**Зигат Султанов**
**Йыһат Солтанов**

# СОЧИНЕНИЯ
# В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

# ӘҪӘРҘӘР
# УН БИШ ТОМДА

# ТОМ
# VI

# НА ПАМЯТЬ ДЛЯ ПАМЯТЛИВЫХ

# ЯТЛАҒАНДАРҒА ЯДКӘР

*Роман*

**Султанов Зигат Адигамович, фото 80-ых годов**



**Йыһат Солтанов.** Әҫәрҙәр ун биш томда, том VI. Ятлағандарға ядкәр, роман. 463 бит.

Этот эпос о башкирской жизни 20-го столетия в черновом варианте автором был написан в 1963 году. После многолетних препятствий со стороны правящего режима, достаточно искромсанный и «нейтрализованный» негласной цензурой роман в 1992 году в ознаменование 60-летия автора был, наконец, выпущен Башкирским книжным издательством в г. Уфе под названием «Ядкарь» и за это я был очень благодарен. Настоящий текст является последним, восстановленным автором в 2010 году и еще раз отредактированным спустя пять лет.

# ЯТЛАҒАНДАРҒА ЯДКӘР

***Посвящается III всемирному Курултаю башкир***

**Башҡорт үҙе хаҡында үҙе һөйләмәһә, уны кем һөйләр ине...**
***Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев. «Ядкәр[1]».***

## БЕРЕНСЕ СӘХИФӘ

Танылған әҙип Мотал Булаттимер улы Шаһибәрәков, эш өҫтәлендә күҙенә ҡарап тилмергән аҡ ҡағыҙға бер юл да өҫтәй алмай, төн оҙоно интекте. Ғажиз булып эҙләгәне ниңә оҙаҡ табылмай? Башы сатнар, аҡылын юйыр хәлгә еткән, әммә шул бер нәмә һаман юҡ та юҡ... Каруан-каруан уйҙары менән ишекле-түрле лап-лоп атлап ҡаңғырып йөрөй торғас, үҙе лә абайламай, атай бахырҙың теге ҡәһәрле утыҙ етенсе йыл шаһиты булып тороп ҡалған, ҡыҙыл кирбестәй ҡытыршыланып ҡырылып бөткән күн көплө диванына баш терәп кенә алғайны. Ни арала таң да һыҙылып киткән! Баяғы уй каруандары мейеһендә өрәңынан ҡубарылып, ике ҡолағы шаулап, ситкә салҡайҙы Мотал һәм шунда уҡ күн аҫтынан төрткән ағас ҡырына соңҡаһы зыңҡ итеп ҡалды, әйтерһең, һүрелә яҙған атай шәүләһе ҡапыл ғына мыҡты һынында терелеп, әүәлгесә ҡырыҫ холоҡло инженер-химик Булаттимер Ташбулат улы Шаһибәрәков ҡиәфәтендә әсеүташтар шыраулатҡан ҡаты ҡулын сәпәне... Ах, эйе... Нимәһен эҙләп зарыҡты һуң әле ул, мейеһе ярылырҙай?..

Тәҙрәнән сирткән нур сиңерткәһе әҙиптең күҙенә сәсрәне лә көллө тәненә гөлт итеп ут ҡабынды: «Таптым! Таптым! Таптым!!!» Бына бит ул ун йыл һәм дә һуңғы бер төн буйына ыҙаланып юҡһынған мөғжизәһе — яҙыласаҡ *иң һуңғы, төп роман* концепцияһы! Һәм уның үҙәк күсәре, умыртҡаһы — заман проблемаһы! Шуны төҫмөрләй алмайынса ул күпме ыҙаланды. Йылдар буйына йүнле нәмә яҙа алмай, ситлектәге бөркөттәй бәрелеп-һуғылыуын төрлө әҙәм төрлөсә юраны. «Бөттө был, капут!» — тине дошмандар. «Ул, тауышһыҙ-тынһыҙ ғына, тетрәткес әйбер яҙа», — тип хупланы дуҫтары. «Ижад кешеһендә була торған хәл -- ижад кризисы кисерә», — тине асы хәҡиҡәтте ярып һалырға яратыусылар. Мәгәр береһе лә хаҡ түгел ине. Был оҙайлы, михнәтле арауыҡ күҙ асҡыһыҙ томан эсенән япа-яңғыҙ һәм юҫыҡһыҙ һәрмәнеп юлда барыу — *концепция* ҡороуға һәм проблеманы билдәләүгә табан яҡынлау ине. Һәм ул бына көтмәгәндә, күҙ асып-йомғансы, тигәндәй, асыҡланды. Ах, ижадтың сихриәтле мәле! Баҡһаң, уның ошо йәшенәсә барлыҡ күргән-белгәндәре, кисергәндәре, ишеткәндәре — уның йәнендәге кескәй донъяһы — бөтәбеҙҙе сорнап алған оло ғәләми донъяның кесерәйтелгән теүәл моделе булып, ул яҙырға ең һыҙғанған ана шул иң һуңғы

[1] Ядкәр -- «Йәдкәр» тип төҙәтмәгеҙ, сөнки ул хата буласаҡ (тулы аңлатма бүлектәрҙең береһендә бирелә).

һәм төп романдың да шөңгөр сәхифә-биттәрен хасил итә икән. Йәғни Мотал аңын һәм йөрәген ярып үткән ниндәй генә хәл-ваҡиға булмаһын, — романдың ул тетрәткес сәхифәһе. Ас та уҡы, ас та уҡы... Ә ул сәхифәләрҙе хәрәкәтле бер тәртипкә килтереп, бер китапҡа төпләп тотоп торорлоҡ иң мөһим көс — баяғы берҙән-бер мөғжизә — *заман проблемаһы!* Табылды алтын үҙәк! Тимәк, Моталға, алдына тауҙай аҡ ҡағыҙ өйөп һалып, һуңғы ҡаһарманлыҡҡа керешкәнсе, һуңғы әҙерлек эштәрен теүәлләргә — баяғы үҙ ғүмеренең хәтер китабы сәхифәләрен «уҡып» сығырға кәрәк. Юҡ, хәтер генә лә түгел! Бөгөнгө, хатта ошо минуттағы күҙ алдында ағылған йәнле тормош, әле күргән һәм кисергән тере хәл-ваҡиғалар — шул уҡ китап биттәре, ул яҙасаҡ мөҡәддәс әҫәрҙең йәнле сәхифәләре! Ошонан башлап һәр нәмәгә ул ана шул күҙҙән генә бағасаҡ!

Иртә ине әле. Күҙҙе ҡабат асырғамы, асмаҫҡамы тип йыбанып ятҡанда, ҡолаҡ ярып телефон зыңғырланы, йөрәккә үтте тауышы. Һай, хәйерһеҙең! Хәләл ефете ни арала алмаштыртып ҡуйҙыртҡан был «заграничный аппарат», элекке ябай ауазлыһынан айырмалы рәүештә, әллә ниндәй һалҡын алтын зыңы менән тертләтә лә өшөтә... Алғы яҡта йоҡо бүлмәһенең ишеге шыҡылдап асылды, имән паркетта ҡоралайҙай йылғыр аяҡ тауыштары тыпырланы.

— Әү, *алтынҡайым,* хәҙер, хәҙер барып етәм — сабыр ит инде, балаҡайым...

Ҡот осорғос!.. Ҡатыны шуны, алтын ялатылған ялтыр телефонды, балаға әйләндергән... Мотал баланы эткә, бесәйгә, хатта үҙенең иренә алмаштырған тыу бисәләрҙе белә, әммә-ләкин... йәнһеҙ һалҡын аппаратҡа... Ҡот осҡос!..

— Кемеңдер бер күрергә зарығып таптытра — трубканы алсы, алтыным!

Алтыным... Кемөшөм... Бына инде сәстәре ағара башлағансы ҡуйынында иркәләнеп йәшәгән, әммә һаман ҡайһы бер сәйерлектәренә күнегеп бөтә алмаған хәләл ефетенең сөсөләклө өндәшеүе күңелен болғандырҙы. Әммә, үҙе лә һиҙмәй, шундай уҡ сөсөләнде:

-- Әү, хәҙер үк алам, *көмөшөм!* — Курәләтә ахмаҡлығы өсөн әллә йәне көйөп, әллә алтын трубканың һалҡынлығы сикәһен сирҡандырып, тамағын ҡоро ҡырҙы ла уҙаман, алыҫтағы борсоусыһына ҡырыҫ ҡына өндәште:

— Эйе.

-- Хәйерле иртә, Мотал Булаттимерович! — Партия өлкә комитеты идеология секретарының ҡабул итеү бүлмәһендәге йылтылдаҡ хужабикә Һылыуҡайҙың мырылдаҡ бесәйҙекеләй яғымлы, ныҡыш ауазы ине. «Ҡасан йоҡлай икән былар!» — тип, ғәҙәтенсә, ҡәнәғәтһеҙ уйланып та алды яҙыусы. Шул арала кухнялағы ҡашығаяҡ шалтырауының кинәт кенә тыныуын иғтибарлап, шундағы йәнәш сымлы трубкаға «көмөш»өнөң сос ҡолағы ҡабат барып тоташыуын абайланы, уғата кәйефе ҡырылды. Темеҫкенмәйенсә түҙмәй был шайтан тоҡомо: тимерҙән дә көндәш таба! Хәйер, көндәш кенәме икән һуң? Бында барыһынан элек, моғайын, ҡатынының йәшерен күңел тоғонан осло беҙ төртә... Бигерәк тә үткән йәй, Мөхлисәһе үҙе генә Карловы Варыға барып ял итеп ҡайтҡас, нығыраҡ һиҙелде был, араларына күҙгә күренмәҫ «фронт» һыҙығы үтте. Хәрбиҙәрсә дауам итһәк, бер-береһенең күңел донъяһын улар әле разведка, әле контрразведка менән тентене. Оло йорттағы Һылыуҡайҙың һомғол һынын күҙ

алдына шәүләләтә башлаған ир ҡолаҡ төбөндә сым арҡылы ҡатынының һағайыулы һулышын тойоуҙан айнып, хистәрен йомарланы:

-- Һаумыһығыҙ, ни булды, йоҡоһоҙ Һылыуҡай-һылыу?

-- Һеҙҙе Димустан Шиһапович зерә зарығып көтә. —Хәйерһеҙ ханым мәғәнәле баҫымлыклап әйткән һәр бер һүҙе артынса уҡ хатта аҫтыртын хихылдағандай ҙа итте. — Хәҙер үк килеп етеүегеҙҙе һорай, әйе...

Мотал көрһөндө: нимә көтә унан был Ҡыҙыл башҡорт (оло етәксе дуҫының яҡындары ғына телгә ала торған йәшлек ҡушаматы килде уйына), уның йөҙөндә Оло йорт – партия өлкә комитеты?

-- Ғәфү итегеҙ, ни мәсьәлә буйынса?

-- Уныһын, — өҙөк кенә хихылданы, — Мотал Булаттимерович, секретарҙың үҙе менән һөйләшкәс белерһегеҙ.

Тимәк, хәйерлегә түгел иртә-таңдан ҡуҙғатыуҙары. «Ағиҙел» электр ҡырғысының талғын шауына күмелеп, күрәһеләрен тоҫмалланы Мотал Шаһибәрәков. Уның һайын, аяғы тартмауын тойоп, бармаҫка ығышланды, ниндәйҙер туҡтатҡыс сәбәп сығырын көттө. Хәрәкәттәре һүлпән — ул хатта телефон икенсе ҡат шылтырағансы ултырып торорға ла баҙнат итер ине. «Ятып-ятып, шаршамбы көн вафат булган, тигәндәй...» — Әсәһенең мәҡәле иҫкә төштө... Дөрөҫ, бынан ике-өс ай ғына элек тупһаһын төшөрмәҫ ине ул да дәү вазифалы дуҫы кабинетының — саҡыртылып та, саҡыртылмай ҙа дөбөрләп барып керер, оҙон-оҙайлап ултырыр ине. Ләкин ҡапыл араларына боҙ тауы өйөлдөмө ни — иҫке дуҫтарҙың йөҙҙәренә һалҡын күләгә ятты, йылы-йәтеш мөнәсәбәттәр рәсмилеккә әйләнде. Бына һиңә әшнәләр: күҙҙәрен йәшерәләр, бер-береһен осратмаҫка тырышалар. Ә бит уйлап ҡараһаң, әлеге лә баяғы, икеһенең араһына бер ниндәй ҙә һалҡын боҙ тауы түгел, ә кескенә шайтан ҡотҡоһо инде... Үҙ алдына үҙе оялып, башын сайҡап уфтанды ир-уҙаман. Әйтмәһәң -- харап, әйтергә тел бармай — ни эшләтергә инде был Мөхлисәне? Ниңә һаман күпереп сәскә атҡан, йәшәргән булып ҡылана — ғәйбәттәргә юл ҡуя? Үҙен һаман күҙ сағылтҡыс һарыбаш -- бәпембә сәскәһе итеп иҫәпләйме икән, студент саҡтағылай? (Ҡыҙ ҡоронда уның Бәпембә ҡушаматы бар ине). Хурлыҡ: бейә заты кешнәмәһә, айғыр аҫауы бармай, тип киҫәтте бит бер көндө, һүҙ аралаш ҡына булһа ла, Моталдың хәйләкәр Яубаҫаров бажаһы... Эйе, Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы ҡайҙан төтөн сыҡҡанын, кемдең бүрке янғанын яҡшы белә: Ҡыҙыл башҡорт тип теле әйләнмәһә лә, тел төбө менән телә... Тегеһе лә хәстрүш: елбәҙәк сағында шағир булам тип осоноп йөрөп яҙған ҡасандырғы «Бәпембәгә» тигән шиғырын ҡабат иҫенә төшөргән... Дөрөҫөрәге, иҫке гәзит төпләмәһенән бер һараяҡ композитор остоғо соҡоп сығарып, йәшелле-күкле көйгә һалғас, түрәбеҙҙең күңеле майҙай иреп, сейле-бешеле булһа ла, матбуғаттан тыйҙыртмаған бит ана шуны — инде килеп булыр-булмаҫ һәүәҫкәрҙәрҙең йәшелле-күкле тауыш менән зарығып йырлаған «Бәпембә»һен эфирҙан да йыш ишетергә тура килә, бына бит ул түрә зауҡы ҡайһылай. Ошоларҙы уйлағас, бәләкәйҙән ҡолағына һеңеп ҡалған атай мәҡәле тулы мәғәнәһендә йөрәккә үтеп инде: «Батыр үлеме — ҡатындан»... Мотал яҡшы хәтерләй: атай дуҫы Талир Ғөләм улы Баҡишев олатай, танылған телсе ғалим, шул мәҡәлде заманында, бер табындан сәй һемерә-һемерә, тарихи

яҡтан асыҡлап та биргәйне: имеш, йыһангир Зөлҡәрнәйен, йәғни илбаҫар Александр Македонский, Үҫәргән-Бөрйән бәктәренең боронғо бер иле Бәкторәны (Бактрияны) баҫып алғас, Өсбит[2]-Әмин (Спитамен) тигән шанлы батырыбыҙ етәкселегендә халыҡ оло яуға ҡубынып, ике йыл буйы ҡаһармандарса һуғышҡан, илбаҫарҙарҙы ҡыуып сығарыу көнө лә яҡынлашҡан. Ләкин... ана шул хәл иткес мәлдә уңышынан иҫергән Өсбит-Әмин үҙенең ғәҙәти ҫослоғон юйған — һылыу ҡатынының тубығына башын һалып иҙерәгән. Ҡатынға шул ғына кәрәк: еңелмәҫ батырҙың башын һуйып өҙгән дә Зөлҡәрнәйенгә улъя итеп тапшырған — Зөлҡәрнәйен эшләй алмағанды батырҙың ҡатыны эшләгән. Әммә иренә хыянат иткәнде ғорур Александр ҙа ярлыҡамаған — күңеле ытырғанып, башкиҫәр-бикәне, йыртҡыстарға улъя итеп, ҡола далаға олаҡтыртҡан. Ә хәҙер?.. Беләме икән шуны беҙҙең Ҡыҙыл башҡорт-дуҫ кеше?.. Белмәһә, нисек белгертергә быны?— Ирҙең йәшерен уйҙары ошо йүнәлештә йүгерҙе.

-- Алтыным, ҡайҙа ҡабаланаһың?

-- Ә?! — Мотал тертләне.

-- Һөйләшәһе һүҙ бар ине. — Кухня ишегенән Мөхлисәнең ысынлап та сағыу һап-һары бәпембә сәскәһеләй күперек башы һоноолдо.

-- Ниндәй һүҙ, тап ошо минуттамы? – тине ашыҡ-бошоҡ кейенгән ир.

-- Эйе.

-- Ҡайтҡас, ҡайтҡас.

-- Ҡайтҡас һуң була.

-- Бынағайыш тамаша. Егерме йыл буйы һөйләшеп бөтмәнекме ни әле, көмөшөм? — Яр аҫтынан яу тигәндәй, уҙаман теҙгенде ҡыҫҡартырға йыйынды.

-- Юҡҡа ауыҙ йыраһың. — Хәләл ефетенең ҡарашы баяғы үле алтын шәүләләй һап-һалҡын, тауышы туңғаҡ ине. — Басир ҡустың Мәскәүҙән ҡунаҡҡа ҡайта, беләһең. Дилбәр балдыҙыңдың да һуңғы уҡыу йылы — диплом эштәренән алйып йөрөгән сағы. Ә инде бер туған һеңлең Гөлзифаның эт илағыс ғаилә хәлдәре үҙеңә мәғлүм булмаһа...

-- Йә, шунан? — Һуңғыһынан ирҙең кинәт үҙәк буйы ярылырҙай ҡорғаҡһып, төкөрөгөн саҡ йотто.

-- Шунан тип ни, үтәргә кәрәк ағалыҡ бурысыңды. «Бөйөк әҙип» бит һин, – ирендәре ярым мыҫҡыллы йәмшәйҙе, -- иртәгә ҡунаҡ мәжлесендә бөтәһенә илһам бир, йөрәктәрен елкендер.

-- Көмөшөм, — Мотал ҡаштарын һындырҙы, — сисеп бөтөр тел төбөңдө.

— Тел төбөм — тел осомда! Йәш быуынға ағай аҡылы кәрәк. Дәрәжәң артһын -- әйткән берең *алтындай* булһын өсөн, Ҡыҙыл башҡортто *ла* саҡыр мәжлескә, юғиһә күргәне *лә* юҡтыр «Ярлауыҡ»ты. Мыжғып торған йәштәр рестораны бит — шул уҡ *идеология* эштәре төйәге, уға китһә. Бына шунда күркәм табын түңәрәгендә башҡа мәсьәләләр ҙә хәл ителер, сиселер.

Уҙамандың йөрәге төптән һыҡтаны: «иң һуңғы төп роман»ына йәнә *лә*

---

[2] Өсбит — ҡушамат, шул заманда яҙыу яҙмалы өс биткә өс телдә яҙыла торған хикмәтле өс яҙыуҙы ла таныусы. Башҡорт хикәйәтендәге Әмин-бәк батыр образына тап килә. Мөхәммәтсәлим Өметбаев тарихында (Ядкәр, Өфө, 1984, 241-се бит) ул Аҡташ хан тип алынған.

бер «сәхифә»...

— Тағы табын, тағы ҡунаҡ. Көмөшөм, һанап ҡарағаның бармы, йылына нисәмә-нисә тапҡыр ҡунаҡ йыйғаныңды?

Мөхлисәнең оҙон һары керпектәре елпеүестәй һелтәнеп, боландыҡы һымаҡ ҙур зәңгәр күҙҙәре шарҙай төбәлде, ирендәре турһайҙы.

-- Ҡыҫмыр... Ҡурҡма, һинән аҡса таптыртмам!

-- Аҡсаламы ни эш.

-- Нимәлә һуң, нимәлә?

-- Минең яҙыусы икәнемде лә онотоп бараһыңмы әллә, «бөйөк әҙип» тиһәң дә? Ваҡыт юҡ бит, ваҡыт...

-- Ваҡытыңа әллә ҡатыҡ ойоторға ҡуйҙыңмы?

-- Беләһең, романым...

-- Тағы ла шул романың. — Һылыу ҡатын күҙ йәштәренә төйөлдө. — Ҡасан һин әҙәм рәтле йәшәй башлайһың??

-- Ярай-ярай, саҡыр, гөрләт! Ләкин һәр бер ҡунаҡ табынында минең һерәйеп ултырыу мотлаҡмы ни?

-- Бәй-бәй, мин әллә тол ҡатынмы?! Престиж тигән нәмә лә бар бит әле.

-- Престиж... Һе! — Тамағына төйөр килеп тығылды. — Ана анау затлы ҡытай вазаң ни ҙә мин ни һинең өсөн: икебеҙ ҙә престиж өсөн генә һерәйеп ултырабыҙ бөтмәҫ-төкәнмәҫ табындарыңда.

Ҡатыны туптай тығыҙ түш йомроларын тиртеллдертеп кирелде, айбалталай һелкенгән дәү аҡ алтын алҡалары күҙҙе ҡырҡып ялҡылданы.

-- Күңелеңде киң тот: был юлы ҡытай вазаһы булмаясаҡ, әнә ултыра ул!. Әйттем бит, үҙемдең «Ярлауыҡ»та ҡорам табынды. Ни ғүмер үҙем етәкләгән ресторанды ағай-энегә әҙәм рәтле бер күрһәтеп алырға ла тейешмендер, шәт, шулай түгелме?

-- Шулайғас һуң? — Ирҙең тауышы йәнләнде. — Ҡытай вазаһы бында ҡалған һымаҡ уҡ, мин дә өйҙә яҙышып ултырырмын. Романым...

-- Уф! Тыумаҫтай ҙа бәпәй булды шул ҡәҙерле «Ғәлийәнәптәре»ң, кемдер әйтмешләй, етлекмәй тыуып ҡуймаһа ярар ине!..

Яңы әҫәр хаҡындағы ҡатын кинәйәләүе, осло ҡылсыҡ йотҡандай, һыҙыра ярып төштө. Бынағайыш тамаша: «Эшсе синыф ғәли йәнәптәре» тип ауыҙ тултырып әйтергә лә иренә. Кем — үҙеңдең ҡатының! «Уның ҡарауы һин үҙең шәп: тупырлатып табаһың бит бәпәйҙе, тыу бейә!» — тип ҡарыу ҡайтарғыһы килде ауыҙынан ни осҡанын белмәгән ҡатынына.

-- Ашыҡма, килсе әле, алтынҡайым, тамағыңды йылытып ал! — Мөхлисәнең тауышы ҡабат йомшарып, шыма ебәктәй үҙәк буйынан сыҡты, Моталды албырғатты.

-- Оло йорт оҙаҡ көттөрткәнде яратмай, -- тине бераҙ йомшарып. — Беләһең бит: уттай ерән-тырпай башын тырнап туҙына башлар ҡәҙерле дуҫыбыҙ.

-- Ут ҡапмағандыр әле, сөскөр танауҙарына.

Ҡатынының тел төбөндә телефондың икенсе тапҡыр шылтырауынаса инсаф һаҡлап һуҙмандарға әхләҡи тотанаҡ тойоп, Мотал еңел һуланы. Шул уҡ ваҡытта зиһенен биләгән яңы ижади табышын — төп романына күсәрлеккә

торош итер үҙе аҫҡан *замана проблемаһын* Обком секретары менән күҙмә-күҙ уртаҡлашыу теләге лә ифрат ҙур ине. Ни булһа ла була бирһен — ошолай йәнгә тейгән көнкүреш ығы-зығылары ла барыбер минең роман файҙаһына, тормош үҙе тыуҙыра материалды, тип илке-һилкеләнеп кухняға инде. Ни арала хәстәрләп тә өлгөрткән! Сәйгүн сәйенең көллө өйҙө хушеҫкә күмеп аңҡыған тылсым-быуы эсмәҫ элек үк башты еңелсә зыңҡытып, йоҡкан бере быуындарҙы мәлйетте. Быдайҙы башҡа бер ерҙә лә тапмаҫһың: грузин сәйе, краснодар сәйе, әзербайжан сәйе, вьетнам сәйе, ҡытай сәйе, хатта һинд сәйҙәре бар, әммә Мөхлисәһенең сәйгүн сәйе генә юҡ ине. Мөхлисә уны, эсенә өрөк һалып, бер уймаҡ бальзам тамыҙып, алтын буталлы сынаяҡтарға ҡуян ҡанындай ҡара яндырып яһай, ҡуйы ҡаймаҡ һыйы өҫтәп йомшарта. Йүкә баллы әскелтем лимон киҫәктәрен ҡабып ҡына, иҙрәп китеп һемерәһең. Мөхлисә-ханымдың фирменныйы, тиҙәр быны. Бынан бер-нисә ай элек, әйткәндәй, баяғы боронго дуҫтары (Ҡыҙыл башҡорт) Димустан Бикләмешев тә бит уларға, ана шул атаҡлы сәйҙән ауыҙ итеп сығырға тигән булып, йыш ҡына һуғылыр ине...

-- Тегеңде әйтәм, ҡапылдан ғына ниңә бөгөн иҫенә төшөрҙө икән? Хәстрүш! — Мөхлисә, йоҡа ебәк халатына һыйышмайынса уйнаҡлаған йоморо яурын баштарын нәзәкәтле-ғорур һикертеп, өҫтәл ҡырында әйләнгеләне, плитала тел-тел ләүкегән талғын зәңгәр утты йәшкелт болан күҙҙәре менән тыныс күҙәтеп, оҙон һаплы ағас ҡалаҡ менән кәстрүлдәге ризыҡты туғырға тотондо. Шул ыңғайҙа дәрәжәле иҫке дуҫты өйҙәгесә ябай итеп атауы сәй һемереп иҙрәгән өй хужаһына йөрәк һыҙлатҡыс алыҫта ҡалғандарҙы — студент саҡтарын хәтерләтте, Ҡыҙыл башҡорт ләҡәбе лә бит уға, Димустанға, ана шунда тағылғайны. — Ниңә ауыҙ йыраһың? — Туғыуын онотоп текләп торған ҡатынының тауышында ниндәйҙер рәнйеүле өн тойомлап етдиләнде.

-- Дөрөҫөн генә әйткәндә, мин үҙем *дә нәк шул хаҡта* баш ватам бит, көмөшөм. — Йылға аҫтындағы һалҡын ағындай, ҡапылдан ғына тойҙортмай, әммә тейешле урынға тейерҙәй ҡаты баҫымлап әйтте. Ҡатынының тертләүен дә күрмәмешкә һалышты.

-- Нимә? Нимә хаҡында? — Әхүәлен белдертмәҫкә, Мөхлисә лә арты менән әйләнде, кәстрүлде йән көскә туҡылдатырға тотондо.

-- Ипләберәк, төбөн төшөрәһең бит. — Мотал тауышын йомшартты. — «Муж да жана – два сатана», тигәндәй, икебеҙ бер төрлө уйлайбыҙ икән, уға ҡалһа... Таң тишегенән саҡыртылырға әллә ни сәбәп тә юҡ, тип әйткем килә минең дә.

Мөхлисә тынысланды.

-- Моғайын, ҡыртлаған3 тауығы елкәһенең соҡорон суҡығандыр — тағы төптө бинахаҡка ҡолаҡ итен ашағандыр. Йомортҡа баҫыуҙан айнымаған һантыйҙан ни көтәһең.

-- Нимә?! — Обком секретарының бала өҫтөнә бала табыусы ҡатынының быйыл да буйында барлығына тура ишара ине был, тупаҫлығы менән рәнйетте йәнде. — Ниндәй ҡыртлаған тауыҡ?!

-- Сабыйланып ҡыланмасы, алтыным. Себеш артынан себеш сығарып

---

[3] Ҡыртлаған – себеш сығарырға көйләнгән тауыҡ.

ҡорошҡан инкубаторын — ташҡа үлсәйем Сәлимәбикәһен әйтәм дә!

-- Вәт әй! — Мотал баш сайҡаны. — Шул «ҡорошҡан инкубатор» үҙеңдең ҡан ҡәрҙәшең — ике туған һеңлең икәнен оноттоңмо әллә?

-- Булһа һуң! — Ирендәре сөрөштө. — Ундай туғандың булғанынан булмағаны мең артыҡ!

Мотал, сәйер һүҙҙәр шаукымына юлығып, сәйер хистәр кисерҙе. Һиндостандан алдыртылған (дефицит!) йылтыр алтын башмаҡлы аяҡтарының осонан алып түбәһенәсә һалҡын матурлыҡ балҡытыусы Мөхлисәһе әкиәттәге сихырланған ҡарһылыу булып күренде лә күҙ алдынан балдыҙы — Димустан бажаһының Сәлимәбикәһе үтте, унан, әйтерһең, донъяға тере йылылыҡ көлтәһе бөркөлдө. Эйе, профсоюздарҙың шул ҡатын эшләгән тәпәш кенә бүлмәһенә барып ингәне һайын, ни сихриәт менәндер, донъялары иркенәйеп, күңеле йылынып китер ине әҙиптең. Ни тиһәң дә, Димустанға хазина булып сыҡты Сәлимәкәйе.

-- Ғәфү ит, — Мотал кәрәк һүҙен таба алманы. — Йәғни мин... Сәлимә балдыҙ алдында баш эйер инем, эйе...

-- Фи, хәстрүш, тиҙ эйелә икән башың! Ни өсөн? Ошо хәләл ефетеңде ил алдында мәсхәрәләп рисуай ҡыла яҙғаны өсөнмө? — Мехлисәнең ҡыу бүтәгәләй[4] һары керпектәре сыланып, тауышында йәшертен янау салынды.

-- Донъяла әсә булыуҙан да бөйөгөрәк нимә бар?

-- Ҡашҡа тәкә! Шул Һаҙый Таҡташыңды ҡабатламаһаң, хәлеңдән килмәйҙер инде. Бөйөк, имеш! Ҡатыныңды кем менән ҡушып һөйләгәнен ишетмәнеңме әллә?

-- Утһыҙ төтөн сыҡмай бит...

-- Мәхлуҡ! Нахаҡ яланан башыңды юймам тимә, ярай ауыҙы томаланды. Оло вазифа эйәһе Димустан алдында оят!

-- Етте, талҡаныңды көйҙөрмә!

-- Көйҙөрөү генә түгел, янып үлерһең ғәрлегенән! Шул ҡойолдороҡ арҡаһында йән дуҫыңды биҙҙерҙең, Обком күҙенән төштөң!

-- Бынығын... ныҡлап уйлап ҡарарға кәрәк әле.

-- Нимәне?

-- Кем арҡаһында икәнен, тим.

-- Нимә? Әллә һин, алтыным, мәхлуҡ йәнле йорт эткәй ҡолаҡтарыңды һәлберәтеп, ысынлап та шул кәнтәйҙең ҡумыҙына бейейһеңме? Егерме йыл көн иткән хәләл ефетеңде — ыстырам! — Зәңгәр муйын тамыры көсөргәнешле тартышып, илағанға оҡшатып хихылданы, — әллә юҡһа уйыңдан шул Ҡыҙыл башҡортҡа ҡушып та һалдыңмы мине?! Ха-ха-ха! Әстәғәфирулла тәүбә, мәсхәрә!.. — Күҙҙәре ҡоро ҡалһа ла, эстән һулығып илап, йәнөҙгөс ҡалтыранды. Күренекле иҫке дуҫы, яҡын бажаһы менән үҙенең генә түгел, ә бер юлы балдыҙы менән ҡатынының да күңеле селпәрәмә килеп, аралары һыуынышыуҙы былай ҙа ауыр кисергән Мотал, тоташ мейеһе зыңҡып, ике ҡуллап йәбеште башына:

-- Етте, етте! Ишетергә теләмәйем!

-- Туҡта, йомортҡа тәбәһе өлгөрә.

---

[4] Бүтәгә -- даланы япҡан үлән (ковыль), сәскәһен ҡылған тиҙәр.

-- Ҡаҙалып киткере йомортҡа! — Муйын тамырҙары күгәрә бүртте.

-- Бәй-бәй, ни һөйләгән була тағы! Ишетһен ҡолағың: беҙгә инде ырғаңдарға урын юҡ, уңһаң да, туңһаң да, бергә икәнде онотма! Бәйләнеп кенә ҡараһын! Улай-былай була ҡалһа, *беренсенең* үҙенә кер. Оло йорттоң оло ишеге беҙгә лә ябылмаған! Нисәмә йылдар романың менән ҡорошоп-ҡатып ултыраһың, ә илтифат итеү юҡ. Ҡырҡ йәшең тулды бит инде — ниңә һаман томдарыңды сығармайҙар? Башҡалар йыйын юҡ-бар сүп-сарын том-том итеп төпләтеп бөттө, көрәп аҡсаһын алды. Һин кемдән кәм? Бына шуларҙың көллөһөн теҙ беренсе секретарға, ауыҙыңа һыу уртлап ултырма! «Волга»ңдың тутыҡҡан кәнсиргә әүерелеүен, бер туған балдыҙың менән ҡустыңдың бөгөн-иртән вуз бөтөргә тороуын, уларҙы әҙәм рәтле эшкә урынлаштырырға, фатир алып бирергә кәрәклеген дә онотма!

Әллә йәш ҡар аңҡытҡан март елдәре — яҙ һауаһы алйыу-малйыу иткәнгә, көтөү-көтөү саңҡылдашып күктә йөҙгән сәүкәләргә моңайып ҡарап торҙо. Беренсе секретарға кереп тирергә ҡуша ла бит, уның ҡапылғара мәркәз Мәскәүгә саҡыртылып алыныуын да белмәй, күрәһең. Ярай ҙа бит әҙәм рәтле яңы секретарь килһә; Мотал белә-белгәндән яңы һеперткеләр бер ҙә ыңғай һепергәне, илде йәлсеткәне юҡ... Ә сәүкәләр шомланып саңҡылдаша -- аҡман-тоҡман бурандары башланалыр, моғайын...

Әле һис кем аяғы баҫмаған көпшәк көрттән оло ихата төбөнәсә юл ярып, гаражға барып еткәнен, тимер ҡапҡаны асып, һағыҙҙай ҡара йылтыр «Волга»ны аҡ ҡарға сығарғанын белештермәне. Кухнялағы телләшеү, серек һалам яҡҡандағы ҡуйы әсе төтөндәй, тәрән мейе юлаҡтарын ҡыҙырып, әрнетеп, үткәндәрҙең юйылып бөтә яҙған боролмалы-боролмалы хәтер юлдарын яңыртҡан — хәтирәләр ебен һөйрәп сығарғайны. Уны бөгөн иртә таңдан Оло йортҡа тартҡан ептең Димустан ҡулындағы икенсе осо ла, моғайын, ана шул үткәндәрҙә төйнәлеп көтә...

Йәшлек-йәшлек... Вузға инеү имтихандарынан арынып, фотоһүрәтең йәбештерелгән ҡәҙерле студент кенәгәнде кеҫәгә ипләп һалып, еңел һулап йөрөгән мәл, тәүге лекцияларҙан һуң һәүетемсә генә баш зыңҡып, дәреслектәрҙең яҡшыраҡтарын эләктереп ҡалыу өсөн китапханаға эркелешкән мәл ине. Баяғы сағыу һары сәсле ҡыҙға төбәлгән Мотал. Уныһы иһә әйләнеп тә ҡарамай: кирбестәй шаҡмаҡ кәүҙәле, сағыу ерән-баҡыр сәсле икенсе бер егеттә ике күзе. «Бәпембәкәй, Бәпембә!..» — Мотал һантый, үҙе лә белештермәй, морон аҫтынан көйләп кенә һөйләнде. Бәпембә иғтибар итте — боролобораҡ ҡараны. Ҡаш менән күҙ араһында яралған ҡушамат шул арала телдән-телгә йүгереп, ихлас көлөү гөрләне: «Бәпембә! Бәпембә!..». Ул ғына ла етмәһә, ирәбе йән китапханасы, еҙ күҙлекле урыҫ әбейе, теге баҡыр сәсле егеткә эскерһеҙ ғәжәпләнеп, һоҡланып өндәшмәһенме:

-- Ҡәҙерлем, бындай ут-ҡыҙыл мөғжизәне ҡайһы ата-бабаларығыҙҙан мираҫ итеп алдығыҙ?

-- ?!.

-- Ғәфү итегеҙ, — төртөп күрһәткән сөйҙәй ҡорош бармағында ысын гәүһәр балҡыны, — бынауы сәс менән бынауы йөҙөгөҙ хаҡында әйтеүем.

Милләтегеҙ кем?

Сират көткән «йомро»ларға (йәғни мейес араһында аунап үҫкән юмор эйәләре була инде!) етә ҡалды:

-- Димустан, ысынлап та, кем һин, әй?

-- Кем булһын, башҡорт! — тине ерән-баҡыр сәсле, һис тә иҫе китмәгәнен белдертеп.

-- Ғәжәп, — ҡарсыҡ башын сайҡаны, — үтә лә ғәжәп! Һеҙ ниңә былай ҡыҙыл?..

-- Һе! Ниңә тип ни, ҡыҙыл булғанға ҡыҙыл, — тине, уғата ҡыҙарынып, баҡыр күбәһен ҡарыш һыпырып ҡуйҙы. «Йоморо»лар кинәнеп хахылданы. Һары бәпембә сәсле ҡыҙ иһә йөрәккә үткәҙгес оҙағыраҡ, башҡаларҙан ҡалыбыраҡ кеткелдәне, шуның менән баҡыр сәсле егетте лә үҙенә әйләнеп бағырға мәжбүр итте.

-- Ни булды, әллә ситән ярығынан бармаҡ күрһәтәләрме? — тине ҡыҙыл егет.

-- Бәпембә, сер бирмә! – тине әхирәттәре.

-- Бармағыңды бер сирт тә ауыҙын ҡапла, Мөхлисә! — тине «йомро»лар. Әммә һары сәсле һылыуҡай һүҙҙе оҙонға һуҙырға теләмәне.

-- Их һин!.. — Ул саҡтарҙа ҡыҙ-ҡырҡында һирәгерәк күренгән аҫыл затлы — ҡыҙыл маникюрлы нәфис бармаҡтарын егеттең танау осона ғына тейҙерә яҙып һелкене лә ҡырт-боролоп китеп тә барҙы. Ишекте ябыр алдынан әкрен, ләкин көллө йәмәғәткә ишетелерҙәй өҫтәне: -- Ҡыҙыл башҡорт! Фи!

-- Ә һин.... һин... — Егет һүҙ таба алманы. Хәйер, уға ауыҙ асырға ла бирмәнеләр, дөбөрләшеп, арттан ҡыҫырыҡланылар:

-- Эй, Ҡыҙыл башҡорт, дәррәү ҡуҙғал, сиратты тотма!

-- Беҙгә лә китап кәрәк!

Ә береһе аҡыл биреп маташты:

-- Юҡҡа һерәйеп торма, ҡыуып ет Бәпембәңде, Ҡыҙыл башҡорт!

-- Бөгөн үк студент кенәгәңде алмаштыр, — тип кәңәш тә ҡорҙолар. — «Димустан»ға ҡарағанда «Ҡыҙыл башҡорт»еллерәк! Ха-ха-ха!

Көтмәгәндә ҡотолмаҫлыҡ ләҡәпләнгән Ҡыҙыл башҡорт ҡыҙыу табанан саҡ табан яҙлыҡтырҙы, уттай ҡыҙыл йөҙө генә яҙа-йоҙа күҙгә салынды. Мотал иһә ысын йөрәктән көйөндө. Һәй ҡыҙылғолаҡ, ҡайҙандыр араға төшөп, Бәпембәнең бая Моталға йүнәлтелмеш иғтибарын селпәрәмә килтерҙе ләһә! Сәсе ерән булмауына, сәйер Димустан урынында тап үҙенең тормауына йөрәкһенеп үкенде. Ҡыҙҙың, исеме лә хатта, шөңгөрләп, егет күңелен тилертте: Мөхлисә... Бәпембә...

Ә шулай ҙа тәү күреүҙән Мотал күҙен сағылдыртып, һушын алған икенсе бер һылыу ҙа бар бит әле — Йыһаниә. Муйыл ҡара күҙҙәрен, ғүмерҙә лә үрелмәгәндәй иркенләгән һағыҙ ҡара сәстәрен йылтыратып, һомғол яурындарына географиянан ғына мәғлүм Ниагара шарлауығылай ағылдыртып төшөрөп, серле-уйсан ҡарашын, аҡ донъяға һоҡланып туя алмағандай, мөлдөрәтеп йөрөр ине. Тәбиғәте көндәй сыуаҡ, хыялсан-алсаҡ. Әллә сәскә күҙҙәренә генә теклән хисләнергә яратҡанға, биология факультетына кергәйне ул... Төрлө яҡтарҙан йыйылған көллөһөн уртаҡ төйәк, күңел төйәге ылыҡтырып

берләштерҙе — университеттың әҙәбиәт түңәрәге. Химия факультеты студенты Мотал шиғырҙарының Маяковскийҙығына тартымларға тырышҡан һикәлтәле юл-киртләстәре, күккә ашҡан бейек тимер баҫҡыстан түбәнгә доңғорлатып тимер мискә тәгәрләткәндәй, ҡаты ҡорос зыңлауҙары хасил итһә, Ҡыҙыл башҡорт-Димустандың ҡәләме иһә тәрән фәлсәфәүи эҙләнеүҙәргә, үткер публицистикаға тартым ине. Мөхлисәнең биш-алты юлдан ғына ғибәрәт уймаҡ хикәйәләрендә телдең бай экспрессив мөмкинлектәре сағылһа, Йыһаниә нәҫерҙәре, сылтырап аҡҡан гәлсәр шишмәләй, күңелдәрҙең иң-иң нескә ектәренә һарыла, яғыла... Әллә шуға, әллә Ҡыҙыл башҡорт һыны арала мәңге һерәйеп торғанға инде, Мотал һаман Ниагара шарлауығына яҡынрараҡ ауышты, Бәпембәнең болан күҙҙәренең йәшкелт-зәңгәрлеге иһә унан, бик төпкөлдә сөмәкәйләнеп күренгән күк көмбәҙеләй, һаман-һаман алыҫлашты, янтайҙы...

Ул көҙ ғәжәйеп салт-ҡояшлы — әбейҙәр сыуағына мансылып килде, термометр төндәрен ун һигеҙҙән, көндөҙ утыҙ градустан төшмәне. Күркәм йәшеллеге менән дан ҡаҙанған ҡалабыҙ бик оҙаҡҡа баҡсаларының йәшел елән ҡусҡыллығын һалманы, ә Ағиҙел тулҡындарын аҡ балыҡтай ҡарпытып-уйнатып аҡты. Тәндәрен ҡояш ялап ҡусҡыллатҡан һыу ҡойоноусылар, спортсылар менән мыжғыны йәмле яр буйҙары. Каникулда өҫ бөтәйтергә артелләшеп эшкә киткән студент төркөмдәре, шефлыҡ итеүсе концерт бригадалары районддарҙан инде әйләнеп ҡайтҡан, уҡыу йылы башланған, ә Моталдың йәй көнөндә, дыуамалланып, эш ташлап китеү ваҡиғаһы ла, факультеттың комсомол йыйылышында ҡаты тикшерелеп, тейешле һөҙөмтәгә киленеп, Йыһаниә менән уның үҙенән башҡалар өсөн онотолғайны.

Шундай сыуаҡ ял көндәренең береһендә, йөрәктәре сыңлап торған дүрт студент, — Мотал менән Йыһаниә, Димустан менән Мөхлисә — Ағиҙелдең киртләс-киртләс баҫҡыстарынан йүгерә-атлай ДОСААФ-тың һыу станцияһына төшөп, моторлы кәмә, һыу саңғылары алдылар, йылғаның ҡыл кеүек тартылған төҙ ағышына үрләп, һыуҙа саңғы шыуырға керештеләр (ғәләмәт уйын тарала ғына башлағайны). Кәмә артынан оҙон бауға тотоноп, ҡара янған бронза тәнен ялтыратып, мөһәбәт ярҙар араһынан, атҡан уктай һыу өҫтөндә кәйелеп, тәүҙә Димустан Ағиҙелдең йөҙөн сыйҙыртып үтте, ә Мотал ғыжылдап үкергән моторҙың «мөгөҙөн» ҡармап ултырҙы. Тәндәрен ебәк ҡойонсоҡ ҡына ҡаплаған, һомғоллоҡтары күҙ яуын алған ике ҡыҙ — һыуһылыу — арҡан осонда һыу көҙгөһөн юлаҡлатып, ут ҡапҡандай сәс көлтәһен ялбырлатып елтерәүсене ихлас тамаша ҡылып ҡына урталағы эскәмйәлә артҡа ҡарап ултырған. Боролоштарҙа бер-береһен ҡосаҡлап, сырылдашып ҡысҡыралар, Мотал уның һайын шәберәк үкертә кәмә моторын, ә саңғысы бөркөт кеүек кәйлегеп оса ла оса. Мотал эстән генә үртәлеп бара: сираты еткәс, саңғыға баҫырғамы, баҫмаҫҡамы? Әгәр баҫмаһа, ҡыҙҙар уны бөркөт янындағы күшеккән тауыҡҡа һанамаҫмы? Эш шунда: кисә кис нык тирләгән килеш тәҙрә асып ултырып, һалҡын тейҙергәйне, күкрәген сәнсеү ала. Шул хәлдә һыуға төшһә, мөшкөлләнеп китмәҫме?

Димустандан һуң, ай-вайға ҡуймай, сиратты Мөхлисә алгас, Мотал еңел һуланы; Йыһаниә лә Мөхлисәнән ҡалышмаҫҡа сәмләнгәс, хатта ҡыуанып ҡуйҙы. Аҙаҡ, көн кисләне, ҡайтырға ваҡыт, тип серҙе йомоп ҡалдырырға ла мөмкин.

Бына Йыһаниә елә, һыу-һауаны ике яҡҡа ҡайырып, торналай осоп килә. Ғәжәп: алыҫтан уҡ күҙҙәренең ике төртөк ҡаралығы күренә. Был юлы Димустан мотор «мөгөҙөн» көйләй, ә Мехлисә менән Мотал эскәмйәлә артҡа ҡарап тамаша ҡылып ултыра. Әллә ҡомарланыуҙан, әллә ҡурҡышынан, уйҡылдап, Бәпембә тығыҙ тәне менән һырлыға, уны ҡосаҡлап ала. Димустан да сос малай: «Эй һеҙ, ҡарағыҙ уны: яҡынайыштыҡ тигәс тә, дәүләт сиктәрен боҙошмағыҙ улай!» — тип бармаҡ янап ҡуя, өсөһө тиң кинәнеп көлә. Ә гүзәл торна Йыһаниә ҡара күҙҙәрен уларға төбәп һыу өҫтөнән кәйелә лә кәйелә...

Мотал иңенә ауышҡайны Мөхлисә, ҡапыл йәшен һуктымы ни: уларға ҡарап осоп килгән Торна-Йыһаниә атылғандай ҡоланы. Их, «мөгөҙ» Моталдың үҙенең ҡулында булһасы ошо мәлдә! Димустан ҡаушаны: кәмә тиҙлеген яйлатыңҡырап боролаһы урынға, ҡулы ҡалтырапмылыр, моторҙы ҡырт һүндерҙе лә тоҡандыра алмай аҙапланды.

— Әс-сәйем, бата бит, бата! Металчик, бәғерем! — Мотал биленә ҡуш беләген уралдырып, Мөхлисәнең ҡолаҡ ярып сәрелдәгәне әле булһа йәнгә үтә...

Мотор ғыжылдап тоҡанды, руле ҡайырылған кәмә шул ыңғайҙа табаҡтай түңкәрелде, һыңлап иҫен йыйған Димустан һыуҙа тыпырсынған саңғысыға табан шаптор-шоптор йөҙөп китте. Ә даръя шундай ҙа тәрән, киң... -- Муйынына сытырҙатып йәбешкән Мөхлисә менән ҡуша һыу төбөнә китмәҫ өсөн йәнтәслим тырышҡан Мотал бары шуны ғына шәйләне. Күҙҙәренә берҙән-бер өмөт бағанаһы сарпылды: бик-бик алыҫта *һаҙ биҫтәһенең* яр ҡомона морон төрткән дүңгәк кәмә, шул кәмәгә йыбанып ҡына яҡынлаған ишкәксе. Һәм шундай ҙа алыҫ-алыҫ һыҙатланған ике яр... Ҡурғаштай ауыр, тәмһеҙ һыуҙы ғорҡолдатып йота-йота Мөхлисә Күккә ҡулын һуҙып ҡысҡырҙы:

— Ҡотҡарығы-ы-ыҙ!

Яр ситендә кәмәне этәреп маташҡан ир аҡтығы ҡалҡынып ҡараны,. иҙелдәге фажиғәне аңланы һәм... ишкәктәрен күгәненән йәһәт кенә һурып алып, уҡ атылған тиҙлектә... ярҙан ситкә ташланды. Ғәҙәттә, иблесте маңлай тәңгәлендә һыңар ғына кәкере мөгөҙлө итеп һүрәтләүсәндәр. Арҡаһын көмөрәйтеп йылғыр табан тайҙырыусы был йорат Моталға, гәрсә кәкере мөгөҙө булмаһа ла, ана шундай иблес булып күренде. Шулай итеп, батып барыусының ярҙам ялбарып һуҙған ҡулы һауала аҫылынып ҡалды — бәндә ҡуйы таллыҡҡа ышыҡланды. Эйе, ҡаланың тайғаҡ фиғелле атаҡлы *һаҙ биҫтәһе* урынлашҡан яр тәңгәле ине шул...

Аңын юя барған Мотал, һыуға сәсәй-сәсөй, ни тылсымлы көс менәндер ҡалҡынды, дымлы иҙел һауаһына үпкәләрен ҡандырҙы, Күктең зәңгәрлеген күреп иҫерҙе. Мең рәхмәттәр яуғыры кем ҡулы һурып алды уны, батып барыусыны, упҡындан, кем?!

-- Уф, Хоҙайым! — Йыһаниә ҡайҙалыр бик алыҫта һулҡылданы.

-- Мөхлисә, ныҡ тот, ысҡындырма, хәҙер барып етәбеҙ! — Димустандың тауышы. — Ә һин, Йыһаниә, кәмәгә сат йәбеш бына ошолай. Саҡ ҡына түҙегеҙ инде, йән киҫәккәйҙәрем!

-- Ҡурҡма, Манара башы минең ҡулда — ысҡынмаҫ. Флюгерынан шытырлатып услағанмын! — Ошо хәтәр сәғәттә лә алсаҡлығын юймаған Бәпембәкәй шарҡылдап көлдө.

Йыһаниәнең аяғы ҡаймыҡҡайны — йылғанан травмопунктҡа, ә унан тура больницаға оҙаттылар. Мотал иһә, кисендә үк тәне уттай ҡыҙышып, ҡаты йүтәлләп, ҡулын һуҙып төпһөҙ һаҙға батыуын, ишкәк йөкмәгән бәндә үҙенең Һаҙ бисҭәһенә өңөлөп ҡасып барыуын күреп һаташып уянды ла ятаҡхананы бер итеп илерә башланы. Күҙен йомған һайын, мөшкөл хәл ҡабатланды. Һаҙға убылыуҙың ошолай нәүбәттәге бер сеансын кисереп илергәнендә, ул да больницала ята ине инде...

Йәшлек хәтирәләренең ҡапыл йәнде баҫыуынан иләҫләнгән Мотал Шаһибәрәков, «Волга»һының маңлай быялаһын шаҡыр-шоҡор һыпырыусы «һепертке»не кәрәкһеҙ эштән туҡтатырға ла онотоп, йорт ҡапҡаһынан сыҡты, үҙәк урам буйлап яй ғына Ағиҙел ярының соңҡаһына — мәрмәр көплө Оло аҡ йорт урынлашҡан тарафҡа юҫыҡлатты. «Их, йәшлек!» — ирекһеҙҙән йөрәкһенеп әйткән һүҙҙәренән үҙе үк һиҫкәнеп, ауыр көрһөндө -- бөгөн Мәскәүҙән ҡайтып төшәсәк ҡусты йораты Басир, балдыҙы Дилбәр тураһында ҡатынының киҫәтеүе ҡолағын сыңлатты ҡабат. Эйе, был йәштәрҙең икеһе лә йүләрлектең иң хәтәр баҫҡысында — мөхәббәттә, минең кеүек, өрмәй ҡабып, ауыҙҙарын бешереп ҡуймағайҙары...

**ИКЕНСЕ СӘХИФӘ**

Рәссамдарҙың Суриков исемендәге юғары уҡыу йортоноң һуңғы курс студенты Басир Дәүләтбаев иһә был сәғәттәрҙә Мәскәүҙең ҙур аэропортында осош графигынан яҙлыҡтырылған һауа карабының форсатланып осоуын көтөп зарығып ултыра ине. Хәйерһеҙ һауа шарттары! Өфө тәңгәлендә генә шайтан туйы ҡуптарып яҙғы буран ҡоторған, баш ҡаланың һауа ҡапҡаһын япҡан. Ҡасан буйһондорорҙар ҙа «Аэрофлот» графигына керетерҙәр был Уралдың ҡар бурағыс бәрей туйҙарын! Хәйер, бәрей ҡойроғон ҡулы етеп кем борһон, еле менән ерҙе-күкте аҡ ҡарға бутағанда, һулышы менән шыҡырлатып Ағиҙелгә һалҡын күпер һалғанда. Боронғо грек тарихсыһы Геродот бабай китабынан алып яҙыусы Мотал ағаһы бәйән иткән бер әкәмәт иҫенә төшә Басирҙың. (Ә ул үҙе, башҡорт интеллигенты Басир, Геродотты аҡтарып ҡарарға әле булһа форсат таба алғаны юҡ!..). Баҡтиһәң, Һалам Торхан замандарында уҡ әҙәм балаһы үҙ ихатаһына бикләнеп тик ятмаған — беҙҙең эраға тиклем алтынсы быуатта Афинанан алыҫ түгел Проконнес ҡалаһынан Каистробей улы Аристей исемле илгиҙәр шағир килеп киткән ошо беҙҙең яҡтарға, Уралдағы бөтә күргән-белгәнен ул «Аримаспи» («Әрме-Асаба», йәғни аҫаба армияһы) тигән поэмаһында тасуирлаған. Бына шунда бермә-бер аталмыш бабаларыбыҙ аҫабалар, исәтәндәр (Исәт йылғаһы буйы кешеләре истәктәр) менән бергә йәнә ҡарлы-буранлы һепер (себер) бабаларыбыҙ — «һипер-борей»ҙар ҙа бар имеш. Әле генә Басирҙың үҙенең аҡыл сүлмәге ҡайнатып сығарыуынса, хәҙерге әҙәм аңлайышлы телгә күсерһәк, «һипер-борей» — һепереп-бурай, йәғни үҙебеҙҙең ғәзиз һепертмәле буран булалыр инде — «Аэрофлот» хеҙмәткәрҙәрен, шулай итеп, Аристей уҡ киҫәткән... Геродотты телгә алыуың була, «һипер-борей»ҙарға бәйле икенсе бер ғилми фараз

иҫкә төшә бит әле. Яҙыусы Мотал ағаһының баяғы утыҙ етенсе йыл «халыҡ дошманы» ителгән ғәййәр большевик атаһы Булаттимер Шаһибәрәковтың утты-һыуҙы бергә кискән, утыҙ етенсе йылда ла баяғы себер яҡтарына үҙҙәре теләмәй бергә киткән йән дуҫы — атаҡлы энциклопедист ғалим Талир Баҡишев булған, бына шул ҡарый, имеш, Геродот ҡарттың Аристей күргән сәйер «һипер-борей»ҙарын тап бөгөнгө үҙебеҙҙең үҫәргән-бөрйәндәрҙең бабаһы тип фашлаған. Иҫке грек телендәге боҙоп яҙып ҡалдырылған «һипер-борей», баҡтиһәң, үҙебеҙҙең «аһапа-әр бүре» (аҫаба-ир бүре) икән дә (башҡорттарҙың күбеһе үҙҙәрен йә изге ата Бүре, йә әсә Бүре тоҡомо тип һанаған). «Бүре тоҡомо» төшөнсәһен «бүре йән» тип тә әйткәндәр, хәҙерге «бөрйән» тигәнебеҙ боронғо төньяҡ Башҡортостан урмандарындағы тап ана шул Аристей күргән бабалар — «аҫаба ир бүрейән» була инде... Тфү-тфү, үҙе лә һиҙмәй, сереп бөткән тәрән тарихҡа сумып бара түгелме был башҡорт интеллигенты?!. Бының өсөн Аэрофлот үҙе ғәйепле! Нимәгә, ти, ул артыҡ йөк күн фуражка кейҙертелгән был сүлмәккә — замана балаһына? Талир Баҡишевтар башын ауырайтҡан шул мәсьәлә утыҙ етенсе йыл еңел хәл ителгән дәбаһа! — баштарҙы себер ебәреп һәм баш-сүлмәге менән ҡуша фанилыҡтан арындыртып?.. Басир Дәүләтбаев иһә шунан һуңғы замананың балаһы — баш ауырайтмай, ауырттырмай ғына көн итергә ярата. Уның рухи идеалы — көн заңы менән йәшәү: һемереп ҡал, типтереп ҡал был өс көнлөк донъяла!.. Әҙәм ғүмерө ҡыҫҡа — бер ғүмерҙең тарихы; ата-баба тарихтарын һыйҙырырға урын юҡ был аҡыл тулы сүлмәктә. Хәйер, булғанмы һуң әле ул, ата-баба тарихы? Әгәр булһа, мәктәптән үк мейегә туҡырҙар ине. Академиктар юллаған тарих дәреслектәренән белеүебеҙсә, беҙҙең өсөн бөйөк урыҫ халҡының тарихы бар, алға киткән сит ил халыҡтарының тарихы бар — шуларҙы ғына һыйҙырһаң да бик яҡшы, артығы менән еткән. Себерәк баҡишевтар артынан эйәреп башҡорт тарихын да соҡсой башлаһаң, башҡайҙарҙан ни ҡалыр?!. Кә-рәкмәй ул артыҡ йөк, серек мүк -- белмәгәндең беләге тынысыраҡ. Ошо йәһәттән Басирҙың ифрат яраҡтан оло шағиры — рухи таянысы бар (шиғырҙарын гәрсә әсә телендә уҡымаһа ла, урыҫ телөнә таржемәләрен белә). Бына шул бөйөк йән эйәһе, Башҡортостандың халыҡ шағиры, башҡорт халҡы тураһында донъяға яңғыратып, ысынын әйтеп бирҙе: уның, йәғни туған халҡыбыҙҙың иҫ китерлек тәрән тамыры ла, олпат олоно ла юҡ — ул ни бары бөйөк урыҫ ҡайынының шыйыҡ сыбыҡ осондағы бармаҡ битендәй тәңкә япрагы ғына – саҡ ҡына ел һуҡҡанда ла өҙөлөп осорға тора... Афарин, ниндәй тапҡыр табылған — йәшәһен шағир һүҙе! Япраҡ, тимәк, ҡыҫҡа миҙгеллек имгәк: миҙгел һайын ҡалтыра ла сыбыҡ осонан ҡойол, олон аҫтына уйыл. Күп кешеләр бына шуны аңламай -- миҙгел генә ғүмеренең ҡәҙерен белеп йәшәмәй. Ә Басирға шағир бөргән фәлсәфә аңлайышлы: миҙгел генә ғүмереңдә олон һутын имеп ҡал!..

Көтөк хәлде уйынға һабыштырып, шаяртыуға һапларға тырышһа ла, йәш рәссамдың сабырлығы һайыға бара ине. Ах был ығыш самолетты! Мөхлисә еңгәһе уны көтә торғандыр: караптан — балға, тигәндәй, тура мәжлес табынына ҡайтаһың, тигәйне бит (ҡаланың шанлы йәштәр рестораны «Ярлауыҡ»та иртәгә ҡунаҡ йыйыла). Бумала буйынса коллегаһы Илһамдар Йыһандар улы менән дә

эшлекле һүҙ ҡуйышылған бит — Өфө рестарандарының береһен ең һыҙғанып аллы-гөллө биҙәкләргә лә йомро гына табышты кеçә төбөнә сумырырға. Диплом эше яҙыр саҡ, алтын герблы ҡатырғаның аçылын яулап алыр саҡ — шул эштәрҙең бура төбөн алтын тәңкәләр ырыçларға тейеш тә! Унан килеп... ҡыштың йәйгә алмашынған яҙ айы — ҡала ҡыҙҙарының иң осоноп матурайған миҙгеле... Алтын ҡалаҡка ғына һалып йоторлоҡ бер һылыуҡайҙың башын әйләндерһә лә яҙыҡ булмаç. Мәркәз мәрйәләренән тамам алйынды — һәр береһе ҡулдан-ҡулға оҙаҡ йөрөп шымарған тәңкә кеүек... Басир, студент булып Мәскәүгә ереккәс тә, шуларға иçе китеп баға торғайны, тәүге ауыҙ бешеүе лә ана шуларҙан булды.

Анатолий Каргин тигән курсташ һәм бүлмәләш, биш йыл буйы бер ҡалаҡтан ашаған дуçы бар уның. Күҙ сағылтҡыс аҡ сәсле, зәңгәр күҙле. Элекке мыҡты моряк — Балтик диңгеҙе бүреһе. Буйы тиһәң — карап мачтаң ары торһон. Шул мачтаның башында, әйтерһең, даланың йылтыр көмөш ҡылғанын йыйнағандар көлтәгә, шуға өçтәп сөм зәңгәр-күк ҡушсәскәне беркеткәндәр — ҡарашынан ҡыҙҙарҙың һушы китә. Әммә Уралда үçкән ирәбе ир-азаматтар ҙа бар бит әле! Үҙ сиратында тамыр имәндәй йомро һәм муйыл ҡара сәсле Басир ҙа шул мачтаның йәнәшәһендә арыу уҡ ҡына контрасланып торғанғамы, әллә ишәй менән ҡушайҙай айырылмаç иптәштәр булғанғамы, уларҙы тәүге курстан уҡ һабаҡташтары, эстраданың танылған ике артисына оҡшатып, «Тарапунька менән Штепсель» тип атап йөрөттөләр. Йәғни, беҙҙең эстрадалағыса, Кәтүк менән Бағанай була инде... Ҡылыҡһырҙары ярашыуға ишаралапмы икән: «Ике танцор — бер иш, кендектәре береш», — тип тә тел сарланылар. «Толя Каргиндың эсе борһа, Басир Дәүләтбаев... бәҙрәфкә йүгерә» имеш... Ә уғата асы бер хәҡиҡәтте, юмор бәлешенә бөрөп, һөйөклө ҡарт профессор ҡаптырҙы. Класс менән һуғанлы-боросло һөйләшә торған ғәҙәте бар шул уның.

— Хәҙерҙән үк икегеҙҙе лә һис икеләнмәй лауреаттар исемлегенә теркәр инем, — тип, ике «береш»тең натуранан яҙған эштәрен йәнәш ҡуйып, алыçтан алдырҙы ҡартлас.— Икегеҙҙе лә туп-тулы даһи итеп донъяға данлар инем. Әммә ләкин... ах шул ҡәһәр төшкөрө «ләкин»!.. — Ауыҙ асып тыңлап торған буласаҡ бумала маһирҙарына әйләнеп ҡарап, ул мутлашып күҙ ҡыçты. — Ике ауыҙ һүҙ менән генә тултырып әйтегеҙсе, коллегалар: туп-тулы даһи булыу өсөн нимә кәрәк?

-- Туп-тулы булыу кәрәк, — тип гөрләне йәмәғәт.

-- Алтын аҡыл. Ә туп-тулы булыу өсөн нимә кәрәк?

-- Ярты-йорто булмау кәрәк.

-- Дөрөç, түп-түңәрәк алма кеүек дөрөç. Бер миҙалдың ике яғы һымаҡ хаҡ. Ә һеҙгә, ҡәҙерле коллегаларым Анатолий Каргин менән Басир Дәүләтбаев, икегеҙгә лә ана шундай түп-түңәрәк алма, йәки ике яғы ла теүәл түп-түңәрәк миҙалдай булыу өсөн, тип, туҡһан туғыҙынсы тап-ҡырҙыр инде туҡыйым, беләһегеҙме, нимә генә етешмәй?

-- Ҡәҙерле профессор, — тинеләр, ҡолаҡ остары семләп, икеһе бер тауыштан, — шуны, зинһар, тағы ла бер тапҡыр — йөҙөнсө ҡабат туҡығыҙсы инде.

-- Яҡшы. Мин хәҙер һеҙҙең рөхсәт менән йәмәғәт алдында эксперимент

үткәрәм. Яковлев, яҡын килегеҙ, ассистентым булырһығыҙ.

Иң шәп шәкерте Яковлев сығып баҫты.

-- Яковлев, бына был ике ҡәҙерле коллеганың «Сәскә тотҡан ҡыҙ» исемле мөғжизәләренә ике ауыҙ һүҙ менән генә анализ яһағыҙсы.

-- Баш өҫтө. — Яковлев күрһәткес таяҡ осон Басир һүрәтләгән картонға төрттө. — Бына был һалҡын таштай ҡатҡан ҡыҙ һынын иҫәпкә алмағанда, ә бынының ындағы, — таяҡ Толя әҫәренә яҫҡанды, — шулай уҡ һалҡын таш хәлендәге сәскә шәлкеменә күҙ йомғанда, уларҙа көллө нәмә тере, тормош һулышы менән һулай, улар икеһе тиң даһиҙарса оҫҡор яҙылған, тип әйтергә лә мөмкин.

-- Бөтәгеҙ ҙе ризамы ошо һөҙөмтә менән?

-- Риза!

-- Афарин! Инде хәҙер, Яковлев, ҡайсы алығыҙ ҙа ике ҡыҙҙы ла сәскәләренән айырығыҙ. Бына шулай. Анатолий Каргиндың үҙегеҙ әйткән теп-тере ҡыҙ һүрәтенә Басир Дәүләтбаевтың теп-тере сәскә шәлкемен, йәки, киреһенсә, Басир Дәүләтбаевтың теп-тере сәскә шәлкеменә Анатолий Каргиндың теп-тере ҡыҙ һүрәтен теркәп ҡуйығыҙсы. Кнопкалар менән беркетегеҙ, бына шулай. Инде күрһәтегеҙ. Йә, нимә барлыҡҡа килде?

-- Ике ярым-йортонан бер бөп-бөтөн картина, ике яртылаш даһиҙан бер туп-тулы даһи булды! — тип белдерҙе ғәҙел ҡарашлы ассистент.

-- Бына күрҙегеҙме, ҡәҙерле коллегалар? Туп-тулы даһи булыу өсөн һеҙҙең икегеҙгә лә, күгәрсенкәйҙәрем, әлегәсә буш ҡала килгән яртығыҙҙы тултырыу бурысы тора, — тип йомғаҡланы остаз. — Ә был мөҡәддәс маҡсатҡа ирешеү өсөн, ике ауыҙ һүҙ менән тағы ла йөҙ ҙә беренсе тапҡыр ҡабатлап әйткәндә, беләһегеҙме, нимә кәрәк? Анатолий Каргинға шәриҡтәше Басир Дәүләтбаев өлгәшкән тышҡы матурлыҡ хисен тойоу сифатына, ә Дәүләтбаевҡа иһә шәриҡтәше Каргин етди үҙләштергән тәрән мәғәнәле эске йөкмәткене тотоп алыу ҡеүәһенә эйә булыу мотлаҡтыр, эйе. Сер итеп әйтеп ҡуям: һеҙҙең аҫыл маңлайҙарҙы биҙәйәсәк сихриәтле таҡыяның лаврҙары дан баҡсаһында ана шул изге сәғәтте көтөп үҫә.

Уларҙың иң кешелекле, ескә хисле һәм көллөһөн берҙәй һөйгән ҡарт профессор ине был, һәр береһен үҙ балаһылай йөрәккә яҡын күреп, хатта нисек һулыш алыуҙарын тоя, һәммәһен тиҙерәк кеше итеп оло юлға сығарыу хаҡына үҙенең һаулығын да, ғүмерен дә ҡыҙғанмай эшләр ине.. Ул бындағы күптәрҙе, бигерәк тә «төпкөлдән» килгән һәр төрлө милләт улдарын, ҡаланан ҡалаға, ауылдан ауылға үҙе йөрөп, бөртөкләп йыйып алған, инеү имтихандарына әҙерләп күп ыҙа сиккән, ингәс, улар өсән ятаҡ, стипендия юллап йөҙәгән, уҡып сыҡҡан һәр береһен тейешле тормош һуҡмағына төшөрөү яйын ҡайғыртҡан, шул иҫәптән Басирға ла ҙур хәстәрлек күрһәткән бер изге йән, остаз ине. Әммә ҡартлас кәрәк саҡта рәхимһеҙ — үҙенең әсе тел төбө менән ҡаты ғына көйҙөрөп тә ала белә... Басир, телен ҡорт сағып, хәйерһеҙ мәлдә өн сығарып өлгөрҙө:

-- Аңлашылмай, профессор. Һеҙ үҙегеҙ минең бер яҡлы даһи булыуымды танығыһыҙ ҙа шул уҡ ваҡытта миңә тигән лаврҙың әле үҫеп кенә килеүен белдерҙегеҙ. Мин һеҙҙең ул лаврҙан, япраҡтар өҙөп алып, ярты венок үреүегеҙҙе һәм минең даһи маңлайыма һалыуығыҙҙы үтенәм. Сөнки даһиҙар ярты килеш тә

даһи.

-- Эйе, — тине профессор, — бына бынауы туҡымалағы киндер — арҡауы менән генә лә киндер. Ләкин уның буйлығын һурып алайыҡ әле, нимәһе ҡалыр икән?

-- Еп ҡала, — тине Басир, бирешергә теләмәй.

-- Эйе, еп, фәҡәт еп. Арҡау менән буйлыҡ булып туҡылаһы еп. Әммә уны еп килеш кенә ыштан итеп кейеп буламы?.. Ә һеҙ, Анатолий Каргин менән икегеҙ, була ул, тип, ығышланып, берегеҙ — буйлыҡ, икенсегеҙ арҡау еп кенә «кейеп» йөрөйһөгөҙ һәм, етмәһә, күрегеҙ, бына беҙ ҡайһындай ҙа ыҫпай ыштанлы: ҡупшы, бөтөн, туп-тулы, тип танау ҙа сөйәһегеҙ!

Йәмәғәт «гөж!» итеп көлдө, ә икәүҙең сикәләре ҡыҙышты.

-- Улай эшкә ашмағас... ниңә мине әллә ҡайҙарға барып эҙләп таптығыҙ, сәнғәт храмына тарттығыҙ? — тип рәнйене Басир.

-- Бәй, кем һеҙҙе, эшкә ашмаҫлыҡ, ти? Әйттем бит: һеҙ — даһи, икегеҙ ҙә даһи, ҡолаҡтарығыҙға киртеп ҡуйығыҙ шуны.

-- Ха-ха-ха, буйлыҡһыҙ арҡау кейгән даһи! — тип һөрәнләне бумала маһирҙары. Профессор, ҡулын күтәреп, тәртипкә күндерҙе илде.

— Эйе, күптәрегеҙ кеүек үк, хәҙерге был егеттәрҙең береһе — буйлыҡһыҙ арҡау, икенсеһе арҡауһыҙ буйлыҡ ҡына кейеп тансыға сыҡҡан даһи. Ләкин тыныс булығыҙ: киләсәктә бынамын тигән тампан[5] бәйләп бейерҙәр. Көлмәгеҙ, тампан — үҙе бер тарихи ҡаҙаныш. Сөнки беҙҙең күп күрмешле был цехта, һаҡал үҫкәс тә әле, һаман малай-шалай рәүешендә ҡалып, оса ялтырын еп менән генә ҡаплатып йөрөүселәр ҙә бар... яланғас билгә ҡайыш билбау... башҡорт халыҡ мәҡәле әйтмешләй.

Остазының мутлығынан шаңҡыған баш ғәләмәте зиһен ҡеүәһен йыйырға ла өлгөрмәне, икенсе мутлыҡ йөрәкте шаңҡыта һуҡты: анабыҙ Һауа кейемендә түр башында бөтә зиннәттәре менән балҡып ултырған натурщица ханым баллы күҙҙәрен күрәләтә Басирға төбәгәйне. Егеттәр тырышып натуранан дәрес алған минуттарҙа профессорға һиҙҙертмәй генә күҙ ҡыҫып алыусан ғәҙәте бар ине уның, шул мутлығы арҡаһыйда һуштарҙы һүрер ине. Басир был юлы иҫенә килергә лә өлгөрмәне:

— Ҡабаланмай яҙығыҙ, бөтөрмәһәгеҙ ҙә ярай. Кискә иркенләп теүәлләп ҡуйырһығыҙ. Тәғәйен үҙегеҙгә генә өҫтәлмә сеанс бирәм, — тип шыбырланы ул, көтмәгәндә, егеттең ҡолағына.

Ни ғилллә был, ниндәй еҫтәлмә сеанс? Ул сеанс өсөн кем түләр? Тәреләге Мәрйәм-аналай нурланып ултырғаны өсөн институт тарафынан ханымға сәғәтләп кенә түгел, минутлап түләнгәне һәм аҙ түләнмәгәне мәғлүм. Оло художниктар ғына натурщица яллау кеүек йомартлыҡҡа бара ала. Дәрес бөткәнсе энә осонда ултырҙы Басирыбыҙ.

-- Йә, киске сәғәт нисәлә? — тине ханым, бергә сығып барышлай.

-- Мин... мин... ни бит әле... һеҙҙе ялларға хаҡым юҡ... — тигән булды егет. Их, әлеге лә баяғы шул кеҫә төбөнөң һайлығы!..

-- Кем һеҙҙән хаҡ һорай? Их һин, һумала күҙ!.. — Һә тигәнсе «һин»гә

---

[5] Тампан — таш быуат кешеләре кейгән алъяпҡыс

күсеп, аҡҡош ҡанатылай һомғол ҡулы осо менән егетебеҙҙең маңлай сәсен туҙҙырып та ташланы, сөмкәһенән бәрхәт тышлы адрестар кенәгәһе тартып сығарҙы. — Киске ете менән һигеҙ араһында — шул яраймы? Бүлмәңдең номеры?

-- Мин... белмәйем бит әле...

-- Кем белә һуң? — һылыу, «ебегән икәнһең» тигәндәй, егет киҫәгенең күҙҙәренә текләп, һыңар ғына алтын тешен көндәй балҡытып көлдө.

-- Бүлмәбеҙҙең номерын ни... беләм мин... ике йөҙ ҙә ун етенсе.

-- Инш-Алла, белемең ул тиклем үк һай түгел икән дә! Нимәне генә белмәйһең һуң, аҡыллым?

-- Мин...

-- Эйе, һин. — Һылыу йәнә йылмайып пырхылданы, електәргә үткәҙеп, күҙҙәрен бырауланы. Басирҙы был тамуҡ утына һалды.

-- Туҡтағыҙ, мин, ни... бүлмәләш иптәшем Толя Каргиндан һорап киләйем әле. — Шулай тине лә, ике ҡолағы борослап ыуғандай ҡыҙарып, елтерәп китеп барҙы. Ул, моғайын, Толя Каргиндан: «Һин, дуҫкайым, ете менән һигеҙ араһында өйҙә булмайһыңдыр бит, сөнки тап шул сихриәтле сәғәттәрҙә бүлмәлә мин үҙем генә ҡалып эшләйһе эш бар»,—тип һорарға иткәндер, әммә һылыу быны үҙенсә аңланы, күҙен йырсайтып ҡалды.

Урамға сығып, ҡолаҡтары һыуынғас ҡына, егет үҙенең ниндәй мәсхәрә хәлгә төшөүен төшөндө. Әгәр белеп ҡалһалар, күҙ ҙә астыртмаясаҡтар: егет ҡорон хур итәһең һин, башҡорт!.. Әҙәм хуры булмаҫ өсөн, тимәк, күҙҙе йомоп эш ҡылырға — тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк! Шундай итеп ир-егеттәрсә һуғырға — көллө донъя һандалланып зыңлаһын, натурщица ханым үҙе башҡорт ир-егеттәренең арыҫланлығы тураһында ейән-ейәнсәрҙәренә мәҙех әйтеп ҡалдырһын!

Ҡайҙалыр олаҡҡан Каргинды көскә табып, мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы:

-- Атайым бахыр әйтмешләй, дуҫ һүҙен тыңла бер юлы...

-- Дуҫ хаҡына диңгеҙ кисергә әҙер. Диңгеҙ генә түгел, табалағы һыуҙы йөҙөп сығырға ла могу, — тине диңгеҙ бүреһе, ҡылған сәсен усы менән һыпырып, зәңгәр-күксәскә күҙҙәрен мут уйнатып. — Тик, ҡунаҡ ашы — ҡара-ҡаршы, тигән бит әле һинең мәрхүм атайың? Минең дә бер дуҫтарса үтенес бар: һин дә бөгөн үҙең әйткән ваҡыттан саҡ ҡына алдараҡ — алты менән ете араһында бүлмәгә ҡайтмайыраҡ тор инде, яраймы, туғанҡайым? Мин дә әҙәм балаһы — минең дә сеанс бар!

-- Килешелде! — Ҡулға ҡул һуғыштылар. Инде натурщицаға яуап һүҙен еткерәһе ине, әммә Басир, бәлеш ауыҙ, адресын йә телефон номерын һорарға башы етмәгән... «Һүҙҙе үҙе башлағас, сәғәтен дә үҙе тәғәйенләгәс, шул тап үҙе әйткәнсә, ете менән һигеҙ араһында «тып!» итеп ҡалыр әле», тигән уй менән рухланып, дуҫлыҡ шартын үтәү хаҡына арауыҡ ситтә ҡыҙырып йөрөгәндән һуң, булаһы бөйөк эштәр менән ҡанатланып, дөйөм ятаҡҡа тап үҙ сәғәте-минутында морон төрттө егетебеҙ. Булғас, дуҫтарса булһын инде, тип, тейешенән саҡ ҡына уҙғарыбыраҡ, бүлмәнең ап-аулаҡлығына, тимәк, Толяның өйҙә юҡлығына инаныс

менән һуғарылып, егеттәрсә ишекте тибеп ебәрһә, ни күҙе менән күрһен... Каргин дуҫы карауатында «суп!» та «суп!» үбешеп ултыра, мөйөштә күҙ буямаҡка һөйәп ҡуйылған ҡоп-ҡоро мольберт уларҙы тамаша ҡыла. Матростың киң ҡосағында шаҡ ҡатырғыс һыуһылыу — ете менән һигеҙ араһында Басирға сеанс бирергә тейешле натурщица ханым үҙе борғалана... Өҫтәүенә, һыңар күҙен генә Толяның ҡосағынан ҡайырып, Басир күҙҙәренә тексәйеп көлә:

— Нимә, ҡәҙерлем, әллә һаман Толя Каргин дуҫығыҙҙан ризалыҡ һорай алмай йөҙәп бөттөгөҙмө? Улайһа, бына хәҙер һорағыҙ!

Ошонан һуң һабаҡташтар араһында: «Басир Дәүләтбав көләш әйттерә, ә Толя Каргин... кейәү ҡоймағы ашай...» — тигән әйтем таралды...

Хәйер, танауы еҫ тоймаҫ борон — малай сағынан уҡ башланғайны ундай йөҙәткес аймылыштар... Урамдан йә аяғына сүп кереп, йә ҡулын ҡанатып, йә башын тиштертеп ҡайтып инер ине. Һәм ингәс үк ишетер һүҙҙе лә алдан уҡ белер: «Басир ғына булманың, ә хәсрәт булдың һин миңә, балаҡайым!..» Шунан һуң әсәһенең һыҡтап һыҙланыуын, ҡыҙҙырып әрләүен тыңлап, шыбырлап ямғыр яугандағылай татлы талғынлыҡ менән ойоп йоҡлап та китер, бер нисә көн буйына, тышҡа сыҡмай, уйланып үткәрер. Инде өйҙән сыҡмам, сыҡһам да, ишек алдынан ары китмәм, тип эсенән һыҙып һүҙ бирер. Тик яҙмышы барыбер уны һағалап табыр ине.

Бер саҡ шулай күршеләрҙең ҡоймаһындағы тутыҡ ҡаҙауға иренен эләктереп, тотҡонлоҡта оҙаҡ ҡына алйығас, өйгә шарылдап инде. Мәсьәләнең ҡыҙығы ла тап шунда: ҡаҙау ауыҙға тыштан түгел, ә эс яҡлап ҡаҙалған. Был хәл әсәһен нисәнсе ҡат сәс йолҡоп, баш ватырға, ә бөтә малай-шалайға уны «ҡармаҡҡа ҡапҡан шамбы» тип ләкәпләргә форсат бирҙе. Ирен яраһынан ҡутыр ҡубып та төшмәне, тағы ла тышҡа атлыҡты: ырғынғыһы, ергә ятып аунағыһы килә башланы. Шулай ҙа был юлы нәфсене тыйып, аҡыл менән эш итте: өҫтәл аяғына үҙен ботонан бәйләп ултыртты.

Алйып ултыра шулай. Тулы һиллек. Әсәһенең һаман эштән ҡайтмауы ғына йонсота. Күҙ тондороп хәтһеҙ бойоҡҡас, бер заман аҡыл сүлмәгендә шәм ҡабынып, өй эсе балҡып-яҡтырып киттеме ни: иҙән аҫтын асып ҡарарға тигән шөңгөр уй тыуҙы. Ҡулсалы ҡапҡасты көскә ҡайырып һалып, иҙән ҡырыйына ятҡан килеш, баҙҙың серле ҡараңғылығын күҙәтергә тотондо. Төптәге моңһоу тынлыҡ, шытҡан картуф еҫе танауҙы ярҙы, баҙ ҡарынын ҡул осо менән һәрмәп ҡарау теләге тартты. Шул теләккә буйһоноп, сәмләнеп, ярты бил тиңентен һонолдо — етмәне. Ҡуш ҡулын һуҙып ебәреп, саҡ ҡына ҡымшанып ҡуйғайны, ах!.. — кәүҙәһе таҡта ҡырынан шамбылай шыуып китте, устары серек картуфҡа «лырҡ!» терәлде, өҫтәл аяғына сирағын тышаулаған бау һығып ныҡ ауырттырыуҙан аҡырып ебәрҙе. Инде ул өҫкә лә, аҫҡа ла китә алмай, аҫылынған килеш баш түбән тора. Иләк һорарға күрше килеп инмәһә, кем белә, был сәйәхәт ни менән осланыр ине икән...

Икенсе юлы әсәһе аласыҡта эркет ҡайната ине. Ни булһа ла, тәмле еҫ аңҡытҡан ҡаҙанға яҡыныраҡ төйәкләнеү, шул уҡ ваҡытта күрше урамда саң борҡотҡан әшнәләренән дә күҙ яҙҙырмау дәрте менән, ҡасандыр атаһы алып ҡайтып биргән бала башындай тубын ҡосаҡлап, аласыҡ түбәһенә менеп ултырҙы

ла... өҫтөнә шаулатып һибелгән һыуҙан, күрше-күләндең ут ҡапҡандай һөрәнләүенән тертләп уянып китте. Ҡалҡынырға ла ирек бирмәй, үҙен аласыҡ башынан һөйрәп алдылар, ылаш аҫтында ярты йәйҙән күпсеп ултырған бер киҫмәк әсе эркеткә сумырҙылар. Күҙҙәре әсетеп, сәсәй-сәсәй, «Эркетбай» ҡушаматын йөкмәп киҫмәктән сыҡҡас ҡына, аласыҡтың мөрйә төбөнән ысынлап та ут ҡапҡанын, ярты салғыйы тоҡанғанын төшөндө...

Танау һәлендрмә, егет, салғыйыңа ут ҡабынып бармай әле! Аяҡ аҫтында гөрләүектәр тулағанда ниңә шаҡшы хәүефтәрҙән күңел шомландыртырға? Төкөр ваҡ хәсрәттәргә, ынтыл донъяны яуларға! — Үҙ уйҙарына күмелеп, ҡаҡҡан бағаналай ҡатып торған Басир, ҡапыл тертләп уянғандай, кеҫә төбөнән көмөштәрен ҡармалап, телефон өшәләгенә ыңғайланы. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Басир ошо сәғәттәрҙә ҡырыҫ холоҡло Мотал ағаһының «шалопай» тип битәрләүен сым аша ишетергә лә, ҡайтып күрешергә лә теләмәҫ ине. Ҡарттар әйтмешләй, «нужа бабай» күндерә, башын түбән эйҙерә... Басир-шалопай ысынлап та ағаһынан ҡалъя тәм итеп ҡарарға самалай шул: бына тиҙҙән институтты бөтә, ҡайҙа урынлашырға? Әлбиттә, ил бауыры иркен, урын күп, әммә ниндәйерәге?.. Ағаһы, тыуған төбәктәге ырыҫлы шәхес, йән тартмаһа ҡан тартып, уға берәй йылы яҙмыш хәстәрләшеп бирмәҫме? Матур еңгәһе әйтмешләй, баланы — баштан, бәҫле креслоны — йәштән, тиҙәр бит. Эйе, еңгәһе Мөхлисә өҙөлөп тора ла ул уның өсөн, ағаһы ише түгел. Ошо ҡайтыуында уҡ, ҡәйнешкәйем, тимерҙе ҡыҙыуында һуғып ҡалайыҡ, тип сәмләндерә... Әммә донъя тигәнең үҙ холоҡло һылыуҙарҙан да хәтәр икән — еңел генә яуланырға теләмәй: Басир телефонды күпме генә ыҙаламаһын, Шаһибәрәковтар фатирынан өн биреүсе юҡ ине. Их, Донбасстағы баяғы сәйер ҡатын менән егетте осратыуы хаҡында ла тумбытырға кәрәк ине ағайға, юғиһә, һуңынан барыбер ишетелеп, тоҡтан осло беҙ төртөп сыҡһа, ниңә тәүҙә үҙемә әйтмәнең, иләк ауыҙ, тип тере йәнгә тейәсәк... Юҡ та юҡ... ағай тағы берәй ижади командировкалалыр, йә булмаһа ҡала буйлап йөрөйҙөр. «Һәр яҡлап етеш профессионал яҙыусы була тороп, «Эшсе гәли йәнәптәре»н генә яҙып ултырмай, донъя гиҙә лә гиҙә!» тип зарланыусан бит матур еңгәһе — бүрене аяғы туйҙыра, тигәндәре ошолор. Шуға күрә Басир ошолай Мәскәүҙән шылтыратҡанында ла гел еңгәһенә тап килә, ағай кеше уның сәләмен күберәге еңгәй аша ишетә. Ҡайһы берҙә ҡустыһын телефон аша үҙе эҙләттертеп таба ла битәрләргә тотона: «Һин, шалопай, ҡаҙан ҡырындығы ялманған бесәйҙәй, ниңә гелән бисә-сәсә тирәһендә сыуалаһың, ҡасан ир ҡорона керергә уйлайһың?!». Бына хәҙер ҙә сәләмде башлап еңгәйгә бирергә тура килде, их-ма!..

Сым буйынан ресторан директорының арығанырак тауышы ҡолаҡҡа салынғас, Басир күңелен уғата хәүеф биләне: ғүмер баҡый алсаҡ һөйләшкән матур еңгәһе лә ниңәлер борсоу һымаҡ. Әллә юҡһа ҡәйнешенең үткән йәйҙә аҡ ҡайынлы Мәскәү янында рәссамдарҙың Милеевка ижад йортондағы һөмһөҙ ҡылығынан ауыҙы бешеүен, дөрөҫөрәге, ыҫмалалы сыралай төтәп яныуын, шунан Мәскәүгә йәһәт табан тайҙырыуын, сығырына ҡайта алмай әле булһа илке-һалҡы йөрөүен ишетеп белгәндәрме? Кем еткергән, Толямы? Тфү-тфү, атайым бахыр әйтмешләй, әстәғәфирулла тәүбә, Толя дуҫым хаҡында улай уйларға... Әллә

Аҡһылыу үҙеме? Булмаç, сөнки Аҡһылыу-Любала Өфө телефоны юҡ! Тәүбә-тәүбә... ниңә былай бөршәйәм — салынырға барған тауыҡ тиерһең... Бәлки, директор бүлмәһендә кәңәш-фәлән баралыр ҙа шуға күрә матур еңгәһе һалҡын, ярым рәсмирәк һөйләшәлер? Һәр хәлдә, егет шуны аңланы: унының ҡунаҡҡа ҡайтасағына Шаһибәрәковтар ифрат шат, Дилбәр менән икеһе тейеш иртәгә үк «Ярлауыҡ»та күркәм табын түрен биҙәп ултырырға. Ә һин, ҡәҙерле ҡәйнешкәй, самолетыңдан килеп төшөү менән үк беренсе сиратта ағайыңды эҙләп тап, күңелен ҡороҡларға. Ишетһен ҡолағың: эс-бауырына кереп һайра! Теге саҡтағылай йәнә командировка-фәлән уйлап сығармаһын. Үҙеңдең һәм Дилбәр туғаныңдың яҡты киләсәге хаҡында һүҙ бара!

Ах әттәгенәһе!.. Тимәк, йонсоу көндә аэропортта самолет көткәне етмәһә, Өфөгә ҡайтҡас та ҡунаҡханала телефон төбөндә өй көбәгендәй ҡаңғыр, йә булмаһа нәҡ бурҙай эт беләктәй тел һәлендереп ағай әҙенән елеп-юрт -- бына бит ул ҡайһылайға борола был донъялар!

Йәне көйөп, өшәләк ишеген шартлата ябып сыҡты, мыжғыу халыҡ араһында айҡалды — шуның менән онотолорға теләне. Их һин Люба-любимая, ниңә былай уттай өттөң һин мине, тәүге мөхәббәтем Любовь Яковлевна?! Бәхетме был, әллә бәхетһеҙлекме? Ә ғәмәлдә ни нәмә һуң ул бәхет? Мөхәббәтме? Талантмы? Йәшлекме? Аҡсамы?.. Әгәр ҙә шулай икән, ошо мәлдә шул зиннәтле тауистарҙың һәммәһен тиң усында бөрөп тота кеүек тә ул. Тик... «тиң»ме икән һуң әле? Мөхәббәт тигән аçыл ҡошо ҡуныр-ҡунмаç күҙ ҡыҙҙыра түгелме? Ғөмүмән, нимә һуң ул мөхәббәт? Әле булһа Басир ошо мәсьәләне аңлап еткергәне лә, сисә алғаны ла юҡ.

Диплом алды эштәре менән мәш килеп йөрөгән студенттар йәйге натура яҙыу өсөн төрлөһө төрлө яҡҡа таралыша башлағас, кендектәре берештәрҙең икеһенә лә рәссамдарҙың Милеевка янындағы ижад йортона путевка бирелеүе, унда булыуҙарының да йәнә бер үк ваҡытҡа тура килеүе асыҡланды.

-- Иптәш Басир Дәүтләтбаев! — Көмөш-йылтыр ҡылғансәстәре аçтындағы ике бөртөк зәңгәр-күк сәскәләрен әллә ҡайҙан, үҙенең мачта юғарылығынан төбәлдереп өндәштеТоля дуçы.

-- Әү, иптәш Анатолий Каргин.

-- Һинең урыны ожмахта булғыры атайың мәрхүм әйтмешләй, икебеҙ ҙә ҡолағыбыҙға һәм танауыбыҙға киртеп ҡуйыйыҡ әле: ижад йорто тирәһендә бер һуҡмаҡтан йөрөмәçкә, бер ҡойонан эсмәçкә. Ҡыçҡа ғына арауыҡҡа шулай иткәндән кендектәребеҙ ҡанамаç. Югиһә, дүрт йыл буйы былай ҙа беҙҙән һынлы сәнғәттәге Штепсель менән Тарапунька яһанылар.

-- Киртелде, иптәш Анатолий Каргин.

-- Ошо үтә ауыр һәм мөҡәддәс ниәтебеҙ тормошҡа ашһын өсөн, юлға ла, үҙеңдең мәрхүм атайың киçәтеп әйтмешләй, ишәй менән ҡушай булып түгел, ә икебеҙ ике яры сығабыҙ.

-- Килешелде. Әйҙә, Толя, тәүҙә, атайым бахыр әйтмешләй, ошоноң шатлығынан минең юл аяғын йыуайыҡ. Ҡасан осрашабыҙ әле. Шунан һуң бер ыңғай һинекен дә сылатып, һил генә яҙлығышырбыҙ.

-- Тәүәккәлләнек. Беҙ илағансы, нәҙек үңәсле шарап шешәһе илаһын!..

Бына Басир шул Каргиндан башҡа ғына — Милеевкала, рәссамдарҙың һәм яҙыусыларҙың ижад йорттарын айырып үҫкән шау урманда — ҡарағайҙар, аҡ ҡайындар araһында. Сыуаҡтарҙан сыуаҡ көн. Ергә серем итергә яҡкан түңәрәк ҡояштай сағыу аҡлан. Урталыҡта һарғылт нурға мансылған, йәшел шәленең тәлгәштәре ергә саҡлы һәленгән наҙлы аҡ ҡайын...

Рәссам аҡлан ситендәге ҡарағайға һөйәлеп, аҡ ҡайындың паклығынан арбалып, күнегелгән оһоллоҡ менән тотондо мольбертына.

Мауығып күпме эшләгәндер, билдәһеҙ. Бындай саҡта сәғәттәр һиҙелмәй ҙә: киндерҙә буяу һалаһы урын ҡалмауын тойоу ғына рәссам йәнен хыял ҡатыш ысынбарлыҡ ҡосағында күбәләктәй тирбәлеүҙән туҡтатып, ҡабат ҡаты ергә баҫтырта. Һәм ул үҙенең ҡулы һалған буяуҙарҙың еҫен һулап иҫерә.

Һәр кемдөң үҙ балаһы үҙенә ғәзиз тигәндәй, донъялағы бер рәссам да буяу иҙгән мөҙҙәтендә үҙе яһаған төҫтәрен зәғиф итеп күрмәйҙер. Тиккәме ни: «Һәр художник яҙған мәлдә үҙен даһи итеп тоя — шуға күрә генә даһиҙар тыуа, ә насар художниктар — художник түгелдәрҙән сыға», — тигән мәрәкә әйтем бар. Был тәбиғиҙер ҙә, сөнки, художник йән үҙен үҙе даһи итеп һанамаһа, ара-тирә ысынлап та даһиҙар тыумаҫ ине. Йәшермәйек: беҙҙең Басир ҙа яңғыҙ ҡайынды һары нурға ҡойондороп һүрәтләгән киндере ҡаршыһында аяҡтарын тарбайта баҫып, үҙ талантынан маһайып ҡарап торҙо. Шул маһайыу, бәлки, ул кисергән ошо көндөң иң юғары нөктәһе булып ҡалыр ине, әгәр ҙә ки... һис көтмәгәндә аҡландағы аҡ ҡайындың төбөндә... һары сәсле ап-аҡ һылыу ҡыҙ ҡиәфәтендәге мөғжизә хасил булмаһа. Бына ул: ҡайын туҙылай аҡ туфлиҙарын ҡулына элеп тотҡан, ап-аҡ ебәк күлдәк кейгән ялан аяҡлы күбәләк күҙ алдында нурлы аҡлан буйлап елеп-осоп бара, ураҡсы көлтә бәйләй торған һары арыш һаламылай шаҡарып үргән берләм толомо ап-аҡ күлдәк ерлегендә алтындай буталланып, һабалағы аҡ ҡымыҙҙа йөҙгән ижау һабылай төҫмөрләнә. Тәрән һулыш алып (Басир быны алыҫтан тороп тойҙо!), аҡ ҡайынҡайҙың борҡолдаҡ-онтаҫ туҙын ҡалҡыу күкрәге менән, һөттәй ап-аҡ бите менән һөрөлдөрөп-һыҙырып сүгәләне:

--Аҡ ҡайыным минең, аҡ ҡайғым минең! Аҡ ҡайғылы аҡ ҡайыным минең! — Сәйер аҡ ҡайғы хаҡындағы йөрәкһеү урыҫ һүҙҙәре, сылтыр-сылтыр, йәш рәссамдың йөрәгенә ҡойолдо. Көтмәгәндә бына икенсе тауыш:

-- Люба! Ҡайҙа китеп олаҡтың, шайтан алғыры! — Ҡарттарса мыжыҡланыу. Инде рәссам күреп тора: ҡыҙ тертләне, ҡосағынан ҡайынды ысҡындырҙы, ап-аҡ туҙлы олонға һөйәлеп ултырҙы, туфлиҙарын ҡағып кейҙе.

-- Әү, мин бында. Кил, атай, аҙыраҡ хәл алайыҡ.

-- Ҡайтайыҡ инде: балыҡ ҡата...

-- Күрәһең бит, атаҡайым, ҡайһындай ҙа матур көн, бал ҡорттары гөжөлдәй. Ултырайыҡсы саҡ ҡына.

-- Их, ҡайын ғына булманы — ҡайғы булды был! —Һыңар ҡулына оҙон ҡыуал, икенсеһенә айғолағынан тал үткәреп бот буйлыҡ суртан тотҡан, тышҡы ҡиәфәте менән оҫтанымы, тирмәнсенеме хәтерләткән бабай ҡыҙҙың ҡаршыһына килеп, ыхылдап ергә ултырҙы, иҫке кейеҙ эшләпәһен көрәктәй усына йомарлап, маңлай тирен тыҫҡылдатып (быныһын да тойҙо рәссам!) һөрттө. Шул ыңғайҙа уның ағара башлаган түңәрәк һаҡалынан он һибелгәндәй булды. — Уҙған һайын

туҡталаһың. Әллә ошо ҡайын төбөнә сихырлағандар инде үҙенде, ә ҡыҙым?

—Эй, атай, ошондай ҙа матурлыҡты нисек урап үтәһең?

Ҡарт, әшләпәһен кейеп, төрөпкәһен ашыҡмай ғына төйҙө. Тоҡандырып, танауы аҫтынан бормасланған ҡуйы-зәңгәр төтөн ебенең ҡылйыландай бөгөләһығыла үргә табан тағатылыуын хозурланып күҙәтте.

— Яңғыҙ нәмә матур була ул, ҡыҙым. Аҡлан ҡосағына күҙ һал: был ҡайындан ғәйре ниндәй аҡлыҡ бар? Һин дә минең ошондай аҡ ҡайыным — донъяла берҙән-бер генәм бит, ҡыҙым...

Ә тегеһе көтмәгәндә ҡырыҫланып бүлдерҙе:

— Атай, асыуланышмайыҡ. Теге ваҡытта ла ошолай яғымлы ғына башлап, стенаға төкәткәйнең. «Ике яңғыҙ — ике гүзәл — бергә ҡушылһа, бәхет тыуа», — тип шул һантыйыңа беркетергә иткәйнең...

Күренеүенсә, бында бәләкәс кенә ғаилә драмаһы бара ине. Ихтыярһыҙҙан шуның шаһиты булыуына үкенеп, рәссам күҙҙәрен йомдо, ошоноң менән, әйтерһең, үҙенең барлығын кәметергә уйланы, сөнки хәҙер һелкенеү, был икәүҙе тетрәндереп китеп барыу үҙе үк мәрхәмәтһеҙлек булыр ине.

—Их! Иванушка һин, Иван! — Һаҡалтай көрһөндө. Ҡыҙына әйләнеп ҡараны. — Һантый түгел ул.

—Атай, тағы ҡайҙа һемерергә өлгөрҙөң?

Ҡарт көлдө:

— Һалып биргәстәре ни, ризыҡтан өҫтөн булырғамы? Василиса ҡоҙағыйҙарҙа, әлбиттә...

-- Ниндәй “ҡоҙағый” тағы?! Һаман да шул Иван тупһаһын тамайһың...

-- Туҡта, бер ҡыҙыҡ һөйләйем әле! Ҡоҙағыйҙарҙан – әй, ғәфү! – Василисаларҙан сығып барһам, киндерле тирәс беркетелгән өсаяғын урам уртаһына суҡайтып, асылмаған кукуруз сәскәһенең себешкеһеләй сағыу сәсле, телеграф бағанаһылай оҙон сираҡлы бер егет баҫып тора, ҡулында буяулы бумала. Һәҙәптәрен ысҡындырып, матрос тельняшкалы түшен күркәләй киреллдергән...

«Шайтан алғыры, Анатолий Каргиндың тулы һынлы портреты был!» — Басир Дәүләтбаев, йоҡомһорап ултырыуын онотоп, шулай һөрәнләй яҙҙы...

— Ҡул иҙәп туҡтатты: «Кил әле яҡыныраҡ, ҡәҙерле ҡартлаҫҡайым!» — ти. Барҙым. Баҡтиһәң, киндеренә Ивандар урамын буйҙан-буй һуҙып һүрәтләп маташа икән дә ҡәһәрең. «Олатай, әйт әле, бынау йорттарҙың тәҙрә ҡапҡастарын, фронтондарын кем был ҡәҙәр оҫта итеп биҙәкләне?» — тип, эс-бауырға инеп бара. «Кем булһын, Иван». —«Ниндәй Иван?» — «Ниндәй булһын, һалып бирһәң сайҡап йотор Иван». — «Юҡ, фамилияһы, тим». Әйтеп бирҙем фамилияһын, ә теге ҡәһәрең, блокнотын сығарып, яҙып та алды. «Ҡайҙа осратып күрергә була ул Иванды?» — «Ҡайҙа булһын, Магадан яҡтарында, — тим. — Оҙон аҡса артынан сабып китте». — «Һем, тағы ла бер һорау», — ти. — «Рәхим итегеҙ, икене бирегеҙ». — «Ошо Лопуховка ауылынан ана теге яҡҡа тартып, ана теге йылғаны аша сығып, яҙыусыларҙың ижад йортон үтеп, тағы ла бер аҙыраҡ барһаң, Куликово тигән ауыл һәм унда ла ошондай уҡ ғәжәйеп бер урам бар». — «Беләм ул ауылды, беләм ул урамды». — «Әйтегеҙ әле, шул урамдағы йорттарҙы

ла һеҙ әйткән Иван семәрләп биҙәнеме?» — «Юҡ, минең белеүемсә, ул урамды шул ауыпдың Яков атлы бер ҡарт һантыйы маташтырҙы»,— тигән булам. Теге иһә бумалаһы менән һуғып йыға яҙҙы: «һеҙ нимә, талантты мәсхәрәләйһегеҙ? Ошондай ике яҡташығыҙ булыу менән ғорурланыу, исемдәрен эске изге ҡалтыраныу аша телгә алаһы урында, береһен «һалып бирһәң, сайҡап йотор», икенсеһен «ҡарт һантый» тип һанайһығыҙ?» — «Әлләсе, уларҙы көллө тирә-яҡ шулай тип ләҡәпләйсе», — тигән булам. «Алдамағыҙ, бер кем дә улай тимәç. Халыҡ үҙенең таланттарын таный ул. Беләһегеҙме, икеһе лә кемдәр улар?» — «Әлләсе, белмәйемсе». — «Белмәһәгеҙ, белегеҙ: бөйөк художпиктар улар! Икеһе ике школа! — Ҡарт йәнә хихылдап көлдө. — Ишетәһеңме, ҡыҙым: Иван менән атайың — школа!

-- «Школа»!.. Мин ул школаның кластарын байтаҡ байҡаным, шөкөр...

Атай кеше ҡыҙының тел төбөн «ишетмәй» ҡалдырҙы:

-- Мәскәүҙән килгән художник икән үҙе — Иван менән беҙ семәрләп биҙәгән йорт кәрниздәрен, ишек-тәҙрә яңаҡтарын шәйләп йөрөй... — Төрөпкәһен туҙға туҡылдатып ҡаҡты. — Әйткәндәй, бына нимә тине миңә Василиса ҡоҙағый... телеграмма һона: «Магадандан «молния» итеп һуғылған, бына әле генә Пантелей килтереп һөйөнсөләне — шуның ҡыуанысын йыуып ултырабыҙ», — ти. Ә телеграммала ни, баяғы: фәләнсә көндә, фәләнсә сәғәттә осоп ҡайтып етәм, улың Иван, тип әшкәртелгән.

-- Иван?! — Ҡыҙ тертләне. — Нисәнсе числола тигән?

-- Ул число тап бөгөнгө була инде.

-- Атай, был һүҙҙе ошонда йомдоҡ! — Ҡыҙ, ырғып тороп, һуҡмаҡҡа ынғайланы. — Киттек! Иртәгә мин китап уҡыусыларымды Бородино ҡырына алып барам, экскурсияға.

-- Иванушка, тим бит...

—Ул исемде башҡаса ҡабатлама, үтенәм.

Һаҡалтай ыһылданы, көрһөндө:

— Их, Иванушка-Иван, үҙ бәхетеңә үҙең балта саптың шул! — Суртаны менән ҡармаҡ ҡыуалын ҡармап, ҡыҙы артынан һәлпәңдәне. Ә рәссамдың күҙе алдында таныш түгел һылыуҡайҙың күбәләктәй елпелдәп осоп үтеүенән ниндәйҙер сихри хозурлыҡ, аҡлыҡ донъяһы яғылып тороп ҡалды. «Китапханасы икән... Аҡһылыу...»

Ҡыҙҙың табандары баçып уҙған серле һуҡмаҡҡа йөрәге-йәне тартылып: «Ниңә Бородино ҡырына барып әйләнмәçкә миңә лә иртәгә?!» — тип сәмләнде...

## ӨСӨНСӨ СӘХИФӘ

Яҙыусы Мотал Шаһибәрәков Оло йорттоң алдындағы ҡыҙыл гранит тирәсле киң майҙанға машинаһын ҡалдырып, ап-аҡ мәрмәр баçҡыстарҙан бина болдорона ирәүән күтәрелгәндә, ирекһеҙҙән, Ағиҙел аръяғындағы һоҡландырғыс икһеҙ-сикһеҙ киңлектәргә — ҡуйы урман һәм тауҙарға ике күҙе төбәлеп, сафлыҡ аңҡытҡан һауаны үпкәләрен тултырғансы һуланы. Йылға аша

иҫкән тығыҙ тибемле ел бина көмбәҙендә ялҡындай ҡыҙыл флагты елберләтте, һауа әләм ҡанаттары ҡағылыуҙан зыңлап тирбәлгәндәй ине. *Лифттағы дәү көҙгөнән* Мотал үҙенең аптырабыраҡ баҡҡан йөҙөн, киң яурынлы, урта буйлы һынын күрҙе, иларға йыйынған сабыйҙарса һәлберәгән ирендәрен йыя һалып көлөмһөрәне: ологайта, ахыры, хискә бирелеү ҙә инде ярамай. Көҙгөнән уның күҙҙәренә оло суҡмар танаулы, кәкерәйеп алға сыҡҡан мыҡты эйәкле, ҡарпыш ҡолаҡлы, ҡабарыңҡы ҡабаҡлы һәм һоро күҙле, өҫтәүенә, ҡашҡа кәзә тәкәһенеке һымаҡ, һирәкләнгән төклө маңлай өҫтөндә генә суҡайтып үргә ятҡырылған бер шәлкем сал сәсле "ҡашҡа ир" текләй ине. Шуныһы ғәжәп, түбә сәсе ҡойолоп бөтә яҙһа ла, уның ике сикәһе лә маңлайы ғына салланды — ҡалған яғы сөм-ҡара килеш ҡалды. Шул ҡиәфәтенә ҡарапмы, әллә тормошонда көллөһө лә йүн килеп торғанғамы, «Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе» тип атаусылар ҙа байтаҡ (шул иҫәптән үҙенең хәләл ефете!). Улар хаҡлылыр ҙа, бәлки. Әгәр шулай булмаһа, теге ҡәһәрле утыҙынсы йылдар аҙағында көтмәгәндә атаһынан етем ҡалған һәм «халыҡ дошманының улы» булып әүерелгән бәләкәс Металл (атай ҡушҡан исеме – паспорты буйынса шулай) бөгөнгө хөрмәтле әҙип, ил ағаһы — танылған яҙыусы Мотал Шаһибәрәков хәленә олғашыр инеме икән? Йылдар ни тиклем генә ауыр булмаһын, ғүмеренең иң яуаплы мәлдәрендә лә уға ярҙам ҡулы һуҙыусылар табылды — иң кәрәкле ишектәр асыла торҙо. Олаҡмыш зат Булаттимер Шаһибәрәковтың ике балаһы ла «халыҡ дошманының суралары» булыуҙарына ла ҡарамай, баш ҡаланың һиммәтле уҡыу йорттарында белем алды, ныҡлап аяҡҡа баҫты. Өҫтәүенә, атайҙың яҡты исеме лә илгә аҡланып ҡайтты. «Ил өҫтөндә сәпсек үлмәй», — тигәндәре ошолор.

Әҙиптең уйҙары өҙөлдө: өсөнсе ҡатта Обком секретарының ҡабул итеү бүлмәһе ишеге асылды, ҡаяны ҡырҡып яһалғандай ауыр дүрткел кәүҙәле бүлмә хужаһы, тышҡығаса кейенеп алған Димустан-Ҡыҙыл башҡорт, кәкере башлы юл таяғын урта биленән услап тотҡан хәлдә коридорға атлығып сыҡты. Ниңәлер, үргә ҡарай тәртипһеҙ тырпайған уттай ерән маңлай сәсенә йыуантыҡ ҡыҫҡа биш бармағын батырып, ишек төбөндә бер аҙ туҡталып торҙо. Һыныҡ ҡаштары түшәмдән түгелгән неон нурында баҡыр сыбыҡ остарылай ҡыҙарып йылтыраны, тығыҙ теҙелгән шундай уҡ оҙон керпектәре серт-серт йомолдо — уйланғанда була торған ғәҙәте. Ҡорҙашын күреү менән үк, ике ҡуллап еңдәре өҫтөнән ҡыҫып тотто:

-- Килдеңме? Әйттергәнем ҡасан -- ниңә мызмырлайһың?!

-- Ыҫҡынып булмай бит, әй, эш...

-- Әллә мине, эшһеҙ генә, эт һуғарып йөрөй тип һанайһыңмы?

-- Үҙең беләһең – романым...

-- Романың ҡасмаҫ, дөндөк аэропортҡа!

-- Үҙ машинамда барайыммы?

-- Ул кәнсир банкаң ҡалып торһон, йәплән минекенә.

Ағиҙел күперен сыҡҡас ҡына һорай ҡуйҙы яҙыусы:

-- Ут ҡаптымы әллә, ниңә мине һөйрәйһең?

-- Уттан да былайыраҡ: *яңы хужа* килә ҡыҙыл мәркәзебеҙҙән!

Мотал «терт!» итеп ҡалды: «Ниһайәт, томандар асыла – киткән «мал»

урынына ниндәйерәк «мал» килере асыҡлана, тик башыбыҙға бәлә булып төшмәһә ярар ине!» -- Әҙип шулай уйланы, сөнки заманабыҙ ҡануны берҙәй: «эшмәкәр»леге йөҙәтеп бөткән иҫке хужа алмашынһа, яңыһы һәр саҡ унан да «хуже» -- хөртөрәк булып сыға... «Кем икән, кем икән?..»

«Беренсе»нән ҡала иң ҙур етәксе --- Обкомдың идеология буйынса секретары булараҡ Димустанды был һорау, әлбиттә, борсоманы, сөнки иҫке түрә киткәс тә секретарҙарҙың бөтәһе Мәскәүгә саҡыртылып, партияның Үҙәк Комитетында айырым һөйләшеүгә *лайыҡ* булғайны һәм тиҙҙән тәғәйенләнәсәк яңы *беренсе* тураһында сер итеп иҫкәртелгәйне. Баҡтиһәң, йәшлегендә Тын океан хәрби-диңгеҙ флотының һыу аҫты кәмәһендә хеҙмәт итеп сыныҡҡан элекке мыҡты моряк, ә һуңынан үҙебеҙҙең «Арланнефть» тресында партия комитеты менән уңышлы етәкселек итеп, Мәскәүгә партия эшенә үрләтеп үҫтерелгән *алтын кадр* Вилор («Владимир Ильич Ленин Октярьская Революция» тигән һүҙҙәрҙең баш хәрефтәренән йыйылған исем) Иҫәргәп улы Хәбибрахманов икән. Атаһы Иҫәргәп булһа ла, иҫе дөрөҫ, төтөнө туры йөрөгән – уланына йәғни партияның буласаҡ шанлы эшмәкәренә *лайыҡлы* исем биргән. Мәғлүмәтте тулыраҡ һоҫорға түҙемһеҙләнгән юлдашын ҡәнәғәтләндерергә булды:

-- *Беренсене* ҡаршы ала барабыҙ!

-- Бына һиңә кәрәкһә -- иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ! – Мотал, күнегелгән ғәҙәтенсә, йәһәт ҡәләмен, ҡуйын дәфтәрен сығарҙы. – Зинһар, тулы исем-фамилияһы?

Ҡыҙыл башҡорт юлдашының ҡалтыраған ҡулдарына иғтибар итте, ирәүән йылмайҙы:

-- Хәҙер инде сер түгел, яҙ. Заманында Мәскәүгә саҡыртып алып үҫтерелгән үҙебеҙҙең үк кеше, нефтяник. Исем-фамилияһы Вилор Иҫәргәпович Хәбибрахманов. Ҡайтҡан малда хәйер бар, тиҙәр түгелме, амин.

Моталдың әллә хәүефтән, әллә ҡыуаныстан көллө тәне сымырланы:

-- Ниңә мин генә, башҡалар ҡайҙа?

-- Ҡаршыларға, тиһеңме?

-- Эйе.

-- Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе бит һин – эргәмдәһең шуға күрә. Башҡалар ҙа ошо аэропорт юлында.

Яҙыусы, тамаҡ ҡырып ҡуйҙы ла, төптән ҡәнәғәтләнде: Оло йортта, тимәк, абруйы көслө!

Самолеттың килеп етеүенә бер-нисә минут ҡалыуы хәбәр ителгәс, оло түрәне ҡаршылаусы «абруйлы халыҡ» тейешле урынға өйөрөлдө, ысынлап та Моталдан башҡалар ҙа байтаҡ «тарттырылған», бөтәһе лә шат һәм ғорур күренә. Таҡыр тимер-бетон юлдан лайнер һалмаҡ боролоп, юл ситенән вокзалғаса түшәлгән ҡыҙыл келәм тәңгәленә етеп туҡтау менән үк ерҙе-күкте тынлы оркестр һелкетеп, күтәрмәнән төшөп килгән ҡәҙерле пассажирҙың һәр аҙымын дәртле марш гөрләтеп, затлы аяҡтар ҡыҙыл келәмгә баҫыу менән үк өҙөлдө гөрөлтөһө. Көрәшселәрсә мыҡты-оҙон кәүҙәле ине беренсе секретарь, Сталиндыҡылай текә ебәрелмеш ҡара сәсле, өҫтөнә фыртый моряктарҙыҡынса яҫыбалаҡ салбарлы ҡара костюм кейгән (балаҡтары ялпылдап ерҙе һеперә), көйҙөрөп ҡараған ҡара

күҙҙәре әҙәмдәрҙең, йөҙөнән дә бигерәк, смәйер: ни өсөндөр арт һындарын быраулаусы иркәк имеш... Ул үҙенең “Мәскәү кадры” булыуы менән ғорур, ҡиәфәте һалҡын-тәкәббер ине, сөнки бында, быуаттар буйына Рәсәй империяһына (һәм аҙаҡ совет хөкүмәтенә!) баш бирмәйенсә ҡарыулашҡан, Рәсәйҙең «баш ауырыуы»на әүерелгән «тынғыһыҙ» халыҡ өҫтөнән нәүбәттәге күҙ-ҡолаҡ итеп тәғәйенләп ебәрелгәйне. 1920 йылғы Сөләймән Мырҙабулатов етәкселегендәге ҡоралды халыҡ күтәрелеше Башҡортостанға Мәскәү үҙе килтереп ҡуйған Шәмиғолов режимын ҡолатҡандан һуң, партия Үҙәк Комитеты республиканы айырым «гайка» иҫәбендә тота һәм ундағы милләтселек зәхмәтенә ҡаршы «идеология фронты»нда «гайканы бороп нығытыу» йәки «гайканы саҡ ҡына бушатыу» мәсьәләһен Кремлдең иң юғарылыҡлы түрәләренең иң ғәййәре («серый кардинал» тип ләҡәпләйҙәр үҙен) – Политбюро ағзаһы Сусликов Михаил Андронович иптәш үҙе хәл ҡыла, «идеология фронты» буйынса шул юҫыҡтан еткерелгән мәғлүмәттәрҙе ентекле барлай, шул йәһәттән Сталин үҙе тамғалаған «кеше йәндәренең инженерҙары»н йәғни милли әҙиптәрҙе «ныҡлы иҫәптә тоторға» бойора ине. Ошондағы Оло йортоноң коридорҙарын гиҙгән риүәйәт буйынса, «һоро кардинал» хәстәрлеге арҡаһында Рәсәйҙең шиғриәт күгендә сағыу йондоҙ балҡыны бер заман, ә эш былай булды. Ниндәй ҙә бер милли мәҙәниәтте ҡалҡытыбыраҡ билдәләү ихтыяжы тыуып, автономиялы республикалағы Мәрүән Карами исемле һәм Рәсәй-әсәйгә ҡарата үтә лә һөйөүсән-мөкиббән мөнәсәбәтле бер шағирҙың «досье»һын алдына килтереп һалғастары, шеф ике төп нәмәгә иғтибар итте: заманында «Культура» журналында сыҡҡан «За здравие товарища Берия» тигән мәҙехнамәһе һәм ағындағы осорҙағы «Ҡайын япрағы» исемле шиғырының урыҫсаға һүҙмә-һүҙ тәржемәһе. Сусликов иптәш, тәүгеһенә әллә ни иғтибар бүлмәһә лә, һуңғыһының төп ғилләһен йәһәт эләктереп алды:

-- Республика -- Рәсәй-ҡайындың бармаҡ битендәй генә бер япрағы... Тимәк, Рәсәй олононан башҡа йәшәй алмай. Тейешле ел япраҡты өҙөп ташлай йәки ул һалҡын һулыштан ҡыуарып ауа...

Ярандары быны шағир йоратына сығарылған маҡтаунамәме, әллә үлемесле приговорҙың башланышы ғынамы тип һағайып көткәндә, шаҡ ҡатырғыс осланды:

-- Шәп! Айырым иҫәптә тоторға был авторҙы!

-- Тотабыҙ, тотабыҙ, Михаил Андронович.

-- Тотоғоҙ, тотоғоҙ. Талантлымы?

-- Иң талантлыһы, тиҙәр.

-- Башҡа күрһәткестәре лә ыңғаймы?

-- Ыңғай, Михаил Андронович.

-- Әйткәндәй, ул республикала быға яраҡлы ниндәй юғары дәрәжәләр бар әле?

-- «Халыҡ шағиры», Михаил Андронович.

-- Бирегеҙ шуны! – Мәсьәләнең сиселеүен аңлатып ҡул һелтәне.

Әммә-ләкин республиканың Оло йорто даирәләрендә юғарынан төшкән юғарылыҡлы был ишара оло хәүеф, хатта паника тыуҙырҙы. Эш шунда: советтар

Рәсәйенең был беренсе совет автономияһы «аҡтар» һәм «ҡыҙылдар» араһындағы оло тартыш арҡаһында көсәргәнешле тыуған кеүек, аҙаҡ бөтә милли республикаларҙың мәҙәни тормошонда күренекле урын аласаҡ «Халыҡ шағиры» тигән маҡтаулы дәрәжә лә беренсе башлап тап ошо «ғауғалы» автономияла яралып, әлеге заман урындағы юғарылыҡлы етәкселәр өсөн сәйәси яҡтан сетерекле «баш ауырыуы»на әүерелгәйне. Сөнки АБССР дәүләт башлыҡтары Муса Мортазин менән Али Тереғолов 1922 йылдың 16 февралендә ҡул ҡуйған рәсми ҡарарҙа[6] уҡ Хәбибулла Ғәбитов менән Мөхәммәтша Буранғолов (партиябыҙ аҙаҡ нәфрәтле тамғалауынса, элекке вәлидовсылар) икеһе лә ҙур хәрефле «Халыҡ шағиры» рәүешендә теркәлеп ҡалдырылыуы ғына етмәгән, башҡорт халҡының күңелендә улар әле булһа иң беренсе *башҡорт халыҡ шағирҙары* дәрәжәһендә йәшәүен дауам итә ине. Шуға күрә был ике йәшерен дошмандың халыҡ шағирлығын башҡорттан оноттортоу өсөн, партиябыҙ бөтәһен дә эшләне һәм шөйлә уңышҡа иреште, ләкин ябай-ялпы күңелендәгеһен юйып ташлай алманы – Халыҡ шағиры, имеш, тап Хәбибулла менән Мөхәммәтша кеүек, *милләте буйынса башҡорт булырға тейеш...*

Ошо серек тенденция совет шарттарында етәкселек даирәһен нык ҡамасаулап, унан сығыу юлы уйлап табылды: баяғыларҙың беренсе «халыҡ шағиры» дәрәжәһен сәйәси йәһәттән аша атлап уҙырлыҡ беренсе *«совет халыҡ шағиры»н* булдырырға! Сәйәси юҫыҡтан ифрат дөрөҫ булһа ла, юғары етәкселек өсөн был һис кенә лә кәрәкмәгән ҡатмарлыҡтар тыуҙырҙы, сөнки, башҡорт халыҡ мәҡәленсә, бүре лә (Мәскәү) туҡ, һарыҡ та (башҡорт ябай-ялпыһы) бөтөн булыуы мотлаҡ. Тимәк, беренсенән (партиябыҙ сәйәсәтенә тап килһен өсөн), ул теге һөрһөгән икәүҙәй *ысын башҡорт* булмаһын. Икенсенән (башҡорт ябай-ялпыһын тынысландыртыу өсөн), шул уҡ ваҡытта *шәжәрәһе буйынса башҡорт* икәнлеге дөрөҫләнһен. Ошо шартҡа тулыһынса тура килгән, ә иң мөһиме, ғүмере буйына һыра яны сафсаталарында башҡорттарҙы күрә алмай түбәнһеткән, хатта Башҡорт автономияһының йыллыҡ юбилейын байрам итеүсе бер төркөм ҡәләмдәштәре араһында: «Мона башҡыртҡа автономия – тотсын шушынымны!» -- тип сығарып күрһәткән сағында шул-баяғы вәлидовсылар ҡалдығы Буранғоловтың суҡмарҙай тос йоҙроғона тарыған бер урта ҡул шағир бар – Туҡай әйтмеш Нәжип Фигури. Ошо кандидат буйынса өҫтә ҡуйылған тәүшарттың беренсе яртыһы йөҙ процентҡа тура килгәнлектән, икенсе яртыһы ғилми яҡтан дәлилләп башҡарыла – үҙен «чип-чиста татармын!» тип күкрәк һуҡҡан Фигуриҙың башҡортлоғон дәлилләүсе шәжәрә киҫәге табыла һәм... 1923 йылдың 9 майындағы шундай уҡ рәсми ҡарар[7] менән Башҡорт АССР-ының *«беренсе* ***совет*** ***халыҡ*** *шағиры»ның* исеме иғлан ҡылынып, тантанаһы баш ҡаланың «Эрмитаж» һарайы сәхнәһендә тап шағирға арнап яҙылған «Аждаһа» маршы гөрөлтөһөндә үткәрелә[8].

Тарихты белмәгәнлектәнме, «үткәндәргә салауат!» тип ҡул һелтәргә яратыусан шанлы Мәрүән Карамиҙың да ни рәүешле нәүбәттәге (инде бәләкәй

---

[6] ЦГИА Р.Б. (Центргосархив), ф. Р-933, оп. 1, дело 75, л. 32.

[7] ЦГИА Р.Б., ф. Р-394, оп. 1, дело 219, л. 130.

[8] «Власть Труда» газетаһының 1923 й. 7 июнь №126 һаны.

хәрефле) совет халыҡ шағиры булып китеүенең тарихына килгәндә, был юлы эш өйрәнелгән шыма һуҡмаҡтан барҙы: ижад кимәлдәре берҙәй башҡорт һәм татар милләтле ике кандидаттың тәүшарттарға тулыһынса яуап биргәнен һәм Сусликов иптәш шәхсән үҙе төртөп күрһәткәнен (Мәрүән Карамиҙы) раҫларға тәғәйенләп, әлеге шул ябай-ялпы «ниңә һаман татарҙы...» тип баш ватмаһын өсөн, мәсьәләне тәүбаштан уҡ ғилми нигеҙгә ҡорҙолар. Аспирантурала уҡығанында Мәскәүҙән үк «сәйәси дағаланып» ҡайтмыш һәм илһамлы эшмәкәрлеге тулыһынса ағымдағы сәйәсәткә тап килмеш өлгөр тәнҡитсе ("башҡорт белинскийы") Ғаяс Хөснигә ашығыс рәүештә ошо сетерекле һәм яуаплы партия бурысын йөкмәтелеп, партиябыҙҙың ышанысы йөҙ процентҡа аҡлана: Ғаяс Хөсни тәрәндән алып тикшереүҙәренең һөҙөмтәһен матбуғатта иғлан ҡылып, күрһәтелгән кандидаттың йөҙ процентлы башҡорт икәнлеген ғилми яҡтан дәлилләп бирә. Дөрөҫ, баяғы һөрһөгән Буранғолов, архивтарҙа соҡсоноп, яҙыусыларҙың асыҡ партия йыйылышында мәсьәләгә аяҡ салып маташты: 1837 йылда башҡорттарҙан ер һатып алып Бүресуан йылғаһы буйында төпләнмеш фәләнсә баш килмешәктең бөтәһе лә рәсми документта аҡҡа ҡара менән *татар* тип яҙылғас, быуындан-быуынға «чип-чиста татар» йөрөгәс, шундай чип-чиста бабаның туранан-тура тоҡомо Мәрүән Карами иптәш бөгөн килеп нисек итеп чип-чиста башҡорт булһын – ғалим Ғаяс Хөсниҙең был асышынан хатта наҙан тауыҡтар ҙа бот сабып көләсәк бит! Шул көләмәс бөтә СССР-ға таралып, илебеҙҙе мәсхәрәләмәһен өсөн, анкетала уның милләтен нисек бар – шулай ҡалдырыу йәғни чип-чиста татар тип яҙыу хәйерле булмаҫмы, йәнәһе. Өҫтәүенә, был Мөхәммәтша тигәндәре тәнәфестә коридор башында тәмәке тартыусылар эргәһенә килеп, төтөн борҡотҡан арандай ауыҙы менән туранан-тура Мәрүән Карамиға өндәште: һин, уҙаман, шиғырҙарыңда гел «атайыбыҙ Ысталин» тип яҙаһың, бая ғына ялҡынлы телмәреңдә лә шуны ҡабатланың. Уны ҡайҙан беләһең, әллә әсәйең ысынлап та Ысталин менән ятҡанмы?.. Алайһа, чип-чиста грузин йәки грузин йәһүде түгелме һин?..

Сығырынан сығып нәфрәтләнгән шағир йыйылыштың дауамында шул оторолоҡто, түкмәй-сәсмәй, бөтә залды яңғыратып ҡәләмдәштәренә еткерҙе, хатта, һөйөклө совет хакимиәтен төптән ҡаҡшатыуға йүнәлтелгән мәкерле диверсия -- халыҡ дошмандарының яуыз ҡотҡоһо тип һанайым быны, тип тамғаланы, ләкин, ауыҙ йырып быш-быш ғәйбәтләшеүселәрҙән башҡа, дәррәү күтәреп алыусы табылманы, ә Оло йорттан килгән вәкил был теманы тиҙерәк йомоп ҡалдырыу сараһын күрҙе, сөнки Сусликов иптәшкәсә барып етһә, халыҡ дошмандары ҡотҡоһона юл ҡуйғаны өсөн күсәк башы иң элек үҙ башына төшәсәген йөрәге һыҡтап шәйләне. Мәрүән Карамиҙың совет халыҡ шағиры булып китеүенә был, әлбиттә, тоҡарлыҡ яһай алманы, сөнки Буранғоловтың үҙенең: «Я, конечно, погоду не делаю, но ее испортить могу» тигән ҡанатлы әйтеме хаҡ ине. Партия өлкә комитетының шифалы ләйсән елдәре был «испорченная погода»ны «Макар быҙау көтмәгән яҡтарға» ҡыуалап, Мәрүән даны бермә-бер күтәрелде: нәүбәттәге һайлауҙарҙа уны республика Юғары Советына халыҡ депутаты итеп һайланылар, шуның рәйесе итеп тә күтәрҙеләр. Һәм уның хаҡта «күренекле *дәүләт эшмәкәре*» тигән мәҙехтәр ырағас, ни

рәүешлелер баяғы Макар тарафынан иҫән-имен ҡайтып төшкән «погода диверсанты» тағы ятып тынманы: ғүмерлек буйҙаҡ хәлендә йөрөмөш Мәрүәндең тел-теш араһына кергән шикле енси мөнәсәбәттәренә тумбытып, буғай, «күренекле дәүләт» урынына «күренекле *ғәүрәт*[9] *эшмәкәре*» тигән ырашҡы ебәреп йонсотто. Шул милләтселегә арҡаһында 1937 йылда йәнә бер тапҡыр ултыртылып ҡайтҡан отороноң хәттин ашҡан ҡылыҡтарын ҡапыл ғына ауыҙлыҡлауы бик ҡыйын, әммә улар совет халыҡ шағиры Мәрүәндең дә, уны күтәргән Оло йорт әһелдәренең дә йөрәгендә нәүбәттәге ҡанлы төйөн булып ҡалды, шуға күрә йүгәнһеҙҙе ахыр сиктә ниндәй яҙмыш көткәнлеге сер түгел ине.

Сталиндың үҙе тарафынан совет яҙыусыларының етәксеһе итеп ҡуйылған һәм уның күрһәтмәләрен тормошҡа ашырыу юлында мөкиббән китеп эшләгән «пролетар әҙип» Максим Горький идеология фронтындағы асылмай ятҡан сирәмгә -- СССР халыҡтары фольклорына иғтибарҙы арттырып, халыҡ ижады нигеҙендә совет фольклорын тыуҙырыуҙы көн үҙәгенә ҡуйғас, ҡаҙаҡ Жамбул Жабаев кеүек аҡындар, лезгин Сөләймән Стальский һымаҡ ашуғтар – «совет ғүмәрҙәре» (гомерҙары) эҙләп табыу кампанияһы көсәйҙе; шуға бәйле башҡорт илендә лә рәсми рәүештә *халыҡ сәсәне* тигән хөрмәтле дәрәжә булдырылып, лайыҡлы беренсе кандидат та табылды – Бирсуан буйындағы бесән баҙарында сәйлек хаҡына:

Сәйфи салам саламы,
Ғәйфи печән аламы?
Печән, салам ашамаса,
Сыйырдан сөт буламы? –

рәүешендәгерәк ижад емештәрен таҡмаҡлап йөрөүсе Бирсуан Сәйфийе. Шуны «кондицияға еткереү» өсөн Бирсуан буйына совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами үҙе сәйәси яҡтан үтә мөһим ижади командировкаға юлландырылып, ай буйына ҡайтмай ятып эшләгәс, буласаҡ халыҡ сәсәненең заман талаптарына яуап бирерҙәй итеп эшкәртелмеш:

Ысталин бабай йәшәсен!
Калинин бабай эшләсен!
Бәхетле совет илендә
Һәр кем эшләп ашасын! –

кеүегерәк ынйылары тулы дәфтәре менән ҡуша баш ҡалабыҙға саҡырып килтерелеп, «халыҡ ҡуйҡымы эсенән сыҡҡан ҡобайырсы»ны Мәскәүҙең Тел һәм әҙәбиәт институтында юғары исем-дәрәжәгә кандидат итеп раҫлатыу эшен шул институтта уҡ белем тиреп ятмыш аспирант (буласаҡ “башҡорт белинскийы”) Ғаяс Хөснигә йөкмәтһәләр ҙә, көтөлмәгән ҡатмарлыҡ килеп сыға: башҡорт телен һәм фольклорын яҡшы белгән атаҡлы профессор Дмитриев Николай Константинович: «Тәүҙә -- Мөхәммәтша Буранғолов, шунан һуң башҡалары!» --

[9] Ғәүрәт – тәндең кешегә күрһәтмәй торған оят урыны.

тигән тәүшарт ҡуйып йөҙәтә, ә институттан аша ырғыу мөмкин түгел. Республика Оло йортондағы йоморо башлылар Буранғолов кандидатураһына риза булып етмәһәләр ҙә, беренсе башҡорт халыҡ шағирлығын унан онотторторуҙың (ауыҙын тығыуҙың) йәтеш сараһы һанап, Мәрүәндең беренсе сортлы «халыҡ»лығы ҡатарында икенсе сортлы «халыҡ» булып йөрөһөн, тип килешәләр. Һөҙөмтәлә башҡорттоң сәсәнлек институты рәсми рәүештә шул хәйерһеҙ Буранғоловтан башлап тергеҙелә. Бер үк ваҡытта төбәктә күҙгә дегәнәк булып ҡаҙалмыш ошо заттан арыныу теләге көсәйгәндән-көсәйеп, бәхеткә күрә Мәскәүҙән дә ыңғай елдәр көйәҫләп, совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамиға һәм уның ҡорҙаштарына, ниһәйәт, сүпте йолҡоп ташлау форсаты тыуа, сөнки Сусликов иптәштең үҙенән йәшерен күрһәтмә килеп төшә -- һуңғы ваҡытта идеология фронтында килеп тыуған хатаға -- ҡайһы бер фольклорсыларҙың феодализм осорондағы үткәндәрҙе идеаллаштырыуҙарына ҡаршы ҡаты көрәшергә. Буранғолов революцияға тиклем үк халыҡтан күсереп алған «Урал батыр», "Иҙеүкәй менән Мораҙым» кеүек бөйөк эпостар, «Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем телһеҙ-күҙһеҙ-ҡолаҡһыҙ башҡорт»тоң ғәмәлдә кем икәнлеген күрһәтеүсе факт булараҡ ташҡа баҫтыртмайынса Ғилми институт архивында йәшереп ҡалдырылһа ла, күп драматик әҫәрҙәрен фольклорға нигеҙләнеп яҙған был ныҡышмал зат тап шул осорҙа матбуғатта үҙе һыйырлыҡ бер ек табып, «Иҙеүкәй менән Мораҙым» тигән сәхнә әҫәрен донъяға сығарып өлгөргәнлектән, Мәрүән Карами өйөрөнә был Сусликов иптәш күрһәтмәһенә тап килерҙәй иң татлы табыш була һәм һөрһөп бөткән башҡорт милләтсеһе, башҡорттоң феодал осор тормошон данлаусы автор өҫтөнән төҙөлгән коллектив шикәйәт Мәскәүгә атҡарыла, һөҙөмтәлә Буранғолов тағы сәйәси матдә буйынса иркенән мәхрүм ҡылынып, ун йыллыҡ Себер ҡатырына (ГУЛАГ-ҡа) оҙатыла, ә данлыҡлы совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами республиканың идеология фронтынан башҡорт милләтселеген эҙләп табып фашлаусы бөйөк трибунға, республиканың һәр быуын *беренселәренең* беренсе кәңәшсеһенә, үҙенең яҡын бер ҡәләмдәше әйтмешләй, «һарай шағиры»на әйләнә...

Вилор Исәрғәповичтың үҙ ваҡытында Мәскәүҙән тороп аңлап белеүенсә, ошонан һуң балҡыны ла инде илдең шиғриәт күгендә Мәрүән Карами йондоҙо: совет халыҡ шағирының ҡәләме аҫтынан табалағы ҡоймаҡ кеүек ҡупҡан берен, ҡараһы кибер-кипмәҫтән үк, ҡабаланып ташҡа баҫып сығарҙылар, әҙәбиәт яны әһелдәре, бер-береһенән ярышып, урыҫсаға, башҡа телдәргә ауҙарҙылар; матбуғатта һәм эфирҙа «гәпереүсе» (тел сарлаусы) эреле-ваҡлы авторҙарҙың һәр береһе, ибен тура килтереп, «Мәрүән ағай әйтмешләй», «Мәрүән ағай әйткәнсә» тип, урынлы-урынһыҙ ҡыҫтырыусан булып китте лә «бөйөк Мәрүән» тигәнгә барып етте. Аңғармаҫтан ил ағаһына әүерелгән Мәрүәнебеҙ, моғайын, үҙе лә шәйләмәҫтән, республика әҙиптәренең Ғайса пәйғәмбәренә -- «пастыр»ына (көтөүсеһенә) һәм Оло йорттоң бөтә секретарҙарының һәм бүлек мөдирҙәренең яҡын кәңәшсеһенә, ә оҙон телле бер ҡәләмдәшенең сағыуынса, «хандың һарай шағиры»на әүерелде. Әле килеп самолеттан сыҡмыш яңы *беренсе* ошоно яҡшы белә һәм алдан уҡ Мәрүәнде үҙенең «идеология фронты»ндағы беренсе кәңәшсеһе итеп билдәләгәйне, шуға күрә самолеттан төшкәнендә

ҡаршылаусылар төркөмөндә уны танып, һәм шағир фигураһындағы *үҙе генә күрә белгән* серле сифатын тәжрибәле күҙенә эләктереп, иғтибар үҙәгендә тотто.

Бына ул, көтөп алынған *беренсе,* тантаналы шарттарҙа һиммәтле бейек күтәрмәнән төшөп килә. Ҡаршылаусыларҙың алғы сафта теҙелмеш һиммәтле ҡоро – Обком секретарҙары менән ҡул биреп күреште, арттағы «вағыраҡ»тар иһә һиммәтле баштар аралыҡтарынан һонолоп, иң мөҡәддәс ошо минутта нурлы йөҙҙәрен түрәгә күрһәтеп ҡалырға ныҡ тырышты. Һиммәтлеләр теҙмәһенең аҙағында күренекле прозаик Мотал, совет халыҡ шағиры Мәрүән һәм билдәле тәнҡитсе Ғаяс Хөсни һымаҡ әҙәбиәт уҙамандары, күренекле бернисә композитор, артист бар ине. Шулар тәңгәленән уҙып барышлайы Ҡыҙыл башҡорт яңы килгән түрәһенең ҡолағына шыбырлағас, уныһы, туҡталып, һуңғыларына ла ҡул биргән арала һәр береһенең исемен әйтеп таныштырыу барышында Мәрүән Карами тәңгәлендә оҙағыраҡ туҡталды, ә Ғаясты, көтмәгәндә, «башҡорт белинскийы менән беҙ теге ваҡыттан -- Мәскәүҙән үк яҡшы таныш инде!» тип алсаҡ тәбрикләп әһелдәрҙе шаңҡытты, шул уҡ ваҡытта беҙҙәй осло күҙҙәре бер-нисәһенең, шул иҫәптән совет халыҡ шағирының һәм тәнҡитсенең кәүҙә-килбәтендәге билдәле урындарын бырауланы, оло түрәнең ошо сәйер ғәҙәтенә күптәр иғтибар итте. Күрешеү йолаһы үтәлеп, оркестр ҡабат яндырай марш уйнағас һәм *беренсе* -- ҡыҙыл келәмдән, ә башҡалар уны янлап ҡырыйынан аҙымлағас, алдан күрелгән сара буйынсалыр инде, ике яҡтан һеперткеле йылғыр ике егет – Обкомдың идеология бүлеге инструкторҙары Арғынбаев менән Мусин иптәштәр йәһәт пәйҙә булып, түрә алдындағы келәмде һеперә-һеперә туңҡаңлап йүгергәйне, яҫы балаҡлы уҙаман шуларҙың йәш һәм тулыш фигураларын күҙҙәре менән ҡамшап, янындағы Ҡыҙыл башҡорттан һорай ҡуйҙы:

-- Һе, кем ул былар – алдан һепереүселәр?

-- Үҙебеҙҙең малайҙар, Вилор Иҫәрғәпович.

-- Яҡшы малайҙар, ундайҙарҙы иҫәптә тоторға кәрәк.

-- Тотабыҙ, тотабыҙ, Вилор Иҫәрғәпович!

-- Тотоғоҙ, тотоғоҙ!

Йәмәғәт йәнә ауыҙ асҡан килеш шаңҡыны: яңы беренсе, барсаһын шаҡ-ҡатырып, Мәрүәнде тап наҙлыбикә (дама) урынына «подручком» ҡултыҡлап алды ла, ер һепертмәле яҫы балаҡтарын мыҡты моряктарса уңлы-һуллы ялпылдатып, “дама”һының ҡолағына ниҙер шыбырлай-шыбырлай, көтөп торған ҡара-йылтыр автомобиль салонына ҡушарлап инеп китте. Һәм бөтәһен үтә сәйерһендергәне – Мәрүәндең тап наҙлы бисә-сәсәләрҙәй буйын-һынын мылҡылдатып ыҫпай ҡыланыуы ине...

Яңы түрә ярандары менән бергә (секретарҙар ҡатарында Мәрүән дә бар) Оло йорт бинаһының иң өҫкө ҡатындағы (өҫкө, сөнки, алай-былай була ҡалһа, бина түбәһендәге вертолет майҙансығына яҡын) үҙ кабинетын барлағас, өс көн эсендә күңеленә ярашлы тәртип урынлаштырырға һәм шуға тиклем борсомаҫҡа бойороп, әһелдәрҙең бөтәһен үҙ эштәренә таратты ла үҙ янына хужалыҡ бүлеге мөдире менән Мәрүәнде генә алып, яңғыҙ башына билдәләнгән биш бүлмәле фатирына урынлашырға китте. Әммә уның буйҙаҡлығын белмәнеләр, ҡәҙимгесә баш-күҙ алғас ҡайтаралыр ғаиләһен, тип уйланылар. Яуаплы ығы-зығынан һуң

күпмегәлер иркен һулыш алған Димустан кабинетының төпкө бүлмәһенә ҡорҙашы Мотал менән инеп бикләнде.

-- Уффф!, әсәйем бахыр әйтмешләй. Яңы һеперткенең ҡайһылай һепереүен яңынан өс көн буйы көтөргә икән... – Сейфынан яртылаш бүҫкәргән шешә сығарып, алтын буталлы кескәй генә соҡортайҙарға коньяк ҡойҙо. Өнһеҙ төп-күтәреп, лимон телеме ҡаптылар.

-- Һо! Яҡшыһы икән! – тине Мотал.

-- Күрмәйһеңме ни – наполеон. Яҡшыһы әллә һинең Мөхлисәңдең «Ярлауығ»ында ғына үрсей тип уйлайһыңмы?

Быныһын яуапһыҙ ҡалдырып, Мотал табын эйәһенең шешә тығынына ынтылышын киҫәтте:

-- Һал тағы. Юҡһа соҡортайҙарың сәпсек кенә эсмәле.

Һалып, тығынын тығып, шешәне сейфҡа йәшерҙе:

-- Артығына тамшанма, яңы һеперткенең алымы билдәһеҙ. Мөхлисәңә ҡайтҡас...

-- Ниңә былай Мөхлисә лә Мөхлисә тиһең әле?

-- Бәй, әйтергә лә ярамаймы?

-- Һинекенә ҡағылмайым бит!

-- Етер, бер ҡағылдың инде... иҫте китәреп.

-- Ниңә иҫкә төшөрәһең?

-- Шунан айный алғаным юҡ.

-- Мин әллә ҡасан айныҡ. – Соҡортайҙы тамағына ҡапланы ла ҡубынып сығып китте.

Димустан алғы эш бүлмәһенә ҡайтып, иҫке дуҫының һәм бажаһының тәкәбберлеген һисбер самаға һыйҙыра алмай кәйефһеҙлек кисергәндә, секретарь ханымдың башы ишек ҡыҫығынан һонолдо:

-- Димустан Шиһапович, һеҙҙе...

-- Кем?

-- Исламғолов Мотиҡ иптәш һорай.

-- Ялғағыҙ эт тешләгерене!

Өлкә газета редакторы көндәлек эшендә теңкәгә тейеп eләткән бәндә ине, ғәмдәренең береһен түгеп бимазалай. Йәнәһе, Ыңғырсаҡ Уральский тигән йәш эшсе шағир гүзәл совет тормошоноң әхләҡи һәм сәйәси ҡалыптарына һыйғыһыҙ поэма тигән бер нәҫтә яҙған, уны «Һандуғас һәм револьвер» тип, шундай уҡ сығырынан сыҡмыш исем менән атаған. Ай-вайға ҡуймай, хеҙмәткәрҙәрҙе яуаплы эштәренән бүлдертеп, һөрән һала-һала уҡып ишеттерҙе, кәрәк була ҡалһа тип, диктофонға яҙғанмын. Йомшаҡ ҡына һыйпалап оҙатһаҡ та, кире килеп, оторонон ҡабартып, шул нәмәҫтәһен ташҡа баҫығыҙ тип, дөбөр-шатор дау ҡуптарып йөрөй, һеҙҙең тарафтарға ла морон төртөүе бар, зинһар, абруйлы партия һүҙен әйтеп, ғауғасыны тыйығыҙ йәки башҡа берәй сараһын күрегеҙ.

Димустандың ҡыҙыл йөҙө күкшелләнеп ситырайҙы: ҡарт төлкө, сетерекле әхүәлдәрҙә өлкәнерәк абруй артында ышыҡланып ҡала торған иҫке ғәҙәт.

-- Үҙегеҙҙә юҡмы ни һуң ул? — тине, йәне көйөп.

-- Нимә?

-- Абруйлы партия һүҙе.

-- Әйткәнде һис тыңламай, беләһегеҙ килделе-киттеле шағир халҡын.

-- Улайһа, поэмаһын услатып ҡайтарығыҙ.

-- Алмай, юғары инстанцияларға олғашыу менән янай. Беләһегеҙ эшсе халҡын...

-- Эшсе халҡын беләмен, шөкөр. — Секретарь ирәүән йылмайҙы — эшсе синыф тигәндән күңеле ирер йәшлек ғәҙәте бар ине. — Ҙурмы һуң поэмаһы?

— Ҙур түгел-түгелен... Магнитофон яҙмаһын тыңлаһағыҙ...

Быныһы сәмләндерҙе:

-- Ҡана, ишеттерегеҙ, булмаһа. — Телефондың ҡысҡырып һөйләгесенә төрткәйне, Уральскийҙың күк дөһөрҙәүендәй ҡырыҫ-көр тауышы донъя яңғыратты, хатта алғы бүлмәләге Һылыубикә ҡомарып килеп инде:

-- Абау, әллә түшәм емерелеп төштөмө икән тип торам...

-- Ишекте асыҡ ҡуйып тыңлағыҙ, шунан миңә әйтерһегеҙ.

Әҫәр сюжетының төйнәлешенә яҡынлашҡан һайын, секретарҙың ерән ҡаштары баҡыр һыныҡтары һымаҡ ослайып емерелде, бер-нисә ҡат тамаҡ ҡырып, әленәнән-әле баҡырсым сәстәренә биш бармағын батырҙы — тулҡынланыуын белдерә торған билдә. Поэма уҡылып бөткәс, шаҡтай уйға ҡалып, һораулы күҙҙәрен ишек ҡыҫаһына төбәне:

-- Йә, әйтегеҙ баһағыҙҙы.

-- Ужасно, револьверы ҡурҡыныс! – Ишек тауышһыҙ ябылды.

-- Ни эшләйбеҙ, Димустан Шиһапович? – Редактор ҡыҙырыҡланы.

-- Миңә шылтыратыуығыҙҙың сәбәбен аңламайым, Мотиҡ Камалович.

-- Әйткәнемсә, һуңғы һығымта сығарырға, хәл күрергә.

-- Ә шуны һеҙ үҙегеҙ генә эшләһәгеҙ ни була?

-- Нимә тип әйтергә?.. — Редактор икеләнде. — Поэма, күрәһегеҙ, ғәҙәти түгел...

-- Эйе, был поэма заурядныйҙарҙан түгел, — тип дөрөҫләгәйне секретарь, сым аша һулышынан һиҙелеп тора -- редакторға йән өрҙө.

-- Хатта уның артында бер-берәй нәмә ятмаймы икән, тип тә уйлап ҡуйҙым әле мин...

Ҡыҙыл башҡорт маңлайын ышҡып алды:

-- Минеңсә, дөп-дөрөҫ уйлайһығыҙ. Бер ҙур нәмә ята уның артында.

-- Бына шуны... — тип кинәнеп башлағайны ла редактор, кәрәк саҡта бик түҙемле була торған Димустан өҙөп алды:

-- Ул ҙур нәмә, Мотиҡ Камалович, беҙҙең икебеҙҙе киҫкен ғәйепләү.

-- Бәй, һеҙҙең менән минең бында ни ҡыҫылыш? — Үҙе күренмәһә лә, тауышынан беленә — Мотиҡ яурын һикертте.

-- Бар шул, ҡәҙерле иптәш, бар! Эшебеҙҙә брак ебәреп, иҫ киткес шәп поэманы һәләк иттерткәнбеҙ.

Мотиҡ, моғайын, яурынын икенсе ҡат һикертте:

-- Шәплеген күрмәйем – торғаны ҡара ҡырлыҡ.

-- Был талантлы әҫәр автор күңелендә тап ошолай,— секретарь тауышын күтәрҙе, — ҡара ҡырлыҡ орлоҡтары менән ҡуша түгел, ә үҙе бер тос, төйөрөм

илһам орлоҡтары булып моронларға тейеш ине.

-- Беҙ... һеҙ...

-- Етте, күп һүҙ – буҡ һүҙ! Трубканы урынына ҡаптырҙы.

Ярты минут үтеүгә, Яҙыусылар берлегенең рәйесе менән һөйләшә ине:

— Алло, ағай кеше, ни эшләп ултыраһығыҙ әле?

-- Эш муйындан, Димустан Шиһапович, яңы ҡулъяҙмалар уҡыйым, — тип ишетелде трубканан.

— Мин дә бер ҡулъяҙма менән танышҡайным әле.

Рәйес, бераућк тынып торгас, өндәште:

-- Әллә Мотал Булаттимеровичтың романымы? Тыуасаҡ тәүге бүлегенең йөкмәткеһен сер итеп кенә сискәйне.

-- Романға ҡул тейгән юҡ. Дөрөҫөрәге, яҙылып бөтөүен көтәм -- мин әҫәрҙе тулайым уҡып фекер йөрөтөү яғында. Ә бөгөнгө ҡулъяҙмаға килгәндә, — секретарҙың тауышында шаянлыҡ осҡонланды, — мине бөгөн һандуғаслы поэмалар ифрат ҡыҙыҡһындыра.

Етәксенең ғәҙәтен белгән рәйес тынлыҡ һаҡланы.

-- Ыңғырсаҡ Уральский тигән эшсе шағирыбыҙ бармы? — Һүҙҙе үҙе ялғап ебәрҙе Димустан.

-- Ә-ә, аңланым. — Ауыр көрһөнөү ишетелде. — Ул егет менән нимә ҡылырға инде....

-- Икебеҙҙең дә башты ауырттыра икән. Әллә, тим, ҡулъяҙмаларҙы өҫтәлдә ҡалдырып, саф һауаға сығып әйләнәбеҙме?

-- Бынауы аяҡ хәйерһеҙең тынғы бирмәй бит әле, әй...

-- Алыҫ йөрөү кәрәкмәй – һеҙгә урам аша ғына баҡсала осрашайыҡ, дәррәү барып етермен.

Баҡса һауаһы ысынлап та саф ине, үпкәләрҙе киреллдергәнсе һулап, эскәмйәгә йәпләнделәр.

-- Кирегә бөткән малай, — тине рәйес, ҡырыҫланып. — Беҙ уға күпме тапҡырҙар туҡыныҡ инде, кермәһә кермәй икән. Һандуғасҡа револьвер ҡушарланғас, үҙегеҙ аңлайһығыҙ...

-- Ҡайҙа тора һуң әле ул мөхәббәт балаһы?

-- Оло йорттоң ҡатарында тип әйтерлек. Яр ҡашағаһындағы «Күгәрсен ояһы»нда.

— Күгәрсен ояһы?

Рәйес көлдө:

-- Бар шундай бер фатир беҙҙең союз ҡарамағында. «Күгәрсен ояһы» тип йөрөтәбеҙ үҙ-ара.

-- Кеме бар?

-- Әсәһе ҡарсыҡ ҡына.

-- Бынан алыҫ түгел тиһең инде ул «күгәрсен ояһы»н?

-- Бынан байтаҡ ара ла ул, әммә Һеҙгә яп-яҡын. — Рәйес урамын, өйөн, фатир номерын атаны. Үҙенең хәленә күсеп, эштәренең йырып сыҡҡыһыҙ тығыҙлығын, идараға өҙлөкһөҙ ағылған урта ҡул ҡулъяҙмаларға баштан-аяҡ күмелеп ултырыуын, етмәһә, аяғының иҫке фронт яраһы ҡуҙғалып, һис ҡайҙа ла

йөрөй алмауынан зарланды.

-- Аңлашылды. Һеҙҙең профсоюз комитетын кем етәкләй әле?

-- Шул инде, үҙегеҙгә билдәле Мотал Шаһибәрәков.

-- Ярай, ағай кеше, гуд бай!

-- Ҡот-бай, ҡустым.

-- Әллә инглизса ла һуҡалайһығыҙ инде, ағай кеше?

-- Юҡ, ҡустым, инглиздар үҙҙәре беҙҙеңсә һупалай, сөнки беҙҙең “ҡот-бай”ҙы алған улар, гуд-бай тип.

-- Бына кәрәкһә, атайым әйтмешләй, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ! Хуш иттек, ағай кеше.

– Хуш иттек, Ҡыҙыл башҡорт! -- Ағай кешенең мыйыҡ аҫтынан хәйләле йылмайыуын күреп, шәп-шәп атлап айырылды. Һәй, телен ҡорт саҡҡыры ҡартлас, ниңә иҫкә төшөрҙө был «Ҡыҙыл башҡорт»то – гөрләп үткән йәш саҡты?!

Эйе, ҡыҙыллыҡтан ҡыҙарып та буҙарып йөрөгән саҡ... Университеттағы теге, еҙ күҙлекле әбекәй, «ниңә һин был тиклем ҡыҙыл?» тип һорағанлыҡтан баяғы көлкө хәлгә ҡалып, уға «Ҡыҙыл башҡорт» ләҡәбе сәпәлгән көндөң кисе үк ине тағы... Иптәштәре ирмәкләүенән ҡыҙара-бүртеп сәмләнгән Димустан торлаҡханаға, ах-уах килеп, бер ҡосаҡ әҙәбиәт күтәреп килеп инде, шуның менән, үҙе лә абайламай, ҡушаматтың һумалалай йәбешеүенә сәбәпселек кенә ҡылды...

— Бына күрегеҙ! — тине ул, китап һәм журналдарын өҫтәлгә теҙеп һалып. — Минең «ҡыҙыл» булыуыма аптырап шаҡ ҡатмағыҙ!

Шахматта көс һынашыусылар ялт итеп баш ҡалҡытты:

-- Нимә, әллә унда ҡыҙыл тәнле индейҙар һүрәтләнгәнме?

-- Һүрәт аҡтарыр сабыйҙарға киоскыла «Мурзилка» бар, — тине егет. — Ә бында, танау аҫты кипкәндәрегеҙ булһа, бына был аҡыллы текстҡа күҙ һалығыҙ.

Ҡыҙыл башҡорт та үҙ сиратында егеттәр зитына тейҙе: шахматтарын ҡуйып тороп, өйрөлөшөп, асып һалынған китапҡа эйелделәр. «XII—XIII быуаттарҙа Урал тауы Башҡорт тауы тип тә атала, — тип ҡысҡырып уҡыны береһе. — Был турала 1223 йылдарҙа энциклопедик әҫәрҙәрен яҙып ҡалдырған ғәрәп Яҡут әл-Хәмәүиҙә осратабыҙ. «Етенсе әҡлим... Башҡорт тауы буйлап бәжәнәктәр, Сувар, Булғар ҡалалары аша утеп, океан ситендә тамамлана», — тип хәбәр итә ул. Башҡорттар тураһында унда оло иғтибарға лайыҡлы йәнә бер мәғлүмәт бар: «Башҡорт — Константиния һәм Булғар аралығындағы ҙур төрки халыҡ... Ләкин мин Хәләб ҡалаһында ла бер таифәне осраттым. Улар: «Беҙ — әл-Башғордиә»,— тинеләр. Йөҙҙәре лә, сәстәре лә бик ҡыҙыл төҫтә ине...»

-- Стоп, ишеттегеҙме? — Тантана итте Ҡыҙыл башҡорт. — Сәстәре лә, йөҙҙәре лә бик ҡыҙыл төҫтә ине, ти.

-- Тимәк, һин шуларҙың сыбыҡ осо булаһың? Был хаҡта тиҙерәк китапханасы инәй менән Бәпембәгә хәбәр итергә кәрәк, аптырап йөрөмәһендәр — тигән булды береһе.

-- Туҡта, был нисек килеп сыға һуң әле? Үҙҙәре «әл-Башғордиә», үҙҙәре бөгөнгө Сириялағы Хәләб ҡалаһында?.. Ә, Ҡыҙыл башҡорт?

-- Бешмәгән баш, артабан уҡы. — Ҡыҙыл башҡорт дилбегәне ҡыҫҡа тотто.

-- «Улар әйтте: «Беҙҙең өлкәбеҙ — Константия артында. «Һунғар»

исемләнгән...»

-- Сеү! Беҙҙең Уңғар, Бишуңғар ырыуы түгелме был? — тип көлдө береһе.

-- Артабан уҡы.

-- ...«Әл-Фрәнж» халыҡтары мәмләкәтендә...»

-- Быныһы ни була тағы?

-- Башһыҙ! Француз була был!

-- Нисек инде: үҙҙәре «әл-Башғордиә», үҙҙәре “һунғар”, үҙҙәре «әл-Фрәнж халыҡтары мәмләкәтендә»?.. «Әл-Фрәнж” тигәне лә, бәлки, үҙебеҙҙең «әл-брйәнж» — йәғни бөрйәндер әле!

-- Башың йәш әле, ҡустым, ҡулыңдағы ҡалағың да бәләкәй — өйрәне ҡуйыртма улай, — тине Ҡыҙыл башҡорт. — Ҙу-у-ур булып үҫкәс, университетты тамамлағас, ике бөртөк ярманан бутҡа бешерерһең, йәме? Ә хәҙергә мин уҡыйым, һин тыңла. Алыҫ ата-балаларың ғәрәп сәйәхәтсеһенә бына нимә тигәндәр тағы: «Беҙ утыҙ ҙур ҡариәләрҙә йәшәйбеҙ, уларҙың һәр ҡайһыһы бәләкәйерәк ҡала хәтлем. Беҙ Носрания (Христиан) өлкәләре уртаһында йәшәйбеҙ. Төньяғыбыҙҙа — Саҡалибә (славяндар), көньяғыбыҙҙа — әл-Баба йәғни Румия (Рим) өлкәһе һәм көнбайышыбыҙҙа — Әндәлүс (Испаниялағы Андалусия). Беҙ уларса кейенәбеҙ...»

-- Йәғни кемдәрсә? — тип бүлдерҙе, түҙмәне баяғы тиктормаҫ тел биҫтәһе.

-- Йәғни «әл-Фрәнж» — баяғы бөрйәнж халыҡтарынса инде, ноҡот!

-- Ә бәлки, әл-французсалыр?

-- Артабан тыңла: «...улар менән бергә ғәскәри хеҙмәттә булабыҙ, улар менән бергә башҡа таифәләргә ҡаршы яуга барабыҙ», — ти бит. Шунда уҡ Башҡордиәләрҙең иң күбеһе — христиан, ә бер өлөшө генә ислам динендә булыуҙары, Хәләб ҡалаһында (Сирия) уларҙың мәҙрәсәлә уҡығанлыҡтары әйтелә. Яҡут әл-Хәмәүизең был башҡорттар ислам динен ҡасан ҡабул итеүҙәрен белешеүенә Хәләбтәге башҡорт шәкерттәре: «Беҙгә бынан бик күп борон замандарҙа дөйәләргә менгән болғарҙар килеп, беҙҙең бабаларыбыҙға ислам динен өйрәткән», — тип яуап бирәләр. «Бында... ҙур-ҙур 30 ауыл булып йәшәгән башҡорттар кем ул тип фараз иткәндә, Х быуатта Белла һәм Баҡсу етәкселегендә килгән һәм башҡорт-болғарҙың Хәсән хан юлбашсылығында Паннонияға (Венгрия) барып сыҡҡан икенсе төркөм башҡорт-болғар ҡәбиләләре тураһында һүҙ барһа кәрәк. Хәсән хан менән барып сыҡҡан башҡорт-болғарҙар бөгөнгө Венгрияның баш ҡалаһы Будапешттың Пешт өләшөнә нигез һалыуҙары мәғлүм. Көнбайыш Европала был башҡорт-болғарҙар «бюляр», «бюлярус» йәки исмаилитян (мосолман) исемендә йөрөтөлә... Ғәрәп яҙыусылары Әбүл-Фиҙа (XVI быуат), Ҡазуини (XIII быуат), Хәмәүи (XIII быуат) әйтеүҙәренсә, Константинополь (хәҙерге Истамбул ҡалаһы) артында, Римға яҡын ерҙә, алмандар (герман ҡәбиләләре) күршеһендә Башғорд исемле ҙур ҡала бар, ундағы халыҡ ислам һәм христиан динен тота... Тимәк, 30 ҙур ауылдың береһе «Башҡорт» исеме менән XIII—XIV быуаттарҙа ҙур ҡалаға әйләнә...»

-- Их был ата-бабаларҙы! Әллә ҡайҙа Рим янында үҙҙәренә ҡала ҡорғандар, ә Ҡыҙыл башҡорт һымаҡ зирәк тоҡомдары йәшәйәсәк Уралда, ҡыҙыҡ өсөн генә булһа ла, бер ҡала ла һалып ҡалдырмағандар! — Тиктормаҫ тел

йәнә сарланып алды.

-- Кем әйтә уны?

-- Кем генә түгел, ә баш ҡалабыҙ Мәскәүҙәге бейек трибунанан тороп *совет халыҡ шагирыбыҙ* Мәрүән Ҡарами үҙе һөйләне, тиҫтәләгән гәзиттәр ташҡа баҫып сығарҙы, әллә шул тиклем дә артта ҡалдыңмы? Белмәһәң – бел: «Минең халҡымдың Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем көтөүселек таяғынан башҡа бер нәмәһе лә булмаған, ул Парфенон һымаҡ зиннәтле һарайҙар, таш ҡалалар һалып ҡалдырмаған, дәүләтселек, дәүләт сиктәре тигән нәмәне белмәгән – башы өҫтөндә түбәһеҙ, ел-ямғырҙар ихтыярында, дала буйынса ел ыңғайына ҡамғаҡтай тәгәрләп йөрөгән. Бөйөк Пушкин яҙған телһеҙ, тулыраҡ итеп әйткәндә, күҙһеҙ, ҡолаҡһыҙ башҡортҡа быларҙың бөтәһен фәҡәт бөйөк Ленин-Сталин партияһы, Бөйөк Октябрь революцияһы ғына бирҙе!» -- тип дөрөҫөн яҙҙы бит.

-- Ә һин шуны, үҙ башың менән уйламай, тутыйғоштай ҡабатлайһыңмы?

-- Ниңә ҡабатламаҫҡа – совет халыҡ шағиры бит ул! Һин белгәнде күптән киптереп элгән. – Шәриҡтәшенең тел төбө аңлашылды: шиғырҙарын йүгерек-елдерек яҙып та, тарихтан аҡһаған ҡәләм эйәһе «тарих сүплегендә соҡсоноп милләтселек сиренә һабышҡан» бәғзе берәүҙәргә ҡаршы «идеология фронты»нда «партиябыҙҙың тоғро һалдаты» һанала һәм шул сифатына ярашлы ярлыҡана – ни тиһә лә хаҡлы ине. Шуға күрә Димустан был теманы сурытманы:

-- Күкәй тауыҡты өйрәтмәй, тиһәләр ҙә, күберәк уҡырға кәрәктер һиңә, ҡустым, — тине, тегенең башынан ағайҙарса һыпырып, китаптың йәнә лә бер сәхифә-битен асып, — бына был ерен, исмаһам:

«1375 йылда төҙөлгән «Каталон атласы» исеме менән мәғлүм географик картала ла Кама тамағындағы Болғар ҡалаһынан үрҙәрәк, шул уҡ Кама буйында Башҡорт ҡалаһы күрһәтелә... XVI—XVII быуаттарҙа бөгөнгө Ҡариҙел йылғаһының тамағында хәҙерге баш ҡалабыҙ ултырған урында ла Башҡорт исемле ҡала була. Төрлө карталарҙан шул уҡ тирәләрҙә Алатор һәм Балатор, Минжан һәм Ожан, Ҡасира һәм Масира, Йүкәтән һәм Ҡараҡая ҡалалары[10] барлығы беленә... Шулай итеп, XIII быуатта татар-монгол биләмәләренә (Алтын Урҙа) сәйәхәт ҡылыусы Рубруктың: «Паскатирҙар — күсмә халыҡ, уларҙа бер ниндәй ҙә ҡала юҡ», — тип әйтеүе хәҡиҡәткә тура килмәй, сөнки ул башҡорт ерҙәренә үтеп инә алмаған. Башҡорттар Иҙел — Урал буйҙарында, Юғары Камала ла, Көнбайыш Европала ла (Рим янындағы баяғы Башҡорт ҡалаһы) ҙур-ҙур ҡалалар һалғандар, бәләкәйерәк ҡала дәүмәлле салаларҙа йәшәгәндәр...»

-- Бына һеҙгә, кәрәк булһа, әсәйем бешергән бәрәмәс! Борондан уҡ ҡалалы халыҡтар булып сығабыҙ түгелме? – тип сәмләнгәйне бер ихласйән, «йоморо» башлыларҙан берәү кәрәкле һығымта яһаны:

-- Уныһын асыҡ ҡына әйтә алмайбыҙ, әммә борондан уҡ «Ҡыҙыл башҡорт»ло булыуыбыҙ хаҡ — был тарихи хәҡиҡәтте инде бер кем дә йыға алмаҫ, дәлиле алдыбыҙҙа!

-- Эйе, «Ҡыҙыл башҡорт» беҙгә үҙенең ҡыҙыллығын төбө-тамырынан

---

[10] Был ҡалалар күрһәтелгән урта быуат карталары матбуғатта сығарылды: «Агиҙел» журналы, 1971, № 4, 105—113-сө биттәр; Ә. Булатов. Башҡорттар тураһында боронғо мәғлүмәттор.

йолҡоп күрһәтте, — тип көлдө икенсеһе.

-- Ә һин, иҫәүән, мәсьәләгә еңел-елпе генә ҡарап, донъяға тыуғас та, әгәр беҙҙе кендек инәләребеҙ Ҡыҙыл һыуында ҡойондорһа — ҡыҙыл, Ағиҙелгә сумырһа — аҡ, Ҡариҙелгә супылдатһа — ҡара, Күгиҙелдә йеҙҙөрһә — күк, Һарыһыуҙа сайҡаһа — һары тәнле булабыҙ икән тип уйлай инең. Рәхмәт әйт: Ҡыҙыл башҡорт арҡаһында ҡолағыңа аҡыл кирте өҫтәлде! Лекцияны беҙгә йышыраҡ уҡы һин, Ҡыҙыл башҡорт!

Димустандың үрһәләнеүе, күрәһегеҙ, исеменә ҡуш ҡабыҡтай йәбешеп өлгергән ҡушаматты һыҙырып ташлай алманы, әммә шуның арҡаһында табындарҙа тел сарлар өсөн бер ҡыҙыҡ һүҙ артты ла «бер таифә» студенттарҙың — буласаҡ төрлө-төрлө һөнәр эйәләренең күңелендә тарих ҡартласҡа ҡарата һағайыулы ҡыҙыҡһыныу, ихтирамлы сәм тыуҙы.

Ерән егеттең аҙаҡ, ысынлап та, Ҡыҙыл һыуы буйынан килеүе, бәләкәстән унда балалар йортонда тәрбиәләнеп, Димустан тип исемде уға Дим буйында тыуып үҫкән, әммә Ҡыҙыл яҡтарының һыуын эсеп, тыуған ерен бик һағынған тәрбиәсе апайҙың ҡушыуы мәғлүм. Ҡыҙыл башҡорт ләҡәбе ләкин үҙенең хәйерле сәғәтен-минутын көтөп кенә торған икән...

Димустан, әллә ни белдереп бармаһа ла, ғүмер үткән һайын, ихлас студент саҡтарын өҙөлөбөрәк һағына, ҡырҡтың өҫтөндә һиҙҙертмәйенсә баҫып килгән олпатлыҡ йөгөн, бигерәк тә ҡырҡты аша атлағандан һуң, бөтә йәне-тәне менән ҡабул итә алмай ҡарыша, егеттәрсә килбәт-килешен юғалтмаҫҡа тырыша — эш кабинетының төпкө бүлмәһендә ятҡан йоморо суйын гантелдәр һәм мөйөштә һөйәүле торған, сыҡҡаны һайын ҡулына күскән гер-таяҡ — шуның ғәләмәте ине. Таяҡ тигәндә лә, үҙенә күрә бер мөғжизә: күҙҙең яуын алған семәрҙәре һәм колоритлы торна муйыны ҡатарында ярты ботлоҡ ауырлығы менән уны тотоп ҡарағандарҙың һушын ала, сөнки таяҡтың тышҡы йоҡа көбө генә имән ағас, ә үҙәге -- баҡыр көпшәгә тослап ҡойолған ауыр ҡарағурғаш — беләк мускулдары өсөн сыныҡтырғыс йөкләмә. Таяҡты ул йәйәү йөрөгәнендә һис ҡулынан төшөрмәй, хатта сит илдәргә сыҡҡанда ла ҡалдырмаҫҡа тырыша. Шуға бәйле бер әкәмәт тә булып алды заманында: яңыраҡ ҡына үҙаллылыҡ алған Африка илдәренең береһенә делегация етәксеһе итеп ебәргәйнеләр («азат башҡорт милләте»нең бәхетле вәкиле рәүешендә Мәскүҙән, әлбиттә!), азатлыҡтың бер йыллыҡ байрамына. Ҡунаҡтар күп йыйылған, хатта әлекке метрополияның — африкаларҙың азатлыҡ көрәше һөҙөмтәһендә был яҡтарҙан табан тайҙырған капиталистик дәүләттең дә вәкилдәре бар ине. Шулар араһынан береһе, билдәле буржуаз ғазетаның хәбәрсеһе, совет делегацияһына айырыуса ҡаныҡты, уңайы тура килгән һайын, әтнәкәле һорауҙарын соҡоп сығарып, «Бикләмешев әфәнде» тирәһендә уралды — хужалары, моғайын, совет иле тураһында берәй «һаҫы емтек» соҡоп сығарырға ҡушҡандыр. Ул үҙенең, моғайын, алҡымдан алырға тейешле һорауын бирҙе:

-- Әйтегеҙ әле, зинһар, Бикләмешев әфәнде, Советтар Союзында һеҙҙең һымаҡ ваҡ милләттәр үҙҙәрен ысын ирекле хис итә аламы?

-- Аяныс, ләкин һеҙ әйткән «ысын ирекле» төшөнсәһен һеҙ һәм мин икебеҙ ике төрлө аңлауыбыҙ ихтимал, — тине Димустан.

-- О, төшөнәм, Бикләмешев әфәнде! — Хәбәрсе алсаҡ йылмайырға тырышты. — Һеҙҙеңсә әйткәндә, мин бит иҙеүсе синыф, аҡ буржуй, ә һеҙ — ҡыҙыл большевиктар тәғлимәтенән башҡа йәшәй алмай торған ҡыҙыл башҡорт...

-- Эйе, мин — ҙур хәреф менән яҙыла торған Ҡыҙыл башҡорт, — тине, ихласланып, Димустан. — Эсем тулы ҡыҙыллыҡ. Бына күрәһегеҙ, ҡыҙыллығым хатта тышҡа сыҡҡан, — тип өҫтәне, бармағын йөҙөнә төртөп. Тыңлаусылар юморҙы баһалап ҡул сапты, көлөштө, ә һорау биреүсе шымтайған килеш ҡалды.

— Шуға күрә, тимәксеһегеҙҙер, беҙҙең төшөнсәләр ҙә бер-береһенә тап килмәй һәм башҡалар, һәм башҡалар... Ләкин мин һеҙҙән был мәсьәләлә барыбер тура яуап алырға теләйем. Бикләмешев әфәнде, әйтегеҙсе, бына һеҙ, ҙур хәрефле Ҡыҙыл башҡорт (әйткәндәй, мин был Ҡыҙыл башҡорт һүҙен блокнотыма ла ҙур хәрефтәр менән яҙып ҡуйҙым, хе-хе-хе!), үҙегеҙҙең башҡорт халҡын нисәнсе бишйыллыҡта тулыһынса руслаштырып бөтөрөргә йыйынаһығыҙ?

Димустандың тирә-яғында фотоаппараттар шыртылданы, кинокамералар шытырланы: сетерекле һорауҙан һуң Ҡыҙыл башҡорттоң йөҙө нисек үҙгәреүен «донъя демократияһы» өсөн мәңгеләштереп ҡалырға көс һалынды. Тик Димустан йөҙө тыныс, ә яуап һис көтөлмәгәнсә булды:

-- Һеҙ әйткән ул мәсьәлә беҙҙә мәсьәлә булып тормай. Шуға күрә ул беҙҙең биш йыллыҡ планға ла, көндәлек планға ла ҡуйылмаған. Һорауығыҙға тулыраҡ яуап ҡайтарыу өсөн, миңә лә бер һорау бирергә рөхсәт итегеҙсе. Бына һеҙ, үҙегеҙ әйткән «ысын ирекле» кешеләр, беҙ ҡунаҡ булып килгән ошо кескәй генә илдең халҡын, колонизациялап, үҙегеҙҙең дәүләт машинаһының дүрт быуаттан ашыу хакимлығы аҫтында үҙгәртә алдығыҙмы һуң?

-- Үкенескә ҡаршы, юҡ, — тине хәбәрсе. — Улар беҙҙең цивилизаторлыҡ миссияны аңламаны.

-- Бәй, шулайғас, ниңә мине, бер Ҡыҙыл башҡортто, был мәсьәләлә үҙегеҙҙең дәүләт машинаһынан да көслөрәк күрәһегеҙ, ә хәбәрсе әфәнде?! Етмәһә, ундай көнүҙәк мәсьәлә беҙҙең биш йыллыҡ пландарға ла керетелмәгәндә?!.

Тыңлаусылар гөж килде, этлекле хәбәрсе блокнотының икенсе битен асты — хис-тойғоларҙан алыҫ, эш менән мәшғүл, йәнәһе. Гөрзә йыландыҡылай теремек күҙе Димустандың торна муйынлы таяғына төбәлде:

-- Әйтегеҙ әле, зинһар, был сихырлы таяҡ тотҡаһындағы һын — боронғо ата-бабаларығыҙҙың торнаға табыныу билдәһеме?

-- Бөтәһенән дә бигерәк, быны минең шәхесемдең спортҡа табыныу ғәләмәте тип аңлау урынлы булыр.

-- О, Ҡыҙыл башҡорт — спортсмен! Тотоп ҡына ҡарарға рөхсәт итегеҙсе сихырлы таяғығыҙҙы?

-- Рәхим итегеҙ! — Димустан таяғын урта биленән ҡармап, пропеллерҙай уйнатып юғары сөйҙө, нәүбәттәге мәкерен уйлап өлгөрмәгән хәбәрсе шул таяҡты һауала килеш тотоп алырға ҡулын һуҙҙы. Мәрәкәнең артабаны ысыны менән көләмәскә әйләнде: мәкерйән таяҡты шулай уҡ уйнатып ҡына уҫлап алғайны, ҡапыл аһылдап, биле йыландай бегәлөп, таяҡ менән ҡуша ултыра тештө,

янбашын тотоп ыңғырашты:

-- Уй хоҙайым!.. Билем-билкәйем!..

Димустанға этлексене күтәреп торғоҙошорға, машинаһынаса оҙатып ҡуйырға тура килде. Кисенә үк газеталар әкәмәт хәбәр баҫып сығарҙы: үҙе лә һиҙмәй Ҡыҙыл башҡорт өгөтөнә төшкән бахырҙың, большевистик таяҡ еле ҡағылып, радикулиты ҡуҙғалған, бер аҙнаға больницаға һалғандар. Был әкәмәт, моғайын, шулай уйын-көлкө менән онотолор ҙа ине, әгәр ҙә ки кордон аша гәпереүсе «Азатлыҡ» радиостанцияһы шуны башҡорт телендә хәбәр ҡылмаһа. Тапшырыуҙың магнитофонға күсермәһен Димустан баяғы сәйәхәтенән ҡайтҡас, эш вазифаһы рәүешендә ултырып тыңланы ла эсе ҡатып бер көлдө, ә ваҡиға үҙенә күрә бер легендаға әүерелде. Тик... хәҙерен һис тә көләһе килмәй, әллә ниндәй хис-тойғолар сырмалай. Йәшлектәге тилелектәре иҫкә килеп төшә лә асы үкенес баҫа, башы зыңҡып ауырта...

Уҡый башлаған ҡағыҙҙарын өҫтәлдә атҡырып ҡалдырып, ярты ботлоҡ таяғын эләктерҙе – урам аша ҡусҡылланған Ленин баҡсаһында һауа һулап ҡайтырға самаланы...

Шул уҡ сәғәттәрҙәге Мотал иһә, бажаһының эш бүлмәһендә баяғы ике соҡортайҙы ҡаплағандан һуң, оторо кәйефһеҙләнеп, асыуын кемгә төшөрөргә белмәй ҡайтып инһә лә, ғәҙәттәгесә, тал баҙарылай иркен өйҙә үле тынлыҡ -- Мөхлисәһенең «Ярлауыҡ»тағы бөтмәҫ-төкәнмәҫ эштәре...

Баҙлап янған зәңгәр утта кофе бешереп эсте лә атаһынан ҡалған иҫке күн тышлы диванға янтайҙы – таралған зиһенде йыйып алырға кәрәк. Әммә бер уй һис тә тынғылыҡ бирмәй, фекерҙәрҙе симәлтә -- Ҡыҙыл башҡорттоң Мөхлисәне теленән төшөрмәүе...

Мотал, хәтирәләрендә ойоп, күҙе эленеп китһә лә онотолмай -- өнө төшөнә күсеп, йәшлегендә тилерә.

Бына ул: Ҡыҙыл башҡорт тигән Димустан, ыҫпай хәрәкәт ҡылып, бәпембәләй һары сәсле Бәпембә-Мөхлисәне киноларға ҡултыҡлап йөрөтә башланы, тын кистәрҙә баҡсаларҙа күҙгә күҙ текләшеп ултырыуҙары йышайҙы. Бәләкәстән үк тәүфиҡлы ла итәғәтле тәрбиәләнгән Мотал, балалар йортонда сыныҡҡан сая әшнәһенән айырмалы булараҡ, уларға арҡыры төшөүҙән ихлас шыртлап, Мөхлисәгә булған тәүге хистәренән ваз кисергә -- күңеле төбөндә күмелдерергә тырышты, был ҡатмарлы тойғоларын һис кемгә белдермәне. Бара-тора уның күңел көҙгөһөндә икенсе тылсымлы йән — Йыһаниә нығыраҡ шәүләләнде, егеттең бар булмышын һис ашыҡмай, ярһытмай ғына биләне — әйтерһең дә, үҙ сәғәтен көттө сихри Ниагара шарлауығы.

Өсөнсө курсты тамамлағас, баяғыса, ауылға бер төҙөлөшкә китер алдынан, тантана йыйылышы булып, аҙағынан университеттың һәүәҫкәр артистары әҙерләгән ҙур концерт күрһәтелде. Ниндәй генә таланттар юҡ ине араларында! Әммә Моталды ысынлап тетрәткәне, күҙенән йәш килгәнсе һыҙланырға ла һоҡланырға мәжбүр иткәне — сәхнәләге ил инәһе Бәндәбикә менән Ерәнсә-сосәндең ялҡынлы бейеүе ине. Үҫәргәндең Һаҡмар — Эйек буйҙарында быуындан-быуынға өҙөлмәй һаҡланған гүзәл хикәйәтте ҡасандыр әсәһенән ишеткәне бар ине Мотал, шулай уҡ Ерәнсә-сәсән менән Бәндәбикәнең

икеһенең дә тарихи шәхестәр булып, бөгөнгәсә Үҫәргәндә кәшәнә һәм ҡәбер таштары һаҡланыуын, эре ҡыҙыл кирбес стеналары башҡорт милли биҙәктәре менән семәрләнеп, өҫтөнә тупраҡ ҡорған өйөлгән «Бәндәбикә йорто»ноң — кәшәнәнең — ошо йылдарҙа ғына археологтар тарафынан ҡаҙып тикшерелеүен, унда, ысынлап та, заманында бик ололап ҡатын-ҡыҙ заты күмелеүе асыҡланыуын да газеталарҙан уҡығайны. Тик быларҙың береһе лә күңелендә ул тиклем үк тәрән эҙ ҡалдырмай, ғәҙәттәге иҫәпһеҙ күп мәғлүмәттәр йылғаһына ҡушылып ағып киткәйне. Ә сәхнәлә сәнғәт телендә һөйөкләһө тасуирлаған хәл-ваҡиға уға халыҡ тормошоноң ығылып киткән бер йылғаһын ҡайтарып, тулҡындарын ҡайнатты.

...Урал тауҙарында таң алды тынлығы. Һыйпап таң еле иҫте, таҡыябаш ҡурайҙарҙың көмөш суҡтарын һелкетте. Сыңратып, донъяның сихри ауазын уятты ҡурай моңо. Ҡарҙай ап-аҡ тирмәләрҙең береһенән шәкәрҙәй аҡ күлдәк кейгән, томандай аҡ бөркәнсек элгән талсыбыҡтай нәҙекәй билле ҡыҙ сыҡты, имән һынлы таҙа егет, ҡулдарын һоноп, ҡыҙ артынан уҡталды; һағыныуҙарын баҫа алмай, наҙлы моңға тулышып, таҡыябаш ҡурайҙар ураткан аҡланды буйланыпар. Икеһе тиң бәхетле — туй күлдәге кейгән ҡыҙ менән мыҡты егет.

Ҡапыл зил-зилә ҡупты, ерҙе-күкте саң баҫты, көслө дауыл тирмәләрҙе ҡуптарҙы, Көндөң йөҙө күмерҙәй ҡарайҙы, таҡыябаш ҡурайҙарҙың көмөш суҡтары һынып, ергә суп-суп ҡан тамды, аҡ һаҡаллы ҡарттарҙың уфтаныуы, ҡатын-ҡыҙҙар иңрәп ыңғырашыуы, бала-саға илашыуы, аһ-зар күмде донъяны; ҡара янып көйгән алыҫ офоҡ ситен ярһыу ат тояҡтары — яу һөрәне тетрәтте. Өҫтөндәге туй күлдәге дөрләп янған Бәндәбикә, яуға ҡаршы яу булырға саҡырып, ир-егеттәрҙе айбарлап, еҙ-ҡыңғырау зыңдың илде туплар телен ҡулына алды, дөм-ҡараңғы ерҙе нурлап, илде ҡурсалап, илбаҫарҙар йөрәгенә шом һалып, еҙ тауышлы оран телен ярһытып ҡаҡты ла ҡаҡты. Ил инәһе оранынан донъя кинәт тетрәне, Ерәнсә-сәсән айбарлаған сая яугирҙәр сафы, һөңгөләрен тырпайтып, ҡара яуҙы ҡайтарырға утлы офоҡҡа олғашты; алда барған ил инәһе Бәндәбикә, нур сағылтҡан булат ҡылысын айҡап, һуғышсылар ҡорон яуға әйҙәне...

Йәшлек-йүләрлек тигәндәре шулдыр инде: был юлы ла Мотал сәхнәлә Ерәнсә-сәсән урынында үҙе булмағаны өсөн үкенде һәм, күҙҙәренән ил инәһенә һоҡланыуҙың татлы йәше ағылып торған килеш, тамаша залынан сығып, июнь төнөнөң сихри тынлығына тапшырҙы татлы һағышын. Баҡса ҡуйыны һил-тымыҡ, хатта һандуғастар ҙа арып талған, университеттың ярым ҡараңғы актовый залының шаран асыҡ тәҙрәләренән иһә сәхнәләге йыр-моң дауамы өҙөлмәй, һауаны тибрәтеп ағыла ла ағыла. Мотал баҡса төпкөләнәрәк үтте, төн тынлығын итәғәтле биләп тотҡан нәҙек кенә аҡ ҡайынды ҡосаҡланы. Уның күҙ йәштәре шундай эскерһеҙ һәм кенәһеҙ, һыҙланыуы шәкәрҙәй татлы ине. Бер ҡосаҡ аҡ сәскә өҙөп, төндө таңға ауыштырып, тынып ҡалған ятаҡханаға ҡайтты, вахтер ҡарсыҡ янынан ялмандай уҙып, үҙе йәшәгән үткелектән ике ҡатҡа юғарыраҡ, быҒаса гел йөрәкһеп күҙәтеп йөрөлгән, әммә инергә йөрьәте етмәгән ишекте һаҡ ҡына тартты. Ғәжәп: егеттең йөрәк ҡағышын ишеткәндәй, шунда уҡ кемдер торҙо, ебәк күлдәк итәктәре иҫертеп ҡыштырланы.

-- Кем ул, Анечка, һинме? — тине сихырлы тауыш.

-- Йыһаниә, йәнем, ас әле, был — мин... — тине егет, йөрәге һурылып сығырҙай. Ҡыҙ өндәшмәне, кире китте. Ҡыштырлатып өҫтөнә кейгәне ишетелде.

-- Ғүмерҙә ҡыланмағаныңды... ни булды һиңә, Металл? — Паспортҡа яҙылған исеме менән ишек ҡыҫығынан ғына өндәште. Үреү белмәгән ҡуйы сәсе — Ниагара шарлауығы — төнгөлөккә артҡа ҡыҫып бәйләнгән, халаттың аҫҡы төймәләре эленеп өлгөрмәгән...

-- Йыһаниә, беләһеңме, мин... Бына сәскәләр килтерҙем...

-- Тссс! Әйҙә, ипләп кенә үт.

Егет шыбырлауға күсте:

-- Йыһаниә... — һулышы һулышын өттө.

-- Ин, тим бит инде! — Ҡулынан һөйрәп алып, ишек йоҙағын шытырлатып бикләне.

-- Их! Йыһаниәм минең, Йыһаниәм! — Мотал ҡыҙҙы аҡсәскәләр менән ҡуша үлтерә яҙып ҡосаҡланы.

-- Тссс! Ярамай! — Йоҡлап ятҡан әхирәттәре яғына ымлап күрһәтеп, ебәк таҫмалай һыпырылды Ниагара шарлауығы. — Кил, ултыр. Ни булды һиңә? Тссс, шаулама!

-- Мин һине беренсе курстан уҡ... — тип ҡайнар өнөн бөркөлдөргәйне Мотал, ҡыҙҙың яғымлы һалҡын усы ауыҙын томаланы. Маңлай сәсенән йомарлап, йәнә әхирәттәре яғына ымланы.

-- Әйҙә, тышҡа сығып һөйләшәйек. — Йыһаниә ҡапыл торҙо, ҡулынан услап-елтерәтеп, тәҙрә төбөнә килтерҙе, рамды һаҡ этеп асты. — Ипләп кенә шыл, мин — һинең арттан...

-- Алдамайһыңмы? Ысынлап та төшәһеңме? — Ҡыҙҙың ҡулын ебәрергә теләмәй, ялыныслы бышылданы.

-- Бар инде, төшәм, тинем бит инде. — Яурынынан йомшаҡ ҡына этәрҙе. Мотал, ергә нисек баҫыуын да белештермәй, йөрәге дөңк-дөңк ҡағып, бошоноп үргә баҡты. Әммә ҡыҙҙың яланғас оҙон аяҡтары ысынлап та табан терәр киртләс һәрмәп, уға яҡынлай ине. Бая ғына сәхнәнән шундай алыҫ, ҡул етмәҫ Бәндәбикә булып аҡылдан яҙҙырҙҡан һомғол һынды үрелеп ҡосаҡланы...

Түңәрәк йәшел утрау булып Ағиҙел яры башында үҫкән ҡарт баҡсаға ашҡындылар, йәш сауҡалыҡ ҡосағында онотолмош аласыҡҡа йәпләнделәр. Алыҫтараҡ күк ситендә доғаланған Ырымбур күперенән һирәк-һаяҡ машиналар елеп уҙа, Ағиҙелдең аҫта сағыл итәгенә аҡ ялдарын һуғыуы ишетелә.

-- Йыһаниә... мин һине беренсе күреүҙән үк яратып йөрөнөм бит. Ә бая сәхнәлә... Ниагара шарлауығым!..

-- Ышанам, ышанам, — тине Йыһаниә.

-- Һинән башҡа минең бер кемем дә юҡ.

-- Минең дә.

Икеһе тиң ғүмерҙәрендә тәү тапҡыр, егет менән ҡыҙ икәнлектәрен тойоп, тертләй-тертләй, эскәмйәлә ара ҡалдырып ҡына ултырған килеш, яурынға яурын терәшеп ҡосаҡлаштылар, янып барған сикәләрен бергә тоташтырҙылар. Ниагара шарлауығы шарлап һүтелеп китте, төпһөҙ даръя тәрәнлеге, егеттең һушын алып, сихырына донъяны күмелдерҙе, ике йөрәк дарҫлап ҡаҡҡан күктирмәнең

суҡайында серле былбыл сут-сут йырын түгелдерҙе...

...Бәндәбикә булып бейеп һушын ала яҙған Йыһаниәне һандуғаслы баҡсанан оҙатып ҡуйғандан һуң йөрәк башын ауырттырып сирткән иң беренсе уй шул ине: уларға бына бөгөн үк, бер нисә сәғәттән һуң уҡ, аянысла айырылышыу мәле янай түгелме? Сөнки ул — колхозға эшкә, ә Йыһаниә ҡатнашҡан һәүәҫкәр артистар төркөмө ауылдарға концерт менән сығып китергә тейеш. Мотал, паспортындағы исеме буйынса ҡоростай ҡаты Металл, ҡамырҙай йомшаҡланып, бүлмәләш иптәштәрен таң ҡалдырып, көпә-көндөҙ, һәр кем ҡабалан юлға әҙерләнгәндә, хатта өҫ-баштарын да һалмайынса, койкаһында йөҙ түбән ҡапланып ята. Эйе, ул үҙенә торорға, яҫтыҡ-йоҫтоҡтарҙы комендантҡа тапшырырға, йыйылыу урынына йүгерергә кәрәклеген яҡшы белә, әммә хәленән килмәй. Егет ғүмерендә тәү ҡат шундай һыҙлауыс менән тулышҡан йөрәген һығып тотоп, мендәргә батҡан ирендәре менән бер генә исемде шыбырлай: Йыһаниә, Йыһаниә... Донъялағы бар ауаздар шуның шаңдауында ғына ишетелә: Йыһаниә, Йыһаниә... Их һин наҙлы Ниагара шарлауығы, тылсымлы-ләззәтле тынлыҡ, тынлыҡлы шарлауыҡ, ниңә былай арбаның, — һөйөп-һөйөлөп йәшәүҙең серле ҡапҡаһын астың кинәт?.. Их, ниңә был мәл йөрәк өҙгөс, ҡотолғоһоҙ айырылышыу мәле менән тап килә? Ниңә?

Ул елтерәп барып ингәндә, актовый залдың сәхнәһендә, күсмә тормош рәүешен хәтерләткән ығы-зығы ҡубынып, ҡартәсәйҙәрҙекенә оҡшаш оҙон юл һандығына — декорацияларҙы, сумаҙандарға уйын кейемдәрен төйгөсләп тултыралар ине. Төн сыҡҡансы, нисектер, һурығып-ябығып киткән һымаҡ күренде Йыһаниә; өндәшеүгә тертләне, күҙҙәрен шар-асып баҡты.

— Уй!

-- Йыһаниә... мин һине эҙләнем.

-- Абау, — тине бер сәрелдәк ҡыҙ, — ҡайһындай ҙа ҙур хөрмәт: эҙләп йөрөгән имеш!

-- Вот это рост – настоящий Манара! – тип текләне бер мәрйәйәне, тел шартлатып, уның оҙон буйын һөмһөҙ күҙәмәләп.

-- Йыһаниә, ҡолағыңа ғына әйтер һүҙем бар...

-- Аһ, шулаймы ни әле? — Йыһаниә, уйынға һабыштырып, ҡолағын һоноп яҡынлағайны, егет уны ҡулынан ҡамтарып алды, сәхнә артына тартты.

— Ҡыҙҙар, йыбырламағыҙ, сумаҙандарҙы сығара башлайбыҙ.

— Ә һин унда иҙрәп йоҡлап китмә: Металл-Манараңдың муйынына аҫылын!

Мотал, ят күҙҙәрҙән ышыҡланмаҫ элгәре үк, һөйөклөһен биленән һығып алды.

-- Йыһаниәм минең, Йыһаниәм...

-- Аһ, ебәр, ҡабырғаларымды һындыраһың бит! — Ҡыҙ терһәге менән ауырттырып төрттө. — Ысынлап та Металл-Манара икәнһең, әй!

-- Йыһаниәм, беләһеңме, — егет йөрәк төбөнән шыбырлауға күсте, һулышы тамағын өттө, — һин бит минең берҙән-берем... иң-иң тәүгем... иң тәүге мөхәббәтем... һине генә теләйем...

-- Китсе! — Ҡыҙ уғата терһәк осон уҡландырҙы. — «Теләйем»гә ирек

бирһәк, беләһеңме, загсһыҙ уҡ нимә менән бөтөрөн?

-- Һин минең бөтөн донъям, ғәләмем! Һин бит минең...— тамағына ялҡыны тамам ҡабып, һулышы ҡапланды.

-- Тилем... шашҡан Металл-Манарам... — Ҡолағына шыбырланы. — Ебәр, йәнем, аҡыллым. Ана киләләр, ебәр... Әйләнер ҙә ҡайтырбыҙ, көҙгә тиклем түҙ инде...

Иҙелбаш районындағы иң төпкөл ауылдарҙың береһендә эшкә егелде Моталдар. Ҡыҙыл башҡорт менән Бәпембә лә бар. Йор ауазлы тау йылғаһының яры башында уйынсыҡтай ғына ауыл, көллө тирә-яҡ — ҡарағай-шыршы ла сағыл, ә төндәрен студенттар ятаҡлаған таҡта түбәле мәктәптең баҡса артында ғына айыуҙар темеҫкенә. Көнө буйы ең һыҙғанып эшләйҙәр, кисен, бәрҙе-балыҡлы, һыуығы елеккә үткеле саф йылғала ҡойоноп сығып, тамаҡҡа ҡапҡылау менән үк, мәктәп ишеге алдында гөрләтеп уйын ҡороп ебәрәләр:

Эй ике гөл, ике гөл —
Ҡыҙыл сәскә, Бәпембә.
Верегеҙҙе берәү өҙһә,
Берегеҙ ҡалыр кемгә?..

Бәпембәнең оялыштан керпектәре һәленә, Ҡыҙыл башкорт иһә гөлтләп ҡабынырҙай ҡыҙара, әммә аяҡтары таҡмаҡ тәкәтенә баҫыуын ғына белә. Һәммәһе — шат, һәммәһе лә бәхетле, тик Мотал ғына моңдо. Төндәрен ул койкаһында шығыр-шығыр әйләнеп тә тулғанып, бер генә уй башҡара: бәлки, университет етәкселәре был районды, был ауылды концерт бригадаһының маршрутына индермәгәндер. Бәлки, иң аҙаҡкы сиратҡа ҡалдырғандыр. Бәлки... был «бәлки»ҙе егет хатта күҙ алдына килтерергә лә ҡурҡа.

-- Йә, ни булды? — Ҡолаҡтарында кисәге шаян таҡмаҡ сыңлап торған Димустан, һаман уйын кәйефенән һүрелә алмайынса, шомтайып ҡалған дуҫын, тәүге күргәндәй, баштан-аяҡ күҙҙән кисерҙе. — Һуңғы көндәрҙә, тимме, аҡырайҙарың төпкә батып, муйының сүмес һабылай оҙонайып, балтаң һыуға төшкәндәй бәлйерәнең. Абау, әллә бер-берәй сир зәхмәте ҡағылдымы үҙеңә?

-- Сирҙең дә бына тигәне, — тине Мотал.

-- Кит, әй! Мәрйәләр тирәһендә сыуала инең.. әллә теге... ҡойроҡто бот араһына ҡыҫтырта торғанды эләктерҙеңме? — Бригадирҙың тел төбөндә хәүефле сиргә ишара.

-- Ни лыҡырҙайһың, ҡасан ҡайҙа барғаным бар?

-- Йә-йә, бөттө, дуҫтарса шаярып ҡына.

-- Һиңә рәхәт ул... — Мотал уның яурынға һалғап ҡулын алып ташланы.

-- Нимә рәхәт?

— Эргәңдәге Бәпембәне һыйпаштырып йөрөүе.

Ҡыҙыл башҡорт эскерһеҙ аптыраны:

-- Бына һиңә әкәмәт! Һин дә һыйпаштыр: аҙмы ни бында бәпембәләр ҙә розалар?

-- Бындағылары һинең үҙеңә ҡалһын. Ебәр мине, бригадир.

-- Ҡайҙа?

— Ете ер, ете диңгеҙ аръяғына. Ниагара шарлауығына...

Димустан шыйылдатып һыҙғырҙы, дуҫының маңлайын услап ҡараны.

—Туҡта, энем, һин әллә тилереп бараһыңмы? Бәлки, Ниагара урынына, бындағы берәй шарлауыҡ та ярап торор?

Мотал ҡулды этәрҙе.

-- Һиңә рәхәт...

-- Эйе, рәхәт! — тине Ҡыҙыл башҡорт, ҡапыл асыуланып. — Миңә бик рәхәт һеҙҙең менән, күрмәйһеңме ни? Бригадир булып бер көн генә әшләп ҡарасы үҙең! Һе, Ниагара шарлауығы кәрәк икән уға. Тапҡанһың ваҡыт!

-- Шунһыҙ мин кеше түгел.

-- Хәҙергә миңә кешелегең кәрәкмәй. Механизм бул, робот бул, теләһәң, әллә нимә бул — миңә тиҙерәк суска һарайын төҙөп бөтөрөргә кәрәк.

-- Тимәк, беренсе урында, һинеңсә, суска тора!

-- Бына ҡайҙа һуҡтыраһың — иң ауыртҡан урынға! — Ҡыҙыл башҡорт уттай ерән ҡаштарын емерелдерҙе. — Йә, әйтеп ебәр, ҡанһыҙ, башымды аша!

-- Әгәр ҙә һары сәслең янында булмаһа, һин дә башҡасараҡ һайрар, күҙеңде асыбыраҡ ҡарар, кеше ҡайғыһын суска ҡайғыһынан айырыр инең.

-- Бына һиңә кәрәкһә, — тине Димустан. — Әйҙә, сыҡтыҡ, тышта көс һынашайыҡ!

Кәкре ҡайын төбөндә улар, аҡҡан һыуға текләшеп, оҙаҡ ҡына һерәйҙе.

-- Их һеҙ, уңмағандар, һөйөшә белмәйһегеҙ! — тип көйәләнде Димустан. — Йыһаниә менән һине әйтәм. Мөхәббәт мәсьәләһендә иң мөһиме, беләһеңме, нимә? Эште, тәүге үбешеүҙән үк, теүәл иҫәп, айыҡ аҡыл менән көйләп ебәреү, сәғәт механизмы һымаҡ яйға һалыу! Бер-береңдең һәр аҙымы, һәр һулышы алдан уҡ билдәле булһын, көтөлмәгәнлек факторына, стихиялылыҡҡа юл ҡалмаһын. Бына шул саҡ һинең һымаҡ юҡҡа һыҙып йөрөүселәр ҙә бөтөр.

-- Мөхлисә менән һеҙҙең аралар шундай шәп тип әйтмәксеһеңме?

-- Шәплеген билдәләү хәҙергә минең бурыс түгел. Әммә шуны әйтә алам: беҙҙең мөхәббәт хронометрының уҡтары тайпылышһыҙ. Уларҙы икебеҙ тарафынан алдан уҡ билдәләп, көйләп ҡуйған иң теүәллекле сәғәт механизмы йөрөтә!

-- Ҡара уны, сәғәтеңдең йөрөткөсө йә тутығып, йә өҙөлөп ҡуймағайы! — Мотал ҡырыҫланып ситкә ҡайырылды.

-- Рәхмәт, кәңәшеңде тотормон. — Ҡыҙыл башҡорт та ҡуҙғалды. — Тик шулай ҙа изге Ниагара шарлауығыңа табынырға барыу өсөн суска һарайының түбәһен япҡасыраҡ бер мәл һайлаһаң ине. Ҡалғанын беҙ һинһеҙ ҙә...

Мотал уныһын көтмәне – иртүк тороп, оло юлға йүгерҙе. Бүрәнә ташыусы машина ғыжылдап килә ине.

Йыһаниәне ул, әлбиттә, тәүҙә күрше леспромхозғаса әлеге машинала барып, район үҙәгенәсә утыҙ саҡрым тау юлын осраҡлы ылауҙарҙа үтеп, ҡалағаса самолетта осоп, унан поезға ултырып, поездан автобусҡа күсеп, әллә ҡайҙан, алыҫ Танып буйҙарынан юллап табырға әҙер ине. Әммә яҙмыш тигәнең аяуһыҙ ғына түгел, миһырбанлы ла икән. Бер кис ҡунып китеү өсөн район үҙәгендәге

ҡунаҡхана ишеген асып инеү менән үк ике күҙе шар булды: коридорҙағы сатнаҡ көҙгө ҡаршыһында, бөгәренә уралырлыҡ тығыҙ сәс йылғаһын тағатып ебәреп, Ниагара шарлауығы үҙе тора! Көҙгөлә күҙҙәре осрашып, әйләнеп ҡарағайны, икеһенең дә йөрәк төбөнән башҡаларға аңлайышһыҙ бәғер ауазы сыҡты:

-- Һинме ни?!

-- Мин!

Һулыштары ҡыҫылды, ҡолаҡтары шауланы, Ниагара шарлауығы донъяны томаланы... Үҙҙәре генә түгеллеген, нисәмә-нисә күҙҙәр төбәлеп торғанлығын ҡапыл иҫкә төшөрөп, ҡулдарын яҙлыҡтырҙылар, ғәйепле йылмайышып, ҡунаҡхана мөдиренә боролдолар.

-- Ғәфү итегеҙ, апай, был — кейәүем минең... — тине көтмәгәндә, азаматының мейеһендә шашҡын сатҡы баҙлатып, алсаҡлығы тышына сыҡҡан Йыһаниә.

-- Рәхим итегеҙ, рәхим итегеҙ! — Хужабикә өтәләнде, йәһәт быларҙы ҡалдырҙы...

Йыһаниәнең уйламай әйткән шаян һүҙе төбәк ҡунаҡханаһында загс танытмаһылай тәьҫир итте: «хәләл ефеттәр» өсөн шунда уҡ ниндәйҙер «оло ҡунаҡ» өсөн тәғәйенләнгән люксты бирҙеләр. Йыһаниә менән Мотал, абайламай шул тиклем ҙур ҡиәмәт ҡуптарыуҙарынан уңайһыҙланып, ҡырҡа баш тартһалар ҙа, «оло ҡунаҡ» үҙе килеп етеп, мин дуҫтарҙың береһендә урынлаштым инде тип, ғашиҡтарҙы күндерҙе...

-- Ниңә улай алабарманланып сығып киттең? — тине Йыһаниә, унын сикәһенә сикәһен ҡуйып, танһыҡтары бер ҡанғас.

-- Һағындым. Һинһеҙ артабан бер секунд та йәшәй алмаҫ хәлгә еттем.

-- Иҫәрем минең, иҫәрем! — Сәстәрен һыйпаны. — Ваҡытты шулай секундлап һанайҙармы ни?

-- Һинһеҙ секунды ла миңә йыл кеүек.

-- Туйырһың.

-- Йәшәүҙәнме?! Һин минең бөтә донъям, ғәләмем!

-- Уй иҫәрем, — тип көлдө Йыһаниә. — Ә һин үҙең минең өсөн кем икәнеңде беләһеңме? Мин дә бит ҡуйыр концерттарымды ҡалдырып сығып киттем — һине Һары аждаһа йотоп ҡуймағайы тип ҡурҡтым.

-- Ниндәй һары аждаһа?

-- Үҙеңдең кемгә күҙең аҡайып йөрөгәнде белмәйҙәр тип уйлайһың...

Егет ҡапыл һиҫкәнде, тороп ултырҙы.

-- Юҡты һөйләмә, Ниагара шарлауығым!

-- Бөттө-бөттө, уйнап ҡына әйтеүем. — Яурынынан тартып үҙенә ылыҡтырҙы. — Ят инде... Хәҙер мәңге минеке булдың, инде.

Мотал саҡ иҫенә килеп һөйләнде:

-- Беҙҙең дә бәпесебеҙ булыр, эйеме?

-- Булыр, булыр...

-- Йыһаниәм, ысынмы, ысынмы?

-- Әгәр белгең килһә, ошо минуттарҙа мин — һөрөп-тырматып ҡуйылған, орлоҡ ҡына көтөп ятҡан яҙғы баҫыу кеүекмен...

Мотал, әйтерһең, ылғый нурға тулышты, ҡолаҡтары шауланы.

-- Ҡыҙыбыҙ булһа, беләһеңме, кем тип ҡушасаҡбыҙ?

-- Үҙең һымаҡ, берәй сыңлы тимер-томор исемелер. Металл балаһы нисек ағас-таш булһын.

-- Долой тимер-томорҙары! Беҙ уға Ниагара тип ҡушасаҡбыҙ!

-- Ә улыбыҙ булһа, Ҡорос тимпе? — Йыһаниә кеткелдәне.

-- Юҡ, беҙ уны ла һиңә оҡшатып атарбыҙ. Йыһан булыр исеме.

-- Әйтерһең инде тағы. Икеһе лә миңә генә оҡшарға тигәнме ни?

-- Бөтә донъя һиңә оҡшарға тейеш. Һин -- донъяларҙың донъяһы, үҙәге!

Тәҙрәләргә таң һарыһы сайпылғас, татлы йәшәү ләззәтенән талсығып, күҙҙәре йомолғайны.

Мотал оло хәүефләнеп уянды.

-- Йыһаниә, беләһеңме, миңә нисек ҡурҡыныс?!

-- Ә? Ниндәй ҡурҡыныс? — Йоҡоһо кинәт осоп, башын мендәрҙән айырҙы. Егет уға текләп ултыра ине.

-- Һине мәңгегә юғалтырмын тип ҡурҡам...

-- Тилекәйем минең, мин һинән бер иле лә айырылмам!

-- Шулай ҙа, иртәгә үк район загсына барып, эште нығытып ҡуяйыҡ. — Мотал кипкән ирендәрен яланы.

-- Бәй, әллә һин дә ҡағыҙ ҡоло булып бараһың инде?!

-- Беҙ хәҙер икебеҙ — бер йән, мин закон ҡаршыһында рәсми яуаплылыҡ йөкмәргә тейеш. Буласаҡ йән хаҡына...

-- Һе! Ҡайғырма, буласаҡ йән хур булмаç. — Серле ябайлығы менән тилертеп ҡосаҡланы, һушты алды Ниагара шарлауығы...

Ә шунан һуң... шунан һуң...

Ах, эйе: теге, дүртәүләшеп, баш ҡаланың Ағиҙел яры буйында кәмәлә йөрөү, кәмәләре түңкәрелеү... *һаҙ биçтәһе* бәндәһенең ишкәктәрен йөкмәп алып ҡасыуы... Батып барған Йыһаниәне — Димустан, ә Металды... шәлкем сәсенән услап тотоп Мөхлисә ҡоткарып ҡалыуы... Әммә төптәнерәк уйлап ҡарағанда, барыһы ла бына ошо Ҡыҙыл башҡорттоң йүнһеҙлегенән килеп сыҡты түгелме? Ағиҙелдә елеп барған, бәхет менән тулы йәшлек кәмәләрен әгәр ҙә ул алйоттарса һыуға түңкәрелдертмәһә?!.

Аяғы ҡаймыҡҡан Йыһаниәне күмәкләшеп травмопунктҡа илткәйнеләр, унан тура больницаға һалдылар. Ятаҡханаға ҡайтып йығылған Моталдың да тәне уттай ҡыҙышып, таңғаса һаташып сыҡты. Уны ла «тиҙ ярҙам» машинаһы алып китте — һыуыҡ үтеп үпкәһе шешкән, тинеләр. Шулай итеп, икеһе тиң хәстәханаға эләкте...

Хәл белергә йә Димустан, йә Мөхлисә сиратлап йөрөнө, Йыһаниәнән — Моталға, Моталдан — Йыһаниәгә сәләм ташыны. Икенсе аҙна тигәндә, егеттең һулышы тигеҙләнеп, күҙҙәре асылып, палатаның ялҡытҡыс тоташ аҡлығында иғтибарына Бәпембәнең сағыу-һары башы, ҙур асылған болан күҙҙәре салына, сыңратып көлөүе йәнгә үтеп инә башланы. Ҡыҙый үҙе лә, әллә шуны һиҙепме, килгәне һайын уғата матурлана, алсаҡлана бара ине. Бер көн ул ҡояштай балҡып бешкәп әфлисундар алып килде, сағыу-һары бәпембә башлы зифа һынын

борғоландырып Моталдың койка ҡырыйына ултырҙы, яғымлы шыма ҡулдары менән ауырыуҙың башын ҡалҡыта биреп, мендәрен ҡабартып һалды, шул саҡ уның тығыҙ тирткән түш йомролары төртөлөүҙән егетте иҫәңгерәтте... Эскерһеҙ студент яңылыҡтарын тирә-тирә, Бәпембә ҡояштай әфлисунды сәскә һымаҡ асылдырып әрсене, итләс-һутлы бүлкәләрен, берәмтекләп айыра-айыра, егеткә һоғондорҙо.

-- Үҙең ҡап, үҙең! — тине Мотал, әсәһенә иркәләнгән малайҙай алсаҡланып.

-- Бына һиңә кәрәкһә, мин — ауырыу түгел дәһә!

-- Мин дә ауырыу түгел!

Ҡыҙ, күрше койкаларға күҙ ҡырын һирпеп, ауыҙ эсенән генә һығылып көлдө, моғайын, был минуттар уға ла ғәзиз ине.

-- Үҙ күстәнәсен ашаған кешене эт тешләй, ти торғайны минең әсәйем.

-- Уның ҡарауы оҙон ғүмерле була, һөйгәне менән ҡауыша, тиҙәр ине беҙҙең яҡта.

-- Бына нисек? Эт тешләһә тешләһен былай булғас, хәл иттек! — Ҡыҙҙың маникюрлы нәфис бармаҡтары әфлисун бүлкәһен алһыу имнек яҡҡан нәфис ирендәре аша нәзәкәтле оҙатты. — Булды, инде быныһы — һиңә! — Ҡуш бүлкәнең икенсеһе егет теленә ятты. Ана шулай уйнай-уйнай, «ялт!» иттереп ҡуйҙылар. Ҡыҙ китергә йыйынды:

-- Йә ярай, иҫән-аман булып тор, Металчик-Манара.

-- Саҡ ҡына ултыра бир инде, миңә бында күңелһеҙ. — тине Мотал.

-- Әл дә оҙаҡлап ҡалдым. — Бәпембә, ауыҙын үпкәле бүлтәйтеп, сәғәтенә ҡараны. — Ниагара шарлауығың килеп инеп, йөрәге ярылыр, тағы.

Мотал һиҫкәнеп ҡыҙарҙы: әфлисунга мауығып, Йыһаниәнең хәлен дә һорашмаған.

-- Больницанан сыҡтымы ни ул?

-- Бөгөн сығаралар. Сығыуы менән һиңә киләм тигәйне, тап ошо сәғәттәрҙә...

--Бына нисек.

-- Эйе. — Мөхлисәнең тауышы һалҡынайҙы. — Ҡултыҡ таяғы менән ҡыбырлаһа ла. Беләһеңме, һинең менән минең хаҡта әхирәт ҡыҙҙары уға нимә еткергән? Имеш, Манара һыуға батып бара, тигән булып, — ҡыҙ ауырыуҙың түбә сәсен туҙғылдырҙы, — мин һинең ошо флюгерыңа йәбешеп, һыу төбөнән үҙемдең буласаҡ кейәүемде тартып сығарғанмын...

-- Һе! Кем тирә ул ғәйбәтте?

-- Һүҙ — эйәһе менән йөрөмәй, үҙең беләһең, *алтыным.* — Мөхлисә тәүге тапҡыр тап бына ошонда уға *«алтыным»* тип өндәште. — Юҡҡа иҫең китмәһен — төкөр танауҙарына! — Егетте мендәренә ипләп кенә яҡкырҙы. Ҡапыл башы зыңлап шаулаған йән эйәһен уғата албырғатып, бүртек ирендәре менән маңлайынан супылдатып сығып китте.

-- Ана, Ниагара шарлауығыңдың ҡултыҡ таяҡтары туҡылдап килә. Тиҙерәк терелеп сыҡ, Йыһаниә әхирәтемде рәнйетмә! — Һуңғы һүҙҙәренең айышын, күппе генә уйлаһа ла, төшөнөп бөтә алманы. Сөнки форсат та ҡалманы

— һыңар аяғы бала ҡәҙәре итеп биләүләп гипсланған Йыһаниә тайпаңдап килеп инде.

-- Һаумы, йәнем!

-- Һаумы, Йыһаным-донъям! — Мотал, ҡалҡына биреп, тағы ла нимәлер, — бик ҡәҙерле һүҙ! — өҫтәргә иткәйне лә, күҙҙәре шар асылып уға текләп ҡатҡан Ниагара шарлауығының ҡулындағы тоҡсайы төшөп китте, тоҡсай төбенән ике һап-һары ҡояш — әфлисун — икеһе ике яҡҡа күрше койкалар аҫтына тәгәрләне. Ул йылдарҙа цитрус емештәре беҙҙә бик һирәк ҡунаҡ ине, шуға күрә Мотал ике әфлисундың үтә лә ҡиммәтле бүләк — больницала ятҡанында һөйгәненең үҙенә килтерелгән күстәнәстәр икәнлеген, Йыһаниә шуларҙы, ашамайынса һаҡлап тотоп, бында алып килгәнлеген аңланы. Йөрәген төптән семтеп һыҙлатҡан ошо хистән айнырға ла өлгөрмәне, Йыһаниә, ике усы менән күҙҙәрен ҡаплап, ҡултыҡ таяҡтарын шалтыр-шолтыр ҡолатып, үкереп илап ебәрҙе.

-- Йыһаниәм, ни булды?!

-- Юҡ-юҡ, булманы! — Ул, койка арҡаһына тотоноп, ырғый-һикерә килеп етте, ҡалҡына башлаған Моталды ике яурын башынан баҫып ятҡырҙы. — Бер нәмә лә булманы, йәнем, ғәфү ит. Әллә ниңә күңелем тулышып торасы... — Йыһаниәнең күҙе тумбочкала ятҡан, сәскә һымаҡ итеп асылған әфлисун ҡабығын һәрмәне лә, әйтерһең, һүрелеп тоноҡланды. — Үҙеңде килеп күреү форсатын әле яңы ғына алдым — гипслап ҡайтарҙылар, — тине.

-- Һөйәге именме һуң?

-- Саҡ ҡына сатнаған, ләкин ҡурҡыныс түгел. Үҙеңдең хәл нисек һуң, арыумы?

-- Арыуланып барам инде, кризисты кисерҙем.

-- Ҡасан сығаралар?

-- Киләһе аҙнала, тип торам.

-- Ярай, ғәфү ит мине, мин ҡайтайым инде. Тышта такси көтәлер. Тиҙерәк төҙәлеп сыҡ.

—Дуҫ-иштәргә сәләм әйт!

-- Әйтермен. -- Таяҡтарын туҡылдатып сығып китте, Мотал иһә һаман һушын йыя алмай аҙапланды: Ниагара шарлауығы ниңә былай бик бойоҡ һәм... һыуыҡ?..

Палаталаш күршеләре янына килеп баҫты, иҙәнгә тәгәрләгән ике әфлисунды, үрелеп алып, тумбочка өҫтөнә ҡуйҙы.

-- Их һин, бешмәгән йән, ошондай ҙа алиһәне илатырға яраймы ни!

-- Минең ни ғәйебем бар?

-- Ғәйебең ана маңлайыңа яҙылған! — Көҙгө киҫәге килтереп баҡтырҙылар. — Күр, ни ҡылығың был?! Ошондай ҙа һылыубикәне һары башлы ҡурсаҡҡа алмаштырҙың!

Эс-бауыры «жыу!» итеп, Мотал күҙҙәрен йомдо: маңлайына Бәпембәнең алһыу ирендәре мөһөрләнгәйне...

Ниагара шарлауығы шунан һуң ҡабат килмәне: аяғы төҙәлгәнсе, ауылына ҡайтып киткән, тинеләр. Мөхлисә менән инде тегеләй ҡыланманы, быны ҡыҙ үҙе лә һиҙҙе, мәгәр уға иғтибарын һүрелтмәне. Хәйер, больницанан сығырға ла аҙна

араһы ғына ҡалғайны бит. Тап ошо аймылыш көндәрҙән Мотал ҡулында, йәшлегенең дыуамал саткыһы булып, дәфтәр битенә ашыҡ-бошоҡ сыймаҡланған яҙыу ғына тороп ҡалды: «Һинең өсөн мин юҡ — теге көндә үк даръяға батып үлдем. Баш осомда ултырып ясин сыҡма, онот». Ҡултамға. Һәм аҫта, йәнә ҡабат уйланғандай, эре хәрефтәр менән өҫтәп ҡуйылған: «Минең өсөн һин бөтә үткәнем булдың. Ә мин үҙем менән бергә һинең килер көндәреңде алып китәм, эйе».

«Килер көндәреңде...»

Хәтерҙә: был юлдарҙы уҡығас, теге саҡта район ҡунаҡханаһында эштәр тәрәнгә киткәнлекте хәтерләп, ирҙәр үҙһөйәрлеге ҡуҙғалып, ошонан һуң минән башҡаны таба алырһыңмы икән, ҡыҙыҡай, тип, Мотал көлөп ҡуйғайны: «Туҡта, балам, терһәктәреңде тешләрҙәй үкенеп, шул саҡтағынан да былайыраҡ йөрәкһеп, илай-илай үҙең эҙләп килерһең, аягыма йығылып ғәфү үтенерһең. Тау — Мөхәммәткә түгел, ә Мөхәммәт тауға барған!» Ләкин ғорурлыҡ тигән нәмә икеһендә лә самаһыҙ булып сыҡты — теге саҡтағы бер-береһен йән атышып барып табышыу инде ҡабатланманы, һыуҙарирегә аҡманы. Йөрәктәрҙе аҡрынлап әллә мүкме, әллә *алтын сөрөкме* баҫты. Вуздан академик ял һорап алып, билдәһеҙ яҡҡа китеп олаҡкан Йыһаниә шунан аҙаҡ бер йыл үткәс тә, унан һуңғы йылдарҙа ла Моталдың ғүмер офоғона кире әйләнеп ҡайтманы...

Ошо минуттарҙа, Мотал йәшлек үткәндәрен уйлап өҙгөләнгәндә, уның йәшлек дуҫы Ҡыҙыл башҡорт нимә кисерә икән һуң?..

Ул да, ул да...

Димустан баҡсала гиҙә, торна муйынлы таяғын әле бер, әле икенсе ҡулында пропеллерҙай зыр-әйләндереп, ағас араларындағы әҙәм аяғы баҫмаҫтай һил-тыныс һуҡмаҡтарҙан яңғыҙы гиҙепме-гиҙә. Юҡ, һис тә яңғыҙы түгел, ә йәшлеге-тилелеге бара йәнәшәһендә... Тиле генә түгел – аянысла, шуға күрә Димустан уны иҫкә төшөргөһө килмәй, хәтеренән ҡыуалай. Сөнки мейеһенә зыңҡып керҙеме – йөрәген бөткөһөҙ һары һағыш, һыҙланыу һулҡылдата. Шуға күрә уның асы иҫтәлеген үҙебеҙ бәйәнләйек.

Мотал дуҫының Йыһаниә менән аралары өҙөлөүҙең тап икенсе йылы ине. Димустандар ятағындағы бер егет Мөхлисәләр ятағындағы ҡыҙ менән өйләнеште. Туйҙары гүзәл Ағиҙел ярының башында – ошо Ленин баҡсаһындағы йәйге кафела гөрләп үтте. Димустан, әлбиттә, Мөхлисәһе менән бергә атап саҡырылғайны. Ләкин яҙмыш тигәнең шуҡ этләшә бит: табын ҡырындағы Мотал урыны, әллә осраҡлымы, әллә юрыймы, тигәндәй, Бәпембә янына тап килде. Ҡыҙҙың икенсе яғынан Димустанға ла урын ҡалдырҙылар: комсомол активисы, ниндәйҙер ашығыс эш сығып, һуңлабыраҡ килә, тип аңлаттылар. Мөхлисә, ҡәҙимгесә шаталаҡланып: «Буласаҡ кейәүем килгәнсе, һин минең буласаҡ кейәүем булып торорһоң, ухаживаты итерһең, йәме?» — тип табын яңғыратып көлмәһенме, сағыу-һары бәпембә башын әүештереп Моталға. «Ҡурҡма, условно ғына бит!» -- тигәсе ни, быныһы «йә» тине, шаян уйынды ирмәкләп табын көлдө, шуның менән уйын да бөттө һымаҡ. Тик Димустан туй уртаһында ла, аҙағында ла мәжлескә морон төртмәгәс, Моталға, баяғы «условный ғына» уйынға буйһоноп, Бәпембәнең «буласаҡ кейәүе» ролен аҙағынаса үтәргә тура килде... Туй ҡыҙа, ә

Мөхлисә, тәүҙә һиҙҙертмәһә лә, ваҡыт үтә барған һайын, энә өҫтөндәге һымаҡ ултыра, әленән-әле ҡул сәғәтенә куҙ һала. Димустандың урыны буш ҡалыуҙан үртәлеп, буғай, бернисә бокалды егеттәрсә төп күтәреп ҡапланы, ике сикәһе утланып, ултырғысын Моталғараҡ шыуҙырып, һырлығыбыраҡ ултырҙы. Сөмһары сәс бәпембәләре егеттең битен ҡытыҡлап, әллә ниндәй хистәргә юлыҡтырҙы, ә ҡыҙ иһә Димустан менән үҙе тураһында, Йыһаниә тураһында ҡолаҡка яҡмаған серҙәр һөйләп үртәне. Тора-бара үҙе менән Мотал тураһъгада ғына ләпелдәүгә күсте. Мотал да ярайһы уҡ ҡыҙып алғайны; Мөхлисәнең һармаҡлығына тәүҙә әллә ни иғтибар итмәһә лә, һуңға табан ҡолаҡ һала, хатта ҡыҙығып тыңлар хәлгә лә етте. Аҙаҡтан үҙ ҡылыҡтарын аҡлап фекерләүенсә, был төндә ул нисек тә ҡыҙҙың күңелен төшөртмәҫкә, дуҫының юҡлығын тойҙортмаҫка тырышты, буғай, тырышыуын... Тик Бәпембә, көтмәгәндә, Димустанды хурларлыҡ һүҙҙәр әйткәс, дуҫын аҡлап кәлимә өн ысҡындырманы... Һылыуҡай, унын һайын осоноп, уны тышҡа саҡырҙы, сыҡҡас, Манарам да Манарам, тип, муйынынан һығып ҡосаҡлап алды: «Яратам мин киршәүҙәрҙе, һинең шикеллеләрҙе!» — тине. Мотал һулыш алырға ла өлгөрмәне: «Больницала ятҡаныңда уҡ муйыныңа һарылырға ине иҫәп, Металчик-Манараҡайым!..» — тип тә өҫтәмәһенме. Ҡыҙҙың күкрәк йомроларының шундай танһыҡ тиртеүлеге төртөлөүҙән һулышы томаланды, тәне буйлап утлы энәләр үтте — Йыһаниәнән һуң бәхет юҡтаған һәм һыуһаған йәш тәбиғәт үҙенекен итте. Ә Бәпембә, ошоно ғына теләгәндәй, уғата шаталаҡланды, осондо:

—Һин минең буласаҡ кейәү бурысыңды аҙаҡкаса үтә инде, йәме! — тип, ҡолагына ҡотҡоло бышылданы. Тын да алдыртмай, шаулы түңәрәккә бейергә һөйрәкләне.

Талғын ғына көйгә ойоп, оҙаҡ тирбәлде улар. Ебәк күлдәк үтә ҡыҙҙың нескә билен тойомлаған егет аҡылын юйҙы...

Мәжлес таралышҡанда, һәммәһе лә тип әйтерлек ҡыҙмасараҡ йәмәғәт, үҙҙәренән-үҙҙәре бер-береһенә һырлығып, парланып та өлгөрҙөләр. Парһыҙҙар иһә бер ситкәрәк һирпелеп, һәр ҡайһыһы үҙ юҫығына ыңғайланы. Ә төп төркөм баҡса буйлап ағылды, был теҙмәлә Мотал менән Мехлисә лә бар ине. Аллея осона сыға килә төркөмдәр шыйыҡланды — төн ҡосағында берәм-һәрәм ирене. Хәйләкәр яҙмыш ҡараңғыла Мотал менән Мөхлисәнең икеһен генә ҡалдырҙы.

-- Буласаҡ кейәү, әйттем бит, бурысыңды аҙағынаса үтәп бөтөр!—тип, нисектер бәлйерәп йомшап киткән кәүҙәһен унын беләгенә аҫылындырып, самаһыҙ кысҡырып көлдө ҡыҙый.

-- Ни эшләйем икән һуң?

-- Аһ, бешмәгән! Мине илтеп ҡуй.

-- Киттек һуң.

-- Ҡайҙа?

-- Дөйөм ятаҡкасы.

Ҡыҙ ҡысҡырып көлдө. Кинәт асыуланып, ҡулын өҙә тартып алды.

-- Юҡ, мин унда ҡайтмайым! — тине, ҡапыл текә-турайып, һынын ҡатырып, осло үксәләре менән урам уртаһынан шаҡ та шоҡ баҫып, яр буйындағы ағас өйҙәрҙең береһенең ҡапкаһына ыңғайланы. Егет йүгереп ҡыуып етте, ҡабат

ҡултыҡлап алды.

-- Әһә, үҙ бурысыңды онотмайһың икән әле, — тине ҡыҙ, туҙғаҡ башын егет яурынына һалды.

-- Ҡайҙа барабыҙ?

-- Әйҙә, бешмәгән, барғас күрерһең!

— Шулай ҙа кем ҡапҡаһы был?

Ҡыҙ ҡапҡа ҡағыуҙан туҡтап, күҙҙәренә ҡараны:

-- Әһәәә, шөрләйһеңме?

-- Таптың шөрләр кешене! — Егет, ярһып, ҡапҡаны ҡуш йоҙроҡлап төйгөсләне.

-- Үәт был — минеңсә! — тине Бәпембә. Ихатала ишек шығырланы.

-- Атай, һинме был? – тине ҡыҙ бала тауышы.

-- Атайың ат һуғарып йөрей, ә был — беҙ! Ас ишегеңде!

-- Аһ, Мөхлисә апайым, һинме ни? — Келә шылтылдап ысҡынды. — Атайым менән әсәйем баҡсаға киткәйне, әллә шулар ҡайтып төштөмө тип торам. — Ун өс йәштәрҙәге ҡыҙыҡай тәтелдәп ҡаршыланы.

-- Беләм уларҙың өйҙә юҡлығын, — тине Мөхлисә. — Һиңә яңғыҙыңа ҡурҡыныс булмаһын тип, бына икәүләшеп килдек, һеңлекәйем.

-- Ах, әллә .буласаҡ еҙнәйемме? — Ҡыҙый ҡыуанысла сыйнаны.

-- Тап үҙе. Эш үтмәҫ борон, билбауына тотоноп ҡал: үҙеңә кейәү һабыны менән көҙгө бирергә онотмаһын.

-- Әһәлүк, туйығыҙ ҡасан була?

-- Һин туйҙы ҡайғыртма, ә хәҙер үк беҙгә урын йәтешлә. Еҙнәйеңде күрмәйһеңме ни, аяғында баҫып тора алмай.— Иркен таҡта верандала туҡталдылар.

-- Урынды ҡайҙа һалайым: бындамы, өйгәме?

-- Ошонда һал.

Ҡыҙ киҫәге, ниҙер белергә тамшанып, бер урында тапанды.

-- Апай...

-- Әлбиттә, айырым һал. Буласаҡ ҡына еҙнәй бит әле ул, үҙеңә кейәү кеҙгөһөн дә бирмәгән.

-- Бында карауат берәү.

-- Булһа һуң? Беребеҙгә — карауатҡа, икенсебеҙгә иҙәнгә йәй. Ҡана, үҙем ярҙамлашайым. Еҙнәй кешенең һөйәге ылғый металдан: иҙәндә аунаһа ла, арҡаһы һынмаҫ әле. Исеме лә уның Металл.

...Күҙҙәре эленеп барғанда, һары башлы Бәпембәнең туптай тығыҙ күкрәк баҫымын тойоп, һиҫкәнеп уянды егет, ҡырт әйләнеп, үҙен эҙәрлекләүсеһен ҡосағына йомарланы... Мейеһен кескәй генә йәшен ләүкетте: Димустан. Әммә икенсе секундта уҡ үткер сатҡы һүрелде, тупаҡланды — дуҫлыҡ хаҡын онотторҙо: сая һылыу бер унан ғына ҡалмағандыр, тимәк, бөгон миңә сират, тип, ҡомһоҙлоғон йүгәндән ысҡындырҙы...

Таң беленер-беленмәҫ айнынылар, тороп ултырҙылар.

Мейе сатнай, тамаҡ буйлап Ҡараҡомдоң сәмум еле һыҙырған... Мөхлисә

башын тотто, аҫтындағы шикле алһыуланған аҡ *бүреаҫтынаны*[11] (простыняны) йомарлап тотоп, үкереп илап ебәрҙе:

-- Манара! Ҡайҙа бәреп кергәнеңде белдеңме һин, Манара?!

Мотал да, үтә һуңлап, мөшкөл хәлде төшөндө: дуҫы ғәфү итмәйәсәк!.. Бөгөлөп һулҡыған Бәпембәне йөнтәҫ күкрәгенә ҡыҫып, һөйөп-һыйпап йыуатырға кереште. Тегеһе, һулҡылдауын тыя алмай, саҡ кейенеп, алһыу таплы простыняны йомарлап тотҡан килеш, сығыу яғына шылды.

-- Туҡта, быныһы иимәгә? Ҡалдыр! — тине Мотал, йомарлаҡты ташлатырға итеп.

-- Әллә күҙең һуҡырайҙымы, кейәү, көҙгөһөҙ кейәү? Башҡалар ҙа күрһен, тиһеңме?!

Ҡапҡанан шым ғына тайғас, Мотал үпкәләп алды:

—Ниңә төндә мине «Ҡыҙыл башҡорт» тип дөмбәҫләнең? Әллә төшөңдә күрҙеңме?

Иламһырап барған ҡыҙҙың һыны ғорур турайҙы:

—Шул кәрәк уға, бешмәгән Ҡыҙыл башҡортҡа! Кисәге туйҙан һуң беҙ ҙә унын менән загсҡа барырға тейеш инек. Вәғәҙәләр бирешкәйнек. Бына кәрәген алды. Дөрөҫөрәге – һин алдың... ҡыҙлығымды!

Мотал такси аулап интеккән арала, Мөхлисә ҡайҙалыр ғәйеп булып өлгөрҙө, һаман иҫенә килә алмаған егет, башы зыңҡып, урам буйлап уны шаңҡып эҙләй-эҙләй, йәйәү ҡайтты.

Койкаһында үлектәй һуҙылып ятҡанда, яурынынан ҡаты һелкетеп торғоҙҙолар:

—Буласаҡ хәләл ефет, кәләшең күперҙән осҡан! -- Моталдың күҙҙәре аларҙы.

— Ҡурҡма, һыуһылыуға әйләнергә өлтөрмәгән – һөйрәп сығарғандар. Һине вузкомском секретары саҡырта.

Был сәғәттә вуз комсомол комитеты секретары үҙенә буйһонған факультет секретарын, йәғни үлектәй төҫө ҡасҡан Димустанды, аҡылға күндереп маташа имеш. Моталға бер ҡалҡынып ҡарап алғас, тауышын баҫылдыра төшөп, нотоғон дауам ҡылды:

-- Үәт ике дуҫ, ә! Берегеҙ уттай эш ваҡытында төҙөлөш майҙанынан табан тайҙырып, комскомитетҡа ЧП алып ҡайтыуығыҙ етмәгән, инде хәҙер икәүләшеп ЧП тыуҙыраһығыҙ! — Ҡарыулашырға маташҡан Моталдың ауыҙын ул киҫкен ҡул киҙәнеше менән яптырҙы, шымтайып ҡалған Ҡыҙыл башкортҡа уғының осон ҡаҙалдырҙы. — Оят түгелме һиңә, комсомол вожагына, биргән вәғәҙәңде боҙоу? Ҡыҙҙы ниңә, загсҡа барабыҙ, тип алданың? Шуның арҡаһында ана ниндәй ЧП!

-- Ғәйеплемен, — тине Димустан. — Кисә Химия заводына сит илдән ҡунаҡтар килгәйне. Йәш эшсе-активистар. Шуларҙы оҙатып йөрөп, көтөлмәгән бәхетһеҙлеккә тарыным: бер ҡунаҡ иптәштең, баҫҡыстан йығылып, аяғы ҡаймылды. Шуны больницаға һалышып, янынан китмәй ултырҙым...

---

[11] Үҙҙәрен Бүре тоҡомонан тип һанаусы үҫәргән-башҡорттарҙың ҡатындары ирҙәрен «бүрем» тип атаған, йоҡлағанда «бүреастына» -- *простыня* түшәгән.

-- Их һин! Сит ил ҡунаҡтары, әлбиттә, зерә яуаплы нәмә. Әммә һиңә үҙ өйөңдәге ҡайбер ҡунаҡтың янынан китмәҫкә ине.

-- Мин хәҙер үк хатамды төҙәтергә әҙер, — тине Димустан, бешкән сейәләй ҡыҙы йөҙө боҙҙай ағарып.

-- Улайһа, ана Металл да бында: бутҡаны икәүләп болғатҡанһығыҙ — ҡушарлап һапырығыҙ. Хәйер, хәҙер үк, өсәүләшеп, Мөхлисәнең бүлмәһенә йүнәлдек! Шагооом арш! Ергә тубыҡланаһыңмы, сәсең менән иҙән һеперәһеңме — уныһы һинең эш, әммә комсомолка ҡыҙҙың йөрәгендә шырау ҡалмаҫҡа тейеш.

—Мин әҙер! — Шул бер һүҙен тәҡрарланы  Димустан. Аһылдашҡан әхирәттәре араһында башын эйгән килеш койкаһында яланғас аяҡтарын һәлендереп ултыра ине Бәпембә. Күгәргән күҙ төптәренә йәш тулған. Егеттәрҙең инеүенә ул иғтибар итмәне.

Вузкомском секретары һүҙ алды:

-- Ҡыҙҙар, аҡкоштар, ике бөркөт бына һеҙҙең ҡаршыла. Мин аныҡ ҡына белмәйем, әммә бөгөнгө бәхетһеҙлек була яҙыуға улар икеһе лә берҙәй ғәйепле, тигән айыҡ һөҙөмтәгә ҡушылам. Кем гонаһлы — шул егеттәрсә үҙенең ғәйебен таныһын да немедленно төҙәтһен.

-- Мөхлисә, зинһар... Бына бөтә иптәштәр алдында ант итәм: миндә түгел ғәйеп! — тине Димустан, тамағы ҡарлығып. — Аянnetwork вәҡиға килеп сыҡты. Объектив сәбәптәр арҡаһында, мин кисә һиңә биргән изге вәғәҙәмде үтәй алмағайным, ләкин бөгөн үк, хәҙер үк уны, хатамды, төҙәтергә әҙермен.

Бәпембә баш ҡалҡытты:

-- Шулаймы ни?

-- Шулай.

-- Һин  хаталарҙың  барыһын  да  төҙәтеп  була тип уйлайһыңмы ни?..

Димустан Мотал йөҙөнә ҡараш ташланы ла йөрәге һурылып төштө — ниндәйҙер оятһыҙ ҡәнәғәтлек менән аҫтыртын йылмая кеүек ине әшнәһе. Шулай ҙа ул егетлеген һындырманы:

-- Иптәштәрҙең күҙе алдында тубыҡланам, Мөхлисәм: хәҙер үк загсҡа барып яҙылышайыҡ. Ҡапҡа төбөндә такси көтә.

-- Ха-ха, шулай уҡмы ни әле? — тине Мөхлисә,  әле генә сыланған күҙ керпектәренең һәр бертөгө, әйтерһең, сытырлап ут сәсрәтте. — Егет булһаң, кисә биргән вәғәҙәңде кисә үк үтәр инең. Быны һиңә, ебек танауға, мин васыят итеп әйтәм. Үҙең кеүек үк, таксийың да бер тәүлеккә һуңлап килә.

-- Мөхлисә...

-- Юҡ, мин һине яратмайым! — Егет йоратының һонолған ҡулдарын ҡағып осорҙо, йәш аралаш ярһып көлөп ебәрҙе. — Ҡыҙыл башҡорт ҡыҙыл ҡар яуғанды көтһөн, ә мин хәҙер үк үҙемдең Металл-Манарама аҫылынам! — Бәпембә ҡырт боролдо, теле аңҡауына ҡатҡан һәм аҡрынлап артҡа шылған Моталды йәһәт ҡармап алып, муйынына һарылды. — Йәнем, берҙән-берем, йәйәү апарһаң да барам, әйҙә, киттек загсҡа!

Өнһөҙ быҙау хәленә төшкән Моталы менән ишектән сығып барышлайы, тағы ла шаҡ ҡатырып, аҙаҡҡы һүҙ өҫтәне:

—Мин был мөһәбәт Манараның флюгерынан ҡулымды ысҡындырмам, йығылмам: тыныс бул, секретарь иптәш!

Ошо ваҡиға арҡаһында, яҙмышына буйһоноп, Мотал үҙе лә көтмәгән туғанлыҡ ептәренә сырмалды — әсәһе әйтмешләй «атаһы урынына ҡалған» ғаилә дуҫы – Иҫке химия заводы директоры Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаровтың бер туған бажаһына әүерелде, сөнки шуның бер туған балдыҙы булып сыҡты Бәпембә. Ә Димустан үҙ сиратында, үҙе лә һиҙмәй, Мөхлисәнең яҡын ғына һеңлекәше Сәлимәкәйгә өйләнгәс, баяғы еп, бажа итеп, уны ла былар ҡорона тоташтырҙы...

Баҡсалағы кафела йәнә, Мотал менән Мөхлисәне ҡауыштырып, туй табыны ҡоролдо. Был туйҙа ла, әлбиттә, Моталдың йән дуҫы Димустан күренмәне: мөхәббәтенең үҙе әйткән теүәл сәғәт механизмының ҡыйралыуы ошолор...

## ДҮРТЕНСЕ СӘХИФӘ

Яңы һепертке яңыса һеперә, тигәндәй, Обкомдың яңы *беренсеһе* Оло йортҡа кереп ултырыуының беренсе көнөндә үк «аппараттың бушаған гайкаларын» ҡыҫып бороорға, секретарҙарының һәр береһен көнөнә бер-нисә тапҡыр кабинетына саҡыртып алып ҡыҙған табала бейетергә кереште:

-- Ниңә һаман барыһы ла иҫкесә -- иҫ китә! -- Ярандары рифмаланмыш һүҙҙәрҙән үк төшөндө: *беренсе* өс көнөн бушҡа уҙҙырмаған – һуңғы заман башҡорт шағирҙарының китаптарын ҡараштырып, үҫеп килеүсе телсе ғалим, өмөтлө йәш шағир Рәшит Төхфәт улы Алмаҡаевтың «заман ҡаҙағына һуҡҡан» шиғри юлы менән ҡоралланып килгән. Өҫтәүенә, башы өҫтөнә күтәреп, биш бармағы араһындағы ус аяһындай ҡағыҙҙы ялпылдата: -- Был ни эш, был ни хәл: йәш эшсе шағир, револьвер алып, *суицид*[12] ҡылыу сигенә терәтелгән! Идеология фронтындағы ярылып ятҡан был брешты идеология секретары ниңә күрмәй үткәргән? Был вопроста ниңә совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами иптәш менән тығыҙ элемтә тотмаған? Сусликов иптәштең күрһәтмәләрен үтәмәү билдәһе налицо! Тикшерергә: *башҡорт милләтселегенең* шауҡымы баш ҡалҡыта!

Димустан аңланы: һуңғы өс тәүлек дауамында *беренсенең* фатирынан сыҡмай ятҡан *олуг кәңәшсе* Мәрүән тиреп өлгөргән.

*Беренсенең* йәшен ташының иң элек идеология секретары башына тоҫҡаласағын төшөнгән башҡа тармаҡ секретарҙары еңел һулап таралдылар. Айырып ҡалдырылып тейешле һабаҡ алғандан һуң, ҡыҙара-бүртенгән Димустан эш урынына ҡайтып, телефонға күҫ төшөрҙө:

-- Алло! Яҙыусылар берлегеме был? – Трубканы алыусы шунда уҡ уның кем икәнен танының, һағайҙы.

-- Тыңлайым, Димустан Шиһапович.

– Тиҙ үк рәйес кәрәк ине.

-- Юҡ бит әле ул, эш менән сығып киткәйне.

Димустан елләнеп трубканы ташланы: «эше билдәле инде – яҡындағы

---

[12] Суицид – үҙ-үҙен үлтереү.

киоскынан йөҙ грамды төшөрөргә киткәндер!». Саҡ ҡына уйлағас, Мотал бажаһы иçенә килеп төштө: бер юлы рәйестең урынбаçары һәм профсоюз комитеты рәйесе бит әле ул – тап уның вазифаһы! Өçтәүенә, алдағы йыйында инвалид ағай урынына рәйес итеп һайланыу мөмкинлеге бар. Әлбиттә, һыналған кадр, ҡәләмдәштәре араһында ла абруйлы. Димустан бит уны башҡаларҙан яҡшыраҡ беләә. Ә шулай ҙа, ә шулай ҙа... Хәнйәр йөҙө ҡайрағанда үткерләнә -- кешелек сифаттарын тағы ла барлап ҡарайыҡ әле.

Трубканы шунда уҡ алды, йәш шағирҙың өйөнә барырға ризалығын да бирҙе. Тик ниңә бик оҙаҡлай, һуҙмаңдай? Ошо уҡ уның камилһыҙлығы хаҡында иçкәртмәйме?

Машинкаһын тырышып-тырышып туҡылдатҡан Һылыуҡайға, яҙыусы Шаһибәрәков иптәш бында күренеүе менән үк ошо адрес буйынса йәш шағир Ыңғырсаҡ Уралъский фатирына йүнәлһен, шунда көтәм, тип киçәтеп ҡалдырып, кәкре торна муйынлы таяғын һәлмәкләткән килеш сыҡты. Коридорҙы эре аҙымлап уҙғайны, лифт ҡаршыһында уҡ Мотал менән маңлай төкәшә яҙҙы.

-- Йәһәт йөрөйһөң икән дә, Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе, Мөхлисә ханым әйтмешләй! – тигәйне, бажаһының маңлайына күсә яҙған күҙҙәрен күреп тыйылды – ысынлап та, тел осонда ғына тора бит был кәнәлйә исем!  Хәлде икенсегә борорға теләп, таяғын юрый үргә күтәреп һондо: -- Мә, тотоп торсо бер секундҡа, бажаҡай, торна муйынлымды, һоп!

-- Топ! – Таяҡ эйәһе өмөт иткән әкәмәт килеп сыҡманы – бажай кеше һауала уҡ матҡыны ла төшөрмәйенсә тотто. – Нимә, әллә бәҙе бер йыуан ҡорһаҡ буржуй әргендеге һымаҡ бөгөлөп төшөр тинеңме?

-- Һәй сәбәкә малай, ысынлап та бирешмәйһең икән, әй! Нимә генә тиһәң дә, ярты ботлоҡ гер бит ул.

-- Шул Грозный-батша таяғыңды ҡулдан ысҡындырмайһың.

-- Ысҡындырһам, үҙең әйтмешләй, ҡорһағымды май бөрөр, ошо ҡырҡ йәшемдә алтмыштағылай күмһер инем.

-- Ә мин бына таяҡһыҙ ҙа тай-тулаҡ.

-- Шулайҙыр шул. Өф-өф итеп кенә һылап-һыйпап йәшәтергә, тейешлеһен генә өлгөртөп ашатырға Мөхлисәм юҡ бит минең, ғәфү ит.

-- Уның ҡарауы Сәлимәкәйең... – тип үҙ сиратында ни нәмәләр ҡаптырырға иткәйне лә бажаһы, лифт килеп туҡтаны ла юлдашы еңенән һөйрәне:

-- Киттек, киттек, мәрәкә һатыр форсат юҡ!

«Һә, ут ҡапҡандай йүгерә! — тип һөҙөмтә яһаны яҙыусы, Ҡыҙыл башҡорттоң мең ҡабат таныш сағыу-ерән төç-башына, кирбес килбәтле кәүҙәһенә йылдам күҙ һирпеп алып. — Романымды тап ошо киçкен эпизодтан — обком секретары менән маңлайға-маңлай төкәшеүҙән башлап алам да китәм, уҡыусымды сәмләндерәм. Шул сәмде арттырмаҡҡа, портретын да эре-эре тимгелдәр менән ҡырыç буяулап бирәм. — Әҙип йәнә лә ҡорҙашына баһалы ҡараш ташланы. — Нисек бар — шулай итеп!» — Ошоно уйлағайны, ни бары үҙе генә белгән һәм ярайһы уҡ шөрләткән тәкәббер әҙәби тәнҡитсе шәүләһе төçмөрләнде. Был яуыҙйән күпме йылдар яҙыусының үҙенең эсендә ултырҙы,

әҫәрҙәренең, тыуыр-тыумаҫ борон уҡ, «осло мөйөш»тәрен авторҙың үҙ ҡулы менән юндырҙы: «Һаҡ бул, әҙип – социалистик реализм ҡанундарына тап килһен!» Әле лә шул дөмөккөрө йәнгә тынғылыҡ бирмәй -- үҙе кеүек үк тәнҡит әһелдәренең, бигерәк тә «башҡорт белинскийы» Ғаяс Хөсниҙең, сығарасаҡ хөкөмдәрен тумбытыпмы-тумбыта: «Йәмһеҙ. Оло етәксе, партия юлбашсыһы, улай булырға тейеш түгел, белдеңме?! Социалистик реализм... Осло мөйөштәрҙе ҡырҡып шымаларға, ҡупшыларға!» -- «Тиһендәр! Төкөрәм танауҙарына! Яҙылған берен юнғы тотоп шымаларға малай-шалай түгелмен. Әҙип! Үҙем нисек күреп белһәм, инанһам, шул рәүешле һүрәтләргә хаҡлымын!».

Ҡыҙыҡһынып һораны:

-- Йә, *беренсенең* һулышы ниндәйерәк?

Һәлмәк кенә аҫҡа шыуышҡан лифт тауышына яйланғандай, Димустан тоҡ ауыҙын сисә бирҙе:

— Иҫ киткес!

-- Эс киткес булмаһа ярай ҙа...

-- Һин, малай, абай бул: уны-быны уйламайса әйтә торған ғәҙәтең бар!

-- Һе! Яңы һепертке яңыса һеперәме?

-- Саңын туҙҙыра ғына! *Башҡорт милләтселегенән* һалдыра.

Мотал йомрандай шыйылдатып һыҙғырҙы:

-- Күренеп тора: Мәрүән этлеге. Интектерҙе бит был, әй: мәрхүм башҡорт милләтселеген һөйрәп сығарып сыбыртҡылауҙы *хоббийы* итеп алды. Хатта Мәскәү трибуналарынан да кинәнеп шуны һыҙыра.

-- Шул хөббиямалы арҡаһында йәшәй ҙә!

Артыҡ ҡуйыртманылар. Бажаһының күҙ төптәре күгәрә төшкән ҡарашының моңһоулығын, нимәлер әйтеп бөтөрмәүен һиҙенде Мотал. Ул да, моғайын, елеп-юртып белем алған ғәмһеҙ студент йылдарын, элекке көр дуҫтарын, ә һуңынан оло вазифа мәжбүр иткән үҙ-үҙеңде сикләүҙәр һәм шул ҡырыҫлыҡ ҡороп ҡуйған күҙгә күренмәҫ кәртәләр арҡаһында әүәлге дуҫлыҡ күперҙәре ыуалыуын, дуҫ-иштәрҙең бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалыуын, шәхси тормошто ла шыҡһыҙ рәсмилек баҫа барыуын кисереп уфтаналыр. Яҙыусының күңеле һыҡтап ҡуйҙы, ҡорҙашына ниндәй ҙә булһа бер йылы һүҙ әйткеһе, күңелен күтәргеһе килде:

-- Эт өрә, каруан бара, тигәндәй, утыҙ етенсе йыл кире әйләнеп ҡайтмаҫ инде. Заман башҡа – заң башҡа, һин дә буштан башы киткән Әхмәт Иҫәнсурин түгелһең.

-- Һәр замандың үҙ заңы ла үҙ яны бит... -- тине Димустан, тәрән уйҙары диңгеҙендә тулҡынып. – Һәм ул яндан ҡасан ниндәй уҡ атылырын белмәйһең...

-- Шул әргендек шағир киҫәге лә лайыҡ булғанмы *беренсе* кимәлендәге ел-дауыл уйнатырға?

-- Сүптән сүмәлә яһарға ярап ята.

-- Мәрүән сүмәләһе! – Мотал сырайын һытып ситкә төкөрҙө.

-- Эш Мәрүәндә генә түгел, ә унан кәңәш алыусыла.

-- Утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫтай ҙа булды бит был *олуг кәңәшсе! Беренселәр* килә лә китә, ә кәңәшсе үҙ урынында ҡала. Тишеккә тығын булып.

-- Һиңә лә шунан үрнәк алырға ине – оло ҡолаҡка икенсе төрләрәк тә кәңәш керер ине, исмаһам.

-- Уныһы булмаç, әшнә. Ялағайҙар тоҡомонан түгелмен.

-- Бына шул-шул! Башҡортлоғоңа барып...

Бер быуа һүҙһеҙ атланылар.

-- Һин уны яҡшы беләһеңме? – Тынлыҡты боҙҙо Димустан.

-- Ыңғырсаҡ Ҡамырбаевтымы?

-- Уральскийҙы.

-- Бәй, шул үҙе бит инде ул, Ыңғырсаҡ Ҡамырбай улы Ҡамырбаев. Уральский – псевдонимы. Ә ижадына ҡарағанда, ҡойоп ҡуйған Ҡамырбай.

-- Йомшаҡмы ни?

-- Эт илағыс.

-- Револьверлы, тиҙәр бит һуң?

-- Револьверы ла уның ҡағыҙ ҡатырға ғына. Башына кирбес төшөп иçәңгерәгән дә еңгәләренең ҡуйынында имсәк имеп, икмәк ейеп бөтәйгәс, мөнәжәт яҙа башлаған, тип көләләр. Ижадында өçтөнлөк алған «еңгәләрем», «икмәк еçе» мотивтары тап шунан килә, тип сирттерәләр.

-- Мәçәлән?

-- Мәçәлән, бына был: -- Мөрйәләрҙән икмәк еçе сыға -- /Ҡайһы еңгәм икмәк бешергән? /Еңгәләрем, һеҙҙең ҡаластарҙың /Еçен тойоп тамам иçерәм!

Йәки: Еңгәләрем, минең еңгәләрем, /Бесән саба тауҙың битендә. /Еңгәләрем менән бакуйҙарға /Ятып аунауҙарым иçемдә!

-- Һем, ашау ҙа ятып аунау... Эшсе-шағир тип күтәрәләр ине түгелме үҙен? Бер ҙә тимер-томор еçе сыҡмай ҙа?

Мотал көлдө:

-- Ҡамырҙан ниндәй тимер еçе сыҡһын, ти? Урта мәктәпте тамамлағас Сибайға килеп, ташсы һөнәрен үҙләштереп йөрөгәнендә эшләүенә бер ай тулыр-тулмаçтан уҡ маңлайын кирбес йәнсеп, Пушкин әйтмешләй, бер шөрөбө бушағанмы, әллә төшөп ҡалғанмы, тиҙәр бит. Шул арҡала Өфө республика больницаһына күсерелеп, дауаланып сыҡҡас, ошондағы бер төҙөлөш тресына эшкә урынлашҡан да шиғыр яҙа башлаған. Эшсе-шағир тиһәләр ҙә, ҡамыр есть ҡамыр инде...

-- Үәт сәбәкә малай! – тип көлдө Димустан, ә эсенән хәтеренә киртеп ҡуйҙы: «Ҡамыр ҙа кәрәк беҙгә, ундай-бындай тишек-тошоҡто һыларға. *Беренсе* үҙе иçәпкә алған икән, ниңә тартынып торорға? Ҡолаҡтарынан тартҡылап башҡаларҙан бер иле артыҡ үçтереү сараһын күрергә лә тейешле сәғәте һуҡҡанда тейешле урында файҙаланырға!». Замана заңы, тигәндәй, быныһы ла аңлайышлы: Ҡыҙыл башҡорттоң да мәнфәғәте бар, бәндәләре шайтанланмыш сетерекле был заманда ул да, бәлки, үҙ сиратында Ҡамырбайҙан үҙ тишеген тығырға яраҡлы икенсе Мәрүән әүәләргә теләйҙер?..

Ағиҙел яры башындағы боролмалы тар һуҡмаҡтан күбенеһе яртылаш ергә батҡан ағас өйҙәр араһына үттеләр. Таҡта ҡапҡа арттарында аяҡ тауыштарына һаҡ һуҡбайҙар ларылдап ҡала.

-- «Күп яттыҡ беҙ мәҙрәсәлә» тигәндәй, кабинетта ултырып ҡына донъяны

аңлауы ҡыйын. Дөрөç әйтәмме, ҡорҙаш? — Яуапты ла көтмәй, дауам итте Димустан. — Һәй был техника заманы,  тәпәй-тәпәй йөрөүҙе лә онотоп барабыҙ, туған. Ҡитға иңен аҙымлап үткән йәйәүле .Мәхмүттәр ҡайҙа! Ашығабыҙ, ашығабыҙ... Йылтыр «Волга»лар  беҙҙе, техника әсирҙәрен, сәғәтенә йөҙ егерме километр тиҙлек менән ғаиләнән, туғандарҙан, таныш-белеш һәм бергә эшләгән иптәштәрҙән  тартып  алып  елдерә. Ул ғына етмәгәндәй, самолетҡа ултырып, тауыш тиҙлегендә ситкә осабыҙ. Үзең сәйәхәт ҡылып барған ер-һыуҙарҙы күреп ләззәтләнеү ҙә, юлда осраған әҙәмдәрҙең йөҙҙәренә иғтибар итеү ҙә юҡ хәҙер. Самолеттан төшөү менән берәй контора ишегенә уҡталып, ундағылар менән ҡағыҙ телендә аралашып, күҙ асып йомғансы уларҙан да ситкә кәйеләбеҙ. Хатта үҙебеҙ йәшәгән подъездагы лифт та беҙҙе күрше-күлән менән яйлап һөйләшергә яй ҡалдырмай елдерә...

-- Ватып ташлайыҡмы икән бөтә тимер-томорҙо?

-- Тимер-томорҙоң ни ғәйебе? Үҙебеҙ тимергә әйләнәбеҙҙер, брат...

Икеһе тиң уйҙарына йомолдо. Димустан торна муйынлыһын урта биленән матҡып, пропеллерҙай зыр-әйләндереп бара, йә булмаһа әленән-әле күккә сөйөп ебәреп, һауала уҡ услап ала. Ике яҡлап теҙелгән ҡарт йүкәләр, бөрөләрен яҙ ыуыҙына тиртеп, мәреү ҡарҙың иреп бөтөүен көтөп, талғын елгә иләç-миләç шыбырлаша. Тиҙҙән Урал яҙы күкрәген кирер — донъя ҡусҡыл ҡыяҡ-япраҡ, аллы-гөллө сәскәләргә күмелер. Таң-иртәнән шөңгөр ботаҡ араларын ҡыҙыл түшле турғайҙар, ә төндәрен һандуғастар илертер, баҡсалағы креслоларҙа ғашиҡ йәндәр ишәйер. Ләкин кемдең һандуғасы ҡайһы ағас башынан һайрар икән? Моталға шул һандуғастың, үҙенең һандуғасының, алыç йәшлек баҡсаһындағы шөңгөр йыры түгелә...

-- Һоп, бына килеп тә еттек. Ошо була инде эшсе-шағир Ыңғырсаҡ Уральский ҡәлғәһе!

Ата-баба ҡомартҡыһы иçәпләнерлек «ҡәлғә» ҡапҡаһын үтеп, ҡар һыуҙары күләүекләнгән ихатаның төпкөлөндә ҡыҙыл кирбестәре ел-ямғырға кителеп-мителеп шаҙраланған флигелгә төбәлделәр. Ҡасандыр бер сауҙагәрҙең йомошсолар өйө булғандыр инде ул. Болан кимереп туйынырҙай ҡалын мүкле ян стенаға оҙон тимер сөйҙәр менән беркетелгән шығырҙауыҡ таҡта баçҡыс күренде. Күтәрмәгә менеп аяҡ терәгәс, Димустан ысын мәғәнәһендә күгәрсен ояһына тарығанлығын тойҙо. Иҙән таҡталарын һығылдырып барып ингән йоҙроҡтай бүлмә — бинаның нәҡ ҡыйығында, түбә маңлайында берҙән-бер тәҙрә һаран көн яҡтыһын һүрә. Плитәле мейес биләй фатирҙың ҡап-яртыһын, ары бер тимер койка ла бер өçтәл, бер шкаф та бер ултырғыс һыйған. Боролоп сығыр әмәл юҡ. Китаптар шкаф башында, койка аçтында, стена буйҙарында ята өйөлөп. Әбей ҡарсыҡ койкала аяҡ һәлендереп ойоҡ бәйләп ултыра. Ҡунаҡтарҙы күреүгә өлтөрәп килеп торҙо, Моталды шунда уҡ таныны:

-- Ултырығыҙ, хәҙер сәй өлгөртәм.

-- Мәшәҡәтләнмәгеҙ, апай, беҙ ултырып тормайбыҙ: ҡабалан ғына индек, — тине Мотал.

-- Их эттәгенәһе, Ыңғырсаҡбайым сығып киткәйне  бит әле, шиғыр-мығырҙарын күтәреп. Редискаға илтеп тапшырам, тинеме шул...

-- Редискаға түгел, апай, редакцияға.

-- Шулайҙыр шул. Миңә ни, һуҡыр тауыҡҡа бары ла тары, тигәндәй... Отпускыла сағымда иркенләп артынан йөрөп ҡарайым, ти. Төҙөлөштә ташсы булып эшләй бит ул, үҙегеҙ беләһегеҙ, башҡа саҡта ҡулы теймәй.

-- Өйләнергә уйламаймы әле?

-- Ҡайҙа инде ул, бынауы йоҙроҡтай күгәрсен ояһында... Һине таныйым да ул. Иптәшең кем була, ул да үҙең кеүек үк осло ҡәләмме?

-- Эйе, осло ҡәләмдәрҙең дә иң ослоһо Димустан Бикләмешев була был иптәш. Ыңғырсаҡбай ҡустының хәлен белергә тип килгәйнек.

-- Унъң хәлен һорамағыҙ ҙа инде... Анауы бөҙрә сәслеһе, битенә түкөрөп, башҡа берәүгә кейәүгә сығып китте бит, мәлғүн. Шунан кәйен алмаштырҙылармы ни балаҡайымды: көнө-төнө ниндәйҙер ләүәлбир тураһында һаташып көйәләнә. Атылып ҡуймағайы тип, төн йоҡоларым ҡасты...

Ҡунаҡтар бер-береһенә ҡарашты.

—Ул бөҙрә сәсле тигәнеңде күреп беләинеңме?

— Белмәй ни. Заманында көнө-төнө ошонан сыҡманы, һағыҙ һымаҡ һыланып ятты. Үҙебеҙ кеүек, ауылдан килгән инсафлы ғына бала ине.

-- Ниңә башҡа кешегә китте икән?

-- Ниңә тип ни, билдәле инде: әҙәм рәтле торор өсөн. Ҡыҙ баланың көндәре һанаулы бит. «Беҙ ике йәшәмәйбеҙ. Өс йыл көттөм һин фатир ала тип, инде өс көн дә көтә алмайым — фатирлы кейәүгә сығам!» —тип ҡойроҡ сөйөп китте лә барҙы. Хәҙергеләрҙе беләһегеҙ: асыҡтан-асыҡ ярып һалалар. Бер-берегеҙҙе өҙөлөп һөйәһегеҙ, икегеҙ ҙә тиң килгән. Ошо бер карауат етер, мин ауылға ҡыҙҙарыма ҡайтып китәм, тип тә өгөтләп ҡараным тегене, булманы. «Капиталистың күгәрсен ояһында йәшәр саҡ түгел, мин — совет ҡыҙы, комсомолка!» — тип ауыҙҙы томаланы. Беҙҙең һымаҡ түгел шул хәҙерге йәштәр, үҙ һүҙле. Шунан биреле улым ләүәлбир тураһында һөйләнә лә һөйләнә.

-- Йә, ни әйтәһең, рәйес урынбаҫары? — Башын баҫып ҡына тыңлаған Бикләмешев юлдашының күҙҙәренә ҡараны. Осло-һалҡын боҙ ярсығы менән төрткәндәй ине. Мотал, кинәт кенә көллө тәне ҡыҙышып, ҡулъяулығын һәрмәне:

-- Юҡты һөйләмә, апай. Был фатир әле түҙерлек, бында, беләһең килһә, заманыбыҙҙың бына тигән талантлы шағирҙары, яҙыусылары йәшәп киткән, ләкин береһенең дә һөйгән йәре ташлап китмәне. Һәм береһе лә револьвер хаҡында һөйләнеп тә йөрөмәне... Сабыр иттеләр, ваҡыты еткәс, бынамын тигән фатирҙарға күстеләр. Бер көндә генә ҡала ҡороп булмай ул. Оҙаҡламаҫ, һеҙгә лә яңыһы бирелер, — тине.

-- Бирелер ҙә ул, тик балаҡайымдың бөҙрә сәслеһе кире әйләнеп ҡайтырмы һуң? Йөрәккәйе өҙөлә шул ҡолонсағымдың. Баклаҙушка тигән бөкләп йыйылмалы карауат алырға итеп тә ҡарағайныҡ, Ыңғырсаҡбайым, иҙән арҡырыһын үлсәп, баклаҙушка һыймай, тине... Рәхәтләнеп ауылда торған еремдән, башына бәлә итеп, саҡыртып алған була бит әле мине: Яҙыусылар союзы ярҙам итте — ятаҡхананан айырым фатирға сыҡтым, йәнәһе. Үҙе таш һалған төҙөлөшөндәге дөйөм бүлмәһендә генә торһа, миң артыҡ булыр ине...

Димустандың, мейес эҫеһе ҡапҡандай, еңелсә башы әйләнде — шыйыҡ

баҫҡыстан ярым бурһыған ағас уратаға тотоноп түбәнләне. Һандуғаслы йәш шағирҙы револьверға тоташтырған был торлаҡ ишараты, ысынлап та, ҡасандыр күгәрсен ояһы булып та, алыҫ ҡытлыҡ йылдарында әҙәм торлағына әүерелеүе, әле лә шул вазифаһын үтәүе бәхәсһеҙ ине. Ҡаты таш юлға төшкәс, юлдашына шул фекерен белдерҙе.

—Быуат башы ҡомартҡыһы, — тине, тыныс ҡына үҙ ғәмдәренә күмелеп барған яҙыусы. — Тарихтан күренеүенсә, был фатир беҙҙең ағай-энегә нэп дәүерендә килеп эләккән, — тип өҫтәне. — Шунан биреле ныҡлы рәүештә яҙыусылар ойошмаһының торлаҡ фондында иҫәпләнә. Бер-нисә быуын йәш яҙыусының ҙур донъяға осоп сығыр оя рәүешен үтәгән ул.

Секретарҙың баҡыр-ерән керпектәре аҫтында ут ҡуҙраны:

— Моғайын,  берәй халыҡ шағиры ла, союздың абруйлы рәйесе лә йәшләй ҡанат нығытып осҡан оялыр әле ул?

Мотал уға һынаулы ҡараш атты, әммә айышына төшөнә алманы.

-- Тап үҙе. Мин үҙем дә, мәҫәлән, мыйыҡ сығармаҫым борон шул оянан үткән кеше. Дөрөҫ, ярты йыл ғына торҙом — ул саҡта һин Мәскәүҙә партия мәктәбендә инең. Ыңғырсаҡ Уральскийҙы әйтәм, партиябыҙ тарафынан айырым иғтибарға алынған эшсе-шағир булараҡ, Яҙыусылар союзына ағза булып инмәҫе борон уҡ шул фатирҙы эләктереүенә ҡыуанһын. Һәм ғорурланһын.

-- Кәләшенән ҡолаҡ ҡағыуы менәнме?

-- Мәмәй ауыҙ булһаң, башыңды ла юғалтырһың. Шуның өсөн дә идара яуап бирһенме?

-- Әйткәндәй, Уральскийҙың тәржемәи хәлен рәйес ағайығыҙ үҙе барып күрҙеме икән?

Моталдың йәне көйҙө. Үҙенең иң мөһим ижади табышын — «иң һуңғы һәм төп романы» проблемаһын секретарға ауыҙ тултырып әйтеп бирергә һаман форсат сыҡмауына, ошо алтын минуттарҙа иғтибарҙы йыйын юҡ-бар биләүенә үртәлеп килгән күңеле ҡырылыуын йәшерә алманы:

— Рәйестең эше түгел был — һәр йәш ҡәләм тибрәтеүсенең  фатирына сәләм биреү,  башҡа ғәмдәре  лә  башынан ашҡан.

Ә Ҡыҙыл башҡорт, әйтерһең, ошоно ғына көтә:

-- Башлап яҙыусы түгелдәргә — Яҙыусылар союзы ағзаларына эләгәлер юҡһа ундай мәрхәмәт?

-- Уныһы ла мотлаҡ  түгел — иламаған балаға  имсәк ҡаптырмайҙар.

-- Әгәр иларлыҡ та хәле ҡалмаһа?

-- Хәле мөшкөл икән, ғариза яҙһын, дау һалһын, ишек яңаҡтарын ҡаҡшатһын. Быйың өсөн Литфонд, профсоюздың месткомы, шуның торлаҡ-көнкүреш комиссияһы бар. Эш шуға ҡалһа, партияның өлкә комитеты ни ҡарай? Торлаҡты һеҙ бүләһегеҙ бит, ниңә күберәк бирмәйһегеҙ?

«Их-ма, бына беҙҙең эш стиле...»

-- Биргәнде ғәҙел бүлә белергә кәрәк. Быйыл нисә яҙыусығыҙ торлаҡ шарттарын яҡшыртты? Шуларҙан бушанғанын ҡайҙа иттегеҙ?

-- Үҙең яҡшы беләһең, уларына башҡалары күсенде.

-- Ә йәштәр? Талант эйәһе дау һалып йөрөй алмай: ул даими

миһырбанлылыҡҡа, яҡлауға мохтаж, тиҙәр түгелме?

-- Бөтәбеҙ ҙә аҙмы-күпме талант эйәләре булдыҡ, әммә ҡуктән майлы бутҡа яуғанын көтөп ятманыҡ.

-- Ысматри, малай, эшсе-шағир *беренсенең* иҫәбенә теркәлгән. Йәшен ташы һине лә урап үтмәҫ.

-- Ҡурҡытма, ҡурҡырлығым ҡалмаған!

—Ҡаты бәғерле һин, дуҫҡайым, йөрәгең таштай ҡатҡан... Ә бит бергә уҡығанда ҡайһындай ҙа нескә күңелле инең! Заводта бергә эшләгәндә лә башҡаса итеп белмәй инем үҙеңде. Ҡайҙа, ҡасан һәм ни өсөн юғалттың һин ана шул аҫыл сифатты?!

«Ысынлап та, ҡайҙа, ҡасан һәм ни өсөн? Тормош юлындағы текә һалыуҙарҙа, сананан ситкә сорғолоп ҡалған әйберҙәй, беҙҙең кешелек тойғоларыбыҙ төшөп ҡалып бөтөп бара түгелме?.. Ниңә ташҡа әүерелде был бәғер?..» Ниндәйҙер ҙур аманатты юғалтыуын йән әсеһе менән тойоп, Мотал теләр-теләмәҫ яуапланы:

-- Ошо уҡ һорауыңды, дуҫҡай, үҙеңә лә биреп ҡара әле һин. Яҙыусылар етәксеһе тәү сиратта ижад эштәрен ҡайғыртырға бурыслы.

-- Ижад үҙе нимәгә нигеҙләнә һуң? Беренсе сиратта авторҙың көнкүрешенә, кәйефенә түгелме? Тәүҙә ҡылдарын көйләмәйенсә тороп, скрипка ла көй тартмай. Скрипка ҡылы ғына түгел, йөрәк ҡылың да «шарт!» өҙөләсәк!

«Ә минең, йәшлек дуҫыңдың, ни өсөн һуң нисәмә йылдар буйына романын тамамлай алмай, «Эшсе ғәли йәнәптәре» өҫтөндә ойоп ултырыуымдың сәбәбен бер генә булһа ла кешеләрсә белешкәнең, хәлемә кергәнең бармы? — Тәрән үпкә хисе ялмап алды әҙип күңелен. — Яҡын ғына бажалар була тороп та, бисәләребеҙ ыҙғышынан өҫтөнөрәк ҡалҡынғаның, ғаилә боҙлоғо йөрәгемде туңдырғанда туғанлыҡ ҡулы һуҙғаның, араларҙы иретешкәнең бармы? Бына әле лә башҡаларҙың ғәмен генә барлайһың, ә минекенә күңелеңдә урын юҡ — ауыҙ асырға ла ирек бирмәйһең. Кеше хәлен аңлау ҡеүәң ҡалмай бара һинең, нәсәлник!..»

—Таш йоттоңмо, ниңә өндәшәнһең? — Димустан ҡорҙашын ауыр ҡулы менән яурын башынан услап һелкетте. — Һеҙ, идара ағзалары, ул «күгәрсен ояһы»ның аллә ҡасан уҡ күгәрсендәрҙең үҙҙәренә ҡалдырылырға тейешлеген төшөнмәнегеҙме ни, тим.

-- Бәй, был фатирҙы юғалтһаҡ, эшсе-шағир артында сират көткән йәштәребеҙ ни әйтер?

-- Рәхмәт әйтер. Бер йөрәкте кобура иткән револьвер ҙа саманан ашҡан. Ниндәй генә булһа ла, шағир бит.

-- Букашка...

-- Улай тимә. Букашканан суҡышҡа тыуып ҡуймағайы... бауырҙарыбыҙҙы суҡырға... Берәй юлын табырға кәрәк.

-- Үткән идара ултырышында рәйесебеҙ быйыл беҙгә торлаҡ фонды буленмәүенән, ә башҡалар менән берлектә йорт һалырға Литфонд күсергән йомро ғына сумманың, төҙөлөш тигәнең ярты юлда туҡталып, «туңып» ятыуынан зарланды.

—Ҡайһы трест төҙөй?

Мотал аңлатып бирҙе.

—Эһә, хәтерләнем. Управляющийын беләм — үҙ кеше. Яҙыусыларҙы ярата. Шуға күрә лә илтеп ҡыҫтырғайныҡ беҙ һеҙҙе йылы ҡанаты аҫтына. Литфонд аҡсаһын әйтәм. — Бикләмешев, тротуар ситенә туҡтап, таяғын бордюрға төрттө лә уйланды. Уның ҡарауы юлдашы ҡапыл йәнләнде: бына хәҙер иң яйлы мәл тыуҙы кеүек үҙе башлап һүҙ алырға, теле осонда көрмәлеп торған шатлығын — әсә ҡарынында уҡ үлгән «Эшсе ғәли йәнәптәре» урынына өр-яңы роман яҙасағын, ә романдың төп проблемаһы быҒаса туған әҙәбиәттә ҡуҙғатылмаған булып, бына тик бөгөн генә, таң һыҙылып атҡанда ғына аңында йәшен атҡыһылай һыҙылыуын, бар булмышының аҫтын өҫкә түңкәреүен, шул илаһи сәғәттән алып үҙен толпар-атҡа атланғандай тойоуын бәйнә-бәйнә тиреп бирергә...

Мотал ауыҙ асырға ла өлгөрмәне, -- ҡайҙан аңдып-күреп торған тиерһең! — хужаһы таяҡ төрткән тәңгәлгә талғын ғына гөлдөрләүек ҡарайылтыр «Волга» килеп тә торҙо, ишеге асылып та китте. Бикләмешев иң элек юлдашын артҡа индереп ебәрҙе лә үҙе шофер эргәһенә йәпләнде.

— Их, һуларға икән -- һуларға яҙ һулышын, ғашиҡ йәнкәйҙәрҙең йөрәк ҡағышын! — тип, элекке йәш шағир-студент саҡтарындағыса, рифмалаштырып ебәрҙе. — Елдерҙек әйҙә, Шаһибәрәков иптәш, мәсьәләне урында хәл итергә! – тип өҫтәне.

Ымһынып үпкәләү кисергән юлдашы баш сайҡаны:

-- Әле генә техниканы хурлай инең, инде килеп үркәсенә ултырҙың.

-- Был юлы мин ҡорос атты ҙурлайым, сөнки ул беҙҙең араларҙы яҡынайта — үҙең әйткән трест етәксеһе менән ҡауыштырырға елдерә!

**БИШЕНСЕ СӘХИФӘ**

Ә был минуттарҙа Моталдың ҡустыһы Басир Дәүләтбаевты аҡ ҡанатлы замана осҡосо Өфөгә табан күктең етенсе ҡатынан кәйелтә ине. Әммә уйланып ойоуынан арына алмаған йәш рәссамды һаман-һаман уҙған йәйҙең аҡ ҡайынлы хәтирәһе ҡалдырмай, күңелкәйен болартыпмы-боларта...

...Бородино ҡырына елдергән автобустың яҫы шинлы тәгәрмәстәре аҫтында асфальт юл арҡаһынан ике яҡҡа сәсрәп һыу сыптырлай, түбә ҡалайында ямғыр тыпырлай. Тәҙрәләрҙе асып булмағанлыҡтан — ел-дауыл! — салон томра-бөркөү. Ямғыр шауын еңергә тырышыпмы, ир-ат араһынан берәү Лермонтовтың Бородино шиғырын яттан һөйләй. Басирыбыҙ креслоға саҡ эләгеп ултыра: көмрө ҡарсыға танаулы, ул ғына ла етмәһә, ирен һырты сәйер ҡара мыйыҡлы, лырҡыш умарта кәүҙәле бер ҡортҡаға (Мәскәү әбекәйе) эргәләш тура килгән. Ауыр молберт һандығы тубыҡтарҙы иҙә -- күсереберәк һалырға ла форсат юҡ: ҡортҡа йоҡоға талған. Автобус һиңкеткән һайын, кәүҙәһе ҡылдай тартылып, тештәрен ҡыҫа егет. Шуғалыр, һәйбәт шиғыр ҙа аҙағынаса аңына тамырланмай. Ҡасандыр, бала саҡта әле, был шиғырҙы мәктәптә үткәйнеләр, хатта ятлаттырғайнылар ҙа —

шуны иҫкә төшөрөргә тырыша. Тик, ғәжәпкә ҡаршы, ул әҫәрҙе һуңынан бер тапҡыр ҙа ҡулына алмаған, ә бала саҡ иҫтәлеге юйылған. Әле генә яңғыраған ғәййәр йөкмәткеле шиғри юлдарҙан тап ошо ел-ямғырлы мәлгә ауаздаштары ҡайһылай күңелгә йоға:

Шумела буря до рассвета;
Я, голову подняв с лафета,
Товарищу сказал:
«Брат, слушай песню непогоды:
Она дика, как песня свободы...»

Туҡта, был ни булды һуң әле? Мейеһенең ниндәйҙер бер юлағында фекер осҡоно сағылып, ғәжәп! — бөйөк шағирға ҡарата аңлашылмау, сәйерһенеү тойғоһо ла уянды: ниңә ул, тәбиғәттән килгән даһи (ә бар нәмәнең дә башы тәбиғәттә!) тәүсәбәпте, тәбиғәттең сикһеҙ иреклелеген, ижтимаҕи-сәйәси тормош тыуҙырған сағыштырмаса тар төшөнсәгә — азатлыҡ төшөнсәһенә сағыштырҙы, ә киреһенсә түгел? Шуның арҡаһында азатлыҡтың ысын өлгө-үрнәге — тәбиғәт ғәли йәнәптәре — икенсе планға сигенеп, шиғырҙа яһалмалъгк, битәбиғилек тыумаймы?.. «Ә был урында Толя дуҫым, моғайын, һөйөклө ҡарт профессорыбыҙҙай заң һалып, мин әйткәндең оторо киреһен раҫлар: «Шағир хаҡлы. Йәмғиәттә тәүсәбәп — тәбиғәт түгел, ә кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте!» — тиер ине. Бына бит ул ҡалай килеп сыға. Ҡайберәүҙәр әйтеүенсә, кендек тигәндәребеҙ береш булһа ла, аҡыл сүлмәктәребеҙҙең икеһе ике яҡҡа тарта икән дәһә ҡайһы бер мәсьәләләрҙә. Дөрөҫ яуап: «Ике аяҡты бер ҡуңысҡа, ике башты бер бүреккә тығып булмай»...

«Яҙғы көндөң яҙығы — серек ситән ҡаҙығы», — тип белмәй әйтмәгәндәрҙер. Әле генә ҡойған ямғыр, ҡапыл ҡеүәте ҡайтып, шиңеп, энә күҙәүендәй генә ара-тирә сыптырланы. Уны ла ел ҡанаттары төшкән берен елпеп алып ырғытты.

-- Бородино ҡырына тәүге тапкыр тәпәй баҫаһығыҙмы? — тине, йылмайып, йоҡоһонан уянған, егетебеҙҙе инде үҙ итеп өлгөргән ҡортҡа, автобус барып туҡтау менән үк йәштәрсә ғәжәп етеҙлек күрһәтеп, төшөү яйын йәһәтләп.

-- Мин бында булғаным бар.

-- Ҡайһы яҡтан — Ҡырғыҙстанданмы?

-- Юҡ, Мәскәүҙән.

-- Ғәфү итегеҙ, милләтегеҙ ҡырғыҙмы әллә, тип һорауым. Минең бик яратҡан ҡырғыҙ ҡоҙам бар.

-- Юҡ, башҡорт.

-- О, башҡорт! — Ҡортҡаның ҡара мыйыҡсалары һелкенде, күҙҙәрендә ихласлыҡ сағылды. Ҡом һибелгән берләм юлдан ағылыусылар боролоп ҡараны.

-- Салауат Юлаев, — тип ҡуйҙы берәү. — Кинйә Арыҫланов.

-- Һәм Ҡаһым түрә, — тип өҫтәмәһенме ҡортҡа! Был юлы Басир ғәжәпләнде:

-- Ә Ҡаһым түрәне ҡайҙан беләһегеҙ? — (Тура һүҙгә хөкөм юҡ: йәш

рәссамыбыҙ үҙе лә Ҡаһым түрә исемле ниндәйҙер тарихи шәхестең булғанлығын, уның хаҡында Баязит Бикбай тигән шағир сәхнә әҫәре яҙғанлығын ҡайҙандыр ишетепме, уҡыпмы, яҙа-йоҙа ғына хәтерләй ине, ә ул түрәнең асылда кем икәнлеген, нимә эшләгәнен аныҡ ҡына белмәй ине.)

Ҡортҡа, йылмайып, шаяртма мине, егет, тигәндәй, шелтәле бармаҡ янаны:

—Ҡаһым түрәнеме? Нисек инде белмәҫкә? Ул бит ошо Бородино ҡырында һуғышҡан герой.

Бына һеҙгә кәрәкһә иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ!..

Башҡалар ҙа, дәррәү элеп алып, ҡортҡаға ҡушылдылар, башҡорттарҙың 1812 йылғы Ватан һуғышында зерә лә сая ҡатнашыуы тураһында бихәбәр түгеллектәрен белдерҙеләр.

-- Моғайын, шул хаҡта картина яҙырға китеп бараһығыҙҙыр әле, — тине ҡортҡа. Быныһын да көтмәгән рәссам, ни әйтергә лә белмәй, «Э-э, эһеммм...» кеүегерәк мәғәнәһеҙ ауаз сығарып сикләнде.

-- Әәә, аңлашыла: ижади сер! — Ҡарсыға танауы тирәһендә йыйырсыҡтар һибелдереп, ихлас йылмайҙы теге. Ә шаңҡыбыраҡ ҡалған Басир, ҡан тамырҙары һулҡ-һулҡ тибеп, ғүмерендә тәүге тапҡыр Бородино ҡырына ла йөрәген, кисәге аҡ ҡайын төбөндәге Аҡһылыуын тап итеү теләгенән тыш, ниндәйҙер серле-аңлайышһыҙ хасилланған тарих ептәренең тартыуын тойҙо, мольбертында шуны илгә аңлатырлыҡ буяуҙары етерлек түгеллеге хаҡында бошоноп уйланы...

Арҡыры-буйын мең тапҡыр аҙымлап уҙһаң да, аҙ булыр һымаҡ төйәк: нисәмә тапҡыр ил яҙмышын хәл иткән, изге Мәскәү юлын төрлө быуаттарҙа төрлө яуыз илбаҫарҙарҙан йәнтәслим ҡурсалаған сал Бородино ҡыры. Дары үртендә мәңгелек ҡаһарман булып гөлтләп янғандарҙың тере һулышы бында. Ике дата — 1812 һәм 1942. Йәкеһе лә ярылып ҡалған ергә...

Ҡалҡыулыҡ һайын суҡайып-сурайған һәйкәлташтар араһында — илдең төрлө мөйөштәренән, хатта сит илдәрҙән ағылыусы төрлө илгиҙәрҙәр. Оҙатыусы һөйләгәндәрен ауыҙ асып, шаҡ ҡатып тыңлай бирәүҙәре, икенселәре, фотоаппаратын, кинокамераларын, йәки, Басир Дәүләтбаев һымаҡ, мольберттарын йөкмәп, үҙ алдарына уйға сумып ҡыҙыра. Аҡ ҡайын төҫлө ап-аҡ йоҡа плащ кейгән (ғөмүмән, был яҡтың ҡыҙҙары, аҡ ҡайындар кеүек, аҡ төҫ яраталар икән), ҡылғандай аҡ сәстәре елгә уйнаҡлаған һомғол буйлы бер һылыуҙы шаулы сит ил тоҡомдары һырыған. Басирҙың йөрәге жыуланы: Аҡһылыу... Ләкин ул башҡа бер һылыуҡай булып сыҡты, Басир теләгән Аҡһылыу күренмәне...

-- Ни ғәләм был? — тип ҡыҙыҡһынды кемдер, үҙ-ара лауылдашҡан тилбер төркөм уҙып барғанда.

-- Французлар бит.

-- Әйтәм, ике сыуаш — бер урам, тигәндәй, үҙҙәре бер баҙар. Әллә ата-бабаларына һәйкәл ҡуя килгәндәрме ошонда? — Һораусы көлөп ҡуйҙы.

-- Ул күптән ҡуйылған инде, — тине икенсеһе, бер ҙур бронза монументты төртөп күрһәтеп. — Батша ғәли йәнәптәре заманында уҡ. Күрмәйһеңме ни, үҙҙәренең бабаларының иҫтәлегенә бағалар. Ҡасандыр батша хөкүмәте менән

килешеп, французлар үҙҙәре төҙөгән. Ошо ҡупшы туристарҙың ҡанбабалары була инде.

-- Ә былары, тоҡомдары, нимә тип лыбырлай икән?

-- Ни тиһен, «тыныслыҡ», «дуҫлыҡ» тиҙәр. Ана теге аҡ ҡайын төҫлө яҫанып алған тәржемәсе ҡыҙҙы шаяртып маташалар. «Беҙҙең бабалар алйот булған: һеҙҙең һымаҡ һылыуҙарҙан-һылыу Рәсәй  аҡ ҡайынының  йөрәген егетлек менән яулап алыу урынына, Наполеонға эйәреп, ҡылыс айҡап килгәндәр. Ә беҙҙең Наполеоныбыҙ ҙа юҡ, ҡылысыбыҙ ҙа ҡында, уның ҡарауы  уңышҡа ирешеү мөмкинлеге йөҙ тапҡыр артығыраҡ, шулай бит?» — тиҙәр.

-- Ә беҙҙең ҡыҙ нимә тигән була һуң?

-- Ул да төшөп ҡала торғандарҙан түгел. «Яулап ҡарағыҙ, ни булһа ла киләсәк күрһәтер әле!» — тип кенә йомдорҙо ауыҙҙарын.

Ялан буйлап гиҙгән фотоаппараттарҙы, кинокамераларҙы, уның үҙенеке һымаҡ мольберттарҙы күреүҙән, ҡапыл, Басирҙың күңеле һүрелде лә ауыр көрһөндө. Унарлаған атаҡлы һәм атаҡһыҙ бумаласылар яуы тарафынан арҡырыһы-буйы иңләнеп, саң остоғон да ҡалдырмай һүрәтләнгән, репродукциялары төрлө баҫмаларҙа, почта открыткаларында миллионлаған даналарҙа ил буйынса таралған, хатта ергә йәбешеп үҫкән һәр үлән, туҙан бөртөгөнә ҡәҙәр, әйтерһен, уның өлөшөнә ҡалдырылмай, ҡомһоҙ һоҫоп алынып бөткән кеүек. Их, күңелкәйҙе йыуатырға кисәге серле Аҡһылыуы ла килмәгәнсе, исмаһам!..

Боронғо монастырь комплексының ҡыҙыл кирбес диуарҙары эргәһендә туҡталып, шулай көйәләнде йәш рәссам. Әммә изге ерҙең сере-тылсымы — бөтмәҫ-төкәнмәҫ, тиҙәр бит: егетебеҙ иғтибарын, һис уйламағанда, үҙенә ҡырҡ тапҡыр таныш нәмә тартты ла ҡуйҙы: көнбайышҡа, дошмандарҙың ябырылыу яғына, тоҫҡалған хәрби ныҒытма — «Раевский флештары». Анығыраҡ әйткәндә, ҡоролманың үҙе лә түгел әле, ә уның текә сирәм һыртын уттай ялмап алған әрһеҙ ялан сәскәләре. Йәшел келәм өҫтөнә ҡан йәйелгән, йәки ялҡын теле һуҙылған, тиерһең... Әҫәрләнеп, еүеш үлән ярып китеп бара ине, шул боронғо хәрби ныҒытмаға йәнәш кенә һәм шуның һымаҡ уҡ бер тарафҡа — көнбайышҡа төбәлгән, теүәл йөҙ ҙә егерме туғыҙ йәшкә кесерәк булған икенсе ҡоролмаға — ДОТ-ка тарып тертләне. Бетон амбразуралар, һаман да баҙыҡ килеш, ҡара шаҡмаҡ күҙҙәрен көсөргәнешле ҡыҫып, Наполеон һәм Гитлер һалдаттары «ерегеп» ауған тарихи ялан яғына текләгән. Улар, әйтерһең, был донъянан киткән ата-бабаларҙың төпһөҙ йыһанға төбәлеп баҡҡан уйпат күҙҙәре ине: «Ейән-ейәнсәрҙәребеҙ, нисек йәшәп ятаһығыҙ? Беҙҙең өмөттәрҙе аҡлайһығыҙмы?..» Бында ла, флештарҙағылай, әрһеҙ ҡыҙыл сәскәләрҙән амбразура тирәләре ҡан төҫлө... Ер-әсәнең яраһынан сәптереп, һабаҡ һайын бөрсөк-бөрсөк мөлдөрәп ҡалған тиерһең... Натураны тиҙерәк элеп алыр өсөн ашҡынып, рәссам ике ҡалҡыулыҡты бер планға һыйҙырырҙай йәтеш ракурс һайланы, мольбертты көйләп ҡуйҙы, ҡайҙандыр, серле эфирҙанмы, ағылған сихри-сәйер хиском иҫереп-тилереп, бына-бына киндергә тамасаҡ алһыу-ҡыҙыл сәскәләрҙе күҙ ҡырыйы арауыҡта — ер менән күк араһында теҫмөрләп тотҡан килеш, хозурлыҡтан керпектәрен йомолдороп, бармаҡ остары менән генә тойомлап, буяуҙарҙы

ҡабалан һығып иҙҙе, һулышына ут ҡабып, йыш-йыш тын алып, офоҡ ситен сағыулаған, күҙҙе сағылдырған баяғы нескә алтын ҡыл юлды, бумалаһы осонда ғына зыңҡылдата киреллдереп килтереп, һис ни тоймай ойоп торған киндергә тоташтырҙы... Тамаҡ төбө ҡызырыҡлап кипкәс кенә, был донъяла үҙенең дә һис бер ниндәй алла түгел, натура икәнен тойҙо. Эйе, ысынлап та ул — ул икән һәм үлтереп эскеһе килә икән. Был хәл, әлбиттә, полотно әҙер, Толя дуҫы әйтмешләй, эш — эшләпәлә икәнден билдәһе ине. Палитра менән бумаланы урынына атып-бәреп, ҡатҡан быуындарын хозур һуҙылдырҙы, ҡуш кулын күккә ырғытып, тәнен ләззәтле тартыштырып киреллде. Тап шул хозур минутта, көтмәгәндә, һул яғынан таныш ҡортҡаның һыуыҡ тейгәндәгеләй ғырылдабыраҡ сыҡҡан тауышы һиҫкәндерҙе:

-- О, Ҡаһым түрә, ғәфү итегеҙ, баянан биреле өндәшергә баҙнат итмәй, ситтән генә тамаша ҡылып торамын: бик мауығып яҙҙығыҙ. Мөмкинме инде яҡыныраҡ килергә?

-- Әлбиттә, әлбиттә, рәхим итегеҙ.

Ҡортҡа редикулен асты, маникюрлы оҙон бармаҡтарын төпкә йүрмәләтеп, алтын билле сигарет алып ҡапты, яҡындағы ҡыҙыл кирбес монастырь яғына күҙ һалып, ашыҡмай ғына ыңғайланы.

-- Күрәм: һеҙҙе лә был заманаһың сиркәү сире ситләтеп үтмәгән, ахырыһы – монастырға яҡыныраҡ төпләнгәнһегеҙ. Аптырарһың: хәҙерге йәштәр шуның менән ауырый...

-- Һеҙҙең мөхтәрәм оло быуындан йоға түгелме ул сир?

Әммә ҡортҡа үҙ фекерен дауамланы:

-- Боронғо поп, монахтар кеүек яурынғаса ял еткергән комсомол йәшендәге рәссамдар, төпкөл ауылдарға барып, өйҙән-өйгә теләнселәнеп йөрөп иҫке тәреләрҙе йыялар, татлы күҙ йәштәрен ағыҙып, ҡыйшайып ауырға ултырған сиркәү манараларын һүрәтләйҙәр. Был шөғөлдәр, үҙҙәренә ҡалһа, туған халыҡ менән ҡуша тын алыу, уның изге тарихына ерегеү тип һанала, буғай. Ә үҙҙәренән: «Ул туған халҡыңдың иркенләп тын алыуы үҙе ҡасан ғына башланды һуң?» — тип һораһаң, «ыҡ-мыҡ» итәләр. Юҡ, яңы быуын тулыһынса аңлап та, ҡәҙерләп тә еткермәй әле Бөйөк Октябрҙең сихәтле өмештәрен!.. Ә бына минең ейәнем, беренсе класлы совет консерваторияһын тамамлап сыҡҡан шалопай, тас үҙенең һүҙҙәре менән әйткәндә, сиркәү ҡыңғырауҙарының баҡыр сыңынан ғына туҡылған симфония яҙырға ниәтләнә... Мөмкинме, мәшһүр?

-- Рәхим итегеҙ.

Ҡортҡа сигаретын тоҡандырҙы, һауаға тап үҙенең туҙғыу күкшелт сәс көлтәһе төҫлө шыйыҡ төтөн елберләтеп, мәғрүр ҡарсыға танауы менән ымланы:

-- Сиркәү — сиркәү инде, иҫ китерлек нәмәһе юҡ. Тарих шаһиты ғына тимәгәндә... Беләһегеҙҙер: был монастырҙы, иренең рухына бағышлап, генерал Тучковтың тол ҡатыны тап ул һәләк булған ошо ҡанлы ергә һалдыртҡан, ә үҙе шунда монашкалар башлығы -- игуменья булып торған. Ана теге мавзолей — Тучковтарҙың ғаилә зыяраты ул. Һеҙҙе лә бында, бәлки, ошо романтикалы мөхәббәт тарихы тартҡандыр, ә, егетем?

-- Һеҙ әйткән был романтика миңә яңылыҡ түгел -- сәйәхәтнамәләрҙән үк

билдәле бит.

-- Сәйәхәтнамәләр өсөн бындай мәғлүмәт — күмәскә һалған йөҙөм емеше инде, изюминка!.. Артығыҙға әйләнеп бағығыҙсы: монарланып ята Бородино ҡыры. Әйтәйек, Рәсәйҙәге шунда тол ҡалдырылған ҡатындарҙың һәр береһе килеп сиркәү йә мәсет һала алһа, беләһегеҙме, күпме манара ҡалҡыр ине был яланда?..

-- Ул тиклем тәрән фәлсәфәнән хоҙайым аралаһын, — тине, әңгәмәнең партия сикләгән сәйәси яғынан шыртлап, шулай ҙа Ҡортҡа телмәренән арбалып та тетрәнеп.

-- Фәлсәфә түгел — тормош был. 0, браво, браво, мәшһүр! — Полотноға ымланы. — Рөхсәтме йәнә күҙ ҡырыйын ғына йүгертеп алырға?

-- Ихтыярығыҙҙа.

Ҡортҡа, оҙон бармаҡтары араһында алтын билле сигарет ҡыҫып тотҡан килеш, берсә, рәсемгә, берсә, рәссамға текләне лә баш сайҡаны:

-- Көтмәгәйнем, көтмәгәйнем. Ихлас: быны мин һеҙҙән көтмәгәйнем.

-- Нимә көткәйнегеҙ?

-- Ул ауыр сир нисек һеҙгә йоҡманы? Картинағыҙҙың фонында ул торорға тейеш ине... Минең ейәнем...

-- Эйе, һеҙҙең ейәнегеҙ. Ләкин минең олатайым, беләһегеҙ килһә, ейәндәре тыумаҫ борон уҡ көллө тутыҡҡан тәреләрҙе һуғып ватҡан, айлы манараларҙы ауҙарып ташлаған. Үкенескә күрә, тип әйтәйемме...

Ҡортҡа күкшелт төтөн төҫлө сәстәре аҫтынан тоноҡ күҙҙәрен тултырып ҡарап торҙо ла, ике бармаҡ араһындағы сигаретын онотоп, ҡул сәпәкәйләне:

-- Браво, мәшһүрем, браво! — Китергә ыңғайланы. — Моғайын, һеҙ хаҡлылыр, моғайын, һеҙ хаҡлылыр... — Ләкин һуҡмаҡҡа төшмәҫе борон ҡырт-боролдо, кире килде. -- Был ҡан тамсылары мине тулҡынландырҙы, — тине, сигаретлы ҡулын киндергә төртөп. — Ғәжәп: һеҙҙең мольберттан ғына иғтибар иттем: Бородино ҡырындағы был талымһыҙ ал сәскәләр тере ҡан тамсылары төҫлө икән дә!.. — Ҡортҡа һауаға тағы ла бер күкшелт төтөн йомарлағы ебәреп, мавзолей яғына ымланы. — Геройҙарса һуғышҡан, һуңғы сиккәсә сикмәйенсә һуғышҡан, аҙаҡҡаса шунда алышып йән биргән. Генерал Тучковты әйтәм. Рәсәй өсөн бына нисек тора белгән икән был синфи дошман-алпауыт, тиһегеҙме?.. Уныһы шулай, әлбиттә... Күргәнһегеҙҙер, Милеевкаға электричкала килгәндә, Тучково станцияһын? Шул Тучковтың ата-бабанан, нәҫел-нәсәптән килгән ере, биләмәләре бит ул. Генерал үҙ имениеһының тулы мәғәнәһендәге ҡапҡа төбөндә һуғышып үлгән... дошмандарҙы керетмәҫкә... — Ҡортҡа күҙ ҡарашы менән һиҙҙертмәй генә һынаны.— Ә һеҙҙең ата-бабаларығыҙ, тим, бында нимә ҡурсалап һуғышты икән, ә башҡорт балаһы?

-- Бородино — барыбыҙҙың да ҡапҡа төбө. — Басир сәйәхәтнамәләге ҡанатлы һүҙҙәрҙе ҡабатланы. — Ошонда күмелеп ятып ҡалған меңәрләгән рус һалдаттары нимә өсөн һуғышһа, минең ата-бабаларым да шуның өсөн йән биргән.

-- Ғөмүми йыр, тигән кеүек, дөйөм патриотизм, тимәксеһегеҙ инде?

-- Шулай ҙа булһын, ти.

-- Әммә ул дөйөм патриотизмды һеҙҙең ата-бабалар — ә Россия армияһына һалдат биреү улар өсөн һис тә мәжбүри булмаған — бында килеп баштарын утка тыҡмай, үҙҙәренең ырыҫлы алыҫ Уралында аҡ тирмәләрендә ҡалып, Рәсәй өсөн дөйөм ҡаҙанға һуғыш иғәнәһе һалып ҡына ла күрһәтә алырҙар ине бит һуң? Мәҫәлән, Рәсәй дәүләтен французларҙан һаҡлау хаҡына өй башынан фәләнсә һум көмөш, фәләнсә баш ат, фәләнсә һыйыр, фәләнсә батман бал, фәләнсә һыуһар тиреһе... Һәм улар йыйнап биргәндәр ҙә. Ләкин башҡорттар, беҙҙән был ғына етмәй әле, тип иҫәпләгәндәр булып сыға...

-- Эйе, шулай булып сығалыр, күрәһегеҙ.

-- Маладис, маҡтанырға яратмайһығыҙ икән, башҡорт балаһы. Ә был тәңгәлдә һеҙгә маҡтанып алғанда ла һис яҙыҡ булмаҫ ине. Сөнки тарихи мәғлүмәттәр...

-- Ғәфү итегеҙ, һеҙ ул мәғлүмәттәрҙе ҡайҙан алдығыҙ?

Ҡортҡа, муйыл күҙҙәрен йәштәрсә йылтыратып, азаматҡа ҡыҙыҡһынып төбәлде:

—Тишек кәмәгә ултыртмаймы икән мине был ҡарт шайтанка, тиһегеҙме? Тыныс булығыҙ: сигарет һурған кеүек бармаҡ осомдан һурып сығарманым. Һөнәрем буйынса мин — тарих уҡытыусыһы. Заманында диссертация ла яҡлағайным — «1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында Россия халыҡтарының патриотизмы» тигән темаға. Һеҙҙең башҡорт хәлдәрен дә һуҡаларға тура килде, әлбиттә. Аңлашылдымы инде хәҙер? Илһөйәрлек Рәсәй тарихына мәңгелеккә алтын хәрефтәр менән яҙылған, бының менән бөгөн бөтөн совет халҡы ғорурлана ала. Ватан яҙмышы ҡыл осонда торғанда, французларға ҡаршы үҙ теләге менән утыҙлап кавалерия полкы төҙөп оҙатҡан башҡорт халҡы кеүек ниндәй халыҡ бар?! Башҡорт яугире рус һалдаты менән иңгә-иң терәп дошманды ҡырған, күптәре ятып ҡалған ошо Бородино ҡырында... батша Рәсәйе ваҡ халыҡтарҙың тере бауырын суҡып иҙгән заманда ла. Диндәр менән диндәр, манаралар менән манаралар бысаҡҡа бысаҡ килеп алышҡан заманда ла... Ниндәй сихри көс уларҙы — һинең ата-бабаларҙы — үҙ аҡсаһына үҙенең ғәскәрен төҙөп, ат өҫтөндә меңәрләгән саҡрымдар үтеп, рус һалдаттары менән ҡуша Мәскәү янында изге Рәсәй-әсәй хаҡына ғәзиз баштарын һалырға, һәм шунан һуң Парижғаса һуғышып барып етергә ҡанатландырҙы икән, ә?..

-- Дөрөҫөн генә әйткәндә, был хаҡта мин уйлап еткермәгәнмен, — тине Басир, үҙенең «тәрән фәлсәфә»гә кермәүенән тәүге тапҡыр оялып. Ә бит быны уға мәктәптең башланғыс кластарынан — Лермонтовтың «Бородино» шиғырын ятлатҡанда уҡ хәстәрлекләп, әсә һөтө һымаҡ итеп «имеҙергә» тейештәр ине! Уҡытыу тормош менән тығыҙ бәйләнмәгән — мәшһүр шиғыр бына ни өсөн күңеленән елләгән. Тарих тигән фәнде өнәп еткермәүе лә шунан киләлер әле... Күрәһегеҙ, ошоно һиҙенеп буғай, хәүефле баш сайҡап тора ҡарсыға моронло ҡортҡа:

-- Ә йәл. Уйлап ҡарағыҙ, уйлап ҡарағыҙ, егетем. Минең ейәнем дә әле күп нәмәләр хаҡында уйлап еткермәй... ә донъя бит һеҙҙең ҡулдарға ҡала... — Тәмәкеһен хозур ғына көйрәтеп, мольберттағы киндергә йәнә һәүетемсә текләне. — Һынлы сәнғәт донъяһында йыраҡ китә алмаған мин бахырҙы ғәфү итә күрегеҙ,

эскерһеҙ һорау: был ҡан тамсылары менән ни әйтергә теләнегеҙ?

Бына һеҙгә кәрәкһә, кемдер әйтмешләй, бер һармаҡ — ауыртмаған башҡа тимер таяҡ: ысынлап та, үҙе эшләгән институтта имтихан алған профессоры һымаҡ ныҡыша түгелме был әбекәй? Усына мөсһөҙ шпаргалка йомарлап бөршәйеп торғандай хис итте үҙен егетебеҙ:

-- Һе, бына һорау! Ни әйтергә теләгәнемде киндерҙән күрмәйһегеҙме ни?

-- Күрмәйем шул, мәшһүрем, күрмәйем. Әллә күҙҙәрем насарланған инде: һис кенә лә күрмәйем шул. Бында бөтәһе лә яҡшы, ләкин нимәһелер етешмәй һымаҡ. Арҡауы бар ҙа буйлығы юҡ, тигәндәй... Борон киндер һуҡҡан халыҡта шундай һүҙ йөрөй торғайны...

Бына һеҙгә тамаша — һары майҙан теш ҡамаша... Ниңә уларҙың мөхтәрәм профессорының һүҙҙәрен теп-теүәл әүмәләй әле был? Әллә ҡартластың берәй ҡәрендәш-маҙарымы юғиһә?..

-- Кисерегеҙ, инде аҙаҡҡы һорау: исем-фамилияғыҙҙы белеп китергә мөмкинме?

-- Дәүләтбаев Басир тип йөрөтәләр мине.

-- Һеммм. Дәүләтбаев, тиһегеҙ инде. Бородино ҡырында һуғышҡандан һуң наградланған башҡорттар исемлеге теркәлгән иҫке фолианттарҙа йыш осрай был фамилия. Моғайын, һеҙҙең бабалыр әле. Аҡһаҡалдарығыҙ әйтмешләй, ете быуын шәжәрәгеҙҙе беләһегеҙме икән?

-- Бәй, атайым бахыр әйтмешләй, ни бысағыма кәрәк ул?

-- Бына һеҙгә «Геродот еҫе аңҡыған башҡорт»[13]... Атайығыҙ иҫәнме?

-- Бөйөк Ватан һуғышында алған ҡаты яраһынан вафат булды.

-- Ҡайһы тирәлә һуғышҡан?

-- Мәскәү янында, ти торғайны.

-- Бәй, ул да ошо Бородино ҡырында ҡан ҡойғандыр әле. Алыҫ бабағыҙ һымаҡ уҡ. Һеҙгә, мәшһүрем, иң кәмендә ана шул бабағыҙға тиклем шәжәрәгеҙҙе юллап белергә, күңел донъяғыҙҙың бушлығын бөтөрөргә — һис юғында ике Ватан һуғышы араһын тоташтырырға ине... Беләһегеҙме, тарих төпкөлдәренә кереү ҡайһылай ҙа татлы ул! Ижадығыҙға өр-яңы һулыш өрөләсәк! Әгәр ҙә теләһәгеҙ, ошо тирәнең тарихы менән шөғөлләнгән герой яҡташығыҙ менән таныштырам.

-- Кем ул?

-- Яҙып алығыҙ: Сергей Абросимович Батулин, фронтовик-яҙыусы. Әҫәрҙәрен уҡырға тура килмәнеме? Мәскәү ҡалаһында тора, бына телефон номеры...

-- Рәхмәт.

-- Әйткәндәй, Бородино музейында бер нәмәгә иғтибар иттегеҙме?

-- Нимәгә?

-- Әйтәйек, ниңә унда башҡорттар тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирелмәй?

-- Эһем... ул хаҡта уйлап ҡарағаным юҡ.

-- Уйлағыҙ, егет кеше, уйлағыҙ... -- Ошоғаса ата-бабалар ғәмен йөкмәп

---

[13] Л.Н. Толстой һүҙҙәре.

күнекмәгән рәссам күңелен болоҡһотоп, сигаретының зәңгәр төтөнө артында әкиәти күренештәй юғалды...

Бына хәҙер самолеттан төшкәндә лә тарихтан арына алмай, егетебеҙҙең башы уғата зыңҡыны: ниңә был фән, ҡайҙа барһаң, аяҡ-ҡулға урала?!. Басир тарих дәрестәрен бәләкәйҙән өнәмәне: кенәздәрҙең дә батшаларҙың ҡасан тыуып ҡасан үлеү, ҡасан ҡайҙа ҡайһы илде баҫып алыу йәки үҙе еңелеп ҡасыу даталарын ятлай алмай аҙапланды, шул арҡала бәләләргә тарыны. Ах был ата-бабалар! Улар килгән дә киткән, ә һин бында баш ват һәммәһен уйлап. Өҫтәүенә, китапҡа ингән «тарихи» бәндә һандары ла бармаҡ менән генә һанарлыҡ булһа икән: күҙ йомоп Ер шары глобусының ҡайһы тошона төртмә — мотлаҡ тарихи урын, ҡасандыр шунда ҡайһылыр дата мөһөрләнеп йәшеренгән, ә һин шуны баш ватып табырға тейеш... Вузға кереп ҡотолдом ғына тигәндә, хәтәрерәк тотолдо: һин инде хәҙер ябай уҡыусы түгел — бөтә кешелек донъяһының тарихын фән, дин, сәнғәттәре аша ла тәрәндән күрмәп алырға тейеш. Ах был ен һуҡҡандарҙы, һис юғында диплом эше осоронда тын алырға бирмәйҙәр, хатта тыуған төйәккә ҡайтҡанда ла... Атай бахыр әйтмешләй, ҡайҙа бара был донъя: атлаған һайын яр аҫтынан яу сыға — тарих ғәли йәнәптәре ҡубарылырға тора...

Теге саҡта Бородино ҡырындағы ҡортҡаның һүҙен тыңлап, матур еңгәһе күстәнәс итеп һалып ебәргән бер ҡоторсоҡ[14] башҡорт балын тотоп барып инде ул Абросимовичҡа — Мәскәүҙең яңы райондарының береһендәге мөһәбәт бейек йортҡа. Бородино ҡырынан уҡ йәненә инеп оялаған тынғыһыҙ көс тартып килтерҙе бында, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандарының береһе — Балтикала үлемһеҙ дан ҡаҙанған «Б-13-Б» һыу аҫты кәмәһенең элекке сая командиры, хәҙерен иһә «йөҙ процентлы инвалид», әммә рухы һәм рухи донъяһының баҙыҡлығы, көндәлек эш мәнфәғәттәренең киң ҡоласлы һәм ҡеүәле булыуы менән урта бармаҡтай егеттәреңә тиңләшерлек яҙыусы-маринист яҡташыбыҙ Сергей Абросимович Батулин янына. Бик ҡатмарлы яҙмышлы йән икән ул. Ғүмерлек тормош юлдашы менән хәрби курсант ваҡытында һуғыш башланыр йылда ғына танышып, ҡауыша алмаһалар ҙа, илаһи рус һылыуы уны һуғыш буйына көткән, йөрәгендә һаҡлаған. Тәрән тылдағы хәрби госпитальдәрҙең береһендә, ниһәйәт, эҙләп табып, миһырбанлы йөрәге ҡушыуынса, йәне-тәне йәнселеп имгәнгән Батулинды өйөнә алып ҡайтҡан. Сергей исемле улдары тыуған тиҙҙән. Үҫтереп еткереп, килен алабыҙ — бәхетле туйын күрәбеҙ тигәндә генә, иң-иң ауыр ҡайғыһына тарыған яҡташыбыҙ — ғәзиз тормош юлдашы үлеп киткән... Бына хәҙер ошо тыныс, яҙҙарын миләш, муйыл сәскәләре аңҡышына күмелгән яҡты микрорайонда улы менән килене ҡулында ғүмер кисермеш икән. Йәштәр икеһе лә ғалим — дәүләт архивында эшләй, фронтовик-яҙыусыны ҡыҙыҡһындырған тарихи документтарҙы эҙләп табырға, әҫәрҙәрен донъяға сығарышырға ныҡ ярҙамлашалар. Басир һымаҡ яҡташтары, тупһаларын шымартып, йәйен-ҡышын һуғылыр, күстәнәскә әсе ҡорот, балан ҡағы, шифалы мәтрүшкә йәки Урал-атайсалдың сәскә еҫтәрен аңҡытҡан сихәтле ҡымыҙ, атаҡлы

[14] Ҡоторсоҡ—«ҡот-ырыҫ-аҡ» өләштәренән хасил ҡушма һүҙ; Үҫәргән башҡорттарында тышы ырып биҙәкләнгән, ҡапҡаслап яһалган ағас һауыт.

башҡорт балын килтерә имеш. Тыуған ерҙең хәл-әхүәлен бәйнә-бәйнә һорашҡас, йор күңеле менән хайран ҡалдырып, ҡаһарман зат тыуған яғының тәрән тарихына бермә-бер керер, быуаса ҡолаҡ ишетмәгән, күҙ күрмәгән ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр һөйләп һушты алыр, шул хаҡтағы нәүбәттәге хеҙмәте менән таныштырыр, серҙәшенең дә ни эш ҡырыуын һорашып, уны тәрән тарихты өйрәнмәүҙә, халыҡ ижады ынйыларын, ҡәҙерен белмәй, алмас таштарын аяҡ аҫтына түшәгән ҡырағай ҡәүемдәрҙәй, өҫтөндә тапап йөрөүҙә, әҙәбиәттәге «заман темаһы» тигән йөрөмтәл төшөнсәне лә ҡайһы бер әҙиптәр, тамыры һәм ябалдашы мөнтәп ташланған ағас кеүек, өй буралыҡ бүрәнә генә рәүешле итеп ҡарауҙа, ғөмүмән, мейене мүк ҡаплауында һәм «баҫыуҙы һай һерөүҙә» ғәйепләп ташлар, шул ыңғайҙа яҡташына тарихта соҡсоноп баш ватырлыҡ бер нисә темаһын йөкмәтеп тә өлгөрөр имеш. Был юлы ла шулай булды, ҡарт яугирҙең һеңдереп теҙгән телмәре Басирға, әйтерһең, Ағиҙел яры башындағы тыуған ерҙең олпат йүкә, имәндәре араһынан ҡарсыға йырылай йәнгә яҡын шыбырлап ишетелде:

-- Беҙ тарихты, алыҫ дәүерҙәрҙә йәшәгән халыҡтарҙы, шахмат таҡтаһындағы сатраштарҙай,— төп-төҙ дүрткел шаҡмаҡтарға айырым-айырым урынлаштырылған фигураларҙай күреп, «уйын» ҡороп фекерләргә күнеккәнбеҙ, — тине ул. — Ләкин тарих — һис тә шахмат таҡтаһы, халъгктар — шахмат фигуралары, ваҡиғалар шахмат уйыны түгел. Халыҡтарҙы халыҡтарҙан геометрик теүәллек менән айырыусы шаҡмаҡтар ҙа аңыбыҙҙа ни бары беҙҙең наҙанлыҡ, зәғиф зиһен арҡаһында ҡоролған. Юҡ, бер ниндәй ҙә шаҡмаҡтарға һыймай кешелек донъяһы! Пушкалар һәм дәүләт сиктәре айырған сүрәттә лә, кешелек ул ғүмер-ғүмергә үҙен бер бөтөн тойоусы илаһи көскә эйә, шуның менән ҡеүәтле. Шул арҡала кешелек тамыры ҡоромаған, ерҙе-күкте көл итерҙәй утлы афәттәр сағында ла халыҡ менән халыҡ ҡулын дуҫлыҡ хисе тоташтырған. Беҙгә ана шул тоташыу көсөнөң сығанаҡтарын асыҡларға, уны юғалтмай һаҡларға һәм арттырырға — килер быуындарға илтеп еткерергә кәрәк, ҡустым. Ватаныбыҙ халыҡтарының борон-борондан дауам иткән берәгәйлеген киләсәккә аманат итеп ҡалдырыу — беҙҙең иң изге бурыс...

-- Бурысын – бурыс та бит, һис үтәлмәй шул әле.

-- Үтәлер, үтәрбеҙ! Шуның хаҡына һуғыштыҡ, «За Родину, за Сталина!» тип үлемесле атакаларға барҙыҡ. Партиябыҙ...

-- Партиябыҙ тарих фәнен өнәп бармай бит әле... тап Сталин бабай ваҡытындағыса...

-- Сталин ҡыҫымы инде алып ташланды, күп нәмәләргә күҙ асылды.

-- Ә шулай ҙа, ә шулай ҙа... – тине Басир, алтын билле сигарет тартҡан юлдашы-ҡортҡаны хәтерләп. – Бер күҙебеҙ асылһа ла, икенсеһен йомоҡ килеш тотабыҙ...

-- Ҡустым, вокруг да около һөйләмә улай. Мин торпеда атакаһына барғандай тура әйтеүселәрҙе яратам. Башҡортмо һин?

-- Башҡорт.

-- Улайһа, башҡортлоғоңдо таныт.

-- Бик танытыр инем дә, Сталин бабай күрһәтмәләре үҙ көсөндә ҡалған

шул.

-- Мәҫәлән?

-- Мәҫәлән, башҡорттарҙың да ошо Мәскәү янындағы Бородино ҡырында Наполеонға ҡаршы тороуҙарын беләһегеҙ бит?

-- Белмәй ни.

-- Ләкин күп халыҡ белмәй һәм белмәҫ тә, сөнки Сталин бабайыбыҙ белдертеүҙе ныҡ тыйған. Хатта үҙем дә белмәйенсә, тип әйтерлек, йәшәнем.

-- Юҡты һөйләмә, ҡустым.

-- Барҙы һөйләйем, ағай. Бородино музейында булырға тура килдеме?

-- Юҡ шул, форсат теймәне... – Ветеран ҡултыҡ таяҡтарын туҡылдатты.

-- Һуңғы тапҡыр мин кисә генә барып ҡайттым...

-- Шунан?

-- Унда ҡуйылған экспонаттар араһында башҡорттоң, төҫө түгел, еҫе лә юҡ. Музей хеҙмәткәренән шуның сәбәбен һорағас, тайпылышһыҙ партия күрһәтмәһе буйынса эшләйбеҙ, тине.

-- Фәстерә, партиябыҙ бында ни при чем! – Ветеранға мәғлүмәт оҡшаманы. Сетерекле сәйәсәткә ҡул һелтәп, ҡәҙимге һүҙ айышын дауамланы. -- Бына һин, ҡустым, ата-бабам шәжәрәһе, тиһең, ҡасандырғы Дәүләтбаевтар тамыры менән ҡыҙыҡһынаһың. Изге хис һәм теләк был! Халыҡтың тамырын белеү ҙә шул үҙеңдең ғаилә тамырыңды юллап табыуҙан башлана. Ғаилә — дәүләттең тере күҙәнәге, державаның тотҡаһы, тип белмәйенсә әйтмәгәндәр. Бәй, шулай икән, тимәк, дәүләт, держава халыҡтарының шәжәрәһенән тыш һинең ғаиләң шәжәрәһе лә, тыуған халҡыңдың шәжәрәһе лә юҡ. Булғанда ла, теуәл түгел. Шуға күрә лә һин, ҡустым, үҙ ғаиләңдең шәжәрәһен Бородино ҡырына килеп тапһаң да аптырама. Киреһенсә, фәҡәт үҙ төбәгеңә, үҙ ауылыңа бикләнеп, суҡышы ебек себештәй, үҙ ҡабығың эсендә тонсоғоп ҡалыуҙан ҡурсалан – партиябыҙҙың күрһәтмәләре шундай бит. Әйтәйек, мәҫәлән, урыҫ менән башҡорт хан замандарҙан Уралда ғына түгел, ә хәҙерге Мәскәү, Киев, Рязань, Владимир өлкәләрендәге ерҙәрҙә лә тамырҙарын тоташтырып, уртаҡ һауаны һулап, бер һыуҙы эсеп, бер икмәкте ашап йәшәгәндәр икән, был хаҡта ошо көндәргәсә ер-һыу үҙе ҡысҡырып тора икән, ниңә беҙгә лә ошо турала ауыҙ тултырып һөйләмәҫкә лә яҙмаҫҡа? Ә һиңә, бынамын тигән йәш рәссамға, полотноларыңда шуны балҡытып сағылдырмаҫҡа?

-- Попробуй – иртәгә үк эҙеңде һеперерҙәр! – тигәйне лә Басир, үҙ телмәренә мауыҡҡан ҡартлас ҡолаҡтары ҡырынан үткәреп ебәрҙе.

-- Был хаҡта алыҫ бабаларҙың ер-һыуға «яҙылған» тарихы ҡысҡырып ята, мәҫәлән, Мәскәү, Рязань, Владимир өлкәләрендә...

-- Ул яҡтарҙың беҙгә ни ҡыҫылышы бар?

—Бына-бына, күренеп тора! — Басир ярһыу яҡташының ут ҡабынғандай дөрләп барыусан йөҙөн, күҙҙәре тирәһендә ҡояш нурҙарылай сыйылған йыйырсыҡтарын күҙәтеп тәьҫирләнде. -- Тыуған илдең ер-һыу атамалары йәш быуынды ҡыҙыҡһындырмай! Дөрөҫөрәге, һаман ҡыҙыҡһындырмай! Нисек итеп түҙеп йәшәмәк кәрәк, асыҡ ятҡан китапты уҡымайынса? Бигерәк тә, рәссам кешегә! Ер-һыу атамалары — бабаларҙың үҙҙәре хаҡында яҙып ҡалдырған

мәңгелек ядкәре бит ул. Ташбулат биналар, бейек ҡоймалы ҡалалар, хатта дәүләттәр ҡомдай ишелеп ауған, барыһы саң-көлгә ҡалған, әммә ергә яҙылған китап ыуалмаған, янмаған, теп-теүәл килеш һаҡланған. Ҡайҙалыр алыҫҡа китмәй, күптәрҙе аймылыш ҡылған Мәскәү һәм Мәскәү яны өлкәләренең генә географияһын байҡайыҡ, тәғәйенерәк әйткәндә, ошондағы Ока йылғаһы бассейнына күҙ ҡырыйын һалайыҡ. «Ока» үҙе — Ағиҙелебеҙгә тамырҙаш» «аҡ» һүҙенән (һыу тигәнде аңлата)! Етмәһә, Уралда ла шул уҡ Ока (Оло Аҡа) йылғаһы бар. Ә уның (Мәскәү яны Окаһының) бассейнындағы ер-һыу атамаларын тикшерә китһәң, бөгөнгө Уралдағы байтаҡ йылға һәм күл, соҡор-саҡыр исемдәрен (әйтелештәре саҡ ҡына үҙгәртелгән) унда табырға була. Ғибрәт өсөн оҡшашлыҡтарҙың күҙгә төртөп торғандарын — иң эреләрен генә килтерәйек: бында, Мәскәү яны Ока буйҙарында, унарлаған Белая-Ағиҙелдәр, уға иптәшкә йәнә Уфа (Упа), Уфалей, Дим, Стәрле, Тора, Шишмә, Темәс, Булғаҡ, Быҙаулыҡ, Ассы, Аҡселән, Абзан, Әрә, Эйекле, Илмәле, Өсән (Усень), Шәде, Ҡарғалы, Ҡаҫмарт, Күҙәй, Сәрмәсән һыуҙары[15] бар. Ундайҙарҙың һан-иҫәбе тиҫтәләгән, йөҙәрләгән... Һәм һәммәһе ҡайҙалыр Уралда түгел, ә бында — Ока буйҙарында[16]... Бына шул нәмәгә һин, художник, нисегерәк ҡарайһың? Ҡасандыр ошо тирәләрҙә, рус туғандар менән ҡулға-ҡул тотошоп, беҙҙең алыҫ бабаларҙың да йәшәгәнлеген туранан-тура иҫбатлай түгелме был?

Басирҙың, ошоғаса шуларҙы үҙе белмәгәнлеккә оялыуҙан, көллө тән күҙәнәктәре, энәләнеп, тән буйына таралды, төртөп сығырҙай сәнсте, ирендәре һыртына тир бөрсөкләнде.

-- Белмәйем, мин был хаҡта уйлап ҡарағаным юҡ...

-- Мәркәз ҡалабыҙҙы алып ҡарайыҡ... Башҡортостанда ошо көндә лә бик боронғо, бер түгел, дүрт-биш Мәскәү ауылы барлығын беләһеңме?!

-- Белмәйем...

-- Һәй йәштәр, йәштәр, нимә тураһында уйлайһығыҙ һуң һеҙ?.. Халыҡтарҙың ҡоростай ныҡ дуҫлығы, уны тағы ла нығытыу тураһында ҡоро һүҙҙәр яҙабыҙ, ә шул дуҫлыҡтың ярылып ятҡан тәрән тамырҙарын табып тәрбиәләүҙе, хәстәрләүҙе Аллаһы Тәғәләгә, йә булмаһа океан арты «белгес»тәренә тапшырып ҡалдырабыҙмы?! Ут-төтөн-көл араһында, тарих саңында күмелеп ятҡан бөйөк мираҫтарыбыҙҙы, бабаларҙы «ҡырағай булған, бер нәмәһе лә булмаған» тип атауҙарға сик ҡуйыусы культура ҡаҙаныштарыбыҙҙы үҙебеҙ соҡоп сығармаһаҡ, уны беҙҙең ҡулға кем килтереп һалыр? Океан арты ҡәләмселәре үҙебеҙҙе тамырын юйған ҡамғаҡ итеп уйнатыуҙарын көтәбеҙме әллә?..

-- Көтмәйбеҙ, уны инде үҙебеҙҙең совет халыҡ шағиры Мәрүән ағай ҡамғаҡлатып уйната! – тип ҡыҫтырғайны ла Басир, ветеран һис иғтибарһыҙ ҡалдырҙы:

-- Ә бит Гитлер фашизмы беҙгә яҡшы һабаҡ биргәйне. — Ҡарт яугирҙең

[15] Башҡортостан йылғаларының да иссмдәре.

[16] Мәғлүмәттәр түбәндәге китапҡа тупланған: Г.П. Смолицкая. Гидронимия бассейна Оки [список рек и озер]. М., 1976. Исемдәр ҡайһы бер өн үҙгәрештәре кисергән.

тулҡынланыуҙан күкрәге ҡыҫылды, һулышы йышайҙы. — Беләһегеҙме, улар беҙҙе, Совет илен, еңгәндән һуң ни эшләтергә уйлаған? Халҡыбыҙҙың өстән ике өлөшөн ҡырып бөтөрөп, бер өлөшөн «бөйөк арийҙар» расаһы өсөн егелеп ер һөрөүсе, иген урыусы һәм мал көтөүсе «ҡырағай эш хайуандары» -- селәүсен хәленә төшөрөп, йыл уратаһына мал аҙбарҙарында бикләп тоторға һәм, «бөйөк арийҙар»ҙың цивилизацияһын күрһәтеп шаҡ ҡатырыр һәм шуның менән рухи яҡтан ҡаҡшатып, имгәтеп, хайуанлыҡтың, селәүсенлектең иң түбән баҫҡысына ҡолатыр өсөн, йылына бер тапҡыр баяғы аҙбарҙарҙан сыбыртҡылап сығарырға ла беҙҙең ҡалаларҙа бал-май имеп донъя көтмөш үҙҙәренең «юғары раса»һына тамаша ҡылдыртырға, үҙ өҫтөнлөктәрен тойҙортоп, «юғары цивилизация» ҡоролмалары эргәһенән ғибрәт өсөн көтөү-кетөү ҡыуалап уҙғарырға. Гитлерҙың «Барбаросс планы»на яҙылған[17] был... Киләсәктә лә Гитлер һымаҡ шаҡшылар тыумаҫ, тимә! Ана шундай хәлгә тарымаҫ өсөн, үҙеңдең кем икәнеңде, ҡайҙа баҫып торғаныңды аныҡ тойоп-белеү зарур! Халыҡҡа быны кем һеңдерергә тейеш? -- Ҡарт йөрәкһеп өндәшкәндә рәссамға ул Ирәндек бөркөтөнөң саңҡылдауын хәтерләтте.

-- Беҙ! — тине Басир, ирекһеҙҙән, уҙамандың йөрәкһеүенә ылығып.

-- Бәй, улайғас, бер адресты яҙып ал: Куликово ауылы, балта оҫтаһы Любашин Яков Ксенофонтович. Үҙең ял иткән Милеевка ижад йортоноң ҡапҡа артында ғына. Ҡартласты яҡшы беләм — оҙаҡ йылдар хәбәрләшеп торабыҙ. Бына уның бер хаты: шул тирәлә борон-борондарҙан уҡ башҡорттарҙың да йәшәүе тураһында. Барып таныш, тикшер, төбөнә туҙ ҡуй — бына һиңә минән боевой йөкләмә! Һәм шуны иҫеңдә тот: балта оҫтаһы ғына булһа ла, ата-баба тарихтары мәсьәләһендә төтөнө тура йөрөй уның, Яков ҡарттың. Рәссам башың менән ояҡа ҡалмаҫҡа, кәштәләге күҙеңә ҡарап торған анауы өс китапты ҡуйыныңа тығып кит. Ҡайтышлай керетерһең. Ижад йорто тигәс тә, бер туҡтауһыҙ картина яҙып ҡына ултырып булмайҙыр бит: ара-тирә шул томдарға күҙ һалыштырғылап та ал. Тап Яков Ксенофонтович фәлсәфәләргә яратҡан — беҙҙең эраның урталарына ҡағылышлы тарих улар.

Килене менән улы, уға һиҙҙертмәй генә, ишара яһап ҡунаҡҡа тумбыттылар: ҡарттың хәле шәптән түгел, бигерәк тә яҡташтары килгәндә үҙен онота... Билдәле, Басир тиҙерәк һаубуллашырға ашыҡты. Хушлашҡан саҡта, көтмәгәндә, урыҫса һөйләшкән яҙыусы саф башҡортса өндәшмәһенме:

-- Тамырыңды онотма — ил тамыры менән ҡуша юлла, башҡорт балаһы!

-- Бәй, ҡайҙан башҡортса беләһегеҙ?! — Был фатирға килеп кергәндә үк рәссам күҙҙәре ҡартластың йөҙ ҡиәфәтен үҙебеҙҙең Урал яҡтары кешеһенекенә оҡшатып, фамилияһын да Ибәтуллинға тартымлабыраҡ уйлағайны. Әммә исеме, атаһының исеме шау рустыҡы булыу аймылыш ҡылды — ошо хисе түгелде тел осонан. Яҡташ иһә көләмһерәп кенә ҡуйҙы:

-- Быныӊ тарихын икенсе юлы һөйләрмен. Сәйәхәтеңдең аҙағында Яков Ксенофонтовичтан миңә сәләм килтерерһең, шәт?

---

[17] В.И. Дашичев. Банкротство стратегии германского фашизма. Исторические очерки, документы, материалы, том I, М., 1973, 62— 63-өнсө биттәр.

Үкенескә ҡаршы, бынылына ирешеү насип булманы – батыр яҡташтың ҡапыл ғына йөрәге ярылып вафат булыуы ишетелде...

Ә ул саҡта, Мәскәүҙән ижад йортонаса электричкаға ултырғас та, рәссам юл буйы яҡташын, уның ошо көндәргәсә дауам иткән уҙаманлығын йөрәкһеп уйланы. Дөрөҫөн генә әйткәндә, хатта ҡалаҡ та тота алмай, теле менән дә һөйләшмәй — фәҡәт ишетә генә, ә әйтәһе фекерҙәрен ҡағыҙға теркәп еткерә. Юғарыла килтерелгән оҙон-оҙон монологтар ҙа, ҡағыҙ киҫәктәренә көс-хәл яҙылып, әлбиттә, ғәмәлдә был ҡәҙәре үк оҙон булмағандарҙыр — уларҙы хисле рәссам зиһене беҙгә шулай камиллап һәм ағылдырып биргәндер. Шунылы ғәжәп: һөйләшкәндә әңгәмәсе уның һәм үҙенең ике ярҙа торғанлығын онота — ихтыяр көсө бөркөлгән, дөрләп торған тәрән аҡыл ҡеүәһе араларҙы тоташтырыусан ине...

Милеевканың һөттәй ап-аҡ ҡайындары көн уҙымында бер ҡарышҡа йыуанайған, һуйҙанайып үҫеп киткәндәй тойолдо, түгелеп турғай һайрауы ла әүәлгесә түгел ине... Бауыры аҫтынан ел үткәрер, хәүефтәрен иңенән һалыр өсөн, рәссам бүлмәнән сыҡты, йәне тартҡан һуҡмаҡтан алыҫкараҡ ҡыҙырҙы. Юл урманда тармаҡланып айырыла, айырсаның береһе — ҡарағайлыҡ артында терәлеп торған яҙыусылар ижад йортона, икенсеһе Лопуховка ауылына илтә ине. Ә артҡа ҡайырылһаң, рәссамдарҙың Басир төйәкләнгән ижад йортон уратыбыраҡ үтеп, Сергей Батулин яҡташ өйрәткән Куликовоның үҙенә барып сығаһың...

—Их, Аҡһылыу, Аҡһылыу, бер күрергә ине һине, Аҡһылыу!..

Атлаған һайын, биғәйни ҙә баш осонда тәкмәсләп, тулған Ай тулҡын ҡаға. Теге юлы Аҡһылыу менән атаһы туҡталған аҡ ҡайынҡай һары нурға аҡ бәпкәләй ҡойона. Уф, Мәскәүҙән шөйлә арып ҡайтылған икән! Аҡлан ситенә уҙып, ҡупшы лапылы йәш ҡарағайға арҡа терәп ултырҙы, күкрәк киреп һуланы. Сайыр аңҡыуы тын юлын иркенәйтеп, сихәтле әсеттереп, йән арбағыс киске һиллек ҡан тамырҙарын ҡабартты. Ҡайһы саҡта талыҡҡан килеш яңғыҙың ғына ҡалып, тәбиғәт күҙенә текләүҙәргә ни етә!.. Рәссам, әлбиттә, оҙаҡламай тап ошонда уның алдында, теге саҡта тылсымлы башланып та, тамамланмайыраҡ ҡалған, тормош-драматург яҙған драманың дауамланырын башына ла килтермәне...

Сеү, кемдер ҡысҡырып көлдө. Һыңар тәпәйендә ҡалғып, Ай аҫтында ап-аҡ ҡаҙҙай ойоп йоҡлаған аҡ туҙлы яңғыҙ ҡайын, әйтерһең, ҡанат ҡағып ҡыйғаҡланы. Сорғоп күккә талпыныр, тирә-яҡҡа Ай нурҙарын сайпып сәсрәтер һымаҡ. Рәссам күҙҙәрен һыпырғайны, тылсым йәнә яңырҙы — һелкенмәйенсә бейеп торған ап-аҡ күлдәкле сихри ҡыҙға әйләнде. «Их, мольбертым тороп ҡалған... — Терһәген тешләрҙәй булды. — Бумаламды уйнатып, мәңге юйылмаҫлыҡ мөһөрләп ҡалдырыр инем һынныңды, ҡайын һылыу!»

—Һәпестә-һәпестә, аҡ бәпесем минең! Һәпестә-һәпестә, танһығым минең!..

Бәй, ҡайын үҙәгенәнме әллә һыҙылып сыға был тылсым-өн? Йөрәк төпкөлөнән һурылған ауаз? Ҡайҙан таныш уға был бәрхәт тауыш, рәхәт тауыш?!.

Рәссам күҙҙәрен ыуалай — Ай аҫтында ап-аҡ ҡайын һәм ҡыҙ һыны ҡушарлана, ҡыҙ, сыбар яулыҡ ҡайырып бәйләгән башын артҡа салҡайтып,

талпыныпмы-талпынып, ҡуш усында әллә Ай, әллә бала һикертә:

—Һәпестә-һәпестә, бигерәк аҡ бәпес тә!.. — Шул мәғәнәләрәк таҡмаҡлай ҡыҙ үҙенең урыҫ телендә. Бала кинәнә, бала көлә, үргә сорғолғаны һайын, ике ҡулын күккә һоноп ебәреп, һары өйрәк бәпкәһеләй талпына, тамаҡ төбөнән ҡарағай сайырылай әсе-ярһыу ауаз сығарып көлә. Әйтерһең, юғарыраҡ ырғылырға, йоп-йомро Айҙың үҙен йомарларға ынтыла... Ҡыҙҙың йөҙө асыҡ күренмәй: ҡәҙимге урыҫ ҡатын-ҡыҙҙарынса түбән төшөрөп ҡыҫып бәйләгән сыбар яулығы, өҙлөкһөҙ үргә талпынған аҡ еңдәре ҡаплай уны. Тик белә инде Басир: алдында сихри Аҡһылыу!.. Юҡҡамы ни аҡ бәпесен һикертергә тылсымлы урман төбөн, тәүлектең татлы Ай балына тулышҡан мәлен һайлаған!

Ботаҡтар ҡыштырланы, шартланы, һиллек сайпылып сәсрәне — көтөлмәгән башҡа һын пәйҙә булды: өҫтөнә әрһеҙ эш комбинезоны кейгән, ас һағаҡлы балтаһын һап төбөнән услап тотҡан, оҫталарса эйелеп көмрәйгән ир... Ҡабарынҡы сәс көлтәһе артҡа ҡарай тулҡынып, оҙон аҙымлап ырғығаны һайын, ырғылып-елпенеп бара, ҙур асылған күҙҙәре Ай яҡтыһына киршәлә... Аҡһылыуҙан элек бала иғтибарланы уны — әсе сарбайлап иланы:

-- Әсәкәйе-е-ем!..

-- Кем был, ни булды?! — тине Аҡһылыу, кинәт әйләнеп ҡарап. -- Иҫерек йән!

Балталы ир төмөзгә һөрлөгөп ҡоланы, һыҡтанып мыңғырҙаны:

-- Ох *Люба, Любаша*!..

-- Ни ҡылығың был, Иван?! –тине быныһы. Шул арала тағы берәү пәйҙә булды аҡланда:

-- Ваня, тим, ҡайҙа олаҡтың? — *Люба*-Аҡһылыуҙың атаһы, әлбиттә. Ҡартлас ҡәһәтләнеп башын сайҡаны. — Тфү! Күҙ асып йомған арала... шельма! Ҡара һин уны — ҡайҙа килеп серәкәй һимертеп ята! Табындың ҡотон осорҙоң!

-- Мин бында, Яков Ксенофонтович!

-- Күрәм, күрәм, Иванушка. Тор!

Рәссам ҡолаҡтары «ҡарп!» итте: бәй, ниндәй Яков Ксенофонтович? Яҡташы Сергей Батулин күреп һөйләшергә ҡушҡан балта оҫтаһы үҙе ләһә?!

-- Атай! — Баланы күкрәгенә ҡыҫып, ниҙер әйтергә итте Аҡһылыу.

-- Эх-ма! Йә, ҡыҙым, аяҡландырайыҡ бынау быҙауҙы, һоп!

-- Балтам. Ҡайҙа балтам! — тип кинәт күҙҙәрен аҡайтып аҡырҙы комбинезонлы.

-- Балтаң өйҙә, шөшлөң сөйҙә, — һымағыраҡ әйтемләне Яков ҡарт.

-- Юҡ, ул яңы ғына бында ине.

-- Әһә, һабы ҡарайғайнымы?

-- Ҡарайғайны.

-- Улайһа, күрҙем мин ул ҡарайған балтаны.

-- Ҡайҙа?

-- Мунса инергә елдереп бара ине, вәт шеьма! — Яков ҡарт хихылданы.

-- Нимә?!

— Дурак һин! Ошо алйотлоғоң менән үҙеңдән биҙҙертәһең. Тейешле кешеләрҙе.

Иван тигәндәре тороп ултырҙы, күҙҙәрен ыуаланы.

-- Минме дурак?!

-- Әйҙә-әйҙә! Шыр тиле булмаһаң, ошо урында ер ҡосаҡлап ятмаҫ инең.

-- Тонған күҙ! — Быныһын ҡыҙ өҫтәне. Сарылдап илаған баланы йыуата-йыуата һөйләнде. — Ҡасан бөтә был эскелек! Хатта сабыйың да ытырғана үҙеңдән! Һин дә, атай, шайтан арбаһына тағылып йөрөйһөң...

Ивандың ҡайтыу шатлығынан бит, ҡыҙым...

— Шатлыҡтарығыҙ табылып ҡына тора!

Рәссам маңлайын яғымһыҙ бер һиҙенеү борауланы: “сабыйың” тип битәрләне... Аҡһылыуҙың иреме икән ни Иван?..

Иван тигәндәре тороп, бер ситтәрәк аунап ятҡан балтаһын көрәктәй яҫы усына һәрмәп алды ла һуҡмаҡ буйлап ауылдары яғына ыңғайланылар...

Алйып ҡайтып ингән Басир, сағыу аҡ ҡайын һынландырылған мольбертын башы осона — карауат буйына һөйәп, һаташҡыс серемгә талды. Бына ул, Басир үҙе, имеш, бала һикерткән Аҡһылыуҙы ғифриттән арсалау өсөн, ҡарурманға ташлана. Түбән генә һәленеп йөҙгән Ай ҡайығын түбәһе менән төртөп сөйә-сөйә елә. Бәпестең үкһеп илағаны йөрәккәйен ҡыҫа ла һығылдыра, шашып алға атлыҡтыра. Йөрәк төбө һалҡынайып, үҙе лә йәнтәслим ҡысҡыра: ҡарағайҙар менән типә-тиң оҙон буйлы, ҡот осорғос ғифриттәр, тар һуҡмаҡты ике яҡлап, ағас тамырылай һәленгән тарбаҡай ҡулдарын һуҙып, уны тоторға-туҡтатырға тамшана, сыбыртҡылай бармаҡтарын сикәләренә сыптыра... Һыңар күҙле, һыйыр ҡолаҡлы йөҙҙәре, ыржайған ауыҙҙары, һырлы-кырлы мөгөҙҙәре... Бәпес күтәргән Аҡһылыуҙы ғифрит батшаһы үҙе ҡармарға итә... Басирға аяҡ сала, яман хахылдап көлә. «Әсәкә-йем!» — тип һөрәнләп әйләнеп кенә баҡһа, аҡ ҡылғандай сағыу сәсле Толя Каргин үҙе, зәңгәр-күк күҙҙәрен тызырайтып, тештәрен ыржайтып тора:

— Туҡта, брат, ҡайҙа ыхылдап сабаһың? Атайың бахыр әйтмешләй, унда бешереп ҡуйғандармы әллә һиңә? Ул бит Аҡһылыу түгел, ә натурщица Нелли ханым, ха-ха-ха!..

Басир Дәүләтбаев шыбыр тиргә батып уяна. «Юҡ, алдайһың, туғанҡайым! Нелли үҙеңә булһын! Ә минең Аҡһылыуға теймә!»

Аҡ ҡайынлы төнгө сихри аҡланда, өндәшергә йөрьәт итмәй, лапы аҫтында боҫоп ултырып ҡалғаны өсөн үҙен сикһеҙ битәрләп, иртән тороп юлға ҡуҙғалды Басир: кисәге серлейәндәрҙе эҙләп табырға! Атаҡлы балта оҫтаһын ул, көн кислеккә ауышҡас, Лопуховка ауылында осратты. Баҡһаң, теге Айлы аҡланда Аҡһылыуҙың ҡатарында балта тотоп күҙгә сәйер салынған, Басирҙың тешөндә ғифриттәр күреп һаташыуына сәбәпсе булған Ивандың ауылы икән был һәм улар, атаҡлы ике оҫта, колхоздың бер шундай уҡ атаҡлы механизаторына биҙәп-төҙәп яңы йорт бурайҙар имеш. Баяғыса, күрше Куликово ауылында йәшәгән Яков Ксенофонтович, ошондағы китапханала мөдирлек иткән ҡыҙы Любовь кеүек үк, таң һарыһынан тороп, ике ауыл араһын көн дә тапай, ә төшкөһөн Иван йортонда Пелагея ҡарсыҡ ҡаҙанынан тамаҡлана, бик арыған саҡтарында ҡунырға ла ҡала икән. Шунда кейем-ҡаралы карауаты,. кәрәк-ярағ һалынған һандығы бар. Ҡарттың үҙенең шаяртыңҡырап әйтеүенсә, Иван йорто уның икенсе үҙ өйөнә

әйләнгән. Басир килеп сәләм биргәндә оҫталарҙың икеһе тиң төшкө аштан һуң бил яҙып, йәйенке олонло ҡарт алмағас төбөндә ултырып тора, өҫтәлдә ҡайынтуҙ тырыз тулы йәнгә танһъгк эсемлек — урыҫ кеүәҫе лә бар. Иван юнғы-ҡасауҙарын үткерләй, ә Яков Ксенофонтович, ялғашҡа өймәләм йәшел һабаҡтар һалып, балта менән тәмәке турай ине. Яҙыусы Сергей Батулиндан фатиха алып килеүен һәм рәссам булыуын белгәс, оҫтаның ҡырыҫ йөҙө шөйлә яҡтырып, тауышы алсаҡланды, артабан һәр һүҙен бизмәндән үткәрә лә мәрйендәй һайлап теҙә — сәнғәт кешеһе ҡаршыһында хурлыҡҡа ҡалмаҫҡа -- китапса төҙөк һөпләшергә тырыша ине, буғай. Хәйер, Басирҙың үҙенең телмәре лә алдан уйлап ҡуйылған — китапсараҡ ине шул...

-- Ғүмер буйы үҙем игеп үҫтерәм тәмәкене — магазиндыҡы мүк кеүек, — тип аңлатып бирҙе ҡартлас сәйерерәк шөғөлөн, туҡылдауыс балтаһын ҡуйып тороп, ҡунаҡ алдындағы таҙа стаканға һыуһын ҡандыртҡыс һалҡын кеүәҫте ҡойоп. — Һе! Шулай итеп, Сергей Абросимович кеүек үк, һеҙ ҙә ҡояшлы Башҡортостандан икән.

-- Беҙҙең яҡта булғанығыҙ бармы әллә?

-- Юҡ, ләкин һеҙҙең яҡташтарҙы был тирәлә йыш күрергә тура килә. Яҙыусыларҙы, рәссамдарҙы, тим.

-- Ижад йорттарына йыш йөрөйбөҙ шул. Ә Милеевка беҙҙең иң яратҡан урын. Үҙе — ысын тәбиғәт ҡосағы, үҙе Мәскәүгә яҡын.

-- Эйе... Ләкин һеҙҙең өсөн унын иң ҡыҙығы башҡараҡ. — Ҡарттың күҙҙәре хәйләкәр-шаян сөрөштө. — Йәғни-мәҫәлән, иң яратҡан был урынға тамырыгыҙ тартмаймы икән әле, тим.

-- Аңлап еткермәйем.

-- Әллә мин аңлап еткерә, тиһегеҙме? Мин шуны ғына беләм: Мәскәү ере борон-борондан уҡ бик күп халыҡтарҙың йөрәк тамырҙарын ғына түгел, нәҫел тамырҙарын да тоташтыра, үҙенә тартып тора.

-- ?!

— Ни өсөн, тиһегеҙме? Ә ни өсөн һуң бында, тип әйтәйем, тап Пушкин атағанса, рус рухы менән тулышҡан, рус еҫе аңҡып торған ерҙә, тупрағына аттай аунап ятып еҫкәп ҡараһаң, икһеҙ-сикһеҙ илебеҙҙең бөтә мөйөштәренең дә аңҡыу еҫе һиҙелә?

-- Йәғни?

-- Йәғни-мәҫәлән, үҙебеҙ йәшәгән төбәктәрҙең тарихын беләбеҙме? Ер-һыуҙарҙың оран һалып ҡысҡырып ятҡан хәтере... Сергей Абросимович аңлатҡандыр...

-- Эйе... — Оло тормош юлы үтеп салланған ветерандарҙың һүҙгә ифрат ихласлығын, бер мәғлүмәткә ҡушып биш тарих һөйләргә һәләтлелеген күп татыған егет йәһәт сәғәтенә ҡараны, дилбегәне оҙонға һуҙмай, теҙгенде үҙ ҡулында тотор өсөн, Сергей Батулин аша был йәһәттән шаҡтай хәбәрҙар икәнлеген дөрөҫләне.

-- Шулай ҙа, Рәсәйҙең үҙәгендәге ошо саф рус ерҙәрендә... «Башҡорт» тигән ер-һыу атамаларының да күп булыуы ғәжәпкә һалмаймы һеҙҙе?

Басир быға ысынлап та ғәжәпләнеүен белдерҙе, сөнки ундай уҡ

мәғлүмәткә эйә түгел ине.

-- Булмаç... — тине ул. — Дөрөç, беҙҙең яҡтарҙа — башҡорттоң тап үҙәгендә — «урыç» аталған ер-һыуҙар күп, әммә был тарафтарҙа...

-- Шулай аталған ер-һыуҙарҙы мин үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Хатта, ярына ятып, һыуҙарын да ауыҙ иттем, тип йылмайҙы ҡарт.

-- Ҡыҙыҡ... Ҡайһы тирәләрәк ул?

.— Беләһегеҙ бит беҙҙең, оçта халыҡтың, балтаһын биленә ҡыçтырып, ил гиҙеп йөрөгәнен... Владимир өлкәһенең Клязьмаға ҡойған Пекша йылғаһының уң яғына барып сыҡтым шулай. Юл саңдарын йыуырға тип, фирүзә ярлы соҡор төбөндә шөңгөрләп кенә ағып ятҡан тере шишмәгә сумдым. Минең кинәнеп ҡойоноуҙы яр башында тамаша ҡылған көтөүсенән һорайым:

-- Беләһеңме, изге йән, нисек атала был гәлсәр һыу?

-- Ниңә белмәçкә, — ти теге, — беҙ белә-белгәндән Башкирдовская йөрөй ул.

Аптырап:

-- Был ни һүҙ, әллә бында башҡорттар ҙа йәшәйме? — тим.

-- Ҡайҙан килеп бында башҡорттар йәшәһен — һәммәбеҙ ҙә саф рустар.

-- Улайғас, ниңә «Башҡорт» һыуы атала икән?

-- Уныһын ата-бабаларҙан һорағыҙ, — тип, тештәрен йылтырата көтөүсе. Бына шулай.

-- Эйе, ысынлап та, мәрхүм атайым әйтмешләй, ата-бабаларҙың ҡөҙрәте сикһеҙ, — тип үҙ һөҙөмтәһен сығарҙы рәссам. — Әйтәйек, Балтик диңгеҙенән алып Ҡытай диңгеҙенә тиклем арауыҡта ниндәй генә «милли» ер-һыуҙар юҡ: теләгән бер күләүеккә, исемен һорашмайынса уҡ супылдап барып сумһаң, сыҡҡан саҡта рустан — башҡортҡа, башҡорттан — русҡа, йәки башҡа берәй төрлө нәçелгә әйләнерендә көт тә тор!

-- «Ни өсөн?» тип уйлап ҡарағанығыҙ бармы шуларҙы?

-- Нимәләрҙе?

-- Ер-һыуға йәбешеп ҡалған исемдәрҙе, тим.

-- Бәлки, улар беҙҙең берәҙәк аяҡтарҙан төшөп ҡалған саң ғыналыр? — тип көлдө рәссам.

-- Берәҙәктең исеме ергә яҙылмай — саң менән ҡуша оса. Шуға күрә уның хаҡында ерҙең хәтере лә ҡыçҡа. Ә минең һүҙ -- кәм тигәндә мең йыл аша килеп еткән, юйылмаған хәтер хаҡында бара.

Үҙ эшенә мауығып, ҡолаҡ ҡымтып ҡына ултырған Иван да йор ялғаны:

-- Минең менән дә булды шундай уҡ бер мәрәкә: үҙебеҙҙең бынау торған Рязань өлкәһендә — Осетр йылғаһының һул яҡ ярынан ҡойған Тюфитка һыуы буйында. (Әйткәндәй, минең Магаданда бергә эшләгән башҡорт дуçым: «Осетр»ҙы «Осетрлы» тип әйтһәң, башҡорт йылғаһының исеме Эстәрле килә лә сыға, ти торғайны.) Тюфитка, тинем бит әле. Баяғы һеҙ әйткәндәй, әлһерәп барып сумһам, Тюфитканың уң яҡтағы кескенә тармағы ла, баяғылай, Башкирская тип атала имеш...

-- Әйттем бит инде: беҙҙең бөгөнгө Башҡортостан тупрағында ла «урыç» атамалы тиçтәләгән ауылдар, ер-һыу исемдәре бар.

-- Тимәк, Магадандағы баяғы башҡорт дуҫым әйтмешләй, беҙ бөтәбеҙ ҙә — бер иш, кендектәребеҙ береш! — тине Иван. — Ниңә икән, тим, әҙәм балалары бер-берен милләткә, дингә ҡарап айыра?

Ҡартлас елкәһен ҡашыны:

-- Эйе, яҙыусы Сергей Батулин үҙенең бер әҫәрендә дөрөҫ әйтә: «Быға тиклем халыҡтар үҙҙәренең башҡа халыҡтарҙан айырымланыу тамырҙарын тикшерҙе, бер-береһен айырҙы, ә бөгөн беҙҙең барыбыҙға ла халыҡтарыбыҙҙың бер-береһенә туғанлыҡ тамырҙарын барлап-юлларға ваҡыт». Шәп һүҙҙәр! – Рәссамға күҙ һирпене. -- Аңлауымса, Сергей Абросимович һеҙҙе лә миндәге иҫке яҙма ҡомартҡы менән сәмләндергән, шулаймы?

-- Шулайыраҡ булып сыға, — тине Басир.

-- Эйе... Ҡыҫҡа ғына әйткәндә, балта һөнәренә керешкәнгә тиклем, ҡасандыр мин дә булыр-булмаҫ ҡына интеллигент инем... Заманында гимназия бөткәйнем...

-- Ә ниңә һуң?..

-- Унынһы икенсе мәсьәлә. Беләһегеҙ: кемгә — ҡәләм, кемгә балта тоттороуҙы йыш ҡына яҙмыш үҙебеҙҙән һорап тормай — үҙе хәл итә...

-- Ә башҡорттар хаҡында ҡайҙан белдегеҙ? Әлбиттә, — рәссам үҙенең яҡташы Сергей Батулин биреп торған китаптарҙан ашыҡ-бошоҡ һоҫоп алған ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе теҙҙе, — прогрессив рус интеллигенцияһы борон-борондан уҡ башҡорт тарихы, культураһы менән етди шөғөлләнгән. Әйтәйек, ғалимдарҙан Сергей Иванович Руденконың «Башҡорттар» тигән махсус монографияһы, Николай Константинович Дмитриев яҙған «Башҡорт теленең грамматикаһы» киң билдәле. Ә шулай ҙа һеҙ...

-- Шуны онотмағыҙ, туған: ябай халыҡ бер-береһен ғалимдарҙан әүәлерәк табыша... Минең менән ул хәл хатта мыйығым да сыҡмаған йәш сағымда — империалистик һуғыштың ҡанлы окоптарында булды... «Тел» алырға разведкаға барған саҡта бер иптәшем мине үлемдән ҡотҡарҙы, шунан һуң йән дуҫтарға әйләнеп киттек. Һуңынан ул йән дуҫымдың — Уралдан, милләте буйынса башҡорт икәнен белдем...

-- Эйе, башҡорт егеттәре менән, мин һеҙгә әйтәйем, разведкаға барып була! — тине Иван. — Былтыр Магаданда мин, мәҫәлән, башҡорттар, яҡуттар менән бер забойҙа таш киҫтем...

-- Туҡта әле! – тине Яков Ксенофонтович, йәйрәй башлаған Иванды бүлдереп, рәссамға бороллдо. -- Һеҙҙең башҡорт яҙыусыларының да китаптарын, руссаға тәржемә ителгән һәр берен, тип әйтерлек, ҡыҙыҡһынып уҡып барам мин. Ҡыҙым китапханала эшләгәс ни, әйтеп ҡуйғанмын... Дауыт Юлтыйҙың «Ҡан», Афзал Таһировтың «Һалдаттар» тигән романдары хәтеремдә. Уҡыған саҡта ифрат сәйер тойғолар биләне мине: баяғы башҡорт дуҫым менән минең хаҡта түгелме икән был әҫәрҙәр?.. Геройҙарының империалистик һуғыштағы күрмештәре шул тиклем дә беҙ икәүҙең башҡайҙарынан үткәндәргә оҡшаған!.. Ә башҡорттоң тарихы менән шөғөлләнеүем башҡорт дуҫымдың ябай ғына тәмәке янсығынан башланды заманында: унда ла тап минең тәмәке янсығындағылай *сатраш-тәреле* биҙәк сигелгән. Сағыштырып ҡараныҡ та аптыраныҡ: дине

буйынса ул — мосолман, мин — христиан, ул — башҡорт, мин — рус, уның янсығын уның һөйгәне — башҡорт ҡыҙы, минең янсыҡты минең һөйгәнем — рус ҡыҙы үҙ милли биҙәктәрен һалып сиккән, әммә, үҙҙәре лә белмәйенсә, икеһе бер үк тәрене һүрәтләгән. «Әллә суҡынған башҡорттар булаһығыҙмы?» — тип төпсөндөм дуҫымдан. «Ауыҙыңдан ел алһын — нисек итеп үҙ динемде һатайым!» — «Ә ниңә һөйөклөң тәре һүрәтләгән һуң?» — «Тәре түгел — Ҡояш-Абыз. Ғүмер баҡый ата-бабанан ҡала килгән изге тамға-аманат. Ҡарттарҙың әйтеүенсә, — тип өҫтәй башҡорт дуҫым, — борон-борон замандарҙа һеҙҙең дә, беҙҙең дә ата-бабалар бер булған, Ҡояш-Абызға табынған». — «Һезҙең ҡарттар уны ҡайҙан белә икән?» — «Ул хаҡта беҙҙең сәсәндәр генә таный торған тылсымлы тамға-хәрефтәр менән таш китапҡа яҙылған...» Шулай тине дуҫҡайым. Ул саҡта мин ышанып етмәһәм дә, күп йылдарҙан һуң уҡып белдем: ҡасандыр беҙҙең рустар ҙа, һеҙҙең башҡорттар ҙа мәжүсилектә йәшәгән, бер үк хоҙайҙарға табынған, ғөрөф-ғәҙәттәре, хатта телдәре лә уларҙың оҡшаш булған...

-- Стоп! Ғәфү итегеҙ, — Басир оло мәғәнә йөкмәтеп һуҡ бармағын күтәрҙе, — нисек итеп улай «хатта телдәре лә уларҙың оҡшаш булған»?! Ҡәҙерле Яков Ксенофонтович, һеҙ уларҙың береһе — славян, икенсеһе төрки заттан икәнен, береһенең теле һинд-европа ғаиләһенә, икенсеһенеке урал-алтайға ҡарағанын онотоп ебәрҙегеҙме? Парадокс!

-- Юҡ, онотманым, — тине ҡарт. — Ғалимдар ҙа быны иҫтән сығармай. Әммә пародоксаль хәлдең хаҡиҡәтлеге уғата асыҡлана бара. Хәҙер генә күрһәтергә ҡул аҫтымда юҡ, әммә бер венгр ғалимының фекерен онотмайым. Ул ғалим венгрҙарҙы, башҡорттарҙы, рустарҙы борон заман Дунайҙан алып Уралғаса арауыҡта йәшәгән бер ҡәбилә тоҡомдары итеп һанай. Унынса, «башҡорт» атамаһы «башаҡ» («башы аҡ») һәм ир-ат («ур-ут») тигән мәғәнәле өлөштәргә бүленә, ә «ир-ат»тан урут (уруҫ) — рут — руш — рус атамалары килеп сыға. Һуңғы өсөһө рустарҙың төрлө дәүерҙә аталышы, улар яҙма тарихҡа ла теркәлгән). Ә «башҡорт»тан мажғор-мадьяр хасил булыуы ла билдәле, ти ғалим. — Яков Ксенофонтович, тулҡынланып күп һөйләүҙән ҡорғаҡһыған тамағын һалҡын кеүәҫ менән сылатып алғандан һуң, башын эйеп бераҙыраҡ уйланып ултырҙы ла көтөлмәгән яҡтан килтереп өҫтәне. — Бына ул ғалим хеҙмәтенән иң нык иҫтә тороп ҡалған мәғлүмәт — Уфа (Өфө), Москва, Будапешт ҡалалары исемдәренең килеп сығышын юрап-тоҫмаллау (был урында (башаҡ» һәм «буҙаҡ» — бер үк һүҙҙең варианттары, ә «сөт» — йылға икәнен иҫтә тотайыҡ):

Буҙаҡуба (буҙ-аҡ-уба) — Буҙаҡ-Уба — Буҙаҡ-Уфа;

Буҙаҡуба — Босакова — Мосакова — Москва;

Буҙаҡуба-сөт — Буҙағубасөт — Буҙайу-Басөт — Буҙай-Бешет — Буда-Пешт (Будапешт). Әйткәндәй, Мәскәү ҡалаһының башҡорт тирмәһенә оҡшатып түңәрәк урамдар ҡатламынан (Арбат) ҡоролошо ла быға дәлил.

«Бына һиңә кәрәк булһа, балта оҫтаһы! — тип хайран ҡалды Басир. — Беҙҙең меҫкен башҡорттарҙан шыттырылған ҡайһы бер ғалимдарыңдың башы аша төкөрөр!» Һәм бер нәмә ҡылт итеп иҫенә төштө: Мәскәүҙә институтта замананың синтетик буяуҙарын киндер битендә нисек ҡулланыу тураһында уларға лекция уҡыған күренекле химик О. Ю. Охлобыстиндың фәндәге асыштар

тәбиғәтенә ҡағылышлы ғалимдарға ҡарата әйткән ҡыҙыҡлы фекере: «Әгәр һеҙҙең ғилми хеҙмәтегеҙ хәҙерге заман ҡараштары менән тулыһынса килешеп-ярашһа — унда бер ниндәй ҙә яңы фекер юҡ, тимәк. Әгәр ҙә был хәл даими ҡабатланһа — һеҙгә үҙ профессияғыҙҙы (һис тә булмаһа тематикағыҙҙы) алмаштырыу тураһында етди уйланыу хәперле. Әйткәндәй, «ғалим» — ул һис тә профессия һәм дәрәжә түгел, ә барыһынан элек фекерләү рәүеше. Диңгеҙсе лә, балта оҫтаһы ла, дәүләт эшмәкәре лә ғалим була ала; шул уҡ ваҡытта фәндәр докторы исемен йөрөткән бәғзе бер олпат бәндә лә үҙ сиратында тап ошолай уҡ бер ҡасан да ғалим булмаҫҡа мөмкин һәм булмаясаҡ та — яраҡлашыусанлығы юл ҡуымай». Һуңынан был билдәләмә ҡалын ғилми журналда ла баҫылып сыҡты... Ә шулай ҙа әҙәм балаһы өйрәнелгән һуҡмаҡтан йөрөргә ярата бит — яңы ярылған юлға ул һәр саҡ икеләнеберәк ҡарай... Әйтәйек, үҙебеҙҙең Көнсығыш Европа ҡитғаһында беҙ белмәгән замандарҙан уҡ бергә йәшәгән славян — төрки — угрофин өс тағанының *рухи* туғанлыҡ берҙәмлеген күңеле һыйҙырһа ла, уларҙың *тел* берҙәмлеге Басирҙың һис тә ҡолағына яғылмай:

-- Минең Мәскәүҙәге рус туғаным Толя Каргинға әйтеп ҡарағыҙ ул мәғлүмәтте — йығылып ятып көлөр, ха-ха!

-- Бына һеҙ ҙә көләһегеҙ, — тине ҡарт тыныс ҡына, — башҡалар ҙа көлөрҙәр. Әммә шуға ҡарап ҡына фәнни факт факт булыуҙан туҡтармы?! Юҡ! Кешеләрҙең көлөүҙән туйып уйланыуҙарын көтөп һәүетемсә йәшәй бирер. Бында телдәрҙең бегөнгө торошо тураһында түгел, ә иң тәүге торошо — *тәүтел* осоро хаҡында бара һүҙ.

-- Тимәк, әлеге башҡорт мин дә, рус Яков Ксенофонтович та, мордва Иван Николаевич та ҡасандыр бер телдә һөйләшкән булып сыға?..

-- Ғалимдарҙың тел төбө шуны төйә...

-- Ғалимдармы, ғалимдар... Әһә, пардон! — Иван нимәнелер иҫенә төшөрҙө лә өйгә елтерәп инеп китте — Энциклопедияның ун һигеҙенсе томын килтереп һалды.

-- Бына, «Ностратик телдәр» тигәнен ҡысҡырып уҡығыҙ.

-- Әһә, күренекле совет ғалимы А.Б. Долгопольский мәҡәләһе икән дә, — тине ҡарт, Иван асҡан биткә күҙ текләп. Басир уҡырға кереште:

«Ностратик телдәр («бер туған телдәр» тигән һүҙ) — телдәрҙең гипотетик макроғаиләһе, ул Евразияның һәм Африканың төрлө-төрлө тел ғаиләләренән (һинд-европа, картвель, семит-хамит, урал, төрки, монгол, тунгус-манчжур, корея, дравид телдәре) тора. Шулай уҡ этруск, элам, япон, нивх, юкагир, чукот-камчат телдәрендә лә ностратик телдәргә ҡарағанлыҡ билдәһе бар. Ностратик телдәрҙең туғанлығы тураһындағы гипотеза егерменсе быуат башында Дания ғалимы Х. Педерсен тарафынан күтәрелеп һәм В. Коллиндер (Швеция), К. Менгес (АҠШ), В.И. Иллич-Свитыч, А.Б. Долгопольский (СССР) тарафынан үҫтерелеп... дәлилле фәнни теория төҫөн алды... Ностратик телдәр туғанлығын өйрәнеү улар төҙөлөшөндәге бәхәсле булған байтаҡ мәсьәләлорҙе сисергә мөмкиилек бирә...»

-- Һе, иптәштәр, шундайын айырым-айырым телдәр — бер туған! Бына һеҙгә, кәрәк булһа, тәғлимәт! Был бит ҡасандыр ер йөҙөндә тулы интернационал булған тигән һүҙ! — Иван туҙғыу сәс күбәһенә биш бармағын батырҙы.

-- Беҙҙең ҡара аҡыл менән уйлағанда, шулай булып сығалыр... тәүтормош-интернационал... — Яков Ксенофонтович зиһенен йыйҙы. — Йә, ярай, башлаған һүҙҙең осона сығайыҡ, ағай-эне. Нимә тураһында ине әле? Ә, эйе, янсыҡтарҙағы тәре һүрәте хаҡында... Эйе, икебеҙҙең дә тәмәке янсығында иш биҙәк — тәре һүрәттәре күреп аптыраныҡ беҙ... Башҡорт дуҫым менән шунан һуң үҙебеҙҙең ауылдар, ер-һыуҙар, ғөрөф-ғәҙәттәр тураһыыда уңайы тура килгән һайын фекер алышыр инек. Ҡайһы бер ҡыҙыҡ деталдәр иҫтә ҡалған: әйтәйек, уларҙың башҡорт ауылында ла, беҙҙең рус ауылында ла яҙ айында йылына бер үткәрелә торған боронғо йола бар — ҡыш буйына йыйылып килгән сүпте яғыу. Серек һалам, сабата, ярыҡ тағараҡ — көллөһө утҡа оса...

-- Минең әсәйем әле булһа шул йолаһын атҡара, — тине Басир. — Өйҙә бер ҙә иҫке-моҫко әйбер тормай. Яға ла, килер ҡазалар шуның менән бөтһөн, тип доға ҡыла...

-- Ул йоланы «собутка» тип атайҙар...

-- Дөрөҫ. Беҙҙә лә ул «сүп — утҡа!» була инде! — Басир шаян йылмайҙы. — Сүп-утҡа — «собутка»...

-- Донъяның зур академиктары әле булһа шул йоланың төбөнә туҙ ҡуя алмай аҙаплана — мәғәнәһен төрлөсәләп аңлатырға тырыша[18]... — Яков Ксенофонтович көлөмһөрәне. — Ә беҙ уны башҡорт дуҫым менән баяғы иҫәүән заманда ук башҡорт теле аша асыҡ тоҫмалланыҡ: әле генә һин әйткәнсә, «сүп — утҡа» (йәғни сүп-сарҙы утҡа яғыу) була икән шул... Башҡорт дуҫым менән беҙҙең тағы ла бер кескәй асыш: үҙебеҙ һуғышып үткән славян ерҙәрендә бик күп изге «Ҡыҙ түбә», «Ҡыҙ тау»ҙары («Девичья гора», «Девин бугор») осраттыҡ та тап шундай уҡ түбә-тауҙарҙың минең Рәсәйемдә лә, уның Башҡортостанында ла һәр ауыл янында, тип әйтерлек, булыуын хәтерләнек.

-- Эйе, беҙҙең ауыл ҡаршыһында ла бар ул Ҡыҙтүбә...

-- Беҙҙең рустар ҙа, һеҙҙең башҡорттар ҙа яҙғы йәмле май айҙарында туғыз көн буйы[19] шул тау-түбәләрҙә йыллыҡ үрсем теләп Ер-әсәгә табынып, төрлө ҡорбандар салып, уйнап үткәрер имеш... Ғалимдар әле лә ошо изге түбәләрҙең «Ҡыҙ» («Дева») атамаһының ҡайһылай килеп сығышын уңышһыҙ төпсөнһә лә[20], заманында башҡорт дуҫым менән мин уны рус һәм башҡорт телдәре аша анһат ҡына аңлаштыҡ: «Ҡыҙ-Түбә» — иҫке башҡорт телендә «Ҡос-Дөбә» әйтелеп, һуңынан шул ике быуынлы һүҙҙең тәүге яртыһы (быуыны) башҡортҡа — «Ҡыҙ» («Ҡыҙ-түбә», «Ҡыҙ-тау»), ә икенсе быуыны русҡа «Дева» («Девичья гора», «Девин бугор») төшөнсәһен биргән имеш. Силезия ерендә шундай Костово («Ҡыҙ-Түбә») бар...

-- Шуныһы ғына мәсьәлә булып ҡала, — тип тештәрен йылтыратты Иван,

---

[18] Рыбаков Б. А. Язычество древних славян. М., 1981, 286—289, 293—194, 315—316-сы биттәр.

[19] 10Туғыҙ һаны — ҡатын-ҡыҙҙың 9 ай гөманлы булғандан һуң донъяға яңы йән тыуҙырыу символы. «Туғыҙ» тигән һүҙ үҙе «тыуғыҙ» («тыуҙыр») менән ауаздаш.

[20] 11 Рыбаков Б.А. Язычество древних славян. М., 1981, 285, 301-се биттәр.

— бында кем кемдән үтескә алды икән: рус башҡорттанмы, әллә башҡорт рустанмы?

-- Уныһы мөһим түгел. Мөһиме, баяғы үҙең әйтмешләй, икеһенең кендектәре берешлегендә... Мин хәҙер рәссам иптәште, моғайын, ҡыҙыҡһындырған икенсе бер һорауҙы ла тоямын: «Нисек итеп йәшлек-иҫәрлек шөғөлөнә һаҡал ағартҡансы тоғро ҡалдығыҙ?» Шулаймы? Яуап бирәм: уттыһыуҙы бергә кискән шул йән дуҫым менән нәҙер әйтешкәйнек — иҫән-имен илгә әйләнеп ҡайтһаҡ, поптарҙың һәм муллаларҙың, алпауыттарҙың һәм байҙарҙың беҙҙе үҙ-ара ыҙғыштырмаҡҡа уйлап сығарған уйҙырмаларына ҡаршы көрәшергә, ғүмер буйына рус менән башҡорт туғанлығын асыҡларға, бөтә көстө биреп уны нығытырға. Фажиғәле һуғыш юлдары беҙҙе Силезияға олаҡтырҙы, мин шундағы баяғы Костово («Ҡыҙ-түбә»!) тигән изге тауҙың тупрағына йән дуҫымды ерләнем, икебеҙҙең нәҙергә мәңге тоғролоҡ һаҡларға ана шунда ант иттем... Йә, ярай. — Йәшкәҙегән күҙҙәрен ситкә борҙо ҡарт. — Иванушка, ҡәҙерлем, төшөр инде минең ғәмәл дәфтәрен ҡултыҡ аҫтынан!

-- Баш өҫтө, Яков Ксенофонтович. — Ҡатырғы тышлы оло контора кенәгәһе бер ҡулдан бер ҡулға күсте.

-- Бына ул... Мин был фолиантҡа, беләһегеҙме, ҡайҙа юлыҡтым? Баяғы Иванушка әйткән Рязань өлкәһендәге бер сиркәүҙең манараһын һиплəгәндә. Урындағы ҡарттар һүҙе буйынса, революцияға ҡәҙәр ул сиркәүҙә граждандыҡ фамилияһы Башкирцев тигән поп булған, алыҫ ата-бабалары — христиан динле башҡорттар, ә был кенәгә ана шул поптың үҙ ҡулы менән яҙып ҡалдырған ҡомартҡыһы, имеш. Шуныһы ҡыҙыҡ: ул башҡорттар тоҡомо ҡасан һәм ҡайһылай христиан динен ҡабул иткән? Үҙҙәре теләпме, әллә көсләп суҡындырылғандармы?.. Быларын мин һеҙгә әйтә алмайым.

— Уларын мин әйтә алам. — Басир яҡташы Сергей Абросимович биреп ебәргән әлеге хикмәтле китаптарҙы бер тына аҡтарғанда ҡыҙыҡлы мәғлүмәткә тап булғайны, һуңғы заманда иҫке тарих ифрат сәмле мәғәнәгә өлгәшеп, мәжлестәрҙә шул хаҡта йыш һүҙ ҡуҙғалғанға күрә, киләсәктә берәй урында мин дә борсаҡты эре бүрттерермен тип, киң ғәләмгә билдәһеҙ был фактты, студент ғәҙәтенсә, хатта ятлап уҡ алғайны. Аллаһы тәғәлә рәхим ҡылған шул форсатты ҡулдан ысҡындырмаҫҡа, йәшлек ялҡыны менән мәсьәләне бер тына әйләндерҙе лә һалды: — Урта быуат гәрәп географы һәм сәйәхәтсеһе әл-Ҡазвини әҫәренең 1413-14 йылдарҙағы күсермә нөсхәһенән күренеүенсә, ул осорҙағы башҡорттар донъялағы «төрки телле иң ҙур халыҡ» һаналып, бер өлөшө — мәжүси, икенсе өлөшө — мосолман, ә өсөнсө «күпселек өлөшө христиан» динен тотҡан, шул «күпселек христиан башҡорттар» араһында мосолман башҡорттар бер төркөм генә тәшкил иткән, ә бөтәһе өҫтөнән башҡорттарҙың «бик ҙур ғәскәрле батшаһы» идара ҡылып торған. Хәҙерге мосолман башҡорттар, тимәк, боронғо күпселеге христиан динле башҡорттарҙың араһындағы «бер төркөм» генә мосолмандарҙың тоҡомдарылыр улар[21].

[21] 12 Абд-Рашид ап-Бакуви. Сокращение (книги «о памятниках») и чудеса царя могучего. М., 1971, 111-се бит.

— Бына һеҙгә кәрәкһә!.. Башҡорттарҙы борондан уҡ мосолман халыҡ тип күнеккәс, әлбиттә, был мәғлүмәт ҡолаҡты ярып керә-кереүен... Әммә бына был иҫке фолианттағы шундай уҡ сәйер мәғлүмәттәрҙе аңларға ул күпер һала, минеңсә. — Ҡарт кенәгәһен асты. — Беҙҙең славян вязын һеҙ, бәлки, еңел танымайһығыҙҙыр. Бына, уҡыйыҡ әле. Изге батюшка, урыны ожмахта булғыры, боронғо монахтарҙай, аҙ-маҙ ғалимыраҡ та булған, буғай, шайтан алғыры, бына нимә тиеберәк башлай бит хикәйәтен:

«Минең алыҫ бабаларым — башҡорт халҡы тарихына ҡарата ҡай бер сығанаҡтар.

Мәғлүм булыуынса, башҡорттар VII быуаттан уҡ Иҙел— Урал аралығында һәм Кама үрендә йәшәй, ә XII быуатта Кама үрендә һәм Ағиҙел буйҙарында уларҙың бернисә ҡалаһы булғанын да беләбеҙ. Башҡорт ҡәбиләләре әүәле болғарҙар, унан ҡыпсаҡ, нуғай союздарына кереп, Көнсығыш Европаға ла бик күптәндән барып сыҡҡан. Улары инде X быуатта уҡ «билярус» исеме менән мәғлүм...» — Ҡарт китаптан айырылды. — Ишетәһегеҙме, «билярус»!.. Хәҙерге славян белорустарҙың да, Болгариялағы славян болгарҙар кеүек үк, һеҙҙең башҡорт нәҫеленең бүләр-биләр ҡәбиләһенә ҡатнашлығы булғандыр, тим. Донъяла бит сап-саф ҡына ҡанлы бер генә милләт тә юҡ — бөтәбеҙгә лә бөтәбеҙ кереп ултырган, ҡатнашҡан... Быны башлап мин түгел, ә һеҙгә таныш яҙыусы Сергей Абросимович әйтте миңә. Ғайса пәйғәмбәр тыуған замандарҙа уҡ төрки ҡәбиләләр башҡа ҡәбиләләр менән аралашып йәшәгән, ә дүртенсе быуатта уларҙың бер өлөшө Атилла-батша етәкселегендә көнбайышҡа табан Уралдан ҡубынып китеп, Бискай ҡултығынаса барып сыҡҡан, тип һөйләгәне иҫемдә. Ә ул ҡорҙашым, беләһегеҙ, тарихи китаптар, архив документтары менән эш итә. Ҡыҙык хәбәр һалдыммы?

-- Был иһә, һеҙҙең рустар әйтмешләй, һыуға һәнәк менән яҙылған, буғай, — тине Басир. — Ғалимдар тикшереп, төбөнә туҙ ҡуймай тороп, ундай имеш-мимештәргә ышаныуы ҡыйыныраҡ, ти торғайны минең атайым бахыр...

-- Шулай ҙа, шулай ҙа... Йә, ярай, уҡыуҙы дауамлайыҡ:

«XII быуатта улар, башҡорт ҡәбиләләре, бөгөнгө Венгрияның төньяғында ла йәшәй...

Башҡорттарҙың Рязань, Темников, Тамбов тирәләрендә йәшәүҙәре тураһында ла рус йылъяҙмаларында нигеҙле мәғлүмәттәр бар. Шацк ҡалаһы архивында, мәҫәлән, 1539 йылда кенәз Кугушевҡа Темниковта йәшәгән башҡорттарҙан һәм мишәрҙәрҙән яһаҡ йыйыу хоҡуғы бирелгән грамотаның күсермәһен күрәбеҙ[22]. Тимәк, бында башҡорттар Башҡортостан Рәсәйгә ҡушылыуҙан күп элгәре үк рустар менән аралашып йәшәгән! Бер тарихсы: Шацк өйәҙендәге Вышинский монастыры эргәһендә XVII быуат аҙаҡтарында әле «Башҡорт тауҙары» барлығы билдәле ине», — тип хәбәрләй. Күрәһегеҙ, XVI быуатҡа тиклем күп элгәре үк Темников, Шацк тирәләрендә мажарҙар (мишәрҙәр) менән бергә башҡорттар ҙа донъя көткән һәм уларҙың унда ултыраҡ тормошта көн күреүҙәре бәхәсһеҙ. Беҙгә мәғлүм булыуынса, юғарыла телгә

[22] 13 Известия Тамбовской архивной комиссии, XXII, 31-се бит.

алынған грамотаның эйәһе Кугуш мырҙаның алыҫ олатаһы Ока йылғаһының буйына 1298 йылда күсеп барып урынлаша[23]. Ихтимал, башҡорттар шул осорҙа уҡ унда йәшәгәндәрҙер. Ҡыпсаҡтарҙың бер килкеһе «башҡорт» исемле булыуы ла — ошо башҡорттарға барып тоташалыр тип уйларға нигеҙ ул. Көнсығыш Европала башҡорттарҙың йәшәүҙәре тураһында иғтибарҙы йәлеп иткән дәлил бар. Унынһын Әүлиә Чәләбиҙең «Сәйәхәтнамә»һендә осратабыҙ[24]. Унда «башҡорт» атамаһы юҡ-юғын, ләкин «һәштәк» (истәк) тигән ҡәбилә, халыҡ бар. Шуны аңлатыусы бер ғалим: «Элегерәк осрап килгән «крул» атамаһының һәм «хещдек» һүҙенең серенә һаман төшөнгәнебеҙ юҡ әле», — ти. Был атама Чәләбиҙә беренсе тапҡыр 173-сө биттә — Львов ҡалаһы тураһында яҙғанында төрлө халыҡтар исемлегендә килтерелә: «москвиты, краковцы, хещдек». Шул уҡ атама тулыраҡ, аңлайышлыраҡ итеп тағы ла 12-се бүлектә (214-се бит) бирелә: «Һәм ғәзими ханға[25] Мәскәү һәщдәк-мосолмандарҙан ошондай хәбәр килде...» Был осраҡта мосолман һәщдәктәрҙе, бигерәк тә Мәскәүгә итәғәт ҡылған булараҡ, беҙ «үстәк», «истәк» (башҡорттар) тип ҡабул итергә хаҡлы. 1805 йылда мосолмандарҙың «Һәфтиәк» тәфсирен яҙыусы башҡорт Тажетдин Ялсығол үҙен «әстәк» тип тә, «башҡорт» тип тә атауы ла, беҙҙеңсә, ошо һәщдәккә ҡайтып ҡала.

Был тарихи сығанаҡтар башҡорттарҙың Тамбов, Рязань өлкәләрендә кәм тигәндә XV—XVI быуаттарҙа уҡ (Башҡортостан үҙе теләп Рәсәйгә ҡушылғанға тиклем үк!) ултыраҡ тормошта йәшәүҙәрен иҫбат итә торған дәлилдәр улар...» — Яков Ксенофонтович «ғәмәл дәфтәре»н япты, ситкәрәк этәреп ҡуйҙы. — Ә артабан, һеҙ, юғары мәғлүмәтле кеше, изге батюшкаларҙың ғәҙәтен беләһегеҙ, бөтөнләй беҙгә кәрәкһеҙ нәмәләр теҙелә: нисек итеп Уралдағы ҡалған башҡорттарҙы ла суҡындырыу заруриятының әһәмиәте тураһындағы шыр-дини трактат... Йәғни әйҙәгеҙ, рәссам иптәш, — табын хужаһы соҡортайҙарға эсемлек өҫтәне, — ата-бабалар еренең бөтөнлөгө, халыҡтар берҙәмлеге — Совет иле тип аталған дөйөм Әсәй-Рәсәй өсөн тотайыҡ!

-- Булдыҡ иҫән!

-- Бәләкәстән үк рустар араһында йәшәп, мин ябай рус халҡының хайран киң күңеллелегенә, үҙен бер ҙә өҫтөн ҡуймай, дорфаланмай, теләгән бер халыҡты ла тиң күреп йәшәүенә, башҡа халыҡтарҙы кәмһетмәүенә, йәғни зәһәр шовинизм һәм милләтселек сирҙәренән үҙен таҙа тотоуына һоҡланып бөтә алмайым — бөйөк рус халҡы менән дуҫлыҡ йәшәһен! — тине Басир.

-- Ә мин башҡорт халҡы өсөн күтәрәм! — Иван үҙенең тосы менән нығытты. — Э-э-эх! Магаданда ер аҫтында таш сапҡанда башҡорт дуҫым бар ине!..

-- Бөтә-бөтә халыҡтар ҙа йәшәһен — һәммәбеҙ ҙә йәшәйек! Сөнки халыҡтарҙың яҡты киләсәгенә -- ҡояш иленә тылсымлы күпер көллөбөҙҙөң йөрәктәре аша һалына!

---

[23] И.Н. Смирнов-Мордва. Историко-этнографические очерки, Саранск.

[24] 3-сө параграф, 111-се бүлек.

[25] Ғәзими хан — бөйөк хан (башҡорттар буйһонған рус батшаһы тураһында бара һүҙ).

-- Эйе, берлектә — көрлөк, туғанлыҡта — бәрәкәт, тип әйтә беҙҙең бер мәҡәл, тип ныҒытты Басир.

-- Ә беҙҙең бер бик ҡыҙыҡлы риүәйәт... – тип башлағайны ла ҡартлас, өнө өҙөлөп ҡалды:

-- Атай! Оят түгелме һеҙгә, ошолай көпә-көндөҙ... — Артҡапҡанан Пушкин томын тотҡан китапханасы ҡыҙы инеп килә имеш. «Һә!» тип стаканын йәшергәйне телмәрсе, табындаштары шарҡылдап көлдө.

-- Ғәфү итегеҙ, -- тине инеүсе, Басир тарафына йәһәт күҙ йүгертеп. – Ни тигәнем кеүәҫ кенә икән дә.

-- Был минең ҡыҙым — *Любовь Яковлевна*, — тине ҡарт. — Күрәһегеҙ, йәшел йылан һутының тере дошманы... Таныш булығыҙ: Басир Дәүләтбаев тигән ап-айыҡ Урал бөркөтө. Художник.

Басир, сихри көскә тарығандай, һылыуға текләп ҡатты: шул үҙе — айлы төндә аҡ ҡайын төбөндә бәпес һикерткән Аҡһылыу!

-- Һаумыһығыҙ. Кисерегеҙ, әллә ҡайһылай килеп сыҡты... — Ике бите бешкән сейәләй ҡыҙарып, Басирға ҡул бирҙе лә атаһына бороллдо. — Мин ҡайтырға ыңғайланым. Һин дә оҙаҡлама инде, йәме? — Ҡунаҡ егеттең төбәлеп баҡҡан ҡарашынан баҙабыраҡ, артҡапҡанан йәһәт кенә олаҡты. Ирҙәр, шым ҡалып, һулыштарын алдылар, ихатаға ҡапыл ғына саф ел көйәҫе ҡағылып үткәндәй булды.

Тупыр-тупыр ат тояҡтары уларҙы, һуштарын тамам йыйып, оло ҡапҡаға бағырға мәжбүр итте: атынан ырғып төшөп, теҙгенде сөйгә элеп, ковбойҙарса кимерсәктәй ҡатынан кейенгән тарамыш егет йораты елтерәп килеп инде:

—Сәләм намыҫлы йәндәргә!

-- Беҙҙән дә ҡаршы сәләм, намыҫлы йәндән ишетһәм. -- Сәләмләшеү сәйер башланды шулай.

-- Ә һин, Иван, атаңдан алда атка атланмай тор әле. – Күҙҙәрен аҡайтты егет.

—Ә һин, Платоша, яллы-койроҡло ат тип, һурғыс башлыға атланып алғанһың, ахыры.

Тегенең иҫе китмәне:

— Яков Ксенофонтович, ниңә мине ҡунағығыҙ менән таныштырмайһығыҙ?

-- Бик ҡимматкә төшөп ҡуймағайы был танышлыҡ!

-- Күп лыҡылдайһың, Иван! — Егет Басирға ҡул һондо. — Мәгеҙ, услағыҙ бишлегемде! Платоша тип йөрөтәләр мине — килеп сығышым ошо затлы урамдан. Ә һеҙ, күрәм, теге ижад йортоноҡо — бумала батшаһы булаһығыҙ.

-- Хаҡ һүҙ.

-- Платоша һәр саҡ хаҡ һөйләй! Яков Ксенофонтович, тамаҡ кибеп китте бит әле, хаҡ әйтәмме?

Тегеһе ҡул һелтәне:

—Һалып бир, Иван, шуға -- күҙенән тултырып бирҙе!

-- Һалынғанын алһын.

Егет кеүәҫ стаканын еҫкәне лә ерәнгәндәй ситкә атып бәрҙе:

-- Ә мин һеҙҙе ысын ирҙәр икән тип уйлағайным. Бынау ҡәҙерле ҡунаҡ алдында оят. Имгәк быҙау икәнһегеҙ.

-- Телеңә һалышма, Платон. Көçәгәнеңде кеçәңдән эҙлә.

-- Кеçәһенән елдәр иçеп тора шул, дөрөçмө, Платоша?

-- Вәт рәхмәт төшкөрө, күрәҙә икәнһегеҙ! Бир бишлегеңде, бер өс көндән кире килтереп еткерермен, Яков Ксенофонтович.

-- Бер өс көн тигәнең — ҡыҙыл ҡар яуғансымы? — Иван кирегә һаплауын дауамланы.

—Ә һин, Ванечка, үҙеңдән олораҡтар һөйләшкәндә тик ултыр. — Көтмәгәндә ҡойма аша ҡолаҡты ярырҙай ҡысҡырҙы. — Тррр, Аҡбәкәл, ниңә сапсынаһың? Әллә юҡһа бынауы алмағасҡа килтереп бәйләгәнде көтәһеңме?! — Иванға ажырайҙы. — Ә һин, бик тә телең ҡысытһа, йыуынтыңды һемер ана! Йә, буламы, Яков Ксенофонтович? Юҡһа, Любаша артынан ҡыуалатам! Хәҙер, Аҡбәкәл!

-- Их-ма! — һуңғы янау тәьçиренә бирелгән Яков салбар кеçәһенән бишлекте һурып алып тотторҙо, шуның менән теге лә юҡҡа сыҡты. Тупыр-тупыр тояҡ таҡмаҡтары алыçлашып һүрелде. Иван ҡапҡа яғына бер төкөрҙө:

-- Күпме әйтәм! Төпһөҙ ҡойоға ташланым тип иçәплә ул аҡсаңды!

— Иванушка, кешене нахаҡҡа рәнйетмә, — тине еңел һулап ҡарт. — Ул әйттеме — бөттө, өс көндән килтереп еткерәсәк. Таш яуғанда ла. Нимә-нимә, ә шул яҡшы сифатын кире ҡағыуы ҡыйын. — Басирға аңлатты. — Тап һеҙҙең башҡорттоҡолай, атһөйәрҙәр бар беҙҙең арала ла. Колхоздың атлы спорт клубы эшләй — тыуа-тыуғандан шунда ат ҡарай Платон. Башҡорт кеүек үк ат йәнле.

-- Эт йәнле тип әйтер инем мин уны.

-- Иванушка, үҙ гонаһтарыңды онотма... Их-ма, -- елкә соҡорон ҡашыны, -- бер Платоша ғына түгел ауылда... Шаҡшы икәнен дә белеп торабыҙ, әммә иҙеү аçтарына ҡойопмо ҡоябыҙ шул...

-- Ҡоймай ҡара... беҙҙең тынғыһыҙ заманда... — Иван да көйөнөп ҡуйҙы. — Любаһы ла, етмәһә, шуны аңламаған була...

-- Любовь Яковлевна был тәңгәлдә хаҡлы, — тине Басир, айлы төндә аҡ ҡайын төбендәге балталы Иванды, сарылдап илаған баланы һәм Аҡһылыуҙың әсенеп әйткәндәрен бер юлы хәтерләп. — Замана бында тамсы ла ғәйепле түгел, эйе!

-- Ә мин нимә тимен һуң?! —Ҡарт ысын-ихлас күңелдән өҙгөләнде. — Бына һеҙ ҙә, күреп торам, минең ҡыҙым кеүек үк, беҙҙе ҡаты ғәйепләргә әҙерһегеҙ...

-- Юҡ, мин бит... – Аҡланырға иткән һымаҡ ине лә, ҡартлас уны бүлдерҙе:

-- Ләкин Иван менән минең, кемдер әйтмешләй, алтын ҡуллы балта оçталарының, кыçтау тиреһенә инеп йәшәп ҡаранығыҙмы һуң, туғаным?!

-- Һе! Атайым бахыр әйтмешләй, «оҙон аҡса» артынан ҡыуалапмы?

-- Эх, аҡсаламы ни эш!

-- Ал юҡ, ял юҡ — ас һағаҡлы балтаңды биләңә ҡыçтырып, ил буйлап йөрөйһөң ҡыҙырып... — тип ҡеүәтләне Иван.

-- Алтын ҡулдарға тыуған ояла ла табылыр ине эш.

-- Эш етерлек ул. Баштан ашҡан. Ләкин ниндәйе, тип һорайым мин! — Ҡарт, ҡапыл йөрәкһеп китеп, верстак тирәһендә йөрөнөп алды. — Ләкин ниндәй эш, тип һорайым мин! Әйтәйек, рәссамлығығыҙҙы йәғни киндергә бумала йөрөтөүегеҙҙе ташлап, киндер туҡыусыға әүерелә алыр инегеҙме һеҙ?! Ә бына Иван менән мине, — аҫыл биҙәк һалып семәрләнгән таҡтаһын ҡулына алды, — бына ошонан айырып, ҡайҙа етте шулай мүкләп-сутлап бүрәнә һалыусыға әүерелдермәкселәр ине.

-- Булмаҫ. Һеҙҙең кеүек алтын ҡуллы оҫтаны...

-- Башығыҙ йәш әле, туғанҡай... Бына шунан һуң миңә, пенсия йәшем етеүгә һылтанып, колхоздан янтайыуҙан, ә Иванға, колхоз уставы ҡушҡанса, отходной һорап алып, кәсепкә сығып китеүҙән башҡаһы ҡалманы... Әммә көн дә, көн дә ейһәң, танһыҡ ҡалъя ла еләтә. Ә оҫталыҡ ҡорамалдарыңды йөкмәп ауылдан-ауылға, өйҙән-өйгә һәлпәндәп ҡыҙырыи йөрөп ҡара... Бик төшөмлө булһа ла, майлы бутҡа түгел шул: кешене ул ялҡыта, күңелен фәҡирләтә — эсергә лә, алдарға ла, урларға ла өйрәтә, тиер инем мин... Бына шулай, ситтә аҙып-туҙыл йөрөү туйҙырғас, ауылға ҡайтып, Иван менән ауылдаштарға ялланып эшләй башланыҡ. Колхоздың аяҡҡа баҫып, хәлләнеп килгән мәле ине: йорт һайын ҡура тулы мал-тыуар, бура тулы иген, ә аҡсаны крәҫтиәнең кеҫәһенә бөкләмәй һалып йөрөттө. Елегенә май ултырғас ни, матурлыҡ тураһында ла ҡайғырта башланы әҙәм балаһы һәм Яков ҡарт менән Ивандың алтын ҡулдарына ла яҡты көн килде: яҡташтарға — һөйөнөс, түрәләргә һабаҡ булһын тип, үҙебеҙ тыуған ике аулдың үҙәк урамдарын өр-яңынан биҙәп-биҙәкләп һалдыҡ.

-- Ғәжәйеп урамдар! — Тел шартлатты Басир. Һоҡланып ҡарап уҙҙым.

-- Шулай тиһегеҙ ҙә бит, етәкселәр улай тимәне әле... — Юнышҡы араһынан башы бүлтәйеп сыҡҡан зәһәр йәшел шешәне тибеп осорҙо. — Их! Үҙебеҙҙе үҙебеҙҙән айырыусы ошо хәмер, кешеләрҙе кешеләрҙән айырыусы дин хәмере әгәр ҙә ки был донъяла булмаһа!

-- Дөрөҫ! Икеһе лә опиум — халыҡты ҡан илатҡыс!

-- Әгәр ҙә шулар булмаһа, тим, ҡайһындай ҙа тигеҙлек, татыулыҡ, туғанлыҡ сәскә атыр, халыҡ менән халыҡтарҙың араһына ла ҡотҡо һалыусы ала-ҡола ҡоҙғондар инә алмаҫ ине! Юғиһә бит эш нимәгә барып етте: кешелек донъяһы үҙен үҙе — синыфтарға бүленеүе етмәгән! — дингә, тәндәренең төҫөнә, милләттәренә ҡарап айырып, ғәмәлдә үҙенә үҙе бысаҡ сала — бер юлы Ер шарын да, үҙен дә юҡ итеп ҡуймағайы, тим... Их, эс серҙәремде бушатып, Һөйләйемсе бер фәһемле риүәйәт, тыңлағыҙ!..

## ӨС ТАҒАН ХАҠЫНДА ХИКӘЙӘТ

Борон-борон, бик боронғо замандарҙа булған, ти, был хәл-әхүәл. Бер диңгеҙҙең яр яҡаһында өстаған — Айыу, Ҡондоҙ һәм Дельфин йәшәгән, ти. Өсәүһе өс төбәктә, өс нәүбәттә торһа ла, өс төрлө тормош ҡорһа ла, өсөһө тиң бер һыу эсеп, бер һауанан тын ала, йәндәре гел бер тирәлә генә урала икән. Эштән талып, зәңгәр диңгеҙ ситендә ял итергә туҡтаһалар, күҙҙәре гел бер

нөктәгә генә төбәлә имеш. Өсөһө тиң бер ыңғайҙан, шул нөктә яғына күрһәтеп: «Их, шунда етергә ине, шунда йәшәргә ине!» — тип, өсөһө бер ауаздан бер һүҙ ҡысҡырып ебәрәләр икән дә! Ә ул яҡта, зәңгәр диңгеҙ аръяғында, ҡыҙарып Ҡояш байый ҙа офоҡ ситендә алһыуланып һүрәтләнмеш гүзәлдәрҙән-гүзәл ил — Ҡояш иле булған, ти.

Бер көн шулай диңгеҙ ситендә хыялланып уйланғас, есөһөнөң дә башына бер юлы бер аҡыллы уй төшмәһенме:

— Туғандар, ниңә беҙгә, өсәүләшеп, бергә диңгеҙ кисмәҫкә, арғы ярға күпер һалып сыҡмаҫҡа, ҡояш иленә етмәҫкә?!

Шулай тигәндәр ҙә, ти, өсөһө тиң бер юлы ең һыҙғанып, эшкә лә керешкәндәр. Ҡондоҙ, үткер бысҡы тештәре менән кимереп, ағас йыға ла юна, Айыу бүрәнә түңәрләтә, Дельфин уларҙы һыуға тарта; һыуға төшкән бүрәнәне Ҡондоҙ килтереп еткерә, Дельфин, һыу төбөнә сумып, сыуай төптәрен турылап тотоп тора, ә Айыу йән көскә сыуай ҡаға икән. Бер һүҙ менән әйткәндә, өсөһө лә үҙ урынына мас килгән, бигәйни үҙ бурыстарын әсәнән үк белеп тыуған. Шулай берҙәм тырышып тир түгә торғас, диңгеҙ аша рәт-рәт сыуай ҡағылып, ҡояшлы арғы ярға ла яҡынлағандар, инде күпер өҫтөн түшәйһе генә, түшәм осон ярға тоташтыраһы ғына ҡалған, ә шунан һуң, йырлай-йырлай, күмәкләшеп тә берләшеп, диңгеҙ аша һалынған күперҙән Ҡояш иленә күсен дә күсен,әйҙә!

Башлаған эш — бөткән эш, тигәндәй, оҙаҡ уйлап тормағандар: күпер өҫтөн өсәүләшеп түшәй ҙә башлағандар. Эш тигәнең бик тә ҡыҙып, ырамлы ғына барғанда, ҡаршы ярҙар бына-быңа тоташырға торғанда, әллә ҡайҙан ҡоторонҡо ел ҡубып, ишетелмәһенме зәһәр ағыулы тауыш:

—Хе-хе! Өсәүләшеп күпер һалабыҙ, тиһегеҙ инде, ике ярҙы тоташтырабыҙ, тиһегеҙ инде? Әммә ләкин иң мөһимен уйлап ҡаранығыҙмы? Күпер һалынып бөткәс, көллө кейектәр Ҡояш иленә күсенгәс, күпер һалыуҙың даны кемгә ҡалыр икән?..

Ҡондоҙ, Дельфин, Айыу тауыш килгән яҡҡа бер юлы әйләнеп ҡараған, тауыш биреүсенең кем икәнлеген таныған: үле балыҡ арҡаһын суҡып ултырыусы ала-ҡола Диңгез Ҡоҙғоно икән, ти, ул.

—Беҙ дан тураһында баш ватмайбыҙ, — тигәндәр өсөһө лә.

—Э, алдан ҡысҡырмай тороғоҙ! Һеҙ уйламайбыҙ тиһәгеҙ ҙә, күпер һалынып бөткәс, баш ватыусылар табылыр, иҫегеҙгә төшөрөр.

Был юлы ла өс дуҫ ҡара кискәсә, бик тырышып, бил яҙмай эшләгәндәр, берҙәм генә эшләһә лә, өйҙәренә өсөһө өс төрлө хәүеф-уй йөкмәп ҡайтҡандар, төнө буйы, йоҡлай алмай, уфтап-борһаланып ятҡандар.

Иртәгәһен, эштең иң ҡыҙған мәлендә генә, тағы әлеге Диңгеҙ Ҡоҙғононоң аҫтыртын ауазы ишетелмәһенме:

-- Был күперҙе һалыуын һалаһығыҙ ҙа ул, әммә данын нисек бүлешерһегеҙ?

-- Даны өсөбөҙгә лә! — тигәндәр хеҙмәттәштәр.

-- Э, алдан ҡысҡырмай тороғоҙ! Хәҙерҙән үк кейек-хайуандар араһында һүҙ бара: күпер һалынып бөтөү менән, өсөгөҙҙөң ҡайһыһын иң беренсе күперсе тип танырға?

-- Беҙ күперҙе өсөбөҙ бергә һалдыҡ, өсөбөҙ бер тиң тирләп яндыҡ.

-- Э, бер тиң, тимәйҙәр шул әле. Кейек-хайуандар араһында һүҙ йөрөй: ҡай берәүҙәр был күперҙе һалыуҙың иң мөһиме — төҙ бүрәнә әҙерләү, тиҙәр. Икенселәре — бүрәнәне сыуай итеп көсәнеп ҡағыу, тип ҡыйышалар. Өсөнсөләре — бүрәнәне сыуай итеп ҡаҡҡан саҡта һыу аҫтында төҙләп тотоп тороу, тип еңешәләр...

Был юлы эште көндәгенән шаҡтай иртә туғарып, өс төҙөүсе, уфтай-уфтай, баштары ҡатып ҡайтып киткән. Төнө буйы тыныслана алмай, алпан-толпан йөрөп сыҡҡандар.

Таң-иртәнән таныш тауыш ишетелгән:

-- Хе-хе! Ни эшләрһегеҙ икән инде: өсөгөҙҙөң береһе — һанланырға, икеһе һанланмаҫҡа дусар ителгән, тиҙәр.

-- Һанланһаҡ та, һанланмаһаҡ та, беҙ өсөбөҙ ҙә бергә! — тигәндәр төҙөүселәр.

-- Бергәлеген бергә лә ул, ғәйре төҫтәрегеҙ-тиреләрегеҙ башҡа шул. Һыуҙың йөҙөн көҙгө итеп бағып ҡарағыҙ әле: өсөгөҙҙөң өс төрлө тиреһенән өс башҡалыҡ шаҡырайып күренә!..

Был юлы Айыу, Ҡондоҙ, Дельфин, эшкә лә тотона алмай, яр башында шаҡырайып ултырып, өс төрлөлөк мәсьәләһен алға һөрөп тикшергәндәр, башҡалыҡты бөтөрөү өсөн баш вата башлағандар. Шулай итеп, бөтөнләй уйламаған ерҙән, Ҡояш иленә тырышып күпер һалыуҙы дауам итеү урынына, тире мәсьәләһе өҫкә ҡалҡып сыҡҡан, өсөһөн дә алйытҡан. Иртәнән кискә тиклем туҡтауһыҙ өсәүләп уйлаһалар ҙа, осона сыға алмай, ала-ҡола Диңгеҙ Ҡоҙғоно үле балыҡ арҡаһын суҡып ултырған яҡҡа күҙ атыр булғандар. Ә теге ошоно ғына зарығып көтә имеш.

Ала-ҡола Диңгеҙ Ҡоҙғоно төнө буйы йоҡламай йөрөп сыҡҡан, өс төҙөүсенең өсөһөнөң дә сиратлап күңел ишеген ҡаҡҡан, ҡаса-боҫа ҡолағына бышылдаған.

Иң элек ул Ҡондоҙға килеп ҡотҡо һалған:

— Әгәр ҙә һин булмаһаң, бүрәнә ҡырҡып ташымаһаң, күпер ҙә булмаҫ ине. Ләкин Айыу менән Дельфин, үҙҙәренең олпат кәүҙәле булыуҙарынан файҙаланып, оҫтөнлөктө икеһенә генә ҡалдырмаҡсылар.

Унан һуң Дельфинға барған:

— Ишеттеңме әле һин бер яңылыҡ? Айыу менән Ҡондоҙ, һинең һыуҙа ятыуыңдан файҙаланып, күпер һалыу эшеңде юҡҡа сығарырға, үҙҙәрен генә өҫтөн итеп ҡуйырға маташа, ти.

Айыуҙы ла кәрәгенсә албырғатҡан:

— Ах Айыу ағай, ошо алыптай кәүҙәң менән мәсхәрәгә ҡалмаһаң! Дельфин менән Ҡондоҙ, күперҙе беҙ икәү генә төҙөнөк, ә тайыш аяҡ ҡамасаулап ҡына йөрөнө, тип әйтәләр, ти, бит әле.

Төҙөүселәрҙең өсөһө өс башҡа булып, өс башҡа тыңлағанлыҡтан, өсөһө лә тәрән хәүефкә төшкән, бер-береһе хаҡында: «Ысынлап та теге икәү мине төп башына ултыртырға йыйынамы икән ни?» — тип икеләнеп уйлаған. Өсөһө лә, бышылдап ҡына, ала-ҡола Диңгеҙ Ҡоҙғонона һорау бирә һалғандар:

-- Ни эшләргә?

-- Өсөгөҙгә лә бер үк төҫкә керергә — тиреләрҙе бер төрлөгә әйләндереүҙе шарт итеп ҡуйырға, — тип ҡотҡо ҡойған теге.

Иртәгәһен өс төҙөүсе бер ауаздан берәгәй ҡарар ҡабул ҡылған: ғәйбәткә аҙыҡ бирмәҫ өсөн, араларға ел-ямғыр үткәртмәҫ өсөн, өсөһө лә артабан бер төрлө тирегә төрөнөргә, бер нәҫел төҫөнә керергә — шуның менән берәгәйлекте нығлап мәңгелештерергә. Күпер асыу тантанаһына шул рәүешле килергә һүҙ беркетешеп, Айыу, Дельфин, Ҡондоҙ күперҙе арғы ярға һуҙып тоташтырғандар.

Бына бөйөк тантана көнөндә барса кейек-януарҙар ҙа күрәләр: күпергә арҡыры тартҡан ҡомас таҫма янында арҙаҡлы өс төҙөүсе тора маһайып — Айыу, Ҡондоҙ, Делъфин. Береһен дә береһе менән бутарлыҡ түгел: өсөһөнөң дә үҙ төҫө, элеккесә, әсәнән кейгән тиреһе. Беркетелгән һүҙ барып сыҡмағанға бер аҙ ғына бошоноп, өс төҙөүсе, ҡолаҡтан ҡолаҡҡа ғына, үҙ-ара бышылдаша:

—Шартына килтерелмәгән. Ниңә, кисә һүҙ ҡуйышҡанса, өсөбөҙ ҙә бер төҫ тирелә түгел?

-- Кем ғәйепле?

-- Ғәйеплене табайыҡ!

Күҙгә-күҙ ҡарашып алғас, үҙҙәре үк һорауға яуап та биргәндәр:

-- Һем... Икегеҙ ҙә тирегеҙҙе тунатып ташлап, бынамын тигән йылтыр ҡондоҙ тиреһенә төрөнөп килерһегеҙ, өсөбөҙ ҙә ҡондоҙ булырбыҙ, тип уйлағайным, — тигән Ҡондоҙ.

-- Һеҙ икәүҙе иҫ китмәле шыма Дельфин тиреһенә көпләнә тип аңланым, — тигән Дельфин.

-- «Йылы һөйәк һындырмай» тигән дөйөм мәҡәлдән сығып, өсөбөҙ ҙә майҙай йылы айыу тиреһен үҙ итер тип белгәйнем, — тигән Айыу.

Әммә ғәйбәт теленә аҙыҡ бирмәгәндәр: яңы асылған күпер өҫтөнән Айыу, Дельфин һәм дә Ҡондоҙ, өстағандай берегешеп, бер туғандай ҡосаҡлашып, берҙәм баҫып үткәндәр, Ҡояшлы ярға еткәндәр. Ала-ҡола Диңгеҙ Ҡоҙғоно, өс дуҫтың өс төрлө тиреһенә айырыуса диҡҡәт атып, «әһә!» тип тамаҡ ҡырып ҡалған, үле балыҡ арҡаһында талпынып, ҡанат ҡағып алған. «Былар берегеп яңы эшкә тотонған һайын, тире мәсъәләһен килтереп сығарырмын, ҡолаҡтарына мыжып, араларына ҡотһоҙ ҡотҡо һалырмын да эштәрен тарҡалдырырмын» тип, суҡышын ҡайрап ҡуйған. Ул мәкерйән шуны белеп эш ҡыла: бер кемгә лә, башҡалар менән бер төҫкә кереү өсөн, тере килеш үҙ тиреһен тунатыу еңел түгел; таймаҫтай ҙа өстағанды тайҙырткың килһә, тиреләренә йәбеш — бер-береһен тунаттырырға кереш... Көллө кейек-януар байрам иткән тантаналы көндә, үле балығының өҫтөндә ала-ҡола йән эйәһе ошолай тип ялманған: «Салғый аҫтынан салып, өстағанды тайҙыртырмын, Ҡояшлы ярға илткән күпер быуындарын үҙҙәренән быстыртырмын; ул бысылһа, ек асылһа, үле балыҡтан ғына түгел, Айыу, Ҡондоҙ, Дельфин итенән дә ауыҙ итермен»... Һәм тап шулай булған да: көндәрҙән бер көн берҙәй тире мәсьәләһе өсәүҙең көн ҡаҙағына ҡағылып, оло низағ тыуҙырып, мәңге таймаҫтай өстағанды тайҙыртҡан, тарҡатҡан – бер-береһенә дошман яһап айырған. Айыу ярҙарға беркетелгән бүрәнәләрҙе туҙҙырған да күпер өҫтөндә бейегән, Ҡондоҙ күпер аҫтында сывайҙарҙы бысҡан,

Дельфин уларҙы ауҙарткыс тулҡын тулҡыткан – күпер шатор-шотор итеп Айыу менән ҡуша Ҡондоҙ, Дельфин өҫтөнә ауған да өсөһө лә бүрәнәләр араһында иҙелгән – ала-ҡола Диңгеҙ Ҡоҙғонона ем булған...

Хикәйәттең хикмәтле тел төбө шуға ишара: төҫтәр төрлөлөгөнә киҙәнмәгеҙ! Төҫтәр төрлө булһа ла, төҫ биреүсе Ҡояш ерҙә бер төрлө: һәр кемгә ул бер төҫ менән яҡтырта, һәр кем уға төҫтәр йәйғоро тыуҙырған дөйөм күперҙән үтә...

## АЛТЫНСЫ СӘХИФӘ

Обкомдың оҙон табутҡа оҡшаш габаритлы ҡарайылтыр «Волга»һына ултырғас та, Мотал Шаһибәрәковты үҙ-ара сәнсешеүсе ҡаршылыҡлы хәүефтәр сорнап алды, урыҫ туғандар әйтмешләй, күңеленең нескә ҡылын «ҡара бесәйҙәр тырнаны». Ни өсөн был Бикләмешев уны ниндәйҙер тресҡа алып китте, таң тишегенән саҡыртыуы шуның өсөн инеме? Тырнаҡтарына ҡапҡан сысҡанды һелккеләүсе бесәй уйыны түгелме был?.. Һәр хәлдә, ҡырҡ йәшенә лә етмәҫ элек ҡырҡҡа төрләнде ҡорҙашы Ҡыҙыл башҡорт, аңлауы ла ҡыйын була башланы, элекке дуҫлыҡ хистәре лә төтөн һымаҡ таралып Күккә осто. Хәйер, булдымы икән һуң әле ул ысын дуҫлыҡ?!.

Трест идаралығы ҡаланың арғы башында урынлашып, арауыҡтың эт эсәгеләй оҙон юлы ике тарафҡа бер туҡтауһыҙ ағылыусы «тәгәрмәсле шайтандар» менән тыңҡысланып тулғанлыҡтан, шофер иҙел аръяғындағы урауҙан алдырҙы ла был ифрат дөрөҫ ине. Шофер менән йәнәшә төпләнгән Димустан, радиоалғысты көйләп, донъя яңылыҡтарына ылыҡты, ә уның арҡа тәңгәлендәге яҙыусы осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарына күмелде. Әле бер, әле икенсе ярға һуҡлыҡты зиһен ҡанаттары. Ыңғырсаҡ Уралъский мәсьәләһе лә тынғы бирмәй йөҙәтте. Обком секретарына еңел дә ул, партиябыҙ бойорғанса, һәр талант эйәһен иғтибар менән сорнағыҙ, тип кенә әйтеүе. Бына үҙең иғтибарлы булып ҡара! «Таш йөрәкле таш бәғер...» -- Моталғамы япһара ул? Ялан ҡул ғына тейгәндә лә ҡанһырап торған саҡтары бар ине бит... Хәҙерге заман йәштәрен дә әйтер инем инде. «Ғашиҡ йәндәргә һалам ҡыуыш та ожмах һарайы», — тигән ата-баба мәҡәлен оноталар, йүнле фатир юҡ, тигән булып, профсоюздың теңкәһенә тейәләр, юҡ ҡына сәбәп арҡаһында бер-береһенең яҙмышын емерәләр. Хәйер, күңел тигән нескә ҡылды өҙҙөртмәккә күсәк менән һуғыу ғына мотлаҡмы ни? Үҙ мөхәббәт һарайыңдың, һине таш бәғергә әүерелдертеп, ни сәбәптән генә ҡыйралып емерелеүен оноттоңмы ни, Мотал? Бына яңы асыҡ тоя башланың: тәүге ҡайнар мөхәббәтте юғалтҡанда, хыялдарың боҙ булып ҡатҡанда яралалыр таш бәғер...

Хәҙер инде ҡырҡҡа етеп төрләнгән, ҡырау юлаҡтары ике сикәһен көлһөүләткән Мотал Шаһибәрәков, сыуаҡ иртәләрҙә тороп, фатирының балалар баҡсаһына ҡараған балконына сыҡҡаны һайын, йәшлек-йүләрлектә тороп ҡалған төпкөл-ҡараңғы төбәктең район ҡунаҡханаһын, ҡарҙай ап-аҡ йәймәле тар

яҫтыҡта күҙҙәре йылтырап көлөп ятҡан Ниагара шарлауығын, ҡыҙҙың йыш-йыш һулыш алып ҡалҡынған ап-аҡ күкрәген һәм тыуасаҡ бала хаҡындағы эскерһеҙ-пак хыялдарын хәтеренә төшөрә лә, өй алдында саф шишмәләй сылтыраған күмәк сабый тауыштары куңеленә һарылып, иҫергәндәй, еңелсә генә башы зыңҡып әйләнә... Гөж-килә балалар баҡсаһы, күбәләктәр осоп уйнаған майҙансығы... Нисәмә-нисә бала әнә бер юлы ҡысҡырып көлә, ырғып-һикереп елә. Шуларҙың тик береһе генә булһа ла, ҡосаҡтарын йәйеп ебәреп, атайым, тип күҙҙәренә төбәлеп, уға ҡарай елһәсе!

Балалар!.. Ах был автомобиль катастрофаһы...

Мөхлисә...

«Автомобиль ғәйепләме икән һуң әле бында?» — тигән шик ҡапыл тертләтә, йөрәген боҙ тултырғандай өшөтә. Уйҙары тышҡа ағылырҙай борсолоп, хәүефләнеп, ян-яғына ашығыс күҙ ата Мотал. Ләкин ишетеүсе лә, йөрәк серен уртаҡлашыусы ла юҡ — бисәһе эшкә киткән, балконда ул яңғыҙ үҙе генә тора шыҡайып. Арандай ҙур фатирының ҡайһы ғына бүлмәһенә инһә лә, ул һаман яңғыҙ үҙе. Шундай ауыр минуттарҙа йәнде үле тынлыҡ баҫҡанда ниндәй ҙә булһа ҡулсыр сабый анауы ялтыр сервантҡа аҫылына менеп, иң ҡиммәтле ҡытай вазаһын түңкәрелдереп ватһасы — яңғыҙлығын селпәрәмә итһәсе!..

Уф!.. Мөхләсәгә икеһенең тәнен иҙгән катастрофаға тиклем дә ваҡыт бар ине бит — йәшлегенең алтын йылдарын ҡыҫыр сәскә рәүешендә көйрәтте...

Мотал һалҡын маңлай тирҙәрен һөртә, уйҙарының үңәсен быуа алмай, кире дауам итергә мәжбүр йәнә. «Нимә, әгәр... әгәр... Бәпембәгә түгел, ә Ниагара шарлауығына — Йыһаниәгә өйләнгән булһам?..» Шулай йыраҡтан алдыртып, ошо мәлдә автомобиль салонында элекке көндәше менән бергә барыуын да оноттортоп, төйгөсләй уны хәтер -- хәтәр *Шулгән ҡотҡоһо*...

Уф, туҡта, ҡайһылай килеп сыҡты һуң был?..

Хәләл никах...

«Никах... никах... никах...» —Ҡарайылтыр «Волга» асфальт юл төйҙәһе соҡорҙарына төшөп шулай өҙләктөртөп бәүелтте, әллә инде бәғерен дә өҙөлдөрөргә итте...

Кем арҡаһында килеп сыҡты был никах?!. — Алда бер ни абайламай радио тыңлап барған түрә-уҙамандың, бер туған бажаһының, елкәһенә күҙе менән ҡаҙала Мотал, ә тегеһе быны уйлап та бирмәй! Ысынлап та тыныҫмы, әллә ҡылана ғынамы? Сәлимәкәйен ҡосаҡлап иркәләгәндә, Йыһаниәһен онота алмаған Моталдай, үҙенең тәүге мөхәббәтен хәтерләп тертләмәйме? Исемен яңылыш ысҡындырмаһам ярар ине, тип телен тешләмәйме? Юҡтыр, сөнки, Моталдан ғәйре булараҡ, ирҙең сикә сәстәре лә ағармаған, көлһыуланмаған — һаман сытырҙап янған ерән ут төҫлө. Эшсе шағир тигән булып, елдереп китеп бара үҙенә ҡалһа. Университетта уҡығанда уҡ эшсе тип иҫе китер, һәр төрлө делегацияларҙы ҡаршылап һәм оҙатып, заводтан ҡайтып килмәҫ ине. Шул ғәҙәте арҡаһында бит, диуана, яҙмыш кәрттәребеҙҙе яңылыштыртып, үҙен дә, мине лә бер юлы әсе һемәйттерҙе — үҙебеҙ һис уйламаған никахтарға тарытты...

Трест управляющийы менән күҙмә-күҙ һөйләшеү, Димустан үҙе көткәнсә, ҡыҫҡа ла, бәрәкәтле лә булды. Башҡорт далаһының ҡылғаны кеүек ҡуйы аҡ сәсле,

туйра талдай нәҙек оҙон буйлы, сәсрәп торған ҡеүәтле һәм йылғыр тәбиғәтле был утыҙ йәштәрҙәге кеше беҙҙең «ҡара алтын»лы төбәккә Мәскәү яғынан ебәрелеп, Димустандың күҙәтеп белеүенсә, килеүе менән үк эш тауҙарын яҡшы аттай тартып алып киткәйне, ҡаланың һуңғы йылдарҙағы иң мөһим, күркәм төҙөлөштәре уның ҡулынан үткәйне. Бикләмешев партияның ҡала комитетында эшләгәндә үк уның менән яҡшы таныштар булғанлыҡтан, бер-береһен, ҡәҙимгесә, ярты ауыҙҙан аңланылар.

-- Эйе, яҙыусыларыбыҙға ярҙам итергә кәрәк, беләм, — тине управляющий. — Тик, теләк күпме генә изге булһа ла, быйылға ҡул еткереп булмаҫ бит әле.

-- Был ниндәйҙер абстракт әҙип түгел, ә һинең үҙ кадрың — шиғыр яҙыусы ташсы егет тураһында һүҙ бара, — тине Димустан.

-- Бәй, беҙҙә лә шағир бармы ни? — Ихлас ғәжәпләнде тегеһе. — Исеме кем уның, ниңә белмәй йөрөгәнмен?

-- Ыңғырсаҡ Уральский тигән егет, ә ысын фамилияһы Ҡамырбаев. — Мотал һүҙгә ҡушылды. — Белмәүегеҙ ҙә ихтимал, сөнки ул тәүге китабын ғына сығарҙы әле, ә рус телендә бөтөнләй баҫылғаны юҡ.

-- Шулаймы ни? — Управляющий эске телефон трубкаһын матҡыны. — Алло, китапхана! Йәһәт кенә Ыңғырсаҡ Уральский тигән шағирҙың китабын табып индерегеҙсе әле.

Уны-быны әңгәмәләшеүгә, йыйынтыҡ килеп тә етте. Ус аяһындай ғына ине, бүлмә хужаһы уны ифрат ҡыҙыҡһыныу менән алып, «Еңгәйемдең тәмле икмәге» тип тышлыҡтан уҡыны ла: «Һем... ә шулай ҙа ниңә, ағайымдың кирбесе, түгел?» -- тип албырғатты быларҙы. Титул бите алдындағы фотоһүрәтте күргәс, ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

—Әәә, теге, маңлайы емерек ҡара егетме ни әле? Ғәфү итегеҙ, хәтеремдә шул ҡалған: ҡара суйындай маңлайында тәрән бирсә бар ине.

Кинәнешеп көлдөләр, китапханасы шаяртты:

-- Стройкала шиғыр уҡып торғанында башына кирбес төшөп, бер шөрөбө бушаған да шиғыр яҙа башлаған», тип тә мәрәкәләй ҡәләмдәштәре.

-- Был һүҙҙәрҙә хаҡлыҡ бар, тип тотанаҡланы Мотал. – Александр Сергеевич Пушкин үҙе әйткән бит, шағирҙың башында бер шөрөбө етешмәҫкә тейеш, тип...

-- Бына бит, Юрий Никифорович, -- Димустан да йөпләне, -- һеҙҙең кирбес арҡаһында республикаға талантлы шағир тыуған! Хәйер, үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ икән.

-- Беләм, ниңә белмәҫкә, ти! – Эргәһендәге мастерға өндәште: -- Ҡарале, Петрович, егет үҙе ҡайҙа, эше нисек?

-- Үҙе әле тейешле ялда. Ул беҙҙең иң алдынғы ташсылар рәтендә.

-- Ниңә шул алдынғы ташсыны әллә ҡасан уҡ фатирлы итмәнегеҙ? — Бикләмешев шаяртып бармаҡ яналы.— Һәй, хәйләкәр ҙә икәнһегеҙ -- башығыҙҙан себен осороп, торлаҡ мәсьәләһен Яҙыусылар берлегенә ауҙараһығыҙ!

-- Ышанығыҙ, Димустан Шиһапович, һис тә улай түгел. Минең белеүемсә, былтыр коммуналь йорттан бер бүлмә тәҡдим ителгәйне уға...

-- Эйе, бүлмәне килеп ҡараны ла егет үҙе баш тартты, -- тип дөрөҫләне мастеры.

-- Ышанам, ышанам, — тине Димустан, -- күгәрсен ояһында йәшәгән шағирға шундай уҡ ҡарға ояһы тәҡдим иткәнһегеҙ, ошонан ни мәғәнә?

-- Ә беҙҙең *Литфонд* һеҙҙең төҙөлөшкә, яҙыусыларға фатир өсөн, өлөшләтә аҡса керетте бит, шуны ла онотмағыҙ, -- профсоюз әһеле булараҡ, тимерҙе ҡыҙыуында һуҡты Мотал да.

-- Уйлап еткермәгәнбеҙ шул, Димустан Шиһапович...

— Шулай ҙа, игелек эшләр өсөн әле һуң түгел. Аңлағыҙ шуны: талантлы шағир Уральскийҙың яҙмышын *Вилор Иҫәргәпович үҙе* ҡыҙыл ҡәләме менән контроль аҫтына алды.

-- Аңлайым, аңлайым... – Управляющий яртылаш төҙөлөп ҡатып ҡалған күп подъезлы йортҡа ҡарап көрһөндө. -- Их, әгәр тағы бер башня краны тапҡанда!.. — Күрәһегеҙме, секретарь иптәш, ниндәй йорт, ярты биленә тиклем генә ҡалҡынып, ары ырай алмай тора?.. Бына шунда инде беҙҙең ҡәҙерле яҙыусыларыбыҙҙың да өлөшө. Буй етмой, туғандар, буй етмәй! Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, тимер юлсыларҙа тора ул кран.

-- Ҡулдарынан ысҡындыртып булырмы?

-- Уларға ябай кран кәрәк: улар тәпәш объекттар һала. Ҡылдарын тартып ҡараным: ябай кранға алмаштырырға ла иҫәптәре юҡ түгел. Әммә буй етмәй, туғандар: ведомстволар башҡа.

Димустан ҡуйын дәфтәренә теркәй-теркәй белдерҙе:

-- Уныһын уйлашырбыҙ. Әммә шағир Уральский мәсьәләһен бөгөндән үк хәл итеү мотлаҡ. Әйттем бит...

Управляющий елкәһен ҡашып уйланды:

-- Саҡ ҡына резерв бар ҙа ул... авариялы йорттарҙа ҡаңғырыусыларға...

-- Шунан өлөш сығар! Вилор Иҫәргәповичҡа ни тип хисап бирәйем?

-- Ыңғай хәл ҡылынды, тип, Димустан Шиһапович.

Ике юлдаш ҡайтыр юлға ҡәнәғәтләнеп сыҡты. Әлбиттә, фәрештәнең амин тигән осраҡлы ғына мәленә тура килде, юғиһә был шағир остоғо үҙенең күгәрсен ояһында сәңгеп ҡартайырға ла хаҡлы ине – баш ҡаланың серек-емерек өшәләктәре үҙ фатирын күрә алмай ҡаңғырған даланһыҙ (талантһыҙ түгел!) ҡәләм эйәләре менән тулы...

Секретарь эш кабинетына кереп ултырҙы ла кисекмәҫтән Уральскийҙы килтереп еткерергә бойороп машина юлландырҙы. Оҙаҡ көттөртмәй, -- яҙышыусылар гонорар алып аяҡ аҫтында бутала торған көн ине, -- касса янындағы хәмерле буфет залынан аулап килтерҙеләр азаматты. Ҡурҡышынан ҡойолоп төшкән шағир йораты баҫып торған урынында дер-ҡалтырай – моғайын, Оло йорт тупһаһынан тәүге уҙыуы. Ултырырға урын да тәҡдим итмәй, һөҙөп ҡарап өндәште:

-- Йә, һайрап ебәр: комсомолецмы үҙең?

-- Һе-һе-һе... юҡ шул, ағайым...

-- Алайһа, партия ағзаһымы?

-- Һе-һе-һе... юҡ шул, ағайым...

-- Кем һуң һин?

-- Мин... мин... Ыңғырсаҡ Ҡамырбаев... йәғни Уральский...

-- Ыңғырсаҡ Уральский, ниңә эсеп йөрөйһөң?

-- Һе-һе... берҙе генә уртлап өлгөргәйнем, ағайым...

-- Ә ниңә «Револьвер һәм һандуғас» тип шиғыр яҙҙың? Совет власына ҡаршыһыңмы әллә?

-- Ю-ю-уҡ, ағаҡайым, йәнем-тәнем менән совет яҡлы мин. Тик... тик... фатир бирмәйҙәр бит, шуға күрә яҙғанмындыр...

-- Иҫереп ятып яҙғанһыңдыр.

-- Шулайҙыр шул, ағайым... әллә йыртып ташлайыммы?

-- Уныһын үҙең ҡара. – Секретарҙың күңеле йомшара төштө. – Ултыр, Ҡамырбаев, бынауы ҡағыҙға яҙ, ҡул ҡуй.

-- Нимә тип яҙайым?

-- «Миңә фатир биргәндәре өсөн һөйөклө партиябыҙға, совет власына рәхмәт, уларға тоғролоҡло хеҙмәт итермен, бойороҡтарын үтәрмен» тип.

Тоҙло балыҡ тәңкәләре йәбешкән ҡулы дер-ҡалтырай, кәкес-бөкөс хәрефтәрҙе ҡағыҙға саҡ төшөрә. Яҙып бөтөп тапшырғас ҡына белеште:

-- Әлеге күгәрсен ояһы өсөнмө, ағайым?

-- Киләсәктә партияға, совет власына яҡшы хеҙмәт итереңә һәм эсеп-сысып йөрөмәҫеңә ышанып, яңы йорттан яңы фатир бирәбеҙ. Ошонан башлап *үҙебеҙҙең кадр* һин, танауыңа киртеп ҡуй! Иртәгә үк эшләгән ереңә бар, профсоюз комитетына ин – яңы фатир алыу өсөн ниндәй ҡағыҙҙар тултырырға кәрәклеген өйрәтерҙәр, аласаҡ фатирыңды ла күрһәтерҙәр. Бар, бынан һуң алйып эт һуғарып йөрөмә!

-- Рәхмәт, рәхмәт, мең рәхмәт, ағаҡайым, йөрөмәм, ағаҡайым!

Секретарь һығымта яһаны: ысынлап та, еңгәләре баҫҡан ҡамырҙай теләгән яҡҡа һығылыусан йомшаҡ Ҡамырбай икән шул!

Кабинет ишегенең тышҡы яғында көтөп торған мыҡты әҙәм Уральскийҙы йәһәт кенә ҡулынан маҡып алып, урамға сығарып ҡуйҙы. Секретарь торҙо, «үҙ кадры»ның ҡултамғаһы һалынған ҡағыҙҙы ҡараштырып, сейфының төпкө бүлегенә бикләне – киләсәктә кәрәк саҡта яҡшы хеҙмәт итәсәк...

**ЕТЕНСЕ СӘХИФӘ**

Өфө аэропорты Басирҙы, яҙғы епшек ҡарҙарын йөҙгә бәреп, әлеге лә баяғы, шул «бәрей» бурандары менән ҡаршыланы. Майҙанда көткән таксиҙарҙың береһенә фырт ҡына кереп төпләнгәс, ҡала тарафына ҡул һелтәп күрһәтеп, рәхәт бәүелеүҙән кинәнеп күҙ йомдо, әммә тирә-яҡты күҙәтеп тамаша ҡылыуҙан мәхрүм — асфальт таҫманың ике янын Туҡай әйткән бәрей мендәр йөндәре туҙғыта ине. Олондарын епшек ҡар һылаған аҡ тирәктәр егеткә Милеевка аҡ ҡайындары һымағыраҡ күренде лә, һис бер ихтыярҙан тыш, йәнә былтырғы Милеевка көндәренә ҡайтарҙы йәш күңелен.

Вальс, вальс, вальс... Ах был Милеевка вальсы!..

...Клубты тынлы оркестрҙың еҙ моңдары шаңғырта, унда тансы бара, тансы бара, тансы бара, байрам тансыһы бара! Басир, клубҡа яҡынлаған һайын, йөрәгенең сығып барыуын тоя: Аҡһылыуы килерме, күренерме?..

Йә Хоҙай, ни күрәм! — Уның Аҡһылыуының — *Любаның, Любовь Яковлевнаның* — зифа аҡ ҡайын билкәйенә һөмһөҙ Толяның баҙыҡ матрос ҡулдары ятҡан... Ниңә быңдай тантана, ниңә улар зал буйлап бөтөрөлә?..

Якоренә һылыуҡайҙы эләктереп өлгөргән элекке матрос, музыка әҙөлөү менән үк, йөҙө ышҡып ялтыратылған көмөш тәңкәләй балҡып, көнләшеүҙән һулышын саҡ алған дуҫы эргәһенә уҡталды:

— Таныш булығыҙ, *Любовь Яковлевна*, был — минең корешь Басир Дәүләтбаев, үҙем һымаҡ уҡ алама бумаласы. Икебеҙ бер фарватерҙан.

*Люба*, яурынғаса яланғас аҡ беләген алға һоноп, көлә-көлә өндәште:

-- О! Беҙ аҙыраҡ таныштар ҙа инек буғай, шулай бит?

-- Булмаҫ! — тине Толя, ҡырыҫ диңгеҙ бүреһеләй ҡыланып. — Басир менән беҙ икебеҙ, бер фарватерҙа барһаҡ та, ара ҡалдырып уҙабыҙ. Быға тиклем *ул* — һеҙҙе, һеҙ уны күргәнегеҙ юҡ. Шулай бит, Басир?

-- Һин әйткәс, шулайҙыр шул...

Дамский вальс уйналды, зал әйләнеп-тулғанды.

-- Наденька, — тине бер ситтәрәк тексәйеп торған әхирәтенә *Люба*, — ни эшләп ойоноң, ал абордажға диңгеҙ бүреһен! Әгәр рөхсәт итһәгеҙ, — ҡыҙ матросҡа йылмайҙы, — ә беҙ киттек һеҙҙең корешь Дәүләтбаев менән. Чао!

-- Рәхим итегеҙ, рәхим итегеҙ! — тигән булды зәңгәр-күк күҙҙәрендә кинәт бойоғоу болоҡһоған бахырым Анатолий Каргин.

Вальс, вальс... Басир үҙен был ҡыҙ менән бик күп йылдар әүәле үк танышҡан, бер ҡалаҡтан ашап үҫкән шикеллерәк хис итте.

-- *Люба, Любонька*, мин һеҙҙең портретты яҙырға хыялланам.

-- О! Иртәрәк түгелме икән? — Ҡыҙ көлдө. Басир уның әхирәте Наденька менән бөтөрөлеп бейеп йөрөгән диңгеҙ бүреһе яғына күҙ ташланы:

-- Бик һуң булып ҡуймағайы тип ҡурҡам.

-- Һеҙ бит мине белмәйһегеҙ ҙә.

-- Мин һеҙҙе тәү күреүҙән үк яҡшы беләм.

-- Ҡасан?

-- Һеҙҙең тәүге тапҡыр ошо ҡарҙай ап-аҡ туфлиҙарҙы кейеп сыҡҡан көнөгөҙҙә, аҡландағы яңғыҙ ҡайын төбөндә.

-- Хәтерләмәйем.

-- Ә мин хәтерләйем. Атайығыҙ менән ҡайта инегеҙ, ял итергә туҡтанығыҙ. Атайығыҙ бот буйлы суртан балығы аҫып алғайны. О ул көн!

-- Әәә... — *Люба* ҡыҙарҙы. — Беҙ ул аҡ ҡайын тәңгәленән көнөнә ике-өс уҙып, ике-өс туҡталабыҙ. Икебеҙ ҙә Куликовонан *Лопуховка*ға әшкә йөрөйбөҙ ҙәһә.

-- Тик мин һеҙҙе сихри сәғәттә күрҙем.

-- Нимә? — Ҡыҙҙың йөҙө әкәмәт сытырайҙы.

-- Гүзәл фея бер ҡарауҙа мине сихырлап өлгөрҙө...

-- Булмаҫ, — ихлас көлдө, — ундай уҡ гүзәл түтел ул.

-- Гүзәлдәрҙең гүзәле!

Дамский вальс туҡталыу менән Толя һәм Наденька юллап килеп тә етте. Алмашынып бейенеләр. Йәнә алмашындылар.

—Күрегеҙ инде дуҫығыҙ менән Наденьканы, — тине Люба. — Ҡалай килештереп кенә баҫалар, бер-береһенә пар ҡилгәндәр.

— Ә беҙсе?

-- Нимә беҙ?

-- Пар түгелдәрме ни?

-- Сая һеҙ!

-- Саяларҙы яратам.

-- Ә дуҫығыҙ үҙегеҙҙән дә ҡыйыу...

-- Ул әллә... — Басирҙың йөрәге семерләне.

-- Нимә «әллә»?

-- Теге ваҡыт үҙегеҙҙе күргәндән һуң ер һәм күгем туңкәрелде, йөрәгемә цунами бәреп керҙе. Ерҙе-күкте дөбөрләтеп, артығыҙҙан йүгерерҙәй булғайным...

Ҡыҙ йылмайҙы:

-- Ниңә йүгермәнегеҙ һуң?

-- Һеҙҙе ситен хәлгә ҡуйыуҙан ҡурҡтым.

-- Бына бит. Мине яңғыҙ ҡалдырыуҙан да хәтәрерәк хәл бармы? Ике ятып бер төшөмә кермәй, тиегеҙ ҙә ҡуйығыҙ, исмаһам.

-- Любовь Яковлевна, мин һеҙҙең менән алдашып һөйләшә алмам. Һис ваҡытта ла...

-- Ысынмы? — Ҡыҙҙың куҙҙәре мөлдөрәне.

-- ...сөнки мин һеҙҙҙе...

-- Ой, етте-етте!

-- Аҡкайын төбөндә... кемегеҙ ул? — тине Басир, еңел музыка ритмында бер килке осоп әйләнгәндән һуң, фекерен осларға тырышып. Ҡыҙ шунда уҡ аңланы:

-- Иванмы?

-- Юҡ...

-- Әәә, Василий Иваныч... — Люба күҙҙәрен йомдо. Ҡулдары дерелдәне.

-- Ғәфү үтенәм. Бәлки, һорамаҫҡа кәрәк булғандыр.

-- Ниңә, һорағыҙ, һорағыҙ.

-- Күҙ алдымдан китмәй һаман: аҡ ҡайынлы тәңкәләй түңәрәк аҡлан, Айлы төн, көлә-көлә ҡулдарын һоноп һеҙҙең ҡулдарҙан зәңгәр Күккә сорғолоусы аҡ бәпес...

-- Эйе, Василий Иваныч...

— Иҫ киткес матур бала.

-- Аңлайым... — Уның йөҙө ҡыҙарҙы.

-- Люба...

-- Ул бала, ул бала... — Күҙҙәренә йәш төйөлдө, ул Басирға, ниңәлер, асыуланғандай төбәлде. — Белергә теләйһегеҙме? *Минеке* ул бала. Эйе!

-- Быға минең шигем юҡ.

-- Нимә?!

-- Ниңә улай аптырап ҡарайһығыҙ?

-- Ҡыҙ һынаусан текләне:

-- Нисек ҡабул итерһегеҙ икән, тип көткәйнем дә... Ир-ат халҡы, ғәҙәттә, йөрөгән ҡатын-ҡыҙының балаһы барын ишетеү менән үк тертләп һырт ҡайырыусан.

-- Люба, мине кемгә һанайһығыҙ?

-- Бөттө-бөттө...

-- Һеҙ мине...

-- Ярай, тинем бит инде! — Егетте үҙенә тартты.

-- Мин...

-- Нимә «мин», нимә «мин»?!

-- Күпме һөйләшәһе һүҙҙәр...

-- Ҡәҙерлем, вальс бейегәндә генә түгәһе сер түгелдер бит инде?

-- Ҡасан һуң?

-- Мине өйгә оҙатып та ҡуйырһығыҙ, шәт?..

Бына улар тылсымлы һуҡмаҡтарҙа йәнәшә, тәнгә-тән терәшеп бара. Һулыштары йышайған, һүҙгә урын юҡ һымаҡ.

—Кем-кем, ә моряк менән бергә киткәнгә Наденька шат инде хәҙер. -- Люба төнгө урманды һиҫкәндертеп, кемөш ҡыңғырауҙар сыңратып көлдө.— Һөп-лә! -- Ҡапыл егеттең яурынынан еңелсә этәреп ебәреп, ағаслыҡҡа атлыкты. Ҙур тулыш Ай ағас араларынан юлаҡланып-нурланып түгелгән юлда тубыҡҡаса яланғас, йыуантыҡ балтырҙары елп-елп ялтырап, зәңгәр йөн кофталы һомғол һыны көңгөрт ылыҫтар күләгәһенә күмелде, әленән-әле сыңрап киткән көмөш ҡыңғырауҙар ғына йоҡоға талған ҡайындарҙы, ҡарағайҙарҙы һиҫкәндерҙе. Ҡыуып етеп, инде тотам тигәндә, йөрәкһеүе менән тамам тертләтеп, һеләүһендәй һыпырылды, ботаҡтарҙы сарт-сорт һындырып, ылғый шырлыҡ араһына ылыҡты. Нәҙек һуҡмаҡ, ниһәйәт, икеһен дә шырлыҡтан атлыҡтыртып, башын һуҡҡан йыландай бормасланып, йылға буйына төшөрҙө, йүгереүҙән ҡыҙышҡан йөҙҙәренә, көҙгөнән сағылғандай, һыуҙың айлы шәүлә-нуры һирпелде. Яр киртләсе аҫтындараҡ мөлдөрәп ятҡан тере һыу һулышын тойоп, бер юлы туҡтанылар. Боландай һомғол һонолоп, усына һыу һоҫоп алған һылыуҙы егет күкрәк тәңгәленән һығып ҡосаҡланы.

-- Ой Басир, йәнем, үлтерәһегеҙ бит! Басир, йәнем, һыуға осораһығыҙ бит!

-- Осорһам да, үҙем менән ҡуша ғына осорам!

-- Уф, үләм!

Басир, тамағы сатнап кибеп, аҫта томһораған һыуҙы һемерергә ынтылды, тайып китеп, талсыбыҡҡа тотондо.

—Һоп! Көмөш һыуҙы үҙем ауыҙ иттертәйем. — Любаның мөлдөр һыулы ҡуш усына түңкәрелгән Айҙың йөҙө ҡалтыранды, Ай, аҡ сабаҡтай, ауыҙға инмәҫе борон уҡ, еүеш бармаҡ араларынан, эйәк остарынан йылтырап ҡойолдо. Сарсауын да оноткан егет һыу биреүсенең Ай юлағы яғылып ҡалған бөртек ус мендәрен үпте.

—Тағымы? Тағы һыу һоҫайыммы?

Өндәшмәй, һығылмалы-һылыу һынын айыуҙай ҡармап алды, күкрәгенә

һығып ҡыҫты. Ҡурҡынып баҡҡан күҙҙәренә күҙ терәп, ҡыҙҙың турһыҡ ирендәрен һулышы менән өттө. Ер йөҙө алпан-тилпән килеп сайҡалды, яр башындағы йәш мышарҙың ойоп ятҡан күләгәһендә абағаларҙы йоҡлатҡан моңһоу тынлыҡ бүҫерелде.

-- Юҡ-юҡ, теймә!..

-- Һылыуым!

-- Юҡ!

-- Яратам!

-- Ой! Ой-ой!..

...Урман өҫләп һүрән генә йәйге таң һыҙылып килә, һыу ситендә ҡайындарҙың шәүләһе ҡалтырана. Абағалар ҡолағына гәлсәр ысыҡ алҡалары эленә. Һулыштары биттәрен өтөрҙәй яҡынлыҡта талғандар. Ер шарында икеһе генә бары. Донъяға яңы көн тыуғанын икеһе лә ғәжәпһенеп кисерә.

-- Уй, Басир, шытырлатып ҡосмасы улай, ҡурҡам!

-- Минәнме?

-- Ҡыҫҡаның һайын нығыраҡ эҫенә барам — шунан ҡурҡам.

-- Иҫәркәйем!

-- Һиңә көллө тән күҙәнәктәрем менән ҡуша тоташтым...

-- Ә мин һуң?!.

-- Уныһын Хоҙай белә...

-- *Люба*...

-- Туҡта! Кәрәкмәй!.. Мин һине юғалтыуҙан ҡурҡам. Үҙ ғүмеремдә тәүге тапҡыр шулай ҡурҡам.

-- Беҙҙе айырыр көс юҡ.

-- Белмәйем, белмәйем...

-- Ер менән Күкте бер-береһенән айырып буламы ни?

-- Бөгөн генә аңланым: ғүмерем буйы, ғүмерем буйы һине генә эҙләгәнмен, көткәнмен.

-- Аҡһылыуым минең! Мин һине таптым һәм инде юғалтмаясаҡмын. Бер кемгә *лә* бирмәйәсәкмен!

-- Ой йәнем... Яҙмыш ниңә осраштырҙы икән беҙҙе? Ниңә? -- *Люба* иланы.

-- Ни һүҙең *был*?! — Басир ҡыҙҙың күҙ йәше тулы керпектәрен һурып үпте.

-- Ниңә һаман һорашмайһың минең үткәндәремде? — Йылғаға ҡоро сыбыҡ һындырып ырғытты. Балыҡтар һырып алды, һыу ҡаҙандағылай ҡайнаны. -- Тап тормоштағы кеүек, — тине ҡыҙ, ҡайнашыуҙы күҙәтеп. — Тик тайып йығыл ғына: хәҙер үк тирә-яғыңда ошолай мыжғырҙар.

-- Һин йығыла торғандарҙан түгелһең. Миңә *лә* бирешмәгәс...

-- Йәнем, әллә үпкәләйһеңме? – Күҙҙәренең төбөнә үтеп баҡты.

-- Ғорур ҡыҙ һин, *Люба*. Аҡландағы аҡ ҡайындай саф-пакһың, һомғолһоң, һынмайһың...

-- Шулайын шулай ҙа бит... Бер саҡ шартлап һындым шул...— Бойоғоп ситкә бороддо *ла* иламһыраны. — Ниҙәр генә күрмәнем, ишетмәнем...

-- Һөйлә. Минең өсөн барыһы *ла* — һин үҙең, танһығым.

Ҡыҙ, оялсан ҡалтыранып, яҡыныраҡ һыйынды.

-- Асыуланма һин миңә, яраймы? Беләһеңме, йәнекәйм, һинең менән хәҙер ҡайҙа ултырабыҙ? Ҡайһы сихри төйәктә? Минең *тыуган* еремдә!

-- Эйе шул, һинең тыуған ерең был.

-- Юҡ, мин ысын мәғәнәһендә.

-- Ә мин һуң?

-- Юҡ. — Ҡыҙҙың көллө тәне сәйер дерелдәне. — Хоҙайым, аңламаҫһың ошо донъяны...

-- Люба...

-- Йәнем, беҙ ултырған абағалыҡ — әсәйем мине донъяға килтергән түшәк бит ул.

-- Ә?!.

-- Эйе, шунан башлап һөйләргә тура килә тормошҡайымды...

Ағын һыуға текләшеп, абағалыҡта яр башында ултыралар. Ҡыҙ һөйләй. Тормошта нисек булғанынса, нисек хәтерҙә ҡалғанынса, буяулап матурламай һөйләй. Киндергә ҡырыҫ яҫмаҡтар һалған һымаҡ, өҙөк-өҙөк итеп һөйләй. Тынып тора ла, сыбыҡ һындырып һыуға ырғыта ла тағы һөйләй ҙә һөйләй...

-- «Ғүмеркәйемдең иң сетерекле ваҡиғалары ошо йылға менән тығыҙ бәйләнгән, — ти ул. — Ошо тыуған һыу менән.

...Хуш еҫле, ырыҫлы, абағалы ошондай уҡ йәйге тымыҡ ай булған.

Әсәйем хәлен ауыр һиҙә башлағас, атайым уны, ашыҡ-бошоҡ ат егеп, район үҙәгенә бала тыуҙырыу йортона алып киткән.

Арбаһының ҡәһәр һуҡкан тәгәрмәс ҡоршауы кистән үк ҡупшып торған икән дә: ауылды сығыу менән, ысҡынып, юл ситенә тәгәрләп киткән. Атайымдың кире боролоп ҡайтҡыһы килмәгән: кире ҡайтҡан юл уңмай. Ҡоршауҙы һалып алған да, Лопуховка ауылындағы тимерлектә тарттырып нығытырмын, тип, ҡоршауһыҙ тәгәрмәсе менән сәфәрен дауамлаған. Бара торғас, хәйерһеҙҙең бер үрәсәһе ҡубып, тигеҙ юлда ла арбаны шаҡ та шоҡ һикертергә керешкән. Әсәйем тештәрен ҡыҫып ыңғыраша башлағас, атайымдың башына етди уй төшкән: әллә яңы тәгәрмәскә боролоп ҡайтырғамы? Крәҫтиән аҡылы менән алдын да, артын да ҡарышлап үлсәп ҡараһа, ватыҡ тәгәрмәсле арбаһы Куликово менән Лопуховка ауылдарының тап урталыҡ араһында тора икән. «Әгәр боролоп ҡайтһам, — тип самалаған атайым, — йәнә шул уҡ юлды әйләнеп киләһе бар. Атты арытмайыҡ, ваҡытты әрәм итмәйек, шул уҡ юлды Лопуховка тимерлегенәсә уҙайыҡ». Тик күп тә бармағандар, беҙ ултырған тап ошо яр башына тиңәлгәс, әсәйемде тулғаҡ тотҡан. Атын туҡтатҡан да атайым, ҡаушауҙан шыбыр тиргә батып, әсәйемде маҭҡып алып абағалыҡҡа һалған.

— Яшенька, ике айға иртәрәк ҡуҙғалдысы... Уҫал ҡыҙ булырмы икән... — һыҙланыу аралаш шулай тигән әсәйем. Һәм мин донъя ярып ҡысҡырып тыуғанмын...

Кискә тиклем икебеҙҙе атайым тәрбиәләгән. Ошо ярҙан мине йылғаға сумырып ҡойондорған. Аҡ күлдәгенә биләүләп, имеҙергә һалған. Ана анау таллыҡтағы сыбыҡтарҙы ҡырҡып алып, икебеҙҙең баш осонда кәрзинкә үрергә ултырған. Үҙенең һөйләүенсә, кәрзинкә ғәжәйеп матур, ыҡсым килеп сыҡкан,

йәм-йәшел фирүзә ташынан һырлап эшләнгән йәшмә ҡумтаға оҡшап торған. Төбөнә йомшаҡ абаға үләне түшәп, мине ипләп ятҡырған да кәрзинде муйынына элгән, әсәйемде ҡултыҡлап, атын етәкләп алған.

—Абағала аунаған бала абынмаҫ, тигән боронғолар. Был сабый беҙгә ҡарағанда ла бәхетлерәк булыр әле. Үҙ аяғыбыҙ менән генә ауылға тәпәйләйек, Матрена йәнем, — тигән. Бәхеткә күрә, бер юлаусы ҡыуып етеп, беҙҙе арбаһына ултыртып алған, йорт тәңгәлебеҙгәсә килтереп ҡуйған. Мин өйгә, көллө күрше-күләнде ҡуҙғытып аҡырып, атайымдың муйынындағы йәшел кәрзинкәлә ҡайтып ингәнмен...

Үҫә барған һайын нығыраҡ абайланым абағала тыуыуымдың бәхетен. Әйтәйек, тормоштоң барлыҡ боҙборсаҡтары минең башҡа ғына яуа. Тиҫтерҙәрем менән уйнарға сыҡһам, осраған һәр ата ҡаҙ, беренсе итеп, мине суҡыр ине. Барлыҡ ғәләм имен уҙған ерҙә лә мин һөрлөгөп йығылам, йәки түтә юлда яланаяғыма шырау кереп яфаланам.

—Зыян юҡ, илаһын: тылсымлы абаға балаһы бит ул. Илағаны һайын, һылыуланып үҫәсәк минең ҡыҙым! — ти торғайны мин белгәндән, арҡамдан тапап, атайым. — Абаға, йөҙ йылда бер булһа ла, ҡасан да сәскә ата, төндө балҡытып яна. Ҡағытмағыҙ ҡыҙымды – уның да тылсымлы абағаһы сәскә атыр бер заман! — тип өҫтәп тә ҡуйыр ине. Һәм абаға «тылсымы»н мин көндән-көн күберәк тойҙом. Үҫә барғаным һайын, йәшенеп һағалап тороуҙар ҙа ыраны, энә остарын йөрәккә үткәҙеп ҡаҙалыуҙар ҙа йышайҙы.

Мәктәптә уҡығанда ла гел миңә төшөр ине таяҡтың башы. Кемдер класта шаяра ла эш боҙа, ә мин яуап бирәм. Дәресемде ныҡ белеп килһәм, уҡытыусы һорамай, ә белмәгән һайын мине торғоҙа. Хатта «бишле»ләрем яңылыш бүтәндәргә сәпәлгән саҡтар ҙа булды.

Ошо ауыҙ бешеүҙәр мине ауыртҡанда ла ҡысҡырмаҫҡа, ә, күҙ йомоп, үҙемдекен эшләргә, осло энәләрҙе кәкерәйтә баҫырға өйрәтте. Мин ауырҙы сабырлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ менән алырға, кәрәккәндә ҡарышырға, елгә ҡаршы төкөрөргә күнектем. Бына шулай уҡыуымдың тәүге яуаплы миҙгелен — һигеҙенсе класты уңышлы тамамланым, йылға аша сылбыр баҫманан Лопуховка ауылына урта мәктәпкә йүгереп йөрөй башланым. Көн дә йәйәү барып, йәйәү ҡайтыр инек шулай. Өйҙә лә эштәр күп булһа ла, йәйәү йөрөп арытһа ла, сер бирмәй, тырышып уҡый инек, Лопуховка ауылыныҡыларҙан һис тә ҡалышмай инек. Барлыҡ көстө һалып унды тамамларға, ә унан һуң институтҡа китергә ине иҫәп. Тап шул ауыр ваҡытта, һағалап ҡына торғандай, ғүмеремдәге иң асы ҡайғы йыға яҙҙы аяҡтан: әсәйем үлеп китте. Атайым оҫталыҡ балтаһын дүңгәккә сапты ла ҡулалмашсыһы Иван менән ҡушарлап эсә башланы. Хәсрәте лә, донъя мәшәҡәттәре лә ошо индәргә ятты. Шулай ҙа теште ҡыҫып йөрөп ҡарыштым, уҡыуҙы дауамланым. Унынсының һуңғы сирегенә лә килеп еттем, инде тырышып имтихандар тапшыраһы ла ҡулға аттестат алаһы ғына ҡалды.

Иртән иң аҙаҡҡы, иң хәл иткес һынау тигән көндө яҙмыш мине тағы ла бер һынап ҡарарға уйланы, күрәһең: атайым, Лопуховканан ҡайтып килешләй иҫерек килеш ярҙан осоп, һыуға ағып, үҙен саҡ тотоп алдыҡ, әжәлдән аралап ҡалдыҡ. Шуның ҡайғыһы менән илереп йөрөп, иртәгә буласаҡ баяғы һуңғы

имтиханға әҙерләнергә ваҡытым да ҡалманы. Иртүк малдарҙы көтөүгә ҡыуып, күҙҙәрен ыуалап тороп ултырған атайыма сәй эсереп, төндә үтекләп ҡуйған бөхтә кейемдәремде кейеп, хәл иткес шул һынауыма атлыҡтым. Яҙмыштың кисәге ҡылыҡтары изге юлымдан тайҙыртмағанға ҡыуанып, ҡоштай талпынып осорға болдорҙан ғына төшкәйнем, ни күрәм! — баш осомдан гөлдөрләп күк күгәрсендәр китте лә, түшемә «тып!» иткәнгә эйелеп ҡараһам, үкереп илап ебәрә яҙҙым: ҡарҙай ап-аҡ күлдәгемә хәйерһеҙ ҡош хәшәрәтен тамыҙған... Инеп, өҫ-баш алмаштырғансы, сәғәт үҙенекен йыйҙы. Ҡабаланып, туфлийымдың бауын нығыраҡ тартҡайным, ул да шартлап еҙәләп сыҡмаһынмы! Икенсе туфлиҙан алмаштырып бау үткәрергә тура килде. Был ғына ла етмәһә, баҡсаға һуған өҙөргә генә тип юлланған атайым, минең өйгә кире кергәнде күрмәй, ишеккә йоҙаҡ элә һалып, магазин яғына шылған, сығырға юл ябылған. Сәғәткә күҙ һалдым да, күп уйлап тормай, тәҙрәнән ырғыным, тура тартып, йылға өҫтөндә бәүелеп торған сылбыр баҫмаға йүгерҙем. Ул йылда яҙ һуңлап килеп, ташҡын ҡайтмағайны әле — ике яр араһы күҙенән мөлдөрәмә. Барып ҡына етһәм, тағы ла ни күҙем менән күрәйем, мин килер алдынан ғына баҫма өҙөлөп, осо һыу төбөндә ята, эргәһендә бер төркөм ир-ат гөж-килә. Класташтарым иҫән-имен сығып киткән, баҫма минең өсөн генә ҡыйралған... Яр яҡаһында кәмә лә, бер нәмә лә күренмәй. Илай яҙып, әллә ошо урғылып-ҡайнап аҡҡан бурьяҡ һыуға сумып үләйемме тип, текә ярҙан ҡарап торҙом. Шул минутта аръяҡтағы бер һыбай йән аяныс хәлемде аңланы, йылға аша атын йөҙҙөртөп сығып, эйәренә мине күтәреп алды. Таныным: баш ҡала ипподромына шәп юртаҡтар үҫтергән йылҡысылыҡ заводының ат көтөүсеһе. Үҙе Лопуховканан булып, ике ауыл араһында былтыр көҙҙән биреле мине һағалап, әйләнгәне һайын юлыма арҡылы төшөп, артымдан бер иле лә ҡалмай эйәреп йөрөгән егет. Лыс-һыу эйәренә менеп ултырып, ат ялына йәбештем, һыбай иһә теҙген тотҡан ҡулдары менән билемдән һығып алды, урғылып-ҡайнап аҡҡан йылғаға толпарын ташландырҙы. Эй, белһәң ине шул минуттарҙа йөрәгемдең, сығырҙай булып, ҡайһылай ырғып тибеүен!.. Һыу түбәнгә ҡайыра, беҙ үргә ынтылабыҙ, һыу түбәнгә ағыҙа, беҙ үргә йөҙҙөртәбеҙ... Әгәр малҡай, дарман юйып, ярты сажин ғына түбән китһә лә, ҡотороҡ һыу беҙҙе текә ярға килтереп һуғыр, һөйәктәребеҙҙе көл итер ине... Ошо хәтәр минутта мин үҙемде ҡыҫып ҡосҡан йәндең йөрәк тибешен тойҙом һәм, — иҫәрлек тиһәң дә иҫәрлек инде! — әгәр ҙә ошонда теге ярға иҫән-аман аяҡ баҫһаҡ, үҙенә кейәүгә сығырмын, ғүмерлек йәр булырмын, тип эстән генә нәҙер әйтеп өлгөрҙөм. Ә кисен шул егет мине әлеге түңәрәк аҡландағы яңғыҙ ҡайын төбөндә көтөп алды...

Иҫән-имен тапшырҙым...

Танытма-аттестат алдым...

Көҙөн институтҡа китергә йыйындым...

Атайым баяғы Ивандарҙың ауылында йорт бурарға ялланды, Ивандарҙа ҡуна ятып эшләнеләр. Мин, өйрәнелгән һуҡмаҡ буйлап, көн дә тиерлек Лопуховкаға аҙыҡ-түлек йөкмәп илтә, ҡайһы берҙә Ивандың әсәһе Василиса ҡарсыҡ янында ҡунырға ла ҡала инем. Беҙ, уның менән бергәләп, ҡатыны ташлап киткәндән һуң буйҙаҡ ғүмер кисереүсе Ивандың Вася тигән бәләкәс кенә улын ҡойондорор, ашатыр, ҡарар инек, уны ҡыҙғанып илай-илай һөйөр, ҡәҙерләп

(Чапаевҡа оҡшатып): «Василий Иваныч» тип мәрәкәләп атар инек. Әллә үҙемдең дә әсәй үлеп, әсенеп йөрөгәнгәме, был сабый миңә бигерәк тә яҡын булып күренде, хатта, үҙемдең балам һымаҡ, тәнемде сымырлатып, күкрәгемә алып имеҙгем килде... Бара торғас мин бөтөнләй быларға — атайым янына күсеп килеп, Василий Иванычты ҡарай, күтәреп йөрөтә башланым, хатта төнгөләккә уны Василиса ҡарсыҡ эргәһенә (Иван да йоҡлаған бүлмәгә) ҡалдырып киткәндә лә, төштәремдә гелән ошо бала менән сыуалдым.

Бер саҡ Василиса ҡарсыҡ ҡайҙалыр күрше ауылда ҡунып ҡалғайны, атайым менән Иван эштән һуң магазинға һуғылып, ҡыҙмаса ҡайтып ятҡайны. Төндә Василий Иванычтың илауынан йөрәгем өҙөлөп уяндым, ҡараңғы бүлмәгә йүгереп сыҡтым, йоҡомдан иҫерек килеш, бишегенә әүешеп, бәүетә-бәүетә йыуаттым. Ни арала күҙем эленеп киткән...

Үҙемде тулҡын өҫтөндә тирбәлеп-бәүелеп барғандай тойоп, тертләп уяндым. Ҡысҡырырға ла өлгөрмәнем, тегем йөнтәҫ күкрәгенә һеңдерҙе, ауыҙымды ауыҙы менән ҡапланы... иҫерек Иван ине был...

Эске күлдәксән килеш, тәҙрәне ҡоя тибеп, балтырҙарымды быяланан ҡырҡтыртып, урамға ырғып төштөм, мәгәр Иван артымдан ҡыуып етте, тағы ҡосаҡлап алды. Тауышҡа атайым уянып сығып, күрше-күлән ҡуҙғалып, ғауға ҡупты. Ә мин иһә ил алдында боттарымдан аҡҡан ҡанға буялып илап торҙом... Һуңынан, күпме генә аҡланһам да, барыбер ышанманылар, ап-аҡ эске күлдәгенең нимә төҫөнә кереүен үҙебеҙ күрҙек, Иван эшен бөтөргән бисараның, тип һөйләнеләр...

Бөтәһенән ауыры — әлеге яҙғы ташҡында үҙемде һыбай йөҙҙөртөп сығарған егеттең был ғәйбәтте күтәреп алыуы булды... Эскәйемдә янып барған хәсрәтемде ҡайҙа бушатырға белмәй, көн дә кистәрен, әҙәм аяғы һил булғанда ауыл аралығындағы түңәрәк аҡланға барып, яңғыҙ аҡ ҡайынды ҡосаҡлап, йөрәк уттарымды асы күҙ йәштәрем менән ҡуша түгелдерҙем.

Иван бер нисә тапҡыр мине, бөтә шартына килтереп, бисәлеккә яусылап та ҡараны, моратына ирешмәгәс, эшен ташлап, эскегә һабышты, атайымды ла ылыҡтырҙы. Көн дә ҡаршыма ултырып алыр ине лә атаҡайым, «алтын ҡуллы» Иванын ҡыҙғанып һөйләнер, аҙаҡтан: «Һәләк була бит алтын ҡул — үҙемә алмашҡа ҡала торған оҫта. Ай, һәләк була, һәләк була! Әллә, ҡыҙым, хоҙайға тапшырып, шул Иванға сығаһың да ҡуяһыңмы? Балаһын да өҙөлөп яратаһың...» — тип йәнемде алыр ине, таштай ҡатҡан бәғеремде йомшарта алмауын күреп, йәне үртәлер ине. Ысынлап та, атай күҙенән бағып уйланып ҡараһаң, Ваня миңә кейәүем булмаҫлыҡ кеше түгел ине шул: буй-һын тиһеңме; үҙе эшсән, егәрле, өҫтәүенә, эскерһеҙ сабый күңелле. Йәш араларыбыҙ ҙа ҙур түгел. Етмәһә, аҡылдан яҙып һөйә үҙемде. Миңә ҡылған ҡырыҫлыҡтары ла ни бары шул үлә яҙып яратыуы, бер ҡатлылығы арҡаһындалыр. Әммә ни хәл итәйем: иремәгән йөрәгемә бойороп буламы ни?!.

Балаларса бер ҡатлылығы арҡаһында, үҙенә-үҙе зыян ғына яһарға, Иван «сара» уйлап тапты: яйы килгән генә һайын, хәмерҙән мас булып ала ла: «Любаша миңә кейәүгә сыҡһа ла, сыҡмаһа ла, барыбер минеке инде. Ләкин миңә сыҡмаһа, үҙ башына оло гонаһ аласаҡ: Васегымды ҡосаҡлайым да күперҙән

осам!» — тип ҡысҡырып йөрөр ине. Бер тапҡыр хатта улын күтәреп шул күпергә йүгергән ыңғайында тотоп алдылар, иптәштәр хөкөмөнә һалып тикшерҙеләр. Шунан һуң ул балтаһын биленә ҡыҫтырып, улын әсәһендә ҡалдырып, илдән сығып олаҡты — ярты йыллап үткәс кенә, алыҫ Магадан яғынан хаты килде. Шул арала мин, бәләкәс Василий Иванычты ҡыҙғанып, Василиса ҡарсыҡтарға уғата эйәләштем. Ауылыбыҙҙа ҡулайлы урын булмағас, уларҙың Лопуховка китапханаһына эшкә урынлаштым, институтта ситтән тороп уҡырға индем. Үҙем мәктәпкә йөрөп таҡырлаған берләм юлдан эшкә көн дә йәйәү барып, йәйәү ҡайтам, йыш ҡына, Василий Иванычты ҡосаҡлап, Василиса ҡарсыҡтарҙа төнәп ҡалам. Сабый ҙа миңә эҫенеп, үҙ әсәһе шикелле күрә башланы, ә белмәгән кешеләр уны минең ул иҫәпләйҙәр...

Ат көтөүсе егетемдең дә көнләшеүҙән ҡан баҫып тонған күҙе асылды буғай: элеккеләй, иртә-кисен юлға арҡыры сығып тора башланы, ялынып-ялбарып, нахаҡтан яла яғыуы өсөн инәлеп ғәфү үтенде, яңылышҡанмын, кисер, тине, бергә булайыҡ, тине. Был мәсьәләлә ошолай яңылышҡансы, теге саҡта ташҡын йылға аша ат йәҙҙөртөп апсыҡҡанында уҡ һыуға батырып китһәң ни булды мине, һинең өсөн тере түгел — үле мин, тип яуапланым. Әммә егет аҙағынаса егет булып ҡалманы. Итәгемә аҫылынырҙай һөйрәлеп йөрөнө лә, үҙенекен итә алмағас, егетлек выжданын юйып, килбәтһеҙ яла-ғәйбәттәре менән мине уғата бысратырға, мәсхәрәләргә кереште...

Абағаны, тылсымлы үлән, тиҙәр, ул төндөң иң уртаһында, ҡараңғы миҙгелдә яҡты йондоҙҙай балҡып сәскә ата, тиҙәр. Абағаға башын терәп бер генә йоҡлап киткән кешенең дә ғүмеренә тылсымлы абаға яҙмышы йоға, тиҙәр. Мин абаға араһында тыуғанмын, ғүмеремдең иң ҡараңғы төнөндә шул абағалыҡта бына һине — сатҡы-нурлы ут-йондоҙомдо таптым...”

...Куликово ауылына улар көтөү ҡыуған саҡта барып керҙе. Таң ысыҡтары ярып, өҫтәре лыс-һыуланған, икеһе тиң өшөгән, әммә күңелдәре ҡайнар — бәхетле ине улар. Моғайын, бәхеттәре йөҙҙәренә сыҡҡандыр: осраған һәр береһе, башын эйеп сәләмләп, Ҡояшты оҙатҡандай, арттарынан төбәлеп ҡарап ҡала...

Любаларҙың урамына тиңәлгәс, ауыл өҫтөн көн балҡытып ебәрҙе, һыу буйына төшөп барған аҡҡоштарҙай теҙелгән йорттарҙың кәрниздәренән, төкөмәләренән, тәҙрә ҡапҡастарынан күҙҙәрҙе оло мөғжизә — сағыу буяуҙар байрамы арбап алды: һәр өй йөҙөн биҙәкләп, ағаска ырып эшләнгән төрлө ҡоштар, ҡоштар, ҡоштар ҡанат киреп оса ине. Сөнки һәр кәрниз, фронтон-төкөмә, ишек-тәҙрә ҡапҡастары оҫта-рәссам ҡулы семәрләгән әкиәти ҡоштар көтеүе менән сырмап алынып, бына-бына улар һауала ҡанат ҡаға башлар ҙа йорттар күккә күтәрелер, аяҙ зәңгәр көмбәҙ буйлап осоп китерҙәр төҫлө...

-- Атайым ҡулы. Һәр береһен атайым биҙәкләгән.

-- Изге тылсым эйәһе һинең атайың.

-- Кәрниздәргә, тәҙрә ҡапҡастарына ҡарап ҡына әйт әле: ҡайһы йортҡа нығыраҡ тарта күңелең?

Торналар, торналар! Ҡанат киреп осоп килгән торналар. Муйындарын өҙөлдөргәнсе һуҙылып, күктәрҙе тирбәлдертеп, һорнай тартҡан торналар. Ата-баба күҙ ҡараһылай ҡурсалаған изге торналар!.. Йөрәге төбөнән ҡубынып,

торналарға ҡул һондо. Һәм тылсымлы юлдашының бәхетле көлөүен ишетте:

-- Дөрөҫ, дөрөҫ күрһәттең, ул — беҙҙең йорт! Әллә электән үк белә инеңме?

-- Тыуа-тыуғандан белә инем был йортто! – Танһығын ҡосаҡланы.

— Йәнем, кешеләр ҡарай, әйҙә, тиҙерәк өйгә уҙ.

Яков Ксенофонтович, ауылдың бөтмөр оҫтаһы, күптән балтаһын ҡыҫтырып китеп барған. Ҡыҙ тиҙ генә өҫ-башын алмаштырып, һыйыр һауырға йүгерҙе. Өйҙә яңғыҙ үҙе генә ҡалған Басир, шул сәғәте-минутында уҡ Аҡһылыуын юҡһынып, уны кемдер алып китерҙәй хис итеп, ихатаға тартылды. Күнәк эсендә бәрелеп тымыҡ ҡына безелдәгән һөт тауышы һиҫкәндерҙе. Люба, ҡояш битендәй түп-түңәрәк ултырғыска зифа һыны менән йәтеш йәпләнеп, ҡулдарын барабан ҡаҡҡандай ҡыҙыу һәм тигеҙ хәрәкәтләндереп, тулы Айҙай түңәрәк күнәк ауыҙына кәкере мөгөҙлө ҡоба һыйырҙың ҡамыштай тиртеү имсәктәрен безелдәтеп тарта ине. Талғын тәбиғилеге менән, ысынлығы менән рәссамдың күҙ алдында тормош үҙе тергеҙгән илаһи картина — һөйгәненең һыйыр һауыу тылсымы һүрәтләнеп, йөрәкте семерләтте, мольберт менән бумаланы юҡһыныу хисен арттырҙы. Күҙҙәрен йомоңҡорап, ғәҙәтенсә, тейешле ракурс һайлау өсөн, бер нисә аҙым ситкәрәк тайшанғайны, көтөлмәгән икенсе бер мажараға юлығып, ҡыҫҡырып уҡ ебәрҙе.

-- Ә, нимә? — тип тауыш бирҙе йәш хужабикә, талғын бызылдатыуын мәлгә тымыҙып. Егеттең өндәшмәй, бура бүрәнәләренә аңшайып тороуын күргәс, ғәмһеҙ ҡыҫҡырып көлдө, тағы ла һөт безелдәүенә күмелде. Басирҙы албырғатып, ҡарағай бура мөйөштәренән баға ине был хикмәт: һәр бүрәнә башы — теп-тере сырайлы әҙәм башы, ғәжәп оҫта ҡулдан юнып-ырып яһалған ифрат үҙенсәлекле, характерлы кешеләрҙең теремек ҡиәфәт-йөҙҙәре!.. Баштар, муйынға муйын ятып, дүрт мөйөш хасил ҡылған, муйынға муйын һалынмыш оҙон әҙәм кәүҙәләренән буралғандай сәйер тәьҫир ҡалдыра ине бура.

-- Аптырап тораһыңмы? — Люба һөтлө ҡулы менән егетенең елкәһенән һыйпаны. Ул инде ҡоба һыйырҙы көтөүгә ҡыуған, бәшмәк башы кеүек ҡабарып күбекләнгән һөт күнәген сөйҙән алып, ҡарбаҙға ыңғайлай ине.

-- Шаҡ-ҡатырғыс.

-- Атай сәйерлектәре. Ошо әкәмәте менән хөкөмгә тарттырылып, башы төрмәнән саҡ-саҡ ҡотолоп ҡалды. Көндәрҙән бер көндө бында «ҡыҙыл әтәс» ебәрһәләр ҙә ғәжәп түгел.

-- Ни өсөн? — Рәссамдың аңына һыйманы.

-- Ә шуның өсөн, — тине Люба, бура мөйөшөнә бармағын төртөп. — Ошо ауыл ирҙәренең ҡойоп ҡуйған портреттары бит былар. Өҫтәүенә, araларында төбәктең бер-нисә етәксе йөҙө лә бар... Улар колхоз йыйылышында атайымды, ситкә китеп оҙон аҡса ҡайыра, колхозға файҙаһы юҡ, тип ғәйепләгәндәр, Яков ҡарттың эшен ауыл сходына ҡуйып, үҙен ҡыҙыу мунсала миндекһеҙ сабындырырға кәрәк, тип ҡыҫҡырғандар. Атайым шул йыйылыштан енләнеп-туҙынып ҡайтты ла, иҫке мунсабыҙҙы һүтеп ташлап, яңыны бурарға тотондо, һәр бүрәнә башын баяғы ҡыҫҡырыусыларҙың башы итеп яһаны... Йәнәһе, ауылдаштары уны, үҙҙәре теләгән һайын түгел, ә ул үҙе теләгән һайын ҡыҙыу

мунсаға индертеп ҡараһындар әле...

Люба өйгә оҙон муйынлы тәрән балсыҡ көршәккә һөҙөлгән йылы һөт алып инде. Үҙ ғүмерендә тәүтапҡыр Басир, йөрәге жыулап, был ҡулдарҙан аҡ-ыуҙы ғына түгел, ә ағыуҙы ла шатланып эсеренә төшөндө. Һәм ошо хисте тойоу — бәхеттәрҙең дә бәхете ине.

-- Ниңә баштан уҡ үҙеңдең — гөнаһһыҙ-саф ҡыҙ бала, Ивандың һиңә төптө ятбауыр икәнлеген әйтмәнең? — Егет үпкәләй бирҙе.

-- Шулай тиһәм, тап һин абаға сәскәм икәнен ҡайҙан белер инем һуң?..

Һыуалғыска тиклем оҙатып ҡалды. Аҡ күнәктәр эленгән алмалы урыҫ көйәнтәһен юлға арҡыры тотоп, икеһе ике осонан услап барҙылар — алһыу алмалар теҙелгән ошо йәйғор менән, әйтерһең, йөрәктәрен тоташтырҙылар...

Артабанғы ваҡиғаларҙың насар спектакль һымаҡ уйналырын, араларҙы беркеткән йәйғор-көйөнтәне йәшен һуғып һындырырын кем башына килтерһен...

## ҺИГЕҘЕНСЕ СӘХИФӘ

«Беҙгә ул ҡыйын ине, ә хәҙер... Ыңғырсаҡ-Ҡамырбайҙарҙы хатта өрмәгән ергә ултыртмайҙар — обком секретары шәхсәнә ҡайғырта, фатир юллашып йөрөй... — Ҡайтыр юлда оло түрә «Волга»һының йомшаҡ-йәтеш креслоһында тирбәлеп барған Ҡыҙыл Башҡорттоң уттай ерән сәстәренә ҡарап, Мотал ана шулайыраҡ хитланды. — Иллә үҙебеҙ сабыр булғанбыҙ икән, — тип кинәнеп тә ҡуйҙы. — Мөхлисә менән кинәт кенә никахлашҡас, ҡайһындай этлекле шарттарҙа — студент ятаҡханаһының шырпы ҡабындай ғына бүлмәһендә шаршау аша ике ғаилә йәшәнек, әммә револьверлы шиғыр-миғыр яҙып зарланышып йөрөмәнек... Һәм ҡапылтын һиҫкәнде: сеү!.. Беҙҙең быуын менән хәҙерге быуын... был бит баяғы романымдың темаһы! «Аталар һәм балалар» проблемаһын, бер-береһенә сағыштырып, өр-яңынан күтәрергә лә ошоғаса һис кем хәл итмәгәнсә — заманаса сисергә сеймәлгән иҫке епте...»

Оло йортҡа кире әйләнеп ҡайтып, ҡорос арғымаҡтан төшөп, бажаһы менән ҡул ҡыҫышып хушлашҡас, дәртле аҙымдар менән йортона ыңғайланы.

Мөхлисәһе, ғәҙәтенсә, «Ярлауыҡ»ынан ныҡ һуңлап ҡайтҡас, койканың ян ҡанатында, һис ни белмәй, йәш ҡыҙҙарса бөгәрләнеп ятып йоҡо һимертә.

Әҙип иһә үҙ бүлмәһендә төңөп, аҙыласаҡ яңы романы хаҡында төндөң икенсе яртыһынаса уйланды. Төшө өнгә ялғанып, романдың сюжет һыҙыҡтары мейеһен симәлткән хәлдә, ғәҙәттәгеһенән иртәрәк уянып, Мөхлисәһен борсомаҫҡа тырышып, кофе бешереп эсте лә йәһәт кейенеп сыҡты. Йоҡлай тигән яртыһы кинәт туҙғаҡ башын ҡалҡытып: «Обкомғамы? Онотма, Ҡыҙыл башҡортто «Ярлауыҡ»ка ҡунаҡҡа саҡырып ҡайт!» -- тип тизып ҡалды, сөнки Басир-ҡәйнешенең ҡайтыуы хөрмәтенә үҙенең ресторанында оло табын ҡорорға сәмләнгәйне. Әҙип иртәнге яңы яуған, әскелтем-сөскөлтөм аңҡышлы көрпәк ҡарҙан эре аҙымлап гаражына ыңғайланы -- мейеһен йәшендәй телеп уҙған әҫәр планын Ҡыҙыл Башҡортҡа тиреpгә, фатихаһын алырға! Обком секретары үҙе

хуплаһа, журналда ла, нәшриәттә лә тотҡарлыҡ булмаясаҡ – яңы китап табанан ҡупҡан уңған ҡоймаҡтай тыуасаҡ.

Киоскынан «Литературная газета»ның әлегәсә өйгә килеп етмәгән һуңғы һанын һатып алып, ғәҙәттә төбәктәрҙәге әҙәби ваҡиғаларҙы яҡтырта торған битен асҡайны, «Башҡорт АССР-ының совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами иптәш менән әңгәмә» тигән күләмле мәҡәләгә иғтибар итеп, баҫып торғаны килеш күҙ йүгертеп сыҡҡас, бер абзацын, кеҫәһендәге ҡәләмдәренең береһен (ул бер-нисә төҫлө ҡәләм йөрөтә ине) һәрмәп алып, тексҡа үҙ аңлатмаларын бирә-бирә һәм йәненә тейгән ҡайһы бер һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙа-һыҙа, тулыһынса уҡыны:

*«По обе стороны от Урала — от Волги до Иртыша* (тинтәк: шулай ҙа йәшерә алмаған бит тарихи Башҡортостаныбыҙҙың цензура тыйған сиктәрен – шуға ла башы етмәгән!) *— на протяжении тысячелетия* ***скитались*** *башкирские племена, гонимые всеми ветрами исторической судьбы* (Башҡортостан тигән илебеҙ булмаған!..)... *Вплоть до 1919 года...* ***не имели*** *ни своей* ***собственной крыши*** *над головой, ни прочной ограды на рубежах, иными словами,* ***не имели*** *своей государственности. Мы были* ***нищими и убогими...*** *Мы были* ***отсталыми...*** *Мы были* ***необразованными...*** *Конечно, и в те далекие времена бывало, например, привозили нашего певца или кураиста Исянбаева в Париж, но только для того, чтобы удивить публику демонстрацией перед миром* ***человека-дикаря».***

Бына һеҙгә, кәрәкһә, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ!..

Алғы бүлмәлә Һылыуҡай йылы теплицала үҫкән гөл-сәскәләй алсаҡ балҡып ҡаршыланы, серле йылмайып, күҙҙәрен мыҙылдатты:

-- Әҙиптәрҙең араһында иң йөрөмтәлеһе, ахыры, һеҙ, Мотал Булаттимерович!

Мәскәү тиклем Мәскәү гәзитендә Мәрүән боларткан эске ярһыуын көскә баҫып, алсаҡланырға тырышып, Мотал ханым тәңгәлендә туҡталды:

-- Абауҡайым, саҡ ҡына беҙҙе лә йәлләһәгеҙсе!.. — Күнегелгән хәрәкәт менән туташ алдына алтын буталлы Мәскәү шоколадын һалды. Тегеһе уны нәфис бармаҡ осо менән генә өҫтәл тартмаһына төшөрҙө:

-- Бәрәкалла, йәлләр өсөн һеҙгә ни булған тағы?

-- Һеҙ, Һылыуҡай, көндән-көн һылыуыраҡ, тылсымлыраҡ!

-- Абау, гонаһтан ҡурҡығыҙ, Мотал Булаттимерович! — Күк божоралап кершәнләгән күҙҙәрен шарландыртып, ҡыҙыл маникюрлы бармаҡ янап киҫәтте. — Һеҙҙең есөн был донъяла Мөхлисә ханымдан да һылыуырағы юҡтыр!

-- Үҙендәме? – тине, ҡыҙғылт көплө ишек яғына ымлап.

-- Үҙендә.

-- Кәйефе?

-- Ал да гөл – һеҙҙе генә көтә кеүек. Хәҙер! – Телефондан кем килгәнен белдертеп, үткәреү рөхсәтен алғас, Мотал, лап-лоп атлап, төпкә уҙҙы, хәйерһеҙ гәзитте секретарь алдына ырғытты.

-- Нимә? – Шулай тине лә онотто Ҡыҙыл башҡорт, сөнки үҙенең сәсе кеүек үк ҡып-ҡыҙыл телефон трубкаһына ярһып ҡысҡыра ине; Моталға әйләнеп ҡарап, ултырырға ымланы. Һөйләшеүе шаҡтай оҙонға һуҙылғанлыҡтан, әмәлһеҙҙән, Мотал да һүҙ ағышына ылығып ҡолаҡ һалды.

—Нимә? Бәндәбикә кирбесе, тиһегеҙме? Ниндәй Бәндәбикә? Туҡтағыҙ. — Трубка микрофонын усы менән ҡаплап, бажаһына өндәште. — Үҙеңә мәғлүм Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллин... хөрмәтле тарихсыбыҙ. Бөгөнгө гәзиттәге фельетон өсөн дыу-ҡуба, Вилор Иҫәрғәповичҡа барып етеү менән янай... — Ҡунағының һораулы ҡарашын ҡул ишараһы менән тыйҙы. — Йә, тыңлайым. Алло, ҡайҙа юғалдығыҙ, Йыһандар Илһамдар улы? Эйе, тыңлайым. Һем, шулай тиһегеҙме! Ысынлап та, башығыҙға һуҡҡан икән, әй, Бәндәбикә кирбесе, ха-ха-ха! Вуздан ҡыуҙыртырға?!. Кемде, Таңатарованы? Юҡ, хөрмәтле профессор, быныһы ҡулдан килмәй. Эйе, минең дә, һеҙҙең дә! Беҙҙә демократия. Эйе, дөрөҫ: *социалистик демократия.* Ә шулай ҙа һәр мәсьәлә буйынса һәр кем үҙ фекерен ярып әйтергә хоҡуҡлы. Эйе, Конституция буйынса. Шул иҫәптән матбуғатта ла. Опровержение? Юҡ, булдыра алмайым, хөрмәтлем. Был мәсьәлә буйынса бында төбәлеп яңылышҡанһығыҙ. Минме? Юҡ, мин бында көсһөҙ. Вилор Иҫәрғәповичты ла юҡ-бар менән борсомағыҙ. *Беренсене* әйтәм. Туранан-тура редакцияға мөрәжәғәт итегеҙ. Хушығыҙ! — Трубканы ҡаптыртып, дөрләп торған ҡарыш сәстәрен биш бармағы менән артҡа һыпырҙы, Мотал килтергән гәзиткә һалды ҡулын:

-- Йә, нимә әйтергә теләйһең?

-- Хурлығынан үлерһең! Уҡып ҡара бына бынауы урынын: сығырынан сыҡҡан бит.

-- Беләм.

-- Белгәс, ниңә ҡулына һуҡмайһың бәдбәхеттең?

-- Ҡулым ҡыҫҡа.

-- Һинеңме? – Ауыҙын ҡыйшайтып көлдө. – Беҙҙең кеүектәргә генә етә ҡулың.

-- Үҙеңә яҡшы мәғлүм, уны Вилор Иҫәрғәпович шәхсән үҙе ярлыҡай. Һеҙҙең кеүектәр күп, ә ул берәү генә.

-- Берәү генәлер шул... Мәсхәрә: икеһе тап килешкәндәре һайын, урыҫ менән мәрйә кеүек, ҡултыҡлашып йөрөйҙәр, әллә икеһе тиң зәңгәрҙәрме икән?.. Голубойҙармы, тим... Ә?

Ҡыҙыл башҡорт ырғып тороп екерҙе:

-- Етте! Ауыҙың ни һөйләгәнде ҡолағың ишетмәй – көфөр һүҙҙәр ысҡындыраһың. Һин үҙең ул тамам сығырыңдан сыҡҡан! – Һыуына төшөп, кире ултырҙы, быға ла урын күрһәтте. – Гәзитеңде кире ал, Мәскәүҙә генә түгел ул яңылыҡ. Хәкимуллинды әйтәм, аяҡ тибеп дау һала...

-- Уға ни булған тағы?

-- Үҙебеҙҙең гәзиттәрҙе уҡымайһың дамы әллә?

-- Бөгөнгөһөнә өлгөрмәнем шул әле.

-- Балдыҙыңдың ни яҙғанын да белмәйһең. Мә, матбуғатыбыҙҙың ҡәҙерле уҙаманы! — Асып һалынған баҫманы әҙиптең алдына ышырҙы. «Башҡа төшкән кирбес» тигән фельетондың бер өлөшө ҡыҙыл ҡәләм менән уратылғайны:

«Ярай, атаҡлы профессор-тарихсыбыҙҙың, йәғни шанлы Хәкимуллин иптәштең, эрудиция тәрәнлегенә ышанып таянайыҡ. Ошоғаса һис кем Бәндәбикә кәшәнәһе кирбестәренең есеменә һәм Һаҡмар — Эйек аралығында тоташ тауҙар

хасил иткән ҡыҙыл балсыҡҡа сағыштырма анализ үткәрмәгәнлектән, быны кескәй етешһеҙлек иҫәпләп, ҡыҙыл кирбестәр, атаҡлы ғалим әйткәнсә, сит мәмләкәт уңғандары тарафынан алыҫ Амударъя һәм Сырдаръя аралығындағы хөрәсән балсығынан һуғып яндырылған да мәҙәниәтле дөйәләрҙең үркәстәрендә артмаҡлап ҡырағай Урал итәгенә килтерелгән, тип һанайыҡ. Профессор Хәкимуллиндың: «XI быуатҡаса Уралда ғөмүмән төркиҙәрҙең хатта еҫе-ҡоҫо ла булмаған, ә башҡорттар — бынан дүрт быуат элек кенә уҡмашҡан халыҡ» тигән мәшһүр концепцияһының мәғрүр фәнни бинаһы олғашып үҫһен өсөн, шул ғалимыбыҙ тирләп-бешеп әтмәләгән тәғлимәт кирбесен һиммәтле фән диуарына күтәреп һалышайыҡ. Ләкин шул саҡ ул бинанан көтмәгәндә Бәндәбикә ханым өйөнөң иҫкереп бөткән ҡыҙыл кирбесе нәфрәтле ҡубынып, концепция нуры яҡтыртҡан маһир баштың ҡаҡ түбәһенә «дыңҡ!» итеп килеп төшһә?! «Килмешәктәр түгел беҙ — беҙҙе ошондағы халыҡ урындағы ҡыҙыл балсыҡтан баҫып һуҡты!» — тип һөрәнләп ебәрһә? Кирбес шауҡымы төшкән ғалим мейеһен, моғайын, йәшен тиҙлегендә фекер осҡоно ярып үтер: «бөйөк тарихи концепция»ны төҙөгәндә бер бәләкәй генә нәмә күҙ уңынан ысҡындырылған — кирбестең өс үлсәме! Йәғни был кирбес-ҡартластың ябай арҡырыһы, буйы, бейеклеге нисәшәр иле тәшкил итә лә профессор таянырға яраҡкан «алыҫ Афросиаб иле»ндәге һәм донъяның башҡа урындарындағы дәүер-дәүер ҡатламдарҙан археологтар соҡоп сығарған кирбестәрҙең шул уҡ үлсәмдәре ниндәй?.. Һөҙөмтәлә Бәндәбикә кирбесе — үҙенсәлекле бөтөнләй икенсе ҡалып — Ер менән Күк араһы икәненә инаныр ине халыҡ. Йәғни мәҫәлән, тибеҙ, ете үлсәп бер киҫмәйенсәрәк «атаҡлы концепция» тыуҙырған мөхтәрәм профессорыбыҙҙың яҫы эшләпә шүрлегенә ана шулай шифалы ҡағылһа ярар ине лә ул Бәндәбикә кирбесе!..»

Мотал гәзитте этәрҙе:

-- Диләфрүз балдыҙымдың саялығы билдәле, әммә фельетон ише фельетон яҙғанын һис белмәгәйнем. Бында, минеңсә, Хәкимуллинға туҙынырға урын юҡ: Күк төбөнә сөйгән кирбесе емерә төшкән башына.

-- Шулай ҙа ҙур ғалим, ул.

-- Бәләкәс кенә диктатор. Һәр тарихи тәғлимәтте үҙенең серек концепцияһына һалып үлсәй.

-- Ярай, ул турала ҡуйыртмайыраҡ торайыҡ. Әгәр ул диктатор икән, башҡа аҡыллы баштар булһын революционер. Фәндә бер кемдең дә зиһене бығауланмаған, ауыҙына келәп һалынмаған.

-- Унынһы шулай ҙа бит, ләкин... революционер булыу өсөн дә тәүшарт кәрәк. Бына минең бер туған кейәүем, үҙеңә мәғлүм Йәүҙәт Ҡондоҙбаев, мәҫәлән, тап шул юҫыҡлы диссертацияһын Хәкимуллин етәкләгән ғилми советтан үткәрә алмай аҙаплана. Дәрте бар ҙа, дарманы юҡ.

-- Ә һин нимә ҡарайһың, бир дарман! — Бүлмә хужаһы, моғайын, уйынға һабыштырырға самалаңы, әммә әҙип-ҡорҙашы етди ҡалды:

-- Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй, тигәндәр.

-- Бына һиңә бер туған ҡайнаға! — Үҙ уйҙарына күмелгән Димустандың боҙҙай һалҡын күҙҙәрендә, тап йәш студент саҡтарындағылай, ҡапыл ғына зәһәр

сәм ҡуҙыраны. — Һин үҙең бит фигура — ҡырмыҫҡа иләүен таяҡ тығып болғатырлыҡ. Ҡуҙғалт йәмәғәт фекерен! Ҡарттар әйтмешләй, ғәҙеллекте юллап ниңә сың ормайһың, ер һелкетеп сыңылдатмайһың?

-- Һе! Каждый сверчок да знай свой шесток, тигән урыҫ туғандар. Әле генә һандуғастай һайрайһың да бит, *яңы һепертке* ҡайһылай һеперер икән, тип шөрләйһең

-- Ә үҙең, ҡойроҡто бот араһына ҡыҫып, ҡыуаҡ аҫтына боҫорға самалайһың.

-- Мин тарихсы түгел — яҙыусы, беләһең.

-- Ысын яҙыусы — бер үк ваҡытта тарихсы ла, филолог та, этнограф та, ҡыҫҡаһы, үҙенә күрә энциклопедист ғалим булырға тейеш түгелме ни? Әллә яңылышаммы?

-- Ҡәҙерле дуҫ, юрғаныма ҡарап аяҡ һуҙамын. Бөйөк энциклопедистар дәүере тарихта ҡалды. Махсуслашыу, махсуслашыу һәм тағы ла махсуслашыу! Шулай талап итә беҙҙән замана!

Секретарҙың ултырғысы шығырланы — арҡаһын ныҡҡа терәп, кирелеберәк алды:

-- Модалы һүҙ фәстерәһең! Инде килеп ФТР[26]-ға ла һылтанһаң...

-- Эйе, хәҙер ФТР заманы — хатта тарихсылар ҙа көллө тарихты иңләй алмай. Физиктар, химиктар, математиктар тураһында әйтеп тә тормайым. Һәр белгес үҙенең тар ғына бер секторында соҡсона ла бары шуның өсөн генә яуап бирә, ти минең Йәүҙәт-кейәү.

-- Бына-бына, — Бикләмешев һуҡ бармағын башы өҫтөнә һөңгөләндертеп сөйҙө, — «шуның өсөн генә яуап бирә» шул! Бына һеҙ – яҙыусылар ҙа шулай: обкомға ла хөкүмәткә япһара. Яуаплылыҡты күберәк тә киңерәк йөкмәүҙән ҡасыу ысулы түгелме был?..

-- Һе, ырғып ҡара кендегеңдән юғарыраҡ...

-- Шуға күрә лә Хәкимуллиндар ҡаршылыҡҡа осрамай – үҙен акула итеп тоя.— Уйланды. — Атайҙар һабағын онотоп барабыҙ, әшнә: улар бер ҙә киңерәк тә тәрәнерәк алдырыуҙан, ауырыраҡ күтәреүҙән ҡурҡмаған...

-- Күтәрер инек тә ул, башҡа һуғып сүктертмәһәгеҙ...

Тик секретарь быныһын да ишетмәгәнгә һалышты:

-- Хәтерләйек саф ленинсы Шәһит Хоҙайбирҙинды... Ал үҙеңдең ғәзиз атайыңды -- мөхтәрәм Булаттимер Ташбулат улы Шаһибәрәковты! Йәш республикабыҙҙағы иң күренекле химик-инженер, химия промышленносын ойоштороусы — биш йыллыҡтарҙың төҙөлөш ҡаҙандарында көнө-төнө ҡайнаусы. Ләкин бер ҙә «был минең эш түгел» тип янтаймаған — заманаһының әҙәбиәт, тел, тарих фәндәре усағында ла большевиктарса янған. Беләһеңме бөгөнгө мәшһүр тарихсы-филологыбыҙ профессор Йәмил Ҡотлой улы Ҡотлоевты ла, иҫке башҡорт телен өйрәнеү өлкәһендә униң менән ең һыҙғанып алышҡан етди белгес Таһир Ғөләм улы Баҡишевты ла атайың нисек ижадҡа дәртләндертеп, шул уҡ ваҡытта ниндәй дыуамаллыҡтарҙан, бәлә-ҡазаларҙан аралап ҡалғанын? Әйткәндәй, һинең ише киң ҡоласлы яҙыусыға роман өсөн үҙе

[26] ФТР – фәнни-техник революция.

бер ҡыҙыҡлы тема был һәм ул хаҡта партархивта бик күп мәғлүмәттәр бар — иренмәй генә ултырып соҡсон әле...

Аҡыл өйрәтеүгә әүерелә барған монологтан биҙә башлаған әҙип үҙенең бында килеү маҡсатын иҫкәртергә теләне:

—Минең *һуңғы* һәм *төп* роман...

Бүлмә хужаһы ишетмәгәндәй бүлдерҙе:

—...Бының менән нимә тимәксемен? Киңерәк ҡоласлы булған ул беҙҙең атайҙар, куҙҙәре дүрт офоҡто ла иңләгән!

— Ә һөҙөмтәһе?.. —Мотал түҙемһеҙләнде. — Улар иңләгән проблемалар ошоғаса хәл ителмәй ҡала бирә: атай нигеҙләгән Иҫке химия заводының мөрйәләренән саф зәңгәр Күккә һаман ағыулы төтөн бөркөлә, көмөш һыулы Ағиҙелгә ҡара ыу ағыла, ә атай дуҫтары сәкәләшкән тарих һәм тел белеме өлкәләрендә шул уҡ айпалашыу бара...

-- Шул уҡ түгел. Заман башҡа – заң башҡа, тигәндәр бит.

-- Заман заңы ла фәхишәгә әүерелде: *оло түрә* креслоһында кем ултырыуға ҡарап үҙгәрә...

Ҡыҙыл Башҡорт, шикләнеп, берсә -- Моталға, берсә ишеккә йылт-йылт күҙ һалды ла түшәмгә -- өҫтә тап *оло түрә* ултырған тәңгәлгә бармаҡ төртөп, тауышын аҡрынайтты:

-- Көфөр һүҙҙәреңде әйтмәнең, ә мин ишетмәнем.

Берауыҡ тындылар, күңелһеҙ уйландылар.

-- Тимәк, ауыҙ асырға ла ярамай? – тине әҙип.

—Тимәк, һинең менән минең елек шыйыҡланған, сөнки атайҙар өлгөрмәгәнде беҙ еренә еткереп өлгөртмәнек... Башланған эш яртылаш тороп ҡалды.

-- Йәғни?

-- Йәғни, үҙеңә мәғлүм: заманында Ҡотлоев һәм Баҡишевтың ҡара-ҡаршы алышының төп асылын тәшкил иткән *автохтонлыҡ һәм мигрантлыҡ* теориялары...

-- Ҡотлоевҡа Баҡишевты тар-мар ҡылырға обком үҙе ярҙам иткән дәбаһа, хатта Ҡотлоев шуның өсөн Ленин ордены алған!

... Шулай ҙа булһын, ти... Ләкин яңы заман өсөн дә Ленин ордены бар бит.

-- Заман башҡа – заң башҡа, тимәксеһең?

-- Эйе... Ҡотлоев уҙаман тарафынан тар-мар ҡылынған Баҡишев ғилми мәктәбе күҙ алдыбыҙҙа ирәбеләнеп терелә — яңы быуын ғалимдары аңында.

-- Ҡондоҙбаев-ҡәйнешемде әйтәһеңме?

-- Ул да, башҡаһы ла... Әллә ҡасан туҡталды, ҡыйралды тигән тирмән ташы уның һайын ҡеүәтләнеп әйләнә... Ә һин, күренекле яҙыусы, ниңә тормош ҡуйҡымына кермәйһең, шуларҙы ярып һалмайһың? «Моя хата с краю» тип, кемдер әйтмешләй, «рапс-вика-кукуруза серияһы»нан бүртек томдар ыратып, ҡыуаҡ төбөндә боҫоп ятаһың...

Мотал йәберһенмәне:

—Ярай, әйттем дә бөттөм, тигәндәй... Минең «рапс-вика-кукуруза серияһы»н заманында, хәҙер ауыл хужалығы темаһына, көн ҡаҙағына һуҡкан

әҫәрҙәр кәрәк, тип, үҙегеҙ – обком йәһәтләткәйне, урыҫсаға тәржемәләтеп, ВЦСПС[27] премияһын да бирҙерткәйне бит... Ә Ҡотлоев – Баҡишев темаһына килгәндә, бутканы кем күрәләтә күмһеткән — үҙе һоҫоп ашаһын. Һин әйткән ул ҡыуаҡ төбөндә минең үҙ эш ыҫтаным — яҙыу өҫтәлем бар, эйе. Хәкимуллин да, Ҡондоҙбаев та минең өсөн роман яҙып бирмәҫ.

Секретарҙың иҫенә төштө:

-- Әйткәндәй, ни хәлдә әле һинең шул атаҡлы роман — бөтәме, юҡмы инде, ниһәйәт!? «Эшсе ғәли йәнәптәре», тим?

-- Ниһәйәт, бөттө... -- Әҙип тәрән көрһөндө.

-- Журналға тапшырҙыңмы, әллә тура нәшриәткә?

-- Аллаға тапшырҙым мин уны, арҡыры сатраш тартып. Етте, *үҙемсә яҙырга* ваҡыт.

-- Бәй, быға тиклем кемсә яҙҙың һуң?

-- Һеҙҙеңсә, партия ҡушканса, әлбиттә. Шуға күрә лә «рапс-вика-кукуруза» *трилогияһын* тыуҙырҙым, шунан һуң хатта *пенталогия* яҙырға дәртләндерҙегеҙ... Инде мин...

Телмәр тоторға сәме ҡомарған бүлмә хужаһы был юлы ла ҡорҙашының фекерен үҫтертергә, бөгөн генә ижадының күк ҡабағы асылыуын — *иң һуңғы* тип һанаған *төп* романының концепцияһы яралып, иҫ киткес мөһим проблемаға күсәрләнеүен ауыҙ тултырып әйтергә форсат бирмәне:

-- Маладис, ҡотлайым! Тимәк, һинең, ниһәйәт, һөрһөп бөткән темаларҙан арынып, тере тормош ҡаҙанында ҡайнарға, көнөбөҙҙөң иң-иң киҫкен проблемаларына сумылырға форсатың киң.

-- Форсатыбыҙ киң дә бит, ғүмеркәйҙәр бик тар шул...

-- Эшең менән киңәйтә бел тарлыҡты. Әле әйткән тирмән таштары һөйәк онтап әйләнһен, ҡойон ҡуйыра бирһен, тимәйһеңдер бит? Кейәүкәйең, балдыҙкайың...

-- Һәр хәлдә, ике ҡойон өйөрмәһе ҡара-ҡаршы бәрелешкәндә араларында онталыу теләгем юҡ. Хатта һылыу балдыҙкайҙы, йәки кейәү-балаҡайҙы ҡаплап ҡалыу өсөн дә... Бының мәғәнәһеҙлеген шул уҡ атайҙар тәжрибәһе иҫбатлай.

-- Тимәк, һәр кем үҙенең мөйөшөнә ышыҡлана -- ҡалған мөйөштәрҙә нимә булғанын күрмәйем дә, белмәйем дә: миңә тимәгәйе, ут ҡапһын, янып юҡҡа сыҡһын өйҙөң һинекенән башҡа яҡтары?..

-- Шуны булдыртмаҫ өсөн өйҙөң түбәһе бар, түбә сарҙағында бейек креслола бөтәһен күреп, етәкләп ултырыусыларыбыҙ — һеҙ бар.

-- Ғәфү ит, дуҫкайым, торған һайын оҡшамай бараһың миңә. — Бүлмә хужаһы алдындағы ҡағыҙҙар өйөмөн ҡыштырҙатты. — Шайтан төкөрҙөмө әллә телеңә?

-- Ә һин үҙең әллә миңә оҡшайһың тип уйлайһыңмы? — Мотал да үҙ сиратында, яйы тура килгән һайын ҡолағына һөйөклө ҡатыны туҡығандай, «үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле» бүгәйҙәй һөҙөп ҡараны. — Ниңә, ауырыу баштан алып, ауырымаған башҡа ауҙармаҡсыһың? Улай бик йәнең көйгәс, ниңә ғалимдарҙың

---

[27] ВЦСПС – Всесоюзный Центральный Совет Профсоюзов – профсоюздарҙың иң юғары органы.

үҙҙәрен ҡыҙыу табала бейетмәйһең?

—Әл-лә-лә! — Бикләмешев, ултырғысының арҡаһына салҡайып, яһалма кинәнеп көлдө. — Вәт, әй! Ниңә улай сығынсы аттай сапсынаһың, ҡойошҡаның аҫтына... теге нәмәкәй ҡыҫылдымы әллә, тигәндәй, ха-ха-ха! — Ҡулъяулығы менән күҙҙәрен һөртөп, йәһәт етди төҫ алды. — Ғәфү ит, туған, ҡайһы бер мәсьәләләрҙә һин минең өсөн, бәлки, академиктарҙан да мөһимерәктер: иҫке дуҫ, ҡорҙаш, уткер ҡәләмле публицист — ни тиһәм дә һүҙем үтә. Өҫтәүенә, ярып һалғыс тура һүҙле Булаттимер Ташбулатовичтың улы ла. Һине күрһәм, беләһеңме, шайтан алғыр Манара, — студент саҡтың ләҡәбен иҫкә алды, — мин бит уны, атайыңды, күҙ алдыма килтерәм — архивтағы документтар аша ғына белгән кешем тере булып килә лә баҫа! Һәм уның үҙе менән кәңәшләшкәндәймен! Беләһеңме, дуҫҡайым, атайың ҡайһындай шәхес? Юҡ, белмәйһең! Мин һиңә әйтәйем, партия өлкә комитетының даими ағзаһы булған ул; беҙҙең кеүек ҡурҡып-нитеп тормайынса, бөтә киҫкен мәсьәләләр буйынса ла ҡыйыу фекерен үткәргән. Уның сығыштарынан мин нисек эшләргә өйрәнәм — большевиклыҡ һабағы алам. Дөрөҫөн генә әйткәндә, һине лә мин шанлы атайыңдай ҡайнап-ташып торған ирәбе, киң ҡоласлы эшмәкәр итеп күрергә теләр инем... Ә һин... мин тарихсы түгел, тиһең...

Яҙыласаҡ романы хаҡында морон төрткән мөҡәддәс фекеренә юл аса алмай тамам йөҙәгән әҙип, интегеп, ике ҡулын әмәлһеҙ йәйеп әйтте:

-- Эйе, мин тарихи темаларға яҙмайым.

-- Ләкин халыҡты, йәш быуынды тарих менән тәрбиәләүҙең мөһимлеген беләһеңме?

-- Беләм. Тик уның өсөн үҙенең ҡәләмдәре — ылғый тарихи темаларға яҙыусылар етерлек. Ҡабатлап әйтәм: мин — башкөлләйгә бөгөнгөлә ҡайнаусы!

— Туҡта-туҡта! — Бикләмешев тырпай бармаҡлы ерән-йөнтәҫ ҡулын һауала болғаҡланы. — Бөгөнгөнө һәм киләсәк-перспективаны дөрөҫ һынландырыу өсөн, беләһеңме, Горький нимә кәрәк тигән? Иң кәмендә ике мең йыллыҡ ретроспективаны артында күҙаллау мотлаҡ! Башкөлләй бөгөнгө юҡ ул, булмаҫ та: бөгөнгөнөң дә һауаһына үтәнән-үтә тарих дарыһы һеңешкән: урамға сығып шырпы һыҙ — гөлтләп тоҡаныр һымаҡ. Ә һин, дуҫҡайым, күрмәйем дә, белмәйем дә, тимәккә бармаҡсыһың?.. Яҙыусы тиклем яҙыусының шундай тайғаҡ позицияла тороуы шомландыра, ғәфү ит.

Һуңғы баһанан әҙиптең һыртарҡаһы ҡабарҙы («Булаттимер шауҡымы»!), мейеһендә сәғәт һуҡҡандай дыңғылданы, шулай ҙа тышҡа сығармаҫҡа тырышты:

-- Һин, хөрмәтле етәксе иптәш, артығыраҡ ыҫҡындырҙың түгелме? Ниндәй тайғаҡ позиция?

-- Тыныслан, бер һиндә генә түгел. Әгәр шунан ғына еңеллек тапһаң, йәшермәй әйтә алам: бөгөн ул беҙҙең барыбыҙға ла шойҡан-касафатын һала. Бик тә белгең килһә, сер итеп кенә сисәйем: мин үҙем дә ҡайсаҡ табан аҫтарымда тап ана шул тайғаҡлыҡты тойоп яфаланам: башҡа берәү йөкмәп алыр әле йөктө, йәнәһе — ниңә ауыр күтәреп биртенергә?.. Рәхәт тә, йәтеш тә фәлсәфә... Ҡара ҡырғын-үләт кеүек, һиҙҙертмәй генә табандан үтеп инеп, намыҫтарын ҡаҡшата ул бәғзеләрҙең. Кешенән бәндә яһай.

-- Шуны яңы күрҙеңме? Бәндәғолдар булып бөткәнебеҙгә биш былтыр инде!

-- Шуны яҡшы белгәнгә лә әсенәм... Ғибрәт өсөн бер генә миҫал килтерәйем: күргәнең барҙыр урамда тротуар уртаһында *кеше* йығылып ятҡанын? Ашығыс ярҙам кәрәктер уға, бәлки, ғүмерен һаҡлап ҡалырға. Ул ята, ә бәндәғолдар, һарык көтөүе һымаҡ, тыпыр-тыпыр ике яғынан ағылып ҡына тора. Һис кемдең ҡатнашы юҡ. Сөнки үрелеп ҡул биреү — бер кемдең дә вазифаһына кермәй. Тимәк, яуап та бирмәй. Бер генә көс, ғәли йәнәп, даулай алыр ине унан яуапты — *Намыҫ*, әммә уныһын әлеге үләт ҡаҡшатҡан... Хәтерләйһеңме, дуҫҡайым, үҙебеҙҙең студент саҡтағы атаҡлы *Һаҙ биҫтәһен*? — Мотал терт-итеп ҡалды, арҡаһы буйлап һалҡын тараҡан йүгерҙе — нисек хәтерләмәҫкә?!. Был ғына аҙ, тигәндәй, Бикләмешев өҫтәкләне: — Шул Һаҙ биҫтәһе ҡаршыһында һыуға батып барғаныбыҙҙа ишкәктәрен йөкмәп ҡасҡан бәндәне? — Мотал маңлайына ҡалҡҡан һалҡын тирҙе усы менән һыпырҙы. Бикләмешев йәһәт уның күҙҙәренә ҡараны: — Ә минең ул хәтерҙә, хәтерҙә — нисәмә йылдар уҙһа ла... Һаҙ биҫтәһен асфальт ҡапланы хәҙер. Йорттары ла күккә олғашып ҡалҡынды: туғыҙ ҙа ун алты ҡат, егерме дүрт ҡат... Кешеләре техникум, вуз танытмалары алды. Хәҙер инде был әҙәмдәр, замандаштар, күреүебеҙсә, Һаҙ биҫтәһе яманатын иҫкә лә төшөрөрлөк түгел. Үҙ-үҙҙәрен тотош та, кейем дә, фиғыл да, һөйләш тә — тап юғары культура ҡалыбында. Әммә ҡарыйҙың ҡара һаҡалы ҡайҙа ла ҡалмай, тигәндәй, Һаҙ биҫтәһе шойҡанын елләтеп ташлап булмай бәғзе бер аңдарҙан һаман... Бына һин, яҙыусы, шул турала уйланып ҡарағаның бармы?

-- Уйламаһам да беләм.

-- Һаҙ биҫтәһе мөхите бит саф тәбиғәтле тормошобоҙҙа, күҙгә төшкән дегәнәктәй, өҙлөкһөҙ ҡырып тора... Әйтәйек, әҙәмдәр бер-береһенә иғтибарһыҙыраҡ, үҙҙәренә иғтибарлыраҡ була барһа, бел дә тор: Һаҙ биҫтәһе мөхите! Кемдеңдер күҙендә *кеше баһаһы* түбәнәйһә, шул уҡ ваҡытта шул уҡ миҡдарҙа *алтын хаҡы* күтәрелһә, тимәк, алдыбыҙҙа Һаҙ биҫтәһе бәндәһе. Ундай бәндә намыҫын да алтынға алмаштырыр... Алтын әйбер магазины алдында, хас та һуғыш ваҡытында карточкаға дүрт йөҙ грамм ҡара икмәк көткәндәй, ҡырҡ градуслы һыуыҡтарҙа ҡырҡ градуслы «йәшел йылан» менән тәнен йылытып, ҡара төндән шыҡырлап сират торор. Ҡала магазиндарының, тауар базаларының артҡы ишек арттарында шул бәндәләр уралыр, салғый аҫтынан юллап, «һин — миңә, мин — һиңә» ҡағиҙәһендәге ҡара баҙарын ҡорор. Тик ул артҡы ишек менән генә сикләнһә икән – парадныйҙарыңдан ғорур атлап инә, түргә менеп ултыра!.. Ундайҙарҙың аңында хатта донъяның мөғжизәһе — кеше ғүмере лә һары шайтан-металдың һалҡын балҡышы алдында тоноғайып, кесерәйеп ҡалғандай... — Бикләмешев, ике усында уйнаҡлаған киң тирәсле күҙлек быялаларын ҡулъяулығы менән оҙаҡ таҙартып, уйланыңҡырап алды. — Ләкин баяғы урамда йығылып ятыусы менән генә осланһа икән ҡойто хөсөт! Донъяның уғата хәтәрерәк яҡтары — *намыҫы ҡауыҡланған* буш йәндәрҙең юғарыға, хужалыҡтың идара итеү урындарына үрләүе бар бит әле, әлеге лә баяғы шул «һин — миңә, мин — һиңә» юлы менән...

-- Теңкәгә тейгәне шул.

-- Алайыҡ үҙеңә яҡшы таныш өлкәне — әҙәбиәтте. Үҙ эшенең ысын маһирҙары менән бер ҡатарҙан, классиктар дәрәжәһенә күтәреп йөрөтөлгән *ҡыуыҡ абруй* — ҡағыҙҙан ҡабартып яһалған бәғзе бер арыҫландарыбыҙ юҡмы ни?!.

Мотал йәнләнеп ҡыбырланы:

-- *Үҙе* (йәғни *беренсе!*) ҡултыҡлап йөрөткән Мәрүәнде әйтәһеңме?

Тегеһе был репликаны, әсеүташ ҡапҡандай сырайын һытып, ҡолағы һыртынан уҙҙырҙы:

-- ...Шуларҙың һыу менән тулған, ташҡа баҫманан өҙлөкһөҙ тупырлап төшөп торған кирбес ҡалынлыҡ томдарын бер-бер артлы ыратып, былай ҙа мул макулатура даръяһын арттырмайбыҙмы, тим?..

Мотал түҙә алманы:

-- Кем ғәйепле? Ни өсөн минең ҡолағыма туҡыйһың? Совет халыҡ шағирыбыҙҙың, мәҫәлән, кибеттәрҙә саңланып ятҡан ике томлығының тиражын киҫкес-станокта *макулатураға туратып,* шул уҡ текстарын иртәгәһенә үк өс томлыҡ итеп сығарырға тотондоғоҙ түгелме ни, сөнки совет халыҡ шағирына өҙлөкһөҙ ташҡа баҫылырға, гонорар алырға кәрәк...

-- ...Ул томдарҙың Ағиҙел һыуы тултырып ҡабартылғанлығын, иң яҡшы тигәндәребеҙ — *урта ҡул,* йәки *икенсел* нәмә икәндәрен күрә-белә тороп, кемебеҙҙең шул хаҡта бер ауыҙ асып әйткәне, бушҡыуыҡ арыҫландың кәперәйгән ҡағыҙ һынын төртөп йыртҡаны бар?.. Мәҫәлән, һин?!

-- Һе, әйтеп ултырам даһа!

-- ...Һәм шулай уҡ ғалим исемен йөрөткән ҡағыҙ фил академия филиалына оялап алһа, фәндәр буйынса фарман йөрөтә башлаһа?..

-- Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллин был!

-- ...Уның бушҡыуыҡ тәғлимәттәре юлбыуар йыланға -- «фәнни ҡанун»ға әйләнһә?..

Ҡыҙара-бүртенгән яҙыусы ялғап алды:

-- Мәҫәлән, *төрки телле* башҡорттарҙың ҡырағай ҡамғаҡ-күскенселәр сифатында урта быуаттарҙа ғына Алтайҙан килеп юлығыуы, Уралдағы сал-боронғо ҡәберлектәрҙән соҡоп сығарылған һөлдәләрҙең барыһы ла *иран телле* булыуы...

-- ...Аҡты ҡара тип танып-хуплап йәшәүҙең йөрәк өсөн дә тыныс, ҡорһаҡ өсөн дә рәхәт, кеҫә өсөн дә төшөмлө икәнен яҡшы тойоп, ялғансыларға ялғанып, башҡаһында минең эшем юҡ, тип эш ҡылһа?..

-- Әйтәйек, «башҡорт белинскийы» тигән ҡағыҙ арыҫлан-профессор Ғаяс Хөсни...

-- ...Шулай итеп, тора-бара яҙмышыбыҙ ҡыуыҡ йәнлеләр ҡулына күсһә?..

-- Кем ғәйеле һуң быға? Әлеге лә баяғы шул Һаҙ биҫтәһе бәндәғоломы?

Ҡыҙыл башҡорт күҙлеген кейеп, Моталға тура ҡараны — быяла үтә күҙ һоролары ҙурайып, зәһәрләнеп, яндырғыс ҡуҙ киҫәктәреләй тызырайҙы:

— Үҙебеҙ ул бәндәғолдар, бөтәбеҙ ҙә бер буҡлы сыбыҡтан ҡыуылған! Бына *тайғаҡ позициялы* һине генә алайыҡ...

-- Ниңә мине? Ниңә үҙеңде түгел? Һин бит ул юғары етәксе!

-- Бына-бына! «Нимә ҡарай милиция?!» тип һөрәнләйһең генә ҡалды!

-- Һәр хәлдә, юғарынан бойороп ултырыусы мин түгел.

-- Кем һуң һин?

-- Совет халыҡ шағирығыҙ әйтмешләй, «партияның рядовойы», ябай яҙыусы-публицист. Минең бурыс...

-- Ярай, алайһа үҙ бурысыңды иҫләтәйем. Теге көндә боҙ аҫтынан балыҡ ҡармаҡларға барғанда уйған мәкеңде оноттоңмо? Ниңә аҡбалыҡ урынына «ҡара шамбы» ҡарпыны, хатта мазутлы ҡойроғон тас битеңә сәпәне?! Әй, ҡәҙерле публицисым?!.

-- Бында минең публицислығымдың бер иле лә ҡыҫылышы юҡ.

-- Шулаймы? «Ағиҙелем — аҡ көмөш һыу» тип мәҙхиәләр йырларға беләһегеҙ, ә ниңә шул көмөш һыуҙы ҡаралаған ыу хаҡында яҙмайһығыҙ? Теге саҡта һыуға батып барғаныбыҙҙа ишкәктәрен йөкмәп ҡасҡан бәндәғоллоҡ түгелме был? «Атайың урынына ҡалған» Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаровтан ҡурҡтыңмы? Әллә уның да «үҙ кеше» -- бер туған бажаң икәнен хәтерләп шиңдеңме? Ниңә үткер ҡәләмеңде һөңгө итеп төртмәнең? Туған-тыумасалыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡмы?

«Ҡара шамбы»ны иҫкәртеү әҙиптең арҡа буйын яғымһыҙ сымырлатты, маңлайынан, ирен өҫтөнән бөрсөк-бөрсөк һалҡын тир бәреп сыҡты.

-- Яубаҫаров ише аждаһаларҙың айғолағынан матҡып алырға тейешле органдар бар. Һис юғында, — Мотал баш бармағын түшәмгә — беренсе секретарь ултырырға тейешле тәңгәлгә тоҫҡаны, — уны һеҙ эшләргә тейеш, эйе. Һуңлатмай һәм кисектермәй. Хөкөм һеҙҙең ҡулда бит.

-- Ә бына балдыҙҡайың... — Секретарь ҡыҙыл-йөнтәҫ һыртлы ҡулын баяғы ҡыҙыл ҡәләм осо ураткан мәҡәлә өҫтөнә һалды.

-- Һинең дә балдыҙҡайың! – тине һарыуы ҡайнаған Мотал.

-- ...Бына шул Диләфрүз Таңатарова тигән ҡыҙый, студент ҡына башы менән, ҡурҡып-өркөп тормаған, юғарылағы етәкселәрҙең ҡыбырлауын да көтмәгән — атаҡлы тарихсы-профессорҙың үҙенә — иң ауыртҡан еренә — дәү кирбес менән тондорған! Ҡартлас, ниңә тырпаяһың, әллә хаҡлы түгелме?

-- Ниңә хаҡлы булмаһын, хаҡлы! — тине Мотал.— Үҙемдең «тайғаҡ позициямда» тороп ҡына булһа ла, шөкөр, мин дә аҡты — ҡаранан, бойҙайҙы кәбәктән айырам. Хәкимуллиндарҙы ла асыҡ танығыйым.

-- Таныу ғына етәме?

-- Етмәй шул. Хәкимуллиндар тәғлимәте биш былтыр иҫкерҙе инде. Әйтеүе имәнес: беҙҙең эраның ун беренсе быуатына тиклем Урал — Волга арауығында башҡорттарҙың ғына түгел, ғөмүмән, төркиҙәрҙең еҫе-ҡоҫо булмаған, ә башҡорт халҡы ни бары ун алтынсы быуаттың икенсе яртыһында ғына дала буйлап аҙып йөрөүсе туҙғаҡ күстәрҙән йыйылып уҡмашҡан булып сыға. Ә унынсы быуат башындағы Ибн-Фаҙландың, бишенсе быуат башҡа сит ил тарихсыларының шаһәҙәтнамәләрен ҡайҙа ҡуйырға? Үҙегеҙ фән докторы итеп етештерткән, башына тай типкән бер әһел кеүек, ул шаһәҙәтнамәләр — фантазия, ни бары әҙәби образ[28], тип нарыҡларғамы? Бындай «ғилми»

[28] Иванов В. А. Путями степных кочевий. Өфө, 1984, 126-сы бит.

раçлауҙарҙан укымышлы халыҡ ҡына түгел, тауыҡ та кеткелдәп көлә! Башҡорт тарихын ботарлаған «арыçлан»дың — һеҙҙең һөйөклө Хәкимуллиндың! — оло табында кимереп ташланған һөйәктәрен йыйып алып сәйнәү менән шөғөлләнә тарихсы һәм филолог исемен йөрөтмөш сәүек-шакалдар... — Ҡатыраҡ ыҫкындырып ташламаныммы икән, тигәндәй, тынып, серҙәшенә күҙ һирпене.

-- Дауам ит, дауам ит! — тине секретарь ғәмһеҙ тыныс тауыш менән, ә эсенән: «Ниһәйәт, һинең дә ҡалын тиреңде төртөп тиштек — уктың осо тере йәнеңә тейҙе!» — тип ҡәнәғәт һөҙөмтәләне.

-- Гөлтләп ҡабынырҙай тарих дарыһы һеңешкән урам хаҡында һәйбәт әйттең әйтеүен, тулыһынса килешәм. Ләкин тарих фәне менән шөғөлләнеүҙең урамдарға һарҡылыуы ифрат һағайта мине... Алайыҡ шул уҡ бер туған кейәүем Йәүҙәт Ҡондоҙбаевты... Әле генә һин минән, ниңә уның диссертация темаһын яҡлашмайһың, тип һораның. Әммә уның, эстрада артисының, эше инеме ни иҫке тарихҡа барып тығылыу, диссертация яҙыу?! Әллә артистарҙан башҡа кеше ҡалмағанмы ул өлкәлә?! Шул дыуамалға ғилми етәксе булырға ризалыҡ биргән профессор-аҡһаҡал Ҡотлоевты ла әйтер инем инде... Ярай, тема — шәп, актуаль икән, ти. Ниңә уны, тикшеренеүсене, шул уҡ тарих институтындағы ҡәбилиәтле кешеләр араһынан һайлап алмаçҡа? Никахлы ҡатыны әйтмешләй, «ни боламыҡ, ни талҡан» булып буталып йөрөүе хәҙер... мәке өçтөндә өйөрөлгән билдәле нәмәләй... Йәүҙәт кейәүҙе әйтәм. Юҡ, фән — фән көйөнсә ҡалырға, институт кабинеттарында профессионалдар тарафынан хәл ителергә тейеш, минеңсә. Әгәр ҙә шулай булһа, Йәүҙәт Ҡондоҙбаев кеүек, көллө донъяны иңләп алырға маташып, һөҙөмтәлә маңлайына күк оролар ғына арттырған «артыҡ бүрәнә баштары» ла аҙайыр ине. Емерелгән ғаиләләр кәмер ине.

Көләмһөрәп тыңлаған Димустан тыныс ҡына киçәтте:

— Ғәфү ит, үҙ-үҙеңә ҡаршы киләһең, буғай. Айныҡ аҡыллы олпат әҙип Шаһибәрәков түгел, ә бер туған һеңлеһенең ҡотҡоһона бирелгән ҡайнаға Шаһибәрәков һөйләне быны. Беренсенән, һин атаған Хәкимуллин да һәм башҡа бәғзе берәүҙәр ҙә беҙҙең өсөн һөйөклө лә, көйөклө лә түгел — барыһы бер. Тәүге сиратта һәр кем үҙенең эшләгән эшенә ҡарап баһалана. Икенсенән, халыҡтың тарихҡа иғтибары — тәрән тамырын юллауы ла аңлайышлы һәм тәбиғи: Совет хакимиәте уға юғары белем бирҙе, донъя мәҙәниәтенә еректерҙе — шул белем һәм культура уны үҙ-үҙен төбө-тамырынан танып белергә этәрә, белем үрҙәренең яңы артылыштарына үрләтә. Ә Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем халыҡтың ни мөмкинлеге бар ине был тәңгәлдә?! Һин өнәмәгән уҙамандың һүҙендә лә күпмелер дөрөçлөк бар: күпселек халыҡ массалары аңһыҙ ҡара наҙан булды, батша хөкүмәте, колонизаторҙар һәм үҙенең милли иҙеүселәре ябай-ялпыны алдап, уны тарих-тамырһыҙ, сал һәм бөйөк үткәнһеҙ бер диуана — меçкен ғөләмә хәлендә күрһәтеп килде...

-- Ә баяғығыҙ әле лә шуны тылҡый бит!

-- ...Эксплуататорҙар синыфы өсөн был бик файҙалы ине — халыҡты «малай» урынына йомошҡа йүгертергә, уны теҙгендә тоторға...

-- Ә хәҙер?..

Ҡыҙыл башҡорт саҡ ҡына сигенә бирҙе:

— Әлбиттә, бер тәңгәлдә һин хаҡлы: халыҡты меҫкен, тамырһыҙ ҡылып раҫлауы ҡыйын түгел — быны өсөн дәлилдәр табыу еңел. Һәм берәү ҙә ауыҙға һуҡмай. Ә бына һин, шәп булһаң, шуның киреһен иҡрар итеп ҡара!..

-- Профессионал тарихсыларҙың эше!

-- Профессионалдар араһынан ҡыйыуҙар табылмаһа?.. Әгәр берәй көтөлмәгән Эдисон[29] килеп сыҡһа? Һинең бер туған кейәүең дә, Ҡондоҙбаевты әйтәм, бәлки, тап шундай эдисондыр[30]! Эдисондар кәрәкмәй беҙгә, бар, кире эстрадаңа кит, тип юлын кәртәләргәме? Уның университет белемле булыуына ла төкөрөп?.. Улайһа кем таяҡ тығып болғатыр тонйораҡ һаҙҙы, таратыр торғонлоҡто?! Хәкимуллинмы? Беләһеңме, балдыҙҡайыңдың ана шул кескәй генә тәнҡит һүҙен сығарыу юлында ла күпме уҡ һәм һөңгөләр һындырылды?.. Доктор һынлы докторҙарҙың бер туҡтауһыҙ редакцияға, дәүләт һәм партия органдарына шылтыратыуы тиһеңме... Туған-тыумасаларҙан, таныш-тоноштарҙан әйттертеү тиһеңме... Хатта, нәүбәттәге ялын алып, Йоматау санаторийында хәл йыйып ятҡан баш редакторҙы һөйрәтеп ҡайтарғандар — гәзиттең шул сығасаҡ һанына ҡул ҡуйған урынбаҫарына ҡыҫым яһатыр өсөн. Аныһы материалды алып ташлауҙан баш тартҡас, ҡурҡышынан ҡойолоп төшкән Әбсәләмов — беләһең бит Мотиҡ Камиловичты, баш редакторҙы! — хәле бөтөп ошонда килеп керҙе: редакцияла бунт — баш редакторҙың башын ашарға йыйыналар, йәнәһе. Гәзит өсөн был осраҡта һин түгел, ә һинең урыныңда ҡалған, ҡул ҡуйған иптәш яуап бирә, тигән һүҙҙе үҙ ауыҙымдан әйттертеп ишеткәс кенә, тынысланып сығып китте... Эш шуға барып етте: төнгө сәғәт ун икеләгә, — Димустан мут күҙ ҡыҫты, хас та тиле студент саҡтары тиерһең, — үҙеңә билдәле иң-иң изге минуттарҙа Сәлимәкәйемдең ауыҙынан ҡолағыма өрҙөртмәһендәрме!..

-- Бына бит ул! Тура һүҙҙе әйтеүе ҡыйын беҙҙә...

-- Әйтелгәне алдыңда ята лаһа! Асыбыраҡ ҡара әле күҙеңде, ҡартлас! Бынан, бәлки, үҙеңә яраҡлы нәмәләр ҙә табырһың, тыуасаҡ романыңа, тим! Дөрөҫ, фельетон жанры тема өсөн уңышлы ла түгелдер — хиссиәткә күберәк урын ҡалдыра. Ләкин унда тос шытымлы бөртөк бар. Ысынлап та: фәндә ниңә бер кешенең генә фекере өҫтөнлек итергә тейеш әле? Ә башҡаларҙың ауыҙына һуғырғамы? Бында һинең менән килешәм, туған. Сәкән[31] уйыны түгел был, көс ҡулланыу алымы менән мәрәйҙәрҙе йыйырға! Фәнни хәҡиҡәт — бөтәбеҙ өсөн дә бер һәм ул бер кемдең дә монополияһы түгел. Монополияға әйләнһә, бәйге ҡырын һаҙ баҫа, баяғы һаҙ «арыҫлан»дары һәм «шакал»дары ярала. Әйтәйек, алғыр ғалим мәсьәләгә үҙ мөһөрөн сәпәһә, ҡалғандары уны, уйлап-тикшереп тормай, һуҡыр рәүештә күтәреп алып табына ла ҡабатлай — ҡанунға әйләндерә. Ә кем белә, бәлки, алғыр яңылышҡандыр? Ул да әҙәм балаһы бит.

-- Бәндәләрҙән алла яһау заманаһы килде шул...

---

[29] Эдисон Томас Алва (1847—1931) — башланғыс ҡына белемле Америка кешеһе, электротехника өлкәһендә талантлы уйлап табыусы.

[30] Халыҡ араһынан сыҡҡан талантлы уйлап табыусыларҙы шулай атайҙар.

[31] Сәкән — хоккей.

-- Балдыҙыбыҙ күтәргән шул проблеманы ғына алайыҡ. Мәҫәлән, шундай алғыр-археолог, илгә мәғлүм Бәндәбикә һөйәктәрен аҡтарып, кәшәнәнең ҡоролоу осорон һәм ҡороусыларын үҙенсә билдәләгәйне, «хәҡиҡәт»кә әйләнде. Хәҙер инде бөтәһе лә шул датаны ҡабатлай ҙа ҡабатлай — *мосолманлыҡ осоро*. Археолог быны, һис бер дәлил килтереп мәшәҡәтләнмәй, Бәндәбикә мосолманса ерләнгән, тип кенә нигеҙләмәксе. Ләкин тәнҡитсән тарихсы быны менән килешеп бөтмәйәсәк. Сөнки мәрхүмә төптө мосолманса түгел, ә бәлки, беҙҙең эраға тиклемге мәжүси бабаларса — «таш ҡумта»ға һалынған. Өҫтәүенә, әгәр ҙә ул, халыҡ хәтерендә тәрән эҙ ҡалдырған һәм үҙе тере сағында уҡ «Ил Инәһе» тип исемләнгән бөйөк шәхес, ҡул һуҙымы урта быуаттарҙа ғына һәм мосолманса күмелһә, кәшәнәлә уның рухына, һис шикһеҙ, шул заманда киң таралған ғәрәп хәрефле яҙыу — ҡәбер ташы-эпитафия ишараты ла ҡуйылыр ине. Бәндәбикәгә ҡарағанда шаҡтай вағыраҡ шәхестәрҙең дә яҙыулы ҡәбер таштары бар!

Монологсыны бер аҙ хәүефкә һалып, яҙыусы ҡысҡырып көлдө:

—Һинең менән минең һымаҡтарҙың, тип әйтмәксеһең?

Бикләмешев, күҙен тултырып, ҡорҙашына ҡараны:

—Әйтеп тораһы ла түгел. – Ҡыҙыл башҡорттоң йүгәнһеҙ фекерҙәре, баш бирмәй, үҙенең ғүмер ағышына йүгерҙе. -- Их ғүмер-ғүмеркәйҙәр!.. Ҡайҙа убыла был ваҡыт, ҡайҙа ағыла йылдар?! – тип уфтанды.

-- Әйтмә лә, ҡырҡтың ҡырлаһына ла артылдыҡ бит, әй!.. -- Ҡан тамырына күптән кереп оялаған — ҡаны менән ҡуша ағылып йөрөгән осло энә сәнсте Моталдың йөрәген: «Ярай, һинең ғүмер дауамың -- бала-сағаларың бар! Ә миңә, миңә ҡайһылайыраҡ?!.»

-- Ә бит, — Бикләмешев гәзиткә күҙ һирпене, — Ил Инәһе Бәндәбикә менән Ил Ағаһы Ерәнсә-сәсән ҡырҡҡа ла етмәгәндер...

-- Уның ҡарауы эштәре һәм исемдәре ҡырҡ быуындарҙы уҙған.

-- Ҡартлас, суҡынып китмәгере! — Ҡыҙыл башҡорт хисләнеп дымланған тырпаҡ-ҡыҙыл керпектәре ҡыҫығынан төбәлде. — Иҫләйһеңме үҙеңде илертеп-тилерткән Бәндәбикәңде?! Ә!?.

Баяғы осло энә, әйтерһең, йөрәкте үтәләй тишеп сыҡты ла, меңәрләгән ваҡ ҡылсыҡтарға сәрпәкләнеп, күкрәк ситлеген пыр-туҙҙырып айҡалырға кереште.

—Хәтерләмәгән ҡайҙа ул...

Бүлмәгә секретарҙың кесе хеҙмәттәше — пропаганда бүлеге мөдире Урал Ҡылғанбай улы Аралйәнов килеп инеп, яңы йүнәлеш алырға торған әңгәмәне бүлдерҙе. «Уран Ҡылғанбаев» псевдонимы менән гәзит һәм журналдарға һәйбәт һүрәтләмәләр яҙа, етмәһә, сығышы менән Моталдың ата-бабаларының тыуған яғы — даланан, шуға күрә яҙыусыға яҡын таныш ине был нәҙек оҙон буйлы, ҡыуан ел өткән ҡырыҫыраҡ йөҙлө, аҙ һүҙле, янып торған ҡара күҙле, шоморт-ҡара сәстәрен, маңлайын ҡаплатып, аҫҡа ҡарай ҡырын һыпырған егет. Моталдың ҡулын ҡаты ҡыҫып күрешкәс, кабинет эйәһе алдына — үҙҙәренә генә мәғлүм эштер инде — яҙыулы ҡағыҙ һалды, шул арала яҙыусының хәл-әхүәлен һорашты:

-- Роман ни эшләй, Мотал Булаттимерович?

-- Ҡайһыныһын әйтәһең?

-- Ҡайһы, тип ни, һәммәбеҙ көткән *төп* романығыҙҙы инде — «Эшсе синыф ғәли йәнәптәре»н.

-- Һе... — «Төп роман» тип баҫымлыҡлау әҙиптең һушын һүрҙе — был идеология көрәшсеһе әллә упың эске уйҙарын да белеп торамы?! Хәйер, Мөхлисәһе, ярыҡ барабан, таратҡандыр был серҙе. — Ә улмы? Ул һәүетемсә бара... яҙыла... — тигән булды, әммә ни әйткәнен үҙе аңлаштырмай, зиһене тарҡалып, ҡағыҙға эйелгән секретарҙың ҡулында сағыу ялтырамыш алтын авторучкаға күҙе төштө лә, шунаң ҡыҫтырғысы аҫтындағы ҡулдан сыйып яһалған тамғаны абайлағас, сәмләнеп, үҙенең түш кеҫәһен һәрмап ҡараны, ләкин ручка унда юҡ -- өйҙә тороп ҡалғандыр...

-- Оҙаҡ көттөрҙөгөҙ, ағай, тиҙерәк тамамлағыҙ инде, — тине дала егете.

-- Эйе, оҙаҡ... — Баяғы алтын авторучка яҙыусының һаман зиһенен һүрҙе. Ғәжәп: Моталдыҡы менән бер иш тә ҡуш – ҡайҙан эләктергән был?! Ә бит завод ысулы түгел, ә тап капиталистарса бөхтәлек менән берәмтекләп кенә сифатлы яһалған, салғый аҫтынан ғына таратылған зат, һанаулы ғына данала, тигәйнеләр. Тыуған көнөндә тантаналы тоттортоп, бындайҙы башҡа бер ҡайҙа ла тапмаҫһың, бер кемдә лә күрмәҫһең, тигәйне Мөхлисәһе. Ошонан һуң Мотал уйланып йөрөнө: тимәк, ысынлап та, социалистик планда ҡаралмаған затлы тауарҙы етештереүсе йәшерен урын, көстәр, белгестәр, оҫталар — йәшерен экономика бар булып сыға ҡалала?.. Асыҡ ҡына әйткәндә, закондан тыш яралған, нэп осорон хәтерләткән шом-шауҡым. Бәлки, ҡара мафиялыр ул, тормошобоҙ нигеҙҙәрен ҡаҡшатыусы ғилләләр? Мөхлисәһе лә ылыҡтымы шуларға?.. Һәр хәлдә, салғый аҫты тауарҙары социалистик сауҙаны аша атлап, зыялы зат Моталыбыҙҙың ҡуйын кеҫәһенә генә түгел, Оло йорттоң үҙенә лә килеп кергән, юл ярған булып сыға. Был ни хәл, ҡайҙа бара был донъя?! Балыҡ баштан сереүе — йәмғиәттең эстән ҡаҡшап тарҡалыуының башымы?..

Заводта эшләгән йәш сағында күп тонналы пресс ыҫтанының ултырған ерендә үҙ-үҙенән селпәрәмә килеүен күргәйне Мотал. Аҙаҡ белгестәр әйтте: ыҫтандың монолит ҡорос һынында ҡылдай ғына рыялы урын булған, ана шул рыя үҙенән-үҙе ҙурайып, корпус буйынса таралып, селпәрәмә килтергән...

Яҙыусы был шомланыуын сығармаҫҡа тырышты, затлы алтын ручканы ла күрмәмешкә һалышты, сөнки коммунист башы менән ошо йүнәлештә уйлауы ла хәтәр һәм дә әхләкһеҙлек һымаҡ ине («бөтәбеҙ ҙә бер... буҡлы сыбыҡтан ҡыуылған»...). Әммә ихтыярынан тыш зиһене йәнә ҡаҡшап, ручканың ялтыр бутал ҡыҫтырғысы аҫтындағы күҙгә күренер-күренмәҫ сыйылған «Ҡойошҡан» тамғаһын абайланы ла көллө тәне эҫеле-һыуыҡлы булды: «Бәй, минеке менән бер иш кенә лә түгел, бер үк тамғалы ла бит был!..» Шунаһы ифрат сәйер: ҡатыны бүләк иткән яҙыу ҡорамалына ырыу тамғаһын Мотал үҙе сыймаҡлағайны, бала саҡтан ҡалған ғәҙәте буйынса. Димустан да ошоно уҡ эшләгән булып сығамы?.. Әгәр ҙә шулай икән, икеһенең дә тамғалары бер үкме?.. Әллә күҙенә яңылыш салынамы?.. Мотал кешеләрсә ихлас көйәләнеп сәмләнде — дуҫыныҡын һорап алып, үҙенекенә сағыштырғыһы килде...

Үкенескәме, әллә бәхеткә күрә, серле ҡәләм Димустандың ҡуйын кеҫәһенә сумды, резолюция һалынған ҡағыҙҙы Аралйәнов иптәш елдертеп алып сығып

китте. Секретарь йәнә иғтибарын серҙәшенә төбәне:

— Эйе, ғүмеркәйҙәр ағыла ғына, малай... — Һиҙҙертмәй генә төймәгә баҫтымы әллә — ярым ҡыҫыҡ ишектән йылмайып Һонолоусы гүзәл затҡа өндәште. — Һылыуҡай, ҡәҙерлем, сәй килтерегеҙ, зинһар.

-- Айн момент, Димустан Шиһапович!

Бүлмәне нескә хушбый еҫе ҡатыш сәй аңҡына[32] ҡандырған егәрле зат артынса ишек ябылғас, үҙенә тейеш стаканды йәһәт ҡармап, баҡырсыбыҡ щетка һымаҡ емелдәгән ерән-ҡыҙыл ҡаштары аҫтынан күҙҙәрен секерәйтеп, боҫло сәйен көмөш ҡалаҡлап болғата-болғата һөйләнде. — Тот, әшнә, тот — эләккәндә ялмап ҡал. Һинең хәләл ефетеңдең фирменныйы түгел дә түгеллеген, их-ма!.. Мөхлисә ханымдың тылсымлы ҡулы ҡағылған ул эсемлекте уртлағанда бар донъяңды онотоп, баш тигәнең зыр-әйләнеп китер ине... — Ошоларҙы әйтте лә бүлмә хужаһы, ҡунаҡ ҡулында балғашыҡтың стаканға бәрелеп уҫал сиҡылдауын, Моталдың, йөҙө суйындай ҡарайып, түбән ҡарап ултырыуын абайлап хафаланды — әллә ҡасанғы Бәпембәне иҫенә төшөрөп үпкәләттем, буғай, һантыйҙы, тип үкенде, «Их был ҡорт саҡҡыр телде!» — тип эстән көйөндө. Юҡҡа үпкәләп барырға бала-саға йәшенән уҙғанбыҙ инде. Ошо булдымы дуҫлыҡ, әшнәлек?! Ә бит дуҫының ҡаршыһында тырнаҡ ҡараһындай ҙа ғәйебе юҡ. Дөрөҫ, теге йылда, ахмаҡ осраҡлыҡтың бәләһе булып, санаторийҙа Мөхлисә ханымдыҡы менән бер миҙгелгә тура килде ялдары — быға хатта үҙе лә, ханым да аптыраны. Дөрөҫ, кипарислы һуҡмаҡтарҙа һауа һулап бергә йөрөгән саҡтары ла булғандыр: күрәләтә яҡташыңды, ҡатыныңдың ике туған апаһын, сит ерҙәрҙә күрмәгәнгә һалышып ҡыланыу кемдең хәленән килһен? Их, һөҙөмтәһен алдан уҡ тоҫмаллаһасы!.. Өйҙә ҡалған Сәлимәкәйе лә, тап ошо Мотал һымаҡ, ауыҙлығын тешләп, төтөнһөҙ ерҙән ут эҙләп маташты... Их-ма!.. Ҡатын-ҡыҙ бит утыҙ йәшкә тиклем һөжүм ҡайтара, утыҙҙан уҙғас үҙе һөжүмгә күсә, тигәндәре ошолор... Бына ниндәй ситен хәл: үҙеңдең гонаһһыҙ икәнеңде лә беләһең, әммә барыбер гонаһлы итеп тояһың...

Икеһе тиң албырғанды, осон-оска ялғау әмәлен таба алмағандай ыҙаланды — ауыр тынлыҡлы бүлмәлә икеһенең ғорполдатып сәй уртлауы ғына ишетелә ине. Телефоны ла шылтырамай, исмаһам! Өҙөлгән епте төйөнһөҙ генә тоташтырырға ниәтләп, ҡапыл өнө тығылыуын йәшерергә тырышып, Бикләмешев, һис ни булмағандай, дуҫтарса шаян-күтәренке өн алды:

— Эйе... Ул сәй иҫкә төшкән һайын, ауыҙҙан һыу ҡойолоп, һеҙгә барғы килеп тора — академик Павловтың шартлы рефлексына буйһондоролған бурҙайэте тиерһең... Ләкин көн етмәй ҙә ҡуя. Килһәң — эш, ҡайтһаң — ҡатын, бала-саға, тигән йүләр бер йәндәй...

«Рәхәт һиңә — тулған Айҙай алсаҡ йөҙлө, Ҡояштай ҡайнар-йомарт ҡосаҡлы Сәлимәкәйең барҙа!» — тип һарыуы ҡайнаны быныһының. Һәм, йәшермәйек, шундай бәхеттән үҙенең мәхрүм ҡалыуына үкенеү, көллө тән күҙәнәктәренә яман ыуҙай һарҡылған көнләшеү тойҙо. Ҡыҙыл башҡорттоң Сәлимәкәйе теге саҡта ярһып-сәсәп Моталға йүгереп килгәс, дөрләп янған ут

---

[32] Аңҡ — аромат.

өҫтөнә май ҡояһы урынға, ниңә уны һүрелтеп маташты һуң? Икәүләшеп ябырылайыҡ, оятһыҙ ғишыҡ-ғишрәттәре өҫтөндә аңдып тотайыҡ, тип, ҡулына ике билет (самолетҡа) йомарлап, мәсхәрәле хәсрәтенә теләктәшлек өмөт итеп килгәйне бит ул бисара, Мөхлисәһенең яҡын ғына һеңлекәше. Икәү-ара алдан уҡ һүҙ ҡуйышып, путевкаларын бер үк ваҡытҡа, бер үк санаторийға тура килтереп алғандар — аҙғын бесәйҙәрҙәй мауығып яталар, тип тупаҫ һәм оятһыҙ ныҡыны көнсөллөктән аҡылын юйған бисә. Йөрәк төбөн ҡара бесәй тырнаһа ла, ауыҙына ҡан тулһа ла, Мотал тышҡа төкөрмәне:

-- Булмаҫ. Ышанмайым. Апағыҙҙың һөттәй паклығына иманым камил!

-- Ебек ауыҙ! Улайһа үҙем осам. Һәм «һөттәй пак» кәнтәйеңдең дегеткә батҡан ҡара йөрәген ҡайтарып һалам алдыңа!

Енләнеп сығып киткәс, хәтһеҙ шомланып ҡалды: бындайҙан көтөргә була! Бәлки, хаҡлылыр ҙа ул, ләкин ни ҡылмаҡ кәрәк?.. Моталдың былай ҙа ҡыл осонда торған сағы: нәшриәттә «Әҫәрҙәр»енең яҙмышы хәл ҡылына. Ә күҙе-башы аларған Сәлимәкәй санаторийҙан, ысынлап та, бөтә ҡаланы шаулатырлыҡ бәлә-ҡаза ҡуптарып ҡайтһа? Һәүетемсә генә барған ғаилә карабың ҡапыл өҫтө-аҫҡа килеп түңкәрелһә?.. Томдарыңдың пландан осоп төшөрөн, кәм тигәндә биш-алты йылға кисектерелерен көт тә тор. Ә был иһә яҙыусыға тереләй ҡәбергә кереү менән бер. Юҡ, янағыс ҡазаны Мотал тап шул сәғәттәрҙә, төбөнән үк сабып өҙөргә тейеш. Ләкин ни хәлдәр ҡылып?!

Сәлимәкәйҙе төңөлдертөү мөмкин булмағанлыҡтан, бер генә юлы ҡалды — ваҡиғалар теҙгенен ҡулға алыу. Һәм курортҡа ҡатыны исеменә бик ашығыс телеграмма һуғылды: «Ҡапыл ҡаты ауырыным, хәл насар, ҡайтып ет, көмөшкәйем»... Һәм иртәгәһенә үк, ял итеүен өҙөп, Мөхлисәһе осоп ҡайта, ҡаты сирләү урынына, тештәрен ҡаты ҡыҫып көтөп ултырған хәләл ефетенең күкрәгенә үкһеп ҡаплана... Бына донъяның мөғжизәһе: таштай ҡатҡан Мотал йөрәген балауыҙҙай иретергә уның бер генә тамсы йәше лә етте — ҡатынының ҙур асылған болан күҙҙәре шундай ҙа тәрән ҡайғы, миһырбанлыҡ менән баға: «Йәндәремде бүлеп бирәйемме икән һиңә, алтынҡайым?!»

Ә дыуамал Сәлимәкәй, ире янында сит тарафта аҙна-ун көндәй башы ҡатып ҡаңғырғас, ташҡан талағы шиңеп, ярһыуҙары баҫылып, һыуынып, Ҡыҙыл башҡорто менән һин дә мин ҡултыҡлашып, шып-шым ғына ҡайтып төшә лә ҡашығаяҡ шалтыратмайынса ғына әлегәсә көн итә...

—Туҡта-туҡта, ҡартлас, танауың ник һәленде? Дөрөҫөн әйткәндә, танымай башланым һине: бая ғына миңә, романым яҙылып бөттө, тип рапорт биргәйнең, әле килеп Аралйәновҡа башҡасараҡ һайраның. Ҡайһыһына ышанырға? Бөттөмө, бөтмәнеме?

«Һе! Иҫәүәнгә -- төштән һуң!..». Тап атаһы мәрхүмдәй (әсәһенең ләҡәбе), ҡырыҫ тамаҡ ҡырып яуапланы:

-- Бөттө. «Эшсе синыф ғәли йәнәптәре» тыумаҫы борон , үлде.

-- Бәй-бәй, быны нисек аңларға?

—Нисек бар — шулай. Бер төрлө уйлап, икенсе төрлө яҙыу, шамбылай шып-шыма әҫәрҙәр әтмәләү еләтте. Ҡытыршыланыр ваҡыт!

-- Бәй, ниндәй ҡытыршылыҡ? *Социалистик реализм* ҡанундарын танымай

башланыңмы әллә?

Социалистик илдәрҙә йәшәүсе бөтә яҙыусыларҙың да теңкәһенә тейеп бөткән сетерекле йөмләне һөмһөҙ ҡиәфәттә ҡолағы һыртынан уҙҙырып, фекерен дауамланы:

-- Мин инде өр-яңы әҫәр ижад итеү өҫтөндә. Әйттем бит: *һуңғы* һәм *төп* романым...

Секретарь баш сайҡаны:

—«Төп» тигәнеңде ҡабул ҡылам, әммә «һуңғы» тип әйтергә тел бармай. Ниңә һуңғы?

-- Сөнки шунан һуң ҡул бармаҫ: үҙегеҙҙең *социалистик реализм* менән тамам төңөлдөрөрһегеҙ.

-- Аҡрын! Дуҫ тигәс тә, тыйылыбыраҡ һөйләшергә кәрәк! – Ишек яғына ымланы.

-- Күп тыйылдым инде. Ҡалын томдарымды яҙып тыйылдым. Аҡтығымда үҙ тауышым менән һайрап ҡарайым. Дуҫ булараҡ, әгәр ҙә ҡаршы килмәһәң...

-- Ниндәйерәк булыр икән ул һайрау? Ҡарға булып ҡарҡылдамаһаң ярай ҙа...

-- Ҡарҡылдаһам да – үҙ тауышым! Ҡалыптарға ҡыҫылып ҡалғыуҙар бөттө, минең үҙ концепциям.

-- Белергә ине ул шаҡ-ҡатырғыс «концепция»ны!

Яҙыусының маңлайы йыйырылды:

—Мин инде малай түгел — өлгөрҙөм. Һәр өлгөргән әҙип аңында үҙенсә донъя моделе — ғүмеренең берҙән-бер роман концепцияһы ярала. Мин нәҡ шул дәүеремде кисерәм шикелле.

-- Ғәфү ит мин белекһеҙҙе — ниндәйерәк ул модель?

-- Әлбиттә, юғарынан төшөрөлгән стандарт түгел.

-- Һем, тыңлап ҡарайыҡ алайһа, – сәғәтенә күҙ һалды. – Эш көнөмдөң сирек өлөшөн умырып урлаһаң да. Тик дилбегәңде ҡыҫҡараҡ тотһаң ине.

Ниһәйәт, уға ла форсат тейҙе!

— Ярай, тырышырмын. Бына уның умыртҡаһы: Ер шарында бөтә донъя һәм бөтәһен тигеҙлектә тотоп торған төп күсәр — *рухосфера* ул...

— Нимә-нимә?!

-- Рухосфера.

-- Ниндәй әкәмәт тағы?

-- Мин уйлап тапҡан нәмә түгел – академик Вернадский термины. Ә мин уны үҙемдекенә мас килтереп ҡулландым. Рухосфера ул планетаның биосфераһын – бөтә органик донъяны уратып алған күҙгә күренмәҫ ҡыртыш-ҡатлам — кешелек донъяһының рухи донъяһы. Һәм ул, рухосфера, яҙыласаҡ төп романымдың да үҙәк проблема-күсәре булып тора!

-- Ҡалайыраҡ күҙалларға?

-- Түңәрәкте хасил ҡылмыш өҙлөкһөҙ сылбыр итеп: *шәхес рухы — халыҡ рухы — кешелек донъяһы рухы,* бына уның өҙөлмәҫ ҡулсалары. Тап шуларҙың өсөһөнөң бер-берећенә үтеп инеп ялғанышы һәм тәьҫир көсө йәмғеһе бергә планетаның рухосфераһын тәшкил итә лә инде...

-- Өс таған, тимәксеһең?

-- Бер бөтөн. Өсөһө лә бер-береһенә тығыҙ бойондороҡло: теләгән береһенең төҙөклөгө ҡалған икеһенә ыңғай йоғонто яһай, ә теләгән береһенең боҙоҡлоғо ҡалған икеһенә кире тәьҫир ҡыла, ә глобаль дөйөм сифат үҙ сиратында айырым шәхестәр сифатынан уҡмаша. — Мотал, фәлсәфәһенең ағылышынан ләззәтләнеп, ҡәнәғәт тамаҡ ҡырҙы. — Бына шулай, уҙаман. Академик Вернадский биосфераны ноосферағаса материаллаштырып бирһә, ә мин кешелек донъяһының шул ике сфера араһындағы рухосфераһының структураһын астым!

-- Ай-буй, тимме, ниндәй философия! — Димустан маңлайын ышҡыны. — Был тубалға һеңдереүе лә ҡыйын — тарҡатыбыраҡ тылҡы!

-- Баш өҫтө, тәҡсир. Бөгөнгө ныҡ үҫешкән фән һәм техника заманында бөтә нәмә (Ер ҡыртышы, биосфера, рухосфера, атмосфера, стратосфера, хатта йыһан бушлығы) бөтәһе бергә рухосфера ярҙамында тығыҙ үрелеп тоташҡан — рухосфера бөтә сфераларҙы ла үтәнән-үтә үргән, бөтәһенең именлеге уға буйһондоролған. Ер ҡыртышының уңдырышлылығы йәки үлеүе, биосфера экологияһының именлеге йәки именһеҙлеге, атмосфераның сафлығы йәки ағыуланыуы, стратосфераның, йыһандың Ер һәм тормош файҙаһына эшләүе йәки һәләкәт килтереүе, тимәк, бөтәһе лә кешеләрҙең үҙҙәренә, уларҙың *рухи* донъяһының төҙөклөгөнә, йәғни кешелек донъяһының рухосфераһы таҙалығына бәйле. Рухосфера имгәнһә, кешелек донъяһы үҙ-үҙен һәм Ер шарын йә ағыулап, йә шартлатып юҡҡа сығарасаҡ. Шуның өсөн беҙ рухосфераны бысратыусы зыянлы фекер сығанаҡтарын (коллектив йәки айырым шәхес булыуы мөмкин) аныҡ билдәләй белергә лә уларҙы һауыҡтырыуға йәмғе көстө һала алырға тейеш. Рухосфера зәғифлеге, вируслы эпидемиялай, хатта ғаилә эсендә лә башланырға һәм артабан ғаләмдәргәсә йәйелергә, быуындан-быуынға күсергә лә ихтимал, әгәр ҙә ки үҙ ваҡытында сара күреп өлгөрөлмәһә. Халҡыбыҙҙың «Урал батыр» эпосында был Урал-бабаның Шүлгән-баба менән дәһшәтле ҡаршылығы рәүешендә асыҡ сағылған.

-- Әллә ҡайҙарҙан соҡоп сығарып табаһың бит, әй, шуларҙы! Ҡайҙан алып уҡырға – ташҡа баҫып сығарылғанмы ул эпос?

-- Мин уны ҡаса-боҫа, тигәндәй, архивтан алып уҡыным -- әлеге лә баяғы шул башы төрмәнән ҡайтмаған Буранғоловтың ҡулъяҙмалар фондынан.

-- Ниңә ташҡа баҫтыртыу сараһын күрмәйһең?

-- Үҙең әйтмешләй, ҡулым ҡыҫҡа. Мәрүән Карамиҙарығыҙ, Хәкимуллиндарығыҙ обкомға һәм Үҙәк Комитетҡа *башҡорт милләтселеге фашлаусы* шикәйәтнамәләр яуҙырып, Буранғоловтың башын төрмәлә сереткәндәй...

-- Күңелһеҙ үткәндәрҙе ниңә туҡтауһыҙ ҡабатларға – аҡланып ҡайтты лаһа шул Буранғоловығыҙ! – Ҡәнәғәтһеҙләнеп бүлдерҙе бүлмә хужаһы.

-- Ҡайтты ла ул, ләкин «Урал батыр» ҙа, башҡалары ла ҡаты бик аҫтында ҡала бирә, үҙеңә яҡшы мәғлүм.

-- Сабыр итә бирәйек,. – күн тышлы ҡалын дәфтәренә нимәлер яҙҙы, -- алары ла ҡайтарылыр.

-- Сабыр итә-итә сәстәр ағарҙы...

-- Сабырлыҡ төбө – саф алтын, тигән боронғолар. Ярай, аныһы тороп торһон. Ҡыҫҡаһы, һинең дөйөм концепцияға ҡаршы килмәйем, унда фәһем алырлыҡ урындар күп. Рухосфера проблемаң бик ҡыҙыҡлы. Мәгәр, минеңсә, һин үҙеңдең стратегик һөжүмеңдең төп йүнәлешен билдәләмәгәнһең. Шунһыҙ һинең рухосфера өсөн һуғышың карта өҫтөндә генә бөхтә башҡарылған, ә ғәмәлдә башланмаған хәрби уйын ғына булып ҡаласаҡ.

-- Минең төп йүнәлеш асыҡ: иң элгәре һәр бер шәхси рухосфераны быҫраныуҙан һаҡлап ҡалыу өсөн аяуһыҙ алыш ул. *Шәхес* өсөн көрәш кәрәк тигән һүҙ.

-- Быныһы менән дә килешәм. Тик нисек итеп? Кемгә ҡаршы кем алышырға тейеш?

Яҙыусы, ултырғысын артҡараҡ шыуҙырып, тубығын тубыҡҡа һалды:

-- Бына, мәҫәлән, миңә ҡаршы — һин, һиңә ҡаршы — мин. Дөрөҫөрәге, бер-беребеҙҙең эсендәге боҙоҡлоҡтарға ҡаршы.

-- Юҡ инде, туғанҡайым, мине бәхәс шырлығында аҙаштырып ҡотолма. Әгәр белгең килһә, донъя яратылғандан — үҙең иҫкә төшөргән Урал батыр менән Шүлгән батыр заманынан уҡ әҙәм балалары бер-береһенә ҡаршы зыҡ-ҡубып көрәшә, караңғылыҡты — яҡтылыҡ, яманлыҡты яҡшылыҡ еңһен тип ҡырҡыша. Әммә яманлыҡ еңелгәне юҡ әле. Киреһенсә, үҫкәндән-үҫә генә кеүек... Бөгөн бөтә кешелек донъяһын (һинең йәмғе сфераларың менән ҡуша) күҙ асып-йомғансы бер юлы юҡ итерлек термойәҙрә ҡоралы етештерелгән...

Секретарҙың киҫәтеүендә ысынлап та хаҡлыҡ бар ине, буғай; шулай ҙа был Моталға оҡшаманы — тауышы ҡалтыраны:

-- Ә нисек аңларға быны?

-- Бөгөн кеше *үҙ-үҙенә ҡаршы* көрәшергә тейеш, бына нәмә! Заманы килеп етте! Шул сүрәттә генә дөйөм рухосфераң һаҡлана!

Тауҙай олпат концепция ҡороп та, шул яп-ябай һәм иң мөһим нәмәне уйлап еткермәүенә аптырап, уғата ҡыйырһынып, Мотал ҡаушабыраҡ ҡалды, сөнки зитына тейҙе. Өҫтәүенә, күпме күңел ғазаптары аша юлланылған *асышына* тейешле баһа ла бирелмәй...

-- Йә, обком ғәли йәнәптәре, буласаҡ романды нисегерәк нарыҡлайһың, алайһа? Әйт партия һүҙеңде!

-- Буласаҡ роман тыуһын әле, ҡулға тотоп ҡарайыҡ.

-- Ә шулай ҙа?

— Ә шулай ҙа... Һуңғы һүҙебеҙ ана ҡайҙан әйтелә, -- ҡыҙыл-йөнтәҫ баш бармағын түшәмгә тоҫҡаны йәнә. – *Уға* оҡшармы? Үҙең беләһең...

-- Уға оҡшамаҫлыҡ ниндәй сөй бар тағы?

-- Заманында оторо мыйыҡлы бабайыбыҙ Александр Фадеевтың «Йәш гвардия» романына ҡарата әйткәндәй, һиндә *партия етәкселеге күренмәй*, ғәфү ит.

Мотал, ҡайҙа ултырғанын онотоп, шыйылдатып һыҙғырҙы:

-- Әл-лә-лә, эттә генәһе! Ғәләм масштабындағы партия етәкселегеме? Ғәләмдәрҙең бойороусыһын – Хоҙайҙы ла алмаштырырға итәбеҙме?!

-- Тссс, шым! – Күҙҙәрен алартып, ирендәренә һуҡ бармағын арҡыры ҡуйҙы. – Дуҫлыҡтың да сиге бар, әгәр минең урында башҡа берәү булһа...

-- Ауыҙ ҙа асмаҫ инем.

-- Атайың бахырҙың асы яҙмышын иҫтә тот.

-- Бәй, утыҙ етенсе йыл киләме әллә, -- бүлмә хужаһы һымаҡ уҡ, бармағын түшәмгә тоҫҡаны Мотал, -- унда Жданов-ғазраил[33] ултырамы?

-- Әгәр күңелең тартһа, *Намыҫ* ғәли йәнәптәре тип һана! – Тороп, әңгәмәнең осланыуын белдереп ҡул бирҙе, әйтерһең дә, Намыҫ ғәли йәнәптәре тап үҙе. – Биғәйбә. Романды бит, концепциянан да бигерәк, романтика бар итә, *партиялылыҡ* уны ауыҙлыҡлап тота.

-- Ауыҙлыҡтарҙы сәйнәп өҙөр саҡ!

-- Телеңә һалышаһың! -- Бикләмешевтың аттай аран киреп иҫәннәүенән яҙыусының йөрәк ҡуҙы һүрелде, күңеле нык рәнйене. Өҫтәлдәге гәзитен һыпырып алып торҙо. -- Бар, ҡайт, -- тип, бармағын ишек яғына тоҫҡаны Димустан. --Мөхлисәнде ҡосаҡлап ятып уйлан. *Коммунист икәнеңде нык иҫтә тотоп!* -- Баш бармағын тағы түшәмгә мәғәнәле тоҫҡаны.

-- Тфү! – Мотал баш бармағын түшәмгә тоҫҡаны. -- Педерастар хужа икән был донъяға! -- Таҫыллылығын онотоп, елтерәп, Һылыуҡай менән хушлашмай ҙа сығып китте. Үтә күренеп тора: уңышһыҙ шиғыр яҙып маташҡан Ҡыҙыл башҡорт уның әҙәби отҡорлоғонан, *асышынан* көнләшә. Хәҙер бер кем дә бер кемдең, хатта яҡындарының да уңышына ҡыуанмай, ә зыялылар араһында уғата: «Ни өсөн был асыштың эйәһе — *ул* булырға тейеш әле, ә *мин* түгел?!.» Ҡунаҡ табыны йыйырға, ошондай ҙа ороно ҡунаҡка саҡырырға ҡыҙырыҡлай Мөхлисәһе... Әйтерһең, улар унан ғәфү үтенергә тейеш... ниндәй түбәнселек, хурлыҡ... Юҡ!»

*Лифтта* шыуып төшөп, кейенеп, милиционер янынан үтеп, тышҡа сыҡҡас артына әйләнеп ҡарап, Мотал көллө эс-бауырын ҡалтыратҡан тойғоһона юл бирҙе:

—Тфү! — Күҙ алдына һаман, әйтерһең, һөңгөләнгән баш бармағын үргә һонмош Ҡыҙыл башҡорт һерәйеп тора. «Шөкәтһеҙ! Намыҫ ғәли йәнәптәре, имеш!..» Күҙе тоноп, үҙ-үҙен белештермәй, бина алдындағы майҙанды арҡыры киҫеп үтте, мейеһендә береһенән-береһе буталсығыраҡ уйҙар ҡайнаны.

Яҙ еле ырғып-еләгә — көндөң йылы һулышын ул Ағиҙелдең аръяғында йәйрәп ятҡан тауҙарҙан, урмандарҙан бөркөлдөрә. Оло йорттоң мөһәбәт аҡ стеналарын йыуып, йөҙәрләгән тәҙрәләренең төндөктәренә[34] урғылып, йәшлек көсөн ҡайҙа ҡуйырға, сарыф итергә белмәй, бина көмбәҙенең суҡайында тере йәндәй талпыныусы ал байраҡтың ҡанатын шытырлатып кирә. Битендә шул яҙ еленең ҡыштырлауын тойған хәлдә, Мотал оло майҙанды йылдам кисеп, ҡыҙыл гранит көпләгән яр ситендә туҡталды, яландай йәйрәгән йылға еҫтөнә баҡты. Бейек тә һуң был тәңгәлдә Ағиҙелдең сағылы! Күҙ күреме аҫта — сағыл итәгендә — Мөхлисәһе тырышып-тырмашып директорлыҡ иткән «Ярлауыҡ» йәштәр ресторany. Машинаға ултырмай ҙа, эскалаторға тәпәй баҫып төшөрлөк — тап Мәскәү метроһындағылай. Ҡатыны, моғайын, энә еҫтөндәгеләй ыуаланып, уны

---

[33] А.А. Жданов, ВКП(б) Үҙәк Комитетының Секретары, 1937 йылда Башҡорт АССР-ында «ҡанлы мунса» ойоштороусы.

[34] Төндөктәренә — форточкаларына.

көтә. Дөрөҫөрәге, обком секретарының үҙҙәренә ҡунаҡҡа килерен, шул турала ризалыҡ биреүен ишетергә өмөт итәлер. Сәсрәп кенә китмәгәйе был бөтмәҫ ҡунаҡтары!..

Ағиҙел күпере аҫтындағы боҙҙарҙы шартлатҡандар — быҒауынан арынған һыу өҫкә ҡалҡынып аға, йылға уртаһынан оҙон ҡара шәре һуҙылған. Шуны күреү менән Мотал ытырғанып ҡалтыраны — Ҡыҙыл башҡорт күҙенә төртөп битәрләгән «ҡара шамбы»ны хәтерләне.

«Юҡ! — тип ҡырҡа ҡарарға килде яҙыусы, гранит ярҙан тороп Ағиҙел күпере аҫтындағы ҡаранға бер талай баҡҡас. — Яңылышаһың, дуҫ кеше! Үҙ-үҙең менән түгел, бер-беребеҙгә ҡаршы көрәшеп тә бөтмәгәнбеҙ әле беҙ. Бөтмәгәнбеҙ генә түгел, хатта башламағанбыҙ ҙа! Юғиһә, һөттәй аҡ иҙелдә «ҡара шамбы»лар ҡарпымаҫ ине. Иң элек шул көрәште көсәйтергә, шунан һуң да үҙ-үҙебеҙгә сират етер. Әшәкенең сығанағын кәртәләргә — «ҡара шамбы» ҡарпытыусының айғолағынан алырға! Быны мин башларға тейеш. Һәр хәлдә, был минең төп романымдың сюжеты өсөн зарур».

Иҙелгә ҡара ыу урғылтыусы Иҫке химия заводына барып етергә ҡыҙышып, машинаһының моторын гөрләтте Мотал.

## ТУҒЫҘЫНСЫ СӘХИФӘ

Мөхлисә ханым Шаһибәрәкова яҡын ғына һеңлеһе Дилбәрҙең «яҡты киләсәген» апаларса ҡайғыртып, «балдыҙыңдың артабанғы яҙмышын хәстәрләмәйһең» тип, иртән торған һайын иренең ҡолаҡ итен кимерһә лә, алсаҡ студент ҡыҙ Дилбәр (паспортында Диләфрүз) Таңатарованың үҙенең иртән тороп кис төшөнә лә кермәй —аяҡ аҫтынан ҡубарылып сығып торған, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ, көндәлек ғәмдәре менән ныҡ мәшғүл ине. Беренсенән, сәнғәт институтын тамамлар йылы — диплом эшен тиҙерәк өлгөртөргә кәрәк. Икенсенән, төрлө йәмәғәт эштәре: вуз күләмендә генә аҙ булыр, тигәндәй, республиканың Тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡыларын һаҡлау йәмғиәте идараһына ағза итеп тә һайланылар бит үҙен. Талантлы йәш скульптор — әйтер һүҙе лә, эше лә булыр, йәнәһе. Өсөнсөнән, тар ғына шәхси донъяһында ла йәшәргә — туған-тыумасаларың, дуҫ-иштәрең, иптәштәрең менән аралашырға, ғәм һәм шатлыҡтарын уртаҡлашырға, ҡулдан килгәнсә ярҙамлашырға ла кәрәк бит әле. Тап ошо минутта ла, тамамланмаған диплом эше көтөп торған оҫтаханаһына тура тартаһы урынға, яңы ғына ҡайтып төшкән «сыбыҡ осо туған»ы Басир Дәүләтбаев менән осрашып күрешергә китеп бара. Мәскәүҙең Суриков исемендәге художество институтын бөтөп сыға ул да быйыл. Ҡыҙыҡ, диплом эше ниндәй темаға икән?

-- Абба, Суриков! Йыл араһында һин бына ҡалай көрәйеп, бөтәйеп тә, ҡотайып та киткәнһең! — Ҡыҙҙың оҙон ҡолаҡсынлы аҡ бүрек аҫтында күмерҙәй йылтыраған күҙҙәре, ихлас ғәжәпләнеүен һис йәшермәй, мәркәз ҡунағын баштан-аяҡ ҡапшаны. Мыҡтынан-мыҡты кәүҙә, сиртһәң ҡаны сығырға торған алһыу йөҙ. Суҡышынаса бөҙрә-йылтыр ҡаракүл көпләгән «Де Голль кәпәсе»,

һоро «дубленка». Аҡ яҡаға боларып төшкән ҡара арыҫлан ялдары. Чикагоның үҙенән килтерткән (Мәскәү фарцовщиктарынан ғына табып була торған) тар киремле күк салбар -- «джинси» балаҡтары аҫтында ҡарҙы йырып барған ҡарайылтыр осло башлы ике кәмә. Егет үҙе — эсе тулы ҡуҙ һымаҡ: бына-бына ялҡынға сорналыр ҙа, тимерлектең һандалынан сорғолған утлы ҡулсалай, саж-бож килеп, ҡарҙа аунай башлар кеүек.

-- Ә мин һуң кемде күрәм! Иҫ киткес! Сәскә атаһың, Мухина! — Егет тә һыр бирмәне. Ҡуйынынан һурып алып, шыптырлаҡ йылтыр ҡағыҙға төрөлгән сағыу ҡыҙыл тере сәскә тотторҙо. — Һинең яҡты йөҙөң алдында хатта Ғүмәр Хәйям данлаған иран бағы гөлдәре лә төҫһеҙләнә! — тип өҫтәне. Дилбәрҙе ул да, тәү күргәндәй, ҡыҙыкһынып байҡаны: ябай һоро цигейка яғалы йоҡа ғына йәшел пальто (ах был йәшел буҫтау пальто, Балтиканан алып Һары диңгеҙгәсә ҡайҙарҙа ғына осрамайһың һин!), һарғылт синтетик күндән тегелгән оҙон ҡуңыслы итек, лыҡа-тулы (таш тыңҡыслагандай!) портфеленең һары ҡайышы нәҙекәй генә һомғол-тос иңен баҫҡан. Әммә шат: иртәнге саф һыуыҡтан бит остары алмалай алһыу, сөм күҙҙәре ямғыр сылаткан ҡарағат емештәреләй йылтырай. Яңы яуған аҡ ҡар ҡатарында ҡандай балҡып ҡулына күскән тере сәскә ҡыҙҙың һулышын өттө.

-- Уй йәнекәйем, яраткан ҡәнәферкәйем! — Алһыу бәбәгенә алһыу ирендәрен тейгеҙҙе лә, күп уйлап тормай, бүләкте ул яҡындағы бронза һынлы революция батырҙарының аяҡ аҫтына — ялтыр постаментҡа һалды. — Күрәһеңме, Суриков, беҙҙең ҡартлас ҡалаға ла һынлы ядкәрҙәр арта.

-- Һаҡ бул, Мухина, — тип киҫәтте Дәүләтбаев, — һин ҡойсаҡ бөйөк һәйкәлгә урын ҡалмай бара икән!..

-- Ул яҡтан ҡурҡыныс юҡ. — Буласаҡ скульптор, ынйылай аҡ тештәрен йылтыратып, яңы яуған ҡарҙы итек морондары менән катамаран шикелле ярып атланы — артынан ике буй эҙе һуҙылып ҡалды. — Урал иленең һәйкәлләнер тарихы ла, матдәһе лә, урыны ла етерлек — талантың ғына булһын!

-- Граниты ла, баҡыры ла үҙебеҙҙә, тип әйтеүеңдер инде.

-- Һәм башҡаһы ла, тип өҫтәмәксемен. Тик шуныһына баш ҡата: һиңә, майлы буяуҙар әһеленә, киндер туҡыманы ҡайҙан табырбыҙ — киндер сәсмәйҙәр бит хәҙер Уралда.

-- Һи! Атайым бахыр әйтмешләй, көрәп-көрәп болон ғына бирһендәр, — егет бармаҡ шартлатты, — буяуымды иҫке ыштан балағына һыларға ла әҙермен — Нико Пиросмани кеүек!

-- Ай-һай, ярмаңды эре яраһың!

- Әлбиттә! Был ярманың ҡәҙерен белһен донъя! Мин — талант! — Дәүләтбаев әллә ысынлап, әллә уйынсалап осоноп-кәпәренде.

-- Әстәғәфирулла тәүбә, көл тубалын семәрләгән гәрәбә, оләсәйем әйтмешләй! Иртә саҡырған кәкүктең башы ауырта, тигәндәре лә бар. Тураһын ғына әйткәндә, талантың да яланғас билгә ҡайыш билбау булып ҡуймағайы, тим, сыбыҡ осо туғаным.

Егет шаҡ ҡатып туҡтаны.

-- Ай-бай-бай, атайым бахыр әйтмешләй... Кемдән ишетәм?! Күрешмәгән

ун ике ай араһында ҡарсыҡтар һымаҡ уҫалланып та өлгөргәнһең, һылыуым. Әллә загс йәшенән дә уҙып бараһың инде... — Басир Дәүләтбаев шулай ҙа хәтере ҡалыуын йәшерә алманы, әсе телле ҡәрендәшен алғараҡ уҙғарып ебәреп, үҙ өңөнә йомолдо. Ҡайҙан килтереп сығарҙы был әйтемде, сәсрәп китмәгере? Мәскәүҙәге һөйөклө һаҡалтай-профессоры менән һүҙ ҡуйышҡан, тиерһең... – Башын баҫып уйҙарына сумған килеш эре-эре аҙымланы.

-- Һе, күрегеҙ әле берәүҙе: ҡайһылай ҙа олпатланып китеп бара! — Ҡыҙ уны ҡабат донъяһына ҡайтарҙы. — Һин, Суриков, күрәм, аҡса һанай беләһең. Иң кәмендә республиканың художество фонды директоры булырҙай өлгөрөп киләһең, бынамын тигән түрәлек килбәтең дә бар, өҫ-башыңа ҡарағанда.

-- Бәй, быныһы ни гонаһтарым өсөн тағы?

-- Һеркәң һыу күтәрмәй икән. Туғандарса ғына әшкәрткәндә, тәнҡит илә үҙтәнҡитте үҙ итмәйһең, үҙеңде бик олпатлайһың.

-- Тәнҡит илә үҙтәнҡит?.. Ха! Үндай архаизмдарҙы табан аҫтына тибәрмәүсене юллап ҡара — Айҙан табырһыңмы икән?

-- Шулай ҙа мин ерҙән эҙләү яғында.

-- Атайым бахыр әйтмешләй, кемһәнәнән?

-- Һәммәбеҙгә лә ҡағыла. Үҙебеҙгә кеше күҙе аша баға алмайбыҙ, баҡҡанда ла дөрөҫөн ҡабул итергә йыйынмайбыҙ. Һөҙөмтәлә мин-минлек сәскә ата, шәхесебеҙ һәр яҡтан да килешкән һәм камиллашҡан мөһәбәт һын итеп һөйөп үҫтерелә...

-- Фәлсәфәгә кереп киттең, Мухина. Тел төбөңдө аңлап бөтә алмайым.

-- Һәр кем үҙенең мин-минлеген бығаулап тота алһын ине, тип кенә әйтмәксемен.

-- Бығаулап? Һигеҙ аяҡлы януарҙымы?!. Ха! Уға ҡаршы кешелек донъяһы ғүмере буйына көрәшә, хатта фәнни нигеҙләнеп ҡоралланырға тырыша. Әммә-ләкин...

-- Әммә-ләкин хахылдамай тор әле. — Ҡыҙ кеше етди ҡыланды. — Үндай иң яҡшы ҡорал, әгәр ҙә белгең килһә, һәр кемдең үҙ ҡулында.

Егет хихылдап көлдө.

—Бына-бына, тап шул үҙе ул ҡорал! — тине ҡыҙ, ниһәйәт, эскерһеҙ киң йылмайып.

-- Нимә?!

-- Көлөү! Үҙеңдән үҙең көлөү.

-- Ай-һай!

-- Испания ерендә бер йола бар, бәлки, ишеткәнһеңдер: йылына бер тапҡыр көлә-көлә «мин-минлектән арыныу көнө». Пиреней ярымутрауына уны Әтилле (Атилла) батыр етәкселегендәге бабаларыбыҙ V быуатта «халыҡтарҙың бөйөк күсенеш дәүерендә» ошо Әтил (Иҙел) буйҙарынан алып барған. Хәҙерге һабантуйҙай, ауыл һайын, ҡала һайын бөтә халыҡ йыйынында үткәрелгән. Ул көндә һәр бәндәгә лә сикләнмәгән мин-минлеккә ихтыяр ҡуйыла икән: хыялыңда үҙеңде ниндәй күрһәң, шундай бул, майҙанға сығып күрен! Бер бәндә лә үҙен серәкәйҙәй генә итеп күрмәй, әлбиттә!.. Һөҙөмтәлә майҙандарға иҫәпһеҙ-һанһыҙ титандар өйөрө ағыла — түбәләре күккә тейерҙәй итеп ҡатырғанан, ҡағыҙҙан

яһалған мәғрүр һындар-маскалар. Майҙан уртаһына еткәс, титандарса ғорурлыҡлы ҡатырға һым ҡағыҙ һындар елкәләрҙән утҡа быраҡтырыла – бөтә майҙан менән ҡуша үҙ-үҙҙәренең мин-минлегенән шарҡылдап көлгән бәләкәй генә кешеләр, ябай кешеләр тороп ҡала...

-- Бөттө-бөттө, телемде арҡыры тешләнем!

—Телдәрҙе тешләмәйек — аҡылды йөрөтәйек.

Басир күҙ ҡойроғо менән генә юлдашының етди йөҙөн шәйләне: хайран үҙгәреп, матурайып киткән дәһә был — сыбыҡ осо туғаны! Ай-бай, атай бахыр әйтмешләй! Дөйөм алғанда, саҡма телләнеп, күҙгә төртә әйтеп теңкәгә тейһә лә, уның менән күп ирҙәренә торғоһоҙ ирҙәрсә һөйләшеп тә, кәңәшләшеп тә, әрләшеп тә була, сәкәләшкән осраҡта ла күңелдә юшҡын түгел, ә аҡыллы йылылыҡ, баһаһыҙ байлыҡ ҡала. «Ҡыҫҡаһы, был ҡыҙ менән ат урларға ла була!» — Басирҙы тартҡан төп көс, моғайын, ошолор. Эре ябалаҡлап яуған ҡар селтәре үтәһенән ҡушарлап атланылар.

—Әгәр ҙә сер булмаһа, әйтсе әле, Суриков: диплом эшеңде ни темаға яҙаһың?

Басир туҡтап, юлдашына дүрт күҙ менән төбәлде:

-- О, ниндәй зифа-һомғол буй! Ҡайһындай сихри ҡараш! Сейәләй тулышҡан ирендәр!

-- Шаярма, һорауыма яуап бир.

-- Бәй, яуап бирҙем дә инде. Мин бит һинең ошо теп-тере һыныңды яҙырға ҡайттым!

-- Юҡ инде. — Һынын ҡатырып ситкә ҡайырылды ҡыҙ. — Натураны ана тегенән — киң халыҡ массалары араһынан тап, партиябыҙҙың Үҙәк Комитеты бойорғанса. Һоп! — Ауыр портфелен ташлап, бордюрҙан ҡар яланына йылғыр тейендәй ырғылды.

Ҡарт сағандың әүенке ботағында, бейек күтәрмәле йылтыр итектәрен Басирҙың нәҡ башы осонда ҡайсылатып, ҡып-ҡыҙыл тел күрһәтте, боҙлауыҡлы олондо ҡыҫып услаған яланғас ҡулдары, еүешләнеп, нәҡ күгәрсен тәпәйҙәреләй ҡыҙарған, иңкеү яурындарына, йөнтәҫ бүрек түбәһенә көрәп алырҙай аҡкүбек ҡар өйөлгән.

-- Ах, илаһи картина! Дилбәркәйем, шаҡырай: ошо ҡиәфәтеңдә һәйкәлташ булып ҡат! Ҡайҙа мольбертым?!

-- Юҡ инде! — Ағасты тирбәлдереп, күбә ҡарҙы ҡупшы мәркәз ҡунағы өҫтөнә ишерелдереп ырғыны, сыр-сыу ҡубышып, йомшаҡ көрттә аунанылар.

-- Һәй-һәй! Етте! — тине Дилбәр, тегенең хәтәр хәрәкәтләнгән ҡулын ситкә этәреп. — Туған-тыумаса менән улай итмәйҙәр!

-- Һинең менән минең сыбыҡ осо туғанлыҡ та инде... — Тороп ҡағындылар. — Загс бюроһына барып етерлек.

-- Суриков, ни һүҙең был? Ошо йәшеңдән үк загс тураһында уйлайһың!

-- Һәй ҡоҙаса... күңелеңде кем аса, тиәйемме... — Басир бармаҡ янаны, — загсһыҙ ҡалып ҡуймаса!

-- Ҡурҡытма. Бер һәпрә йән әйтмешләй, апайым менән еҙнәйем башы һау булһа, загс тәьмин ителгән.

Егет уйға ҡалды.

-- Ҡара әле, Мухина, әллә тим, ысынлап та, Мөхлисә еңгәйем димләгәнсә, миңә генә сығаһың да ҡуяһыңмы?

—Шаярма, Суриков! — Ҡыҙ тырт-тырт атлап китте. — Мотал еҙнәйемә әйтеп, ҡолағыңды борҙортормон юғиһә. Туғандар араһында ундай һүҙ булырға тейеш түгел. Өҫтәүенә, мин — уҫал, белеп ҡуй шуны. Ир-ат затын туфли аҫтында ғына тоторға яратам. Ә туғаның булған кешегә ҡарата быны эшләүе бик тә уңайһыҙ. Сыбыҡ осо булһа ла.

Бәләкәстән үк Шаһибәрәковтар фатирында аунап-түнәп үҫкән Басир менән Дилбәрҙең дә тел төптәре ҡурсаҡ менән уйынсыҡтан уҙмаған саҡтар бар ине. Унан һуң — дәреслектәр, өйгә бирелгән эштәр, имтихандар... Ә артабан осрашыуҙар һиҙелеп һирәкләнде, икеһе тиң бер-береһен күреүҙән үк ҡыҙарышып, оялыусан булып китте. Туғанлыҡ тойғоһо ла, ысынлап та, сыбыҡ осона күсте. Һәм Моталдарҙың тупһаһын төшөрмәй килеп-киткән таныштары, ҡунаҡтары — танылған яҙыусылар, артистар, рәссамдар — әгәр был йортҡа уның серҙәрен белмәйерәк инһәләр, Дилбәр менән Басирҙы йорт хужаларының үҙ балалары иҫәпләр, хатта береһен «(а)тас Мотал», икенсеһен «(и)нәк Мөхлисә» тип тә нарыклар ине... (Бына ҡайҙа ята, буғай, телебеҙҙәге «тас», «нәҡ» оҡшатыу һүҙҙәребеҙҙең тамырҙары!).

Моталдың атаһы Булаттимер Ташбулат улы Шаһибәрәков (заманында мәшһүр инженер-химик), ҡорҙаштары Йәмил Ҡотлой улы Ҡотлоев (тарихсы-филолог ғалим) һәм Талир Ғөләм улы Баҡишев (телсе-фолһклорсы ғалим) граждандар һуғышынан уҡ дуҫлашып, утыҙынсы йылдарҙа ла өстағандай таймай йәшәгән, тиҙәр. Ана шул Талир Ғөләм улы Баҡишевтың Моталдан саҡ ҡына өлкәнерәк, әммә уның менән бергә уйнап үҫкән ҡыҙы Наҙлыгөл булып, утыҙынсы йылдар аҙағында «донъялар боларған» бер осорҙа зым-зыя юғалған имеш. Баҡтиһәң, ул бер ҡайҙа ла юғалмаған, ә «Урта Азиялағы ниндәйҙер Китап ҡалаһында төпләнмеш апаһына (Баҡишевтың бер туған һеңлеһенә) барып һыйынған — был хаҡта Моталға байтаҡ йылдар уҙғас, Бөйөк Ватан һуғышынан һуң Кремлдәге мыйыҡлы бабай төңкәйеп, Магаданда ятып ҡалған атайҙарының яҡты исеме аҡланып ҡайтҡас ҡына мәғлүм була. Баҡтиһәң Наҙлыгөл, Тыуған илгә Гитлер фашизмының ҡара яуы ябырылғас, үҙе теләп фронтҡа киткән, Берлинды алғас рейхстагка штык менән исем-фамилияһын ырып, шул рейхстаг тупһаһында үҙенең фронтташы һәм яҡташы егет менән танышып ҡауышҡан. Уныһы, әмәлгә ҡалғандай, беҙгә мәғлүм Мотал ҡатыны Мөхлисәнең Бәндәбикә ауылындағы ике туған ағаһының улы икән. Шул ауылға ҡайтып йәшәй башлағас, оҙаҡ ваҡыт балалары булмай торғас, ниһәйәт, ошо Диләфрүз (әле ҡыҫҡартып, Дилбәр тип йөрөтәләр) исемле ҡыҙ бала донъяға тыуа. Наҙлыгөл, көтөп алынған балаһына биш йәш тулыр-тулмаҫтан, ҡапыл ғына вафат булған, ҡыҙҙың атаһы ла, иҫке яраһы ҡуҙғалып, кеше көнөнә ҡалған. Тап шул саҡта Дилбәрҙе Мотал ҡалаға алып ҡайтып, билдәле интернат-мәктәпкә урынлаштыра. Бер осорҙа шул уҡ мәктәптә Моталдың Ырымбур өлкәһе Сәнкем-Биктимер ауылындағы Дәүләтбаева фамилиялы ике туған апаһының Басир тигән улы ла уҡый икән. Шаһибәрәковтар фатиры ана шулай был икәүҙең туғанлыҡ төйәгенә әйләнде...

Һыу һөлөгөләй ҡыҙ менән егет башынан, бәлки, бына ошо хәтирәләр елеп-елпенеп үткәндер. Ләкин йәштәр оҙаҡ уйланамы һуң!

—Йә, ҡоҙаса, күңелеңде кем аса, тиәйемме, һөйләп ебәр хәлдәреңде. Атайым бахыр әйтмешләй, күрше-күлән иҫән-аманмы, тыуған ғәзиз төйәккәйҙән хат-хәбәр алаһыңмы?

Әммә ҡыҙҙың кире-ҡабат шаян тулҡынға күсергә яйы юҡ ине, буғай, ауыр һулап яуапланы:

-- Ҡош телендәй генә бер сәләм килде, Ерәнсә-сәсән ауылынан яҙалар. Элегерәк Өфөнән бер төркөм археологтар килеп, Бәндәбикә кәшәнәһен аҡтарып хараплағайнылар, ә хәҙер урындағы ниндәйҙер шабашниктар Ерәнсә-сәсән ҡәберен дә бөлдөрөргә йөрөйҙәр, ти... Турат тауының башы ҡарҙан асылыуын ғына көтәләр, имеш.

-- Булмаç. Шабашниктың ҡулы ҡысытып тормай һөлдә-мөлдә ҡаҙырға.

-- Нисек телең бара шулай атарға?!

-- Нимә тип атайым һуң? Кәрәкмәгән иҫке уба тип әйтһәм...

-- Телең ҡорор. Әллә инде Ерәнсә-сәсәндең кем икәнен дә белмәйһең?..

-- Әкиәт әкәмәте.

-- Әкиәт түгел — хәҡиҡәт. Бәндәбикә кеүек үк, тарихыбыҙҙа эҙ ҡалдырған шәхес ул. Сал быуаттарға тоташтырыусы алтын саҡрым бағанаһы. Уның изге ҡәбере — бабалар ҡомартҡыһы.

-- Их Мухина, Мухина, нимәләр менән ҡатыраһың башыңды! Үҙеңде шул иҫке-моҫколар йәмғиәте идараһына ағза итеп һайланған тип ишеткәйнем, раç икән. Соҡсонһондар, аҡтарһындар, ер менән тигеҙләһендәр — ағартма сәстәреңде! Ҡомартҡы тигән ул нәмәң һинең һымаҡ һылыуҡайҙың бер сәс бөртөгөнә лә торош түгел!

Күҙҙәре шар булған Дилбәр үҙ ҡолаҡтарына ышанманы:

-- Туғаным, быңдай изге нәмәләр менән шаярмайҙар!

-- Ғәфү ит, асы хәҡиҡәтте асырға итәм. Нимә ул һин ҡурсаларға талпынған «ҡомартҡы»лар? Өләсәйҙәрҙең кис ултырып һөйләгес ҡарыһүҙҙәре лә ер менән тигеҙләнеп бөткән убалар... Һөйөклө совет халыҡ шағирыбыҙ Мәрүән Карами ағай үҙе яҙғанса, үткәндәребеҙҙе әгәр бизмән табағына һалһаҡ, баҫып төшөрлөк беҙҙең нимәбеҙ булған? Колизейҙар ҙа, пантеондар ҙа ҡороп ҡалдырмаған иҫәүән бабаларыбыҙ...

—Һин үҙең иҫәүән, туғаным. Беҙҙең үҙ колизейҙарыбыҙ, пантеондарыбыҙ булған.

-- Ҡайҙа улар?

-- Аяҡтарыбыҙ аҫтында. Һәр халыҡтың — үҙ ғәме һәм ғәмен кәүҙәләндерер сараһы, тип әйтергә яратҡан минең атаҡлы Талир Баҡишев олатайым. — Ҡыҙ, йөрәкһеп, юлдашының күҙҙәренә төбәлде. — Һин һәм һинең совет халыҡ шағиры ағайың кәмһеткән ғәзиз бабаларҙың юғары мәҙәниәт кимәлен донъяның аҡыл эйәләре таныған. Бына нәмә тип яҙа күренекле совет ғалимы Светлана Александровна Плетнева (мин уны хатта, һинең ише туң ҡолаҡтарға тукыр өсөн, ятлап та алдым!): «Боронғо башҡорттарҙа үҙенең дөйөм кимәле буйынса күрше дәүләттәр мәҙәниәтенә яҡын торған юғары үҫешкән

мәҙәниәт булғанлығы мәғлүм... Уларҙың үҫеше билдәле бер йүнәлеш буйынса барған һәм һис ниндәй катаклизмдар ҙа был тамам өлгөргән, нығынған дала цивилизацияһын юк итә алмаған. Халыҡтың теге йәки был дәүләткә сәйәси буйһоноуы күп быуатлыҡ мәҙәниәт традицияларын етди үҙгәртә алмаған». Ҡолағыңа киртеп ҡуй: далалы ғына түгел, ә ҡалалы *цивилизация* тураһында әйтелгән! Донъя яратылғандан алып халҡыбыҙҙың тормош тәжрибәһен, хәтерен туплаған ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәрен — эпостарын, хикәйәттәрен, әкиәттәрен алып ҡара — ваҡиғаларҙың күпмеһе *ҡалаларҙа* бара!

-- Ә ҡайҙа ул «ҡала»лар? Ҡайҙа?!

-- Беҙҙең боронғо ҡалаларҙың, урындағы шарттарҙы файҙаланып, шау-ағастан һалыныуын онотма. (Ҡайһы бер райондарыбыҙҙа әлегәсә хатта нигеҙҙәренә тиклем ағастан хасил өйҙәребеҙ бар). Ҡайһы бер ҡалаларыбыҙҙың исемдәренә тиклем «ағас» булған бит: Имәнҡала, Талҡала, Йүкәтән... Башҡаса аталғандары — Башҡорт, Болғар, Ҡараҡая, Аҡуба, Минжан, Алатор, Балатор, Аусы кеүектәре лә билдәле. Болғар ҡалаһының ярты өлөшө, мәҫәлән, кейеҙ тирмәләрҙән торған... Был ҡалалар — урта быуат Европа сәйәхәтселәре үҙ күҙҙәре менән күреп, география карталарына шаҡырайтып һүрәтләп ҡалдырғандары ғына. Ә ғәмәлдә беҙҙең хәҙерге республикабыҙ сиктәре ҡыҫаһында ғына ла — үҙем һанап сығарҙым! — беҙҙең эраға тиклемгеләрҙән алып урта быуаттарғаса төрлө осорҙарҙа гөрләп торған һәм һуңынан харап булған эреле-ваҡлы йөҙ ҙә егерме дүрт ҡала һәм ҡаласыҡ урыны ҡалҡынып ята, ауылдарҙы иҫәпкә алмағанда... Әйтәйек, ғәскәр яңы ерҙәр яуларға бара, ә артында тераге — гарнизон *(ҡаласы)* тороп *ҡала* — бына ҡайҙан килә икән «ҡала» тигән һүҙебеҙ! Уға ҡалһа, имеш, сал-боронғо замандарҙа башбүрегә табыныусы башҡорттар менән урыҫтар уртаҡ дәүләттә йәшәгән, дәүләт етәксеһе (ҡорот) һәм ул етәксе торған ҡала «ҡорот» (ғорот) аталған — бына шунан «город» һүҙе яһалған...

-- Мухина, ҡайҙан белеп бөттөң быларҙы?

-- Быларын мин Талир Баҡишев олатайым хеҙмәттәренән уҡыным...

Басир терт итеп ҡалды, үткән йәйҙә генә Мәскәү янындағы Лопуховка ауылында төптө башҡорт Талир Баҡишев түгел, ә урыҫ ҡарты Яков Ксенофонтовичтан ишеткәндәрен «келт!» итеп иҫенә төшөрҙө. Бынағайыш тамаша, ул да шул уҡ бер балыҡ башын сәйнәй ине түгелме, атай бахыр әйтмешләй: борон-борон урыҫтар менән башҡорттар бер туған булған, бергә-бергә йәшәгән... Бер-берећенән шаҡтай алыҫ ике төбәк аҡһаҡалдарының фекере ниңә ике тамсылай иш килә — ысынлап та, телепатия тигән нәмә бармы әллә донъяла?.. Тик егеткә Дилбәр туғанының һүҙе һис кенә лә ышаныслы тәьҫир итмәй кеүек ине, сөнки урыҫ яҡтарында борондан уҡ ҡалалар булыуы бер хәл (был хаҡта күп яҙылған), ә бында, «ҡырағай башҡорт» ерендә...

-- Мәрүән Карами ағай хатта Мәскәү гәзиттәрендә яҙып сыҡты: «Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем халҡым ҡырағай-наҙанлыҡта, томаналыҡта йәшәгән, уның баш терәр үҙ иле лә, тороп өйө лә булмаған: тамырһыҙ ҡамғаҡ кеүек, дала буйлап ҡайҙа ел иҫһә -- шунда күсенеп йөрөгән. Пушкин тасуирлаған телһеҙ башҡортҡа бөйөк Ленин партияһы ғына тел биргән, һуҡыр күҙҙәрен

асҡан»...

-- Шуға ышанаһыңмы?

-- Ышанам, совет халыҡ шағиры бит ул.

— Их һин, -- егеттең танауына бармаҡ осон тейҙерҙе, -- талантлымын, тиһәң дә, ғәфү ит, талапһыҙыраҡ икәнһең шул, туғаным...

-- Талапһыҙыраҡ? Кемгә ҡарата?

-- Үҙ-үҙеңә, әлбиттә. Тарихыңды белмәйһең. Дөрөҫөрәге, белергә теләмәйһең.

-- Ә нимәгә хәжәт ул? Совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами ағай белгәне лә еткән. Бөгөн минән, һинән, тарихты беләһеңме, тип түгел, ә «партия сәйәсәтенә мас килтереп көн ҡаҙағына һуҡкан әҫәр бир» тип һорайҙар. Һәм шулай уҡ — крәҫтиәндән, шахтерҙан, эшсенән дә: үткәндәрҙән фәтүә юҡ, халҡыбыҙҙың бөгөнгө көн ихтыяждарын ҡәнәғәтләндер — илгә күберәк байлыҡ бир! Тарих уйлап башты ауырттырмайыҡ.

-- Ҙур башыңа кесе үлсәмле кеше кәпәсен кейгәнһең.

-- Ғәмәлдә тарих юҡ бит ул, тарихсылар яһай уны!

-- Мине ирештереү өсөн юрый ғына әйтәһеңдер, тип уйлайым.

-- Анау торған «шырпы ҡаптары»на ҡалҡынып ҡара. – Басир һуңғы йылдарҙа төҙөлгән атаҡлы тимер-бетон панель йорттарға төртөп күрһәтте. -- «Тарих»мы шул? Уларҙың ғүмеркәйе архитектор тарафынан ватманда уҡ иҫәпләп-сикләп ҡуйылған — һикһән, күп тигәндә йөҙ йыл. Шунан улар урынына ошондай уҡ башҡа шырпы ҡаптары ҡалҡынасаҡ, яңы тарих башланасаҡ...

-- Ләкин ана шул йөҙ йылды тарих сылбырынан өҙөп ташлап буламы? Йәки утыҙ йылды, өс йылды, өс көндө!..

-- Унаһы икенсе мәсьәлә.

-- Юҡ, бөтәһе бер мәсьәлә. Әгәр йөҙ йылдан һуң, әйтәйек, ошо урында тәбиғәттең ожмах баҡсаһы сәскә атып ултырһа, ә һин яңынан тыуып, яңы Басирға әйләнһәң, бына ошо ғәзиз ҡалабыҙ һиңә тиклем бер ваҡытта ла булмаған тип сарлар инеңме телеңде?

-- Быныӊ өсөн тарихсылар бар, һис юғында Мәрүән Карами ағайҙар бар. Мин уларҙың өлөшөнә кермәйем.

—Сөнки фекер торғонлоғо быуа аҡылыбыҙҙы. Ташбулаттан һарайҙар ҡалмаған икән — улар төптө булмаған, тип үҙ-үҙебеҙҙе кәмһетеп күнеккәнбеҙ, был хаҡта фән күптән инде икенсе ҡараштa икәнлеген дә белмәйбеҙ, ҡырағай башҡорт тураһындағы Пушкин һүҙҙәрен тылҡыйбыҙ ҙа тылҡыйбыҙ...

Сиктәрҙе һанға һуҡмай үрһәләнгән сыбыҡ осо туғанының, ашар хәләл икмәген – сәнғәт темаһын да торғоҙоп ҡалдырып, тарих саңдарында сабыйҙарса ихласланып буталыуын мәрәкә күргән Басир, күңеленән уның яҡлы булһа ла, ирештереп оторайҙы:

-- Барыбер ышанмайым, партиябыҙ әйтмешләй, һөрһөп бөткән башҡорт милләтселегенең шауҡымылыр, тип һанайым!

-- Алайһа, әйҙә, киттек минең төйәккә -- күрмәгәнеңде күрһәтәйем! -- Ҡулынан һөйрәне егетте. Яҡын уҡ ҡалған икән: Сәнғәт институтының подвал бүлмәһендәге сей балсыҡ еҫтәре аңҡыған оҫтаханаға инделәр. Басир, бөркәнсәккә

йәшереүле бер-нисә һын күҙгә төртөлгән тарафтарға ҡаранып, ҡыҙығыуын йәшерә алмай һөйләнде:

-- Вәт әй, ысын скульпторға һанап, айырым урын биргәндәр!

-- Ысын скульптор шул мин!

-- Кәпәренмә, күҙем тейеп ҡуймаһын! Асабыҙмы бөркәнсәктәрҙе?

-- Үҙ сиратында асырбыҙ. Тәүҙә баяғы теманы тамамлайыҡ.

-- Тағы тарих... Һаташаһыңмы әллә? Үҙеңде күргәндәй булайым.

-- Өлгөрөрһөң. Кил бында. – Шүрлектән ҡалын ғына китапты алды. – Күреп торам: тотоп та ҡарамағанһың. Эрнст Добельхоферҙың 1963 йылда Мәскәүҙә донъя күргән «Знаки и чудеса» тигән популяр хеҙмәте. Бына, 336-сы битен асайыҡ. — Табан тайҙырмаһын, тигәндәй, егеткә ашығып аңлатты. — Һис тә һаташмайым мин. Диплом эшемдең темаһын һайларҙан элек, торғонлоҡ касафатын үтеп сығырға, хаҡлығымды дәлилләр өсөн күп уҡырға тура килде — үҙемә күрә тарихи китапханам тупланды... Шулай итеп, тыңла бына һәм күҙ алдыңа килтер: беҙҙең алда ҡасандырғы тап ошо беҙ йәшәгән ерҙәрҙе лә иңләгән ҡеүәтле дәүләт — Бөйөк Төрки ҡағанаты, 568-се йылдың йәмле август айы. Көнсығыш Рим (Византия) императоры Юстин II юлландырған илселек төркөмө шул империяның дәрәжәле һанаунигы Зимарх етәкселегендә Аҡтауға килеп етә. Әйткәндәй, был Аҡтауҙың ҡайҙалығын ошоғаса тарихсылар аныҡ ҡына шәйләмәй, сөнки төркиҙәр ерендә бындай Аҡ тау-таштар күп кенә (бөгөнгө республикабыҙҙың ете районында — Аҡтау, өс районында Аҡташ-тау бар; Ырымбур ҡалаһы ла Аҡтау өҫтөндә тора). Шуға сәмләнеп китеп, әйтеүемсә, мин үҙемдең атаҡлы телсе-ғалим олатайымдың онотолоп бөткән тәүарих яҙмаларын аҡтарҙым да бына нәмәгә юлыҡтым: баҡты иһәң, уның раҫлауынса, ундай тауҙар боронғо тулы аталышында «Аҡ тағ-таш» рәүешле әйтелгән дә, ҡыҫҡартылып, йә «Аҡтау»ға, йә «Аҡташ»ҡа әйләнгән, «Таҡташ» тигән исемдәр ҙә, имеш, шул «тағ-таш»тан таралған...

-- Туҡта, Мухина, башым зыңҡый башланы! Зимарх сәйәхетенә уларҙың ни ҡыҫылышы бар?

-- Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың «Ядкәр»ен дә уҡымағанһыңдыр әле һин. Ә мин, ғәрәп хәрефтәрен үҙаллы өйрәнеп, күҙҙәремде тондороп аҡтарып сыҡтым. Унда тап беҙҙе ҡыҙыҡһындырған нәмәләр ярылып ята: «Ағиҙелдең уң яғында, Инйәр менән Сим һыуының Ағиҙелгә ҡойған ерендә, *Аҡташ* тигән бейек тау өҫтөндә ошоғаса төрлө урында ҡала емеректәре бар...» Һәм бында, тип өҫтәй аҡһаҡал-ғалим, «шундай ҙа дәүләт булғандыр ки, *нисә мең йыл* был урындан тороп, мәшрик тарафына — Ҡытайға, Һиндостанға, Ҡафҡазға тиклем хөкөм йөрөткән.. Дәшти-Ҡыпсаҡ тигән мәшһүр империяның баш ҡалаһы ла беҙҙең... Аҡташ тауында булған икән...». Ата-бабаларҙың ғөрөфө буйынса, ти ул, «мәшһүр шаһтарҙың нәҫеле һәм дәүләте күсһә лә, урынын килеп алған икенсе шаһ шул элекке мәшһүр шаһтың исемен үҙенә ҡушамат итеп йөрөтә», йәғни Аҡташ-хан ләҡәпләнә. (Әйткәндәй, төрки батша династияларында был ғөрөф-ҡанундың бик боронғо замандан ук урта быуаттарғаса ныҡлы үтәлеүе мәшһүр совет тарихсылары Л.Н. Гумилев, М.И. Артамонов, С.А. Плетнева хеҙмәттәрендә раҫлана). Шундай мәшһүр Аҡташ-хандарҙың береһе — ул тарихта мәғлүм

Өсбит-Әмингә (латинса яҙылышында Спит-амен; Өсбит — өс телдәге өс бит яҙыуҙы ла күҙе таный, тигән маҡтаулы ләҡәп; беҙҙең эраға тиклем фарсы империяһының фармандары тексы өс телдә өс биткә яҙылыр булған) һәм башҡорт хикәйәтендәге Әминбәккә тап килә — Мөхөммәтсәлим Өмөтбаев раҫлауынса, ошо ерҙә йәшәгән һәм Һиндостанғаса арауыҡты биләгән. Заманында еңелмәҫ һаналған атаҡлы илбаҫар Зөлҡәрнәйен (Александр Македонский) яуына ҡаршы сая көрәшеп, Амударъя буйында уны кире сигенергә лә ауыҙы бешеп бөтөнләй икенсе тарафҡа — Һиндостанға китергә мәжбүр ҡылған... Тимәк, ҡитғаны яуланып алыуҙан ул ҡотҡарған... Йәнә ошоларға өҫтәп, урта быуаттар миҫалына ла күсеп: «Нуғай хандары заманында Аҡташ башында ултырған хандарға ла Аҡташ хан тип исем бирелгән», — тип иҫкәртеп ҡуя «Ядкәр»ҙең авторы...

Басир теләр-теләмәҫ тыңлай ине: ҡыҙығын-ҡыҙыҡ та ул, беҙҙең эштә кәрәге тейерме икән? Әйтәйек, мәшһүр Мухина кеүек, партиябыҙ ҡушҡанса, хеҙмәтсәндәр араһына ылығып, әҫәрҙәрҙә ураҡ тотҡан колхозсы йәки сүкешле эшсе һынын мыҡтылап тыуҙырғанда? «Ҡайһындай матур һылыуҙарҙы ла харап ҡыла икән был «тарих ене»!.. Нисек итеп усағын һүрелтергә?..»

— Византия илселеген ҡабул ҡылған Төрки ҡағанаты мәркәзе лә әллә шул Аҡташ тауында булған тиһеңме?

-- Кем нисек уйлайҙыр, әммә бығa минең иманым камил, сөнки башҡа мәғлүмәттәр ҙә бер тирмәнгә һыу ҡоя.

-- Мәҫәлән?

—Мәҫәлән, бик алыҫҡа китмәй, ҡулыбыҙҙагы китаптың нәүбәттәге ике битенә күҙ йүгертәйек. Зимархтан һуң ете йыл үткәс, Византияның яңы императоры ҡағанатҡа яңы илселек ебәрә, уның башында Валентин тигән һанауник тора. Бына улар төрки империяһының һигеҙ төп ырыуы иҫәбенсә һигеҙ юл-өлкәгәгә бүленгән биләмәһенең ил сигендәге бер өлкәһенә килеп етә. Өлкә менән идара итеүсе Төрөксән-Өфө (латинса Турксанф тип яҙылған) кенәз ҡаршылай, ул сикһеҙ ярһып һөйләшә: «Һеҙ түгелме ни шул бер үк ялғанды уҙ телегеҙҙә тылҡыусы румиҙар?!. Һәм һеҙ, илселәр, миңә шул ялғанды йөкмәнеп киләһегеҙ, ә һеҙҙе юлландырыусы үҙе үк — алдаҡсы. Мин бөтәгеҙҙе хәҙер үк, кисекмәҫтән үлтерәм. Ялғанлыҡ төркигә ят һәм ул беҙгә хас түгел! Батшағыҙ ҙа тейешле ваҡытында үҙ язаһын аласаҡ... Ә миңә иһә ҡояш сығышынан алып байышынаса бөтә ер йөҙө буйһона. Бахырйәндәр, алан халҡына һәм йәнә үтәйғур ҡәбиләһенә ҡарап ғибрәт алығыҙ: сая ҡыйыулыҡтары менән маһайып, үҙ көстәренә таянып, еңелмәҫ төрки халҡына ҡаршы баш күтәрергә баҙнат иткәйнеләр, өмөттәре өҙөлөп төңөлдөләр. Хәҙер беҙҙең ҡол улар». Баҡһаң, кенәздең атаһы Истәми-ҡаған вафат булып, шунан һуңғы ҡайғылы осор икән. Шулай ҙа ул илселекте дәүләттең үҙәгенә — атаһы урынына тәхеткә ултырған бер туған ағаһы Тарду (Тора-тау -- ҡытай тарихында Та-тау) ҡаған тарафына үткәрә, ә ул «*Эктел* тауында йәшәй» имеш. Бында шуныһы ҡыҙыҡ: румиҙар яҙыуында ла, ҡытай яҙыуында ла тәүге исемдең тап беҙҙеңсә яңғырашлы ҡушма һүҙ (Тар-ду) булып, икенсе яртыһы «тау» икәнлеге бәхәсһеҙ. Бер юлы тәүге өлөш тә асыҡлана: тар— тор — тора (ҡытай телендә «р» өнө булмағанлъгктан, «та» рәүешле әйтелә

һәм уҡыла); тимәк, үҙебеҙгә яҡшы таныш *Тора-тау* (тулы әйтелешендә ул Тороҡ-тау, шуға күрә ошо Тороҡ төбәгендәге боронғо башҡорттарҙы тороҡтар – *төрөктәр* тип тә атағандар), ә Эктел тигандә — Аҡ-Әтил — Ағиҙел күҙаллана. Тора-тауҙың да, Аҡташ-тауҙың да ошо көнгәсә нәҡ «Эктел» -- Ағиҙел буйында икәнлеген иҫләһәк...

-- Етте, тулы капитуляция! — Сабырлығын юя барған егет ҡулдарын күтәрҙе.

-- Ә һин, башҡорттоң бер нәмәһе лә булмаған, тиһең.

-- Пардон! Политиктар әйтмешләй, асыҡлыҡ керетеүеңде үтенәм: ул көфөр һүҙҙәрҙе мин үҙебеҙҙең абруйлы ғына ғалимдарыбыҙға һәм яҙыусыларыбыҙға ҡушылып ҡына әйтәм. Әгәр ҙә бик теләһәң, — ҡыҙҙың күҙҙәренә баҡты, — ҡуҙағында ямғыр сылатҡан бынауы йылтыр ҡарағат емештәрең хаҡына ғына ла ошо секундтан уҡ әҙермен әйткән береңде тутыйғоштай отоп алып ҡабатларға!

— Ҡабатларға түгел, ә үҙеңдә тарихи ҡараш тәрбиәләргә кәрәк, сыбыҡ осо туғаным. Әгәр ҙә шул юк икән, һин әйткән ул «бөгөнгө көн» байлыҡтарҙың хужаһы, ҡәҙерләп һаҡлаусыһы ла булмаясаҡ. Тыуҙырыуҙа ғынамы ни ул байлыҡтарҙы! Бына бынауы үҙебеҙ йәшәгән, һин миңә төртөп күрһәткән йорттарҙы ғына алып ҡарайыҡ, ти, үҙең әйтмешләй. Һәр береһен һаҡлап тотоу, үҙ ваҡытында йүнәтеп тәрбиәләү, бөлдөртмәү өсөн үҙ-үҙебеҙҙе өгөтләп тә битәрләп трибуналарҙан ҡысҡырабыҙ, гәзиттәргә яҙабыҙ, телевидениела «актуаль камера»ларҙан фашлатабыҙ. Әммә хәл үҙгәрәме? Үҙгәрмәй. Кеше үҙен шул байлыҡтарҙың хәстәрлекле хужаһы итеп тоямы? Тоймай. Һәм ул һаман, һаман шулай ҡаласаҡ, әгәр ҙә беҙ һаман да шул тарихи битарафлыҡта ойоп йәшәһәк, үҙебеҙҙә ысын тарихи ҡараш тәрбиәләмәһәк. Сөнки беҙ, әле генә үҙең әйтмешләй, бөгөнгө файҙаны ғына күрергә, иҫәпләргә күнеккәнбеҙ, бөгөнгөгә хеҙмәт итһә, иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын, тиеберәк йәшәйбеҙ. Үткәндәрҙән ҡалған мираҫты уйлап та ҡарамайбыҙ — ошо бөгөнгө йортобоҙҙоң нигеҙе үткәндәргә ҡоролоуын онотабыҙ. Ә бит асылда бөгөн беҙ үҙ ҡулдарыбыҙ менән төҙөгән, үҙебеҙ йәшәгән был биналар киләсәккә беҙҙең замандан тере шаһит булып барып етәсәк, беҙҙең хаҡта һөйләйәсәк, беҙҙең йылыны ейәндәргә бирәсәк һәм беҙҙең күҙҙәр менән уларға баҡасаҡ — Бәндәбикә кәшәнәһенең кирбестәре, Ерәнсә-сәсән убаһының таштары беҙгә һаман өнһөҙ оранлап баҡҡандай...

-- Их-ма, кәшәнә лә убалар менән генә маҡтана алабыҙ шул...

-- Тел осоңа, туғанҡайым, шайтанмы, тим, төкөргән: үҙ-үҙеңде бахырлауҙан ары уҙа алмайһың. Былайғас, телмәремдең ахырына етмәйенсә туҡтамайым: Зимарх һанауниктың Аҡтауға килгәс хайран ҡалып нимәләр күргәнлеген бел... Август айы, тигәйнек бит. Йәй көнө булғас ни, ваҡиға ҡалала түгел, ә тәбиғәт ҡосағында, йәмле йәйләүҙә бара. Сит ил ҡунаҡтарын тәүҙә, бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған үҙебеҙҙең йола буйынса, артыш ботаҡтары үртәп ыҫлайҙар (сир-зәхмәттән, золомдан арындырырға). Шунан гүзәл ебәк сатырға индереп, һәр береһенә һаумал ҡымыҙлы алтын туҫтаҡ тотторалар. Ирәүән табын әңгәмәһе көнө буйына һуҙыла... Инде тирмәләге күҙҙең яуын алырҙай биҙәктәргә -- оҫта ҡуллы боронғо бабалар етештергән мәҙәни байлыҡтарыбыҙға Зимарх аша

күҙ һалайыҡ: сатыр «төрлө сағыу буяуҙар менән оҫта биҙәкләнгән ебәк туҡымаларҙан ҡоролғайны. Улар (илселәр) шарап эсте, тик ул беҙҙәгесә йөҙөм емешенән һығып әҙерләнгән түгел ине. Улар эсемлеге бөтөнләй башҡаса. Төркиҙәр ерендә йөҙөм тәлгәштәре үҫмәй, был үҫемлек бөтөнләй юҡ уларҙа... Иртәгәһен ҡунаҡтарҙы тәүгеһе кеүек үк аллы-гөллө ебәк менән биҙәлгән икенсе сатырға саҡырҙылар. Бында төрлө ҡиәфәтле хоҙай һындары ла ҡуйылғайны. Истәми үҙе шау-алтындан ҡойолған тәхеттә ултыра. Бина уртаһына алтын һауыт-һаба өйөлгән, шулай уҡ бөркөүестәр ҙә, мискәләр ҙә шау-алтындан... Иртәгәһенә улар башҡа сатырға саҡырылды, унда улар алтын менән көпләнгән бағаналарҙы, алтын ялатылған һәм дүрт алтын тауис ҡошо арҡаһында торған урындыҡты күрҙе. Сатыр алдында күҙ күреме ергә арбалар теҙелеп, уларға бик күп көмөш, көмөштән ҡойолған һауыт-һаба һәм кәрзиндәр, дүрт аяҡлы кейек-януар һындары тейәлгәйне, һәм уларҙың береһе лә беҙҙә эшләнгәндәрҙән һис кәм түгел. Төрки ҡағанатының зиннәте ана шундай».

—Ә ул зиннәттәрҙе бөгөн кем белә?! — Басир биҙәрләгәндәй ҡул һелтәне. — Ниңә башҡа халыҡтарҙа һаҡланғанда беҙҙеке елгә осҡан?

-- Шуның өсөн дә тарихты белеү зарур, тип туҡыйым бит.

-- Әйтмәҫ ерендән әйтерһең шул, беҙҙең колизейҙарыбыҙ ҙа, пантеондарыбыҙ ҙа булмаған, тип. Асыуланһаң асыулан, Мухина, мәгәр тураһын ярмай булдыра алмайым: ул йәһәттән бахыр шул беҙ...

Ҡыҙ, өндәшмәй, китаптарын йыйнаштырҙы. Тыныслана төшөп буғай, серҙәшенең күҙенә тура ҡараны:

—Асыуланмайым. Сөнки бахырлыҡ сире бер һиндә түгел. Ул күптәрҙе кәмһетә. Барыһы ла мәсьәләгә бер яҡлы ҡарауыбыҙҙан, наҙанлығыбыҙҙан. Бына нимә ти ул хаҡта үҙенең «Һундар. Боронғо замандарҙа Урта Азия» тигән мәшһүр хеҙмәтендә шул уҡ Лев Николаевич Гумилев, тыңла, кәпәрек әҙәм балаһы: «Ғәҙәттә, боронғо мәҙәниәттәрҙе үҙ-ара сағыштырғанда, уларҙың үҫеш кимәлен һаҡланып ҡалған матди ҡомартҡылар менән үлсәйҙәр: биналар, яҙмалар, сәнғәт әҫәрҙәре һ. б. Был ысул дөрөҫ түгел, сөнки һаҡланып ҡалған һәйкәлдәр генә иҫәпкә алына, мәҫәлән, таш ҡоролмалар һәм металл әйберҙәр. Ҡомартҡыларҙың һаҡланып ҡалыу ихтималлығы ҡоро климатлы илдәрҙә дымлы илдәрҙәгегә ҡарағанда сағыштырғыһыҙ юғары булғанлыҡтан, беренсе хата тыуа. Унан килеп, кешеләр йорттарҙы мең йылдан һуң археолог ҡаҙып сығарһын тип түгел, ә үҙҙәренә йәшәр өсөн йәтешләп төҙөүен иҫәпкә алһаҡ, йәнә танырға тейешбеҙ: йыш ҡына ағас ҡоролмалар таштан һалынғандарҙан һис кенә лә кәм түгел һәм таш ҡоролмалар табылмауға һылтанып ҡына ул ерҙә мәҙәниәт кимәленең түбән булыуы хаҡында һүҙ йөрөтөү — икенсе хата. Шул уҡ сәбәптән кейем-һалымдың да матурлығын, баһаһын билдәләү мөмкин түгел, сөнки уның металл өлөштәре генә һаҡланып ҡалыусан, ә был иһә бөтә халыҡтарға ла хас түгел. Әйтәйек, ҡайһы бер халыҡта сәнғәт күрке кейем тегеүҙә һынлана ла юғары кимәлгә ирещә, ә икенсе береһендә — ифрат тупаҫ итеп, етмәһә, баяғы беренсе халыҡтыҡынан күсереп, таш әмәлиттәр әҙерләүҙә. Һуңынан шулай килеп сыға: беренсе осраҡта сәнғәт йәнәһе бөтөнләй ҙә булмаған, ә икенсеһендә, имеш, үҙ аллы һәм ғәжәйеп алым булған. Яҙма менән дә шундай уҡ хәл: тәржемәләр, башҡаларҙыҡын

ҡабатлауҙар, башҡаларҙың әҫәрҙәренән йолкоп алып уҡмаштырылған әҫәрҙәр менән тулы һәм үҙ әҫәрҙәре бик аҙ булған ифрат ҙур китапханалы халыҡтар (мәҫәлән, монголдар, манчжурҙар) бар. Шул уҡ ваҡытта «Илиада» һәм «Калевала» ҡасандырғы яҙыу танымаған халыҡтар ижадын тәшкил итә...». Бына шулай, ҡәҙерлем. — Дилбәр, егетенең сабырлығы көрсөгөнә терәлеүен абайлап, китабын шүрлеккә тыҡты. Әммә баяғы «ен ҡағылыу» ҡыҙға һаман тынғылыҡ бирмәй ине. — Йә, аңланыңмы инде? Бына ниндәй була ул ысын фәнни ҡараш, туғаным. Быуаттар буйына бер туҡтауһыҙ Көнсығыш һәм Көнбайыштың фронт һыҙығы араһында ҡанһыраған, иҫәпһеҙ күп илбаҫарҙар итегенән тапалған был тупраҡта мең-мең йылдар буйы пергамент-тирегә, ҡағыҙға һәм туҙға яҙған китаптарыбыҙҙың юҡҡа сығарылып, ағас ҡалаларыбыҙҙың көлгә һәм саңға әйләнеүе лә ғәжәп түгел. Баяғы әйткән йөҙ егерме дүрт ҡала урыны үҙе нисек һаҡланып ҡалған әле — бына шуныһы ғәжәп!

-- Юҡты уйлап башыңды ауырттырмасы! — Егет шаярыуға һаплап тайшанырға самаланы. — Күрәһеңме минең бынауы бәҫле бүрек ҡаплаған аҡыл сүлмәген? Уның эсендә буш ҡыуыҡтар тәгәрләй, тип һинең генә әйтеүеңә кем ышаныр? Башҡаларҙыҡынан бер иле лә кәм дә, артыҡ та түгел. Уның ҡарауы ауыртмай ҙа башҡаларҙы ла ауырттыртмай. Бумалам да киндер ҡытлығы кисермәй. Һинең кеүек, бүрек аҫтындағы сүлмәк тулы осло таштар тейәп йөрөмәйем.

-- Ҡыуыҡбаш — ҡыу батыр һин – бына кем!

-- Уның ҡарауы миңә еңел, рәхәт, йәнем азат — салғыйымдан ата-бабалар гере ергә тартып ятмай. Дүрт яғым да ҡибла: ҡайҙа яҡшыраҡ -- шунда, башың тарткан тарафҡа елпелдәк елдәй тәгәрләнең дә киттең — Балтиканан Ҡытай диңгеҙенәсә, Ҡара диңгеҙҙән төньяҡтың Ҡар диңгеҙенәсә аллюр! — бөтә Союз һинеке. Ҡуш ҡуллап һау, им, аша, теләгең булһа тәкмәс ат. Шул йәһәттән рәхмәт һүҙе әйткем килә «башҡорттоң бер нәмәһе лә — тарихы ла, эҙе лә юҡ» тип аңлатҡан аҡыллы баштарға. Ул аҡыллы баштар ҙа, моғайын, тап минең шикеллелер — минең игеҙәгемдер!

-- Ысынлап ләпелдәйһеңме, әллә мине ҡарыштырыу өсөнмө? — Ҡыҙҙың ике сикәһе ялҡынланды.

-- Их, берсә ҡарап һоҡланһам, берсә ҡыҙғанып уҡ ҡуям үҙеңде. Ниңә мөхтәрәм ғалимдарҙың, ялҡын йөрәкле шағирҙарҙың теңкәһенә тейәһең, үҙеңдең кем икәнеңде онотаһың? Ҡатырға тышлы дипломыңды алып ҡына кеҫәңә бөкләп һалғансы түҙһәң ни булды?

-- Ә шунан һуң тормош ағыны туҡтар, башҡа ғәмдәр ҡубарылмаҫ, тиһеңме?

-- Уларын да һин башҡаларға ҡалдыр, йыйыныһын үҙеңә йөкмәп алма.

-- Ни өсөн мин -- комсомолка, Тарих һәм мәҙәниәт ҡомарткыларын һаҡлау йәмғиәте идараһының ағзаһы?!

-- Бөттө-бөттө, Мухина, һине еңерлек түгел. Әрепләшеп тамаҡ та сатнап кипте. Йыйын, керәйек анауы урам аша икебеҙҙе күҙен ҡыҫып көтөп торған «Экспресс»ҡа, экспрессив тойғоларҙы кофе менән йыуырға!

Әңгәмәләре кафелағы аяғөҫтө табынға — боҫ борлатҡыс сынаяҡтар

эргәһенә күсерелде.

-- Мәрхәмәтле Йыһандар Илһамдар улы Шәйхаттаров ағайыбыҙ ни хәлдә — мине һағынып көтәме икән? — тине Басир, боҫрауыҡ эсемлекте бер-ике уртлап йотҡас, тын алып.

-- Бәй, уныһын ҡайҙан беләйем?

-- Эш шунда, Мухина: уның менән беҙ теге ҡайтҡанымда еңгәмдең шанлы ресторанында осрашып танышҡайныҡ. Матур еңгәм арҡаһында был танышлыҡ матур хеҙмәттәшлеккә күсте. Ҡыҫҡаһы, Һыбай батыр һыны ҡуйылған тирәләге ашханалар һәм рестрорандар тресы ҡарамағында бер-ике ай еңелсә халтурить итеп, ҡул остарына алтын ялатып алырға ине ниәт. Малярлыҡ ҡылып ҡына, рәссамдарса ҡайырып кеҫәгә һалаҡайын. Йәшерен-батырын түгел: күп нәмәләрҙе түгәрәк тугрик[35] хәл иткән заманаға тап килдек.

Ҡыҙ баш сайҡаны:

-- Килемеңде тугриклап иҫәпләһәң дә, Америка бизнесмены һымаҡ фекер йөрөтәһең.

-- Егерменсе быуат аҙағының һулышы — цивилизация ҡануны!

-- Суриков башың менән, шул Йыһандар кәмәһенә ултырҙыңмы?

-- Улай тимә, Мухина. Үҙеңдең ҡан туған ағайың бит ул. Уның алтын ҡайығына йәбешеп, һиңә лә ҡул араһында бер-ике ус тугрикмы, тәңкәме эшләп алыу һис ҡыйыш китмәҫ ине.

-- Юҡ инде. Мин, үҙең әйтмешләй, тура атып ҡыйыш тейҙерә торғандарҙан түгел. Тишек кәмәгә лә ултырып бармайым.

-- Һәй тырпайған тел, ағайыңа оҡшамағанһың.

-- Атанан ала ла, ҡола ла тыуа, тигәндәр. Ә беҙ уның менән ике туған балалары.

-- Хәтерем яңылышмаһа, мөхтәрәм Йыһандар Илһамдар улы Баҡишевтарға тартымлыраҡ — елкәнлеләр тоҡомонан, эйе бит?

-- Елкән тигәнең ҡара ҡорған булып ҡуймағайы, тим.

-- Ләхәүлә, ниңә рәнйетәһең улай?!

—Дөрөҫөн әйткәндә, үҙем дә аңламай башланым. — Ҡыҙ, уйға талып, күңел төбөндә аҡтарынғандай һөйләнде.— Беләһең, яҡын ғына ағайым бит ул минең. Талир Баҡишев олатайымдың Урта Азиялағы бер туған һеңлеһенең остоғо. Дөрөҫ, беҙ уның менән бергә аунап үҫмәнек. Йәшлегендә күргән әҙәмдәр был кешене һәр яҡлап талантлы, ләкин ысынлап та елғыуар-елкәнле итеп нарыҡлай. Ул үҙенең таланттарын елгә осороп бөткән.

-- Ай-һай, талант мәсьәләһенә килгәндә...

-- Туҡта, һөйләп бөткәнде көт. Беләһеңдер, минең бер инәйем, танылған археолог, Алма-Атала тора хәҙер, ә Йыһандар ағайым шуның башҡа әсәнән тыуған үгәй улы бит. Бәләкәс сағынан уҡ һүрәт төшөрөргә һәүәҫ малайҙы ул үҙе менән экспедицияларға йөрөткән, иҫке ҡалаларҙың, ҡорғандарзың серҙәренә төшөндөрткән, һүрәттәрен яһатҡан. «Тарих ене ҡағылған» үҫмер, унынсыны тамамлағас, Мәскәүгә китеп, Михаил Михайлович Герасимов студияһында баш

---

[35] Тугрик—монгол аҡса берәмеге.

һөйәктәре буйынса иҫке заман шәхестәренең портреттарын тергеҙеү ысулын үҙләштереп ҡайтҡан, скиф батшаларының ҡорғандарында бәрәкәтле соҡсонған. Шул етди уңышын нығытаһы, һайлап алған һөнәрендә төпләнәһе урынға, беләһеңме нимә ҡыла ул елғыуар? Бабалары тыуған алыҫ Урал тауҙары, туған моңдар, туған тел менән һаташып, көндәлек шөғөлдәрен ташлап, шиғыр яҙырға тотона ла, бер ҡосаҡ мөнәжәт йөкмәп, ошо гүзәл Ағиҙелебеҙ буйҙарына елтерәп килеп сыға, гәзит һәм журналдарҙа бер-ике шәлкем баҫтырырға ла өлгөрә. Бындағы яҙыусылар (әлбиттә, иң элек Мотал еҙнәйем!) уға иғтибар итеп, ижадына яҡты киләсәк юрай, үҫтерергә тырыша. Ләкин йәш шағир геология партияһында яңы мауығыу табып, баяғы «елкән» уны поляр түңәрәк артына алып оса: әллә тормошто өйрәнергә, әллә алтын эҙләргә...

-- Тапҡанмы һуң ат башындай алтынын?

-- Артабанғы тәржемәи хәле тарихҡа асыҡ билдәле түгел. Әммә бынан бер-нисә йыл элек сатирик «Һәнәк» журналында уның хаҡында фельетон баҫылып сыҡты, шунда бирелгән үткер характеристика, минеңсә, ағайым биографияһының ҡайһы бер буш урындарын шөйлә тултыра. Фелъетон авторының художестволы раҫлауынса, эш быпайыраҡ булған: аҡ айыуҙар яғында биш йыл йөрөп, ат башындай алтынын таба алмағас, геологияға ла күңеле тиҙ һүрелеп, Ҡотоп боҙлоғонан тура Ҡараҡом ҡуҙлығына ырғылырға елкәндәрен ҡорғанда, хәрби хеҙмәт бурысын үтәмәйенсә утыҙ йәшкә етә яҙған елғыуарҙы хәрби комиссариат эләктереп, Тын океан тулҡындары араһына матрос итеп ебәрә. Ағайым шунда, имеш, ситтән тороп вузда уҡып, Мәскәүҙә осона сыҡмайынса ташлап киткән юғары белемен теүәлләп, тарихсы-этнограф һөнәре алып сыға, шундағы аборигендарҙың тормошон тикшереп трактат яҙырға ла өлгөрә. Япон айналарының төрки тамырын юллап асыҡлар өсөн, Алтайҙы айҡап үтеп, Урта Азияға һикерә -- Төрөкмәнстанда, имеш, боронғо Үҫәргән халыҡтарының атаҡлы ҡантураттарын[36] — ахалтекин юрғалары үрсетеүсе йылҡысылыҡ заводында жокей булып урынлаша, бәйгеләрҙә ҡыҙышып ат саптыра, тотализаторҙа сәмләнеп уйнай. Был юлы ла аҫыл алтын призды яулай алмағас, был эшенән дә төңөлөп, сағыуыраҡ шөғөлгә — бумалаға йәбешә: Төрөкмәнстанда уҙғарылған художество күргәҙмәһендә ялҡын кеүек ҡыҙыл юрғалар сабышын тасуирлаған аһәңле ҙур полотноһы менән ҡатнаша. Картинаны ыңғай ҡабул итәләр, йәш дебютсыға уңышлы юл теләйҙәр, әммә ул, әлеге лә баяғы, бумала һәм киндерҙәрен ҡалдырып, ахалтекин юрғаһы тиҙлегендә ҡабат Уралға ябырыла — башҡорт ырыуҙары араһында ауыҙ-тел ижады тыңлай-тыңлай темеҫкенеп йөрөгәс, Ирәмәл тауҙың ҡаяһына артыла – таш битендә арыҫлан менгән Урал батырҙың үҙен һынландырырға! Был эше ҡайһы дәрәжәгә ирешкәндер, униһын тарих белә. Әммә көндәрҙең береһендә данлы Ирәмәл тауы ла үҙенең шанлы ижадсыһынан ҡолаҡ ҡаҡҡан — сағылдан осоп ҡабырғаларын һындырып өлгөргән сәнғәт әһеле ҡалабыҙҙың Ағиҙел яры

---

[36] Аттарҙың был аҫыл тоҡомо, имеш, б. э. тиклемге замандарҙа уҡ үҫәргәндәр төйәгенән таралған. Хәҙерге төрөкмән халҡының бер өлөшөн, билдәле булыуынса, боронғо 25 башҡорт ырыу ярсыҡтары тәшкил итә (Кузеев Р. Г. Историческая этнография башкирского народа. Өфө, 1978, 198-се бит).

башындағы фирүз сағыл төбөнә ҡайтып йығыла. Ҡара икмәк менән арыҡ селедка арҡаһын кимереп, шуның хаҡына халайыҡтарға зыярат янындағы әрһеҙ таштан һәйкәлдәр юнып-һүрәтләп маташҡанда, фәрештәләр ҡанаты ҡағылыпмы, мәйет ерләү бюроһында табуттар һәм ҡалай гөлдәмәләр менән ырыҫлы ғына сауҙа ҡылыусы һылыуҡай күреп ҡалып, ҡыҙғанып, үҙе янына эшкә беркетә лә уны, үҙенең аулаҡ мөйөшөнә эйәртеп алып ҡайта... Тарихҡа мәғлүм булыуынса, шул төйәктә Йыһандар үҙенең йыһандарҙы айҡатыусы тынғыһыҙ елкәнен һалып, кәмәһен бәйләп ҡуя ла оҙаҡ йылдар буйы донъяға күренмәй тынып ҡала. Ерләү бюроһы һылыуының етәкселеге аҫтында ул уңыштарға ирешеп, һәйкәлдәр ҡойоу оҫтаханаһында таш һәм бетондан, бронзанан «ағымға һалынған шедеврҙар» әтмәләүҙе юлға һала, граждандарҙан әжерен дә ҡатынының нәфсеһе ҡушҡанса тирә. Шул арала зыяратта ҡәбер ҡаҙыусылар менән туғанлашып, бер-нисә быуаттың атаҡлы аҡыл эйәләренең ғәзиз баш һөйәктәренә эйә була...

-- Ай-бай-бай, атайым бахыр әйтмешләй. Бындай фельетондан һуң һинең ағайыңдың баш һөйәген таш ҡапсыҡта ғына серетәһе ҡала! Нисә йыл ултырып сыҡты?

-- Ҡайҙа, үҙенең өйөндәме? — Ҡыҙ кеткелдәне. — Ағайым ул, ғәжәпкә ҡаршы, теләгән бер һыйыҡ баҫманан, закон өҫтөнә баҫмай, һыуҙан ҡоро сығыусан.

-- Ғәфү ит, бүлдерҙем: ҡайһылай ослана тәржемәи хәленең шанлы дауамы? Институтҡа якорь һалып, профессор дәрәжәһенәсә күтәрелеүе?

-- Бының сере – илдә коммунизм төҙөү осороноң көндәлек ғәмендәй ябай ҙа, ҡатмарлы ла. Иң мөһиме, СССР-ҙа йәшәйештең төп хәҡиҡәтен аңлай ул: донъялағы бөтә эшмәкәрлеген, хатта һулыш алыуын да, юғарынан төшөрөлгән партия ҡарарҙарына, күрһәтмәләренә ныҡ ярашлы башҡарырға. Беҙ уның ғүмер карабын йөҙ һикһән градусҡа борған, элекке иҫке елкәндәрен коммунизм локомотивына алмаштырған хәл иткес был этабында, әлбиттә, зыярат һылыуынан нисек итеп уңышлы арыныуын белмәйбеҙ, әммә артабанғыһы яҡшы мәғлүм: диңгеҙ бүреһенең мачта башындағы флюгеры Кремлдән иҫкән елгә салт-боролоп, партиябыҙ зарығып көткән мөҡәддәс темаға монографияһын яҙып өлгөртә: ***«Халыҡтарҙың тарҡау төбәк телдәренән – монолит совет милләтенең теленә!».*** Бының ҡайһындай уңыштарға килтергәнлеге барыбыҙҙың күҙ алдында... Ә шулай ҙа оригинальный шәхес ул.

-- Ҡара-ҡара, әллә шуға ғашиҡ булғанһың инде?

-- Тәүбә-тәүбә, һинһеҙ ҙә теңкәмә тейҙе: сейле-бешеле комплименттарын тиреп, «әйҙә, киттек загсҡа» тип йөҙәтә. Туғаным бит һин, тип тә ҡарайым...

-- Тыңламаймы?

-- Аталаш түгел – аталмыш ҡына туғандар бит беҙ, ете яттан да ятыраҡ, тип ебәрә... Ярай, төкөрәйек танауына! Нисек кенә булһа ла, мин уның серле һөнәрен үҙләштерҙем — мәрхүмдәрҙең пластик төҫ-ҡиәфәттәрен тере саҡтарындағылай һынландырам — быға иманым камил.

-- Әллә ҡулалмаш эшләргә уйың бармы – төшөмлө һөнәр күренә... «һин — миңә, мин — һиңә!» заманында. — Егет хихылданы. — Буштың атаһы үлгән, ти торғайны атайым.

*Ләкин* ҡыҙ етди ҡалды.

-- Әйтмәһәң дә, бер ҡылығына иҫем-аҡылым китте. Бәндәбикә бюсы диплом эшем итеп раҫланғас, теүәл төҫөн тергеҙеүҙә туғандарса кәңәш һорап барғайным: «Ә унның өсөн усыма нисә «рэ» һалаһың?» — тип өҙҙө. Бирмәҫемде шәйләгәс, ишеген шартлатып япты: «донъяла туғанлыҡ хаҡы *ла,* дуҫлыҡ хаҡы *ла* бәрәбәр: аҡса менән, алтын менән үлсәнә!».

-- Вәт маладис! – кинәнеп көлдө егет.

-- Башҡа әкәмәттәре *лә* етерлек.

-- Йә, нимә тағы?

-- Һаҙ биҫтәһенең бер куркуле үҙен ҙурлап ҡунаҡҡа саҡырғас, беләһеңме, ағайым нимә тип һораған: «Барыуын барырмын да *ул,* түреңдә *лә* ултырырмын, ашап та эсермен, ә унның өсөн нисә «рэ» бирәһең миңә?»

-- Бына был оригинально! — Басир хахылдап көлдө. — Мәскәүҙекеләреңдән дә уҙҙырған. Юҡ, мин улай уҡ булдыра алмаҫ инем. Хәйер, престиж өсөн ҡунаҡ саҡырған Һаҙ биҫтәһе мещандарына ана шулай кәрәк тә! Кремлдең янындағы фатирында престиж өсөн шкафына таҡтанан Толстой томдарын яһатып теҙгән мещанды ла беләм...

-- *Ләкин* ағайымдың ҡылығы — үҙе мещанлыҡ түгелме?!

-- Ярар, ағайҙарҙы ғәфү итәләр! — Басир ҡыҙҙы ҡайтыр туҡталышына ыңғайлатты.

-- Суриков, белергә рөхсәтме, бында булыуыңдың артабанғы пландары ҡайһылай?

-- Һем... Иң элек Шаһибәрәковтарға туғанлыҡ сәләмен илтәм дә...

-- Туғанлыҡ сәләме тигәндән... — Дилбәр ғәмле уйланды. —Хәтереңдәме беҙҙең бала саҡтағы ант итешеү?

-- Булмай һуң! Бармаҡтарыбыҙға әнә сәнсешеп, ҡандарыбыҙҙы ялаштыҡ: «Бер ғаиләлә — серҙәр бергә!» Йәнәһе *лә* скиф ата-бабаларыбыҙ ана шулай антлашҡан...

-- Минеңсә, насар йола түгел был. Бигерәк тә нейтрон еҫе аңҡыған заманала... «Был донъяның бәхетлеләре *лә* бәхетлеме икән һуң әле?..» тип албырғанған саҡтарҙа...

-- Кинәйәләп һөйләмәсе, Мухина.

—Әйттем бит, Хәкимуллин ағайым аҡса тамшанды, тип. Йүгерҙем, әлбиттә, үҙең әйтмешләй, Шаһибәрәковтар йортона. Апайымды беләһең: йөрәген өҙөп бирергә әҙер торһа *ла,* саҡ ҡына ҡулдары ҡалтыраусан. Бөтәһен еҙнәм янсығына тапшырыуҙы ҡулай күрә. Ошо ғәҙәтенә барып, еҙнәйемдең эш бүлмәһенә һөйрәне. Ишекте яй ғына асып, йәнәһе изге ижад мәлен өҙләктөртөп ҡуймайыҡ, тип, һаҡ ҡына атлап индек. *Ләкин* нимә күрәбеҙ: ижадсыбыҙ эш креслоһында, алтын ҡәләмен тотҡан килеш иҙерәп, татлыларҙан-татлы ябай әҙәми төш ҡосағында тилерә, хатта турһыҡ ирендәре мөйөшөнән нәҙекәй генә фани *ләззәт* һеләгәйе һуҙылған!.. Әмәлһеҙҙән туктаныҡ та, көлөмһөрәп, шаяртмаҡҡа ымһынып, йоҡо йәтмәһенән күҙҙәре асылыуын һағаланыҡ. «Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе, тип юҡҡа әйтмәйҙәр үҙен: күр инде — ниндәй бәхеттәр кисерә ҡашҡа еҙнәйең!» — тип, иренең ысынлап та ҡашҡа һымаҡ бер тотам сал

маңлай сәсенә ишаралап, кеткелдәне апайым. Бына шул мәл булды ла инде ғүмерҙә лә башҡа һыймаҫлык хәл-әхүәл... ҡот осорғос!

-- Ҡурҡытма, Мухина!

-- Уф! Мотал еҙнәйемдең турһыҡ ирендәре кинәт кенә ҡыймылданы, төш аралаш, күрәһең, айырым-асыҡ итеп ошо һүҙҙәрҙе ҡабатланы: «Йән киҫәгем, бәғерем... һағындым...» — Үҙәге өҙөлөп һыҡтанды! Ике күҙем шар булып: «Бына был — мөхәббәт! Эргәһендә баҫып торған апайымды төшөндә күреп тилерә!» — тип оялып уйларға өлгөрҙөм мин, ә апайымдың ике бите йәш ҡыҙҙарҙыҡылай ҡыҙарҙы. Бына-бына ҡосаҡлашырҙар ҙа шарҡылдашып көлөшөрҙәр тип көткәнемдә, — йә Раббым! — Мотал еҙнәйем ап-асыҡ өҫтәмәһенме:— «О бәғерем, Йыһаниәм минең, Йыһаниәм!.. Ниагара шарлауығым!..» Ер менән Күк түңкәрелгәндәй булды, апайымдың йөҙө үлектәй ағарҙы, күҙҙәрен йәш томалап, башын баҫып, бүлмәнән сығып йүгерҙе, ә мин иһә ҡотом осоп баҫып торҙом... Беҙ белмәгән бына нәмәләр бар икән был донъяла...

—Эйе, үкенескә ҡаршы, ундай хәлдәр булғылай.

Ҡыҙ ҡалтыранды:

-- Туҡта, һин ниңә былай һалҡын ҡан менән яуаплайһың? Ниңә Ер-Күк тулатып тетрәнмәйһең? Бөйөк мөхәббәт идеалыбыҙ емерелә түгелме?

-- Юҡ, Мухина, быныһына мин ҡул ҡуя алмайым. Сөнки билдәһеҙ әле: мөхәббәт идеалымы, әллә уның яһалма юлдашымы?..

-- Суриков, нисек телең бара?!

-- Сөнки һинән күберәк йәшәгәнмен.

-- Был хәле әллә мәғлүм инеме һиңә?

-- Әлбиттә.

-- Ҡайҙан?

-- Мотал ағайым үҙе әшкәртте миңә.

-- Булмаҫ. Шундай ҙа йомоҡ кеше...

-- Их, Мухина, Мухина, үҫеп еттем, тиһәң дә, башҡынайың йәш шул әле. Белгең килһә, туптай йомоҡ әҙәмдең дә күңеле бер яҙыла — асыҡ ишек-тәҙрәләр мәле була... Былтыр ҙа ағайымдың, йылдағыса, яҙыусыларҙың Мәскәү янындағы Милеевка ижад йортонда роман яҙып ятҡанын беләһең бит. Мин дә шундағы художниктар төйәгенә эйәләшкәнмен — йыш осрашып йөрөнөк. Бер саҡ биш йондоҙло зәм-зәм һыуын уртлағанда күңелдәр йомшарып китеп, ағайым миңә «буталлы матурлыҡ» һәм «аҡыллы матурлыҡ» тураһында фәлсәфәле нотоҡ уҡымаһынмы! Һин, йәш быуын, аҙып-туҙып йөрөмә, өрмәй ҡабып ауыҙы бешкән ағайыңдарҙан фәһем ал да яҙмышыңдың һурпаһын өрөп эс, йәнәһе. «Матурлыҡтың буталлыһы ла, аҡыллыһы ла бер инде — икеһе лә матурлыҡ!» тип, саңғыны мин тау текәһенә һалыулатҡас, ағайымдың күҙҙәренән йәш килде, хатта мышҡылдап алды. «Һин буталлы матурлыҡҡа ымһынма, ул — быума йылан менән бер!» — тине. «Ә аҡыллы матурлыҡты нисек танырға һуң?» — тигәс, күп уйлап тормай, кәштәләге ҡалын бер том араһынан һарғайып бөткән фото алып күрһәтте: «Аҡыллы матурлыҡтың йөҙө — бына ул!»

Дилбәр егеттең тун еңенән бөрөп тотто:

-- Һәм ул Мөхлисә апайымдың нурлы йөҙө инеме? Эйе, тиң!

-- Кәртишкәнән баға ине, мин һиңә әйтәйем, шарлауыҡтай ағылып төшкән ҡарағусҡыл сәс даръяһында ысынлап та аҡылдың һәм матурлыҡтың алиһәһе! «Еүеш танау! Сихри эш ҡулыңдан килһә, бына ошо Ниагара шарлауығын киндереңә буяулап мисәтләндер!» — тип өҫтәне ағайым... Төҫө күҙем ҡабағында һүрелмәҫкә мөһөрләнеп ҡалған бына шул һылыуҡайҙың исемен дә ағайымдың үҙ ауыҙынан ишеттем: фотоны кире йәшергәндә, йөҙөнән супылдатып үбеп, *«Йыһаниәм минең, Йыһаниәм!»* тип шыбырланы ирендәре...

-- Уф! Бына ниңә еҙнәйемдең йөҙө мәңге монарлы, өйҙә торған көндәренән тормағаны күберәк — ғүмеренең ҙур өлөшөн юлдарҙа йә ижад йорттарында үткәрә...

-- Дөйөмләштерергә ҡабаланмайыҡ, өлгөрөрбеҙ.

-- И илаһым, өлгөрмәһәк кенә ярар ине лә!

-- Иң мөһимен әйтеп бөтмәнем әле. Шул Ниагара шарлауығының теп-теүәл тере копияһын Донбасста ижади командировкам ваҡытында осраттым. Бәлки, оригиналы уҡ булғандыр. Әлбиттә, ярайһы уҡ олпатланып, йылдар шауҡымына бирешә төшкән, әммә барыбер фотоһында мин күргән «аҡыллы матурлыҡ»тың тап үҙе!

-- Булмаҫ!

-- Художник күҙенә ышанмайһыңмы?! Бер күреүҙән таныным. Мыҡты һынлы, сысҡанҡойроҡ мыйыҡлы егет ҡултыҡлап алған үҙен – уныһы тап ағайымдың копияһы...

-- Китсе, Мотал ағайыңдыңмы?

-- Ғәжәпкә күрә, эйе.

-- Уның мыйығы юҡ бит?

-- Ә шулай ҙа тап-таныш: Булаттимер олатайҙың кәртишкәһен беләһең бит – шул мыйыҡ.

-- Булмаҫ.

-- Күргәнемде әйтәм.

-- Иреме икән?

-- Уныһы миңә ҡараңғы, әммә күпкә йәшерәк ине. Шайтан ҡотҡоһона түҙә алманым: ғәфү үтенгән булып, ҡатынҡайға башҡортсалап өндәштем — беҙҙең яҡташтар түгелһегеҙме, йәнәһе. Текләп ҡараны ла, ишетмәгәнгә һалышып, мыйыҡлыһын дәррәү генә етәкләп китеп барҙы, шуның менән эҙҙәре һеперелде. Ләкин иманым камил: яңылыш таныманым...

-- Был хаҡта ағайың беләме?

-- Юҡ. Белдертергә лә йыйынмайым. Ағайым кеүек йомоҡ йәндәр ҡайсаҡ асылһалар ҙа, һуңынан үкенәләр. Асыҡ күңел тәҙрәләренән дөргәнде яратмайҙар.

-- Дөрөҫ. Быны белгәндән белмәгәне хәйерле.

-- Шулай ҙа баш ҡата әле. Әллә һөйләйем дә бирәйемме икән?..

Их был йәштәр, улар өсөн осраҡлы тойолган Ниагара шарлауығының һәм уны ҡултыҡлап илткән сөм-ҡара сысҡанҡойроҡ мыйыҡлы егеттең Мотал Шаһибәрәков өсөн һис осраҡлы түгеллеген һәм шуны белер өсөн генә лә ул йөрәген киҫеп бирергә әҙерлеген саҡ ҡына тойһаларсы! Теүәл бер тәүлек һуңғараҡ урамда «Алтын» магазины алдында Мотал Шаһибәрәковты көткән

ауыр осрашыуҙы фажиғәнән ҡыуанысҡа әйләндертергә шул бер ауыҙ һүҙ генә етмәй ҡалды...

Туҡталышта торалар.

-- Әйҙә, киттек минең менән, Мухина. Ағай алдында ҡыҙарыныу бер үҙемә генә ҡыйын.

-- Ғәфү ит, ҡайһы бер юғары ойошмаларға керәһем бар. Ерәнсә-сәсән мәсьәләһе... Минең салон (солан) ишегенең ҡайһы яҡтан асылғанын онотманыңмы?

-- Бөтә юлдар ҙа Римға илтә, тигәндәй... — Лыҡама тулы троллейбусҡа ҡыҙҙы саҡ этәреп кереткәйне, танауы төбөндә ишек ҡумпылдап ябылды. — Уңыш теләйем, Мухина! —тип ҡул болғап ҡалырға өлгөрҙө.

## УНЫНСЫ СӘХИФӘ

Мотал, йөрәкһеп, йәшлегендә үҙенең беренсе хеҙмәт юлы башланған һәм, аҙаҡ килеп, уны яҙыусы яһаған Иҫке завод тарафына машинаһында елдереп китеп бара, Ҡыҙыл башҡорттоң экологияға бәйләп ғәйепләүе тынғы бирмәй болара күңелендә. Эйе, Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы хасил ҡылған шаҡшы «ҡара шамбы»ны уның ҡара күлендә үк айғолағынан алырға ваҡыт— романының көсөргәнешле сюжет һыҙығына был *яҡшылыҡ һәм яманлыҡтың дәһшәтле бәрелеше* рәүешендә кирәсәк!

Йылдар ыҫлатып һоролатҡан завод корпустарында әлегәсә уның атаһын үҙ күҙҙәре менән күреп белгән ҡартластарҙы осратырға була, ә директор бүлмәһенең стеналары Булаттимер-большевиктың зыңлы ҡорос тауышын һаҡлай һымаҡ...

«Тере тауышыңды онотҡанмын, атай, ғәфү ит... Ҡысҡырып бер көлгәнеңде, һыҙланып уфтанғаныңды, нәфрәтләнеп асыуланғаныңды замандаштарыңдың иҫләп-хәтерләүҙәре аша түгел һәм ташҡа баҫылған хәрефтәр теленән түгел, ә үҙеңдең ауыҙҙан ишетәһе ине... Ниңә киткәндәрҙең тауышы тоноҡ, йомоҡ? Үткәндәрҙе, һыҡтай-һыҡтай бөгөлөп, ергә ятып, һулыш алмай тыңлаһындар өсөнмө?.. Ә бәлки, һинең тауышың, атай, беҙҙе уратҡан тере тәбиғәт ауазындалыр? Дауыт Юлтый ҡорҙашың әсенеп йырлаған, ә, шулай ҙа, беҙҙе ташлап китмәгән һәм мәңге лә китмәйәсәк Тере һандуғас, Тере тәбиғәт симфонияһы бөтә киткәндәрҙең тауышын бергә туплап тоталыр?..»

Заводҡа яҡынайған һайын, атаһына ҡайтҡандай хискә сорнала Мотал: ул инде биғәйни атаһы ҡушҡан исемдәге элекке малай *Металл*, атай менән ял көндө урамға йөрөргә сыҡҡан Металл. Тиҙерәк ҡайтырға кәрәк: уның буласаҡ һеңлеһе Гөлзифаға ғүмер бирергә ҡапыл ғына йыуанайып ауырланған әсәһе өйҙә ҡалған — хафаланмаҫҡа тейеш. «Әгәр шулай мин әйткәнде тыңлап ҡына йөрөһәк, әсәйең тиҙҙән Иҙел һыуынан үҙеңә иптәшкә матур бәпес тотоп алып ҡайтып бирәсәк, уға исемде *Индустрия* тип ҡушырбыҙ...» (Тимәк, был — тыуасаҡ һеңлеһе Гөлзифа, ваҡиға барған заман— 1937 йыл булалыр). Бына улар, ата менән бала, лап-лоп атлап өйгә лә ҡайтып инде. Булаттимер, Моталдың әсәһе менән быш-

быш һөйләшкәс, күҙҙәре уттай янып, улы янына килде, малайҙы ҡуш ҡуллап юғры сөйҙө:

— Оп-лә! — һауага сөйә-сөйә, ә малай шарҡылдап көлә-көлә, бүлмә буйынса йөрөтөп, түр яҡ стенала аҫыл келәмгә эленгән алтын ҡынлы ҡылыс, ҡандай сөм-кыҙыл буҫтау йондоҙло буденовка тәңгәленә килтерҙе; осло кәпәсте бәхетле малайҙың башына сумыра кейҙертеп, сандалийлы тәпәйҙәрен тупылдатып өҫтәлгә баҫтырҙы ла ҡылысты алтын ҡынынан шығырлатып һурып сығарҙы:

-- Оп-лә!.. Киттек, большевик-улым, Ватаныбыҙҙың именлеген ҡурсаларға, булат ҡылыс менән дошман баштарын кәбеҫтәләй турарға!

-- Муйындары өҙөлдө, тигәйнең бит һуң? – тине малай.

-- Өҙөлөп бөтмәгән икән шул әле, улым. — Атай кеше малайын, етәкләп, ала-ҡола буяулы донъя картаһы тәңгәленә килтерҙе, бармағын карта буйынса йөрөтөп, һораны. — Йә әйт әле: нимә был?

-- Юрғалап барған ҙур турат төҫләһөме? — тине малай, атаһының карта алдында биргән уйын-һабаҡтарын йылғыр иҫләп. — Ул — Сысыр...

-- Сысыр түгел, ә эС-эС-эС-эР!

-- Сысыр. Ә бынау итек һымағы -- Италия.

Атаһы уны, ике ҡултығы аҫтынан эләктереп, юғарыраҡ күтәрҙе:

-- Онотмағанһың икән, маладис!. Йә инде, улым, елеп барған Туратыбыҙҙың баш-тояҡтарын төртөп күрһәт. Бына ошолай. — Атай ҡулының ҡырыҫ йылыһы Моталдың һаман иҫендә: улының бармағын карта буйынса йөрөтөп, әйтерһең дә, ҡолағына мәңге һүрелмәҫ ядкәр итеп көйләне (Мотал хәҙер, география картаһына ҡараһа, ашҡыныулы атай тауышын ишетә). — Күрәһеңме: Көн-Өфө юлы буйлап, эйәренә яҡты Көндө атландырып, капитализм төнө баҫкан ҡараңғы Көнбайышҡа табан нур һибелдереп юрғалап барыусы шәп Турат — илебеҙ СССР ул. Йә, матур итеп ҡабатла әле, улым.

-- Сысыр!

-- Һәй әттәгенәһе, ҡалай өйрәтергә инде был малайҙы!

-- Көйөнмә, йәше еткәс, мәктәпкә барғас өйрәнер, -- тип тынысландырҙы әсәһе.

-- Ярай инде, алайһа... Ҡара әле, улым: бына Тураттың һарымһаҡтай таҙа аҙау тешле ауыҙы — Севастополь, ҡаялай текә маңлайы — Ленинград, шеш ҡолағының осо — Мурманск, күрер күҙе — Мәскәү. Арҡаһы — Төньяҡ Боҙло океандың яр һыҙығы, ул һыҙыҡ ҡойроҡ осона — Чукотка ярым утрауындағы Провидение портынаса һуҙыла. Тураттың артҡы бер тояғы — Камчаткалағы Петропавловск, икенсеһе — Владивосток. Алғы тояҡтарының береһе — Дүшәмбе, икенсеһе — Баку. Ә шул юрғаға атланып елгән алһыу-яҡты Ҡояштың билендә булат ҡылыс -- әле генә үҙең тотоп ҡараған минең алтын ҡылысымдай ялтырай, ул — үҙебеҙҙең алтынға бай мәғрүр Урал...

-- Ҡуйсы шул ғәҙәтеңде – баланың башын ҡатыраһың, -- тине әсәһе.

-- Белемдән баш ҡатмай ул – балаларға ла кәрәк!

-- Белдем, белдем! — тине малай, белеп еткермәһә лә.

-- Маладис, улым, беләге йыуан – берҙе йығыр, белеме булған – меңде

еңер, тигәндәр. Киттек ары —тағы ла бер нәмәне күрһәтәйем. Бына был ала-ҡола төҫкә буялған, СССР-ҙы уратып алған илдәр — барыһы ла Туратыбыҙҙы тышауларға, башын ашарға тамшанған ҡапҡорһаҡ буржуйҙар улар.

-- Буржуйҙарҙы тояҡтары менән тибеп тапаһын да китһен ине Туратыбыҙ!

-- Афарин, улым, мин дә тап шулай тимен. Мәгәр бының өсөн Тураҭка ифрат ҡаты тояҡтар, утҡа-һыуға бирешмәҫ ял-ҡойроҡтар, һынмаҫ аҙау тештәр кәрәк. Эйәрҙәге батырына кителмәҫ-һынмаҫ булат ҡылыс кәрәк. Бының өсөн ҡорос, пластмасса, машиналар кәрәк. Һинең менән мин ана шул кәрәкте тиҙерәк табырға, Туратты бер дошманға ла бирешмәҫлек итеп йыһазландырырға тейеш. Аңланыңмы инде, улым?

-- Аңланым, — тине малай.

-- Йә, әйт инде: әгәр мин тағы ҡылысымды тағып һуғышҡа китһәм, оҙон-оҙаҡ йылдар ҡайта алмаһам, һин, ҙур булып үҫеп еткәс, кем булырға теләр инең?

-- Һинең һымаҡ инжәнир, булат ҡылыслы яугир! — тине малай, стеналағы ҡылыс менән буденовкаға күҙ атып...

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк: «Булаттимер-инженерҙың йөрәге тимер» тиһәләр ҙә, теге аяныслы йылда ғаилә башына бәлә ҡунған һуңғы сиктә ҡатынын да, балаһын да, ғөмүмән, бөтә кешеләрҙе лә нисек яратҡанын намыҫы, ғүмере менән раҫланы — тәфтиш алыу ваҡытында үҙенә тағылған яланан, үҙенә ҡушып ғәйепләүҙән башҡаларҙы араланы бер ниндәй ҙә исем-фамилия әйтмәне; шуның арҡаһында элек бергә һуғышта булған, бергә уҡыған, бергә эшләгән байтаҡ яҡын ҡорҙаштарын, шулай уҡ ҡатынын да, үҙенең асы яҙмышына юлығыуҙан ҡурсаланы... Тик был факт һуңлабыраҡ — ике тиҫтә йыл үткәс, уның яҡты хыялдары илдә бойомға ашҡас ҡына беленде. Әммә шуныһы мәғлүм: ауыр металлургия һәм химия промышленносының иң яуаплы тармаҡтарында ошо көндә лә Булаттимер-большевиктың ана шул күҙгә күренмәҫ игелеге ҡурсалаған байтаҡ ҡына кешеләр ҙур урындарҙа уңышлы эшләп йөрөй...

Мотал, машинаһын юл ҡырыйында ҡалдырып, ҡара төтөн боролдатыусы мөрйәләргә табан атланы. Завод артындағы соҡор буйында, элекке ауыл урынында — һуңғы өй, һуңғы өйҙә — «һуңғы могикан» йәшәп ята, тинеләр. Исеме — Ҡәҙерғол ҡарт. Завод ҡалҡмаҫы борон үк йорт төбө ҡайҙа торһа, ҡупмаған -- шунда ултырып ҡалған. Өгөтләп тә, оялтып та, ҡурҡытып та, «оҙон аҡса» һоноп та, бер түгел туғыҙ уланынан димләтеп тә ҡарағандар, мәгәр ҡартлас нигеҙен боҙҙортмаған. Имеш, ата-бабанан уға ошонда изге йомош — ниндәйҙер мифик Йәншишмәнең башын «яңы заман Шүлгәненең әшәкеһенән» ҡурсалау бойоролған. Мотал элек был әкәмәткә, башҡалар кеүек үк, көләмһөрәп кенә ҡул һелтәгәне бар: туҡһанды туҡыған ҡарттан нимә көтәһең... Ә бөгөн башҡаса уйлай: бер фольклорсы тарафынан ошо Йәншишмәнең башында яҙып алынған һәм гәзиттә иғлан ҡылынған куплеттарҙы ауыҙ эсенән генә тәкрарлап бара:

Шүлгән кем ул, тиһәгеҙ,
Бөгөн кем ул, тиһәгеҙ,
Ишет быны ҡартыңдан,

Һүҙ йөрөтмә артымдан.
Бөгөн Шүлгән тигәне,
Илгә бәлә өйгәне,
Һыуҙарҙы ыулатҡаны,
Үләнде ҡыулатҡаны,
Һауаны бөтөргәне,
Ҡош-ҡортто үлтергәне,
Кейектәрҙе ҡырғаны,
Бал ҡорттарын мурғаны —
Берәү ҙә берәү булыр ул,
Ҡылысһыҙ әжәл булыр ул,
Яубаҫаров булыр ул, ау,
Яубаҫаров булыр ул...

Ҡот осорғос ҡобайыр...

Бетон ҡойма буйындағы һирәк-һаяҡ ҡыу әрем, әрһеҙ шайтан таяҡтары, ҡырҡбыуын һәм тутыҡ тимер-томор, кирбес ярсыҡтары, полиэтилен ярпылары араһынан яҙға тартҡан ҡар мәреһенә бата-сума, һауаға һеңгән серек кәбеҫтә ҡатыш һарымһаҡ еҫле саң-һөрөм йотоп бара торғас, йылан һуҡмаҡ арҡаһы әрһеҙ сәйәхәтсене завод артына үткәреп, Ағиҙел ярҙары тарафына тартылған тәрән соҡор ҡырыйына килтерҙе. Ҡасандыр был үҙәндән, моғайын, ебәк яллы шылтыр шишмә тәгәрләп-ағып ятҡан. Ә хәҙерен һумала ҡойолған улаҡты хәтерләтә: улаҡ төбөндә йәйен-ҡышын туңмай торған ҡара-буръяҡ шыйыҡлыҡ, ярҙарының ҡарҙарын әкиәттәге яман Шүлгәндәй ялап, гөжләп аға ла аға, ҡалаға билдәле «хушбый букет» тарала. Мотал танауын ҡаплаған хәлдә үҙән буйынан үрләгәс, ҡаршы ярҙарҙы тоташтырған тутыҡ һыртлы металл рамдан аръяҡҡа атлап уҙҙы, туҡталып, тирә-яғын байҡаны. Ең һыҙғанып үҙе ошо заводта эшләгәндә лә, унан һуң да яҙыусы бер ваҡытта ла был тарафҡа аяҡ баҫҡаны юҡ ине, сөнки был — сүп түгеүселәр йәки махсус торба һуҙыусылар ғына эш ҡыра торған яғымһыҙ «арт яҡ» ине. Инде шуның уртаһында тороп ытырғанып баҡты: завод артынан Ағиҙелгәсә оҙон ҡара йылан — Шүлгән һуҙылғанмы ни! Бына ҡайҙа икән ул теге көндә боҙ аҫтынан балыҡ ҡармаҡларға барғандарында битенә зәһәр сәпәлгән «ҡара шамбы»ның башы! «Йылға»ның үрендәрәк — соҡорҙо билбаулап тоташтырған тупраҡ быуа, быуа башында суҡайып ултырған яңғыҙ өй. Уның тәңгәлендә үрҙән, быуа ситенә һемәкләнмеш тутыҡ торбанан, Шүлгән ҡотһоҙлоғона үс иткәндәй, көмөштәй аҡ саф һыу урғылып тибә — ҡара ағын өҫтөнә, әйтерһең, аҡ-һөт шаулап ҡойола. Шул тәңгәлдә Моталды хозур ирәүәнлек сорнаны: коҙгөләй ялтлап, тәбиғи һыубайлыҡ еҫе, тормош еҫе аңҡытып ятҡан быуа йөҙөнән, тап бәләкәс сағындағы яланаяҡланып кискән аҡ томандай, пак һулышлы ҡуйы аҡ быу күтәрелә!

Аҡ һыу йыйылған быуа төбө үтәнән-үтә күренде: йәм-йәшел ылымыҡтар, томбойоҡҡа оҡшаш оҙон һабаҡлы нәфис үләндәр, тағы әллә нәмәләр ҡусҡыллана. Ҡарҙар иреп бөтмәҫ борон уҡ яҙ илен күреп әҫәрләнгән әҙип өйҙөң ишеген ҡаҡты.

-- Әү, әйҙә, инегеҙ! — Боронғо ҡала зыялыларынса ап-аҡ етен костюм кейгән, һаҡал-мыйығын ялтлатып ҡырған тарамыш кәүҙәле Ҡәҙерғол ҡарт күҙлекһеҙ-ниһеҙ гәзит уҡымаҡта имеш. — Хуш килдең, мырҙам, әйҙә, түрҙән уҙ.

-- Һе! Күҙ күрә икән әле, олатай? — тине Мотал, ҡысҡырып.

-- Тамағыңа улай көс төшөрмә, мырҙам, бейек трибунанан оран һалырға ҡалдыр. Ҡолаҡтарыма тайыш аяҡ баҫмаған, шөкөр! — Ҡарашын ҡунаҡтың баш-аяғына йүгертте. — Маңлай күҙҙәрем дә үткер әле, тим. Бына Айға осҡан батырҙар тураһында мәҡәлә уҡып ултырам. «Кешенең бәләкәй генә аҙымы — Кешелектең ҙур аҙымы»—ҡайһылай тос итеп әйтә ҡәһәрең!

-- Ышанаһығыҙмы һуң? — Әҙип ғәҙәти булмаған тарихи күренештең шаһитына әүерелеүен тойҙо: Урал, Шүлгән тураһындағы мифтар донъяһынан сығып етмәгән ҡобайырсы замананың космонавтика донъяһына ерегә! Бәлки, кешелек аңындағы иң ҙур яңы этап — космос мифологияһының күҙгә күренеп яралыу сәғәтелер был?!.

-- Ҡалай итеп ышанмайһың, ти, инде, заманалар шуға барғас... Айында ла гиҙерҙәр, Зөһрәһенә лә менерҙәр, әммә Ер-әсәгә берешкән кендектәрен өҙә алырҙармы икән, ай-һай...

-- Ер-Әсәнән кендекте өҙөү кәрәкмәй, — тине Мотал. — Шул кендек тоташ хәлдә генә кендектән юғарыраҡ ырғыйбыҙ.

-- Һе, шулай тиһең дә бит. — Ҡарашы Моталдың күҙҙәрендә туҡталды. — Ҡай берәүҙәр бөтөнләй кендекһеҙ тыуғандай ҡылана бит — үҙҙәренән ғәйре юҡ. Табандары баҫҡан ерҙә Ер-Әсәнең тәнен ҡара яндырып, күмер-көйҙөрөп йөрөйҙәр.

-- Кемдәр ул, олатай? Американдарҙы әйтәһегеҙме?

-- Бысағымамы ни миңә һинең американдарың! Күрмәнеңме ни килгәнеңдә завод ҡоймаһы аҫтынан ургылмыш ҡара буръяҡты? Йәншишмәнең бауырына ҡаҙалған шаҡшы Шүлгән һыуы шул инде. — Быны әйткәндә күҙҙәренән мөлдөр-мөлдөр йәш тәгәрләне. «Әҙәм йәше йөҙгә ашһа, сабый аҡылы ҡайта, ти торғайнылар — сабый менән һөйләшеп ултырмайыммы?» тип уйлап ҡуйҙы Мотал.

—Олатай, һеҙ нисә йәштә әле? Төҫөгөҙгә ҡараһам... һаҡал-мыйыҡ үҫтермәй ялт итеп ултыраһығыҙ.

Ҡәҙерғол ҡарт пинжәгенең кеҫәһенән ап-аҡ ҡулъяулыҡ сығарып, күҙҙәрен һөрткөләне, ынйыы тештәрен күрһәтте. — Бына ҡара, мырҙам: һәммәһе лә үҙемдекеләр. Һеҙҙең һымаҡ, ҡырҡ йәштән үк ҡырҡылып, ҡоро ҡомо ҡойолоп, тимер теш ҡуйҙыртып йөрөмәйем. Ошондай тештәр барҙа ниңә ҡырынмаҫҡа. Һаҡал-мыйыҡ тешһеҙ уртты ҡаплатмаҡҡа еткерелә.

-- Һәйбәт тештәр, — тип дөрөҫләне Мотал. — Нисек һаҡлай алдығыҙ?

-- Әле генә бында килгәнеңдә быуалағы мөғжизәне күрмәнеңме ни, мырҙам? Ғүмер буйы Йәншишмәнең һыуын эсһәң, һин дә шулай булырһың.

-- Олатай, һеҙ үҙегеҙ тәбиғәт мөғжизәһе! — тип һоҡланды ҡарттың етеҙ хәрәкәттәрен ентекләп күҙәткән яҙыусы.

-- Дөрөҫ әйтәһең, мырҙам. Тәбиғәтте һөйәм, тәбиғәт менән ҡуша тын алам, шуға ла йәшлек төҫөн юймай йәшәйем. Ә тәбиғәткә ҡул һалыусы

яуыздарҙы, беләһеңме, тәбиғәт-инәбеҙ ни ҡыла? — Тауышы көйҙөргөс үрт әсеһенә һуғарылып, уттай яндырған күҙ ҡаралары тәҙрә үтә завод яғын һәрмәне. — Үндай бәндә, эсенә үләт төшөп, йә рак зәхмәте ҡағылып, йәштән үк кәкрәйә. Йә булмаһа, ана анауы Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы кеүек, бирән зәхмәтенә тарып, оторо ҡорһаҡҡа үҫә... Тәбиғәткә шаҡшы һөргән бәндәләрҙең эсе тулы ҡылйылан, шаҡшы була... Ә мин ғүмерем буйы ошо Йәншишмәнең һыуын эстем, уны күҙем ҡарамдай ҡурсалап йәшәнем.

-- Яубаҫаров уҙаманға ҡаныҡҡанһығыҙ икән...

—Мин түгел, ә тыуған ер үҙе ҡаныға уға, бәдбәхеткә!

Ҡарт самаһыҙ ысҡындырҙы тип уйлап, һүҙҙе ситкәрәк борҙо:

-- Ошо тиклем дә ҙур быуаны үҙегеҙ генә быумағанһығыҙҙыр бит, олатай?

-- Юҡ, үҙем генә түгел. — Күҙҙәре ғорур ялтыраны. — Бер түгел туғыҙ уланым бар, ә заводтағы эшсе-уландарым — туҡһан туғыҙҙан да күберәк!.. Бернисә йыл элек булды был хәл. Завод ҡоймаһы аҫтынан Шүлгән шаҡшыһы йырып төшөп, үҙәнде баҫты шулай, үҙән битенән шылтырап аҡҡан Йәншишмәне күмеп, тирә-яҡҡа ҡаза менән янаны. Нисек тә ыуҙы урғылға ебәрмәҫкә, юлын бүлергә ине. Үҙен енем һөймәһә лә, Йәншишмәм хаҡына тип тағы барҙым — Яубаҫаровҡа баш ороп ҡараным. Ҡолағына ла элмәне. «Әгәр шаҡшы екһендерһә, аласығыңдан ысҡын да ҡаланың иң үҙәгендәге дәүләт фатирына күс, ҡарт ысмутъян, ирешерһең шунда йәннәткә. Борғаның һайын бер крандан ҡайнар һыу, икенсеһенән һалҡыны урғылып торор, кухняһында төтөнһөҙ зәңгәр ут янып», — тип, кире борҙо ла сығарҙы. Ни эшләргә? Донъя тотҡаһы бер Яубаҫаровҡа ғына беркетелмәгән — ил бар бит әле, мин әйтәм, өмә итә торған изге йола бар... Йәншишмәне ҡотҡарырға тип оран ғына һалғайным, заводтағы уландарым бүлдәзерҙәре, самасуалдары менән һөрәнләп килеп етте, көн һуҙымында Шүлгән шаҡшыһына арҡыры кәртә ҡорҙо. Ана тора ул быуа. Шунан биреле Шүлгән шойҡанлана түбәндә — Йәншишмәгә буйы етмәй киҙәнә. Йәй көнө күрһәгеҙ икән: Шүлгән аҫта ағыулы тештәрен ыржайта, ә өҫтә Урал батырҙың Йәншишмәһе — һомғол томбойоҡтар үҫә, ҡоштар һайрай, шифалы күл буйы сүлдәге оазистай ҡусҡылланып ултыра. Әйҙә әле, тағы ла бер байҡап уҙ: яңы ғына ҡыш ҡойроғо — ҡара яҙ башы булыуға ҡарамаҫтан, сәхрәләрҙең ожмахтары бар бында! — Аяғына калушлы быймаһын, башына төлкө бүркен эләктереп, билле тунын яурынына һалып, ҡартлас тышҡа елтерәне, яр башында шыҡайып, һыу йөҙөнә текләне. — Йәншишмәнең шифалығын күрһәтә был хозурлыҡ! Сатнама һыуыҡтарҙа ла туңмай — йәйен-ҡышын ун алты градуслы. Хәйер, уның шифаһы тураһында ашҡаҙандары ауыртып интеккән эшселәрҙән һораш, мырҙам.

Шишмә сыҡҡан урғыл үҙе имән бура менән уратып алынған, түбәһе таҡталап ябылған, күҙ йәшеләй үтәҙек һыу бура аҫтынан таҡтаташҡа атлығып, быуаға ағылып төшә. Халыҡ тапап таҡырлаған майҙансыҡта — кескәй еҫтәл, өҫтәлдә — стакандар, банкалар...

—Эшсән халыҡ көнөнә өс тапҡыр килә — ашҡаҙандары ауырығандары ла, ауырымағандары ла. Шифалы һыу һәр кемгә лә файҙалы. Урал батыр, үлеп барған донъяға йән бөркөр өсөн, тап ошо Йәншишмәнең һутын уртлағандыр,

тим...

Мотал стаканға һоҫоп, тәмен татып ҡараны: ниндәйҙер май тәмен әйтә, тамаҡҡа ла яғынысლы. Ошоноң ишене ул элек алыҫ Карпат тауҙарындағы курортта, йәнә үҙебеҙҙең Уралдағы ғәжәйеп шифа сығанағы Ҡорғаҙаҡта ғына эскәне бар ине. Төбөнәсә һемерҙе, яңынан тултырып алды.

-- Шулай, Йәншишмәгә ғашиҡ булмаған кеше юҡ ул донъяла... — тип һөйләнә бирҙе ҡартлас. — Йотҡаны һайын, йотҡоһо килеп кенә тора.

-- Ашҡаҙаны ауырыуҙар, тиһегеҙ инде?

-- Шулай. Кемдең эсе борһа, ошонда йүгереп килә. Бер-ике ай һемерһәләр, һин дә мин булып китәләр. Мин үҙем дә, әбейем дә, туғыҙ улан үҫтереп, беребеҙ ҙә эстән ауырыманыҡ. Эшсе халыҡ, көмөш торба һуҙып, Йәншишмәне цехтарға үткәреү тураһында һүҙ алып бара.

-- Уға тиклем һыуҙы ғалимдар тикшереп ҡарарға тейеш.

-- Ҡайҙа һуң ул ғалимдар? Бер-икеһе пәйҙә булғайны ла бит, тик, әнжәнирҙәр түгел, ә ҡобайыр тиреүселәр булып сыҡты, ауыҙымдан дыңғырлауыҡ таҫмаға яҙып алды. Яубаҫаров ҡороғоро, шуны әллә ҡайҙан ишетеп ҡалып, йәнемә тейҙе бит, әй. Ҡотко таратаһың, зарарлы әкиәттәрең менән эшсе синыф-пролетариаттың аңын ағыулайһың, тип, былай ҙа көн күрһәтмәй. Өйөмдө ышыртырға, Йәншишмәне күмдертергә нисәмә тапҡыр бүлдәзер ебәреп этләне, тик эшселәр ҡул һалдыртманы. Милиционер һөстөрөүгә барып етте: мин, имеш, дин тотоп, таң һыуы алып, үткән-һүткәнде өшкөрөп ятам, тфү!..

-- Йә, йә, шунан ни булды? — Яҙыусының һөнәрмәнлек сәме ҡуҙғалды.

-- Ни тип ни, бер нәмә лә булманы. Тирә-яҡты байҡаштырып, өйгә лә инеп сыҡҡас, һинең кеүек үк рәхәтләнеп ике стакан һыу эсте лә ҡыҙыляғалы, рәхмәт, бабай, шишмә башын һәр саҡ шулай таҙа тот, ҡарауылла, хулигандарҙан бысраттырма, тип үҙ юлына китте лә барҙы.

-- Теңкәһенә тейә икән?

-- Кемдең?

-- Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улының.

-- Кем?

-- Йәншишмәне әйтәм. Ул шылтырап ағып ятҡандан директорға ни зыян?

-- Бик зәһәр зыян, мырҙам. Ҡойма аҫтынан ул ағыҙған ҡара бурьяҡ — Шүлгән шаҡшыһы[37] янында Йәншишмәбеҙ ҡара мәкер ҡаршыһындағы саф намыҫтай балҡып ята. Шуның яҡтыһында гонаһшомлоғоноң барлыҡ рыялары көҙгөләгеләй сағыла. Унан килеп, мине беләһең, атайың барҙа уҡ завод нигеҙен ҡорошоп, унан һуң, һуғыш ҡырында имгәнгәс, оҙаҡ йылдар ошонда вахтер булып эшләп, пенсияға сыҡҡан кеше: гонаһлы тишек-тошоҡтарын, ҡыңғырлыҡтарын һунар этеләй тоям. Шүлгән шаҡшыһын бында ҡасан, ҡайһындай көндәрҙә ҡойма аҫтынан урғылдырғандарын да, мөрйә башынан ыҫмаҡлап быҫҡытҡандарын да беләм. Юғарынан комиссия көтөлгәндә йәки һинең ише осло ҡәләмдәрҙең тәнҡит һүҙе гәзиттә сыҡҡанда килеп ҡара: шаҡшылыҡтың юлы быуылған була — барыһы ла шиты-крыты, законлы, көллөһө таҙартҡыс ҡоролма аша үтә. Ә шау-шыу баҫылдымы, йәшерен

[37] «Урал батыр» эпосындағы һыу-һауаһы кешеләргә үлемесле Шүлгән күлдәренә ишара.

күлдәрендә бурһып ятҡан зәһәр ағыу ҡабат анауы ҡойма аҫтынан ажғырып килә лә сыға... Атайың менән беҙ белгәндән хәтһеҙ ҙурайҙы завод, ә таҙартҡыс ҡоролмалар теге замандағы килеш — таҙартып өлгөртә алмай, саҡ-саҡ тын ала, мырҙам. Яубаҫаровҡа нимә: үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын, көкөртлө-мөкөртлө кислоталары ҡоролманы уратып уҙып тура Ағиҙелгә аҡһа — экономия, премия... Белгең килһә, үҙе имгән әсә имсәген тешләп өҙгән мөстән[38] ул — тәбиғәтте үлтереп план тултыра...

-- Коллектив ни ҡарай икән?

-- Әллә Айҙан килөп төштөңмө, мырҙам? Үҙең ошонда эшләп киткән кеше бит. Яубаҫаров коллективтың да ауыҙын тыға белә: әлеге шул экономия, премия. Ун өсөнсө тип аталған юҡмыш ай өсөн «зерәплата» барлығын да онотма... Ә мин, пенсиялағы ҡарт тинтәк, шуларҙың барыһын күрәм, Яубаҫаровтың күҙенә сүп булып төшәм. Бына ниңә ата-бабанан ҡалған изге сығанаҡты юҡ итергә киҙәнә ул! Шуға күрә лә әбейем менән был нигеҙҙән ҡупмайбыҙ, күҙле бүкән урынында ҡалғанбыҙ. Беребеҙ бер яры китһә, икенсебез һаҡлап ҡала, тигәндәй... Туғыҙ уланым туғыҙ яҡтан саҡырһа ла, бармайбыҙ. Шишмә башын атайым бахыр аманат итеп, ҡурсарға ҡалдырғайны. Ҡасанмы үҙем ышаныслы ҡулдарға тапшырғансы, ҡупмайым, вәссәләм!

-- Быға минең атай ҙа әллә ғәйепләме икән, олатай?

-- Тәүбә, тиң! Булаттимер-бәлшәүик, тауышы ҡаты булһа ла, йөрәге менән әүлиә, изге йән ине ул, балаҡай. Әгәр заводыбыҙ уның һыҙған юлы менән барһа, ана анауы төтәп торған мөрйә лә, шайтанлы буръяҡ та булмаҫ ине. «Төтөнһөҙ ут яғырбыҙ, һыуһыҙ бысраҡ йыуырбыҙ. Көллө Шүлгән ыуҙарын, һыу-һауаға осортмай, ете кат зинданға йомасаҡбыҙ!» — ти торғайны бит ул аҫыл әнжәнир Булаттимер Шаһибәрәков. Әгәр ҙә иҫән булһа, Яубаҫаров кеүектәрҙең аяғы тышауланыр, завод тирәһендә шаулап-гөрләп баҡса үҫер, йүкәләр сәскә атыр, араһында бал ҡорттары гөжләшер, һандуғастар һайрашыр, йылтынҡойроҡ тейендәр һикерешер ине... Һинең атайың түгел, ә үҙебеҙ ғәйепле быға, мырҙам.

-- Беҙ? Бөтәбеҙ ҙәме!

-- Балыҡ башынан серей, тигәндәй, бөтәбеҙ ҙә шул, балам. Бер-беребеҙҙең күҙен суҡырға теләмәйбеҙ — бөтәбеҙ ҙә ҡарайып бөткән ҡарғалар кеүек... Әйтәйек, ниңә һәр бер ябай әҙәм завод етәксеһенең яҙыҡ эштәрен күҙенә төртөп әйтмәй? «Хужа кешегә ел-ямғыр ҙа ҡағылмаҫ — хатта ҡылы ла ҡымшанмаҫ, ә минең күҙҙе суҡыр— айлыҡ премиянан мәхрүм ҡалырмын...» — Бына бит беҙҙең фәлсәфә! Ә ниңә Яубаҫаровты, мөхитте харап иткәнен күрә тороп, уның кеүек үк юғары даирә кешеләре — химияға бәйле башҡа завод директорҙары, әнжәнирҙәре ғәйепләмәй, намыҫын ҡом менән ышҡып таҙартмай? Сөнки улар үҙҙәре лә был гонаһтан азат түгел: әйләнгәндә бер булһа ла, пландарын штурмлаған ифрат тығыҙ сулаларҙа, заводтарының эш ҡеүәһе таҙартыу ҡорамалдарының ҡеүәтенән артып китеп, ағыулы «артығк ҡеүә»ләрен төндә генә йәшереп йә зәңгәр күккә, йә Ағиҙелгә оҙаталар. Был хәлде лә һәммәбеҙ ҙә һиҙәбеҙ ҙә беләбеҙ, әммә ауыҙ асып өндәшергә форсат юҡ: тыуған ерҙе көнө-төнө

---

[38] Мөстән (урыҫсаһы сибирская язва) — яман әжәл сире.

бөлдөрөүсе Яубаçаров-аждаһа барҙа тегеләренең үҙ болахәте — себен бәләһе һымаҡ ҡына күренә. Фил этлеге эргәһендә әрләндеке иçәпкә алынмай шул... Ә ул «ваҡ-төйәк» тип һаналған болахәттәрҙең бөтәһен бергә йыйып үлсәп ҡараһаң (ә тәбиғәт-әсәбеҙ уларҙың бөтәһен үҙенә йыя!), ғәмәлдә ул фил булып килеп сыға, ә хәйерһеҙ Яубаçаровтыҡы кескәй әрләнгә ҡала. Бына ни өсөн уға ел-ямғыр тейҙертмәйҙәр, тере ҡомартҡы итеп тоталар был төтөн, бысраҡ сығанағын... Их! Шәхсән үҙебеҙҙе генә ҡәҙерләп, башҡаларҙы һанламаçка өйрәндек... Тыуып үçкән еребеҙҙән, һулаған һауабыҙҙан, эскән һыуҙарыбыҙҙан *бер сөскөртөм тәмәке* ҡиммәтлерәк...

-- Олатай, уныһы нимә тағы?

-- Бәй, әллә белмәйһең дәме, мырҙам? Уны миңә заманында атайың — Булаттимер-бәлшәүик үҙе ғибрәт итеп бәйән ҡылғайны. Ишет, әләйһә, ҡартыңдан — һүҙ йөрөтмә артымдан...

## БЕР СӨСКӨРТӨМ ТӘМӘКЕ

Борон-борон замандарҙа булған, ти, бер Бәндәғол. Ҡәҙимгесә ирәүән генә көн итә, әммә бер яҡтан күңеленең мейөшө китек икән: байҙар кеүек сөскөрөп кенә йәшәге, сөскөргәне һайын «йәрхәмбикалла!» әйттерткеһе бик килә, тик сөскөрә алмай этләнә, имеш.

-- Их, байҙар һымаҡ бер сөскөрөү өсөн генә лә бөтәһен бирер инем! — тип әйтеүе була, шунда уҡ Шүлгән килеп етеп, теленән көрмәп тә ала:

-- Әгәр ҙә бер сөскөртһәм, иң ятаҡан бер дуçыңды миңә ҡорбан ҡылырһыңмы?

-- Ике дуçымды ла әпкит, тик мине бер генә сөскөрт!

-- Юҡ, — тигән, бер аҙ уйланып торғас, Шүлгән, — миңә икеһе лә аҙ. Әгәр ҙә бер сөскөртһәм, шуларға ҡушып атайыңды ла миңә ҡорбан ҡылырһыңмы?

-- Атайымды ла, әсәйемде лә әпкит, тик мине бер генә сөскөрт!

-- Юҡ, — тигән Шүлгән, — миңә улар ғына ла аҙ. Әгәр ҙә бер сөскөртһәм, шуларға ҡушып тыуған-үçкән илеңде лә миңә ҡорбан ҡылырһыңмы?

-- Тыуған-үçкән илемде лә, туған халҡымды ла әпкит, тик мине бер генә сөскөрт!

Талай аптырап торғас, Шүлгән баш сайҡап ҡуйған, Бәндәғолға аңлатырға керешкән:

-- Һәй Бәндәғол, Бәндәғол, телең ни һөйләгәнде ҡолағың ишетәме һинең? Тыуған-үçкән илең үртәлеп, туған халҡың ҡырылып, үҙең генә тороп ҡалғас ни ҡылырһың?!.

-- Миңә тимәгәйе, көллө донъяны үртәт, ҡырҙырт, бөтөрт — тик мине бер генә сөскөрт!

Шул саҡ Шүлгән Бәндәғолдың танау тишегенә бер семтем генә тәмәке һалған икән, Бәндәғол ерҙе ярып сөскөрөп ебәргән.

-- Йәрхәмбикалла! — тигән, ти, уға Шүлгән. — Көллө донъяны көл иттертеп сөскөрөүгә рәхәтме? Бер сөскөрөү өсөн бирелгән хаҡыңа үкенмәйһеңме?

-- Кемдеңдер берәүҙең түгел, ә *минең* сөскөрөүем бит был! — тигән, ти, кинәнеп, Бәндәғол. — Бының өсөн, көллө донъя ғына етмәһә, ғәләмең дә йәл түгел!

-- Афарин, һинән шуны көткәйнем! Илең дә, халҡың да, донъяң да, ғәләмең дә кәрәкмәй — миңә *үҙең* генә кәрәк! — тип ҡәнәғәтләнеп маҡтанған, ти, Шүлгән. — Көллөһө лә үҙ урынында ҡалһын, кешеләр араһында йәшә, тоҡомдарыңды тарат, бәндәғолдарҙы ишәйт: мин башҡара алмағандарҙы ла һин башҡара аласаҡһың!

Шунан биреле нисәмә быуат үтһә лә, Шүлгәндең үҙен күргән кеше юҡ, ти, әле: Шүлгән йөрөйһө урындарҙа шомло әҙәми тоҡом — илен, халҡын, донъяһын, ғәләмен бер юлы һәм башкөлләй бер сөскөртөм тәмәкегә һатҡан бәндәғолдар эш ҡырып йөрөй имеш...

-- Бына шулай ул, мырҙам... -- Ең осо менән күҙ йәштәрен һелтәне. — Һеҙҙең арала бәндәғолдар, бәлки, башҡасараҡ аталыр, ләкин асылы бер ҡалыр ҙа барыбер арағыҙҙа эш ҡырып йөрөп ятыр. Бына ошо заводтың ағыулы ҡалдыҡтарын, күрмәмешкә һалышып, халҡыбыҙҙың эсәр һыуы Ағиҙелгә ағыҙыусыларҙы ғына ал – күрәләтә енәйәт ҡылалар бит! Бындайҙарҙы йөрәгеңә оялатыуҙан, сөрөкләнеүҙән һаҡлан. Йәндең сөрөкләнеүе тап шунан башлана ла инде...

Ҡарттың атҡан уғы ғәжәп мәргән ҡаҙала ине, бигерәк тә завод директорҙарына ҡағылышлы тос фекере яҙыусының үҙәгенә үтеп керҙе. «Ҡыҙыл башҡорт мине бына кемдәргә -- Шүлгән ҡотҡоларына ҡаршы аяҡландыра икән!..» тип уйланы, боҙ аҫтынан балыҡ ҡармаҡлау ваҡиғаһын нисәнсе ҡаттыр хәтерләп. Әммә ҡарттың йән аямай шуларға ҡаршы тороуы, сафлыҡ хаҡына фиҙәкәрлеге йөрьәтләндерҙе йөрәген: «Етте! Туҡтатырға ваҡыт ҡара эштәрен! Яҙам, барыһын да фашлап яҙам!». Ҡара үҙәнгә бирешмәй сылтырап аҡҡан шишмә лә, уның ҡурсалаусыһы ла тәбиғәттең аҡтыҡ тыпырсыныуылай бик ҡыҙғаныс тойолдо.

-- Туғыҙ уланың туғыҙ яҡҡа таралған... кемгә күҙ терәү инде?

-- Кемеһе булһа ла, аҡылға бер ултырып, илай-илай Йәншишмәһен эҙләп ҡайтыр, Инш-Алла!. Урал батыр уландары бер беҙ түгел, ҡурсалаусылар табылыр. Бына һин, исеме шанлы Булаттимер улы ла, шул юлдан йөрөйһөң, түгелме?.. Үҙебеҙ төрлө-төрлө һәм күмәк булһаҡ та, Йәншишмәбеҙ тик берәү... Үҙеңдең дә *уландарың дүртәү-бишәүҙер* инде? — Ошоноһо менән ҡартлас әҙиптең тас башына зыңҡыта һуҡты. Күк йөҙө кинәт ҡарайып, ишетмәгәнгә һалышып, Мотал күҙҙәрен йомдо, йөрәгенә ҡылсыҡ кереп ултырғандай һыҙланды: *«үҙеңдең дә уландарың...»* Әммә ҡарт үҙенең данлы инженер ҡорҙашының яңғыҙ улының ғаилә фажиғәһен белеп еткермәй ине, буғай: уҙамандың ел һындырған ҡурайҙай ҡапыл шиңеүен үҙенсә юрап, фекерен ослап ҡуйҙы:

-- Атайың бахырҙы әйтәм, «Беҙҙең дә тубыҡҡа ултыртып ейән-ейәнсәрҙәр һейөр көн килер, Ҡәҙерғол ҡорҙаш, артыбыҙҙан бынамын тигән алтын бағаналар ҡалҡыныр, тип һалдыра торғайны. Тик бәләкәй булып ҡалдың — Булаттимергә бәпесеңде ҡулына алып һикертергә яҙманы... Ни хәл итәһең, мырҙам, донъялар

имен булһын да ҡалғандарға бәлә-каза килмәһен -- үҙеңә ейән һәм ейәнсәрҙәреңде тупылдатып һөйөргә яҙһын!

Мотал, йөрәген услап тотоп, машинаһына табан кире йәйәүләне, аяҡ аҫтын абайламай һөрлөктө, ике күҙен әллә йәш, әллә Иҫке заводтың әсе төтөнө томаланы: *«ейән һәм ейәнсәрҙәреңде...»*

...Мөхлисә менән осраҡлы һәм сәйер генә никахлашҡас, икеһе тиң өс көнлөк студент, хәләл ир менән ҡатын тормошон башланылар. Хәйер, тормоштоң үҙе кеүек үк, сал донъяла бындай хәл тәүге түгел ине һәм аҙағы ла булмаҫ. Комсомол вузком секретарының егетлеге менәндер, йәш ғаиләне дөйөм ятаҡтың коридор башындағы дүрт кешелек бүлмәһенә өйҙәш урынлаштырҙылар. Аҡ простыня-шаршау артында улар кеүек үк себеши ғаилә ай ярымлыҡ имсәк балаһы менән мәж килә. Шуға ҡарамай, икеһе лә, тырышып-тырмашып, бейек түбәле фән тауына үрмәләй, хыялланып айырым фатир шәйләй. Бәпес тигән йомарлаҡ йән төнө буйы үҙәккә үткәреп илай. Әле әсәй, әле атай, ә аҙаҡтан Мотал менән Мөхлисә бишек төбөнән китмәй. Шуныһы ҡыҙыҡ: тынғы бирмәгән сабый, дүрт студенттың лекцияға йүнәлеү сәғәте һуҡтымы, һөрәнләүҙән туҡтай — биләүҙә ойоп йоҡлай. Әйтерһең, имтихандар алдынан дәрес ҡалдырыуҙың һәләкәтлеген тоя. Дүртәүләшеп түңәрәк табын ҡороп, шул хаҡта һөйләшеп көлөшә-көлөшә, сәй эсәләр кистәрен. Йәш әсә был яңы тормош ҡорғандарҙы ҡомарлай:

—Туҡтағыҙ әле, һеҙҙең дә шундай ҡара танауығыҙ булыр!

Бәхетле атай кеше күҙҙәрен ҡыҫып кинәнеп көлә, ә Мотал бәләкәс биҙәлайға күҙ һалып ала ла гөлтләп китерҙәй ҡыҙара. Мөхлисә иһә студент турылығы менән ҡырыҫ һуҡтыра:

-- Юҡ инде, әйкәйем, һеҙҙең кеүек аңра һарыҡ булмабыҙ!

-- Бәй, был ни тигән һүҙ?! — тип албырғай әсә кеше.

-- Сәскәләй сағымда бала ҡосаҡлап ултырырға...

-- Абау, әйгенәм, әллә төшөртмәксеһеңме?!—Тиҫтерҙәрҙең араһында был да ярып һалына. Моталдың ҡобараһы оса. Ике ир, бер-береһен яҡшы аңлап, өнһөҙ ҡарашып ала.

-- Шул тиклем дә артта ҡалырһың икән. Эште абортҡаса еткерәләр тиме ни! — ти Мөхлисә.

-- Әлләсе, беҙ ул тиклем ваҡлыҡтарға кермәнек, — ти, ике бите ялҡынланып, тегеһе.

-- Шул күренеп тора ла! — Мөхлисә бәпәйгә ымлап әйтә. — Нәфсегеҙҙе тыйырға кәрәк ине, ҡотһоҙҙар.

-- Аһ, ҡотһоҙ тип ни... Әллә, ир менән ҡатын килеш, бергә ятып, айырым йоҡлап йөрөйһөгөҙме?.. Балаһыҙҙар була ул самай ҡотһоҙҙар!

Ике ир тамаҡ ҡыра, әммә сәмдәре ҡуҙғалған ҡатындар абайламай.

-- Фән ҡушҡанса йәшәргә кәрәк, ханым, фән ҡушҡанса! — Тауышын күтәрә Мөхлисә.

-- Фән ҡушҡанса ғына йәшәһәк, белмәйем, был донъяла ҡайһылай итеп әҙәм балаһы барлыҡҡа килер ине икән?

-- Һе! Бәпембәгә һинең әҙәм балаң ниңә? — тип көлә атай булғаны. — Уға

ни, донъя өсөн үҙе менән ире булғас, шул еткән.

-- Белмәйем, бынау ултырған манараһы ни тиер икән әле.

—Манара булһа ни. Мин ҡайҙа ҡарай тартам — ул шунда боролор. Ир — баш, ҡатын — муйын!

Мотал, ялбарыулы төбәлеп, Мөхлисәне бүлдерҙе:

—Көмөшөм, улай уҡ ҡаты әйтмәсе... -- Өйҙәштәр шарҡылдап көлдө.

-- Бына күрҙеңме? — Әсәй булған кеше тантана итте.— Баш — башлығын итә инде ул, муйын ҡайҙа ҡайырһа ла. Беҙҙең әхүәл һин һылыуға ла киләсәк!

-- Аллам һаҡлаһын! Киләсәккә тиклем йәшәйек әле, — тигәйне Мөхлисә, әсә кеше «пырх!» итеп көлдө:

-- «Киләсәк» тигәнең ни ул, әллә ни оҙаҡ көттөртмәҫ: бер рәхәтлектән һуң туғыҙ ай ҙа туғыҙ көн генә...

Әммә туғыҙ айҙан һуң да, туғыҙ йылдан һуң да быларға бәпәй тирбәтергә насип булманы.

Мөхлисә тәүҙә, уҡыуҙы тамамлайыҡ, диплом алайыҡ, унан һуң күҙ күрер, тип кисектерҙе. Көтмәгәндә, уҡыуын өҙөп, «Алтын бөртөк» ресторанына официантка булып эшкә урынлашыуы ирҙе хафаға һалды. Йөрәге әрнеп:

-- Ниңә кәңәш итмәнең? Белемеңде ярым-йорто ҡалдырҙың... — тине.

-- Алтыным, һин мине беләһең бит: бына ошо устарымда алтын-көмөш сыңламаһа, ҡауырһындай ҡаты зәңгәр, ҡыҙыл ҡағыҙҙар ҡыштырламаһа, түҙемлегем етмәй шул. — Атластай шыма, һалҡын беләктәрен иренең муйынына уралдырҙы. — Магазин витриналарындағы хазиналарҙы күрһәм, күҙем алара ла китә. Беҙ кемдән кәм, барлы-юҡлы йәшәргә? Был донъяға ике тапҡыр килмәйбеҙ. Мин эшләрмен, ә һин тынысланып уҡырһың, һис кенә лә мохтажлыҡ кисермәбеҙ. Ә уҡыуымды тоҙламаным — ситтән тороп дауам иттерәсәкмен.

-- Көмөшөм, һине эшләтеп, үҙем уҡып ятырға... — тип турһайғайны ла Мотал, ҡатынының яғымлы һалҡын усы ауыҙын япты:

-- Һүҙемде кире ҡаҡма, үҙем табырмын да үҙем ябырмын. Һинең өсөн сәсем менән ер һеперeү ҙә бәхет миңә, алтыным!

Мотал диплом алғандан һуң да көмөшөнөң уҡыуы һүлпән барҙы. Етмәһә, официантка эшен мөкиббән ярата — көндөҙгөлөккә күсеп уҡыуҙан ҡырҡа баш тартты. Ғөмүмән, ресторандағы төнгө шау-шоу, байрамса гөжләгән зал, сағыу биҙәктәр, бокал сыңдары йәш ҡатындың тәбиғәтенә ифрат ятышлы ине. Иренең күңелен төрлө ғәмдәргә сорнап, һаман шул ҡыҙҙарса һылыу, һомғол килеш йөрөй бирҙе, бәпес ҡайғыһы ике ятып бер төшөнә лә кермәне.

— Сабыр ит инде, алтыным, баш-күҙ генә алайыҡ, әҙәм рәтле йәшәйек...

Мотал ауыр көрһөнә. Баш-күҙ ала башлағас, айырым фатир булдырыу бурысы тыйылдырҙы.

Фатирлы булғас, уны затлы итеп йыһазлау, аяҡҡа төк ҡундырыу дәрте тотто.

Унан һуң Моталдың яҙа башлаған романы, Мөхлисәһенең күп йылдарға һуңлатып диплом яҡлауы... Кеше ғүмерендәге ошондай ҙа үтә яуаплы мәлдәрҙе, йәнәһе, итәк тулы бала баҫкан мәхлүктәргә әйләнмәй, ҡаш та күҙ генә саҡтарҙа гөрләтеп уҙыуҙарға ни етә! Йылдар иһә йүгерҙе лә йүгерҙе...

Бергә тора башлауҙарының тәүге көндәренән үк, Мөхлисәһенең ысынлап та алтын-көмөшкә күҙе аларыуы мәғлүм булғайны шул. Ҡыҙ сағында наҡыҫ студент стипендияһын да, ашамай-эсмәй тигәндәй, өҙөп-йолҡоп йыйырға, алтын алҡа менән алтын балдаҡ алып кейергә ҡөҙрәте еткән имеш. Быны ул, ғәҙәттә, иренең аҡса өсөн баш ватҡан саҡтарында тәкәббер ғорурланып, ғибрәт итеп әйтеп һалыр ине. Гәзит-журналдарҙа Моталдың яҙғандары баҫылып, гонорар тигәндәре буйтым ғына ишерелә башлағас, алтын заты һөйөүсенең дә ихтыяждары артты -- ҡиммәтле әйберҙәрҙән хазина йыйғандай ине. Күҙ сағылтҡыс һылыу ҡатынының сәйер холҡо, затлы буталды балҡытҡан аҫыл таштай, йәш яҙыусы өсөн тәүҙә күңелле ирмәк тойолдо, ул хатта эстән генә быға хозурланып, ғорурлана ла ине. Аҡса алғаны һайын, Мөхлисәһенә эйәреп магазин юлдарын тапаны: юҡ-бар ғына ялтырҙан да ялҡынланып ҡабынып киткән алһыу йөҙҙө, утлы күҙ ҡараштарын күреү ирҙе ифрат та ҡыуандыра, татлы ләззәт менән сырмалта ине. Йылдар үтә-килә быға күнегелде: өйгә ҡайтҡан аҡса һаман ҡатынының шатлыҡ балҡытҡан йөҙөн күреү ҡәнәғәтлеге бирһә лә, магазин юлдарын йән киҫәгенең үҙенә генә ҡалдырҙы. Шуныһын да әйтәйек: бала саҡтан эшсе араһында үҫеп, эшсе холҡон үҙ иткәнгәме, Мотал, үҙенә ҡағылғанда, донъя малына төптө иҫе китеп бармай, йән атып табынғаны — алдындағы аҡ ҡағыҙ ҙа һәйбәт яҙған ҡәләм ине. Бер заман ағай-эне араһында кордон аша ҡайтартылған молниялы мех ботинка менән бәҫле бүрек баҙары күтәрелеп, әҙәм талауҙар ҙа көсәйеп, ундай кейем эйәләренең кистәрен ҡараңғыла урамға сығырға ҡурҡышып ғүмер кисереүҙәре тураһында көләмәстәр ишәйгәс, шуғамылыр, Мөхлисә ирен, көлөп, «йолҡһаң бөртөк ҡылы сыҡмаҫлыҡ пролетар яҙыусы» тип атар, сөнки Мотал, өҫ-башында ла бәләкәйҙән һеңгән ябайлыҡ һаҡлап, күҙгә бәрелерҙәйенә мауығып бармаҫ ине. Был ҡағиҙә бер ваҡытта ла уның хәләл яртыһына ҡағылманы: егәрлеген һалыр, мәгәр ҡатынының күҙе ҡыҙған «заграничный» сепрәк-сапраҡты табып ҡайтартыр ине. Тик шул изге хистәренең үҙәге *сөрөк* булып сыҡты...

Көндәрҙең береһендә Мотал, абайламаҫтан, һуңғы ике йыл араһында ғына ла Мөхлисәһе унан әллә нисә шәшке тун юллатып алдыртҡаны иҫенә төшөп, башына һуҡты ла ҡуйҙы. Гардеробтарҙы асып ҡарап, төбөнә тоҙ ҡоя торғас, был тундарҙың (һәм уларҙың ғына ла түгел!) икенсе юлдан ниндәйҙер туған-тыумаса ла таныш-тонош ҡулына шылғанлығы асыҡланды, шулай итеп, Мотал үҙенең намыҫы алдында ниндәйҙер шыҡһыҙ табышсыға — база ҡомағына әүерелде. Етмәһә, бер бөгөн генә түгел, ә күп йылдар буйы ошо хәлдә йөрөгәнлеген, үҙе лә һиҙмәй, муйынынан *һаҙға* кереп батҡанлығын аңланы: күҙ алдында берәм-берәм таныш йөҙҙәр — юғары яҙыусы абруйы аҫтында ҡайһыһы ҡалаға прописканан үткәрелгән, ҡайһыһы эшкә урынлаштырылған, ҡайһыһы вузға индерелгән, ҡайһыһы фатир юллауҙа тотанаҡланылған күп һанлы таныш һәм таныш түгел сырайҙар — һылыу ҡатынының ярандары теҙелде. Хәҙер бына шулар ҡаланың төрлө хужалыҡ тармаҡтарында тамырланып нығынған, уның Мөхлисәһе менән ниндәйҙер, Мотал аңлап еткерә алмай торған, хәтәр алыш-биреш уйыны ҡорған...

Ҡайҙан килеп сыҡты һуң был ғәләмәт? Әлбиттә, Мөхлисәһенең атаҡлы

«Ярлауыҡ» ресторанына директор булып инеүенән. Ресторан үҙенә аҙыҡ-түлекте комиссион хаҡ менән шәхси тармаҡтан да һатып ала башлағас, ҡатынының тирәһендә һәр төрлө «етештереүсе»ләр, «экспедитор»ҙар, «баҙарман»дар — ғөмүмән, ала-ҡола бәндәләр ифрат ҡайнашты. Армен Саркисян тигәндәре, йөҙ-ҡиәфәте бер юлы әрмәнгә лә, грузинға ла, башҡортҡа ла оҡшаған һәм оҡшамаған шылғаяҡ «баҙар ҡорто», үҙе генә лә ни тора...

Иркен, зиннәтле фатирҙа үле тынлыҡ: көҙгөлө гарнитур, китап шкафтары менән уратылған мөһәбәт имән өҫтәлле эш кабинеты ла, бәҫле келәмдәр менән көпләнгән зал һәм йоҡо бүлмәләре лә, гәлсәр менән тулы кухня һәм кафелле ванналары ла, әйтерһең, күңелдең һис бер тартыу көсөнә эйә булмай, алыҫ йыһан бушлығында болара. Мотал эшләп ултырған затлы креслоһында әлһерәп-арып китә, ике ҡолағы шаулап, башы зыңҡып, имән өҫтәленә терһәкләнеп көтә: ошо ялҡытҡыс үле тынлыҡта кемдер, ҡара танаулы малай, тупыр-тупыр сабып, уйнаҡлап, арттан йүгереп килер ҙә, «әттә-әттә» тип, итәгенән тартып, ҡулындағы ручкаһын алып ҡасыр, артынан ҡыуалатып карауат аҫтына инергә, шифоньер артын байҡарға мәжбүр итер. Сәрелдәп көлөп ебәрер ҙә өйҙө баҫҡан үле тынлыҡ – йыһан саңы сәселеп китер... Әммә, аҙнаға бер-нисә килеп-китеп йөрөмәле шаҙра йөҙлө (Мөхлисәһе махсус һайлап алған!) өй йыйыштырыусы ханымдан һәм көн дә кисен йоҡо алдынан ғына ҡайтып йығылыусан, постелендә таң-иртәнән һалҡын шәүләләй һурылып юҡҡа сығыусан һылыуҙарҙан-һылыу ҡатынынан башҡа, уҙамандың йәненә һис кем кермәй, борсомай. Моталға үҙен ошо ултырған урынында өҙләкһеҙ, ләкин күҙгә күренмәйенсә ҡойолоусы һалҡын космос саңы баҫа ла баҫа һымаҡ. Йылдар үтә, саң ҡатламы ҡалыная, тән быуындарын ҡымшанмаҫлыҡ итеп тотҡарлап күмә, өҫтәл өҫтөн, тәҙрә төптәрен, китап биттәрен ҡаплай — йырып сыҡҡыһыҙ, һалҡын саң, үле саң...

Ҡатынының ҡатырғы тышлы вуз дипломы оҙаҡ зарығып көттөргән, күҙ текәп көттөргән фиништың үтелеүе һымаҡ тойолғайны уға бер заман. Ошо ҡыуаныслы көндәрҙең береһендә, йоҡо бүлмәһендә «заграничный» транзисторҙан Бетховендың «Айлы соната»һын тыңлап ятҡанда, йөрәк төбөнә төйнәлеп, ауырттырып төрткәнен сығарҙы ир:

-- Көмөшөм, тим.

-- Әү, алтыным.

-- Дипломлы ла булдың инде хәҙер.

-- Булдым шул.

-- Фатирлы ла, затлы урын-ҡаралтылы ла булдыҡ инде әллә ҡасан.

-- Эйе.

-- Тимәк, беҙгә үҙебеҙ өсөн генә йәшәргә лә ваҡыт етте.

-- Бәй, әйткәндәрең -- кем өсөн, үҙебеҙ өсөн генә түгелме ни, алтыным?

—Донъя малы — диңгеҙ ҡаны өсөн ҡырҡышабыҙ бит. Әнә һеңлең Сәлимәкәйҙе ҡара...

Талғын музыканан иҙрәгән хәләл ефетенең тәнен, әйтерһең, йәшен уғы көйҙөрөп тартыштырҙы:

—Был ни тигән һүҙ тағы?!

Мотал ҡатынының атлас һымаҡ һалҡын, шыма тәнен күкрәгенә ныҡыраҡ

ҡыҫты, ҡапыл һулышы йышайыуҙан үҫмерҙәрсә оялып, саҡ әйтте:

-- Беҙҙең дә үҙ ҡара танауыбыҙ булырға ваҡыт, көмөшөм.

Мөхлисә ҡапыл ырғып тороп ултырҙы:

-- Ни һөйләйһең?! Миңә самай кандидатлыҡ диссертацияһы яҙа башларға ваҡыт. Ғүмер уҙып бара.

-- Эйе, ғүмеркәйҙәр тәгәрләп кенә бара... — тине Мотал, күңеле ҡыйырылып. Мәгәр быны хәләл ефете үҙенсәрәк аңланы — яҡыныраҡ һырышты:

-- Һабаҡташтарым һәммәһе лә кандидат та доктор булып бөттөләр — мин уларҙан кәмме ни, эйе бит, алтыным?

-- Ресторандан китәһеңме? — Мотал хатта ҡыуанғандай ҙа итте.

-- Уйламайым да — ул минең стихиям!.

-- Бәй, улайғас, бысағымамы ни ул кандидатлыҡ? Ашхана һәм рестораңдар тресы факультетында уҡыманың...

Мөхлисә ауыҙын турһайтты ла башын артҡа салҡайтты:

—Уҡымаһа һуң? Герблы дипломды кеҫәгә бөкләп һалдым-ҡуйҙым, вәссәләм!. Һабаҡташтарым минән шәберәкме ни?

— Йә раббым, был ҡасанға тиклем һуҙылыр? — тине Мотал, йөрәк төбөнән һыҙып.

—Бынау ситтән тороп уҡыу ялҡытты, хәлдән тайҙырҙы, арыным. Эшләп йөрөгән көйө берәр йыл арынып, яңы көс менән тотонһам, яҙырға дүрт-биш йыл китһә, яҡлауға...

Мотал ҡатыны арифметикаһын аҙағынаса тыңламаны, үҙ мөхитенә бикләнеп, мейеһе кинәт электронлы иҫәп-хисап машинаһылай хәрәкәткә килеп, һөҙөмтә яһап өлгөрҙө. Быныһы ла вузда диплом яҡлаған тиҙлектә барһа, тимәк... Моталға кәм тигәндә илле, илле биш йәш буласаҡ...

-- Юҡ! Һинең диссертацияны көтөргә дарман ҡалмай.

-- Хыялыйым минең, дәрт булһа ни ул, дарманды үҙем бирермен! — Мөхлисә уйынға борҙо.

-- Юҡ! Һин үҙең дә баҡыр кеүек күгәрәһең, көмөшөм!.. — Был һүҙ тамағынан ауырттырып, осло боҙ һынығылай ҡырып сыҡты. Мөхлисәһе сыбыртҡылап тартҡандай ҡайырылды.

-- Алтыным, бына һин ниндәй үҙһөйәр, эгоист! — Йәберһенеп, танауын мыршылдатты. Ир иһә һыны ҡатып ятыуын белде.

-- Ике тиҫтә йыл буйы үҙһөйәр булманым, инде туғыҙ айға ғына эгоист булып ҡарайым!

— Тәүбә-тәүбә, ни һөйләйһең?!

-- Ишеткәнеңде!

-- Һе! Бына һиңә гуманист яҙыусы! — «Гуманист» һүҙен көмөшкәйе айырым баҫымлыҡланы. Ире хаҡында яҙылған әҙәби тәнҡитте ул береһен-бер ҡалдырмай уҡып барыр һәм, иң мөһимен абайламаһа ла, ошоноң ише яңғырауыҡ эпитеттарҙы аулап алып, ни сара менәндер хәтеренә һеңдереп, яйы тура килгән һайын, көтмәгәндә килтереп сығарыр ине. — Тимәк, ҡатыныңдың ҡәбилиәтле булыуына ҡаршыһың?

—Ғүмер буйы орлоҡ бирмәй, ҡыу ағас хәлендә йәшәүеңә ҡаршы мин.

Мөхлисә торҙо, быуындарын шытырлатып кирелде, танауын мыршылдатып, араларға боҙ ҡоймаһы ҡалҡканлығын белдереп, арҡаһы менән бороллдо. Тымыҡ кистә тын бүлмәлә «Айлы соната» моңо аҫтында нәүбәттәге «һыуыҡ һуғыш» башланды. Хәтерҙә: Моталға был ҡотоп боҙон ниндәйҙер алтын алҡамы, беләҙекме ярҙамында ғына имләп иретергә тура килде...

Шунан һуң йәнә көтмәгәндә өҫкә ишерелгән бәлә — автомобиль катастрофаһы... Икеһе тиң больницала интекте, һөйәктәрен ҡырҡ урындан ҡоршатып, тигәндәй, үле тынлыҡлы фатирға йөҙҙәрендә аҡ палатаның моңһоу төҫөн алып ҡайтты. Ошо яҙмыш Мөхлисәһен эстән дә үҙгәртте, буғай: иренең билдәле ныҡыуҙарын сабыр кисереп тыңлай, моңһоуланып уйлана. Артыҡ ҡарышмай, медицина әһелдәренә икәүләшеп барып күренделәр, «бала табырға әле һуң түгел» тигән ҡыуанyслы һөҙөмтә алып ҡайттылар, ләкин... көндәр үтә-килә ҡатыны бойоҡто, алсаҡлығын онотто -- балтаһы һыуға төшкәндәй күңелһеҙләнде. Ире борсолоп төпсөнөргә тотонғас, кинәт кенә үҙгәреп, көләсләнеп, яңы өйләнешкәндәгеләй, төпһөҙ-тәрән мөхәббәтенә сумырҙы һәм... һис кенә лә көтмәгәндә, сәсте үрә торғоҙорлоҡ әйтеп һалды:

—Күпме генә теләһәм дә, булдыра алмам инде, бәгерем... автомобиль катастрофаһы...

-- Һуң түгел, тинеләр ҙәһә!

-- Алтыным, уны бит мин үҙем докторҙан әйттертем...

Подъездағы күрше-күлән уларға ҡыҙғанып баға, арттарында ҡарт-ҡороноң йәшерен генә мөңгөрләүе ишетелә: «Алтын-көмөшкә алданып ҡыуарҙылар... ғүмеркәйҙәре *алтын сөрөктәй* ыуалды...». Мотал инде икеһенең алтын сөрөккә әүерелеп ыуалыуын төштәрендә күреп һаташып уяна...

Өйҙән сүп-сар сығарманы -- бер кемгә лә бер нәмә лә белдертмәй янды Мотал. Сая йәшлегендәгеләй, кәүҙәһенең төп-төҙ манара килбәтен һаҡлаһа ла, тауышының металл сыңы һүрелде, маңлай сәсе кинәт кенә тәүге ҡырау ялмаған дала бүтәгәһеләй ҡыуарҙы; был ҡыуарыу барышы, ирҙең етеҙлеген дә һәлмәкләтеп, үҙ ҡарыуын тиҙләтеп, инде елкә сәсенә, түбә өҫтөнә күгелйемләтеп бөртөк-бөртөк һикерҙе, ҙур һөжүмгә күскән дошман фронтын хәтерләтеп, һаман тәрәнерәк үтте, уйсан ҡара күҙҙәренең төпкөлөндә бойоҡ тоноҡлоҡ артты. Бәгерен сорнап алған оло аяныстан әллә үҙенә, әллә һылыу Мөхлисәһенә йөрәк төбөнән таштай ҡатып әрнеүен, рәнйеүен дә аҙағынаса белештереп еткермәй, һушына ҡайта алмай, ҡаңғырып йөрөй бирҙе: *сөрөк, алтын сөрөк...*

Ҡот осорғос тамға әле Ҡәҙерғол ҡарт менән хушлашып, «Волга»һында елдертеп барғанында ла, мейеһен яман быраулап, үҙен йомшаҡ креслола бәүелеп ултырған килеш ыуала башлаған сөрөк бүкән рәүешендә күҙ алдына килтереүҙән тән тамырҙарындағы ҡан, әйтерһең, ҡарағурғашланып ҡатты. Ошо хәтәр хәлдән нисек тә сығыр, үҙ-үҙен онотор өсөн, акселераторға ныҡыраҡ баҫты, алдындағы эреле-ваҡлы машиналарҙы бер-бер артлы ҡыуып уҙып, ҡала менән ауыл бергә тоташҡан төньяҡ биҫтә буйлап аҡҡан уктай осоуын һиҙмәй ҙә ҡалды. Яҡынлашыусы яҙ һулышынан түмәләстәре ҡарайып ҡарҙан әрселә башлаған баҫыуҙарҙы ике яндан артҡа ҡарай йүгертеп уҙа торғас, Иҫке завод торбаһы шыҡһыҙ һерәйеп артта ҡалғас, ҡапыл аңына килде — бөтөнләй кәрәкһеҙ

тарафҡа олаға лаһа. Тормоздарын илатып, юл уртаһында боролдо, был юлы инде тештәрен ҡыҫҡан тыныслыҡ менән саҡрымдарҙы тәгәрмәстәргә кире уралтты. Ҡояш төшлөктән ауышҡан, асығыуы ауыртыуға әйләнгән: «Ҡәҙерғол ҡарт сәй эсергә ҡыҫтағанда ниңә риза булманым?»... Сәғәткә ҡараны: Яубаҫаров бажаһы («Шүлгән!..»—Ҡәҙерғол ҡарт нарығын ирекһеҙҙән ҡабатлап, яурыны аша төкөрҙө) Иҫке заводынан әйләнеп ҡайтҡансы (ул хәйләкәр, телефондан һәм «оҙон ҡуллы башлыҡтар»ҙан алыҫыраҡ олағырға ҡырҡышыптыр, дача йортон ҡыш буйы ла һыуындыртмай — ял көндәренән тыш, ҡайһы бер эш көндәрендә лә шунда төнәкләп ҡала), берәй урынға кереп, тамаҡ туйҙырып алырға ла форсат бар.

## УН БЕРЕНСЕ СӘХИФӘ

Сыбыҡ осо туғаны Басир Дәүләтбаев менән троллейбус туҡталышында яҙлығышҡандан һуң, ҡыҙыбыҙ ҡала үҙәгендәге Ленин баҡсаһы эргәһендә төшөп ҡалды — оҫтаханаға ҡайтып эш башлағансы, ҡайһы бер рәсми идараларҙың ишеген ҡағаһы бар. Сағыу йәшелгә буялған боронғо бинаның тос имән ишеген яурыны менән көскә ҡайыра асып, өҫкө ҡатына иркен суйын баҫҡыстарҙан йүгереп, тигәндәй, менде, Тарих һәм Мәҙәниәт һәйкәлдәрен һаҡлау йәмғиәтенең идараһы урынлашҡан тар ғына бүлмәгә инде. Ҡаршы яҡта урамға ҡараған һыңар ғына тәҙрәгә кәштә яурынлы арҡаһын биреп, баяғы ишек кеүек үк тос имәндән ҡойолған өҫтәл артында шундай уҡ баҙыҡ имән кәүҙәле ветеран-ағай (йәмғиәттең рәйесе) алдындағы күбәләй ҡағыҙ өйөмөн аҡтарып ултыра, тәҙрә бөркkән яҡты фонда ул ҙур ҡара күләгәләй күренә. Ҡартластың күбәләй ап-аҡ сәс ҡайыған эре-сыймаҡ йөҙ һыҙатлы, ҡарттарса тоноҡ уйсан күҙле ҡиәфәтен Дилбәр урыҫ яҙыусыһы Иван Тургеневҡамы, совет яҙарманы Федор Гладковҡамы оҡшатып һоҡлана гелән: «Бар бит беҙҙә лә шундай мөһәбәт йәндәр!» Өлкән быуын етәкселәренә хас олпатлыҡ та, кеселеклелек тә бар ҡартта — ингән һәр берәүҙе тороп ҡаршылай ҙа оҙата, ишекте лә артынан үҙе ябып ҡала. Әле лә өҫтәле артынан сығып, йөрәк тәңәленә үк ҡулын ҡаушарып ҡуйып, сал башын эйеп сәләмләне:

-- Әйҙүк, түрҙән уҙығыҙ, ҡәҙерле Таңатарова!

-- Рәхмәт, ағай, түрҙән булмаһа ла ярай.

-- Ах, ҡайһындай һәйбәт булды; уҙегеҙҙе саҡыртырға ине ниәт.

—Гел генә бында саҡыртылып алынам да, ике үркәсле дөйәләй, йомош өҫтөнә йомош артмаҡлап сығараһығыҙ, ағай.

-- Ни хәл итмәк кәрәк, һеңлем, үҙегеҙ идарала берҙәнбер рәссам булғас? — Рәйес ике ҡулын йәйеп көрһөндө. — Әле был юлы ла бына...

-- Юҡ, был юлы мин үҙем артмаҡланып килдем.

—Рәхим итә күрегеҙ, ултырығыҙ. Ни йомош ул, һеңлекәш?

-- Ерәнсә тигән иптәште ишеткәнегеҙ бармы? — Дилбәр, эште шаяртыуҙан башлап еңеләйтергә иҫәпләп, урынына тауҙай сурайып өлгөргән

рәйестең ялбыр ҡаштар аҫтында уйсанланып тоноҡланған күҙҙәренә төбәлде.

-- Әһә-һем... ундай иптәште... үкенескә ҡаршы...

-- Беләһегеҙ, беләһегеҙ! Ана теге, һыңарын майлап, һыңарын майламайынса, төн сыҡҡансы ике итеген әкәмәт һуғыштыртҡан; йә булмаһа, йәйге селләлә сарсап киткәс, шаҡырайып туңған боҙло йылға өҫтөнә төшөп, үҙ башын йолҡоп алып боҙға һуғып мәке уйып һыу эскән һәм шунда башын онотоп торғоҙоп ҡалдырған... — Ҡыҙ кеткелдәне.

-- Мюнхаузен?

-- Башҡорт Мюнхаузены Ерәнсә-сәсән, ил инәһе Бәндәбикәнең йәре.

-- Һем, быуа нисек, быуа нисек... Ә ниңә һеҙ уны *иптәш* тинегеҙ?

Ҡарттың тоноҡ күҙҙәрендә һис бер йылы осҡон заты күрә алмай, ҡыҙ үҙе лә етдиләнде, үҙ йомошоң төшөп килгәндә генә беләһең икән кешене, тип уйланы. Кеҫәһен уттай яндырған хатты һөйрәп сығарып, әле генә уйына килгән дорфалығын онотоп, мәсьәләне ихлас тиреп аңлатырға тотондо. Ә рәйестең көллө сабырлығын егеп ихлас тыңлауынан дәртләнеп, эскерһеҙ сабый ҡыҙҙай, моғайын, моратыма ирешәм, тип сәмләнде, әммә ул, йәш быуын, партияның һөрһөп бөткән функционеры ҡаршыһында ҡанатлы ҡоштай талпыныуын белештереп еткермәне, ахыры...

Һеҙ ҙә шәйләп еткермәнегеҙ, буғай, ҡәҙерле уҡыусым! Замананың һикәлтәле юлдарында, ергә батып бөткән ысын маяҡтар ҡатарында, иң ҡалҡыу урынға төпләнгән һәм ялтырап-балҡып ултырған «маяҡ»тар бар. Улар һәр саҡ көтмәгәндә, көтөлмәгән тәңгәлдә ҡалҡып сыға, һәм ябай юл маяҡтарынан айырмалы булараҡ, юл ҡырыйында түгел, ә уның уртаһындараҡ урынлаша. Һөҙөмтәлә заман йөгөн илткән юл арбаһының йә күсәрен, йә атының муйынын һуғылып һындыра... Ни өсөн иң ҡалҡыуға, юл уртаһына, тиһегеҙме? Сенки ундайҙарҙың мөҡәддәс бурысы — кешеләргә юл күрһәтеү түгел, ә үҙҙәрен күрһәтеү...

Башҡорт тормошоноң ошо күренеше борондан уҡ айбарланып килгәнлектән һәм, ихтимал, киләсәккә лә инде үтеп кергәнлектән, роман ҡануны биргән форсаттан файҙаланып, бөгөнгө Дилбәр һылыуҙарға һәм килер быуындарға фәһемгә беҙгә инде яҡшы таныш рәйес ҡиәфәтендәге дөйөмләшкән үлемһеҙ һынды теүәлерәк ҡылыҡһырлап бирәйек.

Шулай итеп, быуа ултыра ул һын. Әсә һөтө менән ҡуша ҡомарлыҡлы йәмәғәтселек тойғоһо ла ҡанына һеңгәнлектән, йәшлегендә үк азаматтарса шул эшкә аҙауланып һәм «иҫке донъя ҡалдығы» дингә ҡаршы йән аямай көрәшеп, ҡалабыҙҙың аллаһыҙҙар йәмғиәтен беренсе башлап төҙөгән дә уның беренсе яугир рәйесе булған, шул дәһрилек юлында йәнен фиҙа ҡылып, иҫке-моҫко ҡарашлы ата-әсәләрҙән, иҫке исем-фамилияларҙан ваз кисеү йолаһы күкрәп алған утыҙынсы йылдарҙа хатта Тәңребирҙин фамилияһын да «Дәһри»гә алмаштырған бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡеүәтле һәм оҙон ғүмерле атаҡлы шәхес – беҙгә таныш *обком беренсеһе* Вилор Иҫәрғәповичтың атаһы Иҫәрғәп Дәһри ине был. Егермене, утыҙынсы йылдарҙа ошо исем күптәргә ер тетрәүендәй тәьҫир иткән, теҙ быуындарын ҡаҡшатҡан, ә күптәрҙе ифрат алдынғы ҡарашлы шәхес, ҡыйыу эшмәкәр булыуы һоҡландырған. Дәһриҙең шул ҡыйыуҙарҙан-ҡыйыу

эшмәкәрлеге арҡаһында бит быуаттарҙың саңы менән салланған ҡартлас ҡалабыҙ, илде зәһәр ҡыуандырып тәгәрәгән мулла-монтағай салмаларынан ғына түгел, ә үҙенең «милләтселекле архитектура»һындағы «зарарлы иҫке-моҫҡо»ларынан — мәғрүр йәмиғ мәсеттәре, собор сиркәүҙәре биналарынан, эреле-ваҡлы манара һәм көмбәҙҙәренән дә мәңгелеккә арынған — урамдары майлап һыпырған сәстәй шымарып ҡалған. Әгәр бөгөн дә иҫке-моҫҡоһоҙ йәшәй алмаған ҡайһы берәүҙәр иҫке шәһәрҙең мөһәбәт бер ҡалҡыулығында динамит менән шартлатылып юҡҡа сығартылған иң боронғо таш сиркәүҙе — заманында Салауат Юлаев менән уның яугир ҡорҙаштары бикләп тотолған тарих һәм архитектура ҡомартҡыһын юҡһынып әсенә икән, белһендәр: арымаҫ-талмаҫ дәһшәтле Дәһриҙең эше был! Заманында үҙ төйәгендә ҡул һалырлыҡ иҫке ҡалмай башлағас, урғылып ташҡан илһам-ҡеүәтен ҡайҙа егергә белмәгән Дәһри сығырынан сығып киткән: сая ҡарсыға ҡанаттарын киргән килеш күрше өлкә киңлегенә шыҡыйып, Ырымбурҙағы башҡорт йорто Каруанһарай манараһын ауҙартырға башҡорт халҡы исеменән ныҡ даулашып йөрөгән... Эйе, бындай «дәһри»гә Архимедтың таяныу нөктәһен генә бирегеҙ — иҫке-моҫҡо Урал батыр исемен йөкмәгән Урал тауын да күҙ асып йомғансы түңкәреп ташларға киҙәнер! Әй ғәзиз ер, бәләкәй генә төйәгебеҙ, бәрәкәтле тупрағыбыҙ шундай самородкаларға ниндәй бай!.. Дәүерҙәр түңкәрелә, хакимиәттәр алмашына, ер-һыу тетрәп сайҡала, донъяларҙың аҫты-өҫкә килә, ләкин тамырҙары уларҙың өҙөлмәй — замананың Вилор Иҫәрғәповичтары, бирешмәҫ бәшмәк кеүек, һөрөү-сәсеүҙе лә көтмәй, көтөлмәгән бүҫерҙәй ҡалҡып сыға ла ғәләмде үҙ айышына борорға, өйрәтергә, ең һыҙғанып көрәшергә тотона... Яҡыныраҡ аранан да барлайыҡ: «мәшһүр»леге халыҡ йырында юйылмаҫлыҡ тамғаланған Абдулла-ахун. Дөрөҫ, батша хөкүмәтенең һәм ислам диненең мөкиббән илсеһе ул, әммә беҙҙең совет осоро «дәһри»ҙәренең исемлеген лайыҡлы башлай ала. Сөнки ул да үҙенә күрә иҫкегә ҡаршы көрәшсе — башҡорт халҡының ҡанына һеңгән ирек, азатлыҡ, бойондороҡһоҙлоҡ тигән «иҫкереп бөткән» төшөнсәләрҙе иҫке-моҫҡо сүплегенә бәхилләп ауҙартыусы. Ебәк тоҙаҡлы баҫып алыусы-колонизаторҙар таҡмағына йор бейеп, «беҙҙең башҡорт — күсмә халыҡ, уға ер кәрәк түгел» тип һөрәнләүсе, туған халҡының аҫаба ер-һыуҙарына «иҫке» хоҡуғын да тамам селпәрәмә килтерешеүсе шул түгелме ни?! Илдә бөйөк революция ҡубынып, батша самодержавиеһы түңкәрелеп, «халыҡтар төрмәһе» батша Рәсәйһының иҙелеүсе милләттәре үҙбилдәләнеш өсөн йән аямай ҡыҡышҡанда, шундай «дәһри»ҙәрҙең береһе “башҡорт” Ғәли Шәмиғолов, Ленин милли сәйәсәтен хас та Ленинса мәкерлекле үткәреүҙе «яңы»лыҡлы һәм йәненә яҡын күреп, Башҡортостан үҙ аллылығын бишегендә үк быуып ташлашырға ең һыҙғанып көрәшә... Автономиялы республика төҙөлөп, башҡорттоң өс диалектын берләштергән һәм сал быуаттарҙан биреле эпостарҙа йәшәп килгән дөйөм милли әҙәби телде рәсми ҡалыплаштырыу ғәме тыуғас, шул ук башҡорттоң шундай уҡ бер фән «дәһри»е балаҡ төрөп аяҡ салырға керешә, һөҙөмтәлә өсөнсө тотош диалектты «башҡорт теле түгел ул» тип мәкерле иғлан иттертеүгә, йәш республиканың өстән бер өлөшөндәге мәктәптәрҙә балаларҙы башҡа телдә уҡытыуҙы ҡанунлаштырыуға өлгәшә. Ошондай арымаҫ-талмаҫ яугир

«дәһри»ҙәребеҙ ғәрәп графикаһында яҙылған һәм шыр-дини генә түгел, ә борондан килгән халыҡ хәтерен, мәҙәниәт ҡомартҡыларын мул туплаған ата-баба китаптарын, ядкәрҙәрен мәҙрәсә һәм мәсет китапханаларынан, ябай уҡымышлыларҙың китап шүрлектәренән, ауыл ҡарттарының һандыҡ төптәренән иҫке-моҫко рәүешендә алдыртып, йөкләп-йөкләп утҡа яҡтырыуҙы йәки һыуға батырыуҙы ойоштора ла, өҫтәүенә, «тулы ҡанлы интернационалист» икәнлектәрен иҫбатлап, мәшһүр эпостарыбыҙҙың сыңрап торған сәсән телен тамырһыҙ ярым-башҡортса, ярым-татарса «милли әҙәби тел»гә күсерергә керешә... «Дәһри»ҙәрҙең дәһшәтенә түҙеп йәшәй беләһең һин, тыуған ерем!

Бына ошо арымаҫ-талмаҫ, ятып тынмаҫ, ғүмере оҙон булғыры Иҫәрғәп Дәһри, мәҙәниәтебеҙ фронтының һүнмәҫ-һүрелмәҫ йондоҙо рәүешендә абруйлы бер вазифанан икенсеһенә күсә-күсә нур сәсеп йөрөй торғас, хикәйәтләнгән осоробоҙҙа етәксе кадр мәсьәләләренең тап үҙебеҙсә хәл ителешенә нәүбәттәге тапҡыр бәхетле юлығып, әле Дилбәр имән ишеген асып кергән ошо йәмғиәт идараһының рәйесе итеп суҡайтылды, тарих һәм архитектура һәйкәлдәрен үҙенән үҙе һаҡларға тейеш булып сыҡты. Быларҙы төптән-тәрәндән белмәгән Дилбәр, сәнғәт белгесе булараҡ, идарала Дәһриҙең «уң ҡулы» ине...

Таңатарова, әлбиттә, үтә йәш һәм алсаҡ күңел булғанлыҡтан, кешеләргә бөгөнгө күҙлектән ҡарай ҙа Дәһриҙе «ҡалабыҙҙың иң хөрмәтле һәм аҡыллы етәкселәренең береһе» кимәлендә генә төҫмөрләй ине. Ғәжәпләнеүенә ҡаршы, Ерәнсә-сәсән тарихын сискән һайын, ул абруйлы етәксеһен бөтөнләй башҡа юҫыҡтан күрә башлауына инанды. Дәһри, әле уны тыныс ҡына тыңлап бөткәс, ошоно ғына күптән көтөп ултырғандай, ҡыҙҙың ауыҙын да астыртмай, берсә ҡыуанып, берсә янып-ялҡынланып һөйләй башланы, тик... бөтөнләй бүтән үҙәндән ағыла ине «тос» фекерҙәре. Баҡһаң, ҡалабыҙҙың бер яҙыусы эҙәрмәне онотолоп бөткән ниндәйҙер сәйәхәтсе йәһүд Альбановтың бында тыуып үҫкәнлеген асыҡлаған имеш. Элекке өй урынында хәҙер туғыҙ ҡатлы яңы торлаҡ йорт, данлы яҡташтың иҫтәлеген шунда мәңгеләштереү бурысы тора. Ләкин йорттоң стеналары үҙе үк шып-шыма тимер-бетон таштаҡтанан, шуға өҫтәп дүрткел таштаҡта ҡағыу — майға май яғыу кеүегерәк булмаҫмы? Өҫтәүенә, ҡалабыҙҙа яҙыулы таҡталар зерә күбәйеп китте, гелән генә шаҡмаҡлайбыҙ ҙа ҡағабыҙ, форма төрләндереү яғын иғтибар үҙәгенән ысҡындырҙыҡ: Альбановтың тулы һынын һынландырып бронзанан ҡойоу хәйерлерәк булмаҫмы? Шуның өсөн, мәңгеләштереүҙе юллап хөкүмәткә инерҙән алда, ҡәҙерле Дилбәр һеңлекәш, художник-скульптор булараҡ, беҙгә ошо изге маҡсатты моделләштереп кәүҙәләндерергә ярҙам итмәҫме икән, йәғни зирәк фантазияһын һәм оҫталығын егеп?

-- Был маҡсат, ысынлап та, изге, тине Дилбәр, боҙ илдәренә сәйәхәтсенең иҫтәлеген мәңгеләштереүҙе һис шикһеҙ бойомға ашырырга кәрәктер. Мәҡәлдә әйтелгәнсә, бер кем дә онотолмаһын. Әммә уны үҙ иңенә башҡа берәү алмаҫмы — ҡалала скулпторҙар ҙа, рәссамдар ҙа етерлек. Ә Дилбәр иһә хәҙер, әгәр ҙә хөрмәтле рәйес ағай мәрхәмәтле иғтибар итһә, бик мөһим икенсе бер мәсьәләне күтәреп инде бит бында.

—Бәй, ниндәй икенсе мәсьәлә? — Ысын күңелдән аптыраны рәйес,

әйтерһең, Дилбәрҙең уға беренсе ауыҙҙан мөрәжәғәте булманы.

— Ерәнсә-сәсәнде әйтәм.

-- Әкиәт бәндәһе бит ул, һеңлекәш, хе-хе-хе!

-- Ни һөйләйһегеҙ, ағай?! — Ҡыҙҙың күҙҙәре аҡайҙы. — Әкиәт бәндәһенең кирбестән һалынған кәшәнәһе, йәки таш буралған ҡәбере була тиме ни? Теләһәгеҙ, үҙегеҙҙе алып барып күрһәтәм!

-- Күрмәһәм дә беләмен. — Рәйестең тоноҡ күҙҙәрендә һалҡын томан ҡуйырҙы, йөнтәҫ ҡулына бер ус ҡағыҙ эләктереп һелкене. — Бына улар, Ерәнсә ауылынан яуған бер ҡосаҡ ялыу. Дөрөҫ, һүҙемде кире алам: Ерәнсә лә, Бәндәбикә кеүек үк, тарихта булған бәндә, ләкин беҙҙең көндәр өсөн уның ни әһәмиәте? Ҡотоп юлдарын асҡанмы ла геройлыҡ күрһәткәнме?

-- Кеше күңелдәренең ҡотобон асҡан ул. Сал быуаттар төпкөлөндә көн итеп, ошо көндә лә беҙ шарҡылдап көлөрлөк һәм йәш сығарып әрнерлек үткер сәсән һүҙен сәсеп ҡалдырыу — ҡаһарманлыҡ түгелме? Әгәр улайға китһә, уның быуаттар боҙлоғо аша сәйәхәте ҡотоп боҙҙарына сәйәхәттән ни ере менән кәм?!

-- Беләһегеҙме, кемде кемгә тиңләйһегеҙ? — Рәйес тороп ук баҫты.— Һаҡ булығыҙ, һеңлекәш. Етмәһә, *иптәш* тип өндәшәһегеҙ... хан заманындағы һөлдәгә. «Иптәш» ул партиябыҙҙың мөҡәддәс һүҙе икәнен онотмағыҙ.

-- Атаҡ-атаҡ, Ерәнсә-сәсән осоронда был һүҙ әллә булмаған тиһегеҙме? Таш быуаттан килгән һүҙ.

-- Таш быуатҡа төшмәйем, әммә Ерәнсәгеҙ тирәһенән үткән быуаттың емтек еҫе тарала.

-- ?!

—Аптырамағыҙ, һеңлекәш, башығыҙ йәш шул әле. Был мәсьәлә менән ныҡ шөғөлләндем. Бына совет археологы Нияз Мәжитовтың һәм уның коллегаларының фекере: мосолмансылыҡ осоро. Бына Ерәнсә ауыл Советының мөһөрләнгән ҡағыҙы. «Ерәнсә-сәсән ҡәбере» тип аталған уба ошо көндәрҙә мосолман дине фанатиктарының тупланыу төйәгенә әйләнде, шуны бөтөрөү сараһын күреүҙе ауыл һәм район халыҡтары һорай», — тип яҙалар. Бына шулай, Таңатарова һеңлекәш. Үҙегеҙҙе ни ҡәҙәр ихтирам итһәм дә, юлламағыҙға хуплап ҡул ҡуя алмайым. Ислам дине еҫе аңҡый ул Ерәнсәгеҙҙән...

Күҙҙәренә йәш төйөлгән юллаусы, хистәре тышҡа урғылыуҙан тыйылып, Дәһри янынан сыҡты — бейек суйын баҫҡыстан нисек елтерәп төшөүен белештермәне. Баяғы Басир менән ҡыҙышып телләшеүҙән һәм быдағы көтөлмәгән кисерештән башҡайы зыңҡый ине. Күгәрсендәр һырып алған Ленин һәйкәлен уратып йөрөй торғас, күңеле асыла төшөп, ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап Культура министерствоһына йүнәлде, ул уның үҙенең оҫтаханаһы урынлашҡан бина менән ут-күрше — майҙан аша ғына ине. «Егет үҙебеҙҙеке — ҡулынан килгәнде эшләр!» — булды ҡыҙҙың уйҙары. Егет тиһә лә, министр инде утыҙҙы уҙған — ике бала атаһы булырға өлгөргән, әммә һаман үҙенең егет килбәтендә ҡала бирә кеүек ине. Бәлки, маңлайына һәлендереп таралған туҙғыу ҡоңғорт-һары сәсенән һәм теләктәшлек белдереп баҡҡан сағыу күм-күк күҙҙәренән, егеттәрсә килешле буй-һынынан бөркөләлер был тойғо, бәлки, егетлек эшләргә әҙер торған йомарт күңеленәндер. Дилбәрҙе ул студент оҫтаханаһындағы эштәре

буйынса белә, баһалай, яйы тура килгән һайын «минең буласаҡ кадр» тип атай ине. Был юлы ла иғлан итмәй ҡалманы:

-- О, минең кадр!

-- Кадрын кадр ҙа ул, тик булырмы һуң ҡәҙер?

-- Маэстро, мине рәнйетәһегеҙ... Түрҙән рәхим итегеҙ, ултырығыҙ.

-- Рәхмәт, әле яңы ғына *ултырып* сыҡтым.

-- Ҡайҙа, ни өсөн?

-- Дәһри ағай *ултыртты* Ерәнсә-сәсән өсөн.

Министр шарҡылдап көлдө:

-- Уныһы ғына ярай. Юҡһа мин Ерәнсә-сәсән үҙе ултыртҡандыр тигәйнем. Беләһеңме уның нисек Әлми ханды, кәкере ҡайынға терәтеп, төп башына ултыртҡанын? — Яуабын да көтмәй, Дилбәрҙәр яғында киң билдәле тарихты һөйләп ташланы. — Бына шул Әлми хандың, ҡарт төлкөнөң, Ерәнсә кәләше Бәндәбикәнең тап бына һинең кеүек һылыулығын күреп иҫе китмәһенме. «Ниңә быңдай гүзәл сәскә хан баҡсаһында түгел, ә сәсән түтәлендә?!» — Зәһәр көнсөллөк бөрөп ала хакимдарҙың йөрәген. Заманының йола ҡануны был тәңгәлдә уҡҡа ҡаршы — уҡ, һүҙгә ҡаршы һүҙ атып эш йөрөтөргә ҡушҡанлыҡтан, хан сәсәнде сәсәтерлек бойороҡ-һүҙ уйлап таба, шуның менән Ерәнсәне төп башына ултыртып, Бәндәбикәне алып китергә тамшана. Бына бер заман ҡайҙалыр яуға барышлай ул Ерәнсә-сәсән йәйләүенә һуғылып, атынан да төшмәҫтән, бер генә һорау бирә:

-- Бер ҡапҡанда ни тәмле?

-- Йомортҡа, — ти Ерәнсәсәсән һәм Әлмиҙең саң туҙғытып сабып киткән арғымағының ҡойроғон ғына күреп ҡала. Шунан һуң бер йыл үтә, яуҙан ҡайтып килеүсе хан тағы сәсән йәйләүенә һуғыла, нәүбәттәге мәкерле һорауын бирә:

-- Ни менән?

-- Тоҙ менән, — ти Ерәнсә-сәсән һәм хандың яман төңөлөп, уғата ярһып олағыуын ғына күреп ҡала. Ул да булмай, күпмелер ваҡыт үтеүгә, хан көтөүселәре Ерәнсә-сәсәнгә бер көтөү һарыҡ тәкәһе ҡыуып килтерә лә хандың ҡаты фарманын ишеттерә: «Киләһе йәй мин килеүгә ошо тәкәләрҙе бәрәсләтеп ҡуй!» Сәсән ҡайғыға төшә — әҙәм балаһы үтәрлек эшме ни был! «Ҡайғырма, — ти һылыу Бәндәбикәһе, — баш һау булһа, башҡа бүрек табылыр!»

Киләһе йәй килеп етә, йәйләү юлында хан арғымағы күренә.

-- Тиҙ генә тирмәгә ин дә, юрған бөркәнеп, тулғаҡ тотҡандай аҡырып-баҡырып ят, аръяғын үҙем белермен, — ти Бәндәбикәһе. Бына хан килеп етә, Бәндәбикә йүгереп сыға.

-- Ҡайҙа үҙе? Ниңә мине ҡаршыларға бисә-сәсәһен ебәрә? — ти Әлми.

-- Ишетмәйһеңме ни, ханым, ана ҡайһылай аҡыра! — ти йор ҡатын.

-- Ерәнсәгә ни булған, әллә тереләй тиреһен һыҙыралармы?

— Ерәнсә сәсән тирмәлә бәпесләп ята.

-- Бәй, — хан телен тешләргә өлгөрмәй — әйткәне теш араһынан атҡан уктай ыҫҡына, — был ни һүҙ, ир кеше бәпесләйме ни?!

-- Ә һарыҡ тәкәһе бәрәсләйме һуң?! — Бәндәбикә лә мәргән уғын ҡаршы атып өлгөрә. Шунда гына Әлми телен тешләп өҙә яҙған да, Бәндәбикәне

эләктереүҙән мәңгелеккә төңөләп, йәйләүҙән сығып тайған, ти... — Министрҙың күҙҙәре осҡонланды. — Күрҙегеҙме, нисек ултыртҡандар хан тиклем ханды!

-- Күрәм, Ерәнсә-сәсәнде һеҙ ҙә яратаһығыҙ. — Дилбәр ҡәнәғәт йылмайҙы.

-- Бәй, уны яратмаған кем бар икән һуң?

-- Бына шул беҙ яратҡан сәсән беҙҙән ярҙам ялбара. — Дилбәр эштең айышына төшөндөрөп бирҙе.

-- Эйеее, бына был — мәсьәлә... өҫтәүенә, *яңы беренсебеҙ* ажарланғанда...

-- Вилор Исәрғәпович, тип аңлайыммы?

Министрҙың яҡты йөҙөн ихлас һағыш шәүләһе томаланы:

— Их, нисек ярҙам итергә был мәсьәләлә?..

-- Беренсенән, мәҙәниәт һәйкәле тип иғлан ҡылығыҙ.

-- Ҡәберҙеме? Был бит... — Министр, тулҡынланып, тартмаһынан ниҙер аҡтарҙы, таба алмай, ҡыҙҙың күҙҙәренә ҡарап аңлатты.— Был бит... беләһегеҙме, нимә?! Хәйер, мин үҙем дә аныҡ ҡына белмәйем — кем сисергә тейеш был мәсьәләне: фәнме, әллә совет органдарымы? Һәр хәлдә, мин башлап тотонорға хаҡым да, дарманым да юҡ, аңлайһығыҙҙыр мине? Бына әгәр берәй бина, мавзолей һымаҡ ҡомартҡы булһа икән...

-- Улайһа, Бәндәбикә кәшәнәһен ниңә ташландыҡ хәлдә ятҡыраһығыҙ? Ел-ямғыр һәм ваҡыттың рәхимһеҙ ҡамсылауы аҫтында?

-- Быны Фәндәр академияһы филиалының институтынан талап итергә кәрәк — улар соҡоп сығарған да ташландыҡ хәлдә ҡалдырған... Их, әгәр Фәндәр академияһы филиалы һеҙҙең урында булһа, беҙгә үҙе рәсми ҡағыҙ менән юллап керһә икән... Ерәнсә-сәсән тураһында, тим.

-- Һин тот та мин тот, була инде, улайһа. — Ҡыҙҙың ауыҙы турһайҙы. — Ошо йәштән бюрократ булып бөткәнһегеҙ...

Министр үпкәләмәне:

-- Матбуғатта ҡуҙғатығыҙ, булмаһа. Ризамын, изге эш өсөн дөмбәҫләнергә әҙермен — минең башҡа ла кирбес менән тондороғоҙ, ҡәҙерле Диләфрүз туташ, кәшәнә есөн Хәкимуллиндың түбәһен күптергәндәй!

-- Нимә-нимә?!

-- Бына һеҙгә минең буласаҡ кадр, әллә бөгөнгө гәзитте лә күрмәнегеҙме? Унда бит һеҙҙең елле фельетон сыҡҡан! Ҡотлайым! — Баҙабыраҡ ҡалған ҡыҙға өр-яңы баҫманы тотторҙо. — Һибә ҡылам үҙегеҙгә, алығыҙ.

-- Рәхмәт. — Дилбәр һушын тиҙ йыйҙы. — Шулай ҙа һеҙ бюрократҡа әйләнмәй тороғоҙ әле, хушығыҙ!

-- Быуынһыҙ урынға бысаҡ салалар бит, әй... — Рәнйегәндәй ҡалды бүлмә хужаһы. «Ысынлап та, тип уйланы Дилбәр, асфальттағы бысраҡ ҡарҙы үксәһе менән төйгөсләп, быуынһыҙ ерҙән быуын эҙләп маташам, ахыры, мин. Министрҙың ғына ҡулынан килә торған түгелдер, юғарынан ҡушылмаһа, ә уларға фәндең тос һүҙе кәрәк. — Гәзиттең икенсе битендә үҙенең имзаһын һәм профессор Хәкимуллиндың фамилияһын күреп, йөрәге «жыу»! итте. — Тағы ла шул Хәкимуллин, Хәкимуллин... Ниңә әле һуңғы арала Хәкимуллин менән юлдар сатрашлана?..» Оҫтаханаһына инеп йомолорға ашыҡты.

## УН ИКЕНСЕ СӘХИФӘ

Ауыҙлығын тешләп елгән ярһыу ат-«Волга» тимер юл күпере тәңгәлендә Ағиҙелдең бейек тауынан төшөп, бетон менән көпләнгән яр ҡылы буйлап көнсығышҡа, Ырымбур күперенә ҡарай осортто. «Ярлауыҡ. Йәштәр ресторанны» тигән аллы-гөллө таныш яҙыу янда йылпылдағас, тиҙлеген кәметеп, күпер моронproperties уңға боролоп, ҡатыны янына һуғылды асыҡҡан Мотал — Димустан дуҫы әйтмешләй, «фирменный»ын һемерер...

Ҡыҙыл башҡортто иҫләгәс тә ирҙең кәйефе ҡырылды: уны иртәгә ҡунаҡҡа саҡырыу бойороғон үтәмәүҙе Мөхлисәһе ҡайһылай ҡабул ҡылыр?.. Ресторан алдындағы майҙанға килеп туҡтағас та, машинаһынан сыҡмай, бер талай уйға сумды, ниһәйәт, ни булһа шул булһын тип тәүәккәлләп, неон яҙыу аҫтынан эскә уҙҙы. Матур урын, гүзәл ҡоролма — ҡатынының маһайырлығы ла бар. Нәфис зауыҡлап биҙәлгән залдары ғына ла ни тора! Шулай ҙа Моталдың бында күңеле тартмай — ҡатынының һомғол һынына мул аҫылған балҡышлы алтындар кеүек, бинаның да тәбиғи күркәмлеген ялтыр буталдар менән мауығыу боҙғандай... Директорҙың ошоларға контраст булырҙай ябай ғына йыһазландырылған, мәгәр иркен һәм ыҡсым эш бүлмәһенә турыланы ул. Мөхлисәһе түҙемһеҙләнеп унан хәбәр көтөп ултыра ине буғай — ғәмләнгән ҙур болан күҙҙәрен төбәлдереп ҡаршыланы:

— Абау, балтаһы һыуға батҡандай, ҡайһындай ҙа уйсанланып киткән булғансы үҙе! Ниндәй ғәмдәр йәтмәһенә тарыны икән, алтыным?

Мотал хәләл ефетенең, супылдатып алыр өсөн ҡыпһыуырҙай ослайып килгән, ҡан буялғандай алһыу-ҡыҙыл иннекле ирендәренән янтайҙы, зиһенен көскә йыйып, мөмкин тиклем йомшаҡ итеп өндәшергә тырышты:

—Уйҙарым — шул: үткәндең осон бөгөнгөгә, бөгөнгөнө киләсәккә ялғарға ине, көмөшөм.

Мөхлисә лә, йәшерен һалҡынлыҡ тойоп, ҡырҡа ситкә тайпылды, күңеленә үрмәләгән ятһыныулы тойғоно, үпкә ҡатыш йәберләнеүҙе һиҙҙертмәҫкә тырышты:

-- Үткәндәргә салауат, тип әйткән түгелме совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами?

-- Кем өсөн бит һәм ниндәйерәк үткән бит. Бына әле Хөппөлгәрәй еҙнәйеңдең гонаһ шомлоҡтарын аҡтарып ҡайттым.

-- Ләхәүлә!..

-- Ер-һыуҙарҙы ағыулап, тирә-яҡ мөхитте ҡоротоуына, ниһәйәт, сик ҡуйылырға ваҡыт.

-- Хөппөлгәрәй еҙнәйемдә ни ғәйеп — үҙеңдең бәлшәүик атайың төҙөп ҡалдырған завод таһа! — Ҡатынының тел төбө тәрән телде. — Һәм һин уға ни ҡылырға уйлайһың?

-- Фашларға ла хөкөмгә тарттырырға.

-- Кемде?

-- Атайымды түгел инде, әлбиттә.

Хәләл ефет сынаяҡтарҙы шалтыр-шолтор килтерҙе.

— Абай бул, Яубаҫаров бөкрөһөн төҙәтәм тип, үҙ билеңде һындырма. Ике туған бажаң икәнде оноттоңмо? — Үҙәгенән ҡалтыранды. — Ыстырам, хәҙер ннде апайым күҙенә күренергә лә оят... Ниңә тыпырсынаһың? Әллә үҙеңдең ғәмдәрең баштан ашмағанмы? Һуларға — һауаң, эсергә һыуың етмәйме?

-- Эштәр шул көйө барһа, ысынлап та етмәйәсәк. Еҙнәйең урғылтҡан һәм быҫҡытҡан ағыуҙарҙан тонсоғоп үләсәкбеҙ. Атмосфера ғына түгел, рухосфера бысрана – инде рухосфераны ла дауаларға кәрәк! Кисектергеһеҙ ҡаты саралар күреп!

-- Һантый! Яңғыҙ ҡарға ҡарҡылдап яҙ килтерәме?! Рәсми органдар ни ҡарай?

—Барыһын да органдарға тапшырһаҡ, — Мотал, уйынға һабыштырырға итеп, ҡатынын яурын башынан ҡосаҡланы, — беҙгә ни эш ҡалыр ине, көмөшөм?

Ҡулы аҫтынан боландай һыпырылһа ла, тауышы йомшай төштө:

—Башҡа ҡайғың булмаһа, кемдәрҙеңдер башҡарылмаған вазифаларын йөкмәп, ауыртмаҫ башҡа тимер таяҡ, тигәндәй, башыңды ҡатырып йөрөмәсе, алтыным. Эс-бауырыңды өҙөлдөргән ғәмдәрең дә етерлек.

-- Ниндәй ғәмдәр ул шул тиклем?

-- Ҡатының, яҡын туғандарың хаҡына ҡыл ҡыбырлатырға ла иренәһең, гел генә ваҡытың юҡ, эштәр муйыңдан. «Волга»ңдың ана һөлдәһе ҡойолорға тора — әҙәм рәтле ултырып йөрөргә лә оят. Мине һанға һуҡмаһаң, үҙеңдең яҙыусы абруйыңды ҡайғыртыр инең, исмаһам. Басир ҡустыңдың, Дилбәр балдыҙыңдың хәлдәрен дә ҡолағыңа элмәйһең!.. — Бешкән сейәләй ирендәре бүлтәйҙе. — Икеһе тиң күҙ алдында үҫтеләр — кемдекеләр, тиһә, шуларҙыҡы, тиерҙәр. Инде башлы-күҙле итергә лә ваҡыт, ә торор ерҙәре юҡ. Һуҡыр һин.

-- Бәй, яңы машина алыуыбыҙға дүрт-биш йыл да үтмәгән, был ни тағы?! Ҡусты менән балдыҙҙы ла абайлайым, ниңә абайламай, ти. Был мәсьәләлә, беләһең, йөрәк менән йөрәк һөйләшә — йәштәр үҙҙәре хәл ҡыла. Үҙебеҙҙән генә алайыҡ...

-- Бында беҙ не причем! Беҙгә аҡыллы кәңәшселәр булманы.

-- Ә һин алыр инеңме ул кәңәште? — Мотал көләмһөрәне. — Хәтерлә әле: кемде тишек кәмәгә ултыртып, кем муйынына аҫылындың?

-- Һе, кемдең уйы нимәлә икән! Ярар ине лә бит Дилбәр балдыҙың да Басир ҡустыңдың муйынына барып сорналһа... Басир ҡәйнеште әйтәм, шундай уңған, шундай тилбер: йөрөгән ерендә аяғына йүрмә эләктерә белә.

Ҡатынының тел төбө нимә тумбытҡанын артығы менән аңлап, ҡаштарын һындырҙы:

-- Юҡты һөйләмә әле: Басир ҡустының сифаттары бик үк оҡшап етмәй миңә. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Дилбәр балдыҙ йәл уға, шалопайға...

-- Бына һиңә кәрәкһә, иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ... «Бәрәкалла!» тип кенә әйтәһе урынға... Танауы еҫ-коҫ тоя, ҡулы аҡса һәрмәй белә — һинеңише ыштанһыҙ философ түгел! Талант!

-- Талантлы халтурщик ул, бына кем!

Мөхлисәнең быға иҫе китмәне:

-- Силәгенә күрә — ҡапҡасы, тигәндәй, заманына күрә йәшәй ҙә белә шул. Ысын талант эйәһенең даны менән аҡсаһы бергә йөрөй ул, һинең ише түгел...

«Һиңә инеп киткән аҡсаларҙы һанай башлаһаң...» — Эстән һыҙҙы яҙыусы. Ул иҫен йыйған арала һөңгө осо икенсе яҡтан һүрҙе:

—Йәүҙәт кейәүҙе әйтәм, һимереп һикерәндәй ул. Һылыуҙарҙан-һылыу ҡатынының ҡосағында май эсендә йөҙгән бөйөрҙәй мөлдөрәп кенә йәшәйһе урында, рәхәт ҡәҙерен белмәй, ғаиләһен ҡан илата. Гөлзифа бикәсем кеүекте уға табырға әле, ай-һай! Ҡатын түгел — алтын, сберкнижка! Хәйер, был замандың ир-аттары ҡатын ҡәҙерен белмәй шул.

Бер туған Гөлзифа һеңлеһе ни ҡәҙәр ғәзиз булһа ла, кейәү-баланың да хәленә керергә кәрәк ине.

-- Тормошҡа бер яҡлы ғына ҡарайһың. Ғәйеп атта ла, тәртәлә лә барҙыр. Үҙебеҙ ҙә һандуғастар һымаҡ һайрашып ҡына йәшәмәнек.

-- Беҙҙең хәлдәр, — ҡатынының иламһырап ҡалтыранған тауышынан ятайыу һулышы бөркөлдө, — бөтөнләй башҡа, алтыным. Һинең менән мин, бахырҡайҙар, ғүмер-баҡый осон осҡа ялғай алмай интектек, бәғзеләр көрәп-көрәп алғандың төхөрөн дә күрмәнек.

Тел төбөндә әлеге лә баяғы Димустан, Ҡыҙыл башҡорт, бит бының! Мотал, мәсхәрәләнеп, ҡарашын иҙәнгә текәп, бер талай өндәшмәй ултырҙы.

-- Көмөшөм, ниңә фәкирләнәһең?

-- Нимә, байығып киттеңме әллә? Һинең ише ҡәләмғыуарҙар кәм тигәндә йыл да бер повесты, ике йыл һайын кирбес ҡалынлыҡ романды ташҡа баҫтырта, театрға пьесаһын илтеп ҡыҫтыра. Көрәп-көрәп гонорарын, премияларын ала. Ә һинең биш былтыр сыҡҡан «атаҡлы трилогия»ңдан ғәйре нимәң бар? Ун йыл буйы һаман ҡорошоп ҡатҡан роман өҫтөндә ҡағыҙ-кәләм бөтөрөп ултыраһың, етмәһә, артыңды ла уйламай, яманатлы шул Йәүҙәт кейәүеңдәй оторондо тырпайтып, донъяның көслөләре менән алышҡа киҙәнмәксеһең. Арыҫландай Хөппөлгәрәй бажаң артында ниндәй филдәр торғанын белмәйһеңме? Ҡәләмең менән төртөп кенә йығырмын тип уйлама! Былай ҙа, әллә ниндәй ғауғалы мәҡәләләрең менән түрә-ҡараны биҙҙерттең, дошман өҫтөнә дошман арттырҙың, *ҡарт көнөңдә...*

«Ҡарт көнөңдә»... Әйткәндәренең ҡалғандарына ҡарыу юҡ, ләкин *быныһы* ни тағы? Уны ваҡытынан элек ҡартайтып маташа түгелме?.. Уҙаманды, ысынлап та ҡартайып барыуын тойопмы, ытырғаныс шом биләне.

-- Беренсенән, — тине, тыныс ҡалырға тырышып, — беҙ насар йәшәмәйбеҙ. Уға китһә, үҙеңдең ата-бабаларыңдың нисек көн күргәнен уйла ла үҙеңдекенә сағыштыр.

-- Таптың сағыштырыр нәмәне!

-- Һәр хәлдә, мин үҙемдең ҡәҙерле атайым Булаттимерҙекенән ун тапҡырға арыуыраҡ йәшәйем. Уйлап ҡара: ун тапҡыр! Ҡыйышып йөрөп, ҡанын ҡойоп, совет власын үҙ ҡулдары менән яулап алған һәм төҙөгән граждандар һуғышы геройы, илде индустриялаштырыуҙың хеҙмәт ҡаһарманы, Ленин гвардияһы большевигы Булаттимер Шаһибәрәковтың улы унан ун тапҡырға артығыраҡ донъя рәхәтен күрә. Ни өсөн, ниндәй хеҙмәттәрем хаҡына?

Булаттимерҙән ун тапҡырға артығыраҡ эшләнемме? Ун тапҡырға намыҫлыраҡ, ҡыйыуыраҡ булдыммы? Ватан йөгөн ун тапҡырға ауырыраҡ күтәреп, үҙ ғүмеремдә ун тапҡырға йышыраҡ ҡурҡыныс аҫтына ҡуйҙыммы? Юҡ һәм юҡ! Фәҡәт ун тапҡырға, юҡ-юҡ, йөҙ тапҡырға нәфсемдә аҙҙырыуҙа: ашарға, эсергә, кейенергә, күңел асырға йәтешләнеүемдә торалыр минең Ватан алдындағы иң ҙур «ҡаҙаныш»!.. Әгәр бик тә белгең килһә, ошоғаса дөрөҫ йәшәмәүемә — аҙыраҡ яҙып, күберәк дәғүәләшмәүемә үкенәмен... Ә һин Яубаҫаров бөкрөһөн һыйпарға, *эсе сөрөк* өйәңкене... мөһәбәт имән тип танырға димләйһең.

-- Бәй-бәй, ниңә тәртә һындырырҙай тулайһың, әллә ышлыяң аҫтыңа ҡыҫылдымы?.. Ҡарт имәнде төкөп ауҙармаҡсы булған ужым быҙауы хәленә ҡалып ҡуйма тағы! – Танауын мышҡылдатып ситкә бороллдо. -- Уға китһә, миңә тимәгәйе, баштүбән йөрө, бабаларың һымаҡ киндер күлдәк менән ыштан, ҡайыш сарыҡ ҡына кей! Йәне һөйгән — йылан ите ейгән, тигәндәй, алабута менән кесерткән ашай күр, рәхим ит! Башҡалар балда-майҙа йөҙөп йәшәгәндә өйөңдә асығыу режимы иғлан итһәң, бәлки, донъяның аҫты-өҫкә килер, йәмғиәттә үҙегеҙ йырлаған коммунистик үҙаңлылыҡ сәскә атыр. Шуны иҫәпкә алып, моғайын, үҙеңә орден бирерҙәр йәки лауреат яһарҙар! — Ҡайтарып нимә әйтер икән, тигәндәй, ҡатыны көҙгө тирәһендә борғоланды, ҡаршы яҡтың тамам өнө тығылыуға инанып, тырт-тырт баҫып, еңеүле һуғыш ҡырынан тиҙерәк сығыу сараһын күрҙе. — Ҡабатлап әйтәм: сөрөк өйәңкене һөҙөп йығам тип, билең биртенеп ҡуймағайы, алтыным. Эсе сөрек булһа ла, ҡабығы ҡалын уның, ҡарт өйәңкенең. — Мөхлисә сәй табынын йәһәтләне. — Өҫтәүенә, шул алама Яубаҫаровтың үҙеңә атай урынына ҡалғанлығын да онотма — шуның арҡаһында бит кеше булдың. Ит изгелек — көт яуызлыҡ, тигәндәрен онотма.

Эйе, хаҡлыҡ юҡ, тип әйтеп булмай бисәһенең тылҡыуында. Атаһының яҡты исеме аҡланып ҡайтҡас, һуғыш-ғәрәсәт йылдарында уларҙың донъяла барлығын иҫләмәгән, аралары һалҡын усаҡтағы көлдәй һыуынған әүәлге таныш-белештәре, туғандары ишек ҡаға башланы. Атаһы урынына ҡалған завод директоры Яубаҫаров иһә электән үк уларҙы ташламағайны, йәшереп кенә кеше аша ярҙам ҡулы һуҙа торғайны. Ә донъялар үҙгәргәс тә өйҙәренә үҙе килеп, буйға ҡалҡынып үк еткән Металлды, хәҙерге Моталды, ҡәҙерле остазымдың алтын ҡаҙығы тип, асыҡтан-асыҡ ҡанаты аҫтына алды. Булаттимер Шаһибәрәковтың революция тыуҙырған оло шәхес, талантлы инженер-химик, ялҡынлы большевик, төбәктәге шанлы химия промышленносына нигеҙ һалыусыларҙың береһе булыуы тураһында митингыларҙа тулҡынланып һөйләне, үҙен уның шәкерте, эштәрен дауам иттереусе тип таныны. Уланды үҙенең заводына эшкә урынлаштырып, торараҡ вузға димләне, вуздан һуң ҡабат заводына ҡайтарҙы. Студент сағынан уҡ шул заводта эш башлаған бажаһы Димустан унда оло абруй ҡаҙанып, партком секретары итеп үрләтелгәйне, дуҫлыҡтары шул йылдарҙа көсәйҙе. Мотал, белеүебеҙсә, тырышып-тырмашып, гәзит-журналдарҙа яҙыша ине; ҡайһы берәүҙәр, иҫкене иҫкә төшөрөп, йәш яҙыусы менән директор араһына «ҡара бесәй йүгертеп» ҡаранылар, атаһы Булаттимерҙең фажиғәле яҙмышында Яубаҫаров туранан-тура ғәйепле, юҡҡамы ни иртәгәһенә үк директор креслоһына менеп ултырҙы, тип игәнеләр. Мәгәр Мотал, үҙ һүҙҙәре менән

әйткәндә, ғәйбәттәрҙән өҫтөн ҡалды, «тарих саңында соҡсонорға» теләмәне. Әсәһе әйтмешләй, булған да үткән, үлән үҫкән — кәҫле сирәмде ҡуҙғалтыуҙан ни науа?..

Уның менән директор араһын, хоҙай быға үҙе шаһит, атай хаҡына түгел, ә заводтың әйләнә-тирәгә бөркөлдөргән ҡара һөрөмө, ағыулы ыҫы, ә шул гонаһ шомлоғо өсөн туранан-тура директорҙың ғәйепле булыуы ҡырҡыулаштырҙы. Ошо аяныслы хәлгә (мөхитте ағыулауға) яҙыусы һәм директор баштан уҡ икеһе ике төрлө ҡарағанлыҡтан, аралағы сик һыҙығы тәрәнәйҙе, тора-бара упҡынға әүерелде. Хәҙер инде Мотал атаһы һәм Яубаҫаров араһында ла шул упҡындың ҡарайып ятҡанлығын тоя. Тәбиғәт-Әсәгә һис ҡасан да ике йөҙлө булып булмай; ниндәй генә хөлләгә төрөнһәң дә, ул һине үтәнән-үтә күрә, ул һиндә фәҡәт икенең берен таный: йә -- мәрхәмәтле кеше йөҙөн, йә рәхимһеҙ балта һағағын. Өсөнсөһө бирелмәгән.

Мотал шул бөйөк Әсә алдында үҙенең *кеше йөҙөн* һаҡлай алдымы һуң? Әллә, тәбиғәт-Әсәгә киҙәнеүсе балта йеҙөн күрмәмешкә һалышып, йөҙ йәшереп йөрөнөмө?.. Яубаҫаровтың — атай ҡорҙашы, атай шәкерте булыуы, ҡасандыр үҙен ярлыҡауы ошоғаса, хәҙерге обком секретары Ҡыҙыл башҡорт әйтмешләй, уның намыҫын бығаулап тоттомы?.. Хаҡлыҡ яҡлап яҙғанында аҙаҡкаса күҙ йоммаҫҡа ирек бирмәнеме?.. Бына ниңә уның байтаҡ публицистик мәҡәләләрендә, фельетондарында һабансының төрәнде ҡырсып таҙартҡыс ҡарлауы урынында елпеүес күтәрелгән, балдыҙы Дилбәр Таңатарова хәтлем дә була алмаған. Моталмы был?..

Бына ялтыр ресторандың төпкөлөндә хәләл ефетенең йылы ҡулынан сәй һемереп ултыра. Күренеп тора: Мөхлисә, бизмән табағын үҙенә ҡарай самаһыҙ ауыштырғанлығын һиҙенеп, герҙәрҙе тигеҙләргә — алсаҡлығы менән ирен йыуатырға тырыша. Эш тә эш, бынағайыш, тигәндәй, һис өйҙә тороп булмай — һиңә тәрбиә ҡылырға ла әмәлем юҡ шул, йәнәһе. Өҫтәүенә, «Ярлауыҡ»тың әле үҙләштерелмәгән, ярты ҡаланы һыйҙырырҙай мәмерйә залдарының береһендә емеш-еләк, йәшелсә һаҡлағыстары ҡора башланыҡ, кооператив ысул менән. Ҡояшлы Әрмәнстандағы «Арарат» колхозы менән тығыҙ берлектә — вәкилдәре Саркисян үҙеңә мәғлүм. Һаҡлағыс әҙер булһа, ҡалабыҙҙа йәйен-ҡышын субтропика емештәре өҙөлмәйәсәк. Бына шул Армен Саркисян иптәште лә саҡырып алайыҡ, тим, иртәгә йыйылаҡ ҡунаҡ мәжлесенә, бәҫле ағай-эне ҡатарында. Энә үткән ектән еп үтә... Әйткәндәй, Басир ҡустың ҡайтып төшөүе менән үк бөркөттәй осоп килеп етте, ағайымды өҙөлөп һағындым, ти. Телефондан үҙенде эҙләпме-эҙләй, әллә ҡайҙа йөрөйһөң...

-- Асҡыс бирһәң ни булды, әллә ишектең ҡайһы яҡтан асылғанын да онотҡанмы, шалопай?

-- Әстәғәфирулла тәүбә, ҡалай тигән буласы... Кәрәкме ни уға һинең асҡысың. Ҡәҙимге ғәҙәте буйынса, ҡунаҡханала урынлашҡан, әлбиттә, уға унда тынысыраҡ та, иркен дә. Телефон төбөндә ултырам — ағайымды һағалап, нисек күрмәй түҙәйем, ти. Бәлки, үҙең шылтыратырһың — бына телефоны.

-- Әллә ҡайҙа китеп бармай, өлгөрөрбеҙ.

Мотал өҫтәлгә терһәге менән таянған килеш, башын баҫып,

«фирменный»ҙы шопорлатып һемерҙе. Һорау юҡ, кәңәш-төңәш итеү юҡ, кәйефең нисек әле һинең, тип белешеү юҡ, үҙҙәре теләгән сәғәттә ҡайта ла төшәләр, ә быныһы тота ла ҡунаҡ йыя. Илгәҙәк ҡатын күңелен күреп, яҙыу өҫтәленән ҡубынырға, табындағы йәне һөймәгән типтар менән осрашып типтерергә, ҡул бирешергә тейеш. Етмәһә, әйтмәй-нитмәй, мең саҡрымдан был шалопайын саҡырып ҡайтарған! БыҒаса өн сығармаған Басир ҡустының ни ҡыш, ни яҙ аралығында өҫкә ишелгән ҡарҙай ҡапыл ябырылыуы алъюсыҡтан түгелдер. Электән йылғыр ине. Мәскәүгә уҡырға киткәндән биреле, бурысынан ҡасып йөрөгән бәндәләй, Моталға күҙ күрһәтмәҫкә тырыша. Сөнки сүлмәктәге майҙы харамлағанын яҡшы белә йылғыр бесәй: рәссам булып етешер-етешмәҫтән үк, «оҙон аҡса» ҡолдарына тағылып, башын «шабаш»ҡа һалып, әштер-өштөр эштәре өсөн колхоз-совхоз кассаларын тунағанын ағаһы өнәмәйәсәген яҡшы белә. Фәҡәт йә берәй эш боҙһа, йә башҡа ғәме иҙһә генә, күле ҡороған суртандай, күшкәте шиңеп, туғанлыҡ хаҡын дәррәү иҫкә төшөрә лә көтмәгәндә шомтайып ҡайтып инә. Был юлы ла ҡылығының артында ғиллә барҙыр!..

Ҡатыны иһә ҡауырһындай ҡағыҙға яҙылған исемлек килтереп һалып, күгәрсендәй гөлдөрләүен дауам итә: табын күркәм булмаҡсы, ҡалабыҙҙың бынамын тигән абруйлылары, уҙамандары йыйыла...

Инде шик юҡ: Армен Саркисян булған табында, тимәк, хәләл ефет ниндәйҙер мут отош уйнарға теләй. Тик нимә хаҡына? «Машинабыҙ иҫкерҙе, яңы «Волга» юлларға ваҡыт һиңә»,— тип, ҡолаҡ итен кимерә башлағайны — әллә шуғамы?..

Ҡунаҡ исемлеге Димустан Бикләмешевтән башланыуын күреп, Мотал уғата йомолдо, ҡуҙға төшкән ҡалъя кеүек сөрөштө. Их, ҡатын-ҡатын, обком секретарын ҡайһындай өйөрҙөң башлығы яһап иң өҫкә сәпәп ҡуйғанһың, шуның яҙыҡлығын нисек белмәйһең? Исемлегеңдә күрмәйенсә лә тойған буғай йөрәгем — ярай саҡырмағанмын... Ә ҡусты менән балдыҙ тәңгәленә килгәндә... инде шалопайланырға юл ҡуймам — хәләл күкрәк көсө менән ярып өйрәнһен юлды! Хәйер, быны мин генә түгел, ә тормош һәм... — яҙыусы, тонйораған мейеһен йәшен ярып үткәндәй, күҙ алдары гөлтләп китеп һиҫкәнде, һемереүҙән туҡтаны, — әйе, романдың сюжеты шулай ҡуша! Бөтәһе-бөтәһе *рухосфераға бәйле!*

Был, бәлки, әҙип мин-минлегелер, бәлки, һөнәренең мәжбүри ҡанунылыр, әммә уның иң киҫкен тормош кисерештәрендә лә яҙыласаҡ әҫәренең сюжет ебе төҫмөрләнер, тормошо менән ижады үрелеп барыр ине. Һәм бына шул ҡанун бойороуынсалыр, Мотал фекере көтөлмәгән юлаҡтан тәгәрләне: үҙен албырғатҡан ошо тормош ығы-зығыларын бер уҫҡа бөрөп, баш бирмәҫлек толпарҙарҙы әйәрләп, бер юлы ике ҡуян атырға — китапҡа тормошсан ике сәхифә керетергә:

мәжлес табынына үҙе бармайынса һәм, әлбиттә, Ҡыҙыл башҡортто ла саҡырмайынса, ҡатынының хәүефле ҡунаҡ уйынын үҙгәртергә, шуның менән табындағылар рухосфераһын дөйөм рухосфераға һәм роман сюжетына лайыҡлы йүнәлешкә борорға;

әллә ҡасандан йәне-тәне, аяғы тартҡан Иҙелбаш — Инеш удар тимер юл төҙөлөшөнә олағып, тыуған ерҙең ҡайнап торған хеҙмәт һулышын тойҙортҡос өр-

яңы сәхифә өҫтәргә...

Мөхлисә сәй табынын йыйыштырҙы:

—Иртәгә дуҫтар түңәрәгендә һәүетемсә ултырып гәпләшерһегеҙ, уртаҡ тел табырһығыҙ — Яубаҫаров та, Бикләмешев тә була бит.

Эй ғүмер!.. Ҡатынының ошоноң ише киҫәтеүҙәрен ҡолаҡҡа элмәүе арҡаһында нисәмә-нисә тапҡырҙар янғаны бар... Ҡыҙыл башҡортҡа еңел ул, яҙыусы — йәмғиәттең намыҫы, ҡанһырап торған яланғас нервы тамырҙары, тип лаф ороу, ҡайҙа яугир публицистикаң, тип таптырыу. Үҙе Мотал урынында булып ҡараһын ине!.. Был юлы ла яҙмыш үҙе, Мөхлисә ауазы булып, уны ҡурсаламаймы? Күрәләтә башыңды утҡа тыҡма, тип...

—Ниңә телеңде йоттоң, әллә ишетмәйһеңме? Димустан ҡорҙашыңды саҡырып ҡайттыңмы, киләме, тим?

Мотал сығырға йәһәтләнде:

—Бөгөн мин дә һуңлап ҡалам, юғалтма. Көнсыуаҡта түбәләрҙән тамсы тама башланы — дачаны байҡаштырып ҡайтырға кәрәк. Юҡһа былтыр ҙа, ҡар баҫып, веранданың ҡыйығы емерелде. — Ишекте асыр алдынан ғына өҫтәне: — Ҡыҙыл башҡорт табында булмаясаҡ. Обком кешеһен беләһең — һәр минуты иҫәпле, пленумға әҙерләнә, яңы һепертке һыҙырып һеперә, ти. Әйткәндәй, иртүк мин дә районға осоуым ихтимал — бюро бойора! — Бүлмә уртаһында һалҡын боҙһылыу ҡатырып ҡалдырып, ишекте һаҡ ҡына япты.

## УН ӨСӨНСӨ СӘХИФӘ

Бурап-бурап яҙғы ябалаҡ ҡар яуа, ярылы ҡаҙ тәпәйеләй эре-эре һалмаларын ҡаҡ елкәгә тултыра. Мотал Шаһибәрәковтың тынғы бирмәҫ бер туған кейәүе, Тарих һәм филология институтының кесе ғилми хеҙмәткәре Йәүҙәт Әғләм улы Ҡондоҙбаев, елләнеп, өйҙән шарфһыҙ олаҡҡан, ҡулына ла киймәгән: иң ҡәҙерле нәмәһен — ғилми бина бураһының тәүге нигеҙ бүрәнәләре, ниргәһе, һалынған портфелен генә яланғас ҡулына эләктергән. Гөлзифаһы менән нәүбәттәге ыҙғыш һөҙөмтәһендә, үҙ-үҙен белештермәй, артын да һис уйламай, йылы өйҙән атлығыуын үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Бына хәҙер арҡа буйлап һыу йүгерә, бармаҡтарҙы ҡар һалҡыны сәңкетә... «Тәкәләре төкөшкәндә» Йәүҙәт Әғләм улы йәнә бер иң ҡәҙерле нәмәкәйен алырға онотмаған — пальтоһының түш кеҫәһенә уттай ҡыҙыл тышлы китабын тыҡҡан. Тышлығында эре зәңгәр хәрефтәр менән шаҡырайтылған бисмилла: «Ел-Дауыл». Бер юлы китаптың да, авторҙың да исеме. Дөрөҫөрәге, был «Ел-Дауыл» — Йәүҙәт Әғләм улының шағирәнә ләҡәп-псевдонимы. Уның бынан биш йыл элек донъя күргән, «тәүге һәм һуңғы шиғырҙар мәжмүғәһе», Мотал ҡайнағаһы әйтмешләй. Ә ҡайынбикәһе Мөхлисә ханымдың нарығына күскәндә, «тилелек ғәләмәте». Портфелендә ятҡаны ла шундай уҡ бер «тилелек» — уны, бәлиғ булған баланы, «алйытып ошо хәлгә килтереп еткергән» (быныһы — ҡәйнәһенең аянысл һүҙҙәре!) тарих буйынса хеҙмәте. Дөрөҫөрәге, хеҙмәттең даулы башы. Дауамы иһә алдараҡ — авторына үлемесле бәрелештәр вәғәҙәләй. Сөнки ул, «ауыҙына

ҡаптырылған һары майҙы ла йота белмәгән ахмаҡ» (быныһы — ҡатынының телтамғаһы), ана шул «шыр-тилелегенә», «алйотлоғона», «ахмаҡлығына», «һантыйлығына» барып, донъялағы көтөү-көтөү кандидатлыҡ, өйөр-өйөр докторлыҡ дәрәжәләрен «һәп!» иттереп алыусыларҙың юлтүтәләнеп тапалған һәм «асыҡ Сим-Сим ҡапҡаһы» төбөндә саңы борҡорап ятҡан таҡыр юлынан бармайынса, «күҙе-башы аларып», тарих фәнендәге шырлыҡ, тау-таш араһынан һуҡмаҡ ярырға киршәлде. Ауыҙ бешерә-бешерә фән юлында аҙау теш үҫтергән эшем эйәләре уны аҡылға ултыртырға тырышты-тырышыуын: «Фән кандидатлығына диссертация яҡлау — үҙеңдән элекке йөҙ бәндә һеләгәйләп көйшәп ташлаған сүбәкте йөҙ ҙә беренсе тапҡыр сәйнәп ырғытыу ул. Сүбәк сәйнәп май сыҡмай, әммә фән дәрәжәһе сыға!». Уның һайын Йәүҙәт Әғләм улының оторо киреләнә барыуынан йөҙәгәс, шул уҡ юлда күҙе сыҡҡан иң яҡындары, уны ҡотҡарырға теләп: «Кесе ғилми хеҙмәткәр генә башың менән елгә ҡаршы төкөрмәк — *концепцияға* ҡаршы бармаҡ булдыңмы? Һинән ғәйреләр баҙнатсылыҡ итмәй быға — Хәкимуллин уҙаман ҡорған ҡамыш ҡыуыш эсендә тыныс һыйышып йәшәй. Елгә ыңғай һыҙғырһаң — ауыҙ-мороноң май булыр, елгә ҡаршы төкөрһәң — ауыҙ-мороноң ҡан булыр!»—тип тә киҫәтеп ҡаранылар. Ошоларҙың һөҙөмтәһе булып тыуҙы, әлбиттә, ғаилә усағындағы был ҡыйралыш... Иҫе лә китмәҫ ине лә, үкереп илап ҡалған кескәй Морат-улы бәғерҙе ҡанһыратмаһа...

Бурап-бурап ҡарҙар яуа, Йәүҙәт Әғләм улы киске ҡала урамында тинтерәп бара.

Ысынлап та, нимә ошо хәлгә килтереп еткерҙе әле уны? Кирелегеме? Ҡатынымы? Әллә үҙенең тормош башын дыуамал ҡороуымы?

Эйе, ғүмер буйы орҙоло-бәрҙеле йәшәне шул.

Ауылдаштары фекеренсә, сүптәй генә ғәр-үпкәһе өсөн тунының тиҫкәреһен әйләндереп, атай нигеҙен алтын ҡаҙыҡтан мәхрүм ҡалдырып олаҡты — ҡаланың таш урамдарында аҙып-туҙып йөрөнө.

Ҡалалағы иптәштәренең шаяртып тумбытыуынса, әҙәбиәткә лә һис кем һағынып көтмәгәндә һәм көтмәгәнсә, «пландан тыш килеп ингән мал» булды, шуға ла йәлсемәне.

Тарихҡа ла алдан һыҙылған уңай юл, айыҡ иҫәп менән тотонманы, фән үҙе утлы һулышына һурып алды.

Туҡта, әллә никах тигән нәмәһе иҫәп-хисаплы һәм планлы булдымы — абруйлы әҙиптең бер туған һеңлеһе Гөлзифаға йөрәк хаҡына түгел, икмәк өсөн өйләндеме?..

Йәмле Һаҡмар буйындағы шөңгөр Ҡаҫмарт тамағының һыуын эскән ирәүән генә ауылынан, һуғыш инвалиды атай һирәк-мирәк хаттарында йәберһенеп яҙыуынса, «бөтә донъяһын онотоп, башына тай тибеп» сығып китте шул... Ярай әле дыуамалланған сағында ла төтөнө тура йөрөнө — ҡалаға морон тертөү менән үк заводта эшсе араһында ныҡынып, ситтән тороп уҡыуға урынлашты. Ғөмүмән, стихия ҡосағында йөҙһә лә, яҙмышының иң-иң хәтәр мәлдәрендә иң дөрөҫ ҡарар ҡыла ла шул ҡарары юлынан, ауыҙ-мороно ҡанланһа ла «киреләнеп», тоғро дөрә торған ғәҙәте бар уның... Ләкин нимә тартты егет

йоратын Гөлзифаға? Һылыулығымы? Әллә, бәғзеләр ғәйбәтләүенсә, яңы ғына ауылдан килгән «тиле-миле» шағир егетте ҡыҙыйҙың — элек илдә ныҡ танылған ауылдашының йәғни ғүмере иртә өҙөлгән инженер-химик Булаттимер Ташбулат улы Шаһибәрәковтың алтындай төпсөк балаһы булыуы, әсәһе ҡарсыҡ менән генә бай йыһазлы, өс бүлмәле айырым фатирҙа тороуы, аҡсаны көнбағыш ҡабығылай көрәп алып туҙҙырыуы, өҫтәүенә, уның урам аша йәшәгән Мотал ағаһының да муслы яҙыусы икәнлеге арбанымы? Бауыр терәп, ҡан түкмәй генә ныҡлы аяҡка баҫыр өсөн, йәш шағир шул таяныстан файҙаланырға иттеме?.. (Ҡалала бит былдай хәлдәр булғылай...)

Көндәрҙең береһендә, нәфис һүҙ оҫталарының республика конкурсында, әйтерһең дә, күк ҡабағы асылып китеп, фәрештәләй бер туташ хасил булды. Сәхнәгә ул күкте ярған яҡты Зөһрә йондоҙолай атылып килеп сыҡты, һис кенә лә көтмәгәндә Ел-Дауылдың уттай ҡыҙыл тышлы китабын югары сөйөп тотоп, Жанна д'Арк кеүек ғорур, сая ҡараш, рухлы тауыш, көслө талпынышлы янып, иҫ китмәле нәфислек менән шиғырҙарҙы гөрләтте. Йомғаҡлау кисәһенән һуң ҙур табын мәжлесендә Ел-Дауыл ҡыҙ менән ныҡлап яҡынлашты – тик шунда ғына Гөлзифаның мәрхүм атаһы — ауылдаш, ә танылған яҙыусы Мотал иһә ҡыҙҙың бер туған ағаһы икәнлеге, Гөлзифа иһә әсәһе Ғәзизә ҡарсыҡ менән икеһе генә өс бүлмәле фатирҙа донъя көтөүҙәре мәғлүм булды. Сәмләнеп алған халайыҡ бейергә төшкәс, Гөлзифа менән Йәүҙәт тә, терегөмөш тамсыларылай берегеп, ҡулға-ҡул тотошоп әйләнде. «Шағирым, беләһеңме, һин кем? Һин — берҙән-бер, һин — ҡабатланмаҫ, һин — даһи!» — тип иҫертеп шыбырланы ҡыҙҙың теремек, сейә-алһыу ирендәре...

Ҡом сүленә ырғытылғандай сарсап уяныр китеүгә, ап-аҡ йәймәле карауатта кемдеңдер аҡ күкрәгенә башын һалып ятыуын шәйләне Ел-Дауыл...Кисә үҙен тилерткән алсаҡ туташ — ҡул етмәҫ Күк ҡыҙы Гөлзифа ине был... Өй — аулаҡ: әсәһе ҡарсыҡ ошо көндәрҙә Ташкент яғында ҡунаҡта йөрөй имеш...

Көнө еткәс ялпылдап ҡайтып төшкән ҡарсыҡ шул арала ҡыҙ ҡуйынында эҫенеп өлгөргән Ел-Дауылды үҙһенмәй ғауғаланды, туңаяҡ килгән «кейәү-бала» мәрхүм иренең ауылдашы икәнлеге лә иретмәне күңел боҙон. Бер туған ҡайнаға менән дә хөрт килеп сыҡты — ҡырыҫыраҡ йән икән. Ел-Дауылды йәш ҡәләмдәше рәүешендә белһә лә, ҡауышыуҙарына теше-тырнағы менән ҡарышты. Тамағы төбөнән Шаһибәрәковтар нәҫеленең металл тауыштарын сығарып зыңғылданы:

— Тура ултырып ҡырын һөйләйһе юҡ бында: һеҙ бер-берегеҙгә иш түгел. Берегеҙ — артист, икенсегеҙ — елғыуар шағир. Икеһе ике көйгә тартылған скрипка ҡылдарылай иңрәйәсәкһегеҙ. Тимәк, сәсрәп киткәндә лә, һеҙҙең тормош арбаһы тәгәрләмәйәсәк: Крылов мәҫәлендәгеләй, берегеҙ — Күккә, икенсегеҙ күлгә тартасаҡ...

Туйҙан һуң ҡәйнә йортонда Ел-Дауыл хаҡлы рәүештә төпләнеп, Гөлзифа менән икеһенең ябай тормош прозаһы башланды һәм ул күңелһеҙ башланды тип әйтмәҫ инек. Балдай татлы бәхеттәренән иҫереп, Ел-Дауыл хатта үҙенең шағир икәнлеген, шиғриәт иһә оло ҡорбан көткәнлеген: көн дә ныҡышмалы эшләргә — яҙырға, яҙырға, яҙырға, мөҡәддәс бәхет һарайын фәҡәт, бик түҙемле

ташсылай, тос һүҙҙәрҙән нык кирбестәр теҙә-теҙә, бер өҙлөкһөҙ, ауыр хеҙмәт менән генә һалырға мөмкин икәнлеген дә онотоп ебәрҙе, буғай: айҙар буйына аҡ ҡағыҙға ҡәләм осо төртмәгән саҡтары йышайҙы. Ҡайнаға әйткән Крылов мәҡәлен юҡҡа сығарыр өсөн, һандуғастарҙай һайрашып, күгәрсендәрҙәй гөрләшеп, икәүләшеп сит ҡалаларға гастролдәргә киттеләр. Талантлы шағир Ел-Дауыл менән нәфис һүҙ оҫтаһы Гөлзифаның аллы-гөллө батмус ҙурлыҡ баштары төшкән афишалар эленде, кассаларҙа оҙон сираттар торҙо, уның һайын икәүҙең ҡомары артты. «Беҙҙең *морат* — үҙебеҙҙең һаҡлыҡ кенәгәһен ырыҫлатып ҡалынайтыу — әсәйҙекенән дә, ағайҙыҡынан да уҙҙырыу!» — тине Гөлзифаһы, ҡайһылыр төбәк ҡунаҡхана люксында бәхеттән алйып ятҡандарында уны йоторлоҡ үбеп. (Шуның татлы емеше булып тыуған улдарына *Морат* исеме ҡушылды). Йәүҙәткә лә был ниәт оҡшай ҡалды: никахтарын иш күрмәгән ҡәйнә менән ҡайнағанан уҙҙырып, танауҙарына сиртергә... Шуныһы сәйер: бара-тора, ил шаулатҡан шағирәнә исем Ел-Дауыл онотолоп, сәхнәләрҙән уны, ауыҙҙа һурып шымартылған кәнфиттәй, Йәүҙәт Әғләм улы тип кенә яңғыраттылар, нәфис һүҙ оҫтаһы артист тип кенә белә, алҡышлай башланылар. Аҡса иһә кеçәләргә, аҡмаһа ла, тамып торҙо, көрәлеп-көрәлеп кергән саҡтары ла булды. Һаҡлыҡ кенәгәһе ҡалынайған һайын, ҡатыны һәм ҡәйнәһенең алсаҡлығы ла артты. Был сәйер хәлдең хикмәте торараҡ асыҡланды ихлас кейәү-балаға: баҡтиһәң, ҡәһәрле утыҙ етенсе йыл шауҡымы икән дә был. Ҡөҙрәтле большевик Булаттимер ҡулға алынғандан һуң, әгәр ҙә ысын булһа, ғаилә һаҡлыҡ кенәгәһендә унан ике тәңкә генә аҡса тороп ҡалған, йәш балалы Ғәзизәгә нужа һурпаһының асыһын эсергә тура килгән. Бына шул шомло ҡурҡыныс хәл был ғаиләлә әле лә даими хөкөм һөрә, киләсәк көндөң һаҡсыһы рәүешендә, һаҡлыҡ кенәгәһенә табындырта. Ҡондоҙбаев ошоно аңлағанда — эш үткән, ҡомһоҙлоҡ уның алҡымынан алып өлгөргәйне инде...

Ҡомһоҙлоҡ тигән упҡын һаҙы бер тартһа, һурып ала икән ул. Эстрадала мал артынан, дан артынан ҡыуып алйып йөрөй торғас, шаулы тормош ылауынан шыуып төшөп ҡалғанлығын тоймай ҙа ҡалды Йәүҙәт. Башы ҡаҡ юлға «дөңк!» иткәнгә иҫенә килеп әйләнеп ҡараһа, әсе юл туҙаны йотоп тырпырап ята, ә йылғыр шиғри арба, йылғырҙарҙы ултыртып, күтәрәм үрҙән артылып менеп бара; йәйәүле ҡалған ул бахыр, шаулы Ел-Дауыл имзаһы һуғылған ҡыҙыл тышлы ҡомартҡыһын ҡосаҡлап, һаман үҙен шиғри алла, яңы донъя орансыһы итеп танытырға тырыша имеш... Ҡапыл айнып: «Ҡайҙа булдың, Ел-Дауыл? Һин бит шағир инең!..» — тине ул үҙ-үҙенә. Төпһөҙ һаҙлыҡ һымаҡ һурған ҡомһоҙ кәсеп юлынан — төшөмгә әйләнгән эстраданан ваз кисеү фарыз ине уға иң элек.

Ҡатынына өҙә һуғып әйткәс, өй эсендә көтөлмәгән буран ҡубып, ҡаршыһына Гөлзифаһы ике йәшлек улан Моратты елтерәтте:

-- И илаһым, етем ҡалырыңа шыңшыйһыңдыр һин! — Иренең йөрәген киçеп шуныһын әйткәс, суҡмарҙы төп мәрәйенә ауҙарҙы. — Ахмаҡҡа туҡмаҡ-аңра! Теге саҡта уҡ кемлегеңде белгән икән ағайым. Мин, тиле, таçма телеңә алданып, алтын һүҙҙәренә ҡолаҡ һалмағанмын. Әгәр ҙә ошо сабыйыңдың киләсәген ҡайғыртһаң, шул ҡорсаңғы Пегасыңды эйәрләп маташмаç инең!

-- Йәнем, ни һөйләүең был?! —Пегас хаҡындағы көфөр һүҙҙәре ифрат

шаңҡытты.

-- Ни ишетһәң — шул, ана тора юлың!

-- Үҙең түгел инеме: «Һин — донъяла берҙән-бер, һин — даһи!» — тип янып шыбырлаусы?

-- «Инем» шул. Һин дә «инең».

Уларҙың тормош ҡайығындағы шәре үткәргес тәүге ярыҡ ине был. Йәүҙәт, һыҡтанып, башын өҫтәлгә һалды:

-- Ниңә тереләй бәгеремде теләһең?

-- Нимә? Һинең дә бәгерең бармы ни әле, нишана?

—Нескә йөрәк ҡылдарыма балта менән сабаһың!

Ҡатыны йәш аралаш һулҡылдап көлдө:

—Уй, ҡайҙан килгән наҙлы йән! Шағир, имеш! Төләгән әтәс һин, ул да һинән шәберәк!

Бына бит: Йәүҙәт ғаилә тормошоноң әсе-сөсөһөн йотто.

—Ярай, яраға тоҙ һалышмайыҡ, — тине, ҡайҙалыр төптә, йөрәгенең аҫтында ҡабынған утты баҫырға тырышып. — Был юлы кәсеп алҡыштарына минән башҡа сығаһың. Бөттө!

Гөлзифа ауыҙын ҡыйшайтып әсе көлдө, һәҙәбе өҙөлөп тәгәрләгән күлдәк иҙеүенән ҡарҙай ап-аҡ түше бүлтәйеп сыҡты:

-- Биғәләш, шул кәсептең тәңкәләре сыңғырлап ҡойолмаһа, муйының һерәйеп йөрөп күптән аҫҡа үлер инең инде. Уйлап ҡына ҡара аҡылың булһа: кем һин? Һин бит хәҙер эстраданың да тешһеҙ ҡалған ҡомағы: минең итәккә йәбешеп кенә кемдәрҙеңдер мөнәжәттәрен тыҡыр-тыҡыр ҡайыҙлап тамаҡ туйҙырыусы тегәнәк. Киндер күлдәк тә, күп йыуһаң, уңа. Ә һинең инде шағирлығыңдан йыуырлығы ла ҡалмаған — быҙау сәйнәп ташлаған.

-- Ҡыҙым, самалабыраҡ! — Ҡәйнә тауышы, һәр саҡтағыса, күрше бүлмәнән киҫәтте. — Үтә ҡыҙылдар тиҙ уңа, тигәнде лә онотма — үҙ күлдәгең иҙерәп төшмәһен иңеңдән.

Йәүҙәт Әғләм улы күгәргән ирендәрен тешләне:

-- Минең шиғриәтте... минең шиғриәтте... иҙерәгән киндер күлдәккә тиңләйһең?..

-- Харап икән! Кисә ятып бөгөн төшөңә лә кермәгән шиғриәт!

—Үҙең харап иттең мине!

—Ха-ха, төбө тишек карап булған икән харап!.. Йыйын, тилекәйем, манжетлы күлдәгеңде кей!

Иренең күҙҙәрендә йәш мөлдөрәгәс, эштең тәрәнгәрәк китеүен һиҙемләне, буғай: уны башынан һыйпаны, йәһәт кенә, эйелеп, улын күтәреп алды:

—Һүп! Ана-ана, ҡара әле, Морат улым, атаҡайың нимә ти! — Төртөп күрәһтте. — Әстәғәфирулла! Танауының тыржыҡлығын да әсәһе менән атаһынан түгел, ә минән күрәләр әле ул! Әйт атайыңа, ниңә әннәне былай йәберләйһең, тиген. — Сабыйҙы төшөрөп ебәреп, көҙгө алдында борғоланды, иҙеү төймәләрен элде, сәсен ипкә килтерҙе. Болан балаһылай, буй-һынын уйнаҡлатып, иренә килеп һырлыҡты, Күк теҫөндәге ҙур күҙҙәре менән убылып, ал буяулы ирендәрен

ослайтып, танау буйынан наҙланып мөңтөрләне: — Йәүҙәтик, йәнем, ниңә туҙынаһың былай? Ни булды? Әллә ҡәҙерле атайың менән әсәйеңде үлтерҙеләрме?.. Йә, бер генә үпәс итсе әле үҙемде!

Балдаҡтай бүлтәйеп-түңәрәкләнеп яҡынлап килгән сейә-алһыу ирендәр иргә тәү тапҡыр йылан һемәгеләй күренде, үҙ-үҙен белештермәй, усы менән сәпәне... Гөлзифа, һис ни аңғара алмай, оҙон зәңгәр керпектәрен сырт-сырт йомоп торҙо ла, ҡапыл иҫенә килгәндәй, әсе тауыштан сыйнаны, ә һыны ҡатҡан Морат, үҙәге өҙөлөлөрҙәй үкереп, әсәһенә ташланды. «Буран» баҫылыуын төпкө бүлмәһендә боҫоп көткән ҡәйнә-ҡарсыҡ өлтөрәне, шыҡайып ҡатҡан кейәүенә, ҡыҙы менән ейәненә ҡараны:

-- Ҡыҙым, был ни хәл, кейәү, был ни эш?

-- Күрмәйһеңме ни: инде миңә ҡул күтәрә башланы Ҡондоҙбайың!

—Аб-бау, ҡылыҡтары ҡылға һыймаған мәлғүн!

Йәүҙәт Әғләм улы кисләтеп кенә әйләнеп ҡайтыуға, өйҙә һиллек урынлашҡан, болоттар таралышып, күктәр ҙә аяҙыған: уйнай-көлә һин дә мин сәй эсеп ултыралар имеш. Шым ғына төпкә уҙып китергә ынтылышы нурлы өйөрмә уйнатты:

-- Ай-буй, кейәү ҡайтҡан икән дә! Сәй яңыртып ебәрәйек, Гөлзифа ҡыҙым, кейәү сарсап бөткәндер.

-- Хәҙер, әсәй. Морат улым, атайыңды табынға саҡыр, ниңә ҡатып тораһың?

-- Әттә, сәй эсергә!

Өҫтәл ҡырына мыштым ғына йәпләнде. Йөрәге жыулабыраҡ, ҡатынының ирендәрен шәйләне. Еренә еткереп буялған, саҡ ҡына ҡан эҙе лә, яра бирсәһе лә юҡ. Эсенә йылы йүгерҙе.

-- Сәйҙе ҡаты яһайыммы, шыйыҡмы?

-- Яһа, үҙең белгәнсә.

Йәнгә тейеп төпсөнөү башланасағын көтөп, шым ғына һемерә бирҙе.

-- Әннә, әттәмә өйлө өҫтәлде бирәбеҙме? — тип ләпелдәне малай, әллә ҡасан уҡ дөйөм ҡулланыуға күскән тумбочкалы яҙыу өҫтәле йәнәһе..

-- Бирәбеҙ, бәпесем, бирәбеҙ. Тумбалары ҡағыҙҙарын һалырға бик уңайлы. Тик һин атайыңды эшләгәнендә итәгенән тартып ҡамасаулама, йәме, аҡыллым?

-- Әттәм ҡалайтып эшләй?

«И илаһым, улым минең ни әшләгәнде лә белмәй, ниңә был көнгә ҡалдым?..» тип һыҡтаны йөрәге.

-- Өҫтәлгә аҡ ҡағыҙ һала ла ҡулына ҡәләм тотоп яҙа,— тине ҡатыны.

-- Әһәлүк, әттәм яҙа! — Малай өләсәһе яғына йүгерҙе. Сәй янында икеһе генә ҡалды.

-- Гөлзифам, бая мин...

-- Нимә, бая һин? — Ҡатыны ҡыңғырау сәскәһеләй бәләкәс кенә нәфис усын уның уҫлаптай ауыҙына ҡапланы.— Әйтмә лә, ишетмәйем дә! Бәлки, бая һин түгелдер, ә миндер? Бәлки, икебеҙ ҙә түгелдер? — Усын кинәт тартып алып, балдаҡланып бүлтәйгән теремек ирендәрен яҡынайтты. — Йәнем, бер генә үпәс

итәйем әле үҙеңде!..

Ҡәйнә-ҡарсыҡ Морат улдарын алып Ҡаҫмарт тамағындағы ауылға ҡунаҡҡа, ә Гөлзифа алыҫ урта Азияға гастролдәргә сығып киткәс, бушанып ҡалған футбол ҡырылай киң фатирҙа, мәрхүм ҡайныһынан ҡалған ике тумбалы яҙыу өҫтәле артында Йәүҙәт үҙе генә көштәйеп ултырҙы. Алдында ҡәйнәһе сығарып һалған күбәләй аҡ ҡағыҙ өйөмө, ҡатыны таныш-белеш арҡылы табып алып ҡайтып биргән, тап яҙыусы ағаһыныҡына оҡшаш алтын ҡауырыйлы дефицит авторучка һәм бер кем дә бүлдертмәй торған тәрәндәрҙән-тәрән тынлыҡ. Ә алда — үҙенә-үҙе генә хужа булырлыҡ оҙон-оҙон йәй көндәре!.. «Буран» шулай емерткес, имгәткес ел-дауылһыҙ ғына уҙып киткәнгә ышанып бөтә алмай, эстән генә ҡыуанып, ике еңде һыҙғанып, эшкә тотондо шағир – тегеләр ҡайтҡансы шәлкем-шәлкем шиғыр яҙып, редакцияларҙың имсәген һауырға.

Уҙҙы аҙна, китте унынсы тәүлек... һаман өҫтәл янынан ҡупмай ултыра. Ашарға ла йоҡларға ғына тора ла, тағы килеп, ике ҡулы менән башын усмаҡлап, ижади даръяға сума. Әммә илһам тигәнең ниңәлер ҡуҙғалмай ҙа ҡуҙғалмай. Алдындағы ҡағыҙ һаман аҡ ята...

Ун өсөнсө тәүлек...

Әмәлһеҙҙән, Бальзактың эш һәләтлелеген күҙ алдынан кисерә. Бөйөк француз үҙенең ҡайһы бер романдарын ике-өс тәүлек эсендә тыуҙыра алған...

Һәм бөгөнгө көндөң серле ҡәләме — атаҡлы француз романсыһы Жорж Сименон:

«Романдарымды мин өс-дүрт көн эсендә яҙҙым («бер уҡып ташлауға» тәғәйенләнгәндәрен).

Артабан — йылына ун икешәр роман (Мегрэ осоронда).

Артабан — алтышар (егерме йыл буйына шулай килде)».

Ә бер урында, тәүге ҡәләм тирбәтә башлаған йәшлек дәүеренә ҡарата: «Ул саҡтарҙа мин гәзиттәргә хикәйә яҙып маташтым. Көн һайын өс хикәйәнән алып етегә тиклем...» Бына ҡайҙа ул табыш!

«Ә мин, ҡасан ғына донъя шаулатҡан Ел-Дауыл, ун өс тәүлек буйы баш ҡалҡытмай ултырып, бер юл да яҙа алмайым...» -- Йөрәген һығып алды...

Ҡала урамдары буйлап йөрөй-йөрөй, хәле бөтөп эскәмйәгә ауғас ҡына, батып барғанда йәбешеп сығырлыҡ һалам тапҡандай булды: яҙған һәр бере ҡараһы кибер-кипмәҫтән үк ташҡа баҫылып та, эфирға осоролоп та сығып торған совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами алымын ҡабатларға! Тиккәме ни уның куплеттарын «башҡорт белинскийы» Ғаяс Хөсни «шиғриәтебеҙҙең шедеврҙары» тип нарыҡлай, бөтә авторҙарға өлгө итеп ҡуя! Ә бит уның балалар өсөн яҙған «алтын алым»ын да, өлкәндәргә тәғәйенләнгәндәрен дә ҡабатлау һис ҡыйын түгел.

«Мәрүән Карами ағай»ҙары йәштәргә өйрәткәнсә, ҡайнап торған тормош ҡаҙанынан һоҫоп алынған, «ябай халыҡҡа һәм ергә яҡыныраҡ» үтемле шәлкем тыуҙырыуҙан бисмиллаларға ниәтләнеп, әле үҙенең ҡайҙалығын абайланы: фашист райх офицерының ҡуҡырайған хәрби фуражкаһы рәүешле цирк бинаһы артында — беренсе совет халыҡ шағирының исемендәге баҡсала ултыра имеш.

Ҡаршы эскәмйәлә ҡыҙ менән егет супылдашып үбешә, ҡыуаҡлыҡта буҙтурғайҙар сутылдаша. Бына бит илһам, бына әҫәр!.. Ҡуйын дәфтәренә баҡсалағы «суп!» та «суп!» үбешкән бәхетле йәш елкенсәк һәм ике турғай тураһында шиғыр үрнәге сәсрәне.

«Ә ниңә анауы цирк бинаһы хаҡында ла йырламаҫҡа, тыныслыҡ һәм һуғыш темаһына арнап?».

«Хәрби фуражка.

Быға тиклем уны хәрбиҙәр генә кейгән, фуражка аҫтында ҡуҡырай башлы һуғыш суҡмары һуғыш-үлеш, ут һәм ҡан ҡойош тураһында уйлаған.

Яңы заман килде, беҙ килдек. Беҙ миллиондар мейеһендәге фекер румбаһын йөҙ һикһән градусҡа борҙоҡ. Ҡылыстарҙан һабан төрәндәре тапаныҡ. Каскаларҙы өйәңке ботаҡтарына ҡарға оялары итеп аҫтыҡ.

Цирк итеп һалынған хәрби фуражка аҫтында бөгөн бер юлы биш мең бәхетле баш, совет баштары, шашып көлә: кәмәләре ҡомға терәлгән һуғыш уты ҡабыҙыусыларҙан, уларҙы ҡоторткан донъя империалистарынан шашып көлә. Кәрәкһә, хәрби фуражкалар кейеп, шанлы яуға сығырбыҙ. Әммә-ләкин беҙ хәҙер — тыныслыҡ һалдаттары.

Гүзәл ҡала майҙанына «кейҙертелгән» хәрби фуражка бөгөн гүзәл тыныслыҡҡа тура юл яра». – Афарин! -- Булды өлкәндәр шиғыры!

Ижади ҡуласаның ҡапыл ҡуҙғалып китеүенән рухланып, шағирыбыҙ баҡса буйынса тапанды. Янда ғына гигант кран шығырлай, ҡыҙыл кирбестәр тыпырлай — ҡала драма театрының яңы бинаһы ҡалҡына. Их! -- әгәр ошонан тороп бабаларҙың теге «мәңгелек донъяһы»на телевизион репортаж тапшырып булһасы: бинаны үҙ күҙҙәре менән күреп, театрға данлы исеме биреләсәк мәрхүм классигыбыҙ үҙе нисек һоҡланыр ине!

«Кисә иҫке, бөгөн яңы, Һеҙгә ни кәрәк тағы!..»

Туҡта, быныһын да алайыҡ ҡәләм осона -- тағы ла бер пафослы ши-тырға аҫҡыс! Донъя шундай ҙа матур, урамдар иркен, күңелдәр көр — беҙгә бөгөн пафос та икмәктәй кәрәк! Ана теге көмөш көмбәҙле планетарийға бәйләп, йыһанды яулау темаһын һауырға мөмкин...

Мәшһүребеҙ Мәрүән Карами ижадының өлгөһөндә темаларҙың бешеп өлгөргән сәтләүектәй үҙенән-үҙе ҡаҡ түбәгә тупылдап ҡойолоп тороуынан ихлас ҡыуанып, «ергә яҡын» булып тыуасаҡ шиғри юлдарынан иҫереп тә илереп, урам буйлап артабан ҡыҙыра торғас, хәтһеҙ ара үтелеп, юл кәмәһе яңыраҡ асылған автовокзал бинаһы тәңгәлендәге сағылъярға килеп төртөлдө. Аҫта -- ҡара йыландай бөгәрләнеп һуҙылған тимер юл, сағыу ҡояштан ялтырап ятҡан мөһәбәт йылға, һул яҡтараҡ — ике ярға аҡҡош ҡанаттарылай киреп һалынған бетон күпер. Күпер ауыҙынан илле аҙым ғына ситтәрәк Лев Толстойҙың мәшһүр «Война и Мир” әҫәрендәгеләй дәһшәтле күренеш — дошман ике яҡтың йөҙәрләгән пушкалары үлемесле ут яуҙырып тынғандан һуңғы ғәрәсәтле Бородино ҡырындағылай, киң панорама хасил итеп төтәп ятҡан оло ялан — ҡаланың ҙур сүплете... «Иҫке төтәй, иҫке яна — иҫке тейеш янырға!» Сеү, шағир, танауға ниндәй еҫ бәрә?.. Был ни хәл? Ҡала башлыҡтары ни ҡарай!? Фу! Бәй, ғәфү итегеҙ. Бында танау ҡаплау яҙыҡ түгелме? Һис тә сүплектән түгел — ҡала

ситендәге анауы һөрөм урғылтмыш һоро оҙон торбанан бит әскелтем-сөскөлтөм һарымһаҡ еҫе аңҡый — индустрия һулышы! Афарин, тынғыһыҙ завод директоры Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаров-бажабыҙ! Йәшәһен химия ветераны — Иҫке завод! Тәүге биш йыллыҡтар гиганты! Бына ҡайҙа ул танауға бәрелеп-сиртеп тора быуындар күсәгилешлеге, ура! Төптәнерәк тоҫмаллаһаҡ, был да ашҡыныулы шиғыр яҙырҙай ерлекле тема!..

Ҡуйын дәфтәрен шуның ише аҫыл сеймалдар менән сыбарлап, ҡош-ҡорттарҙың ағас баштарында шаулашҡандарын тыңлай-тыңлай, шағирыбыҙ ирәүәнләп олпатйән ҡайтып бара. Сеү! Күренекле әҙип-ҡайнағаһы Мотал Шаһибәрәков табынған академик Вернадский шәхсән үҙе сирттеме ни шағирҙың маңлайына: *биосфера!* Һәп-лә! -- йәш быуынды өйрәтәйек ерҙәге һәр тереклекте — үҙебеҙҙең кесе дуҫтарҙы яратырға. Йомортҡанан моронлаған себештәй, *сеп-себеши* (свежий) шиғыр сатнап ярала:

Ҡарға ҡарҡылдай ҡарамала:
Ҡайҙа бараһың, ҡара малай?
Ҡараманың ҡайырыһын ҡайырырға,
Ҡанаттарың ҡауырыйын айырырға!
-- Һәй уҫал малай, улай ҡылырға ярамай!

Тағы:

Туҡран, туҡран,
Нимә туҡып ултыраң?
Туҙға ҡасты уҡрам,
Шуны суҡып ултырам.

Йәки:

Турғай, турғай — тумалаҡ,
Томшоғонда — ҡомалаҡ.
Ҡомалаҡты ҡомарытты,
Ояһында ыуалап.

Былары инде нәҡ мәшһүр совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамиса ерләштерелгән «кескәйҙәр шиғыры» була — балалар матбуғаты өсөн.

Теманы ергә яҡыныраҡ -- тормоштоң үҙенән алыу китаптарҙа маҡталһа ла, түлләнә алмай йонсоған көнөндә яҙмыш үҙен ошолай бик тиҙ генә быуаҙытып ҡуйһа ла, күңеленең үтә тәрән төпкөлөндә ҡара хәүеф тә артылып ҡайтманы түгел, ҡайтты. «Был һинме икән, Ел-Дауыл? Әллә Мәрүән Карами шәүләһеме?! Тәүге китабыңда улъяны был рәүешле йыйҙыңмы ни, Ел-Дауыл?..» Әгәр ҙә шул хәүефле уйы өҫтөнлөк алһа, кем белә, ҡуйын дәфтәрен йыртып ташлар, торғонлоҡтан ҡотолоуҙың ысын юлын эҙләр ине. Кем белә, ул саҡ, бәлки, тормоштоң әсе һурпаларын да шөйлә аҙыраҡ татыр, юғалтыуҙарҙы, яраларҙы

аҙыраҡ кисерер ине. Дәфтәрен йыртып ташламаны... урау юл буйлап китте. «Урау, тим... Ураумы икән әле ул? Мәрүән Карами урауҙан йөрөйме ни? Бәлки, шағир өсөн иң тура юл ошолор?..»

Элегерәк булып алғайны был хәл. Ә хәҙер?..

...Бурап-бурап яуган ҡарҙар араһынан Йәүҙәткә үҙенең шәүләһе — элекке данлы Ел-Дауыл ҡалҡып сыҡҡандай.

—Ҡәҙерле автор, әйтегеҙ әле: ижади кризис кисергәнегеҙ бармы?

Ел-Дауыл уға, үҙенең шәүләһенә, ике күҙен тултырып, ҡыҙғанып ҡарап тора:

-- Ни тип әйтергә. Әлбиттә, миңә, шиғриәттә яңы ғына моронлаған себешкә, был хаҡта гәпереү ҡыйын. Әммә ошоғаса һәр әҫәремде оло ғазаптар, үҙ-үҙемә шикләнеүҙәр менән интегеп яҙҙым, кешегә күрһәткәнгә тиклем үк йыртып ташлауҙан саҡ-саҡ тыйылып ҡала инем.

-- Юҡ, мин башҡа хаҡта... Һеҙ әйткән бит ул — ижадтың һәр кем кисерә торған тәбиғи бер шауҡымы... Пеғас-арғымағығыҙ тәкмәстереп ташлап китеүҙән төн урталарында ырғып тороп, башығыҙҙы ташҡа бәреү йәки муйынығыҙға боғалаҡ һалыу теләге булманымы, тим.

-- ?!

-- Хоҙайығыҙға шөкөрана ҡылығыҙ ҙа мәңге шулай йәшәгеҙ! Беләһегеҙме, ундай хәтәр минуттарҙа аҡ донъя ҡайһындай күренә? Ҡап-ҡара һөрәм. Ер йөҙө — һөрөм, өйҙәр — һөрөм, кешеләрҙең йөҙҙәре ҡара һөрөм. Үңнектәй генә ҡалған Күк йөҙөнә ҡалҡынып баҡһаң, Күк менән Ҡояш — һөрөм. Бына шунан һуң инде түҙеп йәшәп ҡара. Үҙ-үҙеңде «теге донъя»ға олаҡтырыу өсөн ундай мәлдә ҡатыныңдың бер һалҡын күҙ ҡарашы ла етәлер... Кешеләрҙең үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыуы фәҡәт шундай минуттарҙа була тип уйлайым. Кешене был һәләкәттән йылдар буйы үҙ-үҙеңде тәрбиәләгән көслө рухы йәки яҡындарының ҡайһылыр береһенең миһырбанлығы ғына ҡотҡарып ҡала.

-- Һеҙгә тема табыуы ҡыйын булған. Һеҙ уны тапҡанһығыҙ. Һәм уңышлы хәл итеүгә лә өлгәшкәнһегеҙҙер бит? – Ныҡыпмы ныҡый был шәүлә!

-- Өлгәшеү... Белмәйем, ҡасан булыр ул өлгәшеү?..

Ғаилә-ғәләме сәфәр киткәнгә теүәл ике ай тигәндә, ҡыҙыл ебәк күлдәгенең иҙеүен сисеп ебәреп, мәрхүм ҡайныһынан ҡалған күн тышлы ҡыҙыл папканы ҡултыҡлап, Йәүҙәт Әғләм улы Ҡондоҙбаев тынсыу бүлмәнән оло донъяға сыҡты. Күҙ алдары ҡараңғылана, баш зыңҡый, тубыҡтар бәүелмеш ине... Шулай ҙа ҡултыҡ аҫтындағы тос папкаһы ергә ҡаты баҫырға, башты юғары тоторға ҡеүәт бирҙе. Ҡалалағы берҙән-бер ҡалын әҙәби журнал редакцияһына барып керҙе елтерәп, ҡыҙыл папканы әҙәби бүлек мөдиренең өҫтәленә һәлмәкләтеп яткырҙы. Шиғри өнө тығылып ҡалған Ел-Дауылдың бер ҡосаҡ шиғыр күтәреп инеүе бында тәүҙә ҡыуанысл аптырау, аҙаҡтан, әйтеүе ҡыйын, ниндәйҙер аймылыш тыуҙырҙы. Автор үҙе ҡысҡсырып уҡый башлағанда ихлас тыңлаған редакция әһелдәре, папка һайыға барған һайын, борсолоп борғаланырға, тамаҡ ҡырырға ла йүткерергә, ултырғыс аяҡтарын шығырлатырға, бышылдашып һөйләшергә кереште. Ҡайһылары берәм-һәрәм сығып тайҙы. Иң көслө нервылылар — бүлек мөдире менән баш редактор ғына һуңғы аккордҡаса урында ҡалды. Улары ла

ауыҙҙарына һыу уртлағандай ине.

-- Ярай, хуш, тыңланыҡ, — тине тынлыҡты бүлеп баш мөхәррир, мөгөҙ һаплы таяғы (ул — Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды) менән иҙәнгә туҡылдатып. Был иһә һис тә хәйерлегә түгел ине, Йәүҙәткә ҡаҡ түбәһенә төйәләр һымаҡ тойолдо... Шул арала таяғын һөйәп ҡуйып, бар булмышын ҡулъяулығы менән күҙлек быялаларын һөртөүгә тупланы, бүлек мөдиренә эйәк ҡаҡты. — Йә, әйтеп ебәр әле, кем, үҙ фекереңде.

-- Фекер тип ни, минең фекер ҙә...

-- Нисек, һинең фекер ҙә?

-- Шулай инде. — Бүлек мөдире ыҡ-мыҡ итте.

-- Ниндәй ул «шундай»? Асығыраҡ!

-- Асығыраҡ әйткәндә, -- ауыҙ асып ҡатҡан Йәүҙәткә күҙ һирпеп алды, -- автор иҫ китмәле күп эшләгән. Байтаҡ шиғырҙарын тыңланыҡ. Улар араһында Ҡояш кеүек балҡышлылары ла, Айҙай һүрәнерәктәре лә бар. Йылдар үткәндән һуң шиғриәт иленә кире әйләнеп ҡайтыуы менән ҡотларға ғына ҡала.

-- Асығыраҡ.

-- Шиғырҙарҙа күп етешле яҡтар ҙа, күп етешһеҙ яҡтар ҙа күҙәтелә...

-- Тәҡдим?

-- Минең тәҡдим былай: Ел-Дауылдың яңынан ҡәләм тибрәтеүе — иҫ китмәле ҡыуаныслы һәм һоҡланғыс хәл ул бөтәбеҙ өсөн. Әҫәрҙәре матбуғат биттәрендә һис шикһеҙ донъя күрергә хаҡлы.

-- Һин дөйөм матбуғатты ҡосаҡлап алма, ә үҙебеҙҙең гәзит исеменән һөйлә! — Баш редактор таяғын шаҡылдатты. — Ташҡа баҫа алабыҙмы шиғри гәүһәрҙәрен?

-- Әгәр ҙә автор улар өҫтөндә саҡ ҡына ҡабат ең һыҙғанып эшләһә...

-- Ярай, мин дә шул фекерҙә, — тине баш мөхәррир. — Нисек эшләргә икәнен ошонда уҡ тәғәйен һөйләшеп килешегеҙ. Ғәфү итегеҙ, ашығыс йомошом бар. — Таяғын туҡылдатып, аҡһаҡлап сығып китте. Мөдир менән икәүҙән-икәү ҡалып, «тәғәйен»гә күстеләр.

-- Беләһеңме, туғанҡай, һин беҙҙең барыбыҙҙы ла нисек иҫ киткес ҡыуандырҙың? — тине бүлек мөдире, туҙрап ятҡан шиғри биттәрҙе бер баҫтырмаға һалып. — Ел-Дауылдың дауыллы һүҙҙәрен журнал уҡыусылар күптән зарығып көтә.

-- Замечание-фәләндәреңде сис тә, ошонда ғына ултырып, тиҙ генә эшен бөтөрөп биреп китәйем, улайғас, — тине Йәүҙәт Әғләм улы, тулҡынланып. Бүлек мөдире сәйер текләп ҡараны.

-- Һиңә иркенләп ике еңде һыҙғанып, иҙеүҙе сисеп ебәреп, өйҙә ултырып эшләү кәрәктер, туғанҡай. Балаҡтарҙы төрнәп алһаң да ярай.

-- Мин тап шулай ултырып эшләнем дә инде. — Автор ҡулы ҡыҙыл папкаға ятты. – Бында – һуңғы вариант.

-- Улайһа, башҡа шиғырҙарыңды килтер. Һайлап алып, бындағыларыңдың да бер-икеһен, сүп-сарҙарын тарап, шымартып, ипкә килтергәндән һуң, бергә ҡушып шәлкемләп, редколлегияға тәҡдим итеп ҡарарбыҙ.

-- Һин ни һөйләйһең? Бөтә булған шиғырҙарым алдыңда!

-- Улайһа, яңыларын яҙып килтер, туғанҡай.

Сикәләре ҡыҙышты:

-- Әле генә, тәҡдим итергә, тинегеҙ...

-- Аңла, туғанҡай, ҡабат эшләгәндән һуң, тинек. Былары бармай.

-- Ни өсөн, төп сәбәбен әйтегеҙ!

-- Үтә һай, бер ҡатлы, примитив: маңлай менән бәреп таш ярырға көсәнгәндәй тәьҫир ҡалдыра. Араларында формалары яғынан ҡыҙыҡлы ғыналары булһа ла, темалары бик иҫке, күп тапалған алымдар. Тормоштан ситләшкәнһегеҙ, ерҙән айырылып, ете ҡат Күктәге бушлыҡта йөҙәһегеҙ. Партиябыҙ өлкә комитетының гәзит-журналдар тураһындағы һуңғы ҡарарына ярашлы, һәр ябай эшсе, тракторист, һауынсы һәм көтөүсе бер ҡарауҙан уҡ аңларлыҡ, яратып уҡырлыҡ итеп яҙырға -- ергә төшөргә кәрәк, ерләшергә кәрәк, туғанҡай. Әллә баҫмабыҙҙы алдырып уҡып бармайһығыҙмы?

-- Алдырам һәм уҡып барам.

-- Улайғас, ниңә артта ҡалдығыҙ? Әллә юғиһә «Көн үҙәге талаптары саҡыра таланттарҙы» тигән рубриканы күрмәйһегеҙме? Ошо айҙа ғына унда аҙна буйына һандан-һанға башҡорт белинскийының совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами ағайыбыҙҙың тылсымлы ижадының төп асылы – *ябайлыҡ һәм ерсәнлек* тураһындағы тәрән анализлы һәм фәһемле мәҡәләһе баҫылды.

-- Беләм. Тап шул Мәрүән ағайыңса яҙҙым да инде мин!

-- Мәрүән ағайса түгел шул! Әйттем бит: күпме генә көсәнһәгеҙ ҙә, *ергә төшөп етмәгәнһегеҙ. Аяҡтарығыҙ бушлыҡтан һәленеп тора...*

-- Улайһа, баш редакторға ҡабат керәм!

-- Туғанҡай, уныһы — һинең эш. — Ҡулъяҙманы итәғәтле һалып бәйләп, ҡыҙыл папканы авторына тотторҙо. — Аңла, туғанҡай, һиңә бирәү ҙә ҡаршы түгел... ҡыуанабыҙ...

Баш мөхәррир менән ҡабат һөйләшеү ҙә йыуаныс килтермәне. Иғтибар биреп тыңлағас:

-- Бүлек мөдиренең әйткәндәре менән килешергә кәрәк, — тине. — Белеп торам, һиңә быны ишетеү еңел түгел: «тура әйткән — туғанына ярамаған», тигәндәрме әле?.. Ләкин заманында үҙеңде беҙ үк күтәреп алдыҡ, үҫтерҙек, шулай түгелме? Хәтерләйһеңме, сәбәкә малай, йөнө яңы ғына сыҡҡан себеш-студент йылдарыңды?

-- Хәтерләйем. Ләкин хәҙер себеш түгел инде мин.

-- Ауырға алма, ҡустым: был килтергән шиғырҙарыңдан күренеүенсә, Ел-Дауыл да түгел шул инде. Спортсмендар әйтмешләй, форманды юғалтыңҡырағанһың. Был, бәлки, оҙаҡ ҡына эстрада менән мауығыу шауҡымылыр. Әммә һин — көслө бөркөт, һинең ҡанаттар ныҡ, һин ҡабат Күккә атлығырга тейеш. Шулай буласағына иманым камил. Тик, әлегә был мөнәжәттәреңде баҫтырып сығарырға ашыҡма, эшләргә, эшләргә, эшләргә -- бөйөк Мәрүән Карами ағайыңса эшләргә кәрәк һиңә.

Бына һиңә йомшаҡ түшәп кенә ҡатыға ултыртыу!..

Ике сикә генә түгел, ҡолаҡтары ла уттай янып, мейеһендә «Мәрүән

Карами ағайынса! Мәрүән Карами ағайынса!» тигән оран туҡтауһыҙ зыңлап, авторыбыҙ ҡаланың икенсе тарафына йүгерҙе. Йөрәк тигәне ял-ҡындай дөрләп бара, ҡултыҡ аҫтына ҡыҫҡан ҡыҙыл папка ҡыҙыу тимерҙәй көйҙөрә. Рәнйеүенән күҙгә аҡ-кара күренмәй, пьедесталдан һуғып ҡолатылған даһиҙай хис итә үҙен... Яҙыусылар берлегенең идараһына елләнеп барып керҙе. Рәйес, олпат кәүҙәле, яҫы маңлайлы өлкән йәштәрҙәге һуғыш ветераны, яңғаҙ башы ҡағыҙҙарға күмелеп ултыра икән, ҡолас йәйеп ҡаршыланы:

-- О, кемде күрәм! Эстрада ҡаһарманы! Туған әҙәбиәтебеҙҙең ялҡынлы пропагандисы!

-- Шуны ғына күрәһегеҙ икән шул, — тине.

-- Нимә? Яңылыш әйтәмме әллә?

—Һеҙҙең алда шағир Ел-Дауыл баҫып тора!

Рәйес, яурынынан ипле генә этәреп, йомшаҡ креслоға ултыртты.

—Тыңлайым һеҙҙе, Ел-Дауыл.

Әрнеп, редакцияла булғандарҙы һөйләп бирҙе.

-- Төп талаптары ниҙән ғибәрәт?

-- Мәрүән Карами һымаҡ яҙырға кәрәк, тиҙәр, гәрсә унан уҙҙырыбыраҡ яҙһам да...

-- Һем... -- Ветерандың бер эште лә һуңға ҡалдырмай торған яҡшы ғәҙәте бар ине — ҡыҙыл папкаға ҡушҡуллап йәбеште. Бөгөн килгән газеталар көлтәһен һәнәктәй тарбаҡ ҡулдары менән ҡәләмдәше алдына ырғытып, ҡульяҙмаларға өңөлдө.

Күптән инде көнө-төнө юлда — гастролдәрҙә йөрөүен һылтау итеп, дөрөҫөн генә әйткәндә, гәзит-журналдарға ла яҙылғаны, йүнләп уҡып та барғаны юҡ ине Ел-Дауылдың. Кеше тигәнең, бер ҡолап ҡалһа арбанан, тау аҫтына тәкмәслә генә икән: радио-телевидение программаларынан да уйын-тамашаларға ғына иғтибар ҡылырға күнеккән, көллө донъя, әйтерһең, сәхнә шауынан ғына тора... Рәйес шиғырҙар һайландығын яңы күҙҙән үткәреп, күҙлеген һалып, донъя хәлдәре тураһында әңгәмәләшә башланы. Йәүҙәт сәйәсәттең үҙе һай йөҙгән тәңгәлдәрен уратыңҡырап уҙып, сетерекле хәлдән алай ҙа сыҡты. Имтиханды хәтерләткән был әңгәмә етәксене шулай ҙа хәүефкә һалды.

-- Әллә сирләп яттығыҙмы? — тине, йәш ҡәләмдәшенең төҫө ҡасҡан йөҙөн йәнә иғтибар үҙәгенән үткәреп.

-- Үҙегеҙгә мәғлүм: ижад ялҡыны... — Сер бирмәҫкә тырышты.

-- Эйе, ижад ялҡыны... Беләһегеҙме, мин һеҙгә ни кәңәш итер инем?

Йөрәккә һалҡын йүгерҙе: тағы ла шул бер балыҡ башы?..

-- Быларығыҙҙы, ысынлап та, ташҡа баҫтырырға ашыҡмайыраҡ тороғоҙ. Шиғриәттә бит һеҙ яңы исем түгел: уҡыусы һеҙҙе белә, Ел-Дауыл тип белә. Ә Карамиҙан уҙҙырыу урынына үҙегеҙҙе туҙҙырғанһығыҙ... Бер генә юл бар һеҙгә: элекке ярһыу Ел-Дауыл көйөнсә ҡалып, ярты илегә булһа ла юғарыраҡ ҡалҡыныу.

-- Улайһа һеҙ... һеҙ.. шиғырҙы аңламайһығыҙ! — Донъялағы кәмһетелгән көллө шағирҙар әйтә торған иң йәберле һүҙ теленән ысҡынды.

-- Ҡустым, ниңә ҡабаланаһың? — Рәйес яғымлы «һин»гә күсте.

-- Һеҙ... һеҙ... минең урында булһағыҙ...

-- Һәр кем үҙ урынында булырға тейеш. Барыбыҙ ҙа Карами булып бөтһә, беләһеңме, шиғриәттән ни ҡалыр ине? Рожки да ножки, урыҫ туғандар әймешләй... – Ҡалтыранған ҡулдары менән папкаһын йыйнаған авторға күҙлеге үтә оҙаҡ төбәлде. -- Нимә, ҡустым, әллә ғаиләңдә күңелһеҙлекме? Фатир яғың да арыу ғына ине, буғай... Туҡта, әллә кеҫә төбөң таҡырланып киттеме? Булмаһа, берәр айға ижади командировка бирәйек, ә? Аҙ булһа ла, аҡса...

-- Мин... мин һеҙҙе аңламайым!

— Ҡустым, мин дә һине аңламайым. — Йәүҙәт папкаһын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ишекте асҡанда, артынан ишетелде: — Вәт әәәй!.. Ҡустым, килеп йөрө!

Ҡыҙышып йүгерә-атлай, тура газета редакцияһына йүнәлде. «Нисауа, текә тот ҡойроҡто! Шиғырҙарың һис кенә лә Мәрүәндекенән кәм түгел! — тип тынысландырҙы үҙен. — Борон-борондан уҡ талант төрлө кәртәләр аша үҙенә юл ярған!».

Унда үтә ҡоро тотманылар-тотоуын... Бер-ике шиғыры менән өҫтән-мөҫтән танышҡас, эшлекле кешеләр ни, артабан баш ауырттырып тормай, бер генә һорау бирҙеләр:

—Ҡалғандары ниндәйерәк темаға?

Яуап таба алмай тороуын күреп, ярҙамға ла килделәр: ҡаршылағы иҙәндән түшәмгә олғашҡан, ҡашағаһына бармаҡ яҫылыҡ хәрефтәр менән «Шиғриәт» тип мөһөрләнгән бейек шкафты асып, кәштәләрҙә рәт-рәт теҙелмеш ая ҡалынлыҡ дәү папкаларға күҙ ишараһы яһалды. Бының менән журналсылар үҙҙәренең ҡыҙыу эшендә йомро юмор тойғоһонан да ғафил түгеллектәрен күрһәттеләр: папкаларҙың һәр береһенең көнгә баҡҡан төплөктәрендә ҡуйы зәңгәр ҡара менән: «Һәр төрлө даталарға ҡарата», «Ауыл тураһында», «Әсәй тураһында», «Атай тураһында», «Шағирҙарҙың ижад йорттары, ял йорттары, санаторийҙарға бәйле», «Ҡала хаҡында», «Һандуғаслы мөхәббәт », «Ҡара диңгеҙ ярынан тороп Күк Уралды һағыныу», «Ер-әсәгә өндәшеү», «Уралды маҡтау», «Ҡурай тураһында», «Яңы йорттар, биналар, күперҙәр, трамвай юлдары хаҡында», «Йыл миҙгелдәренә ҡарата», «Һәр төрлө ҡоштар тураһында», «Аттар тураһында» һәм башҡа, һәм башҡа шундай нәмәләр хаҡында һәм тураһында шиғырҙар, тип, бик әкәмәт мәғлүмәттәр бирелгән.

-- Күрҙегеҙме байлыҡты: һәр береһе быуаҙ һыйыр ҡалынлыҡ, — тип, папкаларға төртөп күрһәтеп күҙ ҡыҫты береһе. — Был шиғри борсаҡ көнө-төнө тартҡан тирмәнгә лә иң кәмендә ун йылға етер ине, ә беҙҙеке ишегә – тулы быуатлыҡ...

-- Һеҙ шуларҙың береһен дә баҫып сығармайһығыҙмы?

-- Карамиҙыҡын ғына баҫабыҙ! – Һәр кемгә лә аңлайышлы аксиомалай яуаплағас, һәүетемсә дауамланы. – Был байлыҡтың осона сығырлыҡ түгел. Һәр папкала бер үк темаға фәстерелгән әллә күпме «шиғыр-шығыр»...—Айырым баҫымлыҡлап әйтелгән был «шиғыр-шығыр» теш араһына кергән ҡомдай шығырланы ла күп йылдарға Йәүҙәт Әғләм улының йәнендә йәмһеҙ шығырлап торасаҡ инде... — Күрәһегеҙ бит: редакцияға ағылған шиғри һыуҙың асылы,

үкенескә ҡаршы, көллө сифаттары яғынан бер стандарт ҡалыпҡа ҡайтып ҡала, һәммәһен дә, төрлө вариациялар ҡулланып, бер үк кеше әтмәләгән, тиерһең... Ғәфү итегеҙ, был һөҙөмтә Ел-Дауылға ҡағылмай, әлбиттә, — тип тә йомшарттылар ҡаты тел төбөн. — Моғайын, һеҙҙең тема үҙгәйлелер, яңылыр — үҙегеҙгә башҡа папка асырға кәрәк булыр?

-- Белмәйем шул, — тине, шкафтың темаларға байлығынан хайран ҡалып. — Белмәйем шул...

-- Улайһа, рәхим итеп, шүрлектәргә күҙ йүтертеп сығығыҙ ҙа темалары буйынса яңыраҡ шиғырҙарығыҙҙы һайлап бирегеҙ, — тине мөдир. — Мин һеҙҙекен тирмәндән тиҙерәк үткәреү яйын ҡайырам, шәйләйһегеҙҙер?.. Күрәһегеҙ: ана ниндәй сират!

Иптәш хаҡлы ине. Сират күперен иң тиҙ үтерҙәйҙәрен генә айырып биргәс, мөдир, сәхифәләргә диагональ рәүештә күҙ йүгертеп, алсаҡ йылмайып өс шиғырҙы һайлап алды.

-- Беләһегеҙҙер, обкомдың билдәле ҡарарында хеҙмәт коллективтарының професиональ байрамдарын шағирәнә яҡтыртмауҙа ғәйепләндек... Яңы театр бинаһы һалыу тураһындағын — төҙөүселәр көнөнә, трамвай тураһындағын — юлдар төҙәтеү айлығына, ә быныһын тағы ла берәй дата-матаға тура килтереберәк ҡыҫтырырбыҙ, — тине. Авторҙы был шаңҡытты:

-- Һе, ҡайһы бер ауыл магазиндарында араҡы шешәһенә «әшнәлеккә» еҫләнгән тоҙло балыҡ «ҡыҫтырып» ебәрәләр... — тине, ирендәре ҡалтырап.

-- Кем ғәйепле һуң быға? Көллөгөҙ ҙә бер төрлө тыуаһығыҙ, бер төрлө яҙаһығыҙ һәм, ғәфү ит, туған, бер төрлө үләһегеҙ — нисә ҡапһаң да бер балыҡ башы...

-- Минең исем бар!

— Исемдә генә шул айырма. Аптырарһың был шағир халҡына: күҙҙәренә ни салынһа, «Мәрүән Карами ағайса был» тиҙәр ҙә шуны шиғыр итеп әтмәләп килтерәләр...

-- «Бөйөк Мәрүән Карами ижады бөтә шағирҙарыбыҙға өлгө булып торорға тейеш!» тип үҙегеҙҙең гәзиттән үк оранланы лаһа башҡорт белинскийы, шул өлгөнө кире ҡағаһығыҙмы?

-- Илең болғар булһа-булһын, /Илен болғар булмаһын, тигәнме әле Аҡмулла? Шуның кеүек, өлгөң өлгө булһа-булһын, ылғый көлкө булмаһын! Һинекеләр Мәрүән Карамиҙыҡынан да уҙҙырылған... һис юғында шуның кимәлендә ҡалырға кәрәк ине.

Аңла һин быларҙы!..

Ел-Дауыл элегерәк, балалар матбуғатының әҙәби бүлектәрен тематик тарлыҡта ғәйепләп: «Ысын шиғыр ҡанатланып ҡаскан һеҙҙән. Әҙәби битте зоопаркка әйләндерҙегеҙ: гелән ҡош-ҡорт, кейек-януар, йә булмаһа башҡа төрлө йәнлектәрҙең рифмалап яҙылған портреттарын ташҡа баҫып сығарыу менән шөғөлләнәһегеҙ. Былайһа, һүрәт төшөрөүселәргә ни эш ҡала?..» — тип бот сабып көлөр ине. Бөгөн иһә үҙенең баяғы ҡарға, туҡран, турғай тураһындағы шиғырҙарын балалар гәзите редакцияһына көсләп тигәндәй таҡҡас, ҡыуанып бөтә алманы. Шунан һуң да ҡыҙыл папканың мыҫҡал өлөшө генә бушанғайны

әле. Ҡараҕурҕаш һымаҡ күтәреп ҡайтты.

Газетала, «көн үҙәгенә һуҡҡан» бернисә датаҕа «ҡыҫтырылып», бернисә шиғыры, ә балалар матбуғатында, ҡоштар бала осорор саҡҡа тура килтереберәк, «ҡанатлы дуҫтарыбыҙ хаҡында»ғы куплеттары баҫылып сыҡты, аҙмы-күпме гонорар тейҙе; цирк бинаһын данлаған пафослы юлдарҙы цирк әһелдәре эләктереп алып, программаларына индергәндәр, сезонды ябыу кисәһендә һөйләгәндәр. Уның өсөн автор кеҫәһен тос ҡына төшөм баҫты. Тик ул быңдай «уңыш»тарҙан тулҡынланыр йәштән уҙғайны инде. Матбуғатта яңынан күренгән данлы исем Ел-Дауылға халыҡ йүнле иғтибар ҙа итмәне; куплеттары, бер көнлөк күбәләк кеүек тыуып, бер тәүлек әсендә һүрелде лә юғалды, башҡалар тарафынан күпләп үрсетелгән шундай уҡ шиғырҙар һәм йырҙар аҫтында күмелеп ҡалды, әйтерһең, бөтөнләй булманылар ҙа. Төндәрен йоҡлай алмай, өҙәләнеп уйланды: мин кемдән кәм? Бер үк самала яҙғанда ла Карамиҙыҡы ниңә шыма үтә лә, уныҡы тотҡарлана? Әлбиттә, шымағайҙың «совет халыҡ шағиры» тигән дәрәжәһе юл аса. Тик ул дәрәжәнең ҡайһылай бирелгәнен беләбеҙ: талантҡа ҡарап түгел – талапҡа ярап. Уны алмаған шағир, тимәк, ғүмере буйына түбән сортлы һаналып йөрөргә тейеш... Башына сәмле уй килде: Карамиҙың *үҙе булып* яҙып ҡарарға кәрәк, айыра алырҙармы икән? Шағирәнә бәһлеүәндең затлы тышлыҡтары алтын хәрефтәр менән буталланған томдарын кәштәнән алып, ижадының авторға дан-шөһрәт килтергән төп асылын барланы: ябай ғына әйткәндә, «өлкән ағай»ҙы ҙурлап, «башҡорт-ҡусты»ны хурлап, башҡорт тарихына ҡарата нигилизм үтен һеңдереп яҙған, шуның арҡаһында ғына «партия һалдаты»на – рупорына әүерелгән.

Шул йәһәттән Йәүҙәт Әғләм улы шағирәнә үҙен шағир Мәрүән Карами урынына ҡуйып, уның ижади ҡалыбына һыйҙырышлы әҫәр планын түбәндәгесә ҡорҙо.

Аҡ батшаға ҡаршы яуҙа еңелеп, ике ҡулы быҕауланған Юлай улы үҙенеҡ ҡанлы көрәшенең хаҡлығына шикләнеп үкһеп илай: «Ниңә халыҡты күтәрҙем, йоҡоһонан уяттым? Ниңә мине уяттылар, азатлығың – ҡылысыңда, тип алдаттылар? Кемдәр ул мине йыһатҡа – изге һуғышҡа, тип аяҡландыртыусылар? Быуын-быуын ҡанлы сылбыр килтерҙе ул ҡотҡоно! Әгәр ҙә Сәйет Йәғәфәр булмаһа, Күсем дә булмаҫ ине. Күсем артынан – Алдар, уның артынан – Аҡай, уның артынан – Килмәк, уның артынан – Сураҕол, уның артынан мин-Салауат та тыумаҫ, ҡылыс күтәрмәҫ инем. Динебеҙ, аҫабалыҡ хоҡуҡтарыбыҙ ҡулдан китә, тинекме? Китһә һуң?! Дин урынына дин килә, еребеҙ ҙә үҙ урынында ҡала бит! Батша беҙҙе ҡәлғә ҡолдары яһай, тип ҡурҡтыҡмы? Урыҫ ҡәүеме ғүмер-баҡи ҡол булған, ҡоллоҡта йәшәп килә, әммә тамыры ҡоромай – ярты ер йөҙөн баҫып алырлыҡ үрсей ҙәһә! Телебеҙҙән яҙҙыртыр, урыҫҡа әүрелдертер, тип ҡарыштыҡмы? Урыҫ түгеллегебеҙҙе ҡурсалап һуғыша-һуғыша барыбер ҡырылып бөтәсәкбеҙ, юҡҡа сығасаҡбыҙ бит! *Ҡындан һурмаҫҡа кәрәк ине ҡылысты, өлкән ағай итеп танырға кәрәк ине урыҫты!*»

Әҫәрҙең йомғаҡлау өлөшөндә Салауаттың һыҡтауына бөйөк автор бөгөнгө заман бейеклегенән яуаплай: «Эйе-эйе, бик хаҡлы – мең-мең тапҡыр хаҡлы һин, Салауат! Быуын-быуын баш күтәргән, үҙҙәрендә бөйөк партия

яуаплылығы тойоуҙан мәхрүм ҡалған экстремистарыбыҙ ҡанға батырҙы! Ниңә кәрәк ине иҫәүән башҡортҡа ҡындан ҡылыс һурып тыпырсыныу? Азатлыҡмы? Уны беҙгә көнө килгәс барыбер бөйөк Ленин – Сталин партияһы бирҙе. Еребеҙме? Ер барыбер бөтәбеҙҙең дә мул йәшәүен тәьмин итеүсе коллектив милеккә әйләнде. Динебеҙме? Уны беҙ барыбер мәсет манараларын ауҙарып, китаптарын утҡа яғып юҡ иттек. Телебеҙме? Уны барыбер үҙебеҙ теләп онотабыҙ, бөйөк урыҫ телен мөҡәддәс әсә теле итеп сәскә атабыҙ, сөнки бөйөк партиябыҙҙың ошо быуат аҙағында уҡ яҡты Коммунизм төҙөп өлгөртөү Программаһында алтын хәрефтәр менән яҙылған: төрлө телле ваҡ халыҡтар – берәгәй телдә һөйләшеүсе монолит совет халҡына әүерелергә тейеш! Ошо яҡты киләсәгебеҙҙе алдан күрә белгеп хаҡлы һыҡтаған Юлай улы!»

Ошо Карами концепцияһын мөмкин тиклем уның «хосусан» теленә яҡынлаштырып, шиғри монолог тыуҙырҙы ла, **«Салауат үкенеүе»** тигән баш өҫтөнә автор исемен, һис тартынмай, «**Мәрүән Карами**, республиканың совет халыҡ шағиры» тип шаҡырайтты. «Автор»ҙың үҙе был көндәрҙә өйҙә түгел – Мәскәүҙә кәңәшмәлә йөрөүе бик мас килде. Конвертына тиклем бөтәһен яҙыу машинкаһынан үткәреп, аҫҡы өлөшөнә уның Мәскәү адресын күрһәтеп, аманатты баяғы Мотиҡ Камил улы етәкләгән гәзит редакцияһына почта аша юлландырҙы ла һөҙөмтәһен сәмләнеп көтә башланы; моғайын, һиҙеп ҡалырҙар ҙа сүп кәрзиненә ташларҙар тип тә уйланы. Әммә өсөнсө көнөндә үк монолог, ҡайһылай әҙерләп оҙатылһа шулай, бер хәрефенә лә теймәй, баҫманың беренсе битендә баҫылып сыҡты ла баш ҡаланы шаулатты. Хатта обком бюроһы ултырышында ҡәнәғәтлек ҡаҙанып, Мотиҡ Камил улына йылы һүҙ әйтелгән, ә башҡорт белинскийы Ғаяс Хөснигә «почетлы бурыс» йөкмәтелгән, тинеләр, -- «шиғриәт өлгөһө булырҙай» ваҡиға хаҡында фәһемле мәҡәлә өлгөртөргә.

Нәүбәттәге аҙна башында шул уҡ биттә Ғаяс Хөсни шедевры ла донъя күрҙе -- «Бөйөк шағир ижадының балҡышы – шиғриәтебеҙҙең яңы баҫҡысы» тигән татар һөлгөһө оҙонлоҡ монолог-мөғжизә. Ғалим-тәнҡитсенең асышы яҡшы һөҙөмтә бирҙе: матбуғатҡа юл яра алмаған шағирәнә йәш быуынды ышаныслы яңы ижад үрҙәренә ашҡындыртып, редакцияларға баяғы балҡыш үрнәгендәге әҫәрҙәр яуҙырылды, ҡайһы берҙәре ташҡа баҫылып сыҡты, күпселегенең үҙәк зыңы: «Мәрүән ағай әйтмешләй, эйелгән башты ҡылыс ҡырҡмай – ҡылыс күтәрмә, башҡорт!» шәкелендә ине.

Оҙаҡламай Мәрүән Карами Мәскәүҙән ҡайтып төшә һәм өҫтәлендә күбәләй өйөлгән ҡотлау хаттарын күреп, телефонды бер туҡтауһыҙ ыҙалауҙарынан башы ҡатып, редакцияға үҙе шылтырата: ни ғилләә, минең әҫәрҙе ҡайҙан алып баҫтығыҙ, баҫманы килтереп еткерегеҙ!

Баш редактор менән әҙәбиәт бүлеге араһында зыҡ-килеүҙәр ҡубынып, бүлек мөдире гәзитте тотоп Мәрүән фатирына сапты. Футбол ҡырылай бүлмәлә ырҙын табағылай яҙыу өҫтәле артында ултырып ҡаршылаған мәшһүр зат, инеүсене аяғөҫтө баҫтырып ҡуйып, донъя шаулатҡан монологты диҡҡәт менән уҡыны ла, бесән яҫмаһылай ҡалын ҡаштарын емереп:

-- Сәйәси асылдары, теле, айырым һүҙҙәре минеке, әммә стилистикаһы һәм рифмалары минеке түгел. Тимәк, монолог башҡа кешенеке! – тип күрәләтә

шаңҡытты. Теҙ быуындары ҡаҡшаған мөдир, һулышын көскә алып:

-- Һеҙҙең исем тора лаһа, ни эшләйек инде, ағай? – тип күҙҙәрен мөлдөрәткәс:

-- Мошенниктың ике аяғын тупһағыҙға баҫмаҫлыҡ ҡыҫҡартмаһағыҙ, мин һеҙҙе... – тип бармаҡ янап, аяҡ тибеп екерҙе. Уҡтай атылып сығып китеп, түкмәй-сәсмәй редакцияға ҡайтып еткергәс, ҡурҡышынан ҡойолоп төшкән Мотиҡ, ярҙам һорап, партия өлкә комитетына йүгерҙе, ҡала күләмендә ҙур ғауға ҡупты. Оло йортта уны ҡаты иҫкәртеп, артабан шауламаҫҡа, яман ҡуҙҙы усағында көлгә күмеп һыуытырға, һүндерергә бойороп ҡайтарҙылар. Бүлек мөдире, вазифаһынан түбәнәйтелеп, хаттар бүлегенә кесе хеҙмәткәр итеп күсерелде; Мәрүәндән башҡаларҙың шиғырҙарын гәзиттә баҫмай башланылар, Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың иһә бөтә редакцияларға ла юлы ябылды – мутлығын барыбер белделәр. Ауыҙы бешкән Ел-Дауыл быны һис ни менән тыя алмаҫлыҡ тәбиғи хәл итеп күрҙе, сөнки партияның ҡулы оҙонлоғон бик яҡшы белә ине, шуға күрә фәҡәт тейешле һөҙөмтәләр яһаны ла уйланды:

«Шағирмын, тиһең, ә үҙең партия һыҙған юлды ыштан төбө менән шымартыусы шанлы шағирҙар эҙенән эйәрәһең. Халҡым, тиһең, ә ни өсөн халҡың өнһөҙ һарыҡ хәленә ҡала барыуын белмәйһең. Кем ул халыҡ? Кем ул иҫәүән һарыҡ?»

Кем ул?!. Мәғәнәле һорау.

Хатта бер шаталаҡ ҡына ҡыҙға «йәнем» һүҙен әйтер алдынан да беҙ ул ҡыҙҙың ҡасан һәм ҡайҙа тыуғанын, башынан нимәләр кисергәнен, ни рәүешле йәшәгәнен белеп алырға өлгөрәбеҙ, шунан һуң ғына баяғы тылсымлы һүҙ менән өндәшәбеҙ. Шунһыҙ һинең өндәшеүең яһалма һәм ялған сыға, һине ҡыҙ кире ҡаға. Һинең барлыҡ хистәрең үле тыуа. «Халҡым» тип ауыҙ асырҙан элек кемдең ошо хаҡта уйлағаны бар?! Һәм ул халыҡтың шағирҙарының да ҡайһы берҙәре «халҡым» һүҙен — бөйөктәрҙән бөйөк һүҙҙе — булдыҡһыҙ егет йоратылай, яһалма һәм ялған пафос менән ҡысҡырып йөрөмәйме? Шиғри хистәре лә шуға күңелдән үле тыумаймы?.. Шуға күрә халыҡтың бәҫе китеп, Карамиҙар шауҡымы илдә яман шештәй йәйелмәйме?..

Был хаҡта ул электән һиҙемләй ине. Төндәр буйы керпек ҡаҡмай уйланды. Күңел офоғо кирелеп, зиһене шундай ауырттырғыс бер нөктәгә төртөлдө:

«Халҡымды белмәйем икән.

Юғары белемгә эйә булғанмын, ә халҡымды белмәйем икән.

Халҡымдың улы булып тыуғанмын, ә халҡымды белмәйем икән.

Тимәк, үҙемде белмәйем икән...

Үҙемде...»

Ә ул белем ҡайҙа? Тыуған халҡымдың тәрән-төпкөл таш быуаттарғаса һуҙылған тарихында!

Тарих фәне буйынса белем шүрлегенең «буш» урындарын тултырырға һыҙғанып, «ҡара алтын» ҡатламына тура тоҫҡалған бырауҙай, быуаттар тәрәнлегенә өҫтән аҫҡа төшөү ысулын һайланы ул. Бөйөк Октябрь революцияһынан һуңғы дәүер уға асыҡ. Термометр шкалаһындағы ноль һыҙығы

һымаҡ, Башҡортостан автономияһын яулап алырға булышлыҡ иткән Октябрҙе төп нөктә итеп алып, шуға таянып, «минус» һыҙыҡтары аша аҫҡараҡ — дәүерҙәрҙе үтәлəй барыу йәтештер. Тәүҙә дөйөм мәғлүмәт биргән хеҙмәттәрҙе «һөҙөргә», унан һуң төп сығанаҡтарға тотонорға. Төрлө фәндәрҙе тоташтырып, комплекслы өйрәнергә. Шулай һәрмәнеп бара-бара, кешелек донъяһы туплай алған мәғлүмәттәрҙең осо-башына сығырға. Был ябай һәм уңайлы алым, әлбиттә, тәүге аҙымдан уҡ түгел, ә ҡырҡыу эш барышында, төрлө «ауыҙ бешеү»ҙәр һөҙөмтәһендә яралып, ысул булып нығынды. Һөҙөмтәлә Ҡондоҙбаевтың үҙгәйле "аҡыл сүлмәге"ндә башҡаларҙыҡынан ныҡ оторо айырмалы үҙенә башҡа *концепция* яралды.

Бөгөнгө тарих фәнебеҙҙе кем эшләгән? Батша самодержавиеһының ергә мохтаж ҡомһоҙ колонизаторҙары эшләгән. Шул бинаны Ленин-Сталиндың бөйөк совет режимы үҙенсәлекле яраҡлаштырып нығытҡан. Башҡорттар өсөн әтмәләнгән ялған тарихтың үҙәк-концепцияһы – башҡорт табанын башҡорт еренән тайҙыртыу. Имеш, беҙҙең замандың ун беренсе быуатына тиклем Уралда төрки телле башҡорттоң еҫе-ҡоҫо ла булмаған, фәҡәт угрофин телләләр ҙә иран телләләр йәшәгән, ә төрки затлы башҡорт тоҡомо бында, далала ел тәгәрләткән ҡыу ҡамғаҡтай, тарих елдәре ыңғайына әллә ҡайҙан Алтай яҡтарынан күсеп килгән – баштан уҡ килмешәк булған... – Йәүҙәт Әғләм улы, күкрәгендә янған утҡа түҙә алмай, ишекле-түрле йөрөндө. – Тимәк, оҙаҡламай яңы тәғлимәт тыуыр, нығыныр: Урал аборигендары баштан уҡ урыҫ булған, урыҫ телендә һөйләшкән... бына эш ҡайҙа бара!.. – Туҡталып, бала башындай йоҙроғон өҫтәлгә һуҡты. – Етте! Башҡорт тарихын башҡорт яҙырға тейеш! Уңға-һулға тайпылмай, һатылмай торған башҡорт!

Йәй үтеп, сәфәрҙәренән ҡайтып төшкән ғаилә ағзалары ҡабат бер ҡорға тупланғанда, ҡатыны һәм ҡәйнәһенең ихлас ҡайғыһына, Морат улының оло ҡыуанысына күрә, Йәүҙәт, күҙҙәрен шашҡын фанатизм билдәләре елһетеп, һаҡал-мыйыҡтары өтөрәйгән килеш, мөйөштән-мөйөшкә үрмәксе ауҙары һуҙылған иркен фатирҙа баштан-аяҡ китаптарға күмелеп, һис кем белмәгән ниндәйҙер иҫке бәктәрҙең һәм батшаларҙың, пәйғәмбәрҙәрҙең һәм хоҙайҙарҙың исемдәрен үҙ алдына мыңғырлай-мыңғырлай, табаҡ-табаҡ ҡағыҙҙарҙы сыбарлап, «йортта сүп-сар, саң бәрәкәте арттырып ултыра» ине. Логикаға ярашлы фекер йөрөтһәк, быңдай хәлде күргән ҡәйнә менән ҡатын шунда уҡ һалҡын аҡылдан яҙырға, ҡабынып, туҙынып, сәстәрен йолҡоп илай-илай уға ябырылырға, ҡулынан һөйрәп торғоҙоп тәүҙә үҙен, артынан том-том китаптарын быраҡтырырға тейеш ине. Ир иһә уларҙың миһырбанһыҙлығы: өйҙә бер тин дә ҡалдырмай, күрәләтә уны аҫҡа үлтерергә һүҙ ҡуйышып китеүҙәре хаҡында дау һалырға хаҡлы ине. Әммә ғаилә тормошо шул яғы менән күркәм дә: ул күп ваҡыт логикаға һыймаусан. Ҡатыны менән ҡәйнәһе уның өтөк хәлен тын ғына бер быуа кисергәс, юл тейөнсөктәрен ҡулдарынан ысҡындырып, ысынлап та икеһе ике яҡтан «бахыр»ҙы ҡармап алдылар, ихлас иламһыҡланып сыулай-сыулай, шырт ҡыл баҫҡан биттәренән супылдатып үбергә, туҙғаҡ сәстәрен ыңғай һыйпап шымартырға керештеләр.

-- Уй бисараҡайым, Ҡондоҙҡайым, ниндәй хәлдәргә төшкән!

-- Үҙең ғәйепле быға, ҡыҙым, үҙең! Аҡса ҡалдырмағанһың.

-- Әй әттәгенәһе... онотоп киткәнмен дә барғанмын шул, әсәй. Ах был белекһеҙ башты!

-- Күр: һаҡалы биленә еткән, ҡоро һөлдәгә ҡалған.

— И йәнекәйем, бахырсығым, бер үк кисер инде мине, тинтәкте. Йәнем, кил, бер генә үпәс ит әле үҙемде!

Эҫе һулышын бөркөлдөртөп ванна һемәктәре шауланы, тәрән шкаф ҡарынынан ҡыштырлауыҡ крахмаллы күлдәк-ыштан, йәймәләр, таҫтамалдар сығарылды. Ҡәйнә-ҡарсыҡ туҙрау китап-ҡағыҙҙарҙы ипле генә йыйыштырып, кәштәгә теҙә башлаған арала, Гөлзифаһы уны, һөйөклө ирен, сабый балалай ҡултығынан эләктереп, ванна күленә сумырырға өлгөрҙө...

Һабын күбектәре аҫтынан, күлгә сумған крокодилдай, ике күҙе генә ҡарайып, хозурлыҡтан түшәмгә төкөрөп ятҡанында, ванна бүлмәһенең йоҡа ишеге үтәләй мөңгөрләү салынды ҡолағына:

-- Был әҙәмеңдән ул да тыумаҫ, ҡыҙ ҙа тыумаҫ, тыуһа ла тормаҫ! — тине ҡәйнә.

-- Улай тимәсе, әсәй. Күрмәйһеңме ни: шиғыр яҙып ултырып ни хәлгә төшкән!

-- Беләм мин шиғыр яҙыусы мәхлүҡтарҙы. Береһе лә, үрмәксе ауына уралып, сысҡан кимергән китаптар ҡосаҡлап ултырманы.

-- Тарихты өйрәнә ул, әсәй, Шекспир кеүек, әҙәмдәрҙе тетрәткес тарихи трагедиялар яҙырға.

-- Ташҡа үлсәйем Шекспирың үҙеңде генә тетрәндертеп ҡуймағайы!.. Сүлмәкте ярмаҫы элек, арт һабағын уҡытып алырға кәрәк.

-- Көтәйек әле, әсәй, көтәйек. Сабыр иткән — моратына еткән...

...Тарих менән тартышып йөрөп, ҡыш уртаһын уҙғарҙы, яңы йылды яңы юлға ышаныслы аяҡ баҫҡанлығын тойоп ҡаршыланы. Хәҙер инде был өлкәлә итәгенән тартһаң ҡолап китмәле бәндә түгел, ә юҫығын самалап, билде биштән быуып сыҡҡан түҙемле мосафир ине. Темаһы буйынса таба алған әҙәбиәтте кисеп үтеп, урындағы архивтарҙың туҙанын туйғансы йотоп, инде Ырымбур, Ҡазан, Мәскәү, Ленинград тарафтарына ҡуҙғалырға ынтылып торор ине. Бер тин табыш килтермәһә лә, ғәжәпкә ҡаршы, өйҙә уны йөҙ ҡыҙартмай ашаттылар-эсерҙеләр, ҡайҙа йөрөйһөң, ни ҡылаһың, тип тә ныҡып йөҙөтмәнеләр. Сәйер даръя ағышын үҙ ыңғайына ебәреп, өндәшмәй, ситтән генә күҙәттеләр. Көндәрҙән бер көндә тарих фәнендә типһә тимер өҙөрҙәй көс эйәһе итеп тойҙо үҙен, береһенән-береһе хәтәр идеялар, тоҫмаллауҙар менән ҡайнашты аңы.

Шул осорҙа Тарих һәм филология институты китапханаһы залындағы бер осрашыу артабанғы яҙмышты ҡырҡа хәл ҡылды. Үҙе ҡасандыр лекцияларын тыңлап уҡыған ғалим — электән билдәле филолог, хәҙер тарих фәндәре лә докторы Йәмил Ҡотлоев ине ул, ошо көнгәсә уны, ҡасандырғы студентын, күҙ уңынан ысҡындырмай, иҫендә тотҡан, ситтән генә шәйләп йөрөгән имеш.

Һүҙгә-һүҙ ялғанып, йәнен иҙгән мәсьәләләр өйөрмәһен ишереллдергән дә ташлаған икән Йәүҙәт. Ҡарт профессор ике ҡулы менән яңаҡтарына таянып, күҙен йомоп (уның шундай мәрәкә ғәҙәте бар), бүлдермәҫтән тыңланы.

-- Йә, хуш, инде нимә эшләргә самалайһың? — тине аҙаҡтан, ялбыр ҡаштары аҫтынан ҡарайылтыр күҙҙәрен төртөп ҡарап.

-- Ултырып яҙырға ваҡыт.

-- Дөрөҫ, бик ваҡыт, бик ваҡыт. Нимә әтмәләмәксеһең?

-- Нимә тип... Миңә, шағир кешегә, шиғыр ҡатыш моҡәлә һымағыраҡ бер нәмәлер инде. Дөрөҫөрәге, ялҡынлы публицистика. Бәлки, берәй ысын тарихсыны оло хеҙмәткә рухландырырмын.

-- Берәй тарихсыны, тиһең инде.. — Ҡотлоевтың сал ҡаштары һелкенде — күҙҙәрен сөкөрәйтеп көлдө. — Бармы һуң ул беҙҙә ысын тарихсы?! Нимә, әллә, һинеңсә, шағир кеше тарихсы була алмаймы? Бына мин дә тәүҙә шиғыр яҙа инем, филология фәндәре кандидаты булып киттем. Аҙаҡтан тарих буйынса ла докторлыҡ диссертацияһы яҡланым...

Йәүҙәт белә: тарих фәндәре докторы Йәмил Ҡотлоев та шулай үҙ заманында ике шиғри китаптың авторы булған. Бөгөн дә ул лекцияларында шиғри юлдар һәм ғибрәтле хикәйәттәр ҡыҫтырып ебәрмәйенсә түҙмәй. (Тарих һәм филология ғилми-тикшеренеү институтының директоры булғас та, вузда махсус курс уҡыуын дауам итте.)

-- Һеҙ бит ул... — тине Йәүҙәт Әғләм улы.

-- Бәй, һин кемдән кәм? Аяғың юҡмы, ҡулыңмы, әллә башың үҙеңдеке түгелме? Мин һиңә студент сағыңда уҡ әйтә килгәйнем дәһә: һинең был баш торғонлоҡта туҡтап ҡалған тарих ҡуласаһын матҡып әйләндерергә һәләтле. Тотон, ҡустым, һәм әйләндер! Тел белеме өлкәһендә маһирлығың — яҡшы тарихсы булыу өсөн тылсымлы асҡыс ҡына! Юҡҡамы ни академик Николай Иосифович Конрад, тарихсы — яҡшы филолог, ә филолог — яҡшы тарихсы булырға тейеш, тип туҡый, ә мин үҙем дә бер ҡулым менән — филологияла, икенсеһе менән тарихта соҡсонам! Хәҙер тарих өлкәһендәге асыштар тарихтың беҙ тапанып эҙләргә күнеккән «түтә юлы»нда түгел, ә төптәрәк — тарих фәненең тел белеме, фольклористика, археология, антропология һәм башҡа фәндәр менән тоташып-сатрашланыу нөктәһендә йәшенеп ята. Тарихсы, әгәр ул сүбәк сәйнәүсе көйөш һыйырына әйләнергә теләмәһә, кәм тигәндә ана шул дүрт-биш өлкәнең маһиры булырға тейеш. Ә һиндә бындай һәләт бар. Башы барҙың ашы бар, тигәндәр боронғолар.

-- Ҡулдан килерме икән?

-- Ысынлап тотонһаң, килер.

-- Ә нисек тотонорға?

-- Иң мөһиме — тотҡан ерҙән шартлатып һындырып барма. Хәтәр урындарҙы уратыбыраҡ үтергә өйрән. — Профессор элекке шәкертенең алдындағы тәртипһеҙ өйөлөп ятҡан ҡулъяҙманы аҡтарыштырып, күҙ йүгертеп сыҡты. — Билдәле нисек икәне — диссертация яҙырға, бына нәмә! Кандидатлыҡ яҡларға. Яңы миңә ысҡындырған ҡайһы бер тезистарың, йәшермәй әйтәм, докторлыҡҡа етерлек, докторлыҡҡа! Ҡайһы ысул һайланың?

Ҡондоҙбаевтың яҙыуға күп тексәйеүҙән елһенгән күҙҙәре остазына төбәлде:

-- Быны, нефтселәр теле менән ябайлаштырып әйткәндә, Йәмил

Ҡотлоевич, мин бит һеҙҙең яраткан горизонттан түгел, ә тәрән «девон ҡатламы»нан да ары үтергә йыйынам. Ә һеҙ һәм һеҙҙең ғилми мәктәбегеҙ, ғәфү итегеҙ, нефть девон ҡатламында тамамлана, тип раҫлай.

-- Бәрәкалла! Ул тиклем үк ҡыйыу нефтсе икәнһең, -- бырау башың тупарланмаһын, скважинаңдан фонтан атһын, тип теләргә генә ҡала.

-- Ай-һай, Йәмил Ҡотлоевич!

-- Ҡустым, ниңә шул тиклем кирегә көйләндең әле?

-- Һуғышырға тура килмәгәйе, тим...

-- Кем менән?

-- Һеҙҙең менән! — Йәүҙәт Әғләм улы ҡарттың күҙенә ҡыйыу ҡараны, сөнки уның был тәңгәлдә юғалтырҙай нәмәһе юҡ. Йән тирен сығарып яҙыласаҡ даулы диссертацияһы ла, ундағы бәхәсле һөҙөмтәләрҙе дәлилләйәсәк тиңһеҙ асыш — Асылыгүл тәүырын (тәүрун) яҙыуы һәм шуга бәйле парадоксаль һөҙөмтәләр ҙә алда ине. Фәнгә морон төрткән йәштәрҙең легендар лингвист Баҡишевтыҡы менән бер ҡатарҙан уның да исемен тәкрарлап тилереп йөрөүҙәре, ә күренекле әҙиптәр уны һәм Асылыгүл ҡомарткыһын йә яҡлап, йә хурлап мәҡәлә яҙыуҙары ла билдәһеҙ киләсәктә ине. Әммә Ҡондоҙбаев баяғы тура һүҙен әйтә алды.

-- Уғата яңылышаһың. Теләйһеңме, мин һиңә үҙем ғилми етәксе булам? Аспирантура бөт тә...

Быныһы Йәүҙәт Әғләм улын, ысынлап та, шаңҡытты. Маңлай тирен һыпырып, ҡартҡа ышанмайыңҡырап ҡараны:

-- Минең өсөн оло бәхет булыр ине был, әлбиттә. Тик...

-- Шағир, шағир! — Йәмил Ҡотлоев арҡаһынан һөйҙө уны. — Кеше йәндәренең инженерҙары, тиҙәр тағы үҙегеҙҙе... Уйлап ҡара: һиңә ҡаршы сығыу миңә ни бысағыма? Үҙ тамырыма үҙем балта сабырға мин ахмаҡмы? Әгәр мин девон ҡатламына етеп туҡталғанмын икән, әгәр һин дә шыр тиле түгел икән, ул саҡта һиңә беҙ һуҙған әҙер скважинаны дауам иттерәһе генә ҡала!

-- Әгәр мин үҙемдең скважинамды һуҙһам?

-- Ай-һай, бер үҙеңә күпте алаһың түгелме, дыуамал егет? — тине профессор. — Һуңынан иларға тура килмәгәйе. Ете үлсәп, бер киҫ, тигән боронғолар... Ғәфү ит, был ҡылығың менән миңә кемде хәтерләтәһең — беләһеңме?

-- Кемде? — тине Йәүҙәт, өтөрәйеп.

-- *Тилбер күкенде* — бына кемде!

-- ?!

-- Тыңла, улайһа. — Йәмил Ҡотлоев, университетта уҡытҡанында ауыр имтихан алдарынан консультация биргәндәй, ҡара-ҡаршы ултырып, йәш кешегә һабағын тирелдерҙе.

## ТИЛБЕР КҮКЕН ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ

Тилберҙәрҙән тилбер күкен йәшәгән, ти, дпңгеҙҙә. Бәләкәй генә булһа ла,

ул шундай шәп һәләттәргә ирешкән: теләһә, күҙ асып йомғансы һыу өҫтөнә ярып сығып, бер аршын юғары ырғылыр, теләһә, бер аршын һыу аҫтына сумыр икән. Бер ваҡыт ул балыҡ-кәрҙәштәренең алдына баҫҡан да былай тигән:

— Күк йөҙе көн кеүек асыҡ — үрҙән бөтәһе лә күренә. Ә бына аҫта ни ятҡаны ҡараңғы.

-- Эйе, ҡараңғы, — тип дөрөҫләгән балыҡтар.

-- Бына мин шунда сумып, диңгеҙ төбөнөң ҡомон алып сығырға әле ниәт.

-- Бик яҡшы, — тигәндәр ҡәрҙәштәре. — Тилбер йән тиһәләр ҙә, диңгеҙ төбөн баҡҡаныбыҙ юҡ ине, һиңә яҙғандыр, күрәһең. Тик быны өсөн ҡайһы берәүҙәрҙән кәңәш алырға кәрәк. Мәҫәлән, беҙҙән дә төптәрәк алабуға, унан аҫтараҡ ҡыҙылгүҙ, унан ары ҡыҫала йәшәй, тиҙәр...

-- Сөскөрҙөм мин уларға! — тигән, ти, был тилбер күкен. — Мин үҙем, күҙ асып йомғансы, бер аршынға зөмбөррррт-сумам!

-- Шулай ҙа белгән халайыҡтан һорашып белһәң, бер ҡасан да хур булмаҫһың, тигәндәр боронғолар.

-- Фи! Улар белгәнде мин киптереп элгән!

-- Ярай, — килешкән ҡәрҙәштәре. — Диңгеҙ төбө бик тәрән, тиҙәр, эсебеҙҙәге күшкәт-ҡыуыҡ аҫка ебәрмәй тарта ла тарта, тиҙәр, нисек сумырһың икән?

-- Батырмыс тағып.

-- Ҡайҙан алып?

-- Ул үҙе көн дә иртә менән супылдап һыуға төшә.

-- Ҡалҡыуыс, тип әйт, — тигән, ти, берәү, күпте күргәнгә һалышып. Ләкин тилбер күкен бармаҡ төртөп мәсхәрәләгән:

-- Ҡалҡыуыска ҡушарланып күккә ҡалҡҡан алйоттарҙы күргән бар. Ә мин иһә батырмысҡа баҫырауланып сумам.

-- Нисек баҫырауланаһың?

-- Иҫәүән шул балыҡсының ҡармаҡ ебендәге атырмысты тешләйем дә ҡушарланып баштүбән төшәм дә китәм — зөмбөррррт!

-- Ә ауыҙ асып, һулыш алырға тура килһә? Батырмысың ысҡынһа?

-- Белдем. Мин батырмысты түгел, ә батырмыс осондағы кәкре ҡойроғон ҡабам. Уның ауыҙҙан ысҡынмай торған ҡойроҡ икәнен беләм.

-- Ысҡынмаймы, әллә ысҡындырмаймы?.. Шул хаҡта нығлап уйлап ҡарасы әле. Ҡойроҡ тигәнең кәкре ҡармаҡ булып ҡуймағайы, беләһеңме?..

-- Һин белгәнде мин күптән киптереп элгән!

-- Ҡармаҡ үҙе — батырмыс менән, батырмыс — ҡалҡыуыс менән, ҡалҡыуыс — ҡыуал менән, ҡыуал — ҡарыш ҡул менән нығ тоташҡан, тигән хәбәр ҙә йөрөй... Шул турала кәңәшләшеп, баяғыса, донъя күргән халайыҡтарҙан һорашып белмәк кәрәк.

-- Фи! Беҙ үҙебеҙ донъя күргән, тулҡындарҙың аҫтын-өҫтөн иңләп-буйлап йөрөгән!

Шулай тигән дә, ти, тилбер күкен, батырмыс осондағы кәкре «ҡойроҡ»то һупылдата ҡабып, төпкә сумған. Берәү ҙә был һәләкәтле аҙымдан тыя алмаған. Бөтәһен дә тилбер күкендең ҡыйыулығы, яҡшы теләге арбаған. Тилбер күкен иһә

үҙен күкендәр донъяһындағы иң тилбер, иң зирәк, иң аҡыллы баһадир итеп тойған.

-- Ә аҙағы?

-- Хәйләкәр ҡармаҡ эйәһенең ҡыҙыу табаһына барып тоташа инде аҙағы...

Ҡондоҙбаев үпкәләгәндәй ине:

-- Мине, тилбер күкен, тимәксеһегеҙ?

-- Шулай булып ҡуйма, тим. — Ҡотлоев күптәнге шәкертенең яурынына ҡулын һалды. — Их!.. Халыҡ тарихы бит ул, хөрмәтле мырҙам, ысынлап та, иңләп сыҡҡыһыҙ диңгеҙ! Осһоҙ-ҡырыйһыҙ диңгеҙ! Океан! Беҙ әле уның алабуға йөҙөп йөрөмәле ала-ҡола ҡатламын ғына беләбеҙ. Шуға таянып, диңгеҙ төбө хаҡында фекер йөрөтәбеҙ. Ҡайһы берәүҙәр тилбер күкендән дә йылғыр: тулҡын һыртын ярып үтә лә океан иңләнем тип белә. Ә ҡыҫалалар ҡышлай торған ерҙе (урыҫтар әйтмешләй) асып һалыу —алдараҡ әле... Ул бәхет, бәлки, бына һинең кеүектәр өлөшөнә тейер, эйе. — Ҡартлас хискә бирелде. — Ә бар ине бит башҡорт тарих фәненең дә тилбер күкен тәрәнлеген генә ҡармап йөҙөрҙәй сағы... Революциянан һуң ине ул, Башҡортостанда Совет власының яңы урынлашҡан мәле. Владимир Ильич Лениндың туранан-тура хәстәрлегендә беҙҙе — Ҡыҙыл Армияның аңлы добровoлецтарын — фронттан саҡыртып алдылар, ҡылыс-маузерҙарыбыҙҙы һалдыртып, парта араһына фән ҡәлғәләрен яуларға ҡушып ҡуйҙылар. Беҙ, төрлә яҡтың төрлө милләт улдары, пролетариат дәүләте асҡан иң юғары мәктәп — ҡыҙыл профессураның тәүге курсанттары инек. Һуңынан һәр беребеҙ үҙ төбәктәренә таралып, беренсе ҡыҙыл профессорҙар ҙа булдыҡ. Беҙгә ғилем диңгеҙенең тәрәнлектәрен тәүге аршындан башлап үлсәргә тура килде. Ә һин девон ҡатланымынан да арыраҡ үтергә, тиһең.

-- Үтәсәкбеҙ, Йәмил Ҡотлоевич, үтәсәкбеҙ!

-- Тик ҡасан?

-- Кисекмәҫтән!

-- Их уҙаман, теге тилбер күкендәй, ҡыҙыу табаға тарып ҡуймаһаң ярар ине. Яңғыҙың тыбырсынаһың...

-- Яңғыҙ түгел, Йәмил Ҡотлоевич, Асҡар Ҡотлоев та миңә фекерҙәш.

-- Кем, минең улыммы?

-- Һеҙҙең улығыҙ, Йәмил Ҡотлоевич.

-- Һе!.. – Профессор, бошоноуҙан тулҡынланып, торҙо, иҙән буйынса йөрөндө. – Бына ҡайҙа бара бит ул донъялар... Яҡынырaҡ килеп, тегенең башынан һыйпаны. -- Әммә һиңә, мырҙам, шулай ҙа иң элек аспирантура тамамлау фарыз, юҡһа быраyыңдың осо тупраҡ ҡатламында уҡ тупарланыр. Бына шулай, Ҡондоҙбай, биғәйбә... – Ҡоро ғына хушлашты.

Тарих фәне буйынса аспирантура тамамларға йыйыныуын һөйләгәс, өйҙәгеләр аймылыш булып ҡалды. Бисә лә, ҡәйнә лә ауыҙҙарына һыу уртлағандай шымды.

-- Йә, был эшкә нисек ҡарайһығыҙ? — Ғәйепле йән тынлыҡты үҙе бүлде.

-- Кем булырға теләйем тинең әле, кейәү-балаҡай?

-- Аспирант.

-- *Ас-бирән-эт*?!. — Ҡәйнә-ҡарсыҡтың ике бөртөк һары ҡыл тырпайған

көлсәләй ләпшек ирендәре йәмрәйҙе. — Дөрөҫ аңланыммы, кейәү-балаҡай?

-- Әсәй! — тине Гөлзифа.

-- Ярай, «ас-бирән-эт» тә булмаһын, ти. Кеҫәләреңә нисә мең тәңкә көмөш көрәлеп керәсәк?

Көмөш тәңкәләрҙең көрәп алынмаясағы беленгәс, фатирҙы дөйөм һалҡын тынлыҡ биләне.

-- Белемең буйынса үҙең — филолог, үҙең... тарих фәнен көҫәйһең... — Тешегеп ҡатҡан яңағын саҡ ҡуҙғалтты Гөлзифаһы. Тауышы дерелдәп сыҡты: — Ә беҙ һине, берәй тарихи поэмаға йәки трагедияға тотонғандыр тигәйнек... Әҙәбиәттә тарихи теманың баҙары күтәрелә...

-- Юҡ-юҡ, башҡа һыйырлыҡ түгел! — тип сәркелдәне ҡәйнә-ҡарсыҡ. – Әгәр шағир икәнһең – Мәрүән Карами хорына ҡушылып йырла. Әгәр тарихсы булһаң – Ҡотлоевтар, Хәкимуллиндар еккән арбаға йәпләшеп шартлат башҡортондоң серек йүкә сыбыртҡыһын! – Ҡәйнә ҡарсыҡтың, Ҡазан яғы татарының, татыры өҫкә ҡалҡты...

-- Юҡ! Мин уларҙың хорына ла, ҡорона ла ҡушыла алмайым, сөнки улар – кәпәсле проституткалар! Уңлы-һуллы бирелеүсе рухи проституткалар!

-- Эй бала-бала, үҙ башыңа үрһәләнәһең, утыҙ етенсе йыл тағы әйләнеп килмәҫ, тимә.

-- Үҙебеҙ зарығып атаһыҙ үҫкән етмәгән, инде берҙән-бер малайыңды атаһыҙ ҡалдырырға итәһең! – Һулҡылданы Гөлзифа.

-- Етте, һеҙҙең менән башҡа һөйләшкем килмәй!

-- Беҙҙең менән килмәһәң, башҡа ерҙә йәһәт килерһең, КГБ тигән тимерситлек төйәктә... Заманында һин меҫкендән йөҙ тапҡырға ҡабилиәтлерәк Баҡишев тә бар ине...

Ҡондоҙбаев түҙмәне, елтерәп сығып китте...

## УН ДҮРТЕНСЕ СӘХИФӘ

Ошоға тиклемге «иң ҙур түрә»ләр «икмәк булһа – йыр ҙа була» мәҡәленсә экономиканы беренсе урынға ҡуйып эш иткәнлектән, милли мәҙәниәткә, бигерәк тә әҙәбиәткә иғтибар бирелмәне, яҙыусыларға ҡарата: «спасение утопающих – дело самих утопающих» ҡағиҙәһе хөкөм һөрҙө. «Ҡорос һепертке»ле *беренсе* Вилор Иҫәрғәп улы шул торғонлоҡто һепереп түгеүҙе, бында юлланыры алдынан Кремлдә бирелгән фатиха буйынса, үҙенең төп бурысы итеп ҡуйҙы. Сөнки йәшерен ҡабул ҡылыу бүлмәһендә бер төркөм әһелдәргә Михаил Андронович Сусликов иптәштең йәнгә үткәҙеп туҡыған ҡолаҡта сыңлап тора: «Кеше бит ул йәшәргә йәбешеп ятыусы йән эйәһе: ашағылары килһә эшләрҙәр – экономика үҙе көйләнмәле фактор, шуның өсөн хужалыҡ органдары бар. Беҙҙең иң мөһим бурыс – *идеология фронтында* еңеүҙәргә ирешеү – *сәйәси системабыҙ*, йәшәйешебеҙ ныҡлығының тәүшарты булып тора был; шуның өсөн *барыһынан да элек – идеология!*». Шуны иҫендә тотоп, республикаға килеп баш-күҙ алғас та, әйтелгән эште *үҙәк йүнәлеш* итеп юлға һалыр өсөн бөтә илле дүрт районындағы КПСС

райкомдарының идеология секретарҙарын йыйып алып ҙур кәңәшмә үткәрҙе – төп бурысты барыһының да ҡолағына тизыны; кәңәшмә материалдары республика матбуғатының махсус һандарында бөтә полосаларҙы биләп ташҡа баҫылып сыҡты. Мөҡәддәс эштең Михаил Андронович шәхсән үҙе кисәткән тәбиғи дауамы ла бар ине: «Яҙыусылар мөхитен даими большевистик сафлыҡта ҡыҫып тоторға – серек интеллигенция ҡалдыҡтарын идеология фронтынан *һеперепп түгергә*! Мыйыҡлы хужа бит заманында: «Яҙыусылар – кеше рухтарының инженерҙары» тип юҡҡа ғына әйтмәне һәм, идеология фронтында эштәр ҡыңғырлыҡҡа киткән һайын, ҡорос ҡулы беренсе сиратта әҙиптәрҙе тунаны. Беҙгә, партияның алтын кадрҙарына, яңы сәйәси шарттарҙа ла шуны онотмаҫҡа кәрәк!».

Шулай итеп, яңы обком секретарының иғтибар үҙәгендә беренсе урынды «осло ҡәләм эйәләре» биләне *лә* әҙәби мөхит үҙ ағышына ҡуйылған теге замандағынан күпкә хәтәрерәк яҡҡа үҙгәрҙе. Ҡәләм эйәләрен «яңы һепертке»нең ауыҙынан әленән-әле яңғыраған ҡанатлы һүҙҙәре бошондорҙо: «Яҙыусыларҙы, көршәкте ватмаһындар өсөн, ваҡыт-ваҡыт сыбыртҡылау хәйерле!». «Ҡағыҙ бысратыусы ғәләмә» (Вилор Иҫәрғәп улының тапҡыр һүҙҙәре) әүәлерәк шешә эргәһендә уҡмашҡанда: «Беренсе секретарҙан уңманыҡ, сөнки ул технократ -- әҙәбиәтте бар тип тә белмәй, яҙыусыларҙы һанламай», тип теләләшһәләр, хәҙерен: «Технократ-түрә әҙәбиәткә ҡаныҡты – ҡаныбыҙҙы эсә», тип зарлана башланылар.

Вилор Иҫәрғәп улының теңкәһенә иң ныҡ тейгәне – йәш яҙыусылар һәм ғалимдар араһында *тарихсанлыҡ* ҡеүәһенең бер туҡтауһыҙ көсәйә һәм яман инфекциялай тарала барыуы ине, *башҡорт тарихында* соҡсоноу хатта көндәлек модаға ингән. Һуңғы ун йыллыҡта «осло ҡәләмдәр» тураһында тейешле органдарға еткерелгән сигналдар папкаһын һоратып алып тикшереп ҡарағас, ысынлап та хәтәр хәл асыҡланды: элекке шикәйәттәрҙең күбеһе эсеп-иҫереп айныткысханаға эләгеү, ҡатын айырыу кеүек *әхләҡи боҙоҡлоҡҡа* бәйле булһа, хәҙергеһе яманыраҡ: *башҡорттоң боронғологон* һәм *боронғо тарихын* барлау, «һис нимәһе юҡ ярлы башҡортҡа бөтәһен дә Ленин партияһы, Бөйөк Октябрь революцияһы бирҙе» тигән аксиомаға шик белдереү, хатта кире ҡағыу өҫтөнлөк итә, яман шеш аҙып йәйелә; шуға күрә бөгөнгө иң зарур идеологик бурыс -- түҙеп торғоһоҙ шул йоғошлоно төбө-тамырынан ҡырҡып ташларға!

Йәшерен бюро ултырышы үткәрелеп, мәсьәлә бөтә үткерлегендә ҡырҡыу ҡуйылды. Вилор Иҫәрғәп улының хәрби фарман һымаҡ ҡыҫҡа телмәренең төп-асылы «яңғырауыҡ лозунгылар *һөйләүҙән* туҡтап, шәфҡәтһеҙ һәм дәһшәтле *эшкә* күсергә ваҡыт!» тигән оторо йөмләлә төйөрләнде. Йомғаҡлау өлөшөн, ҡулына яҙыу машинкаһында баҫтыртылған тексы ҡағыҙ алып, бюро ағзаларының танауҙары алдында болғай-болғай осланы:

-- Бына бер төркөм интернационалистик рух менән һуғарылған абруйлы татар һәм башҡорт зыялылары беҙгә нимә яҙа: «Республика мәктәптәрендә, ата-әсәләрҙең теләгенә ҡаршы тороп, балаларҙы көсләп башҡорт телендә уҡыталар». Түҙеп торғоһоҙ баш-баштаҡлыҡ, милли сикләнгәнлек был! Мәғариф бүлеге ни ҡарай? Тороп яуап бир!

-- Был ялған... – тип башлағайны мөдир, ярты ауыҙҙан өҙҙө:

-- Ултыр, беҙгә сафсата кәрәкмәй! Артабан уҡыйым: «Театрҙарыбыҙҙың сәхнәләренән, башҡорт милләтселеге ҡоторонған элекке замандағылай, серек сәйәси еҫ аңҡый – репертуарҙары иҫке заманды данлаусы тарихи темаларға ғына ҡоролған». Был ни хәл, культура бүлеге ник йоҡлай?

-- Төҙәтербеҙ, Вилор Исәрғәпович.

-- Ҡасан? Иртәгә үк керешергә! Кем ул Ҡаһым түрә, ниңә ул ҡабартыла? Ғөмүмән, ниңә «Наполеон баҫҡынсыларына ҡаршы Ватан һуғышында үҙҙәре теләп фронтҡа киткән утыҙ башҡорт полкы ҡатнашты, Парижды ла алдылар» тип юҡты бар итеп яҙырға?

-- Ысынлап та шулай бит... – ти башлағайны культура бүлеге, совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами ырғып торҙо:

-- Ҡустым, әҙәпһеҙлек был! Кеше ышанмаҫлыҡ һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә!

-- Эйе, тап шулай, сәйәси яҡтан тупаҫ хата был! Әйтәйек, ниңә ул утыҙ полк урынына «бер-ике йөҙ башҡорт» тип кенә сикләнмәҫкә? Парижды алыуҙары ла төптө кәрәкмәй! Быныһы бер. Ә икенсеһе, филармония йырсыларының репертуарҙары бына ниндәй: «Сибай» йырында -- «кантон» булыу хыял ителһә, «Ҡолой кантон»да: «Яуыз кантондарҙы ҡуя икән Рәсәй тигән яуыз батшалыҡ», -- тип ауыҙ тултырып йырлай-йырлай изге Рәсәй-әсәйебеҙҙе яманлайҙар. «Тәфтиләү» тигән йырға ла ныҡ иғтибар итегеҙ: унда бит ғөмүмән контрлыҡ ярылып ята – изге Рәсәй-әсәйебеҙгә тоғролоҡло хеҙмәт хөкөм ителә!.. Тағы ла ҡабатлайым: был ни хәл? Заман тойғоһо ҡайҙа?!

Ҡаушап ҡалған культура бүлеге мөдире хәлде аңлатырға итеп ҡараны:

-- Вилор Исәрғәпович, былар бит бик боронғо классик йырҙар...

-- Булһа һуң?

-- «Кантон»ды – райком тип, «яуыз»ды йыуаш тип йырларғамы инде?

-- Ниңә йырламаҫҡа? Йырларға! Заманса булыр, исмаһам.

-- «Тәфтиләү»ҙе төҙәтеү бөтөнләй мөмкин түгел...

-- Мөмкин булмаһа, йырлатмаҫҡа, репертуарҙан алып ташларға! Әлеге документта тағы тарих фәнендәге хәтәр тайпылыштар – башҡорт халҡының тамырын нигеҙһеҙ тәрәнәйтергә тырышыу, социалистик интернационализм ҡанундарын боҙоп, уны башҡа халыҡтарҙан өҫтөн ҡуйырға маташыу тураһында әйтелә. Хаҡ һүҙҙәр! Кем ул Йәүҙәт Ҡондоҙбаев, ниңә сара күрелмәй?! Тағы: бер драматург, урамда эсеп-иҫереп: «Беҙҙең республика кетәгендә Мәскәүҙекенән ике сәғәт элек таң атһа ла, беҙҙең әтәс Мәскәү әтәсе ҡысҡырғас ҡына һөрән һала, ә тауыҡтар Мәскәү тауыҡтары ҡыҫҡылдағас ҡына ҡыҫҡылдай» -- тип антисоветский анекдот һөйләп йөрөгән. Шулмы орден йөрөтөүсе шағирығыҙ?!

-- Орденын ул йөрөтмәй – эсеп-иҫереп, автомобиль тәгәрмәсе аҫтына ташлаған, -- тине Мәрүән Карами.

-- Был ни хәл, ниңә яуапҡа тарттырманығыҙ?

-- Партия йыйылышына ҡуйғайныҡ: «Уның изге символын мин йөрәгем түрендә йөрөтәм, ә үҙен, киҫкен синфи бәрелештәрҙә кер ҡундыртмаҫ өсөн, шкафымда ҡәҙерләп һаҡлайым», тип яуаплағас, ниндәй сара күрергә лә белмәнек...

-- Иптәш Бикләмешев, был турынан-туры һеҙгә ҡағыла!

«Ҡорос һепертке»нең еле тейеп өлгөрмәгән бюро ағзалары еңел һуланы – ҡарар ҡабул ҡылыу өлөшөнә еттеләр. Бына төп тезистары:

«1. Әҙәбиәттәге (бигерәк тә драматургиялағы) төп етешһеҙлек -- үткәндәрҙә соҡсоноу. Театр һәм филармония репертуарҙарын заманса тәртипкә килтерергә.

2. Әҙиптәрҙең (бигерәк тә йәш шағирҙарҙың) ижадында КПСС-тың етәкселек роленең тейешле сағылдырылмауын төҙәтергә.

3. Йәш ғалимдар араһында таралған зарарлы тенденцияны – башҡорт тарихын һәм телен боронғолаштырырға көсәнеүҙе бөтөрөргә.

Кисектергеһеҙ саралар:

а) республика театрҙарының репертуарҙарын зыянлы әҫәрҙәрҙән таҙартыу;

б) «Заман һәм тарих» темаһына доклад әҙерләп, йәш әҙиптәрҙең, ғалимдарҙың дөйөм ҡала йыйылышын үткәрергә;

в) мәктәптәрҙә әсә теле уҡытыуҙың торошон тикшереп, Коммунистар партияһының коммунизм төҙөү Программаһында ҡаралғанға ярашлы дөрөҫ ҡарар ҡабул ҡылыуҙы әҙерләргә.

Сараларҙы бойомға ашырыу идеология секретарына йөкмәтелә».

Еңел һулап таралыштылар.

Димустан Шиһап улы Бикләмешевкә уттай эш миҙгеле башланды: беренсенән, идеологик яҫылыҡта йәш быуын зыялыларҙың махсус йыйылышын үткәрергә..Әлбиттә, йәштәрҙе унда ылыҡтырыу һәм дөйөм йүнәлеш биреү комсомолға -- ВЛКСМ өлкә комитетына йөкмәтелде, ә бүрәнәнең ауыр башы үҙҙәрендә ҡалды. «Эт – эткә, эт -- ҡойроҡҡа» тигәндәй, яуаплы сараны еренә еткереп башҡарыу бурысы тәүҙә -- пропаганда бүлеге мөдире Аралйәнов иптәшкә, ә унан инструкторҙар Арғынбаев менән Мусин иптәштәргә «төшөрөлдө». Кисектерелгеһеҙ эш булараҡ, Димустан культура бүлеге мөдирен төйҙө:

-- Репертуар мәсьәләһенә тотон, ундағы тарихи темалар исемлеген тиҙ арала төҙөп өҫтәлгә һал.

-- Аңлашылды, Димустан Шиһапович. Әммә йыр текстары...

-- Нимәһе аңлашылмай? «Кантон»ды -- «вафат» тип, ә тегеһен «Рәсәй ҙә генә тигән батшалыҡ» тип йырлаһындар, «яуыз»ын төшөрөп ҡалдырып.

-- Аныһын булдырырбыҙ, әммә элекке мәшһүр йырсыларыбыҙҙың яҙмаларын...

-- Шау-шоу баҫылып онотолғансы тотоп тор, һуңынан ебәрерһең. «Тәфтиләү» менән дә шулай... Ә теге «орден йөрөтөүсе» драматургка кисектергеҙ саралар күрергә -- эскән көйө ниңә урам ҡыҙыра? Милиция нимә ҡарай?

-- Үҙегеҙ беләһегеҙ: шатлығынан башлағайны, һаман туҡтала алмай -- яҙыусыларыбыҙ араһында беренсе башлап орден йөрөтөүсе бит...

-- Әйткәндәй, ниңә «йөрөтөүсе»? Орден кавалеры типме, уҙаманы типме, йәки башҡаса әйтергә булмаймы?

-- Үҙегеҙ беләһегеҙ: башҡаса ярамай – орденоносец – орден йөрөтөүсе,

тип кенә яҙырға Мәскәүҙән күрһәтмә килде. Шуға күрә «государство» тигән һүҙҙе лә «дәүләт»кә әйләндерә алманыҡ...

-- Беләм. Мәгәр орден йөрөтөүсе урамда әтәстәр һәм тауыҡтар тураһында һөйләнеп йөрөмәһен – тышаулағыҙ. Ҡатынына ҡушығыҙ.

Ҡатыны опера һәм балет театрында билет һатыусы булып эшләй һәм мәҙәниәтле зат ине – бер һүҙҙән үк аңланы ла тейешле саралар күрҙе: көн дә иртән эшкә киткәнендә ирен пижамала ғына ҡалдырып, урамға сығырҙай кейем-һалымын күршеләргә йәшерер, аҡса мәсьәләһен дә үҙенсә хәл иткәйне. Әммә былдай тышау ҙа ҡотҡарманы: уҙаманыбыҙ алған гонорарҙарының бер өлөшөн өйҙәге һаҡлыҡ кассаһына – ҡатынының ҡараңғы бүлмәлә элеүле, кейелмәгән кейемдәренең кеҫәләренә һалғанлыҡтан, аҡсаға мохтаж түгел, сөнки бөтә тишек-тошоҡто тентегән хәләл ефете үҙ кеҫәләрен барлауҙы башына килтереп тә ҡарамай ине. Уҙаманыбыҙ ҙа урамға сығырға уйламай: еңгәйҙең оҙон кер ебенә ҡыштырҙаҡ ҡағыҙҙы бәйләп, икенсе ҡат балконынан ихаталағы таныш малайҙарға төшөрә лә, артып ҡалғанына туңдырма алып ашарға ҡушып, бау осона тейешле шешәне килтертә... Орден алған йәйҙә эш шуға барып етте: ағайыбыҙ, -- тимер юлға яҡын торалар ине, -- пижамала килеш кенә ҡултыҡ аҫтына миндек ҡыҫтырып вокзал ҡаршыһындағы мунсаға китә лә, яҡшы сабынып сыҡҡас, шифаһын «зәм-зәм»ләп арттырырға вокзал ресторанына кереп ултыра; килеп туҡтаған поездан шулай уҡ пижамалағы һәм ағайыбыҙ һымаҡ уҡ «булып алған» өс хәрби офицер килеп инеп уның эргәһенә төпләнә лә дүртәүләшеп күңелле мәжлес ҡора. Поезд ҡуҙғалып китере алдынан дүртәүләшеп гөрләй-гөрләй вагонға менәләр ҙә купелә дауам иттерәләр; мунсасыбыҙ шул рәүешле Мәскәүҙең Ҡазан вокзалында пәйҙә булыуын һиҙмәй ҙә ҡала – артабанғы мажаралары, тәүгеләренә ялғанып, Мәскәү ҡала фольклорына керә, бер әҙип шуның сюжетына юмористик әҫәр яҙа, кино ла төшөрәләр...

Димустан, драматург мәсьәләһен йомғаҡлап, алдағы йыйылыш тураһында дөйөм күрһәтмә бирҙе:

-- Үткән хаталарыбыҙҙан һабаҡ алырға, әҙәм ялҡытҡыс яланғас тәнҡит сәйнәүҙән арынырға! Юғиһә, күҙ алдыбыҙҙа бит: башҡа ҡәләмдәштәренән һисбер ние менән айырылып тормаған шағирҙы «Әсәм теле йәшәһен!» тигән бер шиғыры өсөн милләтселектә ғәйепләп пыр-туҙҙырғайныҡ, ҡаш төҙәтеү урынына күҙ сығарҙыҡ: азаматыбыҙ республика күләмендә билдәле булды, йәштәрҙең табыныу тәреһенә -- кумирына әйләнде... Һәм һалҡын дөйөмлөктән – партия, хөкүмәт исеменән тәнҡитләү, лозунгылар сөйөү штампынан ҡасырға – доклад уны һөйләүсенең ауыҙынан уҡ үле тыуып сыҡмаһын. Халыҡҡа көндәлек тормошондағы һөйләшеү кеүек үк яҡын, аңлайышлы телдә өндәшеү зарур. Иң яҡшыһы, йәштәр иғтибарын яулаған тәғәйен әҫәрҙе, уның авторын иғтибар үҙәгенә ҡуйып, уйынлы-көлкөлө, тигәндәй тикшерергә лә система өсөн зарарлы һәм сетерекле раҫлауҙарын көләмәс объектына әйләндерергә. Әйҙә, көлһөндәр! Аңлашылдымы, ниндәй һорауҙар бар?

-- Бөтәһе лә аңлашылды, Димустан Шиһапович. – Аралйәнов билдәле репринт-брошюраны түрәһе алдына һалды. – Ҡулдан-ҡулға йөрөй ошо нәмә.

Димустан «нәмә»нең биттәрен аҫҡыланы:

-- Һе! Ҡондоҙбаев! Беләм.

-- Һөйләшеүҙе шуның тирәһендә ойошторһаҡ... быға нисек ҡарайһығыҙ?

-- Хуп, мәйле. Тик докладсыны белеп һайлағыҙ: Хәкимуллин йә Хөсни кеүек күптәрҙе еләтеп бөтөргән рәсми әһел булмаһын. Ябайыраҡ, шул уҡ ваҡытта йәштәрҙең иғтибар үҙәгендә торғаныраҡ тарихсыны һайлағыҙ. Йыйылышта һөйләшеү формаль булмаһын.

Инструктор Мусин иптәш сәғәтендә үк елтерәп, институтта Хәкимуллин менән кәңәшләшеп, лайыҡлы докладсыны табып килтерҙе –заманында «тәртәне тибеп һындырырҙай ҡылыҡтары» менән йәмәғәттең тел-теш араһына кергән ябай лаборант, бер үк ваҡытта электәнге тарих фәндәре кандидаты Хажиәхмәт Хужахмәт улы Алпаров. Имеш-мимеш хәбәрҙәр йөрөһә лә, тышҡы ҡиәфәте менән ул Димустанға ыңғай тәьҫир яһаны: ҡалын ҡара ҡаштары өҫтөнән батмусланып ҡалҡынған текә маңлай, төпкә батҡан уйсан күҙҙәр, ике осо сыбыртҡылай аҫка һәленеп төшкән оҙон ҡара мыйыҡ. Ишетеп белеүенсә, ғалимлығы менән ҡатарҙан шиғырҙар яҙа һәм Арыҫлан имзаһы (псевдонимы) менән баҫтыра, шуға күрә, Хажиәхмәт исемле тағы ла бер коллегаһы булғанлыҡтанмы, әллә түрәләр йөҙөнә дөрөҫлөктө бәреп әйтеүсән ҡыйыулығы өсөнме, тәүге осорҙарҙа уны Арыҫлан Хажиәхмәт тип йөрөткәндәр икән. Шул оторо арыҫланлығы менән институт етәкселегенең тура итеп һыҙған юлынан тайпылып, тере теңкәһенә тейеп йөҙәткән. Димустан яҡшы хәтерләй: тап ошо азамат арҡаһында институтта ғауға ҡупты, шауҡымы Оло йортҡа уҡ ашты. Баҡһаң, Арыҫлан Хажиәхмәт, етәксеһе Хәкимуллиндың фән даирәһендә нығынып өлгөргән *автохтонлыҡ һәм мигрантлыҡ* (йәғни Уралда төп халыҡ -- автохтон булып ирандар һәм угрофиндар йәшәгән, ә төрки-башҡорттар XI быуаттан күпкә һуң ғына мигрант булып Алтайҙан күсеп килгән) тәғлимәтенә ҡаршы сығып, башҡорттарҙың боронғо тарихын *зороастризм* дине яралыу осорона – беҙҙең эраға тиклем XVII быуатҡа тоташтырған һәм, әлбиттә, «Бөрйәндәрҙең әҙәби мираҫы» тигән был хеҙмәте тарих секторында бөтә коллегалары тарафынан ҡаты тәнҡитләнеп тар-мар ҡылынған. Күпселек фекерен танымаусы Арыҫлан Хажиәхмәт, «баш-баштаҡланып», Оло йортҡа мөрәжәғәт ҡылғас, Димустан, белеме буйынса үҙе лә тарихсы булараҡ ҡыҙыҡһынып, хеҙмәтте аҡтарғылаштырып ҡараны ла, ошоғаса хатта урыҫ ғалимдарында ла осрамаған һәм дөйөм ҡалыпҡа һыймаған факттарға, раҫлауҙарға тарығас, авторҙың үҙен саҡыртып алып: «Был донъяға иртәрәк тыуғанһың, мырҙам. Халыҡ мәҡәлен беләһең бит: кеше ышанмаҫлыҡ һүҙҙе дөрөҫ булһа ла һөйләмә»; Мәрүән Карами ағайыңдың телмәрҙәрендә лә ошо алтын аҡылдың йыш ҡабатланыуы юҡҡа түгелдер, тип иптәштәрсә өгөтләп ҡараһа ла, күнмәне: «Иҫкереп бөткән ул нәмәне «Дөрөҫлөктө кеше ышанмаһа ла һөйлә» тип үҙгәртергә ваҡыт!» тип арыҫландай атлығып сығып китте. Ҡулъяҙманы институтҡа ҡайтарып, рәсми баһа биреүҙәрен һорағас, түбәндәге яуап алынды::

***О рукописи Х.Х. Алпарова «Литературное наследие бурзян» (102 стр. машинописи).***

*В своей рукописи Х.Х. Алпаров ставит основной задачей показать, что*

*древние башкиры племени бурзян имели непосредственное отношение к древнейшим государствам Азии — Парфии и Бактрии, были творцами культурных ценностей этих стран, авторами (или соавторами) эпических памятников Авесты и Ригведы. Слово «парфяне» он отождествляет с башкирским родоплеменным названием «бэрйен», наименования «Бактрия — Бактра» этимологизирует, исходя из современного башкирского языка: Бэк-тора. В рукописи приводятся весьма произвольные, особенно в части терминов и наименований, башкирские переводы фрагментов названных памятников. Мысль автора — эти памятники надо считать одновременно образцами древнейшего литературного наследия башкир-бурзян. Х.Х. Алпаров утверждает, что им открыт на берегу озера Асылыкуль древнейший храм башкир-зороастрийцев с алтарем для жертвоприношений и проторуническая надпись на камне с поэтическим текстом (знаки и текст не приводятся), относящиеся к VII — V вв. до н.э. Этим перекидывается мост между Приуральем и далеким Средним Востоком в античности и очерчивается громадная территория обитания древних бурзян. В рукописи все это изложено без какой-либо системы, в высшей степени эмоционально, проследить нить мыслей и рассуждений автора не всегда представляется возможным.*

*Обращение автора к истории народа, к литературно-фольклорному наследию и проблемам реконструкции фактов праязыка следовало бы только приветствовать и оказывать ему всяческую поддержку. Х.Х. Алпаров в своей рукописи обнаруживает определенную осведомленность в научной литературе по этнографии, истории и филологии, есть у него и отдельные мысли, достойные поддержки, например, о необходимости комплексного изучения древности, развития исследований по исторической географии, попытка связать мотивы башкирских кубаиров с эпическими сказаниями народов мира и др.*

*Однако одобрить работу или рекомендовать к изданию в целом, не представляется возможным ввиду чрезмерной тенденциозности, ненаучного подхода к интерпретации исторических явлений и произвольного обращения с лингвистическими, фольклорно-литературными и историческими фактами.*

*Связывая бурзян, тамъянцев и усерган с древней Бактрией и Парфией, Х.Х. Алпаров ссылается на работу З.И. Хакимуллина, на его высказывания об обитании названных племен в VII — VIII вв. в Приаралье. Но история Бактрии и Парфии — это совсем другая эпоха и другие территории. Автор, таким образом, связывает события и явления, удаленные и хронологически (более тысячелетия), и территориально, объединяет явления и факты, между которыми нет никакой лингвистической и исторической связи (Бэрйен и Фриан и т.д.), основываясь лишь на внешнем созвучии. Таких произвольных сопоставлений автор делает чуть ли ни на каждой странице, принимая их за обоснование своих положений.*

*О «знаках» на камнях близ оз. Асылыкуль специалисты ИИЯЛ БФАН СССР и Башпединститута свое заключение уже сделали. Никаких проторунических надписей там не обнаружено и их не может быть по той простой причине, что это рыхлые песчаные камни, и тысячелетиями на них начертания сохраниться, естественно, не могли. Правда, Х.Х. Алпаров именует эти глыбы «монолитными валунами», а мелкие круглые углубления, которые автор называет древними «символами», вышедшими из озера «коней-звезд», образованы под воздействием корней*

*мхов.*

*Для обоснования своих вольных сопоставлений языковых явлений Х.Х. Алпаров ссылается на «ностратическую» теорию В.И. Иллича-Свитыча и выступает против традиционных методов сравнительно-исторического языкознания, против генеологической классификации языков. Между тем теория Свитыча не отрицает генетического родства тюркских, индоевропейских и др. языков, а лишь отражает более древние связи между т.н. «ностратическими» языками. Ничего общего с этой теорией приводимые сравнения, этимологические упражнения автора не имеют. В этих сопоставлениях и выкладках никакие фонетические закономерности соответствия звуков между разными языками и внутри одного языка не принимаются во внимание. Ни один лингвист-тюрколог или даже ностратист не отважился еще считать словами одного корня ут -- ат, ата; ыу — әс, әсә; атәс — тоз, әс — соль. Работа изобилует такими примерами. При таком уровне реконструкциии праформ просто невозможно спорить с автором, поскольку он не соблюдает элементарных закономерностей звуковых переходов в разных языках, все возводит к одному праязыку. Вот один лишь поразительный пример произвольного обращения со словом. На стр. 20 автор совершенно очевидное русское слово начало расшифровывает следующим образом: начало — (у)н ач ало — ун өч алы; өч — өс, алы — алды. Затем развивает целую теорию о цифрах 12 и 13. Такие «этюды» имеются почти на каждой странице.*

*Для полного разбора ошибочных в своей основе сопоставлений и этимологий Х.Х. Алпарова потребовалось бы написать работу более объемную, чем представленная рукопись. Но в этом, видимо, нет необходимости, посколку человеку, имеющему филологическое образование, очевидна полнейшая произвольность этих упражнений.*

*Сведения из различных исторических источников перемешаны здесь с лингвистическими «этюдами» и фольклорными сюжетами.*

*Безусловно, некоторые мотивы башкирских эпических сказаний перекликаются с эпическими сюжетами народов Востока. Это вполне закономерно и об этом имеются серьезные публикации. Каждый эпос — явление многослойное. Между ними прослеживаются сходства типологического порядка, мотивы и образы, проникшие через опосредствующие звенья, есть, разумеется, и генетические сходства. Для выявления этих элементов необходим тщательный всесторонний анализ с учетом длительного развития культуры каждого народа, со строгим соблюдением принципа историзма.*

*Рукопись «Литературное наследие бурзян» не может претендовать на роль научного исследования: в ней не соблюдены элементарные требования современной компаративистики, исторической этнографии и фольклористики. Отвергать устоявшиеся методы научного познания можно лишь на основе полного овладения ими.*

*Зам. Директора ИИЯЛ БФАН СССР, д.ф.н. — (подпись).*

*Зав. Сектором этнографии ИИЯЛ БФАН СССР, к.и.н. — (подпись).*

*Ст.н.с. сектора литературы и фольклора ИИЯЛ БФАН СССР, к.ф.н. — (подпись).*

Даулы-шаулы авторға ошо абруйлы фәнни фекер кисекмәҫтән еткерелде һәм азамат аҙғыны Оло йортто башҡаса борсоманы. Әммә тиҙҙән ул эскегә

һабышып, эштәре артта ҡалғас, институттан һөрөргә лә иткәндәр, тик үткер һүҙле туғандары, атап әйткәндә, билдәле яҙыусы Мотал Шаһибәрәков, тотанаҡлауында вазифаһынан түбәнәйтеү – ябай лаборант итеп ҡуйыу менән сикләнелеп, ғаиләһендә бала артынан бала ыраужан, өҫтәүенә, кеше фатирында өйҙәш булып тороуҙан ҡаҡшаған һәм эш урынын юғалтыуҙан ҡурҡҡан элекке Арыҫлан фиғылы ҡырҡа үҙгәреп, түрәләренең ауыҙына ғына ҡарап әмер көтөп тороусы майланған ҡайышҡа әүерелгәс, арыҫланлығы онотолоп, инде *Ҡуян Хажиәхмәт* тип йөрөтә башлағандар...

Оло йортҡа ла сигнал килеп еткәйне: *айнытҡысхананың йыш ҡунағы ул.* Димустан шунан һуң Хәкимуллинға шылтыратты:

-- Алпаровты димләгәнһең. Ниңә башҡа берәү түгел?

-- Хәҙерге йәштәрҙе тилерткән *так называемый тарихты* унан да шәберәк һуҡалаған кеше юҡ – силәгенә күрә ҡапҡасы.

-- Ышаныслымы, ысҡынып китмәҫме?

-- Уныһына иманым камил: ул Ҡуяныбыҙ йылына тик ике тапҡыр ысҡына ла аҙна-ун көн ятып ала. Ә хәҙерен ысҡыныу мөҙҙәте түгел, өҫтәүенә, майлаған ҡайыштай йомшартып әҙерләнек.

«Әҙерләү»гә һуңғы нөктә Пропаганда бүлегендә ҡуйылды һәм Алпаров үҙенә ҙур яуаплы эш ышанып тапшырылыуынан ҡанатланып ҡайтып китте.

Йыйылыш башлыса йәштәр өсөн тип тәғәйенләнһә лә, мәсьәлә әҙәбиәткә ҡағылғанлыҡтан, әлбиттә, яҙыусыларҙың береһе лә ҡалманы – үҙәк Ленин урамындағы Политмәғариф йортоноң кесе залы лыҡама-тулды. Башланыш көтөп урынлашҡан тантаналы тынлыҡта совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами микрофондан көр тауышын яңғыратып йыйынды асып ебәрҙе лә бисмиллаға ҡыҫҡаса телмәр тотто:

-- Ҡәҙерле иптәштәр, заманабыҙҙың зыялы йәш ҡоро! Беҙ бөгөн бында *идеология фронтының* көн үҙәгендә торған бик яуаплы мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшергә, фекер алышырға килдек. Шуға күрә рәсми булмағанса йәнле һөйләшәйек, доклад барышында ара-тирә репликалар ҙа мөмкин. Башлап шуны әйтәһем килә: мине һәр саҡта ла күңел төпкөлөнән сыҡҡан ике тойғо етәкләне, — совет интернационализмы һәм советтарса милли үҙаң. Бында мин милли үҙаңды милли ирәбелектең һәм милли тыйнаҡлыҡтың юғары сағылышы тип аңланым һәм аңлайым. Ҡайһы саҡта ана шул тыйнаҡлыҡты юғалтыуҙы төҫмөрләһәм, үкенесле булып китә. Был, мәҫәлән, ҡайһы бер әҙәбиәтсе һәм тарихсыларҙың ата-бабаларҙың культура тарихындағы сигенә сыҡҡыһыҙ мәртәбәләрен дәғүәләүҙә, дөйөм төрки, хатта дөйөм кешелек ҡомарҡыларынан бары тик үҙенекен, бары тик «беҙҙең» һыныҡты ғына һындырырға маташыуында сағылыш таба.

Ҡайһы берҙә теге йәки был йән көйҙөргөс факттарҙы осратырға тура килә... Милли республикаларҙан, милли тыйнаҡлыҡ һәм фәнни объективлыҡ тойғоһон юғалтҡан бәғзе бер тарихсылар йәки әҙәбиәтселәр тарихты күпертеп күрһәтергә, үткәндәрҙе ал да гөл итеп тасуирларға тотона, боронғо ҡомарҡыларҙан үҙенә өлөш ҡайырырға һәм шунда үҙ мөһөрөн баҫырға тырыша; йәнәһе, улар башҡалар көнләшһен өсөн бик боронғо культураға ҡыҫылышы барлығын иҫбатламаҡсы. **Үҙегеҙгә билдәле бер милли әҙип нәк уның ата-**

**олатайҙарының тәгәрмәсте уйлап табыуын тылҡый.** Бындай саҡта инде башҡа берәүгә тәгәрмәс майлау өсөн дегет ҡайнатҡандарын иҫбатларға тотоноу бер ни тормай; имеш, тегеләр тәгәрмәс менән булашҡанда уныҡылар дегетте күпкә элегерәк яһаған... -- Трибунсының телмәр дәрәжәһен залдың бер өлөшө берәгәйле шарҡылдап көлөү менән күтәргәйне, икенсе яҡтан көтөлмәгән тупаҫ оторолоҡ яңғыраны: «Маңҡорттар! Үҙегеҙҙән көләһегеҙ!». Йыйылышты алып барыусы еҙҡыңғырау ҡыңғылдатып тәртип урынлаштырғас, Карами, оторолоҡ сығанағы булған тарафҡа бөҙрә сәсле маңлайы менән һөҙә ҡарап, дауамланы: -- Үткәндәргә ошондай, әгәр әйтергә рөхсәт икән, «киң» ҡараш — беҙҙең социалистик тормошобоҙ нормаларына бер нисек тә тап килмәгән ***милли сикләнгәнлек*** билдәһе ул, эйе! – Совет халыҡ шағирының бәгерен ярып сыҡҡан *сәйәси билдәләмә* өр-яңы ине, телмәрсе уны, заманалар үҙгәреү сәбәпле ҡулланыуҙан ҡала барған *милләтселек* терминының эквиваленты итеп, Вилор Иҫәрғәповичтың үҙе менән уйлашып килешкәйне. Залдағы халыҡ был яңылыҡтың айышына төшөнөргә баш ватып тынған арала телмәр тағы һәүетемсә ағылды: -- Дөрөҫ, *башҡорт милләтселеге* тигән яман шеште йәғни *рак сирен* беҙ республикабыҙҙың тере тәненән бөйөк ленинизм скальпеле ярҙамында ҡырҡып алып ташланыҡ, ләкин тынысланырға иртә әле, сөнки үрмәксе ауына оҡшаш рак сиренең ҡырсылып бөтмәгән остоҡтары – *метастазалары* ҡалды һәм ул *милли сикләнгәнлек* тип атала. Метастазалар ҡабат ҙурайып үҫергә лә яуыз *милләтселеккә* әйләнеүе ихтимал, был иһә беҙҙең республикаға ғына түгел, ә күп милләтле бөтә республикаларҙың берҙәм союзына -- бер-береһенә туғандарса тығыҙ бәйлелектә гүзәлдәрҙән-гүзәл бербөтөн келәм һәм күп ҡыллы моңло думбра хасил иткән социалистик державабыҙға ҡурҡыныс тыуҙыра, уны эстән ҡаҡшатып тарҡатыу менән янай. Әле әйтелгәнсә милли сикләнгән ҡайһы бер ҡәләм эйәһе шул гүзәл дөйөм келәмде һәм думбраны үҙһенмәй – уға келәмдән мотлаҡ милли *үҙ ебен* һәм *үҙ ҡылын* һурып алырға кәрәк. Ә беҙ, милләтселектән һәм милли сикләнгәнлектән азат интернационалистар, дөйөм келәмгә үҙ ебебеҙҙе, думбраға үҙ ҡылыбыҙҙы керетеп күп милләтле социалистик хозурлыҡ кисереп ҡыуанабыҙ, социалистик берҙәмлектә сәскә атабыҙ!

Зал төпкөлөнән һирпелгән тағы ла бер оторолоҡ ҡыҙыл япмалы президиум өҫтәленәсә иреште:

-- Һеҙҙең үҙегеҙ шул дөйөм келәмгә кереткән еп менән ҡыл серек һүренте түгелме?! – Бер-ике йән эйәһе хихылдағайны, йыйылышты алып барыусы ырғып тороп ҡыңғырауға көс төшөрҙө:

-- Шым! Кем ул унда ҡорсаңғы тайҙай сапсына, ҡулығыҙҙы күтәрегеҙ!

Ҡул күтәреүсе булманы.

-- Бына бит: әҙәмсә тороп яуап бирергә лә егетлегегеҙ етмәй. Ҡәҙерле иптәштәр, беҙ ат аҙбарында түгел, тәртип һәм тыныслыҡ һаҡлауығыҙҙы һорайым. «Арыҡ арҡалы Арҡайым һәм ярыҡ ярҡалы тәғлимәт тураһында» тигән темаға доклад һөйләр өсөн билдәле шағир, тарих фәндәре кандидаты Арыҫлан... әй юҡ! – хөрмәтле Хажиәхмәт Хужахмәт улы Алпаровҡа һүҙ бирелә.

Доклад ике-өс йәш ғалим берлегендә һәм профессор Хәкимуллиндың үткер күҙәтеүендә Оло йорттан ҡушылғанса еренә еткерелеп, коллектив емеш

итеп өлгөртөлгәйне, Ҡуян Хажиәхмәткә шуны яҡшылап башҡарыу бурысы йөкмәтелгәйне. Бер-нисә көн көҙгө ҡаршыһында ҡиәфәтен һәм дикцияһын көйләп, һуңғы сәғәттә тамағына сей йомортҡа эсеп килмеш докладсының трибунанан зыңғыр ауазы яңғыраны:

-- Әле генә докладтың темаһы әйтелгәс, кемдәрҙер ҡысҡырып көлдө. Эйе, көлкө был – түшәмдән алып фантастик тәғлимәттәр, уйҙырмалар уйлап сығарырға яратҡан филармония көлкөсөһө һәм тарихтың төлкөсөһө аспирант Йәүҙәт Әғләм улы Ҡондоҙбаевтың сейле-бешеле ижад емешенән көлөү. Һәм бик урынлы көлөү. Уғата нығыраҡ, кинәнеберәк көләр өсөн, уның баяғы Арҡайымға бәйле ғилми сафсатаһына күҙ һалайыҡ. Хөрмәтле аудиторияны өҙлөкһөҙ эс ҡатырып көлөүгә дусар ҡылмаҫ өсөн, айырым тезистарына ғына ҡағылам.

Ҡондоҙбаев әҙәм балаһы аңламаҫлыҡ «асыш»тар яһарға ярата, шуның менән кешене ышандырырға, шан-шөһрәт ҡаҙанырға, һыуҙан ҡоро сығырға теләйҙер, моғайын. Ләкин ҡарап-ҡарайыҡ: булдыра алырмы икән?

Бына ул башҡорттоң ниндәйҙер мифик *тәүтелен, тәүдинен* һәм башҡаларын шаҡ-ҡатырғыс асып, башҡорттарҙы Уралдан боронғо Грецияғаса Аполлон-хоҙайға табыныу динен илтеүселәр, алай ғына ла түгел, хатта Афина (аныҡса Өфө-инә) ҡалаһын да нигеҙләүселәр итеп шапырына; ул ғына ла етмәһә, Ағиҙел менән Ҡариҙел аралығындағы Өфөбөҙҙө лә «Афинаға тиклем үк ҡоролған башҡорт ҡалаһы ул» тип һалдыра. Уның логикаһы буйынса барһаҡ, Башҡортостан менән Марс планетаһын бәйләйһе генә ҡалды...

-- Меҫкен-меҫкен, шул тиклем дә артта һөйрәлерһең икән! – Алғы теҙемдә ултырған Ҡондоҙбаев, тороп, тыныс ҡына бүлдерҙе. – Президиумдан ғәфү үтенеп һорайым: йыйылышты асҡан иптәш барыбыҙға ла «һәр төрлө яһалмалылыҡтарҙы ситкә ташлап, үҙебеҙсә һин дә мин тип өндәшәйек» тип мөрәжәғәт иткәйне, ризамын. Һин, докладсы иптәш, ҡайһы донъяла йәшәйһең? Аңлайым: ҡурҡаҡ ҡуяндай ҡыуаҡ төбөндә боҫоп ятып, -- залда хихылданылар, -- эйе, Ҡуянлығыңа барып, минең генә түгел, хатта билдәле урыҫ ғалимдарының, донъя ғалимдарының бөтә донъяға мәғлүм хеҙмәттәрен уҡымағанһың...

-- Ребуссылар менән мауығырға ваҡытым юҡ! Алары ла нәҡ һинең ише уйлай – бер һап та бер ҡалып!

-- Рәхмәт. Бөтә ғәләм минең ише уйлаға с, Инш-Алла, Ер шары ла таймаҫ үҙ күсәренән.

-- Таймаҫ, ләкин һинең кеүектәрҙе быраҡтырыр. Дауам итәйек, иптәштәр. Эйе, донъяла төрлө хәлдәр була. Әҙәм ышанырлығы ла, ышанмаҫлығы ла. Әҙәм ышанмаҫлыҡты дөрөҫ булһа ла һөйләмә, тип иҫкәртә бөйөк Мәрүән Карами ағайыбыҙ... Ә Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың «Тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым тураһында» тигән яҙмаларындағы күп фекерҙәр уның авторының аҡыл сүлмәгендә берәй шөрөбө бушанманымы, йәки бөтөнләй етешмәйме икән, тигән аяныслы шик тыуҙыра.

Күҙәтеүҙе, Ҡондоҙбаевтың үҙ яҙмаларындағы һымаҡ, ниндәйҙер төш күреп һаташҡан сағында ул үҙе уйлап тапҡан Имир Дәү Хоҙай исеменән башлайыҡ. Был исем ҡайҙан килеп сыҡҡан һәм нимәгә кәрәк булған һуң? Ҡондоҙбаев аңлатыуынса, хөнәсә (гермафродит, ырғыҙ) тәүбабабыҙ икән ул.

Ҡайһындай ҙа ҡолаҡҡа ятмаған бөйөк асыш, Ҡондоҙбаев асышы!

-- Минең асыш түгел, уны донъяның иң абруйлы ғалимдары быуат буйынса яҙа! – тип бүлдерҙе тәнҡитләнеүсе.

-- Шулайҙыр: ул хаҡта һин генә беләһеңдер ҙә бөтә прогрессив ғилми йәмәғәтселек артта ҡалғандыр...

-- Был мөҙҙәттә һинең артта ҡалғанлығың күренә!

-- Етте, Ҡондоҙбаев, үҙегеҙҙе тәртипле тотоғоҙ! – тип киҫәтте алып барыусы. Алпаров, стакандан һыу эсеп, тамаҡ ҡырҙы:

-- Бына шулай, йәмәғәт. Икенсе төрлө, кеше аңларлыҡ итеп әйткәндә, Имир тигәне үҙе -- ир, үҙе ҡыҙ, имеш. Бына шуны иҫбат итеү өсөн урыҫса «мир» һүҙе алдына «и» өнөн өҫтәй. Бер өн өҫтәү иһә йүгәнһеҙ фантазияға киң юл аса ла инде. Хәҙер бер ижекле һүҙ икегә әйләндерелде. Һәм ҡуйылған һаташыулы маҡсатҡа ирешеү өсөн, фантазияны теләгәнсә борғослап егергә мөмкин. Беренсе ижек -- «им». Ул инде «әм, имәй, имсәк», йәғни «әсә» мәғәнәһен ала имеш. Икенсе ижек «ир»ҙең мәғәнәһе былай ҙа аңлашыла. Ошо туҙға яҙмағанды иҫбатлау өсөн автор, ир ҡаҡҡанды мир ҡаҡкан (ҡаға), тигән мәҡәлде килтерә. Йәнәһе, ирҙән йәберләнеү -- Имир тәүбабанан йәберләнеү ул. Бына һиңә иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ! Ә уның халыҡ араһында йөрөгән мәғәнәһе -- ир ҡаҡҡан ҡатынды мир (ил) ҡаға, түгелме ни?

Залдан Аҫҡар Ҡотлоевтың ярһыу тауышы яңғыраны:

-- Алпаров, ниңә сафсата һатаһың? Имир һәм мир – бер үк төшөнсә икәнлеген бик тә асыҡлай алмаһаң, нисек тә ваҡыт табып, бөтә донъяға билдәле голланд ғалимы Ф.Б.Я. Кейперҙың «Труды по ведийской мифологии» тигән хеҙмәтен булһа ла уҡып ҡарағыҙ – Ҡондоҙбаев менән икеһенең ҡараштары хайран тап килә.

-- Ышанам: уныҡы менән һеҙҙеке лә тап килгәнен беләбеҙ! Һеҙ ул сафсата һатыусы! Инде йәнә Ҡондоҙбаевҡа әйләнеп ҡайтҡанда, ул, баяғы мәкәлде үҙенсә ҡулланырға тырышып, үҙ фекеренә үҙе ҡаршы килә ләбаһа! Йәғни ҙә Ир -- Имирҙың бер яртыһы икән, ул үҙ-үҙен ҡаға, йәберләй булып сыға бит. Үҙ-үҙен ҡаҡҡан, уҙ-үҙен йәберләгән әҙәм балаһы хаҡында ишеткән юҡ ине әле. Хәйер, укыған бар икән: Гоголдең «Ревизор» әҫәрендәге бер персонаж үҙ-үҙен йәберләй, үҙ-үҙен туҡмай...

-- Рәхмәт, Алпаров, һеҙгә ҡалһа, Гоголде генә булһа ла уҡыйһығыҙ икән әле!

-- Башөҫтө, тәҡсир! Тырнаҡтар эсенә алып әйтелгән был бөйөк ғалим уйлап тапҡан йәнә лә бер һүҙбәйләнеш: *ер кендеге.* Икеһе лә ҡәҙимге аңлайышлы һүҙҙәр. Мәғәнәләре лә ап-асыҡ. Ҡондоҙбаев иһә уны бөтөнләй икенсе яҡҡа, аҡыл һиҙеме теүәл кешенең уйына ла инеп сыҡмаҫлыҡ яҡҡа бора. Баҡһаң, ул ир ҡандағы — Ир хан тауы икән, йәғни Имир тәүбабабыҙҙың ҡанын (нәҫел-нәсәбтәрен) үрсетеүсе тауҙай ҡалҡыу ағзаһы — Тора-тау (боронғосаһы Тороҡ-тау) үҙе булып, уның тирәһендә йәғни Башҡортостанда көн күреүсе халыҡтың да боронғо бер исеме *тороҡ – төрөк,* имеш, боронғо төркиҙәр шул Тороҡ-хоҙайға – фаллосҡа табынған имеш!.. Быға нисек ышанырға?

Йәүҙәт Ҡондоҙбаев ултырған урынынан ҡалҡынды:

-- Исем-шәрифе тырнаҡтар эсенә алынмаған бөйөк ғалим, шуға ла ышанмайһыңмы?

-- Ышанмайым һәм кире ҡағам!

-- 922 йылда Ибн Фаҙлан хәҙрәт осраҡкан башҡорттарҙың тап шул *аҡатаҡҡа* – йәғни фаллосҡа табыныуына, аҡатаҡтың ағастан киртеп яһалған һынын хоҙай рәүешендә муйынға тағып йөрөтөүенә нисек ҡарайһың? Әллә Ибн Фаҙланға ла ышанмайһыңмы?

Докладсы, ыҡ-мыҡ итеп, ҡаушабыраҡ ҡалғайны, залдағы иң алғы буйҙа тубыҡтарына үҙе дәүмәлле һары портфелен һалып, артҡы ялтас түбәһе балҡып мөкиббән китеп тыңлап ултырған «йәш ғалим» (институттың «башҡорт белинскийы» Ғаяс Хөсни етәкләгән филология секторының кесе ғилми хеҙмәткәре) Рәшит Төхфәт улы Алмаҡаев ярҙамға ашыҡты:

-- Ибн Фаҙландың юл яҙмалары тип аталған нәмәкәйе – бер ниндәй ҙә тарихи документ түгел, ә ябай *әҙәби фәстереү* ул, тип тап шул хаҡта үҙебеҙҙең коллега – тарих фәндәре докторы Владимир Александрович Иванов яҙҙы лабаһа! – Портфеленән ус яҫыһындай китап алып, аяғүрә баҫып, арттағыларға күрһәтте. -- Бына ул: 1982 йылда үҙебеҙҙең Өфөлә сыҡкан, «У подножия Рифейских гор» тип атала.

-- Мөстән[39], ниңә ҡыуанаһың?!

-- Ҡондоҙбаев, ултырығыҙ! – Ҡыңғырау ҡыңғылданы. – Хажиәхмәт Хужахмәтович, дауам итегеҙ фәһемле телмәрегеҙҙе.

-- Һем... Тырнаҡтар эсенә алып әйтелгән бөйөк ғалимдың был ғәжәп асышы иҫ киткес – эс киткес! Тора-тау — ир кешенең енес ағзаһы икән дәбаһа! Ҡалай ғүмер-баҡый бер ни белмәй йәшәгәнбеҙ. Башҡорт халҡының легендалары менән бәйле Тора-тауҙы шундай мәсхәрәле хәлгә ҡалдыр әле, -- аҡылға һыймаҫлыҡ! Был халыҡ хәтеренә, халыҡ тарихына, еңелсә итеп әйткәндә лә, ҡара яғыуҙан башҡа бер ни түгел! Йәнә бер яңы һүҙ — Аҡатаҡ, шуны автор әле генә телгә алды. Был инде яңғырашы менән ир кешенең енес ағзаһының бөгөнгө исеменә яҡын. «Шул түңәрәк уратмалы Аҡатаҡ ҡорамын (храмын) Аҡ-урат тип тә| әйткәндәр», ти хәсрәт-тикшереүсе. Быныһы ниңә кәрок булды икән тағы? Баҡһаң, унан бик күп мәғәнә сығарып була имеш. Мәҫәлән, «бороңғо Кесе Азия ҡалалары уртаһындағы үҙәк бина Әс-Аҡ-урат -- зиккурат». Аҡ-урат һүҙе рус теленә *огород, город* булып ингән, имеш. Ҡондоҙбаев уйлап таҡан мәғәнәнән сығып эш итһәк, ул һүҙҙәр һаман шул ир кешенең енес ағзаһына ҡайтып ҡала, имеш. Ошо ғына ла етмәһә, йәнәһе аҡатаҡлы Арҡайм ҡоролмаһын боронғо Платон тасуирлаған Атлантида ҡоролмаһының копияһы итеп һанай, ышанаһығыҙмы шуға?

Алғы буйҙа ултырыусылар ышанмауҙарын белдереп шаулаштылар, ләкин быны күмәк ҡул сабыу күмде – күмәкселек ғәйепләргә йыйынмай ине, буғай.

-- Йәнә: ҡотоҡ, ҡоҙоҡ һүҙҙәре лә Аҡатаҡ терминының ҡыҫҡартылышынан хасил һүҙ варианттары икән. Ә асылына килгәндә, Аҡатаҡ — әлеге лә баяғы шул фаллос имеш. «Ҡаҙыҡ» һүҙе лә шул терминдан ғибәрәттер, ти автор. «Аҡатаҡ,

---

[39] Мөстән – яман сир (сибирская язва).

тигәне йәнә *лә* үҙебеҙҙең хәҙерге *ҡатай* биләмәһе (племяһы)», имеш. Ҡатайҙарҙы яңы асыш менән ҡотлар инем дә бит, яңағымдың иҫән ҡалмауынан ҡурҡам.

Үҫәргәндәрҙең «ҡараҡатай» тигән ҡанаты көньяҡтағы Талас йылғаһы буйында төйәкләнеп, уның *Ҡатаҡ* атамаһы хәҙерге күршебеҙ *ҡаҙаҡ* халҡына ла күсә»... Бына был иҫ киткес асыш: *ҡаҙаҡ* шул уҡ ир кешенең енес ағзаһы икән дә! Бында үтеп барышлай ғына ҡаҙаҡ милләтенең намыҫы ике тапҡыр мыҫҡыл ителә. Беренсеһе — йәнәһе, ул башҡорттарҙың ҡара-ҡатай ҡанаты тип һөрән һалыу булһа, икенсеһе —уларҙың милләт исемен әлеге шул ир кешенең енес ағзаһына ҡайтарып ҡалдырыу...

-- Ниңә, насармы ни шул? Бөтәбеҙ ҙә шунан сыҡҡанбыҙ түгелме ни? – тигәйне бер азамат, йәмәғәт гөр-килеп көлдө.

-- Икенсе бер милләтте шунан да нығыраҡ мыҫҡыл итеү, мәсхәрәләү, хурлау мөмкин түгелдер ул. Ҡаҙаҡ милләте бик ғорур, шул уҡ ваҡытта бик ғәрсел, үҙ милләте өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер торған халыҡ. Ҡондоҙбаевҡа улар алдында бер кешене түгел, ә мөхтәрәм тоташ бер милләтте мыҫҡыл итеүе, мәсхәрәләүе өсөн яуап бирергә тура килмәгәйе.

-- Юҡҡа хафаланмағыҙ: ҡаҙаҡ ғалимдары ла, халҡы ла һеҙгә ҡарағанда күп тапҡыр аҡыллыраҡ!

-- Тыңлағыҙ: «Көпсәк, тәгәрмәс көпсәге (ҡапсығы)... Мосолман һәм йәһүдтәрҙә ир баланы бабаға ултыртмыш сөннәтләп ҡырҡа торған көп — аҡатаҡ-фаллосты ураткан тире көпсәк — ҡапсыҡ икән ул». Һәм тағы: «Санскрит» тип йөрөтөлгән телдә иһә ул Ос-тупа (Ос-түбә, осло түбә) тип, шулай уҡ ҡәрҙәш монголдарҙа ла тап үҙебеҙсә Усубурган (осо — бөргән, йәғни фаллостың осон бөргән ҡапсыҡ) тип атала бит». Йәнә: «Аҡатаҡ — фаллосты ҡарындағы бала һымаҡ итеп үҙ эсендә тотҡан өсөн дә ул әсә — әпсәк тип исемләнгән, ошо көнгәсә бит әсәне әпсә (бисә) тип тә әйтеү бар». Былар бөтәһе *лә* Ҡондоҙбаев яҙмаларынан һүҙмә-һүҙ алынды. Беҙгә шундай —«ҙур» «ғилми» асыш менән әсәләрҙе «ҡотларға» ғына ҡала.

Хәҙер тәгәрмәсҡаланың (Арҡайымдың) үҙенә күҙ һалайыҡ. Ҡондоҙбаев үҙ алдына шундай һорау ҡуя: ҡала ҡоролошона тәгәрмәс өлгө булғанмы, әллә киреһенсәме? Ул был һорауға үҙе үк яуап бирә: «Тимәк, тәгәрмәсҡалабыҙ тәүҙә, ә арба тәгәрмәсебеҙ һуңынан ҡоролған».

Быны аңлайышлыраҡ телгә күсерһәк, тәгәрмөс деталдәренең исемдәре -- үҙҙәре донъяла булмаҫ элек барлыҡҡа килгән икән. Йәғни тәүҙә исемдәр уйлап табылған, бары тик шунан һуң ғына матдиләштерелгән. Әлегә тиклем тәүҙә ниндәй ҙә булһа материал йәки яңы нәмә барлыҡҡа килтерелһә генә уға һуңынан исем эҙләп табылған. Ҡондоҙбаевса алғанда, халыҡ әйтмешләй, иләнмәгән, һуғылмаған, бына һиңә бер ыштан була торғандыр.

-- Алпаров, Ҡондоҙбаевса түгел бит был – ниңә күрәләтә фәстерәһегеҙ?

-- Икенсенән, тәгәрмәсҡаланың йәшенә күҙ һалайыҡ. Ҡондоҙбаев тигән бөйөк астрономмы, математикмы иҫәпләп сығарыуынса, ул бынан 3500 йыл элек (атаклы Троя ҡалаһынан 2000 йыл элек!) гөрләп торған икән дә тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым. Ниндәй иҫ киткес теүәллек!

-- Комплекслы тикшереү һөҙөмтәһе был, һиңә ул ысул билдәлеме?

-- Миңә күп нәмәләр билдәле, Ҡондоҙбаев. Йәнә бер нәмә иҫте китәрә: бынан 3500 йыл элек кешелек донъяһында тәгәрмәс булғанмы?

-- Шуның өсөн дә тәүҙә -- тәгәрмәсҡала, ә һуңынан тәгәрмәс яһалған, тимен дә!

-- Техника тарихсыларының иҫбатлауынса, беҙҙең бөгөнго төшөнсәләге тәгәрмәс булмаған. Египет пирамидаларын, мәҫәлән, Ҡондоҙбаев иҫке алған Хеопс пирамидаһын төҙөгәндә, ауыр таштарҙы ташыу, күсереү өсөн түңәрәк бүрәнәләр ҡулланылған. Аҙағыраҡ, йыуан бүрәнәләрҙән тәгәрмәс һымаҡ түңәрәк киҫәк ҡырҡып алыр булғандар. Ә көпсәк, туғын, үрәсә һәм башҡа деталдәр менән тәгәрмәс эшләү байтаҡ һүңынан башланған.

-- Бәй, мин ни тинем һуң?

-- Шулай булғас, һәр бер түңәрәкләп эшләнгән нәмәне бөгөнгө тәгәрмәс итеп күҙ алдына килтереү ысынбарлыҡҡа тап килмәй торғандыр ул.

Ҡондоҙбаев яҙмаларында бер фекерҙең икенсеһенә бөтөнләй ҡаршы килеү осраҡтары ла байтаҡ. Бына бер миҫал: «Олпат тарих фәнендәге ошоғаса һинд-европа телдәрендә һөйләшеүселәр өҫтөнлөк ҡылып... ә беҙҙең кеүек төрки телле халыҡтар иһә тарихы ла, мәҙәниәттәре лә... йүнле бер нимәһе лә булмаған... тип ҡаралды». Икенсе бер урындан цитата алайыҡ: «тәгәрмәсҡалабыҙҙың иң ҙур ошо биләмәһе (ҡара халыҡ) — баяғы төп термин менән Орон-Уран (Иран) биләмәһе аталған (хәҙерге Уран башҡорттары). Бына ниңә һинд-европа (иран) телдәре менән Урал-Алтай (төрки) телдәре икән бер төптән, бер туған».

-- Хөрмәтле докладсы, трибунаға сығырҙан алда уны-быны уҡыштырһаң ни булды? Тәүтел теорияһын беләһеңме?

-- Белмәйем, белергә лә теләмәйем!

-- Белмәгәс, ниңә ауыҙыңды күпертеп буҡ сәйнәйһең?

Ҡыңғырау ҡыңғырланы:

-- Ҡондоҙбаев, артабан да цензураһыҙ һүҙҙәр ысҡындырһағыҙ, залдан олағыуығыҙҙы һораясаҡбыҙ!

-- Бәй, минең өсөн йыйылғанһығыҙ түгелме ни? Мин олаҡҡас, ни эшләрһегеҙ?

-- Етер һеҙгә, ултырығыҙ. Доклад дауам ителә.

-- Ишеттегеҙме? Бында, моғайын, аңлатма биреп тороу кәрәкмәй торғандыр.

-- Кәрәкмәй, аңлатмаһы Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың һеҙ хурлаған хеҙмәтендә. Ентеклерәк уҡырға кәрәк, иптәш! – тип киҫәтте Аҫкар Ҡотлоев.

-- Студент иптәш, докладтан һуң сығып аҡыл һатырһығыҙ. Ультра башҡорт Ҡондоҙбаевтың үҙ халҡы теле менән, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә лә, хулигандарса эш итеүенә иғтибар итмәй булмай. Ул үҙенә кәрәкле мәғәнәне сығарыу өсөн телде вата-емерә, тел закондарын бөтөнләй һанға һуҡмай. Быны иҫбатлау өсөн дәлилдәр яҙмаларҙың башынан алып аҙағынаса тулып ята. Шуға күрә артыҡ миҫалдар килтереүҙе кәрәкмәй тип иҫәпләйем.

Авторҙың юҡты бар итеп иҫбатлай торған һәләте ифрат ҙур, көслө икәнен иҫтә тотоп, икеләнеп тә ҡуйҙым. Бәлки, ул ер йөҙө -- Күктә, ә Күк ерҙә тип иҫбат

иткәс, булмаҫ тимә... Тейешле рәсми органдарыбыҙҙан һорайым: йәш быуынға бындай иҫерткес әфиүн өрөүселәргә ҡасан сик ҡуйылыр?!

Алпаров трибунанан китеү менән фекер алышыу башланып, һимеҙ һары портфелен һөйрәп сәхнәгә Рәшит Алмаҡаев күтәрелде:

-- Күрҙегеҙме, иптәштәр? Ҡондоҙбаевты әйтәм: ауыҙлығын сәйнәп өҙгән яман тайҙай яһиллана. Ә бит тәнҡит дөрөҫ булды, ундайҙарҙың бәйгеһен ҡыҫҡартыр ваҡыт! Афарин, Хажиәхмәт Алпаров! Сығырынан сыҡҡан Йәүҙәт Ҡондоҙбаевҡа тураһын әйтерлек, ниһәйәт, бер кеше табылды!

Хәтеремдә, был трактаты тыумаҫы борон уҡ әле сикләнмәгән аҡыл эйәһе секторыбыҙға ун-ун бишләп һүҙҙең мәғәнәһен «аңлатҡан» мәҡәлә килтергәйне. Унда, мәҫәлән, урыҫ телендәге «магазин» -- француздың «моҡасин» һүҙенән, французға иһә башҡорттоң «моҡосай»ынан килеп кергән, тип, ә бөтәбеҙгә билдәле «универмаг» (универсальный магазин) — уны бар маг йәки ун бармаҡ тигән һүҙҙән килеп сыҡҡан, тип «иҫбат итеп» маташа ине. Был мөғжизәне беҙ ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ та, эсебеҙ ҡатҡансы көлөп, сүплеккә ташланыҡ.

Ҡондоҙбаевтың тәҡдим иткән бындай «асыштары» бер генә булманы. Ул Асылыкүлдең исемен дә, әллә ииндәй телдәрҙә соҡсоноп, әллә нindәй нәмәләр килтереп сығарҙы, шундай «бөйөк асыш»ты, үкенескә ҡаршы, «Ағиҙел» журналы баҫты. 1986 йылғы башҡортса йыртма календарга «Буҙа» тигән мәҡәлә яҙып, ваза һүҙен башҡорттоң шул эсемлеге исеменән килеп сыҡҡан тип, укыусыларҙы йәнә бер шаҡ-ҡатырҙы. Исмаһам, яҙыр алдынан һүҙлектәргә күҙ һалып алһа икән. «Ваза»ның француз һүҙе, сәскә һәм емеш-еләк ҡуя торған, бүлмәне биҙәп тороусы йыһаз исеме икәнен белер ине, исмаһам. Йүгәнләнмәгән, ауыҙлыкланмаған был «тикшереүсе»нең эшмәкәрлегенә иҫ китерлек.

Йәүҙәт Ҡондоҙбаевты тарихсы тип иҫәпләйҙәр. Имеш, уның китапханаһы тарихи сығанаҡтарға бай. Байҙыр. Әммә шул байлыкты белеп, дөрөҫ файҙаланырға ла кәрәк бит әле. Тарих уйынсыҡ та, ишек төбөнә һалынған һәм Ҡондоҙбаев һымаҡ ғилми берәҙәк-уҙғынсы аяҡ һөртөп китә торған балаҫ та түгел. Ә анығыраҡ әйткәндә, бөйөк совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами ағайыбыҙ бая ғына телгә алған, дөйөм гүзәл келәмебеҙҙән үҙ ебен һурып алырға маташыусы милли сикләнгәнлек ул.

Фекерҙәремде артабан дауам итмәйем. Шул ғына: Хажиәхмәт Алпаров коллегабыҙ уны бик дөрөҫ һәм бик урынлы тәнҡитләне.

-- Рәхмәт, Рәшит Төхфәтович. Нәүбәттәге һүҙ профессор, ғилми институттың филология секторы мөдире Ғаяс Шаһингәрәйевич Хөснигә бирелә, рәхим итегеҙ, Ғаяс Шаһингәрәйевич.

Әле һөйләп төшкән шәкерте Рәшит Алмаҡаев һымаҡ уҡ тәбәнәк буйлы, ләкин арыҡ тороҡло, таҡталанған ҡаҡса йөҙлө Ғаяс Хөсни, трибуна артынан башы саҡ-саҡ һерәйеп, күҙлек быялаларында нәҡ киноларҙағы яһил Берияныҡылай уҫал ут сағылтып залға ҡараны:

-- Докладсы ла, әле генә сығыш яһаусы ла мәсьәләне етерлек дөрөҫ итеп асты, шуға күрә артыҡ һүҙ ҡуйыртып тороуҙың кәрәге юҡ.

Кем ул Ҡондоҙбаев? – Шиғыр яҙып та ус яҫыһындай бер китаптан ары үтә алмаған, эстрада сәхнәләренә менеп тә кире тәкмәсләп төшкән, тарихсы булырға

тырышып та үҙ экскрементында соҡсоноуҙан ары китмәгән бер ҡыҫыр ҡыҫала, дилетант. Фән даирәһендә теше сыҡҡан, күҙе үткерләнгән абруй эйәләренең башы аша төкөрмәк булып, төкөрөгө үҙенә кире ҡайта. Күрерһегеҙ: яҙғы ырашҡы кеүек иреп юҡҡа сығыр, хатта эҙе лә ҡалмаҫ – ысын ғалим үндай булмай ул! Уның доклад үҙегенә ҡуйылыуы – үҙәккә үткес наҙанлығын, алабарманлығын йәштәргә яман өлгө итеп күрһәтеү, уларҙы был яңылыш юлдан ҡурсалау өсөн генә кәрәк булды. Йәмәғәтселек быны дөрөҫ аңлар, тейешле һығымта сығарыр тип ышанам.

Нәүбәттәге һүҙ студент Асҡар Йәмил улы Ҡотлоевҡа бирелде:

-- Хөрмәтле Хажиәхмәт Хужахмәт улының докладын тыңлағас, «ҡара яғыуҙан башҡа бер ни ҙә түгел» тигән һүҙҙәре айырыуса иҫтә ҡалды, йәнәһе Йәүҙәт Ҡондоҙбаев «халыҡ хәтеренә, халыҡ тарихына» ҡара яға. Ә был иһә шундай фекер тыуҙыра: докладсыбыҙҙың Ҡондоҙбаев хеҙмәтенең тәьҫирендә генә түгел, ә ниндәйҙер башҡа сәбәптәрҙән дә үтә лә шашып-ашҡынып китеүенең һөҙөмтәһе түгелме икән бындай баһа?

Ул тиклем нимә яҙған һуң Ҡондоҙбаев? Докладсының фараз итеүенсә, ғалим башҡорт халҡының легендалары менән бәйле Тора-тауҙы мәсхәрәгә ҡалдырған, имеш. Ләкин бит ир енесе — фаллос теорияһы бөтә донъяла танылыу тапҡан ысынбарлыҡ.

Докладсының шулай уҡ ҡатай, ҡаҙаҡ һүҙҙәренә ҡағылышлы йүгәнһеҙ тәьҫирләнеүҙәренең дә Ҡондоҙбаев яҙғандар менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ, тип иҫәпләйем. Авторҙың хеҙмәтенән күренеүенсә, ул үҙе яҙған мәсьәләләр менән күптән шөғөлләнә, төрки тарихына бәйле тарихи сығанаҡтарҙы күптән өйрәнә. Һәм ул: «Олпат тарих фәнендәге ошоғаса һинд-европа телдәрендә һөйләшеүселәр өҫтөнлөк ҡылып... ә беҙҙең кеүек төрки телле халыҡтар иһә тарихы ла, мәҙәниәттәре лә... йүнле бер нәмәһе лә булмаған... тип ҡаралды» -- тип әйтергә лә хаҡлы.

Докладсының: «Ҡондоҙбаев яҙмаларында бер фекерҙең икенсеһенә бөтөнләй ҡаршы килеү осраҡтары ла байтаҡ», -- тигән билдәләмәһе менән дә килешеп булмай. Килтергән миҫалы бының киреһен раҫлай.

Докладсының тәгәрмәсҡала Арҡайым тураһында һүҙ уйнатыуы уның ошо мәсьәләгә ҡағылышлы бер генә баҫманы ла уҡымағанын, һис юғында телевизорҙан тапшырыуҙарҙы ла күрмәгәнен раҫламаймы икән? «Иҫ киткес теүәллек»тәр Йәүҙәт Ҡондоҙбаев уйлап сығарған нәмә түгел бит!

Әлбиттә, быуаттар төпкөлөнә, хатта быуаттар менән иҫәпләнмәгән замандарға төпсөнөүле зиһен менән утеп инергә тырышыусы ғалимдың бер генә түгел, ә байтаҡ ҡына хаталары булыуы мөмкин. Был хаталарҙың сығанағы ла бөтә донъяны урап сыҡҡан төрки ҡәбиләләренә, төрки халыҡтарына бәйле тарихи буталсыҡлыҡтарҙан булыуы ла ихтимал бит. Беҙҙең ғалимдарыбыҙ хәҙергә уның аҙмы-күпме сурайып торған өлөшөндә генә һәрмәнәләр кеүек. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың асыштарына, хаталарына төплө баһа биреүеслә ҙә күренмәй. Әгәр шулай булмаһа, Хажиәхмәт Алпаров кеүек өлгөрмәндәр, бөтә һәләтен, тырышлығын биреп башҡорт халҡы тарихының ҡайһылыр билдәһеҙ яҡтарын асыу маҡсатында тырышып эшләүсе кешегә ҡарата «ультра», йәки

«милли сикләнгән» тигән ярлыҡ тағып, күҫәк күтәрергә баҙнатсылыҡ итмәҫ ине.

Һис кенә лә көтмәгәндә трибуна артына һылыу енес вәкиле – йәш скульптор Дилбәр Таңатарова сығып баҫты:

-- Иптәштәр, аш биргәнгә таш бәрмәйҙәр, тип башлағым килә һүҙҙе.

Йәүҙәт Ҡондоҙбаев уҙамандың хеҙмәтен мин бында сығыш яһаған иптәштәр кеүек репринт-брошюра тексынан түгел, ә төп гәзитебеҙҙең былтырғы 103, 106, 110-ынсы һандарынан уҡыным. «Тәгәрмәсҡалабыҙ Аркайым» тигән шул ҡиссаһы баҫылғас, ғалимдарыбыҙ, тәнҡитселәребеҙ уны иғтибарға алыр, тейешле баһа бирер, тип уйланылғайны. Әммә башҡорт халҡы утә лә боронғо халыҡ, уның тәгәрмәсҡалаһы — Арҡайымы булған тигән фекерҙе раҫлаған авторҙың әҫәре яуапһыҙ тороп ҡалды. Һүҙ араһында ғына, утә фәстереп ебәрә ул, нисек инде донъя башҡорттан башланһын, кеүегерәк фекерҙәр генә ишетелде.

Былтыр «Ағиҙел» журналының 1-се һанында Йәүҙәт ағай Ҡондоҙбаевтың икенсе бер әҫәре — «Тамырҙар» кинопоэмаһы донъя күргәйне. Башҡортостан тураһында кино төшөрөү тураһында хыялланған режиссер булһа — әҙер сценарий ул. Ал да туған республикаң, халҡың хакында рәхәтләнеп фильм эшлә. Әммә ундай яуаплы эште башҡарыусы — башҡорт еренең тарихы тураһында кино төшөрөргә батырсылыҡ итеүсе юҡтыр, ахырыһы. Фильм төшөрмәгәндә лә, был әҫәр буйынса күпме белем һоҫорға, үҙең өсөн бығаса билдәле булмаған әллә күпме мәғлүмәт алырға мөмкин.

Быйыл да гәзитебеҙҙә Йәүҙәт ағайҙың; «Йәнә тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым тураһында» тигән яҙмалары донъя күрҙе. Уны тәүге ҡиссаһының дауамы ла тип әйтергә булалыр. Шул ташҡа баҫылып сыҡҡас, редакцияға бик куп хат килер тип көткәйнеләр. Әммә халыҡ битараф ҡалды. Ә ҡытай хроникаларында йәшәү дәүере беҙҙең эраға тиклемге ике йөҙөнсө йылдың ахырында билдәләнгән Бәндәбикә менән Ерәнсә-сәсәнде урта быуаттар аҙағына ҡуйып нығышҡан тарихсыларҙы нигилистар тип кенә атарға мөмкин.

Хәйер, уның коллегаларының, хатта барсабыҙ хөрмәт иткән совет халыҡ шағирының да, улай уҡ битараф булмағанлығы әле генә ошо трибунан күренде. Ә докладсы Хажиәхмәт Алпаров уҙаман уҙенә генә хас сарказм менән Ҡондоҙбаевтың фараз итеуҙәренән, авторҙың үҙенән мыҫҡыллап көлә, хатта «аҡыл һиҙеме теүәл кешенең уйына ла инеп сыҡмаҫлыҡ яҡҡа бора» тип тә ебәрә. Әгәр ҙә докладсының үҙе һымаҡ фекер йөрөтөпI тел сарларға теләк булғанында, уның үҙенә ҡарата ла шундайыраҡ һүҙҙәрҙе әйтергә булыр ине, әлбиттә. Мәҫәлән, был ғалимыбыҙҙың халҡыбыҙҙа борон мәжүсилек дине булыуы тураһында белмәүе хаҡында әйткәндә берәй елле генә эпитет өҫтәргә лә булыр ине. Әммә хеҙмәт авторы фекеренең тик бер генә яғын тотоп алып, бары тик шуны ҡабартып көлкө сығанағына ғына әйләндерергә маташҡан кешегә ни тип әйтәһең инде?..

Беҙгә бит ғүмер буйы, Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем башҡорттоң яҙма теле һәм башҡаһы булмаған тип тылҡып килделәр (боронғо тарихыбыҙ тураһында фекерҙең булыуы ла мөмкин түгел ине). Ул фекерҙе шул тиклем ныҡ һеңдергәндәр, хатта башҡортоң ҡайһы бер вәкилдәре халҡыбыҙҙың иң боронғо тарихы тураһында мәғлүмәттәр барлығын бер нисек тә куҙ алдына килтерә алмай, бер нисек тә ышанырға, ҡабул итергә теләмәй. Уларҙың меҫкен хәлен аңларға ла

була инде, ғалимдарыбыҙ үҙҙәре үк шул хаҡта тылҡып торғас. Башҡорт хаҡындағы әлеге уйҙырмаға ышанып йәшәгән әҙәмдәрҙә консерватизм шулай көслө булалыр.

Башҡорт халҡының Йәүҙәт Ҡондоҙбаев атлы улы халҡыбыҙҙың иң боронғо тәгәрмәсҡалаһы Арҡайым һәм шуға бәйле тарихи факттар тураһында мәғлүмәттәр табып туплай, шул хаҡта яҙып, төпкөл-тәрән тарихыбыҙ тураһында хәтеребеҙҙә хасил булған упҡын аша күпер һуҙырға, аңлатырға тырыша икән, уны икенсе бер башҡорт шулай туҡтатырға тейешме инде ҡайһы берәүҙәрсә? Хәйер, бының шулай булыуы хаҡында эштәре уң булғыр Ҡондоҙбаев үҙе лә былай тип яҙғайны: «Ә шул ук ваҡытта үҙебеҙҙең хатта фән кандидаты, докторы дәрҗәләренә ирешкән, дипломлы бәғзе бер «күрәҙә»ләребеҙ көндәлек матбуғаттан да, трибуналарҙан да ана шул милли күҙебеҙгә (Аҫаба-Иштәк ишараты — свастика ул) үҙенең ҡара ҡуйынынан таш ата»... Әлеге докладты һәм ҡайһы бер сығыштарҙы гөрләп үтеп барған поезға артынан таш бәреп ҡалыу тип тә ҡарарға мөмкин.

Һүҙемде дауам итеп, шундай миҫалға ла туҡталмаҡсымын. Алтмышынсы йылдар аҙағында ҡаҙаҡ шағиры Олжас Сөләймәновтың «Аз и Я» исемле китабы урыҫ ғилми донъяһында ҙур шау-шоу ҡуптарғайны. Ҡуптарырлыҡ та шул. Унда автор XII быуаттың боронғо урыҫ әҙәбиәте ҡомартҡыһы тип иҫәпләнгән «Слово о полку Игореве» әҫәренең урыҫтыҡы ғына түгел, бәлки төрки телле халыҡтың да ҡомартҡыһы булыуы мөмкин, тигән фекер үткәрә. Шуға ла ваҡытында китапты тыялар (хәҙер «Аз и Я» китабының икенсе баҫмаһы сыҡҡан). Әле бер генә ҡомартҡы хаҡында, ул төркиҙеке лә булыуы ихтимал, тигәндә лә шундай тауыш ҡупҡас, тыйыуҙар булғас, башҡорт халҡының тарихы иң боронғо тип фараз итеүсегә ҡарата ла сығыштар күп булыр әле. Әммә иң тәүге таштарҙы уға шулай үҙ башҡортоңдоң ташлауы үкенесле лә, аянысла ла, хәүефле лә...

Ун биш минутлыҡ тәнәфес иғлан ителгәс, йәштәрҙең байтағы Йәүҙәт Ҡондоҙбаевҡа эйәреп сығып китте лә кире әйләнеп кермәне; йыйылыш, залдың яртыһы бушанып ҡалған хәлдә, исемлек буйынса һүҙ бирелгән телмәрселәрҙе йүнләп тыңламай, һүрелгәндән һүрелә барҙы; фәҡәт һуңғы ораторҙың – яңы фатир алып күңеле көрәйгән, хатта һауалана башлаған, өҫтәүенә, буфеттан ҡыҙмасараҡ булып килеп ингән эшсе-шағир Ыңғырсаҡ Уральскийҙың емерек текә маңлай аҫтынан ҙур ҡара күҙҙәрен ҡыҙыл япмалы президиум өҫтәле артында ултырыусы Мәрүән ағайына тура төбәп яңғырауыҡлы шиғри телмәр уҡыуы ғына бераҙ йәнләндерҙе:

Бөйөк Мәрүән Карами ағайым
Юҡҡа әйтмәгәндер төҙ итеп:
«Дөрөҫ булғанда ла һөйләмәгеҙ
Кеше ышанмаҫлыҡ һүҙҙе!» -- тип.

Дөрөҫ булмағанды «дөрөҫ» тиеп
Һөйләргә лә баҙнат итмәйек.
Бөйөк Коммунистар партияһы
Йөкләмәһен өлгөр йөкмәйек!

Ә был бәндә ниңә «Арҡайым»лап
Һыртарҡаһын илдең ҡабарта?
Хром итек кейҙем аяҡҡа, тип,
Кейеп алған йүкә сабата!

Кеше ышанырлыҡ шапыртһа ла,
Дөрөҫ түгел дүрәк лаҡәбе!
Тишек кәмәһенә ултыртайыҡ
Тишек башлы ғали йәнәбен!

Хәкимуллин, Хөсни, Алпаровтар
Алыпланып фәнде илткәндә,
Ҡондоҙбаев һымаҡ фанатиктар
Фәнләмәксе йыртыҡ елкәндә!

Ултырмағыҙ, дуҫтар, ул кәмәгә --
Ҡомға ултырыр йә ҡапланыр.
Милли сикләнгән шул мәлғүндәрҙең
Исемдәре хурлы тапланыр!

Бөйөк Октябрҙең нуры ғына
Башҡорт халҡын илтә яҡтыға.
Тархан-феодалдар түгел бит беҙ
Тарих саңын тиреп ятырға.

Бағып коммунизм таңдарына,
Яһиллыҡты артҡа тибәйек.
Вилор ағай үҙе өйрәткәнсә,
Милләтселек тамырын өҙәйек!

Ораторҙы сәхнәнән төшөүе менән үк гәзит-журнал әһелдәре һырып алды ла ҡиммәтле шиғри телмәр тексын автор ҡулынан йолдолар, гәзиттәрҙең нәүбәттәге һандарында ул йыйылыш материалдарын биҙәп донъяға сыҡты. Ә шулай ҙа президиумдағылар бошоноуҙарынан арына алманы, сөнки ябай ғөләмә араһында шанлы совет осоро тыуҙырған: «кем дә кем партия һәм хөкүмәт юғарылығынан яманланһа, тимәк, ул кеше -- яҡшы» ҡағиҙәһе буйынса, Ҡондоҙбаевтың мәсхәрәгә ҡалдырылырға тейешле талпынышы йәмәғәт ҡыҙыҡһыныуын ғына уятты, юғарынан билдәләнгән маҡсатҡа ирешелмәне.

Йыйылышты ойоштороусылар һәм алдан күҙалланған рәсми телмәрселәр шулай ҙа еңел һулап, елкәләренән ауыр йөктө төшөрөү тойғоһонда сәхнә артындағы «түрәләр бүлмәһе»нә сәй мәжлесенә эркелә башлағас, бүлмә хужабикәһе Хөсниҙе ашығып туҡтатты:

-- Ғаяс Шаһингәрәйевич, һеҙгә Оло йорттан шылтыраттылар, Вилор Иҫәрғәпович үҙе. Йыйылыш аҙағынан мотлаҡ һуғылып китһен, эш урынымда

көтәм, тине.

Башҡорт белинскийының эсенә татлы-яғымлы йылылыҡ йүгерҙе, мейеһен бәхетле хистәр ялҡыны ялманы – *Ул* иçенә төшөргән, онотмаған! Йәне-тәне осоҡтай еңеләйеп, ҡайҙа нисек баçҡанын абайламай, Оло йортҡаса арала һағынысլы иçтәлектәр донъяһында тирбәлде.

Мәскәү, уның йәшлек Мәскәүе, аспирантура!

Өфө мәктәптәренең береһендә немец теле уҡытҡан Көниәһе менән ҡауышып йәшәй башлауҙарына өс йыл тулып үтһә лә, балалары юҡ ине һәм булмаçтай ҙа ине, шуға күрә хәләл ефетен ваҡытлыса ҡалдырып китеү ҡыйын булманы, ул форсаты сыҡҡан һайын ҡайтҡылап йөрөргә вәғәҙәләште. Хәйер, ир менән ҡатын араһы ниндәйҙер аңлайышһыҙ сәбәптән ир-атҡа хас булмаған һүлпәнлекме, һалҡынлыҡмы кисерә, Көниәһенең көндән-көн артҡан ҡәнәғәтһеҙлеге, «психологка барып күрен», тип ныҡыуы теңкәгә тейә, ҡәнәғәтһеҙлектең ғаилә ғауғаһына килтерәсәген көт тә тор ине. Саҡ ҡына икебеҙ ике яҡта бер-беребеҙҙе һағынып йәшәп алһаҡ, ҡабат эçенешербеҙ, тип уйлап еңел һуланылар. Әммә Мәскәү ҡалаһы ҡаршы төштө: Ғаяс тәүге ярты йыллыҡта бер генә ҡайтып әйләнде лә (уныһында ла төнгө билдәле йәһәттән әүҙемлек күрһәтмәне) хәләл ефетлек мөнәсәбәтен хаттарына күсерҙе. Сөнки мәркәз ҡала Ғаяс тәбиғәтенең йәшерен-серле бер сифатын асып һәм үçтереп хәлен үҙгәртте.

Мәскәүҙең төрлө вуздарында уҡыған һәм эшләгән яҡташтар күбәйеп, ерҙәштәр клубы төҙөлгән – Ғаяс та шунда йөрөргә әүҙемләнде. Бер заман клубта, көтмәгәндә, ҡайҙа ғына ла түгел! -- ә Кремлдең үҙендә эшләүсе һомғол-оҙон буйлы, утыҙ йәштәр тирәһендәге яҡташ-түрә -- Вилор Иçәрғәп улы пәйҙә булды ла беренсе күреүҙән үк, буй-һынына күҙ йүгертеп, Ғаясты үҙһенде, быныһының да күңеле уға тартылды; шул көндән һуң башланды ла инде аспирант тәбиғәтендәге серле үҙгәреш: күрешкәндәре һайын нығыраҡ эçенешеп, ҡыҙ менән егет яратышҡандай яҡынлыҡ кисерҙеләр. Йәмәғәтселек ойоштороған күңел асыу кисәләрендә лә Вилор Иçәрғәпович, күптәрҙе сәйерһендертеп, дама урынына уның менән ҡушарлап бейей, ә баҡсала хәл алғанда һөйәрмәндәрсә ҡултыҡлашып (под ручку) йөрөйҙәр, ошондай минуттарҙа Ғаяс ғәжәйеп хистәргә сума...

Араларына ел үткеһеҙ яҡынайғас, Вилор Иçәрғәпович уны үҙенең яңғыҙаҡ йәшәгән фатирына алып ҡайтты, затлы аш-һыуҙан һығылған мул табында, иç киткес күңелле тостар әйтеп ҡыçтай-ҡыçтай, француз коньягы менән һыйланы; аспирант мәлйерәп йоҡомһорай башлағас, сисендереп, ҡырынлатып, аҡ йәймәле яçы тахтаға һалды ла, уны арҡаһынан ҡосаҡлап ятып, ошоғаса тойолмаған хистәр менән иçәнгерәтеп, арт буйынан ҡөҙрәтле үтеп керҙе...

Иртән айный биреп торғас та аспирант төнгө хәле өсөн нәфрәт белдермәне, сөнки тәбиғәтенә ярашлы ине. Ял көнө булғанлыҡтан, әленән-әле коньяк эсеп, әленән-әле тахтала аунанылар...

Был фатирҙа былдай кисәләр, ваҡыт үтә барғаны һайын, йышыраҡ ҡабатланды, Ғаяс үҙенең Көниәһен һүрелгән төштәр ҡатарында иçләне. Уның ҡарауы Кремль түрәһенең хәстәрлеге арҡаһында аспирантураны тиҙләтелгән шарттарҙа уңышлы ослап, тиҙ арала ошонда уҡ диссертация ла яҡлап, тыуған

төбәккә филология фәндәре кандидаты дәрәжәһендәге «башҡорт белинскийы» булып ҡайтты.

Шул арала Көниәһе лә уны көтөп зарыҡмаған: ваҡытлыса азатлығын зерә йәтеш файҙаланып, «һулдан» йөрөргә шымарған; бер-береһенә үпкәләшмәй-талашмай ғына, бары менән байрам, тиеп, быҫҡып ҡына ятҡан ғаилә усағын, ара-тирә утын һалғылап, һүндермәҫкә килештеләр...

Оло йортҡа барып еткәс кенә арынды иҫтәлектәренән. Киҫәтеп ҡуйылғандыр, ныҡышмай ғына тотҡарлыҡһыҙ индерҙеләр. Саҡ ҡына ҡыҙмасаланған Вилор Иҫәрғәп улы, ысынлап та, эш урынында көтөп ултыра икән: Ғаясты ҡосаҡлап алып кабинет артындағы көнкүреш бүлмәһенә ыңғайлатты, кереү менән үк ишекте шыртлатып бикләне:

-- Ух... һағындым һине, Ғаясочка!

-- Мин дә... ныҡ һағындым, Вилорик!

Күҙҙәренең түҙемһеҙ йылтырауын, өҫтәлдәге мул һыйҙы, ҡырыйҙараҡ көтөп торған аҡ йәймәле яҫы тахтаны күреп, Ғаяс тәрән ҡәнәғәтлек кисерҙе: онотмаған, онотмаған!..

Республиканың әҙиптәре, әҙәбиәт тураһында улар оҙаҡ һөйләште.

Һөҙөмтәлә ошо аҙнала уҡ республиканың төп гәзиттәрендә театр репертуарҙарын «һауыҡтырыу» тураһында ҡарар баҫылып сыҡты:

**БАССР тамаша предприятиеларынан алып ташланған һәм тыйылған пьесалар исемлеге:**

1. М. Буранғолов – бөтә пьесалары.
2. Б. Бикбай -- «Ҡаһым түрә» (драма 3 шаршауҙа), «Бер ата балалары» (пьеса 4 шаршауҙа), «Хисмәт хикмәттәре» (комедия 3 шаршауҙа), «Көтөлмөгөн туй» (музыкаль комедия 3 шаршауҙа), «Урманда» (пьеса 1 шаршауҙа).
3. Ибраһимов Х. «Еҙнәкәй» (комедия 4 шаршауҙа), «Концерт-конферансье» (1 шаршауҙа), «Фронттан бүләк» (пьеса 1 шаршауҙа), «Уңыш өсөн көрәшкә» (пьеса 1 шаршауҙа), «Урожай байрамы» (пьеса 1 шаршауҙа 2 картинала), «Луҙыр Сиражи» (комедия 3 шаршауҙа), «Чабан Шәрәфи» (пьеса 3 шаршауҙа 5 картинала).
4. Сәйфи Л. «Тылда» (пьеса 1 шаршауҙа).
5. Мөбәрәков А. «Бисәкәй» (пьеса 5 шаршауҙа).
6. Ниғмәти Р. «Һинең йондоҙоң» (пьеса 2 шаршауҙа).
7. Агишов С. «Ҡәҙерле ҡунаҡ» (пьеса 1 шаршауҙа), «Хөмәйрә» (пьеса 1 шаршауҙа).
8. Ғүмәров Ғ. «Шулай ҙа булай» (пьеса 1 шаршауҙа 2 картинала).
9. Иҙелбай Н. «Медаль» (пьеса 1 шаршауҙа), «Салауаттың серле ҡылысы» (пьеса 3 шаршауҙа 5 картинала), «Дүртәүҙең осрашыуы» (пьеса 1 шаршауҙа 2 картинала).
10. Бикбулатов. «Урман ҡыҙы» (пьеса 1 шаршауҙа).
11. Әмир М. «Маҡтансыҡ» (комедия 1 шаршауҙа).
12. Әсғәт А. «Көрәш» (пьеса 3 шаршауҙа 2 картинала).

13. Сәйет Х.А. «Бәхетле тормошта» (пьеса 3 шаршауҙа 5 картинала).

14. Тажи М. «Күләгә» (комедия 3 күренештә).

15. Әхмәти Ғ. «Гөлгөнә киткән икән» (пьеса 2 шаршауҙа). «Тальян гармун» (музыкаль пьеса 4 шаршауҙа).

16. Ғәйни Т. «Беҙҙең еңеү» (музыкаль драма 3 шаршауҙа 4 күренештә).

17. Даян Ҡ. «Кейәү» (комедия 1 шаршауҙа), «Ҡоләхмәт» (комедия 1 шаршауҙа).

18. Рәшит К. «Утлы көндәрҙә» (пьеса 3 шаршауҙа 4 картинала).

19. Кулибай С. «Теләк» (4 шаршауҙа 2 картинала).

20. Шабай М. «Ситән» (комедия 1 шаршауҙа 2 картинала).

21. Абдуллин И. «Ал яулыҡ» (пьеса 4 шаршауҙа 6 картинала), «Вәғәҙә онотолмай» (пьеса 4 шаршауҙа 5 картинала), «Вәғәҙә» (пьеса 3 шаршауҙа 5 картинала – үҙэшмәкәрҙәргә).

22. Кирәй Әхнәф. «Минең семьям» (комедия 4 шаршауҙа).

23. Бикбулат А. «Һөйөнсө» (музыкаль пьеса 2 картинала).

24. Хәкимов Х. «Ҡалдыҡтар» (пьеса 1 шаршауҙа).

25. Ҡәрип Н. «Алма» (пьеса 4 шаршауҙа).

**БАССР буйынса ГУРК уполномоченныйы.**

Ошо ҡырсып һепереүҙән һуң милли театрҙар репертуарҙарындағы бушап ҡалған урынды урыҫ, француз, татар, ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ, ҡырғыҙ авторҙарының пьесалары биләне, уларҙы сәхнәгә ҡуйыу өсөн ҡалмыҡ, ҡырғыҙ, бүрәт, хатта монгол режиссерҙарын саҡырып килтереү ҡағиҙәгә әйләнеп, Вилор Иҫәрғәп улының йәне һөймәгән «башҡорт милли еҫе» сәнғәт донъяһынан тамам елләтелә башланы. Ара-тирә «башҡортлоҡто» ла тамаша ҡылдыртыу өсөн, «заман рухында» яҙылған бер-ике әҫәрҙең булыуы ла шарт ине.

Вилор Иҫәрғәп улы, ҡыҙыулатып күрелгән сараларҙан айырыуса хозур ҡәнәғәтлек кисереп, совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамиҙы Оло йортҡа үҙенең эш бүлмәһенә саҡыртып алды, өҫтәл ҡырында ҡара-ҡаршы ултырышып, башҡорт совет әҙәбиәте, айырыуса драматургия өлкәһендә КПСС-тың СССР-ҙа тиҙләтеп коммунизм төҙөү Программаһын уңышлы тормошҡа ашырыу эштәрен ҡыҙыу темпта ҡайһылай атҡарыу тураһында емешле фекерләштеләр. Вилор совет халыҡ шағирына тәғәйен «коммунистик бурыс» йөкмәтте:

-- Әлеге һәм киләсәк драматургтарға үрнәк булырҙай ике пьеса яҙып бир, береһе – шартлап торған бөгөнгө көн темаһына, икенсеһе тарихи темаға.

-- Уф, Вилор Иҫәрғәпович, темаларын беләм дә ул...

-- Ә нимәһен белмәйһең?

-- Драматургияны әйтәм. Мин бит халыҡ шағиры...

-- Бөгөн килеп пьесалары хаҡлы рәүештә сәхнәләрҙән алып ташланған Рәшит Ниғмәти ҙә -- халыҡ шағиры, Мөхәмәтша Буранғолов та халыҡ сәсәне булғандар бит, ә яҙғандар... башыбыҙға бәлә итеп. Һин уларҙан кәмме ни?

-- Ярай, уйлап ҡарармын, Вилор Иҫәрғәпович.

-- Уйлап ҡарама – яҙ! Һәм йәһәтерәк! Коммунисмы һин, әллә түгелме?! Бөгөндән ижади командировка алып Ялтаға ялтай, портфелеңдә ике пьеса ятмай тороп ҡайтма.

-- Булды, Вилор Иҫәрғәпович.

Театрҙарҙың көҙгө яңы сезоны асылыуға коммунистик бурыс теүәл ике йөҙ процентҡа үтәлде: шартлап торған хәҙерге заман (колхоз) темаһына – Александр Корнейчуктыҡына ишәйтелмеш «Ике ҡайын» драмаһы, тарихи темаға Көньяҡ Африка авторы Абрахамстың урыҫсаға тәржемәләге «Тропою грома»һына ифрат аһәңдәш һәм аҙаш «Ай юғалған төн» трагедияһы өлгөрҙө лә, республиканың бөтә сәхнәләрендә гөрләтелеп ҡуйылды, «лайыҡлы баһа бирергә» иң йылғыр әҙәби тәнҡитселәр, хатта Мәскәүҙекелер йәлеп ителгәс, дан-шөһрәте автономия сиктәренән дә ашып, СССР-ҙың берләшкән ун биш республикаларында сәхнәләштерелде, социалистик реализм ысулының классикаһына әүерелде. Шулай ҙа бер йәш тәнҡитсе:

-- Уйлап ҡарайыҡ әле: африканың ул Абрахамс яҙған ҡырағайлыҡ йолаһы башҡортта булдымы икән? – тип фәлсәфә ыратырға итеп ҡараһа ла:

-- Булған! Бөйөк Мәрүән Карами ағайыбыҙ үҙе яҙғас, булырға тейеш! – тип ауыҙын тиҙ яптылар. Классика шулай тыуа һәм ныҒына торғандыр...

## УН БИШЕНСЕ СӘХИФӘ

Бурап-бурап ҡарҙар яуа, йыйылыштан башы ҡатып сығып олаҡҡан Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың шарфһыҙ елкәһенә тултыра. Өйҙә ғаилә усағы һүнеп ҡалды, ә йылыныр усаҡтар яғылмаған. Яғылырмы ул?..

Ниңә ҡәйнә менән ҡатын һүҙен генә тотманы, эйелгән башты ҡылыс киҫмәй, тигәндәй, берегеп йәшәмәне?.. Бәлки, мең-мең тапҡыр хаҡлылыр ул сепрәкбаштар?..

Юҡ, ҡабул итә алмайым! Уларса фараз ҡылғанда, кеше үҙенең кендегенән юғарыраҡ ырғылмаҫҡа, ә, киреһенсә, түбәнерәк сүгергә тейеш... бер баҫҡыстан икенсеһенә, өсөнсөһөнә... Әйтәйек, ниңә миңә бөгөн ошо хәлемдә (тарихсы!) әрһеҙләнеп яфа сигергә ине — кисәге хәлемдә (ат көтөүсе!) тынысыраҡ көн итә инем бит?.. Шул фекерҙе эҙмә-эҙлекле дауамлаһаң, килеп тыуа аймылыш: уғата яфаһыҙыраҡ, тынысыраҡ ҡалыр өсөн, иң яҡшыһы был донъяға бөтөнләй тыумаҫҡа ла кәрәк булғандыр?!. Ә унан да тәрәнгәрәккә китһәк, беҙ, атайҙарҙан ҡала икенсе быуын, тип алайыҡ, азат донъяға азат кешеләр булып ҡомарһын өсөн дә һис кем яфа сикмәҫкә — беҙгә тиклемге быуын, йәғни мәҫәлән, ялҡынлы йөрәк Булаттимер Шаһибәрәковтар, баяғыса, кендегенән юғары ырғылмаҫҡа — революцияның «тормош баҫҡыстарын» үтмәҫкә тейеш булғандырмы?.. Тимәк, донъяның тарих ҡуласаһы әйләнмәҫкә тейешле?!. Бына ниндәй ахмаҡлыҡҡа килтерә был логика — *һаҙ биҫтәһе фәлсәфәһе!*

Күҙ алдына ағас аяҡлы атаһы килеп баҫты. «Ат йәнле» тиҙәр ине уны. Иртән торҙомо — колхоздың ат һарайында. Шатлығы ла ҡайғыһы ла шул. Уҫал телдәр әйтеүенсә, һуғышта ла күкрәк киреп атакаға барғанында түгел, ә мина

ҡырында юшап йөрөмөш менгеһен ҡотҡарыу өсөн ырғылғанында аяҡ аҫтында шартлауҙан имгәнгән имеш... Заманалар ауыр ине, колхоздың аттарын бөтөрттөрөү өсөн Кремль ялтырбашының әмерен үтәмәккә ең һыҙғанған эрелеваҡлы түрә-каралар менән яман ҡыйышып, гел ҡағытылып йәшәне. Үҙәгенә үткән саҡтарында Йәүҙәтте янына яҡынлатып, башынан һыйпап һөйөр ине лә әйтеп һалыр ине:

— Их, заманалар үҙгәрҙе, әҙәм балалары ваҡланды... Булаттимер Шаһибәрәков олатайың иҫән булһа, былай итмәҫ ине, улым. Ысын уҙаман ине!

Шул ысын уҙаманды хәҙер, ул күрергә өлгөрмәгән дыуамал кейәүе булараҡ, Йәүҙәт үҙе юҡһына. Йылдар үткән һайын, үҙҙәрен күреп белмәһәң дә, «Ленин гвардияһы» тип аталған ҡорҙо һағыныу арта. Бына хәҙер ҙә шулай: ябалаҡ ҡарҙар араһынан, ҙур ҡыҙыл буҫтау йондоҙ таҡҡан осло кәпәсле ҡыҙыл командир килеп сығыр ҙа ярҙам ҡулын һуҙыр төҫлө. Юҡ, улай ғына ла түгел. Уға бүтән Булаттимер яҡыныраҡ был мәлдә. Бәләкәйҙән үк тормош баҫҡысының иң түбәнге баҫмаһынан тороп юғары ынтылыусы, түбән тартҡан упҡын көсөнә ҡарышыусы, кендегенән юғарыраҡ ырғылыусы ҡырҡыш малай Булаттимер. Дөмҡараңғы донъяла бер бөтөн ҡара икмәк хаҡына ҡара ҡоллоҡка һатылған бәләкәй Булаттимер. Йәүҙәт яңыраҡ ҡәйнәһенән һорап алып уҡыған, балауыҙ еҫтәре аңҡытҡан (сөнки балҡортло солоҡҡа йәшереп һаҡлағандар) күн тышлы дәфтәрҙән үҙ тауышы менән уға, үҙе белмәгән кейәүенә, өндәшә — бирешмәҫкә ҡуша уға тарамыш Булаттимер. Яҙмалары күҙ алдында ҡанатланып терелә:

«Ә беҙ түбәндән сыҡтыҡ. Ҡояшты үҙебеҙ менән йөкмәп алып сыҡтыҡ.

Эйе, беҙ тыуғанда Совет власы юҡ ине. Беҙгә тәүҙә батшалыҡтың әсеһен бүккәнсе татырға, ә шунан һуң Ҡояштың сәсенә йәбешеп өҫкә ҡалҡынырға тура килде. Шуның арҡаһында бөгөн һәр сабыйҙың тыумыштан уҡ күҙе асыла үҙенең яҡты Ҡояшына — Совет власына.

Ун бер йәшкә тиклем атай нигеҙендә аслы-туҡлы ҡаңғырҙым. Нигеҙ тигәндән, башын ҡабыҡ менән япҡан, тәҙрәһенә ҡарындыҡ ҡаҡҡан йоҙроҡтай ғына өй ине. Береһенән-береһе вағыраҡ ете бала — йәмғебеҙ туғыҙ ҡалаҡ. Ер юҡ, мал юҡ. Тыуа-тыуғандан ҡара һыу, ғәрһеҙ-кара батраҡлыҡ. Атай бахыр нисек осон-оска ялғарға, беҙҙе оянан сорғолтоп осорорға, артыҡ ҡалаҡтан арынырға белмәйенсә баш вата. Шундай көндәрҙең береһендә мине ауыл байҙарына малайлыҡҡа илтеп «төртөргә» булды. Тик береһе лә алмай — аҫҡа интеккән арыҡ кәүҙәм ышаныстарын аҡламай: «Хеҙмәте түгел был, ә имгәксе — бай икмәген сереткес!..»

Ауылда барып сыҡмағас, атай бахыр «урыҫҡа» етәкләп алып китте. Унда ла шул уҡ хәл. Сибек кенә буй-һыныма сетерәйеп бағалар ҙа шаңғырлатып ҡапҡаларын ябалар. Атай бахыр мине инде хеҙмәтсе итеп түгел, ә тамаҡ ялына ғына әрһеҙ малайлыҡҡа алығыҙ: теләгәнсә егегеҙ, теләгәнсә киҫегеҙ — ите һеҙгә, һөйәге миңә, тип ялынып-ялбарып йөрөй башланы. Үҙебеҙҙең Ырымбур далаларында гиҙәбеҙ шулай. Бына бер заман серегән бай (ҡуралары —малдан, буралары игендән һығылып тора, тиҙәр) казак станицаһының урамдарын гиҙәбеҙ. Күрәбеҙ: ерҙәре уңдырышлы, biләмәләре киң —эш ҡулдары кәрәк тә кәрәк кенә. Шулай булһа ла алмайҙар: «Бар, башкирчик, үҫә биргәс килерһең!»

— тип кенә бороп ебәрәләр. Ни булһа ла булыр тип, иң шөһрәтле ҡапҡаға — атамандың үҙенә барып ҡағылдыҡ. Кем уйлаһын яҙмыш шулай йөрөтөп-йөрөтөп мине тәғәйен ошонда — алдағы көндәрҙәге Совет власының яуыз дошмандарының береһенә — Дуртовтар йортона килтергәндер тип?...

Ҡылыслы ҡарт атаман тыңлап-тыңлап торҙо ла, бер ни өндәшмәй, ике ҡолағымдан тартып күтәрмәһенме — хас та бәләкәс көсөктәй!.. Күҙҙәремдән уттар сәсрәһә лә, «эһ» тә иткән ауаз сығарманым, казакка был оҡшаны. Ергә баҫтыртып, беләктәремде һәрмәне. Ҡәнәғәтләнеп, ат аҙбары артындағы балсыҡ баҙөйгә килтерҙе:

— Бына ошонда торорһоң. Аттарҙы яратаһыңмы, башкирчик?

Күҙҙәрем ялтыраны. Атаман арҡамдан төрттө:

—Бар, голопобый, кереш. Ҡыштарын аҙбар таҙартырһың, работниктарға мал ҡарашырһың, ә йәйҙәрен, һыбайланып, далала йылҡы көтөрһөң. Улыңдың тамағы ас, өҫтө яланғас булмаҫ, — тине атайыма. — Яҡшы эшләһә, тыңлап ҡына йөрөһә, бәлиғ булғас эш хаҡы ла ала башлар. Ә шуғаса — тамаҡ ялына!

Атайым сикһеҙ ҡыуанып ризалашты. Атаман менән эйәртенешеп инеп китеп, аңҡауынан араҡы еҫе аңҡытып килеп сыҡты. Моҡсайында бер бөтөн ҙур урыҫ икмәге ята: мин бер бөтөн икмәк менән бер стакан араҡыға һатылғайным...

Атамандың утарында түккән хәләл тирҙәремде хикәйәтләп тормайым. Көн юҡ, төн юҡ, буран юҡ — эш кенә бар. Теләк тигән нәмә юҡ — буйһоноу ҡына бар. Исем-фамилиям юҡ — «голопобый башкирчик» тигән түбәнһетелеүле ҡушамат ҡына бар. Шулай ҙа түҙҙем — «атаман икмәген ашап» буй еткерҙем.

Хужам йортоноң кухняһына йәнәш кенә кескәй бүлмәлә ҡарт служанка Лукерья тора, Варя исемле осоҡ ҡыҙы бар. Мин килгәндә самауыр буйлы ғына бала, ҡулына үҙенән оҙонораҡ сыбыҡ тотоп, атамандың ҡаҙ бәпкәләрен төйләгәндән ҡурсылай ине. Мин белгәндән ҡыҙый шулай ҡаҙ көтөүсеһе, мин йылҡы көтөүсеһе булып буй еттек, әммә бер-беребеҙгә иғтибар итмәнек. Һәм көтмәгәндә генә... сарсап китеп кухняға йүгереп индем. Лукерья ҡарсыҡ йәнәш бүлмәлә кер йыуа, ә Варя усаҡ тирәһендә ҙур шаңда кер ҡайнатып булаша ине — миңә ул, нисектер, һағайып, уйсан-йылмайып баҡҡандай тойолдо. Тулы сүмес һыу һоҫоп алып бирҙе лә беренсе тапҡыр беҙҙең күҙҙәр яҡындан уҡ тоташты. Күктән дә зәңгәрерәк күҙҙәр! Текләүемдән ҡыҙ ҡыҙарҙы, күләп ебәрҙе — шул мәлдә донъя зәңгәрлеге иңемә ҡапландымы ни! Мин һыуымды эсергә лә онотоп, сүмес әүештерәм икән, ә һыу түшемә түгелә лә түгелә икән. Ҡыҙҙың ҡабат күҙҙәремә бағыуы, әйтерһең, туңып ҡалған донъяны иретеп ебәрҙе, ярҙарынан ҡубынған яҙғы боҙҙай тулатты йәнде... Атҡа ырғып менеп, дала төпкөлөнә дондом, юшап йөрөгән йылҡы өйөрөмә етеп йығылдым. Йәмғе дала минең алда өр-яңы нур менән балҡыны, бығаса күҙемә күренмәгән сағыу төҫтәр, аңҡыу еҫтәр, шат тауыштар менән тулғайны донъя. Һәр үлән, һәр бер ҡыяҡ бөгөн минең өсөн тере, йырлы һәм телле имеш. Үҙ ғүмеремдә тәү тапҡыр мин ҡырыҫ ҡылғанлы далам иңен ҡосаҡлап ятып, әсе әремдәренең иҫерткес тәмен татып, хистәремдең урғылыуын тыя алмай йырланым...

Шул көндән һуң, ҡайтышлай гел Варяға даланың аҫыл төҫөн — сәскәләрен ҡосаҡлап илтер булдым...

Атамандың пажеский корпус тамамлап сыҡҡан улы, эполет һәм пистолеттарын ҡупырайтып, йәйгелеккә ҡунаҡҡа ҡайтҡайны, ул мине һәр аҙым һайын кәмһетергә, «башкирчик», «гололобый басурман» тип үсекләргә һәүәҫ ине. (Кем белгән ул буласаҡ офицерҙың да киләсәктә бер минең генә түгел, ә бөтә Ырымбур гөбөрнәһенең ҡанлы палачы генерал Дуртов булып әүерелерен?..)

Ҡулымда сәскәләр бәйләме күреп туҡтатты:

—Эй, башкирчик, килтер бында гөлләмәне!

—Офицер әфәнде, был гөлләмә һеҙҙең өсән йыйылмаған, — тинем.

Башын эйеп тыңларға ғына күнеккән «башкирчик»тан быны ишетеү — Күк ҡабағы ярылыу менән бер булды:

-- Ах сволочь, гололобый басурман, минең менән һүҙ көрәштерәһеңме ни әле? Бирермен мин һиңә кем өсөн йыйылғанын! — Гөлләмәне йолҡа тартып алырға киҙәнде. Белмәйем, ни менән барып осланыр ине икән был, әгәр ҙә ҡарт Дуртов үҙе килеп етеп ҡыҫылмаһа:

-- Туҡта, казак, ҡалдыр ул ҡырағай башкирчикты минең үҙемә! — Ярһыу улын арҡаһынан һөйә-һөйә этәреп, һурылып төшкән бер сәскәне гөлләмәгә ҡыҫтырҙы. — Бына шулай, казак, остоғо ла әрәм булмаһын, — тине улына, әйләнеп ҡарап. Йәнә миңә төбәлде: — Башкирчик, танауыңа кирт шуны: Дуртовтар өсөн булмаған бер нәмә лә юҡ был ерҙә, бер нәмә лә! Был ерҙәге һәр үлән, һәр серәкәй, һәр таш, хатта һауаға күтәрелгән туҙан остоғона тиклем беҙҙеке — Дуртовтарҙыҡы! Һәм һин бындағы бер сәскәне өҙөүҙән, бер серәкәйҙе тотоуҙан элек, беҙҙән баш эйеп рөхсәт һорарға тейеш. Әгәр шулай итмәһәң... ҡых! — Атаман ҡамсыһын мәғәнәле уйнаҡлатты. — Бына шулай. Аңланыңмы инде хәҙер, гололобый башкирчик?.. Беҙ ҙә төшөнәбеҙ һине: һиңә көн дә бер шәлкем сәскә кәрәк. Ал һин был сәскәләрҙе. Тик ҡолағыңа киртеп ҡуй: Һәр шәлкем өсөн һуңынан эш хаҡыңдан тотоласаҡ. Киләсәктә йәғни. Бында бер нәмә лә буштан килмәй, бушҡа китмәй — буштың атаһы үлгән!

-- Эш хаҡы? Уға ниндәй эш хаҡы? — Йәш Дуртов ауыҙын ҡыйшайтты.

-- Көлмә, казак, атайыңдан донъя көтөргә өйрән. Башкирчиктың хәҙергә аҡсаһы юҡ, ләкин бер саҡ буласаҡ. Ир ҡорона кергәс, ялланып эшләргә тейеш. Йәғни эш хаҡына. Бына шул саҡ ҡайтартасаҡбыҙ уның был сәскәләре хаҡын, хе-хе-хе! — Миңә бармаҡ яναны. — Гололобый башкирчик, әллә һинең яҙ башынан алып Лукерья ҡыҙы Варенькаҡны нисә тапҡыр сәскә менән йомшартыуыңды белмәйҙәр ҙә тиһеңме, барыһын да күреп-белеп торабыҙ, ха-ха-ха!.. — Аталы-уллы эстәрен тырнап көлдөләр.

Күп тә үтмәй, Дуртовтар менән йәнә һөйләшеү булды.

Йәш Дуртовтың ҡайтыу хөрмәтенә ҙур мәжлес йыйғайнылар. Ырымбурҙан хатта гөбөрнәтер әфәнде үҙе лә ҡатыны, еткән ҡыҙы менән килгәйне, байрам шауы аҙна буйына һуҙылды: эт абалаулы һунар, ат сабыштырыуҙар, киске дала буйлап һыбай елдереү... Кистәрҙең береһендә, йәш Дуртов гөбөрнәтер ҡыҙын «һыбай йөрөргә өйрәтеү өсөн» алып сығып китергә генә йыйынғанда, наҙлыбикә кинәт ҡылауызланып, «ҡырағай башҡорт өйрәтһен мине» тип һалдырмаһынмы!.. Тегеләй ҙә итеп ҡарайҙар ата-әсәләре, былай ҙа, һүҙҙәрен ҡолаҡҡа ла элмәй бит теге. Мин шым: аҙбар артынан ғына күҙәтәм,

эштәр ҡырҡыулаша ҡалһа, арт ҡапҡанан сығып һыҙырға ниәт. Уйламағанда йәш Дуртов елкәмдән бөрөп алып, ярһыуын тыя алмай, тештәрен шыҡырлатып ҡолаҡҡа игәй: ҡара уны, гололобый басурман, әгәр ҙә ки гөбөрнәтер ҡыҙына елеңде тейҙерһәң, бынауы серек кәбеҫтә күсәнеңдең соҡорға тәгәрләп киткәнен тоймай ҙа ҡалырһың, йәнәһе. Йәшермәйем, шөр ебәрҙем: гөбөрнәтер ҡыҙы бит!..

Шул арала һыбайса салбар-жакет кейгән хәйерһеҙ ҡыҙ эргәмә килеп баҫты:

-- Сәләм, төньяҡ амуры! Таныш булайыҡ: исемем Маргарита, — тигән була, ҡулын үбергә биргән булып ҡылана. Исемемде мығырлап саҡ ҡотолдом. Йәш Дуртов етәкләп килтергән юрғаға атландыртырға самалаһалар ҙа:

— Юҡ, мине тәүҙә башкирчик үҙенең янына менгәштереп сапһын — ҡырағайҙар ат башын нисек тотҡанын күргем килә! — тип ҡырт киҫте лә, һушымды йыйырға ла өлгөрмәнем, Маргарита әйәрем артына ырғып менде лә ултырҙы, ҡуш ҡуллап билемдән һығып алды, етеҙ аяҡтары менән ат бөйөрөн типсене... Эй сабабыҙ йомолоп, беҙҙең арттан ҡушарлап ат етәкләгән йәш Дуртов саба һөмөрөһө ҡойолоп. Төркөм-төркөм ханымдар, офицерҙар, генералдар баш сайҡап тороп ҡала, ә хәйерһеҙ Маргарита елкәмә ҡайнар һулышын бәреп бышылдай-бышылдай билемдән һыға ла һыға:

-- О амур... о ҡара күҙле башҡорт!

Етәк юрғаһын ташлап ҡалдырған йәш Дуртов ҡыуып етте, ҡамсыһын болғап, боролорға бойорҙо.

-- Уф, артта башым әйләнә, алдыңда ултырып барғым килә! — тине гөбөрнәтер ҡыҙы.

-- Ултырығыҙ рәхим итеп минең алға, — тине йәнәшә килгән Дуртов.

-- О, юҡ, һеҙҙең менән һуңынан, һуңынан. Мин был атты яраттым.

-- Улайһа, башкирчик төшһөн, үҙең генә ҡал.

—О, улай яраймы ни һуң! Башкирчикты йәйәү ебәрәбеҙме ни, рыцарҙарса буламы шул?!

Дуртовтың сикә тамырҙары бүртенде, тештәре шыҡырланы. Ҡыҙға шуны һиҙҙертмәҫкә тырышып, атына ҡамсы һуҡты:

-- Үҙ ихтыярығыҙҙа. Тик мин ҡырағай малайға бәйле капризығыҙҙың тиген тамамланырына шикләнәм.

-- О, бушҡа хафаланмағыҙ! Ул бит тәбиғәт балаһы. О, башкирчик, һығыбыраҡ ҡосаҡлағыҙ, юғиһә ҡолап ҡалам!

Дуртовтың саптары тамам күҙҙән юғалғас, Маргарита тигәндәре ҡыланыуҙан туҡтаны ла, теҙгендән тартып, ат аҙымдарын яйлатты:

-- Ванька Дуртов тураһында ниндәй дурной нәмәләр беләһегеҙ, әйтегеҙ!

-- Үҙегеҙ «дурной» тинегеҙ, тимәк, минән башҡа ла беләһегеҙ...

-- Аңланым, елдерә бир юрғаңды!

...Төндә аталы-уллы Дуртовтар баҙөйгә баҫып керҙе:

—Тор, эттән тыуған, һуңғы сәғәтең һуҡты! Гөбөрнәтер ҡыҙына ни тиргәнеңде иҫеңә төшөрәйек!

Ауыҙ-морономдо ҡан иткәс, фургон төбөнә һуҙып һалып, станицанан алыҫыраҡ дала төпкөлөнә олаҡтырҙылар. Ҡылғанлыҡҡа дөңкөлдәп барып

төштөм. Баш осомда торҙолар:

—Эше бөттө.

—Бау йәл, — тине ҡарт атаман. — Сисеп алырға кәрәк. Ыҫҡындырҙылар, бәйҙе фургон төбөнә ырғыттылар. Көскә дүртаяҡланып, тороп ултырҙым.

-- Дөмөкмәнеңме ни әле? — Йәш Дуртов ҡарайылтыр револьверының көбәген ауыҙға тыҡты. — Тояһыңмы, гололобый басурман, эсендә ни ятҡанын? Әллә шул ҡурғаш борсаҡтарҙың бернисә бөртөгөн шартлатайыммы тамағыңа?

-- Әрәм итмәй тороғоҙ, — тинем, сатнау тамағымды төкөрөгөм менән көскә сылатып.

-- Етте, ҡулыңды бысратма, — тине ҡарт Дуртов. — Ас бүреләргә ҡалдыр.

-- Эйе, атай, гололобыйға ҡурғаш борсаҡ әрәм шул.

-- Ул борсаҡтар үҙегеҙҙең маңлайҙарға тишеп керер бер заман! – тип телләштем.

-- Ах язва, дөмөктөрәйем дә ҡуяйыммы әллә, атай, басурманды?

-- Стоп! Түҙ, казак! Ваҡыты ул түгел. Гөбөрнәтер хәҙрәттәре үҙебеҙҙә ваҡытта... -- Ҡарт атаман ҡылысын ҡындан һурып, башым осонда уйнатҡас, дала төпкөлөнә киҙәп күрһәтте: -- Ана тора юлың, гололобый выродок! Әгәр ҡабат күҙемә салыныр булһаң, ҡап-урталай ярырмын!

-- Килер көн: үҙегеҙҙе ҡылыс ҡап урталай ярасаҡ!

-- Ох гиена!

Ҡылыстың тупаҡ төйҙәһе салҡан мәтәлдерҙе...

Ул ваҡытта мин, әлбиттә, йән асыһы менән Дуртовтарға янап әйткән ҡарғышымдың улар өсөн Тарих үҙе сығарған хөкөм икәнен белештермәнем. Приговорҙы ғәмәлгә ашырыу ҙа шул уҡ Тарих тарафынан тап үҙемә йөкмәтелгән булып сыҡты. Эйелгән түгел, ә *эйелмәгән* башты ҡылыс ҡырҡмай ул!»

Бына ниндәй васыят ҡалған беҙҙәргә атайҙарҙан! Башыңды эймә -- юғары тот, «үҙһүҙле» Ҡондоҙбаев! Баҫҡыстың иң аҫҡы араталарын, ҡара упҡынға терәлгән үлемесле өлөшөн, һинең өсөн Булаттимер ҡайнаталарың үткән. Улар һине үҙҙәренең иңбашында күтәреп, киң донъяның яҡты офоҡ һыҙығына баҫтыртҡан. Инде үҙеңдән ҡалды: айбарланып үргә талпын да Ҡояшты ал ҡосаҡлап!

Йәүҙәт Ҡондоҙбаев башын ҡалҡытып, турайып, ирәйеп, тар һуҡмаҡлы аллеянан оло урамға төштө.

## УН АЛТЫНСЫ СӘХИФӘ

Дилбәр-туғанын лыҡама тулы троллейбусҡа төртөп керетеп ебәргәс, Басир бер талай хисен йыя алмай торҙо. Ах әттәгенәһе, үҙен буйтым егеттәрсә тота алдымы ул «тарих ене» ҡағылып самаһыҙ етдиләнгән ҡәрендәше алдында — мәркәз маркаһына тап төшөрмәнеме? Ә тегеһе, сәсрәмәгере, йыл уратаһында ҡайһындай ҙа һуҙылып үҫеп киткән, һомғолланған! Көтөлмәгән ошо хәлдән ҡаушап ҡалды буғай ул, мәскәүский фырт егет. Их, ниңә бала саҡтағылай ябай ғына күрешеп һөйләшмәҫкә, ситән аша осоп төшкән әтәстәй ҡуҡырайып, дорфа

ҡыланды әле? Өҫтәүенә, әллә ҡасан тупраҡҡа әйләнеп сереп бөткән ата-бабаларға тел тейҙереп маташты: йәнәһе бер нәмәгә лә иҫе китмәй, ул — бәйһеҙ, ирекле ҡамғаҡ, имеш! Әйтерһең, һылыу ҡәрендәшенең һушын ала шуның менән. Алдың, ти, тот ҡойроғонан — троллейбусҡа ырғып менде лә һыҙҙы. Ә хәҙер: «Был сыбыҡ осо туғанымды мәркәз ҡала боҙамы, әллә ул үҙе мәркәзде боҙамы икән?» — тиеберәк матур башын сайҡап баралыр. Егет аҡтығы, тугриктарҙы күрәп алыусы, имеш... Һуңынан бит «бизнесмен» тип күҙ астыртмай көләсәк. Дөрөҫөн генә әйткәндә, былтырғы йәй Милеевканың һөттәй ап-аҡ ҡайындары араһынан егеттәргә хас булмағанса табан майлап ҡасыуы ла әлеге лә баяғы шул ҡәһәр төшкөрө тәңкәгә — тугриктарға ҡомһоҙлоғоноң һөҙөмтәһе түгелме? Өҫтәүенә, изге күңелле, йомарт ҡуллы бәндәләй шапырынып, урыҫ иленә игелектәр өйөргә вәғәҙә итеп, усына тугриктар күрәлеп төшмәүе беленгәс тә, төн сыҡҡансы вәғәҙәһенән төңдө, улай ғына ла түгел, эт илағыс шаҡшылығына барып, хатта Любаһы менән дә хушлашманы — үҙен ысын ҡырағайҙарса тотто. Барыһы ла ана шул аҡса, ҡомһоҙлоҡ касафаты!.. Их Любовь Яковлевна, белһәң ине аҡылымдың алты айға һуңлабыраҡ ҡайтҡанын, йөрәгемдең сәрпәкләнеп янғанын, Аҡһылыуым! Дилбәр ҡәрендәше менән килделе-киттеле ҡыланыуы ла ни бары шул ҙур гонаһын намыҫынан ярлыҡатырға тырышыу, ғәййәрләнеп ҡырҡышыу. Ах, үткәндәрҙе, баяғы шанлы шағирыбыҙҙай, күңелдән һыҙып ташлап, онотоп та булһасы!..

...Ул көн һайын Любаның эш урынына — китапханаға сапты. Бергәләп китап шүрлектәрен ипләштерә, уҡыусыларға китап бирә, әңгәмәләшә, бигерәк тә балаларҙы көтөп алыр ине улар. Рәссам ҡулы ҡағылғандан һуң сағыу буяулы стендтар, лозунгылар, портреттар эленгәс, һалҡын стеналарға йән бөркөлөп, «гөлт!» итеп балҡып китте, «ҡаланан килгән художниктың эшен күрергә» төркөм-төркөм колхозсылар эркелде. Нимә генә тиһәң дә, тылсым бар шул аҡсаны ла һанай белгән был ҡулдарҙа!.. Колхоздың партком секретары Иван Викторович Оболенский үҙе лә пәйҙә булып, хужалыҡҡа бик шәптән почет таҡталары, социалистик ярышта еңеп сығыусыларға тапшырыласаҡ вымпелдар һәм башҡа әллә күпме нәмәләр эшләп биреүен үтенде. Был заказдар эһ тә итмәй иң юғары сифатта башҡарылғас, рәссамдың даны артты, күптәрҙең ул «үҙ кеше»һе булып китте, кеҫәгә лә колхоз ҡаҙнаһынан яҡшы төшем ҡойолдо. Көтмәгәндә ифрат абруйлы заказ — хужалыҡтың яңы культура һарайын фрескалар менән биҙәү тәкдиме лә яһалды. Төбәктең аҫыл төҫтәре араһында Басирҙы иң арбағаны — Яков ҡарт менән уның шәкерте Иван ижад иткән һыр-биҙәктәр ине. Был икәүҙең халыҡсан биҙәү сәнғәтенең иң һиммәтле өлгөләрен йөкмәгән шат урамдарға — осҡор ҡоштар урамы менән үрмәле гөлдәр урамына атлыға, йә яңы сығып йәки байып барған Ҡояш, йә тулы Ай нурҙарының ҡыя һуғыу тәьҫирендә тәҙрә ҡапҡастарындағы, кәрниз маңлайҙарындағы нәфис-серлө япраҡтарҙың һәм ҡоштарҙың ҡайһы мәлдә ниндәй сихри тимгел-күләгәләргә йомолоп үҙгәреүен, йәнләнеүен, тылсымлы көскә әйләнеүен йотлоғоп ҡарар ине. Киләсәктә культура һарайын биҙәгәндә шуларҙы киң файҙаланырға булды: Любаһының тыуған төйәк төҫтәре, атаһының ҡул күрке бөркkән сәнғәт тылсымы халыҡҡа әйләнеп ҡайтһын, йән арбағыс ауылдарҙың күңел күген нурлаһын! Ошо рәссамлыҡ

ниәтен таныштарына ипле генә белдергәс, Иван-оҫта пырхылдап көлөп ҡуйҙы, Яков ҡарт баш тырнаны:

-- Барып сыҡмаҫ!

-- Бәй, ни өсөн?

-- Етәкселәр яҡын юлатмаясаҡ, бар тип тә белмәйәсәк...

-- Һеҙҙәрҙең ул теп-тере биҙәктәрҙе һуҡыр ғына танымаҫ, художник булараҡ әйтәм!

-- Эх, таныуын таный ул беҙҙең председатель Богомаз Макар Федорович, хатта юнышҡанымда эргәлә телен шартлатып һоҡланып торғаны ла бар. Әммә эшкә килгәндә, һығымта бер: «Беҙгә ит кәрәк, һөт кәрәк, күп кәрәк — тап партиябыҙ ҡушҡанса! Беҙгә биҙәк-миҙәктәр менән сыуалып көн үткәрмәҫкә, ә күберәк, тиҙерәк, арзаныраҡ торлаҡ комплекстары төҙөргә!» — Бына уның дәғүәһе. Колхоз үҙәгенең «Соцпроспект» тип аталған, шау коробкаларҙан ғына хасил урамын күргәнһегеҙҙер.

-- Һуң, ул коробкаларҙы ла әҙәмсә биҙәп була лаһа?

-- Әйтеп ҡараныҡ. «Иҫке заман ҡалдыҡтарын тергеҙеп, баш ҡатырып йөрөмәгеҙ. Беҙҙең осор архитектураһы — нур ҡылындай туп-тура һыҙыҡ, шымалыҡ, сорғолоп күккә олғашыу!»— булды берәгәй яуап. Әйтерһең, ата-баба биҙәктәре үҙебеҙ менән бергә көн итеп килмәй, әйтерһең, улар алыҫ ҡом сахраһындағы фирғәүен ҡәберенән соҡоп сығарылған.

-- Ә партия ни ҡарай?

-- Иван Викторович Оболенскиймы? Зерә уҡымышлы ул, партком секретарын әйтәм. Алдыбыҙға алтын буталлы альбомдар сығарып һалды, сөкөрәйеп ҡараны. «Бына был — хәҙерге япон архитектураһы, быныһы — бразил, ә был үҙебеҙҙеке, — ти. — Замана йорттарының һаман, күҙ талдырткыс ваҡ деталдәрҙән арына барып, сорғол-тура һыҙыҡ буйынса юғары уҡталыуын, ылғый бетондан да алюминийҙан, быяланан ҡойолоуын күрәбеҙ, — ти. — Иван менән һеҙ, — ти, — шул үҙегеҙҙең сөгөлдөр япраҡлы, торна муйынлы урамдарығыҙҙан ары китергә теләмәй, тормоштан артта ҡалып, артҡа ҡарап йәшәйһегеҙ коммунизм кешеләре түгел һеҙ. «Коммунизм юлы» тигән колхоз ағзалары икәнлегегеҙҙе лә онотоп ебәрҙегеҙ, — тине. Аҙаҡтан: — Зирәк крәҫтиән аҡылығыҙ менән генә самалап ҡарағыҙ шуны: коммунизм осоронда йәшәйәсәк кешеләрҙең түбәһе Ҡояшҡа тейеп торған бейек йорттарының кәрнизен үлән ҡыяғы, ҡош-ҡорт тәпәйе ырып биҙәкләүҙән ни мәғәнә? Ҡош осор бейеклектәге ул биҙәктәрҙе кем күрә? Торҡолдашып йылы яҡҡа ҡайтып барған торналар ғына ҡарап баһаламаһа тағы...» — тип оялтырға маташа.

-- Ә һеҙ?

-- Беҙ ни, беҙ — бәләкәй кеше. Иван әйтмешләй, ҡулыбыҙҙа — балта, ауыҙыбыҙҙа — махра. Шулай ҙа, хәлемдән килгәнсе, телләшеп ҡараным. Коммунизм осоро минең өсөн үтә бейек — күҙ етмәй, — тинем. — Әммә бөгөнгө ошо йорттарҙың кәрниздәренә һырлап-уралған һеҙ әйткән «үлән ҡыяғы», «ҡош-ҡорт тәпәйе» — крәҫтиәнде ғәзиз ергә беркетеп тотҡан илаһи бер тылсым түгелме икән әле? — тинем. — Биҙәкле күңел кәрнизенән айырһағыҙ ер балаһын, бер ниндәй ҙә көҙгөлө-мөҙгөлө стеналарығыҙ ҙа уны арбай алмаясаҡ — нигеҙенән

ҡубынып, күккә ҡалҡҡан һабын ҡыуығылай осоп китер. Үҙегеҙ ҙә абайламай, Тыуған ерҙе уның төп хужаһынан — игеүсенән мәхрүм итәһегеҙ бит! — тип әсенеп әйтеп тә ҡараным.

-- Нимә тине һуң?

-- Ни тиһен. Һиңә, ҡартлас, заман менән ҡуша атларға, сәйәси дағаланырға ла дағаланырға кәрәк әле, тип, һаҡалымды тоттортоп сығарып ебәрҙе.

-- Шул уҡ аҫыл биҙәктәрҙе яңы заман әйбере — ҡиммәтле ҡыҙыл ағастағы ырмауҙа, пластикала, фрескала, мозаикала, бронзала, ул ғына ла етмәһә, алтын менән көмөштә рәхәтләнеп башҡарырға һәм шулар менән хатта небоскребтарға ла йән өрөргә була лаһа? Ошо хаҡта әйтмәнегеҙме?

-- Уныһына баш етмәгән.

Ҡарт, шымартылған таҡта киҫәген верстакка иплəп, тыуасаҡ семәр контурҙарын тоҫмалларға тотондо. Әллә баяғы асы оҫталыҡ яҙмышын бәйән итеп йөрәкһеүҙән, ҡулына эш барманы. Ҡәнәғәтһеҙ тамаҡ ҡырып, ҡәләмен ҡуйҙы, төрөпкәгә йәбеште. Оҫта ғазабын ентекләп күҙәткән Басир, ҡәләмде өндәшмәй генә алып, маһир сыйылған биҙәккә бер нисә яңы һыҙат ҡына өҫтәне. Ҡарт ҡәнәғәт тамаҡ ҡырҙы, верстакка икенсе таҡта һалды. Басир ундағы тоҫмалдарҙы ла үҙенсә «редакторлап» сыҡты. Ике таҡтаны ла алып, Ҡояшҡа төрлө яҡлап бороп, хәтһеҙ һынап ҡараны ҡарт. Төрөпкәһенән төтөн көлкеп-көлкеп сығып, һауаға күтәрелде: оҫта тулҡынлана ине. Кейеҙҙәй ҡытыршыланып, күндәй иләнеп бөткән услы ҙур ҡулын Басирға һондо:

—Афарин, ҡулдарығыҙ — икмәк ашата торған ҡул икән, балаҡай! Беҙҙең артелгә инәһегеҙме әллә?

Оҫтаның йөрәк түренән сыҡҡан ошо ябай һүҙҙәре — танышын үҙ тиңе итеп һанауы, ә был иһә Басир өсөн донъялағы иң оло бүләк ине. Сикәләре ҡыҙарып яуапланы:

—Бик теләп, Яков Ксенофонтович. Тик беҙ һеҙҙең менән һуңыраҡ, баяғыса, колхозығыҙҙың культура һарайын биҙәүҙә берегербеҙ.

— Был мәсьәләлә шаярҡанды яратмайым.

-- Ысын. Председателегеҙ ҡоҙаланы мине ул эшкә. Дөрөҫөрәге, Анатолий Каргин тигән иптәшем менән мине. Ләкин икебеҙҙең генә көстән килерлек түгел — ваҡыт яғы самалы. Дүртәүләшеп тотонһаҡ, ай араһында «ялт!» иттерер инек. — Ғәжәп: Басир беренсе тапҡыр ошонда алда торған эште «оҙон аҡса»ға бәйләмәне...

-- Ай-һай? Риза булырмы икән? — Оҫта баш сайҡаны.

-- Булмай ғына ҡараһындар! Мин уларға ультиматум ҡуям! Их, биҙәйәсәкбеҙ ҙә биҙәйәсәкбеҙ, Яков Ксенофонтович, беҙ ул йортто һеҙҙең менән! Ултырғыстарына тиклем, донъяның иң аҫыл концерт залдарындағылай, семәрләп бирәсәкбеҙ. Килгән һәр кем, аллы-гөллө стеналарына, түшәмдәренә күҙ атып, һушын йыя алмай торор, кемдең алтын ҡулдарының йоғо икән был мөғжизә; тип һорарға мәжбүр булыр!

-- Эх, тамам ебеттегеҙ мине, иҫке бүрәнәне! — Яков ҡарттың керпектәре дымланды.

...Ике оҫта, үткер балталарын түмәргә сабып, төшкөлөккә туҡтаған, *Люба* *ла* килеп еткән — тарбаҡай алмағас аҫтында кәпәй ҡорһаҡлы еҙ самауыр эргәһендә һүрән генә әңгәмәгә талғандар. Басир ҙа йәлеп булғас, йәнләнгәндәй иттеләр, табын ҡырына саҡырып, ҡайнар сәй яһанылар. Рәссам, тулҡынланыуын йәшермәй, баяғы йомош менән колхоз идараһында булыуын һөйләп бирҙе.

-- Тимәк, әлеге *лә* баяғы, беҙ икәүгә ҡаршы, тиһең инде? — Яков Ксенофонтовичтың тауышы ҡалтыраны. — Их, тыуған ерҙең культура усағын үҙ ҡулыбыҙҙан биҙәп ҡалдырырбыҙ тигәйнек!..

-- Беләм мин уны, Богомазды, — тине Иван. — Беҙҙән, ауылдаштарынан, колхоз аҡсаһын ҡыҙғана. Теләгән бер шабашникка унар меңләп тоттортоп ебәрергә әҙер, тик беҙгә генә түгел.

-- Эйе, Макар Федорович ус ялатмай беҙгә. — Ҡарт көрһөндө.

Өндәшмәй генә ултырған *Любаның* ике бите янып-алһыуланды:

—Атай! Һаман шул аҡса, аҡса, аҡса!.. Аҡсанан башка *ла* донъя барлығын оноттоғоҙмо әллә? Тыуған төйәкте күркәмләү хаҡында һүҙ бара, ә һеҙ — аҡса...

-- Аҡсаһыҙ йәшәп ҡара, — тине Иван. — Буштың атаһы үлгән, ти торғайны минең Магадандағы башҡорт дуҫым да.

-- Үҙебеҙгә йорт һалғанда кемдән аҡса алдығыҙ?!

-- Һин, ҡыҙым, культура һарайын үҙебеҙҙең йорт менән тиңләмә. Унда эшләнәһе эштәрҙең хаҡы тиҫтәләрсә мең һумдар менән нарыҡлана, шулаймы? — Яков Ксенофонтович, ҡупшы аҡ һаҡалын һыпырып, рәссамға эйәк ҡаҡты. — Әйтеп бир әле, Басир, һантый ҡыҙыма председатель менән үҙең килешкән тейешле сумманы.

Ауыҙын бешерә-бешерә сәй һемергән егет, стаканын тиҙ генә өҫтәлгә ҡуйып, эштең нисә мең һумлыҡ икәнен тиште. Аптырауҙан *Любаның* күҙҙәре аҡшайҙы:

—Ҡомһоҙҙар, көпә-кендөҙ тереләтә тунарға... Макар Федорович урынында булһам, — Атаһы менән Иванды битәрләне, — мин дә һеҙҙе яҡын да ебәрмәҫ инем. Ауыл өсөн, үҙебеҙ өсөн дәһә ул культура һарайы!

Ҡарттың керпектәре сырт-сырт йомолдо:

-- Әллә һин беҙҙе ысынлап та бушлай эшләтергә йыйынаһыңмы, ҡыҙым?

-- Бер-ике ай бушҡа эшләп бирһәгеҙ ҙә ҡулығыҙ ҡоромаҫ ине. Ана анауы ботаҡтағы һарыҡай ҡошсоҡто тыңлағыҙ, — ҡыҙ алмағастар араһына төртөп күрһәтте, — ҡайһылай өҙөлөп-өҙөлөп һайрай, донъябыҙҙы хозурлай, әммә беребеҙҙән бер нәмә һораймы?! Ә һин, Иванушка, буштың атаһы үлгән, тиһең...

-- Эй, аҡсаламы ни эш! — тине Иван, ҡул һелтәне. — Уға ҡалһа, төкөрҙөм мин аҡсаға — миллион һумдарына!

— Эш нимәлә һуң?

-- Эй! — Иван тағы ҡул һелтәне. — Ысынлап та, ул аҡса беҙгә нимәгә? Богомазға үс итеп, бушлай эшләп бирәйек, Яков Ксенофонтович. Үҙебеҙҙең тыуған ерҙе биҙәйек!

-- Дөрөҫ әйтәһең, Иванушка! — Ҡыҙ хатта ырғып торҙо. — Әгәр шулай итһәгеҙ, Макар Федорович та, бер кем дә ҡаршы килә алмаҫ, эйеме, Басир? — Зәңгәр күҙҙәренең сикһеҙ ихласлығы Дәүләтбаев күңеленә түңкәрелеп ҡапланды

ла йөрәген тулатып ебәрҙе, башын татлы томанда әйләндерҙе.

-- Әлбиттә, шулай! — тине егет, һөйгәненең йөрәк тибешен йәне-тәне менән тойоп. Ни әйтерен һулыш алмай көткән ҡыҙ сеңрәтеп көлдө.

-- Тимәк, Дәүләтбаев иптәш тә беҙҙең менән — талантын халыҡҡа бүләк итергә риза? — тине Иван, рәссамға ирҙәрсә ҡул биреп.

-- Әлбиттә, был хаҡта ни һүҙ тағы! — Иван ҡулын усмаҡлап, башын ғорур ҡалҡытҡан булды Басир. Икеһенең көрмәкләшкән биш йәбенә ҡарттың ҡуш услап ныҡ ҡыҫыуы ҡушылғас: — Беҙҙең башҡортта «өмә» тигән тап ана шундай йола бар, — тип өҫтәне.

-- Ура! — Сабыйҙарса ихлас ҡул сәпәне *Люба*. — Был өмәне ишетһә, Богомазыбыҙҙың ике күҙе дүрт була инде! — Йүгереп килеп, бергә көрмәкләшкән ҡулдарҙы ул да нығытып усланы. — Күрҙегеҙме, егеттәр, буштың атаһы үлмәгән!

-- Үлмәгән! — тине тегеләре, бер юлы.

-- Вәт һантыйҙар, һантыйҙар! — Ике күҙе ҡыуаныстан мөлдөрәгән Яков Ксенофонтович, күңеле тулышып, буғай, саҡ ҡына мышҡылдап алды.

Ижад йортондағы үҙенең бүлмәһендә көскә уянып күҙҙәрөн асты Басир. Башы зыңҡып, күңеле болғанып, ҡыйынлыҡ менән йыуынды, ҡырынды. Өҫтәлдә яртылаш шешә, ике стакан күреп, кисә бик һуң ҡайтып ингәс тә Толя дуҫы менән һемереп ултырыуын, көрмәлгән телен саҡ ҡуҙғалтып, ныҡышланып, уны баяғы илгә игелек итә торған изге өмәгә тартыуын, ә тегеһе «өмә» тигән ябай һүҙҙе һис нисек тә аңлай алмай йөҙәүен хәтерләне. Шешә аҫтында яҙыу ярпыһы ята:

«Басир, ҡәҙерле арҡауым! Юлдар хәтәр сатрашланмаһын өсөн, Мәскәүгә ҡайтып китәмен (минең буяуҙар бөттө)... Унан, бәлки, Донбассҡа тугриктар тирергә шылырмын – буштың атаһы үлгән!. Ҡара уны, үҙең генә һемермә! Шешәләге ҡандала еҫле нәмәкәйеңде мин килгәнсе һаҡлап тот. Үҙеңә хоҙайҙан ялбарып буйлыҡ теләүсең — Анатолий Каргин».

Күҙ алдары ҡараңғыланып, болдорҙағы эскәмйәгә әүшәрелде, ҡолаҡтарында *Любаның* һүҙҙәре шауланы: «Буштың атаһы үлмәгән, үлмәгән!..»

Ай-һай, үлмәгәнме икән әле?..

Таҡыр ырҙын табағылай кеҫә төбөнә ҡулын тығып ҡарағас, йөрәк ите семетеп, председатель Богомаз менән килешелгән һимеҙ ҡалым һыйырының шеш имсәкле шәүләһе, ҡауырһындай ҡыштырлауыҡ иҫәпһеҙ күп ассигнациялар рәүешендә күҙ алдында туҙранып-айбарланып, күңел донъяһын баҫты, һулышын томаланы, йөрәген семерләтте. Их, ул баш тартҡан аҡсалар!.. Күҙ алдары ҡараңғыланып, башын тотто:

— Һантый, ыштанһыҙ меҫкен студент! Өмәгә бара, имеш!.. Ыштанһыҙ!..

Ҡабаланып, ҡалтыранып, сумаҙанға әйберҙәрен тултырҙы: тиҙерәк станцияға, поезға!.. Бөтә *Лопуховка* ауылы уға бармаҡ төртөп көлә, ә артынан теге саҡта төшөндә эҙәрләгән урман өрәге буш араҡы шешәләре тәгәрләткәндәй...

Башы уғата зыңҡып, үҙенең инде тегендә түгел, ә Өфө урамында атлап барыуын да онотоп, Басир әмәлһеҙҙән кеҫә төбөн һәрмәп ҡараны ла тағы тәрән үкенес тойғоһо кисерҙе: эх-ма, әгәр былтыр шул Милеевкала, телен ҡорт сағып, «өмә» һүҙен ысҡындырмаған булһа, Богомаздан «ҡалым»ды ҡайырып алһа!..

Зарар юҡ, ауыҙы бешкән — өрөп эскән тигәндәй, артабан аҡыллыраҡ бул. Алға, егет! Өйөндә юҡ ағаһын аңдып алйыҒансы, Саркисян тигән мутйән танышын тиҙерәк эҙләп табып, бындағы ҡалым һыйырын ҡайһы мөгөҙөнән тоторға, нисә имсәген бер юлы ҡабып имергә икәнен аныҡларға!.. Ҡыҙырмыш Мотал ағаһы ла ояһына әйләнеп ҡайтыр шуңарса.

Урта мәктәпте бергә тамамлаған һабаҡташы Әскәр Йәмил улы Ҡотлоев уны ҡаланың «замана балалары» йыйыла торған «салон»ға (соланға) алып килде: Ыңғырсаҡ Уральский тигән эшсе-шағир, көтөлмәгән бәхеткә юлығып, ике бүлмәле фатир эйәһе булған да, тынысыраҡ бүлмәне әсәһенә биреп, залды баяғы соланға – шау-шоу төйгенә әйләндергән имеш. Музыка һәм шиғыр ҡатыш мәхшәр-тауыш подъездан уҡ ҡолаҡтарға бәрелде, ярым ҡыҫыҡ ишектән һисбер тартынмайса ирәүән үттеләр. Өй эсе ябай һәм затһыҙ, иҙән уртаһына ҡуйылған оҙон өҫтәл тирәләй бер төркөм ир-ат мәжлес ҡороп гөр-килеп ултыра имеш.

Яңыларҙың пәйҙә булыуы табындағы һүҙ ағылышын бүлдерҙе: һәр береһе, ҡалҡынып, икәүҙең ҡулын ҡыҫты. Йәмғеһе лә, аҙмы-күпме, Басирға әүәлдән таныш: Мөхлисә еңгәһе әйтмешләй, рестарандарҙа «йәшел йылан юлында» йылтылдап йөрөгән затлы тоҡом -- «алтын бөртөк»тәр ине: фатир хужаһы эшсе-шағир Ыңғырсаҡ Уральский үҙе, йәнә бер өлкәнерәк быуын шағир Абуталип Сиҙәмле һәм ошондай «хис кешеләре» араһында уралырға яратыусы ҡалын кеҫәле «баҙар ҡорто» (ағаһы Мотал ләҡәбе!) -- баяғы Армен Саркисян иптәш, ҡалғандарын рәссам иғтибарға элмәне. Хис эйәләре араһында Саркисянды «Асам-Кисәм» тип юҡҡа ғына ләҡәпләп йөрөтмәйҙәрҙер: сауҙа-табыш өлкәһендә аҫырға ла, киҫергә лә һәләтле — Саркисяндың танауы тығылған ерҙә, сәнғәттән дә бигерәк, алтын-көмөш еҫе сыға... Шул Саркисяндың усын ялап аяҡ араһында буталған, шешә тығыны асышыуҙа һис кемгә биргеһеҙ маһирлашҡан шағир Сиҙәмле Абуталипты — «Буталып», тип «ҙурлау»ҙары ла тикмәгә түгел. Нимә эшләмәк кәрәк: һәр өйөрҙөң булалыр үҙ кешнәүе йәғни жаргоны... Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: йомарт ҡуллы тип танылған Саркисян-Асам-Кисәм тағы бер маһирлыҡҡа эйә: мутйәндәрҙе хеҙмәтләндергән байтаҡ телдәрҙә ватып-емереп булһа ла һөйләшә белә; ә үҙенең ҡайһы милләткә ҡарауын бер ваҡытта ла өҙөп кенә әйткәне булмаһа ла, кешеләр уны ҡиәфәте һәм фамилияһы буйынса — әрмәнгә, һөнәр-шөғөлө («баҙар ҡорто») һәм телмәр үҙенсәлеге («кацо» һүҙен ҡыҫтырып ебәрергә ярата) арҡаһында — грузинға йә абхазға, ә айырым тәбиғи билдәләре, төҫө-ҡылығы һәм урыҫса һөйләшкәнендәге акцентына ҡарап ҡойоп ҡуйған башҡорт бәндәһенә оҡшата — кавказлы булыуына шикләнә ине.

Өҫтәл ҡырынан Басир менән Асҡарға ла урын биреп, стакан тоттортоп, табындаштар күңелле шауланылар. Басир сырайын һытты: теге саҡта Милеевкала хәйерһеҙ осланған эскелек мажараһынан һуң, терһәген тешләрҙәй булып, ҡырлы стакан тоторға тетрәнә ине...

-- Әйҙәгеҙ, яңы кергән азаматтар һаулығына!

-- Төңкәйттек, булдыҡ иҫән! — Нескә шиғри хисле Абуталип менән Ыңғырсаҡбай, уларға ҡушылып йылғыр Асҡар төп-күтәрә ҡапланы, Саркисян менән Басир уртлап ҡына ҡуйҙы. Пушкиндыҡылай ҡупшы, әммә дала

ҡылғанылай сал-ҡыурау оҙон бакенбартдар үҫтереп ебәргән Абуталип Сиҙәмле бушанған стаканы артынан өҫтәлгә морон төрткәйне, хырылдап йоҡлай ҙа башланы, бөҙрә-көҙрә сал сәс тирәсе уртаһындағы ялтасы көн сағылтҡан көҙгө йөҙөләй «ялт!» итте, рәссамға ул туҙғаҡ аҡболот уртаһында көлөп ятҡан һары Ҡояштай күренде. Ғүмеркәйҙәрҙең һыуҙай ағылып уҙыуын шәйләп буғай, көлләһө лә шымыбыраҡ уйланды.

-- Их замана-замана, был түбәләстә лә бар ине бит Һаҡмар ҡара талдары шаулаған мәл! — тип көрһөндө зыңғыр тауышлы Асҡар, шағир ялтасынан ҡарашын алып.

-- Башын эйгәйне Абуталип, күңелем китте Буталып!..— тип, ҡәләмдәшенең ҡушаматын ҡыҫтырып, моңһоу рифмаларға һалды Ыңғырсаҡ Уральский. Һәр береһе, ирекһеҙҙән, тәрән хискә бирелеп, Абуталип-Буталыптың барыһына мәғлүм тәржемәи хәлен — тиле йәшлек йылдарын хәтерләне лә, тап шул хаҡта «Һәнәк» сатира журналында «Моңло хикәйәт» тип баҫылған әсе һағышлы бер әҫәрҙе иҫкә төшөрөп, ирекһеҙҙән йылмайҙы.

...Бөгөн инде ялтас түбәле таҙғараға әйләнгән, Буталып ләҡәбе менән тел-тешкә кереп, күҙҙәрен хәмер томалаған Абуталип та янып торған ут йөрәкле егет ине, ярһып шиғырҙар яҙа, үҙҙәренең дала районы гәзитендә «Йәштәр тауышы» рубрикаһы аҫтында күпләп баҫтырта ине. Ә ҙур ҡала уттары тураһында иртән тороп кис төшөнә лә кермәҫ, рәхәтләнеп далала мал көтөр ине. Көндәрҙән бер көндө ҡаш менән күҙ араһында районды ил шаңлатҡыс сиҙәм күтәреү фронтына әүерелеп, гәзит-журнал биттәрендә сиҙәм ерҙәр тураһындағы йырҙарға, шиғырҙарға оло ҡытлыҡ килеп тыуғас, сиҙәмселәр араһына, ең һыҙғанып, алыҫ ҡаланан яңы таланттарға һыуһаған өлкән шағир — Яҙыусылар берлеге етәкселәренең береһе килеп төштө лә шунда уҡ эш йәнләндереп, «ошоғаса сиҙәм аҫты билдәһеҙлегендә күмелеп ятҡан, бөгөн килеп замананың тарихи трактор төрәндәре аҡтарып сығарған яңы талант»ты асты — Абуталип Сиҙәмле. Партиябыҙҙың «мудрый етәкселеге аҫтында» сал ҡылғандар араһын нурландыртып тыуған яҡты йондоҙҙо шиғриәтебеҙ күгендә лайыҡлы балҡытыр өсөн, тәүҙә уның бер көлтә ижад емештәрен, ә унан һуң үҙен ҡалаға етәкләп алып ҡайтты. Йәш таланттарҙы һөйгән ихласйән ине ағайыбыҙ: төҙәткеләп, ипкә килтереп, етлекмәгән ерҙәрен етлектереп, таҡмаҡтарҙан ҡәҙимгесә шиғыр яһап, баш һүҙ яҙып, матбуғатҡа сығарҙы, шул шиғырҙарҙың сиҙәм хаҡындағы береһенә күренекле композиторыбыҙ Коммунистар партияһы етәкселегендәге замана заңы талап иткәнсә шаңғыр көй яҙып, танһыҡ ҡандырғыс сиҙәм йыры радионан яңғыраны, ҡауырһын пластинкаларҙа ла күпләп мәңгеләштерелде. Оҙаҡламай «Сиҙәм йырҙары» тигән коллектив китап та әҙерлонде, ул шөһрәтле сиҙәм шағиры Абуталип Сиҙәмле ижады менән асыла ине. Яҡты йондоҙ ҡаланың ялтыр асфальтына ғүмерлеккә йәпләнде, шиғри-миғри соландарға (салондарға) эйәләшеп: «Данлы сиҙәм эпопеяһын мин быға донъяла күрелмәгән оло эпик поэмала мәңгеләштерәм, Ғүмәрҙе[40] уҙып китәм», -- тип елләнеп йөрөр булды. Ләкин сиҙәм талантының тынмаҫ ижад урғылы, асфальтҡа күсереп ултыртылған

[40] Ғүмәр —бик боронғо заман шағиры, «Илиада» авторы Гомер.

суҡ бүтәгә-ҡылғандың тамырылай, күҙгә күренеп ҡороно, сиҙәм асыу йылдары тарихҡа ҡала барып алыҫлашҡас, шаулы сиҙәм йырҙары ла йылтыраҡ бәҫен юйҙы... Бөйөк партиябыҙ бойороуынса ауыл хужалығы эшсәндәре хәҙер инде ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштерергә тотонғанын ишетеп, Абуталип шул турала йыр яңыртып ҡараны. Партиябыҙ ҡушҡанынса һаҙлыҡтарҙы киптереү, мелиорация үткәреү эштәре лә Абуталиптың үҙәгенән шиғри өҙләү урғылдырҙы. Әммә былар барыһы ла үҙенең әүәлге сиҙәм моңдарын ҡабатлау — бер үк тунды яңыртып бесеү имеш. Ә «Ғүмәрҙәрҙе уҙмыш эпопея»һы тыуманы ла тыуманы, сөнки авторҙың ҡыҫыр патрондан борсаҡ пуля ғына осорторлоҡ бер семтем дары остоғо — оло снаряд гильзаһына яҫауланған ябай ҡом булып сыҡты...

Бөҙрә-көҙрә рифмалар маһирын хәҙер онотҡанда бер эфирҙа салынғылап киткән баяғы сиҙәм йыры ла әленән-әле эстрадаларҙа әртистәр ҡатарында шәхсән үҙе бөҙрәләтеп яттан һөйләп йөрөгән «Бөҙрә талдар балладаһы» һәм шағир ағай-энеләре хәмерәнә табын ҡорғанда әллә ҡайҙан ҡаланың икенсе башынан уҡ еҫкәнеп белә һәм атылған уҡ тиҙлегендә килеп етә торған сөгөлдөрҙәй ҡыҙыл танауы ғына исемен тынғыһыҙ сәнғәт донъяһына һаман да бәйләп тота, кеҫәһендә күп йөрөтөүҙән мөнтәлгән, һыйыр сәйнәгәндәй, мөйөштәре тетелеп бөткән баяғы берҙән-бер ғәзиз китабын да ул хәмер еҫле теләгән бер ергә юл ярыусы ярлыҡ — пропуск итеп ҡуллана ине...

Аҡ күбек-айран эсендәге ҙур йомарлаҡ һары майҙай аунап ятҡан ялтас түбәгә бағып, барыһы ла, моғайын, ошоларҙы уйланы.

-- Их, бар ине шул бер саҡтар — кеҫә тулы борсаҡтар!..

-- Сиҙәм шөһрәтханының да бөҙрә-көҙрә талдары ошолай һирәкләнгәс, беҙ бахырҙарға ни ҡала!

Ялтас түбә эйәһе салт ҡуҙғалып, күбенеп шешенгән күҙ ҡабаҡтарын йырсайтып, һүҙ эйәһен күрмәп алырға итте, әммә суйын гергә әйләнгән баш ҡынаһы ҡалҡынырға теләмәне:

-- Ә?! Бөҙрә талдар? Ҡайҙа минең бөҙрә талдарым?! — Шағирҙың күҙҙәре аларҙы.

-- Бөҙрә талдар — зәңгәр диңгеҙҙәрҙә... — Кемдер хихылданы.

-- Туҡта! — Абуталип, ҡапыл аңына килгәндәй, йоҙроҡлап өҫтәлгә һуҡты. — Мәхлуҡ! Ауыҙ-моронoң килешмәй һинең, «Бөҙрә талдар — зәңгәр диңгеҙҙәрҙә»не һөйләргә! — Мәшһүр баллада авторы көсөргәнеп ҡалҡынды — тиҙ үк иҫергәне кеүек, ҡапыл айный торған яҡшы ғәҙәте лә бар уның. — Байғоштар! Тыңлағыҙ: бына ҡайһылай уҡырға кәрәк уны, ысын-хаҡ шиғриәтте! — Саманан сығып йөрәкһегән сиҙәм шағиры һауа бушлығын ялтасы менән буҙ быҙауҙай һөҙөп, арҡа ҡатырып торайҙы ла артҡа салҡайҙы, ярым ҡыҫыҡ күҙҙәрен түшәмгә ҡатып, ике мөйөшөнән һеләгәйе һәленеп аға башлаған ҡалын иренле ауыҙын ҡороға ташланған балыҡтай ҙур асып һуланы, тумбыҡҡан телен саҡ әйләндереп мөңрәне:

Их!..
Бөҙрә талдар — зәңгәр диңгеҙҙәрҙә —
Күҙҙәремә ҡарап илайҙар:

«Шат сабағым — ҡайҙа сабый сағым?
Әллә Айҙа?!.» — тиеп һорайҙар... --

Ишеттегеҙме инде, байғоштарым: ысын сиҙәм шиғыры ҡайһындай була! Ә, Ыңғырсаҡбай?!

Ыңғырсаҡ Уральский үҙ сиратында уға уҫал үгеҙҙәй һөҙөп ҡараны ла нимәлер мыңғырланы.

— Их!.. «Шат сабағым — ҡайҙа сабый сағым? Әллә Айҙа?..» — тиеп һорайҙар...— Абуталип, күңел ҡылы нескәреүҙән мышҡылдап илай-илай, әбейҙәрҙең баш яулығы ҙурлыҡ ҡулъяулығын кеҫәһенән тағатып ебәреп, шарылдатып һеңгерҙе, шул ыңғайға шуның менән күҙҙәрен, ялтасын да ышҡып, урынына ултырҙы. — Их! Урман яҡтың тау-таш араһында ярты телем икмәккә тилмереп йөрөп ләпелдәгән «еңгәләрем былбылы» түгел шул был! Ха-ха-ха, Ыңғырсаҡ Уральский!

—Шым! — Әскәр табындағыларға күҙ ҡыҫты. — Туған шиғриәтебеҙҙең ике бөйөк уҙаманы олуғ шиғри аренала һөҙөшә!

-- Ағайҙарым, Абуталип ағай... — Уральский рәнйене, сөнки уның атаҡлы бер шиғырының юлдары ине был Абуталип әүмәләгән «еңгәләрем былбылы».

-- Етте! — Сиҙәм шағирының бала башы дәүмәлле йоҙроғо өҫтәлгә дөңкөлдәп ятты, ялтасы алға күсте. — Еңгәйҙәреңә өндәш, ана бара юлың! Йә — мин, йә — һин! Ике тәкә башы һыймай бер ҡаҙанға!

Үҙ баһаһын белә башлаған эшсе-шағир ҙа ҡомарланып үрһәләнде:

—Минме тәкә башы?! Юҡ! — Бармаҡ янап нығытты. — Һин үҙең ул тәкә башы! Һин!

—Әләйһә кем һин? Әллә фәләнемдең башымы?! -- Көтөлмәгән тиңләүҙән маңлайға балта төйҙәһе менән тондорғандай шаңҡып, бер күгәренеп, бер буҙарынып, Уральский байтаҡ иҫәңгерәне. Саҡ аңына килеп:

-- Һинең һымаҡ сиҙәм сыҫҡаны түгел, ә мәғрүр Урал тауының текә ҡаяһы мин — бына кем! — тип күкрәк һуғып ярһыны; был мәл уның нәҙек-оҙон шкаф һымаҡ һуҙынҡы-шаҡмаҡ башы, ҡарурмандай сәс тирәсе текәләнеп өтөрәйгән яҫы маңлайлы суйын-ҡара йөҙө, ысынлап та, Уралдағы ҡара ташлы сағылды хәтерләтмеш ине. Ана шул суйындай ялтыраған ҡаҡ маңлай уртаһында, тәндәрҙе зымбырлатып, әллә урайға, әллә солоҡ кейәһенә оҡшаш тәрән яра бирсәһе ажырая... Үҫмер саҡтан уҡ эшсе ҡорона кереп, төҙөлөштә маңлайына кирбес төшөп йәмрәйгән был егетте ҡәләмдәштәре ана шуға ла ара-тирә мәрәкәләп, ысын шағирҙың башындағы бер шөрөбө кәм була, тигәнерәк Пушкин һүҙҙәрен икенселәтеберәк, ҡаяһына талант кирбесе һуғылғанда был әҙәмдең әллә — бер, әллә туҡһан туғыҙ шөрөбө юғалған, тип тә һалдырғылайҙар...

Әммә сиҙәм шағиры ла Урал ҡаяһы аҫтында иҙелеп ҡалырға теләмәне:

-- Ташҡа үлсәйем! Беләһеңме, кем һин? Һыу юлында таңғы ысыҡтан бөршәйеп, һыуға барған еңгәләреңдең ҡулдарына тилмереп-мөлдөрәп ҡарап икмәк һыныфы теләп ултырған меҫкен көсөк һин!

-- Минме көсөк?!

-- Шым! — Саркисяндың абруйлы ауазы тәкәләрҙең төкөшөүен туҡтатты.

— Ағай-эне — аҡ мыйыҡ, бер-беребеҙҙе ҡаҡмайыҡ! Был өй — дуҫлыҡ өйө, был табын — дуҫлыҡ табыны. Әгәр кем дә кем ошоларға хупһынмай, көзәләнеп маташа икән, -- ҡаты әйтеүемә ғәфү үтенәм, -- ана тора юлы! Бына шулай. Сөскөр танауҙарына, гөрләтеп ебәр әле бер иң шәп шиғырыңды, Ыңғырсаҡбай мырҙам!

-- Һорайбыҙ, һорайбыҙ!

Күңеле булған Ыңғырсаҡ ирәйеп киреллде:

— Бына кәүҙәм минең — Ерҙең шары,
Был ҡулдарым — йыһан ҡармар болот.
Ике күҙем — ҡуҙлы Ай һәм Ҡояш,
Ә маңлайым — глобаль баллы солоҡ...

-- Әл-лә-лә-лә-лә, вәт бына был — образ! Галактика ҡоласы! – тине Асҡар.

-- Афарин, Уральский!

-- Дауам ит, дауам ит: маңлайыңдан да кендегеңдән дә аҫтараҡ сосолошҡан ағзаларыңды ла бермә-бер һанап үт! — Абуталип ауыҙ йырып көттө. Әммә эскерһеҙ Уральскийҙың шиғри хискә тулышҡан күңеле көр, ҡәләмдәше битәрләүен дә кисерергә әҙер ине:

-- Һин, ағайым, сиҙәм шағиры тигән бөйөк башың менән натурализмға бирелмә! Бына ниндәй була ул ысын шиғыр, тыңла:

Таң нурынан кейә астырам,
Уйҙарымдың күсен осорам.
Йондоҙ һайын ҡунып, шәрбәт һурып,
Кәрәҙҙәргә шау-нур тултырам —
Баллы кәрәҙҙәр мин тыуҙырам!

Маңлайымда минең — кейә-тәрәҙ,
Бар булмышым минең — баллы кәрәҙ...

Ыңғырсаҡ Уральский шиғырҙарында үҙ шәхесе менән мауығыу мул булғанға һәм шуға бәйле «ҡаялағы баллы солоҡ кейәһе» образы әҫәренән-әҫәренә күсеп йөрөгәнгәме, автор артында әсе-сөсө пародиялар тыуа, йыш ҡына шул «баллы солоҡ кейәһе» лә «һукыр сысҡан ояһы»на әйләндерелә ине...

-- Бына шулай була ул шиғыр, Буталып!

-- Һе! Кейә-тәрәҙ! — Абуталиптың ауыҙ-мороно салшайҙы. — Беренсенән, кейә — ул солоҡтоң ишеге. Икенсенән, «тәрәҙ» түгел, ә «тәҙрә» булырғы тейеш, ҡустым. Әсәйеңдең сусылдаған Ыҡ буйы һөйләше менән ысын башҡорт телен бимазалайһың!

-- Әллә һинең Байбула далаһында ғына ысын башҡорт теле тип беләһеңме?

—Байбула яғы булмаһа, телең булыр инеме?!

Асҡар Ҡотлоев мәрәкәләп киҫәтте:

-- Атланды шағирҙар аҫыл арғымаҡтарына — һәр береһе үҙ төбәген

мактарға ла үҙ һөйләшен ысын башҡорт теле тип ҡыйышырға. Төбәк тархандары шулай тартышҡан, ха-ха-ха!

-- Уның ҡарауы һәр береһе, тар ғына булһа ла, хан булған! — Басир ҙа элеп алды. — Әйтәйек, мәҫәлән, ике ырыу башҡорто тел тәңгәлендә төкәлешһә, ҡиәфәттәре бала әтәстәр кеүек: шпорҙары һынғансы, күкрәктәре ярылғансы тибешә, ти торғайны минең аҡһаҡал олатайым.

-- Юҡ, тибешергә ярамай, — тине барыһын мыйыҡҡа урап ултырған Армен Саркисян, ҡомары ҡапыл ҡыбырлап. — Был доньяла һыйышып йәшәү мәслихәт. Иң яҡшыһы -- теләгән бер мәсьәләлә джентельмендарса ҡулға-ҡул һалышып, устарға алтын ялатышып һөйләшергә — *алтын урталыҡты* табырға кәрәк. Йәшәһен алтын урталыҡ! — Ҡалҡынып, һәммәһе менән сәкәштерҙе, ыҙғышыусы ҡәләм эйәһе икәүҙең ҡомһоҙланып төп-күтәрә эсеүен өнһөҙ күҙәтеп, стаканын кире ҡуйҙы. Яңы өлөш өҫтәлеүҙән ҡыҙара-бүртенгән Абуталип йәш ҡәләмдәшенә төртөлөүен ҡуйманы:

-- Ә шулай ҙа, ҡомарың күмһегән шул, ҡустым. Куплеттарың үҙеңде иҫертһә лә, тим, башҡаларға буш күбек кенә таша, өлгөрмәгән асы бал кеүек.

-- Ә һинең «бөҙрә талдар»ың — шыйыҡлатылған һеркә эссенцияһы!

-- Ә һинең «баллы кәрәҙ»еңдә себен сүпрәһе мыжғый!

-- Ағайҙарым...

—Еңгәләрем, тип әйт! -- Хахылдап көлөштөләр.

-- Үҙемдең ошо кипарис буйлыҡ оҙон ғүмеремдә шағирҙар һәм рәссамдар менән аралашып, — тип, бармаҡ илеһендәй суҡай кавказ мыйығы аҫтынан йылмайҙы Саркисян, — шуға иғтибар иттем: типтергәндә рәссамдар гел ҡабымлыҡты, шағирҙар хәмерҙе ҡайыра...

-- Их, егеттәр! — Сиҙәм шағиры ҡуш йоҙроҡлап өҫтәлде дөмбәҫләне. — Бөҙрә таллы ошо ғәзиз балладамды үҙем иҫән саҡта китап итеп баҫтыртып сығарып булманы!.. Үҙем менән ҡуша китә инде бөҙрә талдарым... — Тос кәүҙәһен ултырғысҡа лөңкөлдәтеп, бала башылай йоҙроҡтары өҫтөнә һары ҡауындай түбәле башын яткырып һулҡылданы.

-- Ҡайғырма, алтын шағир-мосафир, — тине Саркисян, шағир ялтасын гәүһәр ҡашлы бармағы менән һыйпап. — Иҫән булһаҡ, мәңге онотмабыҙ һине, уҙаман. Алтын ижадыңды алтын хәрефтәр менән буталлап нәшер ҡылырбыҙ, шағирәнә исемеңде байраҡтай күтәрербеҙ. Иҫкенең һуҡыр Ғүмәре лә мәңге үлмәй йөрөп-ята. Ә һин бит, бер туған еҙнәң Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаров әйтмешләй, заманыбыҙҙың күҙле бүкән Ғүмәре.

-- Ошо булдымы әйтер һүҙең, Асам-Кисәм?

-- Шыш! Беҙҙең өсөн һин зерә лә ҡиммәтле — алтын бүкән икәнеңде онотма!

Сиҙәмлелең күҙҙәренән супырлап йәш ҡойолдо:

-- Их! Онотмауҙан ни файҙа? Яһил Америка президенты Ер шарын көл итергә яҫҡана бит! Ғәзиз «Бөҙрә талдарым»... тыуған халҡыма китап итеп тоттортоп китә алмамын инде... — Бер-ике һулҡылданы ла, шишмәһе ҡороп буғай, талғын мышнауға күсте.

-- Шағирҙар менән эш харап, — тине Саркисян. — Бөҙрә талдары китап

битенә тамырлана алмаһа, ахыры заман килерен юрай башлайҙар.

-- Ә мин нимә тием һуң? Бына был мырҙабыҙ бит, — Басир күңелле йорт хужаһы Ыңғырсаҡ Уралъскийға эйәк ҡағып ымланы, — ишетеп белеүемсә, үҙенең фатирһыҙлығын һәм кәләшһеҙлеген, еңгәләренең иғтибарһыҙлығын бөтә донъя фажиғәһенә әйләндереү кимәленә килеп еткән...

-- Шуның ҡарауы сиратһыҙ фатир алды, ә мин һаман сират тороп интегәм... – тине Сиҙәмле, хырылдап йоҡлап ятҡан еренән баш күтәреп.

-- Ниңә күпһенәһең? Һин дә ал! – тине эшсе-шағир.

-- Алыр инем дә, бирмәйҙәр шул: һинең һымаҡ, ялағайланып, түрәләрҙең эс-бауырына керә белмәйем.

-- Минме ялағай?!

Басир, һәр ҡайҙа ла фатир мәсьәләһе иң сетерекле булғанлыҡтан, тоҡанырға торған кәрәкһеҙ осҡондо һүрелтергә тырышты:

-- Уральский мырҙаны ҡотларға кәрәк: матур фатир эләктергән. Яҡшынан мебель дә алып ебәрһә... кеҫә төбөн һәрмәштереп...

-- Һе... кеҫә төпкәйҙәре тишек шул... – тине тыныслана биргән фатир эйәһе.

-- Мырҙам, шағир кешегә былай ярамай ҙа инде: тугрик-мугриктарыңды ҡайҙа ҡуяһың?

-- Нимә?

-- Гонорарға көрәп алған тәңкә-мәңкәләреңде, тим.

-- Шеш! – тотторҙолар, ти! Һеҙгә рәхәт ул, рәссам ағайҙар. — Уралъский урайлы маңлайын ярһыу аттай сайҡаны. — Картиналарығыҙҙың буяуы кибер-кипмәҫтән күргәҙмәгә ҡуяһығыҙ һәм «шалт!» — туранан-тура контакт, кеҫәләрегеҙгә алтын-көмөш -- «тып!» та «тып!». Етмәһә, бына тигән еңгәләребеҙ ҡуйынында наҙланып йәшәйһегеҙ. Ә шағирҙың эш башҡа: халыҡҡа барып етер өсөн нәшриәт сират күперен үтергә тейеш.

-- Бәй, һеҙ ҙә шиғырҙы борсаҡ кеүек туранан-тура эстраданан һибәһегеҙ түгелме ни?

-- Һибеп кенә фатир ҙа, кәләш тә алып булмай шул, ялтыр пеләштән ғәйре. Сиҙәмленән һорағыҙ.

Басир, Абуталип ялтасына күҙ ташлап, ирекһеҙҙән, үҙенең ҡуйы лоҡмандарын һыпырҙы:

-- Рәссамға ла һауын һыйыры килтереп бирмәйҙәр, туған. Ул һыйырҙы картинанан ҡырылмаһа-ҡырҡ комиссия, худфонт ҡулдары кәртәләй.

-- Уның ҡарауы Саркисян кеүек алтын ҡуллы меценат ағайҙар табыла...

-- Ярай, сәйнәшмәйек ул хаҡта, — тине Саркисян. — Кацо, һиңә бөгөн күпме кәрәк, әйт шуны.

-- Кәрәкмәй! – Эшсе-шағирҙың ғорурлыҡ тойғоһо уянды. -- Аҡсаны мин, уға ҡалһа, көнбағыш ярып ҡына ла табам!

-- Кәрәкмәҫ шул, еңгәләреңде ялаштырған шиғри телең менән түрәләрҙең ярыҡтарын ялағас! Кацо, миңә генә бирегеҙ ул аҡсаны.

Ыңғырсаҡ Уральский ярһыу аттай башын сөйөп ҡалҡынды, ут сәсрәгән ике күҙе араһында урайланған маңлай соҡоро бер – Сиҙәмлегә, бер -- Саркисянға

төбәлеп ажырайҙы:

-- Минең һымаҡ булып ҡарағыҙ әле! Кемдер кеүек шаляй-валяй түгел мин – эшсе-шағирмын!

-- Етте-етте, -- тине Саркисян. – Кацо, һүҙҙәремде кире алам.

Ир-егетте һоҡланып күҙәткән Басир ҡысҡырып уҡ ебәрҙе:

-- Бына ул ҡайҙа натура! Сур, егеттәр, был ҡустының портретын үҙем яҙам!

-- Ҡабул ителде, — тине Саркисян, һәм Басирға унын бында ултырыуының, «меценат» тип аталыуының сере сиселә төштө. — Мин ул картинаны үҙем һатып алам.

-- Ә минән рөхсәт һорағанығыҙмы һуң әле?! — тип ҡупырайҙы йәш шағир.

-- О! Ошо хәлеңдә, беләһеңме, кем һин, ҡустым? Галактика бәһлеүәне — бына кем! Күҙҙәреңдән — йондоҙҙар, маңлайыңдан йыһан караптары осорорҙайһың! Әлбиттә, һин аҡсаларҙан өҫтөн! Глобаль мөғжизә!

-- Ха, глобаль имеш... —Сиҙәмле ауыҙ йырҙы. — Бәлки, көлтубал мөғжизәлер?! — Көтмәгәндә, нескә генә ауазлы көйгә һалып һамаҡланы:

Ҡояш тураһында шигыр яҙған һуҡыр сысҡан,
Тик шуныһы гәжәп — баҫылып сыҡҡан... --

Бына кем һин, атҡа арҡалыҡ була алмаған Ыңғырсаҡ!

-- Етте, бында минең башым һыймай, ағайҙар! Ғәфү итегеҙ! — Эшсе-шағир, йәшенле күк күкрәүеләй ауазынан тәҙрә өлгөләрен зыңғырлатып, әсәһенең бүлмәһенә инеп китте. Артынса уҡ Сиҙәмленең дөбөрләп иҙәнгә тәгәрәүе табын хозурын селпәрәмә килтерҙе, ә өҫтәлдән баштүбән мәтәлгән һигеҙ ҡырлы стакан, әйтерһең, һуңғы ҡыңғырау булды.

-- Мин кем – беләһегеҙме?! – тине башын ҡалҡытып.

-- Кацо, алтынҡайым минең, — Саркисян, ирәгәйләнеп иҙәнгә йоҙроҡ һуғырға маташҡан Абуталипты ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ишеккә ыңғайлатты, — һинең кем икәнеңде донъя белә! Һинең бөҙрә талдарыңдан Пушкин тирәктәре лә аша ҡарай алмаясағына иманым камил. Ер шарында аҡтыҡ сиҙәм күтәрелгәндә лә Абуталип шиғриәттә һабан төрәне ҡуптарып алғыһыҙ Сиҙәмле килеш ҡаласаҡ, заманабыҙҙың күҙле бүкәне... ой, тфү-тфү! — һукыр Ғүмәре булып быуаттарҙан-быуаттарға барасаҡ. Киттек, киттек, Кацо: мин һине Мәрфуға апайыңа түбәндәге һуңғы бүтәгә-ҡылғандарыңдың бер төгөн дә ҡойҙортмайынса илтеп тапшырырға тейеш. Саркисян ул дуҫ-иштәрҙе ташламай!

-- Юҡ! — Шағир ҡамыт аяҡтарын шаран ишеккә арҡыры тарбайтып ҡырҡышты. — Күк Уралда минең ғәзиз «Бөҙрә талдар»ымды тыңдарлыҡ, аңларлыҡ кеше ҡалманы – барыһы ла һуҡыр сысҡан! Ҡайҙа бара был Ер шары?!.

-- Тыныс бул, Кацо! Һинең «Бөҙрә талдар»ыңды тыңлар өсөн генә лә Ер шарыбыҙ әйләнер ҙә тулғаныр һәм унда беҙ йәшәрбеҙ — бөтмәйәсәкбеҙ!

Сиҙәмлене алдан ҡуларбалай этәреп сығарып, ишек ябылырҙан элек, Саркисян әйләнеп ҡараны:

-- Уральский, алтын һүҙ көсөндә ҡала: бынау рәссам дуҫыбыҙ яҙасаҡ

портретыңды үҙем алам – галереямды биҙәйәсәк! Унан килеп... Хәйер, барыбыҙ ҙа иртәгә кискә Мөхлисә ханым табынында берегәбеҙ түгелме — ҡалғанын шунда осларбыҙ. — «Кавказ кешеһе»нең ярым әйләнешендәге профиле йәш рәссамдың зирәк ҡарашын тартып, күҙ алдында серле мөһөрләнде: һис кенә лә кавказлы түгел, ә башҡорттоң һөрһөп бөткән юрматы тибы ине...

Саркисяндың өр-яңы тимер арбаһы – рулен ысын кавказ кешеһе ҡамтарған «Жигули»йы – юл боролошонда көтөп тора икән дә: аяҡтары яңы тыуған быҙауҙыҡылай бәлкелдәгән сиҙәм шағирын өйөнә илтеп ҡуйҙылар.

-- Уф! Ниһәйәт, кемдер әйтмешләй, шағир-шоғорҙарҙан тамам арындыҡ! — Басирға ҡалҡынып ҡарап, Армен иркен тын алды. — Йә, үҙебеҙҙең эшкә күсәйек, туған. Шәйләүемсә, был юлы ла ҡалым һағалап ҡайтҡанһың?

-- Дөрөҫөн генә әйткәндә, артыҡ көсәнеп тирләмәй, һынлы сәнғәт фронтында бер-ике ус тугрикмы, тәңкәме һауып алырға ине. Бармы һауын һыйыры?

-- Дуҫтар өсөн Саркисяндың күңеле киң -- барыһы ла бар.

-- Атайым бахыр әйтмешләй, яғынысы ҡалынмы?

-- Ҡулға майы арыу ғына йоғасаҡ. Тап һиңә яраҡлы аҫыл шөғөл моронлап тора — ижади ҙа, престижный ҙа. Ҡыҫҡаһы, усыбыҙға алтын ялатыласаҡ.

-- Алтын?! – Басир һағайҙы.

-- Ҡурҡма, ене ҡағылмаҫ. Аҡсаның еҫе юҡ, тигән бит һаҡаллы Карл Маркс бабайың.

-- Алдан уҡ киҫәтеп ҡуям, Армен Тавасиевич, мин законға ярашлы ғына халтурить итә алам.

-- Бәй, уны кем кире ҡаға? Әлбиттә! Закондан аша атларға, әллә минең башыма тай типкәнме, әллә башым икеме, үҙеңдең атайың бахыр әйтмешләй?

-- Улайһа, аҫыл шөғөл тигәнең ниҙән ғибәрәт?

-- Бәләкәй генә кустар мастерскойҙа затлы металдан ҡойоп ваҡ-төйәк биҙәүес эшләүҙе юлға һалдым, уларын һин күрмәйһең дә, белмәйһең дә -- бөтәһе лә ҡанун ҡалыптарында. Һинең бурыс -- формаларға башҡортоңдоң гүзәл милли биҙәктәрен һалыу – шуны булдырырһыңмы?

-- Уныһына ҡалһа, әлбиттә.

-- Килештек, улайһа!

Басир ашығып ҡунаҡханаға ҡайтты: йыуынып-сайынып алырға ла, телефондан барлашып, әгәр ҙә өйҙә булһа, кисекмәҫтән ағаһына барып сәләм бирергә. Сөнки ағай кешенең холҡо ҡырыҫ, ҡайтып күренгәне һайын йә: «Ниңә минән күҙеңде йәшерәһең?» тип, йәки: «Ағайыңа ҡарағанда еңгәйең яҡыныраҡ һиңә», тип битәрләй... Әммә Шаһибәрәковтар фатирында үле тынлыҡ — трубканы алыусы юҡ.

«Етте, көнө буйы ҡунаҡханала, ҡунатаҡталағылай, түшәмгә текләп ятырға мин уҡлау түгел! Ағай унда ирәүәнләнеп ҡыҙыра, ә мин бында һағауылларға тейеш... Мин дә әҙәм балаһы!» Шулай ҙа әле аныҡ ҡына ҡарарға килә алмай, креслоға төпләнеп, Басир Дәүләтбаев тигән рәссамыбыҙ радиоалғысты шаңғыртты — башын баҫҡан хәтирәләрҙе елләтергә теләне. Мәгәр теге саҡта Яков ҡарттың ыңғайына ҡыҙыу баштан һөҙөмтәләнгән сәйер фекер остоғо мейе

юлағында һаман ыҫҡынмайынса тора: имеш, башҡорт, урыҫ һәм мордва -- барыһы бер туған булған, бер телдә һөйләшкән!.. Бына хәҙер туған республикаһына ҡайтып, гәзиттәрҙән нәҡ шул темаға Алпаровтың йыйылышта һөйләгән яман фашлау докладын уҡығас, хәүефләнеп, Милеевкала Яков ҡарттан ишеткәндәре һәм үҙе лә хуплап ҡушылғандары быға ҡапма-ҡаршы килгәнлеген төшөнөп икеләнде. Алпаров уҙаман әйткәнсә, Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың һаташыуы түгелме был? Кәрәкмәгән фәлсәфә! Ысынлап та, дөйә менән арғымаҡ бер иш, тигәндәй, төрлө-төрлө телдәр нисек бер туған булыуы мөмкин? Докладта тәнҡитләнгән Йәүҙәт, һәм шулай уҡ үҙһүҙле Дилбәр ҡәрендәштәре кеүек «тарих ене» ҡағылғандар уйлап сығарғандыр быны. Улай тиһәң, теге саҡта Ҙур Совет Энциклопедияһы битенән Иван төртөп күрһәтеп уҡытҡан мәҡәләлә уғата әҙәм ышанмаҫлыҡ һуҡаланған: тел буйынса беҙ мырҙаларығыҙға урыҫ һәм угрофин ғына түгел, хатта япон менән ҡытай ҙа, немец менән инглиз да, эфиоп, һинд, фарсы һәм ғәрәп тә, улар ғына ла етмәһә, боронғо шумер менән дравидтар ҙа бер туған имеш... Атайым бахыр әйтмешләй, ҡайҙа бара был донъя?! Редакторҙар ни ҡарай?! Хәйер, энциклопедияны ла, баяғылай, «тарих ене» ҡағылғандар яҙып сығараларҙыр...

Шайтан алғыры, Шаһибәрәковтар фатиры һаман өндәшмәй...

Мейеһен елләтмәккә, юл ыңғайы киоскынан һатып алып ҡайтҡан Мәскәү журналын аҡтарғайны, зиһенен һүреп алды: әйтерһең, уның, Басир Дәүләтбаевтың, тап хәҙерге аймылышлы фекери мәленә тап килтереп сәпәгәндәр! Был ни хәл, шул уҡ бер тирмәнгә һыу ҡоя түгелме «өлкән ағай»ҙың тарих фәндәре докторы яҙған, йомортканан яңы ғына сыҡҡан иң-иң себеши (свежий) мәғлүмәт: беҙ белмәгән замандарҙа уҡ «дала киңлегендә ифрат ҙур мәҙәни берләшмәләр төҙөлә. Малсылыҡ менән шөғөлләнеүсе күскенселәрҙең тарихтағы беренсе шундай ифрат ҙур мәҙәни берләшмәһе -- боронғо ямлы археология культураһы тип аталған мәҙәниәт барлыҡҡа килә. Боронғо ямлы культура... б. э. тиклем IV мең йыллыҡ аҙағы -- III мең йыллыҡ баштарында хасил була. Һәм Днестрҙан алып Урал йылғаһынаса булған бик ҙур киңлектәргә йәйелә. Ошо бөтә арауыҡты биләүселәрҙең мәйет ерләү йолаһының ғәжәп бер төрлө булыуы күҙгә ныҡ бәрелә, ә был иһә шул далала йәшәгән күп һанлы ҡәбиләләрҙең үҙ-ара даими аралашыуы һөҙөмтәһендә берҙәм рухи культураға эйә булыуҙарын күрһәтә. Ә бындай хәл бөтәһе лә берҙән-бер телдә генә йәки, аҙаҡ сиктә, үҙ-ара аңлашыла торған телдә һөйләшкәндә генә мөмкин булғанлыҡтан, тимәк, был ифрат ҙур өлкәнең бөтә киңлегендә *берҙән-бер тел* йәки яҡын туғандаш диалекттар төркөмө таралған булған[41]»...

Уффф, тағы тарих, ниңә уны эҙәрлекләй гел тарих?!. Етмәһә, ғалим ошо ҡолаҡҡа яҡмаҫ дәлилдәренә донъя халыҡтары ауыҙ-тел ижадынан нигеҙ итеп алған тылсымлы сюжетта ла башҡорттоң «Аҡъял батыр» героик эпосы ярылып ята — бында беҙҙең ата-бабаларҙың ҡыҫылышы юҡ тип әйтеп ҡара!.. Был ни хәл: бынан биш мең йылдар элек бөгөнгө Уралыбыҙҙан алып Карпатҡаса бөтә

---

[41] «Знание — сила» журналы, 11/86, тарих фәндәре докторы Э. Берзин. Сивка-Бурка, вещая каурка, или Древняя Европа в зеркале мифов и сказок.

Көнсығыш Европала бөтә халыҡтар өсөн берҙән-бер уртаҡ тел булған — бабаларыбыҙ шул уртаҡ телдә һөйләшкән... Тимәк, Мәскәү яны ауылы балта оҫтаһының, Яков Ксенофонтовичтың, төтөнө тура йөрөй! Уға китһә, беҙ кем һуң? Хәҙергесә *төркиме*, әллә боронғо *иранмы*? Әллә боронғо ирандар — үҙҙәре хәҙерге *башҡортмо?* Әгәр шулай булмаһа, ниңә эпостарыбыҙҙың бишеге сал Урал тауы — башҡорттоң донъя яратылғандан төйәкләнеп йәшәгән, матди һәм рухи донъяһының нигеҙе булған изге тауы һанала ла шуның изге ҡырлаларының береһе ииңә һамап Иран-дағ (Ирәндек) тип атала?!. – Шулай сәмләнде Басир.

## УН ЕТЕНСЕ СӘХИФӘ

Ағиҙел туғайы араһындағы яҙғы тынлыҡ менән ойоған дачаһында Мотал Шаһибәрәков уҙаман дөрләү сыуал мейес алдында креслола ултыра. Ялҡын ләүкепме ләүкей, оҙон һары телдәре, әйтерһең, Мотал йөрәген типкесләй. Донъя тигәнең ҡатмарлы, бәндәләре ҡатлаулы... Әйтәйек, кем уйлаған атаһы бахырҙың күҙгә лә элмәгән «шәкерт»тәренең береһе уның етемләнгән улы өсөн бер саҡ «атай урынына ҡалырын»?.. Эйе, хәләл ефете әйтмешләй, Мотал бөгөн Мотал була алыр инеме, әгәр ҙә ки заманында уға Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улының муслы ҡулы һуҙылмаһа? Дөрөҫ, көфөр телдәр Яубаҫаровты майлап ташлаһаң эт ялағыһыҙ яһил, яуыз итеп тәкрарлай. Мөхлисәһе юрауынса, Мотал менән Хөппөлгәрәй араларын Ҡыҙыл башҡорт боҙолошторторға теләй. Иҫке завод ветерандары араһында заманында Булаттимер-директорҙы ла, хужалыҡ эштәре буйынса уның урынбаҫары Хөппөлгәрәйҙе лә яҡшы белеүселәр бар. «Хәҙер һинең атайыңдың шәкерте булып күкрәк ҡағып йөрөһә лә, ваҡытында Шаһибәрәков яҡын да юлатмай ине уны күңеленә. Юҡҡамы ни теге йылда шикәйәт менән башын ашап, урынын баҫып алды — тимер йортҡа ағас директор булды!»—тип тура һуҡтыртыусылар ҙа етерлек... Дөрөҫөн әйткәндә, Шаһибәрәковтар өйөндә уның атай менән дуҫтарса кинәнеп ултырыуын хәтерләй алмай Мотал (гәрсә Яубаҫаров үҙе һуңынан был хаҡта күп һөйләһә лә!). Хөппөлгәрәй, өй хужаһынан да бигерәк, хужабикә менән яҡын дуҫ булғандыр, моғайын. Һәм атаҡлы шәхес Шаһибәрәков тирәһендә уралыусы бик күптәрҙең береһе — ябай ер юлдашы ғыналыр. Әммә уның ғүмере буйына Шаһибәрәковтар ғаиләһенә тоғролоҡло, ярҙамсыл — ысынлап та «атай урынына ҡалыуын» кем кире ҡаға ала?.. Дөрөҫ, атаһы иҫенә төштөмө, Мотал күңелендә уның менән ҡуша төптө Хөппөлгәрәй Яубаҫаров түгел, ә шау-шоулы, дәғүәсел ике уҙаман — ҡарсыға танаулы, ҡарсығалай ҡыҙыу холоҡло, һүҙ һайын ҡабынып барыусан телсе ғалим (*лингвист*) Талир Ғөләм улы Баҡишев һәм түңәрәк-тыныс ҡиәфәтле, баҫалҡы ғына һөйләшеүсе, аҙ һүҙле тарихсы-телсе Йәмил Ҡотлой улы Ҡотлоев көүҙәләнә. Был икәүҙең нимәгәлер үҙ-ара килешә алмауын, шуға күрә һуңға табан Булаттимер янына ла бер-береһенән башҡараҡ йөрөргә тырышыуын сабый күңел һиҙенер һәм ул, бәләкәс *Металл* (атаһы ҡушҡан исем), ни өсөндөр, ыҫпай холоҡло Ҡотлоевҡа ҡарағанда, ҡырыҫ Баҡишевҡа тартылыр ине. Икеһе сәкәшкән мәсьәләлә уның атаһы ғәҙел хөкөмдар булыуын, шуға күрә өсөһө бер төпкә

тәбиғи ылығыуын Мотал һуңғараҡ аңланы. Әммә маһир белгестәрҙең «борсаҡтары ни өсөн бешмәүен» малай саҡта уҡ шаҡтай ғына шәйләп-һиҙенде, буғай. Һәр хәлдә, хәҙер шулай тойола. Үҫә биргәс, бала саҡ хәтирәләрен тергеҙеп, әсәһенән һәм башҡа тере шаһиттарҙан һорашып, ә иң мөһиме — Баҡишев карттың «Тәүтел белеменә инеш» исемле донъяға билдәһеҙ ҡалған хеҙмәтенең айырым ҡулъяҙма биттәрен һәм «Башҡорт диалекттарының башҡорт әҙәби теленә мөнәсәбәте» тигән шулай уҡ онотолоп бөткән берҙән-бер ҡалын китабын уҡыштырып, ике ғалим араһында ҡуҙғалған бәхәстең уртаһында баштан уҡ баяғы сәйер исемле *тәүтел* белеме лә бөгөнгө башҡорт теленең диалекттары мәсьәләһе торғанлығын аңланы. Баҡтиһәң, Баҡишев ҡарт, ошо көндәрҙәге дәғүәле «асыш»ын яһап тилергән Мотал кейәүе Йәүҙәт һәм уның эйәрсендәренән күп йылдар элгәре үк, донъя халыҡтары телдәрен боронғо бер шәжәрә тамырына тоташтырып, мәшһүр тюрколог Мәскәү ғалимы Николай Константинович Дмитриев етәкселегендә хәҙерге халыҡ һөйләштәрен энәһенән-ебенәсә тикшергән дә башҡорт теленең теүәл өс — *көньяҡ, көнсығыш* һәм *көнбайыш* диалекттарҙан торғанлығын иҫбатлаған, Ҡотлоев шуға ҡаршы төшкән. Ҡотлоевса, башҡорт теле ике (көньяҡ һәм көнсығыш) диалекттан ғына ғибәрәт булып сыға. Баҡишев ҡарт асыҡлаған өсөнсө (көнбайыш) диалектты ул йәнле һөйләштә «с» өнө урынына — «ч» («сират» түгел, ә «чират»), «һ» урынына — «с» («һыу» түгел, ә «сыу») ҡулланыуҙарын төп дәлил итеп алып, ул һөйләштең башҡорт асылын һәм уның тарихи ерлеген инҡар итеп, имеш, башҡа халыҡ ассимиляцияһына бирелеп, башҡортлоғонан яҙған төркөм, тип анһат ҡына иғлан ҡыла ла ҡуя. Тәү ҡарауға көлкө генә күренһә лә, ғәмәлдә быуаттар буйынса нығынған дөйөм халыҡ традицияларын, психикаһын, үҙаңын һәм әхләҡи йөҙөн яңылыш икенсе яҡҡа бороп ауҙарыу, һөҙөмтәлә эҙемтәләрен алдан күреп бөтөп булмаҫлыҡ эске тәрән һәләкәттәргә юлыҡтыртыу менән янай ине был... Мотал бына хәҙер йөрәге әрнеп иҫенә төшөрә: көнбайыш райондарҙа йөрөгәнендә гел генә уға, билдәле яҙыусыға, йәштәре лә, ҡарттары ла, тигәндәй, аптырап: «Беҙ кем һуң, ниңә беҙҙе үҙ телебеҙҙә уҡытмайҙар?» — тип «сетерекле» һорау бирерҙәр ине. Ә Мотал быға үҙе лә аптырай биреп, «ыҡ-мыҡ» итер ҙә: «Ысынлап та, уйлап ҡарайһы мәсьәлә был...» — кеүегерәк «яуап» ҡайтарыр, шуның менән эш тә бөтөр һымаҡ ине... Атайҙарға япһарыуҙан туҡталып, бәлки, инде үҙебеҙгә яуаплылыҡ йөкмәргә, граждан ҡыйыулығы күрһәтергә ваҡыттыр?!. Бына ошо үткер мәсьәлә заманында бер нәмәнән дә ситтә ҡалмаған Шаһибәрәков-инженерҙың фатирында өс тағанды беректерер ине лә фекерҙәрен ҡаҡшатырлыҡ киҫкен лингвистика бәхәстәре астыртыр ине. Килешмәүсән ике ғалим, граждандар һуғышының ҡыҙыл кавалеристары, моғайын, үҙҙәренең элекке ҡыҙыл комиссарына ауыр саҡта бил терәү, ғәҙеллек бизмәне табыу өсөн йөрөгәндер. Комиссар иһә уларҙы тыныс ҡына тыңлай, мәсьәләне ҡылыс ҡырҡҡан һымаҡ хәл итмәҫкә, ашыҡмаҫҡа, ә, башҡа фәндәрҙәге кеүек, факттарҙы тағы ла нығыраҡ өйрәнеп, ҡаҡшамаҫлыҡ дәлилдәр менән ҡоралланып, ике яҡ та ғилми әхләҡ һәм этиканы ныҡ һаҡлап, большевиктарса эшлекле һәм намыҫлы хәл ҡылырға, дөйөм социалистик милләт мәнфәғәтенә ярашлы хәл итергә өндәй ине. Ҡапма-ҡаршы ике ғилми мәктәп бер-береһенең хаталарын рәхимһеҙ асҡан

һайын, факттар туплаған һайын, дөйөм фән нығыраҡ отор ҙа хәҡиҡәт тиҙерәк килер, һөҙөмтәлә ике яҡ та бер мисәүгә егелгән булып сығыр. Шул уҡ ваҡытта Баҡишевтың дәлилдәренең төплөлөгөнә, ул яҡлаған һәм революцияға тиклем үк байтаҡ ғалимдар тарафынан нигеҙләнгән *өс диалект* теорияһының хәҡиҡәткә яҡыныраҡ торғанлығына, әле генә ҡалыпланыу дәүерен кисергән яҙма башҡорт *әҙәби теленең* дә киләсәктә башҡорт *милли теленең* Баҡишев дәлилләгән өс диалектына нигеҙләнеренә ышаныуын йәшермәй ине. (Баҡишевтың хаҡлылығы, хеҙмәттәре оҙаҡ йылдар буйына «онотолоп» торһа ла, инде раҫлана бара: хәҙер фәндә көнбайыш башҡорттары һөйләшен башҡорт теленең өсөнсө диалекты итеп ҡарау көсәйә).

Эй заманалар!.. Нәүбәттәге «киске алыш»тан һуң Ҡотлоев ҡайтып киткән, Шаһибәрәков менән Баҡишев һыуынып бөткән сәйле өҫтәл ҡырында бәхәсте һәүетемсә генә йомғаҡлай.

-- Был әҙәмдең электән үк, аҡылы алтын булһа ла, ҡоласҡайы тар ине... — тине Таһир Ғөләм улы, ҡарсыға танауын сөйөп, сәмләнеүенән һүрелеп етә алмайынса. — Фәндә лә ул әүәлге килеш ҡалды: аҡыллы, әммә ҡарашҡайы тар.

-- Ҡыҙма!

-- Ҡыҙмайым, дөрөҫөн әйтәм. Хәтерендәме, ҡорҙаш, ун һигеҙенсе йылғы Ырымбур яны, ҡотороп аҡҡан яҙғы ташҡын һыулы Һайылмыш буйы?

Шаһибәрәковҡа ул хәтирә, күрәһең, күңелһеҙҙәрҙең күңелһеҙе ине:

-- Ҡуй әле... Иҫке аламалыҡты иҫләгәндең күҙе сыҡһын, тигәндәрме... ташлайык!

-- Шул саҡ һинең тас маңлайға тоҫҡап тотҡан карабинының тәтеһенә баҫып өлгөргән булһа?.. Беләһеңме, полкта үҙ-ара ниндәй ҡиәмәт ҡубыр ине?!

-- Баҫып өлгөрмәне ләһә, ниңә шул бер балыҡ башын сәйнәргә!

-- Ул саҡ баҫып өлгөрмәне, дөрөҫ. Әммә Ҡотлоев фиғеле үҙгәрмәне — иң ҡатмарлы мәлдәрҙә унын башынан алда ҡулы тәтегә үрелә. Кисә баҫмаған икән, бөгөн йәки иртәгә баҫасаҡ...

-- Ярай, фәнни бәхәскә граждандар һуғышының шауҡымын ҡыҫтырмайыҡ. Ҡаршыбыҙҙа Колчак, Дутов бандалары тора ине ул саҡта, — тине Шаһибәрәков. — Һин миңә шуны әйт, ҡартлас: алда ҡайһындай перспектива күрәһең? Алайыҡ, хаҡлығың тантана итте — башҡорт теленең өс диалекттан хасиллығын хатта Ҡотлоев та таныны, ти. Беҙҙең химиктар теле менән әйткәндә, ниндәй синтетик ысул менән шул өс диалектты бер милли әҙәби телгә уҡмаштыраһың? Өс диалект башҡорттары ла үҙенеке итеп танырлыҡ башҡорт әҙәби теле көйләп бирәһең? Бына нәмәлә унын ғәмәли яғы!

-- Минең ҡараш шундай. — Баҡишев, тынысланып, тубыҡҡа тубыҡ һалып ултырҙы. — Ғәҙәттәгесә, өс диалекттың да уртаҡлыҡтарын (ә уртаҡлыҡтар айырымлыҡтарҙан күберәк!) төп нигеҙ итеп алып, һәр диалектҡа хас айырымлыҡтарҙы (ә улар уртаҡлыҡтарҙан аҙыраҡ!) дөйөм күрһәткескә килтерергә. Йәғни мин дә, һин дә, ул да һөйләштәребеҙҙәге айырымлаусы бер-ике өнме, ялғаумы формаларын юғалтабыҙ ҙа урынына дөйөм халыҡ теле өсөн тарихи яҡлап иң хас булған формаларҙы алабыҙ.

-- Ҡара аҡылым менән генә белеүемсә, башҡорт әҙәби телен

ҡалыплаштырыу комиссияһында Шәһит Хоҙайбирҙин иптәш етәкселек иткән көндән алып бөгөнгәсә хәлдәр тап шулай бара ла.

-- Барыуын бара ла, өсөнсө диалект бер ситтә тороп ҡалып бара... Әгәр ҙә эҫе мәлендә төҙәтмәһәк, был «тороп ҡала барыуыбыҙ» һуңынан ҙур хатаға килтерәсәк – халҡыбыҙҙың яртыһы татарға әйләндереләсәк.

-- Арттырып ебәрҙең, буғай.

-- Арттырмайым. Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем ике йөҙ мең аҫаба башҡорт йәшәгән Минҙәлә өйәҙебеҙ менән ни булды? Хәҙер ундағы башҡорттарҙың береһе лә башҡорт түгел. Шулмы ленинсы милли сәйәсәт?

-- Көфөр һүҙҙәр һөйләшмәйек... Ҡылыс менән генә сабып хәл ҡылмалы мәсьәлә түгел. Улайһа, көнбайыш башкорттарҙың, үҙең әйтмешләй, «чират», «сыу» тип һөйләшеүҙәрен ҡайҙа ҡуяһың?

-- Беренсенән, «сират»ты «чират» тип уларҙың барыһы ла һөйләшмәй, ә, иҫке китап теле, мәҙрәсә теле ныҒыраҡ һеңешкәндәре генә шулай ти; ә ошо көндәрҙә лә мәктәптәрҙә уларҙы *татарса* уҡытыу мәсьәләне уғата ҡатмарлаштыра... Был диалектты билдәләүсе ялғау формаларына килгәндә, улар көньяҡ диалекттыҡы менән бер иш, тиерлек. Тимәк, ғәҙеллек тантана итеп, мәктәптәребеҙҙә дөйөм башҡорт әҙәби телендә яҙылған китаптарҙан уҡыта башлаһаҡ, иҫке мәҙрәсә һәм иҫке китап һәм хәҙерен Ҡазанда баҫылған дәреслектәр шауҡымы, тәбиғи, һүреләсәк. Икенсенән, дөйөм башҡорт әҙәби теле мәнфәғәтенә мин диалекттарҙа ике ярашыу эшләргә тәҡдим итәм: көнбайыш диалекттың тарихи яҡтан һуңғыраҡ дәүер емеше булған «ч» өнөн уның әүәлге «с» хәленә ҡайтарырға, йәғни «чират» урынына «сират», «ача» урынына «аса» тип яҙыу һәм һөйләүҙе ҡабул итергә. Шуның һымаҡ уҡ, көньяҡ һәм көнсығыш диалекттар өсөн дә тарихи яҡтан һуңғыраҡ дәүер индергән, һүҙ башында килә торған «һ» өнөн уның боронғо «с» хәленә ҡайтарырға, йәғни «һыу» урынына «сыу», «һабыр» урынына «сабыр» тип яҙырға һәм һөйләргә (ә бит һыйыр быҙаулағанда төшә торған быҙау яткылығын һаман әүәлгесә «сыу» тибеҙ -- «һыйыр сыуын һала»; һуғым боғаҙына бысаҡ чалмайбыҙ, ә салабыҙ!). Ошондай ике компромисҡа килгәндә, башҡалары ауырлыҡһыҙ үҙ яйынса хәл ителә.

-- Тимәк, тарихи яҡтан ҡарағанда, боронғо башҡорттар сусылдап һөйләшкән булып сыға?

-- Быға иманым камил. «Һамаҡ»ты — «самаҡ» тип (шунан килә «сам» — «сәм»), «баш»ты— «бас» тип (шунан килә «басалҡы» — «баҫалҡы»), «таш»ты — «тас» тип (шунан килә Атас тау – Таш тау), «аш»ты — «ас» тип (шунан килә аш теләп «асығыу» — «ас» кеше) әйтер булғандар. Был күренештең ҡалдыҡтары беҙҙең төрлө һөйләштәрҙә һәм төрлө халыҡтарҙың телдәрендә әле лә ярылып ята. *Тәүтел* (урыҫса праязык) тамырын юллау иһә асыҡтан-асыҡ миҫалдар бирә быға.

-- Тәүтел тип, академик Николай Яковлевич Маррҙың тел тураһындағы «яңы тәғлимәт»ен әйтмәксеһеңме?

-- Юҡ. Маррҙың «яңы тәғлимәт»е ғалимдар тарафынан урыҡ-һурыҡ ҡына эшләнгән, төҫмөрләнгән тәүтел белеменә үҙенсә «теоретик нигеҙ» ҡуйырға ынтылыш ҡына булып тора. Марр тәғлимәте, бер яҡтан, ҡимммәтле фактик

материал һәм идеялар хазинаһы, икенсе яҡтан, өлгөрөп етмәгән һөҙөмтәләр, субъектив баһалар йыйылмаһы ул. Тәүтел иһә ғалимдарҙан, бер Маррҙың ғына түгел, ә шул өлкәлә ҡыл ҡыбырлатҡан барлыҡ белгестәрҙең дә хеҙмәттәрен, ул ғына ла етмәй, филологиянан тыш, уға уткүрше торған тарих, археология, этнография, география, антропология һәм башҡа фәндәрҙең ҡаҙаныштарын тулайым өйрәнеүҙе, һәр яҡтан маһир ғалим булыуҙы талап итә.

-- Һин үҙеңде шундай ғалим тип иҫәпләйһеңме? – Булаттимер күҙҙәрен сөкөрәйтте.

-- Үкенескә күрә, ундай ғалим киләсәк ҡарамағында. Мин тик шуны әйтә алам: комплекслы тикшеренеү һөҙөмтәһендә беҙгә *тәүтелдең тәүге һүҙҙәренең* нисек итеп *тәүкешенең* космогоник төшөнсәләренән моронлауы төҫмөрләнә. Ә был иһә бикле йоҙаҡтың асҡысын табыу менән бер. Донъяның тел йылғаларының бөтәһенең дә башы шул бер йоҙаҡ-ҡоҙоҡ аҫтынан урғылалыр.

-- Һем... мәҫәлән?

-- Мәҫәлән, тәүтел тамырын тәрәндән үк юллауҙы башҡа ваҡыттарға ҡалдырып, баяғы беҙҙе тәржемәүи яҡтан ҡыҙыҡһындырған «с» менән «ч» өндәренең айырымланыу осорҙарына иғтибар йүнәлтәйек. Билдәле булыуынса, таш быуат бабалар аңында донъя ике есемдән — *ут* (йәки *ат*) һәм *һыу* (йәки *әс*) заттарынан яралған тип һаналған. Уларҙың береһе — ата енес («ат»), икенсеһе әсә енес («әс») икән. Тәүтелдең дә тәүге терминдары былар — бына ҡайҙан килә беҙҙең «ата» һәм «әсә» һүҙе! «Әсәй»ҙән «сай», «сыу», «һыу», «эсә», «әсе» (барыһы ла һыу) һүҙҙәре лә (семантик рәттәр) шытҡан.

Заманалар һыуҙай ағылып уҙа торған, тел үҫешенең икенсе бер этабында «әсә» һүҙе «әжә» үҙгәреше кисергән («ж» өнө хасил).

Өсөнсө бер этапта «ж» — «й»-ға һәм «ч»-ға үзгәргән: «әйә», «эйә» һәм «әчә», «эчә». Тәүгеһе, «й» үҙгәреше, телдең шумер осорона (бынан биш мең йыл элек) тап килә: шумерҙар һыуҙы һәм әсәне «әйә» тигән. Бөгөнгө беҙгә яҡын ҡәрҙәш төрөкмән дә әсәһен шулай «әйә» ти. Ә башҡортта әле булһа Әйәле (Әйле) ырыуы, Әй һыуы бар... Таш быуат дәүерендәге тәүтермин «әсә», тимәк, һис ниндәй үҙгәрешһеҙ, беҙҙең көндәргәсә башҡорт телендә генә һаҡланып килеп еткән.

-- Ярай, уныһы шулайҙыр ҙа. Ләкин башҡорт теленең хәҙерге өс дкалектлылыҡ мәсьәләһенә уның ни ҡыҫылышы бар?

-- Туранан-тура ҡыҫылышы ла, бәйләнеше лә бар икән шул, ҡорҙашҡайым! Инде, күҙеңде баҡтыртып, ғәзиз телебеҙҙе бөгөн ике яҡҡа «айырыусы» (тфү-тфү, көфөр Ҡотлой һүҙҙәре!..) «с» өнөнөң тәүтелебеҙҙә һүҙ башында ла «с» килеш («һ» түгел!) саф әйтелешенә бер миҫал: *сылана* (увлажняется). Бабалар мифологияһында ғәләм — бик ҙур *мамонт*, йәки *үгеҙ*, йәки *һыйыр* һ. б. рәүешендә лә кәүҙәләнгән; Ҡояш менән Ай иһә шуның ҡуш күҙе: береһенән — нур («нор», йәғни ҡорт-орлоҡ), икенсеһенән һыу («сыу», йәғни сыулыҡ-һаулыҡ) яуыр икән ер йөҙөнә. Шуға ла Айҙы «сыулана» — Сылана (Селена) тип тә атагандар; фарсы һүҙе тип йөрөтөлмөш Һилал (Ай) шулай уҡ үҙебеҙҙең «һүлал» (һүл ала торған сығанаҡ, һыу-һүл яткылығы) булып төҫмөрләнә. «Сылана» һүҙ төшөнсәһе һыуға бәйле башҡа миҫалдар ҙа бирә:

«сүл-ана» («сүл» йәғни һыу-һүл һәм «слюна» йәғни урысҫа әйтелештәге һеләгәй-төкөрөк); шунан киләләр Сыу-Олоно (һыу олоно — һыу ятҡылығы), ә «Олоно»нан хасилдыр йәнә Лоно («лоно природы» — урысҫа әйтелештәге шул уҡ һыу ятҡылығы), шунан уҡ киләләр йәнә Лена (оло йылға) һ. б.

Мифтарҙа Ай һәр саҡ шыйыҡлыҡҡа бәйләп-тиңләп йөрөтөлә: боронғолар ысыҡты ла Айҙан ҡойола тип инанған (был хаҡта һуңғы осорҙа сыҡҡан китаптан ҡарағыҙ: Философские тексты «Махабхараты». 1-се сығарылыш, 1-се китап. Бхагавадгита. Ашхабад, 1978, 328-се бит). Тимәк, бөгөнгө «һыу» тип һөйләшеүсе көньяҡ һәм көнсығыш диалекттарҙа ул «сылана» (увлажняется) һүҙе, ана шулай «һ» өнө урынына «с» менән башланһа ла, шул уҡ «һыулана» тигәнде аңлата бит, һәм ул ғәмәлдә ошо һүҙҙең иҫке башҡорт телендәге «сыулана» («сулана») тип әйтелеше түгелме ни? Әлбиттә шул, факт! Ошо уҡ иҫке һүҙҙе («сылана»ны) шул уҡ әйтелешендә көнбайыш башҡорттары хәҙер «йәбешә» («мажется») мәғәнәһендә ҡуллана, ә барлыҡ диалекттарыбыҙ өсөн дә борондан уҡ килгән уртаҡ мәғәнәне («увлажняется», «мокнет») иреү өсөн иһә улар ике төрлө формала: йәнле һөйләштә шул иҫке «сылана» рәүешендә, йә, боронғо китап һәм мәҙрәсә традицияһында, «чылана» тип әйтеп йөрөтә. Шуныһы ҡыҙыҡ: көньяҡ, көнсығыш һәм көнбайыш диалекттар тарихи үҫештә бер-береһенән ошо тарихи тәңгәлдә — сылана («мокнет») уртаҡ күрһәткесенән сылана — «йәбешә» («мажется») төшөнсәһен айырымлау дәүерендә генә тармаҡланып айырыла буғай: һөҙөмтәлә тәүге ике диалект уны «һ»-лаштырһа («һылана»), ә һуңғыһы иһә, йә, «йәбешә», «һыулана» төшөнсәләрен әүәлгесә бер-береһенән айырмай, шул уҡ «сылана» рәүешендә ҡалдыра, йә, иҫке китап һәм иҫке мәҙрәсә традицияһына буйһоноп, «һыулана» мәғәнәһен «йәбешә»нән айырыу өсөн «ч» өнө («чылана») ҡуллана башлай. Тимәк, дөйөм милли әҙәби тел уҡмаштырыу барышында яңынан элекке «с» уртаҡ күрһәткескә күсеү — бер ниндәй ҙә яһалмалылыҡ, ятбауыр булмайынса, өс диалектыбыҙ өсөн дә яңы тарихи шарттарҙа ни бары үҙҙәренең ҡасандырғы уртаҡ-тәбиғи хәленә ҡайтыу ғына, ә юғалтыу бөтөнләй юҡ йәки тигеҙ дәрәжәлә: бер яҡтан «һ», икенсе яҡтан «ч» өнө әүәлдән үк бөтәбеҙгә уртаҡ «с» өнөнә ҡайтарыласаҡ та өс диалектты ла тоташтырған уртаҡ әҙәби телебеҙҙә «һыулана» мәғәнәһе — «сыулана», ә «йәбешә» мәғәнәһе «сылана» аша биреләсәк. Әҙәби телдәр тарихында бының ише реформалар үткәрелгәне билдәле. Шундай ябай һәм аңлайышлы түгелме ни был мәсьәлә?! — Баҡишев, ғәҙәттәгесә, сәмләнеүҙән үҙ-үҙен онотоп, ҡыҙып, ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. Лекцияға оҡшаш оҙон телмәрҙе ауыҙ асып сабыр тыңлаған инженер аптырап баш сайҡаны:

— Һинең өсөн, мәсьәләнең эсендә йөҙгән кит балығына, бәлки, ябайҙыр ҙа ул. Ләкин минең, тел белеменән ғафилйәндең, «тәүтел» тигән төшөнсәнән үк ҡапыл башым әйләнә... Бәлки, лингвистикалағы яңы юл, асыштыр ул, белмәйем. Ләкин иң шәп асыштың да аңлаусылары, яҡлаусылары булырға тейеш, шунһыҙ ул, тере тыуып та, күрәләтә тонсоҡтороп үлтерелгән, йәки мәрткә киткән бәпәйгә әйләнә. Хатта Ҡотлоев хәтлем Ҡотлоевтың да һине аңларға тырышмауы өҙә үҙәкте. Ә башҡалар менән ни хәл ҡылырһың?.. Шуны иҫәпкә алаһыңмы?

-- Һин әллә минең, дөйә ҡошолай, ҡурҡып, башты ҡомға тығыуымды,

йәки фәндең *һаҙ биҫтәһендә* ойоуымды теләйһеңме?!

-- Туҡта, ҡыҙма. Ана шул *һаҙ биҫтәһен* нисек йырып сығырға икән, тим. Уның өсөн бер ус шәкерт эйәртеү генә етмәй, беләһең. Коллегаларыңды нисек һаҙҙан ҡалҡынып ҡарарға, Күктә Ҡояш барлығына инандырырһың икән? Ябай ғына әйткәндә, ҡалай итеп үҙеңә ҡор тупларһың?

-- Бөтә булған үткәндәрҙе файҙаланып, аҡыллы баштарҙы эргәмә ылыҡтырып. Бына хатта һине лә һөрһөп бөткән химик башың менән лингвистикаға еректереп барамын түгелме! — Баҡишев, эскерһеҙ кинәнеп, устарын ыуып көлдө. — Бөгөн һине (ә был үҙе оло эш!), иртәгә тегене үҙ яғыма ауҙарһам, улар аша башҡаларҙы ауҙарасаҡмын түгелме?! Мин эште иң бәләкәстән, һәр шәхестең үҙенән башлап ебәреүҙе лә беләмен, ха-ха-ха!

-- Ниңә көләһең? — Етди химик был урында ҡорҙашының хахылдауына аңламайыраҡ ҡараны. Шуны тойоп, Баҡишев та етди төҫ алды:

-- Йәғни ҙә мәҫәлән, алайыҡ бына һинең ҡартатайыңдың, атайың һәм үҙеңдең исемдәр мәсьәләһен. Улар һиңә ябай ғына исемдәр кеүек, ә үҙҙәре — мәсьәлә.

-- Ни өсөн?

-- Ни өсөн улар быуындар һайын таш һәм булатҡа, булат һәм тимергә — металға бәйләнеп килә (әгәр тикшерә китһәң, моғайын, ете быуынға тиклем дә шулайҙыр!), ә? Тоҡомдарығыҙ туранан-тура башҡорт промышленниктарынан — руда табыусы һәм булат ҡойоусыларҙан килеүенә ишара ул. Моғайын, һеҙҙең ауыл тирәһендә лә ташландыҡ иҫке рудниктар етерлектер.

-- Эйе, бар ине улар беҙҙең Сәнкем-Биктимерҙә, — тине Булаттимер, ҡыҙыҡһыныуы артып.

-- Бына шул. Ҡартатайыңдың исеме Моталлап — «буталлы уба» тигәндән килә (сөнки Бутал — Мотал — Металл, ә «ап» — апа, уба тигән һүҙ!). Хәҙер «бутал» тип ялтырауыҡ металл (алтын, бронза) биҙәктәрҙе атаһаҡ (мәҫәлән, буталлы сынаяҡ), борон ул, ғөмүмән, ал төҫтәге металды — баҡыр затын белгерткән, шул «бутал»дың тәүге ижеге — «бут» — «медь» (баҡыр) һәм «бот» — «пуд» ауырлыҡ үлсәү берәмеге (баҡыр иретеү мейесенә бер күтәреп һалырлыҡ руда миҡдары. Ә «бутал» үҙе «мотал» — «металл» рәүешендә шымарып үҙгәргән дә әлегәсә телебеҙҙә йәшәүен дауам итә, хатта һин уны малайыңа исем итеп тә ҡушҡанһың... Атайыңдың исеме Ташбулат менән үҙеңдең исемең Булаттимер — икеһе бер «формула»ның бер-береһенә ҡул бирешеп ҡап-уртаға бүленеше генә булып, бөтөнләйгә ул бабаларҙың металлургия промышленносы тарихын һәм асылын кәүҙәләндереүсе ҡатмарлы термин икәнен беләһеңме? (Бабалар беҙгә ҡарағанда тапҡырыраҡ булған: ғилми формулаларын, быуындан-быуынға бирелеүсе әҙәм исеме итеп, пергамент һәм ҡаяларға ҡарағанда ла ышаныслыраҡ тере «китап»ҡа — балаларына «яҙған»!). Дөрөҫөрәге, ул «формула»ны, ябайлаштырып, айырым-айырым өс һүҙҙең бергә ҡушылдығы итеп ҡарарға мөмкин: Атас — Булат — Тимер. «Атас-Булат»тан — Тасбулат (Ташбулат), «Булат-Тимер»ҙән үҙеңдең исем Булаттимер хасил була. Тәүге быуын «Атас», һәр кемгә лә мәғлүм, башҡорттарҙың борон-борондан тирә-яҡҡа таныҡлы һәм данлыҡлы булат ҡоросо ҡойоусылар төйәге Атас тауҙың (хәҙерге Магнитогорск)

исеме. Был хаҡта Урал промышленносы тарихын һәм башҡорттарҙы яҡшы белгән атаҡлы урыҫ яҙыусыһы Павел Петрович Бажов бик асыҡ әйткән: «Сал Уралды тәүҙә үҙләштерә башлаусы башҡорттар араһында ер аҫты хазиналарын оҫта эҙләп таба белеүселәр күп булған, -- тип яҙа ул. Златоуст оҫталарын атаҡлы булат ҡорос ҡойорға өйрәтеүселәр тураһында һүҙ барғанда, немецтарҙың был өлкәләге өҫтөнлөгөн раҫлаусы Е. Федоровтың «Булат сере» (1944) романындағы Аносов яһаған асыштың «сит ил сығанағы булыуы» хаҡындағы концепцияны кире ҡағып, П. П. Бажов ысын булат ҡойоусыларҙың башҡорттар икәнлеген асыҡ әйтеп бирә: -- Халыҡ ярлы булһа ла, уларҙың шундай аттары һәм булат ҡылыстары бар — иҫең китер. Бысаҡҡа йә ҡылысҡа һуҡҡан боронғо биҙәктәр... мәңге төштәреңә керер» («Иванко крылатко» хикәйәте); «Әгәр ҙә немецтар уйлап тапҡан, имеш, тип йөрөтөлгән Златоуст булатының ҡәрҙәшен табайым тиһәң, ул ана шул иҫ китерлек биҙәктәр төшөрөлгән башҡорт бысаҡтары һәм ҡылыстары була ла инде» («Төп сер»). Мәшһүр яҙыусының хаҡлылығы ҡайһы бер фән мәғлүмәттәре[42] аша ла тоҫмалланғандай: донъялағы яҡшынан да яҡшы («лучший из лучших») булат ҡоросо борондан уҡ «ҡара табын» аталған, ә унан ҡала икенсе сортлы яҡшы булат ҡоросо «әмәле табын» (Табын ҡәбиләһе әмәле, ысулы менән ҡойолған) исемләп йөрөтөлгән. Шул иң шәп булат ҡоросон ҡойоусы башҡорт ырыуы Ҡаратабын (Ҡарабан) һәм, ғөмүмән, Табын ҡәбиләһе үҙе ҡыҫҡырып тора түгелме ни был иҫке терминдарҙан?! Ә Табын ҡәбиләһенең Ҡара-Табын ырыуы башҡорттары әлмисаҡтан уҡ Уралдың тап шул юғары сифатлы булатты ҡойоу өсөн кәрәкле яҡшы тимер рудаһы табылған яғында, ергә күмеп яҡшы күмер яғылған һәм яҡшыларҙан яҡшы булат ҡоросо ҡайнатылған ерҙәрендә — хәҙергө Орскиҙан алып Силәбегәсә һуҙылған һәм борондан уҡ «Башҡорт тауҙары», «Таш билбау» тип йөрөтөлгән тау заводтары төйәгендә йәшәй ҙә. «Ҡара» («кәр») һүҙенең телебеҙҙә «ҡаты» мәғәнәһендә йөрөүен һәм Ҡара-Табын ырыу атамаһының Ҡара тип ҡыҫҡартылып, ә ул ырыу кешеләренең һәм ҡойған булаттарының ҡайһы саҡта «ҡарасы» тип йөрөтөлөүен дә иҫләһәк, шул «ҡарасы» тигәндән «ҡорос», «ҡырыҫ» һүҙҙәренең дә килеп сығыуын, ә «табын»дың — «табыусылар» (руда табыусылар) булыуы ихтималлығын да онотмаһаҡ, башҡорт ырыу атамаһы «ҡара табын»дың баяғы «ҡорос табыусылар» икәнлеге бермә-бер асыҡлана. Ә ҡоросҡа тиклем үк әле Барын-Табын (ҡыҫҡа әйтелеше Барын) башҡорттары ҡоя килгән боронғо металл иретмәһе Барын ырыу атамаһы буйынса «барынса» (бронза) аталыуын да иҫкәртәйек. Шулай уҡ: «Кәлсер-Табын» -- «гәлсәр табыусылар», «Йоморан (кумуран)-Табын» — «күмер табыусылар» түгелме икән?!. Үҙеңә яҡшы мәғлүм: бөгөн унда, Магниттау ҡалаһында, илебеҙҙең иң ҙур металлургия комбинаттарының береһе ҡалҡып сыҡты. — Баҡишев йәһәт инженерға ҡалҡынып ҡараны. — Хәйер, ҡорҙаш, заманында уны һин үҙең төҙөштөң...

-- Шуныһы ныҡ иҫтә ҡалған: ул комбинатҡа котлован ҡаҙғанда бабаларҙың булат ҡоросо ҡайната торған мейестәренең емеректәре һәм металлургия ҡорамалдары килеп сыҡты — үҙ күҙҙәрем менән күрҙем. Тик йәл: береһен дә музей өсөн ҡомартҡы итеп йыйып ҡалдырмағанбыҙ...

---

[42] «Химия и жизнь» журналы, 1980 йыл. № 5, 60-62-се биттәр.

-- Эйе.. — Баҡишев хискә бирелде. — Тау исеме «Ат-ас», бая ғына әйткәнемсә, үҙе үк тәүтелебеҙҙәге «ут-һыу» тигәнде аңлата («тас» — «таш» һүҙе лә шунан сыға). «Булат» иһә мин ҡулланған тәүтел реконструкцияһы ысулы менән ҡарағанда «аб-ал-ат» өлөштәрен тәшкил итеп, хәҙергесә аңлатҡанда «уба-алһыу-ут» тигәнгә ҡайтып ҡала (мейестә алһыу ут булып ҡайнаған уба ташын -- руданы аңлаталыр, күрәһең). «Тимер» ҙә үҙ сиратында «ат-аб-ер» («ут-уба-ер») өлөштәрҙән хасил бит.

-- Быныһына ла ышанам.

-- Һөҙөмтәлә бабаларҙың дуалистик фекерләүенсә ут (ат) һәм һыуҙың (ас) ҡушылыуынан хасил булған таштың (Атас), мейестә ҡайнап, «уба-ал-ут» — булат һәм «ут-уба-ер» (түбер, тамыр) — тимер тыуҙырыуы кәүҙәләнә һәм беҙ белгән таш — «Ат-Әс» — булат менән тимерҙең ата-әсәһе (Атас тауы) булып сыға. (Шул уҡ һүҙ — Атас — урыҫса «Отец» бит!). Атас тауы исеменең тулы мәғәнәһе, тимәк, «Ата-Әсә[43]» икән дә. Башҡортта әле лә ҡойоп ҡуйғандай ата-әсәһенә оҡшап тыуған баланы «атас» («тас») тиҙәр, ә әсәһенә (ана-инәһенә) генә тартым еҫерҙе «анаҡ» {«нәк») тиҙәр... — Күпме дөрләһә лә һүрелмәҫ Талир Ғөләм улы, дуҫының бөйөрөнә төртөп, ике күҙен сөкөрәйтеп йылмайҙы. — Һинең бынауы өҫтәл аҫтында мыш-мыш килгән малайың *Металл* да шул уҡ Моталлап тоҡомо — Атас булған да тыуған, ха-ха-ха!

-- Бынағайыш тамаша, — Шаһибәрәков тә шаяртып баш сайҡаны, — ысынлап та, үҙебеҙҙә икән дәһә металлургия тарихы!

-- Туҡта, һүҙем әле осланмаған. Һин әйткән ул «металлургия тарихы»нда баяғы *тәүтелдең* төрлө телдәргә тарҡалыу — тармаҡланыу тарихына ла ишара бар. «Атас»тан, уға «аҡ» (һыу төҫө) өҫтәлеп, таш балта исеме «тасаҡ» (урыҫса «тесак») хасил булһа, «тимер»ҙең тәүформаһы «төбөр» беҙгә хәҙер ҙә урыҫса «топор» булып хеҙмәт итә, ә «балта» — боронғо «булата» йәғни хәҙерге «балта» килеш һаман ҡулыбыҙҙа эш ҡырып йөрөй. «Топор» менән «балта» икһе берләшеп («Топор-Балат»), беҙгә мәҡәлдәге «тупар балта»ны ла, бына тигән Тимер-Булат (Тимербулат) исемен дә бирәлер. Шулар уҡ, урындарын ғына алмаштырып ҡуйһаҡ, «Булат-Тимер» — «Владимир» булып китә лә, минеңсә, хәҙергеһен күберәген урыҫ исеме рәүешендә ҡулланылып хеҙмәт итә. Һинең исемең, Булаттимер, асыҡ күренеүенсә, башҡортса әйтелмеш шул уҡ Владимир ул.

-- Бәй-бәй, асылда мин кем булып ҡалам һуң?

-- Булаттимер тип исемләнгән һин дә, Владимир тип аталған башҡаһы ла асылығыҙҙа бер үк тәүтел олононан ботаҡланған туған-тармаҡ телдәрҙә һөйләшеүселәр, тамырҙаш һәм олондаш ҡан-кәрҙәштәр булып ҡалаһығыҙ, йәғни ҙә... — Баҡишевтың күҙҙәрендә осҡондар баҙылданы, ул, кинәнеп, устарын ыуаланы. — Бына күрҙеңме, ҡорҙаш: һине лә үҙ атыма атландырҙым! Һинең эше оторо химия ҡомағы ла лингвистикаға боролоп баҡҡас, тимәк, хаҡлыҡ үҙе, тәүтел белеме булып, беҙҙең тәҙрәләрҙе сиртә!

-- Иртәрәк тантана итәһең түгелме, ҡорҙаш? Минән дә бигерәк,

---

[43] Иҫке мифтарҙа ата енес — ут, ә әсә енес — һыу образдарында һынлана.

Ҡотлоевтың тәҙрә төбөндә ҡаңғырмаһаң ярар ине.

-- Ә һин, комиссар, ҡаңғыртма, ярҙам ит. Хаҡыҡ хаҡына! Юғары даирәләрҙә ҡеүәтең бар ҙаһа.

-- Бының менән ни әйтергә теләйһең? — Шаһибәрәков, һағайып, күҙҙәрен секерәйтеп, Баҡишевҡа текләне.

-- Партияһыҙ большевик икәнемде беләһең... — Һыуынып ҡалған сәйен уртланы. — Шул сәбәпле, йәғни фирҡәғеҙҙә ағза булып тормағас, тәбиғи, Оло йортҡа йыш кереп йөрөй алмайым... Ә Ҡотлоев уның тупһаларын туҙҙыра ғына... Фәҡәт үҙенең ғилми мәктәбен — һуңғы һүҙ, хаҡлыҡ төйәге итеп күрһәтер өсөн...

-- Уныһы ла хаҡ.

-- Әллә, тим, комиссар, ошо турала беренсе секретарҙың ҡолағына төшөрәһеңме? Һин бит унда үҙ кеше — өлкә комитеты ағзаһы...

-- Тимәк, һинеңсә, һеҙ икегеҙ сисә алмаған «һарҙый төйөнө»н[44] беренсе секретарь сабып өҙөргә тейеш. Ҡуш мөгөҙлө Зөлҡәрнәйендәй, булат ҡылысын ҡындан һурып һелтәй ҙә, һә тигәнсә, саф хаҡлыҡты — бер яҡҡа, нахаҡлыҡты икенсе яҡҡа ярып айыра ла бирә... Ҡайһындай тылсымлы ҡылыс!..

-- Хаҡлыҡ хаҡына ярайҙыр...

-- Юҡ, ярамай! — Шаһибәрәков тороп уҡ китте, йөрөнөргә кереште. — Һин, ҡорҙаш, һаман да шул граждандар һуғышындағылай, хаҡлыҡты ҡылыс менән сабып тапмаҡсыһың... Моғайын, үҙеңдең ғилми оппоненттарыңа: «Ҡыҙыл баррикаданың ҡайһы яғында тораһығыҙ һеҙ?!» — тип, яңғырауыҡлы яр һалырға ла әҙерһеңдер әле һин... Ләкин фәнни хаҡлыҡ, минеңсә, араларға баррикада үткәреп тә, баш ҡырҡышып та яҡлауға мохтаж түгел. Киреһенсә, ундай ҡылыҡтарҙан фән үҙе үлә. Ҡапма-ҡаршы фекерҙәр, тоҫмаллауҙар гилми мәктәптәрҙең тыныс бәрелеше — фәндең үҫеү, сәскә атыу мөхите, диалектика законы. Ҡотлоев һәм Баҡишев яҡлылар ҙа, минеңсә, баррикаданың ике яғында торған дошмандар түгел, ә бер үк хәҡиҡәт юллаусының ике күҙе, ике ҡолағы, мөслө ике ҡулы ғына...

-- Әгәр уларҙың икеһе ике төрлө күрһә, ишетһә, эшләһә?.. — Баҡишев әсе йылмайҙы.

-- Баш мейеһе ни өсөн бирелгән беҙгә? Аҡыл ғәли йәнәптәре уларҙың икеһен бер күрһәткескә килтерәсәк — донъяның хаҡ сағылышын бирәсәк... Яңыраҡ мин иҫке яҙыуҙар, уларҙың серен сисеү йәһәтенән тыуған бәхәстәр тураһында бер китап уҡыным. — Шаһибәрәков ҡуйын дәфтәренең кәрәкле битен аҡтарып тапты. — Һәм, беләһеңме, унда миңә нимә оҡшаны? «Гипотезалар, — тип яҙа һинең кеүек үк еңмешле һәм емешле эшләгән ғалим, — хатта үтә ҡыйыу, бәхәсле, ҡайсаҡ фәнгә ҡаршы булып тойолғандары ла, һәр ваҡыт ғилми фекерҙе алға этәрә. Оппонент-скептиктар, уларҙы кире ҡағыу өсөн, факттар тупларға тотона, шуның менән проблеманы өйрәнеүҙе тәрәнәйтә, һәммәбеҙҙе хәҡиҡәткә яҡынлаштыра. Бына ниңә гипотезаларға хөрмәт һәм иғтибар менән ҡарарға кәрәк». Шәйләнеңме? — Шаһибәрәков ҡуйын дәфтәрен кире һалды. — Һеҙ икәүҙең сәкәшеүе лә, миңә ҡалһа, дөйөм фән файҙаһына.

-- Ләкин беҙҙең шул сәкәшеү арҡаһында әле булһа диалекттарыбыҙ

---

[44] Гордиев узел.

мәсьәләһе хәл ителмәүен, һөҙөмтәлә милләтебеҙҙең өстән бер өлөшөнә һаман мәктәптәрҙә милли әҙәби тел уҡытылмауын иҫеңдән сығарма, комиссар.

-- Шуның өсөн мәсьәләне ҡылыс менән хәл ҡылдыртмаҡсыһыңмы?! Оппонентыңды тәүҙә һаҙға батыртып, шунан һуң башын киҫтертеп...

-- Ниндәй һаҙ? Кем батыра?

-- Ниңә Һайылмыш буйындағы онотолоп бөтә яҙған гонаһ шомлоғон яңыртаһың? — Шаһибәрәков урынына ултырҙы.— Ҡотлоевты батырыу өсөн түгелме был? Дуҫтарса буламы ни был?

Баҡишевтың ҡулы ҡалтыранды, сынаяғын өҫтәлгә ҡуйҙы.

-- Хоҙай яҙмаһын, әммә ул Ҡотлоев дуҫыңдың ҡулы ҡалтырамаясаҡ. Әйтәм бит: көнө килһә беренсе осраҡта уҡ мылтыгк тәтеһенә баҫасаҡ...

Булаттимер Шаһибәрәков менән Талир Баҡишев, ике ҡорҙаш, ул иҫтәлекле әңгәмәнең аҙағында ниндәй һөҙөмтәгә килеүен Мотал, әлбиттә, белмәй. Фәҡәт атаһының да ырғып тороп иҙәндә йөрөнөүен, уйланыуын хәтерләй. Ул, бәлки, эстән генә булһа ла, Оло йортта Баҡишев хаҡында һүҙ әйтергә тәғәйенләп тә ҡуйғандыр, сөнки уның тәғлимәтенең хаҡлылығына инаныуы шикһеҙ ине. Ләкин ике ғилми ағымдың тәбиғи алышын битәбиғи яһаған хәйерһеҙ хәл килде — 1937 йылдың һалҡын көҙөндә һалҡын ҡанлы Ҡотлоев тәтегә баҫты... Баҡишев киҫәткәнсә...

Дача йортоноң тәҙрәләрен киске сула күмһәретте — көн ағы әлйеү-мәлйеүләнгән, ҡала халҡы эштән ағыла башлаған мәл. Шуны дөрөҫләгәндәй, ара-тирә башҡа йорттарҙың да мөрйәләренән төтөн бағаналары борҡораны. Сетерекле уйҙарының осона сыға алмай, языусы төп ниәтен үтәргә Яубаҫаров дачаһына йүнәлде.

Хан һарайылай иркен йортҡа аяҡ баҫыуы менән үк уны сәйер шомло йомаҡ мөхите сорнаны. Ҡәҙимгесә өлтөрәп торған хужабикә Мәрфуға ханымдың да, ҡыҙмасараҡ булып өлгөргән хужаның үҙенең дә, ишек алдындағы йылы түтәлдән, тышта әле күҙәнәкләнеп мәреү ҡар ятыуға ҡарамаҫтан, йәшел һуған, ҡыярҙар күтәреп индергән һәм залдағы оҙон өҫтәлдә апаһына табын әҙерләргә булашҡан «сиҙәм сиңерткәһе» (Хөппөлгәрәй таҡҡан ләҡәп) Абуталиптың да, хатта тәҙрә төбөндә битен йыуып ултырған, һеләүһендәй дәү сыбар бесәйҙең дә йөҙҙәренән, хәрәкәттәренән йәнгә тейгес шомло туҡлыҡ, ғәмһеҙлек тойғоһо бөркөлә. Ҡәләмдәшенең ҡәҙимгесә ҡыҙара-бүртенгән ҡыҙмаса йөҙөн күреү менән:

-- Йә, Абуталип-Буталып Сиҙәмский, шиғыр-миғырҙар шыттыраһыңмы? – тип тәбрикләне.

-- Шыттырыуҙан ни файҙа, түрә-мүрә ҡәҙереңде белмәгәс.

-- Ә һин түрәләргә тип түгел, халыҡҡа тип яҙ. Юҡһа, тырнап алыр өс бөртөк ярмаң юҡ.

-- Ыңғырсаҡ Уральскийҙыҡы бармы? Миңә тәтемәгән фатирҙы бирҙегеҙ.

-- Яға аҫтына һалыуыңды кәметһәң, һиңә лә булыр.

-- Ул һалмаймы?

Сиҙәмлегә иғтибарын һүрелтеп, Мотал кире үҙ ғәмдәренә ҡайтты. Бешеп һытылырға торған әфлисундарҙай тиртеү күкрәкле берҙән-бер ҡыҙҙары Шәмсура

туташ төпкө бүлмәнең ярым ҡыҫыҡ ишегендә күҙгә салынып, шарҡылдап көлөүе түгелгәс, хәтәр таныш ир-ат ауазы ла шуға ялғанғас, Моталды бында алып килгән язалы тойғо уғата тынысһыҙланы. Ҡушҡулын һуҙып килеп күрешкән бажаһы Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улының кабинетына икәүләшеп инеп бикләнерҙән элек, хужа кеше ҡайҙалыр олаҡҡан арала, Моталды уҙ күргән Мәрфуға ханым унең ҡолағына шыбырларға өлгөрҙө:

-- Үҙең белмәгән нимә бар, кейәү-балаҡай... Шәмсурабыҙҙы әйтәм, һыуһөлөгөләй һомғол буй-һын менән ата йортонда оҙаҡлабыраҡ ҡалды шул... — Ҡарсыҡ, ҡорошҡан-арыҡ ҡулы менән яулыҡ осон ҡайтарып, күҙ йәштәренә сылатып та алды. — Атаһы әйтә, ҡулымда мөс бар саҡта, берҙән-бер ҡыҙымды бәхетле итәсәкмен, ти... И Илаһым, ҡасан күрербеҙ икән шул изге көндө... Юғиһә береһе килә, береһе китә, тигәндәй, нисәмә-нисә буласаҡ кейәүҙән күҙ яҙҙырҙыҡ инде... Әле ишетәһең бит: йәнә лә яңы ҡунаҡ -- Шәмсурабыҙ нәүбәттәге буласаҡ кейәү-бала менән гөлдөрләшә үҙенең бүлмәһендә...

-- Кем тағы? Теге килгәнемдә генә «буласаҡ кейәү»егеҙ профессор Йыһандар Хәкимуллин ине.

-- Йыһандар менән былайыраҡ булды... — Ҡарсыҡ һүҙен осларға өлгөрмәне, күрше бүлмәнән Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улының көр тауышы тәҙрәләрҙе зыңғырлатты:

-- Әсәһе, ниңә тотаһың бажаны? Һинең шышый-бышыйҙарың бөтмәҫ унда!

-- Әү, хәҙер, атаһы!

-- Еңелсә генә ҡапҡыларға ҡаҙ ботомо, ҡаҙы ҡалъяһымы керет. Кабинетҡа.

-- Залда оло табын көтә бит, атаһы? Шәмсуралар ҙа сыға.

-- Беләм мин уларҙың бөтмәҫ шышый-бышыйҙарын! Килтер, тигәс, килтер!

-- Хәҙер, атаһы!

Ҡарсыҡ менән Мотал кабинетҡа ҡушарлап барып керҙеләр. Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы, сейфын асып, аҫҡы кәштәнән әрмән коньягы һурҙы, ике оҙон стаканға ҡап урталай бүлеп һалды, буш шешәне ҡаҡ иҙәндән шуның кеүек үк тиҫтерҙәре ҡатарына мөйөшкә тәгәрләтте.

-- Ҡуйсы-ҡуйсы инде, атаһы, артыҡ булып китмәҫме?

-- Етте, бүҙәнә, минең ҡапҡан беремде һанап торма! Яубаҫаров эштә ҡапмай — Яубаҫаров өйҙә ҡаба. Мине тыйыуҙан элек, минең һымаҡ ғүмер буйы зарарлы цехта эшләп ҡара! — Ҡунағына бороддо. — Тот, бажай, булдыҡ иҫән! — Ҡунаҡтың ни әйтерен дә көтөп тормай, тулы стаканды ҡара тамағына ҡапланы: Яубаҫаровтың «классик» ғәҙәте ине был — күҙенәсә тултырылған ҡырлы стакан булмаһа, ярым-йорто ғына һалынған соҡорҙан эсә алмай.

-- Әйҙә, етеш ҡаҙыһынан! — Коньяк өҫтөн арыулап баҫтыртҡас ҡына, туранан-тура эшкә күсте. — Йә, ни ғәм менән йөрөшөң? Бында, минең айыу өңөнә, әрмән коньягы һемерер өсөн генә килмәгәнһеңдер тип беләм. Тыңлайым.

-- Ғәмдәрҙең дә кәттәһе, Хөппөлгәрәй Шәңгәрәйевич. Әле генә үҙең атаған зарарлы цех тураһында. — Мотал яманаты сыҡҡан «Шүлгән йылғаһы»на сәйәхәт ҡылыуын, завод ҡоймаһы аҫтынан — Йәншишмә үҙәненә, завод мөрйәһе

башынан — зәңгәр Күк даирәһенә урғылған «Шүлгән шаҡшыһы»ның самаларҙан ашыуын, төбәк мөхите һәләкәткә тарый барыуын үҙ күҙҙәре менән күргәнлеген һәм, әгәр ҙә хәл яҡшыға үҙгәрмәһә, шул хаҡта матбуғатта оран һалырға тура киләсәген туғандарса асыҡтан-асыҡ тиште.

-- Күреп торам, Ҡәҙерғол ҡартта булғанһың, — тине Яубаҫаров, бөтөнләй тыныс ҡалып.

-- Ҡәҙерғол ҡартта ла булдым.

-- Ҡәҙерғол ҡарт кем һуң ул?.. Хе-хе-хе!.. — Яубаҫаров тамағын шыйылдатты.

-- Ҡәҙерғол ҡарт — тыуған ерҙең һаҡсыһы, сәсәне. Ләкин бында эш Ҡәҙерғол ҡартта түгел.

-- Кемдә?

-- Һеҙҙә, Хөппөлгәрәй Шәңгәрәйевич, һеҙҙә! — Мотал бажаһының ҡыҙыл ҡан баҫҡан күҙҙәренә тура баҡты. — Тыуған төбәктең тәбиғәтен, завод директоры булараҡ, шәхсән һеҙ ҡаҡшатаһығыҙ, һеҙ!

-- Эй сабый! — Директорҙың тамағынан тағы шыйлдау сыҡты. — Ысынлап та был донъяны мин ҡорота тип уйлайһыңмы? Шеш! Төп ғәйепләне эҙлә!

-- Төп ғәйепле – һеҙ, Иҫке завод директоры. Муйынығыҙға боғалаҡ төшмәҫе борон...

-- Шеш! – Мазут һеңгәндәй ҡара ҡулы менән ҡуҡыш күрһәтте. -- Ҡороғоң етмәйәсәк! Ҡулың ҡыҫҡа!

-- Минән юғарыраҡ та ҡороҡсо бар.

-- Кем? Вилор Иҫәрғәповичмы?

-- Уға ла барып етер.

-- Хе-хе-хе!.. Иртәгә үк икәүләшеп барайыҡ, күрерһең: Вилор Иҫәрғәпович иптәш нисек итеп ике аяғыңды бер ҡуныҫҡа тығыр икән! Һинең таҙа һауаң йәки һыуың түгел, ә мин етештергән продукция кәрәк уға, Мәскәү Кремле алдында ҡойроҡто юғары тоторға! Әллә минән дә гонаһлыраҡ гонаһ шомлоҡтарын белмәйһеңме? Рәхим ит, фамилияларын яҙып ал, өҫтәрендә утлы йәшендәр уйнат.— Яубаҫаров, илгә нимәләр етештереп республиканың данын арттырған иң эре заводтарҙың, комбинаттарҙың етәкселәрен атап, креслоһында тантаналы хихылданы. — Төбәгебеҙҙән таш мөрйәһе суҡайтылған мин-бажаң ише генә түгел -- *Мәскәү кадрҙарының* алтын фондын тәшкил итә улар. Береһенең генә башынан бер бөртөк ҡылы төшһөн – Вилор Иҫәрғәповичың шунда уҡ креслоһынан осасаҡ. Әһә, күҙең маңлайыңа ырғынымы? Ҡойроғоң бот араңа ҡыҫылдымы? Әллә ана шул исем-фамилияларҙы тәбиғәтте ҡоротоусылар тураһындағы яҙыласаҡ фельетоныңдың төп геройҙары ҡылып сәпәй алаһыңмы? Әләйһә, рәхим ит: мин уларҙың ҡайһыһының ҡайһы айҙа, числола, сәғәттә ҡаш менән күҙ араһында, минең ышығымда шымтайып ҡына, һин йырлаған «көмөш һыулы Ағиҙел»гә нисә мең тонна әшәке һыу ағыҙғанын, «фирүзәләй зәңгәр Күк»кә нисә мең кубометр зәһәр төтөн ебәргәнлектәрен дә дәфтәреңә бәйнә-бәйнә теркәтәм. Шәйләнеңме инде төп геройҙарҙы? Ә мин фәҡәт һин әйткән шул «шаҡшы»ларҙы ҡаплағыс күҙ быуыусы — баһаһы һуҡыр тинлек төтөн шашкаһы ғына... хе-хе-хе! — Баяғыса, тамағын шыйылдатып көлдө.

-- Улайһа беҙ, — төҫө ҡаҫҡан яҙыусы өй хужаһына төртөп күрһәтеп әйтте, — эште тап ана шул «ҡаплағыс»тан башлап дөрөҫ иткәнбеҙ икән. Шүлгәнлегең оҙаҡҡа бармаҫ.

-- Шиш! Буйың етмәҫ! Бына бынауҙы теләйһеңме? — Яубаҫаров баяғы ҡара «ҡуҡыш»лы тос йоҙроғон үргә сөйҙө. — Шәйләнеңме, кемдәр килә тотанаҡлап минең арттан? Оһ-һо!.. Белгең килһә, бер ниндәй ҙә Шүлгән түгел, ә ҡиммәтле хайуан мин! Хе-хе-хе!..

-- Хайуан?!. Был ни тигән һүҙегеҙ?! – Моталды шаҡ-ҡатырҙы.

Яубаҫаров күҙҙәрен яман аҡырайтып, төкөрөктәрен сәсә-сәсә бажаһына яҡынланы:

—Эйе, хайуан! Ниңә аптырайһың? Хайуан! -- Моталдың күҙҙәре, ысынлап та, маңлайына күскәндер:

-- Хөппөлгәрәй Шәңгәрәевич! Бажай! Әгәр иҫергән булһағыҙ, мин һеҙҙең менән һөйләшмәйем.

-- *Мине* иҫертергәме! Шеш!

-- Хайуанмын, тигәс тә ни, әллә намыҫығыҙҙы ла юйҙығыҙмы?

-- Яҙыусы аҡтығы! «Хаҡлыҡ!», «намыҫ!» тип боғаҙ ярғанында һин шуны күрәһеңме: хаҡлыҡ даулап ғауғалаған күпме намыҫтар, эйәләре тарафынан сүплеккә ырғытылып, аяҡ аҫтында ята? Эйәләренең исемен атап ҡысҡыра? Шул ҡысҡырыу юғарыраҡҡа ишетелмәһен өсөн, беләһеңме, кәрәкмәгән шул намыҫтарын эйәләре ни рәүешле тибәрә? Ҡасандырғы ажғыр арыҫландан уларҙы өнһөҙ һарыҡҡа әйләндереп, көтөүләп, ҡасапсының[45] бысағы аҫтына юлландыра?.. Ана шул һарыҡҡа әйләндерелгән ташландыҡ арыҫлан-намыҫтарҙың көтөүенең башында башлап барыусы аҫыл хайуан мин — ҡасапсыға тоғро хеҙмәт итеүсе хәйләкәр кәзә тәкәһе мин, хе-хе-хе!..

-- ?!

-- Эйе-эйе! Ҡасапсының тоғро ярҙамсыһын – хәйләкәр кәзә тәкәһен дә белмәйһеңме? Үҙенә ҡалһа, яҙыусы!.. Башың йәш шул әле, бажаҡай. — Яубаҫаров, сейфын асып, һәрмәнеп ҡараһа ла, эҙләгәнен таба алмай йонсоно. — Әсәһе, тим, мур ҡырғыры! Ҡайҙа минең төнәге бүҫкәргән ярты?

Ҡарсыҡ төтәп килеп инде:

-- Әстәғәфирулла тәүбә, ҡайҙан беләйем мин уны? Ташыңды йотоп, ҡасан нәмә эскәнеңде лә онотмаһаң ни!

-- Етте, сутырлама, бүҙәнә! — Сейфын бикләп, бажаһына бороллдо. — Беҙҙең тирәлә эттәй темеҫкенәһең, ә ҡаланың ит комбинатына сәйәхәт ҡылғаның бармы? Ундағы мал һуйыу цехына, беләһеңдер, һарыҡ малы үҙ тояғы менән, ожмах ҡапҡаһына үткәндәгеләй, лөбөр-лөбөр тәпәйләп кереп китә, ә икенсе остан әҙер колбаса хәлендә әрйәләргә мисәтләнеп шыңғыр-шыңғыр килеп сыға. Бына шул «ожмах ҡапҡаһы»на һинең ише сабый аҡыл һарыҡтарҙы, беләһеңме, кем әйҙәй? Күп йәшәгән, күпте күргән, эт ҡайышына әйләнгән кәзә тәкәһе! Алйот һарыҡтарҙы алдан башлап барып көтөүе менән лөбөр-лөбөр килтереп еткерә лә, тимер ырғаҡлы бысаҡ ҡаршыһында ғына салт-янтайып, тышта тороп

[45] Ҡасапсы — итсе.

ҡала, ә һарыҡтар тимер ырғаҡлы бысаҡ аҫтына *лөбөр-лөбөр* ағылыпмы ағылыуын дауам итә — ошо рәүешле көллө көтөү үҙ тояғы менән бысаҡҡа керә. Хәйләкәр кәзә тәкәһе иһә кире боролоп, нәүбәттәге һарыҡ көтөүен килтереп еткерә *лә* үҙе йәнә янтайып ҡала... Бел: эт ҡайышына әйләнгән кәзә тәкәһе ит комбинатында айырым иҫәптә тора — ашаталар, эсерәләр, күҙ ҡараһылай ҡәҙерләп һаҡлайҙар, ха-ха-ха!

Яҙыусы, үҙ ҡолағына үҙе ышана алмай, бажаһының йөҙөнә текләп ҡараны: иҫереклек ғәләмәтеме әллә? Юҡ, һәр ваҡыттағыса, ап-айныҡ — үҙ аҡылы үҙендә. Әммә-ләкин күңелендәге — телендә...

—Үҙегеҙҙе шул хайуанға -- кәзә тәкәһенә тиңләп, башығыҙға ҡот осорғос бәлә-ҡаза алаһығыҙ түгелме?

Хужа кеше йәнә түшәмде күтәрә яҙып хахылданы.

— Бажа-бажай, һаман төшөнөп етмәйһең: ҡалалағы иң ҡөҙрәтле ярлыҡауға эйә мин — «круговая порука» тиҙәр уны! Башымдан бер сәс бөртөгөмдө генә төшөрөп ҡара: һин яҙыусы остоғонан нисә бөртөк саң тороп ҡалыр икән! Сөнки тарихи вазифа үтәүсемен: һинең һымаҡ нәҙберекйәндәрҙе кәрәкмәгән намыҫтарынан арындыртам, замана заңына ярашлы аҙымлатам, хе-хе-хе! Бер һүҙ менән әйткәндә, минең уйынсыҡ заводтың серек кәбеҫтә ҡатыш әсе һарымһаҡ еҫле сибек төтөнкәйе унарлаған ҙур заводтарҙың мәйет ағыулы һөрөмөн бергә буталап томаларға ла адрестарын юғалттырырға мөмкинлек бирә — бына минең ҡөҙрәтем! Бына ни өсөн Яубаҫаров бажаҡайың ҡаҡшамай -- тиҫтәләгән йылдар буйынса ел-ямғырға бирешмәй йәшәп килә! Так что, ҡәҙерле Булаттимерич, *Ҡәҙерғол* ҡарт уйлап сығарған ун ике башлы Шүлгән дейеү пәрейен минән эҙләмә!

Әҙип шаңҡып бөршәйҙе, өндәшмәне. Фекерҙәре мейеһен йәшендәй телде.

Эйе, *дөйөм рухосфера* беҙҙең һәр ҡайһыбыҙҙың *шәхси рухосфераһына* тығыҙ бәйле, тип уйланы ул, бына ике миҫалы:

Яубаҫаровтың ағыулы-зәғиф шәхси рухосфераһы биосферанан ашып, дөйөм рухосфераны зәғифләндертә, шуға күрә *лә* уға ҡаршы көрәш ифрат ҡырҡыулаша —яҡлаусылары күмәк.

*Ҡәҙерғол* ҡарттың Йәншишмәләй саф шәхси рухосфераһы тирә-яҡ мөхитте *лә*, дөйөм рухосфераны *ла* сафландырта. Быға миҫал: Йәншишмәне ҡурсалашыусы яңы быуын эшселәр һәм шуға ҡарата аҡыллы рәүештә үҙ аллы ҡарар ҡылыусы милиционер.

Яубаҫаров романға зәһәр ҡара көс булып керәсәк — бынан бил тайҙыртыу юҡ, роман ҡануны бойора.

Төп проблема дәһшәтле, ваҡиғалар ҡатмарлы... Шул гәләмде ни рәүешле теүәл итеп иңләргә *лә* ҡабилиәтле сисергә?.. Ә яҡтылыҡ йөкмәп илтеүсем кем булыр? Дилбәр! Терегөмөштәй теремек, аҡыллы *ла*, ялҡынлы *ла* балдыҙҡайым Дилбәр-Диләфрүз!

Шул йәһәттә яҙыусының күҙ алдары яҡтырып, йөрәге, баш мейеһе бер ыңғай зыңҡыны, әйтерһең дә, шифалы йәшен үтте: «Табылды, *роман-эссе* итеп яҙам: геройҙарымдың ҡайһылай уйлауын, нисек көрәшеп-алышыуын хикәйәләү

генә түгел, ә заманса фәнни фекер-тоҫмалдарын да хәлдән килгәнсә һәм тырыш уҡыусы аңлай алырлыҡ асам, уҡыусыма еткерәм, уны аң-тоң баҫҡысынан бер арата юғарыраҡ күтәрәм». Һорау тыуа: ҡатмарлы эссе жанрының етди сәхифәләрен аҡтарып уҡырға теләүселәр булырмы һуң? Теләмәүселәр ҙә табылыр. Хатта «башҡорт белинскийы» кеүек әҙәби тәнҡитселәр, фәндеке фәндә булһын — бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай, тип сапсынып та сығырҙар. Әҙәбиәт белгестәре иҫәпләнеп йөрөп тә, роман жанрының, тормоштоң үҙе кеүек үк, бөтәһен һыйҙыра алырына ышанмаҫтар. Мәгәр тәрән фекерләргә, күңел даирәләрен туҡтауһыҙ киңәйтергә һәүәҫ йәндәр етди урындарын да ентекләп уҡыр, хатта автор менән бәхәскә керер. Шундайҙар ҡулында хәҙер донъя ҡуласаһы!

Кабинет ишегенән Мәрфуға ханымдың борсоулы йөҙө салынды ла уйланыусыны ғәмәли донъяға күсерҙе:

-- Атаһы, Мотал кейәү, табын көтә бит инде!

-- Киттек! — Яубаҫаровтың көрәк дәүмәлле ҡулы ҡунағын еңенән семтеп һөйрәне. — Күп сәйнәштек. Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта, сүбек сәйнәп май сыҡмай, тигәндәр боронғолар.

Шәмсура туташ менән «буласаҡ кейәү-бала» табынға йәпләнгәйне инде. Моталдың йөрәге «жыу!» итте, шулай ҙа белдертмәне, күреште: ресторанда Мөхлисәһенең тирәһендә уралыусы, һәр төрлө алтын биҙәүестәр менән йәшерен сауҙа итеүсе был йәне һөймәгән, тәне тартмаған Армен Саркисян шәхсән үҙе, ирәйеп, буй-һынының һәр йомороһо түңәрәк һыҙаттарға бөткән, ир саҡырып хәтәр мимылдаған Шәмсура туташ ҡырында түрҙә ҡуҡырайып ултырмыш. Һәр саҡтағыса, Армендың юрматы башҡортона тартым ҡаҡса йоҡа йөҙө алһыуланып, ҡыҙмаса булып алған, сөм-ҡара суҡ мыйығын тауыҡ күрпәселәй ҡупырайтҡан. Шундай уҡ күперек һүҙҙәр һибеп:

—О, Салауат Юлаев премияһының буласаҡ лауреаты! Салауат Юлаевтай полководец шағирлы бөйөк әҙәбиәттең талантлы яугире менән табындаш булыуыма шатмын, — тип күреште. Был әҙәмдең, ысынлап та, бер юлы башҡортҡа ла, кавказлыға ла тартым ҡиәфәте, тыштан даими йылы алсаҡлыҡ балҡытһа ла, төптән һалҡын аҡыл менән идара итеlә, йылмайыуында ла иҫәп-хисап хисе сағыла кеүек. Мөхлисәһе ошо бәндә аша ресторанына килтертелгән мандарин һәм лимондарҙы өйгә лә әрйәләп ҡайтарта башлағас, бигерәк тә шул «Ҡаф тауы арты емештәре» араһында көтмәгәндә «Марокко» ярлыҡлы әфлисундар фашланғас, Моталдың әмәлһеҙ һағайыуы шикләнеүгә әйләнде: яҙыҡлы йәндәр ишәйә түгелме ҡатынының ҡырында!.. Бына хәҙер шул йышылмыш Армен хәйерһеҙ завод директорының «буласаҡ кейәү-балаһы» роленә ҡулайлашҡан — тимәк, ниәте барып сыҡһа, Моталдың да ағай-энеһе буласаҡ?.. Бер уйлаһаң, әллә ни иҫ китерлек хәл дә түгел һымаҡ: Моталдың куреп белеүенсә генә лә, Шәмсура туташтың «буласаҡ кейәү»ҙәренең һаны тиҫтәнән ашып китте, ә шуларҙың ошоғаса “иң аҙаҡҡы” һәм, ваҡытында Мәрфуға ханымдың Моталға яҡын туғандарса оло сер итеп кенә еткереүенсә, хәләл ефетлеккә иң лайыҡлы тигәндәре — мәшһүр тарихсыбыҙ Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллин ине. Уларҙың бит икеһе лә бәпкә хөкөмөндә ояла оҙағыраҡ

ҡалған ҡошсоҡтар булып, тап ошо өҫтәл ҡырында парлы күгәрсендәрҙәй гөлдөрләшеп ултырғандарын да Мотал күргәне бар ине. Хәҙер килеп, тимәк, Хәкимуллинды яңы көндәш алмаштырған... Сиртһәң ҡаны сәсрәп сығырҙай «йәш-елкенсәк» Шәмсураһының нәүбәттәге «буласаҡ кейәү-бала» менән мимылдашып һәм борғаланып-һырғаланып, бер-береһенең ауыҙынан бер кәнфитте урталай тешләп һурып, супылдашып убешеүен аҫтыртын ғына күҙәткән эскерһеҙ Мәрфуға ханым Моталдың ҡолағына йәнә лә шыбырлап өлгөрҙө:

—Атаһы әйтә, был кавказ кешеһе ышаныслы: аҡса һанай белгәне кеүек, аҡсалы кәләште лә үтә күреп таный, үҙенә тарта белә, ти. Ошоноң менән танышҡас, Хәкимуллинды «ҡыҫыр кейәү» тип кенә ләҡәпләй башланы...

«Йәш-елкенсәк»тәр сутылдашып аҙ ғына ултырҙылар ҙа, өҫтәлдәге бер шешәне, ҡабымлыҡ һәм бокалдарын күтәреп, кире төпкө бүлмәгә йомолдолар, магнитофон моңона күмелделәр. Иренең дә йәнә, ни йомош менәндер, бер арауыҡ табындан йолҡоноуынан файҙаланып, Мәрфуға ханым Моталға яҡынлабыраҡ шыуышты ла эс серҙәрен бушатырға кереште:

—Ҡара әле, кейәү: беҙҙең был буласаҡ кейәү-баланы һин яҡшы беләһеңдер? Анауы Абуталибыбыҙ әйтә, Мөхлисә ҡәрендәшем уның менән бик яҡындан таныштар — «Ярлауыҡ»та алыш-биреш итешәләр, ти бит...

Мотал, Мөхлисәһенең исеме Армен менән бер ҡатарҙан аталғас, сырайы сытырайып, ҡалтыранып уҡ ҡуйҙы, ә уларҙың «алыш-биреш» итешеүе тураһындағы эскерһеҙ генә әйтелгән һүҙ ирҙең ҡанын ағыуланы...

-- Был һорауҙы, ҡайынбикә, үҙегеҙҙең ана шул Абуталип-Буталыбығыҙға бирегеҙ, сөнки ул бит Саркисяндың шешә бөкөһө — йән дуҫы булып алған, тиҙәр! — тине. Мәрфуға ҡул һелтәне:

-- Эй, беҙҙең Абуталипмы һуң инде аҡты ҡаранан айыра торған әҙәм! Уның бар уйлағаны — әрмән коньягы һемереү ҙә ана анауы кушеткала ятып аунау. «Сиҙәм шағиры» исеме менән күпме шаулап йөрөп, һинең һымаҡ яҙыусы ла булып китә алманы бит, исмаһам... — Тауышын ҡапыл аҡрынайтып, ҡунағының ҡолағына шыбырланы. — Ҡуй инде был беҙҙең Абуталипты! Бажаңдың сейфына асҡыс яратып, шуның көн дә башланған шешәһенән ҡойоп эсеп тик йөрөгән икән, мәлғүн, әстәғәфирулла тәүбә... Элекке көн генә иҫләмәҫтән үҙем абайлап ҡалып, иҫем-аҡылым китте. Еҙнәһенә әйтә күрмә инде, берүк, аҡыллым!

-- Миңә тимәгәйе, сейфының эсенә инеп ултырып эсһен — миңә нимә! — тине түҙемлеген юя барған ҡунаҡ. Әммә ире инмәҫ борон ғәм-хистәрен түгелдертергә ынтылған ҡарсыҡ быны иғтибарламаны, арыҡ тарамыш ҡулы менән Моталдың беләген ҡыҫып, сиселеүен дауамланы:

-- Грузинмы, әрмәнме тиһәләр ҙә, һис береһе лә түгелдер ул, әйгенәм! Буласаҡ кейәү-баланы әйтәм. Төҫө-килбәте зерә лә үҙеңдең юрматы яғы туң башҡорто ҡәләмдәшең Дулатҡа оҡшаған бит! Нисек уйлайһың?

-- Минеңсә, — тине Мотал, гонорар алғас эсеп ботон һындырған һәм ҡултыҡ таяҡланып йөрөгән ас яңаҡлы тәбәнәк шағир Дулат исемен ишеткәс көлөмһөрәп, — буласаҡ кейәү-баланың төп сифаты милләтендә түгел, ә башҡа

нәмәлә... Иң мөһиме, ҡыҙығыҙҙың күңеленә хуш килергә тейеш ул.

-- Уныһы шулай ҙа ул, әммә әсә күңеле төрлөһөн уйлай... Күҙ күреп белгән Йыһандар Илһамдаровичты сонтор ҡойроҡ Арменға алмаштырып, яҙа тотмаҫбыҙмы, тим...

-- Һәр хәлдә, Хәкимуллиндың бер ере лә Саркисяндыҡынан бер иле лә артыҡ түгел, әгәр ҙә кәм булмаһа... — тине Мотал.

-- Шулай тиһеңме, кейәү? — Ҡарсыҡ ҡыуанды. — Шәмсурам бер көн әйтә, буласаҡ кейәүегеҙ әрмән түгел, ә үҙебеҙҙең ҡара башҡорт бит ул, ти. Бәләкәс сағынан Кавказда детдомда үҫеп, әсә телен оноҡкан, ти. Бер көн, ти, йоҡлағанында, төш күреп, «әсәй!» тип ҡысҡырып ебәрҙе, үҙ ҡолағым менән ишеттем, ти.

-- Бына быныһы ҡыҙыҡ! — тине Мотал, ҡапыл етдиләнеп. — Ҡыҙыҡ һәм йомаҡ! Был йомаҡты Шәмсура туташ ҡына сисер, ахырыһы...

-- Әлбиттә, кейәүҙең әрмәнме, урыҫмы, сыуашмы булыуында түгел эш, дөрөҫ әйтәһең, кейәү. Үҙең әйтмешләй, ҡыҙыбыҙға ғына яраһын. Тик беҙҙе борсоғаны шул: берҙән-бер бөртөк балаҡайыбыҙҙы әллә ҡайҙа Ҡаф тауы артына алып китеп, ҡартайған көнөбөҙҙә япа-яңғыҙ ҡалдыртмаһа ярар ине... Әллә, тимен, үҙебеҙҙең тоҡом булһа, йән тартмаһа ҡан тартып, Уралына һырлығыр — икеһе лә күҙ алдыбыҙҙа булыр... Ярхамбикалла, ана атаһы инеп килә!

-- Әсәһе, килтер ҡайнар һалмаңды!

-- Әү, хәҙер, атаһы!

Өй хужаһының ҡулында башланмаған шешә күреп, Мотал, Яубаҫаров лаяҡын булыуҙан элек, Мәрфуға ханымдың да сәбәләнеп кухняға юлланыуынан файҙаланып, бая өҙөлөп ҡалған һүҙен ослап ҡуйырға ашыҡты:

—Ғәфү итегеҙ, мин башҡа тотмайым. Белеүегеҙсә, мин бында ифрат мөһим йомош менән килдем: һеҙҙең үҙегеҙгә, артабанғы яҙмышығыҙға ҡағылышлы. Ошоғаса бажаларса туған күреп, хөрмәт итеп йәшәгәнемде бик яҡшы беләһегеҙ, Хөппөлгәрәй Шәңгәрәйевич. Ләкин һәр нәмәнең сиге бар. Һеҙ әйткән хәйләкәр кәзә тәкәһенең көнө бөтәсәк — яҡшы белеп тороғоҙ. Һәм ул кәзә тәкәһенә намыҫтарын бағлап ебәргән бәндәләр ҙә фашланасаҡ, әгәр ҙә ул әйткәндәрегеҙ хаҡ булһа...

— Фи! — Яубаҫаров яурындарын һелкетеп шыйлап көлдө.

-- Ҡарағыҙ уны, иларға тура килмәһен.

-- Нимә?! — Директор ырғып торҙо. — Молокосос малай, һин миңә янайһыңмы?

-- Мин һеҙгә туғандарса тәҡдим итәмен: башығыҙға бәлә-ҡаза ҡунмаҫ элек хәләл ялға китегеҙ, Хоппөлгәрәй Шәңгәрәйевич.

-- Шеш! Бына бынауҙы еҫкәп ҡараманыңмы? — Шаһитһыҙлыҡтан файҙаланып йүгәнһеҙләнгән Яубаҫаровтың көрәктәй ҡулы әтәс дәүмәлле «ҡуҡыш»ҡа йомарланды. — Төкөрәм мин һинең фельетоныңа! Һәм үҙеңә... тултырғансы! Әгәр миңә ҡул күтәрһәң, Хиросима саңына әйләнәсәкһең — бел шуны! — Моталдың сығып барыуына иғтибар ҙа итмәйенсә, тамағына ғорҡолдатып стаканды ауҙарҙы...

## УН ҺИГЕҘЕНСЕ СӘХИФӘ

Күҙ төбәп барған Культура министрының да тел төбөнән бер үк кинәйә сыҡҡас, Дилбәр иҫке Римға ҡаратылған әйтемде яңыса һапланы: «Бөтә бюрократтар ҙа профессор Хәкимуллинға ебәрә»... Ысынлап та, батмаҫ карап булып сыҡты ла һуң был Йыһандар Илһамдар улының фәндә фекер тышауына әйләнгән тәғлимәте! Теге көндәге йыйылышта Ҡондоҙбаевты ҡамсылаған Алпаров докладын ғына алайыҡ – артында шул Хәкимуллин шәүләһе тора һерәйеп. Тарих фәне өлкәһендә берәү берәй яңы нәмә әйтергә ауыҙын астымы — шул сәйәси караптың алыҫтан ата торған туп көбәгенең ауыҙына башын ҡуйған булып сыға...

Институт подвалындағы ярым ҡараңғы бүлмәгә — оҫтаханаһына, ниһәйәт, инеп, министр һибә ҡылған ҡәҙерле гәзитте асып ҡараны. Эйе, уның ташҡа баҫылған материалы — «Башҡа төшкән кирбес»... И илаһым, Дилбәрҙең редакцияға атҡарған шул дыуамал хатын, бик тырышып, фельетонмы, памфлетмы итеп эшкәрткәндәр имеш. Ҡыҙ шулай ҙа ғалим маңлайын кирбес мәрәйе итеп уйнатҡан алымды хупламаны — мәҡәләне эшкәртеүсе саманы онотоп ебәргән...

Өҫтөн йәһәт алмаштырып, балсыҡ ҡатҡан алъяпҡысын бәйләне лә түрҙә ыҫтанда көткән бюстың киндер бөркәнсеген һыпырып ташланы, ҡыҙып эшкә тотондо. Сатнап торған көслө рухлы йәш егет ине был, диплом эшенә әҙерләгән ике һындың береһе — «Ил балаһы» ине. Ә «Ил инәһе»нең үҙ төҫөн, билдәле булыуынса, сыбыҡ осо туғаны һаналған баяғы ағаһы Йыһандар «музей»ынан барып күсереп алды ла яҡты образ дәрәжәһенә күтәреп йәнләндерҙе... Диплом эшенең мөһим өлөшө булараҡ, «Ил инәһе»нең ватманда теүәл реконструкцияланған кәшәнәһе һәм киләсәктә шуның менән бер комплекс тәшкил итәсәк Ерәнсә-сәсән һәйкәленең проекты ла әҙер. Автор хыялынса, был комплекс йәмле Эйек буйҙарында таш һәм кирбестән генә һынландырылып, үҙенә күрә бер тарихи мемориалға әйләнәсәк; ә быуындар күсәгилешлеген кәүҙәләндереүсе ике скульптор портрет — «Ил инәһе» менән «Ил балаһы» — мемориалдың үҙәген тәшкил итәсәк...

Йөрәкһеүен йоморға теләгәндәй, Дилбәр ярһып әүмәләргә кереште аҡ балсығын, йылғыр оҙон бармаҡтары ыҫтандағы балсыҡ егеттең сырайын әленән-әле берәмтекләп үҙгәртте, яңыртты; бер мәлгә ул ҡойоп ҡуйған Басир Дәүләтбаев булып та баҡты, хатта, бармағын шаян янап, «Һәй Мухина!» тип ҡысҡырып ебәрер төҫлө ине; әммә тылсым эйәһенең ҡағылышы был ҡиәфәтте ҡабат серле томан аҫтына төрҙө — инде ул нимәһе менәндер ылғый беҙҙең Басир ҙа, түгел дә һымаҡ сәйер кисереш ҡалды. Һәр хәлдә, бының шулай булырын, дөйөмләштерелеүен автор үҙе теләне. Шул йәһәттән серле Басир Дәүләтбаев битлеге аҫтынан донъяға баҡҡан икенсе бер образдың прототибын ҡыҙ мөмкин тиклем нығыраҡ томаларға, башҡаларға фашламай, күңел һандығында бикләп ҡалдырырға тырышты; шул икенсе егеттең хатта тауышы ла ҡолаҡ төбөндә зыңлап тора, ә исеме, ҡыҙ йөрәген ләззәтле дөпөлдәтеп, тел осонда тирбәлә...

Бына, ниһәйәт, һалҡын балсыҡ йәнләнеп, һиҙгер бармаҡ биттәре аҫтында һулҡылдап тибә башлаған теп-тере ҡан тамырҙары тойола...

Дилбәр, ике ҡулын ҡаушарып, креслоға әүшәрелде, донъяға тәкәббер баҡкан балсыҡ егет йөҙөнә текләне: кем һин, кем?.. Шуны яҡшы аңланы: быныһы ла иң аҙаҡҡыһы түгел... Ҡыҙ ауыр уфтап ҡуйҙы: ысын табыш ҡайҙалыр тәрәндә ята, күңел төбөнән көйҙөрөп баға, ул — айырым, үҙенә күрә ине...

«Туҡ-туҡ-туҡ!»— Ишек шаҡынылар. Зиһене таралған Дилбәр, ырғып тороп, донъяға серле текләп баҡкан балсыҡ килбәтле егеткә әрһеҙ киндер бөркәнсеген кейҙерҙе. Ашығып ишек яғына ынтылғайны, сөйҙә һәленеп торған, муйынындағы ал таҫмаһы был тылсымлы бүлмә өсөн өҫтәлмә тылсымдай буҙарынған икенсе бер нәмәгә — гитараға ҡулы яңылыш ҡағылды ла иҫәнгерәп туҡталды: оҙон муйынлы ҡоралдың көйләп тарттырылған еҙ ҡылдары, биғәйни, һәр хәрәкәтте аңдып, танып, зыңғылдап ҡуя ине... Ирекһеҙҙән йылмайҙы: резонатор өңөндәге ҡараңғыла ошо гитара эйәһенең үҙенең ҡиәфәте — далалағы салғы аҫтынан ҡабарған бүтәгә бесән яҫмаһылай нәҙек кенә һуҙылған сөм-ҡара ҡупшы мыйығы күҙгә төрткәндәй итте. Һорауһыҙ-ниһеҙ килеп инеп сөй башында эленеп ҡалған моң ҡоралы кеүек үк, уның эйәһе үҙе лә бит, ҡаш менән күҙ араһында көтмәгәндә пәйҙә булып, гелән ана шул ишек төбөндәрәк аңдып ултырыусан, ҡыҙҙың һәр бер хәрәкәтен һағалап күҙәтеүсән...

Әйтмәһәң дә, әллә ҡайҙан ҡурпып сығып эйәләште был Мыйыҡ. Дилбәр уның хатта исемен дә белмәй (хәйер, бында уралыусыларҙың күбеһен исеме менән атамай ҙа ул!), әммә түҙә, ҡыумай: янына кем генә инеп тексәйеп ултырмаған! Тиккәме ни уның ергә батҡан ошо ҡыҫыҡ бүлмәһен «Дилбәр туташтың художество соланы (салоны)» тип шаярталар, оҫтахана тип ҙурлап йөрөтәләр. Мөкиббән эшкә бирелгәнеңдә артыҡ-борток «бүрәнә баштары» шым ғына һеперелә, таралыша, ә был, Мыйыҡ, үҙ урынын белгәндәй, ишек төбө һағында ҡала бирә. Дөрөҫөн генә әйткәндә, моңло бәрхәт тауышы менән эс-бауырыңа үтеп инерҙәй аҫтыртын бәндә, шикле йән булып күренә Мыйыҡ уға. Тынсыу һауалы подвал түрен үле тынлыҡ иҙгән ауыр минуттарҙа гитараһының хыял иленән килгәндәй талғын ғына зыңғылдауы уята, хужаһының күкрәк төбөнән түгелеп моңланыуы тирбәлә. Ошондай мәлдәрҙә ҡыҙ уны, Мыйыҡты, ҡасандыр, ҡайҙалыр бөтөнләй башҡа бер ҡиәфәттә осратҡандай, белгәндәй албырғана; гитараның тибрәнеүҙәрен әҫәрләнеп тыңлағанда ла, мауыҡтырғыс һөнәренән ваҡыт-ваҡыт өҙөлөп, тап бына ошо хаҡта — Мыйыҡты ҡайҙа һәм ҡасан күргәнлеген иҫенә төшөрөргә тырышып баш вата, ә егет йораты донъяһын онотоп көйләй ҙә көйләй... Йәш сырайына шундай ҙа ҡупшы килешеп торған, һумалалай ҡара янып йылтыраған мыйығы ла күңелле хис уята, өҫтәүенә. Теүәлерәк әйткәндә, скульпторҙы башҡаларҙан айырмалы ҡиәфәт-тип булараҡ йәлеп итә, ахыры, был әҙәм. Бәлки, йәш художник уны фәҡәт шуның өсөн өркөтмәй «аҫырай»ҙыр — ҡул араһында йөрөп-ятҡан әп-әҙер натура!.. Гитара сөйҙә иңрәй, тимәк, ишек артынан Мыйыҡ үҙе «йәлп!» итеп ҡаласаҡ хәҙер. Күрегеҙ, ҡайһылай туҡылдата!

-- Инегеҙ. Ҡәҙерле Мыйыҡбай әфәнде.

-- О! Әссәләмәғәләйкүм! Ниндәй мыйыҡ? Ниндәй һаҡал? Ниңә былай

мәсхәрәләйһегеҙ, Дилбәр-Диләфрүз туташ? Хәрби-Диңгеҙ флотынан көләһегеҙ!

Мөйөштәге еҙ һемәк аҫтында сайынырға керешкән ҡыҙ, көтөлмәгән тауышҡа әйләнеп бағып, ни тип әйтергә лә белмәй албырғаны: ауыҙ йырып килеп инеүсе әҙәм — төптө Мыйыҡбай түгел, ә тап ошо сәғәттәрҙә ул тамсы ла күрергә теләмәгән тарихсы ғалим -- профессор Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллин тап үҙе ине... Бына һиңә кәрәкһә! Ҡасандырғы матрослығынан «м» хәрефе лә ҡалмаһа ла, ғәҙәтенсә, һүҙ урауы һайын үҙенең элекке хәрби диңгеҙсе икәнлеген ҡыҫтырып, артисланып, әле булһа аҙаулы диңгеҙ бүреһе — мөхәббәт елкәнен төшөрмәгән йәш йөрәк, кәләш күҙләүсе егет булып ҡырҡыша. Әстерхан сәтләүегеләй таҡыр түбәһендә һыйыр ялағандан ҡалған ике бөртөк сәс шәлкемен үргә бөкләп һалған да мәсхәрәле ялтасын «ҡаплаттыртҡан»... Исеме билдәле ғалим, ҡалтаһы ҡалын «ҡарт егет» — өлгөрөп еткән туташтарҙың күптәренең күҙҙәрен ҡыҙҙырырлыҡ «буласаҡ кейәү» булһа ла, әллә ниңә Дилбәр менән борсағы бешмәй һаман... Һуңғы ваҡыттарҙа оҫтахананың тупһаһын төшөрмәй башлағас, ҡылыстары сатрашланып, икенсе килмәҫтәй битәрләп сығарыуына иҫе китмәне -- тағы елкәнен еккән!

Оҫтахана эйәһе, иғтибарһыҙлыҡ күрһәтергә тырышып, таҫтамалға ҡул һөрттө, ыңғайында ҡубасаҡ һүҙ айышын самаланы. «Мәсхәрәләйһегеҙ» тигәне, әлбиттә, гәзиттәге фельетонға ишаралыр. Әммә “диңгеҙ бүреһе” ифрат сос шул: ҡыҙҙың һағайып ҡалыуынан уҡ тейешле һөҙөмтә яһаны ла үҙе ярҙамға килде:

-- Минең был бөҙрә-көҙрәләрҙең аҫтында, —ялтасын тысҡылдатып сиртте, — һеҙ әйткән ул ҡупшы мыйыҡ килешеп етерме икән, тим. Шулай ҙа бик теләһәгеҙ, ҡәҙерле Диләфрүз туташ, — «Диләфрүз»гә ныҡ баҫым яһаны, — ҡаш һикертеп ишара ғына ҡылығыҙ: бөгөндән үк мыйыҡ та, һаҡал да ҡурпып ҡунасаҡ!

-- Әгәр ҙә ундай ҡөҙрәтегеҙ бар икән, һеҙ, иң яҡшыһы, — ҡыҙ бармаҡ төртөп үк күрһәтте, — түбәгеҙҙәге анау ырҙын табағына ҡарурман үҫтерегеҙ.

-- Бәй, уныһы тағы ниңә?

-- Юғиһә күҙ сағыла.

-- О! Сократ-хакимды тап ана шул күҙ сағылтҡаны өсөн һөйгәндәр ҡыҙҙар.

-- Үҙегеҙҙе Сократ-хаким тип беләһегеҙме ни?

— Унан да хәтәрерәк — Диоген мискәһендә ятып шымарып бөткән күк диңгеҙ бүреһе мин!

Ҡыҙ көлдө:

—Шымарыуығыҙ дөрөҫ. Күгәреүегеҙ ҙә хаҡтыр. Сылғаулыҡҡа сыҡҡандыр тельняшкағыҙ...

Хәкимуллин көсәнеңкерәп йылмайҙы — әсе тел төбө тейгәнен белдертмәне.

-- Бына быныһы — беҙҙеңсә! — тигән булды. — Тельняшкамы? Ул минең йөрәгемдә. Их һылыуҡайҙар, белмәйһегеҙ шул диңгеҙсе-моряк йөрәген! Күҙгә бағыу урынына, түбәгә текләйһегеҙ. Ә бәлки, туғыҙ баллы штормдарҙың романтикаһы менән тулылыр был ялтас аҫты? Шаулы диңгеҙ-океандарҙы һөймәйһегеҙме әллә, Дилбәр-Диләфрүз туташ?

-- Диңгеҙ-океандарҙы һөйәм, әлбиттә.

-- Мин бит бөйөк Тын океандың мәңге дауыллы киҫәге — ниңә һөймәйһегеҙ мине?

-- Ҡартластарҙы һөймәйҙәр — ҡыҙғаналар йәки хөрмәт кенә итәләр, ағайым. Хатта Сократ булһа ла. Унан килеп, үҙегеҙгә лайыҡ өҙөлөп һөйөүселәрегеҙ ҙә барҙыр.

-- Йәғни мәҫәлән, һеҙ үҙегеҙме әллә? — Тызырайып, күҙгә һөҙөп ҡараны.

-- Йәғни мәҫәлән, Шәмсура туташты алайыҡ...

-- Кем-кем? Ҡайһы Шәмсура?! Ха-ха-ха! —Белмәмешкә һалышты.

—Үҙегеҙ белгәне инде. Әллә фамилияһын һораманығыҙмы?

Йөҙө серек ҡауындай йәмерәйҙе:

— Вәт һиңә был ҡыҙҙарҙы! Роза сәскәһеләй алсаҡ йылмаялар ҙа йөрәккә шырау ҡаҙайҙар. Дөрөҫөн генә әйткәндә, һинең менән икебеҙҙең арала бит ун йәшкә генә айырма. — Хәкимуллин сөйҙән гитараны алды, ҡылдарын тартҡылап ҡараны.— Ниңә?!

—Әйттем бит инде: үтә лә ныҡ балҡыйһығыҙ — нурығыҙ күҙҙе ҡырҡа.

—Их! — Ярһыуланып дыңғырланы еҙ ҡылдар. — Әгәр ҙә һеҙ күҙ сағылтҡыс Джульетталай икәнлегегеҙҙе шәйләһәгеҙ, ә мин ҡойоп ҡуйған Ромео булһам, беләһегеҙме, балконығыҙ аҫтында тороп ниндәй серенадалар йырлар инем?

-- Ниндәй?

Диләфрүз туташ, Диләфрүз,
Бәғеремде телә бер һүҙ:
Йәр һөйөргә «ҡарт» тиһең,
«Ҡарт» тиһең, ау, «ҡарт» тиһең...

Ҡарт түгел мин, ҡарт түгел —
Дауыллана йәш күңел!
Миндә йәйен-ҡыштарын —
Туғыҙ баллы шторм!

Тын океан елдәре
Сәстәремде елгәрҙе.
Ялтыр түбәм — тулған Ай,
Мөхәббәтем — ай-һай-һай!

Ҡарама, иркәм, сәсемә,
Ҡарамасы йәшемә.
Күкрәгемә башың һал,
Йөрәгемдән ялҡын ал, ау,
Йөрәгеңә ялҡын ал!..

— Әсәкәйем!.. Үҙегеҙҙең Джульеттаны табырһығыҙ... әгәр һуң булып ҡуймаһа.

Серенадасы, уйын ҡораплын урынына ҡамтарып, түргәрәк тәпәйләне:

-- Их! Джульеттам табылһа, беләһегеҙме, аҫылҡай, ни эшләтер инем мин? Уның нәфис бармағындағы гәүһәр ҡашлы йөҙөк булыр инем мин. Күгәрһәм дә, гәүһәремде күтәреп кенә йөрөтөр инем.

-- Һеҙҙең джентельменлыҡты беләбеҙ, Йыһандар Илһамдарович!

— Баһаламайһығыҙ тик. Тубәмә гел маникюрлы сиртеүҙәр ҙә кирбестәр генә яуа...

Сәтләүектең шулай йәһәт ярылырын көтмәгәнлектән, ҡыҙ ҡапылдан ни әйтергә белмәне, мәгәр икеһе араһында күптән ҡабул ителгән ғәҙәтенсә, һуған эсенә борос төрөп биреүҙе дауам ҡылды:

-- Шуның өсөн дә бит һеҙ профессор, Сократ. Фәнебеҙҙең яҡты маяғы, күккә олғашҡан ҡаяһы. Мотал еҙнәйем әйтмешләй, йәшен уҡтары иң әүәле сағылдарға ҡағыла.

-- Их, бер көнгә генә миңә — скульптор, һеҙгә тарихсы булып ҡарарға ине, ҡәҙерле туташым Диләфрүз!

-- Быныһы төп мәсьәләгә яҡыныраҡ. — Дилбәр ирендәрен ҡыҫып етдиләнде.

-- Ниндәй төп мәсьәлә ул?

—Бында килеп инеүегеҙҙең төп маҡсатын әйтеүем.

Йыһандар Илһамдар улы, үпкә белдереп, ҡоласын йәйҙе:

-- Ниңә былай рәнйетәһегеҙ мине? Һеҙҙең һымаҡ тулышып бешкән Урал һылыуын бер күрергә теләүем ғәйепме ни? Онотмағыҙ, Диләфрүз туташ: был тәңгәлдә, — йәнә түбәһенә тыҫҡылдатып сиртте, — сәскәләрҙе дауыл йолҡоп бөтһә лә, мин дә әле йөҙ процентлы шәп егет! Бер тапҡыр ҙа никахланмаған!

-- Иң кәмендә зыярат һылыуын иҫәпкә алмағанда...

-- Әйттем бит, бер тапҡыр ҙа, тип. Паспортымды ҡарағыҙ!

-- Уның тап-таҙа икәнлегенә шигем юҡ, тик... Ғәфү итегеҙ, ҡиәфәтегеҙ бында ҡыҙ күҙләргә килгәнгә һис оҡшамай.

—Кемгә оҡшатаһығыҙ — әйтеп бөтөрөгөҙсө!

Ҡыҙҙың сая күҙ ҡарашы киршәлде:

-- «Кирбес» тип тел сисеүегеҙгә ҡарағанда, ең осоғоҙҙа ҡурғаш гер йә хәнйәр юҡмы икән, тим.

-- Тәүбә-тәүбә... Дилбәр-Диләфрүз һылыу, ниңә һеҙ миңә шул тиклем дә миһырбанһыҙ? Ҡасан ғына осрашып һөйләшһәм дә, суҡмар менән шаңҡыта һуғаһығыҙ. Ни гонаһтарым өсөн?

-- Сәтләүектәй ҡап-урталай ярмаһаң, һеҙҙең төп асылығыҙҙы аңлап ҡара! Бахырйәндәр быны белмәй һәм һеҙҙең үрмәксе ауына себендәй сырмала.

-- Афарин! Бына ни өсөн яратам, ахыры, мин һеҙҙе! Килгәнем һайын ҡабырғамды һындырып, ике аяғымды бер ҡуныҫҡа тығып, башымды ҡулыма тоттортоп ҡайтараһығыҙ. Сөнки башҡа даирәләрҙә ишетә алмағанымды һеҙҙән генә ишетәм. Диңгеҙҙәрҙе күп гиҙеүҙән мукләнеп бөткән караптай, һеҙҙең рәхимһеҙ тырнаҡтарығыҙ аҫтында таҙарынамын.

-- Ләкин мине сырмаҡлай алмаҫһығыҙ: телегеҙҙең осонан уҡ тел төбөгөҙҙө тоям. Ниңә һеҙгә — скульптор, миңә тарихсы булыу? Үҙ урыныңды белмәй,

беҙҙең ир-ат эшенә ҡыҫылаһың, тип әйтмәксеһегеҙме?

-- Тәүбә, улай тип уйлауҙан Хоҙай үҙе һаҡлаһын! Әгәр скульптор булһам, тимен, бөлтерәгән Бәндәбикә-ҡарсыҡ урынына Урал һылыуы Дилбәрҙе генә һынландырыр ҙа ҡуйыр инем, -- булыр ине замана мадоннаһы!

-- Быныһы ни була тағы?!

-- Уҫал итеп ҡарамағыҙ, аҡыллым, һылыу ҡыҙҙарға улай килешмәй. Бөлтерәгән генә түгел, күмһеп бөткән мифик зат тип тә өҫтәр инем.

-- Мифик зат?

-- Эйе, мифик зат. Сөнки туҙға яҙмаған ваҡиғалар — тарих түгел, мифҡа ҡарай, һылыуым. Тарих менән эш иткәндәр быны бик асыҡ белә.

-- Әгәр туҙға яҙылғандары ла быуат-быуат арауыҡта саң һәм көлгә әйләнһә?

-- Һис юғында ташҡа яҙғандары ҡалырга тейеш.

-- Таштар ҙа бит онтала.

-- Эйе, онтала ла ҡом була.

-- Тимәк, яҙма заты юҡ икән, тарих та юҡ, тимәксеһегеҙ?

-- Тимәк, миф хаҡында ғына һүҙ бара ала.

-- Яҙма үҙе ҡасан барлыҡҡа килгән?

-- Иң күбе бынан һигеҙ мең йыл элгәре.

-- Иң кәмендә  бынан һигеҙ мең йыл элек үк бабалар булған, тимәк.

-- Бабалар? Кем ул бабалар?

-- Башҡорттар, әлбиттә.

-- Башҡорттар? Ха-ха-ха! Төшәмдән алдығыҙмы?

-- Юҡ, Урал ҡаяларынан.

-- Быны менән нимә әйтмәксеһегеҙ?

-- Телсе ғалимдар, бөгөнгө бөтә алфавиттар бер уртаҡ сығанаҡтан — ябай һүрәт-тамғаларҙан ишәйгән, тиҙәр түгелме? Урал ҡаяларында тап ана шул тамғалар бар. Етерлек.

— Ай-яй-яй, Дилбәр-Диләфрүз туташ! Һеҙҙең юл менән барһаҡ, шанлы Мәрүән Карами ағайыбыҙ әйтмешләй, беҙҙең боронғо зат-ырыуыбыҙ ерҙәге беренсе ел тирмәнен кешелек донъяһы игендең үҙен сәсеп үҫтергәнгә тиклем үк ҡороп ҡуйған, тәгәрмәс яһамаҫы борон уҡ уның көпсәген майлар дегет етештергән, тип анһат иҫбатларға мөмкин.

-- Ә һеҙҙеңсә, ғәфү итегеҙ, хатта ыштан бауын да халыҡ ҡойма аша ҡытайҙан йә башҡа берәүҙән үтескә йә бүләккә алған буламы? — Ҡыҙҙың нәфис йөҙөнә ҡыҙыллыҡ бөркөлдө.

-- Һе! — Ҡунаҡ һис тә теләмәгән ошо форсатта араларҙың ҡырҡыулаша барыуына йәне көйөүҙән ихлас үртәлеп, буғай, куҙҙәрен йомоп, башын сайҡап уҡ ҡуйҙы. — Был донъя ҡайҙа бара? Ҡайҙа китеп юғалды был борондан уҡ *башҡортҡа хас милли әҙәп, тыйнаҡлыҡ*, Мәрүән Карами ағайыбыҙ әйтмешләй?!.

-- Һеҙҙеңсә, башҡорт әгәр башын меҫкенлеккә һалһа, минең бер сыбыҡ осо туғаным Йәүҙәт Ҡондоҙбаев әйтмешләй, үҙен төпһөҙ-тамырһыҙ ҡамғаҡ һанаһа, милли тыйнаҡлыҡ була?

-- Һеҙ, һылыуҡай, ҡасандырғы Талир Баҡишев олатайығыҙҙың, ғәфү

итегеҙ, бәҫәреп бөткән милләтселегенәме, милли сикләнгәнлегенәме бармағыҙ.

-- Аһ-аһ, ниңә бында Талир Баҡишев? Ата-бабалар шәжәрәһен тәрән тарих төпкөләнән күҙаллауҙы ҡайҙан килеп милли сикләнгәнлеккә теркәй башланығыҙ әле?

-- Тормош уны үҙе теркәгән, һылыуым.

— Тормошмо, әллә Ҡотлоев менән Хәкимуллинмы?

-- Ғәфү итегеҙ, шәхестәргә ҡағылмайыраҡ торайыҡ.

-- Баҡишевҡа ҡағылырға ярай, ә һеҙгә — юҡмы ни?

-- Баҡишев — икенсе мәсьәлә.

—Бына нисек! *Башҡорт ул,* тип кенә әйтегеҙ.

-- Күберәк дәрәжәлә мин дә башҡорт.

-- Әләйһә ниңә башҡортто бер миҙгеллек ҡамғаҡҡа һанайһығыҙ? Уның телен дә, үҙен дә бөтөрөргә тамшанаһығыҙ?

-- Һеңлем, уның үҙен бөтөрөргә йәки ауыҙындағы телен йолҡоп алырға һис кем йыйынмай, ул да бөйөк Совет иленең *совет халҡы* булып сәскә атасаҡ. Үҙенең ошо артта ҡалған, тарихи реликтҡа әйләнгән *төрки теленән* арынып, бөтәбеҙҙең яҡты киләсәге булған коммунизм йәмғиәте телендә -- Пушкиндарҙың, Толстойҙарҙың *бөйөк урыҫ телендә* һөйләшәсәк.

-- Ә донъяла тиңе булмаған «Урал батыр» эпосының теле бөйөк түгелме?

-- Бойоҡ, тип әйтер инем. Һеҙ нимә, әллә партиябыҙҙың яҡты коммунизм төҙөү Программаһын уҡымаığыҙмы? Партиябыҙ ҡушҡанды үтәмәйһегеҙме?

-- Партиябыҙ ҡушҡанға йөрәгем ҡушылғанды үтәйем.

-- Ай-һай, ҡыҙый, серек идеология! Диплом яҡлайһығыҙ бар, иҫегеҙҙән сығармағыҙ!

-- Әле генә: «Күберәк дәрәжәлә башҡортмон", -- тигәйнегеҙ, асылында күберәген кем һуң һеҙ?

Хәкимуллин көлдө:

-- Ҡыҙый-ҡыҙый, үҙең «туғаным» тиһең, ә шуны ла белмәйһең. Күпмелер процентлы башҡорт булыуым менән бергә үзбәк ҡатнаш урыҫ йәнле татармын – полный интернационал, партиябыҙҙың ышаныслы һалдаты! Ошо көндә Башҡортостанда йөҙ илле милләт йәшәгәнен, ә башҡортоң үҙ өйөндә егерме ике процент ҡына тәшкил иткәнен беләһеңме?

-- Ассорти милләтле һеҙ!

-- Күп тә үтмәҫ, һөрһөп бөткән Баҡишев ҡарт кеүектәрең дә тап минең һымаҡ ассорти милләткә әйләнеп, *бара-тора башҡорт – татарга, татарҙан – урыҫҡа йәгни монолит совет халҡына* әүерелер.

-- Ә һеҙ шуны ҡыуанып үтәйһегеҙ...

-- Партия ҡушҡанды ең һыҙғанып башҡарабыҙ. Тарихи яҡтан ҡарағанда ла был дөрөҫ: Иртыштан алып Дунайғаса автохтон булып хәҙерге урыҫ телләләрҙең бабалары – иран телләләр йәшәгән. Шуны танымай төркилеккә йәбешеп ятыу – милли сикләнгәнлек, әгәр ҙә хужыраҡ булмаһа.

-- Һеҙ «иран телле» тип тамғалаған боронғо бәғзе бер ҡәбиләләрҙең төрки телле икәнлектәрен дәлилләгән Баҡишев — милли сикләнгәнлек, ә шул төрки телләләрҙе иран телле тип инҡарлаған Ҡотлоев менән Хәкимуллин —

сикләнмәгән интернационалист буламы? Киреһенсәлер, бәлки?

— Был тәңгәлдә демагогияға һуҡлығыу төптө урынһыҙ, һеңлем. — Хистәрен ауыҙлыҡларға өлгөргән Хәкимуллин, олпат тыныслыҡ һаҡлап, теманан бил тайҙырҙы. — Баҡишевтан башҡа барса ғалимдар ҙа бер фекерҙә ныҡ тора: Уралдағы көллө иҫке ҡомартҡылар — йә боронғо иран, йә һуңғыраҡкы угрофин теллеләрҙән тороп ҡалған.

-- Билдәле булыуынса, ул иҫке ҡомартҡылар араһында яҙыуҙар табылмаған. Иран телле һәм угрофин телле икәнлектәрен кем һөйләй? Һөлдәләре йәки һөйәк төймәләре һөйләйме?

-- Шулай уҡ билдәле булыуынса, әлмисаҡтан был тирәлә төрки заттың еҫе-ҡоҫо ла булмаған.

-- Кем әйтә быны? Һеҙме?

—Эйе, беҙ. Йәғни бөгөнгө фән үҙе. Һеҙҙең Баҡишев олатайығыҙҙай, йә булмаһа Ҡондоҙбаев еҙнәйегеҙҙәй, донъяның дүрт тарафында ла башҡортлоҡ ғәләмәте күрмәйбеҙ. Һәм уның, ғәфү итегеҙ, бабаларыбыҙ беҙҙең эраға тиклемге сал замандарҙа уҡ ошо Уралда тамырланып йәшәгән дә Уралдан төрлө тарафтарға юл алған, ә ҡәбилә йәҙрәһе мәңге Уралда тороп ҡалған — бөгөнгө башҡорт халҡының нигеҙе булған, тигән уйҙырма «тәғлимәт»ен дә танымайбыҙ.

-- Ә һеҙҙекен таныйҙармы икән һуң?

-- Танымау ғына түгел, ә үҙегеҙгә мәғлүм, тарихҡа бәйле бөгөнгө ҡараштарҙың ысын фәнниҙәре тап беҙҙекенә — берҙән-бер прогрессив концепцияға ерегә.

— Ул прогрессив тигәнегеҙ регрессив булып ҡуймағайы.

Әммә ғалимлыҡ сәме менән ирлек сәме ҡуша ҡуҙғалған профессор быны әллә ишетмәне, әллә ишетмәгәнгә һалышты:

-- Бына шулай, ҡәҙерле һылыуҡайым. Олатайығыҙ «тәғлимәт»е баррикаданың теге яғында ҡалды, ул ялғанды заман үҙе хөкөм итте!

-- «Ҡара груһ монах Мендель»[46], «серек буржуаз шарлатаны Винер»ҙар[47] менән бергәме?

-- Оһо, олатайығыҙҙы кемдәр менән тиңләйһегеҙ!..

-- Ә һеҙҙәрҙе кемдәргә тиңләрҙәр икән?!

-- Бының менән ни әйтмәксеһегеҙ, һылыуым?

-- Өрмәй ҡабып, ауыҙығыҙ бешмәһен, тим.

-- Һәй әттәгенәһе! — Йыһандар Илһамдар улы шарҡылдап көлдө. — Ошондай сихри күҙҙәрҙән дә зәһәр Баҡишев ҡарт осҡондары сәсрәр, ошондай һылыу сикәләрҙә лә көйҙөргөс Баҡишев уты дөрләр икән! Афарин! Тик, һылыуым, йәш кенә башығыҙ менән кеше итәгенә усаҡ яғырға маташып, үҙ ҡуҙығыҙға үҙегеҙ бешеп ҡуймағыҙ. Һеҙҙең ише дилетанттарҙы тарих ҡаты язалай. Сер итеп кенә әйткәндә, тарих юлында муйын һындырған докторҙар, академиктар ҙа етерлек...

-- Белмәйем әле, кем муйыны һынғанлығын тарих үҙе күрһәтер... әле

---

[46] Мендель Грегор Иоганн (1822—1884) — генетика фәненә нигеҙ һалыусы.

[47]Винер Норберт (1894–1964) – кибернетика фәнен нигеҙләүсе.

әйткән Мендель менән Винер миҫалындағылай. Уларҙы ла акуланың бысҡы аҙауы сәйнәп йотҡандай ине...

-- Олатайығыҙ Мендель түгел, Винерлыҡҡа ла бик йыраҡ.

-- Үтә һауаланмағыҙ.

-- Беҙ нығ ерҙә торабыҙ. — Профессорҙың күҙҙәре һалҡын быялаланып ялтыраны. — Үҙегеҙ әйткән һалҡын ҡанлы, бысҡы аҙаулы тарих акулаһы булараҡ, аҡыллым, шуны киҫәтмәксемен: объектив хәл һәр юлы ла беҙҙең субъектив теләктәргә тап килмәй. Күпме генә сыпраҡдап ҡойроҡто ярға һуҡмаһын, йылға балыҡ ихтыярына буйһонмай — үҙ ағышында ҡала. Башҡорт тарихын ғәмәлдәгенән салыраҡ итеп күрергә теләү тенденцияһы менән дә тап шулай булды, эйе. Һәм киләсәктә лә тап шулай буласаҡ!

-- Ҡурҡытмағыҙ.

-- Ҡурҡытмайым, ә киҫәтәм. Йәп-йәш кенә башығыҙҙы буш хыялдар менән иләҫләтмәгеҙ. Һеҙҙең кеүектәр күрергә теләгән «сал Урал бөркөтө» юҡ ул, ә ярылы ҡабығында сеп-сей себеш кенә ята әлһерәп.

-- Әгәр халыҡ яңы сыҡҡан себеш йәшендә булһа, ниңә уның эпостарында донъя мифологияһының иң-иң тәүгел ҡатламдары вулканланып урғыла? Беҙҙең эраға тиклемге сал таш быуат хәлдәре ҡомарлана? Эпос берәүҙән дә үтескә йәки бүләккә алынмай, уны һәр бер халыҡ үҙе тыуҙыра, ти бит донъя фәне.

-- Дилбәр һылыу, һеҙҙең белем даирәһенең икһеҙ-сикһез киңлеге алдында тағы ла бер инабатлы баш эйәм дә артабан әрепләшеүҙән итәғәтле баш тартам! — Хәкимуллин һүҙҙе уйынға борҙо. — Әгәр белгегеҙ килһә, минең бында килеүемдең төп сәбәбе лә һеҙҙең һымаҡ эрудиттың теңкәһенә тейеү түгел, ә оло ихтирамлы баш әйеү теләге ине.

Ҡараштары бер юлы өҫтәлдә ятҡан гәзит өҫтөндә сатрашланды.

—Тимәк, миңә рәхмәт яуҙырырға индегеҙ?..

Хәкимуллиндың сикәһендә күкшелт тамыр тартышты.

-- Эйе-эйе, рәхмәтемде әйтергә лә һеҙгә ҡайһы бер изге кәңәштәр бирергә. Аптырамағыҙ, рәхмәтем шуның өсөн: әгәр ҙә ул әҫәрегеҙ гәзиттә баҫылмаһа, һеҙҙе тағы ла бер тапҡыр ошолай яҡындан тап итеү осрағы — яҡты йөҙөгөҙҙө күреү бәхете тейер инеме ни миңә, ҡарт диңгеҙ бүреһенә? Үҙегеҙҙе ҡайһылай ихтирам иткәнлегемде беләһегеҙ.

-- Бына нисек! Биреп ҡарағыҙ изге кәңәштәрегеҙҙе.

-- Беренсенән, ошондай затлы башҡайығыҙҙы затһыҙ тауарҙар менән тынҡыслап йөрөүҙән тыйылығыҙ, аҫылым. Шул дыуамал олатайығыҙҙың «башҡорт – сал бөркөт» тәғлимәтенән арынығыҙ, ул һеҙҙе яҡшыға килтермәйәсәк. Сәнғәтебеҙҙең талантлы киләсәге, ысын Урал патриоткаһы булараҡ, бик тә булмаһа, *бөгөнгө фәнде* етдиерәк өйрәнегеҙ. Юғиһә, һеҙ шундайын да һылыу, йәш әле — тигеҙ ерҙә һөрлөгөп йығылып муйын һындырыуығыҙ бар. Уйлап ҡарағыҙ: хатта вузда диплом яҡлау барьеры ла ырғып уҙылмаған... Алда күпме яулайһы ҡәлғәләр! Ә һеҙ диплом алдында уҡ хәтәр юлда тораһығыҙ.

-- Йәғни? — Ҡыҙҙың төҫө ағарҙы.

-- Йәғни, һеҙ диплом эше итеп алған Бәндәбикә ҡомартҡыһын беҙҙең эра баштарына уҡ ҡаратыу — шәхси һәләкәтегеҙҙең башы ғына буласаҡ. Беҙҙең

ғилми экспедиция, беләһегеҙ, ул убаны ҡаҙып-тикшереп ҡараны ла ундағы кәшәнә ҡалдыҡтарын XIV—XVI быуаттар ҡомартҡыһы тигән ҡәтғи һөҙөмтәгә килде, ә был иһә ғилми йәмәғәтселек тарафынан бер ауыҙ һүҙһеҙ танылды.

-- Улайһа ниңә Ил Инәһе Бәндәбикә бронза дәүере йолаһы менән ерләнгән? Үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм Ҡарасуҡ һәм Окунев культураларының мәйетте таш ҡумтаға һалыу йолаһы...

-- Эйе, таш ҡумта. Әммә уны бронза дәүер ҡумтаһы тип раҫларға ни хаҡығыҙ бар?

-- Ислам динле XIV быуатҡа ул тап килмәй.

Профессор ауыҙын йырып көлдө:

-- Яңы быуын фанатигыбыҙ Йәүҙәт Ҡондоҙбаев мырҙа «асыш»ымы?..

-- Булһын да, ти. Әммә төп һорауға яуап бирегеҙ.

Хәкимуллин ялтасының һарғылт сәтләүек төҫө кинәт кенә алһыуланып, маңлай тиреһе йыйырылып, татар бабаларының ҡыҙыл ситек ҡуңысына оҡшап ҡалды.

-- Әгәр белгегеҙ килһә, ул таш ҡумта урта быуат кәшәнәһенең кирбес түшәлгән иҙәне аҫтына һалынған, тимәк шул дәүерҙә ерләнгән.

-- Ә бинаның иҙәне менән диуары — икеһе ике дәүерҙә һалынған булһа?! Әйтәйек, һуңыраҡ дәүер кәшәнәһе бик боронғо емерек бинаның иҙәне өҫтөнә тергеҙеп төҙөлһә?.. Радиокорбон йәки башҡа прогрессив ысул менән тикшереү үткәрҙегеҙме?.. Киң мәғлүм булыуынса, һеҙҙең шанлы экспедиция ундай мәшәҡәтле ысулдар менән ваҡланып тормаған — күҙәмәләп эш иткән.

-- Фәндә киң таралып, борондан уҡ үҙ-үҙен ныҡ аҡлаған күҙәмә ул.

-- Ә мин әйткән контрдәлилдәрҙе ҡайҙа ҡуяһығыҙ?

-- Нимә-нимә?! — Профессор тауышында йәшертен хәүеф сатҡыланды. — Ҡарағыҙ уны, ҡыҙыҡай, контрдәлил тигәнегеҙ контрреволюция булып ҡуймағайы! — Ҡабат тынис төҫ алып, бармаҡ янап хахылдап көлөүе әллә ҡайһылай яһалма — шаяртыуын күрһәтергә көсәнеү һымаҡ тойолдо. Ҡыҙ көлмәне.

-- Ярлыҡ йәбештермәксеһегеҙ?..

-- Уныһын һеҙ үҙегеҙ теләп алаһығыҙ, һылыуҡай. Тауыҡ салыныр бысағын үҙе тырнап сығарған, тигәндәй... -- Тере ҡуҙға яланаяҡ баҫҡандай, йәһәт-йәһат ишекле-түрле йөрөндө. Тәкәбберҙең ҡаршыһына туҡталып, һәр һүҙен ергә ҡаҙыҡ итеп ҡаҡҡандай, йоҙроҡлап төйҙө һауаны. – Белегеҙ: ун беренсе быуатҡа тиклем был тупраҡта ғөмүмән төрки заттың еҫе-ҡоҫо ла булмаған, төркиҙәр бында ун беренсе быуаттан һуң ғына килгән. Һеҙгә быны күпме тылҡырға кәрәк?

-- Ха-ха-ха!

— Көлмәгеҙ, иларға тура килмәгәйе!

Ҡыҙ ең осо менән күҙҙәрен һөрттө:

—Ысынлап та, көлөргәме, иларғамы был тәңгәлдә?.. Ун беренсе быуатҡаса Уралда төркиҙәрҙең еҫе-ҡоҫо ла булмаған тип иҫәпләгәс, тап ошо сал Уралда икенсе быуатта уҡ халыҡ булып донъя көткән, тарихтарға кереп ҡалған төрки телле һундарҙы, йәғни башҡорт бабаларын, ҡайҙа ҡуяһығыҙ? Һуңғараҡ, 375 йылда бөтә Көнсығыш Европаны үҙенә буйһондорған, ә 441 йылда Көнбайыш

Европаны ла биләп алған Баламбер-хан менән Атилла-хандың да ошо үҙебеҙҙең сал Уралдан ҡубынғанлығын әллә оноттоғоҙмы? Кемгә яраҡлашаһығыҙ, ниңә ярлыҡлашаһығыҙ?!

Хәкимуллин тыңларға теләмәне, йәнә ауыҙын йырҙы:

-- *Әл-лә-лә-лә-лә*, кемде күрәм, ҡоҙаҡайың Ҡондоҙбаев төшөндә илереп уйлап сығарған хоҙайбикәбеҙ *Арта-би сура Ана ҡото* үҙеме әллә? Иҫ киткес! Эс киткес! Ниндәй сихри көс тарта бында мине? Вәт әкәмәт: дыуамал тай типкәне һайын тояғына яҡыныраҡ тартылам!

-- Тай тояғы маңлайға типмәһен өсөн, яҡыныраҡ һырлығырға кәрәклеген яҡшы беләһегеҙ шул.

-- Беләм, һылыуҡай, беләм! — Хәкимуллин көсәнеп хахылданы. — Шуны белеүҙән айырмаһын Аллаһы Тәғәлә! Бер һүҙ менән әйткәндә, наянбаш байталҡайым, мин бында иң изге ниәт менән килдем һәм иң изге ниәт менән китәмен.— Ишекте тибеп асты. — Мәңге ошолай яугир булып, сәнскеле роза һымаҡ ҡалығыҙ! Мәгәр минең ҡулды сәнстертмәгеҙ!

— Рәхмәт төшкөрө! Икенсе юлы бейәләй кейеп килегеҙ, хушығыҙ! — Ҡыҙый сөйҙәге гитараның сымдарын дерелдәтеп, подвалды шаңғыратып көлдө, әммә уның күҙҙәре уйсан ине. И илаһым, бына ҡайһындай кешегә бит *ил йомошо* терәлә! Бар тип белә, ти, Хәкимуллин һинең Ил Инәһе Бәндәбикәңде лә Ерәнсә-сәсәнеңде — уның өсөн икеһе тиң ислам дине ҡалдығы. Уныҡы ғына — һүҙ, хәҡиҡәт, ә башҡалар гел хаҡһыҙ. Хәҡиҡәткә монополия булып сыға түгелме?.. Әгәр ҙә шулай икән, бында килеп тынсыу подвалда сәғәт буйы аяҡ өҫтө фәлсәфә ҡорорға бысҡы аҙаулы акуланы ниндәй сәбәп этәрҙе? Газеталағы шул фельетон остоғомо? Әллә ҡыҙға билдәһеҙ ҡалған етдиерәк сәбәптәр хөкөм һөрәме?.. Бер юлы ғәмләнерлек тә, хәтәрлекле лә тойғо биләне ҡыҙҙы. Тик шунда уҡ, башын ғорур турайтып, оторо хәлдән арынды, зиһенен тәртипкә һалды — олатаһының дыуамаллығы ҡайнай ине ҡанында.

Дөбөр-шатор күмәк аяҡ тауыштары уны тәүҙә тертләргә, аҙаҡ һирпелеп бағырға мәжбүр итте:

—Ас ишек, Бәндәбикә! Ил Инәһе өйҙәме, ҡайыш ҡамсыһы сөйҙәме?

Бәрелеп тә һуғылып, был юлы бер төркөм университет егеттәре эркелде — филологтар тоҡомо. Һомғол буйлы, оҙонса аҡ һылыу йөҙлө Әсҡәр Ҡотлоевтан башҡа, уға тағылып йөрөмәле йәнә бер бәндәне белә: бүкәндәй ҡыҫҡа ла, тос та кәүҙәле, кешене үтә тишеп ҡараусан ҡара төймә күҙле, Әсҡәрҙән бер-ике йәшкә өлкәнерәк кесе ғилми хеҙмәткәр Рәшит Төхфәт улы Алмаҡаев. Иҙәнгә һөйрәлтә яҙып, олпат ғалимдарса «быуаҙ» портфель тотҡан. Икеһе лә бөхтә кейемле — үҙҙәренә эйәреп ингән бәғзе студент халҡынан ябай һоро турғай араһындағы йөнө йылтыр сыйырсыҡтар шикелле айырыла. Йөҙҙәре саф һалҡындан алһыуланған.

-- Әһә, өйҙә икән солан хужабикәһе!

-- Салон, тиң, һантый!

-- Һиңә, Рәшит Алмаҡай, Солан ни ҙә салон ни – икеһе лә бер ҡалып!

-- Ә һин, ҡотһоҙ Ҡотлоев, телеңде күп сарлама – теленеп бөтөр!

-- Бөттө-бөттө, ыҙғышмағыҙ, егеттәр! – тине салон эйәһе.

Ярышып тигәндәй, икеһе бер юлы гәзит һонғайны, ҡыҙ өҫтәлгә ымланы:

—Туй үткәс, дөмбөр ҡаҡмағыҙ, азаматтар. Ана ята.

— Ах әттәгенәһе! — Әскәр бүләген тәҙрә төбөнә ырғытты, Рәшит, бик бөхтә бөкләп кенә, портфеленә һеңдерҙе. Пальтоларын һалған ыңғайҙа Әскәр сөйҙәге ал таҫмалы гитараның ҡылдарына бармаҡ сиртеп һыҡтандырҙы:

-- Бынығы ни ғәләмәт: килгән һайын, сүместәй эленеп тора. Кем йөрәк тибрәткесе?

-- Донъяла һеҙ генәме ни — уфтаныусыларым етерлек, — тине йөҙөнә алһыулыҡ һирпелгән ҡыҙ, тештәрен йылтыратып.

-- Аңлашыла. Һумалалай сөм-ҡара мыйыҡты яҙа-йоҙа күреп ҡалғайным төнә! — Рәшит бармаҡ янаны.

-- Бәй, улайһа мин дә һаҡал-мыйыҡ ебәрәм! – тине Әскәр.

-- Һиңә һаҡал-мыйыҡ түгел, ә башҡа бәрәкәт үҫтерергә бик ваҡыт, Әскәрулла-мулла. Шулай бит, Диләфрүз туташ?

-- Саҡмател! Ултырығыҙ, һиндостан сәйе менән һыйлайын үҙегеҙҙе.

—Сәй эскән бар ҙа ул... — тип мыңғырланы Әскәр.

— Сеү! Мыйыҡһыҙҙарға мәй харам.

—Улайһа, — егет ҡулында затлы авторучка ялт итте, — мин, ҡасандыр мыйыҡ үҫтергәнсе, мыйыҡһыҙ осор автографымды һалып ҡалдырайым әле Диләфрүз туташҡа иҫтәлеккә. — Ташлаған гәзитен алып, нимәлер сыйғысланы ла китап кәштәһенә ырғытты. — Бер табып уҡырһығыҙ әле. Белеп тороғоҙ: донъяла Әскәр Ҡотлоев тигән берҙән-бер, уникум йәшәй бөгөн; ҡәҙерен белеп ҡалығыҙ: киләсәктә ҡултамғаһы алтындан ҡиммәт тартасаҡ.

—Алтын ҡауырыйҙан яҙған өсөнме? — Рәшит сағыу буталланған яҙыу ҡоралына ымланы.

— Абау! Мотал еҙнәйем ҡулында ла ялҡылдай ине тап ошондай алтын зат, — тине Дилбәр.

-- Шау алтын булмаһа ла, алтын янында ятып сыҡҡан нәмәкәй. Тик уныһы мөһим түгел. Иң мөһиме — минең йөрәгем янында бер көн ҡунды ул. Шуны заманабыҙҙың эпик әҫәрен тыуҙырыусыға — кирбес атып Хәкимуллиндың бөҙрә-көҙрә сәстәрен туҙҙыртыусыға бүләк итәм.

-- Китсе... уңайһыҙ бит... — Ҡапыл ҡолағы шаулап, башы әйләнде ҡыҙҙың. Ә тегеһе, ике ҡуллап этәреп, бүләген ҡыҙҙың нәфис усына йомдортто:

-- Бөттө, артыҡ ләпелдәмәйбеҙ! Бындайҙы башҡа бер ҡайҙан да, күндөҙҙәрен сыраҡ яғып эҙләһәгеҙ ҙә, таба алмайһығыҙ. Ҡулығыҙҙа, Аркадий Райкин әйтмешләй, шау-«диффисит» тауарҙыр! Үҙегеҙҙе генә уңайһыҙ хәлдә ҡалдырмаҫ өсөн, Алмаҡаев иптәшкә лә дуҫлыҡ символы итеп тапшырам. — Мә, заманабыҙҙың башҡорт белинскийының тоғро шәкерте! -- Рәшиткә лә тап шундай уҡ, тик алтын урынына тутыҡмағыс бутал ялатылған аҫыл мал тотторолдо.

— Табаһың бит, әй! Саркисян тауарымы? — Алмаҡаев яҙыу ҡоралын усында әйләндергеләп, ентекләп ҡыҙыҡһынды. — Шәп, шәп!

—Тссс! Ерле юҡҡа Асам-Кисәмдең исемен телгә алма — туба!

-- Табу тип әйт!

-- Эш унда түгел: ҡайҙан тапҡанды һин һорама, мин әйтмәйем. Беҙҙең эралағы иң яҡшы моделле автомат. Быны мин әйтмәнем, ә яҙыусы Мотал Шаһибәрәков әйтте.

Ике бите уттай яныуын ҡалай итеп һүрелтергә белмәгән ҡыҙ ыуаланды:

-- Ҡунаҡ ашы — ҡара-ҡаршы, тигәндәй, үҙем нимә бүләк итәйем икән?

-- Әгәр ҙә бик теләһәгеҙ, бер генә үпәс итегеҙ ҙә, йомарлаҡ сей балсыҡты әүәләп, танауымдың кирбес ҙурлыҡ портретын әтмәләгеҙ.

-- Һуңғыһын булдырырбыҙ ҙа. — Устары менән ике сикәһен ышҡып, ҡыҙ кинәнеп көлдө...

-- Шәп автомат шул, әй, беҙгә лә кәрәк ине! — тине был икәүҙең артынса уҡ инеп тулған башҡа егеттәр ҙә, Алмаҡаевҡа тейгән бүләкте ҡулдан-ҡулға йөрөтөп.

-- Шым, адресын һорамағыҙ. Аллаһы Тәғәлә бойорһа, кеҫә төбөгөҙ мулланһа, ҡулай ғына суммаға ялтырырағын да табышып бирербеҙ — почти шул уҡ дәүләт хаҡы, ләкин затлы: таныш-белештәр арҡылы!..

-- Һәй был таныш-белештәрҙе! — тине Рәшит. — Оҙаҡламай ботинка бауын да салғый аҫтынан юлларға ҡала инде. Коммунизмға яҡынлап уҡ барғанда...

-- Улай тимә, коллега: коммунизм йәннәтендә лә салғый аҫтынан сыҡҡан тауарҙың бәҫе ҡалын ҡаласаҡ. — Әскәр ауыҙын Дилбәр яғынан усы менән кәртәләп, тауышын аҡрынайтты. — Никахһыҙ урлашып һөйгәндәй... — Егеттәрҙең шарҡылдап көлөүенә һис иғтибар итмәҫтән, ҡулын алып, инде ҡысҡырып дауамланы. — Һәй замана, замана... Әсәйем бер көн варенье банкыһына яба торған ҡалай ҡапҡасты ҡаланың алтмыш саҡрымдағы арғы осона барып, таныш-белештәр аша инәлеп эләктергән. «Үҙебеҙҙең ҡаршылағы хужалыҡ тауарҙары магазинында тулып ята лаһа, ниңә шунан ғына инеп алманың?» — тип ҡыҙҙыра башлағайны профессор атайым, «Ҡапҡасын таныш аша алып япҡан банка вареньеһының тәме ниндәй ҙә урам аша магазиндан алғандыҡы ҡайһылай?! Һин, ҡарт шайтан, ошо йәшеңә етеп, шуны ла айырмайһың!» — тип, әсәй ҡарсыҡ атай ҡарттың ауыҙын «шап!» яптырҙы ла ҡуйҙы бит, әй... Әйткәндәй, таныш-белеш тигәндән, быйыл мин шул алтын юлаҡтан нисек оҫта файҙаланғанды беләһегеҙме әле?

-- Нисек?

-- Улайһа, — мут күҙ уйнатты Әскәр, — ауыҙығыҙҙы йомоғоҙ ҙа тәжрибәле ағайығыҙҙы ҡолаҡ ҡарпайтып тыңлағыҙ — кәрәге тейеп ҡуйыр. Бына нисек булды ул... Диплом алды эшемде ҡайһылай үҙ ваҡытында өлгөртөргә баш ватып, сәстәремде йолҡоп өйҙә ултыра инем шулай, телефон шылтыраны. Ҡайһылыр ки Баллыбауырһаҡов иптәш өндәшә: Ҡазандан килгән театрға билет алып бирмәҫменме икән, йәнәһе. Тауышы шундай татлы — йәнгә үтеп инә бит, әй. Исемен хәтерләмәһәм дә, берәй таныштыр әле, мин әйтәм, таныш-белеште ситкә тибәреү -- гонаһ. Яңыраҡ ҡына ҡайһылыр танышыбыҙ зәңгәр «Волга»быҙға ҡыҙыл башлы тормоз тупалсағы табышып бирешеүе иҫемдә. Моғайын, шул Баллыбауырһаҡов туғандыр әле, мин әйтәм, ҡунаҡ ашы — ҡара-ҡаршы икәнлекте онотмаған! Ә бәлки... бәлки... шул Баллыбауырһаҡов минең үңәскә гер

булып баҫҡан сонтор ваҡытты ла оҙонайта алыр?.. Ҡуйын дәфтәремдән кәрәкле номерҙы соҡсоноп, үҙем белгән Алымһаҡовҡа шылтыраттым: теге көндә танышҡан яңы йән киҫәккәйең театр янында һыра һата ине буғай, уның да үҙенең ышаныслы йән киҫәктәре барҙыр әле, йәнәһе. Алымһаҡов күҙ асып йомғансы икенсе телефондан йән киҫәккәйенә шылтыратты һәм миңә: «Эштәр бешә, театр һинеке, ҡарт!»—тине. Шул арала мин тағы теге татлы телле Бауырһаҡовты сым буйынан юллап табып, моратына ирешәсәген әшкәртеп, телен төптән көрмәп алдым, үҙ зарымды еткерҙем: диплом алды эшем яна — дефицит ваҡытты табышып-оҙайтышып бир! «Шалопай, бот күтәреп яттыңмы?.. — тип гөрөлдәне трубка. — Ярар, беҙҙән ҡалмаҫ, ышаныслы танышым бар минең дә!» Театр билеты йүнләүсемә рәхмәт әйтеп шылтыратып, трубканы һалырға ғына иткәндә, сымдың теге осондағы Алымһаҡовтың тыны ҡурылды, иламһырап өндәшә һалды: «Әйткәндәй, таныш гипнотизерың юҡмы һинең? Бауырға таш ултырҙы бит, әй, ә врачтар, йөҙҙәре ҡара булғыры, тел осонан коньяк тәмен тамам оноттортмай тороп, дауаларга теләмәй. Ә гипнотизерҙар, таныштарҙың әйтеүенсә, теш араһына ярып ингән хәләл ризыҡтың тәменә бәйләнеп бармай...» Ғәжәпкә ҡаршы, минең таныш ғипнотизерым бар булып сыҡты, ул шунда уҡ танышымдың таш ултырған ҡәҙерле бауырын арбарға ризалыҡ бирҙе, ләкин шунда уҡ, өҫтәп, филармонияның малайҙар хорына юл аса алмаҫһыңмы икән, улым тыумыштан иҫ китмәле музыкальный, тип үтенде. Мин Өлгөрбаев ағайым менән элемтәне булдырҙым, ул үҙенең апаһына өндәште, ә апаһы — танышының филармонияла балалар хорында йыйыштырыусы булып эшләгән бикәсенә. Ярты сәғәт үткәндерме-юҡмы, йыйыштырыусы ханым да гипнотизерҙы баш директор менән осраштырып таныштырыуҙы үҙ өҫтөнә алды. Бының өсөн Өлгөрбаевҡа рәхмәт әйтергә лә өлгәрмәнем, ул миңә тағы өҫтәп, бисәһенең нервыларын төҙәтә торған санаторийға путевка кәрәк ине бит әле, тип саҡма сағып өлгөрҙө. Был мәсьәлә, ҡыйынлыҡ менән булһа ла, хәйерле сәғәттә сиселде: мин Үлмәҫбаевҡа шылтыраттым, Үлмәҫбаев — Янмаҫбаевҡа. Янмаҫбаев — Батмаҫбаевҡа, ә унынһы — тап нервыны баҫа торған путевканың өҫтөндә баҫып ултырған Аумаҫбаев-танышҡа. Майлаған һымаҡ зыр-әйләнде-китте тәгәрмәс. Дөрөҫ, бының өсөн миңә шунда уҡ Үлмәҫбаевҡа — «Ағиҙел» электр ҡырынғысы, Янмаҫбаевҡа — ҡан баҫымын түбәнәйтеүсе импорт дарыу, Батмаҫбаевҡа — әфлисундар табышып бирешергә тура килде. Әфлисундар мәсьәләһе хәл ителеп бөттө генә тигәндә, әфлисун ятҡан магазин мөдире кинәт кенә тауышын аҡрынайтмаһынмы: «Яҡшы булыр ине, әй, әгәр ҙә бер шалопай студенттың үҙ ваҡытына өлгөрмәгән диплом алды эшенең өлгөрөү ваҡытын календарь биттәренән аҙ ғына сигертеп, сонтор ваҡытты оҙонайтыу сараһын да эҙләп тапһаҡ», — тине. Мин башты ҡашып алдым, тап үҙемдең үңәстән алған зар бит был, минең һымаҡтар донъяла бар икән әле, тип ҡыуандым. Ҡайҙалырғы үҙем һымаҡҡа теләктәшлек хисе менән тоҡанып, шунда уҡ әфлисун маһирын профессор атайым исеменән мәғрүр Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллин менән тоташтырҙым, ә ул — әфлисун эйәһен вуздың деканат секретарына ялғаны. Йә хоҙай, таныш-белештәр сылбыры осона сыҡтым, инде үҙем тураһында ла белешеп ҡарарға ваҡыт тип уйланып ултырғанда, деканаттағы миңә үтә яҡын таныш секретарь ҡыҙ телефон

шылтырата: «Яңы итальян итектәремде күрергә кил, шалопай!» Аптырап ҡалдым: «Ысынмы, һин уны ҡайҙан эләктерҙең?» Ҡыҙый ғорур ярҙыра: «Һинең һымаҡ таныш-белешһеҙ түгел мин! Диплом алды эшенә һинең һымаҡ уҡ төкөрөп ҡараған ниндәйҙер бер шалопай аҙашыңдың танышының таныштары арҡыры килеп ҡапты!» — тине. Туҡта, мин әйтәм, ниндәй аҙаш тураһында лыҡылдайһың? «Ниндәй булһын — тулыһынса һинең копияң инде: Ҡотлоев Әскәр Йәмил улы тигән бәндә, хатта һин икән тип торам»... Иҫемде лә йыйырға өлгөрмәнем, минән театр билеттары ҡайырттырған Баллыбауырһаҡов танышым шылтыратып шаҡ ҡатырҙы: «Үтенесең үтәлде: ҡыуан, шалопай, диплом алды эшеңдең ваҡытын оҙайттырҙым... деканатығыҙҙың секретарына яңы итальян итектәре кейҙереп! Йәнә бер үтенес...» -- дауамын тыңлап торманым. Бына шулай, туғандар: күпме тырышлыҡтар һалып, үҙем аша үҙемә ярҙам иттерткәнмен булып сыҡты ла ҡуйҙы... Дефицитлы заман бит: һәр кемдең үҙ дефициты — үҙенең ҡулында, тимәк...— Әскәр маңлайын һөрттө. — Ярай, оҙаҡ ултырып киттек, хөрмәтле әфәнделәр. Ҡайҙа, эсерһәгеҙ эсерегеҙ ҙә шул һиндостан сәйегеҙҙе... Юҡһа, әсәйемдең кисәге һыйынан һуң, бер ҙә баш уңалғаны юҡ — *кирбес төшкән кеүек* шаңҡып тик тора, — тине.

-- Ай-һай, ауыҙыңдан Саркисян мәйе аңҡый! — Дилбәр ситкә боролдо. Ҡапыл иҫенә килеп, электр плитәһендәге сәйгүнен йәһәтләне.

-- Асам-Кисәмде кисә генә ысынлап та аҫтыҡ-киҫтек һәм тунаныҡ — кисә бушҡа уҙманы. Абуталип-Буталып килеп сыҡмаһа, бөткәйне, хәмер күленә батҡайны баш.

-- Абуталип? Ҡайҙан ел ташланы уны, һыра дөкәне алдында бутала ине ләһә? — Баш сайҡаны Рәшит. Сәй яһап өлгөрткән хужабикә эреле-ваҡлы соҡортайҙарҙы тотторҙо ҡунаҡтарға. Әскәр ауыҙын бешерә-бешерә һемерҙе:

-- Ну, Дилбәр туташ, тикмәгә памфлет яҙмайһығыҙ — иллә уҫал икәнһегеҙ: йотҡан берен өрөп ҡабырға кәрәк! — Рәшиткә боролоп аңлатты. — Сиҙәмский Абуталип-Буталыптың иң ҡиммәтле сифаттарының тап береһе шунда ла шул: һинең менән бергә юлланмай, ә һин барған табындың иң ҡыҙған мәлендә ултырҙаш булып сыға... Йә ярай, ул бында ла өҫтәл аҫтынан ҡурпып сыҡмаҫы элгәре эргәгеҙҙән таяйым.

-- Тағы берҙе яһайым?

«Тағы бер»ҙән баш тартырға тура килер... Әйткәндәй, нимә тип атала ине әле һеҙҙең мөхтәрәм диплом эше?

-- «Ядкәр...» — Ҡыҙ тауышы ниңәлер эстән ҡалтыранып, йөрәген һыҙып сыҡты.

-- «Ядкәр» түгел -- «Йәдкәр» тип төҙәтегеҙ! – тине Рәшит.

-- Туҡта, ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған, тигәндәй, ҡыҫылмайыраҡ тор әле һин, Алмаҡай! -- Әскәр себен ҡыуғандай ҡул һелтәне лә Дилбәргә ҡараны. -- Тимәк, быуындарға аманат булырҙай архитектура һәйкәле?

-- Улай уҡ булмаһа ла... Боронғо менән бөгөнгөнө бергә тоташтырыусы, киләсәккә лә ялғаусы иҫтәлекле комплекс ул, минеңсә. Хәтер аманаты...

-- «Күпере» тип әйтегеҙ, — тип төҙәтте Рәшит.

-- Маладис! Әммә сүлмәгең һиҙә лә һуң, Алмаҡай! Ошондай күпер

Дилбәр туташ йөрәгенә лә һалынһын ине мәгәр!

-- Бынные ни тигән һүҙ тағы!.. — Ҡыҙҙың зиһене таралды. — Тағы сәй яһайыммы?

-- Стоп! Тағылары кәрәкмәй. Инде Алмаҡаевҡа ла яуап бирергә кәрәк. Ә беләһегеҙме, ҡәҙерле Дилбәр-Диләфрүз, телегеҙҙән алтындай тамған, бәғзеләр төҙәтергә тырышҡан шуп «ядкәр» һүҙенең нисек килеп сығышын?

-- Һүҙлектәрҙә фарсы һүҙе, тип бирелә.

-- Ә ниңә һуң шул уҡ тамыр — «ятлау» һүҙе башҡорттоҡо тип әйтелә?

-- Уныһын һеҙ, филологтар, асыҡларға тейештер.

-- Һин, Әскәр, ҡәрендәштең башын ҡатырма. — Рәшит ололарса олпат өндәште. — Былай аңлатырға кәрәк: беҙ, филологтар, берәй һүҙҙең этимологияһын белмәһәк, ул — ғәрәптән йә фарсынан ингән һүҙ, тип һыуҙан ҡоро сығабыҙ ҙа ҡуябыҙ. Бер фән кандидаты миңә хатта «әсәй» һүҙенең дә ғәрәптән килеп ингәнлеген иҫбатлап маташты...

-- Аяныс... Ниңә беҙҙә этимологик һүҙлектәр юҡ?

-- Этимология фәне үҙе бармы беҙҙә, тип һорағыҙ, туташҡайым...

-- Ә ниңә булдырмаҫҡа? Итексе килеп, билмән бешерел биргәнде көтәһегеҙме?

-- Көтмәйбеҙ, — тине Әскәр. — Рәшит дуҫ яҙараҡ һуҡты: беҙҙә этимологияһын да, башҡаһын да үҙ эсенә алған фән моронлап килә — *тәүтел белеме*. Тик ул сабый бала әлегә ваннала — йыуынты һыу эсендә «сәп-сәп» итә...

-- Йыуынты һыу менән ҡуша сығарып түкмәҫтәрме?

-- Түгеүҙәре лә ихтимал, — тине, һимеҙ портфелен усмаҡлап, Рәшит.

-- Юҡ, иптәш, был юлы яҙа тейҙең! — Әскәр ауазы зыңланы. — Дөрөҫ, ул сабыйҙың тауышы әсе — ҡайһы бер абруйлыларҙың ҡолағын яра. Ләкин донъяла беҙҙең кеүек әрһеҙҙәр ҙә бар бит әле.

-- Ярай ҙа ул, әрләнеп ҡалмаһағыҙ.

-- Бына күрерһегеҙ: тәүтел белеменең нигеҙҙәрен һеҙҙең, Алла бойороп, тыуасаҡ ғәзиз балаларығыҙ мәктәптәрҙә уҡыясаҡ, ә ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ хаҡында әйтеп тә тормайым... Тәүтел, бөгөнгө грамматика һәм арифметика кеүек, элементар белемгә әйләнәсәк, ә донъяның теләгән бер сит телдәрен өйрәнеүҙә нигеҙ булып ятасаҡ.

-- Һе! — Рәшит сәмле йылмайҙы. — Бер хөрмәтле ғалимыбыҙ тап шул тәүтел тураһында: «Әгәр мин белмәйем икән, тимәк, ундай белем донъяла юҡ!» — тип тә ысҡындырҙы бит. Маһир белгестәр иҫәбендә йөрөй ул ағайыбыҙ.

-- Дөйә ҡошо ла, бүрене күрмәйем тип, башын ҡомға йәшергән...

-- Яңылышаһың, хөрмәтлем. Һинең юл сатлығыңда, Диләфрүз ҡәрендәш әйтмешләй, бысҡы аҙаулы акулалар һағалай!

-- Их, күбебеҙгә акуланың сифаттары етешмәй! — тине Дилбәр.

-- Тфү-тфү, тәүбә ҡыл!

-- Ниңә, кемдән кәм ул: бысҡы аҙауын һис кемдән дә йәшермәй, ғүмере буйы бер иле лә сигенмәй — һөжүм итеп көн күрә.

-- Шуға ла ул — акула. Ҡалғандары — балыҡтар, ауыҙҙары йомоҡтар.-- Әскәр көлдө.

-- Кемдеке — йомоҡ, ә кемдең һәр һүҙе — уҡ!

-- Маладис, бына был — Бәндәбикә!

-- Ситтән тороп батырайыу еңел ул. — Алмаҡаев Дилбәргә һынап ҡараны. — Өҫтәүенә, гүзәл енес эйәһе — ниңә уға булмаҫҡа Бәндәбикә.

-- Бәй, һеҙ ҙә булып ҡарағыҙ Ерәнсә-сәсән! Ниңә, тим, кәпәс кейеп йөрөгән бәғзеләргә лә, фәнни тигән хәҡиҡәтте шаршау артында ғына яҡлауҙан уҙып, ут һыҙығына сыҡмаҫҡа? Мәҫәлән, бына һеҙгә — фәндең йәш тоҡҡаларына.

-- Тоҡондарына, тип төҙәтеү урынлы булыр, ха-ха-ха! — Әскәр кинәнде. — Тыңлап ҡарағыҙ әле, егеттәр: ҡайһындай ҡыҙыҡ яңғырай — фәндең йәш тоҡондары, ха-ха-ха!

-- Кефөр һөйләйһең! — Алмаҡаев ҡәнәғәтһеҙлек белдерҙе. – Яңы килгән *беренсе* Вилор Иҫәрғәпович ишетеп ҡалһа...

-- Ниңә, шул ысын түгелме ни? Һин үҙең дә бит, Алмаҡай, Хәкимуллин әтмәләгән, остазың Ғаяс Хөсни шуға ҡушҡуллап йәбешкән *концепцияның* тоҡоно. Уның яһалма икәнлеген дә беләһең, Диләфрүз туташ әйтмешләй, шаршау артында ғына фәнни хәҡиҡәтте лә яҡлашаһың, әммә ил алдында ауыҙ асырға тотлоғаһың.

-- Көнө был түгел.

-- Әһә, таныныңмы? — Әскәр ҡыҙға бороллдо. — Бына шулай ул, Дилбәр-Диләфрүз туташ, беҙҙең әхүәлдәр. Үткән быуаттың бер йылъяҙмасыһы әйтмешләй, «беҙҙең бөйөк Лихтенштейн кенәзлегендәге донъя хәлдәре». Әгәр Аллаһы Тәғәлә насип итһә, алдыңдағы Алмаҡаев йөҙөндә беҙ алмалай алҡынып алға тәгәрләгән ғәҙәти ғилми карьераны күрербеҙ: аспирант саҡта көллө ғилми мәктәптәргә лә яраҡлашыу, фән дәрәжәһе яҡлағанда алтын уҙәктән барыу (шунһыҙ диссертацияны үткәреп булмаҫ, ти); фән кандидаты булып алғас, «көслөләр» һәм «көсһөҙҙәр» араһында уңлы-һуллы тайшаныу — дөйөм танылған концепция акулаларының ҡанаты аҫтына һырлығыу (шунһыҙ фән докторы дәрәжәһенә диссертация яҡлағанда аяҡ салыуҙары бик мөмкин, ти); фән докторы дәрәжәһенә ирешкәс, ҡалған ғүмерҙе тыныс ҡына әҙер ем сүпләп үткәреү — фәндәге һыуҙы бер һауыттан икенсеһенә бушатыу менән шөғөлләнеү (сөнки бөтә докторҙарға ла Академияла урын етмәй, ә яҡланған докторлыҡты ҡул ҡаушарып йоҡлағанда ла һис кем һинән тартып алмаҫ, ти). Тимәк, яңы асыштар яһамаҡҡа ынтылыу — былай ҙа ҡаҡшаған нервыларҙы бөтөрөү, докторлыҡта кинәнеп кенә йәшәүеңде ҡыҫҡартыу... Бына ни өсөн мин Рәшит Алмаҡай дуҫтың да ҡасан кемгә ни әйтерен алдан уҡ белеп торам — үпкәләштән булмаһын. Һәм ул, әлбиттә, ҡайһылай ғына өгөтләп-тәрбиәләһәк тә, башҡорт белинскийы Ғаяс Хөснизең тоғро ҡоло -- Ҡотлоев һәм Хәкимуллин концепцияһының тоҡоно булып ҡаласаҡ.

-- Булмай ҡара. — Алмаҡаев бер ҙә йәберһенмәне. – Юкагирҙар сей балыҡ ашағандай, тоҙ һипмәй ҙә сәйнәп йотасаҡ.

--- Йотһа ярай ҙа ул – төкөрөп ташламаһа! -- Әскәр шарҡылдап көлдө.

-- Һәр хәлдә, совет фәне тарафынан ҡабул ҡылынған һәм партиябыҙ раҫлаған дөйөм концепция был.

-- Тимәк, башҡорт нәсәбе XI—XVI быуаттарҙа ғына данлы Бәләбәй

ҡалҡыулығындағы ҡыҙыл ләмдән әүмәләнеп, Уралға тәгәрләгән, тиһең инде?

-- Шулай булып сыға.

-- Ун беренсе быуатта уларҙы тыуҙырған «ләм» массаһы ниндәй телдә һәйләшкән? — тип ҡармаҡ һалды Дилбәр. -- «Концепция» тигәндән, әллә бөтөнләй һөйләшә лә белмәгәндәрме бабалар-бахырсыҡтар?

Зитына тейә башлаған Рәшит тамаҡ ҡырып уҡталғайны, Әскәр ҡулын уның яурынына һалып, «өйөр»өнә күҙ ҡыҫты:

—Тыңлағыҙ: буласаҡ кандидат Алмаҡай дуҫ хәҙер үҙенең атаҡлы ынйы-табышын — «ҡаҙанда быҡырлаған бутҡа» тәғлимәтен сисә!

Тегеһе, сая телде иғтибарһыҙ ҡалдырып, ысынлап та, «тәғлимәт»ен епкә мәрйен теҙгәндәй ағылдырҙы:

-- Атаҡлы Тарих һәм филология институтыбыҙҙың хөрмәтле аҡыл эйәләренең ҡаҙанышын ябай ғына әҙәми телгә күсерһәк, — йыуантыҡ-кыҫҡа һынын ултырғыс арҡаһына киреллдерә биреп, тубыҡҡа-тубыҡ һалды, — ул осорҙа беҙҙең ысынлап та бахыр бабалар, әле Әскәр әйтмешләй, төрлө сорт иген ярмаларын бер ҡаҙанға һалып бутағандар икән: төрки, иран, ҡытай, монгол, угрофин телдәре... Шул бер ҡаҙанда болғанып, быҡырлап ҡайнап, XI—XVI быуаттарҙа Уралда башҡорт теле тигән бутҡа-концентрат хасил була... Шулаймы, буласаҡ профессорыбыҙ кесе Ҡотлоев?

-- Ишеттегеҙме, ағай-эне? — Әскәр зәһәр тәғлимәтсене башынан һыпырып һөйҙө. — Тылсымлы концентрат-концепцияны был сүлмәгеңдә хайран маһир быҡырлатаһың, әй, буласаҡ академик! Ләкин шуға яуап биреп ҡара әле: тамырҙарыбыҙ ун беренсе быуаттан ары китмәгәс, ни өсен Кесе һәм Урта Азияла беҙҙең эраға тиклемге VII—V быуаттарҙан уҡ ҡалған һарт яҙыуы, саҡ яҙыуы текстары үҙебеҙҙең Уралда ла табыла ла, тегеләре һымаҡ уҡ, үҙебеҙҙең телебеҙҙә уҡыла?

-- Иҫке башҡорт телендә, — тип төҙәтте Рәшит.

-- Эйе, иҫке башҡорт телендә, тип әйтәйек. Ләкин бит ул текстарҙағы байтаҡ һүҙҙәр тап хәҙерге башҡорт телендәгесә генә! Ул ғына ла етмәһә, үткән йәй генә үҙебеҙҙең Асылыкүл буйҙарында коллегабыҙ Йәүҙәт Ҡондоҙбаев тапҡан һәм шул уҡ беҙҙең эраға тиклемге VII—V быуаттарга ҡараған тәүырын (рун) яҙыуҙар ҙа ни өсөн шулай уҡ үҙебеҙҙең иҫке башҡорт телендә һуң? Әллә бынан ике мең дә биш йөҙ йыл элек йәшәгән битекселәр[48] уны, әлеге ләғнәтле Баҡишев һәм Ҡондоҙбаевтарҙың «яңылыш» ҡараштарын Ҡотлоев һәм Хәкимуллиндарҙың «дөрөҫ» бағышы менән сәкәштертеү өсөн, йәғни бөгөн Уралда «башҡорт» тигән халыҡ йәшәйәсәген һәм уның тарихын өйрәнәсәктәрен шул замандарҙан уҡ тоҫмаллап, үҙҙәренең ике мең ярым йылдан һуң ғына «буласаҡ» башҡорт телендә сыймаҡлап ҡалдырғандармы юрый?.. Килер быуындарға мәрәкә ҡылып?!.

-- Уларына яуап биреп тормайым, сөнки улар концепцияға һыймай. Ә концепцияға һыймаған нәмә беҙҙең ғилми даирәләрҙә *антинаучно* һанала.

—Бына быныһын хаҡ әйттең, афарин!

Әммә Алмаҡаев ғәҙәти тыныслығын боҙманы:

---

[48] Битекселәр — яҙыусылар.

-- Һин әйткән ул һарт яҙыуын, саҡ яҙыуын иран телендә уҡыусы ғалимдар ҙа бар. Һәм улар хатта күберәк. Тимәк, һинең ул дәлилдәрең, ылғый резинка кеүек, ҡайһылай тартһаң да һуҙылыр икән... Инде килеп, Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың ул Асылыкүл экспериненты үҙ башына етмәһә ярар ине.

-- Абау, ни булған ул Йәүҙәт ҡоҙама? — Өшәнгәндәй итте Дилбәр.

-- Сөнки бит ул елбәҙәк шағир башы менән фәндең нимә икәнен белеп етмәй. Фәндең бит уның эске закондары бар: бөгөнгө көндә ҡайһы проблема ағастағы һутлы емештәй өлгерөп еткән, ә ҡайһыһы сеп-сей килеш; һоғаланып ҡабып, аҙаҡ тештәрең ҡамашмаһын йәки эсеңде бормаһын өсөн, нимәне өҙөргә ярай, ә нимәне — ярамай. Ярамағанын иртәгә — килер быуындар ҡарамағына ҡалдырып тороу хәйерле.

-- Тимәк, һеҙҙеңсә, фәндә революциялар заманы уҙған?

-- Революция яһаусылар быуатҡа берәү генә тыуа.

-- Ә бәлки, һеҙ һанламаған Йәүҙәт Әғләм улы Ҡондоҙбаев тап шундай — быуатҡа берәү иҫәбенән тыуғандыр?

-- Әгәр ҙә улай булһа, тәүҙә яп-ябай темаларҙа күрһәтһен маһирлығын. -- Тәртә араһына инмәгән тайҙай, тибенә.

-- Йәғни-мәҫәлән, — тип төшөндөрҙө Әскәр, — әлеге лә баяғы ҡылым тураһындағы нәүбәттәге сүбек-диссертацияны яҙмай бит ул эт ялағыры!

Һауыт-һаба йыйыштырыусы хужабикә түҙмәне:

-- Юҡ, егеттәр, мин — Йәүҙәт ҡоҙам яҡлы! Әгәр ул килер быуындар эшләйһе эшкә бөгөн тотонған икән, ниңә уны тыйырға?!

-- Аңлағыҙ, Диләфрүз ҡәрендәш: фән ул резина тоҡ түгел. Үҙегеҙ белгән элекке моряк Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллин әйтмешләй, фән ул океан кәмәһе кеүек: күҙенә (йәғни ватерлинияһына) һыу кимәле тиңәлгәнсе генә күтәрә. Йөктө шунан артығыраҡ тейәнеңме, карабың күҙ асып йомғансы океан төбөнә китә. Үҙебеҙсә әшкәртһәк, Ҡондоҙбаев фәнде уның үҙ кендегенән юғарыраҡ ырғылдыртырға маташа.

-- Тап шуны талап итә лә заманаһы! -- Әскәр киҫәтеүен Рәшит ҡолаҡ ҡырынан үткәрҙе:

-- Өҫтәүенә, сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, ғаиләһе менән дә боҙолошҡан... ошо көндә таныш-белештәрендә ҡунып йөрөй. Ә был иһә Хәкимуллин яҡлыларға уны тамам сүкергә козырь ғына.

-- Быныһы ла хаҡ, Алмаҡай! — Ҡотлоев тәбәнәк егеттең дүрткел яурынына әшнәләрсә дер-һелкетә һуҡты. — Был донъяла ғаилә ҡороу үҙе бер ахмаҡлыҡ булһа, ғаилә менән боҙолошоу — башты юғалтыу тигән һүҙ!

-- Эй егеттәр, егеттәр, — тип көлдө ҡыҙ, — аҡ һаҡаллы ҡарттар кеүек һөйләйһегеҙ.

-- Әскәр бит ул ҡартаймаҫы борон ҡартайырға — монах булырға йыйына.

-- Монах түгел — Мономах! — тине егеттәрҙең береһе. Йәш Ҡотлоев әммә етди ҡалды:

-- Баяғы эшем әйәһе фән кандидатылай, хатта «әсәй» һүҙенең дә, Диләфрүз туташ памфлетында әйтмешләй, ҡойма аша алыныуын таныһаҡ, ул саҡта беҙҙең үҙебеҙҙән ни ҡала? Ирек һөйөүсе халҡыбыҙҙың ҡаһарман-сал

тарихынан ни ҡала? — Әскәр ҡыҙҙы. — Быуаттар буйына Уралдың азатлыҡ рыцарҙары[49] булыуыбыҙ, унан килеп, үҙ теләгебеҙ менән бөйөк Рус дәүләтенә ҡушылып, бергә-бергә дөйөм Ватан ҡороуыбыҙ, шул Ватанды нисәмәһе-нисәмә тапҡырҙар урыҫ туғандарыбыҙ менән иңгә-иң терәшкән хәлдә ҡанлы алыштарҙа ҡурсалап, һаҡлап ҡалыуыбыҙ, сәскә аттыртыуыбыҙ тарихы ла, бер көн килеп, Хәкимуллин һымаҡ идеология диверсанттары тарафынан бөтөнләй булмаған хәл — «ҡойма аша алынған» итеп күрһәтелмәҫме?!.

-- Ҡара-ҡара, ҡалай ҡаты һөйләшә! Фән бөттө — сәйәсәт башланды. Артыңды уйла, мырҙам! — Ҡыҙыу ҡанлының еңенән тартты Рәшит.

-- Мәгәр сәйәсәтһеҙ фән дә, бер нәмә лә юҡлығын онотма, Алмаҡай!

-- Шулайын шулай ҙа ул, тик шаштырыбыраҡ ебәрҙең. Был урында «диверсанттар» нимәгә?

-- Һуғыш уты ҡабыҙыусы океан аръяғы «советолог»тар бөгөнгө көндә тап шулай яҫҡына ла, — тине Дилбәр. — Гәзиттәрҙән уҡығанһығыҙҙыр: совет халҡынан уның ҡаһарман үткәндәрен — тарихын оноттортоға итә. «Йәҙрә ҡоралы менән генә еңеп булмай советтарҙы, — ти улар. — Иң ышаныслыһы — идеология ҡоралы. Беренсе сиратта был ҡорал менән йәштәребеҙҙең күңеленә үтеп инергә, ундағы ҡаһарман үткәнгә тоташҡан тәрән тамырҙарҙы ҡырҡып, эске яҡтан тарҡатып емертергә. Өсөнсө донъя һуғышы башланғанда улар араһында Зоя Космодемьянскаялар ҙа, Александр Матросов[50] менән Миңлеғәли Ғөбәйҙуллиндар ҙа сыҡмаһын. Тап ана шул саҡта ғына беҙ советтарҙы тамам һәләк итербеҙ».

-- Ҡәҙерле замандаштар, — тине Әскәр, — ошонан файҙаланып, бер имтихан алырға булдым һеҙҙән: Баҡишевтың атаҡлы китабын кемдең уҡығаны бар?

-- Ғәйеплемен: уныһын мин дә тотоп ҡарағаным юҡ, — тине ҡыҙ. — Сөнки ул китаптың һуңғы данаһы ла китапханабыҙҙан мин бәләкәс саҡтарҙа уҡ юғалған.

-- Бына һеҙгә Баҡишев ейәнсәре! Ниңә, улайһа, диплом эшегеҙҙе «Ядкәр» тип атанығыҙ?

-- «Ядкәр» түгел, ә «Йәдкәр»!—тип «йә»ләштереп тағы төҙәтте Рәшит. — Ҡәрендәштең башын әйләндерәһең. Ул да берәй сәхифәһендә «Ядкәр» тип хата яҙып, оятҡа ҡалып ҡуймаһын. Данлыҡлы рәссәм башы менән.

-- Тимәк, «Йәдкәр» тиһең инде? — Әскәр көлдө. — Кемдән сыҡҡан ҡанун ул, аҡыллы баш?

-- Көллө ғәләм шулай яҙа. Гәзит-журналдарыбыҙҙы ғына ҡара.

— Хатта Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың «Ядкәр»е лә китап нәшриәтендә «Йәдкәр» булып килеп сыҡты, факт! — Башҡа егеттәр ҙә тотанаҡланы Алмаҡаевты.

-- Нимәгә нигеҙләнеп?! — Әскәр һуҡ бармағын Рәшит яғына тоҫҡаны. — Ни өсөн ул йәнселеп бөткән «Йәдкәр» булырға тейеш?!

-- Үҙебеҙҙең башҡорт теле ҡанундары буйынса...

---

[49] «Память» роман-эссеһында билдәле урыҫ совет яҙыусыһы В.А. Чивилихин әйтә.

[50] Башҡорт Шакирйән Мөхәмәтйәновтың урыҫса ләҡәбе.

—Ә башҡа телдәрҙең ҡанундарын ниңә һанға һуҡмайһың? Мәҫәлән, иран, славян, угрофин телдәренең?

—Бәрәмәс, улары бында нимәгә? Бөтөнләй башҡа телдәр.

—Бөтөнләйен бөтөнләй ҙә, ләкин башҡамы икән! — Әскәр ҡыҙа төштө. — Һеҙ, эшем эйәләре, концепция ҡолдары, телдәрҙе бер-береһенән бейек ҡытай стенаһы менән айыраһығыҙ ҙа шул стена аша һүҙҙәрҙе бер-береһенән, Дилбәр туташ әйтмешләй, үтескә алышыуҙары тураһында ҡыҫыр һөҙөмтә сығараһығыҙ.

—Һин әллә телдәрҙең бер-береһенә тәьҫирен танымайһыңмы?

—Таныйым, унһыҙ мөмкин дә түгел, әммә-ләкин барыһын шуға ҡайтарып ҡалдырмағыҙ. Унан килеп, бер тел дә үтескә алмай, ә мал урынына мал түләй.

—Бына бит, — Алмаҡаев кинәнде, — барыбер беҙҙең яҡлы булдың!

-- Эйе, телдәрҙең тарихи үҫешенең өҫкө ҡатламында мин һеҙҙең менән. Әммә «тәүтел» тип аталған иң төпкөлдә беҙҙең юлдар айырыла. Дөрөҫөрәге, һеҙ унда барып етмәйһегеҙ, шуға күрә, хата өҫтөнә хата өйөп, борон бура тебөндәрәк ятып ҡалып онотолған һәм тәү ҡарашҡа ят һымаҡ тойолған һәр һүҙҙе ситтән үтескә алынған тип иғлан итәһегеҙ.

-- Үтеслеге, — Рәшит өтөрәйҙе, — шаҡырайып күҙгә бәрелеп торғас...

-- Йәғни?

-- Шул уҡ фарсы һүҙе «ядкәр»ҙе алайыҡ.

-- Ә ни өсөн фарсы һүҙе?

-- Сөнки һүҙҙең йөкмәткеһе «фарсымын!» тип ҡысҡыра. Фарсыса «йад» — хәтергә төшөрөү, иҫтә тотоу. «Кәр» — шуға ҡушылған ялғау, башҡорттағы «-лек» ялғауына яҡын, мәҫәлән: иҫтә-лек, хәтер-лек...

-- Ә башҡортса-урыҫса-немецса «кәр» — тулы мәғәнәле һүҙ — ныҡлыҡты, ҡатылыҡты, ғөмүмән, «таштай»лыҡты белдерә. Шуға бәйле ҡыр (ҡырла), гор (гора) — башҡортса һәм урыҫса «тау-таш», ә немецса шул нигеҙ һүҙле керн — емеш һөйәге, таш; кирха — таш сиркәү, крайде — аҡбурташ...

-- Ә ниңә ул өс төрлө телде, баяғы әйтмешләй, бер ҡаҙанға һалып бутарға?

-- Сөнки мин ул «өс төрлө»нөң — бер төрлө, бер тел булган тәүтел дәүерен байҡайым. Тимәк, һуңынаныраҡ айырымланған өс олонло дәү тирәктең ябалдаштарындағы сыбыҡ остарын ғына һәрмәмәйем һинең кеүек, ә ябалдаш менән ҡуша олондарын да, дөйөм төп һәм үҙәк тамырын да күрәм. Шуның өсөн дә уртаҡ һүҙҙәрҙе үтескә, йә булмаһа алмаштырып алынған итеп түгел, ә ҡасандыр уртаҡ бер тел һүҙҙәре булғанлығын яҡшы белеп эш итәм... Инде әйт әле миңә: тулы мәғәнәле һүҙ («кәр») тәүгеме, әллә уның ялғауға әйләнешеме?

-- Әлбиттә, тәүгеһе, — тине Рәшит.

-- Тимәк, башҡорт — урыҫ — немец телдәрендәге бер үк «кәр» нигеҙ һүҙе «төп нөсхә» икәне асыҡлана ла «фарсынан үтескә алынған» тигән дәлилең юҡҡа сыға.

— Һеммм...

-- Инде «яд»ты ла ҡаҡҡылап-һуҡҡылайыҡмы?

-- Тырышып ҡара.

—Баш өҫтө, тәҡсир! «Кәр»ҙең асылы «таш» булғандай, «йад» та үҙенең иң

боронғо (тәүтел осоро) ҡыҫҡартылмаған өлгөһөндә шул уҡ «таш»ты белдереүсе «кад» әйтелеп йөрөгән (һуңғараҡ «к» өнө «й»-ға әйләнгән). Иҫке төрки әҫәрҙәрендә ул кед, кеҙ, кет рәүешендә яҙыла һәм, тап беҙҙеңсә, ҡаты, ныҡ (асылда, шул уҡ таш ҡатылығы) тигән төшөнсә бирә. Уның икенсе мәғәнәһе лә һаҡланған: иҫке төрки яҙмаларында «ҡата» тип әжәл фәрештәһе аталһа, башҡорт теленең бөгөнгө юрматы һөйләшендә «ҡатар» — кәфен, урта һөйләшендә «ҡатыу» — үлеү, «ҡатил» — үлтереүсе; урыҫ телендә иһә «кат» — үлтереүсе, «гад» — сағып үлтереүсе йылан; ә немецса «кадауеч» — мәйет (ҡатыусы) икәнлеге мәғлүм. Шулай итеп, таш ҡатылығы менән мәйет ҡатылығы бергә килеп тоташа: Кад-Кар. Беҙ уны бабаларҙың вафат булған кеше иҫтәлегенә (ядкәренә) баҫтырып ҡуйылған таш һын йәки ҡәбер ташы Кадкар (Ҡотҡар) итеп тоҫмаллай алабыҙ, беҙҙең атайсал далаларҙа ундай һындар бихисап. Нимәнән «ҡотҡар?» Онотолоуҙан, иҫтән һәм ядтан (яттан) сығыуҙандыр, әлбиттә. Тәүҙә ул таш ядкәрҙәр, моғайын, яҙыу-ниһеҙ генә булған; торараҡ, ҡул араһына яҙма кергәс, таш яҫыһына ядкәр текстары ла сыймаҡланған. Ҡыҙыҡ, ташҡа сыймаҡлауҙы немец телендә әлегәсә баяғы «кәр» нигеҙле һүҙ белдерә: «краллен» — сыймаҡлау, ә «кралле» — сыйғыс януар тырнағы... Шулай итеп, боронғо тәүтел осорондағы «кадкар» һүҙенән, тәүге «к» өнө «й»-ға әүерелеп, һис кемдән дә үтескә алынмаған «йадкар» (ядкәр) барлыҡҡа килә. Шул уҡ өндәр үҙгәреү ҡануны һөҙөмтәһендә «кад» нигеҙ һүҙ айырым ғына ла телебеҙҙе байыта: кады (ҡаты) — йаҙы (яҫы, таш яҫыһы) — йаҙығ (*яҙыҡ,* яҙыулы ядкәр ташына ҡул тейҙерергә ярамай, тигән йола һүҙ) — йаҙыу, йәғни ядкәрташ яҫыһына сыймаҡлап яҙыу... Бына һеҙгә, кәрәк булһа, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, фекеремдең тотҡаһы! Әлбиттә, Алмаҡаев ишеләр был һүҙҙе йәнсеп (ҡаты я-ны алмаштырып) «йәдкәр» тип яҙа, мәгәр уйлап ҡарамай: ниңә «йәҙеү» тимәйбеҙ, «йәтләү» тимәйбеҙ, ә «яҙыу», «ятлау» тибеҙ?!

-- Уғата фажиғәлерәге — «ғәрәбизм», «фарсизм» тигән «изм»дар тағабыҙ ҙа китаптарҙан һыҙып ташларға тотонабыҙ, —тине егеттәрҙең береһе. Икенсеһе өҫтәне:

-- Килеп сыға: беҙ һәр ваҡыт кешенән алғанбыҙ ғына, ә үҙебеҙ бер нәмә лә бирмәгәнбеҙ. Ләкин алыш-биреш ҡасан, ҡайҙа бер яҡлы ғына барған?! Әгәр үҙең бирмәһәң, алып булыр инеме?

-- Аяныслыһы шунда: мәсьәләнең төбөнә туҙ ҡуйырға — баш ватырға теләмәйбеҙ. — Әйтәһен әйтеп бөтөп, Әскәр ҙә тынысланды. — Бына һин, Рәшит дуҫ, ниңә *тәүтел* менән шөғөлләнмәйһең, баяғы әйтеүемсә, ябалдаштың сыбыҡ остарын ғына һәрмәкләп йоҡлайһың? Ә үҙең бит, аңлайһың, бына хәҙер ҙә минең менән өнһөҙ генә килештең...

-- Өнһөҙ генә килешеүҙән тәғлимәт тауы тыумай бит.

-- Миңә ҡушылып ҡысҡыр, оранлайыҡ!

-- Көнө килеп етмәгән... Иртә саҡырған кәкүктең башы ауырта.

-- Башын эйеберәк ихлас тыңлаған Дилбәр «аҡын»дарҙың әйтешен оҡшатманы:

—Әгәр яңылышмаһам, икегеҙ таяҡтың ике башынан тотҡан да берегеҙ туған тел тип, икенсегеҙ тәүтел тип үҙенә тарта, ә уртала дөйөм тел шәжәрәһе

ҡаңғыра. Дөрөҫ шәйләйемме?

—Шулай тиергә була.

Бүлмә хужабикәһе баш сайҡаны:

-- Ҡарап-ҡарап торам да тағы ла бер ҡарап ҡуям, тигәндәй, Талир Баҡишев олатайымдың фажиғәһен төшөнә башланым хәҙер, егеттәр. Лингвистика фәнебеҙҙәге ике мәктәп тигән төшөнсә төптө буш һүҙ, минеңсә. Ике мәктәп түгел, ә бер таяҡтың ике башы тартыша... бер-береһен танымай.

-- Бик танышыр инеләр ҙә, ябалдаштың сыбыҡ осо үҙенең тамырын күрмәй шул! «Ун алтынсы быуатта ғына формалашҡан халыҡ»!..

Яр аҫтынан яу, тигәндәй, көтмәгәндә яңы ауаз ҡубынып, ялҡынға май өҫтәне:

-- Уҙамандар, ғәфү итегеҙ, ниңә һеҙ гел башҡортто бөйөкләйһегеҙ әле? — Бая шым ғына инеп баҫҡан сәйер әҙәм ишек төбөндәрәк гитараһы ҡушарында йылмайып тора ине.

-- Абба! Һаумы, Мыйыҡ әфәнде! — тине Әскәр. — Сәйәси яҡтан дағаланғандай йылғыр ҡыланаһығыҙ! Инде килеп, «баррикаданың ҡайһы яғында тораһығыҙ?» тип яр һалаһығыҙ ҡалды. Минең профессор атайым үҙ заманында тап ана шул һөрән менән үҙенең көллө көндәштәрен тәкмәсләткән, фән буйынса, әлбиттә...

Мыйыҡтың иҫе китмәне:

—Ысынлап та, ниңә гел башҡорт та башҡорт тиһегеҙ, бөтә нәмәне башҡортҡа һаплайһығыҙ! Ғәфү итегеҙ, мин үҙем дә ата башҡорт, әммә үҙ-үҙеңде бөйөкләү, башҡа халыҡтарҙы ерле һанға һуҡмау — интернационализмды боҙоу, *башҡорт гегемонизмына* юл асыу булмаймы был?

—Хаталанаһығыҙ, иптәш, — Рәшит күҙҙәрен ялтыратты. — Беҙ, беренсе сиратта, башҡорт материалын яҡшы беләбеҙ, шуға күрә лә дөйөм әһәмиәтле мәсьәләгә үҙебеҙгә яҡшы таныш баншҡорт халыҡ мәҙәниәте, тарихы аша киләбеҙ. Мәгәр шуны уҡ бынамын тигән итеп урыҫ, венгр халыҡтарында ла эшләргә, ошондай уҡ һөҙөмтәгә килергә булыр ине. Ул осраҡта ундай автор хеҙмәтендә, әлбиттә, шул «рус», «венгр» тигән һүҙҙәр «башҡорт» тигәнгә ҡарағанда күберәк ҡулланылыр ҙа, һеҙҙеңсә һаплаһаҡ, «бөйекләнер» ине. Һәм һеҙ ул саҡта, моғайын, авторҙы башҡорт халҡын һанға һуҡмауҙа, интернационализмды боҙоуҙа ғәйепләр инегеҙ, эйеме?!

Ҡапылдан «бәкәлгә һуғылған» Мыйыҡ тынып ҡалды, уйланды. Өҫтәүенә, Әскәр ҙә икенсе бәкәлде ҡаймылдырҙы:

— Бер башҡорт хаҡында түгел, ә уның аша Ватаныбыҙҙың төп өс тағаны тураһында бара һүҙ, хөрмәтле Мыйыҡ әфәнде. Славян, төрки, угрофин — бөгөнгө беҙҙең өс таған — ҡасандыр бер бөтөн булған, бер төптән үркеп сыҡҡан, бына шул! Тимәк, башҡорт тарихын юллау — бөтә совет халҡы тарихын юллау, ә шул юлда башҡорт атала икән, шәжәрә олоно буйлап төпкөлгәрәк төшкән һайын, һис иҫегеҙ китмәһен! — шуның аша йә бүтән аша бөтә совет халҡын күҙ уңында тотоп атау тигән һүҙ ул, ҡәҙерлем. Һәм киреһенсә лә шулай: урыҫ һәм угрофин аталғанда ысын фәндә улар аша башҡорт та каүҙәләнә! — Мыйыҡ менән иҫәп өҙөлөүҙе аңлатып, иптәштәренә бороддо. — Парадокс, әҙәм ышанмаҫлыҡ

хәл: урыҫтар «башҡорттоң һигеҙенсе ырыуы»! Ышанмаһағыҙ, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» эпосынан бағығыҙ! Был һүҙҙәрҙе әйткән сәсән һис тә фәстермәгән дә, яңылышмаған да, минеңсә. Тәүтел осорона төшөп тентенһәк, телдәребеҙ ҙә тоташа, тимәк, борондан уҡ барыбыҙ ҙа бер туған! — Дилбәрго йөҙөн борҙо. — Олатайың Баҡишевте илһамландырған тәүтел ул шундай ҙа тылсымлы көҙгө: төрки, славян, угрофин өс тағанының ҡасандыр бер туған булғанлығын күрһәтә. Был иһә халыҡтар берҙәмлеге, берҙәм совет халҡы төшөнсәһен сыбыҡ осонан түгел, ә тамырҙан ҡармап табыу һәм нығытыу тигән һүҙ. Милли ҡыйырһыныу һәм милли ҡупырайыу кеүек нескә һәм әсе тойғоларҙы ла юҡҡа сығарыусы шифалы дауа был, *тәүтелле тарихи ысул!*

...Сөйҙә ҡаңғырған гитара ауазланып зыңланы ла һәммә баштар боролоп ишеккә баҡты — ҡыҙыу йөрөп тирләп-бешкән Басир Дәүләтбаев елтерәп килеп инде.

— Фи, мин уны йүгереп йөрөп Күктән эҙләйем, ә ул бында ер аҫтындағы тамуғына төшкән икән! — тине, Дилбәргә мөрәжәғәтләп. — Бәй, быларың кем? Тамуҡ киҫәүҙәреме?

—Беҙ —тамуҡ һумалаһын ҡайнатыусылар. Бәғзе гонаһлыйәндәрҙе ике ҡолағынан тотоп сумырабыҙ. — Әскәр ҡул биреп күреште. — Әгәр яңылышмаһам, азамат, беҙ һеҙҙең менән бая ғына Иҙел ярында контрабандный бер «ярты»ны... -- томат һутын! -- икәүләшеп бушатҡайныҡ. «Ярлауыҡ» ҡабырыйында.

-- Тап үҙе! Иҫке дуҫтарҙы тағы ла бер күреүгә ифрат шатмын. Мухина, мәрхәмәтле Мөхлисә апайыңдан ҡайнар сәләм ҡабул ҡыл. Иртәгә кискә һәммәбеҙҙе үҙенең эш төйәгенә — «Ярлауыҡ»ҡа — туғанлыҡ мәжлесенә өндәй, яратып.

-- Беләм.

-- Күркәм табын, һый-ниғмәттәр, тигәндәй... Ҡыҫҡаһы, заманаға тиң банкет! Әлбиттә, һинең менән минең түгел, ә директриса еңгәйем иҫәбенән.

-- Ахмаҡ! — Әскәр һөҙөмтә яһаны. — Аҡылы бар әҙәм был заманда банкетты үҙ иҫәбенән үткәрәме?! Уның өсөн мәңге һыуалмаҫ һауын һыйыры — дәүләт кеҫәһе бар ҙаһа. Директриса башы менән әллә шуны ла белмәйме?

-- Һауын һыйыры тигәс тә, коммунизм юлынан уңышлы барғаныбыҙҙа арала һауа белмәүсе һантыйҙар ҙа булырға тейеш тә инде, ара-тирә булһа ла, — тине Рәшит.

-- Дөрөҫ әйттең, Алмаҡай: намыҫ тигән элементар нәмә хәҙер реликтҡа әйләнеп бара, хатта ҡәһәр төшкөрө *һаҙ биҫтәһенән* йыраҡта ла. Алыҫ китмәй, әсәйемдән генә алайыҡ бына. Атай ҡарттың берәй коллегаһының шанлы юбилейынан ҡайтҡаны һайын, аш-һыуҙарын маҡтарҙан элек, хәләл ефетенең йәнен ала бит әй: банкет өсөн нисә йөҙ һумды нисек итеп ҡаҙнабыҙҙың ҡайһы кеҫәһенән ҡайырғандар? Үҙеңдең дә яҡынлашып килгән оло юбилейыңда уларҙан да арттырыбыраҡ һауыу яйын онотоп ҡуймаңыңмы?..

-- Һине тыңлаһаҡ, ысынлап та, ялғый бүрҙар араһында йәшәйбеҙ икән, тип уйларһың. Саманан сығараһың...

-- Һинең һымаҡ түгелмен шул, Рәшит дуҫ — көллөһөнә ҡояш булып,

һыйышып йәшәй белмәйем. — Ҡыҙ яғына бороллдо. — Дилбәркәй-һылыуҡай, шәйләп ҡалығыҙ әле: фән докторына кейәүгә сыҡҡығыҙ килһә, тотоғоҙ ҙа ошо йоморобаш Алмаҡаевты ҡороҡлағыҙ. Был заманда тап ошондай көшөлдәр[51] доктор була.

-- Эй һеҙҙе! — Дилбәр ҡул һелтәне. Тупһала туҡталған Әскәр, ҡыҙҙың яуабын да көтмәй, эйәрсендәре менән ҡуша «ялп!» итте, арттарынан ишек дөбөрләп ябылды. Басир баш сайҡаны:

-- Ни өсөндөр оҡшап етмәй был йәш Ҡотлоев миңә. Осраған һәр берәүгә күңелен ярып һала кеүек, әммә шул уҡ ваҡытта унда нимәһендер йәшереп ҡалдырғандай. Көләмәстәре лә үҙенеке түгел бит: ҡайҙалыр гәзиттәнме, көлкө журналынанмы уҡылғанды иҫкә төшөрә.

-- Булһа һуң. — Дилбәргә оҡшаманы. — Ул жанрҙың телдән — баҫмаға, баҫманан телгә күсеп йөрөүе тәбиғи. Шуның есөн дә көләмәс.

-- Яҡлашма! — Бармаҡ янаны егет.

-- Беләһеңме, — Дилбәр бороллдо, сыбыҡ осо туғанының күҙҙәренә текләне, — Ҡотлоев оҡшай миңә. Көр күңеллелеге, ихласлығы, тура һүҙлелеге менән!

-- Бөтә сифаттарын да кире ҡаҡмайым, әммә...

-- Ярай, Суриков, үҙе юҡтың күҙе юҡ, ти, ғәйбәт һатмайыҡ әле.— Ҡыҙ ҡунаҡты ике ҡуллап яурынынан этәрҙе.— Был яҡҡа баҡ: бөйөк башланғыстарымды күрһәтәм! — Мөйөштәге көплө ыҫтанды электр лампалары менән төрлө яҡтан яҡтыртып, киндерҙе һыпыра тартты. Басир алдына тәүҙә тоташ ҡыҙыл ялҡын дөрләгәндәй булды ла, баға килеп, айырым деталдәре лә төҫмөрләнде. Балыҡ тәңкәләреләй теҙеп алюминий шаҡмаҡтарҙан хасил күҙ күрмәгән монументтың макеты ғына ине был, әммә һуштарҙы һурҙы. Алыҫтанырак тоташлайына баҡһаң, һыу төбөнән текә ярға Аҡбуҙатка атланған Урал батыр-һыбай сығып килә, атының ялы-койроғо һыуҙа һөйрәлә. Яҡынданыраҡ төбәлһәң, атты тәшкил иткән айырым шаҡмаҡтар — һәр береһе үҙенә башҡа айырым ат, ә һыбайҙы һынландырғандары — айырым кеше һындарына әйләнә, ерҙе ябырып халыҡ, йылҡы өйөрө эркелгәндәй тәьҫир ҡала. Уғата яҡынлаһаң, был ҡатмарлы ҡоролманың шаҡмаҡ аралыҡтарында уйым-уйым тере күҙҙәр — күп ҡатлы бина тәҙрәләре көнгә бағып торғанлығы асыҡлана.

-- Һеммм...— Басир елкәһен ҡашыны.— Мине сетерекле хәлгә ҡуйҙың бит әле, Мухина. Алып батыр ҡорған олпат ҡоролманың һыҙаттарын иңләргә тырышҡан серәкәйҙәй хис итәм үҙемде... Мәғрүр Урал батырға һәйкәлме был, әллә мәҙәниәт һарайҙары комплексымы?

-- Суриков, шуны ла аңламайһың! — Ҡомары эсенә һыймаған ҡыҙ, һыңар үксәһендә генә күсәрҙәге глобустай зыр-әйләнеп, Басирҙы кинәт муйынынан ҡосаҡланы, сикәһенән супылдатып үпәсләне лә ситкә этәреп ебәрҙе. — Бар, һыуынмаҫ борон сәйеңде уртлай тор. «Атлы халыҡ» тип аталған ядкәр был. Тышы — һынлы һәйкәл, эсе — зиннәтле һарай: атлы халыҡтың тарих һәм мәҙәниәт үҙәге. Бөтә булған ҡомартҡыларҙы бер урынға туплаған грандиоз

---

[51] Көшөл — Һыу ҡомағы.

музей!

—Ҡомартҡылар тигәндәй, һәй әттәгенәһе, онотоп та барам тағы! — Басир, уҙалдына гитараһын дыңҡылдатып маташыусы Мыйыҡты, ниһәйәт, абайлап, тауышын баҫа төштө. — Беләһеңме, Мухина, ниндәй бүләк килтерҙем мин? Ифрат мөһим разведка мәғлүмәттәре! — Ҡыҙҙы тамам сабырһыҙлыҡта алйытып, ҡолағына бышылданы. — Хәкимуллин ағайыңда булдым, әй, Саркисянды ла күрҙем. Һине борсоған Ерәнсә-сәсән ҡәберен ҡаҙа башлау эштәренең теҙгене Саркисян ҡулында икән. Һәр хәлдә, сәсәнеңдең шәхсәнә ҡыу башы тиҙҙән ағайыңдың музейына ҡайтасаҡ.

Ҡыҙ ҡойолоп төштө:

-- Ысынмы?

-- Ысын.

-- Ҡара әле, иртәгә апайым мәжлесенә Саркисян да киләме?

-- Ни тигән һүҙ, табын күрке Саркисянһыҙ буламы?!

-- Ә Йыһандар ағайым?

-- Түрендә ултырасаҡ, минеңсә.

Тәүәккәлләнеп, *Дилбәр ҡуш йоҙроғон төйҙө: «Икеһен дә күрермен, кәрәктәрен бирермен. Ҡурсалаусыһыҙ икән тип уйламаһындар Ерәнсә-сәсәнде!»*

Басир, маңлайын һырландырып, сәйле касаны усында әйләндергеләне, сөнки ыҫтандағы сей балсыҡ еҫе аңҡыткан яҫы маңлайлы егетте (тап Әскәр!..) сырамытыуҙан баҙабыраҡ, йөҙөнә тура төбәлеп, талай өндәшмәй торҙо. Дилбәр иһә күҙ ҡарашынан шуны шәйләргә тырышты: үҙен танып белерме был коллегаһы балсыҡ һындан, әллә...

Басирҙың ҡапыл күҙ ҡарашы һүрелде, йөҙө ҡобараланды — профессиональ һиҙгерлеге балсыҡ киәфәт аҫтында томалап йәшерелгән серҙе кәбәнгә батҡан энәләй табып һурҙы:

—Һин, ҡыҙый, замандаштарҙы һайламағанһың, ә үҙеңә кейәү һайлағанһың!.. — Сыбыҡ осо туғанын шулай күҙҙәре шаҡырайған хәлдә торғоҙоп ҡалдырып, йәһәт атлап сығып китте.

Аты туғарылып арбаһында дилбегәһен тотҡан килеш ултырып ҡалған хәйерһеҙ ылаусылай, күҙҙәрен ишеккә төбәп ғәмләнде Дилбәр. Аҙаҡ килеп, маңлайына ишелеп төшкән сәсен артҡа һыпырып ташлап, балсыҡ һындың күҙенә тура ҡарап, йоҙроҡҡа йоҙроҡ һуғып тәкәбберләнде:

—Һе! Кейәү булһа ла булыр, үзеңде туйыма саҡырырмын!..

*Ләкин*, быны менән генә күңеле ҡанманы уның. Балсыҡ егеттең танауын бармағы менән сәпәп йәлпәштерҙе лә ҡабат яһай башланы. Яңы эшенә ҡарап: «*Их, тағы ла һин килеп сыҡтың — ниңә мине шул тиклем эҙәрләйһең?..*» — тип һөйләнде. Сепрәген бөркәндертеп, ширма артында күҙенә текләп ҡарап торған Ил Инәһе Бәндәбикә бюсы янына килде, яңаҡтарына таянып, ҡаршыһына сүгәләне: «Йөрәккәйем һурылып сығып бара бит, Ил Инәһе. Нимә күрәһеләрем бар икән, Ил Инәһе?..»

Башҡорт иленең сая рухлы инәһе, быуаттарҙың һөрөмлә офоғо аша, үҙен һынландырған сая тоҡомоноң йөрәгендә ни тулауын төшөнөргә итеп уҡталғандай ине. Дилбәр уға, күкрәк тәңгәленә терәп, үҙенең тарихи өйөнөң

ҡомартҡы кирбесен тотторған. Был кирбесте ҡасандыр ул үҙенең тыуған ауылынан атай бүләге рәүешендә алып ҡайтты, ә Ил Инәһе хаҡындағы халыҡ рухын үҙенең йәш йөрәгенә һеңдерҙе... Бына әле лә мәрхүм атай тауышы ҡолаҡҡа салынып киткәндәй булды, оҫтахана түрен яңы моң-заң менән тертләтте:

— Берәүҙә үсең булһа, һин уны орма-һуҡма, аҫма-киҫмә, ә тарихын тартып ал да ете йоҙаҡ аҫтына йәшереп бикләә. Тарихһыҙ ҡалған бәндә — хәтерһеҙ ҡалған бәндә: Ҡояш аҫтындағы ерҙән һутлы төп-тамырын ҡырҡҡан үлән кеүек ҡыуара, юл саңына әүерелә...

Үҙе физика-математика уҡытыусыһы булһа ла, ғүмере буйы ил тарихы менән мауығып йәшәне, һуғыштан да, Берлинғаса барып етеп, пилотка кейгән хәләл йәре менән бергә, «изге Рәсәй ерен ҡан ҡойоп ҡурсалаған батыр ата-бабаларҙың эҙҙәренән изге тупраҡ алып» ҡайтты ул. Ә аҙаҡтан, күп томлы «Бөйөк Ватан һуғышы тарихы»ндағы һаран ғына бер һөйләмдән күренеүенсә, ул үҙе лә Еңеү юлында тарих биттәренә юйылмаҫлыҡ эҙ һалған булып сыҡты...

Археологтар уба аҫтынан «Бәндәбикә өйө»н соҡоп сығарғас, емерелгән кәшәнәне ҡабат тергеҙергә тип, ғалимдарҙың да, төбәк әһелдәренең дә теңкәһенә тейеп бөттө уның атаһы, редакцияларға хат яҙып аптыратты. Кирбестәрҙе көҙгә табан ямғыр сылата башлағас, һандыҡта ятҡан хәрби формаһып кейеп, орден-миҙалдарын сыңлатып, партияның район комитетына китте; унан, кәшәнә өҫтөн ваҡытлыса ҡоролма — таҡта, толь менән ышыҡлап ҡаплатырға, тигән бойороҡ ҡайтартты. Ғалимдар ҙа килеп төштө ҡаланан, урындағы етәкселәргә эш артты, ветеранға ҡырын ҡарап йөреүселәр күбәйҙе. Дилбәрҙең ауылға ҡайтҡан саҡы ине был. Уға: «Таңатарова иптәш, һин — алдынғы ҡарашлы йәш кеше, комсомолка, атайың ҡартлаҫҡа аҡыл биреп китсе әле: онотолоп бөткән иҫке сүп-сарҙы яңырттыртып, эш кешеләренең маҙаһына теймәһен», — тип тумбытты ҡайһы берҙәре. Дилбәр, әлбиттә, «сүп-сар» һүҙен ҡолаҡ артында ҡалдырҙы, атайға мәсьәлә елеген генә еткерҙе. Ләкин был да ҡарт һалдатҡа пуля менән атҡандай тәьҫир ҡылды:

—Мин Берлинғаса, ихтимал, артымда ҡалған тыуған ер — Бәндәбикәнең кәүҙәһе ятҡан ошо уба булғанлыҡтан барып еткәнмендер ҙә! Бер ерҙә лә һөрләкмәгәнмен, абынмағанмын, ситкә тайғаҡлап китмәгәнмен: ошо тыуған төйәгем биргән Ватан тойғоһо тотҡан. Беҙ, совет һуғышсылары, рейхстаг башына байраҡ ҡаҙап, ана шул бөйөк Ватан тойғоһон саң иттертмәй һаҡлап ҡалдыҡ!

—Күрше-күлән әйтә бит һуң... — тип башлағас:

—Күрше-күлән әйткән берҙе мөкиббән тыңлай китһәң, беләһеңме, ҡыҙым, беҙ күптән кем булыр инек? — тип, күҙҙәренә тәрән мәғәнәле баҡты.

—Кем һуң? — тигәс, Бәндәбикә кәшәнәһенең кирбесен һондо:

—Әгәр ил ҡыҙы булһаң, ошо ил кирбесен тот та минең әйткән беремде иғтибарлы тыңла — ата-баба һүҙен елго осортма. Мин үлгәс, үҙең сал сәсле булғас, бәлки, иҫеңә төшөрөрһөң, ейән-ейәнсәрҙәреңә лә еткерерһең, — тине...

Дилбәр, әйтерһең, оҫтаханаһында йәнә бер йән эйәһе барлығын онотҡайны. Гитараһын һирәк-һаяҡ сирткеләп, тере йөрәккә үткәргес моң тибрәлдереүсе Мыйыҡ, уйнауынан кинәт кенә өҙлөгөп, ике күҙен тултырып ҡараны:

-- Әҙәпһеҙлек булһа ла, тағы ла һорайым әле, туташ: һеҙ, шундай ҙа һылыу фәрештә, ниңә иҫке-моҫко тарих менән мауығаһығыҙ?

-- Ниндәй иҫке-моҫко?! — Дилбәр, әле генә кисереп тә бөтмәгән хистәренән айный-айный үртәлеп, үҙе лә һиҙмәй зәһәрләнде. — Нимә?! Атай-әсәйең, олатай-өләсәйҙәрең иҫке-моҫкомо? Йә булмаһа Маркс, Энгельс, Ленин иҫке-моҫкомо? Улар ҙа донъя ҡуйған, тарихҡа әүерелгән.

-- Ғәфү итегеҙ, туташ, мин улай уҡ әйтергә теләмәгәйнем.

-- Теләмәүегеҙ тел төбөгөҙҙән күренә... Һанһыҙ һыуыр булып ҡуймағыҙ тағы.

-- Һанһыҙ һыуыр? Ниндәй ғилләә ул, туташ?

Ҡыҙ тынысланa төштө.

-- Ишетмәһәгеҙ, ишетегеҙ ҡартыңдан — һүҙ йөрөтмәгеҙ артымдан! Быны миңә шулай уҡ үҙе лә тарих булып әүерелгән атайым һөйләп ҡалдырҙы. — Атаһын йәнә күҙ алдына килтереп, әйтерһең, теге ваҡыттағы атай тауышы менән һөйләнде. — Бына шулай. Беләһегеҙҙер: һыуырҙы әҙәм балаһынан аҙған мәхлүкйән тиҙәр...

-- Ҡыҙыҡ...

-- Ҡыҙыҡ булһа, тыңлағыҙ, әммә ҡыҫҡа һүҙ түгел — хикәйәт...

—Ҡолаҡтарым ҡарп итеп ҡалды, туташ.

Дилбәр, Мыйыҡҡа йөҙөн бороп, мәғәнәле йылмайҙы, әйтерһең, бөгөн иртә таңдан башланған хәтәр кисерештәре өсөн Мыйыҡ ғәйепле ине.

## ҺАНҺЫҘ ҺЫУЫР ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ

— Һыуыр тәүҙә, бына ошолай һеҙҙең һымаҡ, ҡупшы мыйыҡ ебәреп, түшен киреп, һанлы ғына йәшәгән, ти. Үҙенең ата-бабанан ҡалған өңлө убаһы, уба тирә-яғында юшар йыуаһы, эсер йылғаһы булған. Ҡайһы ваҡыт мохтажлыҡтың сигенә етһә лә, кеше еренә сыҡмаған. Шуның өсөн үҙен көллө күршеләре һанлаған, ҡәҙер-хөрмәт күрһәткән.

Һыуыр убаһының иң мөҡәддәс ере — уба башындағы йәшел артышлы түбә икән. Ата-бабаларҙың һөйләүе, шәжәрә ҡылыуы буйынса, ундағы аҡ мәрмәрташта иң тәүге заттың — оло убаға беренсе өң ҡаҙып кергән баба-һыуырҙың изгеләрҙән-изге эҙҙәре мөһөрләнгән. Һыуырҙарҙың һәр быуыны эҙҙе яттар табанынан баҫтыртмай ҡурсалаған, йәшел артыш уратмаһын төрлө бәлә-ҡазаларҙан аралаған. Баштарына ҡайғы ҡунған ауыр ваҡыттарҙа ла, бик шатлыҡлы саҡтарҙа ла, изге эҙҙәр эргәһенә йыйылышып ултырып, үткән быуаттарҙы иҫкә төшөрөр, киләсәктәрен ҡайғыртып уйланыр, үҙҙәренең шул үткән менән киләсәкте ошо ергә, ошо убаға тоташтырып тотоп тороусы алтын бүкән икәнлектәрен төшөнөп, сикһеҙ ғорурлыҡ кисерер, ҡөҙрәт алыр, тыуған ерен элеккегә ҡарағанда ла ғәзизерәк күреп яратыр булғандар. Беҙ һөйләгән ҡупшы мыйыҡлы һуңғы быуын һыуыр ҙа, ти, атаһынан шул изге йолаларҙы, шул мөҡәддәс бурыстарҙы йөкмәгән дә үҙенән һуңғыларға ла шуны биреп китергә тейеш булған.

Әммә һыуыр күңеленә бер көн ҡара шик ҡунған. Уны уҙғынсы ҡомаҡ менән һаҫы көҙән албырғытҡан.

— Һыуыр ағай, иҫәүән дә икән һин, — тигән ҡомаҡ. — Йыуаларыңды ейеп, йылғаларыңды эсеп, йылы өңөңдә ҡорһаҡ киреп кенә ятаһы урында, кәрәкмәгән артышлы түбәне уҙғынсыларҙан ҡурсып, йонсоп ултыраһың бит, әй.

-- Кәрәк икән, ҡусҡыл артыш үҙ аллы үҫһен, изге эҙ үҙе һаҡланһын, — тип ҡеүәтләгән ҡомаҡты һаҫы көҙән.

-- Йонсоп ултырмаҫ инем дә, атай һүҙе ултырта, — тигән, ти, елкә соҡорон ҡашып, һыуырйән. Ҡомаҡ менән һаҫы көҙән эстәрен тырнап көлгән:

-- Таптың һүҙ, сығарҙың күҙ! Беҙгә ҡалһа, ата һүҙенә төкөрөп тә бирмәйбеҙ, уның ҡарауы, ыҙа сикмәй, уйнап-көлөп йәшәйбеҙ.

-- Бабаң эҙен юйҙыртһаң, йортоңдан да яҙырһың, — тип әйтеп ҡалдырған иҫке аҡыл бар.

-- Иҫең китҡән икән иҫке сәкмәнгә! Уба һаҡлап ултырып, һин нимә күрәһең? Ә бына мин, исмаһам, үҙ убам булмаһа ла, илдән-илгә йөрөнөп, башҡаларҙың өйөнөң иҙән аҫтарына оялап, рәхәтләнеп бураларын кимереп йәшәйем, яңы бешкән икмәк кенә ашайым! — тип шапырынған ҡомаҡ.

-- Ә мин илдең ҡош-ҡорт кетәгенә кереп, һимеҙ ҡаҙҙарын, хатта, ҡәберҙәренә төшөп, үҙҙәрен дә ашайым! — тип кәпәренгән көҙән.

-- Һәм беҙ һис ниндәй убаға бәйле түгел, бурыслы түгел!

—Иҫкән елдәй иркле, аҡҡан һыуҙай һүлекле!

Һыуыр, артышлыҡтың ҡырыйында һәмтәйеп ултырған килеш, уйға ҡалған. Уны ҡомаҡ менән көҙән яҙмышы ҡыҙыҡтырған.

—Төкөр ата-бабаңа, ултыр беҙҙең арбаға! — тип дәртләндергән тегеләре. Һыуыр артыҡ уйлап-нитеп тормаған, артышлы түбәгә ҡул һелтәгән. Шуны ғына һағалап көткән ҡомаҡ, ҡыуанып, артыштарҙы төбөнән умырырға, ҡайыҙларға, ә һаҫы көҙән, изге түбә төбөнә ҡаҙып инеп, һыуыр ата-бабаларының һөйәктәрен кимерергә керешкән. Улар шул эштәрен бөтөрөп китеүгә, йәшел артышлы һәм аҡ ташлы түбә урынында туҙрап ятҡан саң ғына тороп ҡалған. Ул саң да тиҙҙән шунда тапатып юл һалып уҙған төрлө ҡош-ҡорт, кейектәрҙең табандарына эйәреп китеп бөткән. Изге түбә теләһә кем утеп йөрөмәле ҡаҡ юл түтәһенә әйләнгән, һыуырҙың юшарға йыуаһы, эсергә һыуы ла ҡалмаған. Һанлы ғына йәшәгән һыуыр, һанынан яҙып, күршеләренә үтескә аҙыҡ һорап сыҡҡан. Бер биргәндәр ҡыҙғанып күршеләре, ике биргәндәр, ләкин һыуырҙың тамағы һаман туйынмағас, өсөнсөгә биреүҙән төңөлгәндәр. Көллө ялан буйлап һанһыҙ һыуыр хаҡында телдән-телгә һүҙ киткән, ул килгәндә ишеклеләр ишектәрен бикләп көтәләр икән, осрағанда бармаҡтарын төртөп үтәләр икән. Һыуыр, муйынына хәйер тоҡсайы аҫып, башын түбән һәлендереп, күҙ күрмәгән яҡка сығып китергә мәжбүр булған. Кеше тупһаларында типкеләнеп, кеше ҡалдыҡ-боҫтоҡтарын йөкмәнеп, кире әйләнеп ҡайтыуға, убаһында уны тағы ла яманыраҡ яңылыҡ көтөп торған: тыуған өңөнә ҡомаҡ менән һаҫы көҙән инеп оялаған. Һанһыҙ һыуырҙы яҡын да юлатмаған улар — алыҫтан уҡ суйыр бәреп ҡыуғандар:

—Рәхим ит, килгән яғыңа кит! Был убала һыуыр ҡыҫылышы юҡ: бында ылғый беҙҙең өң — тыуа-тыуғандан, борон-борондан уҡ!

Һанһыҙ һыуыр аптырап, ҡалтырап, күрше-тирә яҡтарына ла кереп ҡарай, ләкин береһе лә уны танымай:

—Рәхим ит, килгән тарафыңа кит: бындай хәйерсене бында һис ҡасан күргәнебеҙ юҡ!

Аҡылдан яҙырҙай булған һанһыҙ һыуыр шикәйәт яҙып, януарҙарҙың хөкөмөнә баш ора:

—Ярҙам итегеҙ, ата-бабам убаһын алып бирегеҙ!

Хөкөм бер йыл буйы убаны тикшереп, убаның һәр саң бөртөгөн еҙ иләктән үткәреп, бер йыл буйы шаһиттарҙан һорашып, тағы ла бер йыл буйы хөкөм йөрөткәс, ике яҡтың да һәлмәклеген бизмәнгә һалып үлсәгәс, ошондай ҡарарға килгән:

—Даулы убала һыуыр затының эҙе лә, еҫе лә юҡ, тимәк, һанһыҙ һыуырҙың тартыш хоҡуғы ла юҡ. Убаның аҫыл хужалары — һаҫы көҙән менән ҡомаҡ!

Һанһыҙ һыуыр сығып киткән хәйерсе тоҡсайын аҫып, әсе күҙ йәше менән юл саңын йыуып. Инде ул ҡайҙа тыуғанын да, кемдән тыуғанын да төптө иҫләмәҫ-хәтерләмәҫ, өң ҡаҙа ла, йыуа йыя ла белмәҫ, фәҡәт тупһанан-тупһаға һуғылып, ергә тиклем баш эйеп, кеше ҡалдыҡ-боҫтоғон илап теләнеүсе йоратҡа әйләнгән, имеш...

-- Абба! Фи! — Мыйыҡ тап шул һанһыҙ һыуырҙы хәтерләтеп, шыйылдатып һыҙғырҙы.

-- Бына шулай һөйләне миңә атайым, — тине ҡыҙ. — Бәлки, һеҙгә лә, әгәр ҡолаҡ һалып тыңлаған булһағыҙ, үҙегеҙҙең атайығыҙ шулай һөйләп ҡалдырғандыр.

-- Хәтәр һүҙ!

-- Эйе, *Хәтер.*

Мыйыҡ баш сайҡаны.

-- Туҡтағыҙ, атайымдың әйтеп ҡалдырғаны бөтмәне әле. «Ҡыҙым, — тине ул, — был донъялар ҡатмарлана, бәндәләре ҡатлаулана — һанһыҙ һыуыр хәленән һаҡла үҙеңде. Яуыз Гитлер беҙҙән тыуған тупраҡты онотторторға, ата-баба эҙҙәрен юйылдыртырға, Ватан хисен юғалттыртырға, халыҡтарҙың һәр береһен һанһыҙ һыуыр хәленә ҡуйырға теләгәйне, әммә барып сыҡманы. Беҙҙең ватансылыҡ тойғоһо фашизмдың мәкеренән көслөрәк булып сыҡты. Һанһыҙ һыуырҙар булманыҡ, беҙ Уралды, тыуған төйәкте, бөтөн гүзәл Ватаныбыҙҙы ата-бабалар һәм үҙебеҙ донъя көткән изге ер — Совет иле итеп белеп барса дошмандарҙан ҡурсаланыҡ. Ошо тыуған тупраҡ өсөн ут-һыуҙар кисеп үтеп, Берлинғаса барып етеп, Еңеү менән әйләнеп ҡайтып, инде шул ерҙең ғәзиздәрҙән-ғәзиз тупрағын күрәләтә елгә осортайыҡмы?!» — Бына шулай тине минең тарихҡа әйләнгән атайым. Мыйығығыҙға урағыҙ.

—Булды, ураным, — тине Мыйыҡ. — Бая әйткән һүҙҙәремде кире алам.

—Һүҙҙәрегеҙҙе ифрат тиҙ кире алаһығыҙ икән. Туҡтағыҙ, мин һеҙҙе элек ҡайҙа күргәйнем әле?..

Мәгәр Дилбәрҙең тоҫмал-уйы ошо урында өҙөлдө: Мыйыҡ, ҡапыл ғына

ҡалҡынып, өҫтәлдә балҡып ятҡан бүләк авторучкаға үрелде:

—О, алтын! Дилбәр туташ, тотоп ҡарарға рөхсәтме? — Алтын услаған тарамыш ҡул ҡомһоҙлоҡтан ҡалтырай төҫлө ине, һәр хәлдә, ҡыҙға шулай күренде. Әммә Мыйыҡтың аслан кем икәнлеген һис белмәгәндәй, ни артынан йөрөүе лә уға ҡараңғы ине. Ә уның эше етди, алтынға алҡыныуы ла тиккә түгел — ошо төбәктә йәшерен цех асып алтын иретеүсе, алтын әйберҙәр етештереүсе, «ҡара баҙар»ҙа салғый аҫтынан шуларҙы «осороусы», кешеләргә алтын тештәр ҡуйып ҡара табыш ҡылыусы мафияға тартым *алтын сөрөк* өйөрҙөң эҙен һәрмәштереп йөрөгән эҙәрмән — ҡала милицияһының угрозыск темеҫкене ине ул... Ә ҡыҙҙың хәтере ҡалды:

—Бахыр, бахыр!.. Һеҙгә хикәйәт һөйләп булашҡан мин — йүләр!.. Күҙегеҙҙе бына ни тондора икән. Донъяны алтын аша ғына ҡарап күргән бәндәгә, әлбиттә, алтындан ғәйре бар нәмә лә иҫке-моҫҡо.

Мыйыҡ кет-кет көлгән булды, әйберҙе кире ҡуйҙы:

-- Үҙегеҙ ҙә шул һары шайтанға йәбешеп ятаһығыҙ әле! Ғәфү итегеҙ, туташ...

-- һе! Әгәр бүләккә бирелгән әйбер булмаһа, гитарағыҙ менән ҡуша артығыҙҙан олаҡтырыр инем дә... Һеҙ ҙә ғәфү итегеҙ.

-- Зарар юҡ, зарар юҡ, һе-һе! Ғәфүт итегеҙ, һеҙгә кем бүләк итте, миңә лә шундай ручка бик кәрәк ине...

«Бахыр, бахыр!.. — тип уйлап алды ҡыҙ. — Теләгең шул икән — моратыңа ирештерәйем дә күҙ алдымдан олаҡтырайым!» — Тик, буталлы авторучканы услап алған еренән, олаҡтырмай кире һалды — бүләк булыуы тыйҙы, Әсҡәрҙең үпкәле сырайы күҙ алдында һүрәтләнде...

-- Табышырмын мин һеҙгә, бик кәрәкһә. Тик... башҡа ваҡытҡа ҡалдырығыҙ, ғәфү итегеҙ...

-- Рәхмәт, Дилбәр туташ, рәхмәт -- шулай итә күрегеҙ! — Мыйыҡ, йәһәт йүнәлеп, күләгәләй тауыш-тынһыҙ һыпырылды. Ҡыҙ, еңел һулап, шартлап ябылған ишек яғына ҡалкынып ҡараны ла тағы көрһөнөн ҡуйҙы: ҡыҙыл таҫмалы гитара сөйҙә яңғыҙы шаңғырып тора...

Йәш скульптор, ап-аҡ һынлы Бәндәбикә ҡаршыһына теҙләнеп, йөрәге әрнеүҙән әсенеп, иртә үлгән атаһын хәтерләне. Һалдат кейемдәрен кейеп, тыуған ерҙең тарихын һанға һуҡмаусыларҙың ҡылығы өсөн иңрәүҙәре ҡабатланды:

—Юҡ, күтәрә алмай быны ҡарт һалдат намыҫы! Беҙ Берлинды штурмлағанда...

Хәтерҙә, Дилбәр атай телмәрен ҡырыҫ бүлдерҙе:

—Ҡуйсы әле шул яңғырауыҡлы йөмләләреңде, атай. Ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырғандай, шуны килтерәһең дә сығараһың: «Беҙ Берлинды алғанда...» «Беҙ рейхстагка менгәндә...»

Атай бахыр кинәт кенә кесерәйгәндәй сүгенде, хәтере ҡалып, өндәшмәйерәк ултырҙы. Ҡыҙы ҡайҙалыр сығырға ҡуҙғалғас ҡына, эсемдә ҡалмаһын, тигәндәй, ғәйепле һымаҡ һөйләнде:

— Беҙ алып ҡайтҡан шул яңғырауыҡлы һүҙҙәр булмаһа, ошо көндә был донъяла һеҙ ҙә булмаҫ инегеҙ, ҡыҙым... Эйе, булмаҫ инегеҙ...

Дилбәр, күҙ йәштәрен төпкә йотоп, «Ил Инәһе» матҡып тотҡан ҡыҙыл кирбескә текләне...

## УН ТУҒЫҘЫНСЫ СӘХИФӘ

Хөппөлгәрәй-бажаһынан йәне имгәнеп ҡайтҡан Мотал арандай киң фатирында яңғыҙ башы ҡаңғыра, ҡатынына «бөгөн мин дә һуңлап ҡалам» тигәненә үкенә: иртәрәк ҡайтһалар, йөрәгенең янып барыуын һөйләр ҙә эс серҙәрен бушатыр — еңелерәк булыр ине, исмаһам. Өҫтәүенә, төшкө сәй эсергә юл ыңғайы һуғылғанында ла йүнле һөйләшә белмәне — хәләл ефетен рәнйетеп сығып китте. “Ярлауыҡ”та ҡунаҡ табынында була алмаясағын әҙәмсә яғымлы итеп, эс-бауырына кереп кенә һеңдерә ала ине бит. Мөхлисәһе, әлбиттә, алдына алғанын үтәмәй ҡалмаясаҡ — ҡунаҡ мәжлесе ресторанда унһыҙ ҙа йыйыласаҡ, әммә ҡыуаныс урынына ҡан йотоп йөрөйәсәк... Шуны белә тороп, ниңә ул килеләнде? Командировкаға башҡа ваҡытта ла сығып китә ала ине бит! Атай бахырҙан ҡалған ошо ҡырыҫлыҡтан — «Шаһибәрәковтар комплексы»нан (матур ҡатынының билдәләмәһе!) ҡайһылай арынырға?.. Хәйер, көнө шулай килде шул: күҙен тырнап асыу менән Ҡыҙыл башҡорт тарафынан ҡамсыланыу... Хәтерләүе имәнес: ике күҙе уттай баҙлап янып, «хәйерле юл» урынына: «Намыҫ! Намыҫ! Намыҫ!» — тип екереп ҡалды уға, күпме йылдар бер ҡалаҡтан ашаған ҡорҙашына. Тел төбө нимәгә бара? «Ҙурҙы өмөт итеп йөрөмә -- үҙ хәлеңде үҙең барлап ҡара ла, намыҫың менән кәңәшләшеп, алдағы йыйында асыласаҡ вакансиянан – Яҙыусылар берлеге идараһының рәйесе вазифаһын дәғүәләүҙән үҙ теләгең менән баш тарт!» — тип тумбытыуымы? Ә ниңә тәғәйен ул ғына баш тартырға ла бушанасаҡ креслоға башҡа берәү менеп ултырырға тейеш? Әллә ул, Мотал, ана шул башҡа берәүҙән аҙыраҡ эшләнеме? Йәмәғәт бурыстарын аҙ башҡарҙымы? Шул уҡ Бикләмешевтең үҙен генә алайыҡ: республика күләмендә берәй сәйәси сара моронланымы, егеттәре фарман йөкмәп йүгереп килеп етә: «Ҡәҙерле Мотал Булаттимерович, беҙҙе ҡотҡара күр, зинһар, — шулай ит, былай ит!..». Төрле яҡтан тарталар, борсойҙар, бүлдерәләр, эш урынынан йолоп алып китәләр. «Һөйөклө Мәрүән Карамийығыҙ етмәйме ни һеҙгә?» тиһәң, яуап бер: «Ялҡынлы публицист һүҙе кәрәк!». Илдә йәки Ер шарында берәй ғилләә ҡуптымы, көнө-сәғәтендә матбуғатҡа, радиоға, телевидениеға уның фекере зарур. Театр премьералары, юбилейҙар, тантаналы ултырыштар унһыҙ уҙмай. Республика, ҡала күләмендәге һәр йыйылыштың түрендә лә ата ҡаҙҙай ҡайҡайып ултырырға тейеш. Сөнки ул — танылған яҙыусы ғына түгел, ә төбәгебеҙҙәге тәүге трилогия авторы, әҙәбиәтебеҙҙең ғорурлығы һәм ялҡынлы йәмәғәт эшмәкәре. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләген, йәки орден бирергә тиһәләр – Мәрүән Карами әҙер, ә «ялҡынлы публицист» онотола. Ана шул шау-шоу ҡалҡыуысы уны төп кәсебенән — проза яҙыу өҫтәленән айырып, хоҙайҙар йәшәгән Олимп тауының түбәһенә күтәрә. Мотал белгән аҙмы талантлы әҙип унда, дан-шөһрәткә талантын алмаштырып, «яҙыусы яҙырға тейеш» тигән изге ҡағиҙәне йомро оса аҫтына түшәп, үҙен ашатҡан һәм үҫтергән эшлекле яҙыу

өҫтәленә өҫтән аяҡ һәлендереп ултыра. Яҙмау — яҙыусының үлеме, тигән асы хәҡиҡәтте лә белә... Быуып алған аҡ әжәлдең ләззәтенән наркомандың баш тартмағаны шикелле...

Ләкин Мотал ана шуларҙы күрә, белә — инде иблес ҡотҡоһона «юҡ!» тип тә ҡырт-киҫә алыр.

«Әммә ҡырҡ йәш — тап ана шул иң хәл иткес мәл түгелме?.. Партияның хөрмәтле бурысы итеп йөкмәтелгән заманса романың -- «Эшсе синыф ғәли йәнәптәре»ң «пшик!» булды...Яҙыласаҡ *иң һуңғы төп* романың, хатта исеме лә табылмаған хәлдә, авторының оҙайлыға һуҙылған «түл йыйыу» осорон кисереп, өҫтәлеңдәге аҡ ҡағыҙ күбәһе рәүешендә зарығып-көтөп ята»...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, яҡын ҡәләмдәштәре күптән үк ашыҡтырып димләһә лә, идараға рәйес булыу әҙип арбаһына бишенсе тәгәрмәс кеүек тә ул. Ләкин баш тарта алмай. Иртәгәһенә үк, капиталистар әйтмешләй, биржала барлыҡ акцияһы түбән тәгәрәр ине: «Әһә, теге юғары посҡа лайыҡ түгел, тип табылған ҡағыҙ буяусымы әле был?!.» Китап яҙмышында әлегәсә талант түгел — юғары кресло бойора. Унан килеп, кемдә — талант, кемдә һәләт икәнлеген кем белһен?.. Ҡалҡыуысынан яҙҙымы, ул үҙенең элекке төп асылына ҡайтасаҡ. Төп асыл шунан ғибәрәт: партия өлкә комитетының еле ыңғайынса һыҙғырыусан башҡорт белинскийы башлап ебәргән маһир тәнҡит күккә сөйөп тә ил теленә кермәгән, кәштәләрҙә ятып ҡаҡһыған трилогия... Онотолған бер-нисә очерк йыйынтығы... Тимәк, *урта ҡул* яҙыусы... Сигенеберәк тор, туған, даһиҙарға юл бир! («Даһи» тигәндәре лә әлегә уның һымаҡ уҡ урта ҡул, әммә юғарыраҡ вазифа биләүсе инде!..). Урта ҡул ғына көйөнсә нәшриәттә йыйылма томдарын сығарырға киҙәнәме, һөмһөҙ?! Выжт, темпландан!.. Артабанғыһы билдәле — ғаилә трагедияһы. Табанынан түбәһенәсә алтын-көмөш аҫынған һылыу ҡатын бар — аҡса юҡ. Һат машинаңды, һат дачаңды. Улары ғына етмәй, ниңә тиҙерәк сығартмайһың томдарыңды?! Бер үк балыҡ башы — спиралдең икенсе юлағы башлана. «Сәскә кеүек егерме йыл ғүмеремде кемгә ҡорбан иткәнмен!.. Ах, Ҡыҙыл башҡортҡа ғына йәбешеп сыҡҡан булһамсы! Ҡамыт аяҡ Сәлимә ниндәй бәхетле!..» Шундай мәлдә тейешле кимәлдә тотоп торған ҡалҡыуыстан ҡолаҡ ҡағырға — Мотал һантый түгел дә! Ул белә: әҙәби дан — һылыу ҡатындар кеүек, нескә биленән һығыбыраҡ алмаһаң, башҡа ҡулдарға күсә.

Телефон шылтыраны. Хәйерһеҙ малай, баяғы шалопайҙыр!.. Ниндәй заманға килеп еттек: әсә ҡарынынан сыҡмаҫы элек үк протекция ныҡыйҙар... Художник!.. Алмайым трубканы — матур тигән еңгәйе менән эш ҡылһын. Салғыйы бик тә янып барһа, тәпәйләп тә эҙләп табыр. Ә хәҙер, ул өйҙә юҡ икән, тиһен дә тынһын — былай ҙа йән көйгән саҡ.

Тертләтеп, йәнә електәргә үткәҙеп зыңғырлай. Ах был алтын ялатылған һалҡын сит ил аппараты, ҡәһәр һуҡҡыры!..

— Алло, алло! Ишетәһеңме, ағайым?

Мотал трубканы һалды. Ишетмәгән ҡайҙа ул! Теге юлы ишеткәндәренән ҡолаҡтары зыңлап тора. Ниңә барҙы ул унда — һөйөклө һеңлекәшенең саҡырыуына?! Үҙ итәгенә ут ҡапһа, ныҡышмал да һуң был Гөлзифа: бына йәнә зыңғырлай, ҡолаҡ иттәрен ашай. Саҡ ҡына көтөп тора ла кире-ҡабат зыңғырлай.

Юҡ инде, һеңлекәйем, батырға ла йән кәрәк. Ауҡанлыкта ҡалдырып тор бөгөнгә.

Башы сатнауҙан миктәп, өҫтәл тартмаһынан төймәләй генә ҡалай ҡоторсоҡ ала. Аҡлы йәшел түңәрәккә биш ҡанатлы алтын йондоҙ һүрәтләнгән ҡапҡасын асып, хуш еҫ аңҡытҡан гәрәбәләй һары майҙы, Мөхлисәһе өйрәткәнсә, маңлайына, ике сикәһенә, елкә соҡорона һөртә — һуңғы йылда модаланған атаҡлы вьетнам бальзамы. Яғылыу менән көллө тәнгә эҫе ялҡын йүгерә. Өҫтәлендә һағалап ятҡан алтын авторучкаһы һәм, ғөмүмән, алтын һарылы көллө нәмәләрҙәй, был да хәҙер дефицит — Мөхлисәһе ҡайҙандыр аулап алып ҡайтҡан артҡы ишек бәрәкәте... Бына шулай шау-алтынға төрөнөп, *алтын сөрөккә* әйләнеп, үҙебеҙ ҙә һиҙмәйенсә, күңелдәребеҙҙең аҡ елкәнен, иң саф кешелек сифаттарын ҡомһоҙ ҡара упҡынға[52] тәгәрәтәбеҙ, дефицит ҡылабыҙ түгелме?.. Ана анауы ярһып-ярһып шылтыраған телефон да ҡара упҡынға йәнде тоташтырмаймы, шунда *алтын сөрөк* булып ыуалған йәндәрҙең «разбой»ҙарын һалмаймы?..

Дерелдәгән ҡулы трубканы күтәрҙе.

— Алло-алло! Бер туған ағайыммы һин, түгелме? Килеп хәлебеҙҙе лә белмәйһең, исмаһам... — Һүҙе тиҙ генә бөтмәҫен белдереп, Гөлзифа һеңлеһе танауын мышҡылдатты.

—Бәй, ҡай ерең кителде тағы? Төнә генә күрешкәйнек тәһә.

-- Ул «төнә»ңә нисә аҙна тулды икән...

—Ни булды?

-- Кейәүең аҡылдан яҙған.

-- Нимә?!

-- Йәнәһе лә белмәйһең! Уны Алпаров дөмбәҫләгән йыйылышта булманыңмы ни?

-- Булмағайным шул, ситтә йөрөп ҡалдым. Ләкин уны яҡлаусылар күп, тиҙәр.

-- Шуның менән генә осланмаған шул...

-- Аңламайым.

-- Беләһең бит кейәүеңдең электән үк килделе-киттеле икәнен. Ҡасандан биреле интегәм. Аҙып-туҙып йөрөп Асылыкүл ене ҡағылып ҡайтҡас, бөтөнләй баш бирмәй башланы. Йәшәр әмәл ҡалманы...

Йәнәш трубканан тыңлаған әсәй-ҡарсыҡ ҡыҫылды:

-- Һин, улым, берәй сара күреп, аҡылға ултырт шуны. Юғиһә баш-баштаҡлығы, ғилми даирәләрҙән уҙып, Хөкүмәткә ирешкән.

-- Бәй, насар түгел бит был: хөкүмәттән теләктәшлек табыр, бәлки.

-- Тапты, ти, тапмай ҙа ни! – Һеңлекәше йәнә мышҡылданы. – Тыңларға ла теләмәйҙәр, ти, уны. Шунан биреле илерә лә ҡотора.

-- Туҡта, портфелен артып сығып китте, тигәйнең түгелме?

-- Китһә ни, тағы ҡайтты әйләнеп. Ана, кухняла тыҡшынып ултыра. Мал да бит тоҙ ялаған еренә ҡайта.

---

[52] Ҡара упҡын — ғәләмдәге ғәҙәттән тыш ныҡ ҡыҫылып-тығыҙланған, күҙгә күренмәҫ йондоҙ. Ғәләмдән бөтә нурҙарҙы убып-йота, төбөнән кире сығармай.

-- Ҡайтҡас һуң, ниңә мине борсойһоң?

-- Әйтәм бит, аҡыл көршәге сатнаған. Бер һүҙеңә ҡаршы ҡырҡ яуап таба. Йәнәһе, башҡорттарҙың беҙҙең эраға тиклем үк ошонда йәшәгәнлеген дәлилләгес *ырын яҙыулы* таш таптым, тип, *дөйөм концепцияга* ҡаршы барып, бер юлы үҙенең дә, беҙҙең дә ғәзиз башҡайҙарҙы ашатырға йыйына.

-- Кемдән?

-- Кемдән икәне мәғлүм. Мәғүн профессор Хәкимуллиндың бер ҡулы фәндәр академияһында булһа, икенсеһе академия театрында, филармонияла икәнен беләһең бит! – тигәйне әсәй-ҡарсыҡ, Гөлзифаһы үкһене:

-- Репертуар мәсьәләһен ике туған ҡустыһы хәл ҡыла... Ә килене...

-- Етер, артабанғыһы кәрәкмәй! — Моталдың сикә тамырҙары тартышты: йәнә лә шул Хәкимуллин!.. — Һин, һеңлекәйем, ирең хаҡында һүҙ башлағанһың икән — аҙағын да шуның менән бөтөр!

-- Ҡороғоро булды ул ир... — Трубканан оҙон-оҙаҡ шыңшып һулҡылдау ҡойолдо. — Тауыҡ менгән ситәнгә, «кикрикүк» итергә, тигәндәй, тарих акулалары менән көс һынашмаҡсы, эсем ауырыуы! Уф, Ҡондоҙбайҙың таҫма теленә алданып харап ҡына булды бит йәш башҡайым!

-- Эш үтмәҫ элек уйларға кәрәк ине, сүлмәкте ярғас түгел. Әйткәйнем бит мин һиңә.

— Үҙәгемә үткәҙгәнсе әйтмәгәнһең икән шул, ағайым.

Бер туған һеңлеһенең үпкә һүҙенең йәнде иҙгән ауырлығын самалап: «Йәнә лә мин ғәйепле!» -- тип, эстән һыҙып алды Мотал. Исеме лә билдәһеҙ бер шағир йораты Йәүҙәт Әғләм улы Ҡондоҙбаевты һеңлеһе өй кейәүлегенә эйәртеп алып ҡайтҡан, имеш, тип ишеткәс, кем һуң йүгереп барҙы, эште ҙурға ебәрмәҫ элек төҙәтергә тырышты? Үс иткәндәй, әсәйҙәре Ғәзизә ҡарсыҡ, йылдағыса, Ташкенттағы туғандарында ҡунаҡлап ҡалған мәл ине. Яңғыҙ үҙенә ҡалай ҡыйынға төштө! Йөрәген ярып бирерҙәй булып инәлде, тик һүҙҙәре стенаға бәрелгән борсаҡмы ни. Үтмәне. Гөлзифа һеңлекәше, Йәүҙәт Әғләм улының ҡаҙ муйынына аҡкош ҡанаттарылай һомғол беләктәрен сырмалдыртып:

—Мөхәббәтемдән мине бер кем дә, хатта Хоҙай бабай үҙе лә айыра алмаясаҡ! — тип ҡырт-өҙҙө лә ҡуйҙы, ағай хаҡы бар икән тип тә белмәне...

Моталдың телефон трубкаһын тоткан ҡулы дер-дер ҡалтыраны, тауышы, ҡарлығып, тамағын һыҙырып сыҡты:

-- Кейәү-бала үҙе өйҙәме әле?

-- Ана, һөҙгәк бүгәйҙәй ташбайып инеп килә.

-- Ярай, хәҙер барып етермен. Әсәй, кескәй табын ғәләмәте хәстәрләй тороғоҙ.

Яҙыусы, teләһә-теләмәһә лә, тормоштоң ваҡиғалар ағылышын үҙ һөнәре бизмәненә һалырға — «иң һуңғы төп роман»ы концепцияһына ярашлы яҡка бороп йәтешләргә -- теҙгенде ҡулда ҡыҫып тотоп тормоштоң үҙен идара ҡылырға тейеш. Кейәүе мәсьәләһендә лә шулай уҡ. Моталса, тарих фәнендәге һуңғы һүҙ — партия хәҡиҡәте — «урындағы корифей»ҙар Ҡотлоев менән Хәкимуллин ҡарамағында, Ҡондоҙбаев иһә ана шул асы хәҡиҡәт тәртәләрен тибеп һындырырға тыбырсыныусы, һөҙөмтәлә үҙ башына ла, башҡаларҙыҡына ла

«планлаштырылмаған һәм аҡланмаған хәүеф-хәтәр» генә яуҙыртыусы ахмаҡйән булып сыға. Эйе, тай-тулаҡ Ҡондоҙбаевҡа, үҙен ниндәй генә йоморо башлы һанаһа ла, ауыҙлыҡ сәйнәп тибенергә әле иртә — заманаһы ул түгел!.. (Романы иҫкә төштө). Дөрөҫ, тормоштағы кеүек үк, әҫәрҙә лә заманаһының «боҙоҡбаш» элементтары ла ҡатнашыуы кәрәкле — сюжет көсөргәнешен ҡырҡыулатыу, кәм тигәндә фабуланы төрләндереү, йәнләндереү хаҡына. Мәгәр тормош менән әҫәр араһында айырма: тормош мәңге дауамлы: аҡтың -- ҡараға, ҡараның – аҡҡа әйләнеү һәләте бар, әммә автор заманаһы ҡалыбына ҡыҫылған, ул унан сыға алмай, әҫәр автор ғүмерен һыйҙырған ҡалып эсендә яҙылып бөтөргә тейеш — Ҡондоҙбаевтарҙың хәҡиҡәт юллап ауыҙ-морон ҡанатышыуҙарын тормош үҙе логик финалға еткереүен автор көтөп ята алмай, уның быға ваҡыты юҡ. Шуға күрәлер ҙә Мотал, үҙе лә шәйләмәҫтән, гонаһ шомлогона бирелеп, кейәүенең дәррәү аҡылға ултырыуын — ул даулаған фәнни хәҡиҡәт уның оппоненттарының ҡулында икәнлеген, ә ул үҙе, тинтәк баш, хәҡиҡәт тип буш ҡыуыҡ ҡармап сәбәләнеүен таныһын ине, роман концепцияһына ла ифрат тап килер ине, тип көтә. Һәр хәлдә, романда шулай буласаҡ. Кейәү-баланың ошоно аңлап айнып хәлгә етеүен тиҙләтергә, дөрөҫөн генә әйткәндә, әгәр ошо сутырмаҡ юлын ҡыуһа, ярыҡ ялғаш янында һемәйеп ҡаласағын әшкәртергә кәрәк, сөнки башҡаса тормош та, яҙыласаҡ романы ла юл ҡуймай...

Әсәй-ҡарсыҡ үҙ бүлмәһенә бикләнгән, Гөлзифа — кухняла, ә кейәү-бала йомош табып — урамға, бәләкәстәре Морат ихатала уйнарға сығып киткән. Өйҙә уға яҡшы таныш «һалҡын һуғыш» мөхите хөкөм һөрә.

—Ташбайып ултыра, тигәйнең түгелме һуң? — тине Мотал, ҡарашы менән бүлмәне әйләндереп.

-- Килереңде шәйләгәс, магазинға һыпыртты.

-- Эш ниҙә һуң? -- Һеңлеһе өндәшмәне. -- Әллә артығыраҡ һала башланымы? Иҫереп болармайҙыр бит?

Гөлзифаның керпектәре сыланды:

-- Әгәр иҫерһә, еңелерәк булыр ине әле, ағайым. Айыҡлығы менән үтә үҙәккә. — Кранды шарылдатып, ҡашығаяҡ шалтыратты. Әсәй ҡарсыҡ та төлкө: улының тиҙерәк ысҡынырға йыйыныуын аяҡ тауыштарынан уҡ самалап, стена үтә ауаз биреп өлгөрҙө:

-- Ҡайҙа бараһың, балам?

-- Бармайым да ул,  әсәй. Кейәүебеҙ ҡасан пәйҙә булыр икән?

-- Ҡасан да бер моронлар, моронламай хәле юҡ. Сыҫҡаҡ быҙау ҙа имгән еренә ҡайта. Ә һин табан ялтыратырға ашыҡма. Ана, телевизор ҡарай тор.

-- Көтмәй әмәл юҡ инде. — Әммә телевизор ҡайғыһы китте — әсәй ҡарсыҡтың кинәйәле тел төбөнән хәүеф сорнаны күңелен. Шулай уҡ бында ла эш тәрәнгә төшкәнме?.. Күн көплө (атайҙан ҡалған!) иҫке креслоға арҡа терәп, күңелһеҙ уйҙарға сумды. «Бынағайыш тамаша, аңламаҫһың был донъяны, — тип рәнйене эстән. — Берәүҙәр иҫерек ирҙәренән зар-илаһа, быныһын иренең айыҡлығы ҡаҡшата. Ҡайҙа икән ғәҙеллек?» Ләкин һеңлеһенең һүҙендә хаҡлыҡ бар: ул «айыҡлыҡ» был өйгә, ысынлап та, «Асылыкүл ене һуғылып», үткән йәй эйәреп ҡайтты, быға Мотал да ғәйепле. Ниңә шунда күрәләтә түрәләрҙең башы

аша атлата торған хәтәр юлдан кейәүен тотҡарламаны? Гөлзифа атаған акулаларҙан һөйәген онтаттырырғамы? Ул саҡта бит был тиклем ҙурға китмәгән — кейәүкәйҙең «ен һуғылыуы» ҡыҙыша ғына башлаған -- башына бер сүмес һалҡын һыу ҡойоу ҙа һыуытыр ине. Ғүмерендә аяҡ баҫмаған Асылыкүл буйына уны, Моталды, яҙмыш ҡулы, моғайын, шуның өсөн юлландырғайны ла. Ә ул...

Кейәүенең «енле» юлына арҡыры төшә алмауына, ихтимал, ғүмерендә тәүге күргән Асылыкүлдең сихриәтле тәьҫире, унан да бигерәк, беренсе аҙымдан уҡ күлдең яр буйында тап килешкән кешеләр, күлгә бәйле улар һөйләгән серле хәлдәр, риүәйәттәр үҙ шауҡымын һалғандыр? Ҡаланан бит директор бажаһы Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаров, бауыр аҫтынан ел үткәреп ҡайтайыҡ, тип, ҡулънан һөйрәкләп тигәндәй, ҡара «Волга»һына ултыртып алып киткәс, өҫтәлендә ярым-ярты туҙрап ҡалған романы өсөн көйөнөп, тәбиғәттең сағыу-алсаҡ төҫтәренә лә ерле иғтибар итмәй, яр башында алйып йөрөнө тәүҙә. Көтмәгәндә, бер көтөү ҡарлуғас балаларылай теҙелешкән уҡыусыларын ауыҙына ҡаратып, Асылыкүлгә ҡул иҙәп күрһәтә-күрһәтә мөкиббән һөйләгән сал сәсле бер ағайҙың — әҙәбиәт уҡытыусыһының -- хикәйәте ҡолаҡҡа һүреп керҙе:

«Ана ята һыу ситендә алтын тараҡ ялҡылдатып башҡорттоң Арта-би сура Ана ҡото[53] Һыуһылыуыбыҙ алтын сәсен тарап ултырған, уның алтмыш ҡолас оҙонлоғондағы толомдарына тотоноп, Заятүләк батыр тылсымлы һыу аҫты батшалығына сумып төшөп киткән тош — ырҙын табағындай шыма яҫы таш. Ана тора яр башында, Ҡарағастау морононда, уның толпар Күкбуҙатын[54] теҙгененән ҡарағасҡа бәйләгән изге урын. Бына һыу аҫты донъяһынан, ажарлы Аҡбуҙатҡа атланып, сысҡан һыртлы аҫыл ҡола йылҡыларҙың икһеҙ-сикһеҙ өйөрөнөң арҡаларын йылҡылдатып, Заятүләк килеп сыҡҡан, ер тетрәтеп менеп киткән текә үр. Һыу ситендә аунап ята Аҡбуҙаттың тояҡтары аҫтынан һынып-ҡубынып төшкән тирмә төбө дәүмәллеге ҡаяташтар, ялпаҡ сағыл һырттарында уйылып ҡалған Аҡбуҙаттың оло ҡаҙан ҙурлыҡ тояҡ эҙҙәре...»

Башҡорт мифологияһының бер тармағы, үҙенең тыуған төйәгенә[55] кире ҡайтып, ҡабат башланғандай була Моталдың күҙ алдында. Башҡорт халыҡ ижады дәресен ҡайһылай йәнле үткәрә был уҡытыусы!

«...Халҡыбыҙҙың риүәйәттәре буйынса, «Асылыкүл диңгеҙе» ер аҫтынан үҙенең «игеҙәгенә» — Ҡандракүлгә тоташа. (Мәҫәлән, ике күлдең дә һыуы бер үк кимәлдә, икеһендә лә бер үк тоҡом балыҡтар үрсей, имеш; һәм ҡасандыр ошо беҙҙең Асылыкүлдә ғарыҡ булған атлы арба бер нисә көндән һуң Ҡандракүлдә ҡалҡып сыҡҡан, ти...). Ошо ырым арҡылы ла халыҡтарҙың ер йөҙөндә эҙ ҡалдырып уҙған тарихи юлын төҫмөрләргә мөмкиндер: легендалар буйынса, мәҫәлән, Мәскәү ҡалаһы янындағы Бездонное күле «ер аҫтынан диңгеҙ-океанға

---

[53] Арта-би сура Ана ҡото — зороастризм (ҡояшҡа табыныусылар) динендәге ер-һыу-тереклек хоҙайбикәһе. Һуңынан ул фольклорҙа һыу эйәһе бисураға — һыуһыпыуға әйләнә. Башҡорттар исламға ҡәҙәре ошо бисура-хоҙайбикәле зороастризм динен тотҡан.

[54] Күкбуҙат — варианттарҙа Аҡбуҙат.

[55] Асылыкүл — «Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» һ. б. эпостарыбыҙ тыуған урын.

тоташҡан» (имеш, алыҫ диңгеҙ-океанда батҡан карап һыныҡтары Бездонное күле өҫтөнә ҡалҡып сыҡҡан); хәҙерге Бүрәт АССР-ындағы Гузээн күле лә шундағы икенсе бер күл — «Хубсугул диңгеҙе» менән, Ҡытайҙағы Кукунор күле иһә унан көньяҡтараҡ Ҡыуанһыуға[56] сығанаҡ биреүсе икенсе бер күл менән дә шулай ер аҫтынан тоташа». Тарихтан байҡаһаҡ, исемдәре аталған шул урындарҙа ҡасандыр беҙҙең алыҫ бабалар ерегеп көн иткәнлеге, халыҡтарҙың тамырҙары, тимәк, бер-береһенә «ер аҫтынан» да тоташҡанлығы асыҡлана...»

Моталдың хәтерендә: моңло итеп шөңгөрләп торған скрипкаға сыбыртҡылап һуҡҡандағылай ауаз — мыҫҡыллы шарҡылдап көләү... Колхоз баҫыуында һоло һыпырып туйынғандан һуң юл ситендә үрә ҡатып ҡайҡайып торған һимеҙ айыу кеүек күренә был минуттарҙа уның мыҡты кәүҙәле бажаһы Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы — упҡындай ҡара өңлә ауыҙын киреллдереп, төпһөҙ зәңгәр Күккә салҡайып хахылдай:

—Йүкәлә икән сәтләүек — таптың ата-бабаларҙың төйәген!

Әҙәбиәт уҡытыусыһы тоҡана — ҡолаҡ остары ҡыҙара:

-- Хөрмәтле директор, мин һеҙҙе яҡшы беләм. Үҙегеҙҙең ҡыҙығыҙҙы ла уҡытҡайным ҡасандыр. Заводығыҙ көмөш һыулы Ағиҙелгә ҡара мазут урғылтҡандай булды был көләүегеҙ, ғәфү итегеҙ.

-- Пардон, кем һеҙ, был ни тигән һүҙ?! Ағиҙелгә мазут аҡҡанын ҡасан күргәнегеҙ бар?! Белмәһәгеҙ, белегеҙ: «мазут» тигән компонент бөтөнләй юҡ ул беҙҙең производствола! Һөрһөп бөткән яла!

-- Мазут булмаһа, башҡа ҡара шыйыҡлыҡ.

-- Ғәфү итегеҙ, бәлки, аҡ шыйыҡлыҡтыр – тамағығыҙ төбөнә шешәнән ебәргән? — Хөппөлтәрәй хахылданы.

-- Улайһа, ниңә балыҡ тоторға бында килдегеҙ?

Әгәр ҡалала, заводта булған хәлдә, Яубаҫаров, әлбиттә, үлсәберәк һөйләшер, директорлыҡ бәҫен төшөрмәҫкә тырышыр ине. Ә тәбиғәт ҡосағында үҙен «вольный казак» тойҙо:

-- Теләһәм, Байҡал күленә лә барырмын — үҙемдең хәләл ялым!

-- Ялығыҙ хәләлдер ҙә ул, машинағыҙ дәүләттеке бит әле... Тегеләй-былай йөҙ иллешәр километр ҡыуҙыртып... Яғыулыҡ хаҡын кем күтәрер икән, тим, иптәш директор?

-- Меҫкенкәйем, — әсе үте һытылды директорҙың, — дәүләтебеҙ тигән булып, үҙ кеҫәңде ҡайғыртаһың, буғай, һин. Ағиҙел хаҡында мығырлауың да фәҡәт шуның өсөн генә. Тыныс бул: минең юл хаҡы һинең бюджетҡа һуҡмаҫ! — Айыу тәпәйеләй яҫы ҡулы һауа ярып һелтәнде. — Тфү! Киттек, егеттәр, ваҡ бәндәләр ҡырынан!

Яубаҫаров шоферы менән — бер яҡҡа, әҙәбиәт уҡытыусыһы икенсе тарафҡа тартылды, Мотал яңғыҙы ҡалды. Йәнде шыраулаған йәмһеҙ күренеште онотторға тырышып, улар яғына арты менән әйләнде, күкрәк киреп һуланы: их, һауаһы ла һауаһы! Йотлоғоп-йотлоғоп шифаһын эсәһе урында, ебәрәләр бит

[56] Ҡыуанһыу — карталарҙа Хуанхэ тип тә, Желтая тип тә яҙыла, хәҙерге Ҡытайҙағы йылға исеме. Башҡортса ла «кыуан» — һары, ә Ҡыуанһыу — Һарыһыу.

маҙаны!

Сағыу дала ҡояшынан ялтлап ятҡан күл йөҙө — йәшелле-күкле тулҡындарын тәгәрләтеп уйнаҡлай. Күҙҙе рәхәт талдырыусы икһеҙ-сикһеҙ иркенлек, хозурлыҡ... Тирә-яҡта сал ҡылған, быуаттарҙан килгән сафлыҡ, мөһәбәтлелек, олпатлыҡ, эпостар дәүмәллеге. Уралда тыуып-үҫеп, ошо йәшенә етеп, тәбиғәттең былдай ҙа хозур мөғжизәһен картала зәңгәр тамсы рәүешендәрәк кенә күреп йәшәгәне өсөн Мотал көрһөнөп ҡуйҙы. Әгәр ошоно күрә алмай үлеп китһә?!.

Сеү! Ҡайҙа ултыра әле ул?!. Гөлзифаның ҡулындағы сынаяҡ сеңләп төшөп китте лә иҙәндә селпәрәмә килде, ярсыҡтары сәселде, әсәй ҡарсыҡ һуҡраныуы ҡушылды. Фекер ағылышы өҙөлдө лә Мотал ҡабат үҙенең бөгөнгө көнөндә таш ҡалала — һеңлеһе өйөндә баш-баштаҡ кейәүҙең магазиндан ҡайтыуын көтөп ултырыуын шәйләне.

—Асылыкүл тип әйттеме, сәсе үрә тороп, күҙҙәре алара ла китә, ауыҙы ни һөйләгәнен ике ҡолағы ишетмәй, — әсәй-ҡарсыҡ мыжыны. -- «Ас-бирән-эт» сағында илергәне етмәгән!

-- Күпме әйтергә була, әсәй, «Ас-бирән-эт» түгел, ә аспирант! — тип төҙәтте Мотал, әсе ҡауын ҡапҡандай, йөҙө-сырайы һытылып. — Унан килеп, хәҙер ул күптән аспирант та түгел инде, ниңә шул бер һүҙҙе туҡтамай тылҡырға!..

-- Аһ-аһ, профессор булып уҡ киттеме ни?

-- Штаттағы кесе ғилми хеҙмәткәр, быны белергә ваҡыт.

Әсәй-ҡарсыҡтың хәтере ҡалып та ҡуйҙы:

-- Көсөк кенә шул, ташҡүлсәйем, бала атаһы булырға өлгөрһә лә.

-- Көсөк түгел, әсәй, кесе! – тине Гөлзифаһы.

-- Аһ, көсөк ни ҙә «ас-бирән-эт» ни — икеһе лә бер инде — ус ялап ҡына көн күрә. Хужаһының усын танымай башлаһа, маңлайына итек үксәһе ҡуна. Ҡотлоев менән Хәкимуллинды аңғыра тип белдеңме? — Ике бөртөк һары ҡыл үҫкән йоҡа иренле ауыҙы йәмерәйҙе. — Пөшшш, Асылыкүл яҙыуы, имеш! Шул тиклем дә иҫ китерлек күлме ни һуң ул?

-- Эйе, әсәй. — Асылыкүлде лә күрә алмай ошо йәшенә еткән әсәһен Мотал ҡыҙғанып ҡуйҙы. Зиһене ҡабат былтырғы йәйҙең тылсымлы көнөнә ҡайтып, яр башының аҡкөмөш ҡылғандарын, диңгеҙ һымаҡ йәйрәп ятҡан йәшкелт һыуҙың аҡ яллы тулҡындарын, ҡандай ҡыҙыл ҡом-таштарға суп-суп бәрелеүҙәрен дә тойомланы.

...Өйҙән сығып киткәнендә Мөхлисәһенең һыуға инмәҫкә киҫәтеүе ҡылт итеп иҫенә төшөп, шомланыбыраҡ, көйәнтәләп яр буйынан менеп килеүсе киленсәктән һорай ҡуйғайны Мотал:

-- Әйтегеҙ әле, һеңлекәш, дөрөҫмө шул: Асылыкүл йыл һайын бернисә кешене йота, имеш...

-- Тәүбә-тәүбә, кем яға ул яланы? — Ҡарлуғас ҡанаттарылай һыҙылып киткән ҡаштар аҫтынан ике бөртөк ҡуҙлы ҡара төртөк Мотал күҙҙәрен кейҙөрөрҙәй ҡараны. — Асылыкүл, бахырҡай, изгеләрҙән-изге әсәйебеҙ бит ул — ҡәҙерен генә белмәйбеҙ... Асылыкүл, бахырҡай, берәүҙе лә йотҡаны юҡ һәм йотмай... Бына быйыл да һеҙҙең кеүек ҡаланан килмеш алты кеше, кәмәләре

ҡапланып, һыуға ғарыҡ булды — уның өсөн Асылыкүл ғәйепләме ни? Араҡы эсмәһендәр! Иҫереп һыуға төшәләр ҙә Асылыкүл, бахырҡай, әтвисәй... Ана, күрмәйһегеҙме ни: яр башында күпме шаҡшы шешә тумарлап ята?!. Юҡ-юҡ, Асылыкүл — әсәйебеҙ ул беҙҙең, рәнйетмәгеҙ бахырҡайҙы!

«Бахырҡай? Ниңә бахыр?»

-- Һеңлекәш, ниңә был һыу Асылыкүл тип аталған?

-- Хәтерегеҙҙәме, бынан биш-алты йыл элек баш ҡалала бөтә илдең ғалимдары башҡорттоң килеп сығышын тикшерҙеләр — гәзиттәрҙә шауланы...

-- Булды ундай хәл, — тине Мотал, көләмһерәп.

-- Ана шунда ҡатнашыусы бер ғалим ағай бында ла юлыҡҡайны. Күл буйҙарын ҡыҙырып, осраған берәүҙән тарих тиреп йөрөнө, үҙен төрөкмән тип танытты. Шунда ул беҙҙән һорай ҡуйҙы: -- «Донъялағы иң аҫыл ат тоҡомон беләһегеҙме?»

-- Донъялағы йылҡының иң аҫылы — Төрөкмәнстандың ахал-текин тоҡомо, — тине беҙҙең зоотехник.

-- Әммә-ләкин төрөкмәндең дә, башҡорттоң да әкиәти батырҙары тап шул толпар тоҡомона атланып донъя гиҙгәнен беләһегеҙме?

-- Нисек була инде улай?

— Сөнки аҫыл ахал-текин тоҡомо — һеҙҙең ошо Асылыкүлдән сыҡҡан, күл дә шунан «аҫыл-ат-көн»[57] аталып йөрөтөлгән дә «Асылыкүл»гә әйләнгән, ти ул. Аттарҙың бынан сыҡҡанлығын «Урал батыр», «Аҡбуҙат» һәм башҡа күп эпостарҙа хикәйәтләнә. Мифология, тиҙәр быны.

—Әммә шуныһы ҡыҙыҡ, — тинек беҙ, — ниңә аҫыл тоҡом бында сыҡҡан да беҙҙән алыҫ Төрөкмәнстанда «аҫыл тоҡом» — «аһал-текин» булып тороп ҡалған?

-- Был һорауға тағы ла һорау ялғана, — тине ғалим. — Ә ниңә һуң бөгөнгө Төрөкмәнстан сигендә — Бохара янында һеҙҙең «Башҡорт тауҙары», Төрөкмәнстан көньяғында Термез ҡалаһы тирәһендә — «Башҡорт тауы», Памирҙа «Башҡорт»[58] төбәге бар? Ә башҡорттоң 25 ырыу-ҡәбилә ярсыҡтары төрөкмән халҡы ҡоронда[59] тороп ҡалған?

-- Быныһы ла беҙҙең өсөн аптыраҡ, — тип әйтергә мәжбүр булдыҡ. Ә ғалимдар быға һис аптырамай, сөнки беҙ белмәгән замандарҙан уҡ башҡорт халҡы ырыуҙары Уралдан алып Памирғаса йәйрәгән: Урал—уның Йәйләүе (төп төйәге), Памир Ҡышлауы[60] булған. Ә татар-монгол яуынан һуң Алтын Урҙа осоронда Йәйләү (Урал) менән Ҡышлау (Памир) араһындағы тәбиғи тығыҙ берәгәйлек оҙөлөп, онотолоп, был ике ос икеһе ике башҡа йәшәй башлаған — йәғни Ҡышлау үҙенең һыңары Йәйләүҙән айырылған... Шулай тип осланы һүҙен

---

[57] Аҫыл-ат-көн — әс-ал-ат-көн (һыу, ал ут-көн) тигәндән хасилдыр был («көн» — «конь» һүҙе хәҙерге урыҫ телендә «ат»).

[58] Кузеев Р.Г. Историческая этнография башкирского народа. Уфа, 1978. 43, 162-се биттәр.

[59] Шунда уҡ, 198-се бит.

[60] Шунда ук, 42, 162-се биттәр һәм «Вокруг света» журналы. 1982, № 3. 36-39-сы биттәр.

ғилем эйәһе. — Киленсәк көйәнтәһен иңенә һалды. — «И илаһым, ҡайҙарға ғына барып сыҡмай ир-егеткәй менән ат башы — әҙәм балаһының тамыры!» тип аптыраштыҡ та ҡалдыҡ. Бына шулай көтмәгәндә икенсе яҡлабыраҡ асылды беҙгә Асылыкүлебеҙҙең мәңгелек мөғжизәһе. — Был һүҙҙәрҙе әйткәнендә киленсәктең һылыулығы йөҙөнә балҡып сыҡты. Ихласлығы менән Мотал күңелен албырғатып: — Ә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ, ышанырғамы быға? — тине. Ләкин яҙыусының зиһене таралған — төплө генә яуап биреү ҡеүәһе лә ҡалмаған.

-- Туҙға яҙмағанды ла һөйләп йөрөйҙәр, хатта яҙып та сығалар хәҙерге ғөләмәләр.

Асылыкүл йәнһөйәренә был оҡшаманы, буғай, яурынҡайҙарын һикертеп, ҡунаҡты һынаулы байҡаны:

-- Ә һеҙ үҙегеҙ кем әле, шундай уҡ ғөләмә түгелме?

-- Юҡ, мин былай ғына кеше.

-- Беләбеҙ инде һеҙҙең «былай ғына»ларығыҙҙы. — Көндө болот япҡандай, киленсәктең мөләйемлеге һүрелде. — Ярҙан һыуға таш атып, йәшел ҡамыш һындырып, йәнәһе, әсәй-тәбиғәт менән хозурланып йөрөгән була ла, кис ҡырын ғына әсәйебеҙ Асылыкүлгә йәтмәләрен сумыра, сурағайҙы тоҡларға... Ана анауы албаҫты директор кеүек.

-- Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улын әйтәһегеҙме?

-- Һеҙгә Шәңгәрәй улы булһа, Асылыкүлгә Шүлгән ул. Килгәне һайын донъяны ҡорота ғына. — Ҡарағастау итәгенә киҙәнде. — Әнә анау суҡайып торған күбәташты күрәһегеҙме? Шунда алйып ултыра тағы бер тәбиғәт һағауылы. Ашамай, эсмәй, фәҡәт таштағы яҙыу-ядкәрҙәргә генә текләй, йәнәһе... Эргәһендә үҙе кеүек үк «тәбиғәт һағы» сыуала — башы-күҙе аларған бер саҡмател. Май сүлмәгенең тышынан уҡ билдәле: Асылыкүл әсәбеҙгә яңы этлек әҙерләйҙәр. — Зифа билен һығылдырып, таныш түгел һылыуҡай берләм һуҡмаҡтан текә ярға үрләне. Яурынынан ағылып төшкән сәс ҡараһы ирҙең күҙ нурын һүреп, әйтерһең, йөрәгенә сырмалды, һулышын туҡталдырҙы: «Йыһаниә!..» Яҙыусы, аяҡ аҫтында ер әйләнеп киткәндәй, күбәташҡа ултырҙы. Сихри көстән тиҙерәк арынмаҡҡа, ике күҙен сырт-йомоп, бер талай шаңҡып ҡалғас, ҡалҡынып, артына ҡарамаҫтан, киленсәк күрһәткән Ҡарағастау текәһенә үрләне...

Үткән ғүмер тигәндәрең аҡҡан һыу һымаҡ, имеш: Асылыкүл буйында булып ҡайтыуына ла ярты йыл самаһы уҙған...

-- Ана, кейүең ҡайтып килә, — тине бүлмәнең ярым ҡыҫыҡ ишек аралығында ҡылғандай аҡ сәс шәлкемен һәлендереп күҙәткән әсәй-ҡарсыҡ. Инеүсенең, ысынлап та, кейәүе икәнлегенә инанғас, ишеген ҡабат япты, һил булды: буҡтағыҙҙы үҙегеҙ күмһеттегеҙ, үҙегеҙ һапырып ашағыҙ — мин ҡатнашмайым, тиеүе.

-- Хәйерле көн, Әғләм улы. — Ҡондоҙбаевтан күңел йылыһы һирпелмәүгә ҡарамай, ҡайнаға бәҫен һаҡлап, үҙе башлап өндәште. Кәрәк саҡта кеселекле булырға ла беләбеҙ.

-- О, һаумы, ҡайнаға! — Кейәүенең күҙ ҡарашында һәм ҡул ҡыҫышында буйһонмаған дыуамаллыҡ ғәләмәте тойолоп, Моталды һағайтты. — Ғәфү үтенәм, — тине кейәү-бала, пальтоһының эске түш кеҫәһе тәңгәлендә тумпайған шешә

ишаратына усын һуғып. — «Ҡоро закон» эксперименты ҡайсаҡ бәкәлгә бәрә — магазиндан-магазинға сабып йөрөп саҡ таптым. — Ауыҙ асырға ла форсат ҡалдырмай, кухняға елтерәне. — Гөлзифа, ҡайҙа табын? Ниңә сәй әҙер түгел?

«Белмәйем, теге ваҡытта ла һындырып булыр инеме икән быны? — тип икеләнде ҡайнаға кеше. — Шунда, Асылыкүл буйында уҡ, ул ошондай фетнәйән ине буғай...». Эйе, Мотал үҙенең иң һуңғы төп романы концепцияһында заманаһынан алда тыуып дыуамалланып йөрөгән йүнһеҙ кейәү-бала образына ла шаҡтай урын бүләсәк, хатта айырым сәхифәгә индерергә мөмкиндер — замандаштары тарафынан үҙе типкеләнеүе генә етмәгән, ғаиләһендә ығы-зығы ҡуптарып, ағай-энеләрен дә бимазалап дөйөм рухосфераны, бысратып уҡ бармаһа ла, бутап-болғатып йөрөүсе һәм шул мәғәнәһеҙ ҡылығы менән үҙенә лә өҙлөкһөҙ зыян килтереүсе, шулай уҡ йәмғиәттең ҡиммәтле ваҡытын, ҡеүәһен алып әрәм итеүселәр ҡатарында. Был бәндәгә ана шундай итеп кенә ҡарағанда, донъялағы барлыҡ сәйер һәм тынғыһыҙ йәндәрҙе бер епкә теҙеп, ҡалыпҡа һыйҙырып, фарман ярҙамында ғына йәмғеһен ҡайҙалыр ҡара упҡынға олаҡтырып ебәрергә лә иркенләп тын алырға булыр ине. Әммә кешелек доньяһы нисәмә миллион йылдар йәшәй — сәйерйәндәр кәмемәй һәм тынғыһыҙлыҡ та бөтмәй. Бәлки, беҙҙең ҡул менән яҙылмай торған, мәңгелек донъя тип аталған төп романдың концепцияһы үҙе быны ишеләргә зарурҙыр?!.

Кухнялағы моңһоулыҡ — һемәктән шаулап сәйнүккә һыу ағыла... Һыу, һыу, ниндәй күп һыу — Асылыкүл тулҡындары шаулап ярға ябырыла... Эйе, ул, Мотал, тулҡын тулауҙарын тыңлап, Ҡарағастау текәһенә күтәрелә...

Алыҫтан ук суҡайып күренгән сағыл, итәгенә тиңәлгәс, дәү ҡаялар төркөмөнә әүерелде — тәртипһеҙ өймәкләшеүҙәрендә ниндәйҙер тәбиғи тәртип, тылсымлы теүәллек бар ине. Моталға был йоморо монолит киҫәктәре, бауырҙай ҡыҙыл күбәташтар, ҡасандыр бында хөкөм һөргән титандарҙың — алып батырҙарҙың тәүге архитектура тәжрибәһе, йәки килер быуындарға магиялы һәйкәле, йәки уларҙың рухын һаҡлаусы изге ҡорамы[61] рәүешендә һынланды. «Бәй, был ни хәл — кемде шәйләй күҙҙәрем?!.» Көнсығышҡа ҡаратылған яҫы таш ҡаршыһында... Әскәр Ҡотлоев менән бергә үҙенең Йәүҙәт кейәүе алйып ултыра. Ҡәйнәһенең, асыуы килгән һайын, «ас-бирән-эт» тип ләҡәпләүенә лайыҡ булған шул йуләр, тағы ла һис көтмәгәндә, Гөлзифаһы әйтмешләй, нисәнсе тапҡыр маңлайына тай тибеп, йөҙәткес фекер оялатҡан йоҙроҡтай мейеһенә: имеш, салдарҙан-сал эпостарыбыҙ эстәлегенән асыҡ күренеүенсә, беҙҙең Урал ҡаяларында донъялағы иң иҫке тәүырын (рун) яҙыуҙар һаҡланырға тейеш. Шул дыуамал уйы тамам алйытып, өйҙә күҙенә ҡарап ултырған ҡатыны, малайы, ҡәйнәһе барын да онота: дәлил эҙләп яҙ башынан районларға сығып китә, тау-таш араларын ҡыҙыра...

Кейәүҙең һуңғы мауығыуы тураһында Тарих һәм филология институты директорының (профессор Йәмил Ҡотлоевтың) фәндәр буйынса урынбаҫары, үҙенең яҡшы танышы Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллиндан һорашҡас, Мотал һағая төшкәйне.

---

[61] Ҡорамы — храмы.

— Беҙҙең төбәктә, ғөмүмән, Урал менән Иҙел араһында, ырынға (рунға) оҡшаш яҙыу булыуы ихтимал тип иҫбатлау үҙе, йомшаҡ ҡына әйткәндә, саманан тыш фәстереү йәки аҡылдан яҙыу билдәһе булып тора. Сөнки башҡорт бабалары был тирәгә XI быуатта ғына килгән, ә ул саҡҡаса уҡ инде донъялағы ырын өлгөлө яҙыуҙарҙы башҡа төр яҙыуҙар алмаштырып бөтөргән. Һеҙҙең ҡәҙерле кейәү, күренеүенсә, ҡулын һуҙып ҡына күктән шау-йондоҙ усламаҡсы...

Күбәташ янында ҡалғыусылар уға текләп ҡатҡайны.

— Һөймәнегөҙ һыуға төштөмө әллә, егеттәр, ниңә һерәйеп ҡалдығыҙ?

Шунда уҡ йәнләнделәр. Әскәр әҙипте күбәташтар өйөмөнә өҫтөрәне, кәбән төбөндәй яҫы монолит түтәһендә яртылаш саңға күмелгән, иле ҡалынлыҡ һөрөм ҡаплаған түп-түңәрәк ике ҡаҙан-уйымға иғтибар йүнәлттертте:

-- Юғарығы ташҡаҙан — Ҡояш был, ә анау түбәнерәге — Ай символы. Сураш-Тора (Заратуштра) динен тотҡан бабаларыбыҙ Ҡояш менән Ай рухына ошо изге таш ҡаҙандарҙа ҡорбан ите салғандар[62] һәм яндырғандар. Ана теге ырҙындай ҙур таш келәмдә Әсә-аба Арта-әби[63] хоҙайбикәгә табыныусылар доға ҡылып ултырған... бынан ике лә ярым мең йылдар әлгәре...

-- Йылын ҡайҙан беләһегеҙ?

-- Уныһын буласаҡ профессор кейәүегеҙҙең үҙенән һорап ҡарағыҙ! Хәйер, радиокарбон ысулы менән теүәлерәк билдәләп булыр ине...

-- Көҙгө тиһәң, көҙгө түгел, тәре тиһәң, тәре түгел — нимәгә текләп шаҡҡаттың? — Кейәүе эргәһенә тартылды Мотал.

-- *Алтәр* – ал тәре был, йәғни алһыу Көн-Ҡояш шәүләһе был... Ҡотбәрәкәт алтәре... Бынан ике лә ярым мең йыл элек зороастризм динен тотҡан бабаларҙың изге алтәре...

-- «Ал тәре» — ал төҫтәге тәре, тигән һүҙме инде?

-- Тап үҙе, «ал Ҡояш» мәғәнәһендә. Тәрәндәнерәк барлаһаҡ, «Тәре» менән «Тора» — бер, бер үк һүҙҙең ике төрлө әйтелеше, Көн-Ҡояштың боронғо бер исеме. Бына ҡайҙан килә беҙҙең боронғо *Тора* хоҙайыбыҙ (сыуаш ҡәрҙәштәребеҙ әле лә, йәшереп кенә, Тора-хоҙайға табына), ҡасандыр шул Тора хоҙай алтәре торған изге Тора-тауыбыҙ – хәҙерге Ишембай районында. Шул «алтәре» һүҙенән киләлер христиан дине термины «алтарь» (ғәрәпсә михраб), шулай уҡ сиркәү башындағы ал тәре (алтын тәре)... Баҡишев ҡарт беҙгә урыҡ-һурыҡ яҙып ҡалдырған, һөрһөп бөткән *тәүтел белеме* буйынса[64] юллана был...

Мотал, абайламаҫтан, баяғы «атаһы урынына ҡалған» завод директоры

---

[62] Салғандар — телебеҙгә «һ» өнө кергәнгә тиклемге боронғо башҡорт һүҙе был, хәҙергесә — «һалғандар». Беҙ һөйләгән мал «салыу» — архаик һүҙ: Көн-Ҡояш хаҡына яндырыу өсөн изге ритуал ҡаҙанына (ул «дин» тип аталған) ҡорбан салыу (һалыу) тигәндән килә.

[63] Әсә-аба Арта-әби — Асаба Артвисура Анахита -- зороастризм диненең һыу-һауа, ер-уткмәк хоҙайбикәһе (бисура), йәки скиф бабаларыбыҙ хоҙайбикәһе Әпи (Әпәй).

[64] Талир Ғөләм улы Баҡишевтың «Тәүтел белеменә кереш» тигән хеҙмәте, укенескә ҡаршы, ҡулъяҙма хәлендә юғалған. Ғалимдың һуңғы йылдарҙа ғына табылған, замандаштарына яҙған бер хатында ғына шул хеҙмәттең ҡыҙыҡлы өлөшө бар (шунан алынған мәғлүмәттәрҙең ҡайһы берҙәре был китапта төрлө урында килтерелә).

Яубаҫаров һымаҡ уҡ хахылдап көлдө:

-- Ярай, алтәре лә булһын икән, ти. Ләкин ике мең ярым йыллыҡ йәшен ҡайҙан шыттырҙың?

-- Бына ул! — Йәүҙәттең дер-дер ҡалтыраған бармағы ҡытыршы таш йөҙөндәге юлаҡтарҙы буйланы, ирендәре, ҡыбырлап, бисмиллалай уҡыны: — «Арта»... Зороастризмдың нигеҙ терминдарын һаҡлаған тәүырын-яҙыу былар!

Мотал иғтибарланы: баяғы Көн-Ҡояш менән Ай ҡаҙандарынан саҡ ҡына түбәндәрәк яҫы таҡтаташтарҙа, ысынлап та, бик боронғоға оҡшаған сыймаҡтар һүрәтләнә.

-- Ҡыл осонда ғына тора — һаҡһыҙ бер ҡағылыу ғына ла һуңғыһы булырға мөмкин. Бына ниңә кейәү-балаҡайығыҙ, гүзәл хәләл ефете ҡуйынына ла ҡайтмайынса, ҡуна-төнә Асылыкүл ташын ҡосаҡлап ята: юйылмаҫы борон күсереп алырға...

-- Юйылмаһа ла, оҙон ҡулдар «автограф»ын һалып һәләк итәсәк, — тине Йәүҙәт Әғләм улы, тәрән һулыш алып. — Ә датаға килгәндә, бында яҙылган «арта» һүҙе үҙе ана шул датаны бирә лә инде. Билдәле булыуынса, «арта» — зороастризмдың нигеҙ ташын тәшкил иткән терминдарҙың мөһиме ул. Ә зороастризм дине бынан 3500 йыл элек Зороастр-маг (грекса яҙылышы шулай, ә ғәмәлдә Сураш-Тора, йәки Сураш-Түрә пәйғәмбәр-хоҙай) тарафынан тап ошо беҙ баҫып торған ерҙә — Мери Бойс[65] тигән ғалимә әйткәнсә, Урал менән Иҙел араһында иғлан ителеп, һуңынан донъяға таралған, уның тәүге ҡорамдары ла тап ошолай Күк көмбәҙе аҫтында — тәбиғи тау-таш ҡомартҡыларын ҡулайлаштырып ҡоролған. Эйе, иң тәүге...

-- Тимәк, бабаларҙың храмы була инде был?

-- Эйе, ҡорамы.

Мотал тарих фанатигының йонсоп эскә батҡан сөм-ҡара күҙҙәренә текләне.

-- Кейәүкәй, күпмегә тиклем бында табынып ултырырға ниәтең?

-- Тәүырынндарҙы күсереп алып бөтмәйенсә, ҡупмайым.

-- Әгәр ҙә мин палатка һәм аҙыҡ йөкмәп килтермәһәм, аяҡтарын да һуҙыр ине, — тине Әскәр.

-- Ҡасан бөтәһең һуң?

-- Аҙаҡҡы юлын юллайым. Ә йәмғеһе дүрт кенә юл яҙыу...

-- Шүл дүрт кенә юл эсендә беҙҙең өс мең биш йөҙ йыллыҡ тарихыбыҙ! — тине Әскәр.

-- Кем әйтә быны? — тине Мотал, датаны телгә алып. Йән тартмаһа, ҡан тарта, тигәндәй, бер туған кейәүенең яҙмышын ҡайғыртып, меҫкенкәйҙең ҡаҡ башы өҫтөндә «бысҡы аҙаулы акула» (Дилбәр-кәрендәшенең һүҙҙәре) Хәкимуллин күҫәге сайҡалыуын асыҡ тойоп, ул, йәғни кейәүе, моғайын, был һорауҙы (йәғни күҫәкте) кире ҡағырлыҡ дәлил итеп, бындағы булмаһа ла, Алма-Аталағымы, Ташкент, Мәскәү, йәки Ленинградтағымы таныҡлы ғалимдарҙың исемдәрен ҡысҡырыр тип көткәйне. Әммә-ләкин фанатик, ҡолаҡты өшәндереп,

---

[65] Мери Бойс. Зороастрийцы. Верования и обычаи. М., 1987, 3, 4, 8-се биттәр.

ғорур ҡиәфәттә хаҡ-мәғлүм ҡылды:

-- Мин әйтәм!

-- ?!. — Мотал һыҙғырып ҡуйҙы.

-- Дөрөҫ! Бир бишеңде! — Әсҡәр иһә Йәүҙәт ҡулын ихлас күңелдән ҡыҫты, һоҡланыулын асыҡтан-асыҡ белдереп, оҙонса йәшкелт күҙҙәрен Моталға борҙо. — Яратам мин ошондай саҡматаштарҙы! Был «сәтләүек»те ватыр өсөн, оһо! — беләһегеҙме, ниндәй алмас тештәр кәрәк! Һеҙҙең урында булһам, Мотал Булаттимерович, уска ғына һалып йөрөтөр, ҡосаҡҡа ғына ҡыҫып иретер инем мин был аҫыл-кейәү баланы!

Текә яр, аҡ ҡылғандарҙың билен һығып иҫкән ел; аяҡ аҫтында ғына, Асылыкүлләнеп, болоҡһоп, бойоҡ быуаттар шаулай... Мотал үҙенең быға тиклем ҡайҙарҙа ғына булмауын — диңгеҙҙәрҙең Ағын да, Ҡараһын да, Ҡыҙылын да, Һарыһын да күреүен хәтерләне. Һыуҙарҙың төҫ-киәфәттәре һымаҡ ҡабул ителгән шул серле исемдәр көтмәгәндә күңелен тирбәлдерҙе, ошоғаса ҡапланып ятҡан хисле ҡатламдарын ҡуҙғалтты. Бала саҡта география дәресендә Башҡортостандың иң ҙур йылғаларын картаға һүрәтләп килергә өйгә эш бирелгәс, иртәгәһен класс алдында ҡолаҡтары ҡыҙарыуын ғүмерҙә лә онотмаҫ. Сөнки Мотал сығарып элгән картаға күҙ йүгертеү менән:

—Ниңә йылғаларҙың исемдәрен яҙманың? — тип аптыратты уҡытыусы.

—Күренеп тора лаһа.

— Бәй, нисек?

-- Бына күрмәйһегеҙме ни: Ағиҙел — аҡ, Ҡариҙел — ҡара, Күгиҙел — күк, Ҡыҙыл — ҡыҙыл, Һүрән — һүрән төҫлө итеп һыҙылған.

-- Ниңә улай?

—Һыуҙарының төҫө шулай булғанға. — Бына шуға инде көллө класс шарҡылдап көлдө... Мотал, вузға инеп уҡый башлағас ҡына, үҙенең шул бала саҡтағы бер ҡатлылығын хәтерләп, шул үҙенсә юрауы менән ғәмәлдә фәндең алыҫ балалыҡ осорон — халыҡ этимологияһын кәүҙәләндергәнлеген аңланы. Тап шул бәләкәс Металл-уҡыусы һымаҡ уҡ, ошо заман белгестәре араһында ла бер ҡатлылыҡтан үтмәүселәр — Асылыкүл исемен дә ундағы һыуҙың йәнәһе лә асылығы — тоҙло булыуына бәйләп, ә Ҡандракүлдекен — һыуһынды ҡандырғаны өсөн, тип юраусылар байтаҡ бит. Бая ғына үҙе теләп гид вазифаһын башҡарған, Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы менән телләшкән уҡытыусы ла шулайыраҡ һуҡалай ине, буғай. Ә был ырып яҙылған таштан ырын яҙыуы тоҫмаллаусы ике тарихсы киҫәге лә үҙҙәренең өлкәһендә тап шулай тилермәйме? Айырма шунда ғына: Моталдар быуыны, тилергәндә лә, үҙҙәренең уҡыусы ғына икәнен онотмаһа, хәҙергеләр, Моталдың әсәһе Ғәзизә ҡарсыҡ әйтмешләй, инәһенең ҡарынында уҡ унынсы класс бөтөп тыуа ла студент булыр-булмаҫтан үҙен профессор итеп тоя. Ә тарих фәненә морон төртһә, хатта аҡылын да юя. Ә бит Моталдарҙы ла тарих тартманы түгел — тартты, улар ҙа һыу төҫтәрен генә түгел — быуаттарҙың ҡан төҫтәрен дә айырыр кимәлдә ине...

Эйе, был заманда фәндәр ҙә, улар менән шөғөлләнгән кешеләрҙең уҙҙәре һымаҡ уҡ, сап-саф ҡына филология, йәки тарих түгел инде: филология — тарихҡа, тарих филологияға үтеп кереп болғана, сик һыҙыҡтары юғала. Әйтәйек,

бына был ике мырҙа ла, ҡасандырғы яндырай студенттар Димустан менән Моталдай, икеһе ике төрлөрәк фән кешеләре һанала, тыштан ҡарағанда береһе — тарихсы, икенсеһе филолог. Әммә ғәмдәре бер — халыҡтарҙың бик боронға тарихы. Ҡартлыҡ көнөндә йөрьәт итеп, филологтан тарихсылыҡҡа аҙымлаған профессор Йәмил Ҡотлоевты – ошо Әскәр-мырҙабыҙҙың атаһын ғына алайыҡ... Мәсьәлә тик шунда ғына: был ике йолҡош бында, Асылыкүл буйында, ысындан тилереп ятамы, әллә хәҙерге йәштәр ауырып үткәрә торған нәүбәттәге мода сире генәме?..

Сәй янында ла туған халыҡ, тарих, Йәүҙәт Әғләм улының яҙылып бөтөп барған диссертацияһы хаҡында ағылды һүҙ.

-- Әғләм улы, белеп тор: минең атай Йәмил Ҡотлоевич иҫән саҡта, елкәңдең соҡоро кеүек, һиңә диплом ҡатырғыһын күреү юҡ! — тип аҡ ынйы тештәрен йылтыратты әшнәһе.

-- Бәй, ниңә улай тиһең әле? — Мотал шаңҡыбыраҡ ҡалды. — Хәкимуллинды әйтһәгеҙ, бер хәл. Ә Йәмил Ҡотлоевич Ҡотлоев үҙе кейәүҙең ғилми етәксеһе ләбаһа?

-- Баш бирмәҫ тайҙы етәксе лә етәкләмәй — шуны белергә кәрәктер, ағай кеше!

-- Ҡалай аңларға быны?

—Бик ябай. Атайым-ҡарттың тура һыҙған юлы буйынса «Башҡорт ырыуҙарының XI быуатта барлыҡҡа килеүе» тип башланған ҡолонсаҡ-диссертацияһы, башбирмәҫ тай булып үҫеп, тәртип тәртәләрен тибеп һындырып, «Беҙҙең эраға тиклемге VII — V быуаттарҙағы башҡорт ырыуҙары» тигән ажарлы аҫауға әүерелә. Бер һүҙ менән әйткәндә, кейәүегеҙ йөҙөндә «ләғнәтле» Баҡишев ғилми мәктәбе шытып сыҡты. Ә быны иһә профессор Ҡотлоев та, уның тоғролоҡло нөгәре профессор Хәкимуллин да ғәфү итәсәк түгел. Бына был бомба! Ишетәһегеҙме, Шаһибәрәков иптәш? Кейәүегеҙ бомбаһы!

-- Ысынмы? — Мотал усаҡ ҡаршыһында тубыҡтарын ҡосаҡлап ҡатҡан кейәүенә төбәлде.

-- Эйе, шулайыраҡ.

-- Ә ниңә баштан уҡ темаңды һайламаның?

-- Мин быға тәрән эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә юлыҡтым.

-- Алйот! — тине Әскәр. — Был заманда тәрәнгә керәләрме? Доктор булаһы бәндәләр гелән һайыраҡ йөҙөп, алыҫтан алдыралар. Урыҫ ағайҙарың әйтмешләй, һыуҙан һилерәк, үләндән түбәнерәк булалар. Мәҫәлән, үҙенән ҙурыраҡ быуаҙ портфелле минең әшнә Рәшит Алмаҡаевты ал... Сүлмәге яҡшы ҡайнаһа ла, остаздары кимәленән бер иле лә ырғымай — төтөнө тура йөрөй!

-- Эйе, кейәү. Һиндәйҙәрҙе генә түгел, Баҡишевтарҙы ла бөгә был донъя!

-- Бөгә, иллә-мәгәр һындырмай!

-- Һынмаһа ла, көлгә әйләнгән түгелме? Баҡишевтың һөйәктәрен тапап уҙған уҙамандар, һинеңсә, «тәрән эҙләнеүҙәр»еңде алҡышлап алырҙармы?

-- Үҙ хатаһын үҙ ваҡытында таныған ғалимдар бар.

-- Ҡайҙа улар? Һаҙ биҫтәһе бәндәләре тураһындағы риүәйәтте

тыңлағаның юҡмы әллә, кейәүкәй? Һаҙ биҫтәһе бәндәлеге тарихсыларға ла хас.

-- Мәҫәлән, мәшһүр Ҡотлоев менән эшмәкәр Хәкимуллинға! -- Асыҡлыҡ керетте Аҫҡар.

-- Күрәләтә фальсификатор, улар!

—Абба!

Әҫкәр иһә дуҫын ыңғай һыпырҙы:

-- Шулай ул беҙҙең профессор атаҡайҙар. Уларҙы тере саҡтарында баҫып торған түңгәктәренән пушка монән атып йығырмын тимә.

-- Тимәк, мәғлүмәттәре тере! – Емешһеҙ бәхәсте осларға йыйынды Мотал.

-- Тере үлек кеүек тере!

-- Һеҙ, йолҡоштар! — Ситтән күкрәне һөрән. Ҡая артында тыңлап торған Яубаҫаровтың тәүҙә Юпитер планетаһылай дәү аргентин эшләпәһе, унан ҡаҙандай ҡара янған майлы йөҙө пәйҙә булды, артында мыҡты кәүҙәле шоферы һерәйҙе. — Ниңә үҙегеҙҙе генә хаҡлы һанайһығыҙ әле?! Ниңә Ҡотлоев хаҡлы түгел дә Баҡишев ҡына хаҡлы?

-- Хөппөлгәрәй Шәңгәрәевич, ниңә ләкәп тағырға? — Тыныс яуапланы Әҫкәр. — Беренсенән, ҡайҙа әссәләмәғәләйкумегеҙ? Икенсенән, кем йолҡош? Һеҙҙең менән берҙәй уртаҡ дуҫыбыҙ – баҙар ҡорто Асар-Кисәм-Саркисян хаҡлы әйткәнсә, беҙҙе оторо ләкәпләп, үҙегеҙҙе рәнйетәһегеҙ, түгелме?..

-- Саркисянда эшегеҙ булмаһын, тәүҙә ирендәрегеҙҙәге әсәй һөтөн ҡоротоғоҙ, молокососстар! Әссәләмәғәләйкүмем минең бына! — Бүрәнәләй муйынын бөгөп алтәре-ташҡа уҡталды ла яҫы һағаҡлы һунар бәкеһе ялтыраны ҡара-йөнтәҫ ҡулында. — Ҡайҙа ул тәүрунағыҙ? Ошомо? — Бәке осо ҡая йөҙөн сатрашлап телгеләне.

-- Теймәгеҙ! — Бысаҡ үҙенең йөрәгенә ҡаҙалғандай әсенеп, алыпйәнгә ташланды кейәү-бала. — Харап итә күрмәгеҙ! Бронза дәүере яҙыуҙары!

-- Алйоттар! Бронза дәүер яҙыуы бында ҡайҙан килһен? Күрегеҙ: үҙебеҙҙең космос ракеталар дәүере тамғалары был, ха-ха-ха!

Күҙҙәре атылып сығырҙай шарланған Йәүҙәт һөрләгөп йығылды, ҡалҡынғаны ыңғайында ҡулына таш ҡармап алып, Яубаҫаровтың ҡулына һуҡты, төшөп киткән бәкеһен Әҫкәр Асылыкүл һыуына бырағтырҙы. Директорға таш йәҙрә әллә ни зыян килтермәне буғай, сөнки ул шул ҡулы менән үк Әғләм улының бил ҡайышынан, икенсеһе менән Әҫкәрҙекенән бөрөп тотоп, мырҙаларҙың табандарын бер юлы Ер-әсә ҡыртышынан айырҙы, ҡармаҡҡа ҡапҡан сабаҡтарҙай һауала сайҡалдырып, палаткалары тарафына тәкмәстерҙе. Арттарынан шапылдатҡансы төкөрөп, өнһөҙ-тынһыҙ, шоферын эйәртеп китеп барҙы. Һуштарын саҡ йыйған мырҙалар эргәһенә сүгәләп, Мотал башын сайҡаны:

-- Һәй, егеттәр-егеттәр, ауыҙығыҙ ни һөйләгәнде ҡолағығыҙ ишетмәй, ҡулығыҙ ни ҡылғанды күҙегеҙ күрмәй. Хатта һөрһөп бөткән химик Яубаҫаров та һеҙгә, тарихсы-филологтарға, иҫке яҙыуҙар өлкәһендә һабаҡ бирерлек булғас...

-- Әммә беҙ хаҡлы! — тинеләр бер ауыҙҙан.

-- Хаҡлылыҡты диссертация яҡлағанда күрһәтегеҙ!

-- Диссертация түгел — бомба, әйттем бит! — тине Әҫкәр. — Ҡайһы бер

туң маңлайҙарҙы сатнатырға.

Мотал һүҙ ыратманы. Сөнки «байғош» һаналған кейәү-баланың портфелендә, ысынлап та, диссертация тип аталған бомба йөрөтөүенә үҙе лә инана, хәүефләнә башлағайны...

...Кухня ишеге асылды:

-- Сәсрәп китһен донъялары, ҡайнаға! — Йәүҙәт Әғләм улы бер ҡулына — араҡы, икенсеһенә сажлап ҡайнаған телем-телем колбасалы таба тотоп килеп инде. — Бары менән — байрам, юғына бар айран, тигәндәй, үҙебеҙ генә ултырып алайыҡ әле бер.

-- Ниңә үҙебеҙ генә? Әллә ғаиләң барлығын оноттоңмо?

-- Үҙҙәре һанға һуҡмағас... Күрәһең бит: боҫтолар.

Моталдың өндәшеүе, тап атаһы Булаттимерҙекенсә, ҡырыҫ-киҫкен яңғыраны (һәр хәлдә, Ғәзизә ҡарсыҡ менән Гөлзифаға ул тап шулай ишетелде):

—Әсәй, Гөлзифа! Ни ҡылығығыҙ тағы!?

Икеһе ике ишектән пәйҙә булып, табын түңәрәге тәртипкә килтерелде, ҡурҙаҡ колбаса эргәһенә йылҡы ите ҡалъялары, Ҡафҡаз ниғмәттәре ҡунды. Әммә хужабикәләрҙең турһайыуы бөтмәне. Ел иҫһә осоп тарҡалырҙай, табынға саҡ берегеп, күҙгә-күҙ ҡарашмайынса ашанылар. Ирҙәр ҡаты эсемлеккә көс һалды.

-- Йә, кейәү, һуңғы яңылыҡтар ниндәй? Нимә менән шөғөлләнәһең?

Портфеленән бер мәктүб алып бирҙе:

-- Бына, уҡып ҡара, ҡайнаға.

Хөкүмәткә хат юлландырыуы хаҡ икән:

**Председателю Совета Министров БАССР т. Хакназарову З.Ш.**

**Копии: Институту Востоковедения АН СССР, г. Москва;**

**Председателю Верховного Совета БАССР советскому народному поэту БАССР т. Марвану Карами.**

Чрезвычайно важное дело не только государственного, но и общечеловеческого значения заставило меня не дожидаясь окончания напряженной хлебоуборочной страды в республике обратиться к Вам с ниже следующим заявлением.

2 сентября сего года на побережьи известного озера Асылыкуль в Давлекановском районе Башкирской АССР среди давно известных природных объектов мною опознан бесценный памятник природы, истории и культуры одновременно, а именно: связанный с культом солнца-Акбузата (Белого Коня) жертвенник-храм под открытым небом наших древнейших скифско-сакско-массагетских предков — возможно, создателей бессмертных башкирских эпосов «Заятуляк и Хыухылыу», «Акбузат».

Названное культовое сооружение по всем признакам было посвящено Солнцу, Луне и звездам (в эпосе эти небесные светила фигурируют в образах Белого, Сивого коней и табуна саврасых коней с мышиными холками), где в их честь, по-видимому, приносились кровавые жертвы — обычай, осужденный в

другом башкирском эпосе «Урал батыр». Это позволяет предварительно датировать возраст храма примерно зороастрийской эпохой (не позднее VII — VI веками до н.э.). Подобные же культовые сооружения учеными были обнаружены в республиках Средней Азии, Северо-Западной Индии.

Но самое главное не в этом. Главный сюрприз, заставивший обратиться с настоящим заявлением, дожидался меня там же — четыре строки текста на скале, написанные древнейшими проторуническими буквами. Подобные письма учеными (К.А. Акишев) впервые были открыты в кургане Иссык близ г. Алма-Аты и признаны «старинными письменами — древнейшими не только в Казахстане, но и во всей евразийской степи» (V век до н.э.). Значит, данная надпись на берегу Асылыкуль может оказаться лишь вторым руническим текстом вообще, из числа до сих пор обнаруженных на территории БАССР (после Чекмагушевского камня) и только вторым «сакским» проторуническим текстом вообще, из числа до сих пор обнаруженных на всем Земном шаре. Поэтому данный письменный памятник нужно оценить как редчайщее культурное сокровище общечеловеческого значения и принять безотлагательно срочные меры для его сохранения, ибо объект буквально валяется под ногами у «дикарей-туристов» и ему уже нанесен огромный непоправимый ущерб: все древние надписи, кроме названных сохранившихся четырех строк (которые тоже частично пострадали от выветривания), безобразно испещрены личными «автографами» наших «диких» современников, орудовавших с зубилом и молотком, и безвозвратно уничтожены. Каждый день и каждый час от любой случайности может погибнуть и все остальное...

Учитывая тот факт, что пока единственный человек — я только хорошо знаю и другим могу показать то сокровище, а я, как человек, тоже не огражден от любых роковых случайностей;

сознавая высокую ответственность перед народом и человечеством, предлагаю:

Немедленно создать правительственную комиссию примерно из семи человек для освидетельствования и подтверждения на месте наличия выше названного культового сооружения и находящейся там проторунической надписи и для принятия срочные практические меры для их сохранения.

После авторитетного освидетельствования, фотографирования необходимо до прибытия из Москвы специалистов часть скалы с проторуническим текстом точас в присутствии правительственной комисси законсервировать (обкладывать кирпичной стенкой или другим строительным материалом). Потом памятник можно будет заменить точной копией, а оригинал передать в музей.

Комиссию обеспечить:

Автотранспортом повышенной проходимости — на три дня;

Командировочными расходами на три дня.

В случае официального подтверждения наличия вышесказанного проторунического письменного памятника откомандировать в распоряжение комиссии из г. Давлеканово или из близлежащего Давлекановского совхоза

каменьщика на один день с необходимым для консервации инструментарием и стройматериалом.

**Я.А. Кундузбаев,**

историк,член Союза писателей СССР.

г. Уфа, 8 сентября с.г.

-- Шунан? Ниңә башҡортса яҙманың?

-- “Ниңә?..” -- Ауыҙ ҡыйшайтып көлдө -- Ундағыларҙың береһе лә башҡортса уҡый алмағанды беләһең, ассорти телле совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамиҙы ғына иҫәпкә алмағанда...

-- Телеңде тый, ишетеп ҡалһалар... -- Әсәй-ҡарсыҡ киҫәтте.

-- Быларына ла күҙ йүгерт.

Ҡағыҙҙарҙың береһе – Мәскәү гәзитендә үҙенең хәбәрсеһе Ҡондоҙбаевтан һорашып яҙған «Таҡтаташтың сере» тигән ус яҫыһындай мәҡәлә киҫентеһе, икенсеһе шул айҡанлы Ленинград ғалимы тарафынан үҙ хәбәрсегә төбәлгән, ундай яҙма ҡомартҡы табылыуы хаҡ булһа, донъя күләмендәге иғтибарға торошло табыш бит был – кисекмәҫтән уны һаҡлау һәм тикшереү сараһын күрергә кәрәк, ә йоҡомһорап ятыу – енәйәткә тиң, тигән ғәмле-хәүефле юллама ине.

-- Хөкүмәт, Юғары Совет ни тип яуап бирҙе?

-- Юғары Совет рәйесе Мәрүән Карами балыҡтай өнһөҙ, ә Хөкүмәт рәйесенең ҡабул ҡылыу бүлмәһенән татарса сутылдаған ханым, юҡ менән баш ҡатырып йөрөмә, тип әрләп сығарҙы.

-- Һин һантыйға шул кәрәк -- аҡылға ултырырһың.

-- Юҡ инде, былай ғына ҡалдырмам! Ниндәй ҙә булһа яҙма яуап алғансы, теңкәләренә тейермен.

Ҡәйнәһенең ауыҙынан ғүмер тигәнең аҡҡан һыуҙай ығылып ҡына үткәнен, һаҡал һәлпәйер йәшкә еткәнсе ни шағир, ни артист, ни ғалим ҡорона керә алмай, байғош һанында йөрөгәнлеген ишеткәс, Йәүҙәт тороп уҡ китте, табын тирәләй йөрөштөрә башланы:

-- Ярай, береһе лә булмағанмын икән, ти. Ләкин мин — кеше, аңлайһығыҙмы шуны, кеше!

-- Ел арбаһына ултырып йөрөргә тейеш түгелдер кеше.

-- Мин...

-- Бахырҡай... — Әсәй-ҡарсыҡтың ауыҙ мөйөшөнөң ике бөртөк һары ҡылы сиңерткәләй һикерҙе. — Ярай ҙа ул, кеше булғаның өсөн генә теш араңа бауырһаҡ ҡыҫтырһалар. Минең пенсия — үҙемдеке үҙемә. Балаң, ҡатының барлығын онотма!

-- Ҡондоҙбайға бала ни ҙә ҡатын ни — ул үҙен генә ҡайғырта. — Гөлзифа күҙҙәрен ыуаланы.

-- Ни эшләйем һуң инде?

-- Асылыкүлде хәтereңдән юйып ташла, онот. Теләһәң, шиғыр яҙ, теләһәң, эстрадала минең менән донъя гиҙ.

-- Минең ғалим икәнлекте оноттоңмо әллә һин?

-- Онотманым, онотоуҙар ҡайҙа ул.

Йәүҙәттең яңаҡ тарамышы туланы:

-- Шулайғас? Тарих — минең шөғөл икәнде лә иҫтә тот!

Гөлзифаһы килешергә ынтылғандай итеп тә ҡараны:

-- Ярай, шағир ҙа булма, артист та булма, улайһа. Тарихсы бул. Әммә тарих сүплегендә соҡсоноуыңдан туҡта. Бына шуны эшлә һин, хәләл ефеткәйем.

Мотал да етдиләнде:

— Әҙәбиәткә ҡайтырға ваҡыт һиңә.

-- Әҙәбиәткә?! — Кейәүе шарҡылдап көлдө. — Икенсе Абуталип-Буталып Сиҙәмле булып буталып йөрөргәме? Йәки Мәрүән Карами эҙенә баҫып, эсен көйә ҡайыҙлаған бойҙайҙай кәүек-бушҡыуыҡ поэмалар, драмалар әтмәләргәме? Әллә һинеке кеүек рапс-вика-кукуруза томдары тыуҙырып, сүп-сар арттырырғамы? Юҡ, булмай, ҡайнаға. Тыуған илгә һеҙ тыуҙырған макулатура ла еткән!

-- Нимә?!—Күҙҙәре маңлайына күсте Моталдың. — Минме макулатура тыуҙырыусы? — Кейәүенең тупаҫлығынан ярһып, теҙ-быуындары ҡалтыраны. Ошо йәшенә етеп, нисәмә-нисә китап сығарып, берәү ҙә былай күҙгә бәреп әйткәне юҡ ине. — Минме?!

-- Һин дә һәм бәғзе-башҡалар ҙа. Шул атаҡлы трилогияның шанлы авторы бит һин. Ниңә быны үҙ-үҙеңдән йәшерергә, ҡайнаға.

Кейәү уғы йөрәктең тас уртаһына килеп тейҙе. Ни ҡылырға белмәй, ярға сығарып ырғытылған алабуғалай, әле энәләрен тырпайтып, әле ауыҙын кәшкәйтеп, һулышын ала алмай бер талай ыҙаланғас, үҙенә ҡалһа, ҡарыусыһын ергә йәлпәштерә һуҡты:

—Тарих, тарих тип тартайҙай тарҡылдап, ҡайһы һаҙға батҡаныңды абайламайһың, малай.

—Һаҙға? Ҡайһы һаҙға?

—Милләтселек һаҙына убылаһың. Хәсрәт!

Тура әйтелгән хәҡиҡәтте бизмәнгә һалып һәлмәкләтәһе урынға, ғалим йораты әсенеп көлдө:

-- Тимәк, һинеңсә, ҡайнаға, халыҡ тарихын тәрән төпкөлдән өйрәнеү — милләтселек булып сыға. Ә өҫтән һай ғына һөрөү — интернационализм билдәһе. Һе! Указ яҙып тыяйыҡ, улайһа, ысын тарихты. Үҙ ырыуын танымаған ыуандарға әйләндек.

-- Эш тыйыуҙа түгел, ә сама белеүҙә. Сик кәрәк.

-- Белемдең самаһы-сиге буламы ни ул? Рухыбыҙҙы ыуалтыусы дошмандарыбыҙ беҙ самалап-сикләнгән тәңгәлдән ҡаҙаһа? Үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙы ҡорал ҡылып, үҙебеҙҙе туҡмай башлаһа? Тарихтың дәһшәтле ҡоралға әйләнгән саҡтарын тарих беләә!

-- Һинең менән фәлсәфә ҡорорға минең һис теләгем дә, ваҡытым да юҡ, кейәүкәйем. Әммә бер яҡшы кәңәш бирәм: бөгөнгө көн менән йәшә. Бына минең һымаҡ. Минең бөтә әҫәрҙәремдә бөгөнгө көн ваҡиғалары, бөгөнгө көн геройҙары.

-- Бына шуға ла ҡайнағаңдың исеме гел алдан йөрөй, китаптары алдан сыға, ултырған урыны ла өҫтәл түренең алғы буйында була, — тип өҫтәне ҡәйнәһе. — Үҙебеҙҙең ғаилә кәңәшмәһе ләһә, ниңә йәшереп торорға.

Кейәү-баланың күҙҙәре аларҙы:

-- Эйе, алдан йөрөй, алдан сыға. Ләкин бөгөн ҡайҙа һуң ул китаптар? Уҡыусылары ҡулындамы? Биттәре тетелгәнсе уҡылып, халыҡ массалары ҡабат баҫып сығарыуҙы һораймы? Һинең ҡалын кирбестәрең, ҡайнаға, китапхана кәштәләрендә өр-яңы килеш туҙанлана. Ә ил ҡулындағылары... бәҙрәфтә ҡулланыла! Үҙең әйткән *һаҙ биҫтәһе* бәндәһе һин, бына кем!

-- Шулаймы ни әле, ахмаҡ! Кемдән ишетәм! – Күҙен ҡапыл ҡан баҫҡандай, үҙ-үҙен белештермәй, Мотал йәберләүсеһенең яғаһына ҡушҡуллап йәбеште лә ажарланып һелкетте.

—Туҡтағыҙ, был ни хәл, ни ҡылығығыҙ! — Әсәй ҡарсыҡ тауыш биргән, Гөлзифа иренә арҡыры төшкән арала, күҙ асып йомғансы, Йәүҙәт уң ҡулын ҡылыс һымаҡ күтәреп, хатта ирҙәрсә йоҙроҡ йомарларға ла иренгәндәй, ҡайнағаһының сикә тамырына сабып ебәрҙе, дөбәр-шатор нимәләрҙер ҡоланы, ҡырылды; Мотал, ултырғысҡа һөрлөгөп, салҡан ҡапланды, башы ҡаты зыңҡылдап, күҙ алдарын ҡараңғылыҡ ҡапланы, әйтерһең, аҡрын ғына һаҙлыҡҡа — ҡара упҡынға убылды; мейеһендә, бер туҡтауһыҙ: «Һаҙ биҫтәһе бәндәһе, Һаҙ биҫтәһе бәндәһе, Һаҙ биҫтәһе бәндәһе!» — тип зыңланы...

Бер ниндәй ҙә дарыу бөтөрә алмаҫлыҡ шаҡшы тойғоно иҫәпкә алмағанда, медицина әһелдәре ҡулынан Мотал ул саҡта сағыштырмаса еңел — түбәһенә бер-ике аҡъямау йәбештереү менән генә ҡотолғайны. Мәгәр иң мөһиме алда — әсәй ҡулы телефонға үрелеп, мажараға милиция ҡыҫылған!..Сүп-сарҙы өйҙән сығарып, эште боҙорға итә бит был әсәй ҡарсыҡ! Ҡыҙыл башҡорт менән шундай оло һөйләшеү булғас, Яҙыусылар берлеге идараһының рәйесе креслоһынаса бер аҙым ҡалғас ҡына!.. Уның маҡтаулы ҡалын-ҡалын томдарына ла, исеме алдан йөрөүгә лә талаҡтары яман ташып, хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе ул, тип, күрә алмаусылары теш ҡайрағанда, шул ҡашҡаңа дегет яҡһындар әле! Дуҫ-иш араһында ла көнсөллөк бар. Ҡыҙыл башҡорттоң үҙе, ихтимал, уның юрғаһын бәйгенән тайҙыртыр өсөн, сәбәбен яҫҡыналыр... Аҙаҡҡы ҡабул итеүе генә лә үҙе ни тора!.. Һай, хәйерһеҙгә булды был көн!..

Ҡобараһы осоп ҡайтып ингән әҙипте йорт подъезында йәнә лә бер мөшкөллөк аңдый ине. Ҡарттар әйтмешләй, тәҡдир ҡулылыр инде: башҡа ваҡыттарҙа иҫе лә китмәй күҙ йомоп үтеп китә торған ҡәҙимге хәл — юлды быуып шарҡылдашҡан иҫерек өйөрҙөң, «подъезд тараҡандары»ның табан ялтыратыуын талап итеп, күҙҙәренә тегәнәктәй ҡаҙалды. Тоҙло балыҡ тәңкәләре ҡатҡан һаҫы ҡуллы береһе уны үңәсенән боғалаҡлап уҡ алды, бүркен бәреп осорҙо:

-- Һой, аҡъямау! Башың сатнап барамы? Тот усыңды, бер йотом ҡойоп бирәйем!

-- Аяғында саҡ баҫып тора, ҡарт алаша!

-- Йәмәғәт, айнытҡысханаға оҙатырға кәрәк үҙен! — Һаҫы ҡуллы түшкеҫәнән аҡсаны һурып алғас, беләгенән тотҡайны, упҡындай ҡара ауыҙын убылдыртып, яҙыусының битенә һыра ҡатыш хушбуй һөрөмө һөрөлдөрҙө, көтмәгәндә еңе осонда ялтыраған зәһәр ҡорос тунын телеп ебәрҙе: — Шым, мехҡа төрөнгән буржуй! Башыңды ашаясаҡмын! Мин һиңә Париж Коммунаһы яһармын! Саша Гаврош тип йөрөтәләр мине! — Иҙәнгә ауған бүректе тапап

ташланы. Әҙиплеген онота яҙған Мотал, әҙәплеген юғалтып, иҫен-аҡылын юйып, — ниндәй оят! — хас та баҙар бисәләреләй сәрелдәп һөрәнләне:

—Раз-бооой!

Күрше-күлән тигәнең, ҡолаҡ ҡымып, күҙ йомоп, ике яндан «елп! тә елп!» үтеп кенә тора — лифтҡа бикләнеп шыла... Ниңә ҡотҡарыусы юҡ, ысынлап та, ерҙә ғәҙеллек бөттөмө?!.

Яңғыҙ ҡатын-ҡыҙ ауазы:

-- Шаҡшылар! *Алтын сөрөктәр!* Мә, алығыҙ, өлөшөгөҙҙө! — Иртә-кисен бидон тейәгән санаһын һөйрәп килеп, «Мәләкәәә!» тип һөрәнләп һөт һатыусы аҡ халатлы олпатйән апай имеш — оҙон һаплы сүмесе менән берәм-берәм тегеләргә ҡундыра ла тыш яҡҡа олаҡтыра...

-- Апаҡайым, был мин бит, танымайһығыҙмы ни?! — Сүмес башы ҡаты ғына Моталға ла ҡаптырылды.

-- Пашол, барығыҙ ҙа бер сыбыҡтан ҡыуылған — *алтын сөрөк!*

Алтын сөрөк... Ләкәп үҙенә йәтеш кенә һылап йәбештерелгәс, яҙыусының сәстәре үрә торҙо: хурлъгк!.. Ҡасан ғына булғайны һуң әле ул хәл, ғибрәт һүҙ — малайлыҡтың һабағы?.. «Алтын хазина ут булып ҡабына төндәрҙә» тигән ата-баба ырымынан әҫәрләнеп, ҡараңғыла утынлыҡта баҙлап ятҡан «хазина»ға ташланды, усына йомарлап тотоп, өйгә йүгереп инде: «Әсәкәйем, алтын таптым, алтын!». Күрше-күлән дә бар ине — сәмләнеп, усын саҡ яҙлыҡтырҙылар, малайҙы мәсхәрәгә һалып, шарҡылдап көлдөләр. «Алтын тигәнең — сөрөк, ябай өйәңке ағасының серек үҙәге бит ул, балаҡайым. Ҡараңғыла алтындай баҙлаһа ла, тотоп ҡараһаң, саңдай ыуала ғына ул *алтын сөрөк*...» Бына хәҙер һөт ташыусы был ҡатынҡай уның үҙен, Моталды, күнегелгән олпатлығынан яҙҙыртып, шул сөрөк-саңға тиңләштерә...

## АЛТЫН СӨРӨК ХАҠЫНДА ХИКӘЙӘТ

Борон-борон заманда булған, ти, был.

Бабаларҙың Урал иле, Ағиҙел буйы төйәгенә беренсе аҡ ҡар менән бергә ҡайһылыр тарафтың ҡара бәндәһе юлыҡҡан. Еккән санаһының тәртәләре, йәһәннәм баҙынан уҙғандай, ҡара күмерләнеп бөткән, еләненең салғыйҙары утҡа янған, ә атының ял-ҡойроғонан көйөк есе аңҡый икән.

-- Ай, дат! Вай, дат! — тип, һөрөмлө битенән күҙ йәштәрен супырлатып, ил ҡарттарын илатырлыҡ зарлы-ҡыҙғаныс тауыш менән, нәҡ «төрки китап» теле менән үҙәккә үткәҙеп «дат» ҡысҡыра[66], ти, үҙе. — Күҙ асып-йомғансы ут сығып, көллө донъям, ҡаралтыларым янып китте, ел уны төтөнгә ҡыуҙы, көлөн күккә осорҙо, бала-сағам торомбаш өҫтөндә сеңләп ултырып ҡалды...

-- Ай-бай, кемһең, ҡайһы яҡтан киләмһең?

[66] Дат ҡысҡырыу — Иҫке Египет диненән үк килгән хөрәфәт буйынса, асмандағы Ай ҡайығында «теге донъя»ла (Дат иле) йөҙөп барған бабаларға илап ялбарыу. Урта Азия халыҡтарында (мәҫәлән, үзбәктә) әлегәсә «дат ҡысҡырыу» йолаһы бар.

-- Үҙ яғымдан килмеш әкә[67] мин.

-- Кем? Килмешәкә? Асылың?

-- Эйе, Килмешәкә. -- *Ләкәп шөйлә оҡшап ҡалған мутйәнгә.* – Асылыма килгәндә, һеҙҙең кеүек үк мосолман-тәкә — йәғни ҙә ки Мөхәммәт Ғәлиһөссәләмдең тоғро ҡоло. Хаҡ мосолман булһағыҙ, ил менән иғәнә ҡылығыҙ: торомбашлы тәртәләремә хәйер-саҙаҡаларығыҙҙы элегеҙ, сана төбөмә игелегегеҙҙе түгегеҙ.

-- Килмешәк! Килмешәк! – Ҡоромло-һөрөмлө сана артынан сабышҡан бала-саға – был яҡтарҙа «килмешәк» һүҙе ана шулай килеп сыҡҡан, ти. «Үҙ яғымдан» тигәнен дә аңлағандар: хәҙерге Ырымбур далаһының Һаҡмар, Һайылмыш буйҙарында донъя көткән аҫабаларҙың береһенең ялҡаулыҡтан аҙып китеп иген игеү, мал аҫрауҙы онотҡан, шул арҡала аҫабалығынан яҙып, башкөлләйгә Бохара юлы кәсебенә күскән аҙмыш тармағы икән ул. Хәләл ата-баба ғөрөфөнән бил тайҙыртыу уларҙа, баҡтиһәң, гөбөрнәтер Перовский Ырымбурҙа башҡорттарҙан Каруанһарай һалдыртҡан саҡта ҡурпыған. Йәғни аҫаба ырыуҙарҙың ҡайһы берҙәре баяғы ил төҙөлөшөндә өмә менән Аҡтауҙа янып-тирләп таш киҫһә, икенселәре Йылайырҙан бүрәнәлек ағас ҡырҡып һал ағыҙһа, өсөнсөләре Ырымбурҙа аҡ таштан диуар-манара бураһа, аҙмыш ара ил ғәменән йәтеш кәсеп эҙләп тапҡан: арманһыҙ булып һыуһағандарға юл буйында асы айран болғатҡан. Был шөғөл үҙе, әлбиттә, намыҫ менән үтәлһә, ил өҫтөндә кәрәкле һәм ул эште камил башҡарыусылар дәртләндереүгә лайыҡлы. Ләкин аҙмыш араның аҙғынлығы ла тап шул бәләкәй генә нәмәлә — *Намыҫты Мутлыҡ* алмаштырыуҙа икән шул. Йәғни асы айранға һыуҙы Һаҡмар йә Яйыҡтан түгел, ә ус төбөндәге һаҙлыҡ-күтерҙән генә һоҫҡандар ҙа асы ҡатыҡ миҡдарына Аҡтауҙың асы аҡ балсығын ҡушып шыйыҡлағандар, шул мутлыҡтан кеҫәләренә алтын-көмөш һауғандар. Каруанһарай һалынып бөткәндән һуң да был мутлы кәсеп Бохара каруан юлдары буйҙарында быуындан-быуынға дауам иткән, яңынан-яңы мутлыҡтарға төрләнгән. Ана шуның бер төрөн мут ҡулланып, күрәһең, аҙғын ара тоҡомоноң «килмеш әкә», оло каруан юлы шымартҡан «төрки китап» теле менән ҡолаҡтарҙы шаңғыртып, Урал армыттарынаса килеп сыҡҡан.

Был төбәктең халҡы йомшаҡ күңелле, тиҙ ышанып барыусан, игелекле йән икән. Урам башынан урам осона сыҡҡансы, «дат!» ҡысҡырған «килмешәкә»нең ҡара һөрөмлө яурынына ҡама яғалы төлкө тун, торомбашлы тәртәләренә аҫалы балаҫ, һөлгөләр, төбөнән көл-ҡыуы ҡойолған санаһына тәпән-тәпән бал да май, тоҡ-тоҡ тары, арпа, бойҙай килеп тә ҡунған — аты саҡ тартыр булған. Балаҡ буйлап тубығынаса һуҙылған кеҫәһенә, бала-бәпестәй сеңләп, көмөш тәңкәләр тирелгән.

— Бар, иҙел аръяғыңа ҡайт, торомбаш өҫтөндә ултырып ҡалған сиреүеңде ҡыуандыр — атай нигеҙеңде ҡотайтып донъя көт, Килмешәк!

Ауылдан күҙ яҙҙыртып, сауҡалыҡҡа ышыҡланып, «килмешәкә» атын туғарып еккән: торомбашлы тәртәләрҙе һалдырып, сана аҫтына тыҡҡан, сана аҫтынан алып тырнаҡтарға өр-яңы ҡарамалар, ҡайын тәртәләр ҡайырған. Арғымағының ял-ҡойроғонан көйөк төҫөн һөртөп ташлап, өҫтөндәге һөрөмлө

---

[67] Әкә -- аға, ағай.

еләнен дә сана төбөнә бырактырып, яңыһын кейеп алған. Шығырым тулы йөгө менән яҡындағы баҙарлы ауылға барып ингән. Тәпән-тәпән бал-майҙарын, тоҡ-тоҡ тары, бойҙайҙарын, тундарын һәм аҫалы балаҫ, һөлгөләрен Бохаранан килгән сауҙагәрҙәргә алтын тәңкәгә һатып, иғәнәгә төшкән көмөш тәңкәләрен дә алтынға алмаштырып, алтындарын ыштан бөрмәһенә теккән. Баҙарлы ауылдан сығып, сауҡалыҡҡа боролоп, атын туғарып еккән: торомбашлы ҡарамаларын, тәртәләрен ҡабат тырнаҡҡа ҡайырған, атының ял-ҡойроҡтарын көйөк менән ыҫлаған, үҙе һөрөмлө еләнен кейеп алған.

— Ай, дат! Вай, дат! Көллө донъяһы утҡа сыҡҡан, тотонгә осҡан килмешәкә мин! Хаҡ мосолман булһағыҙ, ил менән иғәнә итегеҙ!.. — Шулай зарлы-ҡыҙғаныс «дат» ҡысҡырып, ҡыш буйына ауылдарҙың береһенән-икенсеһенә ҡыҙырған; иғәнәгә төшкән бар малын алтынға әйләндергән дә ыштан балаҡтарына, күлдәк инестәренә, елән еңдәренә теккән. Яҙ еткәс, алтынын яңғыҙы күтәрә алмаҫтай булғас, баҙарлы ауылдан бынамын тигән тройкалы фаэтон-арба һатып алып, фаэтон эсен бал-май менән, бойҙай менән тултырып, ҡама тун һәм ҡама бүректәр кейеп, «килмешәкә» үҙенең яғына ҡайтып киткән. Был яҡтағы халыҡ уны онотҡан.

Ил ғәмендә нәүбәттәге яҙ, йәй, көҙҙәр уҙып, һимереп бөткән бурһыҡтарҙы ҡышҡы йоҡоға талыу өсөн өңгә ҡыуыусы «аҡ себен»дәр оса башлағас, буралар игендән һығылып, тәпәндәргә, көрәгәләргә бал һәм майҙар көрәлгәс, йәш ҡыҙҙарҙың, килендәрҙең сәстәренә сулпы итеп яңы көмөш тәңкәләрҙе тишеп тегә башлағас, ни күҙҙәре менән күрһендәр, был төйәктең бер юлдағы тиҫтәләгән ауылдарын беренсе аҡ ҡар менән бер юлы юлыҡҡан тиҫтәләгән таныш ҡара бәндәләрҙең «дат» зары иңрәткән:

-- Ай, дат! Вай, дат! Көллө донъяһы көлгә сыҡҡан мөьмин-мосолмандарбыҙ...

-- Килмешәк берәү ине, унау булған икән инде! — тип аптыраған эскерһеҙ ил ҡарттары. Шулай ҙа һәр береһенә ил иғәнә биреүен дауам иткән, тәүге «килмешәкә» кеүек үк, унауһын да байытҡан, саналарын тултыртҡан. Яҙ ҡояшы битен биргәс, тройкалы фаэтондарға тейәлеп, унауһы ла үҙҙәренең «иҙел аръяғы»на кире ҡайтып киткән, тәүге килгән «килмешәкә» каруандың башында барған. Баҡтиһәң, был яҡтарҙа ул элгәре бер байып ҡайтҡандан һуң, бөтә ағай-энеләрен йыйып алған да, алда торған табыштың һәр унынсы өлөшөн үҙенә «закат ҡылыу»ҙы төп шарт итеп ҡуйып, иҫәүәндәр иленә барып ҡотайыу серен сискән — һәр береһе торомбашлы тәртәләргә көйгән ҡойроҡло ат егеп, «дат» юлына өйөрөлөп сығып киткән... Торомбашлы тәртәләр менән сәфәр гиҙгән унауһы ла ҡыңғыраулы тройка егеп уңып ҡайтҡан, ә баш «килмешәкә» унлата байыҡҡан. Шунан һуң йыл һайын аҡ ҡар яуыу менән, аҡ сана юлы төшөү менән Урал иңе, Ағиҙел буйҙарына торомбаш тәртәле ылауҙарҙа күмерҙәй ҡара «дат»сылар сиреүе ябырылған, уларға биреп еткерер мал, әмәл ҡалмаған. Торомбашлы тәртә башы күҙгә салыныу менән:

— Килмешәк! Килмешәк! — тигән һөрән яңғыраған. Шулай итеп, «килмешәкә» тигән ләҡәп, имештер, «килмешәк»кә әүерелгән, килмешәкле һуҡмаҡтарҙа мәшһүр мәҡәл таралған: «Ағиҙелдең аръяғында бер энәгә — бер

һыйыр». Торомбашлы саналарына сығарып һалыр әйберҙәре ҡалмағас, был төбәктең йомшаҡ күңелле, тиҙ ышанып барыусан, игелекле йәндәре, ҡыҙғанып, үҙҙәре кеүек үк хаҡ мосолмандар икәнен иҫтә тотоп, ерһеҙ-һыуһыҙ «килмешәк»тәргә үҙҙәренең ата-бабанан килгән аҫаба ерҙәрен дә ҡырҡып бирә башлағандар. Улар унда нигеҙ ҡороп ереккәс, үҙ-ара ҡыҙ әйттерешеп, килен алышып, туғанлашып та киткәндәр — һәр береһе хәләл көсө менән донъя көткәндәр. Әммә тәүге «килмешәк»тең быға күңеле килмәгән, күнмәгән. Торомбашлы тәртә егеп йөрөп шундай осонған — ул хәҙер бил бөгөргә лә, бауыр баҫып эшләп тир түгергә лә һис кенә лә теләмәй, ә шунһыҙ инде төшөмкәйҙе Алла ла, бәндә лә төшөрмәй икән. Ахырыһы, булмағас, ул икенсе аҡыллы хәйлә әмәле уйлап тапҡан: башына аҡ сәллә урап, «ҡөрьәнел хафиз»[68] булып киткән. Йәғни йәнә ауылдан-ауылға йөрөп, хаҡ мосолмандарға яттан Ҡөрьән укыр, «Йондоҙнамә» асыр, шуның өсөн тәңкәһен дә, башҡаһын да көрәп кенә алырға тырышыр, имеш. Мәгәр уға алтын-көмөшкә ҡарағанда ла рәхмәт кенә күп яуыр, имеш. Сөнки Ҡөрьән уҡыуҙы ла, «Йондоҙнамә» асыуҙы ла был яҡтарҙа һис бер алтын менән тиңләшмәҫ-үлсәнмәҫлек изге эш тип ҡарағандар, ә ысын йөрәктән әйтелгән рәхмәтте алтындан да ҡиммәтерәк һанағандар. Әммә алтын урынына рәхмәт алыу Килмешәк тип исемләнгән был бәндәне төптө ҡәнәғәтләндермәгән, ыштанының бөрмәләре тәңкәләрҙән ауырайыуын көҫәгән. Ҡөрьән менән «Йондоҙнамә»нең торомбашлы тәртәләрҙән дә ҡеүәтһеҙлеген тойоп, ул сәлләһен тағатҡан, ҡайсы менән ҡоралланып, үҙен «Бөйөк Бесеүсе» тип иғлан иткән, элеккеләй, ауылдан-ауылға, өйҙән-өйгә ҡыҙырып, байғураға, тархандарға һәм хандарға ҡама тундар бесергә керешеп киткән. Үҙе өйҙә тун бесер, үҙе хужа алтынының күпмелеген, ҡырҡ йоҙаҡлы ҡайһы һандыкта ятҡанлығын, аҫыл малдары ниндәй каруандарға артылып оҙатылыуын еҫкәнеп-темеҫкенер икән. Бөтә илде шулай темеҫкенеп уҙып, был яҡтарҙың көллө алтын каруандары юлаҡланып уҙа торған, дүрт тарафҡа һыҙа торған алтындан да алтынлыраҡ юл сатрашын тоҫмаллап (ә ул хәҙерге ҡалабыҙҙың иңкеүендәге элек Сиған аҡланы тип аталмыш һаҙ биҫтәһе урынлашҡан ер икән), бесеү кәсебен ташлап, шул алтындан да алтын баһалы сатрашҡа килә, дүрт ҡиблаға тартылған юлдар киҫемендә ҡара ҡайын туҙынан сатыр ҡороп, сатыр алдына иман таяғын ҡаҙап, изге Йософ пәйғәмбәрҙәй инсаф менән аяҡ бөкләп ултыра. Өҫтөндә шул «пәйғәмбәрҙән ҡалған» укалы йәшел елән, башында ап-аҡ ебәк сәллә, бер тубығында Аҡ Китап, икенсеһендә Ҡара Китап, йөҙө иһә Айҙан да, Ҡояштан да яҡтыраҡ-изгерәк имеш. Дүрт тарафҡа уҙған алтын каруандары тәңгәлендә туҡталып, унан Аҡ Китап астыртыр, Ҡара Китап аҡтартыр, юл-сәфәргә ике фатихаһын да алып китер, ти. Ә Килмешәк каруандарҙың ҡайһы юлдан ҡайҙа табан ығылыуын, ҡайһы дөйә уркәсендә күпме миҡдар алтын заты ятҡанлығын ғына шәйләп ҡалыр, ти. Һәм... ҡара ҡайын туҙ сатырлы дүрт юл сатрашынан тап өс көнлөк алыҫлашҡас, ҡаш менән күҙ араһында каруан юлы баҫылыр, үркәстәрен алтын иҙгән дөйәләрҙең теҙгендәре юлбаҫарҙар ҡулы аша Килмешәктең ҡулдарына юлығыр...

[68] Ҡөрьәнел хафиз — Ҡөрьән-Кәримде яттан белеүсе.

Тәүге каруан хазинаһына эйә булыу ҡыуанысынан куҙҙәренә йоҡо ҡунмай илереп ятҡан ҡара ҡәҙер төнөндә Килмешәктең күҙ алдары ҡапыл яҡтырып китә лә ҡара ҡайын туҙынан ҡоролған ҡара сатыры алтын төҫөнә инә, һары алтын шәүләләре ҡомарында ғәжәйеп йән эйәһе — ҡарсыға башлы һәм ҡанатлы, арыҫлан кәүҙәле ҡурҡыныслы Ҡарабан[69] пәйҙә була.

-- Әссәләмәғәләйкүм, йәнен алтынға алмаштырған Килмешәк ошонда торамы?

-- Эйе, ошонда! — ти Килмешәк, ҡурҡышынан теле аңҡауына ҡатып, һулышын саҡ-саҡ алып. — Һин үҙең кем буламһың?

-- Мин — Ҡарабан. Ҡояш-хоҙайбикәнең яҡты шәүләләре рәүешендә ер йөҙөн гиҙгән Ҡарсыға менән Арыҫландың бергә ҡушылдығын хасил итәмен, шуға күрә бер юлы Ҡарсығаға ла, Арыҫланға ла оҡшаймын. «Ҡарсыға» — «Ҡор» тимәктән хасилдыр...

-- Беләмен, — тигән Килмешәк. — Беҙҙең телдә «Ҡор» — ҡырағай тауыҡ, ә икенсе телдә лә шул уҡ: «Ҡор-әсә» (Кур-ица) — өй тауығы. Ул ҡор-тауыҡ нәҫелен беҙ, башын бороп ташлап, йөнөн йолҡҡас, үҙ йомортҡаһын үҙенә тултырып...

-- Меҫкен! Үҙ хоҙайыңды үҙең ашағаныңды белмәйһең шул... Иҫке Египетта торған саҡта һинең бабаларың Ҡояш-хоҙайҙың ерҙәге шәүләһе Ҡор (Хор) хоҙайсығына табыныр, уны үҙҙәренең ҡорамдарындағы (храмдарындағы) изге алтәреләренә һары алтындан ҡош затында ҡойоп һүрәтләр ине...

-- Һе! Йомортҡаһын эсенә тултырған ҡор-тауыҡты алдыма килтереп ҡуйһалар, мин дә... — тигән, ти, Килмешәк, йыртҡыстай Ҡарабандың, төптө лә йыртҡысланмайынса, күбеһенсә фәлсәфәгә бирелеүенән шөйлә иркен тын алып.

-- Бабаларың шул уҡ иҫке Египетта Ҡояштың ерҙәге арыҫлан ҡиәфәтендәге яҡты шәүләһе булған 32 хоҙайға, 33 хоҙайбикәгә лә табынған, уларҙың һары алтындан ҡойған һындарын халыҡ Зәхмәт (Сехмет) тип тә, Бәхет (Пахт) тип тә ололаған...

-- Хәҙер ҙә беҙ Зәхмәтен дә, Бәхетен дә таныйбыҙ; тик Зәхмәтте — дошмандарға ҡағылһын, ә Бәхетте үҙебеҙгә ағылһын, тип кенә теләйбеҙ...

-- Шуға күрә ҡара сатырлы юл сатында бер тубығыбыҙға — Урал батырҙың Аҡ Китабын, икенсеһенә Шүлгән батырҙың Ҡара Китабын һалып ултырабыҙ, тиһең инде!.. — тип төрттөргән көтмәгәндә Ҡарабан.

---

[69] Ҡарабан— (хәҙерге ғилми термин гриффон) — Урал батырҙың ер аҫтындағы аҫыл һөйәктәрен (алтын хазинаһын) ҡурсалаусы мифик зат (тау эйәһе), боронғо бабалар (скифтар) уйлауынса. Ул иһә «кәр» (ер) һәм «абан» (ҡояш) тигән һүҙҙәрҙән хасил, йәғни «Ер эсендәге Ҡояш» була. Был ер аҫты йыртҡыс ҡошо башҡорт мифологияһында (мәҫәлән, «Аҡъял батыр» эпосында) бик баҙыҡ кәүҙәләнгән. Ҡарабандың игеҙәге Балабан (бал, балаҡ, болаҡ — һыу тигән һүҙ, абан —Ҡояш; Балабан, тимәк, «Күк эсендәге Ҡояш»). Боронғолар Күкте Ҡояш, Ай һ. б. есемдәр йөҙөп йөрөгән һыу заты тип һанаған; Балабан иһә башҡорт телендә әлегәсә әүҙем ҡулланылышта: *балапан* — ҡарсығаның ирәбе себеше (Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге, II том, Өфө, 1970, 39-сы бит) һәм эпостарыбыҙҙағы мифик Самрау иле эйәһе сәмреғош (самрау: асмар-аба — «Кук-һыу эсендәге ҡояш»). Хәҙерге бер йыртҡыс ҡоштоң исеме «гриф» (таҙғара) һәм «ғөрөф» һүҙҙәре шул Ҡарабанға (Гриффонға) бәйле имештер. Ҡарабан-Гриффонды һүрәтләгән ҡомарҡылар ҡурғандарҙа — бабаларҙың ҡәберендә табыла.

—Ҡарабан әфәндем, һин ниңә бында минең сатырға килдең?

-- Алтындарҙың төп эйәһе булараҡ, һин Килмешәк-бәндәне киҫәтергә.

-- Нимә тип?

—Бөгөн һинең ҡулға алтын каруаны кергәнде беләм. Өсөнсе көн генә ул алтынға мин, Ҡарабан, эйә инем, кисә Каруан үркәстәре хужаланды, бөгөн һин хужа тағы. Иртәгә башҡа бәндә хужаланасаҡ. Мәгәр уның төп эйәһе һәр саҡ берәү — мин, Ҡарабан. Алтындарымдың ҡайһы тарафҡа ялҡылдап ағылғанын да, ҡайһы тарафтан шымарып ҡайтҡанын да күреп торам. Йылғанан ыҡкан һыу заттары оло диңгеҙгә ҡойоп, унан Күккә томан булып олғашып, тос болотҡа әүерелеп, йылға башына кире әйләнеп ҡайтып, ямғырланып яуғандай, минең алтындарым да үҙе ятҡан ергә кире әйләнеп ҡайта. Урал батыр ауыҙынан бөркөлгән *йәнһыу* заттары, билдәле булыуынса, көллө үткән юлында яҡты тормош, тилбер тереклек тыуҙыра, шул уҡ ваҡытта уның, ҡара Шүлгән ҡарамағына ҡармалып, ҡара әжәл килтереүе лә ихтимал. Алтын да шуның кеүек: берәү ҡулында ергә бәхет, ҡыуаныстар балҡытһа, икенсенең усында ул илгә күҙйәш, ҡан сәсә...

-- Бының менән миңә ни әйтмәксеһең?

-- Икенең берен һайла, тим. Кешеләргә бәхет килтерер булһаң, ҡулыңа ҡапҡан алтындарҙы усыңдан тартып алмайым. Әгәр үҙең өсөн генә тамшанһаң, күҙ асып йомғансы алтыныңды *сөрөккә* әйләндерәм — *алтын сөрөк* хужаһы итеп ҡалдырам. Ошоно ныҡ иҫеңдә тот, икенең берен уйлап эш ҡыл һәр ваҡыт! — Шулай тигән дә, ти, Ҡарабан, арыҫлан кәүҙәһен турайтып, ҡарсыға томшоғон ыржайтып, ҡарсыға ҡанаттарын ҡыйғырлатып, Килмешәктең күҙенән дә юғалған, ҡара ҡайын туҙлы ҡара сатыр ҡабат төн ҡаралығына сырмалған. Ҡурҡышынан Килмешәк телһеҙ ҡалған.

Шул ҡараңғы төн ҡуйынында ҡара ҡайын туҙлы ҡара сатыр биләмәһендә ҡара төндән дә ҡараҡ йылан затлы икенсе бер ғәләмәт төҫмөрләнгән:

-- Хе-хе-хе! Урал батыр вәзиренең шул һүҙҙәрен саф алтынға алдыңмы? — Ҡара йыландың тауышы шундай ҙа яғымлы, хәстәрлекле — һәр һүҙе эс-бауырыңа май булып яғылыр икән. Тотанаҡ көсө тойоп, Килмешәк еңел һулаған:

-- Ҡурҡам да, алтындарымды һибәләргә ҡыҙғанам да.

-- Хе-хе-хе, бына быныһы — минеңсә! Ҡурҡма ла, һибә лә ҡылма — телең менән тирмән тарт, ҡулың менән он көрә.

-- Әлхасил[70], төшөндөрөп бирһәңсе.

-- Алтынды һин кемделер бәхетле итер өсөн йыям тип уйла, һөйлә, лаф ор, ләкин ҡулыңа төшкән берен төпһөҙ ҡойоңа сумыр. Ҡарабанды ла алдарһың, миңә лә таянырһың, һөҙөмтәлә үҙ нәфсеңде һыйларһың.

-- Кем һуң һин, эй остазым?

-- Тубығында ятҡан Ҡара Китаптың тылсымы мин, Урал батыр үлгәндә лә мәңге үлмәҫ Шүлгәнмен! — Шулай тигән дә Шүлгән, сатыр мөйөшөн күтәреп, күтерле һаҙға шылған.

Ҡөҙрәтле Ҡарабандың киҫәтеүен Килмешәк иҫендә ныҡ ҡалдырған, әммә

---

[70] Әлхасил — ҡыҫҡаһы.

һөҙөмтәне Шүлгән ҡушыуынса яһаған: «изге» эшкә ҡулы ҡысыҡкан, күңеле ҡуҙғалған һайын, мин бит кешеләр бәхете өсөн тырышамын, хоҙайым. Тәүҙә алтынды етерлек итеп йыяйым, шунан һуң бөтәһен кешеләргә бәхет итеп һибәләп өләшермен, тип доға ҡылыр икән. Шул доға менән ил күңелен йомшартып, бер әсмүхә сәйгә һаҙлыҡ уртаһындағы дүрт юл сатрашланған Сиған аҡланын һатып алған (был яҡтың алсаҡ күңелле, тиҙ ышанып барыусан, игелекле йәндәре ул ерҙе, имеш, йыл да шунда табор ҡороп йәйләп ятып маҙаларына тейеүсе — дүрт тояҡлы малға, бигерәк тә йылҡыға ҡарата «ҡулы оҙон» сиғандарҙан арынмаҡҡа, хатта бушлай бирергә лә бик ныҡ тырышҡан, тиҙәр!). Һаҙ алҡымындағы юл сатрашына ҡара ҡайын туҙлы сатыр урынына ташбулаттан каруанһарай, һаҙ араһындағы әрәмәлеккә икешәр ҡатлы ташбулаттар, келәттәр, ат аҙбарҙары һалдыртҡан. Каруанһарай ихатаһына ҡара-ҡаршы итеп мәсет һәм трактир, мәҙрәсә һәм тәтәй ҡыҙҙар менән тулы фәхешхана төҙөткән. Йәмәғәткә өндәшеп, эй илем-бәғерем, быларҙың барыһы минең үҙем өсөн түгел, ә Атайсал-ил өсөн, кешеләр бәхете өсөн кәрәк, тип изге доғалар ҡылған, башҡаларҙан да ҡылдыртҡан. Дүрт тарафтың алтындары ла каруанһарай аша уҙып, Килмешәктең ек-япҡытына һеңә торған. Ек-япҡыттан көрәлеп, баҡыр келәт эсендәге уймаҡ ауыҙлы тимер мискәгә ҡойолған. Тимер мискә шундай ҙур — төбө тирмә дәүмәлле, буйы манара тиңле икән. Уймаҡ ҡына ауыҙынан алтынды төшөрөп була, ә кире алып булмай, ти — хәйлә менән яйлатҡан. Килмешәктең хәйләһе лә үҙенә күрә, имеш: алтын эйәһе Ҡарабанды отмаҡҡа йүнәлтелгән. Дәү мискәне лыҡама ҡылып тултырғас, тип Ҡарабанға ишеттертеп мут хәйләләгән ул, көллө алтынды донъяға таратып бирәм, һибә ҡылам — илде бәхетле итәм. Ләкин эске ысын уйы сүлмәк тышына сыҡҡан майҙай беленгән: бөтә донъяны һатып алам, илде уҙемә ҡол ҡылам!

Бер заман һаҙ, ҡала менән ҡушылып, ҡаланың *һаҙ биҫтәһенә* әүерелгән, тимер мискә тамағы иһә, алтындарҙы йота торғас, лыҡама булып тулған, шул сәғәттә Килмешәк тә, һуңғы ҡабым ризығы ҡулынан төшөп китеп, Ғазраилға йән биргән. Килмешәктең имәндәй утыҙ улы — утыҙ өймән[71] араһында Һаҙ биҫтәһен илертерлек ығы-зығы башланған — мираҫҡа ҡалмыш тимер мискә өсөн оло дау ҡупҡан. Көллө Һаҙ биҫтәһе шул ғауғаға ылығып, бер-береһенең боғаҙын сәйнәп-талаусы, боғаҙлаусы утыҙ төркөмгә бүленеп, һәр береһе мискә тулы алтынды үҙенә даулап, бер-береһен туҡмашҡан. Ҡанлы низағ тау башындағы мәсет ҡарты мөфтигә барып етеп, аҡ батшаға ирешеп, Петербурҙан Һаҙ биҫтәһенә тәфтишселәр ебәртелеп, энәһенән-ебенәсә дау осо тикшерелеп, Сенат тарафынан указ сығарылған: мискәләге саф алтынды, бысҡы менән бысҡандай, ҡап-уртаға бүлергә, ҡап-уртаға бүленгәндең бер яртыһын йәнә ҡап-уртаға айырырға ла шуның яртыһын теүәл утыҙ өлөшкә өймәкләргә. Тәүге бүлеүҙең өлөшө булған ҡап-яртыны — аҡ батшаға, икенсе ҡап-яртының ҡап-яртыһын — мөфтигә, ә сиректең утыҙ өлөшкә айырылғанын Килмешәктең боғаҙ сәйнәшеп низағлашыусы хәйерһеҙ тоҡомона — утыҙ өймән өйөрөнә бирергә, шуның менән дәғүәне бөтөрөргә. Петербурҙан һәм Златоустан тимер оҫталары килеп, Һаҙ

[71] Утыҙ өймән — утыҙ өй-бура тигән һүҙ.

биçтәһен оторо сәмгә һалып, тимер мискә ауыҙын ҡайырып асалар ҙа алтынды һоçко менән һоçоп алырға, билдәләнгән миҡдарға ярашлы утыҙ ике лә тағы ике өлөшкә бүлеп һалырға тотоналар. Беренсе һоçоп алыуҙа уҡ Һаҙ биçтәһе халайығы тетрәнеүгә юлыға, икенсе һоçоп алыуҙа ул сәсен йолҡорға тотона, өсөнсө һоçоп алыуҙа иһә үкереп илап ебәрә. Ни өсөн, тигәндә, шаҡ-ҡатырғыс хараба: һоçоп алынған һәр миҡдар алтын бөтә күҙҙәрҙең яуын алып баҙырлап-балҡып китә лә, һоçҡонан төшөп етер-етмәçе борон, һауала уҡ ыуалып, күҙ менән ҡаш араһында *алтын сөрөккә* әүерелә — ҡарт өйәңке олонононоң үҙәгендә онталған сөрөк кеүек... Ғажиз ҡалып, оçталарҙан мискәнең төбөн ҡапҡа ҙурлыҡ ярҙырталар — алтынды мискәнән ергә тура ишереддертәләр, ләкин ул, мәрхәмәтһеҙ, ергә тейер-теймәçтән, тағы ла баяғы саңға — *алтын сөрөккә* әйләнә. Килмешәктең ғүмере буйы ҡарманып йыйған тау ҡәҙәре һары алтыны сөрөк булып кешеләрҙең аяҡ аçтына ыуала, юл саңына әүерелә...

Һаҙ биçтәһе халайығы алйыуҙан бармағын тешләп, һушы китеп шаҡ-ҡатҡанда, *алтын сөрөклө* майҙандың уртаһында, һары сәмүмдәй борхолдаған юл саңында, әлеге лә баяғы, ҡарсыға башлы һәм ҡанатлы, арыçлан кәүҙәле Ҡарабан пәйҙә була, ерҙе-күкте тетрәтерлек нәфрәтен саңҡылдырып, Килмешәктең утыҙ өймән тоҡомона бармаҡ янап, үҙенең һуңғы киçәтеүен яуҙыра:

— Һеҙгә, *алтын сөрөк* тоҡомға, мәңгелек ғибрәт булһын, быуындан быуынға аманат ҡылып ҡалдырығыҙ был һабаҡты! Аҡ күңелле Уралдан үрнәк алып, үҙегеҙ өсөн түгел, кешеләр өсөн, ил өсөн йәшәргә кәрәк ерҙә — шунда ғына үҙегеҙ ҙә бәхетле булырһығыҙ! Ҡара бәғерле Шүлгәндәй, әгәр үҙегеҙ өсөн генә тамшанып тырмашһағыҙ, тапҡан алтындарығыҙ ғына түгел, ә алтындан да ҡиммәтлерәк ғәзиз ғүмеркәйҙәрегеҙ, ғүмер биреүсе ризыҡ әпәкәйегеҙ *алтын сөрөккә* әйләнәсәк, юл саңы булып осасаҡ — иçегеҙҙә тотоғоҙ! — Шулай ти ҙә Ҡарабан, һәр бәндәне үҙ алдына ҡалдырып, Уралтауға атлыға — Һаҙ биçтәһенән мәңгелеккә олаға. Тынып ҡалған Һаҙ биçтәһе биләмендә һаҙҙай йомшаҡ һыланыусан-яғылыусан, эс-бауырға кереп рәхәтләндереүсән, арбаусан бер тылсымлы ауаз йәмғе ҡарпыш ҡолаҡтарҙы иркәләп, йөрәктәрен биләүләп, аҡылдарын алйытып-бәлләүерләп, йәнгә йәпле таяныстай ымһындырып илертә:

— Урал һүҙе һеҙгә шәхсилекте тыйыу, нәфсегеҙҙе ауыҙлыҡлау, иркегеҙҙе сикләү заңы килтерә. Шүлгән һүҙе һеҙҙең шәхсилеккә иркен юл аса, нәфсегеҙҙе ысҡындыра, сикләнмәгән азатлыҡҡа сығара. Уралдың Аҡ Китабынан баҡҡан саҡта үҙегеҙҙең күңелдәге тауҙай күргән аҡлығығыҙ ҙа саңдай ғына булып ҡала — ул һеҙҙе кесерәйтә. Шүлгәндең Ҡара Китабынан ҡарағанда саңдай ғына аҡлығығыҙ ҙа тауҙай булып күренә — ул һеҙҙе олпатлата. Урал батыр Ҡарабаны һеҙ табынған һары затты алтын сөрөккә әйләндерһә, Шүлгән һеҙгә сөрөктән алтын табыу юлын өйрәтә. Шуға күрә ошо икенең береһен баш итеп үҙегеҙ һайлағыҙ ҙа өндәшмәй генә шуның буйынса йәшәгеҙ! — Татлы ҡотҡо һалыусы ла күҙ алдынан юғалған, үҙе яҡлы бәндәләрҙең күңеленә кереп оялаған. Шунан биреле кешеләрҙең ҡырҡ йоҙаҡлы күңелендә, күҙгә күренмәй генә, мәңге тынмаç һәм туҡталмаç яу бара -- Аҡ һәм Ҡара тартышы дауамлана, ти. Күҙ алдында алтын сөрөк булып ыуалған ғүмерҙәр генә был донъяла Ҡарабандың да, Шүлгәндең дә әле булһа барлығын, кемдең ни өсөн йән атып йәшәүен үтәнән-үтә

күргәндәй белдерәләр...

Күкрәк ярып сығып барған йөрәк башын кем иңенә терәргә?!.

Эш бүлмәһенә инә һалып төпләнгәс, Моталдың йән йәрәхәттәре ҡанһырап, «Саша Гаврош»тың улаҡланып ялтыраған бысағының шәүләһе киçте һушын: тауышы ла ҡалтырамай, исмаһам! Был ни хәл?!. Үлемесле кисерештәр кисендә лә Мөхлисәһе өйҙә юҡ — кем менән һөйләшергә, моң-зарҙы түгелдерергә? Аçыл келәмдәр аçып биҙәлгән бүлмәләрҙә үле тынлыҡ...

Ҡәләм әйәһенең елһенгән мейеһендә мажара гәжәйеп дәүмәлдәрҙә ҡабарып, кисекмәçтән милиция булегенә еткереү, үлтерергә янауҙары тураһында рәсми ҡағыҙ тултыртып, бандит бысағынан ғүмерен һаҡлатыу өсөн ашығыс саралар күреүҙәрен талап итеү теләге дөрләп ҡабынды: ни тиһәң дә, илгә таныҡлы шәхес — яҙыусы бит әле ул! Төбәктәге тәүге өстоҡан[72] авторы! Тик ниәте, быçҡыған мәлендә үк, баяғы ҡара һаҙға һеңгән осҡондай һүнеп-һүрелде — кәрәк түгел сүп өçтөнә сүмәлә! Ҡыҙыл башҡорттоң мәғәнәле һүҡ бармағын онотма! Кейәү-балаңдың йоҙроҡ елен йомоу тураһында уйла!.. Их, хәйерһеҙ көн булды был!..

Тороп, бүлмә буйынса йөрөндө. Улай ҙа бисәһе тегендә — итәк аçтыңдан ялҡын таралмаясаҡ. «Шылт!» иткәнде лә һиҙмәһен Ҡыҙыл башҡорт!

Ут сыҡҡандай, телефонға йәбешеп, әсәй менән Гөлзифа һеңлеһен киçәтте — ауыҙ тулы ҡара ҡанды төкөрмәçкә. Йыуынып-сайынып, тәртипкә килтерҙе үҙен. Сәсе көҙәлеп, аҡъямау йәбештерелгән соңҡаһын күрһәтмәçкә, өсөнсө йыл Риганан алып ҡайтҡан, саңғы шыуғанда кейә торған йылы бәйләм-башлыҡ менән көпләнде. Милицияға шылтыратып, ике туған араһындағы низағты, ике туған талашыр, атҡа менһә ярашыр, тигәндәй, аҡ ҡағыҙға мөһөрләндертеп ҡалдырмай ғына йомоуҙарын, ә дыуамал ғалим киçәген, саҡ ҡына шөрләтеп алғандан һуң, арт һанына йомшаҡ ҡына тибеп сығарып ебәреүҙәрен үтенде. Үҙ һүҙенең көсен тойған әҙип ҡәнәғәт йылмайҙы: «Эштәр насар түгел беҙҙең, Димустан!» Ул боҙоҡбаш кейәү-баланың да, милиция биге аçтынан ҡотолоп сығыу менән үк, йоҙроҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәй, танау күтәреп килеп етерен, аҙаҡ сиктә күрәләтә ут менән уйнарға ярамағанлығын төшөнөп, түбәнселекле ғәфү үтенерен инанып өмөт итте. Ни тиһәң дә, бер туған ҡайнағаһы бит ул. Телефонды ҡабат егеп, һеңлеһенә лә тумбытты ошоно, сөнки туғандар араһында туғанлыҡ ҡануны хөкөм һөрөргә тейеш. Әммә кейәү-бала ҡаҙна йортонда ла аҡылына ултырмаған, тәкәбберлеген һындырмаған булып сыҡты — өйгә ҡайтып инеүе менән, тип белдерҙе Гөлзифаһы телефондан, һыртарҡаһын терпе кеүек тырпайтты: «Һөйөнсөлә ағайыңа: һоло-вика-кукуруза-донник-рапс ҡамсаһын[73] макулатураға ярашлы итеп өлгөртөүенә барып етермен, силосҡа һалышырмын...

Кейәү сәләме Мотал бәғерен әсе ыуҙай көйҙөрҙө: «һоло-вика-кукуруза-донник-рапс ҡамсаһы!..» Нисәмә йылдар әсе тир һәм ҡан түгеп яҙылған романдары хаҡында бына ҡайһылай уйлаусылар бар әле. Етмәһә, үҙеңдең бер

[72] Өстоҡан — трилогия.

[73] Ҡамса— пенталогия.

туған кейәүең, үҙеңдеке — үҙеңә яу, тигәндәй... Эйе, ҡайһы бер томдары өр-яңы килеш ята-ятыуын китап шүрлектәрендә. Бәлки, бәғзе бер наҙандар, баҫма һүҙ ҡәҙерен белмәүселәр макулатураға тапшырыуҙары ла хаҡтыр. Дюма өсөн әсәһен һатырҙай йәндәр бар. Әммә уның, Моталдың, партия алдындағы ижади подвигы тоноҡланмаҫ — бөгөнгө көн аңламаусылар ҙа киләсәктә төшөнөр. Яңы быуындар баһалар. Сөнки ул, ысынлап та, төбәктәге *тәүге* өсто̆кан -- *трилогия авторы*, шуныһы ғына ла ни тора! Алтын тутланмай, алмас онталмай, тип күңелен йыуатырға тырышты ул. Әммә йөрәк яраһы һулҡып һыҙланы: ҡәҙерҙе белмәй кейәү! Ит изгелек — көт яуызлыҡ, тигәндәре ошолор... Хәҙер китап шүрлектәрен олпатлатып биҙәп торған өсто̆канды яҙып бөткәнсе, уны донъяға сығарғансы күпме ғазаптар кисергәнен әҙип үҙе генә белә. Дөрөҫ, бер роман ғына итеп уйланылғайны тәүҙә — илдең ауыл хужалығын күтәреүҙә көн үҙәгенә килеп баҫҡан, гәзиттәрҙе шаулатҡан темаға, йәғни иркен баҫыуҙарҙа игелекле *һоло* культураһын күкрәтеп сәскә аттыртыу аша колхоз-совхоз фермаларында яңы еңеүҙәр яулауға. Хоҙайҙың ҡашҡа тәкәһе, тип, көндәштәре күпме генә сафсата һатмаһындар, әммә аша атлап уҙа алмаҫтар бер хәҡиҡәтте: партияның яҙыусыларға йөкмәткән мөҡәддәс бурысын кемдер түгел, ә Мотал Шаһибәрәков үтәне, һәр саҡта ла ул ана шундай өлгөр яҙыусы булды, көн үҙәгенә ҡаҡкан сүкеште лә, ураҡты ла күтәреп ала белде. Ләкин тормош тигәнең үҙ хөкөмдәрен ҡора шул. Көс-хәл менән йырып сығылған «һоло романы» ҡулъяҙмаһының ҡараһы кибергә лә өлгөрмәй, Кремлдең ялтыр башлы хужаһының ҡушыуы буйынса колхоз-совхоз баҫыуҙарында яңы алым башланды — һолоноң үҙен генә түгел, ә *вика* үләнен ҡауыштырып сәсергә. Моталға, түбә сәсен йолҡа-йолҡа, романдың яңы *һоло-вика* өлгөһөн (дилогия!) ҡорорға тура килде. Елек майҙары ҡороп, шуның осона сығырға ғына өлгөргәйне, ауыл хужалығы офоғонда «баҫыуҙар байбисәһе» — *кукуруза* үҙе ҡалҡынмаһынмы! Ҡалҡынды ла йәнә теҙ-бәкәлгә һуҡты — әҙип өсөнсө өлгөгә (өсто̆кан!) тотондо. Әммә үҙе дилогия тип тә, трилогия тип тә шәйләмәй ине әле. Быныһын да йырып сыҡты, әммә күңелдә ҡурҡыныс шөбһә ҡалды: ни ҡылырбыҙ мәғрүр «баҫыуҙар байбисәһе»н дә икенсе бер культура һуғып йыҡһа?.. Ҡулъяҙмаларын өс тау рәүешле өҫтәлгә өйөп һалып, икеләнеү ғазаптары кисергәндә Моталдың эш бүлмәһенә юғары даирәләргә билдәле һәм аҡыллы партия күрһәтмәләрен милли әҙәбиәткә бөтмөрләп үткәреүсе баяғы әҙәби тәнҡитсе – башҡорт белинскийы Ғаяс Хөсни килеп инде лә, өс суҡай тау эргәһендә йоҙроҡтай кәрлә кәүҙәһе менән ирәүән генә ултырып (Мотал уның партия өлкә комитеты ҡушыуы буйынса килгәнлеген яҡшы шәйләне), мәсьәләгә даһиҙарса аныҡ асыҡлыҡ керетте:

— Танауыңды юғары күтәр, ҡартлас! Һин бит бөйөк ижади подвиг ҡылдың — туған әҙәбиәтебеҙҙең беренсе өсто̆каны! Аңлайһыңмы, ҡартлас, тарихыбыҙҙа бе-рен-се три-ло-гия! Этап булыр ваҡиға!

Хәйерле сәғәттә һуғылған сың-ҡыңғырау ине был — еҙ сыңлауы фәрештәнең (йәғни ҙә партияның!) амин тигән мәленә тура килде — нәшриәттә беренсе милли өсто̆канға — трилогияға сәйәси заказ килешеүе төҙөлдө. Һәр том өҫтөндә авторға өҫтәлмә рәүештә тир түгергә генә ҡалды. Һөҙөмтәлә ысынлап та көн ҡаҙағына һуҡҡан *беренсе трилогия* — «Һоло аттан да оло», «Баҫыу бикәһе

вика», «Кукуруза — ҡыуып уҙа» тигән һәлмәк романдар донъя күрҙе...

Кейәүенең өстоҡанға ҡарата тупаҫ ялаһы — үҙенең эштәре алға бармауҙан үртәлеп ярһыу, көнләшеү, үс ғәләмәте генәлер ул. Йә булмаһа, башҡаларҙың абалауына сабалау. Көнсөлдәргә киң донъя ла тар кеүек...

Мотал хәтерҙән үҙенең бай тәржемәи хәлен байҡай, тиҫтәләгән тәнҡитселәрҙең, уҡыусыларҙың уның әҫәрҙәре хаҡында матбуғатта шәлкем-шәлкем баҫылып сыҡҡан фекерҙәрен энә күҙәүенән үткәрә: фанатик Йәүҙәт Ҡондоҙбаевтың мыҫҡыллауын дөрөҫләрлек энә осондай ғына ла ҡара тап бармы? Юҡ. Әгәр булһа, бизмәне һәлмәк тартмаһа, бөгөн иртән Оло йортҡа саҡыртылыр инеме? Иҫе китеп барыр ине, ти, эсендә көсөгө юрткан Ҡыҙыл башҡорттоң! Уйынмы ни: яҙыусыларҙың партия ойошмаһы активы башҡа бер кемдең дә түгел, ә уның, Мотал Шаһибәрәковтың, кандидатураһын идараға рәйеслеккә байраҡ итеп күтәрә, бының менән обком үҙе иҫәпләшергә мәжбүр! Эйе, хатта иң төплө тәнҡитселәр ҙә уны юғары баһалай, хөрмәтләй. Ә баяғы уға бәхетле фекер биргән Ғаяс Хөсниҙең «подвал» ярымлыҡ мәҡәләһе бына ҡайһылай башлана бит: «Ниһәйәт, туған әҙәбиәтебеҙҙә беренсе өстоҡан-трилогия тыуҙы, уны беҙҙең замандашыбыҙ тыуҙырҙы! Ләкин тормош өҙлөкһөҙ алға бара, ул беҙҙән яңы ижади подвигтар һорай. Ижады заман һулышын сос тойоусы, өлгөрлөккә нигеҙләнгән талантлы әҙип Мотал Шаһибәрәков, ышанам, заманабыҙ баҫыуҙарындағы һуңғы яңы үҙгәрештәрҙе лә үҙенең үткер ҡәләм осона дәррәү элеп алыр, алғандыр! Ул, моғайын, һүнмәҫ ҡеүәһен егеп, колхоз-совхоз ҡырҙарылай киң һулышлы өстоҡанына тағы ла иркен һулышлыраҡ яңы ике том еҫтәп, әҙәбиәтебеҙ тарихында беренсе ҡамса-пенталогия ла бүләк итер халыҡҡа!» Мотал тәржемәи хәленең, һуңғы осорҙа осҡонланған зарур «эшсе темаһы»на ныҡлап күскәнгә ҡәҙәр, партиябыҙ алға һөргән шанлы «ауыл темаһы» дәүере ине был...

Бына ошонан һуң, Моталдың һиҙемләүенсә, уның уңыштарын күрә алмаҫ ваҡ йәндәр тараттылар ҙа инде әлеге игелекһеҙ кейәүе элеп алған ғәйбәтте... Иң-иң ғәрләндергәне — үҙенең бер туған кейәүенең ҡул күтәреүе ине. Хатта ҡул күтәреүе генә лә түгел, ә шул ҡулдың, ҡәҙимгесә ирҙәргә хас тос йоҙроҡҡа ла йомарланмай, ерәнгәндәй, ҡылыс кеүек ҡыя сабылыуында ине...

Әсәһе менән һеңлекәйе өсөн был, әлбиттә, көсөргәнешле гаилә проблемаһы һәм ғаилә трагедияһы тип билдәләнә яҙыусы. Ә роман ҡанундарынан сығып ҡарағанда... Бындай сеп-сей үҙһөйәрлекте уҡыусы ла аңлаһа ине: ғүмеренең хатта иң сетерекле мәлдәрендә лә яҙыусының аңы ижад юлағынан яҙлыҡмай — яҙылған, яҙылып ятҡан йәки яҙыласаҡ әҫәренең нескә сюжет ептәрен барлап төҫмөрләүен дауам итә ул! Эйе, ә роман ҡанундарынан сығып ҡарағанда, дөйөм *рухосфераға* шәхси рухи камилһыҙлыҡтың туранан-тура кире йоғонтоһон юллап курһәтергә була был Ҡондоҙбаев-уңмағандың ҡылыҡтары миҫалында... Бына шуның һүрәтләнеш һөлдәһе: кейәүҙең *шәхси рухи* хәленең боҙолоуы *гаилә ру-хосфераһын* зыянлай, ә «дәүләт ячейкаһы» дәрәжәһендәге ғаиләнең имгәтелгән рухосфераһы *дөйөм рухосфераны* ла ҡаҡшата. Дөрөҫ, ысынлап та, ғилми асыш булыуы бик ихтимал был тарих ерлегендәге Йәүҙәт дәғүәләренең, ләкин ул бөгөн, әлеге минутта кемгә кәрәк?! Йәмғиәт,

дөйөм рухосфера, тимәк, *әҙер түгел* әлегә ул асышты ҡабул итергә, йәғни ихтыяжы юҡ, көнө килеп етмәгән. Бәй, улай икән, килмәгән көндө килтерергә ниңә йәнең сығырҙай көсәнәһең, башыңды ташҡа бәрәһең? Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй — ниңә ҡарҡылдап донъяны болартырға, кешеләрҙе иләҫ-миләҫ итергә, миҡдарланып тигеҙләнгән дөйөм рухосфераны бөлдөрөргә? Көнө килер, ундай асышҡа көнүҙәк ихтыяж артыр һәм кешеһе лә табылыр, ә һин, кейәүкәй, кендегеңдән юғарыраҡ һикерергә маташма, юрғаныңа ҡарап аяҡ һуҙ!

Достоевский көндәлектәрен асып, күпте күргән атай бахыр диванына йомарланып янтайҙы: уф, ҡайһындай ҙа ауыр көн, ҡайһындай ҙа арытты, миктәтте!..

Имеш, ул — ул түгел, ә тауҙан түбән тәгәрләүсе йоп-йомро күбәташ. Теге саҡта Асылыкүл буйында үҙе күргән, үҙе тибеп ҡараған ҡыҙыл күбәташ. Был ни хәл, ниңә уны тәгәрәлүҙән туҡтатмайҙар, тотмайҙар?! Ах, һәр ваҡыттағыса, яңғыҙ ҡалған икән дә. Бисәһе — үҙ юлында, ә ҡысҡырып илар балалары юҡ... Тәгәрәй ҙә тәгәрләй... Төшөп бара тау аҫтындағы упҡынһаҙ тамағына. Ниндәй һалҡын һәм ҡараңғы, кеҫәл һымаҡ убып ятҡан ҡара һаҙ!.. Илаһым, уға, илгә танылған әҙипкә, олағып барыусы күбәташ хәленән ҡайһылай ҡотолорға?! Шәфҡәт ҡулы ниңә һаман һуҙылмай ҙа һуҙылмай?!. «Һаҙ биҫтәһе бәндәләренән ярҙам ҡулы алмаҫһың, усында әгәр алтын ялтырамаһа...» Ах был ҡот оҫҡос риүәйәт!.. Сеү! Ғалимдар һуңғы йылдарҙа ғына асҡан, егерменсе быуат аҙағын тетрәндергән антидонъя ҡапҡаһы — *ҡара упҡын* даһа был!.. Ҡотолоуҙар юҡ хәҙер... Ҡара упҡын артында аҡ — ҡараға, изгелек — яуызлыҡҡа, намыҫ — намыҫһыҙлыҡҡа, тоғролоҡ — хыянатҡа, мөхәббәт — нәфрәткә, тормош — үлемгә, кеше үҙе, кешелек төҫөн юйып, ағыу тулы былйырап ятҡан ҡара һаҙға әүерелә. Сөнки ҡара упҡын артында донъя күсәре кире яҡҡа әйләнә. Антидонъя... Донъяға фәҡәт яҡтылыҡ өсөн килеп тә, аңғармаҫтан антидонъяға тәкмәсләүе ҡурҡыныс, аяныс... Аҡ һәм Ҡара араһында бөлөп-тәгәрләп барған аҡтыҡ секундтар, секундтың ярсыҡтары... Мәрхәмәтле ҡул юҡмы ни уны тартып алырлыҡ, ҡотҡа-ры-ғы-ыыыҙ!

...Мейеһендә өнө дөрләп ҡабына — иртәгә дәүләт имтиханы тапшырам тип йөрөгән саҡматаш-студент саҡ. Яманатлы атайҙың әле исеме-аты аҡланып ҡайтмаған, әсәһе һәм кескәй һеңлеһе — ауылда, алыҫта... Ни өсөндөр, ул үҙ-үҙенә ышанысын юғалтты, ошо һуңғы имтиханын (хәл иткес!) бирә алмай бөлөр һымаҡ тойолдо... Уны, бәхетһеҙ студентты, имеш, табанын ерҙән айыртып, ер менән күк араһына — таш манара башына бикләп ҡуйғандар, ишеге лә, тәҙрәһе лә юҡ төрбәнең — торғаны шау-ташбулат көп. «Ҡот-ҡарығы-ы-ыҙ!..»

Ишеттеләр, ишеттеләр!

Бына аҡбуҙатта кемдер йән-фарманға сабып килә, тояҡтарҙан ут сәсрәтеп, һөңгөһөн айҡап елә. Килеп тә етте, манараның ҡалын ташбулат стенаһын һөңгөһө менән ҡайырып та ырғытты. Ҡушҡуллап Моталды күтәреп алды, тәпәйҙәрен ҡусҡыл үләнгә баҫтырҙы... «Эй хоҙайым — Урал батыр!..»— Ҡыуанысынан йөрәге сығырҙай сыйнап, бәлйерәүен онотоп уянды студент һәм шунда уҡ ирәйеп, фекөрҙәрен тупландырып, имтиханды «отлично»ға тапшырҙы... Бына шулар әлйеү-мәлйеү мейеһендә оҫҡондай баҙлап китеп, дәһрилеген онотоп, ҡара һаҙға батып барған ошо көнгө күбәташ-Мотал йәнә йән

әсеһен һалды: «Эй хоҙайым, Урал батыр, ҡотҡар мине Шүлгәндән!..»

Баш осонда ығы-зығы ҡубынды, зарығып көткән ярҙам ҡулы һуҙылды. Әммә Урал батырҙыҡы түгел шул. Оҙон кәкре бармаҡлы, осло ҡара тырнаҡлы — үҙенә генә ҡармаусан шүрәле ҡул...

—Әһ-һә, йәнекәйең ғәзизме! Бир бишеңде, хе-хе-хе!.. -- Мәкере тышына һарҡып сыҡҡан тауыштан бәғере ҡанһырап, сәстәре үрә торҙо:

-- *Ләғнәт төшкөре, һинме был?*

-- Эйе, мин.

-- *Урал батырға ялбарҙым бит.*

-- Ә эсеңдә Шүлгәнгә урын ҡалдырҙың, хе-хе-хе! Шуның өсөн мин килдем — исемем минең Шүлгән!

-- *Анау көндө Мөхлисәмдең хазиналар ҡумтаһына кереп киткән йыланмы?*

-- Эйе — Мөхлисәңдең ҡырауытҡан шау-боҙ йөрәген иретеп кергән мәрхәмәтле Шүлгәнмен.

-- *Ул саҡта һин әҙәми зат хөлләһенә төрөнөп, башҡорт йөҙөңә әрмән мыйығы үҫтереп, баҙар ҡорто Саркисян булып килгәйнең...*

-- Бәндәләрҙең араһында мин әҙәм булып йөрөп-ятам, батып барғандарҙы үҙемә тартам.

-- *Ә мин Урал батырҙы саҡырҙым бит.*

-- Һинең Урал батырың, күпме генә ҡысҡырһаң да, ауазыңды ишетмәҫ — бәндәлеккә ҡалғанһың.

-- *Ялған!*

-- Бер туған кейәүең Йәүҙәт Әғләм улы Ҡондоҙбаевтың үҙеңә биргән нарығы иҫеңдәме? Ха-ха-ха! Бына шул! Әллә ҡасан Һаҙ биҫтәһе бәндәһе һин. Бир тиҙерәк бишеңде, хе-хе-хе!

Үҙәккә үткес Шүлгән көлөүе хатта мейеһенә тиклем йәнен-тәнен ҡатырып, Мотал ҡулдарын тартып алды — ғалимдар яҙған төпһөҙ ҡара упҡынға тәгәрләп төшөп китте һәм... һуңғы сиктә һиҫкәнеп күҙен асты. Йөрәге барабан һуҡҡандай дарҫлап тибә, маңлайынан ҡурғаштай ауыр, һалҡын шыбыр-тир аға. Бәй, ул үҙенең фатирындағы эш бүлмәһенең күн көплө атай креслоһында янтайып ултыра лаһа! Ошо килеш таң атҡан... Иҙән — боҙ кеүек. Сөнки тәҙрә төндөгө шаран асыҡ. Ҡатынҡайы Мөхлисә, хәйерһеҙең, кисә кис, ҡунаҡ табыны үткәргән «Ярлауыҡ»ынан тунының тиҫкәреһен әйләндереп ҡайтып, уның менән һөйләшеп тә тормаған... Өҫтәүенә, ирен дә уятмаҫтан, көндәгенән иртәрәк китеп барған, ынтылып ҡына шул төндөктө ябырға ҡулы етмәгән. Хәйер, эш төндөктә генәме ни... Өйҙә зәһәрерәк икенсе һыуыҡ — ике-ара «һалҡын һуғыш» башланыуы ап-асыҡ. Тимәк, кисәгенең ҡоһорон ҡайтара бөгөн. Ғәҙәти ысул аша: ирен үҙенең булмышынан мәхрүм итеү, яңғыҙлыҡта интектереп ҡаңғыртыу менән язалап. Урта быуат инквизиторҙарының да башына килмәгән сара!..

Ирҙе ҡапыл үҙәккә үткес яңғыҙлыҡ, бер кемгә лә кәрәкмәгәнлек тойғоһо биләп алды. Ах, әгәр ошо аҫалы балаҫта терегөмөш кеүек тәгәрләп йөрөгән бер генә, бер генә бала остоҡайың булһасы!..

Уҙаман ырғып торҙо: «Юлға! Юлға! Юлға!..» Урал артына сығып елләнеп

ҡайтырға! Юлға!

Артында инглиз йоҙағын ҡумпылдатып, быуаҙ эттәй көмпәйгән иҫке портфелен һәлмәкләп тотҡан килеш, подъездан һыпырылды, ҡәҙимге ғәҙәтенсә, ҡотло бүре башлы аҫҡыс бүрелеген[74] ҡул осонда уйнатып, ихатаның төпкөлөндәге олпат кирбес гаражға ыңғайланы. Барып еткәс кенә ҡапыл төшөндө — был юлы үҙ машинаһы хеҙмәт итмәйәсәк уға. Их, ошондай саҡтарҙа оҙатып ҡуйыусы йөрәк ҡаның — уланғынаң булһасы!.. Бәғерен һыҙлатып, ҡылт итеп иҫенә төштө: кисә бит уның ҡорҙашын, йәштәш бер яҙыусыны, вокзалға үҙ машинаһында малайы илтеп ҡуйҙы...

Урам буйлап такси туҡталышына атлағанда, һауа уғата боларып, йәнә бурап ябалаҡ ҡар ишерелде, һә тигәнсе ерҙе аҡ көпкә төрҙө. Әммә «Алтын» магазины эргәһендә ғәҙәти сират: затлы тауар сығарылыуын көтәләр. Йәйен, ҡышын, тәбиғәттең аламалығына ҡарамайынса торалар шаҡырайып. Әйтерһең, шул уҡ бер үк кешеләр... Һуғыш ваҡытында ошолай дүрт йөҙ грамм сей икмәк көтөр инек...

Мотал сират яғына бер төкөрөп, йәһәт үтеп китергә самалаһа ла, әмәлһеҙҙән, аяғы көрмәлеп, шаҡ-ҡатып туҡталды: йылан һымаҡ борғоланған сират һуҙымы буйында, яҙғы көпшәк ҡарға йөҙтүбән ҡапланып, сысҡан ҡойроғолай мыйыҡ остоҡайҙарын тырпайтып, хәрәкәтыеҙ ҡалған кәүҙә — тере мәйет ята ҡатып. Тамыр имәндәй баҙыҡ, манаралай оҙон һын – хас та Моталдың үҙенең йәш сағындағы. Йоҡа ғына «джинсы», сағыу күк куртка кейгән. Ҡара каракуль кепкаһы ситкә тәгәрәгән. Арҡаһына, сөм ҡара сәс күбәһен тоташтырып, йомшаҡ йәш ҡар һырыған. Һис кемдең иҫе китмәй: эсеп йығылған ирҙәр менән тулы бит урам буйы! Ергә ләпәшкән был кәүҙә, ни өсөндөр, барлыҡ килеш-килбәте менән Моталға бик яҡын кемделер хәтерләтә, йәнде нык өйкәп тарта. Бәлки, баяғы юҡһыныуҙың — был донъяла яңғыҙ башы ҡаңғырыуҙың шауҡымылыр?.. Моталдың булырға тейешле, әммә-ләкин булмаған улҡайы ла, әгәр ҙә ул булған булһа, моғайын, ошо йәштәргә етер ине... Кем һуң был, кем? Тик үҙенең таныштары араһынан ундай сөм-ҡара сысҡан мыйыҡлы кешенең дә, асфальтта аунап ятырҙай бөткән баш хәмерйәндең дә булырын һис тә күҙ алдына килтерә алмай, әҙип такси туҡталышына уҙҙы: юҡ, туҡталырға форсат юҡ, уға тиҙерәк аэропортҡа барып етергә кәрәк! Эсеп йығылған икән, тора ла белһен үҙе. Тормаһа, милиция машиналары илтер. Ә уға дәррәү самолетҡа, самолетҡа!.. Тик ниндәйҙер сәйер көс ирҙең аяҡтарын суйын гер таҡҡандай тартты, артҡа ҡарай һөйрәне. Әле генә бик кәрәкле нимәһендер юғалтҡан, йәки өйҙә онотҡандай — шөҡәтһеҙ хис барған һапын нығыраҡ, ауырттырыбыраҡ сыйҙы. Ниңә был тиклем эскелеккә һалышты һуң йәш быуын? Тормош еңеләйгән һайын, күңел ыуала барамы — алтындарыбыҙ *алтын сөрөккә* ҡаламы?.. Ә бит улар йәшлегендә ябай ҙа, саф та ине әҙәмдәрҙең асылы. Кирә тартылған ҡорос ҡылдай, зыңғырлап та торор ине үҙәк тигәнең. Атайҙар быуыны хаҡында әйтәһе лә юҡ! Күҙ алдына килтерә аламы Мотал үҙенең, баяғы әргендек йәндәй, эсеп-иҫереп, юл һыртында

---

[74] Бүрелек (урыҫса әйтелештә *брелок*, ул боронғо башҡорт ижауҙарына тағылған бүре-ҡот (бәрәкәт) — бүре һыны. Һуңынан келәт аҫҡыстарының да «һаҡсы»һына әйләнгән.

ҡарға ләпәшеп ятырын, тәүбә-тәүбә!.. Ятмаç һәм ятҡыртмаçтар ине! Кемдер мотлаҡ ярҙам ҡулы һуҙыр ине! Ә хәҙерен Моталдың форсаты юҡ...

Еүеш асфальтты тызылдатып елеп барған йомшаҡ резина тәгәрмәстәрҙең йырынан ойой биреп, күҙҙәре асылыр-асылмаç, теләр-теләмәç кенә, Мотал такси йөрөтөүсенең өрөп тултырган тауыҡтай ҡыҙара-бүртек йөҙөнә төбәлә. Оҙон арыш һаламылай һәлпелдәгән ерән-ҡыҙыл мыйыҡ осонда зиһене сыуалып, көтмәгәндә, йөрәге «жыу!» итеп китә: «Тегенең сысҡан ҡойроғолай нәҙек кенә һәм сөм-ҡара мыйығы... Ах, ни булды бөгөн уға, ниңә ашҡынып ултырҙы был таксиға?! Ҡарға ҡатып ята ине бит кеше!..» Һәм шунда уҡ кисәге көнөнә ҡайтып, күҙ алдында әзмәүерҙәй Ҡыҙыл башҡорттоң баҡыр-ерән бөҙрәләре өçтөнә ослайтып һөңгөләй тырпай күтәрелгән һуҡ бармағы хәтерләнеп, хөкөм кеүек киçәтеүле һәм шәфҡәтһеҙ ауазы яңғыраны: «Намыç! Намыç! Намыç!..».

Кемгә ҡысҡыра Намыç?!

Был ни хәл, ниңә шыйып ҡына китеп бара ул? Был такси ниңә тап килде, тыңланы?! Атай бахырҙың нәҙекәй сысҡан мыйығы...

— Туҡта-ғыйыыҙ!..

...Тормоздар ҡыйралып сыйылдай, селпәрәмә килгән быяла ҡойолоп сылтырай — маңлайға маңлай бәрелә. Шығырлап металл һына, ҡорос терәүҙәр онтала. Алғы маңлай-быялаға башы тоçҡалып осоп барған Мөхлисәһен ынтылып тотҡан ыңғайҙа үҙе лә ыуалып, көллө донъя ҡайнар ҡанға мансыла. Катастрофа...

Туҡта, был ни катастрофаһы? Самолет ауып төштөмө?.. Шығырлап металл һына... һыныҡтары араһында асфальтта... сысҡан ҡойроғондай нескә, сөм-ҡара мыйыҡтары сасҡау ҡарға ҡуша ҡатып, көллө төçө-ҡиәфәте, килеш-килботе Моталдың атаһы Булаттимерҙеме, әллә Моталдың үҙенме хәтерләткән егет үлергә ята. Туңып барған ирендәренән ҡан күбеге менән ҡуша мөлкөлдәп, йәнәстем һүрелгән һуңғы һүҙе түгелә, ҡолаҡ пәрҙәләрен шаулатып ҡаға: «...ат-ай! ата...ай! ата...ай..!» Илаһым, кемдәргә төбәп өндәшкән кемдәрҙең ғәзиз балаҡайы был?!. Бәй, Моталдың үҙе бит был — мыйыҡ ебәргән Мотал... Хоҙайҡайым, алтынға сират тороусыларҙың аяғы аçтында туңып ҡата бит Мотал...

Юҡ, теге саҡтағы Мотал менән Мөхлисәнең һөйәктәрен онтаҡлаған катастрофа түгел был; машинаһы ла үҙҙәренеке түгел — такси... Һөмһөҙләнеп рулде ҡармаған, авария яһата яҙған Мотал ҡулын ысҡындыртырға аҙапланып маташа такси йөрөтөүсе — мыйығының ерән арыш башаҡтары пассажирҙың беләгенә тейә яҙып сайҡала:

-- Аҡылдан яҙҙығыҙмы әллә, был ни хәл?!

-- Эйе, аҡылдан яҙып барам, ахыры, ғәфү итә күрегеҙ, — ти Мотал, ҡулын йәһәт тартып алып. — Зинһар, ҡайтыр яҡҡа боролоғоҙ, ҡайтарып ҡуйығыҙ мине!

-- Вәт һантый! — Клиенттың йөҙөнә оҙаҡ текләп тора ла теге, машинаны, ҡабаланып, ҡайтыр яҡҡа ҡайыра. — Ауырыу килеш ниңә юлға сығырға — авария яһата яҙҙығыҙ бит! — тип башын сайҡап тиргәшә. Эйәгендәге ерән ике арыш башағы сәғәт теләләй тирбәлә. Ахыры булмай, Моталды йәлләп буғай, ыңғай һыпырып ҡуя. — Ярай, онотторҡ был эште, ағай кеше. Онотолғандың башы бәләнән ҡотолған...

Онотолғанмы һуң ул? Йөрәгенә ҡанлы ярсыҡтарын ҡаҙаған һалҡын

металл тауышы онотоламы һуң?.. Их, Мотал — Металл.. Ҡар өҫтөндә ятҡан ул һын Моталдың үҙ улы булырҙай ҙаһа! Булып ҡуйһа, ни эшләр ине?!. Тәүбә-тәүбә, булыуы мөмкин түгел, әммә Моталдың да теге ваҡыт улы тыуыры, әгәр тыуһа, бөгөн ул тап шул егет йәшендә булыры ихтимал ине бит... Йәки унан да кесерәк уландары, ҡыҙҙары... әгәр теге саҡта Мөхлисәһе менән Ағиҙел аръяғындағы дачаларына елдереп барғанда автомобиль катастрофаһы булмаһа... Их, сысҡанҡойроҡ мыйыҡлы егетте ҡарҙан ҡалҡытып ҡына, ҡайҙа тороуын һорашып, өйөнә илтеп ҡуяһы урынға... салғыйына ут ҡапҡандай, аэропортҡа елдерҙе... Ҡасан булыр, булырмы һуң уның да үҙ балаҡайы?!.

—Елдерт, ҡустым, еткер мине тиҙерәк баяғы урынға — «Алтын» магазины янына!..

Такси йөрөтөүсе уны бер ҡарауҙан аңланы.

Егет һаман шул килеш ҡарҙа ята, эргәһенән ҡала халҡы туҡтауһыҙ үтеп тора. Төштөләр, шофер менән икәүләшеп салонға кереттеләр.

-- Ҡайҙа? – тине шофер.

-- Тиҙ ярҙам хәстәханаһына, тиҙерәк, тиҙерәк!

Реанимацияға һалдылар, коридорҙа көтөп торған Моталдан һоранылар:

-- Улығыҙмы ул? Атас үҙегеҙ икән.

-- Юҡ... эйе... – Ҡапыл башы әйләнде, эскәмйәгә әүшәрелде, доктор үтәнән-үтә текләп ҡараны:

-- Сабырлыҡ, сабырлыҡ! Сестра, һыу бирегеҙ!

-- Юҡ, кәрәкмәй. Хәле нисек... егеттең?

-- Хәле шәптән түгел, ағай кеше, улығыҙҙы үҙ ваҡытында килтереп еткермәгәнһегеҙ... Шулай ҙа өмөт итәйек. Бына кеҫәһендәге ҡағыҙҙары.

Паспорты, йәнә адрестар менән тулы ҡуйын дәфтәре. Исеме, ғәжәп! – *Мотал*, атаһының графаһында һыҙыҡ ҡына торһа ла, фамилияһы йәшлектәге Ниагара шарлауығыныҡы... иҫ киткес осраҡлылыҡ!..

Һалҡын боҙҙай ағарынған врач сыҡты, әҙиптең ҡулын услап, бераҙ өндәшмәй торҙо:

-- Бирешмәгеҙ.Үкенескә ҡаршы... ҡотҡара алманыҡ...

Мотал үҙен упҡын-һаҙға батып барғандай тойҙо, томанланған аңына башҡа бер нәмә лә кермәне. Доктор киткән, аҡ халатлы киҙеүсе ҡыҙ ғына үҙенең урынында уға ҡарап ултыра. «Улы»ның ҡуйын дәфтәренән «Мама» тигән бүлекте, адресын (Донбасстың Луганск ҡалаһында), телефон номерын тапты. Күҙ алдары ҡараңғыланған хәлдә Почтамтҡа етеп, алыҫтағы «Мама»һына шылтыратты:

-- Ало, ғәфү итегеҙ, *Мотал* һеҙҙең улығыҙмы?

Ғәжәп: ете ер, ете һыу артындағы ҡатын-ҡыҙ тауышы йәнгә үтеп керерлек яҡын тойолдо, һәм шулай уҡ теге остан да уны танынылар һымаҡ:

-- Мотал Бикләмешевмы был?

-- Эйе. Һеҙ кем?

-- Ул һеҙҙең дә улығыҙ. Әгәр онотмаһағыҙ... Йыһаниә исемем...

-- Йыһаниә!..

-- Эйе, икебеҙҙең балаҡай... Ай-вайыма ҡуймай, «Атайымды эҙләп табам!» тип китте...

Көтөлмәгән ҡот осорғос драманың һуңғы шаршауы сөм-ҡаранан кейенгән Йыһаниәнең ашығыс килеп етеүе, йәш Моталды, икеһенең берҙән-бер ғәзиз улын, илай-илай ерләүҙәре менән тамамланды...

## ЕГЕРМЕНСЕ СӘХИФӘ

Тиҙ йөрөшлө трамвай бетон эстакадаларҙан уларҙы, әйтерһең, тура болот араһына сорғолтоп, дөбер-шатор осортоп алып китте.

-- Уф! Ер-әсәнең тартымынан яҙлығып, йыһан буйлап кәйеләбеҙ түгелме?! — тине Дилбәр.

-- Сеү! — Басир юлдашын беләгенән усланы. — Үҙебеҙҙең Галактиканан ҡубып, ҡара упҡынға олаға беҙҙең карап!

—Абау! Ата-бабалар янына, тимәксеһеңме?

Алда, яҡында ғына, сатрашланған ҡуш хәнйәрҙәй прожекторҙар саткыһында ярһыу толпарын ҡарғытҡан суйын һыбай һыны «ялт!» итеп ҡалды. Вагон ҡапыл, тәнде зымырлатып, ҡара тоннель ауыҙынан зыярат тауы аҫтына кереп китте, «теге донъя»ның дегет ҡараңғылығы һарылды тәҙрәләргә. «Эт эсәгеләй» етмеш саҡрымға тартылған ҡала урамдарында яңыраҡ ҡына йомолоп йүгерә башлаған, әлегәсә сәйер тойолған тиҙ йөрөшлө трамвай ошолай сирек юлын, тип әйтерлек, «ҡара упҡын»дарға бер кереп, бер сығып, атылған уҡтай елә, ә был һуңғы тоннель иһә «ата-бабалар яны» аша Ағиҙел ярына тура алып төшә ине. Һәр нәмәгә юмор менән ҡараусан ҡала халҡы, ошо тарафҡа юл тоттомо, әлеге Дилбәр әйтмешләй, «ата-бабалар яғына барам» ти ҙә ҡуя.

-- Ҡалабыҙҙы һис тә матурламай эстакаданың был һерәйгән таш боттары... — тине тәҙрәнән аҫҡа бағынған Басир.

-- Унық ҡарауы — тиҙлек!

-- Тиҙ йөрөшлө трамвайҙы маҡта, әммә метро менән көн күр, тиер ине, иҫән булһа, минең аҡыллы атай. Ҡара әле, Мухина, ҡалаға ҡасан метрополитен төҙөтәһең?

—Ҡыҙыл ҡар яуғансы ғына сабыр ит инде, аҡыллым.

Вагон «ҡара упҡын»дан атлығып сыҡты ла Ағиҙелдең ике ярын селтәрләнеп тартып торған тимер юл күперен уңда ҡалдырып бороллдо, таҡыр бетон көплө оҙон яр һыртынан йүгерҙе. Шул арала Күк тә үҙенең ялбыр-йолбор яуынын теүәлләп, баш осона аҫылынған ҡар болотон ел йолоп алып китте, тирә-яҡҡа күҙ-арауыҡ асылды. Ҡайырылып артҡа ҡарай өҫкә баҡһаң, алыҫтан уҡ яр башында бейек ҡаяла баяғы һыбай батыр, университет корпустары, ап-аҡ күлдәк кейҙертелгән Оло йорт — партия-хөкүмәт бинаһы балҡып күренде, ә алдараҡ Ырымбур таш түтә юлының думбыра уңәселәй оҙон бетон күпере, ап-аҡ һабын күперегенә батҡандай, яңы яуған ҡарға шалланып[75] балҡыны. Күктең бер яҡ мөйөшөнән байып барған Ҡояш ҡылый күҙен ҡыҫты ла аҡ күбекте алтын нурға мансыны — ике ярҙы, әйтерһең, шау-йәйгор тоташтырҙы.

---

[75] Шалланып — буяуланып.

-- Күрҙеңме, беҙҙең менән бер табында ултырыуҙан ҡасып, яҙыусы еҙнәйең аэропортҡа елдергән алтын күпер! — тине Басир, ошо мәлдә нимә хаҡында уйлауын фашландырып. Ҡыҙ иһә еҙнәһен яҡлағандай ҡыланды:

-- Улай тимә, Суриков. Һинең менән мин түгел бит еҙнәйем — алтын ҡәләмгә алтын юлы ла төшөп тора. — Һалҡын саф елде йырып, ярҙы буйлап атлайҙар ине инде.

-- Минеңсә, дөрөҫөн генә әйткәндә, алтын ҡәләмле ағайым үҙен үҙе эҙләп ҡасҡан – күпме йылдар инде үҙенең алтын күперен һала алмай интегә... «Эшсе синыф тураһында эпопея яҙыла» тип көндәлек матбуғат шаулағанға нисәмә былтыр инде, — тине Басир.

-- Ләкин шау-шоу араһында романдың тос өҙөктәре лә баҫылып сыға торҙо, буғай, Суриков.

-- Өҙөктәрҙең дә өҙлөкһөҙ ялғанмай барыуы йөҙәтә бит.

-- Ярар, иң кәмендә беҙ — унын сыбыҡ осо туғандары, түҙемлек һаҡлайыҡ әле! — Ҡыҙ, ҡарыулашырға теләмәүен белдереп, сыбыҡ осо туғанының беләгенә нығыраҡ әүшәрелде. — Әҙәбиәт тарихында өҙөктәре менән генә лә үлемһеҙлек яулаған даһиҙар бар...

-- Шаштырмасы, Мухина!

-- Бисмилла, еттек шанлы «Ярлауыҡ»ҡа. Күрәһеңме еңгәйеңдең төйәген? Аб-ба, неондары үҙҙәре генә лә ни тора!

Ҡая буйлап теҙелешкән йәш шыршылар тәңгәлендә аяҡтарын ҡаҡҡыпап, үҙе асылып-ябылмалы быяла ишектән уҙҙылар.

—И илаһым, танымай ҙа торамын! — һоҡланып ҡараны Дилбәр. — Был мәмерйә тирәһендә күптән булғаным юҡ ине. «Мең дә бер кисә»ләгеләй[76]: «Сим-Сим ас!» -- тип әйтергә лә өлгөрмәйһең, үҙе асылып-ябыла.

-- Замананан артта ҡалмай бит ул матур еңгәйем!

Төркөм-төркөм ағылыусы йәмәғәт, күбеһе йәштәр, ҡултыҡлашып инәләр ҙә сисенгес алдында туҡталып, алтын буталдан һандар һуғып тамғаланған ҡумырыҡтарҙағы суҡай сөйҙәргә эләләр кейемдәрен. Беҙҙең юлдаштар ҙа пальтоларын йәһәт һалып, тамғалы ҡалайҙы алып, төймәгә баҫҡайнылар, кейемдәре үҙенән-үҙе ҡумырыҡ төбөнә шыуып инде лә китте, урынына йәнә буш сөй ҡалҡып сыҡты.

—Абау, нимә уйлап тапҡандар!

-- ФТР[77], Мухина! Саңлы-соңло соланыңда бикләнеп, замананан артта ҡалаһың, ҡыҙый. Абай бул: кейенер саҡта бынау ярыҡҡа ҡалайҙы төшөрәһең дә төймәһенә баҫаһың, «һә!» тигәнсе кейемең килә лә сыға. Сират та, сәйлек көмөш һоноп маташыу ҙа юҡ. Бына рәхәт!

-- Мәскәү-мәркәзеңдән ошонда һәр көн ҡайтып йөрөгәнеңдәй белдеклеһең, Суриков!

-- Һауа караптары осоп торғанда, билеты ҡырҡ биш тәңкә генә булғанда, мут пумала уйнатып ҡына усыңа тугрик тулғанда, ниңә ҡайтмаҫҡа, ти, Мухина?

---

[76] «Мең дә бер кисә» — ғәрәп халыҡ әкиәттәре йыйынтығы.

[77] ФТР — фәнни-техник революция.

-- Бигерәгеи ишек төбөндә әзмәүерҙәй бәндә тормауы сәйер. Иҫеректәрҙе лә автомат олаҡтырамы икән әллә?

—Ундайҙарға «Ярлауыҡ»та урын юҡ — берюлынан «кәзә билеты» тотторола. Йыл буйына буҫағанан аша атлап уҙмаҫҡа. Ә иң мөһиме — бында данлыҡлы ҡырҡ градуслылар ҙа, «бормотуха»лар ҙа бирелмәй. Сәсрәп китәм, тиһәң дә. Ә һәр төрлө тәмле-татлы һуттарҙың, яҡшы шарап сорттарының башҡа бер ерҙә лә табып булмаҫтай аҫылдарын — йәнең теләгәнен кинәнеп ауыҙ ит. Әммә, — ҡыҙҙың күҙҙәренә шаян төбәлеп, тауышын күтәреп, егеттәрсә бармаҡ янаны, — саманы бел! Бер һүҙ менән әйткәндә, йәштәр ресторанı.

—Ярлауыҡты алтын иткән был Мөхлисә апайым!

Боролмалы юлдар уларҙы өй дәүмәлле һыуыткыстар, күпәй ҡорһаҡлы һыра мискәләре эргәһенән үткәреп, «Инергә ярамай» тип тамғаланған аулаҡҡа төртөлдөләр.

—Беҙгә ярай, — тине Басир. — Беҙ — хөрмәтле директрисаның һөймәлекле туғандары!

Инергә ярамаған ишек үҙе асылып китте, Мөхлисәнең йөрәк төбөнән сыҡҡан бәрхәт ауазы моңло тирбәлде:

-- Әйҙүк, әйҙүк, хуш килдегеҙ, ҡәҙерле туғандарым! Бик һағындырып йөрөйһөгөҙ. — Үпкәләгәндәй итте. — Ниңә кешенән элек ҡуҙғалманығыҙ?

-- Эй еңгәйем, бынауы бөтмөр Диләфрүзде оҫтаханаһынан йолоп алып булмай бит. Аласаҡ диплом ҡатырғыһына талпан һымаҡ ҡаныҡҡан.

-- Дилбәрҙең шул булыр инде ул. Туғандарын онотто. — Мөхлисә һәр береһенең сикәһенән ике усы менән ҡыҫыл тотоп, һутлы ирендәрен маңлайҙарына супылдатты.

-- Эй, ошо матур еңгәйемде... — тигән булды Басир.

-- Бәй, ниңә ҡыҙҙар шикелле ҡыҙараһың? Ҡәйнешем — ярты йәнем, тигән башҡорт мәҡәле.

-- Ағайыма барып әйтәйем әле.

-- Ҡойроғон тотторҙо, ти, һинең ағайың!.. — Сағыу һары сәсен түңәрәк ҡояш итеп түбәһенә төрнәгән, күҙ-ҡаштарын һөрмәләгән, ҡолаҡтарында даға ҙурлыҡ аҡ алтын алҡалары Айҙай балҡыған матур еңгәһенең ҡара ебәккә төрөнгән һомғол һыны күҙҙәрҙе сағылдырҙы. Һығылма биленең тулылана барыуы тойолһа ла, Мөхлисә иҫ китмәле һылыу ине.

-- Апай, еҙнәйемә ни булған? — тине Дилбәр, был икәүҙең сусылдауына саҡ ҡына йәне көйөп.

-- Һе, эшлекле кеше бит ул. Яҙыусылар союзының әҙәбиәтте пропагандалау бюроһы тигән нәмәкәйҙәре донъяға пәйҙә булғандан һуң, — ул Басирға аңлатты, — ағайың ҡойроғон һәп иттереп һыртка һала ла юрта. «Бюро ҡуша», «бюро бойора» ти ҙә ҡуя, ҡоромағыры... — Мөхлисә, оҙон керпектәрен аҫҡа һәлендереп, саҡ ҡына өндәшмәй торҙо. «Шул ағайың арҡаһында уҙегеҙҙең бөгөн күпме аҫылйәндәр менән бер ҡалаҡтан ашау, туғанлашыу хозурлыҡтарынан ҡолаҡ ҡаҡҡанығыҙҙы ла аңламайһығыҙ шул әле һеҙ...— тип ҡыҙғанып алды ул. — И илаһым, гүзәл «Моңдар төйәге» залын тоташ биләрлек уйланылғайны оло мәжлес... Хәҙер инде бер мөйөшөндәге кесерәйтелгән табынға

ғына ҡала... оҙон өҫтәлдә генә... Шул ағайың арҡаһында аҫыл ҡунаҡтарымды — Ҡыҙыл башҡортомдо, Йәмил Ҡотлоевымды, Хәкимуллиндарымды ла ҡаршығыҙға ултырта алманым бит...»

Йәштәр иһә был хаҡта уйлап та бирмәйҙәр ине буғай. Мөхлисә моңһоуланды. И донъя!.. Уның тормошона ситтән баҡҡан әхирәттәре: «Мөхлисә ниндәй бәхетле! Йәштән үк белеп иҙеленә таянды ла игелеген сәсенән һөйрәп сығарҙы — беренсе яҙыусыны эләктерҙе!»—тип уйлай ҙа һөйләйҙәр. Ә беренсе яҙыусының беренсе *үҙһөйәр* (эгоист) икәнлеген белмәйҙәр...»

Ғәмгә талыуының сәбәбен томаларға teләгәндәй, өҫтәне. — Гөлзифа бикәсем дә, ағаһы менән һүҙ ҡуйышҡандай ҡыланып, килә алмайым, тип шылтыратты бит әле.

-- Кире тәкәһе төкөгәнме ни тағы? — Дилбәр теләр-теләмәҫ кенә һораны.

-- Әлеге лә баяғы, тигәндәй... Үҙегеҙгә мәғлүмдер...

-- Йәүҙәт ҡоҙаны тиң күрмәй ул ҡоҙасам, бына шул. — Дилбәр оторайҙы. — Ә Йәүҙәт ҡоҙам — бынамын тигән.

-- Ҡара-ҡара, ҡоҙаһына ғашиҡ булған инде әллә тағы был ҡоҙасаһы? — Бармаҡ янаны Басир. — Ҡатып-ҡалсайып бөткән, тигән була бит әле үҙен...

-- Йәүҙәт ҡоҙаға тел тейҙермәгеҙ!

-- Нисек итеп тел тейҙерәһең инде уға — болотҡа атланған дәрүишкә... — Мөхлисәнең матур-осло танауы сыйырылды. — Ул, моғайын, был донъяла ике йәшәйем, өс йәшәйем, тип ҡылана торғандыр: күрәп-күрәп аҡса алымлы сәхнәһен ташлап китмәҫ ине, юғиһә.

-- Эш аҡсала ғынамы ни! — тине Дилбәр.

-- Ә нимәлә һуң? Коммунизм осоронда йәшәмәйбеҙ, бетәһен дә аҡсаға һатып алабыҙ. Бәлки, бына һиңә, сәнғәтебеҙҙең буласаҡ дан-шөһрәтенә, уҡыуыңды тамамлағас рәхәтләнеп йәшәп алып китергә беҙҙекеләй өс бүлмәле генә булһа ла фатир ҙа, яҡшы йыһазландырылған оҫтахана ла кәрәкмәҫтер? Затлы кейем-һалым да, мул табын да, ғаилә татыулығы ла мөһим түгелдер? Шулаймы? Ә һин нисек уйлайһың, Басир ҡәйнеш?

-- Мин, үкенескә ҡаршы, үҙемдең аң даирәмдең артта ҡалғанлығын беләм — ялтыр башлы яңы бөйөк юлбашсыбыҙ әйтмешләй, ни бары реаль социализм кешеһемен. Тимәк, мин, еңгәй, мәрхүм атайым әйткәндәй, һеҙ атаған ул бәрәкәттәргә ҡуш ҡуллап йәбешәсәкмен.

—Бына күрҙеңме, һеңлем? Күктәге торнаға ҡарағанда, ҡулыңдағы тартай ышаныслыраҡ. — Мөхлисә кескәй табын хәстәрләп өлгөрттө. — Был хаҡта аҙаҡ гәпләшербеҙ, туғандар. Өшөп килгәнһегеҙҙер, быйылғы яҙ әллә ниткән ырашҡылы булды бит. Улай-былай мәжлес табыны йыйылғансы, тим, сәй-мәйҙән рәхим итегеҙ, ауыҙ йылыта тороғоҙ.

Зыңлап торған ысын (фарфор) сынаяҡтарға ҡуян ҡанылай ҡуйы яһалған бальзамлы сәй тәнгә ялҡын ялматты, йәнде рәхәтләндертеп, күңелдәрҙе йомшартты.

-- Эй замана!.. Был ярлауыҡ ҡуйынында ярты йыл эсендә бынамын тигән заманса ресторан асылыр ҙа апайым шуның директоры булыр тип күҙ алдыма ла килтермәгәйнем, — тип ихласланды Дилбәр.

-- Үҙемдең дә ете ятып бер төшөмә кергәне юҡ ине шул. Дөмә-һуҡыр мәмерйә ине бит был, ярлауыҡты әйтәм.

— Иҫән-һау гөрләтеп эшләргә, һәр саҡ шулай үрләргә яҙһын, апайым.

-- Министрғаса! — тине егет.

-- Ҡуйығыҙ, ошо директор вазифам да бик еткән, туғандарым: бәғзе директрисаларға министрҙар килеп баш эйгәне бар.

-- Былдай гәүһәр «Ярлауыҡ»тың һылыуына — бигерәк тә! — тип тә ебәрҙе Басир.

-- Тссс! Ағайың ишетеп ҡалмаһын!

-- Шөрләйһең икән әле! Ҡорос сәмреғошҡа атланып Уралды артып баралыр бит инде ул? Алыҫтан тыңлап белә торған аппараты бармы әллә ағайымдың? — Геү-килеп көлөштөләр. Мөхлисәнең яңаҡтары алланды:

-- Һәй туғандарым, йүкә шынаны ҡағаһығыҙ инде ҡағыуын... Ә шулай ҙа маҡтанырлыҡ яйым да бар әле минең. Бик тә белгегеҙ килһә, был ҡараңғы ярлауыҡты неон нурлы «Ярлауыҡ» яһау идеяһын оло йыйында тәү башлап күтәреп сыҡты ошо апағыҙ! Беҙҙең һөнәр-эш халҡының ҡала күләмендәге кәңәшмәһе бара ине, ҡала Советынан, партияның өлкә комитетынан да яуаплы иптәштәр килде.. Йәштәр иң күп ағыла торған урын — ике күпер араһындағы Ағиҙел буйҙары тураһында ҡупты һүҙ. Ярғанаттарҙай, шундағы ярлауыҡ ҡуйынына эркеләләр: мәмерйәне зыҡ-ҡубарып эсәләр, гитара сиртеп аҡырышалар, тәртип боҙалар — шуларҙы нисек ауыҙлыҡлап, ҡала үҙәгенәрәк тартырға, күҙ-ҡолаҡ булырға, тигән мәғәнәләрәк инде. «Ышпананы милиция саҡыртып таратырға, ярлауыҡты шартлатырға» тигән тәҡдим биреп сәбәләнә берәү. Түҙмәнем: һүҙ һорап ал да тет тә ташла тегенең ҡабырғаһын! Ә ахырҙа, сәмләнеп китеп: «Әгәр ҡала Советы ышанып тапшырһа, сарыф бүлһә, мин ул ярлауыҡты ультрасовременный ресторан — йәштәрҙең ысын мәҙәниәт үҙәгенә әүерелдерер инем, гәүһәр ҡашылай бөтә яр буйына балҡып китер ине ул!» -- тип әйт тә һал йәмәғәткә. Әлбиттә, был ғына түгел инде: бөтә яйына килтереп, һандар теркәп һөйләнем, сөнки ярлауыҡ мәмерйәһе үҙемде лә борсоған бер ер ине: кемдең генә йәшлегенең бер өлөшө шунда кереп янмаған!.. Ҡолағы «карп!» итеп ҡалды түрәләрҙең, ә ҡала Советы рәйесе ниҙер яҙып алды. Оҙаҡламай, апайығыҙҙы тейешле урынға саҡыртып, йөкмәтмәһендәрме оло вазифа!.. Әлбиттә, ғәйбәт йөрөтөүселәр ҙә булды артымдан. — Дағалай аҡ алтын алҡалы ҡолаҡ остары ҡыҙарҙы. — Ҡасандырғы бер студент саҡтарҙы иҫкә алып, «Бәпембә — икенсе секретарь Ҡыҙыл башҡорттоң күптәнгө һөйәркәһе, директор итеп үрләткән шуға күрә» тип ыуҙары ҡойолдо бәғзеләрҙең. (Әстәғәфирулла тәүбә, Ҡыҙыл башҡорттоң кем икәнен беләһегеҙ ҙә инде, туғандарым...)

-- Маладис, матур еңгәй: алдыңа алғанды үтәп, көнсөлдәрҙең ауыҙын томаланың, — тине Басир. — Был яр хәҙер күҙҙәрҙең яуын ала.

-- Ялтырауын ялтырайҙыр ҙа, эстә байтаҡ эштәре ҡалтырай әле. Әйткәндәй, — Мөхлисә йәштәргә ҡараны — был тау тишегенә төпкәрәк ингәнегеҙ бармы һуң?

-- Уның төпкәрәге лә буламы ни әле?

-- Ҡала аҫтынан бер-нисә саҡрымға һуҙылған ул. Ҡарттарҙың әйтеүенсә,

Урал батыр инеп сыҡҡан «теге донъя» — Ҡатил иле шунда, ти... Ә ғәмәлдә торғаны бер тәбиғи келәт инде. Бына шунда әле һаман төҙөлөш дауам итә — ауырлығы ошо еңгәгеҙ иңендә.

-- Ниндәй бөтмәгән эш тағы?

-- Һәр төрлө аҙыҡ-түлек һаҡлағыстары, һыуытҡыстар, ярҙамсы биналар, тигәндәй, аҙмы ни уның күҙгә күренмәгән мәшәҡәттәре... Бына, әйтәйек, субтропика емештәрен — субфруктылар һаҡлағыс һала башланыҡ, ҡулалмаш (кооператив) ысул менән. Ҡулалмашсы булып Абхазиялағы бер миллионер колхоз ҡатнаша. Беләһегеҙ бит Армен Саркисянды — шуның колхозы инде. Саркисян, молодец, эштәрҙе гөрләтеп көйләй. Әгәр ҙә ул булмаһа, белмәйем, яңғыҙ үҙем генә ни ҡылыр инем? Былай ҙа әле һис бер өйҙә тороп та, ағайығыҙҙы ҡәҙерләп тә булмай бит: эшкә һары таңдан китеп, ҡара төндә генә ҡайтып йығылам. Ағайығыҙ ана шуны аңламай — усаҡтағы өй-ут[78] ҡуҙын һыуыттың, ти, асыулана... Ай әттәгенәһе, һүҙгә мауығып киттек... — Мөхлисә сәғәтенә күҙ һирпеп алды, ҡабаланды. — Әйҙәгеҙ, ҡуҙғалдыҡ: табынға ултырышҡансы, «биләмәләр»емде саҡ ҡына йөрөтөп күрһәтәйем. Яңылышмаһам, Дилбәр бында булғаны ла юҡ әле, баш ҡалала тороп та, шулай бит?

Баяғы килгән боролмалы юлдарҙан буйлап сығып, түр ишектән үттеләр, ҡая күкрәген умырып эшләнгән иркен-бейек үткелек аша ҡайҙалыр ер ҡуйынына һеңделәр. Басир үҙен Мәскәү метрополитенының иң ҙур станцияһына барып ингәндәй тойҙо. Бынан миллиард йылдар элгәре ошондағы Бөйөк Океан төбөндә йәшәгән, эзбиз ташына әйләнеп ҡатҡан ҡусҡарҙар, баҡа ҡабырсаҡтары, хатта балыҡ һөлдәләре, Ер-әсәнең фашланған бөйөк сереләй, баҙырайып баға таш диуарҙарҙан; улар аша таш тослоҡта Уралдың аҡ мәрмәр тамыры уҙа. Иҙәнгә лә шымартылған шул уҡ ҡая киҫәктәре йәпләтеп түшәлгәйне, түшәмдән түгелгән һалҡын неон нурға мансылып, меңәрләгән серле күҙәнәктәре менән ем-ем мөлдөрәп ята. Үткелекте ике яҡлап — һәр төрлө сувенирҙар, кәрәк-яраҡ һата торған урындар, гәзит-журнал һәм китап киоскылары, сәс алдыртыу, үҙйомош булмәләре... Тоннель ҡапыл уғата киңәйеп китеп, Көньяҡ Урал тәбиғәтенең йәмғе асыллығын туплаған мәңге йәшел мөғжизә — Гөлдәр залы күренде, бында ҡайһы гөлдө нисек үҫтереү тураһында төплө кәңәш алырға, иң яратҡан гөлөңдө, кеҫә дарманың тартһа, өйөңә үк илттертергә мөмкин ине.. Унда шулай уҡ ҡалалағы гөлһөйәрҙәрҙең үҙҙәре үҫтергән сәскәләренең күргәҙмәһе лә йәйен-ҡышын уҙғарыласаҡ икән. Өс дәү ишек тарта залдың өс яғына — халыҡ ағымын өҙлөкһөҙ үҙенә һурып йәки урғылтып тора. Ишек баштарында төрлө төҫтәге сағыу неон яҙыу-һүрәттәр бер һүнеп, бер ҡабына. Береһендә, ялт-йолт итеп, берсә, көмөш таҡыябаш ҡурайҙар үҫкән Урал тауы күренеше хасил була, берсә, Ағиҙелдең текә яры башында иҙрәп ҡурай тартып торған мыҡты йәш егет һүрәтләнә, берсә, аҡ ҡайынға һарылып, йөрәгенән йыр-моңдарын тирбәлдертеүсе нәҙекәйбил ҡыҙ һыны һыҙатлана. Икенсеһендә, мискә ауыҙылай божораланып уйылған әкәмәт ишек-үткелектең башында, фәһемле бер һүрәт ялт-йолт ҡабына: үҙенең атаҡлы

---

[78] Өй-ут — уют, утҡа табынған осорҙағы усаҡта һүндермәй һаҡлана торған «ут-ҡуҙай» (ут-хоҙай).

мискәһе эсендә фәлсәфәгә батып мәшһүр Диоген — боронғо грек фәлсәфәсеһе ултыра. Был ҡартлас, билдәле булыуынса, тыуған ғәзиз ҡалаһына Искәндәр-йыһангир баҫып кергәндә лә үҙенең тәрән уйынан бүленмәгән, шуға йәтешләнгән танһыҡ мискәһенән сыҡмаған; йыһангирҙең: «Һиңә нимә бирәйем, әйт, ҡартлас?» — тигән фарман-һорауына ни бары: «Зинһар, кит бынан — Ҡояшты ҡаплайһың!» — тип кенә яуаплаған... Шул Диоген бөгөн бына «Ярлауыҡ»та неон утлы мискәһендә бәхетле неон ҡояшының нурҙарына ҡойона, тирә-яҡтарында шундай уҡ уйсан неон балыҡтар фәлсәфәсенең фәлсәфәһен яҙып алырға ҡағыҙ-ҡәләм тотоп тора... Өсөнсө ишек ҡашағаһында — аллы-гөллө болонлоҡ, күк үләндә тояҡтарын ҡайсылатып бейеп йөрөүсе сыңрау торналар тубы...

-- Тап теге әкиәттәгеләй: өс юл сатрашында шаҡ-ҡатып ҡалдыҡ. Ҡайһы яры китергә? — тине Дилбәр, зиһенен көскә йыйып.

-- Фәлсәфәнең ғүмер баҡый танһыҡлығын иҫәпкә алып, тәүҙә серле фәлсәфәселәргә сәләм биреп үтмәйекме? — тине Басир.

Диогендың мискәһенә илткән юлда ҡая ташты ҡырҡып яһаған яҫы тупһалы баҫҡыстар аяҡтарҙы йылдам түбән йүгертте, ысынлап та, бик ҙур мискәнең эске төбөн хәтерләткән иркен зал хасил булды. Шул уҡ ҡая дауамы итеп юнылған таш өҫтәлдәр, ултырғыстар, буфеттар — йыйыны бер әкиәт ташһарайын иҫләтте, ә мискәнең түңәрәк әйләнә-стенаһы әҙәм бейеклек кимәлгәсә ая ҡалынлыҡ шау-быяланан ҡойолоп, шул быяла үтә залға Ағиҙелдең төбө тоташа ине. Һыра тигән танһыҡ эсемлек тә бында, һөйләүҙәренә ҡарағанда, яр башындағы заводтың үҙенән үк, көмөш торба буйлап, мәмерйәнең йәйен-ҡышын бер дәүмәлле йылылыҡ тотҡан һауыттарына ағыла, шуға күрә тәмен-татын юғалтмай килә, имеш. Таш өҫтәл яндарын һырып ултырған тәрән фекерле йәмәғәт алдында шулай уҡ мискә һымаҡ итеп һап-һары ағастан эшләнгән, бейек аҡ күбек кәпәс кейгән һыралы көрөшкәләр тора, ә йәмәғәт мауығып текләгән шау-быяла стенаға Ағиҙелдең боҙ аҫтындағы йәнле тормошо сайпыла: һыуҙы телтән прожектор яҡтыһында йәм-йәшел ылымыҡтар, ажар ҡыҫалалар, тупаҡ моронло балыҡтарҙың аптыраулы-фәлсәфәле күҙҙәре, ҡан-ҡыҙыл ҡанаттары, тулыш ап-аҡ ҡорһаҡтары, ҡара-йәшел арҡалары сағыла, ҡай берҙәре, наян йәмшек морондарын быяла «мискә»гә төртөп, түңәрәк залда ойоп ултырмыш «фәлсәфәсе»ләргә аптырап ҡарай. Улар, әйтерһең, фәлсәфә мискәһенең эсендә лә, тышында ла йәнле тормоштоң мәңге дауам итергә тейешлеген, шуның өсөн дә уны ҡурсалап һаҡларға ла кәрәклеген өнһөҙ ҡараштары менән иҫкәртеп-аңғарталар...

Һыра һемереп ойоусылар араһында аулаҡ ҡына бер мөйөштә ҡағыҙҙарын өҫтәлгә өйөп һалып, ҡулъяҙма өҫтөндә гәпләшеүсе ике маһир тартты Басир иғтибарын. Егет рәссам күҙе аша баҡҡанда, уларҙың береһе урта буйлы, ҡуйы ҡара ҡашлы, түңәрәк киң йөҙлө батырандар (ветерандар) ҡоронан булһа ла, күҙҙәре йәшлек нурҙарынан арынмаған асыҡ сырайлы ҡартлас ине, серҙәше менән тыныс ҡына, йылмайып һөйләшә ине. Икенсеһе — ҡолғалай нәҙек оҙон кәүҙәһе, өс бөртөк ҡыллы ялтасы менән барлыҡ баштарҙан аша ҡарап торналай һерәйеп ултыра, гәүһәр ҡашлы балдаҡ кейҙертелгән баш бармағы эргәһендә энә сәнсеп төшөрәлгән зәңгәр диңгеҙ якоре айбарлана, таяҡ шикелле оҙон һөлдә

ҡулдарын өҙләкһеҙ болғап, ҡомарланып, ҡартҡа нимәлер тирә; баяғы балдаҡ ҡашы, әленән-әле балҡып, күҙҙәрҙең яуын ала. Улар һөйләшкән мәсьәлә, моғайын, ҡолға буйлы өсөн ифрат әһәмиәтле булып, башкөлләй бирелһә лә, уның аҫҡа кәкерәйеп төшкән йоҡа ҡырлас танаулы, Сократтыҡылай ялтасланған киң маңлайлы, урттары эскә убылып ингән өңшәк йөҙөндә бөртөк кенә оскон да, тормош та, тулҡынланыу ҙа һиҙелмәй — балауыҙҙан ҡатырғандай аҡһыл-һары йәнһеҙ тире. Етмәһә, күҙҙәре ыйыҡ аттыҡылай батынҡы һәм төҫһөҙҙәр.

-- Ай-буй, кем һуң был, күргән-белгән кешемә оҡшамай ҙа, оҡшай ҙа, — тип һөйләнде Басир, ҡолғанан күҙен алмай.

-- Бәй, мәшһүр тарихсы-профессор Хәкимуллин Йыһандар Илһамдар улы үҙе бит.

-- Бер-ике йыл күрмәгән арала ҡайһындай ҙа ҡорошҡан! Әһә, бына ниндәй ырҙын табағын иҙгән икән һинең Бәндәбикә кирбесең! — Басир ҡыҙға газеталағы фельетонын хәтерләтеп төрттөрҙө. – Жирафмы, төҙөлөш кранымы әллә был?..

-- Ташҡүлсәйем, күркә-мүркәләр араһында ситән башына ҡунаҡлаған дөйә ҡоштай муйыны һерәйеп ултыра! — тип көлдө Дилбәр.

Тел сарлау әммә кемгәлер оҡшаманы.

—Ҡара, уны ҡыҙый, — тип киҫәтте Мөхлисә, — һайланған — һаҙға, осраған таҙға, тигәндәй, шул дөйәнең муйынына аҫылынып ҡуйма тағы.

-- Әстәғәфирулла тәүбә, ни телең бара, апай?!

-- Тура әйткән — туғанына ярамаған, тиҙәрме әле?.. Ул атандың әле булһа сәсе сәскә бәйләнмәгәнен, ә күҙенә салынған гөлсәскәне, өҙөп кенә түгел, йолҡоп алырға һәләтлелеген beләһең.

-- Тәүбә-тәүбә... — Шул дөйәнең кисә генә оҫтаханала айбарланыуын хәтерләп, ҡыҙ ситкә боролдо. — Сәс бөртөгөм бәйләнерлек ҡыл да юҡ бит түбәһендә. Сөрөшөп бөткән әстерхан сәтләүеге...

-- Шул «сөрөшөп бөткән әстерхан сәтләүеге»ндә гигант аҡыл синхрофазатроны дөрләп тибә тип әйтепме-әйтәләр! — Басир күҙҙәрен алартып ирештерҙе. Яндағы өҫтәл ҡырындағылар ҙа ҡолаҡ һала башлағайны.

—Урал — Иҙел аралығы халыҡтарын тарих яҙып ҡыуандырған ир арыҫланы бит ул. Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллин йәғни.

-- Минең хәләл ефетемдең әйтеүенсә, тарихыбыҙҙағы ҡатламдарҙы тоташы менән аҡтарған. Халҡыбыҙҙың килеп сығышына ҡарата үҙенә бер концепция тыуҙырған. Профессор Ҡотлоев менән берлектә, — тине алсаҡ Мөхлисә. Ҡырыйҙараҡ баҫып торған берәү һүҙгә ҡушылды:

-- Ә ул концепциялары — төбө тишек кәмә түгелме икән, ха-ха-ха!

Басир әсе тел эйәһенә салт-әйләнеп ҡараны:

-- Ә һеҙ, туғанҡай, әллә шуларҙың кәмәһен аҫтан умырыусымы?

-- Ғәфү итегеҙ... Әссәләмәғәләйкүм, хәйерле кис, Дилбәр туташ!

Дилбәр, әсеүташ ҡапҡандай, сырайын сытырайтты: әлеге лә баяғы, уның оҫтаханаһына эйәләшкән сәйер гитарасы — Мыйыҡ — күҙҙәрен тызырайтып, быларҙың эс-бауырына инергә маташа, буғай.

-- Ал таҫмалы гитарағыҙ ҡаңғыра тегендә сөйҙә — ниңә барып

алмайһығыҙ?

-- Ғәфү итегеҙ! — Мыйыҡ һыралы киҫмәген өҫтәлгә ҡуйҙы. Һә тигәнсә ireп Күккә оҫкандай, күҙ алдынан юйылды.

-- Киттек! — Мөхлисә ханым йәштәрҙе ашыҡтырҙы.

Шул арала Хәкимуллин менән Ҡотлоев, һыралы киҫмәктәрен этәрҙеләр ҙә ҡағыҙҙарын йыйыштырып, сығырға ыңғайланылар. Хәкимуллин ялтасының үргә ҡайтарып яптыртмалы, һыйыр ялағандай шыма-йоҡа шәлкеме, әллә инде хужаһы яңылыш ҡағылыуҙан боларып, ҡара-ҡаршы үрәпсеп, ҡаҡ түбәлә кәкре башлы мөгөҙҙәй ороланған.

-- Абау! — Бармаҡ төртмәй түҙә алманы Дилбәр. — Мефистофель...

-- Шым! Фаустың үҙе тора унда! Ана, Ҡотлоев-профессор иғтибар итте беҙгә.

Ҡартлас алыҫтан Мөхлисәне абайлап, баш эйеп хушлашып үтте, ә Хәкимуллин иһә, әйләнеп тә баҡмайынса, ҡолғалай төҙ баҫып барыуын белде.

-- Бәй, ниңә табан тайҙыралар? Концепция титандарын да саҡырманыңмы ни ҡунаҡҡа, апайым?

-- Һеҙҙең кеүек тауис ҡоштар араһында дөйә ҡоштарға нимә бар? — Хужабикә һүҙҙе шаярыуға бороп, һары алтын тештәрен ялтыратты. Йәнә етди төҫ алды. — Был ағайығыҙ арҡаһында титандарҙы ғына түгел, бер туған апайым менән еҙнәйемде лә килтерә алманым әле. Барыһын да үпкәләткән, биҙҙерткән...

-- Ай-һай, үпкәләтеп ҡара ул дейеү бәрейен! Яубаҫаровты әйтәм.

Ҡыҙ көлдө:

-- Беләһең икән әле!

-- Белмәй ҡара. Төн сыҡҡансы көллө ҡаланың кислородын һурып алып, мөрйәләренең серегән кәбеҫтә ҡатыш һарымһаҡ еҫле Шүлгән хушбуйы менән үпкәләрҙе тултырһа, белеү түгел белерһең!

-- Ағайыңа оҡшап, ниңә улай отороланаһың, туғаным? — Апай кешегә был шуҡлыҡ оҡшаманы. — Һыйышып йәшәргә кәрәктер был донъяла, бигерәк тә ил алыптары менән. Мәжлесеңдә була алмайбыҙ, ғәфү ит, тип әйтер өсөн килгәндәр, йәнәһе лә һис кенә лә форсат юҡ, иртәгә симпозиум... Ағайың бит кеше менән берегеп йәшәй белмәй... — Мөхлисә, артығыраҡ ысҡындырыуын самалап, тиҙ генә шымаланы. — Ярар, ағайың үҙе ҡайтҡас, тағы табын йыйырбыҙ, һеҙҙе таныштырырбыҙ. — Тынысланғандай итте. — Ҡотлоевтан, Алла бойорһа, Булаттимер ҡайнатам тураһында ла һөйләтербеҙ. Хәтере ғәжәп шәп уның. Утыҙынсы йылдар аҙағына тиклем бер ҡаҙанда ҡайнағандар.

-- Ҡайнаған да ул, ҡайнауын, — Дилбәр кинәт тырпайҙы, — тик ҡаҙанға бер юлы ике тәкә башы һыймаған...

-- Ысынлап та, Булаттимер яҙмышы нисек уратып үткән уны?

-- Уныһы һеҙҙең эш түгел! — Мөхлисәнең ирендәре ҡаты итеп ҡымтылды. Бераҙыраҡ өндәшмәйерәк ситкә ҡарап торғас ҡына, алсаҡланып бороллдо. — Ә бөгөн мин үҙегеҙҙе башҡа бәҫләләр менән таныштырмаҡсымын. Тормош юлы — оҙон, таныш-белештәр кәрәк... ҡаршы алып атың бәйләргә... Әйҙәгеҙ, икенсе залға үтәйек, унда беҙҙе һыйлы табын һәм яңы дуҫтар көтә. — Һыра һемереп ултырыусылар араһынан ихтирамлап үҙенә баш эйеүселәргә һары алтын

тештәрен балҡытып йылмайҙы. — Әлеге лә баяғы, ҡунаҡтарҙы ата-бабаларса өйгә саҡырырға форсат ҡалмаған, заманса ҡыланырға мәжбүрбеҙ инде. Фельетонсылар теле менән әйткәндә, эш урынын шәхси мәнфәғәт өсөн файҙаланабыҙ... Ғәфү итерһегеҙ инде, туғандарым.

-- Еҙнәйемдең булмауы ғына бик йәл шул... — тине Дилбәр.

-- Уға ни, әйттем бит: үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын. — Мөхлисәнең матур танауы сыйырылды, йөрәк әрнеүенән арына алмай ине әле ул. — Ярар, бер бөгөн генә түгел: унһыҙ ҙа көн күрербеҙ! — тигән булды, һүҙҙе уйынға һабыштырырға итеп. — Бисмилла! Баштарҙы ҡалҡытайыҡ, алтын-көмөшкәйҙәрем, ана, аҫыл «Торналар төйәге» тәбриклəй беҙҙе!

Ресторандың иң зиннәтле залдарының береһе ине был. Ошо ярлауыҡ-мәмерйәнең тәбиғи һынланышын мөмкин тиклем һаҡларға тырышып эшләнгән: айырым-аулаҡ табын ҡороп ултырмалы тын бөгәлдәр ҡалдырып, төрлө боролоштар яһап төпкә табан һуҙылыпмы-һуҙыла, урыны-урыны менән ул, шымалығын юғалтып, сурайып сыҡҡан ҡырағай ҡаяташтарға әүерелә. Шул ғәжәйеп стеналарға оло-оло тәҙрәләр уйып киҫелгән, унда баҡһаң, Ағиҙелдең шығырым халыҡ мыжғып торған, неондарҙан шау-балҡыған яр буйҙары, арыраҡ, тоноҡ ҡараңғылыҡ төбөндә, уртаһынан ҡаран ыҡҡан икһеҙ-сикһеҙ боҙ яланының алыҫ бушлығы ағарынып күренә. Ә эстә зал уртаһында — ялтлап ятҡан түңәрәк күл, күл ситендә ҡыҙыл-көрән гранит ярҙа ҡанат киреп бейеп тора оҙон тәпәйле суйын торналар. Ауыҙын ҙур асҡан суртан-аждаһа, күл уртаһынан ҡарпып, ҡоштарҙы көмөш һыу менән ҡойондора — фонтан гәлсәрен ҡоя. Төҫлө таштар ярҙамында башҡорт милли биҙәктәре һалып биҙәлгән иҙән; парлы-парлы йәштәр унда моңһоу бейеп-тирбәлә — зал иңендә, уралып-уралып, яғымлы моң ағыла. Түрҙең төбөндәге ярым ҡараңғыла затлы итеп йыһазландырылған түңәрәк өҫтәл яндарында ағай-эне шәрбәт һәм шарап һемереп, йыр-моң тыңлап, бейеү тамашаһы менән хозурлана... Дилбәрҙең дә шул минутта күл тирәләй бөтөрөлөп, ойоп бейеп китергә сәме сәнсһә лә, апаһы уны, күҙ ҡороғонан ысҡындырмай, төпкөлгәрәк һөйрәне — ишек башына ҡурай һыны һүрәтләнмеш серле өсөнсө залға.

— Киттек, киттек! Тамсы ла туҡталмаҫҡа! Беҙҙең табын гүзәл «Моңдар төйәге»ндә!

Юлаҡ-юлаҡ алһыу ҡан тамырлы аҡ мәрмәрҙән теҙеп түшәлгән киртләс баҫҡыстар ҡунаҡтарҙы юғарыраҡ әйҙәне.

Баш осонда ҡанатландырғыс иркенлек, бушлыҡ тойоп, Дилбәр ҡалҡынып баҡҡайны, иҫе китеп ҡысҡырып ебәрә яҙҙы: мәмерйәнең таш көмбәҙе уйылып, тәбиғи Күк есеменә тоташып, Күк көмбәҙен дауам иткән икән дә: шау-быяла көмбәҙ үтәләй алыҫтағы Етегән йондоҙ етеләнеп саҡҡылана... Етегән сүмесе аҫтында зал турендә — йыйнаҡ ҡына эстрада, ә ҡаршы яҡ стена буйлап аҡ тирмәләр теҙелгән. Тирмәләр бер-береһенән ҡая ташлы бөгәлдәргә ышыҡланып, аулаҡланып, ишектәре иһә сәхнә тарафынан асыла, табындаштар сәхнәләгеен хозур тамаша ҡыла. Күмәк халыҡ көр мәжлес ҡорһа ла, йүгәнһеҙлек бәләһе шау-шоу, бокал сыңдары ла юҡ — төп иғтибар эстрадаға йүнәлгән. Унда, пианистың йүгерек-оҙон бармаҡтары араһынан, һығылып-һығылып, мәшһүр «Ғилмияза»

моңо ағыла, һумалалай ҡара бөҙрә сәсле бер йәш кенә ҡатын, һулығып-һулығып, йырҙы йөрәк төбөнән һығылдыра. Быяла көмбәҙ өҫтөндә иһә Ер шарының төнгө Күге йымылдап ҡомарлана — эреле-ваҡлы меңәрләгән йондоҙҙарҙың күҙе тызырайып яна. Шул йондоҙҙар араһынан моң ҡойолоп торғандай, йөрәккә үткес ине өҙөлөп йырлаусының боролоп-боролоп сыҡҡан тәрән аһәңе, булмышыңды башкөлләй әсир итеп, хатта һулыш алырға ла оноттортоп, бәғерҙәргә яғылып урала ине:

Эййй!..
Тыуған илкәйемә ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп...

Бала саҡтан күңелдәргә тулышҡан илаһи моң, был һылыу йәш ҡатындың сеңләүендә, ғүмерҙә лә ишетелмәгән гәлсәр сыңдар менән уралып үрелә, терелә, йөрәкте бороп ала, үҙәкте өҙә ине. Бигерәк тә куплет һайын былбыл ауазының сихри бөгәлен биргән мәшһүрә, йөрәген һурып сығарғандай, үкһетә яҙҙыртып, йәнеңде услап ала, эҫеле-һыуыҡлы итә, иҫәңкеҙәтә ине. Табын юллап килеп ингән туғандар, әмәлһеҙҙән, ишек төбөндә үк туҡтап ҡалдылар, һуңғы аһәң яңғырап һүрелгәнсе, зиһендәрен йыя алмай тыңланылар. Тирмәләрҙә тәрән һулыш алынып, Күк көмбәҙен күтәрерҙәй ҡотороп ҡул сабылды, йөрәкһегән күңелдәрҙе был донъяға ҡайтарҙы. Йырсы ҡатын, сәскәләр бураны аҫтында сәхнәнән төшөп, тирмәләрҙең береһенә йүнәлгәс, Басир, шул тарафтан күҙҙәрен ала алмай, йөрәкһеп һорап ҡуйҙы:

-- Кем тигән йырсыбыҙ ул? Ниңә ошоғаса бер ҙә тауышын ишетмәгәнмен?

-- Мәскәүҙәге һин түгел, бындағы мин дә тәүге ишетәм әле, — тине Дилбәр. Мөхлисо, әҫәрләнгән күҙҙәрен иң осондағы алһыу атлас ҡулъяулығына һөртөп, зиһенен саҡ йыя-йыя яуапланы:

-- Һөнәри йырсы түгел бит ул, тап үҙегеҙ кеүек үк, бында ял итергә ингән изге йән. Ә шөғөлө буйынса телсе ғалим. Мирйәнова Сәүиә тигән ханым.

-- Ниңә, йырсы ғына булып китмәй, талантын әрәм итә икән?

-- Аллаһы тәғәлә бер үҙенә ике талантты ла ҡушарлап биргәс, ни ҡылһын? Төп шөғөлө йырҙан да мөһимерәк: мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы яйға һалырға тырыша.

-- Ләкин береһе менән икенсе талантты йомоп ҡалдырыу — енәйәт ул, минеңсә! — Егеттең тауышы ҡалтыраны. Мөхлисә, көлөмһөрәп, уны маңлай сәсенән һыйпап ҡуйҙы:

-- Әллә ҡәйнешкәйебеҙ ҙә ғашиҡ булырға уйлай инде! Эргәһендә... бынауындай аҫыл гөл-сәскә барҙа! — Дилбәргә күҙ ҡырын йүгертте.

-- Мин ысынлап әйтәм, еңгәй!

-- Йә-йә, тынысслан. Һәр кемдәге Аллаһы тәғәлә биргән шул икенсе талантты илгә еткереү өсөн ҡоролған зиннәтле бина лаһа был. Тәғәйен артистарыбыҙ юҡ, берәүгә лә эш хаҡы түләмәйбеҙ. Бында инеп сәхнәгә менгән һәр изге йән, артисмы ул, шағирмы, әллә ябай һәүәҫкәрме, халыҡҡа үҙенең йөрәк майҡайын һыҙҙырып бирә ала. Сер итеп кенә әйтәйем: хатта танылған

маһирҙар һәм маһиралар ҙа бында сап-саф халыҡ моңдарын тыңларға, илһам ҡанаты алырға йөрөй башланы. Ҡайһы бер кистәр ысын сәнғәт байрамына әйләнә.

-- Изге башланғыс, — тине Басир. — Тик бына беҙҙең һөнәрҙәрҙе күрһәтеп булмауы ғына йәл, шулай бит, Мухина?

— Йәлләмәйерәк тороғоҙ, «Ярлауыҡ»тың мәмерйәләре оҙон. Бер ҡанатын киңәйтеп, художество салоны ла асып ебәрмәксебеҙ. Даими бер йылылыҡлы, бына тигән күргәҙмәлек буласаҡ. Йәғни картиналарығыҙҙы, скульптураларығыҙҙы хәстәрләй тороғоҙ алдан... Әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең тирмәгә — табынға рәхим итәйек. — Баяғы йырсы ҡатын инеп киткән бөгәлгә әйҙәне. Оҙон өҫтәл ҡырында уларға таныш һәм таныш түгел унарлаған ҡунаҡ, әлеге йыр йөрәкһетеп сәмләнеүҙән, ахыры, ҡайһыныһы ултырып, ҡайһыныһы баҫып тора — мәжлес башланыр алдындағы күңелле ығы-зығы.

—Хуш килдегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарым! Әйҙәгеҙ, рәхим итеп, табын түңәрәгенә йәпләнегеҙ!

Ағай-эне-йәмәғәт, оҙаҡ ҡыҫтатмай, һәр береһен зарығип көткән затлы һауыттар тәңгәленә төпләнде, ҡайберҙәре хатта һыйҙан элеп ҡапҡыларға ла өлгөрҙө. Тәмле шәрбәттәр ҡойолоп, шампанский бөкөләре атылып, кәйефле һүҙҙәр әйтелде.

—Ағай-эне, ҡәҙерле йәмәғәт! — тип, дилбегәне ҡулына алды мөлдөрәмә тулы гәлсәр бокал тотҡан Мөхлисә, һылыулығы менән күптәрҙе алйытып, ауыҙына ҡаратып. — Башлап дуҫлыҡ һүҙе әйтеү, боронғо йола буйынса, хужаға фарыз булғанлыҡтан, ошо күркәм мәжлесебеҙҙе йыйырға сабәпселек иткән ике йәш йөрәккә иғтибарығыҙҙы йәлеп иттертмәксемен: бына ултыра улар — береһенән-береһе матур минең һөйөклө туғанҡайҙарым! — Йөҙҙәре бурҙаттай ҡыҙарынған Дилбәр менән Басир яғына эйәк ымланы. — Хәҙер ни, икеһе тиң еләктәй үҫеп еткәс, юл саттары айырылып, бер-береһе менән дә, туғандары менән дә күрешмәй башланылар. Шуларҙы ошонда табын түрендә ултыртып ҡабат күрештертеү һәм һеҙҙең бөтәгеҙ менән дә таныштыртыу ине изге ниәтебеҙ. Иншә-Алла, юраған юш килә кеүек... Бокалдарҙан икеһенең йәшлеге кеүек ҡайнап-ташып торған шаян шәрбәтте уртлап ҡуйайыҡ әле, туғандар, барыбыҙҙың да иҫән-һаулыҡҡа!

-- Ур-ра! — тип һөрәнләне бер шаян.

-- Йәш йөрәктәр бәхетенә!

-- Донъялар имен булһын!

-- Иллә-мәгәр шағир ҙа һуң минең матур еңгәйем! — Баш сайканы Басир.

Эсемлек һәм тәмле һыйҙан ҡыҙарышҡан күмәк йөҙҙәр араһынан рәссам йылтыр-ҡара шырт мыйыҡлы, уйнап торған ҙур ҡара күҙле «кавказ кешеһе» Саркисянды, оҙон буйлы, оҙонса яңаҡлы, һөрмә ҡашлы, көлөп торған алсаҡ йөҙлә студент Әскәр Ҡотлоевты һәм дүңгәктәй ҡырҡма кәүҙәле, бөҙрә-ялтас түбәле Рәшит Алмаҡаевты таныны. Өсөһө лә энәнән-ептән кейенгән, ҡарҙай ап-аҡ күлдәк өҫтөнән һуңғы модалы аллы-гөллө галстуктар бәйләгән. Йәнә бер әҙәм йәлеп итте Басирҙың иғтибарын: ҡаштары өҫтөнән батмусланып ҡалҡынған текә маңлай, төпкә батҡан уйсан күҙҙәр, ике осо сыбырҡылай аҫҡа һәленеп төшкән

оҙон ҡара мыйыҡ. Әҙәмкәйҙең ҡыланышы үтә лә ирмәк ине: табын ҡырына йәпләнеү менән ул башын аҫҡа эйеп алды ла ҡуш ҡуллап ашанырға ла эсенергә тотондо; шул шөғөлө менән ныҡ әүәрә булып, ауыҙынан бер өн дә сығарманы, янындағы кешеләргә лә һис иғтибар итмәне. Уның мөкиббән китеп, ударниктарса, ике уртына бер юлы һалып, шул уҡ ваҡытта әленән-әле затлы шыйыҡлыҡ менән болғатырға ла онотмай, ҡолаҡтарын келт-келт һелкетеп сәйнәүен, йотҡан саҡта ата бесәйҙеке һымаҡ оҙонса йәшел күҙҙәренең ләззәтләнеп ҡыҫылыуын ҡарап ултырыуы үҙе бер кинәнес, күңелле тамаша ине. Басир ахыры түҙмәне: сыбыҡ осо туғанынан шыбырлап ҡына белеште:

— Кем була был фани донъяла уҡ ожмах тәмен татығандай ирәбе ир арыҫланы?

—Хажиәхмәт Хужахмәт улы Алпаров. Беҙҙең һымаҡ уҡ, апайымдың ҡайһылыр бер ботағының сыбыҡ осо туғаны. Ҡуян Хажиәхмәт тә тиҙәр уҙен.

Рәссамдың көлкөһө килде:

-- Ниңә Ҡуян?

-- Сөнки арыҫлан түгел. Байһөйәкте[79] урттарында тап бүреләй шатор-шотор иҙһә лә.

-- Әллә матур еңгәйемдең затлы «Ярлауыҡ» ресторань штатында һөйәк кимереүсе булып торамы?

-- Ундай һөнәре лә бар. — Ҡыҙ ҙа серҙәшенең «шаян тулҡын»ына ылыҡты. — Һәм был, ысынлап та, Алпаровтың төп алыплығы түгелме икән әле?.. Сөнки иҫтә нык ҡалган: уның оло табындарҙағы маһирлығын күрергә тура килде.

-- Йәғни?

-- Йәғни атайым иҫән саҡта уҡ әле, археологтар беҙҙең өйҙә ҡуна ятып эшләнеләр — Бәндәбикә кәшәнәһен ҡаҙғанда. Шунда Ҡуян Хажиәхмәт тә бар ине, ә мин йәйге каникулға ҡайтҡайным. Бер һарыҡты һалдырҙы ҡаҙанға атайым. Ҡәҙимгесә, ҡул һайын бер байһөйәк тоттороддо, ә һалпы яғы[80] һыналып өлгөргән Хажиәхмәткә — байһөйәктең дә иң кәттәһе, дигәне. — Ҡыҙҙың шаян тауышына йомшаҡ юмор өрөлдө. — Эй кинәнеп тотондо ла һуң ҡунағыбыҙ байһөйәген теге яғынан да, был яғыпан да әйләндергеләп мөнйөргә! Шунан хайран ҡалдым мин, ит ашауҙың да ысын сәнғәт юғарылығына күтәрелеүен, һоҡланғыс бер ритуалға әүерелеүен күреп. Япондың сәй эсеү ритуалы сүп кенә быньң ҡаршыһында! Һулышын ҡыҫып, тын ҡалып күҙәтте бөтә табын, табын ғына түгел, беҙҙең тыҡрыҡ күләмендәге тарихи ваҡиға барғанлығын ишетеп, күрше-күлән ишектән башын тығып тамаша ҡылды. Егеттең мөнйөү талантының камиллығына шаҡ ҡатҡан йәмәғәт һуңынан да һуғым байрамдарында шул ваҡиғаны табын һайын һағынып һөйләр булды...

—Археологтар һөйәк-һаяҡ менән оҫта эш итә, тип ишеткәйнем шул, хаҡ икән.

Ҡыҙҙың йөҙө етдиләнде:

---

[79] Байһөйәк — һөйәгенә балта йөҙө тейҙермәй, быуын-быуындан юллап ҡырҡылған өлөш.

[80] Һалпы яғы — йомшаҡ ғәҙәте.

— Көлмә. Ысынлап та талантлы археолог ул. Улай ғына ла түгел: үҙе үк этнограф, палеограф, фольклорсы, тиҙәр.

— Фиии!

—Фиылдама! Өҫтәүенә, Йәүҙәт ҡоҙам һымаҡ ук, әҙәм балаһы белмәгән иҫке яҙыуҙарҙы ла танып уҡый ала, ти. Бер һүҙ менән әйткәндә, энциклопедист ғалим.

-- Ниңәлер ул энциклрпедист ғалимындың шанлы исеме яңғырағанын ишеткәнем юҡ бер ҙә. Үҙең әйткән «Ҡуян» титулын ғына иҫәпкә алмағанда...

-- Улай тимә, туғаным. Яңыраҡ ҡына, башҡорт тарихына арналған ҙур йыйылышта (үкенескә ҡаршы унда һин булманың) доклад яһап, Йәүҙәт Ҡондоҙбаев ҡоҙаның тетмәһен тетте ул.

-- Дәрәжәһе бармы, ҡайһы фәнде айбарлай?

-- Тарих фәндәре кандидаты.

-- Ә кем булып эшләй?

-- Ҡотлоев институтында лаборант.

-- Фиии! Кандидат башы менәнме? Ни өсөн?

-- Ҡуян булғаны өсөн.

-- Шаяртма, Мухина!

-- Ысын. Уның Ҡуян икәнлеге лә теге ваҡыт — баяғы Бәндәбикә һөйәктәрен тикшергәндә асыла.

-- Сәйнәгәндә теше-фәлән һыныпмы?

-- Көлмә. Олпат шефы Хәкимуллиндың: «Бәндәбикә кәшәнәһе — XVI быуат ҡомартҡыһы», — тигән ныҡлы ҡарашына ул баштан уҡ ҡаршы сыҡты.

-- Булмаç! Нимә тип?

-- Беҙҙең эраға тиклемге быуат баштарыныҡы тип дәлилләне...

-- Ниңә Ҡуянға ҡалды шундай арыçлан?

-- ...Ләкин күп тә үтмәне, үҙенең арыçлан дәлилдәренән ваз кисеп, баш-баштаҡлығы өсөн тәрән үкенеүен, ғәфү үтенеүен белдереп, тулыһынса Хәкимуллин фекеренә ҡушылыуын иғлан итте ҡыйыу арыçланыбыҙ.

Бына һиңә тамаша...

Баҡтиһәң, абайламастан, Алпаровты хәмерйән исемле йәшел йылан ҡуяндай бөкләп һалған да, һөҙөмтәлә арыçланыбыҙ билдәле ҡаҙна йортонда айнығып сыҡҡан. Йыһандар Илһамдар улы уны эшенән ҡыуырға янаған, етмәһә, кеше фатирында гына торалар, ә бисәһе бына-бына донъяға яңы йән килтермеш тә икән...

-- Бер бөкләнеү һыныу түгел бит әле.

-- Шунан һуң уларҙың балалары, Мотал еҙнәйем әйтмешләй, инкубаторҙан сыҡҡандай, бер-бер артлы тыуа торҙо, алтауға барып етте, ә Алпаров кәм тигәндә йылына ике тапҡыр хәмерйәндең өйәнәк сире тотоп йығылыусан булып китте. Хәкимуллин уҙаман иһә штат исемлеге менән дә, фатирға сират тороусылар исемлеге менән дә, айнытҡысхана сәләмнамәләре менән дә оҫта дирижерлыҡ ҡылыр, Ҡуян хәленә ҡалған элекке арыçландың ике аяғын бер ҡуңыска тыҡтыртып, тап үҙенә кәрәгенсә бер таҡтаға баçтыртып, ҡамсы һәм прәник араһында бейетер, имеш... «Әпипә»гә.

-- Аңлашыла. Академиктарың көнләшерлек лаборант булһын да ҡулы аҫтында... Их, Мухина, беҙҙең дә шундай ҡуяныбыҙ булһасы! — Ҡалаҡтарҙың, бысаҡтарҙың ҡабаланып сиҡылдауын, бокалдарҙың кинәнеп сыңлауын бер талай тыңлап ултырҙы ла Басир, эсе бошоп буғай, табын буйлап күҙ йүгерткәс, иҫе китмәй һөйәк мөнйөүен дауамламыш Алпаровтың ҡолағына самалабыраҡ өндәште. — Ҡәҙерле-хөрмәтле йәмәғәт, мин һеҙгә бер мөрәжәғәт менән өндәшер инем, атайым бахыр әйтмешләй, әгәр ҙә илтифат булһа. Әле бында Дилбәр туғаным менән инерҙән алда матур еңгәйем беҙҙе ошо зиннәтле мәмерйә буйҙарынан тамаша ҡылдыртып йөрөттө, иҫебеҙ-аҡылыбыҙ китте. Әкиәт һарайҙарынан да матурыраҡ залдарҙы аша уҙҙыҡ, ул залдарҙа, ашап-эсеүҙән дә бигерәк, сәнғәттең һәр төрҙәренең дә сәскә атыуын тойҙоҡ. Бигерәк тә һушымды китәргәне — Диоген ҡарттың фәлсәфәселәр менән лыҡама тулы мискәһе булды. Дөрөҫөн генә әйткәндә, фекерҙәр бәрелешеп, хәҡиҡәттең ут-оҫкондар эсендә тыуыуын күрергә өмөт бағлағайным мин унда, әммә һемәйеп ҡалдым. Ни өсөн тигәндә, тарихыбыҙ корифейҙары Ҡотлоев менән Хәкимуллиндың бер ауаздан вәғәзләүе генә асыҡ ишетелә, ә ҡалғандар, татлы һыра менән ҡуша телдәрен йотоп, ҡолаҡтарын һәлпәйтеп кенә ултыралар икән дә. Ҡайҙа киткән Диогендар заманаһының ҡыҙыу фәлсәфә алышы, бәхәсе? Әфләтүндәр, Сократтар, Аристотелдәр әйтеше, йәғни ҙә диалогы? Хәтерләйһегеҙҙер, ул уҙаман фәлсәфәселәрҙең иң үлемһеҙ әҫәрҙәре лә нәҡ диалог рәүешендә тыуған бит!.. — Басир, байһөйәген ҡуйып тыңлай башлаған Алпаровҡа ҡарашын тоҫҡалдырып, әсе йылмайып ҡуйҙы. — Мин бисара, атайым бахыр әйтмешләй, сит илдәрҙә аҙып-туҙып йөрөгән бер мәжнүн, телемде лә онотоп барамдыр инде, ә халыҡтың тарихы барлығын хатта белгәнем дә юҡ. Әгәр ҙә ул юҡ икән, тимен мин, ниңә башҡорттоң донъя яратылмыштан уҡ килгән эпостары бар? Әгәр башҡорт ун алтынсы быуатта ғына уҡмашҡан икән, ниңә уның таш быуатта табынған хоҙайҙары, мәҫәлән, ат культы ошо көнгәсә көр доғаланып килеп еткән? «Аҡбуҙат», «Аҡһаҡ Ҡола», «Ҡара Юрға» «Биш ҡолон» һымаҡ, башҡа бер халыҡта ла һаҡланып ҡалмаған доғалар — ат эпостары тураһында бара һүҙ...

-- Уғата ғәжәберәге, — тип ялғаны Әскәр Ҡотлоевтың зыңғыр тауышы, — таш быуатта уҡ яралған шул эпостарыбыҙҙың ерлеге үҙ урынында, Уралда — Шүлгәнташ мәмерйәһе, Йылҡысыҡҡан-Шүлгәнкүл, Асылыкүл кеүек эпос төйәктәрен әйтеүем. Эпостарҙың үҙҙәре лә, тыуған төйәктәре лә, тыуҙырған кешеләре лә — ошоғаса ошонда, кендектәре берешкән урынында!

-- Туҡтағыҙ, ағай-эне! Мәшһүр Ҡотлоев менән мәшһүр Хәкимуллин-профессорҙар айбарлаған концепция буйынса... — тип киҫәтә башлағайны ла Алмаҡаев, Әскәр сыйнап бүлдерҙе:

-- Алмаҡай, «ҡан эсеп сөйә» тип аңларға кәрәк һинең ул концепцияны! Ха! Эпостарҙың тыуыу осоро ун алтынсы быуат имеш!

-- Бәлки улар хаҡлылыр ҙа, — тине Басир.

-- Кемдәр?

-- Концепция эйәләре. Ун алтынсы быуат беҙҙең таш быуатыбыҙ булһа, ун өсөнсө быуат башында шағирыбыҙ Ҡол Ғәлиҙең «Ҡисса-и Йософ» поэмаһы ижад ителмеш осорҙа, бәлки, ысын мәхлүҡтәр булғанбыҙҙыр...

-- Туғаным, нисек телең бара?.. — тине ике бите уттай янған Дилбәр.

-- Бәй, әйттем бит инде мин үҙемде халыҡ тарихы мәсьәләһендә мәхлүкйән хәлендәмен тип... Ана шул мәхлүкйәнлелегемдән арыныр өсөн, тырышып-тырмашып тарихи романдар кимерә башланым әле һуңғы ваҡытта... урыҫсаға тәржемә ителгәндәрен, әлбиттә. Ҡазан авторы әтмәләгән «Ҡубрат хан» тигән шундай бер мәжмүғәне, бәлки, уҡығанһығыҙҙыр — «башҡорт ҡәүеме» тураһында ла бар унда...

-- Эйе, уҡыныҡ шул, — элеп алды Рәшит Алмаҡаев. — Донъя цивилизацияһының иң юғары кимәлендәге болғарҙарҙың етенсе быуатта Кама йылғаһы тамағына килеп шанлы дәүләт ҡороуҙары хаҡында. Улар шунда шул изге эшкә аяҡ салыусы вәхшәттәрҙе — ҡырағайҙарҙы осрата ла, әҙәмсә аңлата алмағас, себен урынына ҡырып һалып ас бүреләргә ташлай, төнө буйы һөйәктәрен ас бүреләр кимерә, тап бына бындағы Алпаров-коллегабыҙ кеүек... Беҙҙең башҡорт бабаларыбыҙ була ул ҡырағайҙар.

-- Бәй, башҡортсаға тәржемә ителеп, Өфөлә лә баҫылып сыҡты бит ул китап.

-- Дөрөҫ! — Басир тороп уҡ баҫты. — Шул уҡ авторҙың «Илсегә үлем юҡ» тигән икенсе китабын да табып алып уҡыным. Бынаһында ла баяғы Болғар иле, әммә ун өсөнсө быуаттың башы...

-- Бөйөк шағирыбыҙ Ҡол Ғәли йәшәгән осор.

-- Тап үҙе. Баҡтиһәң, был осорҙа инде болғарҙар дөмә-ҡырағай башҡорттарҙы әҙәмсә аңлай башларға, хатта әйткән берен тоғро эттәй һә тигәнсе үтәргә лә өйрәткән. Башҡорт инде болғар ханының иң тыңлаусан ялпыһы, ялсыһы — Яйыҡ ярынаса һуҙылған шанлы Болғар дәүләтенең сиктәрен мөкиббән һаҡлау хаҡына хужаһы болғар ханының усын ялаусы...

-- Кем яҙған ул мәсхәрәне, тәүфиҡһеҙ!.. — Хатта Мөхлисә ханым да был юлы сәмләнмәй ҡала алманы.

-- Кем яҙһа ла барыбер, исеме — китаптың тышында. Ташҡа баҫҡанға ышанмай булмай, ти торғайны атайым бахыр. Беҙҙең тарих юҡ, тимәк, ысынлап та, вәхшилектән яңы ғына сыҡҡанбыҙ... йәки сығып барабыҙ...

Шул саҡ оҙон өҫтәл тертләп-ҡалтыраны, һауыттар шалтыраны.

—Кем әйтә быны?! — Көтмәгәндә Ҡуян Алпаровтың ҡалын тауышы арыҫландай ырылданы, күптәрҙе хайран ҡалдырып. — Кем әйтә?!

-- Бәй, аңлашылманымы ни, ташҡа баҫҡан китап әйтә... Ҡазанда сыҡҡан.

Ҡуянлығын онотоп, Алпаров өҫтәл һуҡты (ләхәүлә!..):

-- Төкөрәм мин һинең ул китабыңа!

-- Иҫеңә кил, Хажиәхмәт, кемгә йоҙроҡ төйәһең?! — Рәшит Алмаҡаев ҡыҙышҡан коллегаһын һыуытырға тырышты.

-- Иҫемдән яҙғаным юҡ!

-- Тимәк, концепцияның башҡорт-болғар бәйләнештәре версияһын танымайһың булып сыға? — Әскәр аҫтан үртәне.

-- Ниндәй башҡорт-болғар бәйләнеше? Болғарҙар үҙҙәре саф башҡорт булған хәлдә!

-- Кем әйтә быны, һинме, ҡәҙерле Алпаров?

-- Тарих үҙе иҫбатлап ҡысҡырып тора.

-- Мәҫәлән?

-- Мәҫәлән, бөрйән халҡы, һеҙҙеңсә кем?

-- Бәй-бәй, кем булһын, башҡорт. Бына мин үҙем бөрйән! — тине Рәшит Алмаҡаев. -- Хажиәхмәт, һин үҙең дә ата бөрйәнһең дәһә!

-- Эйе, бөрйән-башҡорт. Бер үк ваҡытта болғар ҙа!

-- Быныһы ҡайҙан килеп тағы?

-- Тағы түгел, ә ғүмер баҡый шулайбыҙ. Уралдағы боронғо төп дәүләтебеҙ Көнбайыш төрки ҡағанаттан бүленеп сығып, алтынсы быуатта Каспий — Аҙау буйҙарына ереккән, етенсе быуатта ханыбыҙ Ҡубрат етәкселегендә Аҙау — Ҡара диңгеҙ буйҙарында гөрләтеп дәүләт ҡорған бөрйән-болғарбыҙ. Алты йөҙ ҡырҡ икенсе йылда Ҡубрат хан донъя ҡуйғас, Византия ҡыҫымынан сигенеп, ике тармаҡҡа бүленеп китеп (ҡәбиләнең уң һәм һул ҡанатына), бер тармағы Ҡубрат улы Аспарух-хан етәкселегендә Балҡан таулы Дунай йылғаһы буйындағы Бөрйән-Болғар дәүләтен төҙөп ебәргән, икенсе тармағы Кама йылғаһы тамағындағы Балҡан таулы Бөрйән-Болғар дәүләтен ҡорған бөрйән-болғар булабыҙ. Был тупраҡты боронғо грек һәм ғәрәп географтары теүәл итеп карталарға төшөргән, Сармат иле тип атаған. Уларҙың һәр әҫәрендә бер рәүешле «Сармат иле — бөрйән ере» тип әйтелә. Шулай булғас, һинең ул китап тип атаған ылғый мәсхәрәнамәләреңдә әйтелгәнсә, бөрйән үҙен-үҙе үлтереп ас бүреләргә ташлаған, йәки үҙен-үҙе ялсы итеп яллаған килеп сығамы? Көлкө!

-- Вай-вай, бына һеҙгә иҫке ауыҙҙан яңы һүҙ! — Дилбәр аптырап ҡалды. — Һин, ағайым, теге көндә Ҡондоҙбаевтың ҡабырғаларын һанаған докладыңда ниңә шуларҙың ылғый киреһен һөйләнең?

-- Сөнки шулай бойорҙолар. – Табын гөж-килеп көлдө.

-- Һинең ҡайһы һүҙеңә ышанырға?

-- Ошоноһона.

-- Улайһа ниңә, «Бөрйән» тип түгел, ә «Болғар» тип атағандар ул башҡорт-бабалар дәүләтен? – тине Басир.

-- «Бөрйән» дә, «болғар» ҙа икеһе бер -- Бүре-хоҙайға табыныусы тигән һүҙ, бер үк башҡорт ырыуының исеме — бер үк телдең һөйләштәрендә үҙгәртелеше генә. Икеһе лә ҡушма һүҙ, нигеҙендә «бүре-кеше» тигән мәғәнә ята.

-- Әйтәйек...

-- Әйтәйек, иҫке телдә «бөрөк» әйтелгән бүре. Шуға «ән» (инә) һүҙен ҡушып әйтһәң (Бөрөк-ән), Бүре-инә (инә бүре) аңлашылған ул боронғо заманда. Тимәк, бер үк ҡәбиләнең әсә-инә бүрегә табыныусы яртыһы, ҡәбиләнең һул ҡанаты. Төрки телдәрҙең тарихи фонетикаһынан яҡшы аңлашылыуынса, Бөрөк-ән һуңыраҡ Бөрөй-ән — Берйән булып үҙгәргән. Шул уҡ ҡәбиләнең ата бүрегә табыныусы икенсе яртыһы, ҡәбиләнең уң ҡанаты, тәүҙә Бөрөк-әр (бүре-ир) аталған да, төрки телдәргә хас р — л үҙгәреше кисереү һөҙөмтәһендә ике өн араһындағы «р» тартынҡыһы бара-бара «л»-ға әйләнеп, «Бөрөк»тән — Бөлөк (Балыҡ, Волк) рәүешен алған, тимәк, баяғы «Бөрөк-әр»ҙән Бөлөкәр — Болғар (шулай уҡ Балҡар) атамалары хасил булған. Шулай итеп, бөрйән менән болғар икеһе бер тиң, бер ҡәбилә — бер халыҡ, башҡорттоң бабалары.

—Ә шул хаҡта ташҡа баҫылған бер-берәй нәмә бармы һуң?

-- Бик тә белгегеҙ килһә, унынсы быуат башында ук бөйөк Болғар ҡалаһында биш мең ғаилә бөрйән тоҡомо йәшәгән, башҡорттоң киң билдәле Үҫәргән, Бүләр, Ғәйнә-тархан, Йәнәй, Юрматы, Юрми ырыуҙары менән бергә. Был биш мең ғаилә бөрйән хаҡында атаҡлы ғәрәп сәйәхәтсеһе Ибн-Фаҙлан үҙе яҙып ҡалдырған.

-- Ә минең белеүемсә, — Рәшит Алмаҡаев арҡыры төштө, — «бөрйән» тигән атама осрамай Ибн-Фаҙлан яҙмаларында.

-- Ә «баранжар» бармы һуң?

-- Уныһы бар, әлбиттә.

-- Бәй, шулай булғас, атаңдың башы кәрәкме тағы һиңә? «Бөрйән» тигән һүҙ бит ул!

-- Ҡайһылай?

-- Бына былай: «Бүр-ән-әж-әр» тип, быуындарына тарҡатып уҡырға кәрәк ул ҡушма һүҙ «баранжар»ҙы. Бында «Бүр» — бүре, «-ән» — сығанаҡ килеш ялғауы, «әж» — әсә, «әр» — ир (кеше), тигән мәғәнәлә. Тимәк, «Бүренән (тыуған) әсә тоҡомдары» аңлашыла. Боронғо телдә сығанаҡ килеш ялғауы исемдең («әж») алдында ла, артында ла ялғанып килә алған, мәҫәлән: ән-әж — әнәж (хәҙерге Әнәс тигән исем, «әсәнән» тигән мәғәнәлә) һәм әж-ән — әжән (хәҙерге Әсән тигән исем, шул уҡ «әсәнән» мәғәнәһендә), Әгәр ошо һуңғы әйткән формалағы «әжән» һүҙе теркәлеп килһә «Бүре»гә, хасил була бәтәбеҙгә билдәле Бүр-әжән — Буржән, Бөрйән ырыуы атамаһы йәғни. Ә икенсе формаһындағы боронғо һүҙебеҙ «әнәж» шул уҡ «Бүре»гә төркәлеп, хасил ҡыла Бүрәнәж — Бүрәнж — ә шуға йәнә «әр» (ир) ҡушылып яһалған күплектәгеһе Бүрәнжәр (баранжар) иһә Ибн-Фаҙлан яҙмаһына ла кереп ҡалған, үҙегеҙ беләһегеҙ. Ә «бөрйән»дең шул уҡ «булғар», «бурғар», «бурған» һәм башҡа игеҙәк атамалары тураһында сурытып та тормайым...

—Хажиәхмәт, ғәфү ит, ут менән уйнайһың бит. — Алмаҡаев Рәшит тағы киҫәтте. — Үҙең уйлап сығарҙыңмы быларҙы, эйе бит? Ҡыҙыҡ әкиәт итеп?

— Һин үҙең ул әкиәт — сүбек сәйнәгес аспирант-аспират!

— Боронғо болғарҙың бөгөнгө башҡорт икәнлегенә ни дәлил бар?

-- Ул дәлил — бөгөнгө Урал башҡорттарының теле. Хәйер, таныҡлы тел белгесе, бәлки, миңә ҡарағанда ла яҡшыраҡ аңлатып бирер быны? Арабыҙҙа ана ултыра профессор Мирйәнова Сәүиә ханым үҙе. — Бөтә күҙҙәр бая ғына ошо сәхнәнән «Ғилмияза»ны өҙҙөрөп йырлаған мәшһүрәгә төбәлде.

-- Эйе, — тине ғалимә, аяҡ өҫтө тороп, — тел белеме тулыһынса дәлилләй был тарихты... йәғни болғар-бөрйәндең берҙәйлеген. Бөгөнгө Урал аръяғы башҡорттарының, шул иҫәптән бөрйәндәрҙең, һөйләштәре, төп үҙенсәлектәре буйынса, боронғо болғар теленең төп вариҫы, дауамы булып тора. Фән үҙе раҫлай быны.

-- Булмаҫ, ышанмайым, — тине аранан кемдер.

-- Әгәр ышанмаһағыҙ, төплөрәк белгегеҙ килһә, беҙҙең ғилми үҙәктә ташҡа баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәрҙән уҡып инанығыҙ — бына шуларҙың береһе: Ареальные исследования языкознании и этнографии. Тезисы. Өфө, 1985, 175-176-

сы биттәр. Етерме, әллә өҫтәй бирәйемме?

-- Рәхмәт, хәҙергә етеп торор, — тине Басир, — Телебеҙ үҙе шуны дөрөҫләй икән, ышанмай әмәлебеҙ юҡ, сөнки тел ул — туҙға яҙмаған китап, ти торғайны аҡһаҡал олатайым.

-- Ә шулай ҙа уйлап ҡарайыҡ әле...

Әммә Алпаровтың шараптан һуң арыҫланланып ҡаны ҡыҙышҡан, яйлап ҡына ҡуянлығына сигенеү юлы онотолғайны инде. Аспирантҡа ҡуйы ҡаштары аҫтынан емерткес ҡарап, иҫәңгерәтеп һалды:

—Уйлауыңдан ни мәғәнә, концепцияның ҡоло. Әгәр ҙә ышанмаһаң, халҡың тарихын ысынлап белгең килһә, һигеҙенсе — туғыҙынсы быуат ғәрәп географтарының карталарын, аңлатмаларын ҡара. Һис булмаһа береһен — Мөхәммәт ибн Муса әл-Хваризмиҙы[81] ғына. Ул ошонан ҡул һуҙымы ғына ерҙә — Сырдарья буйҙарында тыуып үҫкән, тимәк, Урал — Волга буйҙарын да үҙенең биш бармағындай яҡшы белгән.

-- Афарин, Арыҫлан Алпаров, мин был мәлдә һинең алда баш эйәм! — тине Әҫкәр.

-- Минең алда түгел, ә халҡыбыҙ алдында баш эйәйек! — Ауыҙ асып тыңлаған табын йәнләнде — ҡул сабыу һәм бокалдарҙың сыңлауы теүәлләне. Алпаров, эсендәге енде сығарып бөтөп, тынысланды, ҡабат ҡуш яңағын егеп сәйнәргә, һемерергә тотондо.

-- Йәмәғәт, етди генә фәлсәфәләр тыңланыҡ, мейе юлаҡтарына ла ураныҡ. Инде шунан һуң нимә кәрәк — шиғыр! — тине Мөхлисә ханым. Гөрләтеп берҙәм ҡул сабыуҙар был теләкте хупланы.

-- Ана килә Сиҙәмле! Шиғриәтебеҙҙең йөҙөк ҡашы Абуталип Сиҙәмле!

-- Сиҙәмлене һорайбыҙ, Сиҙәмлене!

Тулы айҙай ялтыраған соңҡа тирәһе күбектәй аҡ бөҙрә-көҙрә тирәсле, сикәләре бакенбардлы олпатйән, үҙе лә ҡуша ҡул сабып, ирәүәнләнеп менеп баҫты сәхнәгә. Рәссам бер күреүҙән уны таныны: кисә генә Ыңғырсаҡ Уральский фатирында түшәм ҡуптара яҙып шаулаған әҙәми зат таһа! Микрофонға ауыҙ терәне, тәрән тамаҡ ҡырып, иғтибарҙы үҙенә йәлеп итте.

—Кем был, күркә кикереге кеүек ҡыҙыл йөҙлө әҙәмкәй? — Залды тоҙһоҙ хихылдау һиҫкәндерҙе.

-- Тссс, атаҡлы шағир Абуталип, тиҙәр бит.

-- Сиҙәмле! Күрмәйһеңме ни, сәс лоҡмандары ҡылғанлы ҡыу бүтәгәләй ағарған — шуға күрә лә Сиҙәмлелер инде, бахырҡайым.

-- Бахыр тимә. Пушкиндыҡынан шәберәк бакенбардтары!

-- Әллә шиғырҙа ла Пушкиндан уҙҙыртамы?

-- Тссс! Тыңлайыҡ!

Аҡ күбекле ҡаштары ҡырт-емерелде, таҙа итеп ҡырған һаҡал төптәренән бөрсөк-бөрсөк йән тирҙәре йылтыраны — ил алдына сығып шиғыр уҡыуҙары бакенбардтар эйәһенә лә еңел түгелдер, күрәһең... Күркә кикереге һымаҡ йөҙөн

[81] Т. М. Калинина. Сведения ранних ученых Арабского халифата. М., 1988, 17, 48, 32, 92, 93, 95, 130, 136, 137-се биттәр.

уғата ҡыҙартып, бакенбардлы яңагын ҡырын янтайтып, үҙенең күп сәхнәләрҙә һыналған «романтик төҫ»өн алды:

-- Шым! Абуталип Сиҙәмлене тыңлайһығыҙ! – тине.

-- Абуталипмы, әллә Буталыпмы? Хи-хи-хи!

-- Шым! — Тоноҡ ҡына дерелдәгән усы менән эйәгендәге тир затын һелтәп ташлап, нескә-моңһоу аһәңле һөрәнләне:

Их!..
Бөҙрә талдар зәңгәр диңгеҙҙәрҙә —
Толомдарын сайҡап эләләр.
«Һандуғасым, ҡара ҡашым!» — тиеп,
Ҡосаҡтарын йәйеп киләләр... —

Тауышы шундай һыҡтаулы, бер үк ваҡытта зәһәр яңғырауыҡлы ине — татлы шарап уртлаған алсаҡ әҙәмдәрҙең йөрәгенә был аһәң, иҫәнгерәтеп, ауыҙ терәгән бокалының ярсыҡтары сылтырап ергә ҡойолғандай тәьҫир итте. Бер ҡатынҡай, бисара, ебәк ҡулъяулығы менән хатта күҙен-ҡашын һөрткөләп алды:

—И йөрәккәйем, ниндәй һағыш эйәһе!

Ул да булманы:

—Афарин, сиҙәм сиңерткәһе!.. — тип, көтөлмәгәнсә көллө залды яңғыратып алҡышланы ҡыҙара бүртенгән Әскәр Ҡотлоев. — Абуталип-Буталып, йөрө шулай сәхнәләрҙе тапай-тапай Буталып! — тип, ҡушаматлап та данланы. Шағир йораты, алғы тирмәләрҙең береһендә күҙ йәш һығып һулҡылдаған әлеге нескә күңелле ҡатынҡайға боролоп, түбәнселекле баш эйҙе — ялтасында электр уттары саҡҡыланып сәсрәне. Бер ыңғайҙан күҙе менән мәрхәмәтһеҙ Әскәрҙе һөҙөп алып, тауыш зыңын бер баҫҡысҡа күтәрҙе:

Бөҙрә талдар зәңгәр диңгеҙҙәрҙә —
Аҡсарлаҡтар осоп ҡуналар.
«Кук сәсәгем, киләсәгем!» — тиеп,
Ҡанаттарын һыуға маналар...

-- Абауғынам, Аллаҡайым, ҡайһылай ҙа йөрәктәргә үткәҙә!

Ииих-ма!..
Бөҙрә талдар зәңгәр диңгеҙҙәрҙә —
Күҙҙәремә ҡарап илайҙар.
«Шат сабағым — ҡайҙа сабый сағым?
Әллә Айҙа?.. — тиеп һорайҙар...
Ер шарынан Айға арбайҙар...

—Һәй, арбаһы арбалғыры бөйөк шағир Абуталип-Буталып! —Залды йәнә зыңғылдатты Ҡотлоев. — Зинһар, ырғып төш Ер шарынан — китәйек Айға мәтәлеп тә Буталып!

Заманаyың һуңғы ҡушыуынса кейенгән — күлдәк итәге кендегенән юғарыраҡ тип әйтерлек сикләнгән бер сая ҡыҙ-ҡырҡын йомолоп сәхнәгә атлыҡты, ҡайыш аяҡтарын бөгөп, малайҙарса мөнтәлгән башын муйынында футбол тубылай уйнаҡлатып реверанс яһаны ла күкрәгендә илһамлы сәм ҡуҙғалыуҙан ҡыҙара-бүрткән Сиҙәмлегә сәскә шәлкеме һондо. Сәскә менән ҡуша ҡыҙҙы ҡосаҡлап үбергә өлгөргән Абуталип, һулҡылдаған ҡатынҡайға тағы ла бер баш эйеп, пружиналай һикертмәле аҙымдар менән зал түбөнә — Мөхлисәнең мәжлес тирмәһенә юлланды.

-- Дуç кеше, ултыр әле яндарыма, ял булһын йәндәремә! — Әсҡәр ялҡынлы шағирҙы, эргәһенән урын биреп, муйынынан ҡосаҡланы.

-- Шәп яңғыранымы «Бөҙрә талдар»?! — тине, эскерһеҙ ҡыуанысын белдереп, һаман хистәр донъяһында тулҡынған, көллө йөрәктән дөрләгән шағир.

-- О, иç киткес! Эсмәгәндәргә — иçерткес!

-- Эс киткес тип әйтһәң ни була! – тине Рәшит Алмаҡаев, көлкө шауын ҡуҙғатып. Әммә хистәренән ярым илерек шағир һис иғтибар итмәне:

-- Ниңәлер тамаҡ ҡарлыҡҡан — бөгөн ундай уҡ яңғырамаçтыр, тигәйнем.

Әсҡәр фужерға шаулатып шарап урғылтты:

—Гүзәлдәрҙән-гүзәл Мөхлисә ханым иçәбенән сылатып алайыҡсы әле ҡарлыҡҡаныраҡ тамаҡтарҙы, дуç кеше!

Иçермәй ҙә, айнымай ҙа, тулыр-тулмаç стакан кеүек даими бер ҡыҙмаса — «музыкаль» кимәлдә йөрөүсән шағир шарапты бер һелтәнеүҙә тамағына түңкәрҙе, Басир менән Дилбәр яғына төбәлеп, елләнеп йырлап ебәрҙе:

Нисек килдегеҙ һеҙ беҙгә,
Батмайынса диңгеҙгә?
Ҡәҙерле ҡунаҡ һеҙ беҙгә,
Беҙ нисек икән һеҙгә?

Табындағылар, хозурланып, бокал күтәргән арала, Абуталип Сиҙәмле йәнә Әсҡәр дуçының ҡолағына «өрөргә» лә өлгөрҙө:

-- Алмай...

-- Нимә?

-- Тамаҡтың ҡарлыҡҡанын алмай. Ҡырҡыуы түбәнерәк.

-- «Ҡырҡлы»рағын көçәй, тиһеңме йәш күңел?

-- Эйе шул.

-- Ижаб ҡабул иттергәнсе түҙ, ҡыҙым, абыстай булырһың, тип әйткән, ти, әсәһе... Бына шулай. Әрмәнский коньяк бирмәйҙәр бында, — тине Әсҡәр. Саркисяндың быға ҡолағы «ҡарп!» итте: турғай башындай суҡ мыйыҡ биҙәгән кеселекле ихлас йөҙөн Әсҡәргә бороп, табынды һиçкәндерҙе:

-- Кацо, миңә ҡунаҡҡа килегеҙ, ултыртам ящик коньяк! Ул бөтһә, ултыртам ящик ҡаймаҡ!.. — Бокалдарҙы сайҡалдыртып йәнә ихлас көлдөләр. Сәхнәлә һыҙылып ағыла башлаған ҡурай моңо шул арала өҙөлөп, күптәр өсөн радионан таныш булған уҙамандарса ҡырыç, көр тауыш яңғыраны, баштарҙы үрә ҡатырҙы. Текә ҡарурман ҡырындай киртләсләнеп ҡалҡынған шырт сәсен

көрәктәй ҡулы менән артҡа һелтәп, һөйәге йәнселеп эскә батҡан яҫы шаҡмаҡ маңлайлы, янып торған шағыр күҙле, тауҙа үҫкән төп имәндәй йыуантыҡ кәүҙәле, суйындай ҡара-йылтыр йөҙлө бәһлеүән әллә ҡайҙан баштар өҫтөнән залға бөркөттәй сая ҡараш ташланы:

-- Ҡәҙерле башҡорттарым, үҙемдең өр-яңы әҫәремде бүләк итәмен һеҙгә! — Күк күкрәү дәрәжәһендә ҡалын дөһөрләп (бына-быны йәшен уҡтары сытырлап китер төҫлө) репертуарын иғлан итте был нәүбәттәге шанлы шағир ауазы. — «Һандуғас һәм револьвер»... Һуңғы поэмамдан ҡайһы бер фрагменттар... — Аҙаҡҡы һүҙҙәрҙе, ниңәлер, матәмле-трагик аһәңдәргә мансыны.

-- О! Ыңғырсаҡ Уральский! Эшсе-шағир!

-- Ыңғырсаҡ? Ниңә арҡалыҡ түгел?

-- Тссс!

-- Тай типкәнме юғиһә — маңлайына ни булған?

-- Тссс, кирбес төшкән. — (Дилбәр терт итеп ҡалды). — Ул бит элекке ташсы...

—Ой ҡайһындай ҙа аһәңле Уральский — унда Урал тауышы!

Басир, ҡыҙыҡһыныуы ҡомарып, тиҙҙән үҙе портретын яҙасаҡ ҡарасуйын ҡиәфәтте байҡаны. Уральский Күк күкрәүле Урал тауышын киренән тәбиғи яңғырашҡа ҡайтарҙы, «Элек үҙем менән бергә эштәгән ташсы дуҫтарыма арнайым был йырымды», — тине. Кәрәккәндә түбәнәйтеп, кәрәгендә күтәреп, ҡайһы саҡ тамам тынып, ысын нәфис һүҙ маһирлығында һамаҡларға кереште:

Һан юғалды һары һандуғаска,
Һайрауҙарға һомғол көн бөттө.
Төштәремә ҡара ҡарсығаның
Ҡарғыуҙары кереп миктәтте...

-- О! О!
-- Бына һеҙгә ыңғырсаҡ, бына һеҙгә арҡалыҡ!
-- Ыңғырсаҡ ҡына түгел, ә көмөш ҡашлы эйәр!
-- Тссс!

Һандуғасы үлде бәғеремдең —
Револьверым ҡурғаш төкөрҙө.
Еңгәләрем, ғәфү итерһегеҙ,
Өҙгән өсөн аҫыл ғүмерҙе...

Зал ҡабат иҫенә ҡайтып, ҡул саба башлап, ҡыҫҡа юбкалы сая ҡыҙ сәскә тотоп сәхнәгә атлыҡҡанда, ярһыу шағир Ыңғырсаҡ Уральскийҙан елдәр иҫкәйне инде. Фәҡәт уның йәмерәйеп йәнселгән яҫы маңлайы, шырт ҡарурман сәсле дүрткел башы ғына рәссамдың ҡуйын дәфтәрендә ҡабалан-һаран һыҙаттар менән һүрәтләнә биреп ҡалды ла «сиҙәм шағиры»ның ҡәләмдәшен оҙатыу сәләме яңғыраны:

—Их! Еңгәләрем тирмәне —
Тағы ла тарта бирмәне!..

Кемдер ихлас күңелдән һулҡылданы:

-- Фажиғәле мөхәббәткә тарығандыр ул, бахыр...

-- Иҫ китмәле! — тине Дилбәр. — Ниндәй йәл: шағир менән яҡындан таныш түгелмен.

Ҡыҙҙың алһыуланған йөҙөнә баянан биреле текләп ултырған Әскәр түҙмәне: дөбөр-шатор ҡалҡынып, яҡынымраҡ һырышты. Дөрөҫөн генә әйткәндә, тынғы белмәй һемерелгән шарап ялҡыны башына ҡаба яҙып, ул ниндәйҙер тиле Ыңғырсаҡ Уральскийҙы нәзәкәтле Дилбәр-туташтың иғтибарына биреп ҡуйырға теләмәй, быны уның егетлек зиты күтәрә алмай ине.

-- Хөрмәтле Диләфрүз-туташ! Әгәр рөхсәт итһәгеҙ, мин һеҙгә уның өй адресын, телефон номерын дәфтәрегеҙгә үҙ ҡулым менән ядкәрләп ҡуйыр инем...

-- Әлләсе... Берүк... — тине Дилбәр, Әскәр йөҙөнөң йылы ипкенен сикәһендә тойоуҙан эҫеле-һыуыҡлы булып. Әскәр, ҡыҙҙың ҡуйын дәфтәренә эйелеп, сыймаҡлай ҙа башланы. Затлы алтын ручкаһы иһә ҡыя нурҙар саткылатып, күҙҙәрҙе сағылдырҙы. Ҡыҙарынған ҡыҙ түбәндәгеләрҙе уҡыны: «Илаһиәм минең! Һеҙ — был табындың фәрештәһе!» Ҡыҙҙың ҡапыл ҡолаҡтары шауланы, түңәрәк зал, өҫтәл-табындары менән ҡуша, зыр-әйләнә башланы. Ни өсөндөр, үҙе лә белештермәй, ырғып торғайны, соңҡаһы менән ыңҡылдатҡансы йөнтәҫ моронға төкәлеп, сәрелдәп ебәрә яҙҙы: әлеге лә баяғы бәндә Мыйыҡ, ҡыҙ елкәһе аша Әскәрҙең алтын ручкаһына күҙҙәрен тызырайтып, һерәйеп торған имеш...

-- Һөмһөҙ! Шымсы! — Ярһыуынан үҙ-үҙен белештермәне Дилбәр.

-- Ғәфү итегеҙ!

Башын баҫып шымып ултырған Хажиәхмәт Алпаровтың ултырғысы һыҡтанып шығырланы, дарылай дөрләп-ҡабынмалы ярһыу тауышы бокалдарҙы сайҡалтты:

-- Вон бынан, КГБ темеҫкене! — Шаҡ-ҡатырып, Ҡуян тағы йоҙроғон өҫтәлгә төйҙө. — Минең нимә ашағанымды, эскәнемде еҫкәнеп, Хәкимуллинға ошаҡларға килдеңме?! — Алдындағы бокалды услап алып, Мыйыҡҡа бәрергә итте —тотоп ҡалдылар.

-- Ләхәүлә, Ҡуян ҡупты! — тип көлдө кемдер.

-- Арыҫланға әйләнде! — Шул арала Мыйыҡ сығып та һыҙҙы, артынан Әскәр йүгерҙе.

-- Арыҫланланма, Алпаров! Шефың ишетеп ҡалһа, үҙеңде ни эшләтер!

-- Сөскөрҙөм мин уларға!

-- Йыһандар Илһамдар улы Хәкимуллинғамы?

-- Барыһына ла!

Ялҡынға май ҡойҙолар:

— Ҡуянлығыңды оноттоңмы, Хажиәхмәт?

-- Кем ҡуян?!

-- Тереләй, хатта бөртөк тоҙ ҙа һипмәй, сыйылдатып йотасаҡ ул һине, кил

иçеңә! — Була яҙған арыҫланды был киҫәтеү ҡапыл-ғара ҡалтыратып, кире ҡабат Ҡуян хәленә ҡайтарҙы — Алпаров шиңеп төштө. Мәрәкәләп көлөү аҫтында табындан уҡ ҡубынып, артына әйләнеп тә ҡарамай, ҡойроҡто һыртҡа һалды.

-- Их-ма! Башы айныған, нисәмә балаһы барлығы иҫенә төшөп, ҡурҡышынан тилергәнсә эсә лә тағы айныҡтысханаға ҡаба инде был коллегам Ҡуян... — Үртәләнде Алмаҡаев. Ике сикәһе ҡыҙарған, йоҙроҡтары йомарланған Әҫкәр елтерәп килеп инде:

-- Мыйығынан аҫып ҡуя инем жуликты, бәхете: үҙйомошханаға инеп бикләнде.

-- Ә һин уны тыштан терәтәһе лә шундағы ҡыҙыл төймәгә баҫаһы ине. Дөбөрләп килеп етер ине милиция!

Һуңғыһына Саркисяндың ҡолағы ҡарп итте:

—Зачем милиция, кәрәкмәй милиция!

— Ярай, туғандар, болотһоҙ көндә бола күтәрмәйек әле. Бер ниндәй ҙә жулик та, шымсы ла түгел, ә анауы күрше тирмәлә генә күңел асыусы ирәүән бит ул, — тине Мөхлисә. — Рәхим итеп ултырышайыҡсы, туғандар, табын ҡото осмаһын. Берәй йоморо һүҙ әйтәһегеҙме әллә тагы, хөрмәтле Абуталип туған?

Таяҡ тыҡҡан ҡорт күселәй туҙғыған табын кире ултырышҡанда, мәжлестең маҙаһы китә башлағайны инде. Өҫтәүенә, ишек төбөндә аңғармаҫтан шау-шоу ҡубып, йәнә иғтибарҙы һүрҙе. Баҡтиһәң, яңы килгән клиенттарға урын юҡ, ә уткүрше бер тирмәлә өҫтәл яны яртылаш буш: өлгөр Саркисян алдан алып ҡуйған да Мөхлисә табыны менән бер ҡатарҙан үҙенең шәхси автономиялы мәжлесен ҡорған.

-- Был ни хәл? Ниңә беҙ баҫып торабыҙ, ә ҡайһы берәү бер үҙе биш ултырғыста ултыра? – тине урын даулаусы.

-- Сөнки ул иптәш алдан алған тирмә был.

-- Ниңә уның аҡсаһы алдан йөрөй? Беҙҙә лә совет һумдары!

Иптәштәре тотанаҡланы:

-- Беҙҙең һымаҡ, станоктан килмәгән шул. Шуға күрә алдан өлгөргән!

-- Май сүлмәге тышынан ук билдәле — баҙар ҡомағы!

-- Юҡты һөйләмәгеҙ! — тине Мөхлисә-ханым. — Беләһегеҙме, кем ул Саркисян иптәш? Үҙ иленең хөрмәтле хеҙмәт эйәһе — бына ул кем! Ылғый һеҙҙең кеүектәрҙең табынына йылы яҡтың ҡояшлы еләк-емештәрен эркелдерткән егәрле колхозсы.

-- Колхозсы кеше йыл уратаһына ҡала баҙарында ураламы?

-- Колхоздары тарафынан шуның өсөн ебәрелгәс, ниңә уралмаһын? Өҫтәүенә, әгәр ҙә белгегеҙ килһә, Саркисян иптәш — ошо үҙегеҙ яратҡан «Ярлауыҡ» ресторанының ҡайһы бер төҙөлөш эштәрендә лә актив ҡатнашыусы ул.

-- Беләбеҙ уның «ҡайһы бер төҙөлөш эштәре»н!

-- Баҙарҙа беҙҙе терелэтә тунап ала ла усығыҙға алтын ялата! ОБХСС ни ҡарай, милиция ниңә йоҡлай?

Бокалынан уртлап ҡына ҡолаҡ ҡымтып тыңлаған Саркисян тыныс ҡына ҡуҙғалды, ҡул ишараһы яһап, эстрадала «Сулико»ны көйләп торған йырсыны,

оркестрҙы туҡтатты, табындарға итәғәтле ихтирам ишараһы күрһәтеп әйтте:

—Ҡәҙерле ағай-эне, шундай ләззәтле көйгә ойоп хозурланыуығыҙҙы бүлдереүем өсөн гәфү итегеҙ, ләкин мин был ишек төбөнән ишетелгән һөмһөҙ ялаға түҙеп тора алмайым! Хөрмәтле идарият[82], ниңә ул хулигандарға ҡаршы төплө сара күрелмәй? Урамдағы постовойҙы саҡырығыҙ. Кем ул унда абруйлы ОБХСС-ты һәм беҙҙең һөйөклө милицияны яманлап мәсхәрәләй?! Һеҙгә әйтәм, ғауғасылар! Әллә һеҙ Совет власына ҡаршымы?!.

-- Һинең кеүек баҙар ҡомағына ҡаршы беҙ!

-- Ҡомаҡ ҡына түгел — ике аяҡлы ҡараҡ! Ҡара һин уны — ауыҙынан алып бармаҡ остарынаса алтындан ялатылған, танауын ғына алтынлатаһы ҡалған!

-- Уның ҡыҙыл танауы былай ҙа алыҫтан уҡ ялтырай. Ҡараҡтың башында бүрке яна, тигәндәй.

Мөхлисә ҡайҙалыр китеү менән идарият вәкилдәре милиция эйәртеп килеп инде:

-- Граждандар, эш ниҙә? Кем шаулай?

-- Хөрмәтле старшина иптәш, бер кем дә шауламай бында, — тине ҡойоп ҡуйғандай килешеп торған костюмы, тура һыны, дүрткел ҡара мыйығы аҫтынан ихлас йылмайыуы менән тәртип һаҡсыһын арбарға өлгөргән Саркисян.

-- Документтарығыҙҙы рөхсәт итегеҙ.

-- Рәхим итә күрегеҙ: бына паспорт, бына хәрби билет.— Ҡатырғыларҙы энә күҙәүенән үткәргән милиционерҙың эсбауырына инеүҙе дауам итте. — Бына бында тирмәгә — табынға рәхим итегеҙ, старшина иптәш, ултырып һөйләшәйек. Ризығыбыҙҙан етешегеҙ. — Старшинаның, өҫтәлгә күҙ һалып, һалҡын йөҙөнә йылылыҡ өҫтәлеүен абайлаған табын эйәһе ҡыйыуыраҡ дауамланы. — Бына күрәһегеҙ бит: ниндәй культуралы халыҡ ял итеп ултыра бында — шау-шоу ҡуптарырға һәләтлеме ни улар? Идарият та дөрөҫләр: шау-шоуҙы ана тегеләр — ишек төбөндәгеләр ҡуптарҙы, эйе бит?

-- Дөп-дөрөҫ. — Эйәк ҡағып тотанаҡланы идарият вәкилдәре.

-- Беҙ был гүзәл тирмәне законлы рәүештә биләйбеҙ: йәнебеҙ һөйгән дуҫтар менән һөйләшеп, әңгәмәләшеп ултырырға. Ә буш урындар иһә килер ҡунаҡтарыбыҙға тәғәйенләнгән: рәхим итегеҙ, һеҙ ҙә ҡәҙерле ҡунағыбыҙ булырһығыҙ. Шул уҡ ваҡытта ана теге ишек төбөндә торған, бая ғына шунан оторо һөрәнләп, барыбыҙ өсөн дә оло хөрмәтле ОБХСС-тың, милицияның һәм минең өҫкә бысраҡ яуҙырып маташыусы аңһыҙ граждан ды ла мин табыныбыҙға кеселекле саҡырам: кил, аңһыҙ граждан, рәхим ит, хөрмәтле ҡунағым бул. Һин бит үҙеңдең бысраҡ яланды керһеҙ ОБХСС-ҡа, миңә һәм хөрмәтле милицияға ныҡлап уйлап еткермәйенсә яңылыш яҡтың, шулай бит? Ҡыйын булһа ла, шуны кире алырға, беҙҙән ғәфү үтенергә тура килер һиңә, ҡәҙерлем.

Милиционер үҙ сиратында ишек төбөндәгенең дә документын тикшереп, «яла» тураһында ныҡлап төпсөндө.

-- ОБХСС йоҡлай, милиция ҡарамай, ә баҙарҙа хеҙмәтсәндәрҙең кеҫәһен ҡомаҡ кимерә, тип әйттем, бына шул.

---

[82] Идарият — администрация.

-- Ҡәҙерле старшина иптәш, мин ул аңһыҙ граждандың ерлекһеҙ фәлсәфәһенә инде иғтибар итмәйем, кисерәм. *Ләкин бына был,* — Саркисян алтын балдаҡтары йылҡылдаған ҡулы менән залды әйләндереп күрһәтте, — мөхтәрәм вә ғәзиз граждандар алдында ундай нахаҡ яланы ҡайһылай күтәрермен?.. Шуға күрә бөтәһенең күҙе алдында минең кем икәнлегемде, рәсми рәүештә, бына был ҡануни документтарҙан тикшереп ҡарауығыҙҙы һәм дөрөҫләүегеҙҙе үтенәм. Бына минең тыуған илем ҡояшлы Абхазияла «Казбек» исемле миллионер колхоз ағзаһы булып тороуымдың, һеҙҙең ҡалала шул колхоздың тулы хоҡуҡлы вәкиле булып эшләүемдең танытмаһы. Эйе, минең эш социалистик баҙарҙағы намыҫлы сауҙа менән бәйле: миллионер колхозыбыҙҙың егәрле ағзалары ҡайнар тирҙәрен түгеп үҫтергән хеҙмәт емештәребеҙҙе һалҡын Урал киңлектәренә килтерәм дә колхозыбыҙ билдәләгән кооператив хаҡҡа һатам. Ҡалағыҙҙың хеҙмәтсәндәрҙе туҡландырыу төйәктәрен — шул иҫәптән ошо үҙегеҙ ултырған зиннәтле вә һиммәтле ресторанды *ла* — ожмах емештәре менән тәьмин итәм: табынығыҙҙағы нәҡ ҡояштай балҡып янған әфлисундар, лимондар ана шул мин фәҡирегеҙҙең хеҙмәтенең һөҙөмтәһе. Бына минең тыуған колхозым ҡырҙарында бала саҡтан уҡ ҡайнар тирҙәремде түгеп эшләүемде баһалап, дәүләтебеҙ биргән оло награда — Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кенәгәһе. Бына минең үҙемдең .дә йортом алдында үҙ көсөмдө һалып үҫтергән еләк-емеш баҡсам барлығын, унда өлгөргән байлыҡтарҙы киң Ватаннабыҙҙың теләһә ҡайһы мөйөшөнә *лә* илтеп һатырға хоҡуғым барлығын дөрөҫләгән танытма. Эйе, хәлле йәшәйем мин, әммә был минең хәләл хеҙмәтем менән яуланған хәллелек — бөтә совет халҡы быға хоҡуҡлы! Анау ишек төбөндә ғауғалаған, аң кимәле түбәнерәк граждан иһә минең алтын тештәремә, алтын балдаҡтарыма иғтибар итте, уларҙы *ла* ниндәйҙер шик аҫтына алырға маташты. *Ләкин* был аҫыл ҡашлы йөҙөктәрҙең һәр береһенең оҙон ғаилә тарихы бар — улар миңә бер-нисә быуын ата-бабамдың изге мираҫы булып килгән һәм минән дә балаларыма, ейәндәремә ҡалыр. Ә алтын тештәр мәсьәләһенә ҡағылһаҡ, гигиена һәм һаулыҡ өсөн әһәмиәтле ул «ҡоролма»ны (уның нәҡ шулай икәнен был аңһыҙыраҡ граждан үҙе ҡартая башлағас ҡына белер!) һәр бер совет кешеһе теләгән бер стоматология үҙәгендә, тейешле хаҡын түләп, әлбиттә, сүкетеп ҡуйҙырта ала. Теләһәм, шау алтын ялатылған «Волга» һатып алырмын — хеҙмәт аҡсаларым хәләл! Тағы *ла* башҡа документтар кәрәкме?

-- Аңлашылды, — тине милиционер һәм ҡаршы яҡҡа төбәлде. — Граждан, насар ҡылығығыҙ өсөн ғәфү үтенегеҙ хәҙер үк.

-- Үтенмәһәм?

—Протокол төҙөргә мәжбүр булам. -- Һуңғы мәғлүмәт дәғүәсене шомландырҙы.

-- Протокол кәрәкмәй, — тине Саркисян, — беҙ унһыҙ ҙа табырбыҙ уртаҡ телде — икебеҙ ҙә саф хеҙмәт кешеләре бит.

-- Ярай, — тине кинәт кенә шиңеп төшкән, ҡолаҡ төптәренәсә ҡыҙарынған «аңһыҙ граждан», — ғәфү үтенәм.

-- Мин дә ғәфү итәм. Бына шулай, хөрмәтлем, икенсе юлы уйлабыраҡ һөйләрһең. Ә хәҙер кил, ултыр, һыйлан — ҡәҙерле ҡунағым бул! — Ҡәнәғәт

йылмайған Саркисяндың мөһәбәт һыны күптәрҙең күңелен болартып, еңеүенән олпатланған яғымлы тауышы ҡолаҡтарға яғылды. — Бына шулай ул, иптәштәр! Донъя-ғәләм белеп торһон! Саркисян яһил АҠШ президенты түгел – һалҡын һуғыш ҡабыҙмай. Саркисян менән һәр саҡта ла теләгән бер мәсьәлә буйынса ла йәтеш уртаҡ тел табырға, һыйышып йәшәргә була! — Кемдәрҙер ҡысҡырып көлдө, кемдәрҙер ҡул шапылдатты — ҡабат алсаҡ музыка, күңелле шау-шоу ҡупты. Шаңғыртып танго таҫмаһы тарттырғайнылар, ҡәнәғәтле йылмайған Саркисян егеттәрсә Дилбәр алдына баҫты ла ҡушарлап бейергә ҡупшылыҡлы үтенде. Дилбәр ризалыҡ белдергәйне, йәһәт «ҡороҡлап» та алды, әйләнеп-тулғанған бейеүселәр араһынан талғын ғына өйөрөлтөп алып китте. Үҙен бында атлыҡтырып килтергән, йөрәгендә төйнәлеп торған һорауын бирергә теләгәйне Дилбәр.

-- О Дилбәр һылыу, һеҙҙең менән бейеү бәхете миңә лә насип булды! — тине Саркисян.

-- Яҡынданыраҡ таныша торайыҡ, тинем — бергә эшләйәсәкбеҙ бит.

-- Аңлабыраҡ етмәйем, ҡәҙерле Дилбәр һылыу.

-- Ниңә, Йыһандар Хәкимуллин ағайым һеҙгә әйтмәнеме ни? Ерәнсә-сәсәндең төҫ-ҡиәфәтен бергәләшеп тергеҙеү хаҡында һүҙ бара. «Төп нөсхә» ҡасан ҡул араһына керер?

— Нимә?

—Сәсәндең...

Саркисян иҫенә килде:

-- О да! Әлбиттә, әлбиттә! Минең юлбаҫарҙар, — о, пардон! — юлбарыҫтар унда ҡаҙыныу эштәре башларға әҙер. Арба юлы төшөү менән...

-- Ислам дине фанатигының баш һөйәге ниңә кәрәк булды һеҙгә? — Дилбәр «Сулико» көйө яратыусының күҙенә тура баҡты.

-- Кем әйтә ислам дине тип?

-- Профессор Хәкимуллин, мәҫәлән. Һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Саркисян дүрткел мыйығын һикертеп көлдө:

-- Бынbackup һы беҙҙең файҙаға. Улар шулай әйтә торһон, ә беҙ эште ослайыҡ. Ҡәҙеремде белһәгеҙ ине, ҡәҙерле Дилбәр һылыу, мин бит һеҙҙең ҡулға алыҫ мәжүсилек осоро ҡомартҡыһын тоттортам!

-- Уның улай икәнлеген ни рәүешле билдәләнегеҙ?

-- Бик ябай. Әгәр ул уба һеҙ әйткәнсә ислам дине фанатигыныҡы булһа, әүлиә зираты тип атарҙар ине уны, шулаймы? Бынһы бер. Ә икенсенән, ислам осоро булһа, уның һөйөклө әбекәйе Бәндәбикә, ҡатын-ҡыҙ енесе булараҡ (ислам дине ҡатын-ҡыҙҙы кешегә һанамай!), бөтөнләй ҙә хәтергә алынмаҫ ине. Һәм «әүлиә зираты» янынан бөгөнгәсә Мөхәммәт пәйғәмбәр ҡарғалары өҙөлмәҫ ине.

-- Һәр йыл һайын, ҡара ер асылыу менән, фанатиктар уратып ала, тип яҙалар ҙаһа.

-- Дөрөҫ. Ләкин *ниндәй* фанатиктар, тип һорар инем һеҙҙән. Уларҙың унда нимә һөйләгәнен, уҡығанын тыңлағанығыҙ бармы?

-- Ҡөрьән сүрәләре сығаларҙыр, моғайын.

-- Ха-ха-ха, һәр мәктәпкә дәрес итеп индерергә ине ул «сүрә»ләрҙе —

Ерәнсә-сәсәндең үткер көләмәстәрен!

Ҡыҙ пырхылдап көлдө лә, ғәфү үтенеп, уҙамандан ысҡынды — инде Йыһандар ағаһын күрәһе бар. Ысынлап та, ылғый көлкө: кисә генә ул уға Ерәнсә-сәсәндең ислам диненә тиклемге шәхес икәнлеген дәлилләр өсөн күпме уҡ һәм һөңгөләрҙе һындырҙы, ә дәлил тигәнең шундай яп-ябай ҙаһа!

Мәжлес ҡоро тарала башлағайны инде. Ахыры, хушлашыу һүҙен әйтеп, юл аяғын күтәреп, хужабикә үҙе лә Басир, Дилбәрҙең ҡоронда ҡуҙғалды:

-- Әллә ниңә башым да сатнап тора бөгөн, һеҙҙең менәнерәк эрәүәйем әле, — тине ул. — Эш бүлмәмә инеп, саҡ ҡына көтөп тороғоҙ, балаҡайҙарым: ҡайһы бер нәмәләрҙе барлап киләйем.

-- Дилбәр-Диләфрүз туташ, үҙегеҙҙе небоскребығыҙғаса оҙатып ҡуйыуҙы азаматлыҡ бурысым һанайым бөгөн! — Әскәр Ҡотлоевтың алсаҡ тауышы. Дилбәрҙе албырғатып, апаһы яуапланы:

-- Юҡ инде, бөгөн беҙгә азаматтар кәрәкмәй. Күрәһегеҙ бит: ике яғынан икебеҙ — ташҡаялай йәнуҙаҡтар[83] булғанбыҙ.

-- Улайһа мин өсөгөҙҙө бергә һаҡлап барайым.

-- Үҙемде генә айырым һаҡламағас, кәрәкмәй! — Ҡыҙ шулай тигән булды.

-- Әсҡәрчик, хуш! Әйҙәгеҙ, ҡәҙерле туғандарым, иң яҡшыһы — икегеҙҙе үҙем йәнуҙаҡлайым.

Төркөм-төркөм ыңғайлаған ҡунаҡтарҙы урамғаса оҙата биреп барҙылар.

-- Эй! Ҡайҙа пропал Ҡотлоев? — Алдағы төркөм араһынан, әйләнеп ҡарап, һөрәнләне Саркисян.

-- Мин бында. Әллә бриллианттарыңды талайҙармы?

-- Кацо, мин ундайҙарҙың үҙҙәрен эт итеп талармын. Һуң булмаҫ борон, ҡушыл беҙҙең өйөргә! Их, Остап Бендер ҡорҙашым әйткән Рио де Жанейролағы кеүек, һемерек килеш руль тотоп ултырып булһа ине! Был бәхетһеҙ баштарға такси аңдырға ҡала.

Әсҡәрҙе һынабыраҡ:

-- Ә мин һеҙҙе атайығыҙҙың «Волга»һында килгән икән тип торам, — тигән булды Мөхлисә.

-- Атайҙыҡын ат типһен, шиғриәтебеҙҙең ғорурлығы Абуталип-Буталып әйтмешләй. Әйткәндәй, ул үҙе ҡайҙа әле?

-- Әллә ҡасан ялтыратты табанын. Ҡырҡ градуслыһы булмағас ни...

«Кавказ кешеһе» оло юлға йүгерҙе:

-- Алло, такси! Беҙгә кәрәк много-много такси!

-- Ярай, йәнуҙаҡ һанамағас, хушығыҙ. — Ҡотлоев төркөмдән бүленде. — Йән дуҫтарым һау булһын — хәҙер йә «Жигули»йын, йә «Волга»һын сығартам аҙбарҙарынан. — Телефонға йүнәлде.

Телефон-автомат өшәләгендә бәхет һынап торғанда, бүректәрен баҫып кейеп, пальто яғаларын торғоҙоп, ҡултыҡ аҫтарына ғәләмәт ауыр төргәктәр ҡыҫтырып, ашыҡ-бошоҡ төпкә ҡарай үтеүсе ике әҙмәүер йәлеп итте иғтибарҙы, Әсҡәр уларҙы бер ҡарауҙан таныны. Телефонда һандар йыйыуҙан туҡтап, терһәк

---

[83] Йәнуҙаҡ — телохранитель.

менән ипләп кенә ишекте тыштка этәреп тыңланы – Саркисян:

-- Сереп бөткән ата-бабаларың әйтмешләй, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы шул: «һары ҡабаҡ» кисекмәҫтән уҫка керергә тейеш.

-- Ниңә ҡабаҡ тиеп мәсхәрәләйһең?

-- Табак тиергәме инде, алайһа?

-- Арыҫлан менгән Урал батыр һыны ул, шау-алтындан!

-- Шыш! Телеңде ҡыҫҡартырмын! Мин әйткәнсә лыҡылда! Юғиһә, һиңә, урыҫ туғандарың әйткәнсә, крышка! — тине иптәше.

-- Туҡта әле, ҡулдан шыуып төшөп бара быныһы, шайтан алғыры. Саҡ ҡына ипләп алайым. — Өшәләк артына боҫоп, төргәктәрҙең ҡағыҙын ҡыштырлаттылар. — Уф! Бысағымамы ни был газ баллондары, Саркисян? – Абуталип Сиҙәмленең ярым иҫерек тауышы.

-- Күпте белһәң, тиҙ ҡартайырһың, тип тә әйткән аҡыллы ата-бабаларың. Шуны әшкәрт һин миңә: *тигель* ниңә тотҡарлана?

-- Яубаҫаров еҙнәйемдән тора бит: заводынан ҡайтартмай һаман.

-- Әгәр мин әйткән ваҡытҡа килтереп еткермәһә, еҙнәйеңә лә крышка. Заводынан ул ағыҙған шыйыҡлыҡҡа тонсоғоп үлгән Ағиҙел алабуғалары һәм шулар менән ҡуша «теге донъя»ға эрәүгән балыҡсы ағай үҙе һағыныслы сәләмен күндерә, тиң. Еҙнәң аҫтына шәреләнеп керәсәк был мәғлүмәттәр йәмғеһе бергә тупланып, конвертҡа һалынып, адресы яҙылып, тейешле сәғәттә тейешле урынға тапшырылыуҙы көтөп кенә ята, тиң. Әйткәндәй, ул конвертҡа Яубаҫаров еҙнәйеңдең заманында Булаттимер Шаһибәрәков өҫтөнән яҙған шанлы шикәйәтнамәһенән теүәл күсермә лә тәңкләп теркәлгән!

«Бына һеҙгә кәрәкһә, был ярым әрмән, ярым грузин тигәнебеҙ үҙебеҙҙең әсәй телендә лә үҙебеҙҙе һатып ебәрерлек лыҡылдай белә икән дәһә!» — тип баш сайҡаны Әсҡәр Ҡотлоев, йәшерен мәғәнәлә барған әңгәмәне аңлап еткерә алмай.

—Тәпәйлә! Ошо ығы-зығылы мәлдә кереп ҡалайыҡ! — тине Саркисян. Әсҡәрҙең оторо ғәжәпләнеүенә ҡаршы, «хужалыҡ ҡоролмалары» тип тамғаланған бикле ишекте еңел генә астылар ҙа мәмерйәнең төпкөлөнә үттеләр. Бына һеҙгә кәрәкһә, такси тоторға йүгерешкән ҡунаҡтар!.. Ниңә әйләнеп килгәндәр, ниндәй «һары ҡабаҡ», ниңә газ баллондары? Һәм ниндәй *тигель*, ниндәй металл иретергә уйлайҙар?..

—Абуталип-Буталып! Асам-Кисәм! Ҡайҙа олаҡтығыҙ? — тип һөрәнләне егет, тик тегеләр эҙҙәрен һепергәйне. Саркисяндың йәйен-ҡышын «Ярлауыҡ»ты дефицит мал — субфруктылар менән тәьмин итеүен, үҙ сиратында, Мөхлисә ханымдың махсус рөхсәте буйынса, баҙарға сығарасаҡ әрйә-әрйә әфлисун һәм лимондарын да тап ошонда — ресторандың бер тигеҙ һауалы мәмерйә баҙында һаҡлауын белә ине. Әммә, иҫерек Абуталиптың Урал батырҙы телгә алыуын ғәҙәти шапырыныуы итеп һанаһа ла, әфлисун маһирының «һары ҡабаҡ» менән эш итергә тотоноуын башына һыйҙырманы -- кемгә кәрәк булды икән ул ашамлыҡ? Моғайын, әфлисунлы баҙға инеп, әрмән коньягы эсергә киткәндәрҙер. Тамаҡ айыралар!.. — Әсҡәр ҡыҙышып арттарынан эҙәрләне, мәгәр әшнәләрҙән елдәр иҫкәйне. Ҡайҙа юҫыҡларға белмәй, тирә-яғын байҡанды -- төрлө тарафҡа тупиктар һуҡыр эсәкләнеп һуҙылған. Һыра мискәләре, әрйәләр, морожный

һандыҡтары аунап ятҡан, ярым-йорто яҡтыртылған тоннелдән бара торғас, бетонлы юл өҙөлөп, аяҡ аҫты көрпәкләнеп, дөм-ҡараңғы тәбиғи мәмерйә алҡымына тарыҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды егет. Һауаһы иркенәйеп, һалҡынайып, һиллек баҫырауланы, ҡайҙандыр секунд арауығы менән тамған япа-яңғыҙ тамсының ғына мәңгелекте һанауы ишетелә. Кеҫәһенән алып ут тоҡандырғысты саҡты, мәмерйәгә әсе бензин аңҡыны. Тау ҡуйыны дәррәү яҡтырып киңәйҙе лә күләгәләр уйнаны, ә түшәме күҙ етмәҫ бейек ине. Ҡайҙа олағып өлгөрҙө был Абуталип менән Армен?!. Зәғиф утты башы осонда яҡтыртып бара торғас, нәҙек һуҡмаҡ бер-нисәгә тармаҡланып, йыландарҙай төрлө яҡҡа тартылды. Ҡайһыһынан олаҡты теге икәү?.. Ҡотһоҙ юлға тарыуҙан ытырғанып, боролорға иткәйне, ҡаялағы ҡып-ҡыҙыл, түп-түңәрәк нәмәгә (ҡабаҡ?..) иғтибар итте: бабаларҙың ҡыҙыл таштан тупаҫ юнып эшләнгән хоҙай-балбал һыны, әйтерһең, сал быуаттар төпкөлөнән текләне...

Һындың йыуантыҡ муйын киртләсенән әкрен генә биткә бәргән һауа ағымы Әскәрҙе һиҫкәндерҙе: тимәк, таш баба йәшерен мәғәрәгә инеү юлын ҡаплап тора, шунда һаҡҡа ҡуйылған. Һауа ағымының көсөнә ҡарағанда, унда ла оло мәғәрә[84] булырға тейеш. Егет ярыҡҡа ут остоғон һоноборaҡ байҡағайны, уғата ҡойолоп төштө: төпкөлдәге таш бүкәндә күҙ сағылтҡыс алтын арыҫлан тештәрен ыржайтып көлә... Был ни хәл? Әллә, ысынлап та, Урал батырҙың менеп йөрөгән алтын арыҫланымы — Урал батырҙың Аҫкы Донъяға төшөп сыҡҡан юлы тип тә һөйләйҙәр бит мәмерйәне...

Бензин янып бөткәнгә тиклем юлға сығып ҡалырға, тип, Әскәр кире боролдо. Ялпылдаҡ уты һүнеп, дөм-ҡараңғыла ҡалды. Йөрәге ларҫ-лөрҫ тибеп, саҡ барып тапты ишекле үткелекте. Мәмерйәне иркенләп килеп тикшерергә кәрәктер: урындағы бешмәгән ғалимдарҙы бында, моғайын, ҡыҙыҡлы әкәмәт көтә. Тик төш булманымы был?.. Тештәрен ыржайтып көлгән арыҫлан күреүенә икеләнә лә башланы.

Өҙөк-өҙөк мөңгөрләүҙәр ишетелде артында: кеҫә фонарҙарын баҙлатып, ике әшнә яҡынлап килә имеш. Саркисян менән Сиҙәмле икәнлегенә шикләнмәй, күрмәҫтәре элек ситкә тайпылды, ишек яңағы артынараҡ ышыҡланып көттө. Тамаҡ айырған дуҫтарын тертләтергә уйланы:

—Стоп! Һеҙ кемдәр, ниңә хужалыҡ ҡоролмалары араһында темеҫкенеп йөрөйһөгөҙ?!

Бәндәләр ҡырт-туҡтаны, ҡаушаны, әммә уларға ҡарағанда ла Әскәр үҙе нык аптыраны: ҡаршыһында, ниндәйҙер юлдашы менән, бая ғына тирмәле залдан сығып һыҙған Мыйыҡ һерәйеп тора!

-- Беҙ ошонда эшләйбеҙ, ә һеҙ үҙегеҙ кем булаһығыҙ? — тигән булды Мыйыҡ, уғата шиккә һалып. Бына һеҙгә «ирәүән йән»! Тимәк, ысынлап та, жулик!.. Баҙҙан араҡы йә әфлисун сәлдерергә йөрөйҙәр! Мыйыҡты күлдәк иҙеүенән бөрөп алды Ҡотлоев:

-- Ҡайҙа документтарығыҙ?!

-- Һеҙ үҙегеҙ кем әле?! — Мыйыҡ та түштән алды. Әскәр ишек яңағындағы

---

[84] Мәғәрә — ер аҫты ҡыуышлығы.

ҡыҙыл төймәгә баҫҡайны, сирена үкереп-олоно, шул ыңғайҙа ул Мыйыҡты тибеп осорҙо.

-- Алйот! — тине Мыйыҡ, тәкмәсләгән еренән тороп, мәгәр Әскәр ҙә һә тигәнсе ҡапланып барып ятты — Мыйыҡбайҙың әшнәһе йәһәтләне. Сиренаны олоуҙан туҡтатҡан Мыйыҡ, Әскәрҙе тартып торғоҙоп, тынысландырырға итте, тик шунда уҡ төрлө яҡлап ғауғаға эркелгән тәртип һаҡсылары ҡороғонда ҡалдылар.

-- Тотоғоҙ ике бурҙы! — тип һөрәнләне Әскәр.

-- Иптәштәр, яңылышлыҡ! Беҙ сығып килә инек... — ти башлағайны Мыйыҡтың әшнәһе, тиҙ үк яптылар ауыҙын:

-- Ялған! Үҙ күҙебеҙ менән күрҙек: бына был егетте яңағына һалып осорҙо! — тип киҫәтте бер агай-эне. Тәртип һағы шаһиттарҙың исемдәрен яҙып алырға йыйынғас, көлләһө борсаҡтай һибелеп ситкә сәсрәне. Милиционер был өсәүҙе сығыу яғына ыңғайлатты.

-- Атлағыҙ, тикшереп асыҡларбыҙ.

-- Ә ниңә минән һорамайһығыҙ? Мин бит зыян күреүсе! — тип ажарланды Әскәр.

—Тәпәйләгеҙ, зыян күреүсе!

Фантазияһы харап ҡуҙғалған Әскәр, халыҡ милкен ҡурсалау, бурҙарға ҡаршы сая көрәшеү тураһында ялҡынлы телмәр һөйләп, милиция башлығының башын шаңҡытырға йыйынығыраҡ барһа ла, уға әллә ни иғтибар итмәнеләр: арылы-биреле һораштырҙылар ҙа башы тартҡан яҡҡа ыңғайлаттылар. Инде угрозыск башлығы алдында бүлмәлә хәрбиҙәрсә һынын ҡатырып Мыйыҡ һерәйеп тора — майорҙың шелтәләрен кисерә ине:

-- Эште боҙа яҙҙығыҙ, лейтенант!

-- Ғәйеплемен, майор иптәш. Көтөлмәгән хәл ҡупты. Хәйерһеҙ егет шундай етеҙ, сая ла булып сыҡты.

-- Һеҙ ҡуптарған ул шау-шоуҙан «ҡомаҡ»тар өркмәһен, тим. -- «Гитара» операцияһы менән эштәр нисек бара әле?

-- Бына, майор иптәш! — Йөҙө Айҙай балҡыған Мыйыҡ алтын авторучка һалды өҫтәлгә. Майорҙың төҫө боҙолдо:

-- Лейтенант, ҡайҙан алдығыҙ быны — студент ҡыҙҙың оҫтаханаһынанмы?

-- Юҡ. Был табыш — мәмерйәнән.

-- Лейтенант, һеҙ егетте таланығыҙ?!

-- Быныһын дөрөҫләй алмайым, майор иптәш. Үҙҡурсалыу йәһәтенән уны тәкмәстереүебеҙ хаҡ, әммә авторучканы мин табып алдым. Хужаһы йығылған ерҙән.

— Һем. Табыш, әлбиттә, ҡыҙыҡлы, тик хужаһына ҡайтарырға кәрәк булыр.

-- Был юлы мин һеҙгә, майор иптәш, юғалдыҡ әйберҙе табып алып килтереп тапшырыусы сифатында мөрәжәғәт итәм. Табылдыҡтар кенәгәһенә теркәтегеҙ, ә хужаһы, моғайын, беҙҙең «гитара» операцияһы тамамланған изге сәғәткәсә кисереп көтөр.

-- Хуплайым. Операция дауам ителә.

Баш ҡалала ойлаған йәшерен табыш әһелдәре — алтын менән эш ҡылыусы шайка эҙенә төшөү әмәле ана шулай үҙ сиратында үҙ юлынан бара ине.

## ЕГЕРМЕ БЕРЕНСЕ СӘХИФӘ

Замананың аҡ ҡанатлы «сәмреғош»о аҡ болоттар араһынан талғын ғына бәүелә, мотор геүләүе Моталға аҡ сәскәле ҡарабойҙай баҫыуында бал ҡорттары тыжылдауын хәтерләтә. Тиҫтәләгән пассажирҙарын, аҫыл сәскә һеркәләре шикелле, бауырына ҡармап, аҡ самолет, әйтерһең дә, Уралдағы иң дәү умарталыҡҡа — бутал ҡойоусылар ҡалаһы Иҙелбашҡа талпына. Геү, геү, геү, гөжжж... Һәм шуныһы ғәжәйеп: самолетта осҡан саҡта әҙәм балаһы тирә-яғына ныҕыраҡ ҡаранып уйлана — ул унда түп-түңәрәк алмалай Ер шарына ғына түгел, ә үҙенең ғүмеренә лә бойондороҡһоҙ бағыу мөмкинлеген ала...

Күпме генә тырышһа ла, йөрәгенең һыҙлауын баҫа алмай: гүргә керер өсөн генә ҡайтып күренгән улы, ҡайғыһынан ҡара көйгән Йыһаниә... Ниңә былай килеп сыҡты уларҙың ғүмер ағышы, яҙмышы? Булғандарҙың бөтәһен оноторға, хәтирәләрен юйырға башын алып сығып китте түгелме Мотал? Әммә үҙ-үҙеңдән ҡасып ҡотолоп буламы ни?..

Арттағы өс креслола юлдаштары телләшә. Йәш егет менән ҡыҙ, ялҡынланып, үҙ көндәлек ғәмдәре — дискотека һәм «джинсы»лар тураһында эс серҙәрен бушата, яндарындағы йоҡомһораған сал ҡартлас ара-тирә генә һүҙ ҡыҫтырғылай.

-- Азамат, һуңғы ваҡытта ниндәй романдар уҡының? — тине ҡыҙ, көтмәгәндә, һүҙ ағышын үҙгәртеп.

-- Һин, Бибиғәйшә, минең башты бутама.

-- Шулай ҙа әйт әле.

-- Бынамын тигән ун ете сериялы роман менән мауыҡтым мин.

-- Бәй, хәҙер китапты ла «серия»лап сығара башланылармы ни? — тип аптыраны ҡарт кеше.

-- Шулай, олатайым.

-- Вәт һантый, — ҡыҙ көлдө, — ни исемле әҫәр ул, авторы кем?

-- Ниңә ауыҙ йыраһың? «Яҙҙың ун ете мәле» тигән шаҡ-ҡатырғыс әҫәр, яҙыусыһы — Штирлиц.

-- Бәй, йүкәлә икән сәтләүек... — Ап-аҡ кәзә һаҡалын келт-келт һелкетеп, кеткелдәне ҡартлас.

-- Сабаталы заманыңдың йүкә-мүкәләрен ҡыҫтырмай тор, олатайым.

-- Ай Азамат, Азамат, Штирлицтың әҫәре, тиһең инде?

-- Шулай. Ул Штирлиц барҙа һинең Пушкиндарың ары торһон.

-- Штирлицты уҡыныңмы, әллә тексәйеп үткәрҙеңме? — тип ирештерҙе Бибиғәйшә.

-- Барыбер түгелме ни?

-- Барыбер булһа — тәҙрәнән, йәки мөрйәнән йөрөрҙәр ине. Һин, Азамат, бер ҙә китап уҡымайһың.

-- Зәңгәр экран барҙа ниңә уҡырға? Бигерәк тә төҫләһе шаңғырлап торғанда.

-- Яҙыусы Юлиан Семеновты уның әҫәренең геройы Штирлиц менән бутайһың.

-- Федор Михайлович Достоевскийҙы ла Карамазов тип атайҙыр әле минең ейәнем! — Ҡартлас, йоҡоһо ҡасып, ҡалҡынып уҡ ултырҙы.

-- Һин, олатайым, үҙеңдең Достоевскийыңды миңә тағып маташма. Киң халыҡ массалары өнәмәй уны.

— Һорау бирергә рөхсәт ит: ни өсөн?

— Сөнки һинең ул Достоевскийың массалар өсөн телекс эшләй белмәй. «Бер туған Карамазовтар»ының кадрҙары телевизор экранына һыймайынса йөҙәтте. «Һуғыш һәм именлег»е менән дә тап шулай. Эпопея тигәс тә, ниңә инде киң форматлы итергә? Бик тә ҡулың ҡысытһа, вертикалгә киңәйт уны! Етмәһә, ул ятраҡан яҙыусыңдың эсендәге дарыһы ла бүҫкәргән: ике һәм дүрт сериянан артығыраҡ тартырға етмәй дарманы. Тарамышы шыйыҡ шул. Юҡ, беҙгә Штирлицтар кәрәк!

Ҡыҙ шарҡылдап көлдө, ҡарт йомшаҡ ҡына өндәште:

-- Ейәнем, үҙебеҙҙең башҡорт авторҙарынан кемде беләһең?

-- Фи! — Егет үҙе Моталға күренмәй ине, ләкин ул, моғайын, Моталдың байтаҡ ҡәләмдәштәрен бөтөрөп ҡул һелтәне. — Әмир Әбдрәзаҡовты. Былтырмы, өсөнсө йылмы шунда, «Ҡылсыҡбай» тигән телексын күрһәттеләр. Әйткәндәй, хатта ул да һинең һөйөклө Достоевскийыңдан уҙҙырған — биш серияға тиклем тартҡан. Әммә Штирлицҡа етмәй...

Мотал үҙенең яҙыусы булып йөрөүенән үртәлеп көлөп ҡуйҙы: уны кем белһен инде — әлегәсә бер китабы ла «телекс» итеп экранлаштырылмаған...

-- Ай Азамат, Азамат, — тине ҡыҙ, — һинең менән бергә булһаҡ, кәмит кәрәкмәй икән! Үҙең -- аҡсаһыҙ театр!

-- Минең ейән шулай ул: аҡсаны ла, һүҙҙе лә түшәмдән генә һурып ала! — Ҡарт көлдө. — Магаданда ике йыл мәғдән йыуып, шөйлә шымарып ҡайтты. Алтын араһында һәрмәнгәнендә мәшһүр Николай Островскийҙың: «Ғүмер кешегә бер тапҡыр ғына бирелә...» — тигән изге һүҙҙәрен дә күңеленән йыуып ташлағандыр әле ул, моғайын.

-- Яңылышаһың, олатайым. Ғүмер кешегә бер тапҡыр ғына бирелгәнен ныҡ аңлап, шуның ҡәҙерен белеп йәшәргә өйрәндем мин. Дөрөҫ, алыҫ Магадан яҡтары ла хыялыйҙар менән тулы, тик мин ундайҙарҙан түгел.

-- Ҡыҙыҡ, ниндәй хыялыйҙар ул?

-- Ҡыҙыҡ шул. Мәҫәлән, унда утыҙынсы йылдарҙа «зэк»тарға тип һалынған иҫке бараҡтарҙың береһенең стенаһындағы мәрмәр таҡтаташҡа алтын хәрефтәр менән бер хыялыйҙың исеме яҙылған. Һуғыш ваҡытында шул ыристан-хыялый, үҙен конвойлап илткән саҡта мөғжизәгә юлығып, тотҡонлоҡтан ысҡына ла бер юлы тоҡ-тоҡ саф алтын тейәлгән каруандың тулы хужаһы булып ала. Йәғни алтын илтеүсе отрядты бандиттар ҡырып ташлағас, алтын ылау башында ыристан-хыялый тороп ҡалған. Эйе, хыялый! Сөнки һаҡсылары үлтерелгән. Дүрт яғы ла ҡибла. Шунан һуң ни эшләй ул, тиһегеҙме? Бандиттар менән атышырға

тотона, мең бәләләр ашып ҡалаға барып керә. Арты менән килеп ингән бәхетенән баш тартып, ана шулай алтынды ҡаҙна келәтенә тапшыра, ә үҙен ҡабат конвой аҫтына алдырта. Шунан һуң үҙ теләге менән фронтҡа китеп башын һала. Хыялыйҙың хыялыйы, шыр тиле...

—Ай-буй, ейәнем, әллә һин төптө башҡаса эшләр инеңме?

-- Ул саҡта мин ни эшләр инем икән — унынһын белмәйем. Әммә үҙемдең заманымда бәхетле йәшәргә теләйем.

-- Ни була һуң ул бәхет? Ғүмер кешегә бер генә тапҡыр бирелә...

Егеттең, йөрәкһеүҙән, тауышы ҡалтыраны:

—Эйе, ғүмер кешегә бер генә тапҡыр бирелә һәм уны шундайын да аҙаҡ үкенмәҫлек итеп йәшәргә кәрәк: һаҡлыҡ кассалағы кенәгәңдә хисапһыҙ күп нолдәр теркәп яҙылған түп-түңәрәк суммаң, стеналарына буталлы көп балҡытылған, ҡиммәтле келәмдәр эленгән, иҙәненә арыҫлан һәм юлбарыҫ тиреләре түшәлгән, ете диңгеҙ аръяғынан килтерткән гарнитурҙар менән йыһазландырылған кәм тигәңдә дүрт бүлмәле затлы фатирың, ике һыуыткысың, төҫлө телевизорың, япон транзисторҙарың һәм магнитофоның, ҡара-йылтыр «Волга»ң, ауыҙыңда шау-алтын тештәрең һәм алтын билле сигараң, кеҫәңдә алтын портсигарың, өҫтөңдә көрән дубленкаң һәм эргәңдә шәшке тунлы, алтын алҡалы ҡатының, алтын миҙаллы бульдогың йә немец овчаркаң булһын. Һәм, әлбиттә, ҡаланың иң ҙур аҙыҡ-түлек, кейем-һалым базаларында йә яҡын туғаның, йә ҡоҙа-ҡоҙағыйың, йә алтындай танышың ҡолас килеп эшләһен. Ашағаныңда өҫтәлеңдәге алтын приборҙарҙағы ҡуйы һурпа өҫтөндә Ҡояш кеүек түп-түңәрәк алтын өрөләр йөҙһөн!

Хас та серек капитализм һулышы тойоп ытырғаныуҙан креслоһына һеңешә барған Мотал, түҙмәй, ҡайырылып ҡараны:

—Ҡайһындай ҙа әҙәпһеҙлек! Оят түгелме һеҙгә? Олатай һәм атайҙарығыҙҙы илаһи изге көрәшкә, изге эштәргә рухландырған ҡанатлы һүҙҙәрҙе боҙаһығыҙ!

—Әһә, ҡолағығыҙ сос икән әле, ағаййән! Островский һүҙҙәрен беҙ һис кенә лә боҙмайбыҙ, ә замана, бегөнгө көн зауығына яраҡлы ҡулланабыҙ. Уға ҡалһа, һеҙ әйткән ул беҙҙең изге олатайҙар ни өсөн революция яһаған, үҙебеҙҙең эшсе-крәҫтиән власын урынлаштырған? Бөгөн беҙ, уларҙың эшсе-крәҫтиән ейәндәре һәм ейәнсәрҙәре, зерә бәхетле йәшәһен өсөн түгелме ни? Һәм беҙ ул бәхетте ҡасандырғы яҡты киләсәктә түгел, бөгөн алырға теләйбеҙ!

—Беҙ-беҙ тип шапырынма, үҙ исемеңдән һөйлә! — тине олатаһы.

-- Дөрөҫ, һин ул боҙоҡ фәлсәфәңә бөтәбеҙҙе лә ҡыҫтырма! —Бибиғәйшә турҫайҙы. — Алыҫ Көнсығыштан да йә ҡыуылып, йә ҡасып ҡайтҡанһыңдыр әле.

-- Ярай, һеҙ шыр-тиле хыялыйҙар булып ҡала бирегеҙ, ә мин өс көнлөк фани донъяның рәхәтен күреп кинәнәйем.

-- Ай Азамат, Азамат, хас та бәлеш төбөнә яҫҡанған муллаларҙай һөйләйһең! – тине ҡартлас. Ҡыҙ кеше лә үпкәләгәндәй итте:

-- Магадандан боҙолоп ҡайтыуы етмәгән, беҙҙең удар тимер юл төҙөлөшөнә китеп барған була бит әле үҙе.

-- Хәсрәт! Оҙон аҡса артынан ҡыуып, аҡылын да, намыҫын да ҡыҫҡартҡан

ул, ейәнем. Удар төҙөлөштәгеләр алйот түгел: үҙенә ҡарай кәкерәйгән бармаҡтарын тиҙ төҙәйтерҙәр шайтандың!

-- Азамат, комсомол удар төҙөлөшөнә китеп барағың, ә комсомол билетың бармы һинең? Әллә кәзә билеты тотоп китеп барағыңмы?

-- Ҡара-ҡара, Бибиғәйшә прокурорға әйләнгән!

-- Оҙон аҡса ҡойроғона тотонған ул ейәнем.

-- Ирмәкһең дә инде, олатайым! Оҙон аҡса ҡойроғо һәлберәй икән — ниңә ҡайырып алмаҫҡа ла бөкләп кенә кеҫә төбенә һалмаҫҡа? Мин уны бушлай алмайым, эшләп алам.

-- Мәгәр оҙон аҡса ғына тартмай бында комсомолды.

-- Етте, Бибиғәйшә, политграмота уҡыма.

-- Һиндәйҙәргә уҡының ни ҙә уҡыманың ни! *Алтын сөрөк!* — Ҡыҙ турҫайҙы, икенсе яҡҡа бороллдо.

Сетерекле мәлдәрҙә беҙ бөтәбеҙ ҙә ошо ҡыҙҙай ҡыланабыҙ — ҡул һелтәп, мәсьәләнән тайпылабыҙ түгелме ни, тип уйланы яҙыусы. Сөнки ваҡытыбыҙ тар, көндәлек тормош бик тығыҙ, ҡатмарлы: ҙур тиҙлектәр һәм ҡыҫынҡы ваҡыт-арауыҡ заманы, тип аҡланырға һәүәҫбеҙ. Татлы хистәргә сумып уйланырға ла, хәүефләнеп артыңа боролоп ҡарарға ла форсат юҡ: тормош һине тын алдыртмай, ял иттертмәй ҡыуалапмы-ҡыуалай... Эш шуға барып етә: хатта бер туғандарыбыҙҙың хәлен белергә лә ваҡыт тапмайбыҙ, ике тыуғандарҙың, өс тыуғандарҙың барлығын да онотабыҙ, ә бер үк йорт подъезында ишеккә-ишек терәлеп торған уткүршеләрҙең кем икәнен белмәйбеҙ... Бына шулай кешеләрҙең бер-береһенә бөркөр йылылығы кәмей, тәьҫир көсө юғала — шәхси ҡабығы әсенә йомола әҙәм, һөҙөмтәлә Намыҫ тигән үткер күҙҙән дә арынып, үҙ-үҙенә тәнҡит менән ҡарау һәләтен юя — күңеле һуҡырая, шәхси ҡабыҡ эсендә зәғиф мин-минлек сүбе шыта, бәндә үҙен донъяның кендеге итеп тоя башлауға барып етә: инде ул — саф алтын үҙәк-күсәр, донъя уның тирәһендә әйләнһен! Бына шундай ҡабығына йомолған «саф алтын» бәндә, Мотал инаныуынса, эстән үҙалдына бурһып, *алтын сөрөккә* әүерелә... Алтын сөрөк йәмғиәткә бәйле рухи тормош менән йәшәүҙән туҡтай: ул үҙенә туранан-тура ҡағылмаған бер нәмәгә лә баш ватмай, үткәндәре тураһында ла уйламай, киләсәген дә ҡайғыртмай, ә фәҡәт шәхсән үҙенең (илдең дә, донъяның да түгел!..) бөгөнгөһө менән генә йәшәй, уның өсөн алтын ғәм — бөтә йәмғиәт етештергән байлыҡты үҙенең көпөһө эсенә көрмәү... Ошо «алтын ауырыуы» зәхмәте йәндән йәнгә йоға, намыҫтарҙы ҡаҡшата, әҙәм балаһын бәҫле сепрәк, йылтыр тауар, «артҡы ишектән кереү» ҡолона әйләндерә, милләтенә, енесенә, йәшенә, йәмғиәттәге дәрәжәһенә ҡарамайынса сөрөкләндереп ыуалта дөйөм кешелек *рухосфераһын*...

Әйтәйек, бәләкәй генә «дефицит» — Мотал кеҫәһендәге ялтыр-бутал авторучка. Дәүләт сауҙа селтәрендә көндөҙ сыраҡ яғып эҙләһәң дә табылмаҫ, әммә зыялы даирәләр шуның менән яҙыша. Моталға уны Мөхлисәһе Саркисян тигән шикле бәндә аша салғый аҫтынан юллап алып ҡайтып биргән (һәм ул ҡабул ҡылып алған!) кеүек, башҡалар ҙа кемдәрҙер аша алдырта, ҡара баҙарҙан шундай аҡ мал табып булғаны өсөн ҡыуана. Шуны яҡшы күреп торған баҙар ҡара баш ҡорто (әйтәйек, шул уҡ Саркисян!), тере мутлыҡ, барыһын да төп

башына ултырттым тип кинәнә. Мутлығы йөҙөнә сыҡкан, әммә бармаҡ төртөп күрһәтеп ҡара! Шундай нисәмә ҡыйыу йән үҙ ваҡытында бармағын тешләп ҡасты!.. Мотал көрһөнөп ҡуя: төп сәбәп, моғайын, ҡыйыу йәндәр бармаҡ төртөп күрһәткәндә *лә* бәғзеләрҙең, шул иҫәптән Моталдың, күрәләтә ҡыҫылмай, өндәшмәй ҡалыуында, ҡойроҡто һыртҡа һалып юртыуындалыр?.. Уға ҡалһа беҙ үҙебеҙ, зыялылар, «оҙон аҡса» ҡоло азаматтарҙан алыҫ киткәнбеҙме ни?.. Беҙҙең атайҙар башҡаларҙан *эше* менән уҙҙырһа, беҙ хәҙер -- *әйбер* менән... Намыҫыбыҙҙың эш һәм әйбер тупһаһын ни арала әйбер яғына ҡарай талпындыҡ, әйбер ҡолона әүерелдек?! Шүлгәнләнмеш Хөппөлгәрәй бажаһы әйтмешләй, алтындай аҡ намыҫыбыҙҙы аяҡ аҫтына һалдыҡ? Ә әйәһеҙ алтынға ен эйәләй...

Юлдаштар, һәр береһе үҙ уйына йомолоп, байтаҡ өндәшмәнеләр. Ҡарт кеше тамаҡ ҡырҙы:

-- Ҡара әле, ейәнем, удар тимер юл беҙҙең Айғыр тауын ярып үтә, комсомол шунда таш киҫә, күпер һала, ҡорос рельстар һуҙа. Әммә улар йөрәген оҙон аҡса түгел, ә ил мәнфәғәте тарта, Павел Корчагиндар дәрте рухландыра. Беләһеңме, ейәнем, ул тимер юл тап беҙҙең Блюхер партизан армияһы уҙған ерҙәрҙән һуҙыла бит... Уралдың шундағы иң бейек бер сағылын һинең ҡорҙаштарың, комсомолдар, һәйкәл итеп һынландыра, ти, әле.

-- Кемгә, үҙҙәренәме?

-- Яңылышаһың, ейәнем. Беҙгә, йәғни Блюхер партизан армияһы ҡыҙыл яугирҙәренә. Ял көндәрендә шул сағылга тупланып, ҡая ташын юнып, ҡулына мылтыҡ тотҡан, башына осло кәпәс кейгән ҡыҙыл әрмис һыны яһайҙар, ти. Шунда, имеш, ошо тирә граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғыштарында һәләк булған ҡаһармандарҙың яҡты исемдәре ядкәр итеп ташҡа соҡоп яҙыласаҡ. Эйе... — Ҡартлас, һулышы ҡыҫҡарып, ғыж-ғыж тын алды. — Беҙ мең туғыҙ йөҙ ун һигеҙенсе йылда тап шул тәңгәлдә ҡорҙашым Булаттимер менән разведкаға барғанда...

-- Булаттимер? Һе! — Егет көлдө, Мотал тертләне. — Әллә шул бер үк хыялыймы икән тағы?

-- Нимә тиһең?

-- Магадандағы баяғы барак стенаһындағы таштаҡтаға ла шул исем яҙылғайны.

-- Ә?! — Ҡартлдас иҫәнгерәне. — Фамилияһы кем ине?

-- Шаһибәрәков түгелме?! – тип ырғып торҙо яҙыусы.

-- Уныһын хәтерләмәйем. Хыялый есть хыялый инде.

—Их, ейәнем, ундай хыялыйҙар донъяла бөгөн дә күп булһын ине!.. — Ҡарт, кәйефе ҡырылып, гәзит ҡыштырлатты, ә егет танауын һыҙғыртып йоҡоға сумды. Ҡыҙ иһә ҡалын романға өңөлгәйне. Мотал, атаһының тап шул Магадандан һуғышҡа китеп юғалыуын иҫләп, телгә алынған Булаттимер тураһында төпсөнөргә уҡталып ҡараһа ла, кәйефһеҙләнгән ҡартты ҡабат бимазаларға ҡыйманы, ә егет танауын шыйылдатып йоҡлай ине. Унан килеп, Булаттимер тигән исемде теләһә кемдән ишетеү менән атаһын күргәндәй тертләүе үҙе иҫәрлек түгелме?.. Ләкин ниңә яҙмыш тигәнең аҙым һайын иҫләтә

был атайҙарҙы — ҡорос йәнле Булаттимерҙәрҙе?!.

«Намыҫ! Намыҫ! Намыҫ!» — Әллә ҡайҙа болоттар аҫтында тороп ҡалған Ҡыҙыл башҡорт тауышы ишетелә. Башы өҫтөндә һөңгөләтеп күтәргән һуҡ бармағы, әйтерһең, саҡрымдар аша һуҙылып, лайнер салонының дюраль көпләмәһен тишеп инеп, тура уның йөрәгенә төртөлә... Ниңә эҙәрләй уны, ни гонаһтары өсөн?!. Аһ йөрәгем! Мотал-улым, Йыһаниәм!..

*Иң һуңғы төп романы...* Концепция умыртҡаһы — *рухосфера,* кешелек донъяһының рухи ябалдашы. Берләштерә торған көс. Ошо көндә уларҙы, кешеләрҙе, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ, намыҫ һәм намыҫһыҙлыҡтан башҡа, милләт һәм дин айыра, байлыҡ менән ярлылыҡ — синыфтар яры айыра. Бик йыш ҡына «йә милләт, йә синыф?!» теленмәһе теленә. Ҡалай итеп хәл ҡылыр инең шуларҙы һин, атайым?..

«Намыҫ! Намыҫ! Намыҫ!..»

Ярай, «йә милләт, йә синыф?!» тигәндә «синыф!» тип асыҡ яуап бирҙең, атайым. Һеҙҙең заман өсөн ул иң дөрөҫ хәл ителеш ине. Ә хәҙер бит илебеҙҙә беҙ бөтәбеҙ бер «синыф» — тиң хоҡуҡлы совет халҡы, ҡаршы синыфтар юҡ беҙҙә. Диндең дә ҡулы ҡыҫҡа. Ә бына «милләт менән милләт» мәсьәләһе һәүетемсә йәшәп килә бирәлер был донъяла, әҙәм балаһының күңел төпкөлөнөң иң төбөндә ҡасып-боҫоп булһа ла. Бер туғандарҙай ихласланып донъя көткән кешеләрҙең араһында ла ул бәғзеләрҙең күңел төбөнән көтмәгәндә төнгө ябалаҡтай томорайып килеп сыға ла шомон һала — кешеләрҙе кешеләрҙән айырырға ынтыла. Ә теләгән бер айырыу, айырылыу минең күңел һарайым мөғжизәһен һәм мөғжизәм менән ҡуша *иң һуңғы төп романымды* — концепцияны емерә. Был тәңгәлдә нисек хәл ҡылырға миңә, атайым?.. Әҙәм менән Һауаның балалары, иң тәүге бер туғандар, шул уҡ Урал менән Шүлгән, ниңә ваҡыт машинаһында бер-береһенән ҡапма-ҡаршы тарафҡа елдергәндәр — бер-береһен аңлашмаҫлыҡ телдәргә, милләттәргә, диндәргә бүленгәндәр? Ана шул ваҡыт машинаһын, Димустан ҡорҙашым әйтмешләй, ҡайһылай итеп кире ҡабат табышыу, ҡауышыу яғына борорға — бер-береһен онотошҡан туғандарҙы ҡабат бер туғандар итеп ҡуйырға?! Асҡысы ҡайҙа бының? Әллә шул уҡ Баҡишев, дыуамал кейәү Ҡондрҙбаев, тынғыһыҙ студент Әскәр Ҡотлоевтар үҙҙәренең баш ҡатырғыс тәүтел тәғлимәте менән шул асҡысҡа табан дөрөҫ юҫыҡ-юлда торамы? Баш ватырға тура килә романсы уланыңа, атайым...

«Һинең ҡулда асҡыстарҙың да иң тылсымлы асҡысылыр, уланым: *Үҙең Йәшәгән Заман — Хаҡлыҡ менән Намыҫ килтергән Бәхет!»*

Дөрөҫ, атай! Мин шул һеҙҙе яуға әйҙәгән *Хаҡлыҡты,* һеҙ һаҡлап ҡалған *Намыҫты,* яулап алған *Бәхетте* алтын сөрөккә әйләндереүҙән ҡотҡарып алып ҡалырға — ҡурсаларға тейешмен! Изге юлда йөрәгем дә, аҡылым да, ҡулым да ҡалтырамаһын! Үткәндәрҙең изге рухына тоғро ҡалыу — тереләргә хәҡиҡәтте ярып һалыу тигән һүҙ, яҙыусының яҙыусылығы бына шунан башлана...

Бөйөк Михаил Федорович Достоевскийҙың ҡуйын дәфтәренә яҙған тылсымлы һүҙҙәре бар: «Әҙәбиәттә (беҙҙең заманда) намыҫ байрағын юғары тотоу кәрәклеге тураһында. Күҙ алдына килтерәйек: әгәр ҙә ки Лев Толстой, Гончаров намыҫтарын юйған булып сыҡһалар, нимә булыр ине?.. Ниндәйен дә

ымһындырҡыс шайтан ҡотҡоһо, ҡайһындайын да оятһыҙлыҡ, ә купме бәндә шул ҡыҙыҡтырғыс ҡотҡоға тарыр ине! Әйтерҙәр ине: быларҙың-былары шулай булғас, беҙ бахырҙарға... һ. б.» Даһи әҙип артабан ошондай фекерен теркәп туя: «Миндә күп етешһеҙлектәр һәм күп боҙоҡлоҡтар барҙыр. Мин улар, бигерәк тә ҡайһы берҙәре, өсөн һыктап илайым һәм намыҫыма еңелерәк булыуын теләр инем. Ләкин минең ҡойроҡ болғағанымды, әйтәйек, Федор Достоевский нимәнелер булһа үҙенең шәхси файҙаһы есөн йәки үҙһөйәрлек сәмен ҡәнәғәтләндереү өсөн эшләгәнен — быны һеҙ бер ваҡытта ла иҫбатлай алмаясаҡһығыҙ һәм ундай фактты ла тапмаясаҡһығыҙ... ғорурлыҡ менән ҡабатлаясаҡмын мин быны...

Юҫыҡ! Нимә өсөн дәрәжәләр, түрәлектәр бирелмәй — шул минең тотҡан юҫығым».

Федор Достоевский ҡасандыр йөрәк әрнеүе менән әйткән был һуҙҙәрен бөтә заман яҙыусыларына доға итеп алырлыҡ. Һәр хәлдә, Мотал, башына таш яуһа ла, ошо юҫыҡтан барасаҡ!

Мотал ошоно уйлап ҡапыл тетрәнде. Туҡта, был ни хәл? Димустан ниңә уны, Моталды, Ағиҙел буйына «балыҡҡа» алып барҙы, «ун ике башлы дейеү бәрейе» Хөппөлгәрәй Яубаҫаровҡа ҡара-ҡаршы аяҡландырҙы? Ғәмәлдә, ул бит намыҫын юйып йүгәнһеҙләнгән хәтәр әҙәми затҡа — өлкән бажаһына ҡаршы ҡотортто. Уны, иҫке дуҫы Моталды, тирмән таштары араһына һалып тарттыртыр өсөнмө? Хәйер, дуҫымы икән һуң әле?.. Нисәмә-нисә йылдар буйынса Бәпембәһе өсөн ут йотоп, ҡуйынында таш йөрөһә? Яубаҫаров ҡулы менән Моталдан шуның ҡонон алырға йыйынһа?!. Ҡапыл ҡупҡан хәтәр шиктән күҙ алды томанланды. Их һин яҙмыш, булдыңмы әллә аҙмыш?!.

Азамат тигәндәре, уянып, ҡарт быуынды йәберләй:

-- Бына һин, олатайым, аҡса артынан ҡыуа, тип, тиктәҫкә битәрләйһең. Аҡса түгел – яҙмыш йөрөтә беҙҙе!

-- Аһ-аһ, яҙмыш үҙеңдең ҡулыңда түгелме ни?

-- Үҙемдең ҡулда булһа, «Яҙмыштарҙан уҙмыш юҡ» тип тә әйтмәҫтәр ине!

-- Әләйһә, аҙағынаса тыңлап бөтөр, ейәнем, аманат һүҙ һөйләп ишеттерәйем.

-- Һөйлә.

Ҡартлас, тамаҡ ҡырып, хикәйәтен башланы.

## ЯҘМЫШТАРҘАН УҘМЫШ БАР!

Әйт, тиһәгеҙ әйтәйем, яҙмыштың ни икәнен бәйән итәйем!

Егеттәрҙең егете, ирҙәрҙең ире, баһадирҙарҙың баһадиры Алп батыр булған борон донъяла. Яурынын ғына һелкетһә, тау емерелер, башын ғына ҡалҡытһа, Күк ишерелер икән. Ерҙә, Күктә һәм һыуҙарҙа көс яғынан уға тиңе булмаған. Ләкин шул егеттәрҙең-егетен, ирҙәрҙең-ирен, баһадирҙарҙың баһадирын күрер күҙгә күренәҫ, тартыр бизмәнгә тартмаҫ, килер ыңғайға килмәҫ, көс тиһәң -- көс түгел, үс тиһәң -- үс түгел, теш тиһәң -- теш түгел юҡтың юғы ҡол иткән. Кем, тиһегеҙме? Шул үҙе инде – яҙмыш-аҙмыш...

Алп батыр ер һөрөп, иген игеп, донъяны байытырға - кешеләрҙең ас тамағын туйҙырырға тырышҡан. Тик ул күпме генә көсәнеп көс түкмәһен, тирләп-бешеп эшләмәһен, урып алғаны орлоҡ итеп һалырға ла етмәй икән. Көн уйлай башын баҫып Алп батыр, төн уйлай, теүәл өс көн, өс төн шулай уйлағас, орлоғоноң ил икмәгенә әүерелә алмауы сәбәбен юллай.

-- Әһә, булды! - тип ҡысҡырып ебәрә ул. - Игенсенең иң яуыз дошманы - ҡоролоҡ икән. Ҡоролоҡто тотоп юҡ итергә кәрәк!

Суҡмарына ҡул һоноуы ғына була Алп батырҙың, күҙгә күренмәгән аран-ауыҙҙан туп-тура уның ҡолағына йәмһеҙ ауаз һауыла:

-- Яр-ра-май!

-- Нимә ярамай?

-- Ҡоролоҡто юҡ итергә ярамай.

-- Ул бит минең игендәремде юҡ итә?

-- Түҙ, маңлайыңа шулай яҙылған.

-- Уны кем яҙған?

-- Мин.

-- Һин кем?

-- Яҙмышың.

Алп батыр маңлайын тотоп уйға ҡала. Бына уның күҙҙәре ут-ҡуҙҙай уйнап, ялтырап китә: яҙмыштың үҙен сәсрәтә һуғыу өсөн суҡмарына йәбешә. Ләкин шунда уҡ, баяғы йәмһеҙ тауышты ишетеп, кире сүгә:

-- Мин - хоҙайың һинең, хоҙайың. Миңә ҡаршы күтәргән суҡмарың үҙ башыңа етәсәк.

-- Яҙмышым-хоҙайым, ни эшләргә һуң? - тип башын тота Алп батыр.

-- Яҙмышыңдың алдына сыҡмай, уның ҡойроҡ осонан - ҡойроҡ кикеленән генә тотоноп бар!

Көн уйлай башын тотоп Алп батыр, төн уйлай. Өс көн, өс төн уйлағас, яҙмыштан һырт ҡайырып ҡасмаҡ була: ерҙәге иген эштәрен бөтөнләй ташлап, зәңгәр һауаға күсә - ҡош аулап тамаҡ туйҙырырға тотона. Әммә күпме генә көн-төн көсәнеп тырышмаһын, аулап тапҡан улъяһы, илен туйҙырыу түгел, үҙенә лә саҡлы-соҡло ғына булып ҡала икән. Тағы ла башын тотоп уйға һабыша Алп батыр.

-- Әһә, таптым! - тип шатланып ҡысҡырып ебәреүе була, йәнә баяғы йәмһеҙ тауышты ишетеп сүгеп төшә:

-- Яр-ра-май!

-- Һин кем?

-- Яҙмышың!

Зәңгәр күген ташлап инде ҡара ер аҫтына боҫа Алп батыр. Ундағы иҫәпһеҙ хазиналарҙы ер өҫтөнә сығарып, илен байытмаҡ була. Көн эшләй ҡорос кәйлә тотоп Алп батыр, төн эшләй.. Бына бер заман сығарған алтындары, иленә барып етә алмай, *алтын сөрөккә әйләнеп* елгә осоуы асыҡлана. Мәмерйәһе ауыҙына ултырып, башын тотоп, өс көн, өс төн шул хаҡта баш ватҡандан һуң:

-- Әһә, таптым! - тип шатланып ҡысҡырып ебәреүе була...

-- Яр-ра-май!

Башын тотҡан килеш тороп ҡаса Алп батырыбыҙ. Был юлы ул икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ-океан ярына барып сыға. Диңгеҙҙең тап шашынып-ҡайнап торған дауыллы сағы икән. Быны күргән Алп батыр ҡыуанып йырлап ебәрә - үҙенең шашҡын тәбиғәтен таба ул. Дурт ҡаяны бергә уҡмаштырып, бишенсеһе менән түбәһен ябып, үҙе ҡунып-йоҡлап йөрөрлөк өшәлөк әтмәләп керә лә батырыбыҙ, иле өсөн күк диңгеҙҙәрҙе кисеүсе балыҡсы булып китә. Оло гранит тауҙың уртаһын соҡоп яһаған таш кәмәһендә көнө-төнө океан иңендә ишкәк ишеп йырлап йөрөй. Уның көр йырын ишетеп, алыç-алыçтарҙан яр буйына халыҡ эркелә - ҡала ҡороп ултыра. Алп батыр барыһын да балыҡ менән туйҙыра. Яҙмыш өргән ел-дауылдар, уның юлында ажғырышып, бейек туфан тауҙары торғоҙоп ҡарай - таш кәмә бирешәй. Яҙмыш ҡайырған көслө ағындар балыҡтарҙы көтөү-көтөү ҡыуып ебәреп ҡарай - таш кәмә ҡалышмай. Яҙмыш һалған ут һәм боҙҙар, көндөҙ ҡыҙҙырып, төдә туңдыып ҡарай - таш кәмә сатнамай. Күк океан киңлегендә көнө-төнө Алп батарҙың дәртле йыры яңғырай. Ахыры булмағас, ҡола һыу яланы уртаһында Алп батырҙы яҙмыш үҙе ҡаршылай:

-- Яр-ра-май!

-- Ярай! - ти Алп батыр. - Мин шуны төшөндөм: илем өсөн тигәндә утҡа-һыуға инергә лә бик ярай!

-- Улайһа, ин бына минең ауыҙға!

Күрә Алп батыр: алдында, йөҙ йәшәп, йыланлығынан үткән, мең йәшәп, аждаһаға әүерелгән мүк түбәле суртан тоҡомо, ажарланып, ҡапҡалай ауыҙын асып тора, тыны менән тартып алып йоторға ялмана.

-- Мин – яҙмышың! Яҙмышыңдың ҡойроғонда һөйрәлеп барырға теләмәгәс, яҙмшыңа ҡаршы барып, яҙмышыңдың оторо аңҡауына ин!

-- Илем өсөн мин, бер генә түгел, мең яҙмышҡа ҡаршы барырға ла әҙер! -- ти ҙә Алп батыр, кәмәһенең бауын йомарлап тотоп, ҡот осорғос ут бөркөп торған аждаһаның ауыҙына һикерә һәм, күп тә үтмәй, кәмә бауының осон һаман ҡулында йомарлап тотҡан килеш, аждаһаның айғолағынан "былт!" итеп килеп тә сыға. Кәмәһенә етеҙ һикереп менеп, айғолағынан баяғы бау үткәрелгән ҡартлас-яҙмышты таш кәмәнең ҡойроғона көрмәп-бәйләп тә ҡуя, үҙе, аҡ елкәнен ҡороп, кинәнеп йырлай-йырлай ҡайтырға сыға.

Яр буйында иле, йыйылып, Алп батырҙы көтә. Күрәләр: күбекле аҡ тулҡындарҙың һыртын урталай ярып, дауылдарҙа сигенмәç таш кәмә килә, таш кәмәнең ҡойроғонда, айғолағынан һөйрәтелеп, Алп батырҙан еңелгән Яҙмыш килә, ә аҡ елкән ҡушаһында, мыҡты һынын сүкмәç сағылдай турайтып, ғорур күкрәк киреп, иленең ятатҡан йырын йырлап, көслөләрҙең көслөһө Алп батыр - яҙмышының алдына сыҡҡан батыр - еңелмәç Кеше килә...

Таш кәмәне ярға тартып, Алп батыр һыуға төшә, Алп батыр кәмәһенең ҡойроғонда һөйрәлеүҙән бәлйерәп бөткән, ажарлы аждаһанан мөшкөл генә сурағайға әйләнгән яҙмышты айғолағынан ярға алып бәрә ул:

-- Кешеләрем, күрегеҙ! Бер нимәнән дә ҡурҡмай-сүкмәй йәшәгеҙ, кешелек өсөн бил яҙмайынса эшләгеҙ - яҙмыш үҙебеҙҙең ҡулда! Иле өсөн алға ҡарпыған ир-егеткә кәртә юҡ, үлем юҡ! Күрегеҙ: хатта бирешмәç Яҙмыштың да

яңаҡ ямауһыҙ икән – егет ҡулы матҡып-һығып ала торған ярыҡ айғолаҡ икән!..

Ошонан һуң ерҙе иңләп илдән-илгә таралған да иңде баһадирҙарҙы изге яуға ҡанатландырған, «яҙмаштың да айғолағы ярыҡлы!» тигән тәүәккәл әйтем. Һеҙ һоранығыҙ, мин әйттем.

Партияның Иҙелбаш ҡала комитетынан Моталды һигеҙ саҡрым артабаныраҡ урынлашҡан, күбеһенсә таҡта-ҡоролма йорттарҙан хасил Юбилейный салаһына – удар төҙөлөш штабына килтереп төшөрҙөләр. Аяҡ аҫты шаптор-шоптор; күмер төҫлө бысраҡ ҡарҙарҙы батҡаҡҡа бутап ерҙе-күкте ҡалтыратҡан техника өйөрөн күҙәтеп, тау-таштарҙы кимереүсе әкиәттәге аждаһаларға оҡшатып, аптырабыраҡ торҙо... Сәфәренең осона – ҡарурман араһында яңы төҙөлөп ятҡан Инйәр станцияһынаса илтеп ҡуйырға вәғәҙә ителгән машинаны көтөп тормайынса, үҙаллы ҡуҙғалырға булды. Ни тиһәң дә, урындағы халыҡты ярты быуат буйына егәрле йөрөткән, шул иҫәптән заманында уның атаһын да үҙенең көймәле арбалай ғына вагонсыҡтарында күп тапҡырҙар тирбәлдертеп елдерткән, инде яңы юл һалыныу сәбәпле һуңғы көндәрен кисергән тар араталы (узкоколейка) ҡартлас тимер юлдан ирәүәнләнеп бер үткеһе, тарих ҡомартҡыһы булып килеп еткән «кәкүк»-паровоз төтөнөнән үткән быуат елдәрен дә һулағыһы килде уның. Төҙөлөш штабы етәкселәре мосафир хаҡында Инйәргә шылтыратып өлгөргән, унда онотҡанда бер килеп сыға торған күренекле яҙыусы менән китап уҡыусылар конференцияһын уҙғарыу теләген белдергәндәр. Тимәк, әҙипкә үҙалдына ғына уйланаһы уйҙар бар.

Удар тимер юлдың Иҙелбаштан башланыуы – үҙе ҙур плюс йөкмәүсе изге символ булып күренде Моталға – Көньяҡ Урал пролетариатыныңборондан уҡ ҡорос бишеге бит ул. Ошо ергә, рәсми тарихтарҙа бәйән ителгәнсә, «Рәсәйҙә иң тәүге марксистик түңәрәктәр төҙөүселәрҙең береһе – ялҡынлы революционер П.В. Точисскийҙың изге ҡаны түгелгән». Тик йәйәләр эсендә әйтергә кәрәк: Рәсәй халыҡтарынан беренсе булып автономиялы дәүләт яулаусы «аҡ башҡорт»тарҙың ҡайнар ҡанын эсер өсөн беренсе ҡыҙыл полктарҙы төҙөп яуға оҙатыусы ла булған ул. Баш күтәргән башҡорттарҙы, ә һуңғараҡ алтайҙарҙы үлтереп ләззәтләнеүсе Аркадий Голиков-Гайдарҙы ла ҡанлы эшмәкәрлектәренә тап шул Точисский һөйөп фатихалаған. Хәйер, ҡанэскес остаз шәкерттәренән уңмаған: йылы ҡуйынынан сыҡҡан большевик Кашириндың ҡыҙыл казак полкы һуғышсылары уны өйөндә үк туҡмап үлтереп, мәйетен ҡала ситендәге тиреҫлеккә илтеп, өҫтөнә сүп-сар өйөп яндырған. Ошо уҡ ерҙән, шул уҡ тарих китаптарынан билдәле булыуынса, «легендар герой В.К. Блюхерҙың ҡыҙыл партизандар армияһы Башҡортостан аша ҡорос ташҡындай ағылған», ташҡындың уртаһында, осло буденовкаһының маңлайына ҡыҙыл буҫтау йондоҙ баҫҡан һынмаҫ большевик Булаттимер Шаһибәрәков – Моталдың атаһы барған...

Был сәфәргә, дөрөҫөн генә әйткәндә, барыһынан да бигерәк, Күк Уралға удар төҙөлөш алып килгән цивилизация алҡымында тәбиғәттең сабыйлығы, хәтирәләрҙең самимилығы сәйнәлеп имгәнмәҫе, мазутҡа буялмаҫы элек, изге атай эҙҙәренән уҙып ҡалыу теләге лә килтерҙе уны. Күпме генә данларға һәм

йомшартырға тырышма, индустриаль цивилизация йәнебеҙгә дәһшәтле ҡорос тырнаҡтарын батыра – *рухосфера бысрана...*

«Ни тиһәң дә, әҙәм балаһы – тәүбашта тәбиғәт балаһы ул, -- тип уйлана әҙип. – Хатта архииндустриаль тоҡом да. Шаулы, тимер-томорло, термоядро энергиялы егерменсе быуат аҙағында ла. Эйе, кеше – тәүбашта *кеше,* тере йән эйәһе. Үҫемлектең, тереклектең айырылғыһыҙ туғаны. Илаһи аҡыл ҡанаттары рухыбыҙҙы һаман-һаман юғары сорғолтҡаны һайын, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, йөрәгебеҙ тартылып, ерҙең тере тупраҡ күҙәнәктәренә, унда бөрөләнеп шытҡан йәнле йәшел ҡыяҡҡа берегәбеҙ түгелме?.. Һәм шул энә күҙәүендәй генә хлорофилл фабрикаһының именлеге – бөтә кешелек донъяһының именлеге икәнен дә «аҡыл сүлмәге»беҙ көндән-көн ныҡыраҡ тоя. Ер-әсәнең һәр саңын һәм таш киҫәген, йәнлеген, морон төрткән үләнен, нисек бар – шулай ҡымшатмай һаҡлау, килер быуындар өсөн ҡурсалап ҡалдырыу теләге өтә йәнде. Ә күҙ алдында миллион йылдар тып-тын ятҡан саф тәбиғәттең иңен ярып тауҙар күккә сәсрәһә, ер ҡыртышын ҡанһыратҡан бирсәләргә тимербетон шпалдар, ҡорос рельстәр һалынһа?.. Үҙенең, бөйөк төҙөүсе булыуы менән бергә, ҡөҙрәтле емереүсе лә икәнен беләме икән кеше?!.

Үҙе белгән, үҙенең атаһы менән быуындаш булған эшсе синыфҡа алмашҡа килеүсе йәш быуынды тулыһынса аңлап еткерә алмауын ул эстән генә көйөнөп һиҙемләй ине, яҙыусы намыҫы шул бушлыҡты тултырыуҙы һораны. Хәйер, «бушлыҡ» тигәне – шул ғынамы икән әле? «Ҡарт быуын» тигән төшөнсәне төшөнөп бөтә алғанмы? Шул быуындың төбөндә ятҡан ерлекте, геологтар теле менән әйткәндә, тәрән материк тоҡомон? Әллә, беләм, тип, кәртә артында ҡала ҡороп уйнаған сабыйҙарҙай, иң өҫтә борхоған саң-соңда соҡсоноп йөрөймө? Ҡайҙан башлана ул синыф, эшсе тоҡом?..

Самолет геүе ҡолаҡтарында баҫылмаған да көйө, Мотал, уйҙарына сорналып, тар араталы тимер юлдың йоҙроҡтай ғына вагонында тирбәлеп-сайҡалып китеп бара Инйәргә. Мискәләге балыҡ һымаҡ шыпланнып, тубыҡҡа тубыҡ терәшеп ултырған пассажирҙар ирәүәнләнеп әңгәмәләрен һүтә, «тимер арба» эсе умарталай гөжләй. Мотал, елкә тәңгәлендә аҡһылланған өҫтәл көҙгөһө ҙурлыҡ ҡына тәҙрәгә муйынын бороп, ала-ҡола ҡаръюрған ябынып ойоп ятҡан юл буйҙарын ҡараштыра. Иҙелбаштан саҡҡандан биреле йәнәшәнән яңы бейек өйөлмә - удар тимер юл полотноһы һуҙыла. Унан өҫтәрәк – төҙөүселәрҙең кәрәк-яраҡ ташый торған автомобиль юлы оҙатып бара. Был өс йәпле трасса яҙғы Ҡояш ялауынан ҡар юрғаны бүҫерелгән тау-урмандарҙы, йылғаларҙы, соҡорҙарҙы арҡыры ҡыйып үтә. Әҙәм ҡулы өйгән ташлы суҡайҙарҙа ҡандай ҡыҙыл сурик һылап яҙылған, йөрәк менән плюс тамғалары төшөрөлгән ҡая ярсыҡтары тарта иғтибарҙы. Был -- кисә генә мәктәп парталарына үҙ фамилияларын бәке менән уйып ҡалдырған, ә бөгөн ошо тау һырттарын ҡырҡып-уйып үткән удар егет һәм ҡыҙҙарҙың ҡултамғалары.

Иҙелбаш ҡала гәзите:

«Заман башҡа -- заң башҡа, тигән боронғолар. Хәҙер тимер юлдары ла, кешеләре лә үҙгәрҙе. Башҡортостан индустриаль республикаға әйләнде. Милли эшсе синыф быуын ныҡытты -- халыҡтың яртыһынан ашыу өлөшө ҡалала эшләй

һәм йәшәй. Шул эшсе синыф тураһында кинәнеп һөйләһәк һәм яҙһаҡ, ул беҙҙең ҡуҙ алдында -- бер кеше ғумере һуҙымында мөһәбәт баһадир булып үҫеп еткәндәй тоҫмаллана». Быныһы дөрөҫ, әлбиттә. Әммә шул дәү баһадирҙың үҙебеҙҙән үк тыуыу, хатта яралыу осорҙарын да ошо үҙебеҙ йәшәгән бер быуындың күҙ алдындағылай итеп күрергә күнегеп киттек түгелме? Шул хаҡта күпме әҫәрҙәр ижад иттек. Итәбеҙ. «Милли эшсе синыфын үҙебеҙ тыуҙырып үҫтерҙек!». Был, әлбиттә, үҙебеҙ өсөн ҡыуаныслы һәм ғорурлыҡлы. Тик шул дорфа «үҙебеҙ», бөтә нәмәнең дә башланышын 1917 йылда ғына «күҙе асылған» үҙебеҙгә ҡайтарып ҡалдырыу сире, мин-минлек, эшсе ғәли йәнәпте лә үҙебеҙҙең быуын аршинына һалырға маташыу, титанды тәрән тамырҙарынан айырыу булып сыҡмаҫмы? Донъя яратылғандан алып халҡыбыҙҙың олпат олонон ергә беркетеп тотоп торған тәрән тамырҙар тыуҙырмағанмы ни эшсе ғәли йәнәпте лә?!.

Бына мин үҙем, тип уйлана Мотал, эшсе-химиктар тормошонан роман яҙырға партиянан юғарылыҡлы социалистик йөкләмә алғанмын. Оҙаҡ йылдар буйы яҙам да һыҙам. Ләкин, дөрөҫөн генә әйткәндә, беләмме һуң әле мин эшсе-химик тигән ғәли йәнәптең шәжәрәһен?.. Кеше тигән мөғжизәнең психологияһы донъя яратылғандан алып тупланған, уны идеаль белеү - донъя яратылғандан алып материяның үҙеңәсә булған эволюцияһын идеаль белеүгә тиң булыр ине. Ләкин шул уҡ эшсе-химикты, донъя яратылыуға ҡағылмайынса уҡ, хатта алхимия осорон да торғоҙоп ҡалдырып, промышленность химияһы осоронан алып замандың шул фән маһиры Булаттимер Шаһибәрәковҡа - атайымаса һуҙылған ҡыҫҡа осорҙо ғына булһа ла беләмме һуң мин? Шуны ғына ла белмәһәм, романда уның эске донъяһын, психологик анализды дөрөҫ бирерменме икән? Һәләк иткес ялғандан мин азатмы?..

Әлбиттә, мәсьәләнән еңел ҡотолоп була. Бер ниндәй ҙә тәрән тарих өйрәнеү, архивтарҙа соҡсоноу кәрәк түгел. Төбәгебеҙҙә атайың башлап нигеҙләгән тәүге химия заводының бөгөн дә иҫән ветерандарын, әйтәйек, заманында атайыңдың урынбаҫары булған, ошо көндә шул заводтың директоры Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаров менән бер шешә бушатҡан арала һорашаһың да, цехтар буйлап йөрөйһөң дә, завод ҡағыҙҙарында аҡтарынаһың да - беттө-китте, вәссәләм! (Мотал тап шулай башлағайны ла тыуа алмай интектергән романын!). Сөнки, маҡтансыҡланып уйлауыбыҙса, барыһы ла беҙҙән – төбәктәге тәүге химия етештереүсәнлегенән уны етештереүселәрҙең -- эшсе синыф шәжәрәһе лә башлана. Ләкин... ул саҡта өнһөҙ Тарих-ҡартластың тоҡҡа йәшергән осло беҙҙәй икенсе бер дәлилдәрен: ун һигеҙенсе быуат урталарында уҡ - Леонтий Кислянский, Федор Прядуновтар менән бер ҡатарҙан Рәсәйҙә беренселәр булып «ҡара алтын» яткылыҡтарын асыусы һәм донъяла беренселәр булып нефтте химия ысулы менән эшкәртә башаусыларҙың береһе башҡорт Нәҙер Ураҙмәтовты, Уралдың төҫлө металдарын асыусы һәм эшкәртеүсе, Рәсәй күләмендә беренсе башлап промышленность юғары уҡыу йорто - Петербург тау училищеһенә нигеҙ һалыусы башҡорт Исмәғил Тасимовты, мәшһүр Павел Бажов ҡәләме данлаған мәшһүр тоҡомдо — Атас (хәҙерге Магнит) тауында донъялағы иң сифатлы булат ҡоросон ҡайнатыусыларҙы, Емельян Пугачевтың халыҡ армияһына дары яһаған аҫаба башҡорт, «дары мастеры» Изге Әйүповты һәм башҡа шундай уҡ исемле һәм исемһеҙ «эшсе-химик»тарҙы ҡайҙа ҡуйырға?..

Ҡояш байый, тау түбәләре тоноҡлана, ҡарағайҙарҙың ҡара шәүләһе

вагон тәҙрәләрен яба. Баш сюоңда майшәм ҡабына. Йоҙроктай ғына паровоз, ҡәҙимгесә һыҙғырып-бышҡырып, артынан ҡуйы төтөн көлтәһе һуҙып, арбаларын тимер юлаҡтан кәлтер-көлтөр йүгертә. Урман төпкөлдәреңдәге ауылдарҙа кешеләр уны күҙҙәре тишелеп көтә. Юл араталары тар булһа ла, киң донъя менән бәйләй шул.

Мотал ҡуйын кеҫәһенән ҡәҙерле атай дәфтәрен һөйрәп сығарҙы. Кескәй форматлы «һимеҙ» китапҡа оҡшатып, ҡулдан төпләнгәйне ул. Тышлығына бал ҡортоноң шифалы елеме прополис һеңешкән. Сөнки бит был ҡомартҡы, Булаттимер Шаһибәрәков ҡулға алынғас, тиҫтә йылдар буйы көн яҡтыһы күрмәй, ошо төбәктәге сәсән Мирхәйҙәр-ҡарыйҙың урмандағы солоғонда – бал ҡортоноң кәрәҙҙәре араһында йәшереп һаҡланған. Ғәрәп хәрефтәре менән тышына: «Әгәр ҫуғыштан ҡайтмаҫам, улым Металлға ир ҡоро -- ҡырҡ йәше тулып уҙғандин ҫоң тапшырылҫын», - тип васыятнамә яҙылған. Ҡарт шайтан былтыр ғына, гәзиттәрҙән уҡып, Булаттимер улы Мотал Шаһибәрәков тигән яҙыусыға ҡырҡ йәш тулып уҙғанлығын шәйләгәс, солоҡто асып, мәрхүм ҡорҙашының аманатын яҡты көнгә сығарған, васыятта әйтелгәнсә, «ышаныслы ҡулдар аша» вариҫына тапшыртҡан...

Дәфтәрҙәге атай һүҙҙәре Мотал йөрәгенә тәрән үтеп керҙе: «Ҡайһы бер «пәйғәмбәр»ҙәр, баштарынан аҡ салмаларын сәйәсәт ялҡыны ялмап үтһә, утты һыу һибеп һүндереү урынына, йөгөнөклəп ултырып, күҙ йәштәрен ағыҙалар. «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» тигән мәҡәлде тәкрарлап уфтаналар.

Кешемен тигән кеше, һуңғы тамсы ҡаны ҡалғанса, утта ла, һыуҙа ла бирешмәҫкә, Париждағы мәшһүр инженер Эйфель төҙөгән башня кеүек ғорур ҡалкынып торорға, яҙмыштың үҙен ҡағып осророрға тейеш. Шунһыҙ уның кешемен тип аталырға хаҡы юҡ!"

Төн уртаһы ауышҡас, поезд ҡаяға төкәлгәндәй дөбөр-шатор туҡтаны, йоҡомһораған әҙиптең соңҡаһы таҡтаға «зыңҡ» итте. «Кәкүк»-паровоз, үҙенән дә ҙур әсе тауыш сығарып, һыҙғыртып артҡа сикте. Шау-шоу ҡупты, полотно буйлап кешеләр йүгереште. Ҡуҙғалыуын көтөп байтаҡ ҡаңғырғас, күңелһеҙ хәбәр таралды: поезд артабан бармай – юлға тау ишерелгән, хәрәкәт аҙна-ун көнгә өҙөлә...

Портфелен эләктереп, Мотал вагон ишегенән һалҡынса таң ҡосағына ырғыны. Мәреп ятҡан ҡарлы һыуға бата-сума, өҫтәге удар юл өйөлмәһенә үрмәләп, тигәндәй, менеп, шыңғырҙап ятҡан тимербетон шпалдарҙан бераҙыраҡ атлағас, сана табанына беркетелгән вагонсыҡтар эргәһендә суҡаңдаусы эшселәр төркөмөнә тарып, координаттар асыҡланды: Иҙелбаштан – 68, Инйәрҙән 15 километрҙағы ҡарлы-урманлы тау араһында тора имеш. Яңы юл киҫемендә, рельстар бөткән ерҙә, төҙөлөш материалдары өйөлгән, йәнәшәлә тау-таш араһынан Инйәргә табан автотранспорт юлы гөжләй. Тимәк, ҡарурман эсендә юғалып ятмыш был төбәк – удар төҙөлөш фронтының иң алғы һыҙығындағы тәьминәт терәге, материаль базаһы, тип һөҙөмтә яһаны әҙип. Удар төҙөүселәр менән хәҙер үк күҙгә-күҙ терәшеп һөйләшәсәген һиҙенеп, йөрәге лөпөрләне.

Таң тишегенән дыңғырҙаған гитара моңо йәлеп итте иғтибарҙы; ҡала урамдарындағы сәс-һаҡалдары етек, балаҡтары урам һепереп йөрөгән

ғауға өйөрҙәрен -- *алтын сөрөктәрҙе* бында осратырын күҙ алдына ла килтермәгәйне. Мәгәр гитарасы йыры йәлеп итте:

Тахта ебәр посылкаға, әсәйем,—
Тау-таш араһында йәшәйем.
Сәс-һаҡалға батты йәш башым,
Һоро айыу минең юлдашым.
Рельстәрҙе бергә борабыҙ,
Балластирлап, көйләп барабыҙ:
«Даешь, тайга, беҙгә Инйәрҙе!
Урал, тыңла яңы көйҙәрҙе!»

Ярайһы ғына һыҙҙыраһың, егет! - тип уйланы Мотал, йылмайып.

Өйөлмә-юл -- беҙҙең гитара,
Сүкеш сиртә рельс-ҡылдарға.
Ә төҙөлөш -- беҙҙең өйөбеҙ,
Һоро айыу менән бейейбеҙ.
..............................................
Ҡояш байый, шәфәк ҡабына,
Айыу тая өңө яғына.
Минең генә өңөм юк һаман,
Йәнкәйемде йәнә юҡһынам.
Тау-таш араһында йәшәйем,
Тахта алып ебәр, әсәйем!

Көй бығаса бер ҡайҙа ла яңғырамаған, һәр хәлдә Моталдың ҡолағына салынмағанса яңы, йырлаусының тау шишмәһе кеүек нескә, саф тауышы тәрән йөрәк төбөнән селтерәп аға. Вагонсыҡтар артындағы ҡарт ҡарағай төбөнә яҡынлағаны һайын, танауға кейеҙ яндырғандағылай әсе көйөк еҫе бәрелде. Оскон сәсеп сытырҙаған усаҡ тирәләй ташбүкәндәрҙә өҫтәренә геологтарҙыҡылай көпөшәнле тупаҫ брезент куртка, баштарына төрлө төҫ һәм шыҡылдағы бүректәр, аяҡтарына кирза итек кейгән егеттәр һерәйешеп ултыра, береһе, ҡарағусҡыл күмер күҙле башҡорт, һөрөмләнеп ҡатҡан оҙон кухня бысағы ярҙамында ялҡын өҫтөндә ҡырғыслап, һыйыр малының мыҡты тояғын өтә. Эргәһендә бер иле ҡалдырып бүҫкәргән араҡы шешәһе, тарбаҡай болан мөгөҙө күреп, яҙыусының сәстәре үрә торҙо: браконьер!..

Ят кешене абайлап, баштарын ҡалҡыттылар.

-- Әссәләмәғәләйкүм! – тине Мотал, болан мөгөҙөнән күҙен алмайынса.

-- Вәғәләйкүм. – Ҡойҡа ҡырсыусы, эшен теүәлләп, тояҡты мөгөҙ эргәһенә ырғытты.

-- Кем үлтерҙе?

-- Абау, ниндәй ҡырыҫ өндәшәһең, ағаҡай!

-- Лицензияғыҙ бармы?

-- Лицензия? Был ҡырағай тау-таш араһында кемгә кәрәк ул филькина грамота?

-- Ҡанунды белмәйһегеҙ.

-- Тыуған илебеҙҙең гүзәл тәбиғәт байлыҡтарын ҡурсалау тураһындағынымы? Белмәй ни! – Иптәштәренә күҙ ҡыҫып хихылданылар. Бөтәһе лә йәштәр, тап ҡала йорто подъезында Моталдың тунын телгәндәгеләй, сәс-һаҡал баҫҡан өйөр. Гитарасы буш стакан һондо:

-- Тот, атаҡай, ҡоям. Тамағыңды сылатып ал, мосафир.

-- Браконьерҙар менән табындаш түгелмен!

Үҙ-ара бышылдаштылар, болан мөгөҙө менән тояғын күҙ алдынан олаҡтырҙылар. Гитарасы стаканды кеҫәһенә йәшерҙе, шешә төбөндәге бер иле хәмерҙе, аҡ күбектәр бызырлатҡансы һелкетеп, шешә боғаҙынан тура тамағына атҡарҙы ла еҙ ҡылдарҙы дыңғырҙатып көйләне:

Тау-таш араһында йәшәйем...

Мотал, ҡырт-боролоп, вагонсыҡтар тарафына йүнәлде. Барып асҡан ишек кухняныҡы булып сыҡты: суйын һымаҡ ҡара-йылтыр корей ҡыҙы, ап-аҡ ашнаҡсы хөлләһенә төрөнөп, яңғыҙ үҙе мәш-килә -- өтөп-йыуып таҙартылған, сабып ярылған болан башының еләк һымаҡ алһыу мейеһен һауытҡа бушата. Шуны күреүҙән сырайы сытырайып, мосафир ишекте япты, фекерен йыя алмай торҙо. Башына тәү килгәне: «Ниңә сыҡтым әле был хәйерһеҙ сәфәргә?..» -- булды. Айырымыраҡ торған, тышына сағыу плакаттар беркетелгән вагонсыҡта ғыжылдатып телефон ҡолағын борғослаған өлкән йәштәрҙәге прорабҡа үҙенең кем икәнлеген, ни йомош менән йөрөүен әйтеп бирҙе. Тик уҙамандың, был донъяла үҙенең вазифаһынан башҡа бер нимәгә лә иҫе китмәгәнлеген белдертеп, ҡиәфәте эшлекле-һалҡын ҡалды.

-- Поезд ҡасан ҡуҙғалыр икән? – тине Мотал. – Унда халыҡ, бала-саға...

-- Беләбеҙ. Берәй аҙна, минимум өс тәүлек кәрәк булыр. Әле генә телефондан һөйләштем: пассажирҙарҙы алырға Инйәрҙән вездеходтар сыҡҡан. Айғырға артылғансы ғына тәпәйләһәләр...

-- Айғыр тигәнегеҙ атмы ул?

-- Шул исемле сағыл. Баяғы тау ишелеп төшкән артылыш.

-- Бында кемдәр эшләй, ни эш башҡараһығыҙ?

-- Шахматовскийҙың комсомол-йәштәр бригадаһы. Буласаҡ станцияға разъезд юлдары һалабыҙ. Тар араталы тимер юлдан килгән йөктө машиналарға бушатып тейәйбеҙ. Ҡыҫҡаһы, һәр төрлө авралдар менән шөғөлләнеү.

-- Мине бригадир менән таныштырһағыҙсы.

-- Бәй, танышманығыҙмы ни? Әле генә һеҙ баҫып торған усаҡ янында гитара сиртә ине.

Яҙыусының кәйефе ҡырылды:

-- Шулмы ни бригадир Шахматовский?

-- Бәй, шул булмай ни! Төнө буйына аврал яһап Инйәр яғына бетон торбалар тейәп оҙаттылар ҙа, саҡ ҡына серем итеп, инде баяғы тау ишендеһен

бөтөрөргә киттеләр. Уны шунда ғына күрә алаһығыҙ. Киттек, мин дә шул яҡҡа барам.

Әҙип, портфелен һәлендереп, прораб артынан тәпәйләне. Урыны-урыны менән ҡар ҡалын ине – ярай өйҙән, аҡылы етеп, күн башлы унталар кейеп сыҡҡан.

-- Ҡайһы яҡтанырaҡ йыйылған бригада егеттәре?

-- Илле проценты – ситтән. Ҡалғандары – тирә-яҡ ауылдарҙан. Ғәҙәти контингент.

-- Өҫ-баштары ҡараулы ғына күренһә лә, сәстәре, һаҡалдары етек...

-- Эйе, шулайыраҡ.

-- Әллә юғарынан килгәндәрен көтәһегеҙме, тим. Төктәрен көйҙәргә.

-- Ниңә? – Прораб туҡтаны. – Юҡ, яҙыусы иптәш, ярамай ул төктәргә яҫҡынырға – Төркөстан ҡом сүлендә түгелбеҙ ҙәһә. Беҙҙең удар эштәрҙең ун проценты шул төктәргә эленеп тора. – Серҙәше һүҙҙең асылына төшөнә алмауын күреп, аңлатты. – Эш бына нимәнән ғибәрәт, яҙыусы иптәш. Тартмайһығыҙмы? Бик шәп! – Моталдан йөҙөн бороп, тәмәке тоҡандырҙы. – Беҙҙең егеттәрҙең, -- тауҙар яғына ҡул һелтәне, -- кондиционерланған һауалы ҡала кабинеттарында ғына ултырып эшләмәгәнен беләһегеҙ. Улар йәйен-ҡышын анауы хоҙай-тәғәлә япҡан көмбәҙ аҫтында. Ыҙғар ел-бурандары ла, ә йәйҙәрен күҙ асҡыһыҙ серәкәйҙәре лә йәнгә тейә. Бына шунда яланғас бит, муйын менән түҙеп ҡара! Ҡала битниктары хаҡында әйтә алмайым, әммә беҙҙең һымаҡ трасса кешеләренә тыловиктар килтереп еткермәгән йылы битлеген дә, селтәрен дә алмаштыра тәбиғи төк, йәғни һаҡал-мыйыҡ. Беҙҙең менән бер алты ай эшләһәгеҙ, иманым камил, үҙегеҙ ҙә ҡалалағы коллегаларығыҙға йөнтәҫ айыу булып күренер инегеҙ.

Мотал өсөн көтөлмәгәнерәк булды:

-- Шулай тиһегеҙ инде.

-- Эйе. Һаҡал-мыйыҡ беҙҙең өсөн стиль түгел, ә мохтажлыҡ ул, туған. Ҡайберәүҙәр беҙҙең гитара сиртеүҙән дә мөгөҙ сығарып маташа. Боронғолай, яурынға тальян гармун аҫып йөрөгәнде яратырҙар ине, буғай. Был шарттарҙа гитаранан да ҡулайлырағын табып ҡараһындар әле!

Бетон шпалдарҙан ике-өс саҡрымдай аҙымлап, бульдозерҙар көр гөрөлдәгән, самосвалдар геүләгән, экскаватор шыҡырҙаған үргә менделәр.

-- Һеҙҙең сәфәрҙе бүлдерткән Айғыр сағылы тап ошо була инде. Ана ҡарағыҙ: Шахматовский бригадаһы эш кыра.

-- Раз-два, взяли! – Техниканың теше үтмәгән күбәташтарҙы егеттәрҙең һөймәндәре шыуҙырып түбән быраҡтыра. Йөнтәҫ бүрегенең ҡолаҡтарын ҡайтарып бәйләгән прораб та, тирләп-бешеп, таш тәгәрләтә башланы. Күмәк эшкә ҡыҙығып ҡарап торған Мотал, портфелен ситкә ҡуйып, ҡулына һөймән алды, көсөргәнешле бригадаға ҡушылды...

Төшкөлөккә туҡтағас, йөк машинаһына тейәлеп, ыҫтанға ҡайттылар ҙа баяғы ҡарағусҡыл корей ҡыҙы хәстәрләгән табынды һырынылар. Балыҡ тәңкәләреләй йылтыр өрөләре мөлдөрәгән ҡандай ҡыҙыл һурпалы борщтың татлы еҫе танауҙарҙы ҡытыҡлап, ауыҙ һыуҙарын ҡойолдорҙо. Боҫ борлатҡан беренсе һауыт ҡунаҡ алдына ҡуйылды, уңған ҡара арыш икмәге килде.

-- Икенсеһенә -- котлетмы, әллә ҡойҡа турап аралаштырған мейеме? – тип,

әмер көттө ашнаҡсы. Шахматовский Моталға бороддо:

-- Һеҙ нимә теләйһегеҙ?

-- Был борщ та болан ите һалып бешерелгәнме?

Ашнаҡсы дөрөҫләне:

-- Эйе, беҙҙә бөгөн барыһы ла болан итенән.

Яҙыусы ҡалағын ҡуйғайны, күҙәтеп ултырған Шахматовский прорабҡа өндәште:

-- Әйттем бит мин һиңә, юҡ менән бәйләнмәйек, тип. Яҙыусы иптәшкә аңлатып бир инде хәҙер.

-- Болан ите ҡайыҙлауыбыҙ ирекҡәндең көнөнән түгел, -- тине прораб. – Күрәһегеҙ бит участканың ниндәй төпкөлдә ятҡанын, ә эш кешеһенә тейешле калорийҙар кәрәк. Һуңғы аҙнала ит мәсьәләһендә ҡытлыҡ тыуҙы: тегендә ултырған тыловиктар, -- ҡалаҡ башын түшәмгә тоҫҡап күрһәтте, эштәрендә брак ебәргәндәр, шул арҡала браконьер исеме ала яҙҙыҡ. Ләкин лицензия бар.

-- Дөрөҫөрәге, уның номеры бар, -- тип төҙәтте Шахматовский. Прораб ҡуйын дәфтәрен сығарҙы:

-- Эйе, бына ул документтың числоһы, номеры. Урындағы егерь кәңәше буйынса, телефон аша бер боланға рөхсәт алдыҡ.

-- Ситтән тороп үбешеү һымаҡ була инде был, -- тип сирттерҙе егеттәрҙең береһе.

-- Так что, тартынмайынса керешегеҙ, -- тине прораб. Мотал, елкәһенән тирмән ташы төшөп киткәндәй тойоп, еңел һуланы, ләкин шунда уҡ ауыр көрһөнөп ҡуйҙы: тимер аждаһа килә, уның менән бергә телефон аша боландарға әжәл килә...

Тышта тәмәке тартырға өймәкләшкәс, үҙ һөнәренә тоғролоҡло әҙип уны-быны һорашырға, Аҡһаҡал тип йөрөтөлгән ҡарт эшсе менән әңгәмәләшергә китте. Ағай кеше Шахматовский бригадаһына үҙе һорап яҙылған, сөнки бында уның ауылы Сағыллы яҡын икән. Мотал йөрәген ут яндырғандай итте – Блюхер армияһында разведкаға барған атаһының тап шул Сағыллы ауылы эргәһендә аҡ казак пуләһенән яраланыуын, ләкин сафта ҡалыуын бала саҡтан уҡ ишетеп белә ине. Шулай ҙа был хаҡта ауыҙ асманы.

-- Йәштәр менән ҡуша йөрөп, үҙем дә йәшәреп киттем әле, -- тип ҡәнәғәт йылмайҙы әңгәмәсеһе. Прорабтың әйтеүенсә, Аҡһаҡал йәштәргә сер бирмәй – рельстәрҙе тегеү машинаһылай йөйләй. Ошоға тиклем егерме туғыҙ йыл буйы леспромхозда ағас ҡырҡҡан. Удар төҙөлөш башланғас, бысҡыһын йырлатып, ҡуйы урман күкрәгенән трассаға юл ярған. – Иң яратҡан уйынсығын эләктергән йәш балалай ҡыуанып, йүгереп йөрөп эшләнем: ул көндәрҙә донъяла минән дә бәхетлерәк ағас йығыусы булмағандыр, -- тине ул, үткәндәрен хәтерләп. – Мин генә түгел, бөтәбеҙ шулай тырыштыҡ. Ағас ҡырҡылып бөткәс, үҙем уйған осһоҙ-ҡырыйһыҙ йәшел коридор буйында хайран ҡалып ултырҙым. Нисек тә тиҙерәк поездар геүләп үткәнен күргем килде. Үҙ ҡулдарым менән шуны яҡынайтыу хаҡына, бына күрәһегеҙ, профессияны алмаштырҙым – юл һалыу эшенә өйрәндем.

-- Ниндәй көс тарта икән һеҙҙе?

Күҙҙәрендә эске йөрәк уты көйрәп ҡабынды:

-- Изге эш тарта беҙҙе. Был төҙөлөш – бөтәбеҙ ҙә ҡасандан хыялланып көтөп алған изге эш. Был тимер юл – киң донъяға тәҙрә!

Әммә Моталдың йөрәк төбөндә баяғы болан мөгөҙө ослайып төртә: был яңырыш, нисек кенә прогрессив булмаһын, Уралыбыҙҙың кеше аяғы баҫмаған гүзәл тәбиғәтен лицензияһыҙ-ниһеҙ һәләк итмәҫме, донъяны ҡоротмаҫмы?..

Йәнә кискәсә эшләп, арып-талып ҡайтҡандан һуң, ҡыҫынҡы ғына вагонсыҡта Шахматовский менән бер койкаға йығылғас, күҙен бөргән көскә ҡарышып, һораны:

-- Иртән усаҡ эргәһендә көйләгәнең ни ине?

-- Әллә оҡшанымы?

-- Көйө арыу ғына былай. Әммә һүҙҙәре, тураһын әйтәйем, күңелде өйкәне. Тупаҫыраҡ.

-- Ни хәл итәһең инде, -- тине бригадир. – Тау-таш араһында яралғас, шыма түгелдер шул.

-- Репертуарҙың лайыҡлырағын һайларға кәрәк ине.

Шахматовский тороп ултырҙы:

-- Ҡайҙан? Күктәнме? Фәрештәләр беҙҙең эштәрҙе күрмәй бит. Ә хөрмәтле шағирҙарыбыҙ, композиторҙарыбыҙ фәрештәләрҙән дә йырағыраҡ – етенсе ҡат Күктә йөҙөп йөрөйҙәр. Урал тауын арҡыры ярып сығып барабыҙ, ә төҙөлөш тураһында берәй йүнле нәмә яҙғандары бармы? Тау аҡтарған халыҡ йырлай ҙа белә, уның йырлағыһы килә!

-- Сәғәте һуҡмағандыр. Йырҙары ла, поэмалары ла тыуыр, -- тип кенә әйтә алды әҙип, баш ҡалала тарихҡа ҡаршы ҡубарылған йәмһеҙ яуҙы хәтерләп.

-- Юлдар төҙөлөп бөткәс, бөтәбеҙ ҙә пенсияға киткәсме?

Мотал да тороп ултырҙы:

-- Йырҙарҙы әйтә алмайым, әммә эшсе синыфҡа арналған китаптарыбыҙ байтаҡ.

-- Ләкин ниндәй китаптар?! Эшсе синыфтың йәне бармы ул китаптарҙа? Бына был, мәҫәлән? – Егет тумбочканан үрелеп алған, тышлығы айырылған баҫмала әҙип үҙенең урыҫ теленә тәржемәләнгән очерктар йыйынтығын шәйләне. – Ас кешенең асыуы яман, тигәндәй, эштән арып ҡайтҡан әҙәмдең дә һүҙҙәре тура була, ә бөгөн беҙ икебеҙ ҙә арып ҡайттыҡ... Йыйып ҡына әйткәндә, ғәфү итегеҙ, эшсе кешенең тәрән эске донъяһын, күңел түрен станоктар фрезынан, шестерналар һырынан һәрмәнә һаман һөйөклө әҙиптәребеҙ. Һәр хәлдә, миңә шулай тойола...

-- Әрепләшә алмайым...

-- Эшселәр темаһына уңышһыҙ китап сыҡҡаны һайын, беҙ авторҙы эшсе тормошон белмәүҙә ғәйепләргә күнеккәнбеҙ, -- тип йомғаҡланы Шахматовский. – Ләкин хәл, минеңсә, төптө башҡасараҡ тора: автор *үҙен* яҡшы белмәй. Үҙен тәрәнтен белгән кеше генә бүтәндәрҙең эске донъяһына керә ала... Кисерегеҙ беҙҙең тура әйткәндәрҙе.

-- Зыян юҡ, барыһы ла – файҙаға.

-- Иртәгә лә, ял көнө булһа ла, кисектергеһеҙ эштәр бар – йоҡлайыҡ.

Ләкин Мотал тиҙ генә арына алманы – баш ҡаланы, ундағы бер фабрика китапханаһында үҙен ҡунаҡҡа саҡырған һәм йәшлегендәге әҙәби тормош тәжрибәһендә беренсе тапҡыр булған китап уҡыусылар конференцияһын хәтерләне. Трибунаға сығыусылар шундай шыма һөйләйҙәр, уның тап ошо Шахматовский ҡулындағы китабын шундай йөрәкһеп маҡтайҙар, бер-береһенең фекерен үҫтереп тулыландыралар – тыңлап ултырһаң, үҙе бер оҫта композициялы әҫәр ине. Мотал шунда иң төплө күренгән сығышсыларҙың текстарын һоратып алды, йомғаҡлау телмәрендә, күңеле тулышып, ҡағыҙҙарҙы башы осонда һелкеп, ҡәҙерле эшсе-уҡыусыларымдың йөрәк йылыһын, яҡты фекерҙәрен туплаған был яҙмалар киләсәктәге ижадыма көс биреүсе дәрт сығанағы булып үҙемдә һаҡланырҙар, тине. Машинкала баҫылған шул телмәрҙәрҙе өйҙә аҡтарғылап ҡарағас ҡына, сәстәре үрә торҙо, ер тишегенә инеп китерҙәй оялды: «эшсе фекерҙәре»нең һәр береһенең аҙағына: «Китапхана мөдире фәлән-фәләнова яҙып әҙерләне», -- тип ҡултамға ҡуйылған, ә тәүге биттәрҙең өҫкө мөйөшөнә: «Ҡаршы түгелмен, эшсенән уҡытырға ярай, комсомол бюроһы секретары фәлән-фәләнов» һым: «Раҫлайым: партком секретары фәлән-фәләнов», -- тип резолюциялар һалынған... Хәтһеҙ хәтере ҡалып, фабриканың комсомол бюроһы секретарына шылтыратты ла эсен яндырып барған үпкәһен белдерҙе:

-- Ниңә китап уҡыусыларҙы шпаргалканан һөйләттегеҙ, үҙ фекерҙәрен сатнатып әйттертмәнегеҙ?

-- Ярамай, -- тине йәш етәксенең олпатланып киткән тыныс тауышы. – Үҙегеҙ белергә тейеш: әҙәбиәт – идеология фронты. Идеология фронтында кәмәне һыуҙың ағышына тапшырырға ярамай – партиябыҙ шулай өйрәтә. Әгәр беҙ шулай итһәк, трибунан беҙ бөтөнләй планлаштырмаған, көтөлмәгән фекерҙәр ҙә ысҡыныуы ихтимал.

Ошонан һуң Мотал бик күп форумдарҙа ҡатнашты, хатта үҙе сығып һөйләргә тейешлене лә партия өлкә комитетында уҡытып, фатиха алыу мотлаҡлығына күнекте. Сөнки беҙҙең ауыҙҙарҙан кеше үҙе һөйләмәй, ә партиябыҙ фекере атҡарыла, һәр хәлдә был шулай булырға тейеш...

Иртәнге туңғаҡта, кистән һөйләшелгәнсә, бригада егеттәре Моталды ла алып тау һырты аша Сағыллы ауылына саңғыларҙа елдерҙе. Алыҫтан уҡ манаралай сурайған сағыл, яҡынлашҡан һайын, кеше ҡиәфәтенә кереп, оҙон шинель кейеп биленә ҡылыс таҡҡан ҡыҙыл һуғышсы һынына әйләнде, ул туранан-тура ер үҙәгенән үҫеп сыҡҡандай ине. Ҡая битенә ике бағаналап ошонда һәләк булған граждандар һуғышы ҡыҙыл ҡаһармандарының исемдәре яҙылған, егеттәр шул исемлек аҫтына һуңғы штрих – ураҡ-сүкешле ҡыҙыл йондоҙ яһарға килгән имеш.

-- Шуны уйлап торам әле, -- тине Мотал, -- был тиклем ҙур мөғжизәне ҡайһылай тыуҙырҙығыҙ?

-- Күмәк көс менән. Үткән көҙ Октябрь байрамында башлағайныҡ, ҡыш буйы ял көндәрендә һәм эштән һуң килеп эшләнек. Ошо ерҙә һеҙҙең атайҙың да ҡаны түгелгән тип ишеттек, был уға ла һәйкәл булһын.

-- Рәхмәт. Арағыҙҙа скульптор ҙа бар икән.

-- Бына ул! – Шахматовский кисә усаҡ эргәһендә тояҡ өтөп мәш-килгән егетте күрһәтте. -- Ә беҙ, ҡалғандар, уның мускул көстәре, көнләксөләре генә...

Күҙ күреме һуҙылған үркәс-үркәс тауҙарҙан, Блюхер армияһы ташҡынында атаһы ла уҙған Иҙелбаш тарафынан, сикәләрҙе ҡытыҡлап яҙ еле иҫте, ҡолаҡҡа ул атай тауышылай шыбырҙап ишетелде: «Ослобаш шлемдар кейеп, маңлайҙарҙа ҡыҙыл йондоҙҙар ҡуҙратып, тыуған ерҙе изге ҡандарыбыҙ менән һуғарып уҙҙыҡ беҙ, улым. Уҙҙыҡ, ләкин юҡҡа сыҡманыҡ – бейек тауҙар булып ҡалҡынып ҡалдыҡ»...

Донъяла ғәжәп хәлдәр күп: Сағыллыла Моталды һыйларға өйөнә алып ҡайтҡан ҡолхоз көтөүсеһе - Ҡуҙйылғалағы атай дәфтәрен солоҡта яҭҡырып аҫыраусы Мирхәйҙәр-карыйҙың Ямырҙа тигән бер туған ҡустыһы имеш. Өҫтәүенә, үҙенә күрә йор күңелле, ҡыҙыҡ һүҙле йән икән:

-- Тимер юлдан килгән саҡта ҡайһы тауҙан артылдың?

-- Әллә тағы, - Мотал ҡул һелтәне, - ошо урман араһындағы ҡырлаларҙың береһенән.

Ағай томораланды:

-- Донъяға ҡул һелтәп кенә ҡарама улай, кустым.

-- Бәй, - Мотал аптырап ҡалды, - мин донъяға ҡул һелтәргә йыйынмайымсы.

-- Һинең урында булһам, "әллә тағы" тип кенә ҡуймаҫ инем. Менгән-төшкән һәр ҡырламдың исемен төпсөнөр инем.

Мотал тирә-яҡҡа ишаралап көлдө:

-- Һи, ана күпме улар! Берәй исемһеҙ тау-таш булғандыр, моғайын.

Ләкин ағай һис кенә лә уйынға борорға теләмәй:

-- Исемһеҙ кеше булмағандай, атамаһыҙ тау-таш та булғаны юк ул, ҡустым. Табғас ҡағанының ҡылығын хәтерләтәһең миңә.

-- Ә? Ниндәй табғас ҡағаны?

-- Хәҙергесә әйткәндә, үҙебеҙҙең халыҡтан аҙып ҡытайға әүерелмеш хан -- ҡытай императоры була инде. Иҫке заман бәндәһе.

Йәшермәйек: сағыштырыу оҡшаманы Моталға.

-- Бында табғас-ҡытай императорының ни ҡыҫылышы бар, ағай? – тине, ҡәнәғәтһеҙ тамаҡ ҡырып.

-- Туранан-тура. - Ямырҙа әҙипкә күҙ һалды. -- Әллә тарих уҡымайһыңмы, мырҙам? 1Ү-Ү быуаттарҙа Урал халҡы үҙенең аҙған ҡан-ҡәрҙәштәренә йәғни ҡытайҙарҙы баҫып алып шунда император булғандан һуң үҙҙәре лә ҡытайға әйләнмеш табғас империяһына ҡаршы үлемесле яу алып барғанлығын белмәйһеңме?

-- Үтә тәрәнгә сумып киттек түгелме?

-- Һай йөҙәбеҙ, минеңсә.

Мотал көлдө:

-- Мин менгән ҡырлала табағас та, таба ла күренмәнесе.

-- Куренмәҫ тә! Урал батырҙың аҡыҡташы яҡтырта ул үрҙәрҙе! – Күҙҙәренән эске нур балҡыған көтөүсе тыуған тауҙарына ғорур ҡараш атты. – Их ҡустым-кустым, ҡыйырһыта яҙҙың минең күңелде! -- тип баш сайҡаны. Уның ирәүән ҡиәфәте Моталға ел-ямғыр йышҡан гранит ҡаялай куренде.

-- Ғәфү ит, ағай, -- тине, яҙа баҫҡанына үкенеп, - Рәнйетергә теләмәгәйнем һис тә.

-- Мине түгел -- үҙеңде рәнйетәһең. Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән, ти боронғолар. Ә һин абайламайыраҡ ыскындырҙың... беҙҙең тауҙар тураһында. Йә ярай, алыҫтан килгән мосафир хәлеңде иҫәпкә алып, һин әйткән ул «тау-таш»тарҙың мәғәнәһен төшөндөртөп бирәйем. Ә һин, мосафир, ил һүҙен елгә түгел, ә илгә таратырһың. Урал батырҙың ҡарайыу белмәҫ аҡыҡташы тураһында бара һүҙ. - Ямырҙа дөрләгән мейескә әрҙәнәләр ырғытып, урындыҡҡа аяҡ бөкләп ултырҙы. Мотал күҙҙәрен йомоңҡорап, йылыға иҙерәп, тыңларға һәүәҫләнде. Хужабикә сығып киткән – аулаҡта ҡалғайнылар. Һәлмәк кенә сытырҙаған ут алҡымы минуттарҙың серлелеген арттырҙы.

-- Тарих китаптарынан билдәле булыуынса, - тип башланы көтөүсе «арт һабағы»н, - боронғо табғас императорҙары, үҙҙәре ҡытай булып киткәндән һуң ҡытай ҡанунын тотоп, үҙҙәрен -- ерҙең кендеге, илдәрен – хоҙайҙың Күк түренә ҡаратылған иң изге урыны тип, ә бөтә донъя уларҙың ҡул аҫтында бейеп кенә йәшәргә тейешле түбән зат (варвар) тип һанағандар, шул йәһәттән күрше илдәр һәм халыҡтар менән өҙлөкһөҙ ҡанлы һуғыш алып барғандар. Бына бер заман императорға хәбәр килеп ирешә: төньяҡтараҡ Урал тигән тау яғаһында йәшәгән халыҡ баш бирмәй, ҡытай еләне кейергә һәм ҡытай телендә һөйләшергә, ҡытай табынған изге Буддаға табынырға теләмәй – ҡылыс-уғы менән табғас ғәскәрҙәрен эҙәрләй. Бер быуат үтә шулай һуғышып, ике быуат үтә, өсөнсөһө китә. Гөрләп торған ҡалалар харабаға әүерелә, яңылары ҡалҡына, күп халыҡтар ер йөҙөнән юйыла, күптәре юҡтан көсәйә, «изге Күк аҫтында» табғас императорының береһен-береһе алмаштыра, әммә төнъяк сиктәрҙә һуғыш бер көнгә лә баҫылмай. Баш эйеүҙе талап итеп ебәрелгән император илселәрен үткер сәсән телдәрендә көлөп-мәсхәрәләп, әсәнән тыумаса яланғасландыртып, тәүҙә киҫмәк тулы балға сумыралар, артынса уҡ ҡотһоҙ өкө йөнөндә әүмәләп-аунатып, эҙҙәренә ҡарама көлө һибеп, күттәренә тибеп кире ҡайтаралар, ә император ғали йәнәптәренә сәләм итеп ебәргән мәктүптәре бер: «Урал батыр табаны баҫҡан аҡыҡташ Уралда саҡта, берәүгә лә баш эймәбеҙ, Урал тауы кеүек кирем торорбыҙ!

Урал халҡын бер нисек тә баш эйҙертә алмағас, табғас императорының һөрөмө йөҙөнә сыға:

-- Юҡмы ни беҙҙең ерҙе ябып бара торған шанлы ғәскәрҙәребеҙ? Юҡмы ни ҡылды ҡырҡҡа яра торған ҡылыстарыбыҙ? Һарансалай ябырылып керегеҙ, беҙҙең бөйөк империя ҡаршыһында эйелмәгән ғорур баштарын ҡылыс менән кәбеҫтә күсәнеләй ҡырҡығыҙ, баҫып торған ерҙәрен беҙҙең аяҡ терәр тәхет балаҫы ҡылығыҙ! - тип екерә ул аҡыллы вәзирҙәренә.

-- Буйтым эшләп ҡараныҡ та ул, ләкин булдыра алманыҡ: сиктәренән үткәрмәйсә, ғәскәрҙе һуйып-ҡырҙылар. Урал батыр табаны баҫҡан аҡыҡташ Уралда сағында һонолорға ҡулыбыҙ ҡыҫҡа шул... - тип зарланып яуап бирәләр аҡыллы вәзирҙәре.

-- Юҡмы ни беҙҙең донъялағы иң бөйөк хоҙай Буддабыҙ? Ғорурҙарҙың ҡуҙҙәрен ҡамаштыртырға, күңелдәрен аймылыш ҡылырға шуның ҡара мәрмәрҙән ҡойолған изге һынын илтегеҙ, бөгөлмәҫ билдәрен Будда тылсымы менән ҡырҡҡа

бөгәрләтегеҙ!

-- Быны эшләр инек тә ул, Урал халҡы араһында Буддаға ла урын юҡ. Урал батыр табаны баҫҡан аҡыҡташ Уралда саҡта -- ил доғаһы Уралда.

-- Юҡмы ни беҙҙең юлһыҙ ерҙә юхалап юл табыусы, йылымһыҙ күлдә йылытып йылан бейетеүсе таҫма телле шымсыларыбыҙ? Бөгөлмәгән ғорурҙарҙы һарайға алдаулап килтерегеҙ, император һыйы алдында баштарын эйҙертегеҙ!

-- Бик тырышып үтәр инек тә быны, ләкин үҙебеҙҙең һыйҙан үҙебеҙҙең ауыҙ беште. Урал батыр табаны баҫҡан аҡыҡташ Уралда саҡта, ул ғорур халыҡ Урал һыйҙарынан төңөлмәй, кеше табынына өңөлмәй.

-- Шул саҡлы бөтә халайыҡты үҙ янында тотор булғас, асылында нимә һуң ул Урал батыр табаны баҫҡан аҡыҡташ? -- тип, император иғтибарын эштең асыл үҙәгенә йүнәлткән.

-- Ул халыҡтың Урал батыр тигән башбабаһы бар, -- тип аңлатҡан аҡыллы вәзирҙәре, -- уның һөйәктәре күмелгән Уралтау тигән оло уба бар. Шул убаның маңлайында, тере күҙҙәй көнгә балҡып, орсоҡбаш ҙурлыҡ ҡына аҡыҡ ята. Ул аҡыҡташ, донъя яратылғанда, Урал батыр, билдән ергә батып, яуыҙ дошманы Шүлгән менән алышҡанда, имеш, Урал батырға табанынан ерҙең ҡөҙрәтен биргән, ә ул Шүлгәнде йыҡҡас, Урал батыр табанына йәбешеп өҫкә сыҡҡан. Урал батыр үҙе үлгәс, аҡыҡташты уның убаһы маңлайына ер күҙе итеп балҡыта һалып ҡуйғандар, бөтә күҙҙәргә нур биреүсе ил күҙе тип атағандар…

-- Изге Күк ҡабағы аҫты империябыҙҙағы иң игелекле шымсыны эҙләп табығыҙ, Урал батыр убаһына юлландырығыҙ, -- тип бойорған император. -- Ул шуңда көнө-төнө гөрзә йыландай шыуышып барһын да бөтә күҙҙәргә нур биреүсе ил күҙен һуҡырайтһын!

Ошонан һуң бик күп айҙар һәм йылдар уҙған, Бөйөк ҡытай стенаһы буйынан күп елдәр иҫкән, һыуҙар аҡҡан. Бер заман иң игелекле шымсы бейек диуарҙы төньяҡтан аша төшөп, телен арҡыры тешләп, император тәхете төбөнә ҡайтып йығылған.

-- Булды, бөйөк бойороҡ үтәлде, Урал иленең бөтә күҙҙәргә нур биреүсе ил күҙе һуҡырайтылды! -- тип белдергән ул. Император тәхетенән ырғып торған, ҡулын һоноп аҡырған:

-- Һәй буласаҡ киҫекбаш, ҡайҙа аҡыҡташ, килтер бында!

Игелекле шымсы иҙәндең саңын ялап ялбарған:

-- Зинһар, башымды киҫтертмәгеҙ, әйтеп бөткәнемде көтөгөҙ! Аҡыҡташ шундай балҡыш -- ете ҡат көп аҫтынан да нуры тышҡа бөркөлә, етмеш саҡрым алыҫлыҡтан күренә -- уны йәшереп Бөйөк стенаға килтереп еткерер әмәл юҡ.

-- Ниңә ҡуптарып алманың, селпәрәмә килтермәнең?

-- Ҡуптарып алыуын-алдым, ләкин аҡыҡ усымда уҡ мең-мең нурлы ап-аҡ ҡомдай сәсрәп, Урал еренә һибелде – бөтөн Урал иленең күңелен яҡтыртты, усымда бер остоҡ саңы ғына ҡалды...

-- Аныһын ни эшләттең?

-- Иң шәп хәйлә уйлап таптым – Шүлгән күленә илтеп һалдым.

-- Балҡышы юғалдымы? - Булған император һорауы.

-- Унының мин күрмәнем. Дегет мискәһенә сумған бал тамсыһылай батты, шунда уҙ гурен тапты.

Император хәрби борғо тарттыртҡан, ғәскәрҙәрен Урал батыр иленә юлландырған:

-- Бөйөк стенаны аша артылғас та, осраған һәр башты билсән урынына сабығыҙ, кәүҙәләрен бесән итеп өйөгөҙ – ут төртөргә сүп яһап, Урал тауын империямдың Күк ҡабағы аҫтына кусерегеҙ! Ә был шикле бәндәне, -- тигән ул, шымсыға төртөп күрһәтеп, -- игелектәре ҡасанмы аҡланғансы, Урал яғына киткән ғәскәр кире әйләнеп ҡайтҡансы, ҡапҡаны һайын һөрһөү ҡалъя һоғондортоп, затлы алтын ситлеккә бикләп тотоғоҙ!

Ғәскәр Бөйөк стенаны ашып оҙаҡ та бармай, дала шырпы һыҙған кеуек тоҡана: Өргөн – Инәсай таҡтаташтарына ядкәр итеп ырылған, тарихтағы иң ҙур һаналған һуғыштарҙың береһе башлана. Был һуғыш куп йылдар буйы баҫылмай дауам итә.Табғас халҡының яртыһы, Бөйөк стена аша артылып, дала ҡоҙғондарына емтек була. Ул ғына ла етмәһә, һуғыш өйөрмәһе Бөйөк стенанан ырғылып, табғас ҡалаларын емереп уҙа, илдә ҡолаҡ ишетмәгән, күҙ курмәгән оло ҡырылыш башлана. Ғәрәсәт ялҡыны император һарайына ла ҡабынып, эҫе теле итәк-салғыйын ялмағас, алтын ситлектәге шымсынан яуап алыу башлана:

- Аҡыҡташынан яҙған тау ниңә бында күсмәй, халҡы ниңә һаман яман ғәйрәтләнә? - тип язалайҙар уны. Язаларҙың һуңғы сигенә еткәс, игелекле шымсы теленән аҙаҡҡы мәғлүмәт йолона:

-- Аҡыҡташтың саңдай ғынаһын Шүлгән күленә батырып ҡына Урал халҡын баш эйҙертеү мөмкин түгел, сөнки аҡыҡташтың нурлы саткылары кешелрҙәң күҙендә һәм йөрәгендә мәңге һүнмәҫ төйнәлгән.

- Бына был -- алтын мәғлүмәт! - тигән император. – Был шымсымдың алтын теле менән ҡуша башын ҡырҡап алығыҙ, тубә ҡапҡасын саф алтындан ялатып, һарайҙағы иң хөрмәтле алтын сөйгә элегеҙ. Һуғыштарҙы туҡтатығыҙ, баш эймәүсән ул дошманга иң баш эйеүсән илселәрҙе ебәрегеҙ – кеселекле солох һорап ялбарырға. Ул бөгөлмәҫ ғорур Урал кешеләренә, ун меӊ йыл буйы һеҙҙеӊ менән дуҫ булырға, һорағанығыҙҙы һоноп кына торорға, ҡыҙ бирешеп ҡоҙа-ҡоҙағый булышырға теләйбеҙ, тип әйттертегеҙ. Солох алыныу менән үк, империялағы икенсе бер игелекле шымсыны табып килтерегеҙ, уға ярҙамға ун меӊ шымсы бирегеҙ: таралһындар, гөрзә йыландай шыуышып, Урал батыр иленә. Ерҙеӊ һәр ек-япҡытын айҡаһындар, утыҙ ике теш араһынан сыҡҡанды тыңлаһындар, ил күргәнде күрергә өйрәнһендәр. Шул рәуешле ун меӊ йыл буйы ил гиҙеп, ерҙәрендәге Урал батыр табаны баҫкан аҡыҡташты хәтерләтмеш ялтырауыҡ һәр ташты, балсыҡты, саӊ остоғон ҡырсып алып ҡара һыуға батырһындар, ер-һыуҙарына, тау-таштарына исем биргән билдәләрҙе юйһындар, исемдәрен исемһеҙлек менән алмаштырһындар, кешеләренеӊ күӊеленә ҡара шом тултырһындар -- шунан да олораҡ игелек кәрәкмәҫ беҙгә. Ғорур кешеләр йөрәген аҡыҡ-нурға бәйләп тотҡан нурлы төйөндө ҡырҡыу өсөн иӊ ышаныслы хәйлә -- ул кешеләрҙеӊ хәтерҙәрен ҡыҫҡартыу, изге аҡыҡташтарын хәтерләткән тарихтарын оноттортоу! -- тип тамамлаған, ти, император үҙенеӊ тарихи бойороғон…

Ямырҙа торҙо, дөрләп янған мейескә йәнә әрҙәнәләр ташпаны.

-- Бына шулай, ҡәҙерле ҡустыҡайым, аҡыҡташтарҙың хәле, -- тип уйсанланып һөйләнде. -- Әммә ил хәтере өсөн табғас император әмеренән дә ҡурҡыныслыраҡ дошман бар -- ваҡыт. Ул бөтәһен онотторторға яҫҡына. Ваҡыт ул, әгәр ҙә белгең килһә, беҙ-иҫәүәндәрҙән аҡыҡташтарыбыҙҙы үҙ ҡулдарыбыҙ менән ҡара күлгә һалдырта... – Дөрләүү мейес ипкене һымаҡ йылы ҡарашын Моталға йүнәлдерҙе: -- Ҡайһы ҡырла аша төштөм тиһең әле һин?

Мотал, тәҙрәгә бармаҡ төртөп, алыҫта сурайған аҡ түбәне күрһәтте.

-- Аҡыҡтау тип йөрөтәләр беҙҙә уны... Моң үҙәген кисеп үткәнһең, мырҙам: уның ҡурайы һымаҡ ҡурай илдә юҡ. Ишмырҙа ҡурайсы шунан ала ине шаңғыр ҡурайҙы... -- Кәштәнән, үрелеп, улән ҡурай һәрмәне лә бер-ике шыңғырҙатып өрҙө. -- Әлбиттә, мәшһүр Ишмырҙаның исеме сыҡҡас, мин фәкиргә тотоноуы ла ҡыйын, --тине. -- Әммә ҡунаҡ хөрмәтенә баҙнат итәмен инде. Шуныһын да онотмайыҡ: донъялағы һәр ҡурайҙың, курайсының да үҙ тауышы, моңо бар, -- тип өҫтәне. Ил ағаһының күкрәгенән донъяларҙы әсир иттерткес ҡурай моңо таралды.

Моталға был сихри сәғәт үҙенең һиҙҙертмәй үтеп китеп барған йәшлеге менән дә, ҡыҙыл йондоҙло буденовка кейгән яугир атаһының легендаға кергән йәшлеге менән дә бер юлы осрашыуы һәм хушлашыуы кеүек ине...

- Шулай. -- Ағай кеше тылсымлы көпшәһен ҡуйҙы. -- Ҡурай менән ата-бабалар быуаттарҙың ҡара шырлыҡтарын ярып сыҡҡан, Аҡыҡтауҙарын ҡурсалап алып ҡалған.

Мотал зиһенен йыйҙы, үҙен бында килтереп еткергән форсатҡа уҙамандың фекерен белгеһе килде:

-- Комсомолдарҙың ҡаяташты юнып яһаған яугир һыны иҫ киткес бит, эйеме?

-- Иҫ киткес.

-- Һәләк булған яугирҙәрҙең ташҡа уйып яҙылған изге исемдәре…

-- Бөтәһе лә түгел шул.

-- Табғастарға ҡаршы һуғышыусыларҙыҡы юҡ-юҡлығын, уларҙы белмәйбеҙ бит.

-- Ҡыҙылдарҙы ғына түгел, ҡыҙылдарға ҡаршы торған аҡтарҙы ла беләбеҙ, уға ҡалһа.

-- Бәй, әллә шуларҙың да исемдәрен яҙҙыртмаҡсы уйығыҙ?!.

Ағайҙың иҫе китмәне:

-- Әлбиттә.

-- Аңламайым.

-- Әле ниндәй илебеҙҙә йәшәүеңдең ҡәҙерен беләһеңме? Белһәң, яугирҙәребеҙҙең ҡәберен дә, исемдәрен дә бел, белдерт.

-- Исемдәре яҙылған даһа?

-- Кемдәрҙең? Автономиялы дәүләтебеҙҙе бит ҡыҙыл башҡорттар түгел – аҡ башҡорттар ҡан түгеп яулап алды, аманат итеп беҙҙәргә бирел ҡалдырҙы.

Яҙыусыбаҙ тертләп телен тешләне…

-- Гәзиттәрҙе шаулатҡан тимер юлындың гөрзә йыландай ҡаяуланып

ҡайҙа кереп киткәнлеген беләһеңме? – тине хужа, бераҙ тынып торғандан һуң, етди-һынаулы ҡарап.

-- Шунда барып етергә ине.

Йәнә көтөлмәгән һорау:

-- Паспортың буйынса башҡортмы һин, мырҙам?

-- Әлбиттә!

-- Әләйһә юлың ябыҡ – Ҡуҙйылғанан ары үткәрмәйәсәктәр.

-- Ни өсөн?

-- Барғас күрерһең. Шунда йәшәгән Мирхәйҙәр ағайымдан сәләм килде: «Шанлы Шаһибәрәков ҡорҙашымдың уланы һеҙҙең яҡта ирегеп йөрөмөш икән. Шуны эҙләп табып, үҙемә килтереп еткер!» -- тип ҡәтғи бойорған.

Иртәнге ҡатҡаҡта еңел санаға ат егеп, ҡар утрауҙары араһындағы ҡара ерҙе сыйҙыртып барҙылар. Бейек үрҙе артылғанда туҡталып, икеһе лә төшөп баҫты. Ҡайҙа ҡарама – икһеҙ-сикһеҙ хозурлыҡ, ҡарурманлы тау үркәстәре зәңгәр офоҡтарғаса сиратланған, Инйәр һыуы үҙәнендә, нескә ептәй һыҙатланып, тар араталы иҫке тимер юл, шуға йәнәшә өҫтәрәк удар тимер юл һуҙымы ята ҡарайып. Ямырҙа ҡая иңенән бер таш киҫәген үрелеп алды, усында әйләндергеләп, күҙҙәренә яҡынайтып, хатта битенә үк терәп һөйләнде:

-- Их! – Ҡарашы алыҫ офоҡтарға төбәлде. – Көндөң беренсе нурҙары *ла*, елдәрҙең алғы типкене *лә* тәүбашта ошонда һуғыла -- Аҡыҡтауҙың түбәһендә торабыҙ...

Мотал тирәһен байҡаны:

-- Нурлы аҡыҡташы ҡайҙа?

-- Һәр беребеҙҙең йөрәгендә, күңелендә! – Шулай ҙа уфтанып көрһөндө. – Их, Урал сағылдарын ашатлап, тимер аждаһа килә *лә* ул, килеүен... Әммә, тимен, бына ошо ғәзиз таштарыбыҙҙы – таш, ағастарыбыҙҙы – ағас, һыуҙарыбыҙҙы – һыу, йәнлектәребеҙҙе – йәнлек, исемдәребеҙҙе – исем килеш ҡалдыра алһаҡ ине... – Ғәмдәренә төплө яуап биргәндәй, өҫтәне. – Бөтәһе *лә* бит беҙҙең үҙебеҙҙән тора, *үҙебеҙҙән!*.. – Санаға ултырғас, ат ыңғайына ҡуйып, юлдашының йөрәгенә йомшаҡ япма һалырға теләгәндәй, йомшаҡ ҡына киҫәтте. -- Ә Мирхәйҙәр-ҡарыйға барыуың яҡшы – ғибрәт алып китерһең. На, малҡай!..

Сана табаны сыжлауына ҡушылып, яҙыусының ҡолаҡтарында шауланы: «Бөтәһе *лә* бит беҙҙең үҙебеҙҙән, үҙебеҙҙән!..»

## ЕГЕРМЕ ИКЕНСЕ СӘХИФӘ

Вилор Иҫәрғәп улы Иҫәрғәпов үҙенең был республикаға Кремлдән юлландырылғанда йөкмәтелгән изге миссияһының бойомға ашырылышындағы иң юғары нөктәгә үркенләүен – тымыҡ күлде болғатыусы аждаһа-суртанды, ниһәйәт, айғолағынан маткып алып ҡоро ярға бәрергә хәйерле сәғәт һуҡҡанлығын йәненең бөтә булмышы менән тойоп, Оло йортта партия өлкә

комитеты бюроһының киңәйтелгән ултырышын йыйҙы. «Киңәйтелгән» даирәһенә атаҡлы совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами, мәҙәниәт, мәғариф министрҙары, телерадио комитеты рәйесе, республика гәзит-журналдарының мөхәррирҙәре, республиканың Статистика идаралығы башлығы, Тарих, тел, әҙәбиәт институтынан Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙар комитеты рәйесе телсе-ғалимә Мирйәнова Сәүиә Фазыл ҡыҙы, профессорҙар Йәмил Ҡотлоев, Йыһандар Хәкимуллин, Ғаяс Хөсни үҙенең шәкерте Рәшит Алмаҡаев менән саҡырылғайны. Бюро мәжлесе, ғәҙәттәгесә, урыҫ телендә барҙы, шуға күрә был юлдарҙың авторы уны роман теленә ярашлы башҡортсалаштырып бирһә лә, урыны-урыны менән урыҫса өлөштәр ҡалдырылыуына ла аптырамаҫҡа кәрәк. Ултырышҡа ҡуйылған мәсьәлә -- «Идеология фронтындағы негатив күренеште бөтөрөү» -- көнэлгәре үк бөтәһенә лә белдертелгән, ҡәҙимгесә, ҡыҫҡа һәм аныҡ һөйләү шарты мотлаҡан ине. Вилор Иҫәрғәп улы асып ебәрҙе:

-- Беләһегеҙ: республиканың экономикаһы ыңғай яҡҡа үҫешһә лә, партия ойошмабыҙ һыңар аяҡҡа аҡһай – идеология фронтында баш-баштаҡлыҡ, әгәр әйтергә яраһа, анархия үҙенең серек туйын үткәрә һаман. Бына партиябыҙ Үҙәк Комитетынан төшөрөлгән документ, -- ҡағыҙ шәлкемен башы осонда болғаны, -- үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм хөрмәтле ветеран-әҙип Йонос Зарайҙың Үҙәк Комитетҡа шәхсән Михаил Андронович Сусликов иптәшкә тәғәйенләп яҙған һәм бик дөрөҫ яҙған шикәйәт-хаты...

Ултырыштағылар, баштарын эйеп, ысынлап та яҡшы таныш ул әҙиптең тап Ғаяс Хөсниҙеке һымаҡ уҡ кәрлә, әммә йыуантыҡ буйлы, шул уҡ ваҡытта Хөсниҙеке кеүек үк ҡаҡса-«фанера» йөҙлө теремек ҡиәфәтен күҙ алдына килтереп хәүефләнде. Замана елдәре ыңғайына әле башҡортса, әле татарса һөйләшеп йөрөгән ҡартлас әҙип утыҙынсы йылдар аҙағында ифрат эшмәкәрләнеп, күренекле ҡәләмдәштәрен гәзиттәрҙә башҡорт милләтселәре рәүешендә фашлап-күҫәкләгән, «Ежов иптәшкә» тигән мәҙхиә яҙып баҫтыртҡан («Үктәбер» журналынан уҡырға була), тиҙләтелеп аттыртылған баяғыларҙың ғәмәлдән сығартылған мәктәп дәреслектәре урынына партия һәм үҙ рухындағы дәреслектәр авторына әйләнгән һәм Яҙыусылар берлегенең Афзал Таһировтан бушатылған рәйес креслоһына мыҡты менеп ултыра алған авантюрасы ине был. Әммә оҙаҡ эш ҡырырға тура килмәне уға: йәнгә тейгес фин һуғышы башланып, фин ҡарҙары араһында Ҡыҙыл Армия күп ҡырылып, шулар урынын тултырмаҡҡа яңы яугирҙәр кәрәккәс, хәрби комиссар башҡалар менән бергә атаҡлы Йонос Зарайҙы ла изге хәрби хеҙмәткә саҡыра, ләкин Зарай, хәрби комиссарға баяғы “Ежов иптәшкә” тигән шанлы мәҙхиәһен һәм халыҡ дошмандарын фашлаған мәҡәләләрен күрһәтеп:

-- Һалдат булырға ябай-ялпы етерлек, ә мин номенклатур кадр – былдағы яуаплы эшемдән алырға ярамай, мин бында ла ҡәләмемде штык итеп халыҡ дошмандарына ҡаршы үлемесле көрәшәм! – тип ҡырҡа баш тарта. Үкенескә күрә, Ежов иптәш осоро үткәнлектән, шанлы кадрҙың үҙен ҡулға алалар ҙа ошоға тиклем Ежов иптәш үҙе етәкселек иткән Беломорканал ГУЛАГ-ына ер ҡаҙырға ебәрәләр. Ә шулай ҙа яҙмыш уны ҡурсалай: Көнбайыштан баҫып кереп Гитлер тыуҙырған ығы-зығынан файҙаланып, Зарай каналдан ҡаса, Урта Азия

ҡышлаҡтарында эҙен сыуалта. Һуғыштан һуң үткәндәрҙе хәтерләмәүсе ҡәләмдәштәре генә ҡалған мөхиткә кире әйләнеп ҡайтып, Яҙыусылар берлегенә ағза итеп ҡабат алына, башҡортса ғына һөйләшә, ләкин башҡорт баҡсаһына ырғытыласаҡ ҡара ташын ҡуйынында йөрөтә һаман...

Вилор Иҫәрғәп улының тауышы ҡурҡыныслы-ҡаты яңғыраны:

-- Һәм бына Йонос Зарай иптәштең хатын Юғарынан оҙата килеүсе рәсми мәғлүмәт:

«ЦК КПСС, №270945. Секретно. Тов. Исяргапову В.И.

Прошу Вас рассмотреть письмо тов. Зараева Ю.И. и принять срочные безотлагательные меры. Письмо подлежить возврату в ЦК КПСС вместе с ответом. С уважением **Е. Мигачев».**

Йотлоғоп тыңлаған баштар өҫтөнән оло түрә кинәйәле күҙ йүгертеп алды:

-- Так что, иптәштәр, беҙгә күп уйларға түгел – кисекмәҫтән саралар күреү мотлаҡ. Йонос Зарай иптәштең ун битлек хатынан, фәһем өсөн, бер-ике абзац ҡына уҡып ишеттерәм, бына улар:

«С 1980 года примерно начались нездоровые тенденции среди башкир. Много татарских школ (в татарских селениях) были переведены на башкирский язык обучения. Эти татарские деревни заранее были объявлены башкирскими. С каждой переписью населения то и дело в книге «Административно-территориальное деление Башкирии» число башкирских деревень росло, а татарские деревни исчезали»... – Вилор Иҫәрғәп улы, тексты уҡыуҙан туҡтап, ялбыр-ҡара ҡаштары аҫтынан ҡарсыға ҡарашын Статистика идаралығы башлығына ҡаҙаны. – Иван Петрович, ҡыҫҡаса аңлатма бирегеҙ.

Тегеһе, тороп, дерелдәүек тауыш менән дерелдәүек ҡулындағы ҡағыҙҙан ҡыҫҡырып уҡыны:

-- По данным статистики выявляется обратное положение. Если в конце прошлого века в 1897 году на территории только одной Уфимской губернии проживали 899 тысячи башкир (41% к общему населению губернии) и только лишь 184 тысячи татар (11%), то к 1970 году примерно на той же территории численность башкир стала 892 тысячи (23% к общему населению), а татар 944 тысячи (24%). Как видно, за годы советской власти в Башкирии прирост татар составлял в 5 раз, но в то же время численность башкир стала меньше, чем было их в самодержавном 1897 году. А в запредельном регионе наблюдался полное их исчезновение. Например, если 1897 году в Мензелинском уезде, сплошь населенном башкирами и в советское время отошедшем в состав новообразуемой Татарской АССР, насчитывалось 193 тысячи башкир, то в 1926 году по переписи их стало только 1752 человека, а в 1939 году там башкир совсем не стало... то есть, в годы советской власти мензелинские башкиры все поголовно были переписаны как татары. При этом до 1926 года численность и восточных башкир сократилась в 2,5 раза!.. В то время, когда до 1970 года общая численность башкир сократилась, получилось так, что численность татар в республике увеличилась в 5 раз. Таковы сухие цифры статистики.

-- Значит, ваша статистика не соответствует магистральной линии партии и ни к чему не годится, имейте это в виду, уважаемый Иван Петрович! Так,

читаем дальше:

«Везде вырастали башкиры, исчезали на бумаге татары! Так искажали здесь Советскую власть и политику КПСС. Проявления башкирского национализма видим не только в отношениях к тататарм. И не только в области просвещения, где из года в год сокращаются татарские школы и торжествует вопиющий антитаризм»...

-- Ғәфү итегеҙ, телсе ғалимә булараҡ, ҡыҫҡаса ғына аңлатма биреп китәйем. – Мирйәнова Сәүиә ханым күтәрелде. – Бына минең ҡулда Мәғариф министрлығынан алынған рәсми мәғлүмәт: «В 1925-26 учебном году количество школ в республике было башкирских 572, а в 1967-68 учебном году их стало 785 (137% прироста); соответственно татарских школ было — 582 и стало 1117 (192% прироста!); русских школ — 788 и стало 1914 (243% прироста!). Как видно, прирост численности башкирских школ в сравнении с татарскими отстал примерно в три раза. А в годы бурной индустриализации, когда в республике был взят курс на ликвидацию национальных школ, опят-таки главный удар наносился башкирской школе. Например, в числе 650 национальных школ, переведенных на русский язык обучения лишь в одном 1973-74 учебном году, башкирских оказалось 420, а татарских — всего 112».

-- Значит, родители сами захотели этого, и правильно сделали, ибо в этом важнейшем вопросе жизнь сама вносит свои коррективы, – тине Вилор Иҫәрғәп улы. – Но этого недостаточно, этот процесс не надо пускать на самотек, его надо ускорить, мы должны взять быка за рога!

Мәғариф министры үҙе ырғып торҙо:

-- Мы так и делаем, Вилор Исаргапович. Вот самое свежее данное. На новый учебный год число школ с обучением на башкирском языке сокращается — еще на 300 единиц.

-- Правильно делаете, не надо вводить на татарских селах обучение на башкирском языке, чего и просит, выражая настоятельные пожелания родителей, в своем письме уважаемый Юнус Зарай. А что думает об этом уважаемая руководительница женщин республики?

Ҡыҙара-бүртенгән Сәүиә-ханымдың тауышы ҡорос зыңлауылай асыҡ яңғыраны:

-- Хат авторы тупаҫ алдай: ул атаған ауылдар бөтәһе лә борондан уҡ аҫаба башҡорт ауылдары һәм башҡортса уҡыта башлау ҙа ата-әсәләрҙең теләге буйынса атҡарылды.

-- Пардон, әйтеп бирегеҙ: ниндәй телдә һөйләшә улар? – Энәгә сәнселгәндәй ырғып торҙо Хәкимуллин.

-- Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында.

-- Юҡ ундай диалект, татарса һөйләшә улар! Утыҙынсы йылдарҙағы Талир Баҡишев менән Николай Дмитриевтың башҡорт телендә өс диалект барлығын көсәнеп иҫбатлаған серек тәғлимәте, үҙегеҙгә яҡшы билдәле булыуынса, бына ошонда ултырған хөрмәтле профессорыбыҙ Йәмил Ҡотлоевич Ҡотлоевтың зирәк аҡыллы асышы -- башҡорт теленең башҡортлоғон билдәләүсе төп күрһәткес ярҙамында пыр-туҙҙырып еңелде.

-- Ниндәй күрһәткес ул? – Ҡыҙыҡһындылар аранан.

-- Әйттем бит: зирәк аҡыллы күрһәткес! Так называемые башҡорт ырыуҙарының ***«әсә»*** тип һөләшкәндәре генә башҡорт, ә ***«ана, инә»*** тигәндәре татар. Беләһегеҙ: Йәмил Ҡотлоевич ошо бөйөк хеҙмәте өсөн партиябыҙ һәм дәүләтебеҙ тарафынан Ленин ордены менән бүләкләнде. Ҡыҫҡаһы, бәғзе бер башҡорттарҙың башҡорт түгеллеген бына Йәмил Ҡотлоевич Ҡотлоев үҙе әйтеп бирһен!

-- Эйе, Йыһандар Илһамдар улы хаҡлы, -- тине Ҡотлоев. Әммә Сәүиә-ханым һаман ҡырҡышты:

-- Башҡорт халҡының сирек өлөшө генә -- «әсәй» тип, ҡалғандарыбыҙ «әней, инәй» тип һөйләшә. Хатта урыҫ та «ана» (она) ти. Йәмил Ҡотлоевич, быны нисек аңлатаһығыҙ?

Хәкимуллин яуапланы:

-- Тимәк, хөрмәтле Сәүиә Фазыловна, беребеҙ ҙә башҡорт түгел – бөтәбеҙ ҙә татар. – Мәжлестең күпселек өлөшө хихылданы.

-- Аңлашылды. Савия Фазыловна, нечего здесь разводить антимонию. Мөһим хатҡа иғтибарҙы йүнәлтәйек, иптәштәр:

«В последнее время Башкниготорг, Башпотребсоюз все меньше и меньше закупают книг из Казани. Это тоже политика. Это для того, чтобы больше читали башкирских книг. Редактор татарского журналпа «Азат хатын» В. Ихсанова в письме сообщила, что 20 тыс. подписчикам этого журнала в Башкирии выписали башкирский журнал «Башкортостан кызы». Татарские районы не имеют своих газет»…

-- Рөхсәт итегеҙ, Вилор Иҫәрғәпович, бер бәләкәй генә төҙәтеү. – Инструктор Арғынбаев иптәш һүҙ алды. – Беҙгә бирелгән рәсми мәғлүмәт буйынса, эштәр ошолай тора:

«Согласно статистическим данным по 21 районам западной Башкирии из общего числа населения этого региона башкиры составляют 43%, татары — 31%, русские — 11%. Как видно, башкиры здесь составляют подавляющее большинство. Однако на башкирском языке издается лишь одна — единственная альшеевская газета, и то в качестве дубляжа, в то же время на татарском — 21, на русском — 18».

-- Ярай, ҡустым, ултыр. Олатайҙарыбыҙ әйтмешләй, ике ҡолағыңды ҡарпайтыбыраҡ тыңла:

«Башкиризация происходит и там, где несведущие люди об этом и не мыслят. Генерал Шаймуратов, Герой Советского Союза М. Губайдуллин, дипломат Каримов, поэты прошлого века Хибетулла Салихов, Абельманих Каргалы и др. превращены в исконних бпашкир, хотя они совсем не башкиры; как будто их деяния, творчество приобретают особое значение, если они станут башкирами. Нашелся ученый (А. Харисов), который даже в Старом Египте нашел башкирского поэта. Неважно то, что человек сделал, важнее его метрика! Если по метрике башкир, значит, знай наших!

Доказывают, что поэт Акмулла по отцу – казах. Мать его после смерти мужа вышла за башкирина Камалетдина замуж, естественно, привела маленького

сына в эту семью. Потом этот малыш стал поэтом, писал на казахском, татарском (вернее, на языке общем для тюрков «тюрки»)... Поэт Мифтахетдин является сыном Мухамедияра, воспитанником Камалетдина... Но это очень мешал некоторым делягам, помешанным на «башкиризме», и они объявили его башкирином.

Три года тому назад в журнале «Агидель» были обнародованы три больших статьи «писателя» в кавычках Я. Кундузбаева об истории башкир, об истории языка и прочая дребедень. Статьи невнятные, путаные, безграмотные, вредные. Ученый Сафуан Суфиянов сказал в разговоре очень кратко: «По этим материалам выходит, что вся культура зародилась на Урале и распространилась затем по свету»...

Вилор Иҫәрғәп улы, уҡыуынан өҙөлөп, тыңлаусыларына ҡарсыға-караш атып:

-- Йүкәлә икән сәтләүек! Бөтәбеҙгә таныҡлы совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами әйтмешләй, кешелек донъяһы тәгәрмәс яһамаҫы элек үк башҡорттар уны майларға тәгәрмәс майы уйлап сығарғандар, булып сыға түгелме?! – тигәйне, күпселек йәмәғәт кинәнеп шарҡылдап көлдө. -- Тағы ла бер фәһемле урыны бар, иптәштәр:

«Как это дурь пропустили в журнале, нам непонятно. А на что смотрел секретарь обкома по идеологии, тоже неведомо. Как бы ни было автору статей этого ярого «башкириста» выдали годовую премию журнала.

Скажем о некоторых положениях этих постыдных статей:

Автор устанавливает башкирско-шумерские связи, башкирско-скифские связи. По его мнению, «просвещенному до высшего совершенства», такие связи были. Диких лошадей сделали ручными в Башкирии. Откуда брали коней цари Кир, Дарий, Чингис-хан, князь Святополк автор не говорит. Не смейте думать, что слово «сувенир» не башкирское слово. А что значит слово Афродита? Так знайте: это слово башкирское, означает «АПРА ТУТЭЙ» («из бурноподнявшегося теста тетя»). Автор свои «открытия» в одном месте даже сравнивает с открытием Генделя. Вот так и ест. Знай наших!

Прошло много времени, но кроме восхваления этих статей никакого опровержения «глубоких истин» Кундузбаева и возражений не было. Значит, «новоявленный башкирин» Кундузбаев изрек правду, только правду. (Он – татарин, так хорошо подделался под вкусы национализма)».

Асыуы йөҙөнә сыҡкан Вилор Иҫәрғәп улы идеология секретары яғына ҡараш атты:

-- Димустан Шиһапович, ҡасан юлын ябаһығыҙ шул Ҡондоҙбаев тигән әҙәби хулигандың? Һеҙгә тағы ниндәй тотанаҡ кәрәк?

-- Бер ниндәй ҙә тотанаҡ кәрәкмәй, уның юлдары ябылған.

-- Ябылмаған шул. Мәскәүҙән Көнсығыш телдәре институтындағы яҡшы танышым шылтырата: Ҡондоҙбаев тигән һеҙҙең бер тарихсы ниндәйҙер бер күл буйында ырын яҙыулы таштар табылыуын хәбәр иткәйне, һеҙҙең институт быны кире ҡағып хат ебәргәйне, әммә баяғы тарихсы һаман беҙгә яҙып ныҡыша. Мөмкин булһа махсус тикшереү ойоштороп, асыҡлаһағыҙ ине: бармы ундай

яҙыулы таш, әллә сираттағы блеф ҡынамы, ти.

-- Блеф икәнендә шик юҡ, -- тине Хәкимуллин.

-- Башҡалар ҙа шикләнмәҫлек итеп эшләргә кәрәк. Телевидениенан бригада алып барығыҙ ҙа ундай нәмәнең юҡлығын донъяға күрһәтегеҙ, нечего разводить тарабарщину! Әйткәндәй, кем ул Ҡаһым түрә, ниңә яҙыусыларыбыҙ шуның исемен ҡуйырта? Наполеондың француз яуына ҡаршы утыҙ доброволь башҡорт полкы һуғышҡан, Парижға барып еткән, тип ниңә ҡабартырға? Полктар һаны бында нимәгә? Башҡорттар ҙа ҡатнашҡан, тип кенә әйтергә, йәки бөтөнләй әйтмәҫкә кәрәк!

-- Сделаем, Вилор Исәрғәпович.

-- То-то же! Иптәштәр, был хаттың эстәлегенә партиябыҙҙың Үҙәк Комитетында ҙур иғтибар бирелеүен онотмай эш итәйек. Хөрмәтле ветеран-әҙиптең бөгөнгө көн идеология фронтындағы зәхмәтте мәргән фашлауын, тәрән уйланылған фекерҙәрендә рациональ орлоҡтар барлығын билдәләп, терминология өлкәһендә бер мөһим төҙәтмә индереүҙе зарур һанайым: ошоғаса ҡулланылыштағы «башҡорт милләтселеге», «милли сикләнгәнлек» терминдары үҙ вазифаһын тулыһынса үтәне хәҙер; инде әлеге яуаплы мәл үҙенә лайыҡлы яңы билдәләмә һорай: ***«башҡорт гегемонизмы».*** Шулай итеп, идеология фронтында башҡорт гегемонизмына ҡаршы берҙәм көрәшкә, иптәштәр!

Берҙәм ҡул сабыуҙарҙан һуң, тема буйынса доклад һөйләргә пропаганда бүлеге мөдире Аралйәнов Урал Ҡылғанбай улына һүҙ бирелеүе күптәр өсөн көтөлмәгән хәл булды, сөнки «яңы һепертке»нең идеология секретарына ышанмаусанлыҡ күрһәтеү ғәләмәте һиҙенеүҙән берәүҙәре һөйөнөп, икенселәре көйөнөп, көнө бөтә Димустандың, тип уйланылар. Ышаныска лайыҡ булған Аралйәнов үҙе лә, башҡалар ҙа тиҙҙән уның бер баҫҡыска үрләтелеү ғәләмәтен шәйләнеләр, трибуна артына телмәрсе үҙен абруйлы тотоп, ышаныслы аҙымдар менән барып баҫты, йәһәт отоп алынған яңы терминды, *башҡорт гегемонизмын,* тейешле урындарға йәтеш ҡыҫтырып һөйләне. Һурпа эсенән ярмаһын өйөрөп алғанда, мәжлестәге төп төйөрҙәр ошоларҙан ғибәрәт ине:

**1-енсе төйөрөм.** Мәктәптәрҙә ебәрелгән идеологик хатаны һис кисекмәҫтән бөйөк партиябыҙҙың коммунизм төҙөү Программаһына ярашлы ғилми яҡлап эшләнгән һәм партия өлкә комитеты бюроһы раҫлаған «Милли үҫеш – монолитланып сәскә атыш» концепцияһы буйынса ҡыҙыулатып төҙәтеү. Шул нигеҙҙә алдағы уҡыу йылы башынан уҡ мәктәптәрҙе өлөшләтә -- татар телендә, күпселеген урыҫ телендә уҡытыуға күсереү.

Мирйәнова Сәүиә ханым, башҡорт телендә уҡытыу ниңә телгә алынмай, тип ныҡығас, докладсы берәгәй яуапланы:

-- Сөнки концепцияла уның ҡыҫылышы юҡ.

Бер мөйөштә кемдәрҙер саҡ ҡына ҡәнәғәтһеҙ мыңғырҙаны. Сәүиә-ханым:

-- Башҡорт телендә уҡытыу ҡаралмаған ниндәй концепция ул, асылын аңлатығыҙ, -- тигәс, концепцияның төп авторы профессор Хәкимуллин тороп асылын систе:

-- Һеҙ, Сәүиә Фазыловна, ғилми экспедицияларҙағы диалекттар шырлығында аҙашып йөрөп, тормоштан артта ҡалғанһығыҙ, үҙебеҙҙең

институтта ғилми яҡтан дағаланған концепциянан да бихәбәрһегеҙ. КПСС-тың СССР-ҙа хәҙерге кешеләр быуынында уҡ коммунизм төҙөп өлгөртөү, бөтә халыҡтарҙы – монолит бер милләткә, телдәрҙе дөйөм бер телгә берләштереү Программаһына ярашлы итеп эшләнгән концепция ул. Һеҙ белергә теләгән асылы ошондай: мәктәптәребеҙҙең бөтәһендә уҡытыуҙы революцион юл менән ҡыҙыулатып урыҫ теленә күсереү менән бергә, был сараны аңламаған йәки ҡарышҡан түбән ҡабилиәтле ата-әсәләр барлығын да иҫәпкә алып, ундайҙар араһында оҙайлыраҡ эволюцион юл ҡулланырға, йәғни ундай контингентта башҡорт теле – уға яҡын һәм аңлайышлы татар теленә, татар теле – урыҫ теленә күсә; бер-нисә быуын һуҙымында бөтәбеҙ ҙә бер телдә -- мәшһүр Пушкин, Толстой һөйләшкән бөйөк урыҫ телендә һөйләшәсәкбеҙ.

-- Ата-әсәләр риза булмаһа?

-- Партиябыҙ ни ҡушһа – ата-әсәләр шул яҡлы, бөтәбеҙ ҙә партия һалдаттары. Нимә, Сәүиә Фазыловна, әллә һеҙ партияға ҡаршымы?

-- Мин йөрәгем тәңгәлендә партия билеты йөрөтәм.

-- То-то оно!

**2-нсе төйөрөм.** Һуңғы осорҙа гәзит-журналдарҙа, телерадиола иғлан ителгән сәйәсәткә һыйышһыҙ материалдар, мәҫәлән, Й. Ҡондоҙбаев сығыштарына юл ҡуйылыу, был органдарҙа идеология эшенең түбән кимәлдә тороуын һөйләй. Тарих фәнендәге сатаҡлыҡтарҙы бөтөрөүгә арналған ҙур йыйылыш та тейешле һөҙөмтәһеҙ тамамланды, сөнки шунын уңышһыҙлығына радиобыҙ ҙа алдан өлөш кереткәнлеге асыҡ: тап шул йыйылыш алдынан эфирға сығарылған радио журналисының быйыл йәй йыйыласаҡ бөтә донъя башҡорттарының йыйыны тип аталған сараға ҡарата Ҡондоҙбаев менән әңгәмәләшеүҙең репортажын тыңлағыҙ (магнитофонды эшләтте):

*«1. Башҡорттарҙың быйыл буласаҡ йыйынының әһәмиәтен ҡайһылай баһалайһығыҙ?*

— Бик юғары баһалайым. Беренсе тапҡыр тирә-яҡтан бер ҡорға — Тәүтөйәккә тупланыу. Башҡорт милләтенең юҡҡа сығыу — һәләкәт алдында тороуын уртаға һалып һөйләшеү.

*2. Милләтебеҙҙең һәләкәт алдында тороуының сәбәптәрен ҡайһылай аңлатаһығыҙ?*

— Геноцид. Башҡортостан 1557 йылда Урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан алып, Урыҫ дәүләте (империя) башҡорттарҙы ҡырып бөтөрөү сәйәсәтен үткәрҙе. Империя төрлө осорҙарҙа төрлө төҫтәргә керҙе: аҡ империя — ҡыҙыл империя — ала-ҡола империя. Әммә уның асылы, милли сәйәсәте бер ҡалды — урыҫ булмаған халыҡтарҙы бөтөрөү.

Башҡорт халҡы үҙенең азатлығын, йәшәйешен яҡлап ике йөҙ йыл буйына баш күтәрҙе, ләкин батша самодержавиеһы ҡанға батырып баҫтырҙы һаман.

Һуңғы (һәм еңеүле) ихтилал — 1920 йылда, милли геройыбыҙ Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов етәкселегендә булды.

Рәсәй империясыларының геноцид сәйәсәте башҡорттарҙың йән иҫәбен өҙлөкһөҙ кәметте: 1917 йылда — 1.800.000 башҡорт, ә 1926 йылда — 630 мең... Ошо көнгәсә баяғы 1917 йылғы һанға өлгәшә алмайбыҙ...

Башҡорттарҙы татарға, урыҫҡа әйләндереү — ассимиляция бара өҙлөкһөҙ. Башҡорт тигәнең һыуға төшкән тоҙ кеүек иреп бөтә, юғала...

*3. Һеҙҙеңсә, милләтте был һәләкәттән ҡотҡарыу өсөн, ҡоролтайҙың көн үҙәгендә ниндәй бурыстар тора?*

— Башҡорт милләтен ҡотҡарыуҙың комплекслы ***дәүләт программаһының*** ҡабул ҡылыныуын, уның ***дәүләт эшенә*** әүерелеүен талап итергә тейешбеҙ.

*4. Ул программаның үҙәгендә иң мөһим ниндәй мәсьәләләр торорға тейеш?*

— Төп ике мәсьәләне күрәм:

1) башҡорт теленә дәүләт теле статусын биреү;

2) башҡорттоң быуаттар буйына империя ҡулы менән бөгөп-һындырылған *милли рухын* тергеҙеү.

*5. Йыйын быларҙы ыңғай хәл итер, тип ышанаһығыҙмы?*

— Икеләнәм. Сөнки, үҙегеҙ беләһегеҙ, Башҡортостаныбыҙҙа ҡәҙимге өй хужаһы һәм өйҙәштәр бар. Өйҙәштәребеҙҙең ифрат әхләҡһеҙлеге лә билдәле: өй хужаһын тупһаға тибеп төшөрөп, түргә үҙҙәре менеп ултырыусан...

Көрсөктән сығыу өсөн, иң элек һәр башҡорттоң *милли рухын* тергеҙеү мотлаҡ.

*6. Милли рухты тергеҙеүҙең ниндәй саралары бар?*

— Төп саралар — империя тартып алып тапаған, йәшергән, юҡ иткән милли ***Хәтеребеҙҙе*** ҡайтарып алырға тейешбеҙ.

*7. Нимә ул Хәтер?*

Бына нимәләрҙән тора ул Хәтер:

1) башҡорт теле;

2) башҡорт тарихы;

3) башҡорт тәүдине һәм Ислам.

«Рәсәй — дөйөм йортобоҙ» тигән хәрәкәтте башлаусыларға ла һүҙем бар. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Рәсәйҙе ундағы бөтә «ҙур» һәм «бәләкәй» милләттәрҙең дөйөм туғанлыҡ йорто итеп яңыртылыуын теләйбеҙ. Ләкин был яңы хәрәкәт тә иҫке йөкмәтке алмаһын, һөҙөмтәлә шул ҡәҙерле дөйөм йортобоҙ — «бәләкәй» милләттәрҙең зираты, ә «ҙур» милләт — зират һаҡсыһы була күрмәһен ине».

Ҡулын үргә күтәреп бармаҡ янаны:

-- Аңланығыҙмы, Ҡондоҙбаев нәмәләр ти?!.

Тыңлаусылар ултырған урындарында хәрәкәтләнеп шауланы, бигерәк тә урыҫтар, татарҙар ҡәнәғәтһеҙләнде, хатта теш араһынан ҡыҫып ҡына һүгенеү ҙә ишетелде. Совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамиҙың көр тауышы тынлыҡ урынлаштырҙы:

-- Иптәштәр, тамам сығырынан сыҡҡан, ауыҙлығын сәйнәп өҙгән бит былар! Бөтөнләйгә әҙәптәрен юйғандар, ә башҡорт борон-борондан әҙәпле була торғайны. Был мырҙаларҙы әйтәм, фекерҙәрен белдертер өсөн ауыҙ асырҙан алда шуны уйлаһындар ине: бөйөк партиябыҙ үткәргән бөгөнгө сәйәсәткә тура килерме был, әллә юҡмы? Кеше ышанмаҫлыҡ һүҙҙе ысын булһа ла һөйләмә, ауыҙың тулы ҡан булһа ла төкөрмә! Бөгөнгө ҡәләмдәштәремдең милли әҙәплелекте боҙоп оторо сығыш яһауҙарына иҫ китә. Уларҙа ғына баш бар ҙа, башҡаларҙа юҡмы ни? Башҡорттоң милли әҙәплелеге – уйҙарыңды телеңә

сығармау, башында ғына тотоу ул. Бына шундайҙар килергә тейеш беҙҙең матбуғат һәм радиотелевидение органдарына етәкселеккә. Бармы ундай шәхестәр – бар! Бына бер йәш шағирабыҙҙың тап ошо көн ҡаҙағына һуҡҡан һоҡланғыс әҫәре (ҡуйын дәфтәренән уҡып ишеттерҙе):

Ҡабырсаҡта йәнем, ҡабырсаҡта.
Диңгеҙҙәге дауыл шауҡымында
Эшем дә юҡ! Эске донъям – донъя...
Нисә быуат уның шау-шоуына...
Ҡабырсаҡта ятам тыныс ҡына...

Ҡорбан һорай диңгеҙ, ҡорбан һорай,
Йән аҡлығы ҡорбан түгел, түгел!
Ҡабырсаҡта ҡал һин, ҡабырсаҡта, --
Ҡорбан булып ғәрипләнмә, күңел!
Ҡабырсаҡта ҡалһын халҡым гел-гел! --

Бына был ысын шиғриәт! (Хуплап ҡул сабыуҙар). Бөйөк партиябыҙ һәм Совет хөкүмәте барсабыҙҙан *бөйөк әҙәплелек* көткән яуаплы-сәйәси мәлдә ошонан да мәргәнерәк, фидакәрерәк әйтеү мөмкин түгелдер ул, туғандар! Бына кем ул Ил Инәһе! – Гөрләтеп алҡышланылар. Ҡолаҡ һоноп тыңлаған Вилор Иҫәрғәп улы, һоҡланыуын йәшермәй, «Ил Инәһе» тигән ләкәпте ҡыҙыл тышлы эш дәфтәренә күсерҙе, Димустанға ғәйепләүсән өндәште:

-- Ниңә үрләтмәйһегеҙ Ил Инәһен, үрләтегеҙ! – Тәҡдим күмәк ҡул сабыу аша хупланды.

-- Бына күрәһегеҙ, иптәштәр, эштәр ҡайҙа бара, -- тине докладсы. – бөйөк Мәрүән Карами ағайыбыҙ әйтмешләй, *милли әҙәплелекте* онотто зыялылар. Әгәр ғифрит-енде кире-ҡабат шешәһенә керетеп томаламаһаҡ, хәлдәр ҡатмарланасаҡ. Ярай, баяғы эфирҙан яңғыраған – үҙебеҙҙең өйҙәге сүп-сар булғайны. Ләкин сүпте, һөмһөҙләнеп, мәркәзгә илтеп еткереүселәр күбәйҙе. Миҫал өсөн, ғәфү итегеҙ, хөрмәтлебеҙ Йәмил Ҡотлоевич, бында һеҙҙең улығыҙҙың шикәйәтнамәһе тураһында һүҙ бара, шуны ла әйтеп үтмәйенсә мөмкин түгел. Уҡыйым:

« **Секретарю ЦК КПСС тов. Малоенкову.**

1. До сих пор, в СССР неизменно продолжает существовать сталинское разделение наций на три категории:

нации I категории — это союзные республики;

нации II категории — это автономные республики;

нации III категории — это автономные области и округи.

Такая унизительная для любой нации несправедливость нашла себе оправдание даже в Платформе КПСС по национальному вопросу якобы тем, что «различия в форме самоопределения нации отразили ту жизненную реальность, что в период становления Союза народы находились на разных уровнях социально-экономического развития, существенно различались по численности, не все прошли этапы национальной консолидации, не имели в прошлом или не

были готовы создать собственную государственность».

Но, как известно, выше названную «собственную государственность» (Автономный Башкортостан) башкиры имели уже 15 ноября 1917 года, то есть еще до Великой Октябрьской революции и также прежде чем образования самой Советской России. Впоследствии (22 марта 1919 г.) Автономный Башкортостан как государство с его правительством был признан центральной советской властью во главе с Лениным и по обоюдному Соглашению *как федеративная республика* вошла в состав РСФСР. При том государственный статус Автономной Башкирской Советской Республики в сравнении с современными союзными республиками был несравнимо выше, ибо она имела национальную армию. Однако уже в 1920 году правительство РСФСР в одностороннем порядке грубо нарушило Соглашение, отняв суверенитет республики. Таким образом, «статус автономной республики, полученный Башкирией по Соглашению 22 марта 1919 года, при Сталине, Хрущеве и Брежневе превратился лишь в ничего не дающую декларацию, еще точнее — в простую бумажку.

В Платформе КПСС по национальному вопросу выше указанный исторический факт полностью проигнорирован — поэтому мы продолжаем числиться нацией II категории.

2. Начиная с кровавого 1937 года и вплоть до наших дней в республике сделано все для того, чтобы Башкирию оставить без башкир — ее коренных жителей. Этот вопиющий факт со всеми его цифровыми данными широко опубликован в печати и известен народу (также ЦК КПСС).

Поэтому извингите меня за резкость и разрешите спросить: что делает ЦК, Политбюро и Советское правительство для того, чтобы спасать башкирскую нацию от полного исчезновения между тисками двух братских народов — русских и татар?

Кстати, Пятнадцатая Башкирская конференция ВКП(б) в своих резолюциях еще в далеком 1932 году поставил верный диагноз этой межнациональной смертельной болезни («великорусский шовинизм и великодержавническая тенденция татар по отношению к башкирам») и определил метод ее лечения («усиление темпов коренизации совгосаппарата и реализация башязыка»). Что думает по этому поводу уважаемый Секретарь: может быть, наконец-то, пора приступить к исполнению этих резолюций?..

**А.К. Кутлуев,**

студент 5-го курса БГУ».

Бюро ағзалары, берәм-берәм тороп, *башҡорт гегемонизмсыларына* ҡаты нәфрәт белдерҙе, беренсе секретарҙың уларҙы ауыҙлыҡлау юлында, ниһәйәт, ҡаты ҡуллы сәйәсәт башлауын ҡәнәғәтләнеп хупланы. Бюро бер тауыштан ҡабул ҡылған ҡарарҙа бөтәһе лә сағылып, һуңғы пунктында: «Республиканың идеология фронтында ебәрелгән тупаҫ хаталары өсөн идеология буйынса секретарь Д.Ш. Бикләмешевҡа ҡаты шелтә бирергә һәм кире хәлдәрҙе тиҙләтеп төҙәтеүен талап итергә», -- тип яҙылды.

Ултырыш аҙағында Вилор Иҫәрғәп улы Ғаяс Хөсниҙе ҡалырға киҫәтеп, үҙенең артҡы бүлмәһенә сәй эсергә алып керҙе, ләкин «Ғаясочка» көткәнсә булманы – кушеткаға аҡ йәймә түшәлмәгән. Ғорҡолдатып бер-ике йотоу менән

үк:

-- Теге саҡ мине аэропортта ҡаршылаусылар араһында Рәшит Алмаҡаев тигән йәш дипломант та бар ине бит әле?

-- Эйе, диплом эше буйынса мин уның етәксеһе.

-- Ҡасан яҡлай?

-- Өҙөп кенә әйтә алмайым, төрлө ҡатмарлыҡтар бар.

-- Улайһа, әйт: иртәгә кискәрәк минең янға килеп етһен.

Ғаяс Хөсни өсөн күңелһеҙ ине был, юл буйы уйланып ҡайтты: тимәк, түрә күңеле башҡала...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, таҙғараға әйләнгән ул пеләш-бөҙрәбаш егетте Хөсниҙең йәне һөймәй, әммә йыл йәки йыл аралаш нәшриәттә тупылдап сығып торған кирбес ҡалынлыҡ китаптарын яҙыуҙа үҙе генә өлгөрә алмағанлыҡтан, уны ҡара эшсе итеп эргәһенән ебәрмәй тота – институт ығы-зығыһынан һуң иркен фатирында кис ултыртып китаптың айырым бүлектәрен унан яҙҙырта ла үҙенеке итеп беркетә ине. Шул рәүешле кабинетта төн уртаһынаса баш ҡалҡытмай эшләйҙәр, ара-тирә күрше йоҡо бүлмәһенән ҡатынының түҙемһеҙләнгән саҡырыуы ишетелеп теңкәгә тейә:

-- Ғаясик, ят инде, күпме көтөргә була?

-- Көтмә. Алтындай ҡиммәтле ваҡытымды һинең ҡанмаҫ нәфсең өсөн әрәм итә алмайым, халҡыма хеҙмәт итәм! – Ҡырыҫ яуаплай ире. Көниә, мышҡылдап илай-илай, күңелһеҙ тыныслана. Халҡына хеҙмәт итеүсе профессор, шәкертен буш бүлмәләрҙең береһенә йоҡларға ебәреп, үҙе ошонда уҡ диванға төңкәйә. Ә эш шунда: Ғаяс Мәскәүҙә Вилор менән яҡынлашып ҡайтҡандан һуң уның ирлек дарманы шөйлә наҡыҫайып, енси хистәренең ҡапма-ҡаршы юҫыҡланыуы арҡаһында Көниәһенә мөнәсәбәте һүрелде, ә «Вилорик» быйыл Өфөгә күсеп килгәндән һуң һүнде, тиһәк тә ярай.

Бер саҡ төндә тороп туалетҡа барғанында ҡолағына йоҡо бүлмәһенән шикле тауыштар салынып, ишекте аҡрын ғына асып ҡарағас, шәкертенең шыр-яланғас Көниә ҡосағында иҙерәүен күреп бераҙ албырғанды, ләкин белдертмәне. Ишекте һаҡ ябып, күнегелгән үҙ диванына ҡайтты: хәләл ефеттең сетерекле мәсьәләне, ситтә аҙғынланмай, өйҙә генә йомолоп хәл ҡылыуынан, енси талаптары менән уны артыҡ йөҙәтмәйәсәгенән ҡәнәғәтлек кисреп йоҡоға талды. Әммә көндәр уҙған һайын был икәү һөмһөҙләнде, ғишыҡ-ғишрәттәрен асыҡтан-асыҡ -- өй хужаһының күҙ алдында, тип әйтерлек, башҡара башланы; тамам һөмһөҙләнгән ҡатын, киҫәтеүҙәргә лә һис иҫе китмәй, иренең күҙенә ҡарап көлдө...

Шул күңелһеҙ уйҙары менән Ғаяс фатирына ҡайтып, эш бүлмәһендә яҙышырға ултырҙы, ә йоҡо бүлмәһендә ҡатыны, ғәҙәттәгесә, уның шәкерте менән суп та суп үбешә, өҫтәүенә, юрый тигәндәй, Ғаяска ишеттереп бәхетле кеткелдәйҙәр...

Иртәнге сәй табынында, ҡатыны кухняла маташҡан арала, шап та шоп сөсө ҡоймаҡ һоғонған шәкертенең күҙҙәренә ҡарамай, беренсе секретарҙың сәләмен тапшырҙы:

-- Вилор Иҫәрғәповичтың һиндә мөһим йомошо бар: киске сәғәт

алтыларҙан да һуңламай килеп етергә ҡушты.

-- Минеме?

-- Һине.

-- Ни өсөн икән?

-- Уныһын барғас белерһең. – Уҫал итеп йылмайҙы.

Көнө буйына йөрәге өлпөрәп билдәһеҙлектә алйыған Рәшит Алмаҡаев, елеп-юртып, тигәндәй, беренсенең ҡабул ҡылыу бүлмәһенә кергәндә, саҡ ҡына ҡыҙмасаланып алған хужа уны аяғөҫтө тороп ҡаршыланы, алғы бүлмәләге секретарь ханым сәғәт элгәре ҡайтарып ебәрелгәйне. Албырғабыраҡ ҡалған ғилем эйәһен әшнәләрсә яурынынан ҡосаҡлап, эш бүлмәһенә этәрҙе, өҫтәл ҡырыйындағы йомшаҡ креслоға сүгертте:

-- Тартынмағыҙ, Рәшит Төхфәтович, үҙ өйөгөҙҙәгеләй хис итегеҙ.

-- Минең өйөм юҡ шул, Вилор Иҫәрғәпович, -- тине, үҙе төйәкләнгән ҡыҫынҡы дөйөм ятаҡты хәтерләп.

-- Һеҙҙең кеүек талантлы йәш ғалимдың ниңә өйө юҡ икән? Ҡайҙа, нисек йәшәйһегеҙ?

-- Дөйөм торлаҡта, тар ғына бүлмәлә дүрт кеше.

-- Ай-яй-яй, эш шарттарығыҙ хөрт икән. Институт етәкселеге ни ҡарай?

-- Ҡарамай шул.

Хужа сейфтан башланған шешә алды, соҡортайҙарға ҡойҙо:

-- Һеҙҙең кеүек талантлы йәш ғалимға айырым шарттар булдырыу мөҡәддәс бурыс. Ярай, мәсьәлә хәл ителер. Тотайыҡ, булдыҡ иҫән! – Ҡунағының көслө коньякты соҡортайҙан бөтөргәнсе эсеүен күҙәтеп тороп, бер генә йотоп ҡуйҙы ла тағы өҫтәне. Тегеһенең теле көрмәлә башлағас, яурынбашынан ҡыпҫыуырҙай һығып алып, төпкө бүлмәгә елтерәтте, ашамлыҡлы кескәй журнал өҫтәле йәнәшәһендәге аҡ йәймә түшәлгән кушетҡаға ултырҙылар.

-- Мин ҡайҙа? – тине ғалим йораты, тороп китергә ынтылып.

– Ултыр-ултыр, һин бик яҡшы урында. Әйтергә кәрәк, һөйгәнеңдең ҡайнар ҡосағында. – Хихылдап, нәүбәттәге соҡортайҙы ҡунағының тура ауыҙына ҡойоп йоттортто. -- Иң затлы әрмән коньягы – һаулыҡҡа шәп дауа ул!

Ысынлап та шәп ине, Алмаҡаев һулыған үләндәй бөгөлөп, йоҡомһорарға иткәс, хужа уны һыңар ҡулы менән яурынынан ҡаты көрмәне лә икенсеһе менән салбар подтяжкаларын ысҡындырҙы, аҡ йәймәгә йомшаҡ ҡына этәреп йыҡты... Эстән арҡа буйынаса тупаҫ ышырып һөрөлгән үҙәккә үткес ҡаты уҡлау тойғоһонан иҫенә килә башлаған Рәшит Алмаҡаев һис ни аңлай алмайынса аҡырҙы...

-- Бөттө-бөттө, тыныслан, Рәшиточка! – тине хужа, туғандарса «һин»гә күсеп, үҙ ҡулдары менән уны иркәләп-кейендереп. – Шаулама, бөтәһе лә яҡшы буласаҡ. Күҙ асып-йомғансы кандидатлыҡ яҡларһың, доктор ҙа булырһың, тыңлап ҡына йөрөһәң. Бөтә эштәрең дә алға дөрәсәк.

-- Был ни хәл? Ниндәй позор! – Тороп ултырып шыңшыны.

-- Бер ниндәй ҙә позор түгел – ғорурлыҡ ул, Рәшиточка. Ильич үҙе иҫән булһа, һинең менән, минең менән ғорурланыр ине.

-- Ошоноң өсөнме?

-- Ошоноң өсөн, Рәшиточка. Бөгөн беҙ Ильич йәшәгәнсә йәшәнек. -- Өҫтәл мөйөшөндә ятҡан ҡыҙыл папканы ҡунаҡтың портфеленә һалды. – Бел шуны: Кремлдең иң йәшерен серҙәренең береһен үҙеңә генә ышанып тапшырам, бер кемгә лә күрһәтмә, юғиһә башыңды ашарҙар. Ҡайтҡас та уҡып ҡара, үҙеңдең бөйөктәрҙән-бөйөк кемдәргә иш икәнлегеңде белеп шатлан. Хәҙер бәҫле машинала зырлатып ҡайтартып ҡуям үҙеңде.

Иртәгәһен Рәшит эшкә барманы, бүлмәләштәре таралышҡас, койкаһында һуҙылып ятҡан килеш, ҡыҙыл папкалағы ташҡа баҫылған, «СЕКРЕТНО» тип ҡаты киҫәтелгән документҡа төбәлде:

## «Великий, русский... особенный!

ОТ СОСТАВИТЕЛЯ.

Эта статья была готова к печати еще три года назад. Когда открылись исторические архивы, до той поры закрытые, я сумел поработать с документами, доступ к которым раньше был категорически запрещен.

Меня интересовали архивы партийных работников так называемого «ленинского призыва». В особенности много времени я провел над архивами тех коммунистических деятелей, которые позже, уже после смерти Ленина, были подвергнуты репрессиям.

Мне довелось переворошить частные бумаги ранее неизвестные.

И только на одном материале произошла заминка. Его отказались не только публиковать, но даже и обсуждать. Так с тех пор мне и не удалось предать гласности открытые мною исторические факты. Вероятно потому, что они так ошеломляющи и неожиданны... Редакторы многих изданий, увидев их, опускали глаза и бормотали нечто невразумительное о том, что «читатель не готов узнать об этом».

Я же, тем не менее, считаю, что читатель должен знать обо всем. Поэтому все же я предлагаю ознакомиться с открытыми мною историческими материалами.

## Владимир Ульянов (он же Ленин, он же Бланк...)

Прежде, чем излагать архивные материалы, обратимся к официальной хронологии того времени, которая опубликована в последнем, шестом издании «В.И. Ленин, Биография», 1981 г.:

«8 июля 1917 г. Аллилуев и Сталин проводили Ленина на станцию Разлив, где Ленин поселился в сарае рабочего Емельянова Н.А. (Все это было предпринято с целью укрыть Ленина от официальных властей, разыскивающих его как преступника). Но, побоявшись окружающих дачников - мелкобуржуазной публики (оказывается дачники - мелкобуржуазная публика, что, впрочем, не помешало партноменклатуре сразу же после Октября начать «обуржуазиваться»), Емельянов арендовал в 5 км сенокосный участок за озером Разлив, куда и переправил Ленина и Зиновьева на лодке в приготовленный шалаш,

примыкающий к стогу сена, где была «спальня на двоих». Откуда взялся Зиновьев? Из-за боязни ли окружающих дачников переселился Ленин в шалаш? Ведь дачники были повсюду и бродили в поисках грибов и возле шалаша. Да быть запертым в сарае было безопаснее. Ведь к шалашу ежедневно приносили еду жена и сыновья Емельянова. Да и подогревал еду Ленин на костре в котелке.

Читаем в биографии: «Ленин был чрезвычайно загружен работой, писал статьи». Да, он написал несколько статей, на которые можно потратить 5-7 дней. Но ведь пробыл Ленин в шалаше до 6-го августа.

Далее читаем: «Ленин совершал прогулки, лежал на солнышке, вечерами купался в озере Разлив, удил рыбу». Значит, Ленин неплохо месяц отдохнул, а потом уехал в Финляндию.

Главный вопрос: раз Ленин отдыхал, что там делал Зиновьев? Почему в биографии подробно описываются такие моменты, какой улицей Ленин шел, через какую насыпь или канаву переходил; кто был рядом в этот момент, а месяц жизни с Зиновьевым тщательно замалчивался -- меня заинтересовало.

Материалы из личного архива Григория Зиновьева, члена Политбюро ЦК ВКП(б), первого секретаря Ленинградского обкома партии. Письмо Ленина к Григорию Зиновьеву (1 июля 1917 г.):

«Григорий! Обстоятельства сложились так, что мне необходимо немедленно скрыться из Петрограда. Далеко уехать не могу, дела не позволяют. Товарищи предлагают одно место, про которое говорят, что оно вполне безопасное. Но так скучно быть одному, особенно в такое время... Присоединяйся ко мне, и мы проведем вдвоем чудные денечки вдали от всего... Если можешь уединиться со мной, телефонируй быстрее -- я дам указание, чтобы там все приготовили для двух человек...».

Это письмо написано в июле 1917 года, когда Ленин собирался покинуть Петроград и поселиться с Зиновьевым в Разливе, в ставшем потом знаменитым шалаше. Именно там взаимоотношения Ленина с Зиновьевым получили свое развитие. Они провели там наедине много времени, и, очевидно, это окончательно вскружило голову Зиновьеву. Потому что в сентябре он пишет из Петрограда Ленину в Финляндию:

«Дорогой Вова! Ты не поверишь, как я скучаю тут без тебя, как мне не хватает тебя и наших с тобой ласк... Ты не поверишь, я не прикасался ни к кому с тех пор, как ты уехал. Ты можешь быть совершенно уверен в моем чувстве к тебе и в верности. Поверь, ни к мужчине, ни, тем более к женщине, не прикасался и не прикоснусь. Только ты - мой близкий человек... Приезжай, не бойся, я все устрою наилучшим образом».

Вероятно, Ленин не откликнулся на это письмо, и тогда Зиновьев, спустя неделю, пишет следующее, вдогонку за первым:

«Милый Вова! Ты не отвечаешь мне, наверное, забыл своего Гершеле... А я приготовил для нас с тобой замечательный уголок. Мы сможем бывать там в любое время, когда только захотим. Это - прекрасная квартирка, где нам будет хорошо, и никто не помешает нашей любви. Будет так же хорошо, как и прежде. Я вспоминаю, какое счастье было для меня встретиться с тобой. Помнишь, еще в

Женеве, когда нам приходилось скрываться от этой женщины... Никто не поймет нас, наше чувство, нашу взаимную привязанность... Приезжай скорее, я жду тебя, мой цветок. Твой Гершель».

В конце октября товарищи по партийной борьбе, наконец, встретились. Случился октябрьский переворот, и Ленин вернулся в Петроград. Зиновьев выехал в это время в Москву руководить там завершением переворота. Оттуда он пишет Ленину:

«Ильич! Все, что ты мне поручил, я выполнил. А что еще не успел, обязательно сделаю... Здесь очень тяжело и непросто, но меня согревает мысль, что уже через несколько дней я увижу тебя и заключу в свои объятия. Хранишь ли ты наше гнездышко? Не водишь ли туда других? Я очень переживаю тут, и только надежда на твою верность согревает меня... Целую тебя в твою марксистскую попочку. Твой Гершель».

При чтении этих записок у меня сразу возникли два вопроса. Первый -- кто была та женщина, от которой Ленин с Зиновьевым скрывались в Женеве? И второй вопрос -- кто из них был активным любовником, а кто пассивным...

Кто была та женщина, скоро выяснилось. В 1918 году Зиновьев уже пишет о ней более конкретно:

«Вова! Каждый раз, когда я оказываюсь далеко от тебя, я мучаюсь ужасно. Мне все время кажется, что я вот сижу тут, тоскую по тебе, а ты как раз в эту минуту изменяешь мне. Ты ведь большой баловник, я-то знаю... Не всегда можно устоять, особенно в разлуке с любимым. Но я держусь и ничего себе не позволяю. А у тебя положение скверное -- нужно всегда быть рядом с Надей. Понимаю тебя, все понимаю... И как тяжело притворяться перед окружающими, тоже понимаю. Сейчас хоть стало немного легче - не нужно ничего от нее скрывать. Не то, что тогда в Женеве, когда она впервые нас застала...»

Надо понимать, что тогда в Женеве, когда Зиновьев и Ленин впервые сошлись в постели, их застала за этим Надежда Крупская - гражданская жена Ульянова. А потом, после, Ленин уже открылся ей, и она смирилась с его наклонностями и не препятствовала бурно протекающему роману с Зиновьевым. Потом появился ответ на второй вопрос. В следующем письме к Ленину с фронта Зиновьев спрашивает шутливо:

«Вова! Не заросла ли твоя попочка за время нашей разлуки? Не стала ли она уже за это время?.. Скоро я приеду, как только управлюсь тут с делами, и мы займемся прочисткой твоей милой попки».

Значит, Ленин был пассивным, а Зиновьев -- активным любовником. И это подтверждается следующим письмом. Оно написано из-под Нарвы весной 1918 года, когда был разгромлен Юденич. Красная Армия остановилась на эстонской границе, и Зиновьев собирался вернуться с победой в Петроград. Он ликует и совсем теряет осторожность в выражениях:

«Вова, я скоро приеду и больше не выпущу тебя из своих объятий, что бы ни говорила эта грымза! Враг бежит по всему фронту и, думаю, больше с этой стороны не сунется. Так что жди меня и спеши подмываться, я скоро буду».

Однако, не прошло и нескольких месяцев, как в отношениях любовников назревает разрыв. Он, как всегда бывает в таких случаях, связан с ревностью. Мы узнаем об этом из письма самого Ленина, которое он написал Зиновьеву, находившемуся в то время на Северном Кавказе. Ленин пишет ему почему-то по-немецки:

«Милый Гершеле! Ты совсем не должен обижаться на меня. Я чувствую, что ты намеренно затягиваешь свое пребывание на Кавказе, хотя обстановка этого совсем не требует. Вероятно, ты обижаешься на меня. Но я тут не виноват. Это все твои глупые подозрения. То, что касается Лейбы и меня -- это было лишь однократно и больше не повторится... Жду тебя и мы помиримся в нашем чудесном гнездышке».

И подпись в конце по-русски: «Твой всегда Вова».

«Ильич, - следует немедленно из Владикавказа ответ Зиновьева. -- Это совсем не глупые подозрения насчет тебя и Лейбы. Кто же не видел как ты кружил вокруг него все последнее время? Во всяком случае, у меня есть глаза, и я достаточно долго тебя знаю, чтобы судить... Мне ли не знать, как загораются твои глазки, когда ты видишь мужчину с крупным орудием. Ты сам всегда говорил, что у маленьких фигурой мужчин великолепные орудия... Я же не слепой и видел прекрасно, что ты готов забыть нашу любовь ради романчика с Лейбой. Конечно, он сейчас рядом с тобой и ему легко тебя соблазнить. Или это ты его соблазнил?..»

Действительно, в то время Лейба Троцкий - наркомвоенмор Республики - был продолжительное время в Москве рядом с Лениным. И, надо полагать, тут у двух вождей и зародилось взаимное чувство. Лейба Троцкий, бравый нарком обороны, пламенный трибун и оратор, занял в ленинской постели место Зиновьева... Ленин же продолжал оправдываться перед Григорием. Он, вероятно, чувствовал, что его связь с Троцким будет непродолжительной, и что вскоре Лев Давыдович бросит его, увлекшись очередной женщиной. Все же Троцкий больше склонялся к женщинам, чем к своим товарищам по революционной борьбе. Только, наверное, для Ленина он сделал исключение, уважил. И вот Ленин пишет на Кавказ Зиновьеву:

«Не обижайся на меня, Гершеле. Ты прав, я действительно не смог устоять. Лейба такой брутальный мужчина. Он просто обволакивает меня своей лаской. А я так в ней нуждаюсь, особенно в такой напряженно политический момент. Мне очень трудно без ласки, а ты уехал, негодник. Вот я и не устоял. Но ты ведь простишь мне эту маленькую слабость, Гершеле? Возвращайся, и ты увидишь, что я полон любви к тебе. Твоя маленькая Вова».

Вероятно, этот маленький пассаж с «маленькой Вовой» окончательно успокоил Зиновьева. Он утвердился в мыслях, что их связь не прервалась, а только на время была омрачена связью «Вовы» с коварным Лейбой-обольстителем. Григорий понесся в Москву, и с тех пор в архиве его больше нет соответствующих писем. Может быть любовники нашли иной способ связи, или Зиновьев потом уничтожил следы переписки...

Вскоре, однако, злодейская пуля эсерки Каплан сильно повредила здоровью Ленина. С той поры оно было подорвано, и постепенно и половые

отношения Ленина с Григорием сошли на нет. Во всяком случае последней, относящейся к данному вопросу запиской, были несколько строк, написанные рукой Крупской. Она пишет Зиновьеву в середине двадцать второго года:

«Прошу вас не беспокоить больше моего мужа своими домогательствами и просьбами о свидании. Пора бы уже и вам угомониться. Сколько же можно с моей стороны терпеть такое ваше бесстыдство! Ильич болен, вы же знаете это, и излишне говорить вам, взрослому человеку, что ваши шалости на сей раз могут только окончательно подорвать здоровье Ильича. Прошу вас больше не склонять его к тому, на что он всегда слишком охотно шел. Надеюсь, вы поймете это мое письмо. Оно продиктовано заботой о здоровье моего мужа». Не случайно Зиновьев часто в письмах к Ленину неуважительно отзывался о Крупской: «Та женщина, которая мешала нам в Женеве...» Теперь она взяла реванш. Столько лет быть отвергнутой собственным мужем ради любовника - это было трудно перенести. Вот теперь, когда Ленин слег и стал беспомощным, Надежда Константиновна решила поставить все на свои места. Больше она не допускала свиданий мужа с Зиновьевым наедине - только в присутствии своем или других членов Политбюро.

В конце тридцатых годов, после ареста и казни Зиновьева, эти архивные материалы попали в руки НКВД и, несомненно, были доложены Сталину. Почему он не распорядился их уничтожить? Вероятно, по двум причинам. Во-первых, для него все это, несомненно, не было тайной. И он и прежде прекрасно был осведомлен об отношениях Ленина с Зиновьевым и Троцким. Не случайно, поэтому подчеркнуто пренебрежительное отношение Сталина к Крупской. Что ему было ее уважать, если он знал о том, что она -- всего лишь ширма для утех своего мужа?

Второй же причиной, вероятно, была та, что Сталин решил придержать эти письма на тот случай, если бы пришла пора посмертно скомпрометировать Ленина. Если на каком то этапе Сталин вдруг решил отказаться от «ленинского наследия» и остаться единственным незапятнанным борцом революции, ему бы как раз весьма пригодились эти письма. Так или иначе, а архив сохранился до наших дней. И мы можем с удивлением обнаружить, что Ленин был обычным гомосексуалом...

**И.В. Соколов,**

кандидат исторических наук.

**Запись на одном из российских блогов:**

"Ещё в начале 70-х годов во Франции была издана книга "Великие гомосексуалисты", автора не помню. В России она ходила в самиздатовском варианте. Что касается Ильича, так к этому его пристрастию его приучил его "папаша" - Илья Николаевич. Папашей он назначен был полицией Петербурга, стоял он у них на учёте, как педераст. А к своим "детям" никакого отношения не имел. По молодости мать Ильича была фрейлиной при дворе и нагуляла там своего первенца - Александра. У него была паталогическая ненависть к своему папаше, которого он мечтал убить, за что был посажен. Мать его сразу метнулась к царю, была им принята и они пытались отговорить сына от мести. Александра не казнили, он подох в психбольнице. Это потом придумали революционную

версию этой мерзкой истории. После того, как фрейлина М.А. забрюхатилась во второй раз, её удалили от двора, отдав замуж за Илью Николаевича, и отправили семейку на кормление в Симбирск. В общем всё это в той книге прописано.

© 2006-2008, Sergey Melnikoff»

Ысынмы, ялғанмы?.. Моғайын, ялғандыр ул, Вилор һымаҡ берәй «зәңгәр» йән уйлап сығарып, донъяға тараҡтандыр! Улай тиһәң, ил башында ултырыусы бөгөнгөләрҙең күбеһе шул «гомо» тиҙәр бит... Тимәк, ысын, ысын! – Алмаҡаев, шундай бөйөктәр араһында булыуынан кинәт кенә оялсан кинәнес кисереп, быуындарын шытырлатып карауатында кирелде.

Асышынан йәшерен ләззәт татып, иҙерәп үк киткән икән – комендант ҡатын килеп, ғүмерҙә булмағанса Төхфәтич тип ҙурлап уятты:

-- Рәшит Төхфәтич, тороғоҙ – үҙегеҙҙең бүлмәгә күсенегеҙ.

-- Ошо түгелме ни бүлмәм?

-- Юҡ, һеҙҙең бер үҙегеҙгә айырым бүлмә -- юғарынан бойорҙолар. Ваҡ-төйәгегеҙҙе һуңынан килеп алырһығыҙ, киттек.

Ятаҡхананың иң уңайлы тип һаналған ҡатындағы бер генә койка ҡуйылған, матур итеп йыйыштырылған яҡты бүлмәгә керетте:

-- Йә, нисек? Оҡшаймы Рәшит Төхфәтич?

-- Оҡшай, рәхмәт.

-- Рәхмәтен юғарылағыға әйтерһегеҙ.

Күп тә үтмәне, Оло йорт машинаһының шоферы килеп, Алмаҡаевты елдереп алып китте лә беренсенең кабинетынаса оҙатты, хужа үҙе урынынан тороп ҡаршыланы:

-- Баш төҙәтәһеңме?

-- Һе, ҡыйыш китмәҫ ине лә...

Соҡортайға һалып бирҙе:

-- Ошонан артығын эсмә, был донъяла айныҡ йөрөү хәйерле. Торлаҡ мәсьәләң нисек?

-- Бик яҡшы хәл ителде, рәхмәт, Вилор...

-- Вилорик, тиң, Рәшиточка, Вилорик!

-- Рәхмәт... Вилорик. – Ҡыҙыл папканы өҫтәлгә һалды.

-- Аңланыңмы инде хәҙер үҙеңдең кем икәнеңде?

-- Ильич тә шулай булғас...

-- Беҙгә ни ҡала?! – тип йөпләне тегеһе.

-- Эйе.

-- Дөрөҫ аңлайһың, Рәшиточка: Кремлдең иң ҙур шешкәләре лә тап беҙҙең кеүек. Беҙ – йәмғиәттең, партияның зәңгәр ҡаймағы!

Тахтала аунап алдылар.

-- Тыңлап ҡына йөрөһәң, тиҙ арала профессор ҙа, академик та булырһың. Партияға ағза булып инергә ғариза бир. Артабан үҙеңде һәр яҡлап үрләтербеҙ.

-- Рәхмәт, Вилорик!

-- Үҙеңә рәхмәт, ҡәҙерле Рәшиточка!

Оло йорт машинаһына ултырып институтҡа елдерҙе. Ә унда профессор Хәкимуллин, Оло йорттоң инструкторҙары Арғынбаев менән Мусинды

юлдашлыҡҡа алып, арттарынан автокран эйәртеп, Асылыкүл тарафына ҡуҙғалырға торалар. Ошоғаса һытыҡ йөҙҙән башҡаһын күрһәтмәгән Хәкимуллин май ашаған бесәйҙәй алсаҡ ҡаршыланы:

-- О, Рәшит Төхфәтич! Етте һеҙгә көнлөксө булып йөрөү, диссертация яҡларға әҙерләнегеҙ, үҙем етәксе булам. Юл йөрөп ҡайтҡас ентекле һөйләшербеҙ, минең бүлмәлә көтөгөҙ.

Асылыкүлгә сәғәт ярым эсендә барып еттеләр ҙә Ҡарағастау битендәге «Ҡондоҙбаев ҡомартҡыһы» эргәһенә килделәр, яҙыулы өс яҫы ташты кран үҙенең дәү йәшнигенә еңел күтәреп һалғас, шофер эргәһенә Хәкимуллин үҙе менеп ултырып, ҡуҙғалып китер алдынан обком егеттәренә ҡыҫҡа һаплы көрәк ырғытты:

-- Таштар урынында тупраҡты һис ни булмағандай нығ тапап тигеҙләгеҙ, серәкәй ҙә морон тыҡмаһын. Эштәрҙе тамамлағас, минең машинала ҡайтырһығыҙ. – Автокран билдәһеҙ тарафҡа дөндө.

-- Крансыға ышанмай, оло башын кесе итеп, үҙе оҙатып китте бит, әй! – Баш сайҡаны Мусин. Ҡайҙа илтеп һалыр икән таштарҙы?

-- Аныһын үҙе белә.

Соҡорҙарҙы тынҡыслап тигеҙләгәс, Арғынбаев иренеп ҡорһағын тырнаны:

-- Әллә ниңә эс борасы, әй. Ҡайтыр алдынан бушанырға ине.

-- Мин ни тим һуң? Өҫтәрәк Ҡондоҙбай-иҫәрҙең Ҡояш менән Ай ҡаҙаны бар, тиҙәр ине – шуларҙан да йәтеше юҡ.

Таш майҙансыҡҡа күтәрелеп, салбар ҡайыштарын йәһәт ысҡындырып, нисәмә мең йылдар дауамында изге ҡорбан салынған таш ҡаҙандарға сүкәйҙеләр...

Иртәгәһенә үк Ҡарағастау башына профессор Хәкимуллин етәкселегендәге шаулы төркөм килеп етте, унда ғауғалы Ҡондоҙбаев һәм телевидение бригадаһы бар ине. Аппараттарҙы тоҫҡап, Ҡондоҙбаевтан ырын яҙыулы таштарҙы күрһәтеүен һоранылар, ә ул күҙҙәре аларып ары һуғылды, бире һуғылды, йүгерекләп ҡомартҡыны әйләнеп тә сыҡты, ләкин һис ни аңлатып бирә алманы. Өҫкәрәк күтәрелгәс, Ҡояш һәм Ай ҡаҙандарында ерәнгес һаҫыҡ таратыусы әҙәм экскрименттарынан биҙеп һәр кем танауын ҡапланы; шул ыңғайҙа йөрәкһеп йөҙтүбән ҡапланған Ҡондоҙбаев ҡапыл ырғып торҙо ла, ике ҡуллап сәстәрен йолҡа-йолҡа йәмһеҙ тауыш сығарып, әләгә-тәгәрәй тау түбәненә -- ауылға ҡарай йүгерҙе.

-- Аҡылдан яҙған мәжнүн, сумасброд! – Хәкимуллин артынан төкөрөп ҡалды. -- Ысын сумасшедший. – Камераға тура ҡарап йомғаҡланы: -- Күрҙегеҙме инде бында бер ниндәй ҙә яҙыу-фәлән юҡлығын – бөтәһе блеф, аҡылы камил түгел бәндәнең һаташыуҙары икәнен? Ҡондоҙбаевтың ысын урыны ҡайҙалығын медицина әһелдәре билдәләр.

Асылыкүл репортажы зәңгәр экрандарҙан бер-нисә тапҡыр ҡабатлап күрһәтелде...

## ЕГЕРМЕ ӨСӨНСӨ СӘХИФӘ

Ҡуҙйылғаға Ҡояш бешерә башлағас – төш ваҡытында барып еттеләр,

пәйғәмбәрҙәр кеүек ап-аҡтан кейенгән Мирхәйҙәр ҡарый ҡапҡаны асып, ҡолас йәйеп ҡаршыланы:

-- Әйҙә, рәхим итегеҙ! – Ауыҙ асҡан Моталды тынысландырҙы: -- Ярай-ярай, әйтмәһәң дә беләм ни йомош менән йөрөгәнеңде, иркенләп гәпләшербеҙ! Тәүҙә тамаҡ ялғап алайыҡ.

Ямырҙа, ашыҡ-бошоҡ сәй эсте лә, юл өҙөлмәҫе борон өлгөрәйем, тип, ҡайтыр яғына ҡуҙғалды.

-- Мунса әҙер: мосафир кешегә, еңгәйеңдең аш-һыуы өлгөргәнсе, быуындарын яҙылдыртып алыу һис зыян итмәҫ. Ҡуҙйылғаның хуш еҫле ҡайын миндеге менән сабынғаның да юҡтыр?

-- Юҡ шул.

-- Киттек, әләйһә!

Тирләп-бешеп, ҡыҙара бүртенеп ҡайтҡас, берәр туҫтаҡ асы балды һемереп, иҙерәп ятып хәл алдылар ҙа, өлгөргән ашты ашап, ғүмере буйына мөғәллим булып эшләп пенсияға сыҡҡан, әлеге көндәрҙә яҡташтары араһынан ҡобайырҙар йыйыу менән шөғөлләнгән ҡарыйҙың яҙыу өҫтәле торған төпкө бүлмәгә үттеләр; бер стена иҙәндән түшәмгәсә кәштәләнеп, китаптар менән шығырым. Йомшаҡ диванға йәпләнеп, ирәүән әңгәмә ҡорҙолар.

-- Ямантауҙа ниндәйҙер йәшерен эш бара, ләкин унда берәүҙе лә ебәрмәйҙәр, тип әйтәләр, ысынмы? – тине Мотал.

-- Яман үкенескә күрә, эйе шул.

-- Ауылығыҙҙан эшләгән кешеләр бармы?

-- Унда, башҡортто ғына түгел, урындағы урыҫтарҙы ла үткәрмәйҙәр; оҙон аҡсалар түләп, Белоруссиянан килтереп эшләтәләр.

-- Ни өсөн улай икән?

-- Ҙур секретлы, йәшерен шөғөллө зона. Атайыңдар яулап алған совет хакимиәте кәрәгебеҙгә бирҙе: егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа башҡорт ерен ҡырҡҡа тураҡлап тирә-яғыбыҙҙа Ырымбур, Силәбе, Свердловск, Ҡорған, Төмән, Пермь, Куйбышев, Саратов өлкәләре һәм Татарстан, Ҡаҙағстан республикалары тигән ҡораҡ юрған яһауҙары етмәгән, инде килеп республикабыҙҙың тере тәненән Ямантаулы егерме ике квадрат километр хәләл аҫаба еребеҙҙе ҡырҡып алып, федерация ере тип иғлан ҡылдылар ҙа әҙәм үткеһеҙ тимер ҡоршау менән кәртәләнеләр – ҡылыҡтары боронғо йыртҡыс Демидовтарҙыҡынан да кәм түгел. Ләкин ил күҙе үткер, бына уның географик картаһы:




-- Ҡуҙйылға, Татлы ауылдары ҡайҙа? – Мотал карталағы Кесе Инйәргә ҡойған Оло Ҡуҙйылға буйынан бармаҡ йөрөтөп эҙләне.

-- Елгә осоролдо улар, Межгорье хасил булды. Межа-Горе (Ҡайғы сиге) тип йөрөтәбеҙ уны. Башҡорт еренең йөрәгенә ҡара ҡайғы һалдылар...

-- Ҡайғырмайыҡ, Мәскәү-мәркәзебеҙ алдан ҡайғырта. Ядро һуғышы була ҡалһа, кереп ҡотолор урын.

-- Ә ниңә ул икеләтә Лихтенштейн дәүләте һыйырлыҡ автономиялы ерҙе федераль ер иттеләр? Башҡортостан ере килеш ҡалғанда ла Рәсәй ере булыр ине бит?

-- Уныһы инде, ағайым, оло түрәләр эше.

-- Тимәк, һинең менән минең эш юҡ, теләһә нишләһендәр? Булаттимер Шаһибәрәков былай тип әйтмәҫ ине.

-- Белмәйем, белмәйем...

-- Әммә белеүселәр бар. – Мөғәлләм-ҡарый яҙыусы алдына принтерҙан үткәрелгән мәғлүмәтнамә һалды:

Загадочная точка мира
Ямантау – плохая гора
Самый глубокий ход под самую высокую гору Южного Урала



Вид на гору Ямантау.

Есть версия, что президент страны приезжал контролировать окончание строительства секретного подземного города, расположенного в самой высокой горе Южного Урала — Ямантау (в переводе с башкирского — «плохая гора»;

высота 1640 м).

Первой о существовании тайного горного объекта на Южном Урале миру рассказала газета «Нью-Йорк Таймс»: «В ходе секретного проекта, напоминающего о жутких периодах холодной войны, Россия занимается постройкой гигантского военного комплекса под землей в районе Уральских гор. К спрятанному внутри горы Ямантау, в районе Белорецка (объект Белорецк-16 — закрытый город Межгорье) на Южном Урале, огромному комплексу подходят железная дорога и автодорога. В работах задействованы тысячи рабочих».

Газета «Вашингтон Таймс» поместила статью «Москва строит бункеры на случай ядерной атаки», в которой говорилось, что «в то время как США закрыли большинство подобных объектов, Россия быстрыми темпами выполняет дорогостоящую программу по сооружению подземных убежищ, тоннелей и командных пунктов, унаследованную от времен холодной войны. В частности, продолжается работа по созданию подземного пункта на Урале близ города Белорецка».

Западные СМИ распространили информацию ЦРУ и о других подземных убежищах, приготовленных для себя российским руководством. Это более близкие бункеры: в Московской области — в районе Вороново, в 70 км к югу от Москвы, и близ Шарапово в районе Чехова, в 50 км к югу от столицы. К одному из этих объектов якобы ведет подземная секретная линия метро, позволяющая властям скрыться из столицы.

Иностранные издания пытались брать комментарии у российских официальных лиц. Но внятных объяснений не последовало. Высказывались предположения и о добыче урановой руды в южноуральской горе, и о хранилище государственных ценностей, и о резерве пищевых продуктов. Выдвигалась и версия строительства бункера для российского правительства на случай ядерной войны. Но потихоньку тема спецобъекта в Ямантау сошла на нет.

Между тем о Ямантау не забыли туристы, которые ежегодно совершают восхождения на эту гору (гора большая, здесь есть где разойтись туристам, военным, строителям и егерям). Они рассказывают, что меры по охране окрестностей Ямантау ужесточились. К горе примыкают территории Южно-Уральского государственного заповедника (рассказывают, что и заповедник там учредили не случайно). Но патрулируют окрестности Ямантау не только егеря, но и военные.

Те, кто добрался до вершины Ямантау, говорят, что она представляет собой огромное каменистое плато, с небольшой грудой скалистых останцов в центре. «На вершине до начала 90-х годов стояла военная часть, обслуживающая бетонированную вертолетную площадку и военное спецоборудование. После военных на вершине горы остались руины былых строений, лужи мазута и груды проржавевшего железа», — рассказывают очевидцы... «Впрочем, о том, что скрыто в недрах горы Ямантау, до конца не знают даже жители Межгорья, расположенного у подножия горы. Объект Ямантау имеет статус повышенной секретности, — это факт, все остальное лишь домыслы».

Закрытый город Межгорье у подножия Ямантау находится на

территории Башкортостана, Белорецкий район. В разное время это место было известно под названиями Куз-Елга, Кузъелга, Уфа-105, Солнечный, Белорецк-16. Город расположен в 230 км к востоку от Уфы и в 70 км к северо-западу от Белорецка, на левом берегу реки Малый Инзер. В Межгорье входит и Межгорье Юго-Западный (Белорецк-15).

-- Уға ҡалһа, быҙдай мғлүмәт сер түгел, -- тине Мотал, ҡулындағы тексты өҫтәлгә һалып. – Ул объекттың ядро һөжүменән һаҡланыу урыны итеп эшләнеүе тураһында юғары чиновниктарҙан йыш ысҡына.

-- Ә мин әйтәм, үлемесле Шүлгән шойҡанын йәшереү урыны ул.

-- Йәғни?

-- Йәғни донъяла атом электростанциялары күбәйҙе, радиациялы ядро ҡалдыҡтарын ҡайҙа ҡуйырға белмәйҙәр. Бына шуның ҡәбере итеп беҙҙең бахыр Ямантауыбыҙ тәғәйенләнгән.

-- Быныһы ла икеле. Шул хаҡта баш ҡалабыҙҙа бер килке зыялыларыбыҙ боларып та алғайны, ләкин дәүләт ҡоролтайы депутатын объектҡа керетеп, үҙ күҙҙәренә күрһәтеп, Шүлгән шойҡаны буш һүҙ икәнлеген иҫбатлаттырттылар. Үҙегеҙҙең төбәктең халыҡ вәкиле.

-- Хе-хе-хе! Беләм мин ул яулыҡлыны! Туннель ауыҙына индертеп киноға төшөргәндәр ҙә, йөҙ аҙым да ары үткәртмәй, Шүлгән шойҡаны хаҡындағы имеш-мимештәрҙең ерле буш һүҙ икәнен фашлатҡандар.

-- Сер өҫтөнә -- сер генә, уны нисек сисергә? – тине Мотал.

-- Төбөнә туҙ ҡуйып ҡына сисергә мөмкин уны.

-- Ундай тылсымлы туҙҙы ҡайҙан табырға?

-- Халҡыбыҙ хәтере ул. Халыҡ хәтеренән алып тиргәндә, Урал-батырҙы -- яҡшылыҡ-аҡлыҡ эйәһе, уның игеҙәк туғаны Шүлгән-матурҙы яманлыҡ-ҡаралыҡ эйәһе тип беләбеҙме? Беләбеҙ. Урал-батыр вафат булғас, кәүҙәһе ана анауы торған Урал-тау булып ҡалҡынған. Шүлгән-матурҙың кәүҙәһе – хәҙерге Силәбе өлкәһендә тороп ҡалмыш Шүлгән-тау. Башбабаларыбыҙ икеһе тиң ваҡыты етеп үлгән, әммә ғүмерлек шөғөлдәре үлмәгән. Хәҙер инде онотолған тәүдиндәге Дәү Хоҙайыбыҙ Имирҙың ун дүрт йәне кәүҙәһенән ҡубынып Күккә ашҡас, ятып ҡалған тән ағзалары Урал – Ҡаҙаҡ – Алтай тауҙары төркөмдәренә әүерелеүен беләбеҙме? Беләбеҙ (шул хаҡта хаҡ китап бар).

-- Ниндәй китап? Кемдеке?

-- Йәүҙәт Ҡондоҙбаев тигән ғалимыбыҙҙың мәктүбе.

“Шыййй!” итеп һыҙғырҙы әҙип, ул ғалимдың ғалимлығын бөлдөрөп.

-- Һыҙғырма, тыңла. Имирҙың ҡуш имсәкле, ҡуш имсәк башлы күкрәге – Ҡуш-тау, Шәке-тау, Йөрәк-тау үркәстәре булып, ә дарманлы торого (фаллосы) – Тора-тау булып хәҙерге Эстәрлетамаҡ ҡалаһы эргәһендә ҡалҡынған. Инде ошо айыштағы иң мөһимен әйтәйем. Урал-батыр фани донъянан китһә лә, уның яҡшылыҡ-аҡлығы китмәгән – баяғы Ҡуш-тау, Шәке-тау, Йөрәк-тау, Тора-тауҙарҙың эсенә инеп ҡалған, шуға күрә лә ул тауҙарҙың таштары һөттәй ап-аҡ, ә аҡлыҡта – яҡшылыҡ. Ләкин беҙҙең быуындың күҙ алдында уҡ оло фажиға булды: изге тауҙар итәгендә оялаған Эстәрлетамаҡ сода комбинаты тигән яуыз-аждаһа

Шәке-тауҙы төбөнәсә кимереп, яҡшылыҡ-аҡлыҡты кер содаһына әйләндереп, донъяның әшәкеһенә бутап Шүлгән (Үлгән) диңгеҙенә85 ағыҙып харапланы, инде тегеләре ҡалды сиратта... Яуыз-аждаһа уларын да бөтөрһә, Урал-батырҙың яҡшылыҡ-аҡлығы ер йөҙөнән китәсәк, Шүлгән (Үлгән) диңгеҙендә батасаҡ... Ошо хаҡта мин яр һалып ҡараным, ишетеүсе булманы. Баяғы Ҡондоҙбаев тигән уҙаман ғына районыбыҙ матбуғатында һөрәнләне, ишетеүсе булманы...

Инде киләйек икенсе фажиғәгә. Шүлгән-матур был донъянан киткәндә лә уның шөғөлө китмәне – унан ҡалған яманлыҡ-ҡаралыҡ Дәү Хоҙайыбыҙ Имирҙың артҡы яман ағзаһынан хасил булмыш Яман-тау эсенә кереп бикләнде, шуға күрә лә ул тауҙың таштары ҡара... Замана дәжжалы бөгөн килеп тимер тырнаҡтары менән Яман-тауға соҡоп керҙе – яманлыҡ-ҡаралыҡты шунда ыратып-арттырмаҡсы. Әгәр шуны кисекмәҫтән тыймаһаҡ, был Еребеҙҙән ни ҡалыр ҙа Күгебеҙҙән ни ҡалыр?!.

-- Ныҡ шыттыраһың, ағай.

-- Иҫәүән Иҫәрғәптәр һанын ыратма улай, мырҙам!– Мирхәйҙәр-ҡарый ҡунағына оҙаҡ текләп ҡараны.

-- Иҫәүән Иҫәрғәп? Кем ул?

Ҡарый аяҡ бөкләп түргә ултырҙы:

-- Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем – Илгә мәғлүм итәйем... Донъяның ҡара башлы һары ҡорто — бына кем ул Иҫәүән Иҫәрғәп! — ерәнесле төкөрҙө. – Тыңла!

## ИҪӘҮӘН ИҪӘРҒӘП ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ

Урта Азияның йөҙө ҡара булғыры Аҡһаҡ Тимере Уралға баҫып ингәс булған, ти, был хәл86.

Башҡорт еренә етеү менән, ғәскәрен оҫҡор уҡтар ҡыра башлаған. Аҡһаҡ Тимер башҡортто ҡыра, ә ғәскәре унан да ныҡ ҡырыла, имеш. Ер йөҙө себен кеүек сереп ятмыш үлек менән түшәлгән.

Аҡһаҡ Тимер башҡорт уғын уҡ менән туҡтатып булмаҫтайына инанғас, Уралдың ике итәген буйлатып шымсыларын ебәргән:

— Башығыҙҙы юғалтһағыҙ — юғалтығыҙ, әммә уҡтарҙың атылыуҙан туҡталмау серен белеп ҡайтығыҙ, өҙөлмәҫтәй керешен күреп ҡайтығыҙ!

Хәйерсе һүрәтенә лә кереп, мосафир таяғына ла таянып, әүлиә салмаһына ла уранып, ҡуштан ҡиәфәтендә түрә-мүрәнең салғый осона ла уралып, дуҫ ҡиәфәтендә йөрәк-бауырға ла кереп, шымсы тоҡом башҡорт илен буйҙан-буйға ҡыҙырған, һәр тирмәнең төндөгөнә ҡолаҡ һалып тыңлаған. Иҫән-имен ҡалғандары, ғәскәргә әйләнеп ҡайтып, Аҡһаҡ Тимергә өгөгән:

— Өҙләкһеҙ ҡаршы осоп торған, беҙҙе ҡырған уҡ яндарының кереше — был халыҡтың батырҙарының рухында, ә керешенең көрмәге — сәсәндәренең телендә. Уҡ менән атып, һөңгө менән ҡаҙап, ҡылыс менән сабып, батырҙарын бөтөрһәк тә, рухтарын үлтереп булмаҫ, сәсәндәрен бөтөрөп булмаҫ — тел

[85] Шүлгән (Үлгән) диңгеҙе хәҙерге Израил дәүләте ерендә, урыҫса Мертвое море, тиҙәр.

[86] Был ҡобайыр сәсмә өлөшө менән бергә китапта тәүгә баҫыла.

төптәре төйөнлө.

— Ни ҡылайыҡ әләйһә?

— Сәсәндәренең сәсен һинең ат ялына бәйләйек, телен һинең борғоларҙың еҙ көйөнә көйләйек, күҙен һинең алтын таждың гәүһәренә аҡшайтып баҡтыртайыҡ.

— Бының өсөн ни кәрәк?

— Сәсәндәрен оло туйға саҡырайыҡ, ҡулдарына байһөйәк тотторайыҡ. Һәр ҡайһыһын яҡшы атҡа атландырып, йола буйынса, тип, юл аяғы — берәр туҫтаҡ ҡымыҙ һалып бирәйек. Ҡымыҙ эсенә гүрзә йыландың ағыуын — иҫәүән итә торған ыуын тамыҙып алйытайыҡ.

— Шунан ҡала ни булыр?

— Һемереп эскән һәр бер сәсән, аҡылын юймаһа ла, иҫен юйыр: шул ҡымыҙҙы эскәнгә тиклем ни булғанын онотор. Ете быуын ата-бабаһын да белмәҫ, дуҫы менән дошманын да айырмаҫ, табанында тупраҡ йылыһын да توймаҫ: тел тибрәткәне һайын, бөйөк йыһангир Тимер исемен генә иҫләп табыныр, илен уның тәхете аҫтына өйөрөр. Сәсән телдәренең төбө төйөндәрен юғалтып, ил кереше ысҡыныр — батырҙар тоҡомо ҡорор.

— Шәп! — Тигән, ти, Аҡһаҡ Тимер. — Кисекмәҫтән солох иғлан ҡылығыҙ, туй дөмбөрө ҡағығыҙ!

Бөтәһе лә, баяғы әйткәнсә, еренә еткереп үтәлгән. Солох менән алданған сәсәндәр хан урҙаһының туй һыйына ялғанып, гүрзә ыуы һалынған ҡымыҙҙы яланып ҡайтып киткән.

Байтаҡ Ғүмерҙәр уҙғас, солохло илде, солоҡ итеп, үҙ тәхете аҫтына ауҙарыу өсөн, Аҡһаҡ Тимер тағы килгән, һынамаҡҡа сәсәндәрҙе тағы туйға йыйҙыртҡан. Үҙен, йәғни йыһангир Тимерҙе, маҡтап әйткән әйеттәрен үҙ ҡолаҡтары менән ишетеп торһондар өсөн, бейҙәргә — бүләктәр, муллаларға хәйер-саҙаҡалар таратып, бик күп халайыҡты тамаша ҡылырға өйөрткән. Майҙан әйләнәһенә, яланғас ҡылыстарын тотоп, хандың ғәскәре баҫҡан. Байһөйәге ҡулдарға тотторолғас, сәсәндәрҙе әйет әйтергә саҡырған. Вәзирҙәре табынға күҙ йүгерткәндәр, Аҡһаҡ Тимер тәхетен маҡтап табыныуҙы көткәндәр. Тик сәсәндәр һәммәһе бер юлы нәфрәтләнеп тамаҡ ҡырған, байһөйәкте атып-бәргән. Бөтәһе бер тауыштан һамаҡлаған:

Ишет быны ҡартыңдан,
Һүҙ булмаһын артымдан,
Йортҡа әшкәр итмәһәм,
Әйетемде әйтмәһәм,
Илдең күңеле ҡалыр, тим,
Илдең хәтере ҡалыр, тим.

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Боронғоларҙан аманат,

Уға итһәгеҙ хыянат,
Булыр һеҙгә яманат.

Ай Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым,
Илгә дошман килгәндә
Ышыҡ булған Уралым,
Ил һаҡлаған ҡоралым.

Ҡайнар-ҡайнар ҡабарып,
Ҡалҡып килгән болоттай,
Күҙ күремдән күренеп,
Нур япраҡлы ағастай,
Күгәреп ятҡан Урал тау.

Ботағы алтын алҡалай,
Япрағы көмөш тәңкәләй,
Һыны һынсыл егеттәй,
Тамыры ташҡа ереккән
Ҡарағай, имән, ҡайыны, —
Бары ла һөйгән Урал тау.

Сылтырап аҡҡан шишмәңдән
Һирпеп һыуың алғанда,
Бөтә ғәмен онотоп,
Һыныңа күҙ һалғанда,
Таң Сулпаны ҡалҡҡанда,
Һылыуың маҡтап йырлаған,
Таң һыҙылып атҡанда
Ҡошо маҡтап һайраған,
Ҡыҙы ла һөйгән Урал тау,
Ҡошо ла һөйгән Урал тау.

Күбәләген, бал ҡортон
Үҙ буйына арбаған,
Сал бөркөтө, ҡыйғыры
Ҡаяңда төйәк һайлаған, —
Хоҙай бирер йәннәттән
Туғайы һылыу Урал тау.

Ай Уралым, Уралым,
Ҡуш имсәктәй ҡабарып,
Ҡалҡып торған Уралым;
Бөтә данды үҙенә

Тартып торған Уралым.
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған Уралым;
Яусыл булған атама
Атан булған Уралым;
Йүнсел булған әсәмә
Ватан булған Уралым;
Икеһен дә йөп ҡылып,
Түл йәйҙергән Уралым;
Аҫыл ағас үҫтереп,
Ҡош үрсеткән Уралым;
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Яу астырткан Уралым;
Атамды яу саптыртып,
Әсәмде тол ҡалдырып,
Ике күҙен йәшләтеп,
Моңло ҡылған Уралым!

Сыңғыр-сыңғыр сыңраған
Йылҡыһы күп Урал тау,
Мөңгөр-мөңгөр мөңрәгән
Һыйыры күп Урал тау,
Һуйыл ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Урал тау,
Ҡыҫка ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Урал тау,

Майлап ҡуйған ҡайыштай
Йыланы күп Урал тау,
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Урал тау,
Йәш кәләштәй биҙәнгән
Төлкөһө күп Урал тау,
Ояларға урыны мул, —
Ҡоштары күп Урал тау,
Балығы аттай дулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай һулаған,
Һыуы ярына һыймаған
Йылғаһы күп Урал тау.

Балтырғаны беләктәй,
Һарнаһы ҡурай елә ктәй,
Туғайҙары түшәктәй,

Талы, муйылы ҡурсаҡтай,
Сәскәләре мең төҫлө,
Иҫертерлек хуш еҫле,
Йылҡылары сыңырлап,
Һыйырҙары мөңөрәп,
Ҡуй-һарығы ҡуңырлап,
Көтөү-көтөү йөрөр ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йөҙ ҡуй булып үрсер ер,
Тороп ҡалған яңғыҙ тай
Өйөр булып типсер ер, —
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуың эскән ер!

Ай Уралым, Уралым,
Барына ата Уралым,
Ай Уралым, Уралым,
Барына инә Уралым.
Болоттарға олғашҡан
Армыт-армыт Урал тау,
Ғәйебе бар януарға
Һунарсың күп Урал тау.
Һауыт-һаба тултырып,
Азаматтар ултырып,
Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡотороп,
Уйнап-көлгән Урал тау.
Ҡуйылығы ҡаймаҡтай,
Тәмлелеге һаумалдай
Һаба-һаба ҡымыҙы,
Ғыж-ғыж килгән ҡурайы,
Дың-дың иткән ҡумыҙы
Йыр йырлатҡан Урал тау.

Ябырылып яу килгәндең
Һөйәге ҡалған Урал тау,
Айбарланған батырҙарҙың
Төйәге булған Урал тау.
Биләңә баҫып ҡараһаң, —
Бар еребеҙ күренә.
Башыңа баҫып ҡараһаң, —
Бар илебеҙ күренә.
Ай Урал тау, Урал тау,

Ай Урал тау, Урал тау...

Әйет ошо урынғаса әйтелгәс, Аҡһаҡ Тимерҙең ҡаштары емерелеп, ирендәре ҡымтылған, ә вәзирҙәр араһында шыш-быш, хәүефле хәрәкәт киткән, араларынан береһе, иң өлкәне, хандың ҡолағына өргән:

— Уралдарын маҡтайҙар ҙа маҡтайҙар, һинең тәхетте данламайҙар.

— Бөйөк йыһангиребеҙгә тапшырыласаҡ был ерҙең баһаһын күтәрмәккә, хәйер-садаҡаны мулыраҡ сумырмаҡҡа тамаҡ йырталыр улар, — тигән хан ҡаҙнасыһы.

— Әммә һис бер сама юҡ — телдәренән төшмәгәне шул бер Урал да Урал... — Вәзирҙәре хәүефле баш сайҡаған.

— Шул Уралды тәхет аҫтына ҡыҫтырырға ысулын шәйләп килдем дә! — тигән, ти, Аҡһаҡ Тимер. — Иншалла, гөрзә йылан ағыуы кипмәгәндер. Бөгөн Уралды маҡтаһалар, иртән, иншалла, ул минең ҡул матҡыһына килеп кергәс, мине данлап йырларҙар.

— Ай-һай!.. — тигән оло вәзир.

— Айһайламай ғына тыңлап ҡарайыҡ, гөрзә ыуы үҙенекен итмәй ҡуймаҫ, — тигән башҡалары.

— Байһөйәкте атып-бәреүҙәрендә бер ғилләә бар... — Өлкән вәзир һаман да бирешмәгән.

— Байһөйәкте атып-бәрһәләр ҙә, баштарын бәрҙертергә теләмәҫтәр — һәр кемгә йән ҡәҙерле.

— Әнә, беҙ һалып биргән ҡымыҙҙарын да һирптеләр.

— Ҡымыҙҙы түкһәләр ҙә, ҡандарын түгәһеләре килмәҫ! — тигән ҡапыл эштең асылын һиҙенә башлаған Аҡһаҡ Тимер, тештәрен шыҡырҙатып. Туҫтаҡтарын алдарынан ҡағып осорған ғорур сәсәндәр хан тештәренең шыҡырҙауы араһында бер тауыштан ошо әйетте лә әйтеп өлгөргән:

Бейек тауҙың үлгәне —
Башын монар алғаны;
Ай менән Көндөң үлгәне —
Тонйорап байып барғаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны.

Яйыҡ китһә, юл китер,
Иҙел китһә, ил китер.
Илең китһә, ни ҡалыр?
Яңғыҙ яман бей ҡалыр,
Ике күҙеңә саң һалыр.

Ханға менәр ат кәрәк, тип,

Һайлап яҡшы атты алыр;
Ҡоҙа-ҡоҙа булам, тиеп,
Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите Айҙай балҡыған,
Бер бите Көндәй яҡтырған,
Томбойоҡтай күкрәге
Күпереп үҫеп ҡалҡынған
Һылыуыңды яуыз зат алыр.

Ханға бирһәң ҡулыңды,
Ханға түшәк йәйерһең;
Төшһәң менгән атыңдан,
Ханға башың эйерһең.
Ҡылысың тыҡһаң ҡыныңа,
Хандың ҡоло булырһың.
Яу килгәндә өнһөҙ ҡалһаң,
Хандың боло булырһың.

Ойошоп көткән ҙур йортто
Өрккән тайҙай итер хан;
Арыҫландай ирҙәрҙе
Йыуаш ҡуйҙай итер хан.
Илеңде алыр ҡулыңдан,
Ғәскәр алыр улыңдан;
Тартып алыр малыңды,
Иҫәпкә алыр барыңды;
Боғаҙламай эсер ҡаныңды,
Үлтермәй алыр йәнеңде, ау,
Үлтермәй алыр йәнеңде.

Шоңҡар һөйгән һунарсы
Ҡош сөйҙөрмәй сыҙармы?
Ирмен тигән ир-егет
Ат уйнатмай тынырмы?
Урал тигән ере бар,
Күҙ нурылай иле бар
Батыр башын эйерме?!

Ирмен тигән ир кеше
Бурһыҡтай боҫоп ятмаҫ ул;
Көнгә күҙе сағылған
Ябалаҡтай ҡасмаҫ ул.
Яу килгәнен күргәндә,

Бәпкә йөнөн ҡалҡытып,
Еләҫ иҫкән елдә лә
Шаулап торған уҫаҡтай,
Йөрәктәре ҡалтырап,
Нишләргә лә аптырап,
Яуҙан тороп ҡалмаҫ ул,
Ҡылысын ҡынға һалмаҫ ул.

Илдең нурлы булғаны —
Илдә батыр тыуғаны;
Илдең моңло булғаны —
Дошман килеп тулғаны.
Айбарланған батырҙар
Яуға барыр яу булып,
Тигеҙ ерҙә тау булып;
Сергеһенән ҡан үтмәй,
Батыр булып дан тотмай,
Аттан эйәр алмаҫтар,
Ҡындан ҡылыс һалмаҫтар, ау,
Ҡындан ҡылыс һалмаҫтар!

Бөтә сәсәндәр ҡоро аяғөҫтө тороп бер тауыштан ҡабатлаған аҙаҡҡы ике юлды:

Ҡындан ҡылыс һалмаҫтар, ау,
Ҡындан ҡылыс һалмаҫтар!

Ошоно ишеткәс, Аҡһаҡ Тимерҙең йөҙөн тартышҡаҡ тотоп, тағандағы ҡаҙан төбөләй ҡарайып һөрөмләнгән.

— Гүрзә ағыуын әллә еренә еткереп һалманығыҙмы? Һуңғы тамсыһынаса алҡымдарынан уҙғанын һағаламанығыҙмы? Сәсән телдәре ниңә мине данламай, истәк ере Уралды аяғым аҫтына һалырға тамшанмай? Батырҙарының уҡ атҡыс мәргән яндарының керештәрен атмаҫлыҡ ысҡындыртмай?! — тигән, ти, ул вәзирҙәренә, ҡанға тонған күҙҙәренең ағын әйләндереп, ажғырып.

— Миһырбанлы ханыбыҙ, һинең ҡулда йәнебеҙ һәм ҡаныбыҙ! — тип баш орған вәзирҙәре. — Аллаһы Тәғәлә шаһит: барыһын да еренә еткереп үтәгәйнек — ыуын тейешенсә һалып, дүрт күҙ менән һағалап эсергәйнек.

— Ә ниңә һуң, алайғас, сәсән телдәренең төбө төйөнлө, ил кереше кирә тартыулы һаман?!

Хандың аҡтыҡ әмере тел осонда, вәзирҙәренең ғүмере ҡыл осонда ҡалған. Шул саҡ оло вәзир әйткән:

— Мәрхәмәтле ханыбыҙ, аяҡ аҫтында булһын йәнебеҙ — бында беҙҙең ғәйеп юҡ. Ғәйеп булһа булыр ошо баш эймәүсе Уралда, баш бирмәүсе халыҡта. Һуңғы тапҡыр бизмәнгә һалып ҡарайыҡ — сәсәндәренең сәсәненән һорайыҡ.

Буйһонмаған сәсәндәрҙең сәсәнен хан ҡаршыһына һөйрәкләп килтергәндәр.

— Үҙеңде ҡыйҙыртһам да, нәҫелеңде аярмын, — тигән Аҡһаҡ Тимер уға, — әйт, гүрзә ағыуына ҡаршы дауа серең нимәлә?

Бөтә табын, бөтә майҙан яуап көтөп тын ҡалған.

— Илем өсөн мең ҡылыстан үтергә лә әҙермен, — тигән ғорур сәсәндәрҙең сәсәне илбаҫарға. — Ә нәҫелем һинән аяу һорамаҫ — һиңә унан аяу һорарға тура килер! Һорауыңа шулай ҙа яуабымды ал — килер быуындарың өсөн васыят итеп ҡалдыр уны, донъяның ҡороҡкосо! Бәдбәхет, һүҙ йөрөтмә артымдан, ишет быны ҡартыңдан: баҫҡынсыларға ҡаршы беҙҙең дауабыҙ — беҙҙең ҡаныбыҙҙа, Урал батыр-баба биргән йәнебеҙҙә, донъяның барлыҡ ағыуҙары ла көсһөҙ уның ҡаршыһында. Урал халҡын иҫәнгерәтеү өсөн — тамырҙарыбыҙҙа типкән тере ҡанды һыуға алмаштырыу, ә тубыҡландырыу өсөн йәнебеҙҙе аҡһатыу кәрәк булыр ине һиңә, ә был, беләһең, һинең эше аҡһаҡ юлбаҫарҙарҙың ғына түгел, хатта Аллаһы Тәғәләнең үҙенең дә ҡулынан килмәйәсәк. Сөнки табандарыбыҙҙы Урал тупрағына баҫып торған саҡта тәнебеҙҙә мәңгелек көс ҡаҡшамаҫ, сәсән телдәренең төбө бурһымаҫ, батыр яндарының кереше сиселмәҫ!

Аҡһаҡ Тимерҙең йөҙө үлек төҫө алған, һаҡалының осон ҡороп сәйнәгән.

— Тетмәгеҙҙе тетәйем, табандарығыҙҙы Уралығыҙҙан айырып, баштүбән аҫып ҡуяйым, боғаҙығыҙҙы салып, ҡанығыҙҙы ҡояйым, эттәрҙән ялатайым! — Ғәскәр башлыҡтарына ҡул һелтәгән.

— Меҫкенйән! — тигән уға сәсәндәрҙең сәсәне. — Табандарыбыҙҙы ерҙән айырһаң да, күккә тоташасаҡ улар, ә күк — беҙҙең үҙебеҙҙеке, Уралдыҡы!

Сәсәндәр берҙәм тороп баҫҡан, хан язаһын да берҙәм алыр өсөн, сәсәндәрҙең сәсәне йәнәшәһенә теҙелгән. Ҡатилдар, ашығып, хан әмерен үтәргә лә керешкән...

Шул саҡ сәсәндәр ҡоронда башҡаларға ҡушылмай, һаман бер ҡулынан — хан биргән байһөйәген, икенсеһенән туҫтағын төшөрмәй шымтайып ултырған берҙән-бер бахырйән, хан алдында йыландай бишкә бөкләнгәнсе теҙләнеп, әсе тауыш менән сарбайлаған:

— Бер үк миңә теймәгеҙ! Мин хан ҡәҙерен беләм, мин ханды һөйәм, мин баш бирмәҫ нәҫелемдән баш тартам! Иҫәүән итһәгеҙ итегеҙ, әммә ғәзиз башҡайымды иҫән ҡалдырығыҙ! Иҫәүән мин, иҫәүән!

— Иҫәүән, тип әйттеме? — тигән, ти, Аҡһаҡ Тимер, көтөлмәгән хәлдән кинәт һиҫкәнеп. Бишкә бөкләнгән бахырйән, алтынсыға бөкләнеп, хан итегенең туҙанын ялап ялбарған:

— Эйе, ханым, иҫәүән — мин һеҙҙең сихәтле ҡымыҙҙы эскәндән үк иҫәүән, исемем дә булһын Иҫәрғәп-Иҫәүән! Мин бер ни ҙә иҫләмәҫлек иҫәүән!

— Бына был ғәжәп, — тигән Аҡһаҡ Тимер, хатта иҫәүәндең башынан һыйпап ҡуйған. — Әле генә башҡалар әйткән әйетте лә әйтмәнеңме ни һин, иҫәүәнем?

— Әйтмәнем, мин үҙемдең әйетемде әйтеп ултырҙым.

— Һәй шомло йән, әйтеп ебәр әле үҙ әйетеңде!

Теге бахырйән, хан күңеленә оҡшау өсөн, ауыҙын уҫлаптай асып, ҡулындағы хан байһөйәгенән умыра тешләп, хан ҡымыҙын уртлап йотоп ебәргән дә, хан алдында теҙләнгән килеш, әйетен һамаҡлаған:

Иҫәүән мин, иҫәүән!
Иҫәүән мин, иҫәүән!
Ата-әсәмде лә белмәйем,
Үҙемде лә белмәйем,
Ҡатынымды ла белмәйем,
Тоҡомомдо ла белмәйем;
Ете быуын, ете быуын
Бабамды ла белмәйем;
Етмеш быуын нәҫелемдең
Төп-тамырын да белмәйем;
Бер нәмә лә белмәйем,
Бер нәмә лә белмәйем!

— Афарин! Кейҙерегеҙ быға ҡара таҡыя — башы киҫелмәҫкә минән ярлыҡауыя! — тигән, ти, Аҡһаҡ Тимер. Теҙ-быуыны дер-дер ҡалтыраған бахырйән, хандың ҡара таҡыяһын кейеп алып, ҡуян кеүек йөгөнөкләп ултырып, ҡул сәпәкәйләп һамаҡлаған:

Әһәлүк, әһәлүк!
Хандан таҡыя кейгән,
Таҡыябашын эйгән,
Илдә бынамын тигән...

Аҡһаҡ Тимер башын сайҡап тыңлап ултырған-ултырған да:

— Бына был — мин тигәнсә! Кейҙерегеҙ тағы ла һары елән — арҡаһына ярлыҡау булһын минән! — тигән, ти. Шатлығынан күҙе шартлап сығырҙай аҡайған бахырйән шунда уҡ майҙан буйлап йөгөнөкләп бейеп киткән:

Әһәлүк, әһәлүк!
Хандан таҡыя кейгән,
Хандан хаҡ елән кейгән,
Аҡһаҡ Тимер “афарин!” тигән
Иҫәүән Иҫәрғәп мин!
Иҫәүән Иҫәрғәп мин!

Быны күреп күңеле килгән хан, сәрғәскәрен ымлап алып, бойорған:

— Был Иҫәүән Иҫәрғәптең ҡулына ҡылыс тоттороғоҙ, баштүбән аҫылған иҫәүән түгел сәсәндәрҙең боғаҙҙарын салдыртығыҙ — ысынлап та иҫәүәнме икән, һынап ҡарағыҙ!

Тотонған, ти, Иҫәүән Иҫәрғәп ҡорҙаштарын ҡылыс менән салырға ла

сабырға. Байһөйәген умырып ҡаба ла сала, ҡымыҙын эсә лә ҡан сығара икән. Эшен теүәл тамамлағас, телен арҡыры тешләгән эттәй әлһерәп килеп, хан аяғына йығылған:

Ысынлап та бик шәп мин,
Иҫәүән Иҫәрғәп мин!

— Их, бөтәһе лә Иҫәүән Иҫәрғәп булһасы! — тигән, ти, Аҡһаҡ Тимер, һыҙланып. — Был илде мин бер көндә теҙләндертеп, икенсе көндә елкәһенә менеп ултырып, өсөнсө көндә ике күҙен суҡыр инем, мейеһенә апара һалып эсер инем!.. — Шулай тигән дә, янсығынан ярты тинлек баҡыр сығарып, ҡанлы кәүҙәләр өйөмөнә ырғытҡан. — Бына һиңә, Иҫәүән Иҫәрғәп, иҫ китмәле һуҡырлығың өсөн һуҡыр тин!

Аҡһаҡ Тимер, Урал тупрағынан ғәскәрен бороп, һуғылған бүреләй төңөлөп ҡайтып киткән, шуның менән Уралда уның ҡара эҙе лә бөткән. Иҫәүән Иҫәрғәп иһә шунда уҡ, хандың һуҡыр-ярты тинен ҡармаҡлап, үҙе һуйған ҡанлы кәүҙәләр араһына үрмәләп инеп киткән, хан кейҙергән ҡара таҡыяһы менән һары еләнен дә һалып тормаған. Баҡыр бүләген юллай-юллай, ул, үле һөйәктәрҙе кимереп үтеп, ҡара тупраҡҡа һеңгән, шунан кире сыҡмаған... Бөгөн балыҡсылар ғына, балыҡ ҡаптыртыу өсөн, тиреҫлектең ҡара башлы һары ҡортон соҡоп ала, башынан ҡармаҡҡа ҡата. Әммә Иҫәүән Иҫәрғәп өндәшә алмай — үҙенең кем булғанлығын иҫләмәй...

Әйет әйтелеп бөттө, әйетсенең дә, тыңлаусының да йөҙөн тәрән уй һөрөмө солғаны. Асыҡ ишектән тышта әбей-ҡарсыҡтың, доңғорҙатып, күнәк йыуып түңкәргәне, моғайын, йыуынтыҡ эсереү өсөн, безәү-безәүләп, быҙау саҡырғаны ишетелде. Ниндәйҙер уҙмыш һайыҫҡан, ҡапҡа башына ҡунып, яман шыҡырыҡлап китте – шомло хәбәргәлер, моғайын... Артынса уҡ кетәк яғында ғорур әтәстең ажарланып һөрән һалғаны, тауыҡ халҡының, сыр-сыу ҡубып, ҡыҭҡылдағаны баҫты ихатаны. Өйҙәгеләр икеһе лә тышҡа күҙҙәрен текәп, тормош шау-шоуына ҡолаҡ һалып, тып-тын ултырҙылар.

— Тилегән бар, — тине ҡарт, — ҡош-ҡорт шуға ҡуҙғыша.

— Эйе, тилегән... — тине тарих шауҡымынан өҙөлә алмаған Мотал. — Уралыбыҙҙың күгендә ғүмер баҡый тилегәндәр бөтөрөлә... Аҡһаҡ Тимерҙәй килеп...

— Шуға күрә әйтәм бит: бөтәбеҙ ҙә үҙ хәтеребеҙҙән биҙеп, гөрзәйылан ыуын эскән иҫәүән иҫәрғәптәргә әүерелмәһәк ярар ине...

Мөғәлләм-ҡарый телевизор тоҡандырғайны, зәңгәр экран Өфөләге ифрат шомло яңылыҡтарҙы түгелдерҙе: көмөш һыулы Иҙелгә ҡар һыуҙары менән ҡуша Хөппаөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаров заводының зәһәр урғылы төшкән, баш ҡаланың эсер һыуҙарын ағыулаған... Урамдар тулы халыҡ, ғауғалы шау-шоу, буш күнәктәр тотоп эсер һыу эҙләп йүгерешеү... Фатирҙарҙан, кварталдарҙан ташып сығып тулаған дөйөм ыҙғыш -- тәртип боҙоу кимәленә етешкән: ҡыҙыу баштар Оло йортто уратып алып, йоҙроҡ болғап әсе ләғнәт оранлай, резина күҫәкле

милиция тәҙрәгә таш бәреүселәрҙе кәртәләп айпалаша. Баш күтәреү хәленә еткән халайыҡтарҙы тынысландыртыу өсөн, телестудияла ҙур ҡор йыйылған: ҡунаҡсалағы тауыҡтарҙай теҙелешеп ултырған чиновниктар, ғалимдар, әҙиптәр (шул иҫәптән Яҙыусылар берлеге идараһының рәйесе лә!) араһында ата күркәләй ҡупырайған совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамиҙың, етәкселекте алмаштырыуҙы талап иткән бәндәләрҙе антисоветизмда ғәйепләп: “Әҙәп кәрәк, туғандар, әҙәп! – тигәне, шуны ялғап алған Ҡуян Хажиәхмәттең: “Тәрән тарих төптәренән байҡаһаҡ, беҙҙең ата-бабалар әҙәпле булған, өйөнән сығып ғауға ҡуптармаған!” – тип башлауынан уҡ Моталдың һарыуы ҡайнаны. Ә Нефть химияһы институтының олпат ректоры, үҙенә яҡшы таныш химик, фенолдың һис тә ҡурҡыныс ағыу түгеллеген иҫбатлағас, сикәһендәге ҡан тамырҙары бүртеп, түҙеме тамам ҡаҡшап, төпкө бүлмәгә үтте лә ашығып яҙырға ултырҙы. Асылда фенолдың ниндәй хәтәр зәхмәтлеген аңлатып биргән бер бит текстың үҙәген *рухосфера мәсьәләһе* биләне лә уйҙары *режимга* ҡайтты.

Режим, режим! Илдең сәйәси режимы... *боҙолган рухосфера...*

«Совет власы – алтын үҙәк!» -- тип күкрәк ҡағып йәшәнек, ләкин ул... *алтын сөрөк* булып сыҡты, ыуалды... Емертелгән рухосфера ҡабат төҙәлһен өсөн, *сөрөктән арыныу кәрәк!..* – Тынғыһыҙ әҙип ғүмеренең аяныслы һөҙөмтәһе ине был.

Мөғәлләм-ҡарыйҙың һыбайланған йылғыр ейәне тексты район газета редакцияһына елдертеп, факс арҡылы адресатҡа -- Өфө Тарих, тел, әҙәбиәт институты директоры Ҡотлоевҡа еткерелде. Хужалар менән хушлашып, нисек тә баяғы кеше үтмәҫ тимер ҡоршау аша Янғантау аҫтына керергә тәүәккәлләнеп сыҡҡайны, һайыҫҡандың хәбәре килеп етте: ҡулына ашығыс телеграмма тотторҙолар -- Өфөнән, һеңлеһе Гөлзифа һуҡҡан: «Дорогой брат, немедленно возвращайся, трагически потеряли Мухлису, рыдаю!»...

Күҙ алдары ҡараңғыланып, болдор баҫҡысына сүгәләне, саҡ ҡалҡынып, өйҙәгеләргә әйтеп тормай, оло юлдан Иҙелбашҡа барыусы йөк машинаһына эләкте – тиҙерәк-тиҙерәк самолетка!..

## ЕГЕРМЕ ДҮРТЕНСЕ СӘХИФӘ

Ауылды үтеү менән шофер радиоалғысын ебәргәйне, Праганан «Азатлыҡ» каналы шаңғыртты.

-- Тота икән, -- тине Мотал, ғәжәпләнеп.

-- Япон транзисторы.

-- Ә беҙҙә, Өфөлә, хатта Хоҙай-Тәғәлә лә сараһыҙ: көнө-төнө дырылдатып тонсоҡторалар эфирҙы.

-- Урал тауҙары... ҡулдары ҡыҫҡа! -- Әсе йылмайҙы шофер. Эфирҙағы хәбәрсе ҡапыл Өфө яңылыҡтарына күскәс, икеһенең дә ҡолаҡтары ҡарпайҙы: баш ҡаланың Ярлауыҡ мәмерйәһендә алтын иретеп биҙәүестәр һәм затлы әйберҙәр етештереүсе йәшерен заводты тапҡандар, шул ҡиммәтле әйберҙәр менән ҡара баҙарҙа эш ҡылыусы мафияны фашлағандар, шайка етәксеһе Армен

Саркисян, унын әшнәһе шағир Абуталип Сиҙәмле һәм башкалар кулға алынған, «Ярлауык» ресторани директрисаһы Мөхлисә Шаһибәрәкова...

Мотал үҙенең ниндәй хәлдә икәнлеген был таныш түгел кешегә белдермәне; көллө тәне уттай яныуҙан капыл тирләп, кәпәсен сискәйне, каршылағы көҙгөгә күҙе төшөп, «Хоҙайҙың кашка тәкәһе» тигән ләкәпкә сәбәпсе бер шәлкем ак маңлай сәсен күрмәне – бөтә башы Уралдағы карлы түбәләй ағарып салланғайны...

Аэропортта самолет көткән кыҫка арала телефондан һеңлеһенә тоташты, Гөлзифаның иламһыраған тауышынан иң мөһимен яҙа-йоҙа аңланы: тикшереү органдары ерләргә рөхсәт бирҙе, көнө-төнө шунын артынан йөрөйөм, һуңғы юлға оҙатырға бөтәһе әҙер, ә калғанын – үҙең кайткас...

Ак болоттар самолеттың ак канаттарына урала, алтындай һары Һомай-Кояш болоттарға өҫтән көлә, аҫта, ак кейеҙгә төрөнөп, үҙ көйөнә бирелеп талғын ғына, һәүетемсә Ер шары зыр-әйләнә. Колактарҙа, өҙөлмәҫ оҙон моң булып, оскос моторҙарының боғаҙы өзләй. Юк, Ер шарының йәшел кыяк аралары, аллы-гөллө сәскәләре косағында бал корттары тызылдай. Бал корттары ғына түгел — уның, Моталдың, бәләкәс малай сағындағы әсәһенең кәпәй корһаклы көләс самауыры сыжлай. Бәй, самауыр тип ымһынғаны — Мөхлисәһенең, кәҙерле көмөшкәйенең, күрше бүлмәлә талғын ғына гөжләп торған сәс киптерткес электр машинаһы лаһа. Аһ, Мотал үҙенең эш бүлмәһендә ултыра... Катыны иртән тороп эшкә барырға ыҫпайлана. Һары-алтын бөҙрәләре боҙолмаһын өсөн, муйыны аҫтына хәтфә валик кына һалып йоклаясак, Моталды ла якын юлатмаясак... Йүнһеҙ электр машинаһы Мөхлисәгә тимер зыңы бөркөп гөжләй, ә уның тере бәғеренән ағылған боҙ һыуыклығы стенаны үтеп йәнде өшөтә. Аңы сәңкеп, ойоп, ак кар донъяһына төбәлгән тәҙрәгә баккан килеш, һалкын шәүләләр илендә гиҙә Мотал...

Ак кар яланынан уға туп-тура текләп-төбәлеп килгән кап-кара шәүлә. Ҙурайып якыная, якынайғаны һайын буйы оҙоная. Ул баҫкан кар, яңы ғына яуған йәш кар, суйындай карайып кала, әйтерһең, табандарынан кара дегет һаркыла. «Алтын» магазинын уҙҙы, йортка килеп терәлде — Мотал ойоған өсөнсө кат тәҙрәһенә йөҙө тиңәлде. Текләшкән килеш, тәҙрә төндөгөнә — форточкаға — үрелеп, табандары менән кирбес стенаны дөбөрләтеп күтәрелде һәм... капыл лимон төҫлө һары нур балкытып, йомғакка йомарланды, кесерәйгәндән-кесерәйҙе. Йоҙроктай ғына калып, асык төндөктән эскә тәгәрләп төштө. Мотал ап-анык күрә: тәҙрә төбөндә өлгөрөп еткән һары лимон емеше баҫып тора.

—Әссәләмәғәләйкүм, һеҙгә кунакка килдем!

Мотал бик якшы белә: төштә һары емеш күрһәң, һарғайып сирләүгә була. Шуға ла ул йә төштө өҙөп уяныраға, йә лимонды кергән юлынан бырактырырға тейеш.

-- Кәрәкмәйһең, беҙ һине сакырманык!

-- Һиңә кәрәкмәһәм дә, катыныңа кәрәкмен, хе-хе-хе!

Был ни хәл: һары лимон кабығы сатнап асылған, кыуыш кабык эргәһендә лимон буйлы иргәйел көлөп тора. Етмәһә, йәне өнәмәгән йән — баҙар корто Саркисян. Катынының ресторанына эйәләшкән кавказ кешеһе. Ошо Армен

Саркисяндың ҡара дүрткел супай мыйыҡлы йөҙөн күҙ алдында тотоп, ҡоҫоп ташларҙай була.

-- Юҡ, мин Саркисян түгелмен, — тине бәндә. Бәй, ысынлап та, икенсе йән икән дә! Йөҙөн ялтлатып ҡырған. Ҡыҙыл буҫтау мундирлы, ҡара күн ботфортлы, алтын уҡа эполетлы. Билендә пистоле бар. Ун һигеҙенсе быуат әҙәме.

-- Гонаһ шомлоғо, әле генә Саркисян инең дәһә?

-- Саркисянды өнәмәүеңде белгәс, ғәйре затҡа әйләндем. Кем ҡиәфәтендә күрергә теләһәң, шулай булырға әҙермен.

Мотал, ауыҙының ике мөйөшөн йәмерәйтеп, үҙенә генә хас «өнһөҙ зәһәр көлөү»е (Мөхлисәһенең билдәләмәһе!) менән йылмайҙы:

-- Улайһа, минең ярлыҡаусым булып күрен һин.

-- Баш өҫтө, тәксир! — Ғәжәпкә ҡаршы, Моталды шаҡ-ҡатырып та ҡалтыратып, тәҙрә төбөндәге әҙәмдең табаҡ йөҙө ҡапыл тарайып оҙонсаланды, маңлайы өс иле яҫылыҡ ҡала дүрткелләнеп, һары сәсе шырт ҡараға әүерелде, ҡырлас танауы аҫтында шундай уҡ ҡара мыйыҡ барлыҡҡа килде — тап атайҙың мыйығы! Шунда ғына айырма — остары аҫҡа боролған... Ботфорты — кирза итеккә, алтын уҡа эполетлы ҡыҙыл буҫтау кафтаны алтын петлицалы тар мундирға әйләнде; кәүҙәһе лә сандырайып, турайып, һалдат рәүешенә керҙе. Ярым ҡыҫылып аҡыллы-мут секерәйгән күмерҙәй ҡара күҙҙәре Моталды хәстәрлекле аталарса тура көйҙөрөп ҡараны, һул усына ултыртып тотҡан төрөпкәһенән ашыҡмай ғына имеп, ауыҙынан матур зәңгәр төтөн ҡулсаһы ебәреп, төрөпкәһенең мөштөгө менән Моталға төртөп күрһәтеп, быға тиклем ул кинофильмдарҙан ғына күреп-ишетеп белгән, йәнгә үткес таныш һәм яғымлы, һағыныслы бәғер тауышы менән арбап өндәште:

-- Атаһы өсөн улан ғәйепле түгел! — Атаҡлы грек философтары заманынан уҡ килгән постулат ине был. — Һин — илебеҙҙең улыһың! — Утыҙ етенсе йылдан һуң Моталдың бәғеренә шифалы бальзам булып яғылған билдәле һәм ҡанатлы әйтем ине был. Шәүлә, һүҙенең ҡайһындай тәьҫир ҡылыуын хоҙайҙарса мәғәнәле йылмайыу аша тыныс күҙәтеп, йомшаҡ ҡына өндәште. — Мин белгән Булаттимер Шаһибәрәковтың улымы һин?

-- Теләмәйем! Баш тартам! Ваз кисәм! Халыҡ дошманы — минең атайым түгел! — Моталдың ауыҙынан тап баяғы иртә йәшлегендә ҡот осорғос бейек сәхнәнән әсәһе Ғәзизә һәм уларҙың «атаһы урынына ҡалған таяныс»ы Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаров уның арҡаһына, аталарса һөйгән булып, ҡаты йоҙроғон төйгөсләп әйттерткән шомло һүҙҙәре сәсрәп түгелде, тап шул ваҡыттағылай, теҙ быуындары ҡалтырап, ытырғаныс һалҡын тир ағып төштө арҡа улағынан.

-- Беләм, беләм. Исемең дә яңыса, заманса — Металл Владимирович Бараков бит әле һинең. — Һәм ҡайҙалыр ситкә ҡарап бойорҙо. — Яҙыусы Металл Владимирович Бараковтың таланты сәскә атһын өсөн, бөтә шарттарҙы ла тыуҙырырға. Атаһы өсөн улан яуаплы түгел! Ул — ил улы!

-- Ррр-әх... — Урғылып ташҡан хисен Мотал сығара алмай ҡалды — ҡаршыһында ҡабат тәүге — ялтыр йөҙлө һәм ботфортлы иргәйел тора ине. Ун һигеҙенсе быуат йораты.

-- Хе-хе-хе, рәхмәтеңде әйтерҙән алда мине яҡшылап тыңла.

-- Нәфрәт белдерәм! Минең өсөн иң изге йән образына керергә хаҡың юҡ ине!

-- Шуның өсөн дә бына ғәйре бәндәгә әүерелдем, хе-хе-хе!

Яҙыусының таңғайына йәбешеп ҡатҡан теле саҡ хәрәкәтләнде:

-- Тәфтиләү?!

-- Тас үҙе, суҡынмыш Мәмәт (Алексей Иванович) Тевкелев.

-- Яуыз! Геноцид өрәге! Һин уҙған ерҙә йөҙәрләгән ауылдар урынында көл-күмер, баш һөйәктәре ҡалды. Сейәнтусы[87] дәжжалы! Ҡырағай һин!

-- Хе-хе-хе, шыттырмасы, тәҡсир. Мин үҙемдең быуындың, замананың улы инем. Тап һеҙҙең Мәрүән Карами, Вилор Иҫәрғәпыч кеүек... Сейәнтусы көлө лә һеҙҙең быуын көл ҡылған Хатындәрҙән, Орадурҙарҙан, Лидицеларҙан, Сонгмиҙарҙан ҡырағайыраҡ түгел.

-- Халыҡ һине ҡәбереңдә лә ятып сыҙамаҫлыҡ ләғнәтләне.

-- Уның ҡарауы, мин һеҙгә мәңгелек «Тәфтиләү» йырын бүләк иттем, хе-хе-хе!.. Себендән дә арзаныраҡ кешеләрҙең үлемесле кәлләләрен[88] ҡылысымдан үткәреп, үлемһеҙ моң тыуҙырттым.

-- Әҙәм баштарын киҫеү — донъялағы иң изге эш булып сыға, һинеңсә.

-- Хе-хе-хе! Һинең бит тәғлимәтеңдә «хаҡлыҡ өсөн изге һуғыш», «нахаҡ өсөн яуыз һуғыш» тигән төшөнсәләр бар. Белеүемсә, һин дә ана шул үҙеңдең хаҡлығың өсөн ҡыйышаһың бит.

-- «Һин дә» тигән һүҙеңде кире ҡағам!

-- Металл Владимирович Бараков та, Алексей Иванович Тевкелев тә бер үк заттан икәнлекте онотма.

-- Беҙ икебеҙ ике юлдан барабыҙ.

-- Дөрөҫ, баштарҙы ла ике төрлө ҡылыс менән ҡыябыҙ Әммә ҡыйылған баш өсөн ул барыбер.

-- Минең ҡылыс — ҡараңғылыҡҡа ҡаршы, аҡлыгк-яҡтылыҡ яҡлы. Илгә яҡты ҡояш сығарыу хаҡына.

-- Эйе, икебеҙ ҙә гөманлы[89]: икебеҙ тиң Ҡояш хаҡына, тормош хаҡына әҙәм баштарына һунар ҡылабыҙ, хе-хе-хе!.. Үлемесле был йола, әгәр ҙә белгең килһә, донъя яратылғандан — Әҙәм менән Һауа балалары гөманланып тыуғандан алып үтәлеп килә бирә: кисен байыған Ҡояш иртән яңырып тыуһын өсөн, төн әтәсе ҡысҡырғанда әҙәм башы ҡырҡыла. Ҡырҡылған баш, йәнәһе лә, ал Ҡояшҡа әүерелеп, Күккә ҡалҡа, Күктән көнлөк юл үтә лә кисен тағы ергә (гүргә) керә, ә иртәһен ҡалҡһын өсөн төнгө әтәс ҡысҡырғанда тағы бер баш ҡырҡылырға тейеш була...

-- Ялғанлама, шомло йән! Коперник һәм Лобачевский тәғлимәттәре тантана иткән — йыһан караптары осҡан заманала йәшәйбеҙ!

---

[87] Сейәнтусы - Тәфтиләү ҡырған боронғо башҡорт ауылы.

[88] Кәллә — баш.

[89] Гөманлы (гуманист) — балаға йөклө.

-- Ышанмаһаң, үҙеңдең китап шүрлегеңдәге мәжмүғәне[90] алып баҡ. Йыһан карабында осҡан замандашыңдың күҙе алдында анау Яңы Гвинеялағы икенсе бер замандашың әҙәм баштарына һунарлыҡ ҡыла — тап минеңсә, минеңсә!

-- Тап һинеңсә булыуы мөмкин түгел: һин сәйәси дошман итеп һуйғанһың ҡорбандарҙы, ә ул тәбиғәт балалары, таш быуатын кисергән папуастар, хөрәфәткә буйһона.

-- Хе-хе-хе, барыбер ул -- минеңсә, минеңсә! Мәхлүктәрҙең муйынынан беҙ айырған кәлләләре, ерәнгес ер ҡорттарының зәғиф мейе сүлмәктәре, балҡып яныр Ҡояшҡа әүерелә — хыяллана ла алмаған илаһи бәхетенә ирешә. Ошо түгелме иң ысын гөманлылыҡ?! Шуға курә минең ҡылысым сапҡан бәндәләр сикһеҙ рәхәтлек, ләззәт кисереп йән бирә. Бына ул ысын гөманлылыҡ! Һинең кеүек үк мин дә, тимәк, илаһи ысын гөманлы!

-- Үҙең менән ҡуша бизмән табағына мине лә һалырға маташыуың ғәжәп түгел — мәкерле йәндән көлләһөн көтөп була. Әммә быңдай ҡәбәхәтлекте ишеткәнем юҡ ине: «Тәфтиләү — ысын гөманлы»... Сейәнтусы ауылында ҡылған ҡылыҡтарың хәтереңдәлер?

-- О ул шанлы ҡылығым! Ҡылған мин генә түгел, ҡылығымды күтәргән ил тәүәрих итеп хәтерләй. Шүрлегеңдән икенсе бер мәжмүғәне (Очерки по истории Башкирской АССР, т. 1, часты первая. Өфө, 1956) ал, 175-176-нсы сәхифәләрен ас: 1735 йылдың декабрендә Башҡортостанда Йосоп батыр ихтилалын баҫтырырға Бөрө ҡалаһынан Әй йылғаһы буйлап китеп барышлайында Балыҡсы ылыҫы Сейәнтусы ауылында туҡталып, Тәфтиләү мең кешене, шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро һәм бала-сағаларҙы, ҡылыстан тураҡлата, ә йөҙ ҙә биш кешене келәткә бикләтеп, тереләтә яндырта. Сейәнтусы ауылының һәм йәнә шундай биш йөҙ ауылдың көлөн күккә осорта ла юл ыңғайында тағы ике мең кешене ҡылыстан үткәртеп, ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарҙы, бала-сағаларҙы үҙенең ҡара ҡырғындарына — яза әтрәтендәгеләргә ғүмерлек ҡоллоҡҡа тарата...

Яҙыусының үҙәгенән әрнеү ҡанһырап сыҡты:

-- Уф! Сейәнтусы ауылы, башҡортомдоң башкөлләйгә ҡырылып бөткән Сейәнтусы ырыуы...

-- О Сейәнтусы ауылы, онота буламмы һуң! Унда күпме йәндәрҙе мин бөйөк мәрхәмәтем аша ләззәтләндереп үткәреп, үҙем дә ләззәтләндем! Үҙең әле әйтмешләй, донъя яратылғандан биреле ҡара ер ҡорто булып йәшәп килгән бөтөн ырыуҙы тулайымса Ҡояш итеп зәңгәр күккә олаҡтырҙым! Русиә императоры хәҙрәттәренә тоғро хеҙмәт иткән шанлы ғүмеремдең иң-иң гүзәл сәхифәләренең береһе ул! — Шәүлә, татлы хәтирәгә бирелеп, күҙҙәрен ярым йомған хәлдә хыялланып һөйләнде. — Эй меҫкен! Ундай ҙа ләззәт гөлләмәһен татыу ҡайҙа ул һиңә! Иҫемә төшһә, әле булһа көллө тәнем рәхәтлектән семерләп, ауыҙ һыуҙарым ҡойолоп китә, күҙ алдыма шул ауылда үҙем ҡосоп бәхетле иткән һыу һөлөгө һымаҡ башҡорт һылыуы төҫмөрләнә. Ярандарым тотоп килтереп

---

[90] Мәжмүғә — йыйынтыҡ (Мифы и предания папуасов маринд-аним. М., 1981. 152-160-сы биттәр.

миңә бүләк иткән ул ҡыҙ бала саф далала ҡороҡ күрмәй уйнаҡлап үҫкән байтал кеүек керһеҙ ҙә, йәш тә, өлгөрөп еткән дә ине. Икебеҙҙе генә ҡалдырып ярандарым сығып киткәс, мин уны ҡайнар ҡосағыма алып һөйөргә иттем, ул баш бирмәй туланы, күмерҙәй ҡара күҙҙәренән утлы осҡондар сәсрәтте — аңһыҙлығы арҡаһында үҙенә тейер бәхетте үҙе кире ҡағып ҡарышты91, аңһыҙ диуанаҡайым. Изгелекле ҡулым менән мейес араһынан туғыҙ ҡырлы утын әрҙәнәһе һурып алып, ҡуш йәйәләй кирелеп киткән ҡара ҡаш, ут сәсрәтеп янып торған ике күҙе аралығына — маңлайына шаңҡытҡансы аҡыл мөһөрө һалдым, әрҙәнәгә алһыу сейә төҫлө ҡанын сәсрәтеп иҫәңгерәп йығылған һомғол кәүҙәһен ҡостом, ҡосағымда дер-дер ҡалтырап йән бирергә тартышҡан кейек ҡошсоҡтоң — фани ожмах баҡсаһының һутлы тәненә үҙемдең ҡотло һабанымды батырҙым... О, шундағы Йәшәү менән Үлем алышҡан мөҙҙәттәге илаһи-оло ләззәтте татып ҡараһындар ине! Ҡотло һабаным һөргән һайын ике сәйгүн ҡапҡасылай тиртеп-дереллдәп торған наҙлы күкрәк ситлегендә йөрәккәйе мин татытҡан илаһи хистән лөпөр-лөпөр-лөпөр тибеп талпына, ярым Айҙай ярылып киткән маңлайынан — мәрхәмәтле ҡоралым әрҙәнә асҡан сей яра бураҙнанан — боҫ борлатып ауыҙыма ҡыҙыл француз шарабынан да татлыраҡ йәшәү һуты сөпөр-сөпөр урғыла, аҡтыҡ йөрәк тибешенең нәзәкәтле тәне аша тәнем буйлап яҡынлауын һиҙенеп йәнем илерә... Ул хур ҡыҙы ана шулай минең ҡайнар ҡосағымда аҡтыҡҡаса илаһи ләззәтләнеп, керһеҙ йәнен теге донъяның йәннәтенә осорҙо.

-- Ҡан эскес! Кәүҙәһен дә ҡурып ашағанһыңдыр! Әле генә үҙең әйткән «мәжмүғә»лә Кебан атлы папуас үҙенең хәләл ефетен ғаилә ыҙғышы ваҡытында әрҙәнә менән һуғып үлтереп, кәүҙәһен ботарлап, күрше-күлән менән бергә ҡурҙаҡлап ашағандай!

-- Әлбиттә. Шул уҡ мәжмүғәлә дәүләт эше менән ауылдарына килгән ҡытай чиновнигын сажылдатып ҡурып ашаған ҡырағайҙар әйтмешләй, шундайын да татлы ниғмәтте нисек әрәм ҡалдыраһың? Шуныһын да әйтәйем: салынғанға ҡарағанда тереләтә утҡа һалып ҡыҙҙырылған ҡурҙаҡ тәмлерәк — тиккәме ни командама төшкө ашҡа йөҙ ҙә биш башҡортто сарылдатып ҡурҙырттым, оло келәткә бикләп... Ә шулай ҙа әлеге башҡорт һылыуына етмәйҙер...

-- Ҡәбәхәт! Хатта Батый-хан яуҙарына ҡаршы тороп күпте күргән, мең-мең тапҡыр иңрәгән был ерем һиңә тиңләшерҙәй яуызлыҡ татымағандыр! Башҡорт һылыуы һиңә язалап үлтерер сәйәси дошман да, енси ләззәт алыр ҡатын да, тамаҡ туйҙырыр ҡурҙаҡ та булған бер юлы...

-- Эйе, Башҡортостандың башҡорт совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамийығыҙға Башҡортостан бер юлы «әсә лә, ҡатын да» булған кеүек!

-- Быndай «универсал»лыҡты хатта Гитлер белмәгән — ҡорбандарының итенән ни бары һабын ғына ҡайнаттыртҡан...

— Унының ҡарауы, унан һуңғы уңыштарым иҫ киткес: үҙен Үҙәк Африка императоры итеп танытҡан француз ғәскәре капитаны Бокассо, Кампучия тигән

---

[91] Халыҡ риүәйәте килтереп еткергән был шомло эпизод Ғ. Хөсәйеновтың «Алдар батыр» ҡиссаһында ла сағылған.

илдең ҡан ҡойоу маһиры Пол Пот... Улар ҡурып ашаған әҙәм баштарын һанай китһәң, иҫәп төймәһен миллионлап тартырға тура килер. Минең юлды тотоусылар үҙҙәре ваҡланһа ла, ҡылыҡтары эреләнә — Ҡояш итеп осорған баштар һәр бер юлы миллионлап иҫәпләнә.

—Ысындан да, ерҙә тиңе булмаған «гөманлы» һин...

Донъя саж-сож көйгән ҡурҙаҡ еҫе менән һуғарылды, тыны ҡыҫылып баҫлығыуҙан, ҡурҡышынан аңын юйыр хәлгә еткән яҙыусы был төшөнән — һаташыуҙан арынырға, уянырға тырышты.

-- Туҡта, күҙҙәреңде асмай тор! — тип киҫәтте Шәүлә уны. — Аҙағына еткермәй өҙмәйек һүҙҙе. Теләйһеңме, был ҡиәфәтем әгәр һиңә ҡыйын булһа, теләгән бер башҡа бәндәгә әүереләм: Чанкайшиғамы, Франкоғамы, Маоғамы...

-- Кәрәкмәй!

-- Теләгән бер ҡиәфәткә төрләнәм!

-- Америка президенты булып та алаһыңмы?

-- Быны ҡайҙан беләһең?

-- Сөнки океан аша һинең «гөманлы»ҡ-ҡурҙаҡ еҫе аңҡый... Америка президентының кешелек донъяһын «бәхетле» итәсәк бүләге — «иң гөманлы ҡорал» хаҡында әйтәм.

-- Их, кешелек донъяһына бүләктәрҙән дә оло бүләк, мөғжизә бит ул яңы уйлап сығарылған «иң-иң гөманлы ҡорал»! Теге саҡта бындай ҡорал минең ҡулда булһасы, меңәрләгән башҡорт ауылдарын яндырып көл итмәҫ инем — барлыҡ йорт-ҡуралары, иген келәттәре, ҡаралтылары имен килеш үҙемә ҡалыр ине! Хәҙерге фән беҙҙе нисек тылсым-ҡөҙрәтле итте! Әйтәйек, ҡорос ҡанатлы сәмреғошҡа атланып, дошман яҡтың ҡалаһына барымтаға осҡанында бомба итеп ташлаһаң, ул бомба, «иң-иң гөманлы ҡорал», ҡор осар бейеклектә генә тауышһыҙ ярыла ла күҙгә күренмәҫ нурҙар ғына тарата — минең әжәл нурҙарым. Һис бер нәмәне ватмай, көл итмәй, ҡиммәтле завод-фабрикалар, зиннәтле һарайҙар, торлаҡ йорттар, машиналар, бөтә мөлкәт-ҡаралты, кейем-һалым — көллөһө лә иҫән-имен тороп ҡала, кешеләре генә төптө булмағандай боҫланып елгә оса. «Иң-иң гөманлы ҡорал»дың игелеге шунда: ул кешеләрҙе асы әжәл ғазабына һалмайынса елләтә.

-- Ғазапһыҙ әжәл булырмы?!.

-- Елгә осоу менән Ғазраилдың салғыһына башты һалыу бер түгел. Эйе, салып йәнеңде алмай, ә күҙ асып йомған арала кәүҙәңде тере килеш, һиҙҙертмәй ҙә, үҙең белгән Менделеев әфәнде таблицаһының элементтарына тарҡата. Ул күҙгә күренмәҫ ҡара нурҙар, мәрхәмәт нурҙарым, ҡағылыуҙан әҙәм балаһы көллө тәнендә һис бер аңлатып бирә алмаҫлыҡ илаһи ләззәт кисереп, рәхәтлектән көлә-көлә тарҡала. Мәғрүр барымтасыға, тиңһеҙ гөманлыға, биналарҙың төндөктәрен шар-асып, эйәләре эфирға осҡан бүлмәләрҙе елләтәһе генә ҡала. Елгә осоусыға ла рәхәт, елгә осороусы ла ҡәнәғәт — бына ниндәй кешелекле ул «иң-иң гөманлы ҡорал»ым!

Тәфтиләүҙең оҙон телмәре ябай һаташыу ғына түгел, ә төшкә кергән өн, ҡот осорғос өн икәнен шәйләп елгөргән Мотал күҙҙәрен тиҙерәк тырнап асырға тырышһа ла, Шәүлә ирек бирмәне:

-- Уянмай торсо, тәҡсир! Нимәгә ынтылғанлығыңды, кемгә табынғанлығыңды төшөндөртөп бөтмәнем.

-- Яҡтыға ынтыламын, Уралға табынамын!

-- Юҡ, ҡараңғыға ынтылаһың, Шүлгәнгә табынаһың!

-- Мәкер эйәһенән быны ишетеү ғәжәп түгел!

-- Мин мәкер эйәһе булһам, һин, һеҙ, ерҙәге йәмғе бәндәғолдар — шул мәкерҙе ваҡ өлөштәргә бүлгесләп, таратып алыусылар, эсегеҙгә йомарлап йомоусылар! Һәм шуны үҙегеҙҙән дә, минән дә йәшерәһегеҙ, танырға теләмәйһегеҙ. Ләкин һеҙҙең барығыҙҙың мәкерен бергә йыйһаҡ ҡына минең мәкер туплана — айырма шунда ғына. Шуға күрә һәр берегеҙ үҙенең ҡара эсе менән минең иңгә таяна.

-- Ҡот осорғос яла был!

-- Миҫал өсөн ғүмереңдең бер кәррәһен92 алайыҡ. Ғәйепһеҙлеген белә тороп, йоҡа ғына үҙ тиреңде һаҡлау хаҡына атайыңды ил алдында ләғнәтләп, «Халыҡ дошманына ул булырға теләмәйем! Баш тартам! Ваз кисәм!» тип һөрәнләүсе бәндәғол һин инең түгелме? Утыҙ етенсе йылда, тим.

-- Мин ул саҡ иҫ белмәгән малай инем.

-- Бәлиғ булғас, йән дуҫыңдың мөхәббәтен урлап ҡасыусы, шуның менән арҡаһына бысаҡ ҡаҙаусы ла һин түгел инеңме?

-- Мин ул саҡта ылғый иҫерек инем.

-- Ылғый иҫерек булһаң да, йән дуҫыңдың һөйгән йәренә ҡул һалырға иҫең еткән бит.

-- Йәш ваҡытта ундай ғына нимәләр булғыламай? Егет саҡта кемдең һөйгәнен кемдәр һалдыртып алмаған?! Етмәһә, быһың өсөн дуҫым үҙе ғәйепле.

-- Ә һин унын шул ғәйебен дә күтәрә белмәнеңме? Намыҫ ҡануны ҡартлыҡта ла, йәшлектә лә бер үк түгелме?!

-- Уныһы икенсе мәсьәлә.

-- Хе-хе-хе, барыһына ла һинең ғәйепле булыуыңа кемдәрҙер ғәйепле, һин түгел, улар яуап бирергә тейешле. Һөҙөмтәлә бөтәгеҙ ҙә ғәйепһеҙ, берегеҙ ҙә яуапһыҙ, эйеме? Бына ошонда инде ул һин әйткән мәкерҙең асылы. Эй әҙәм балаҡайғынаһы, тексәйеберәк ҡарасы! Бына минең эполетымдыңептәренә иғтибар итәһеңме — тыштан нисек ялтырай! Сөнки һәр епкә ҡылдан нескә, ҡылыстан үткер алтын таҫма уралған. Балҡып янған шул таҫманы тағатһаң, унын аҫтында епте еп иткән, алтын уҡаны йыйып тотҡан үҙәклек — ҡара киндер еп булыр. Алтын уҡалай балҡыған бәндәнең дә асылында ана шундай ҡап-ҡара үҙәк ятыр. Алтын таҫма алтындай донъяла «алтын сөрөк»кә әйләнер, ҡара үҙәк өҫкә ҡалҡыр, бәндәләрҙе үҙҙәренә лайыҡ «ҡара упҡын»ға һөйрәп тартыр... Хоҙай итеп табынған Урал батырығыҙға ла, баяғылай, өлөшләтә бүлеп хыянат итәһегеҙ түгелме: һәр берегеҙҙең алтын таҫма менән сырмалған ҡара ҡылығы күренмәй ҙә беленмәй, ә бөтәһен бергә ҡуйһаҡ, Уралды күмерҙәй ҡара упҡын йыйыла.

-- Төймәләй генә ғәйебемде дөйәләй яһама, үҙ бәләңде бәндәләргә ташлама!

---

92 Кәррә — тапҡыр, ҡат, мәл.

-- Бәндәләрҙең үҙҙәренең ҡаралығы етерлек. Баҡ әле тәҙрәң үтә: ҡаршылағы икмәк кибетенән кемдәр йөкмәнеп сығып бара? Ҡытлыҡ йылындағы астармы улар? Әллә берәй йотлоҡ илен ҡотҡарырға йөкмәнеп баралармы?..

Мотал күреп таныны: көндәлек ҡәҙимге хәл... Оло-оло селтәр тоҡтарға ҡояш кеүек күпереп бешкән бөтөн-бөтөн икмәктәрҙе тултырып, ауыл кешеләре вокзалға төша. Көн дә электричкаларға тейәлеп, сусҡа һимертер өсөн, бешкән икмәк ташый улар ҡаланан...

—Күрҙеңме? Улар хатта үҙҙәренә үҙҙәре хыянат итә. Игенде сәсеп үҫтерәләр, урып алып келәттәргә һалалар, әпәкәйҙе Ҡояш менән генә тиңләп була, тип ололайҙар. Һәм шул тормош сығанағын ҡаласлап бешерәләр кеше хаҡына, кеше табынына ғына ҡуйыр өсөн, кибеткә сығаралар. Тик икмәкте сәсеп үҫтергән кешеләр үҙҙәре үк уны — ана ҡара! — кеше ауыҙына еткертмәй, ҡайырып алып, сусҡа алдына илтеп һала һәм намыҫы алдында ла аҡлана: «Икмәкте мин аҡса түләп һатып алдым — кем алдына һалырға ла хаҡлымын!» Ләкин Ҡояш менән Икмәкте һатып алыу мөмкинме һуң!.. Күрәһегеҙ: мин тараткан аҡса менән аҡлана — аҡса тигән ҡағыҙҙы ул икмәктән өҫтөн ҡуя, сөнки уның ярҙамында мәкерен ҡаплап ҡала. Ғәмәлдә ул аҡса тоҡсайы алдында, алтын алдында «хаҡлы»: икмәк ашатып һимерткән дуңғыҙын бишләтә хаҡҡа һата ла унлата хаҡҡа киләсәгенең алтын сөрөгөн ала, ха-ха-ха!.. Ошоно күргән һатыусылар, һатып алыусылар, милиционерҙар, автобус һәм поезд йөрөтөүселәр — урамдағы һәм юлдағы барса бәндәголдар көлләһә вайымһыҙ уҙа: «Был тоҡтағы ҡаластарҙы сусҡа өсөн алынған тип ни өсөн мин уйларға тейеш әле? Тейешле кешеләр уйлаһын!» Бына ошо минутта һин дә тап шулай тип уйланың, бөтәһенең күләгәһе артына ышыҡландың. Таны һәм ялған ғорурлығыңды һындыр, әҙәмсеккенәм: тере икмәкте аяҡ аҫтыбыҙға ташлайбыҙ, сөрөк алтынды башыбыҙ өҫтөнә күтәрәбеҙ, тип әйт, хе-хе-хе!..

-- Көтөүҙәге ҡутырлы бер башмаҡ менән бөтәһен дә буяма! Бөтәһе лә алтын сөрөк булмаясаҡ, алтын сөрөккә ҡаршы яу бара ерҙә!

-- Алтын сөрөк һәммәгеҙҙе баҫасаҡ! Тәҙрәнән күреп торҙоң бит... хе-хе-хе!.. Ана шулай тәмле шул ул тере ҡабырсаҡ ҡаны!

-- Ни һөйләйһең, ниндәй ҡабырсаҡ? Ниндәй ҡан?!

-- Хе-хе-хе! «Урал батыр» ҡобайырында яҙылғанды көйләйем! Сөнки Урал батырығыҙ ҙа ҡабырсаҡтан ҡан эсмәйенсә түҙә алмағайны... Шүлгән апаһы менән бергә ауыҙын ҡайырып эскәйне!

-- Уныһы ла — һинең мәкерле ҡотҡоң! Мәкереңә ышандыртып, сабый күңелле Урал батырҙы шүлгәнлеккә тартканһың!

-- Яңылышаһың, бәндәгол. Сабый саҡта мин ҡоторткан тиһәгеҙ, бәлиғ булғас ҡылғандарын кемгә япһарырһығыҙ? Бөтә әҙәм балаларын ҡырҙыртып бөтмәк өсөн, асыуланып, ер йөҙөнә туфан ҡалҡытыусы Урал түгел инеме? Уға ҡаршы көрәшеүсе, туфандан һуң түлләнәсәк әҙәм тамырын ҡурсап ҡалыусы Шүлгән түгел инеме ни?! Шүлгән батырҙың аҡыллылығын аҙаҡ Урал үҙе лә нык аңланы: үҙе ҡалҡыткан туфанға ҡаршы көрәшергә һәм үҙе бөтөрөргә ниәтләнгән кешелек донъяһын ҡабат аяҡка баҫтырырға мәжбүр булды[93]... Һеҙ, ҡәләм

---

[93] Игеҙәк геройҙары Урал батыр менән Шүлгән батырға иш иҫке донъя мифтарында,

тибрәтеүселәр, ике себен ыҙғышынан да трагедия яһарға тырышаһығыҙ. Ә бына ҡайҙа ята ул Шекспирығыҙ ҡоласына ла һыймаҫлыҡ донъя трагедияһы!..

— Хаталаныу ғәйеп түгел, ә хатаңды танымау, төҙәтмәү ғәйеп, ти беҙгә боронғолар. Урал батыр бер яңылышын мең игелектәре менән аҡлаған. Шуға күрә мең рәхмәтле халыҡ уны Аҡлыҡ батыры тип атаған. Ә һин, Шүлгән, Урал батыр ҡурсалаған тереклекте ҡабат ҡырҙыртыу өсөн, ил һуғарыр күл һыуҙарын әжәл ҡылйыландары менән тултырғанһың — бер игелегеңде мең мәкереҥ менән ҡаралағанһың. Шуға күрә мең ләғнәтле халыҡ ауыҙынан үҙең Ҡаралыҡ батыры аталғанһың.

-- Эй әҙәмсеккенәм! Эсеңдәге ылғый аҡты, ылғый ҡараны айырып, бизмән табаҡтарына һалып ҡара — ҡайһы яҡҡа ауыша?.. Урал батырығыҙ ҡайҙа?!.

-- Урал батыр ергә йәншишмәһен бөркөп, донъяға йәнен биреп китте — шуның менән мәңге тере! Ә һинең терелегеңдән — барлыҡ әҙәм сирле! Шуны ла белә Кеше: Урал батыр тереклектәрен үлтерергә, бөтөрөргә Шүлгәндең етмәҫ көсө!

—Хе-хе-хе! Урал батыр тереклектәрен Урал батырға табыныусыларҙың үҙҙәренән юҡ иттертеү әмәлен белә Шүлгән! Уралтауҙың ҡуйынынан Урал батырҙың ҡанын һурҙыртып алып, тирә-яҡҡа түктертеп, үҙҙәре эскән аҡ һыуҙарын эсмәҫлек ҡарайттыртыу, ҡара төтөн итеп күккә осортоп, үҙҙәре һулай торған һауаны бөтөртөү, далалағы үләнде, урмандағы ҡыуаҡты, болондағы кейекте, йылғалағы балыҡты, оялағы ҡош-ҡортто, solоҡтағы балҡортто, һәммәһен дә, һәммәһен дә тонсоҡтортоп бөлдөртөү шуның һоҡланып-ҡыуанып бөткөһөҙ миҫалы түгелме ни?!. Бәхетле, мин, бәхетле!

-- Әммә шул уҡ кешеләрҙең ҡом сүлдәрен — гөлбаҡса, боҙлоҡтарҙы — ожмахтай, ҡолалыҡты — ҡалалай, таҡырлыҡты — баҫыуҙай итеп мөслө үҙгәртеп, бер башаҡ урынына биш башаҡ үҫтереп, донъяны аслыҡ-йоттан, үләттән, ҡайғы-хәсрәттән ҡотҡарыуын ҡайҙа ҡуяһың? Уның ҡөҙрәтенең сикһеҙлегенә нисек баш эймәҫһең!

-- Ана шул үҙ ҡөҙрәте үҙенең башына етәсәк уның.

-- Әле мин һине Тәфтиләү тип кенә белһәм, ылғый Шүлгән икәнһең. Өҫтөңдә лә ҡара Шүлгән еләне.

-- Тап елегенә баҫтың, донъялағы иң олоғ серҙе астың! Һүрәттәрем минең төрлө булһа ла, асылым мәңге Шүлгән! Күҙгә төрткән яҡтылыҡҡа интекмәҫкә — ҡараңғылыҡ, шау-һиллек алып киләм. Кешеләрҙең эстәренә, алтын уҡа үҙәге ҡара ептәй, ауыр саҡта ҡасып сигенер өсөн, ҡараңғылыҡ һаҙы һалам, уларҙың зәғиф күңелдәренең мәңгелек «ҡара упҡын»ы булып ҡалам.

-- Ләкин кеше һинең ҡара һаҙлығыңдан арына, ҡара упҡыныңды кире тибәреп, яҡтылыҡҡа ынтыла. Ғорур кеше һыны бөгөн йыһанғаса турайып, ҡулы менән шау-йондоҙҙарҙы тота.

—Шул уҡ саҡта ҡулы тейгән йондоҙҙарҙа «иң гөманлы ҡорал» өсөн сорғолоу майҙаны ҡараштырып булмаҫмы икән, тип тә ҡармана. Шул уҡ ваҡытта яҡты Ҡояштың, йондоҙҙарҙың — икһеҙ-сикһеҙ ҡом сүлендәге ысыҡ тамсылары

---

ысынлап та, ваҡиғалар ана шулай тасуирлана.

кеүек һирәк булыуына, бөтә ғәләм төпһөҙ йыһан ҡараңғылығынан, ҡара упҡындарҙан ғына тороуына инана.

-- Әммә кеше аҡылы ла сикләүһеҙ: ул үҙе Ҡояш ҡабыҙырға һәләтле. Бөгөн кеше ҡабыҙа торған ҡояш — тәбиғи Ҡояштан йөҙ тапҡыр, мең тапҡыр яҡтыраҡ балҡый ала. Шүлгән ҡараңғыһын ҡыуыу кешенең үҙ ҡулында, ҡөҙрәтендә.

-- Хе-хе-хе! Ә ул шартлап бәлҡый торған «ҡояш»ығыҙ нимә һуң? Ул да тәғәйен миңә хеҙмәт итәсәген, Шүлгән ҡараңғыһы алып киләсәген беләһеңме? Тап кеше, кеше ҡулы күҙ асҡансы балҡытҡан ҡояш күҙ йомғансы бөтә Ер шарын ҡара күмер ҡылып ҡараңғылыҡҡа күмәсәк. Мәңге асылмаç Шүлгән ҡараңғылығына...

-- Әгәр шулай икән, ниңә миңә кәрттәреңде асаһың? Уйын кәртеңде белеп алғас, һиңә ҡаршы уғата көсләнермен, үҙеңде юҡ итермен.

-- Үҙеңде юҡ итә алаһыңмы һуң?!. Урал батыр һәм Шүлгән, Тереклек һәм Үлем бер ҡасан да бер-береһен юҡ итә алмаясаҡ, тик ҡайһыһы ҡайһы саҡта өҫтөнлөк алып китә — мәсьәлә шунда ғына.

-- Шулайғас, минән һиңә ни кәрәк?

—Ғорурлығыңды һындыр, Урал — Шүлгәндән өҫтөнөрәк, тигән уйыңдан ваз кис. Әгәр ҙә мине генә үҙһенә алмаһаң, бер юлы Урал батырға ла, миңә лә табын, ҡасып-боçоп, йәшеренеп кенә булһа ла табын. Ғорур башыңды эйә төш. Минең кеүек йылан булып шыуышыуҙан да ғәрләнмә — һалҡын Күктән алыçыраҡ, йылы Ергә яҡыныраҡ йәшәрһең. Мейеңде быраулап интектергән һорауҙарыңдан да арынырһың, яҡшынан да, ямандан да ем алып кинәнерһең. Һине туҡтатырлыҡ бик, һин һыймаçлыҡ ек ҡалмаç. Ғорурлығың арҡаһында үҙ бисәңде лә аңламай, туң йөрәген иретә алмай йәшәйһең... Һин уның боҙ кеүек ҡатҡан йөрәге ҡайҙа ятҡанын беләһеңме?!. — Һуңғы һүҙҙәрен әйткән саҡта Шүлгәндең тауышы, хәстәрлекле атай һыҡтанып һөйләнгәндәй, шәфҡәт ҡатыш ҡыҙғаныулы ауаздарға күмелде, күңел йылыһына һыуһап өшөгән Мотал бәғерен семерләтте. «Белһәң ине лә ул!..» — тип саҡ-саҡ ысҡындырманы. Шүлгән быны һүҙһеҙ ҙә аңлай кеүек:

—Һинең ҡатыныңдың боҙло йөрәге ана анау ҡара һарайҙың эсендә, ҡара бәрхәт көбөндә. —Ҡасандыр Мотал ҡатынының тыуған көнөндә бүләк иткн ҡалын ҡара мәрмәр ҡумтаға тоçҡалды Шүлгән бармағы. («Был, әлбиттә, төштә генә булмыш хәл», — тип уйланы Мотал: хәләл ефетенең йоҡо булмәһендәге хазина ҡумтаһы ни арала уның яҙыу өҫтәленә сығып ятҡан!). Ул ҡумтала Мөхлисәнең даими йоҙаҡлы алтын-көмөштәре һаҡлана. — Һин, әлбиттә, унда нисек инеү яйын белмәйһең. Ҡарап тор ҙа отоп ал: үҙем инеп күрһәтәм. — Шулай тине лә Шүлгән, ҡара еләненә башын йәшереп, йомғаҡтай йомарланып, кире-ҡабат ҡара йылан булып тағатылды, тәҙрә төбөнән төшөп, иҙән буйлап шылып, яҙыу өҫтәленә шыуышып менде, ҡара ҡумтаның күҙгә күренмәç ярығынан ығылып инеп китте лә ых-бых килеп кире-ҡабат килеп сыҡты. Йәнә тәҙрә төбөнәсә һөйрәлеп, йомғаҡҡа йомарланып, ҡара елән аҫтынан башын сығарҙы, Шәүлә хәленә ҡайтты.

— Күреп ҡал: ана ята ҡатыныңдың боҙ йөрәге!

Мотал ҡара мәрмәр ҡумтаның ошо мәлдә быялалай үтә күренеүенә, унда, эстә, ҡара бәрхәт мендәр өҫтөндә бик ҙур ҡара гәүһәр ҡашлы алтын йөҙөк балҡып ятҡанлығына ғәжәп ҡалды. Иҫен йыйып, кире тәҙрә яғына боролғанда унда шомло Шәүлә лә, һары лимон ҡабығы ла юҡ ине инде, тышта фәҡәт тәҙрә төбөнән иҙелгә табан аҡ ҡар ярып һуҙылған ҡара дегет эҙҙәр генә ерҙе көйҙөрөп ята. «Икенсе атай урынына ҡалған» Яубаҫаров заводының ыҫланып ҡарайған кирбес торбаһы ерҙең сиҡан шешеләй һерәйеп тора. Төшөнә лә Шәүлә булып шул кергәндер, моғайын...

Самолет геүләй ҙә геүләй, ҡанаттарына саҡрымдарҙың йәймәһен урай ҙа урай... Тик күңеле менән Мотал, үҙе самолет салонында булһа ла, ҡалалағы фатирында — эш бүлмәһендә имеш... Саңғы шыуғанда кеймәле ҡалын йөн башлыҡ аҫтында Йәүҙәт кейәүе шаңҡытҡан, аҡъямау һалынған түбә ҡапҡасы сатнай... Ниндәй аяныс хурлыҡ!.. Иртәгәме, береһе көнгәме ул ҡайтыуға өйҙә хәлдәр нисек булыры һынлана күҙ алдында, бына ул.

Бәпембә сәскәһеләй сөм-һары сәсен йәш ҡыҙҙарса ҡыҫҡа итеп ҡырҡтыртҡан, һылыуҙарҙан-һылыу Мөхлисәһенең ишектән «гөлт!» итеп күренеүе уны бынан бер нисә йыл әлгәрегеләй ҡыуандырманы. Нәфис ҡолаҡ остарында эре гәүһәр таштарын һалҡын баҙырлатып-балҡытҡан ярым Ай рәүешле тос алтын алҡалары Күккә эленгән ике дана балта йөҙөнә оҡшап зәһәр сайҡалды. Оҙон бармаҡтарындағы ҙур ҡашлы йөҙөктәрен, алты мең тәңкәлек шәшке тунынан арынған саҡтарында «декольте» түшендә саҡҡыланып күҙҙе ҡырҡҡан аҡ алтын медальонын — элек үҙенә ниндәйҙер дәрт, күңел һиллеге һәм кинәнес биргән ошо затлы әйберҙәрен күреүҙән үк уҙаманға үле металл һалҡынлығы бәрелде. Муйынын эскә тартты Мотал. Етмәһә, ҡатынының ҡыҙмасаланыбыраҡ ҡайтыуы ла һағайтты. Әммә Мөхлисәһе уның әхүәлен аңламаны. Ҡиммәтле роммы, әрмән коньягымы һеңешкән ирендәре, ҡаҙау һурырға йәтешләнгән ҡыпһыуырҙай ослайып, мәрмәр маңлайынан үпте:

—Ниңә бөршәйеп ҡаттың, сәңкенеңме, алтыным? Абау, башына ҡайһындай торпоша ҡаплап алған! — Мөхлисә был һүҙҙәрҙе иренең сикәләре ҡырау атҡан ҙур башын һыңар беләге менән ҡыҙҙарҙыҡынса тығыҙ күкрәгенә ҡыҫа биреберәк гөлдөрләне.

—Ғүмеремә шулай сәңкеп йәшәрмендер инде мин...

Иренә арҡа биреберәк, буй көҙгөгә ҡарап күлдәк иҙеүҙәрен ысҡындырып маташҡан Мөхлисә ҡырт-туҡталды, тиртеп сыҡҡан ҡарҙай ап-аҡ тыу йомороларын балҡытып бороллдо:

-- Ошо йәшеңә етеп, ниңә һаман кеше менән кешесә йәшәй белмәйһең һин, алтыным?

-- Ҡайһылай булайым һуң? – Бына-бына башлана – улының ҡәбере эргәһендә Йыһаниә менән ҡосаҡлашып илашҡанды һөйрәп сығара инде был, тип һағайғайны, икенсе яҡтан алдырҙы:

-- Илап-һыҡтап Мәрфуға апайым килеп китте. «Хөппөлгәрәй еҙнәйең ер тетрәтеп ҡоторона — Мотал кейәүгә еле ҡағылып ҡуймаһа ярар ине, ҡулы оҙон бит уның...» ти.

-- Ул ҡулдарҙы ҡыҫҡартыусы табылыр.

-- Томдарыңа кәртә ҡорҙортоп ҡуйыуы бик ихтимал — Госкомиздатта тешен ҡайрап кеме ултырғанын beләһең.

-- Госкомиздаттан өҫтөнөрәк орган бар.

-- Донъяларың бына ошолай зерә лә ҡатмарлы осорҙа ниңә тағы Ҡыҙыл башҡорт менән иҙән тибештең, алтыным?

-- Һин нимә, көмөшөм, әллә мине умыртҡаһыҙ ҡылйыланға һанайһыңмы?!

Мөхлисәнең ирендәре ҡалтыраны, күҙҙәренән эре ямғырҙай ике бөрсөк тәгәрәне:

—Үҙһөйәр! Һаман үҙең хаҡында ғына ҡайғыртаһың! «Гөманлы яҙыусы»!.. — Батист яулығы менән күҙҙәрен ҡоротоп, турһылдап, Мотал яуап биреп өлгөрмәһен өсөн ҡырт-боролоп, һөлөктәй һылыу буй-һынын горур мыймылдатып сығып китте — ғәҙәтенсә, йоҡо бүлмәһенә инеп бикләнде.

Ҡатынының сисенеп бөтөүен, утты һүндереүен, карауатҡа ауып, тәрән көрһөнөүен, урынында әйләнеп-тулғаныуын, йоҡа таш стена үтә көллө тән күҙәнәктәре менән тойҙо ир. Һуңғы йылдарҙа ҡәҙимгеләнгән һөҙөмтә лә яһаны: бынан һуң йоҡо бүлмәһе уның өсөн бикле — һалҡын һуғыш иғлан ителде, тимәк. Улар, хәләл ир-ҡатын булараҡ, кемдәр өсөндөр сәхнәлә уйнағандай, бер-береһенә яғымлы, тыныс өндәшәсәктәр, йылмайышасаҡтар, «алтыным» да «көмөшөм» тиәсәктәр. Ҡатыны хатта, һылыу буй-һыны менән алсаҡ борғаланып, уйнаҡлап, ул онотолоп яҙып ултырған минуттарҙа туптай тығыҙ түштәре менән уның арҡаһына баҙыҡ тертөлөп, енси яҡынлыҡҡа тартасаҡ, шул арала ир күңелендә бөтә үпкәләш, асыуҙар елгә осҡандай онотоласаҡ, әммә... ир өсөн иң көсөргәнешле мәлдә генә... ҡатыны тыу боландай ырғып китеп, уйнаҡлап инеп ятҡан йоҡо бүлмәһенең ишегенә эстән типке һалынған булып сығасаҡ... Нәфис заттың меңәр йыллыҡ тәжрибәһен кәүҙоләндергән зирәк аҡыл бизмәнендә исәпләп, миҡдарлап, Мөхлисә уны аҙналар, айҙар буйы ана шулай яңғыҙлыҡта интектереп язалауын дауам итер, сабырлығы ҡаҡшаған ир ахыр сиктә бөтә ғорурлығын юғалтып һыныр, ҡатынының аяғына йығылыр, ни ҡушһа ла үтәргә әҙер булыр... Үҙенең шул көсһөҙлөгөнән түбәнһетелгән Мотал, был юлы ла иҫке йоланың ҡабатланыуын һиҙемләп, донъяларын ләғнәтләп, яҙыу өҫтәле эргәһендәге атай диванына баш терәп янтайыр, һөлөктәй һылыу ҡатынының барлығын, яҡында ғына икәнлеген онотorға тырышыр...

-- Ах, төш икән!..

Өфө аэропортына килеп төшкс, газеталарҙан белде: партия өлкә комитетының идеология секретары Д.Ш. Бикләмешев иптәште, профсоюз эшенә күсерелеүе сәбәпле, вазифаһынан бушатҡандар, урынына секретарь итеп иптәш Хәкимуллин Йыһандар Илһамдар улы раҫланған; пропаганда бүлеге мөдире итеп -- иптәш Алмаҡаев Рәшит Төхфәт улы, инструктор итеп эшсе-шағир Уральский Ыңғырсаҡбай Ҡамырбай улы алынған; элек унда эшләгән иптәш Арғынбаев Фидун Арғынбай улы – Телерадио комитеты директоры итеп, коллегаһы Мусин Сөнәғәт Муса улы башҡорт телендәге республика гәзитенең баш мөхәррире итеп үрләтелгән (элеккеһе хаҡлы ялға оҙатылған). Тарих, тел, әҙәбиәт институты директоры ҡарт профессор Йәмил Ҡотлой улы Ҡотлоевты,

коммунизм төҙөүселәрҙең йәш быуынын юғары коммунистик рухта тәрбиәләү фронтында һүлпәнлек күрһәткәне, Йәүҙәт Ҡондоҙбаев, Әскәр Ҡотлоев кеүек элементтарҙың буржуаз антисовет тайпылышын алдан уҡ киҫәтмәүе һәм һаулығы насарайыу сәбәпле, пенсияға сығарғандар, урынына директор итеп тарих фәндәре кандидаты Хажиәхмәт Алпаров (элекке «Ҡуян»!) тәғәйенләнгән. Республика Ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте етәксеһе Мирйәнова Сәүиә Фазыл ҡыҙын, «Ярлауыҡ» ресторанында оҙон көйҙәр йырлағаны өсөн, мафияға бәйле яуапҡа тарттырып маташҡандар, ләкин барып сыҡмаған; ахырҙа Сәүиә-ханым «үҙе теләп» вазифаһынан киткән, урынына «Мин ҡабырсаҡ эсендә!» исемле китабы менән дан ҡаҙанмыш ялҡынлы шағирәне билдәләгәндәр. Мотал өсөн бигерәк тә мөһиме: танылған тәнҡитсе профессор Ғайас Хөсни (Ғ.Ш. Хөсниев) иптәш Яҙыусылар берлеге идараһының ултырышында бер тауыштан әҙиптәрҙең нәүбәттәге йыйынына тиклем идара рәйесе итеп һайланған (элеккеһе хаҡлы ялға китеү сәбәпле). Ундағы профсоюз комитеты ултырышы ла булып, элекке замандарҙа күренекле әҙип Мотал Шаһибәрәковтың «һоло-вика-рапс-кукуруза» пенталогияһын Күккә күтәреп маҡтаған шул «башҡорт белинскийы» был юлы уны графоманлыҡта, макулатура тыуҙырыуҙа, профсоюз эштәрен, партиябыҙҙың «мудрый етәкселегенән» ситләтеп, үҙ ағышына ебәреүҙә ғәйепләп сыҡҡан һәм «йәмәғәтселек тойғоһон юғалтҡан" графоманды профкомитет рәйесе вазифаһынан сигертеп, яңыға алмаштырғандар. Иҫке химия заводында Яубаҫаров иптәш етәкселегендәге берҙәм коллектив авария һөҙөмтәләрен бөтөрөү өсөн ҡаһармандарса көрәшә...

Тауҙарҙа ҡар һаман мәреү ала-ҡола ҡалһа ла, баш ҡала урамдары, газондары йәшәреп һәм беренсе һары бәпембәләрен балҡытып, ағастарының бөрөләрен бүрттертеп, ҡәҙимге яҙғы төҫ алған; мәңгелек һылыу Ағиҙел, боҙ-бығауҙарынан арынып, Һаҙ биҫтәһе яғының ҡомло ярҙарына үркелгән, беренсе аҡ пароходтар күренә...

Өйҙә ҡара матәм хөлләһенә төрөнгән хәләл ефете менән әснәһе үгәйһетеп ҡаршыланы:

-- Матур тормошоңдоң ҡәҙерен белмәй, ҡатыныңды ағыу эсер хәлгә этәрҙең!

-- Тағы ниндәй яңылыҡтар?

Һеңлекәше ксерокстан үткәрелгән ҡағыҙ бите тотторҙо:

-- Һинең ошо ҡәһәр һуҡҡыры фенол өсөн совет власын, етәкселекте ғәйепләп яҙған листовкаңды бола ҡуптарыусылар араһында тараҡҡан өсөн студент Асҡар Ҡотлоевты, үҙ һүҙле, үгеҙ күҙле кейәүең Ҡондоҙбайҙы ҡулға алдылар... – Мышҡылданы. – Баштары төрмәлә серейәсәк, тиҙәр...

Әсәһе ялғап алды:

-- Шул листовка тигәндәренең аҫтына ҡул ҡуйғанһың, нисек ҡулың барҙы?!

Ҡаланың Черниковка тарафына барғандағы юлдың уң яғындағы урманлыҡҡа йәшеренгән үлекхананан (морггтан) мәрхүмәнең иң яратҡан күлдәген кейҙертеп ҡиммәтле йылтыр табутҡа һалынған мәйетен өйгә алып ҡайтып, зал уртаһына ҡуйғас ҡына Мотал уның башы осона ултырып, һалҡын

маңлайынан үбеп тауышһыҙ иланы; мәңгелеккә китеүенә һис тә ышанғы килмәй – йәш сағындағылай шундай матур, теп-тере кеүек ине. «Хоҙай ниңә был тиклем дә рәхимһеҙ? Ошондай ҙа һылыулыҡты нисек итеп ер ҡуйынына һалырға?!.» -- тип өҙәләнде. Тәүге танышыу көнөнән алып ошоғаса бөтә тормоштары күҙ алдынан һыҙылып үтте, ҡәҙерен белмәгән ҡабатланмаҫ минуттар, әйтелмәгән яратыу һүҙҙәре үкендертеп аңын-йөрәген өттө. Ҡаранан кейенгән, ҡара шәл бөркәнгән әсәһен, Гөлзифаһын, буҫлығып илаған Дилбәр-Диләфрүз һылыуын башы осонда ҡалдырып, ҡәбер урынын боронданғы Мосолман зыяратынан биреүҙәрен үтенергә Хөкүмәт йортона ашыҡты, сөнки был йомошто һеңлеһе йомошлай алмай ҡайтҡан. Ләкин тейешле чиновник, үҙ фекерен үҙгәртмәй, һалҡын һәм ҡырыҫ һөйләште, күренекле яҙыусы тип торманы. Кәмһенеүҙән бер иле сүгеп, Ағиҙел аша Һаҙ биҫтәһе яғындағы Яңы зыяратҡа килде; «Теге донъяның СССР-ы» тип йөрөтөлмөш был һуңғы берҙәм «держава»ның майҙаны өс – християн, мосолман, йәһүд өлөштәренә бүленгән, ә ер эштәре заманса механикалаштырылған: окоп һымаҡ оҙон итеп трактор ҡаҙған, төбөнә бәкәлдән һыу һарҡыған буй соҡорҙо табут һыйышлы «коммуналь бүлмә»ләргә бүлеп бирәләр...

Йыназа уҡылып, һуңғы тупраҡ һалынып, кешеләр таралып бөткәс, ҡатынының башы осонда япа-яңғыҙы тороп ҡалған Мотал янына баштан-аяҡ ҡараға төрөнгән һын килде, ирҙе иңенән ҡосаҡланы, алҡымдарына тығылып, ҡуша һулҡылданылар -- Ниагара шарлауығы ине был... Башлап һүҙҙәрен дә әйтә алманылар, әҙмәүерҙәй ике ир пәйҙә булып, икеһен ҡуша шартылдатып боғауланы:

-- Атлағыҙ!

-- Хаҡығыҙ юҡ, мин -- партия ағзаһы!

-- Партия йыйылышы һеҙҙе партиянан сығарҙы, ғәҙел хөкөмгә тапшырҙы.

-- Мин бөтөнләй сит кеше, мин... – тигәйне Йыһаниә, тупаҫ этәрҙеләр:

-- Тәпәйләгеҙ, тегендә һөйләшербеҙ.

Зыярат ҡапҡаһы алдында көтөп торған машинаға – утыҙ етенсе йылдан мәғлүм “черный ворон”ға төрткөсләп индерҙеләр...

Бер-нисә ай мөрйәһенән төтөн борҡотмай алйып торған Иҫке завод кәлтер-көлтөр эшләүен дауамланы. Дегәнәк булып күҙгә ҡаҙалған номенклатур эшмәкәр Хөппөлгәрәй Шәңгәрәй улы Яубаҫаровты, һал ағыҙғанда йылға төптәренә батҡан бүрәнәләрҙән фенол-диоксин ҡуйылтмағы яһатыр өсөндөр инде, Урман хужалығы Министры итеп күсерҙеләр, үҙгәрешһеҙ ҡалған завод эшселәре, «ҡарға ҡүҙен ҡарға суҡымай», тип һөйләнеүҙән ары уҙманы. Диоксинлы һыуҙы эсеп вафат булған бер эшсе-депутат урынына Рәшит Алмаҡаевты Дәүләт юғары ҡорона депутат -- халыҡ вәкиле итеп һайлап ҡуйҙылар һәм телевизорҙан көндәлек яңылыҡтар сәғәтендә депутаттар ултырған залдан репортаж биргәндә халыҡ уҙамандарының ифрат аҡыллы йөҙҙәрен «аулап» таҫылланған операторҙар ниңәлер шул шөғөлдәрендә яңы депутат Рәшит Алмаҡаевтың бөҙрә-көҙрә сәс биҙәге ырмаулаған, емтек ейеүсе таҙғараныҡына оҡшаш түп-түңәрәк ялтасында оҙон-оҙаҡ туҡталыуҙы шөғөл итеп алдылар, тамашасыларын ошоға күнектерҙеләр. Зәңгәр экран ҡараусылар,

бигерәк тә бала-саға, таныш ялтас экранда сағылыу менән: «Таҙғара! Әнә Таҙғара!», -- тип ҡыуанышып һөрәнләр ине. Иң яҡындары уны атаһының исеме менән «Төхфәтыч та Төхфәтыч» тип кенә ҡәҙерләп өндәшә, ә «ҡабырсаҡ эсендәге» илһамлы шағира уның хаҡында «Нурлы түбә» тигән мәҙхиә яҙҙы. Диоксиндан байтаҡ халыҡ сир кисерҙе, байтаҡтары инвалид булып ҡалды, шул сәбәпле үлеүселәрҙе берәү ҙә һанаманы.

Совет халыҡ шағиры Мәрүән Карамиға, алтмыш йәшлек юбилейы менән ҡотлап, Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен бирҙеләр (Грамотаны һәм Алтын Йондоҙҙо Мәскәүҙән Вилор Иҫәрғәп улы шәхсән үҙе алып ҡайтып тапшырҙы); кавалерҙың Алтын Йондоҙло портреты сағыулатып һүрәтләнгән дәү паннолар ҡала урамдарын, аэропорт юл буйҙарын биҙәне, һәр паннола алтын хәрефтәр менән яҙылған елкендерткес замана куплеты тәбрикләй:

Урыҫ булмаһам да, урыҫмын мин!  
Урыҫмын мин! – Ниндәй ҙур бәхет!  
Шулай булғанымда кәрәк түгел  
Батша һарайҙары һәм тәхет!  
Шуны аңламаған – бәдбәхет!

Партиябыҙҙың аҡыллы етәкселегендә бер туҡтауһыҙ сәскә атыусы Башҡортостан-һылыустанға арналған, тышлығы затлы крокодил тиреһенән көпләнеп, алтын бутал ҡайылған китабы сыҡты, ул ошондай мәҙхиәһе менән асылды:

Имдертеүсе әсәм һин, Башҡортостан!  
Һөйҙөртөүсе бисәм һин, Башҡортостан!

Әсе телле ҡәләмдәштәре, әллә бөйөклөгөнән көнләшепме, «һөйҙөртөүсе» һүҙен шул уҡ яңғырашлы оятһыҙға алмаштырып сәйнәнде...

Башҡорт мәктәптәрен «туғандаш урыҫ» йә «бер туған татар» телендә уҡытыуға күсереү эшен ҙур ҡыҙыулыҡ, уңыш менән атҡарыусы Вилор Иҫәрғәп улын бер-нисә тапҡыр Мәскәүгә саҡыртып ҡайтарҙылар, быһың сәбәбе тураһында ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа төрлө хәбәрҙәр гиҙҙе: берәүҙәре – ыңғайға, икенселәре кирегә юраны, әммә асылын оло түрә үҙе генә белә ине. Көндәрҙән бер көн абруйлының юғарыраҡҡа китере асыҡланғас ҡына, мәркәздең йәшерен серен, теш араһынан сығармаҫҡа ҡаты киҫәтеп, комитет секретарҙарына ғына тиште; ә ғәмәлдә уны нәүбәттәге орден, Башҡортостанда тупланған бай тәжрибәһен күрше милли республикаға ырыҫлатыу өсөн яңы ҙур тәғәйенләнеш көтә ине.

Аэропортҡа мөҡәддәс серҙе уртаҡлашҡан иң ышаныслылары оҙата килде, араларында йән дуҫының ҡубыныуын хәйерһеҙгә юрап үҙәге өҙөлгән Алтын Йондоҙ кавалеры – совет халыҡ шағиры Мәрүән Карами ҙа бар ине. Алтмыш йәшлек юбилярға айырым итәғәтлек күрһәтеп, самолет көткән ҡыҫҡа арала Вилор уны ғәҙәтенсә ыҫпай ҡултыҡлап алды ла, дөйөм ҡорҙан айырып, иң

юғары әһелгә ял итер өсөн тәғәйенләнгән аулаҡ бүлмәгә килтерҙе, затлы ниғмәттәр теҙелгән тәпәш өҫтәл артындағы йомшаҡ диванға сумыртты, биш йондоҙло әрмән коньягын асты. Үҙәк буйҙарын яндырған көслө эсемлек тәьҫиренән ойой башлаған Мәрүән Карами, моғайын, үҙенең юғары дәрәжәһен тейешһеҙ кимәлдә арттырып, түрәһенең яурынына әшнәләрсә ҡулын һалды, битенән үбергә итте, Вилорға был оҡшаманы. Һаман үҙен белештермәгән кавалер:

-- Китәһең... белмәйем, ҡайҙа китәһең... Ысын күңелдән ҡыҙғанам мин һине, Вилор Иҫәрғәпович... бирешмә... ярҙам кәрәкһә, үҙемә кил – хәҙер минең кем икәнде beләһең! – тип күкрәк һуҡҡас, түрәм тигәне ғәрләнеп, сығырынан сыҡҡан йәнде түшендәге алтыны менән ҡуша саңға бутап иҙеп ташлау теләге тыуҙы: «Тиреҫ ҡорто! Кемде ҡыҙғанаһың һин, кемде?!». Вилор үҙен ошо мәлдә кешеләрҙән өҫтөн кеше – супермен итеп тойҙо, меҫкенйәнде түбәнһетеп тантана ҡылыу теләгендә алтын йондоҙо менән ҡуша ҡосағында ҡыпһыуырҙай ҡаты ҡыҫып, диванға тупаҫ йыҡты, бөтә көсөнә һөңгөләнде... Алтмыш йәшлек һөмһөҙйәндең ҡапыл айнып аҡырыуынан ләззәтләнеп екерҙе:

-- Замолчи, падло! Кемде ҡыҙғанмаҡ булдың, кемде?! Кем һине, тынсыу тиреҫлегеңдән күтәреп, совет халыҡ шағиры, Алтын Йондоҙ кавалеры яһаны? Ҡыуан, гадина! – Арынып, өҫ-башын йәһәт иплəгәс, осаһы ялтырап шыңшып ятҡан «мәхлуҡ»ҡа еңелсә типте: -- Тфу, кейен, сучье отродье! – Һүгенеп сығып китте. Тышта моторҙар гөрләне, ҡыҙыл ҡанатлы лайнер һауаға күтәрелеп, ҡыҙыл мәркәз тарафына уҡталды...

1963.
1992.
21.03.2010, 2015.
Өфө.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

**Ятлағандарға ядкәр (роман)**

Беренсе сәхифә
Икенсе сәхифә
Өсөнсө сәхифә
Дүртенсе сәхифә
Өс таған хаҡында хикәйәт
Бишенсө сәхифә
Алтынсы сәхифә
Етенсе сәхифә
Һигеҙенсе сәхифә
Тугыҙынсы сәхифә
Бер сөскөртөм тәмәке
Унынсы сәхифә
Ун  беренсе сәхифә
Ун икенсе сәхифә
Ун өсөнсө сәхифә
Ун дүртенсе сәхжфә
Ун бишенсе сөхифә
Ун алтынсы сәхифә
Алтын сөрөк хаҡында хикәйәт
Ун етенсе сәхифә
Ун һигеҙенсе сәхифә
Һанһыҙ һыуыр тураһында хикәйәт
Ун туғыҙынсы сәхифә
Егерменсе сәхифә
Егерме беренсе сәхифә
Егерме икенсе сәхифә
Иҫәүән Иҫәрғәп тураһында хикәйәт
Егерме өсөнсө сәхифә
Егерме дүртенсе сәхифә